# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ



**VII**
**ТОМ**

*Боронғоно һөйләмәйҙәр*
*Боронғо өсөн генә.*
*Боронғола — бөгөнгөнөң*
*Асылы, төшө генә:*
*Бөгөнгөң — шул боронғо*
*Сәскәңдең емештәре,*
*Боронғола — киләсәктең*
*Тамыры, инештәре.*

*Аҡылһыҙға әйткәнеңдән*
*Мең артыҡ — әйтмәгәнең:*
*Көллө ғаләм белә уға*
*Бер һандың етмәгәнен,*
*Ҡолағының ҡурай һымаҡ,*
*Үтәнән тишеклеген —*
*Бер ҡолағы сығарғанын,*
*Береһе ишеткәнен.*

*Әйтер һүҙем — аҡыллыға,*
*Ундайҙар бар, иншалла!*
*Ундайҙарға етә булыр*
*Ярты һүҙ, ишараң да.*

*(Ҡобайырҙан)*

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## WRITTEN QISSAS AND DASTAN SAGAS

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ПИСЬМЕННЫЕ КИССЫ И ДАСТАНЫ

# BAŞKURT HALK FOLKLORU

## YAZMA KISSALAR YE DESTANLAR

КИТАП

УФА - 2004

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## VII ТОМ

## ЯҘМА ҠИССА ҺӘМ ДАСТАНДАР

КИТАП

ӨФӨ - 2004

УДК 398 (470.57)
ББК 82.3 (2Рос-Баш)
Б 29

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов (баш мөхәррир), Рауил Бикбаев, Салауат Галин, Ринат Йосопов, Фәнүзә Нәҙершина, Розалиә Солтангәрәева, Зиннур Ураҡсин, Азамат Урманшин, Ғайса Хөсәйенов.*

Текстарҙы асыҡлап, барлап, томды төҙөүселәр: *Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов, Миңлеғәли Нәҙерғолов.*

Инеш мәҡәлә авторы — *Әхмәт Сөләймәнов,* һүҙ ахыры — *Ғайса Хөсәйенов, Әхмәт Сөләймәнов, Миңлеғәли Нәҙерғолов һәм Флүр Сибәғәтовтыҡы.*

Аңлатмалар һәм һүҙлекте *Ғайса Хөсәйенов* менән *Миңлеғәли Нәҙерғолов* ҡатнашлығында *Әхмәт Сөләймәнов* әҙерләне.

Томдың яуаплы мөхәррире — *Әхмәт Сөләймәнов.*

**Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов (главный редактор), Равиль Бикбаев, Салават Галин, Ринат Юсупов, Фануза Надршина, Розалия Султангареева, Зиннур Ураксин, Азамат Урманшин, Гайса Хусаинов.*

Выявление текстов, составление *Ахмета Сулейманова, Гайсы Хусаинова и Минлегали Надергулова.*

Автор вступительной статьи — *Ахмет Сулейманов.*

Авторы послесловия: *Ахмет Сулейманов, Гайса Хусаинов, Минлегали Надергулов, Флюр Сибагатов.*

Комментарии и глоссарий подготовлены *Ахметом Сулеймановым* при участии *Гайсы Хусаинова и Минлегали Надергулова.*

Ответственный редактор тома — *Ахмет Сулейманов.*

**При перепечатке ссылка на том обязательна**

Б 29 **Башҡорт халыҡ ижады.** 7-се том. Яҙма ҡисса һәм дастандар. — Өфө: Китап, 2004. — 624 б.

ISBN 5-295-03485-2(т. 7)
ISBN 5-295-01393-6

Том башҡорт эпосы ғилемендә быға иғтибарҙан ситтәрәк торған әҫәрҙәрҙән төҙөлдө. Уларҙың барыһы ла халыҡ араһында мәғлүм сюжеттарға таянып, төрлө дәүерҙә яҙма рәүештә ижад ителгән.

**УДК 398 (470.57)**
**ББК 82.3 (2 Рос-Баш)**

**ТП — 104/04**

**ISBN 5-295-03485-2 (т. 7)**
**ISBN 5-295-01393-6**

© А. М. Сулейманов, составление, 2004

## МӨХӘРРИРИӘТТӘН

Фольклор һөйөүсе хөрмәтле дуҫтар! Һеҙ әле генә эпик ҡомартҡылары-быҙҙан төҙөлгән сираттағы томды астығыҙ. Был томға ингән әҫәрҙәрҙең барыһы ла, эпостарыбыҙҙың башҡаларынан айырмалы, яҙма рәүештә ижад ителгән. Уларҙың берәүҙәре — быға са йә шәжәрәләр йыйынтығында һәм әҙәби антологияларҙа («Тәтегәс бей», «Бабсаҡ менән Күсәк», «Ҡыпсаҡ затлы Ямғырсы бей менән Ҡусҡар бейҙең яңы ил тапҡаны», «Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей», «Сыңғыҙнамә», «Аҡһаҡ Тимер» һ.б.), ҡайһылары йыйынтыҡтарҙа, художестволы әҫәрҙәр контексында («Аҡташ хан», «Хан ҡыҙы Алтынсәс», «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» һ.б.) донъя күргеләне. Айырым баҫма рәүешендә (мәҫәлән, «Һуңғы Һартай» эпосы сюжетында яҙылғандар) донъя күрҙе. Өсөнсөләре әҙер сюжетҡа таянып ижад ителгән. Һуңғыларына «Көрьән Кәрим» сюжетына нигеҙләнгән «Әҙәм менән Иблис» ҡиссаһы, «Сура батыр» тигән сюжетһыҙ ҡобайыр, риүәйәттәр ерлегендә тыуған «Минәй батыр менән Шүлгән батыр» эпостары миҫал. Яҙма эпостары-быҙҙың ҡайһы берәүҙәре (мәҫәлән, «Ҡорҡот ата», «Мөйтән бей», «Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей», «Ялыҡ бей», «Ҡармасан менән Сәрмәсән») — йыйылма текстарҙан ғибәрәт.

Аҙаҡ килеп, шуныһын да әйтеү зарур. Һүҙ ахыры рәүешендә тәҡдим ителгән мәҡәләнең «Сыңғыҙнамә» хаҡындағы өлөшөн — Миңлеғәли Нәҙерғолов менән Ғайса Хөсәйенов, шәжәрәләрҙәге эпик сюжеттар хаҡындағыһын, Әхмәт Сөләймәновты йәлеп итеп, өсәүләшеп яҙҙылар. «Күлтәгин»гә — Миңлеғәли Нәҙерғолов менән Әхмәт Сөләймәнов; Уғыҙ хан, Мөйтән бей, Сура батыр сюжетына һәм «Ләйлә менән Мәжнүн» дастанына — Ғайса Хөсәйенов менән Әхмәт Сөләймәнов; «Ҡорҡот ата», «Аҡһаҡ Тимер», «Ғайса улы Әмәт» сюжеттарына Ғайса Хөсәйенов күҙәтеүҙәр яһаны. «Әҙәм менән Иблис» ҡиссаһын Флүр Сибәғәтов анализланы, ҡалғанын Әхмәт Сөләймәнов яҙҙы. Йәнә шул: «Ҡорҡот ата», «Уғыҙ хикәйәте», «Мөйтән», «Сура батыр» (26-сы текст) дастандары — Ғайса Хөсәйенов; «Сыңғыҙнамә», «Аҡһаҡ Тимер», «Ғайса улы Әмәт», «Тәтегәс бей», «Ҡазанфари заманы — ике Килмәт низағы» һәм «Аңлатмалар» менән «Һүҙлек»тең әле исеме сыҡҡан текстарға ҡараған өлөшө — Миңлеғәли Нәҙерғолов менән Ғайса Хөсәйенов бергәләшеп әҙерләгән баҫмаларҙан, «Түлле Мәмбәт» дастанына ҡағылышлыһы ошо әҫәрҙең ҡулъяҙмаһын табып, текстологик яҡтан анализлап, уны тәүләп киң йәмәғәтселеккә мәғлүм иткән шағир Ҡәҙим Аралбаев баҫтырған китаптан алынды. Томды төҙөү эшен һәм уны, әле һеҙ тотоп ултырған хәлгә килтереү өсөн, талап ителгән башҡа мәшәҡәттәрҙең барыһын да Әхмәт Сөләймәнов атҡарҙы. Уны тикшереүҙә ҡатнашып, файҙалы кәңәштәр биргән Фәнүзә Нәҙершинаға, Салауат Галинға, Берйән Байымовҡа, Розалиә Солтангәрәеваға, Закир Әминевҡа, Гөлнур Хөсәйеноваға, Ринат Йосоповҡа һәм башҡаларға мөхәрририәт үҙенең рәхмәтен еткерә.



# ИНЕШ

## Яҙма ҡисса һәм дастандарыбыҙ

Мәғлүм булыуынса, эпос, фольклорҙың бүтән жанрҙары һымаҡ уҡ, борон-борондан телдән ижад ителеп, телдән башҡарыла килгән. Әммә, яҙыу-һыҙыу мәҙәниәте хасил булғандан һуң, йыр, бәйеттәрҙе генә түгел, күләмле һәм олпат булыуына ҡарамаҫтан, быңдай әҫәрҙәрҙе лә яҙып ижад итеү осраҡтары күҙәтелә башлай. Ошо хаҡта һүҙ сыға ҡалһа, ғәҙәттә, гректың мәшһүр «Илиада» һәм «Одиссея» поэмаларын, эстондарҙың «Калевипоэг»ын, йәнә килеп финдар менән карелдарҙың милли ғорурлығы иҫәпләнгән «Калевала» тигән эпостарын иҫкә алыусандар. Тикшеренеүселәрҙең фараз итеүенсә, әле аталған дүрт эпик поэманың тәүге икәүһе (ә уларҙы ғилми яҡтан өйрәнеү тарихы ике йөҙ йылға тартыла[1]) б.э.т. VIII быуаттан һуң ғына ижад ителеүе мөмкин. Ни өсөн тигәндә, гректар бары шул йөҙйыллыҡта ғына яҙыу мәҙәниәтенә ирешкән халыҡ булыуға өлгәшә. Ә бының өсөн улар өр-яңы алфавит уйлап табыу мәшәкәтен кисереп тормайҙар, финикейҙарҙыҡын үҙләштерә лә ҡуялар.

«Илиада» менән «Одиссея» поэмаларын Гомер ижад иткән, тиҙәр. Уларҙы ул үҙ ҡулы менән яҙғанмы, әйтеп кенә яҙҙырғанмы (сөнки уның һуҡыр булыу-булмауы, күҙҙән яҙа ҡалһа, был фажиғәгә ул йәш сағында тарыймы әллә ҡартайғасмы), әлегәсә аныҡ мәғлүм түгел. Үҙе легендар шәхес булғас, ундай аныҡлыҡҡа нисек ирешһендәр инде. Әммә беҙҙең өсөн шуныһы мөһим: сәсән затлы шул шағир Троя һуғышы хаҡындағы был әҫәрҙәрен үҙ халҡының ауыҙ-тел репертуарында һаҡланған миф, легенда, риүәйәт, эпик ҡомартҡыларға таянып ижад иткән. А. Ф. Лосев һүҙҙәре менән әйткәндә, «быуаттар

[1] Лосев А. Ф. Гомер. — М.: Госпедизат МП РСФСР, 1960; — С. 5—6; Зайцев А. И. Древнегреческий эпос и «Илиада» Гомера// Гомер. Илиада/Пер. Н. И. Гнедича; Изд. Подготовил А. И. Зайцев. — Л.: Наука, 1990. — С. 394.

һынауын үткән ауыҙ-тел ижадын ипкә килтергән»[2]. Сараһыҙҙың көнөнән шулай иткән ул. Сөнки б.э.т. 1260 йылда булып үткән ул ҡырғын хаҡында бәйән итеүсе бүтән сығанаҡ ул саҡта мәғлүм булмаған[3].

XX быуатта Венгрияла төркиәттең алға китеүенә ҙур өлөш индергән күренекле ғалим һәм дипломат Иосиф (Йософ) Торма 1979 йылда Башҡорт дәүләт университеты студенттары алдында сығыш яһағанында: «Һеҙ, башҡорттар, — бәхетле халыҡ. Сөнки һеҙҙең эпосығыҙ бар», — тигәйне, үҙ халҡының, Урал артылып, IX—X быуаттарҙа Дунай буйына күсенеп китеүе арҡаһында, милли эпос традицияһын юғалтыуына үкенеп. Күрәһең, милли фольклорҙа эпос һаҡланып ҡалмауын карелдар, эстондар менән финдар ҙа рухи мәҙәниәттәренең ҙур кәмселеге тип белгән. Уларға ла әлеге венгр ғалимы кисергән тойғо яҡшы таныш булған. Әммә улар, үҙҙәренең венгр ҡәрҙәшенән айырмалы рәүештә, үкенес белдереү менән генә сикләнеп ҡалмағандар: XIX быуаттың тәүге яртыһында уҡ уларҙың уҡымышлылары дәррәү рәүештә ошо бушлыҡты тулыландырыу эшенә тотона. Халыҡ йырҙарын (Балтик буйын төйәк иткән был ҡәүемдәр уларҙы рундар тип атай) ҡоршаштырып, легенда, риүәйәттәрҙе лә йәлеп итеп, 1835 йылда фин фольклорсыһы Ленрот Элис бар донъяға «Калевала» тигән исеме менән мәғлүм булған эпик поэманы яҙа. Ана шул әҫәр — бөгөн булһын финдар менән карелдарҙың уртаҡ милли эпик ҡомартҡыһы хисабында.

Ленрот Элис ҡулланған ысул (йәғни йыйылма эпос тексы төҙөү ысулы) эстондың Фельман Фридрих Роберт тигән фольклор белгесе менән ул башлаған эште тамамлап ҡуйған Крейцвальд Фридрих Рейнхольдҡа ла ярап ҡала. Тап ана шул икәүҙең тырышлығы менән 1857-1861 йылдарҙа йыйылма эпос тексы төҙөлә. Хәҙерге көндә эстон халҡы үҙенең милли ғорурлығы иҫәпләгән «Калевипоэг» эпосы бына шулай тыуа.

Яҙма рәүештә йыйылма текслы эпик әҫәр яҙыу тәжрибәһе төрки халыҡтарына, шул иҫәптән башҡорттарға ла, бик борондан таныш булған.

Тарихи яҡтан ҡарағанда, эш былай тора. «Татар-монгол яуы ваҡытында күп ҡалалар, мәҙәни үҙәктәр ҡыйратылһа ла, Алтын Урҙа дәүләте иҡтисади, сәйәси яҡтан яйлап нығына башлағас, Һарай Бәркә, Һарай Бату, һуңғараҡ Һарайсыҡ һымаҡ ҡалалар барлыҡҡа килгәс, XIV быуатта ҡала мәҙәниәтенең яңынан тернәкләнеүенә (йәғни теремекләнеүенә. — *Ә. С.*), сәнғәт һәм яҙма әҙәбиәттең мәғлүм кимәлдә үҫешенә юл асылған. Волга буйындағы үҙәк ҡалаларҙа ғалимдар, яҙыусылар йәшәгән, Алтын Урҙаның алыҫ төбәктәренән был ҡалаларға байтаҡ ғалимдар ... күсеп килгән»[4].

Башҡорттар йәшәгән биләмәлә ереле-ваҡлы ҡырҡлап ҡала булғаны мәғлүм. Ҡала мәжлестәрендә сәсәндәр, шағирҙар, йырауҙар,

---

[2] Там же. — С. 32.

[3] Зайцев А.И. Древнегреческий эпос. — С. 399—400.

[4] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 1-се том: Урта быуаттар осоро. — Өфө: БКН, 1990. — 166-сы б.

халыҡ музыканттары (ҡурайсылар, думбырасылар, башҡаһы), сәмләнешә-сәмләнешә, үҙ һөнәрен күрһәтер булған. Иртыш-Днестр араһын, Болғар, Хәрәзм илен, Себер киңлектәрен, Каспий буйҙарын иңләгән Алтын Урҙала «иҫке төрки әҙәби телдең ерле һөйләштәге ҡыпсаҡ тел элементтары менән ҡушылған ҡатнаш төрки әҙәби теле формалашҡан».[5]

«Ерле һөйләштәге ҡыпсаҡ тел элементтары менән ҡушылған төрки әҙәби тел»ен башҡорттар ҙа һәйбәт үк үҙләштерә. Шул сәбәптән дастансылыҡ традицияһы уларға ла яҡшы таныш була. Аныҡлаңҡырап әйткәндә, башҡорттар шул дөйөм төрки ҡомартҡыларын, оҙайлы дәүерҙәр һынауын кисергән милли эпик традицияларыбыҙ иләгенән үткәреп кенә, шул традицияларға яраҡлашырҙайҙарын яраҡлаштырып ҡына, ҡабул иткән. Ҡаурый ҡәләм тибрәтерлек дарманы булған һүҙ оҫталарыбыҙ иһә бына шулай үҙләштерелгән дөйөм төрки дастандарын да, үҙҙәре ишетеп белгән милли эпик сюжеттарыбыҙҙы ла шулар йоғонтоһонда һәм шулар өлгөһөндә аҡ ҡағыҙға теркәү хәстәрен күрер булған. Ана шундай милли эпик ҡомартҡыларыбыҙҙы, шулай уҡ төрлө тәуарих, шәжәрәләргә теркәлгән эпик сюжеттарҙы, төрлө риүәйәт, легенда, эпик мотивтарҙы үҙәк бер тема, идея тирәһенә ойоштороу һөҙөмтәһендә хасил булған «коршаулы», йәғни йыйылма эпик әҫәрҙәрҙе беҙ ҙә яҙма эпостар рәтенә индерергә хаҡлыбыҙ. Яҙыу мәҙәниәтен үҙләштергән кеше тарафынан теркәлгәнлектән (йәки «коршалғанлыҡтан»), традицион эпостан айырмалы рәүештә, бындай әҫәрҙәргә индивидуаль ижад башланғыстары хас булыуы ҡотолғоһоҙ. Шуға күрә лә, традицион эпостарыбыҙҙан айырмалы рәүештә (һәм айырыу өсөн дә), уларҙы яҙма дастандар тип атарға булыр ине.

Академик Ғ. Б. Хөсәйенов раҫлауынса, «тел-стиль үҙенсәлектәре, шиғыр формаһы, тимәк, жанр тәбиғәте ҡабатланмаҫ милли» булыуҙарына ҡарамаҫтан, «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Алпамыша менән Барсынһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» кеүек эпик ҡомартҡыларыбыҙ ҙа «дастансылыҡ традицияһынан йәки йоғонтоһонан килгән» һыҙаттарға эйә булғас[6], яҙыу мәҙәниәте ҡағылғандарына ни һан! Миҫал өсөн төрки халыҡтарының байтағы өсөн уртаҡ мираҫ иҫәпләнгән «Сыңғыҙнамә»нең башҡорт версияһына иғтибар итеп ҡарайыҡ. Башҡорт уҡымышлылары араһында XVII быуаттан уҡ киң билдәле булған, ҡарамаҡҡа, бары тарихи ваҡиғалар, факттар теҙмәһе рәүешендә күҙалланған был әҫәрҙе уҡый башлауың була — шунда уҡ, күптән таныш традицион сюжеттарға юлығаһың. Иң тәүгеһе — фольклор ғилемендә шартлы рәүештә «Хакимдың бикле ҡыҙы» һәм «Мөғжизәүи юл менән ғоманлы булыусы ҡыҙ» тигән ике мотивтың контаминацияһынан тора. Тәүгеһенең килеп сығышын былай аңлаталар. Борон-борон заманда хакимдар раббы (божество), илаһ (бог) хисабында булған. Шуға күрә

[5] Шунда уҡ. — 169-сы б.

[6] Хөсәйенов Ғ. Б. Башҡорт әҙәбиәтенең жанрҙар системаһы. — Өфө: 1980. — 15-се б.

уларға әҙгә генә булһа ла тәхетле һарайҙан сығыу ҡәтғи тыйылған. Был фекерҙе, төрлө ҡитғалағы төрлө-төрлө илдәрҙә тупланған бик күп этнографик материалдарға нигеҙләнеп, инглиз ғалимы Дж. Фрезер яҙып ҡалдырған. Рус фольклорсыһы В. Я. Пропп әйтеүенсә, бындай тыйыуҙар, батшаларға ғына түгел, уларҙың вариҫтарына ла ҡағылған һәм фарыз иҫәпләнгән[7]. Экиәт сюжеты типтарының Аарне-Томпсон системаһындағы күрһәткесендә АТ 575 тип тамғаланған «Хакимдың бикле ҡыҙы» тибындағы мотивҡа нигеҙләнгән мажаралы сюжеттың донъя фольклорында киң билдәле булыуы — был әйтелгәндәргә тос дәлил ул.

Бындай мотив һиндтарҙың Вишна исемле раббыһы ултырып оса торған Гаруда тигән тылсымлы ҡош хаҡындағы мифтарҙа; һинд, тибет, монгол, ҡалмыҡтарҙың «Веталының 25 хикәйәһе», «Веталының әҙәм балаһы менән уйнағаны», «Тылсымлы мәйет», «Шидит-хюр» (N2), «Панчатантра» (1-се китап, № 8), ғәрәптең «Мең дә бер кисә» («Ҡара ағастан эшләнгән ат»,357—3712-се кисәләр), башҡорт халҡының «Ғабдрахман» (АТ 575 «Ағас бөркөт»), «Һалдат тураһында экиәт «(АТ 954 «Алтын тәкә»), «Таҙҙың һалдат булғаны, шунан батша булғаны» (АА *855 «Һалдат менән батша ҡыҙы»), «Буйҙаҡ батшаның төштә ғашиҡ булғаны, өндә кәләш алғаны» ( АТ 725* «Төштә ғашиҡ булыу») + *875** («Ир-атты күралмаған ҡыҙҙың кейәүгә барғаны») ише новеллистик экиәттәрендә файҙаланылған[8]. Уның асылы шул булыр: ир-ат күҙенән йәшереп, бикләп ултыртып ҡына, аҫыралған хаким ҡыҙы янына хәйлә ярҙамында (йә берәй музыкаль инструмент, сәғәт эсенә ултырған хәлдә, йә тылсымлы осҡосонда, йә икенсе кеше урынына) ингән егет йәшерен рәүештә уның менән ирле-ҡатынлы булып йәшәй башлай... Был мотив «Сыңғыҙнамә»лә һүҙмә-һүҙ ҡабатланмай, әлбиттә: үҙенсәлекле интерпретацияла ҡулланыла. «Үҙенсәлекле»леге шунан ғибәрәт: ят күҙҙән һаҡлау ниәтенән һарайға бикләнгән ҡыҙ янына берәй егеттең инеү-инмәүе хаҡында был әҫәрҙә бер һүҙ ҙә юҡ. Әммә юғарыла телгә алынған әҫәрҙәр ише миҫалдар менән таныш уҡыусы ир-ат затынан бер хәйләкәр тарафынан тап бына шундай мутлыҡ ҡылынғанына барыбер ҙә төшөнә. Сөнки эштең һөҙөмтәһе бер үк: бикле ҡыҙ ғоманлы булған. Әйтерһең, «Сыңғыҙнамә»не яҙыусылар, әлеге популяр мотивтың беҙгә таныш булыуына иҫәп тотҡандар ҙа, этик маҡсаттарҙан, уны төшөрөп ҡалдырып, урынына күп нөктәләр ҡуйыу менән генә сикләнгәндәр, әммә күсе-рәктән-күсереккә күсерә килә, ул нөктәләрҙе лә төшөрөп ҡалдырып бөткәндәр. Әйтерһең, тим. Сөнки боронғо яҙмаларға күп нөктә ҡуйыу бөтөнләй хас түгел. Әммә әле әйтелгәндәр этик маҡсаттарҙан сығып эш итеү мәсьәләһен инҡар итмәй. «Янына хәйлә менән ингән егеттән бикле ҡыҙҙың ғоманлы ҡалғаны» мотивының «Сыңғыҙнамә»лә бөтөнләй икенсе мотив менән, асығын әйткәндә, «Мөғжизәле юл менән

---

[7] Фрезер Д. Ж. Золотая ветвь. /БМ., 1928. — С.43; Пропп В. Я. Исторические корни волшебной сказки. — Л.: Изд-во ЛГУ, 1968. — С.41.

[8] БХИ: Экиәттәр. 2-се кит./Төҙ. Марат Минһажетдинов, Әхнәф Харисов; яуаплы мөхәрр. Нур Зарипов. — Өфө: БКН, 1976. — 351-се б.; № 37; БХИ: Экиәттәр. 4-се кит. — №№ 49,50,56.

ғоманлы булыу» мотивы менән алмаштырылыуы ла тап шул этик маҡсаттар менән аңлатыла. Ә уның асылы шунан тороп: Аҡ диңгеҙ эсендәге Мәлтә тигән шәһәр хакимы Алтын хандың Күрләүеч тигән ҡатынынан тыуған Ғөләмлек Күркле тигән ҡыҙы, янына бер ниндәй ир-ат заты ингәне һиҙелмәһә лә, һарайҙа бикле ултырыуына ҡарамаҫтан, ауырға ҡала: йәнәһе, быға көн яҡтыһы сәбәпсе. Аңлашыла торғандыр. Беҙгә новеллистик сюжеттарҙан таныш булған «Хакимдың бикле ҡыҙы» мотивының аҙағы шулай интерпретацияланғас, ғоманлы булыуына ҡарамаҫтан, хаким ҡыҙы ғиффәтен һаҡлап ҡалған булырға тейеш. Эйе. Дастанды ижад итеүселәр, осо осҡа ялғанһын өсөн, был мөһим моментты ла иҫәпкә алғандар. Уның менән ҡауышҡан Тумауыл Мәргән (Сыңғыҙ хандың олатаһы) тәүге никах төнөнән һуң, йәнәһе: «Үҙе быуаҙ — үҙе ҡыҙ!» — тип ғәжәп итә була.

«Хакимдың бикле ҡыҙы» мотивы дастанда икенсе төрлө интерпретация алған һымаҡ, «Мөғжизәле юл менән ғоманлы булыу» мотивы ла төрлөсә вариантлашырға мөмкин. И. Я. Бичурин теркәп ҡалдырған бер ҡытай легендаһы буйынса, бер аҫрау ҡыҙ, хужаһы өйҙә юҡта, күктән йомортҡа ҡиәфәтендә килеп төшкән һауанан ғоманлы була. Абдулҡадир Инан телгә алғаны буйынса, Молоһеү тигән бер саньби татары өс йыл яуҙа йөрөп ҡайтыуына, ҡатыны бала таба ла бының сәбәбен шулай аңлата: йәнәһе лә күк күкрәгәндә, ауыҙына борсаҡ ҙурлыҡ боҙ килеп инә лә уны ауырға ҡалырға мәжбүр итә. «Мөғжизә юлы менән ғоманлы булған ҡыҙ» мотивы алтайҙарҙа ла ошолайыраҡ интерпретациялана икән[9].

Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: «мөғжизәле юл менән ғоманлы булған ҡыҙ» мотивы «Сыңғыҙнамә» контексында, бер түгел, ике мәртәбә файҙаланылған. Ғөләмлек Күркленең «көн яҡтыһынан тыуған» улы Дуйын Байан үлгәс, уның ҡатыны Аланғужа ла, йәнәһе, көн яҡтыһынан ғоманлы була. Таныш мотив был осраҡта бына нисек интерпретациялана: йәнәһе, үлер алдынан Дуйын Байан, үҙе иҫкәрткәнсә, Аланғужаның сатырына үҙе үк көн яҡтыһы булып инә лә бүре булып сығып китә, һәм бисәһе хан тәхетенә ирешәсәк Сыңғыҙға ауырға ҡала. Тимәк, таныш мотив, әле генә әйтелгәненсә, файҙаланыуға ике тапҡыр файҙаланыла, әммә һүҙмә-һүҙ ҡабатланмай, улай ғына ла түгел, вариантлашыу менән генә лә сикләнмәй, бөтөнләй үҙ аллы версия хасил итә.

«Сыңғыҙнамә» дастанының йыйылма тексын төҙөгәндә, йәнә бер сюжет өр-яңыса интерпретацияланған. Һөҙөмтәлә уның да яңы версияһы хасил булған. Беҙгә ул сюжет Н. Ф. Катанов теркәп ҡалдырған бер легенда буйынса мәғлүм. Уның асылы шунан ғибәрәт: «донъя яралған мәлдә» йәшәгән, «бер кәүҙәһендә биш баш, ун күҙе» булған бер заттың ҡатынының толомо, хәттин ашып, оҙон була. Тотам да ҡалмай, артынан йөрөгән көңө (хеҙмәтсе ҡыҙы, ҡоло) уның толомон,

---

[9] Бичурин И. Я. Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии... — М.; Л., 1950. — С.21; Инан Абдулҡадир (Фәтхелҡадир Сөләймәнов). Эпос һәм хөрәфәт мотивтарының әһәмиәте//Ватандаш. — 2000. — № 4. — 154-се б.

һөйрәлмәһен өсөн, алтын табаҡҡа һалып, тотоп йөрөр булған. Ҡатынының үтә аҡыллы булыуына көнләшеп, бер саҡ теге зат уның толомон киҫеп ташлай була[10]. «Сыңғыҙнамә» дастанында был легенда сюжеты ла әҫәрҙең йөкмәткеһенә яраҡлаштырылған. Бында, Сыңғыҙ хакимлыҡ итә башларға торғанда ғына, уға оппозицияла торған Ҡуңғрат бейҙең ҡыҙ ҡарындашы Бүртә Ҡучин шул тиклем оҙон сәсле итеп күрһәтелә: «Андаҕ сулу кешене ул заманда һич күрәсе юҡ ирде. Тәңре ҡөдрәте берлән пәйдә булмыш ирде. Ҡырҡ ҡолач сәче бар ирде. Артындин дәйәсе алтун табаҡҡа сәчен салып йөрөтөр ирде». Аңлашыла торғандыр, Катановҡа мәғлүм булған мифологик сюжет был осраҡта, реаль ерлеккә еректерелерлек итеп интерпретацияланған.

«Сыңғыҙнамә» дастанында Сыңғыҙ хандың нәҫел-нәсәбенең Нух пәйғәмбәргә алып барып ялғаныуын, уның улы Йәфеттың (Йәфестең) төрки ҡәүеменә ҡанбаба булыуын күрһәтеү ҙә — асылда, традицион бер мифологик мотивты тарихи шәхескә яраҡлаштырыу маҡсатынан, уны ер-яңынан интерпретациялауҙан ғибәрәт. Зат-зориәттың сығышын затлыраҡ итеп күрһәтеү өсөн, уның тамырҙарын күренекле шәхескә, әүлиәләргә, пәйғәмбәрҙәргә, хатта ки изгеләштерелгән ҡош-ҡортҡа алып барып бәйләү — төрки нәҫел-нәсәбнамәләре өсөн традицион булған. Ошо мотив «Сыңғыҙнамә»ләге кеүегерәк, төркиҙәрҙең айырым ырыуҙарының шәжәрәләрендә лә, шул иҫәптән башҡорт ырыуҙарыныҡында ла (мәҫәлән, «Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, һәм Тамъян башҡорттары ырыуҙары шәжәрәһе», «Башҡорттоң Ҡары-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе»ндә лә) ҡабатлана.[11]

Ваҡ деталдәре мәсьәләһенә инеп тормаҫтан, традицион тематик мотив һәм сюжеттарҙы, үҙәк идея талап иткәнсә, төп сюжет һыҙығына яраҡлашырлыҡ итеп («төп нөсхә» тип иҫәпләнгәненән айырмалы рәүештә), бөтөнләй икенсе төрлө интерпретацияланыуы, бер үк сюжет эсендә үк ярҙамсы сюжет һәм мотивтарҙың вариантлашыуы, хатта ки версиялар хасил итеүе һымаҡ билдәләренән сығып ҡына ла, «Сыңғыҙнамә»нең йыйылма текстан торған яҙма дастан икәненә инанырға була. Әле әйтелгәндәр иһә үҙ нәүбәтендә уның аноним авторының (йә уның авторҙаштарының) үҙ заманы өсөн, тарих йәһәтенән генә түгел, фольклор йәһәтенән дә төплө мәғлүмәткә эйә булғанлығы хаҡында уйландыра.

«Сыңғыҙнамә» үҙенең килеп сығышы менән XVI быуат тирәһенә ҡараһа, йыйылма текслы «Түлле Мәмбәт» XX быуат баштарында төҙөлөп бөткәнгә оҡшай. Әммә «Сыңғыҙнамә» хаҡындағы фекеребеҙҙе һис бер икеләнеүһеҙ «Түлле Мәмбәт» дастаны хаҡында ла ҡабатларға була. Башҡорттоң Үҫәргән ырыуының бер тармағын тәшкил итеүсе Мәмбәт ҡәүеменең барлыҡҡа килеү тарихын быуын-быуын тәфсирләп тиреп сыҡҡан был әҫәр ҙә йыйылма текстан торған яҙма дастан үрнәге тип ҡаралырлыҡ. Сөнки уны төҙөүсе үҙ ҡәүеменә бәйле риүәйәттәрҙе лә, йыр, көләмәстәрҙе лә, үҙенең шәхси күҙәтеүҙәрен дә, сәйәси ҡараштарын да, тарихҡа, тыуған ергә, халҡына мөнәсәбәтен

---

[10] Катанов Н. Ф. Среди тюркских народов // ИРГО. — Б.М., Б.Г-Т.XXIX. — С.6/254.

[11] Башкирские шежере. — С.75—80, 102—105, 196, 205.

дә, уның яҙмышы хаҡындағы уйланыуҙарын да, ҡайҙа публицистарса, ҡайҙа юмористарса, ҡайҙа халыҡ педагогияһы күҙлегенән фәһемле бәйән итә.

Был томға тәҡдим ителгән «Ҡорҡот ата», «Уғыҙнамә», «Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей», «Мөйтән», «Түлле Мөйтән» ише дастандар ҙа, асылда, тәнҡиди йыйылма текстарҙан ғибәрәт. Уларҙың ҡайһы берҙәренең сюжеты төрки ҡәрҙәштәребеҙҙең башҡалары менән дә уртаҡ.

Төрлө (дини йә донъяуи) яҙма сығанаҡтарҙа билдәле бер идеяны уҡыусыларға ла, тыңлаусыларға ла эмоциональ итеп еткереү маҡсатында, күләмле цитата рәүешендә килтерелеп тә, контекстан айырылған хәлдә, билдәле кимәлдә үҙаллылыҡҡа эйә булған сюжеттарға таянып ижад ителгән әҫәрҙәрҙе лә беҙ яҙма ҡисса һәм дастандар иҫәбенә теркәргә хаҡлыбыҙ. «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының 6-сы томына индерелгән «Йософ менән Зөләйха» дастанының Ҡол Ғәли ижад иткән версияһы — ана шундай яҙма дастандарҙың классик үрнәге ул. Мәғлүм булғанынса, башҡорт сығышлы был төрки шағиры уны «Көрьән Кәрим»дең «Йософ» тигән сүрәһендә бирелгән ҡиссаға таянып ижад иткән (әлбиттә, бында шағирҙың ошо уҡ сюжетҡа башҡалар ижад иткән әҫәрҙәр менән, шул иҫәптән Насретдин Рабғуҙиҙың һ. б. « Ҡиссасил-әл-әнбиә»ләре менән таныш булыу ихтималын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай). Ә «Көрьән»гә ул сюжет «Тәүрат»тан алынған. Тәүратҡа иһә — боронғо сүмәр, аккад ҡомартҡыларынан, уларына шул ҡәүемдәрҙең ауыҙ-тел ижадынан килеп юлыҡҡан тигән фекер бар. Былар хаҡында 6-сы томға һүҙ ахыры итеп бирелгән мәҡәләлә һәм «Аңлатмалар»ҙа әйтеп үтелгән ине инде.

Әле һеҙ ҡулға алған томда «Көрьән Кәрим» сюжетына нигеҙләнгән йәнә бер эпик әҫәр тәҡдим ителә. Беҙ бында Иблис ҡотҡоһона бирелеп, Аллаһы тәғәләнең киҫәтеүен боҙоуҙары арҡаһында Атабыҙ Әҙәм менән Инәбеҙ Һауаның йәннәттән ҡыуылыуы хаҡында буласаҡ халыҡ шағиры Мәжит Ғафури яҙған «Әҙәм вә Иблис» тигән ҡиссаны күҙ уңында тотабыҙ.

Табын ырыуының фольклор репертуарында мифик затлы йүгерек арғымаҡ хаҡында бәйән итеүсе бер легенда һаҡлана. Мәшһүр тел белгесе Жәлил Кейекбаев тарафынан 1945 йылда яҙып алынған уның бер версияһы был томды уҡыусыларға күптән таныш булырға тейеш. Сөнки ул ҡайта-ҡайта донъя күрә тора («Аңлатмалар»ҙы ҡарағыҙ). Үҙе үк яҙып алған шул легенданың сюжетын Ж. Кейекбаев үҙенең «Туғандар һәм таныштар» романында ижади файҙаланған. Ижадилығы шунан ғибәрәт: автор уны әҫәренең төп темаһына һәм төп идеяһына яраҡлаштырып, айырым персонаждарының образын асыҡлау маҡсатынан өр-яңынан интерпретациялаған. Романында ул Әҙһәм тигән персонаж ауыҙынан дастан рәүешендә бәйән ителә. Халыҡтың легендаһының яңыса интерпретацияланыуына шул миҫал: мифологик сюжетҡа романда донъяуи йөкмәтке һалынған — легендалағы мифик Аласабыр романда ҡәҙимге ат рәүешендә һынландырыла. Бынан тыш телдән яҙып алынған версияһында Әбрәй тигән батыр бөтөнләй юҡ. Фольклор репертуарында ул — үҙ аллы бер риүәйәт

геройы. Романда шул риүәйәт менән әлеге мифологик легенда Әҙһәм ҡарт ауыҙынан бер дастан рәүешендә бирелгән, йәғни автор ике сюжетты контаминациялап, йыйылма сюжет төҙөгән. Әбрәй батыр унда Аласабыр менән бер ҡатарҙан төп герой урынын алған. Был сюжетты ла беҙ, бер аҙ шартлы рәүештә булһа ла, яҙма дастандар рәтенә индерәбеҙ.

Әлбиттә, был әҫәрҙә үҙ аллы дастандар рәтенә индереп, уны «Әҙәм вә Иблис» менән бер рәттән ҡараһаҡ та, художестволы форма булараҡ уларҙың статусы бер тигеҙ түгел икәнен дә онотмайбыҙ. Хикмәт бында береһенең дини йөкмәткеле һәм теҙмә телмәр рәүешендә ижад ителеүендә генә лә түгел, Мәжит Ғафури яҙғанының инде «Ҡөрьән» тигән ғәжәп поэтик изге китап контексынан айырып алынған сюжет нигеҙендә үҙ аллы йәшәгән әҫәр булыуында, Ж. Кейекбаевтыҡының иһә роман контексында ҡалыуында. Халыҡ репертуарынан шәжәрәләргә килеп инеп, уларҙың төп идеяһына яраҡлаштырылған эпик сюжеттар хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була. Шуға күрә «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» сюжетын да, шәжәрә контексынан айырып алынған «Тәтегәс бей», «Ҡыпсаҡ затлы Ямғырсы бей менән Ҡусҡар бейҙең яңы ил тапҡаны», «Ҡазанфари бей заманы — ике Килмәт низағы» сюжеттарын да яҙма дастан тип атауыбыҙҙың да шартлы икәнен оноторға ярамаҫ.

«Әҙәм менән Иблис» ҡиссаһы менән «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» һәм шәжәрәләр контексынан алынған дастандарҙың, жанр статусы алыу хоҡуҡтары бер тиң булмаһа ла, уларҙы яҡынлаштырған принципиаль бер билдә бар: уларҙың барыһы ла әҙер сюжетҡа таянып, яҙма рәүештә ижад ителгән.

Әммә шәжәрәгә теркәлгәндәре (һәр хәлдә, Мәмбәт ырыуы хаҡында бәйән иткәненән башҡалары) телдән бәйән ителгәндең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен теркәү менән генә сикләнгәнгә оҡшай. Сөнки уларҙа, сюжеттың мөмкинлеге еткән сүрәттә лә, шул мөмкинлек тулыһынса файҙаланылмаған: шәжәрәсе, йәйелеп китеп хикәйәләүҙән тартынған һымаҡ, сюжеттың мөһим компоненттарын барлағандай, шуларға ярашлы рәүештә фабула теркәү менән генә сикләнгән. Ә инде әҙип ҡулы ҡағылған сюжеттар тулы ҡанлы үҙ аллы әҫәр кимәленә еткерелгән. Ошо яҡтан ҡарағанда, һуңғыларына «Һуңғы Һартай» эпосы сюжетына нигеҙләнеп тә, уны мәғәнәүи яҡтан икенсе төрлөрәк интерпретациялаусы «Ялыҡ бей, Ҡармасан менән Сәрмәсән» дастаны, айырыуса «Ҡуңыр буға» эпосы менән бер художестволы комплекс хасил итеүсе «Минәй батыр менән Шүлгән батша» дастаны яҡын.

«Ҡорҡот ата», «Уғыҙ хикәйәте», Сыңғыҙнамә» хаҡында һүҙ сыҡҡанда, уларҙың башҡа төркиҙәр менән уртаҡ хазина икәне әйтелгәйне инде. Был исемлекте һеҙ асаһы томдағы «Ләйлә менән Мәжнүн», «Аҡһаҡ Тимер», «Ғайса улы Әмәт» кеүек әҫәрҙәр тулыландыра. Быларҙан тыш ошо уҡ төркөмгә тағы бер уртаҡ әҫәрҙе индерергә була. Ул — мәшһүр Орхон-Йәнәсәй руник яҙмаларының Күлтәгин бабабыҙға бағышланған өлөшөнөң хәҙерге әҙәби телебеҙгә күсермәһенән ғибәрәт. Был эште Мәүлит сәсән Ямалетдинов атҡарғайны. Уны ла яҙма дастандарыбыҙ рәтендә береү урынлы булыр тигән фекерҙәбеҙ. «Ялыҡ бей» эпосын, төп сюжет һыҙығынан да, йөкмәткеһенән

дә тайшанмайынса, ул яҙған теҙмәүер хәлендәге варианты хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була. Сәсмәүер рәүешендәге ошо дастанды теҙмә телмәрҙә «һөйләшергә мәжбүр итеү» эшен тәүләп рус шағиры Роберт Паль атҡарғайны. Шиғри формаһына һәм йөкмәткеһенә əҙ генә булһа ла үҙгәреш индермәү маҡсатынан, ул яҙған «Ялыҡ бей» поэмаһы тулы килеш томдың «Аңлатмалар» өлөшөндә бирелә.

Яҙма ҡисса һәм дастандар тигәндә, боронғо китаптарҙан хәтерҙә ҡалғанды бәйнә-бәйнә бәйән иткәндән хасил булған һәм ҡағыҙға теркәлгән әҫәрҙәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмау хәйерле. Шундайҙарҙың береһе — «Ләйлә менән Мәжнүн» дастаны булһа, китапҡа ингән икенсеһе — Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев теркәп ҡалдырған «Аҡташ хан» дастаны булыр, өсөнсөһө — Ейәнбай Тимербай улы Усманов һөйләгәнде шағир һәм тел ғалимы Рәшит Шәкүр ҡағыҙға теркәгән «Заманалар ҡиссаһы».

Ахырҙа, әле әйтелгәндәрҙән сығып, һығымта урынына шуларҙы ла өҫтәп ҡуйыу кәрәктер. Яҙма дастан һәм яҙма ҡиссаларҙың иң мөһим үҙенсәлеге шунан ғибәрәт: әйтелгәндәрҙән үк аңлашылыуынса, уларға традицион һәм индивидуаль башланғыстар берлеге хас. Ә бына шуларҙың нисбәте нисек — быныһы үҙе бер тикшеренеү темаһы булырлыҡ.

Телдән таралған эпик ҡомартҡыларҙан айырмалы рәүештә, яҙма дастандарҙа деталләп тасуирлау мөмкинлеге ҙур. Сөнки, телдән тәүләп башҡарғанда, деталләүҙәр булған сүрәттә лә, ундай ваҡлауҙарҙы һүҙмә-һүҙ хәтерҙә тотоуы ла, ишеткәнде икенселәргә һөйләгәндә, иҫкә төшөрөү ҙә ҡыйын. Ә яҙма рәүештә ижад иткәндә, ҡағыҙға ваҡ ҡына деталдәрҙе лә төшөрөү мөмкинлеге була. Әгәр ҙә бөгөнгө компьютер технологияһын ҡулланып, «Йософ менән Зөләйха» кеүек танылған яҙма дастандың Ҡол Ғәли версияһын башҡа шағирҙар ижад иткәндәре, изге китаптарҙағылары, ауыҙ-тел репертуарынан яҙып алынғандары менән сағыштырып тикшергәндә, әҫәрҙең яҙма вариант һәм версияларындағы тасуирламаларҙа нимәгә нығыраҡ иғтибар ителеүе, индивидуаль ижад башланғысы нимәлә күренеүе, ә телдән яҙып алынғандарында ниндәй компоненттар күпмегә тотороҡло, ниндәйе үҙгәреүсән икәнен билдәләргә булыр ине. Ә был беҙгә дастандарҙа традициялылыҡ һәм индивидуаль башланғыс мәсьәләһенә асыҡлыҡ индерергә булышыр ине.

Йәнә шул. Ауыҙ-тел репертуарында һаҡланған эпик ҡомартҡыларҙағы һымаҡ уҡ, яҙма дастан, ҡиссаларҙа ла анахронизм күренеше, йәғни ваҡыт әҙмә-әҙлелегенең буталышы күҙәтелеүсән. «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» ише милли эпостарыбыҙҙа, мәҫәлән, герой берсә мифик дәүерҙә, берсә тарихи дәүерҙә, тимәк, ирреаль донъяла ла, реаль шарттарҙа ла йәшәй. Урал батыр, мәҫәлән, мифик дәүерҙә үк йәйелдереп ебәрә үҙенең изге эшмәкәрлеген. Әммә Ҡатил батша иленә килеүе була — күптән инде социаль тигеҙһеҙлек хөкөм һөргән йәмғиәткә юлыҡҡандай була. Ул ҡатнашҡан артабанғы ваҡиғалар беҙҙе йәнә мифик дәүергә алып китә. Яҙма дастан өлгөһө булыуға дәғүә иткән «Минәй батыр менән Шүлгән батша» әҫәренең геройы иһә, киреһенсә, тарихи дәүергә хас реаль шарттарҙа эш итә башлай ҙа, мифик дәүергә юлыға, шунан инде йәнә реаль тор-

мошҡа ҡайта. Бындай анахронизмды, реалистик әҙәбиәт күҙлегенән баһалап ҡына, эпик ҡомартҡыларыбыҙҙың кәмселеге тип баһаларға ярамай. Уны эпостарға (киңерәк алғанда, тотош фольклорға) хас ҡотолғоһоҙ күренеш тип ҡарау кәрәк. Сөнки, аңлы рәүештәме, аңһыҙ рәүештәме — барыбер: анахронизм тотош әҫәр контексында билдәле кимәлдә эстетик әһәмиәткә эйә була. Ҡыҫҡаһы, «мең тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр күр», тигәнде иҫтә тотоп, ғәмһеҙҙе лә уйға һалырлыҡ, берсә мөғжизәгә ымһындырып, берсә ысынбарлыҡҡа алып ҡайтып, ике осраҡта ла хәҡиҡәтте нәсихәт итмәле яҙма ҡисса һәм яҙма дастандар донъяһына рәхим итегеҙ, халҡыбыҙ ижадын хөрмәт итеүсе хөрмәтле дуҫтар!

*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ*

## I. ӘҘӘМ ВӘ ИБЛИС

Хоҙа ғәзимәт вә ҡөҙрәт менән был ерҙе хаҡ иткәс,
Ер өҫтөндә әҙәмдәр яратырға ваҡыт еткәс,
Ниһәйәтһеҙ кешеләргә булыр тип ер йөҙө меҫкен
Ер өҫтөнә үҙенең фәйзене әсрарҙы сәскән.
Ҡояш нур сәсте ергә күктән, яҡтырҙы ай төндә,
Кешеләрҙе яралтмаҡ булды шунан һуң ер өҫтөндә.
Ниңәлер?.. Шул ваҡыт Алла мәләктәргә хәбәр бирҙе:
«Әҙәм балалары өсөн хаҡ ҡылдым ҡара ерҙе,
Әҙәм халифә булыр ергә уны шуға яраттым», — тип,
«Уға ниғмәттәр бирҙем, һеҙгә биргәндән артыҡ», — тип.
Был тәблиғты әйткәс тә мәләктәр аптыраштылар.
«Был ниндәй эш?» — тиеп, был мәсьәләлә һүҙҙәр астылар.
Тинеләр: «Был фәсад әһлен яратмаҡта ни хикмәт бар?
Ғази буласаҡ әҙәмдәрҙә был ниндәй әфзәлиәт бар?
Гонаһ эштәр ҡылырҙар һәм улар мотлаҡ түгәрҙәр ҡан.
Тулар ергә фәсад, талаш, һуғыш, ғәйбәт менән боһтан.
Күрәһең — беҙ һиңә тәсбих, һине тәҡдис менән мәшғүл,
Уларҙы артыҡ итмәҫлек түгелдер шаиғыңа мәғҡул».
Нисек тә был хәбәр баштуҡ мәләктәргә ауыр килде,
Әҙәмдәрҙең улай булыуын улар, белмәйем, нисек белде?
Яратылмаҫ борон былар яратмағас әҙәмдәрҙе
Тине хаҡ: «Әй, мәләктәр! Мин беләм һеҙ белмәгәнде».
Хоҙа шулай мәләктәргә ғәжәп ҡыҫҡа яуап бирҙе.
Былай өҫтән ҡарауға шул мәләктәр фекере хаҡ ине.
Хоҙанан башҡа бер ергә урын бөткәс эләкләргә
«Күрәйек, нисек булыр?..» — тигән бер уй төштө мәләктәргә.
Әҙәм тормаҡ өсөн баштуҡ яратылған икән был ер,
Кешеләрҙе түбән итмәктә барҙыр, белмәйем, ни сер.
Әҙәмде Алла хаҡ итте, уға ит һәм дә ҡан бирҙе,
Нисә йылдар үтеп киткәс, Әҙәмгә Алла йән бирҙе.

Хоҙа баштуҡ Әҙәмде ерҙең өҫтөнә яратҡан, ти.
Тән үҫеп, йән кереп бөткәнсе ерҙә яңғыҙ ятҡан, ти.
Әҙәм шунда ята торғас, кеше һүрәтенә кергәс,
Үҙенең рәхмәте менән, рух менән ғаҡыл биргәс,
Хоҙа сын мәһбүт итмәксе булып бахыҫ, хисамдарҙы
Һөйөп яратҡан Әҙәмгә өйрәтте күп исемдәрҙе.
Тине шунда мәләктәргә: «Был ергә, әйҙәгеҙ, килегеҙ!
Был шәйағтарҙың исемдәрен берәм-берәм хәбәр бирегеҙ!»
Хоҙа өйрәтмәгәс, тәбиғи, мәләктәр баштарын һелкте.
«Улай булғас, хәбәр бир! Йә, Әҙәм», — тип Алла әмер итте.
Мәләктәр торҙолар ҡарап — Әҙәмде имтихан итте.
Ҡарап торған мәләктәрҙең тамаша иҫтәре китте.
Мәләктәрҙән Әҙәм ғалемыраҡ булғас еңелделәр,
Хоҙаның һәр эше хикмәткә мәбне тиә белделәр.
Тине Хоҙа: «Тимәнемме, беләм һеҙ белмәгәнде,
Был күктәрҙә дәхи ерҙә миңә йәшерен түгел һәр ни».
Фәрештәләр элек ҡылған бәхәстәргә үкенделәр,
Хоҙа әмере шулайҙыр, тип, ҡара тәҡдиргә күнделәр.

## II

Әҙәмде яратыу менән генә эш бөтмәгән әлдә,
Мәләктәргә әмер килде ҡылырға кешегә сәждә.
Тәбиғи бәғзеһе ҡотолор әҙәмгә шәкияд итһен
Әҙәмдең әфзиләтен мәләктәр бары яд итһен.
«Был ниндәй бер әмер һуң?» — тип тәрдәд ҡылдылар барыһы,
Улар бер ҙә тора алмайҙар Хоҙаның әмеренә ҡаршы.
«Хоҙаның әмере булғас, сәждә ҡылмай сарабыҙ юҡ», — тип,
Әҙәмгә сәждә ҡылдылар Хоҙаның ҡәһәренән ҡурҡып.
Хоҙа ҡушҡас, мәләктәр был кешене ҡылдылар тәҡдис
«Был эш мәғҡул түгел», — тип сәждәгә баш бөкмәне Иблис.
«Әҙәмдең асылы бик мәғлүм, тейешһеҙ ихтирам», — тине.
«Ни булһа ла уға сәждә ҡылыу минән харам», — тине.
Фәрештәләр Әҙәмгә сәждә ҡылғас һәм дә эш бөткәс,
Хоҙа: «Нисек сәждә ҡылманың?» — тип унан һөал иткәс,
Тигән Иблис: «Мине уттан яраттың, уны — тупраҡтан,
Нигә сәждә ҡылайым һуң? Мин артыҡ булғас ул заттан».
Йыһанда йөмләнән әүәл Хоҙайға ҡаршылашҡан ул.
Был эш мәғҡул түгелдер, тип япа-яңғыҙ талашҡан ул.
Тигән Алла: «Һиңә ләғнәт! Йыраҡ кит! Торма был ерҙә,
Йәһәннәмгә һалырмын мин бөтә табиғтарың берлә»
Тигән Иблис: «Был көндән һуң үсектем мин кешеләргә,
Хоҙайым ихтыяр бирһә, белермен нимә эшләргә».
Хоҙа асыуланып Иблисте һалды мәңге дәлаткә.
«Бына һин шунда тор!» — тип әҙәмде индерҙе йәннәткә.
Өмөтһөҙ хәлдә Иблис шул сәғәт ергә төшөп киткән,
Япа-яңғыҙ ер өҫтөндә зарарһыҙ ғына көн иткән.
Ер өҫтөндә тулы януарға ҡылмаған зарарлы эш,
Әҙәмдәр ергә тулғас та заһур иткән йәнә Иблис...

## III

Хоҙа ҡушҡас, Әҙәм йәннәткә яңғыҙ баш барып кергән,
Ағыр һыуҙар, мәзин баҡсаларҙа буш ҡына йөрөгән.
Теләгән инде йәннәттә Әҙәмде яңғыҙ итмәҫкә,
Яратып бирҙе Һауаны Әҙәмгә бергә иптәшкә.
Хоҙа шулай ҡатындарҙан хаҡ итте фәҡәт берҙе,
«Бер иргә — бер ҡатын», — тип һәм яратҡан бер генә ирҙе.
Рух, ҡәлебкә кергәс тә, бирелгән есмәни ләззәт,
Әҙәмдең башына етә бына ошбу фани ләззәт,
Күрәһең, булмаған хур ҡыҙҙары ул саҡта йәнәттә,
Дөрөҫ, хикмәт тә юҡ инде улай есмәни ләззәттә.
«Нисек итәйек? Шулай инде был эш китәм мәнзәлдә,
Ни хикмәт бар был эштәрҙә белә алмайҙар әл дә.
Әҙәм ата үҙе янда үҙе есмен күреү менән,
Яратҡан хәҙрәт Һауаны шундуҡ сын күңел менән.
Элек Һауа бер аҙ наҙланһа ла тиҙҙән илә шиҡаңлар,
Икәү генә ултырғанда алай-былай һөйләшкәндәр.
Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, шулай йәннәткә Әҙәм кергән,
Теләһә ни эшләһә лә, хөрриәт һәм ихтыяр биргән.
Ашар, эсәр өсөн һәр нәмәнең ишеген асыҡ ҡуйған.
«Яҡын барма был эшкә», — тип, фәҡәт бер нәмәнән тыйған.
Борон яҙған китаптарҙа был бер хикмәтле эш, тиҙәр.
Ашарға ҡушмаған бер нәмә — бер төрлө емеш, тиҙәр.
Зарар юҡ, нимә булһа ла була инде быңдай бер эш,
Күрәйек нишләр Әҙәм, Һауа дәхи ни эш ҡылыр Иблис.

## IV

Ашау-эсеү әҙер булғас, тороуҙар бигерәк анһат,
«Белермен нишләтергә», — тип теге Иблис көтә форсат.
Торалар нәҡ сабый төҫлө мәғишәт ҡатылығын күрмәй,
Хәжәт юҡ һис эш эшләргә — Әҙәм тик ята, һис йөрмәй.
Был ниндәй эш? Әҙәм, Һауа торалар ғиш-ғишрәттә,
Тора Иблис ҡасан форсат етер, тип ҡайғы-хәсрәттә.
Унын дошмандары йәннәттә буш йөрөһөндәр иркенләп,
Йөрөй Иблис асыу менән Хоҙаның рәхмәтен көнләп.
Нисә мең йыл ғибәҙәт ҡылһа ла, киткән бары елгә,
Унын өҫтөнә «мәлғун» тип яҙылған Тәүрәт, Инжилгә.
Шулай ҙа бер етер беҙгә лә көндәр, тип йөрөй иплэп,
«Был йәннәткә кереп булмаҫ микән?» — ти ҙә китә ситләп.
«Әҙәм өсөн генә дәлатҡә төштөм аһ вә оһ», — ти,
«Быны алдау еңел эш», — тип йөрөй ул хәйләкәр даһи.
Ҡыуалар меҫкен Иблисте, йәннәткә яҡын барһа,
Нисек ингән һуң ул унда — яҙайым иҫке китаптарса:
Шулай ситләп кенә йәннәт янынан бер көн уҙғанда,
Күрә Иблис: Йылан яңғыҙ ғына ултыра ишек янында.

Бөгөнгө кеүек түгел Йылан — унда матур булған,
Аяҡ-ҡуллы, зифа буйлы дәхи кәүҙәгә ҙур булған.
Бөгөнгө суфыйҙарса башын түбән таба эйҙе,
Хәйер Һауа мәләктәр төҫлө: «Иҫәнме, мелла кем?» — тине.
Бының тәкеүәлеген күргәс, Йыландың шәфҡәте килде,
Хоҙаға иң яҡындарҙан, мәләктәрҙән тиеп белде.
Быны форсат белеп, Иблис Йыланға эште белгертте,
«Минең эш бар ине йәннәттә, кил, зинһар мине керет!» — ти.
Тине Йылан: «Бөгөн йәннәт ишек янында мин һаҡсы,
Ҡарауыллап торған өҫтөнән һине керетмәк түгел яҡшы».
Тине Иблис: «Мине һин ауыҙыңа керет, һис кеше күрмәҫ,
Йылан кереткән Иблисте, тип һис бер кеше белмәҫ».
Йыланға әллә ниндәй вәғәҙәләр ҡылды, ќүп алдашты,
Йылан меҫкен: «Улай булғас, кер инде», — тип ауыҙ асты.
Нисә йылдар көтөп йөрөгән был йәннәткә барып кергәс,
Япа-яңғыҙ ғына йөрөгән анабыҙ Һауаны күргәс,
Тине: «Аһ, был матурлыҡтар төгәнмәҫ мәңгелек булһа,
Гүзәл булыр ине бында ни хикмәт, белеп булһа,
Ваҡытлыса булмаһа ине был йәннәт, был матурлыҡтар,
Булып, тиҙҙән бөтә торған был тормошта ни ләззәт бар?
Күҙ асып ҡына йомған саҡлы ләззәт йәки төш төҫлө,
Кире килмәҫ булып бөткәс, был тормош иң ҙур үкенесле.
Хоҙа биргән икән бында һеҙгә нигмәттең әнуғанын,
Һис үлмәҫ мәңгелек итһә, Хоҙайға ни була тағын?
Һинең ғүмерең был ерҙә ялт итеп киткән йәшен төҫлө,
Ахырҙа бер үлем етер, көн аҫтындағы төн төҫлө».
Илай-илай һөйләй Иблис, уның бер ҙә йөрәге тынмай,
Был һүҙҙәрҙе ишеткәс тә тине Һауа: «Был эш ысынмы?
Ҡайҙан белдең?» — ти торғас, Һауа Иблискә яҡын барҙы.
«Һин әйткәнсә, шулай уҡ был матурлыҡҡа зәуал бармы?
Һин әйткәнсә, шулай уҡ беҙ үләбеҙме? Бөтәбеҙме?
Гүйә, һис булмаған төҫлө был донъянан китәбеҙме?»
Йөҙөнән, һүҙҙәренән Һауаның сын ҡурҡҡанын тойҙо,
Тине Иблис: «Был ағастан ашауҙан ни өсөн тыйҙы?
Бына шуның өсөн тыйҙы: бер ерҙә мәңге тормаҫҡа,
Үлемде күрмәй көн иткән фәрештәләрҙән булмаҫҡа.
Теге мәмнуғ емеш ысын-ысын дауалыр мәңге үлмәҫкә,
Аша тиҙерәк, теләһәң һин ҡара ергә күмелмәҫкә!»
Хәйер хәүа төҫлө Иблис Һауаға күп вәсвәсә ҡылды,
Тамам алдаштырып бөткәс, үҙе бик тиҙ генә шылды.

## V

Ғәйәт тиҙ алданыусы Һауаға был һүҙ етә ҡалды,
Ағастан шул минут бер аҙ емеш һындырып алды.
Өҙөп бер бөртөгөн ҡапҡас, бер аш юҡ шыма китте,
Был шатлыҡтарҙы әйтергә Әҙәм янына барып етте.
«Теләһәң мәңге үлмәҫкә, бына был нәмәне ҡап!» — ти,
«Һинең һөйгән матур ҡатының әжәл дарыуын тапты.

Аша инде, бер ни булмаç! Аша тиҙ, әйҙә, тиҙ, тиҙ!» — ти,
«Бына инде был йәннәттә икәү мәңге торорбоҙ», — ти.
Ҡатын һүҙе менән Әҙәм ашаны бер генә бөртөк.
Дөрөç, бер нәмә лә юҡ, тип ашай башланылар күп-күп.
Емеште ашағандан һуң ваҡыттар үтмәне бик күп,
Осоп китте уның өçтөндәге кейемдәре өркөп.
Бына шунда Әҙәм меçкен яланғас тән тороп ҡалған.
Гонаһаға әрткап иткес ниһәйәтһеҙ Әҙәм оялған.
Кеше күтәрә алмайҙыр Хоҙаның фазыл ихсанын,
Эш үткәс, белде — Һауаны яуыз Иблис ҡотортҡанын.
Тине: «Ах! Шул яуыз Иблис сәбәп булды гонаһ эшкә!»
Үҙе алданғанын һылтап ҡуйҙы меçкен Иблискә.
Әҙәм балаһы ла шулай ҡыла ла бер-бер гонаһ эште
Үҙе саф, тап-таҙа ҡала, ғәйепле итә лә Иблисте.
Кеше ҡылмаç гонаһ эште, әгәр ҙә нәфсеһен тыйһа,
Тирә-яғында булған нәмәләр менән күҙе туйһа.
Гонаһ башланды Әҙәмдән ябай ғына бер эш менән,
Ике аранан мөхәббәт китте бер бөртөк емеш менән.
Бер эш ҡылдым әҙәмдәргә, тип Иблис тә көс алды,
Беренсе ҡат үҙенең дошманынан яҡшы үс алды.
«Йә, Әҙәм! Әрткән ҡылдың, нәһи ҡылған гонаһ эшкә», -
Тиеп шундуҡ Хоҙаһынан Әҙәмгә килде ҙур шелтә.
Был инсан хәлкәтендә тәмәғкәр һәм дә тамаҡ саудыр,
Кәрәк ни булһа ла булһын, туры килгәнде ашауҙыр.
Әҙәм меçкен был эшкә бик үкенде, аһ-зар итте,
Гонаһын иҡрар ҡылды, Хоҙаға иҡтидар итте.
Йәнәп Хаҡ тине: «Мин бит нәһи ҡылдым гонаһ эштән
Гелән һаҡлан тимәнемме һиңә шул мәлғүн Иблистән?
Был йәннәткә керер-кермәç, йә Әҙәм, ҙур хатаң булды,
Сыҡ инде йәнәттән! Бар һиңә ерҙән ватан булды.
Бер-берегеҙ менән талашып ғүмерегеҙ үтһен,
Һинең балаларың ерҙә аҙ-маҙ йәшен түкһен!»
Хоҙа Әҙәменә: «Ерҙә мәғишәт михнәтен тарт»! — ти,
«Бөгөндән һуң ер өçтөндә үҙең эшлә, үҙең тап!» — ти.
«Һиңә файҙалы сүрәттә хаҡ ҡылдым тәбиғәтте,
Шуларҙан файҙалан, көн-төн улай бушҡа ҡарап ятмай.
Эш эшләп эшкә керетһен, тип яраттым төрлө таштарҙы,
Һиңә булһын, тип үçтерҙем үләндәрҙе, ағастарҙы.
Эш эшләү һәм ғәмәл менән булыр бәндәләрем мәсғүт,
Һине яралтыуымдан да шул эштәрҙер минең мәҡсут.
Ер аçтында күмелгән күп хазиналар етер күпкә,
Берәү бушҡа ҡарап ятһа, миңә һис ҡылмаһын үпкә.
Быларҙан истифада ит! Һиңә әүәл ғаҡыл бирҙем,
Ҡолаҡ, күҙ һәм йөрөргә аяҡ, уның өçтөнә ҡул бирҙем.
Сират мөстәҡимдә бул, Хоҙаның берлеген берлә
Хәйер хаһ яҡшы һүҙле бул! Кәрәк торһон да кем берлә!
Сығаһы килмәй йәннәттән Әҙәмдең йәше аҡкан һуң,
«Ниңә ҡылдың гонаһ эште?» — тигән ҡәтғи хитаптан һуң
Алыш һәм дә биреш бөткәс, Әҙәм, Һауа икәү бергә
Хоҙаның әмере менән шул сәғәт ташландылар ергә.

## VI

Был йәннәт бик ғали булған беленмәҫ мәғнәүи бер ер,
Уға инмәк өсөн ҡылһын Әҙәм был рухын тәзаһер,
Рух ысын-ысындан сафланһа, гонаһтарҙан йыраҡ китһә,
Хәҡиҡи ғәләүиәт менән лайыҡлы ла кәсеп итһә,
Бына шунда ашыр рухи, моғайын, гәреш әғләгә,
Уның был мәтмағын нәфсе рәжа итер бер Аллаға.

## VII

Китаптар әйткәнсә, был икәүһе ергә ташланғас,
Ҡапылда ҡулда һис ни юҡ, яланғас һәм тамаҡтар ас.
Был эштәр етмәһә, тағы Әҙәм Һауанан айырылған,
«Раббына золомона», тип Әҙәм күп тәүбәләр ҡылған.
Рәхәт-рәхәт тороуҙарҙы ауыр булған китеү ташлап,
Шул көндән һуң әҙәмдәр ер йөҙөндә торҙолар башлап.
Ер өҫтөнә төшөү менән Әҙәмде күрҙе мәхлүктәр,
Тыныс торған был мәхлүктәр һөйләй башланылар юҡ-бар.
Тинеләр: «Был ике аяҡлы, ике ҡуллы ғәжәп нәмә,
Быларҙың бер ергә килмәгенән һуң сәбәп нәмә?
Һүрәтенә ҡарағанда сығарыр былар гелән фетнә,
Туры ҡаҡҡан ағас төҫлө был нәмәнән өмөт көтмә.
Ниңә һуң был беҙҙең төҫлө түгел, йүнһеҙ яланғастыр,
Үҙе бик хәйләкәр төҫлө, уҫаллыҡтар быға хастыр.
Был көндән һуң арабыҙҙан мөхәббәттәр китәр инде,
Был бар саҡта ер өҫтөндә тыныслыҡтар бөтәр инде.
Хәҙерҙән үк үҙен һаҡлар өсөн ҡулына таяҡ тотҡан,
Асыулы бер кеше төҫлө төҫө киткән. Йөҙө һытҡан.
Хоҙа күрһәтмәһен инде, күбәйһә, үрсеһә был зат,
Арыҫлан менән ҡапланды тотор хәйлә менән арбап.
Үҙенә мәнфәғәт килһә, был нәмә гел ҡырыр беҙҙе,
Нисек һаҡлай алырбыҙ һуң шунан үҙебеҙҙе?
Бының балалары ерҙең йөҙөн тиҙҙән китер ҡаплап,
Был инсандар һөжүменән беҙҙе кемдәр ҡалыр һаҡлап».
Бына күреү менән шундуҡ тәшәэмләнде һәр бер йән.
Балыҡтар һыуға ҡастылар. Әйттеләр: ҡылайыҡ доға,
Бәхилләшкәс тә януарҙар берәмләп киттеләр тауға.
Тинеләр: «Әйҙәгеҙ, дуҫтар, беҙ инде тормайыҡ бергә,
Әҙәм ер йөҙөнә төштө, китәйек ул бармаған ергә».
Бейек тауҙарға, урмандарға януарҙар таралдылар,
Ғали әлләбеҙ (?) әҙәмдәрҙән ҡасып вәхшәттә ҡалдылар.
Әҙәмде күргәс үк ҡурҡып ҡасалар, ҡурҡалар әл дә,
Әҙәмдәрҙең яфаһынан имен түгел улар әле лә.

## VIII

Ҡайҙа һуң! Хәҙрәт Һауа, Әҙәм һис бер таба алмай юл,
Бара торғас Хоҙа ҡаршында булды тәүбәһе мәҡбүл.
Бер-береһенән айырылғас, хисапһыҙ йәштәрен түккәс,
Әҙәм, Һауа ҡауышҡандар нисә йылдар үтеп киткәс.
Был Әҙәм менән Иблис ҡылдылар икеһе гонаһ эше,
Хоҙа ғәфү итте Әҙәмде, ғәфү ҡылманы Иблисте.
Өйрәнмәгән Әҙәм, Һауаға бик мөшкөл яңы тормош
Торалар таш араһында, ағас аҫтында йәй һәм ҡыш.
Торалар ҡурҡа-ҡурҡа: тәки Иблис китмәһен алдап,
Емеш, япраҡ-фәлән ашап, торалар саҡ тамаҡ ялғап.
Кейәр өсөн кейем, кереп торор өсөн тыныс ер юҡ,
Тәбиғи хаҡ ителгән нәмәләрҙән башҡа әйбер юҡ.
Хоҙаға үпкәләй алмай үҙе башлап ғази булғас,
Ауырлыҡҡа күнәрһең тиҙ, ауырлыҡ донъяһы булғас,
Көн итмәксе Әҙәм уңай ғына йәннәттәге төҫлө,
Улай түгел... был ер донъя һине эшкә үҙе көслөй.
Был донъя: «Бушҡа ятма! Үҙ көнөңдө үҙең күр», — ти,
Ғаҡыл һәм ҡул көсөңдө һин сарыф итергә мәжбүр. ти.
Тырыш инде, тырыш, Әҙәм! Һөйләп торма улай юҡ-бар,
Яратылған Әҙәм файҙаһына ерҙәге бар байлыҡтар.
Әҙәм бары шуларҙы эшкә керетһен, ижтиһад итһен,
Мәғишәткә кәрәкле нәмәләрҙе лә ижад итһен.
Теге йәннәттәге төҫлө юҡ инде бында тик ятмаҡ,
Үҙеңдең ихтыярыңда мәғишәт юлдарын тапмаҡ.
Беләһегеҙ ул саҡ Әҙәм хәяттың ибтидаһында,
Хәүеф, рәжа менән көн үткәрә урман араһында.
Ер өҫтөндә Әҙәм ул саҡта нәҡ бер йәш бала төҫлө,
Бөгөн тәсхир ҡылынған нәмәләр унда ғәйәт көслө.
Ҡоро кәүҙә, яланғас тән, бер иш юҡ ихтыярында,
Тирә-яғында ни булһа, Әҙәм сит күрә барын да.
Ағас япраҡтары шаулап, дауылдар сыҡһа, ел өрһә,
Йәшен йәшнәп ҡаты ямғыр гөрәлдәп яуғанын күрһә,
Ағастарҙың араһында берәр нәмә шытыр итһә,
Берәр ят нәмә күрһә, йәки бер ҡош осһа, пыр итһә,
Тамам ҡурҡа, һиҫкәнә, дерелдәй, ҡалтырай башлай,
Тамам хәлһеҙләнә, шундуҡ тирә-яғын ҡарай башлай.
Бөтә тирә-яғы дошман кейек, ҡурҡа ҡуяндан да,
Үҙен һаҡлау юлын эҙләй, һөжүм ҡайғыһы юҡ унда.
Ҡайҙа туры килә шунда тора, юҡ билдәле торлаҡ,
Үләр-үлмәҫ кенә булһа ла маҡсат донъяла тормаҡ.
Үләһе килмәй бик тиҙ — был әҙәм балалары күндәм,
Бара торғас Әҙәм меҫкен ауыр тормошҡа ла күнгән.
Йөрөй-йөрөй бик әкеренләп эйәләшә башланы ергә,
Үҙенә ҡаршы торған көслөләр күренмәгәс бер ҙә.
Бара-бара Әҙәм үҙендә ҡеүәт барлығын һиҙҙе,
Көсө еткән бер нәмәне тапаны, ҡыҫты вә иҙҙе.

## IX

Ниһайәт, һеҙ ер өҫтөндә икәү тормаҡ күңелһеҙ эш,
Хәүефле төрлө мәхлүктәр Әҙәмгә һалалар тәшүиш.
Шулай торған ваҡытта бер ауырлыҡ килде Һауаға,
Тора торғас, бер ул (уғыл), бер ҡыҙ балаһы килде донъяға.
Был шатлыҡтан Әҙәм, Һауа, ниһайәт, булдылар мәмнүн,
Әҙәмдәр булдылар дүртәү ер өҫтөндә бына бөгөн.
Ғүмер үткән һайын ерҙә Әҙәм балалары үрсей,
Игеҙҙең береһе ул булһа, моғайын, ҡыҙ була береһе.
Бала-саға күбәйгәстен Әҙәм көн уҙғанын белмәй,
Әҙәмдәр шөйлә арттылар, Әҙәм хатта һҙнын белмәй.
Кешеләр яртылай вәхши, әпен-төпөн үтә көндәр,
Балаларҙың араһында сыға башланы мажаралар.
Хаталыҡ менән башланғас был инсандарҙың эш башы,
Ваҡыт күп үтмәне шундуҡ егеттәр булдылар ғази.
Әҙәмдәрҙең араһынан ямандар бергә ун сыҡты,
Шуға ҡарап заруратҡан шәриғәт һәм ҡанун сыҡты.
Татыу, яҡшы тора алмағас, ҡанун сыҡмай ҙа булмай шул,
Таҙа ерҙәрҙе бысратҡас, фәсад менән булып мәшғүл.
Әҙәм балаларын был хәлдә күргәс ҡалды үкенескә,
Нәсихәдкә ҡолаҡ һалмай сума улар гонаһ эшкә.
Әҙәм өндәй тура юлға, уны һис тыҡмайҙар һанға,
Уларҙы аҙҙырырға ихтияж ҡалманы шайтанға.
Бара торғас Ҡабил бер ҡыҙ өсөн Һабилға бәйләнде,
Уны күргәс Әҙәмдең шатлығы хәсрәткә әйләнде.
Күрә Ҡабил үҙе менән игеҙ тыуған матур ҡыҙҙы,
Шәриғәткә ҡилаф был эш; вә ләкин был шуға ҡыҙҙы.
Бара торғас бер аҙ эш булһа ла бик ҙурға тартылды,
Әҙәмдең башы әйләнде, Хоҙаға аһ-зар ҡылды,
Хоҙаның әдәне менән был ике зат салдылар ҡорбан,
Әҙәм балалары менән был эштәрҙе ҡарап торған.
Һабилдың ҡорбаны мәғбүл булып, салғас та янған, ти,
Ҡабил ҡорбаны мәғбүл булмағас, янмайса ҡалған, ти.
Быны күргәс, тине Ҡабил: «Был мөғжизә минҙә мөбһәм
Хоҙайҙанмы, түгелме? Ҡалды был эштә минең шөбһәм.
Белермен нишләтергә!» — тип Һабилға бармағын һелкте,
«Был эшкә мин разый түгел», — тип ерҙән тороп китте.
Күңелемдә булмаһа сафлыҡ ҡолаҡҡа яҡшылыҡ кермәҫ,
Пәйғәмбәр мөғжизәһе лә уны төҙ юлға күндермәҫ.
Үҙе файҙа күрә алмаҫ булһа баш тартыр дин әмеренән,
Хәүефләнмәҫ вә ҡурҡмаҫ ул Хоҙаның ҡаты ҡәһәренән.
Ҡабил асыуын эсендә һаҡланы, бер аҙ ваҡыт уҙҙы,
Бер аулаҡ ерҙә Һабилдың яғаһына ҡулын һуҙҙы.
Тине Һабил: «Ҡулыңды һин минҙә һуҙһаң да мин һуҙмам,
Хоҙанан ҡурҡамын мин, нишләһәң дә ғәһедемде боҙмам».
Һабилдың һүҙҙәрен ишетеп, Ҡабил ҡыҙғанманы бер ҙә,
Үҙенең ҡәрҙәшен тотоп ҡатил ҡылды ошо ерҙә.

Еңә алманы Әҙәм уғлы үҙенең нәфсе шайтанын.
Мәләктәр әйткәненсә, түкте ергә бер кеше ҡанын.
Тары саҡлы гонаһы юҡ туғанының ҡанын түккәс,
Ҡатилға йөрьәт иткәнгә үкенгән булды эш үткәс.
Үлекте йөкләне, белмәй йөрөй ҡай ергә йәшерергә,
Йөрөй торғас ғажиз булды — күмеүҙе белмәйҙер ергә.
Быға саҡлы күренгән эш түгел ергә үлек күммәк,
Ер өҫтөндә йөрөй торғас, был алды ҡарғанан үрнәк.
Ҡабилдың был эшен күргәс, Әҙәм хайран булып ҡалды,
Бала өсөн йәшен түкте, Хоҙанан ҡурҡты һәм оялды.
Әҙәм балалары йүнләп аяҡ баҫмаҫ борон ергә,
Ҡыҙармаҫлыҡ түгел бит әрткәп иткәс ҡәбергә.

## X

Гонаһаһы юҡ фәрештәләр яңынан һүҙҙәр астылар:
«Тинек бит беҙ түгәрҙәр ҡан, беҙҙең һүҙҙәр раҫ», — тиҙәр,
«Ғәжәпләндек беҙ әүәлдүк фәсад әһлен яратканға,
Бара торғас әҙәмдәр үрсеһәләр ер тулар ҡанға.
Әҙәмдәр балалары башланылар бер-берен үлтерешкә,
Әҙәмдәр булмаһа, Иблис ғәйепһеҙ инде был эшкә».
Мәләктәргә әйтте Алла: «Ғәдәүәт ҡылмағыҙ изһар,
Был эштә һеҙ белә алмаған, Хоҙа белгән генә сер бар.
Улар ҙа, яҡшылар ҙа бар минең һәр әмеремә мәнҡад,
Минең барлыҡ вә берлекте көнө-төнө итерҙәр яд.
Минең фәйзем, нурым ерҙең йөҙөндә ингәс иткәс,
Арыз һәммә хәят эҫәрен нурымдан иҡтибас иткән».
Тинеләр: «Был хафа серҙең илаһи хикмәтен күрһәт,
Ҡатил төҫлө насар эшкә нисек һуң ҡылалар йөрьәт?»
Тине Алла: «Әгәр һеҙгә жәсад менән нәфес бирһәм,
Шулар төҫлө гонаһ эштәр ҡылырһығыҙ, шөбһәһеҙ, һеҙ һәм.
Уларҙың бәғзеһе шулай ваҡытса булһа ла ғази
Ахыр сиктә ҡылыр сәждә минең ғәзимәтемә ҡаршы.
Ниһан улай Хоҙаһына ҡылыр ул ғәжәзде изһар
Хоҙаға мәғситтән һуң итәр тәүбә вә истиғғар».
Һаман улар был һүҙҙәргә ҡәнәғәт ҡылмаған төҫлө,
Тинеләр: «Беҙ әҙәмдәр төҫлө ҡылмабыҙ гонаһ эште».
Гүйә шунда әйтмеш Алла: «Көтөп тороғоҙ бына инде,
Был эштәрҙә ни хикмәт бар? Шуны тиҙ күрһәтермен», — ти.
Хоҙа ике фәрештәгә есем менән нәфес бирҙе,
Тамам кеше кеүек иткәс, быларҙы ергә индерҙе.
Төшәләр был икәү ер өҫтөндә иртүк тороп һәр көн,
Тороп көндөҙ ер өҫтөндә менәләр күккә һәр бер төн.
Әҙәмдәрҙең араһында хөкөм иткән былар ерҙә,
Нисә йылдар үтеп китте, ғази булманылар бер ҙә.
Мәләк булғас, мәләк инде, гонаһ эшкә ҡыҙыҡмайҙар,
«Сират мөстәким»дән һис ваҡытта ситкә сыҡмайҙар.

Имеш бер көн ғәжәп бер эш торҙо килгән мәләктәргә,
Килә быларға бер ҡатын кешеләрҙе әләкләргә.
Лайыҡ ирҙең фәрештәһе булырға был матур ҡатын
Мәләк тиһәң, мәләк төҫлө мәләктәргә килә яҡын.
Фәрештә түгел ул ҡатын, үҙе саҡ ун һигеҙ йәштә
Фәрештәләр ҡыҙыҡҡандар матур ҡатынды күргәс тә.
Килеү менән: «Минең дәғүәмде ныҡлап тыңлағыҙ, ти.
Шулай-шулай бер эш булды, шуға һеҙ хөкөм итегеҙ», — ти.
Шулай өҫтәп китәйек инде, улай бик кермәйек эскә,
Ошо ҡатын сәбәпле төштөләр былар гонаһ эшкә.
Мәләктәргә әйтте Алла: «Быларҙы күрмәнегеҙме инде,
Нәфсе биргәс, мәләктәрҙең шулай булырын беләм мин», — ти.
Ғази булған мәләктәргә Хоҙа бик ҙур яза биргән,
Ҡатын доға уҡып, күккә менеп йондоҙға әүерелгән.
Нисек булһа ла булды был ҙур эш, шулай үтеп китте,
Хоҙаның ҡәһерен күргәс, мәләктәр һәп сөкүт итте.

## XI

Әҙәм үлгәс, әҙәм балалары ергә таралдылар,
Ҡайҙа матур урын булһа, уларҙы ҡулдарына алдылар.
Ҡыла башланылар былар боҙоҡлоҡтарҙың әнуғын,
Хоҙанан ҡурҡмай эшләйҙәр гонаһтарҙың эре-вағын.
Хоҙа әмер итә ерҙәге шул көнгә пәйғәмбәргә,
Ғази булған кешеләрҙе тура юлдарға өндәргә.
Пәйғәмбәр арҡылы килгән Хоҙа һүҙен ишетмәйҙәр,
Баралар башҡа юл менән, был динде бер ҙә көтмәйҙәр.
Боҙоҡлоҡ эшләмәҫ өсөн быларға дин генә етмәй,
Күңелде сын ғилем вә выждан менән бик ныҡлы беркетмәй.
Буялды, пәрҙәләнде күҙҙәре алтын-көмөш менән,
Ҡарап торһаң, Әҙәм балалары мәшғүл юҡ эш менән.
Ихәүәт һәм мөхәббәт телдә бар, һис бер күңелдә юҡ,
Әҙәмдәрҙең ғәзиз ғүмерҙәре үтә һуғыш менән,
Күрә Алла: фәсад ҡылмаусылар ундан берәү сыҡмай,
Таҙа күңелле, саф вә выжданлы миллиондан берәү сыҡмай.
Рәсүлдәре арҡылы Алла китаптар индерә ергә,
Уның һайын әҙәмдәр иргәкәп итәләр кәбаирғә.
Нисек тә һис төҙәлмәйҙәр, китәләр диндәрен тапап
Быларҙың араһынан булмай инде һис берен маҡтап.
Үтә көндәр, ер өҫтөндә фәсех, фәсад һаман арта,
Итәғәт юҡ, бирәләр һәр ваҡыт Хаҡ әмеренә арҡа.
Хоҙаның үҙенә лә сәждә ҡылмай башлағас инсан
Мәләктәр әйткәненсә, башланы былар түгергә ҡан.
Хоҙаға ысын шәрәйек ҡайтҡас сынымдар яһап алтындан
Кә мәмнүн булманы Алла был инсандарҙы холҡонан.

## 2. МИНӘЙ БАТЫР МЕНӘН ШҮЛГӘН БАТША

Бынан күп быуаттар элек Урал тауы эт үткеһеҙ урманлыҡ, төрлө-төрлө эреле-ваҡлы ағастар менән ҡапланған булған. Ҡышын ҡар бик ҡалын ятҡан, шуның өсөн дә ара-аймаҡтарға, түбә-ырыуҙарға бер-береһе менән бәйләнеш тотоу ҡыйын булған. Ололар, урта-үҫмер йәштәр, һунарға йөрөгәндә, гел генә аҙашып китеп икенселәргә барып сыҡһалар, һәм бик кәрәгендә генә, туған-тыумасаларына бармаһалар, башҡаса йөрөй ҙә алмағандар. Бигерәген дә бала-саға, үҫмерҙәр ҡыуыштарҙа, тирмәләрҙә, кейем-һалымдарына төрөнөшөп, утҡа ҡыҙынып ҡына ҡыҫҡа көндө еңел үткәрһәләр, ҡышҡы оҙон төндәрҙе үткәреүе бик ауыр булған. Балалар һәм үҫмерҙәр бабай-әбейҙәрҙең әкиәттәрен, сәсәндәрҙең бәйет-ҡобайырҙарын, һамаҡсыларҙың һамаҡтарын, мәҡәлселәрҙең мәҡәлдәрен тыңлап, йомаҡсыларҙың йомаҡтарын сисеп ваҡыттарын үткәргән. Һирәк-һаяҡ ҡына ҡурайсы уйнаған көйҙәргә йырҙар йырлағандар, бейегәндәр. Башҡорт халҡы, Уралының тәбиғәте бай һәм матур булғас, һоҡланып уның күренештәрен йыр алымына һалып йырлаған, йәнлектәрен, ҡоштарын күҙәтеп, уларҙың һәр ҡайһыһына ҡарата йырҙар тыуҙырған. Ир-ат типкер ҡоштар*, ыласын һәм бөркөттәр менән һунар иткән. Йәштәр иһә, яҙ башынан алып ваҡ типкерҙәрҙән торомтай, яғалбай, ҡыйғыр, тойғон исемле ҡоштар менән һунарға йөрөгән.

Ҡыш үтеү менән, һуңғараҡ ҡалып булһа ла, ер өҫтөндәге ҡалын юрған-ҡарҙар ирегәс тә, шаулап эреле-ваҡлы йылғалар боҙҙарҙан әрселгән. Уларҙың мул һыуы ярҙарына һыймай, үкереп шашып алға ынтылған, бәләкәй күлдәр, киңәйеп китеп, бейек ярҙарын күмгән, күләүектәр ҙә һыу менән мул тулған. Ҡара ер өҫтө үләндәр, бүтәгәләр һәм сәскәләр менән ҡапланып, йәшәргән. Һаны булмаған йәнлектәргә һәм ҡоштарға күлдәр һәм һаҙлыҡтар тирәһендә аҙыҡ күп булған, уларҙы ситкә ебәрмәгән. Шулай бай һәм йомарт Урал тәбиғәте үҙ халҡын һунарсылыҡҡа таяндырған-туйҙырған. Хатта ҡышын бер төрлө, күңелһеҙ ағышында ялҡып та, зарығып та интеккән бала-саға, үҫмерҙәр алыҫыраҡ китеп, типкерҙәрен иңбаштарына, ус эстәренә, эйәр ҡаштарына ултыртып алып йөрөтөп һунарсылаған. Һунар өс-дүрт көн һуҙылған.

Йәштәргә баш итеп һәм тәртипте һаҡлау, шулай уҡ уларҙы һунарсылыҡ серҙәренә өйрәтер өсөн бер-ике ҡартты ла ҡушып ебәрә торған булғандар. Йәштәр үҙҙәренең типкерҙәре менән ҡырағай ҡоштарҙан ҡурпысыҡ, сөрәгәй, өйрәк, ҡыҙғатау, көйөлдө, бүҙәнә исемле ҡоштарҙы ғына типтергән. Тик торомтайҙың иң батыры ғына һирәк-һаяҡ ҡына ҡаҙ типкән.

Һунарға алынмаған бала-сағаның бар шөғөлө шул ине, ти: йорт тирәһендә бүтәгә төбөндә «быт-быт» килгән бүҙәнәләрҙе тыңлағандар, уларҙы елберҙәк менән аулап, уйнауҙарын, талашып һуғышыуҙарын күҙәткәндәр. Бүҙәнәләрҙе йәй тотһалар ҙа, ҡышын, аҙыҡ булмау сәбәпле, тоторға мөмкинселек булмаған. Ситлектә тотолған бүҙәнәләр уларҙың оҙон йәй көндәрен ҡыҫҡартҡан, әүрәттергән, күңелдәрен асҡан.

Шулай итеп, ҡырағай ҡош — бүҙәнә башҡорт халҡының тормошона бәләкәй генә өлөш булып ингән. Уларға ҡарата ҡурай көйөнә һалынып йырҙар йырланған, был ҡоштарҙың уйындарын һүрәтләп ҡапма-ҡаршы әйтелә торған таҡмаҡтар халыҡта киң таралған, бүҙәнәнең етеҙ хәрәкәттәрен эләкләп, бейеүселәр бейегән.

Бына шулай Таңдыса тиҫтерҙәре менән, үҙҙәренең йыл да ҡалдырмаған йолалары буйынса, типкерҙәре менән йыйылышып, ике ҡурайсы ҡарамағында һунарға сыға. Ялҡҡансы һунарсылап, табыш-тарына маҡтанышып уттыҡсала* өтөп ашанып алыуҙарына ҡояш та байыған, ти. Барыһы ла, таң аттырыр өсөн, дәррәү ҡоро-моронан утын әҙерләй һалып, дөрләтеп ут яғып ебәргән. Шунан ике ҡарттың ҡурайына йәштәр, үҙҙәренең яратҡан «Бүҙәнә» таҡмаҡтарын әйтешеп, ут тирәләй бейешергә әҙерләнгән һәм барыһы ла араларында беренсе уйынсы Таңдысаны көтә икән. Ул түңәрәккә баҫыу булды — йыр һәм бейеү башланып китте, ти. Иң башта «коҙалар» — егеттәр йырлашты, «коҙасалар» — ҡыҙҙар ҙа яуапһыҙ ҡалманы, ти.

*Ҡоҙалар:*

Йоморо һорғолт бүҙәнә
Көмбай* буйлап килә лә,
Бер-ике үпһәң, кинәнә,
«Тағы үп», — тип инәлә.

Бүҙәнәнең бытбылдауы
Быйыл нисәгә тула.
Өҫтө-башың бөтөн булһа,
Ҡоҙалашырға була.

Пыр-пыр осто бүҙәнә,
Барып төштө күрәнгә.
Көн ашала беҙ киләбеҙ,
Һеҙҙе яҡын күргәнгә.

Бүҙәнәнең өйө юҡ —
Бытбылдыҡ та бытбылдыҡ.
Ҡоҙасаларҙың йүне юҡ —
Бырхылдыҡ та шырҡылдыҡ.

Бүҙәнәләрҙең ояһы —
Ҡуйы ҡаулан араһы,
Ҡул тейгеҙеп, яра әйтмә —
Уңалмай тел яраһы.

Бүҙәнәләр ҡурҡа-боҫа,
Йүгерешеп киләләр.
Ҡоҙасаларҙы ҡоҙалар,
Йүгере(ше)п тотоп үбәләр.

Юлда ятҡан бүҙәнәне
Һуҡмай үттем, турғай, тип.

Юлда осраған ҡоҙасамды
Үпмәнем, юл уңмай, тип.

Бүҙәнәнең майы тос,
Туя ашаһам, кикертә.
Ҡоҙасалар ҡыйҡандашып,
Күҙ-ҡаштарын һикертә.

*Ҡоҙасалар:*

Йоморо йоҙороҡ — ҡоҙалар*,
Нисек улар юрғалар.
Беҙ әйтәбеҙ таҡмаҡты,
Төшөр, бейет һармаҡты.

Түшеңде кир, сәкәйт башың,
Төшөп бейе лә, тула.
Уңған егет булһаң ғына,
Шунда барыһы(ла) була.

Һөйҙөрөрбөҙ, һөймәһәң,
Кейҙерербеҙ, киймәһәң.
Ата-әсәңде танытырбыҙ,
Уйнап, көлә белмәһәң.

Ҡоҙа, беҙҙе хурлама,
Йырыңа ҡушып йырлама.
Беҙ ҙә әйтә башлағанда,
Тыбырсынма, туланма.

Ҡоҙа, ҡоҙа-ҡоҙороҡ,
Ҡаҡ башыңа йоҙороҡ.
Һөйләшә белмәй, һөйләнһәң,
Ебәрербеҙ тоҙороп.

Ҡойтоланып маташма,
Һүҙ күтәрмәй, талашма,
Ҡоторған этһеңме әллә,
Теймә теңкәгә, йәнгә.

Үбер инем, үптерһәң,
Тибер инем, типтерһәң.
Өҙмәк-йолҡмаҡ итер инең,
Тырнағыңа эләктерһәң.

Һикерәндәтмә күҙеңде,
Тыйыңҡыра телеңде —
Тел һөйәкһеҙ — һуҙыла,
Беҙ оҫтабыҙ киҫергә.

Ҡоҙасалар ҡыйҡандашалар, ә ҡоҙалар телдәрен сығарып үсекләйҙәр, ти.

*Ҡоҙалар:*

Йүгерек юрға бүҙәнәнең
Ҡауланлыҡта төйәге.
Икенсегә эүрәгән, ти,
Ҡоҙасаның һөйгәне.

Бүҙәнәнең баллары*
Сәскәлеккә эйәләй.
Ҡоҙасалар түҙә алмай,
Шыбырҙашып һөйләшмәй.

Бүҙәнәнең йомортҡаһын,
Тап иткәндә, алманым.
Әйҙә, сығарһын бала,
Уны ҡыйғыр тибә ала.

*Ҡоҙасалар:*

Үсектәшеп маташағыҙ,
Әллә һеҙ һаташағыҙ,
Мөгөҙ тилберән орлоғо —
Ҡоҙасалар бойомо.

Телебеҙ телгә теймәй,
Барыбыҙ берҙәм һөйләй.
Йөрәк елкенмәй, түҙмәй,
Бер аҙ уйнамай, көлмәй.

Бүҙәнә итен бешереп,
Саҡыр беҙҙе ҡунаҡҡа:
Һөйләшербеҙ аулаҡта,
Яҡын ара булһаҡ та.

Өтөлгән бүҙәнәне йәштәр талашып ашайҙар.

*Ҡоҙалар:*

Бүҙәнәнән типтермәм,
Алырмын да китәрмен,
Йәнде оҙаҡ көйҙөрһәң,
Үҙемдеке итәрмен.

Бүҙәнә итен ашар инем,
Телемде ҡуша йотмаһам.
Үкенескә ҡалмаҫ ине,
Ҡосаҡлашып йоҡлаһам.

Бүҙәнәнең балалары
Сос та, шәп тә юрғалай.
Ҡыҙығышып, ҡыҙыртып,
Уйнап килдек бер талай.

Кәрешкәлек сәскәлектә,
Бүҙәнәнең балалары,
Уйнап, йырлап, бейештек,
Бүтән уйын ҡалманы.

Бүҙәнәләй бүртенеп,
Йөрөмәгеҙ төртөнөп.
Бөгөн-иртән, тиеп, йөрөп,
Ҡалмайыҡ беҙ үкенеп.

*Ҡоҙасалар:*

Ауанланма һин, ҡоҙа,
Ярма борсағың, ҡойма,
Борсағыңды сирттермә,
Һөймәйем, өмөт итмә!

Күҙең икеләнә икән,
Өмөттәрең күп икән,
Йоҡлай алмай, әйләнеп
Төн көткәнең кем икән.

Беҙ үҙебеҙ йәш кенә —
Йөрәгебеҙ ашҡына;
Бер-ике уйнап шаярһаң,
Ашҡыныуҙар баҫыла.

Бер күргәнсә, хуш, ҡоҙа,
Яҡшы йөрө, эш боҙма.
Ана-бына, тигәнсә,
Йәш ғүмер үтә тора.

Дөрөҫ, ҡоҙалар, ысын һүҙ,
Аҙ ғынаға түҙгәс, түҙ,
Һеҙ алһағыҙ, беҙ барабыҙ,
Ҡайтауылһыҙ*, ысын һүҙ.

Ошо «Бүҙәнә» уйынынан һуң бөтәһе лә арып, дарманһыҙ булып, ҡуйы үлән-бүтәгәлектә аунашып, йоҡоға киттеләр, ти. Ә Таңдыса ярты төн ауғас йоҡоһо араһында аптыранды, төш күреп уянғанда, ҡабаттан йоҡоға киталмай, әйләнеп-тулғанып ятты ла ятты, ти. Таң атыр алдынан ғына серем иткән арала, өҙөлгән төш ҡабатланып, тағы ла ялғана биреп осланып ҡуйғас, онотоп ҡуймайым тип, ҡат-ҡат иҫенә төшөрөп, ятлап, төшөн юратмаҡсы булған, ти. Аңғанса

булмай ҡарттар яндарына ҡарсығаларын алып, береһе ҡурайҙа уйнап, икенсеһе йыр башлағас, йәштәр, йоҡоларынан уянышып, уларҙы тыңлай башланы, ти.

*Йырсы ҡарт:*

Күк ыласын ҡошто мин аҫырайым
Үҙе елпенеп, үҙе осҡансы,
Дуҫ-ишемде мин һаҡлайым,
Тәнемдәге йәнем сыҡҡансы.

Ыласынҡай ҡоштоң, ай, типкеһе*,
Энә-беҙҙән дә оп-осло,
Әллә ниңә минең ҡотом осто,
Алды әллә донъя бар ҡотто.

Ҡарсыға ла менән ыласындың
Ҡаялыҡта була ояһы.
Йөрәкле лә, уяу, ай егетте,
Баҫа ла ғына донъя нужаһы.

Аҡ ҡарсыға менән күк ыласын
Күҙ күреме ерҙән күрә икән,
Зирәк егет күрһә, белә икән,
Һыҡтап-һығылып ҡына түҙә икән.

Ҡул осона ултыртып сөйәр инем
Ҡарсыға ғына ҡоштоң балаһын.
Бер торамын таңда, бер ятамын, —
Уралым, халҡым өсөн янамын, —

тип, йырлап бөтөрҙө лә: «Йәгеҙ, балалар, әҙерләнегеҙ, бындағы ҡоштарҙы өркөттөк инде. Улар ҡасып-боҫоп ҡына йәшәйҙәр, инде, ҡурҡыуҙарын онотҡансы, был тирәгә яҡын да килмәҫтәр. Йә, әҙерһегеҙме?» — тигәс тә, сапсан йәштәр тиҙ генә ҡуҙғалып китте, ти.

Таңдыса йортона ҡайтҡас та: «Төшөмдө юратайыммы, әллә юратмайыммы? Әллә ниндәй төш булды», — тип өҙгөләнә ине. Шул төндө төш тағы ла асығыраҡ ҡабатланғас, ул аптыранып та, ҡыҙыҡһынып та, фалсы, ноҡот бүлеүсе, юраусы үҙ атаһы Өлкәр ҡарттан юратмаҡсы булды, ти. Үҙ заманының ғалимы, йондоҙсоһо ине ул. Таңдыса иртүк тороп йыуынып, һыланып-һыйпанды ла атаһы алдына барып баҫты, ти. Ҡыҙын ҡаршыһына ултыртҡас, уныһы:

— Атай, мин бик ҡыҙыҡ төш күрҙем, юрарһыңмы икән? — тип өндәшкән. Өлкәр ҡарт төш юрай торған китабын ҡулына алып:

— Юрап ҡарайыҡ әле, ул ниндәй айырыуса ҡыҙыҡ төш булды икән? — тип риза булған, ти.

*Таңдыса:*

— Бөгөн йоҡом ҡасҡанда,
Әйләндем дә тулғандым,
Оҙонайғас ҡыҫҡа төн,
Тышҡа сығып әйләндем.
...Оло Уралдың өҫтөндә
Нур йәйелде йәйғорҙан,
Унан үтә алыҫта
Алһыуланып ай тулған.
Ҡомһарылып өйөрөлә
Тау-тау ҡара болоттар.
Болоттарға араланып,
Тибенеп оса ҙур ҡоштар,
Һырғалана бирәүһе,
Аралаша күмәге.
Ал шоңҡарҙай үрҙәйҙәр,
Саҡ-саҡ мине типмәйҙәр.
Бер аҙҙан ай асылды,
Болоттарҙы ҡасырҙы.
Ҡапыл сыҡты бер егет,
Киләарыҫлан менеп.
Мине алдына алған да,
Йотлоға ла, тексәйә,
Нуҡталаған бүреһе лә
Артыбыҙҙан эйәрә...
Уяныпкитеп, уйландым,
Йоҡомһорап күп яттым.
Күпме ятҡанымдыр инде,
Осто-китте кеүек йөрәгем.
— Йә, атаҡайым, ни юраһың? —

тип Таңдыса һорау бирҙе, ти.

*Атаһы Өлкәр ҡарт:*

— Әйләнеп тулғаныуың — йөрәкһеүең,
сығып әйләнеүең —
Сабыйлыҡтан аша үҫеп
тулыланыуың, етеүең.
Ҡоштар, болоттар булаһы —
ул ил-йорттоң ыҙғышы,
Күп булһа, беҙҙең Уралды ситтәр
баҫып һуғышып,
Һунарсы батыр егеткә барырға
тейешһең, —

тине, ти. Таңдыса төшөн дауам итте, ти:

Аҡбуҙ атҡа атланған,
Үҙе яуҙа маҡталған,
Нур дүңгәләк эсендә
Кәүҙәләнде шул егет.

Ҡулына алған ҡоралын,
Ялт-йолт итә ҡылысы,
Үткәшә, ут-йәшен һыҙа,
Яҡтыра Урал өҫтө.
Кәнде таныным үҙен,
Өндәште йылы һүҙен.
Һүҙе шундай яғымлы,
Йөрәгемә яғылды,
Ысынымды әйтәйем,
Күңелемә ултырҙы,
Сәскә өйөмөнән өҙөп
Ал бер сәскә тотторҙо.
Сәскәнән еҫ бөркөлә,
Танауыма эркелә.
Күкрәк эсемә һыймай,
Йәш йөрәк тә һикерә.
Егет-егет тигәс тә
Егеттең дә егете,
Ике ҡоласын йәйеп,
Ҡосағын иҙем итте*.
Етмәһә әле өҫтәүенә,
Күҙ-ҡаштарын һикертә,
Алмашландырып, иһә,
Һаташтыра, тилертә.

Ҡасам ғына тигәйнем,
Егетем дә юҡ булды,
Алыҫҡараҡ китте лә
Ҡул болғарға тотондо.
Ҡулын болғай ҙа болғай,
Мөңрәп, һыҙғыра, йырлай.
Яра тауышы һауаны,
Ҡолағымда ла сыңлай.
Ҡасам да ҡасам унан —
Алыҫ аралар уҙам,
Ҡыуалата-баҫтыра.
Етте лә ҡосаҡланы,
Суп-суп үбә башланы.
Ҡурҡынып шарылданым.
Шул арала мин үҙем
Йоҡомдан уянғанмын.
Әҙерәк тилереп ултырҙым,
Йөрәгем леп-леп һуға,
Дарманы юҡмы уға?

Атаһы ҡыҙының ҡул тамырҙарын тотоп ҡараны:

— Ҡыҙым, юҡҡа борсолма, күргән төшөң бик яҡшы. Балам, һинең башың сителеп ситкә китәр, итәк тулы бала-сағаң булыр, бер батырға кейәүгә сығырһың, тик ғүмереңде зарығып үткәрерһең — яҙмыштарҙан уҙмыш юҡ инде, — тине, ти.

*Таңдыса* дауам итеп:

— Ул батырҙың алдында
Оҙон-оҙон юл, имеш
Аҡыҡлы эйәр, имеш,
Ялтырай алтын-көмөш,
Ҡайсылай аты ҡолағын,
Үтәй йүгерек йолаһын;
Ҡылысын ҡулында уйната,
Ут-осҡон ялтылдата,
Йомарланып йоморо ут үтте,
Үтте ҡултыҡ аҫтымдан,
Ул уттан да ҡурҡманым,
Кире ятып йоҡланым;
Уй-аҡылың юрғалат,
Йөрәнөм өс көн ыҙалап,
Бер кемгә лә әйтмәнем,
Йөрәгемдә һаҡланым.
Күҙем тырнап астым да,
Һиңә һөйләргә булдым.
Иҫ-аҡылым бөттө инде,
Юрар көнөң етте инде.
Ни тип әйтеп юрар, тип,
Ошоғаса көттөм мин,
Иҫ-аҡылым ҡалманы,
Уй-хәсрәтем ялғанды.
Аптырайым үҙем дә,
Һаташтырҙы ендәре,
Һинән башҡа бер кем дә
Юҡ асырға был серҙе.

— Төшөңдөң был аҙаҡҡы өлөшө аңлатып үҙенән-үҙе әйтеп тора. Ил батыры, иле, халҡы өсөн тәнен-йәнен йәлләмәгән был егет. Йомарланған ут — икегеҙҙең дә алдығыҙҙа буласаҡ ҡурҡыныстарҙан именаман ҡотолорһоғоҙ, аҡтыҡ һулышығыҙға ҡәҙәре бергә булырһығыҙ, балам, — тине, ти, Өлкәр ҡарт.

Таңдыса төшөнөң аҙағын һөйләргә булды, ти:

— Мин ботомдо салып ултырған килеш, итәгемә биш ташымды һалып, уйнап ултырам, имеш. Шул арала ғына күҙемдә йондоҙ кеүек бер нәмә йылтылдағандай итте. Күҙемде сырт йомдом да, асып ебәрһәм, итәгем өҫтөндә йондоҙ ята, имеш. Ә күтәрелеп күккә ҡарағам, «Тимер ҡаҙыҡ» йондоҙо урынында юҡ ине. Ялт-йолт иткән яҡтылыҡҡа тағы ла күҙҙәрем үҙҙәренән-үҙе йомолдо. Ә асҡайным, тирә-яғымда ете йондоҙ баҙлап яна ине. Күтәрелеп тағы ла күккә ҡараным — Етегән йондоҙ урынында юҡ ине. Унда тик Һары һәм Буҙ ат ҡына Урал өҫтөнә тейер-теймәҫ кенә, яҡты яныып, күҙгә мөлдөрәп күренеп уйнайҙар ине, — тип һөйләп биргән, ти, Таңдыса. Атаһы Өлкәр ҡарт төштөң аҙағын юрап, былай тигән:

— Беренсенән, төшөңдөң башында ил теләге алдыңа төшкән. Ни өсөн тиһәң, Тимер ҡаҙыҡ тирәләп бар йондоҙҙар әйләнә, беҙҙең дә һәр

өрөбеҙ — ил бөртөгө. Шулай булғас, ил, уның халҡы алдында уларҙың теләгән үтәрһегеҙ. Ете йылдан һуң, кеше күрмәгәндә генә, һары ат менән Буҙ ат килеп төшөр. Улар егетте алып йөрөтөп урындарына урынлашҡас та, был ваҡиғалар башланыр.

Таңдыса ошо көндән алып буласаҡ кейәүен һағынып көттө лә көттө, ти.

* * *

Атаһынан күргән уҡ юна, тигәндәр. Минәйҙең атаһы Һыныҡ батыр ҡаты бурандарға ла, сатнама һыуыҡтарға ла бирешмәй, Көньяҡ Уралдың аҫтын-өҫкә әйләндереп, көнө-төнө һунарсылыҡта йөрөнө. Уның бер генә уҡ-һаҙағы ла яҙа китмәне, зәғифләнгәнен дә, тура килһә уҫал-ажғыр йыртҡыстарын тереләй тотоп алып ҡайта торған булды. Улы Минәйҙе лә, бауыры ҡалҡа башлағас та, үҙе менән бергә һунарға алып йөрөнө, һунарсылыҡтың серҙәренә, шулай уҡ үлеһен-үле, тереһен тереләй тотоп алып ҡайтырға өйрәтте. Һыныҡ батыр улына иң башта бүрене, һеләүһенде, унан инде айыуҙы ла тотоп бирел, ауыҙлыҡлап өтәләтте. Йортҡа ҡайтҡас, ул Минәйен кешеләр алдында айыу менән көрәштереп, һуғыштырып таҫылландырҙы.

Минәй, атаһы үлгәндә, иң мәргән уҡсыға әйләнгәйне инде.

Бер ваҡыт Минәй тирә-яҡҡа ҡурҡыу һалып, халыҡты йөҙәткән, уҫалдарҙың да, ай, уҫалы, йыртҡыстарҙың да, ай, йыртҡысы ала айыуҙы аулап, тереләй килеш һөйрәп алып ҡайтып, йорто алдындағы йыҡғыҙ ҡарағасҡа бәйләп ҡуйғас, уны күрергә тип бөтә ғәм йыйылды. Табышына һөкланып-ҡыуанып һаулыҡ теләгән ырыуҙаштарына, Минәй ала йыртҡысты һуйып-тунап, өләшләтә таратып биргән, ти.

Иртә яҙҙың бер көнөндә һунарсы Минәй, янынан үткән ҡалын мүкле ере мөлкөлдәп торған шомло ҡара һаҙҙа ниҙер барын һиҙемләнеп йөрөй торғас, уның уртаһына инеп сығырға булды, ти. Һаҙ уртаһында боҫорап ятҡан ҡойолоҡҡа еткән, батыр егет мөлкөлдәктәге төбө-тамырынан аҡтарылған ағастар араһынан һөйрәлеп һалынған тәрән эҙҙе күреп, уны юллап китте. «Бында ниндәйҙер ҙур ғына йән эйәһе ҡышлаған йә ҡояшта ҡыҙынырға, йә бөтөнләйгә сыҡҡандыр», — тип уйланы, ти, Минәй. Ул, бик күп кенә араны үткәс тә, Урал тауының көньяҡ битләүенең бер яланғас ҡырасында әйләнгеләп, һонолоп ятҡан оҙон, йәмһеҙ бер йәнде абайлап ҡалып, ҡарап торҙо. Баҡтиһәң, ул йән эйәһе — ҡышлағандан һуң ҡояшта ҡыҙынып-йылынып алып, танауы менән кешеләрҙе тартып йотоп, имәғын туйҙырырға сыҡҡан аждаһа[2], имеш. Минәй һаҡ ҡына серек-сорок һәм ҡоро ҡаҡ ағастарға тотона-тотона барып, иң һуңынан бер ҡарағас түңгәккә йәбешеүе булған, ти — аждаһа уны түңгәге менән ҡуша һурып тарта башлаған, ти. Шул арала сос батыр егет йыуан түңгәкте аждаһаның ауыҙына арҡыры ҡуйып өлгөрҙө лә, ҡынынан хәнйәрен һурып алып, был имәнес йән эйәһенең соңҡаһын сәнскеләп, йәнен алды, ти. Еңеүсе егет аждаһаның башын өҙөп алып ҡайтыу менән йортоноң алдындағы теге ҡарағастың йыуан ботағына аҫып

ҡуйған, ти. Ошо көндән алып ҡыйыу егеттең даны артҡан, уны «Минәй батыр» тип хөрмәтләй башлағандар. Бөтә ырыу, тирә-яҡтар: ҡарт-ҡороһо, ир-аты, ҡатын-ҡыҙы, бала-саға ҡот осҡос бәләнән ҡотолғандарына бик ҡыуанған.

Ошо ваҡиғанан һуң утыҙ өсөнсө көн тигәндә, Минәй батыр бер күл яры өҫтөндә йоҡлағанда, таңға табан аптырамалы бер төш күреп уянған, ти. Күп уйлап тормай, төш юраусы ҡартҡа барған, ти.

*Минәй батыр:*

— Бөгөнгө төн төшөмдә
Күкрәгемдең өҫтөнә
Йондоҙ яҡтыһы төштө.
Был ни — ҡайһы тәңере эше?
Түңәрәкләнгән тулы ай
Ҡыуалатты артымдан.
Аҡһыл ал нур һибәләп,
Иркәләне битемдән,
Оҙаҡламай ошо ай
Түңгәләккә әйләнде,
Шөкәр*, нуры үтәһенән
Бер ҡыҙ һыны йәнләнде.
Алтын тараҡ ҡулында
Сәсен тарай, аралап,
Ҡырпаҡ ҡыйғас ҡашына
Хөрмә тарта самалап,
Сәс бөртөгө осонан,
Көмөш нурҙар сәселә,
Ер йәмләнгән сәскәгә,
Ысыҡ булып һибелә;
Ике иренен ҡымтыһа,
Ҡыҙғылт һыҙыҡ һыҙыла,
Аҡыҡтай аҡ тешенә
Бөтә донъя ҡыҙығыр.
Ике күҙен уйнатһа,
Йондоҙҙай осҡон сәсә.
Керпектәре тибешеп,
Шыбыр-шыбыр һөйләшә.
Ҡарап көлһә үҙеңә,
Нур һибелә йөҙөнән,
Ҡарап йылмайып көлһә,
Сәс толомон һелкетһә,
Ергә ынйы бөркөлә.
Солҡоп* кейенгән үҙе,
Һылана ла һыйпана.
Иркәләнеп ҡараһа,
Күҙенән ынйы тама.
Моңға күмеп тирәне,
Өҙҙөрөп үҙе йырлай,

Ғашиҡ булдым моңона,
Һандуғаска тиң күреп.
Шулай үтте ул төшөм,
Таң һыҙылды яй ғына.
Бер-бер артлы һүнде йондоҙ,
Күктә ҡалды ай ғына.
Таң нурына ҡойоноп,
Эй наҙланды һылыу ҡыҙ,
Кирелде лә һуҙылды,
Миңә баҡты ҡыйыуһыҙ.
Ә мин яндым тыйыуһыҙ.
Алтын, яҡут эҙләй ул,
Мине, имеш, димләй ул.
Мин үҙем эҙләнмәнем,
Баш эйеп, теҙләнмәнем,
Бирҙем һыңар ҡулымды,
Үпте ҡулым һыртынан,
Тертләндем дә уяндым,
Шундай тәмле йоҡомдан.

Төш юраусы ҡарт Минәй батыр күҙенә ҡарап былай тигән, ти:

— Был төш — бик ғәжәп төш, бер кем дә ошоға тиклем ундай төштө юратҡаны булманы. Ҡайтып тор, уйланырға ваҡыт бир.

Минәй батыр, түҙмәйенсә, тиҙҙән йәнә килеп еткән, ти. Был юлы төш юраусы:

— Күкрәк өҫтөңә сатҡы төшөүе — беренсең* булыр. Тик ул һиңә алынсы* ғына булар. Уның матурлығына тиң булмаҫ, халыҡ та үҙен бик яратыр. Кемдеңдер берҙән-бер балаһы икән ул, — тигән, ти.

Артабан Минәй төшөнөң ҡалғанын юратыр өсөн һамаҡлап алып китте, ти:

Менер-менмәҫтән ярһыны,
Аҫтымдағы Аҡбуҙат,
Остом ҡарап алдыма,
Ҡулбашымда уҡ-һаҙаҡ.
Уралана ел-дауыл,
Ҡойороғо ялына,
Ел артымда, тағы ла
Саң томандары ғына.
Йомро тояғы тейгәндә,
Таштарҙан ут сәсерәй,
Дүрт тояҡтың тыпылдауы
Йыр һымаҡ миңә берәй.
Уңға, һулға һелтәйем,
Үткер булат ҡылысымды,
Дошмандан таҙартам, имеш,
Барыр юлым тырышып.
Тумһырайып түмәр-түмәр,
Ята үлек кәүҙәләр.

Күҙҙәрен соҡоп ашайҙар,
Ҡарға, ҡоҙғон-сәүкәләр.
Үлек еҫтәрен еҫкәшеп,
Ас бүреләр эҙләнә,
Эһ тә тимәйем уларға,
Баштарын кимерһә лә.
Асындым да, асыуым килде
Дошман ҡанһыҙлығына.
Үсем саҡ ҡанғандай булды —
Уларҙы ҡырҙым ғына.
Һөҙөмтәһен күргән төштөң,
Өҙөп-ялғап, һөйләнем,
Бер боҫҡағы* ҡалып торһон,
Аҙаҡ өҫтәп һөйләрмен.

Юраусы ҡарт был өҫтәлмәгә аптырап башын һелкте лә былай тине, ти:

— Оло яуҙа булып, маҡталырһың. Эйе, дошманды йәлләмәҫкә, уларға аяуһыҙ булырға кәрәк.

*Минәй батыр:*

Үткән эшкә ҡайғы юҡ,
Аҡыл аңлар, күҙ күрер,
Тағын ҡалды бер аҙы,
Уныһын да юрап бир.
Ана-бына тотам, тип,
Һәрмәләнәм тирмәмдә,
Ҡасты ырғып, һикерәнләп,
Эҙләнәм мин тирәмдә.
Төшөмдө яртылағас та,
Бүреләр ҡаманылар,
Бөтәһе лә ҡасып бөттө,
Ҡурҡаҡтар ҡалманылар.
Уларҙан да ҡурҡманым,
Кире ятып йоҡланым,
Баҫтыҡманым, итмәнем,
Һаташып та китмәнем,
Уяндым мин һиҫкәнеп,
Йә әле, юра, нишләнем?

Юраусы ҡарт төштөң ҡалғанын былай аңлатты:

Төштө юрау — анһат түгел,
Дөрөҫ әйтеүсе һирәк.
Һорайым да шуны әйтәм,
Һөйләүсегә лә төбәп.
Уны алдан теләһә ҡалай,
Юрап һөйләү ярамай.
Ҡолағың тоноп, күҙең шешеп,

Ауыҙың булыр арандай.
Тыңламай, төш серен асһаң,
Кәрәгеңде алырһың.
Үҙең һулып, тамырың ҡороп,
Зәғиф булып ҡалырһың.
Тоғоро килеп, эшкә ашҡас,
Шунда ғына һөйләрһең,
Төшөң, тим, шулай булһа,
Ҡыуанысын күрәрһең.

Ул заманда ете ырыу башҡорттары күршеләре, йән һандары һәм мал байлыҡтары артҡандан-артыу өҫтөндә булып, үҙҙәренең тирә-яғындағы башҡа халыҡтарҙың ерҙәренә ымһынып, бик шашынған хазарҙар булған, ти. Шул маҡсат менән улар башҡорттарҙың еренә яҙ башынан уҡ, киҫә-талай эскә үтеп инә башлаған, ти. Ете ырыу башҡорттары, башта дәррәү ҡаршылыҡ күрһәтеп ҡараһалар ҙа, хәлдәренән килмәне. Уралдың урта төшөндәге Тығыл, Танып, Сөн һәм Өй буйы башҡорттары... (Һөйләмдең аҙағы юҡ. — *Ред.*)

Тик ҡыш башланғас ҡына Минәй батыр етәкселегендәге башҡорттар ҡышҡы сасҡау һыуыҡтарға, яуын-сәсен бурандарға ҡарамай, һөжүм яһап, хазарҙы еңеп, беренсе батырын ботон-ботса, ҡулын-ҡулса ботарлағас ҡына, тегеләре ярашырға мәжбүр булды, ти. Ошо еңеүгә арналып ете ырыуҙың төньяҡ осонда Темәс тигән ерҙә[3] оло байрам яһалды, ти. Ситтән килгән яусыларҙың теләгәндәре еңеү туйына ҡалды, телләмәгәндәре ҡайтты. Минәй батырға ла: «Һин ҡайтмайһың, батырлығың өсөн бүләк алырһың», — тигәстәре, ҡалырға риза булған, ти. Байрамға һимеҙ, тыу бейәләр, һыйырҙар, ҡуйҙар һәм кәзәләр һуйылған, бер далай* егеттәр урманға кейек ауларға ебәрелгән, шулай уҡ еткән ерҙәргә саҡырыу менән сапҡынсылар йүнәлгән, ти. Шулай итеп, туй көнөнә ҡара ҡырсынташ кеүек йән-яҡтан байтаҡ халыҡ йыйылды, ти. Оҙамандарҙың* иң олоһо: «Еңеү туйын башланыҡ!» — тигән. Бында ҡатнашҡан һәр кем төрлө уйындарҙа үҙ оҫталығын күрһәткән. Көрәш, уҡ менән балдаҡ үтә атыуҙа беренселекте бирмәгән Минәй батырҙы хөрмәтләп ҡор уртаһына ултыртҡандар, ти. Был олпат кәүҙәле, матур егеттән байрамға килгән ҡыҙҙар күҙҙәрен алмағандар, ти.

Оло оҙаман һунарсыларға тағы ла бурыс-үтәлге* ҡуйған: «Кем дә кем Уралдың януарҙарынан йыртҡысмы, кейекме, шуны терелэй тотоп етәкләп алып килә, шул да бүләк үтәлгеһенә инә».

Минәй батырҙың урман эсенә инеп китеп күҙҙән юғалыуына күп тә үтмәгән, уның бер айыуҙы етәкләп алып килгәнен күреп, хайран ҡалғандар һәм күптәре: «Уй, ысҡынып ҡына китмәһен ҡулынан!» — тип ҡурҡышҡандар, ти.

Оҙамандарҙың берәүһе: «Кис тә етеп килә, әммә тағы бер үтәлге бар. Типкерҙәре барҙар — ҡырағай ҡоштар, ә балыҡсылар күл-йылғаларҙан балыҡтар тотоп алып килегеҙ, былар барыһы ла маһирлыҡҡа инә», — тигәс, Минәй батыр, типкере булмаһа ла, башҡаларҙан иң алда, имгәтмәйенсә генә көмөш ҡанатлы һуна алып килгән, ти.

Байрамдың иртәгәһенә иң һуңғы шарт иғлан ителгән. Уның буйынса, кем дә кем Уралда булған йән эйәләренең иң ҡурҡыныcын тотопмо, үлтерепме, быны иҫбатлап, ниндәйҙер бер билге алып килһә, шул беренсе булып һанала икән. Бер аҙҙан егеттәр сәмләнешеп, урындарынан һикерешеп тороп урманға инеп таралыштылар, ти. Төшкә табан Минәй батырҙан башҡалар һунарҙан буш ҡул менән ҡайтып инәләр.

Минәй батыр, һунарсыларҙың иң һуңғыһы булып, ҡор уртаһына килеп баҫҡан да, үҙенә һүҙ биреүҙәрен һораған. Ризалыҡ алғас, үҙенең ошолай һамағын теҙеп китте, ти:

Күҙ йөрөтөп ҡараным ян-яғыма,
Күренде күҙемә ҡарасҡы.
Ибәтәйһеҙ оҙон, имәнес йыуан,
Ынтыла-һонола был шаҡшы, —

тип үҙенең һунар-сәйәхәтенән теүәл бер тәүлек тигәндә ҡайтып килеүе тураһында һөйләй башланы, ти. Беренсе булыу өсөн, ҡуйылған шарттарҙың алдағыларын үтәгәс, уға ышана төшөп, халыҡ уны тыңларға булды, ти.

Уралана, ишелә ул ағасҡа,
Иң осона ниҙер ҡаранып.
Тын алғанда төҙөк-төҙөк булып,
Ул, ағасты урап, һарыла,
Томшоғонан болот ағыла.
Ерҙең ҡыртышынан тау-таштан,
Ул тын алған һайын ҡалҡа быу,
Тамаҡҡа һыҡыны, күкрәккә ултырҙы,
Монар булып һаман артты быу.
Иҫ үңгәләй, башым әйләнә,
Йөрәк тибә, ашҡаҙан болғана,
Уҡшыйым үҙем, айылғандай күҙем,
Йоҡо баҫты, хәлем бер сама.
Ана-бына ошо арала,
Деүләп шашты ел-дауыл,
Берәм түгел, өсәм-дүртәм түгел,
Аҡтарылды донъя бер ғауым.
Өйөлә-төрөлә, уйнаҡташа,
Бөтөрөлә болот, эй шаша —
Ҡот әҫәре ҡасты һәр йәндең,
Тау-таш, урман әсе ыҙғыша.
Уйнай уттар, ишелә-һүтелә,
Тәгәрәшә туптай йомро ут,
Йәне булған барлыҡ ҡош-ҡорттоң,
Ҡобараһы осто, бөттө ҡот.
Һелкенә ер, сайҡала ағастар,
Арҡыс-торҡос ҡолап, сурт һына,
Сарпынды һыныҡтар, яҫмарҙай дәү таш,
Осҡондай осалар ҡаршыма.

Салт аяҙ көн, ҡап-ҡара төн булды —
Ҡалҡҡанға болоттар ҡабарып.
Һис түгел белерлек тегендә, янында
Ни булған, нимә юҡ, ни барын.
Үҙемде тота алмай, йөрәкһенеп,
Һикереп мендем мин атыма
Ул өркә, тулай ҙа тибенә,
Һис килмәй, ҡыуһам да, ибемә,
Туҡтауһыҙ ҡарана артына,
Йыуан ҡамсым батҡас һыртына,
Менгән атым алға ынтылды.
Ел-дауылдар ҡармап, уралаҡнды,
Тамам ҡороттолар аҡылды.

Минәй батыр Уралдағы бар йәнлек, йыртҡыс, башҡаһы, бер булып алғанын, ҡайҙалыр ҡасҡанын күргәнен бәйән итте, ти:

Тирә-йүнде йәмгә күмгән
Йырсы ҡоштар ләм-мим булды.
Уҫалдың уҫалы типкерҙәр
Ҡая ярығына тиҙ тулды.
Урман эсенә беҙ хужа, тип
Йөрөгән йыртҡыстар ҙа шымтайҙы,
Әйләнеп тә ҡарамай арттарын,
Сәхрәгә ҡарап шымтайҙы.
Берәүгә күренмәй, буй бирмәй,
«Беҙ генә!» — тигән бирелләр
Ҡай ерҙә батҡаҡ, беҙ шунда,
Тигәндәй сабышып йөрөйҙәр.
Толомон күпсетеп шаршыла,
Тарайған матур ҡыҙ Һыуһылыу,
Күҙ йомоп, сумды тиҙ төпкәрәк,
Ҡайҙа сөм, ҡай ерҙә бар йылыу*.
Бисураларҙың оло аҡһаҡалы,
«Бына мин!» — тигән албаҫты,
«Күрешербеҙ әллә, әллә юҡ», —
Тип, күҙен аҡайтып, тиҙ ҡасты.
Бисуралар шуға күренмәй,
Йөрөйҙәр ине гел ыҡшандап.
Ҡайҙалыр боҫто ла шымдылар,
Хатта ки тынғыһыҙ ен, шайтан,
Ҡытыҡ-мытыҡ уйнайыҡ, тип,
Еҙ тырнаҡлы шүрәле,
Улар ҙа, күҙҙән юғалып,
Шымып ҡалды, күр әле.
Ҡалтыраша ҡуян, төлкө,
Бүре ҡыҫҡан ҡойроғон,
Улар ҙа шым ғына үтәй
Ошо мәхшәр бойроғон.

Кейек көйө йөрөгән аттар —
Башын бирмәҫ тарпандар,
Ҡойроҡ сәнсеп, олаҡтылар,
Елә, саба, тарбандап.
«Күл хужаһы — беҙ», — тип
маҡтанған
Йәйен, суртан — сөмбәйҙә,
Ас тейен дә өңдә ашап,
Эскем килә тимәй ҙә.
Дүрт тояғым мөгөҙ-ҡорал, тип,
Маһайышҡан йылғыр боландар,
Эләктереп, мөгөҙҙән яҙғас,
Үкенә туҡал булғанға.
Аңра айыу, тәкмәс атып,
Ҡумрыҡ аҫтын һайланы,
Мәлһеҙ ҡыштың мәхшәре, тип,
Башлап усын яланы.
Ботаҡтарҙан ботаҡтарға
Бесәйҙән сос һикергән
Һеләүһен дә, ҡотолам, тип,
Өңкәйенә тиҙ кергән.
Туңҡанлашып, йығылышып,
Ҡайҙа ҡаса бурһыҡтар,
Ҡотор-ҡотор өйөрө менән
Осто ҡорҙар ҡыҡырлап.
Сарғаланып шыйҙап күктә
уйнаған,
Типкер бөркөт, типкер ыласын,
Ажарҙары ҡайтып, аптырашты,
Белмәй ҡасып ҡайҙа бараһын.
Ҡупыҡтанып көндөҙ емешәгән
Урал ҡапыртының* һуйыры
Ҡурҡаҡ сөрәгәй дуҫтарына,
Йән һаҡлағыҙ, тиеп бойорҙо.
Күктә йымылдаған йондоҙҙар ҙа
Күҙ ҡыҫышып көлмәй,
йылмаймай,
Көмөш нурҙа ҡойондорған ай ҙа
Тип өндәште: «Ай-һай,
һай-һай-һай!»
Аждаһаның шомонан
ҡурҡышып,
Маҡауланып ҡалған күп булды,
Әжәл килмәҫ борон үлгәндәрҙән
Бөтә урман, тирә-йүн тулды.

Ошо мажаралы күренештәр, ғауғалар ваҡытында аптырашта ҡалған йән эйәләренең байтағын йотҡас та, аждаһа бер аҙға тыныс ятты.

Аҙ-маҙ ваҡыт үттемелер, юҡмы,
Ҡупты тағы яман мажара.
Теге ғифрит тағы ҡоторондо,
Табып булһа ине бер сара.
Көс йыйҙымы икән шул арала,
Ҡупты дауыл, борсаҡ, ҡар яуа.
Түңкәрелде төҫлө күк күмәсе,
Мына-мына ҡая таш ауа.
Йылтыр-йылтыр уттар ялт-йолт итеп
Күҙҙе сағылйыта сасырап*,
Баш осонан, боттоң араһынан,
Ҡуйындан да үтә сатырҙап.
Күк ярылды, даңғыр-доңғор итте,
Юҡ, асылып күктең күк күмәсе,
Изге заттар шунан уҡытырға булды
Аждаһаның, тим, арт һабағын.
Сылтыр-сылтыр, сылтыр-сылтыр итеп,
Күктән төштө сынйыр бауланып,
Ауыҙ асып, баш саңҡайта биреп,
Ҡарап торҙом шуға, таң ҡалып.
Нимә сылтырай, тип, аждаһа ла
Ҡарағайны башын кәксәйтеп —
Боғал булып, күктән төшкән сынйыр
Муйынынан алды шәп итеп.
Муйынынан алғас, боғал булып,
Сынйыр ҡапыл ҡылдай тартылды,
Теге ғифрит аҫылынып ҡалды,
Ҡойроғонан аҡты һарҡынды.
Һаҙлыҡ һарҡындыһын сәсә-сәсә,
Эй, был тартышырға тотондо:
Ҡойроғон, тим, сыбыртҡылай күреп,
Уңға, һулға яман тондорҙо.
Ҡупты дауыл — аҡтарылды ағас,
Шаурап ауҙы хатта ҡая таш,
Ҡояш һүнде — айырырлыҡ түгел
Аяҡ-ҡулдар ҡайҙа, ҡайҙа баш.
Дулап, тулай торғас аждаһа, тим,
Сынйыр өҙөлдө лә, сылт итеп,
Терелә-бәрелә йомарланды ла ул
Килеп төштө ергә лырҡ итеп.
Сындап-зындап ҡуйҙы сынйыр үрҙә,
Шул тәңгәлгә кәрәк барыуым —
Ярҙан ашҡан диңгеҙ тулҡынылай,
Ташҡан ине минең һарыуым.
Күреп теге затты аптыраным:
Дарҫ-дарҫ һуға әле йөрәге.
Тын алғанда даңғыр-доңғор килә
Киң ҡыуышлы рәүке үҙәге.

Шаҡылдата тешен, телен һуҙа,
Ауыҙынан ағыу ағыҙып.
Үҙе бысраҡ, үҙе һаһыҡ ағыу
Ян-тирәгә ҡала яғылып.
Ҡурҡып тормай, тотон мин ҡойроҡҡа,
Һиҫкәнде лә яуыз тартышты,
Бирешмәҫкә уйлап, билендәге
Бөтә көсөн йыйып алышты.
Туҡта, тинем, малай, ҡоторонма,
Тартҡыслайым, һелкәм, һөрәтәм,
Ҡойроғонан тартып, алам көсөн,
Кәрен алам, тамам йөҙәтәм.
Арыны ла яуыз, әжәл сиккә етте,
Һонолоп ятты, тын да алмайса.
Эҫе мәлендә, тим, кәрәк берәй
Сара күреү, туҡтап ҡалмайса.
Кәбән ҙурлығы уҡ булмаһа ла,
Ҡул осона алдым елле ташты,
Устан-усҡа һалып һәлмәкләнем,
Яра һуғырға тип был башты.
Атҡан инем ташты — аждаһаның
Соңҡаһы, тим, ҡалды сырт итеп,
Йәне ярылып, микән, ҡап урталай,
Алҡымымы ҡалды мырт итеп.
Шул арала ғына күкрәге эсенән
Ипләп кенә ниҙер шыуышты.
Шул саҡ танауҙары япырайҙы,
Хәтерләтеп өлкән ҡыуышты.
Шунан кереп асты ҙур ауыҙын,
Ә ауыҙы унын арандай.
Тыны менән тарта башланымы,
Бер ни уға ҡаршы торалмай.
Аждаһа бит, һуңғы көсөн
йыйып,
Йотмаҡ була икән мине лә —
Ҡарағастан елле киҫкә тыҡтым,
Йотоп ҡара шуны, тинем дә.
Оҙонлоғон самалап ҡап-урталай,
Ҡуйған инем теге киҫкәне.
Шымды-тымды, һелкенмәй ҙә,
шунда
Эш мөшкөл, тип һиҙҙе,
һиҫкәнде.
Шунан ҡылысымды ҡайрағыма
Иҙелдереп өйкәп, ҡайраным,
Үтә микән, үтмәйме был, тиеп,
Бармаҡ йөрөтөп йөҙөн ҡараным.

Яҡын килеп йылан елкәһенә
Ултырткайным йөҙөн ҡылыстың
Суйыр саҡматашҡа тейҙеме ни —
Майырылдырып, уны ырғыттым.
Елкәһендә уның ике ая,
Таштан ҡаты ере бар икән,
Әле ҡылысымды сапҡан саҡта
Саҡма саҡтырыусы шул икән.
Ҡылысымды ҡабат ҡулға алып,
Ҡайра баҫып, тағы киҙәндем.
Киҫеү түгел, минең булат ҡылыс
Һалманы ла кескәй инәүҙе*.
Ҡылыс ҡайрап мандай тирем
аҡты,
Ниңә үтмәй? Ҡалдым аптырап.
Минең шулай аптырағаныма
Тора торғас менгән ат, ҡарап,
Ниҙер әйтергә тип уҡталғандай,
Миңә ҡарап, ҡат-ҡат бышҡырҙы.
Уянғандай булдым, әйтерһең ул
Аҡыл биреп миңә ҡысҡырҙы.
Аҡыллы ат тотҡан ҡылысыма
Тирле тәнен килеп ышҡыны.
Иҫемә килеп, шунда үҙем
Ебәрмәнем саҡ-саҡ ҡысҡырып.
«Ат тиренән йылан сикһеҙ ҡурҡа,
Шуға һаҡлана ул унан гел.
Ошо серҙе һиңә сисеп бирҙем,
Үҙең аңла, дуҫым, үҙең бел!» —
Тигән кеүек тоғро атым миңә,
Эйәк атып, ҡат-ҡат ымланы.
Атым ымын шундуҡ аңланым да,
Уның кәңәшен мин тыңланым.
Үткерләнде ҡылыс зөлфәкәрҙәй*,
Сапҡан һайын ҡырҡты, ҡырт та ҡырт.
Иҫкә төштө ололарҙың һүҙе
«Аждаһаны ҡырҡһаң, ҡырҡа ҡырҡ».
Шытырҙығын сығып һыҙырыуға
Ҡаршылашмайынса, бирелде,
Ҡоймос тәңгәленә еткәс кенә,
Аһ-ух итеп йылан кирелде.
Көскә мөс* өҫтәлде, тора-бара
Көсө ҡайтты нәүбәт алдыма.
Ҡылыс эскә батҡас, шымды
йылан,
Бөгәрләнеп ятып, ҡатты бис.
Бәғерһеҙгә, йыланһың һин, тиеп
Белмәй әйтмәй икән кешеләр.

Хаҡ икәнен хәҙер үҙем беләм:
Улар, эйе, йылан ишеләр.
Шуны белдем: йылан, аждаһаны
Бер ни түгел икән үлтереү,
Йылан затҡа бер ни ҡылып
булмай,
Ҡасан ҡараһаң да, ул терек.
Аждаһаның икән барлыҡ көсө —
Уның һырт ҡайышында.
Һыҙыра торғас төшөндөм
Мин шуның айышына.
Мин тағы шуға төшөндөм:
Бушҡа булған тырмашыу.
Асып ҡараһам, буш булды
Соңҡалары ҡыуышы.
Күмәк ендәр сынйырға
Ҡасан йыланды аҫҡан,
Шунда соңҡаһын асҡан,
Алтынын алып ҡасҡан.
Бер хәүефе лә ҡалманы
Был аждаһа-йыландың,
Өҫтөндә уйнаһын баллар,*
Теләгәнсә ҡыланһын.
Әйткәнемә шик тотһағыҙ,
Ебәрегеҙ сапҡынсы,
Мин һүҙемде дауам итәм,
Улар урап ҡайтҡансы.

Ил ағалары кәңәш ҡороп, сапҡынсылар тәғәйенләп, уларға эштең әрәсәһен аңлатып, оҙатырға булдылар, ти. Минәй батыр һүҙен дауам итте, ти:

Тау күтәрмәле көс кәрәк
Өҙөргә һырт ҡайышын.
Мә, күрегеҙ, тартышығыҙ,
Аңларһыҙ һүҙ айышын.

Шулай тине лә, ти, Минәй батыр, ҡанъяғаһына бәйләнгән ҡуржынын алып, ауыҙын систе лә:

Мә, ҡарағыҙ, алығыҙ
Һырт ҡайышын йыландың,
Тартышығыҙ кемдәр көслө,
Кем ҡеүәтле, кем алдын, —

тине лә, ти, ҡуржынынан өйрөлтә һелтәп ебәргәйне — унан йыландың һырт ҡайышы сыбалып килеп төштө, ти.

Һынамаҡҡа, килеп сыҡты
Маҡтансыҡтар, урталар,
Ике осон урап тотоп,
Өҙәбеҙ тип, тарталар.

Берәм, икәм йәбештеләр,
Шунан өсәү, дүртәмләп.
Бер-береһен ҡеүәтләп,
Бере-береһен кәмдәп.
«Күҙ асып күҙҙе йомғансы,
Өҙәбеҙ!» — тиештеләр.
Булдыралмай, йығылдылар,
Бары ла көлөштөләр.
Хәҙер дүртәм генә түгел,
Тотондо, ти, күмәкләп,
Ҡара тиргә төштөләр, ти,
Берен-бере һөрмәкләп.
Тартыша, еңешә, ауа-түнә
Тыһылдашып, арып бөттөләр.
Берәм-берәм арып, аралыҡтан,
Булдыралмайынса, киттеләр.

*Минәй батыр:*

Эстән көлөп, йөҙ йылмайтып,
Байтаҡ торҙом ҡарап ҡыҙыҡты.
Һеҙ күргәндә, тине, тегендәге,
Уйын түгел, ысын һуғышты.
Намыҫлы ла батыр ҡабатламаҫ,
Тик бер генә әйтер хаҡ һүҙҙе.
Теленән килгән, ҡулынан
килмәгән —
Шапырыныусының тас үҙе.
Тағын әйтәм: бик тә ышанмағас,
Ебәрегеҙ бер аҙ кешене.
Әйткәндәрем хаҡмы,
әллә бушмы —
Тикшерһендәр шулар эшемде.

*Көләшә батыр һүҙе:*

Мин үҙем дә ырыу батырымын,
Һин алдайһың һымаҡ, Минәкәй.
Арттыраһың, күп өҫтәйһең,
Кәметә бир әле бәләкәй.
Ышанабыҙ, донъя ҡоторондо,
Йәне барҙар ҡурҡып ҡастылар:
Ғәм* йөрәген ҡыҫты ҡулы менән,
Усҡа алды күптәр йөрәген.
Мал, кейектәр боҫоп яттылар,
Унда ғына түгел, был яҡта ла
Тауыш тынды, һәр кем шым
булды.
Күкме емерелде, тип уйҙаныҡ,
Тирә-яҡҡа яман шом тулды.

Араланы Ер-һыу, Күк-тәңребеҙ
Барыбыҙҙы мәлһеҙ Әжәлдән.
Беҙ уйҙаныҡ бөтә был мажара
Гонаһ эйәһе бер әҙәмдән.
Барына ла ышанабыҙ, ҡустым,
Дөрөҫ әйтәң: көс тә көс, тиһең.
Аждаһаны үлтереүең хаҡтыр,
Мәгәр һырт ҡайышын өҫтәйһең.
Батыр булып, бик тә көсөң еткәс,
Ниңә бирҙең енгә алтынды?
Ул халыҡты ҡан илатып алған,
Уйламаныңмы ни халҡыңды?
Беҙҙең ерҙә әҙе түгел, хатта
Булмаһын аждаһа еҫе лә.
Аждаһа яҙмышына тәл булһын*
Уралға яҫҡанған кеше лә!
Уҡ-һаҙаҡтар алып, һөңгө тотоп,
Күпме яуға ҡаршы елдерҙек.
Һыйындырған изге Урал тауҙы
Һаҡлап күпме ҡорбан килтерҙек.
Ҡырҡты тауҙың көньяҡ
битләүендә
Булған бер һуғышты иҫкә алам —
Ҡандыҡая тиеп исем бирҙек,
Быуындарға ҡалһын тип,
балам.
Ана теге ҡалҡыу тауҙы ҡара,
Исем бирҙек уға — Һағауыл.
«Ниңә?» тигән бәлки һорау
тыуыр —
Торҙо унда һаҡсы-ҡарауыл.
Уйлайһыңдыр, ниңә, ни өсөндөр
Сик буйында бар, тип,
ҡорғандар.
Һанһыҙ яуҙан һаҡлап Уралтауҙы
Башҡорт яугирҙары
торғандар.
Ғүмер үтте, йәшлек кире килмәҫ,
Байғошланмай, өҫтөн йәшәнек,
Сәс салланды, тештәребеҙ төштө,
Йәшнәр саҡта мәгәр йәшнәнек.
Беҙ бирмәнек изге Урал тауын
Беҙҙең мөлкәт, байлыҡ —
Уралтау.
Яттар һырынмаһын тауыбыҙға —
Үлем көтөү — уны юғалтыу.
Әйткән һүҙең әгәр дөрөҫ булһа,
Хаҡтан булһа әгәр ҡылғаның,
Киләсәккә һинең даның китер,
Быуын-быуын барыр ялғанып.

Үле йөрәкте лә терелдергән —
Ил теләге, халҡы теләге.
Терелткән дә, кеше үлтергән дә —
Ил теләге — ирҙең терәге.

Көләшә һөйләп торғанда,
Ҡапыл шау-шыу ҡуҙғыны,
Ана-мына киләләр, тип,
Барлыҡ халыҡ ыҙғыны*.
Яҡшы һүҙ — өгөт, нәсихәт,
Барыһы ла өҙөлә —
Күҙ күреме етмәҫ ерҙә
Саң томаны өйөрөлә.
«Ана киләләр», — тиешкән
Тауыштар арта бара.
Берен-бере тапашышып,
Кем алда, кем артта бара.
Һәр берәүҙең ауыҙында:
«Ысынмы ул?» «Буштыр ул?»
Баҙнатһыҙҙар тел төбөндә
Шыпырт-шыпырт шыпырт мул.
Күп тә үтмәй, сабып килгән
Сапҡынсылар күренә.
Йыйындағы барлыҡ халыҡ
Ҡаршы алырға йүгерә.
Даһыр-доһор, шатыр-шотор,
Шау-шыу көсәйә бара.
(Ышанмай икәнең миңә,
Бар үҙең барып ҡара)...
Йүгереп, эләгеп ҡолап,
Берен-бере тапайҙар.
Сыр-сыу килә бала-саға,
Әсәй, инәй, апайҙар.
Кеме ҡолай, кеме тора —
Китте этеш тә төртөш.
Берәү әйтә: «Һынды билем!»
Икенсеһе: «Төштө теш!»
Әйтерһең, кемдер тарата,
Бушлай, зиннәтле нәмә;
Асманға ашырға бөгөн
Юл асылғанмы әллә?
Иреш, талаш ҡыҙа бара,
Илаш, һыҡташ аралаш.
— Тешеңде емерәм, малай,
Алабыңды* ипләп ас!
— Әйҙәгеҙ, нимә тексәйеп,
Торағыҙ ҡарап, йәгеҙ!
— Алғараҡ үт йә артҡа шыл —
Беҙ ҙә, ҡана, күрәбеҙ.

— Һеҙгә генә күрергәме,
Йә, ошондай ҡыҙыҡты?!
Йыйын башлығы ҡысҡыра:
— Аша сыҡма һыҙыҡты.
Ололар ҡуҙғалып бармай,
Урталар — урталыҡта.
Ҡапыл ситтән берәү килә:
«Ни булды, — тип, — халыҡҡа?»
Тыны тығылып ҡысҡырҙы
Ошо туйҙа баш кеше.
Халыҡ үҙенекен итә,
Юҡтыр унда һис эше.

Сапҡынсылар башы булған
Урта йәштә бер кеше.
Эйәрсәндәре киләләр
Артынан эркелешеп.

Күҙ асып йомған арала
Түңәрәкләп баҫтылар.
Аптырашып, ҡурҡышып,
Дөрөҫлөктө астылар.
Буш, тимәйҙәр, дөрөҫ, тиҙәр,
Минәйҙең батырлығын.
(Еткән ҡыҙҙар ҡарап тора
Тын ҡалып, матурлығын.)
Барыһы ла һоҡланышып:
— Афарин, Минәй! — тиҙәр.
— Ырыуың ни? Ораның ни?
— Ҡай ерҙән һин, әй? — тиҙәр.
Тик аранан көнсөл берәү
Ярһып туҙа, аҡыра.
Халыҡты үҙенә әйҙәп,
Ҡулын болғап саҡыра:
— Ул аждаһа хәлһеҙ булған,
Мөскенәһе* — ҡойроҡта.
Зәғиф нәмәне еңгәнһең,
Минәй, һүҙең ҡуйыртма.
Бик шәп булғас, һин
һап-һауын —
Көслөһөн еңеп ҡара.
Ажғырып өҫтөңә килһә,
Табырһың микән сара?
Батырмын, тип, маҡтанғансы,
Еңеп ҡара шундайын.
Мин үҙем, йәғни, мәҫәлән,
Еңер инем унлабын!
Улай булмай, энекәшем,
Көс менән көс алына.

Арттан түгел, ҡаршы тороп,
Батыр егет алыша.
Булғас булһын, көслө булһын,
Мөсһөҙҙө кем еңә алмаҫ.
Көслө, һауы менән алыш —
Әйтергә һүҙ ҙә ҡалмаҫ!» —
Тигән ине болғаҡ боларҡкыс,
Таяҡ тығып иләү болғатҡас,
Мыжғышты халыҡ, дауҙашты,
Хәл ителер саҡта ҡуҙғытҡас.
Ҡуҙға өргәс, ут тоҡанды,
Быҫҡыманы, гөлт итте.
Болғаҡ, гүйә, утты болғап,
Услап уға май һипте.
Гүйә ки ул, таяҡ тығып,
Болғаны һил иләүҙе.
Болғаҡ һүҙен тыңлай торғас,
Уның яҡка ил әүҙе.
Унан тағы талаш китте,
Икеләнделәр күптәр,
Кемде тыңларға белмәне
Әүмәкәйе кеүектәр.
Көстәр яңынан барланды —
Ил бүленде урталай.
Тартҡылашыуҙан тирә-йүн
Шаулап торҙо бер далай*.
Минәй маҡтау алмаһын, тип,
Кәрсел күңел* тарыҡты.
Йыйындағы барлыҡ халыҡ,
Асығып, арып, ялҡты.
Иртәгәһенә иртәрәк
Йыйылалар күберәк:
Кем, йә, нисек баһаланыр —
Шуны белеү бик кәрәк.
Аҡлан тулды, тау-түштәре
Ҡара болот баҫкандай.
Килгән бөтә ҡарт-ҡоро ла,
Ғәрибе, кем аһҡандай.
Бала-саға, бисә-сәсә,
Сыр ҙа сыу, гөж киләләр,
Үҙ араһы төрткөләшеп,
Ҡыҙыҡ табып, көләләр.
Теге төркөм, был төркөм дә
Үҙҙәренсә бәһәләй*,
Бәһәләре сайҡалыша,
Әйтерһең дә, әүһәләй.

Йәшерәһе түгел инде,
Һүҙ юҡ бында батырын:
Күберәктәре яҡташа
Үҙ ырыуы батырын.

«Яттың шәп аты уҙғансы,
Үҙеңдең тайың уҙһын,
Кемдеке — анығы, тигән —
Ошо төп ҡанун булһын».
Әллә ҡайҙан һонолоп
Хәбәр һала шарҙыуан.
Үҙе яр һала, ҡарлығып,
Ике күҙе шар буған.
Теге эсе тар ҙа сабып
Ялған һүҙен тарата.
Икеләнгән, әүмәкәйҙе
Үҙ яғына ҡарата:
— Минәй ул бит ситтән килгән —
Һыу ағыр ҙа, таш ҡалыр,
Бирелһә ҡыҙ, тейһә бүләк,
Алып китәр ҙә барыр.
Ни тимә, үҙебеҙҙеке
Алға сыҡһын, маҡталһын.
Ысынын да буш итәйек,
Яңғыҙ ят ни буҡталһын*.
Ятҡа яй биреү ярамай! —
Тине, ти, күңел тарға. —
Ҡайҙан ул? Ник батыр булһын,
Үҙебеҙҙеке барҙа.
Бирмәгәс, уға бирмәйек,
Ҡыҙ түгел, былай бүләк,
Юҡтың хаҡын йөрәгең мән*
Ебәргән кеүек түләп.
Намыҫ барҙа, Минәй батыр
Сыҡмаҫҡа тейеш алға.
Еңмешлек тә — намыҫ эше
Халҡым, һин шуны аңла.
Күрҙегеҙме, нисек батыр
Алыштым кисә мин, әй.
Алып атайым тигәндә,
Аяҡ салды тик Минәй.
Уғымды күҙәгәнемдә
Терһәгемә ҡағылды,
Шуға ла бит минең һаҙаҡ
Яҙатайым* ҡаҙалды.
Ҡыуалға менә алманым —
Шыялап ниҙер һөрткән,
Ул ине бит минән алда
Ҡыуалға менеп төшкән.
Ул етәкләгән айыуҙы
Мин үҙем тотоп бирҙем...
Йәнен һатыусы аранан:
— Хаҡ һүҙ, — ти, — үҙем күрҙем.

Ул маҡтана:
— Аждаһаның
Һырт ҡайышын мин алдым,
Ул аждаһаны мин үҙем
Ендәрҙән алып ҡалдым.
Тик ул ғына башындағы
Уйып алған алтынын.
Шуны күтәрә алмайым —
Баҫылмай эс ялҡыным.
Әгәр ҙә ҡыҙҙы бирһәгеҙ,
Мәңгегә хур итәгеҙ.
Ышанмайһығыҙмы миңә,
Өндәшмәй, ни көтәгеҙ?
Бушты һөйләүсе мин түгел,
Кешелә кемдең эше.
Ысын менән хаҡты әйтеү —
Һәр кемдең изге эше.
Ҡыҙыл телем ҡырҡҡа болғап,
Бушты ысын тимәйем,
Юҡты бар тип әйтеп әллә
Гонаһ эшкә димләйем?
Миңә уның бүләгенең
Әһәре лә* кәрәкмәй,
Уға, тим, ник тиктән тиккә
Бирергә өҫтәп мәрәй?
Ҡыҙ бирмәк — ул намыҫ эше,
Әрәмгә ҡыҙ китмәһен.
Ата-инәһе, үкенеп,
Ҡайғы-хәсрәт сикмәһен! —

тип үҙенең Таңдыса өсөн тарсылығы килеп, уны Минәйҙән ысынлап ҡыҙғанғанға, әйтеп белгертә биреп ҡуйҙы, ти. Ысынлап та, ул көнләшә ине. Урта йәштәрҙә булһа ла, ул икенсегә Таңдысаны алырмын, ти ине. Халыҡтың күбеһе тигәндәй ышана биреп:

— Әллә, шулайҙыр ҙа. Уныһын кем белә, — тиештеләр. Халыҡ:

— Быға ышанырғамы, юҡмы? Кемдеке ысын, кемдеке буш? — тип торғанда, йыйынға килгән берәү:

— Ағай-эне, ышанаһығыҙмы, юҡмы, бер ерҙән шыуышып барған ибәтәйһеҙ имәнес йән күрҙем. Ошолай ҡарап килә, яҡындамаҫ борон, — тине, — берәй кеше ебәреп, айырым асыҡлап белегеҙ, — тине. Ырыу башлыҡтары ете һыбайлы ебәреп, уны асыҡларға булды, ти. Һыбайлылар барып етеүе булды, ти — һарғыл-һор аждаһаны күреп, кире йән-фарман саптылар, ти. Ул арала килеп етеп һөйләгәстәре, ололар:

— Быны аҙғындамаҫ борон, маҡамынан ҡуҙғалып сыҡҡан ыңғайында, бөтөрәйек, — тип. — Йә, батырҙар, кемегеҙ бара? Кемегеҙ ҡурҡмай, кемегеҙ — ҡыйыу? — тинеләр, ти. Аранан берәү ҙә сыҡмай торғас, ырыу башлығы баяғы ҡотҡосо Һалпан батырға бармағы менән төртөп:

— Йә, батыр, теге аждаһаны мин тартып төшөрҙөм, Минәй алданы, әҙер ҡорбандың һырт ҡайышын һыҙырып алып ҡайтып һеҙгә күрһәтте, тей инең. Ҡарап ҡарайыҡ, икегеҙ араһын айырырға уйҙамаған, көтмәгәндә, һеҙҙең бәхетегеҙгә, юхаға әйләнергә сыҡҡан аждаһа барлығы асыҡланды, кемегеҙ бара? Күҙебеҙсә, айырылығыҙ, — тигәс, Һалпандың йөрәге жыу итеп ҡалды, ти. Минәй иһә тегенең алдашыуын ишеткәс тә, намыҫланып, сәмләнеп, унын көсө артҡан һымаҡ булып китте, ти.

— Эй һин, Һалпан батырым,
Бына килде татырың:
Батырлығың —дан даһа,
Тағы тотсо аждаһа:
Тотоп алда, бир миңә,
Ниңә бирәйем, тимә —
Башын тотоп торорһоң,
Һырт ҡайышын һуйырмын.
Әйҙә киттек һунарға
Аждаһаны тунарға, —

тигәс тә, Һалпан артҡа сигенеп, халыҡҡа аралаша. Аралаша-аралаша барып, ситкә ситләнеп, ҡайтып түшәгенә йығыла. Үҙ алдына: «Нисек әле былай уңышһыҙ булды? Эш барып сыҡманы ла баһа», — тип ухылдап ятты, ти. Тик Минәй аждаһаны үлтереп, тураҡлап ҡайтҡас та, уны, шаулашып, күтәргән тауышҡа ғына йортонан сыҡты ла оҙаҡ тыңдап торҙо, ти. Ни булғанын белә алмай тора ине, ти. Алдан ҡайтып килгән бисәһен күреп һорашты, ти. Бисәһе:

— Минәй аждаһаны үлтереп ҡайтты, — тигәс:

— Бүләгенә ни? — тип һорап, бисәһе өндәшмәгәс, уны эйәртеп йортона инде, ти.

Баяғы ете һыбай күреп килгән аждаһа, икенсе аждаһа, ысын юхаға әйләнеп, ҡотора башлаған аждаһа булған икән, ти. Оло Урал түбәһендәге Оло һаҙҙа ятып, сығар көнө еткәнгә, эҙләнеп сыҡҡан сағы булған икән, ти. Теге сапҡынсылар күреп ҡайтҡас, ул бер сусаҡты ете мәртәбә уратып алып, һығып, урта төшөнән быуа башлаған икән, ти. Эсе-эсе һыҙғырыуына ел-дауылдар уйнаған, ағастар сайҡала башлаған, ер тетрәп, халыҡтар йәндәрен ҡулдарына тотоп, ҡобаралары ҡасып, ҡоттары осҡан, ти.

Минәй ҡылысын Урал ташына ҡайрап үткерләгән дә, ти: «Тәүәккәлдәндем, халҡым», — тип, аждаһаға ҡарап атлап киткән. Аждаһа ун ике башынан ун ике телен тау түбәненә һалындырып, һап-һары ағыулы шайыҡтарын аттыҡтырып, тирәһендәге үлән-үсемлектәрҙе һарғайтып көйҙөрөп ята икән, ти.

Ҡойроғо эләккән бер ағасты ҡыра, ауната һуға ине, ти. Минәй, барып еткәс, телдәрен өҙә сабып алып, әллә ҡайҙа Урал ашаһына бырағтырҙы, ти. Шул тиклем йыуан ҡарағас түмәрсәне күтәреп алып, урталағы башына етеп асылған ауыҙҙарына арҡырылата терәгән ине, ти — ажарҙанып теше менән саҡҡайны, тештәре түмәрсәгә батыуы булды, ти. Шул арала Минәй батыр ҡылысы менән өс башына өс

сапты — өҙөп тә төшөрҙө, ти. Ҡалған баштарын ҡурҡмай иркендәп өҙә башлағайны, ти, теге баштар аңғанса тағын ҡабат яралдылар, ти. Ләкин хәлһеҙ генә ине, ти. Һиҙенеп, бер экиәттән ишеткәне иҫенә төшөп, кәрәк булыр әле, тип ололар биргән тырыҙдан Урал майын[4] алып, ҡырҡылған бер баштың урынына һөртөп барҙы, ти. Шунан һуң ғына ҡырҡылған баштар ҡабат уңалманылар, ҡырҡылған бере тауҙан түбән тәгәрәп төшөп торҙо, ти. Иң һуңғы башын ҡырҡҡас та аждаһа урауынан тағатылып төштө, ти, урмандарҙы ҡыра, тау-таштарҙы ауҙара башланы, ти. Минәй тиҙ генә йүгерә-атлап барып ҡойроғо осонан тотоп алып ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла һелкетә, тарта башлауы булды, ти — тартҡан һайын, мырт-мырт итә барып, аждаһаның йәне тәненән сыҡты, ти. Шул арала ҡуйырған болоттар һирәгәйеп, һибәләп ямғыр яуып ебәрҙе, ти. Ҡояш та, ҡара болоттар аҫтынан сығып, йомшаҡ йылы нурын һибәләүе булды, ти. Ер йәшәреп, үләндәр терелде, төрлө сәскәләр күҙен асып яҡты донъяға ҡарап, танауҙы ярырҙыҡ тәмле еҫтәрен борҡотоп Урал эсенә тултырҙы, ти. Йәмле йәмгә күмгән ҡоштар ҙа дәртләнеп, ҡыуанышып ҡанат ҡағып һайрарға, йыртҡыс кейектәр, эйәләшкән мал-тыуар, кире маҡам тораҡтарына ҡайтып, ҡыуанышып йәшәй, үрсей башланы, ти. Уралда ғына түгел, күршеләге халыҡтар ҙа һин дә мин уйнапкөлөп, эшләп, ашап, ау, һунарсылыҡ менән иркенләп көн күрә башланы, ти.

Минәйҙең ошо һуғыштағы батырлығы, көрәштә һынатмағаны, уҡ менән алтын балдаҡтан үтә атҡаны, етәкләп айыу алып килгәне, аждаһаның һырт ҡайышын һыҙырып алғаны, юхаға әйләнгән аждаһаны тураҡлағаны өсөн, үҙенә абруй, һаулыҡтар теләп, тағын да алғы көнөнөң алғыһында ла һәр ҡасан шулай булыуын, ил, халыҡ өсөн киләсәктә лә йәнен дә, тәнен дә йәлдәмәй ҡорбан булырға әҙер, ҡайтауылһыҙ бер һүҙле булыуын, вәғәҙәһендә тороуын әйттеләр, ти. Шунан оло-ололарҙан бер аҡ һаҡалды ҡарт: «Иртәгә туйҙың һуҙымы була әле, бөттө тип уйҙамағыҙ. Йомғаҡлау була әле», — тип әйтте. Халыҡтың йөрәге тынсып, уйһыҙ, хәсрәтһеҙ, ҡурҡыныс шомдан ҡотолоп, донъяға тәүге тыуғандағы шикелде булып, ауыр йөктән бушанып таралды, ти. Күҙһеҙҙәрҙең күҙе асылды, телһеҙҙәр һөйләшә башланы, ти, һөмһөр йөҙҙәр асылып, яҡтырҙы, ти. Бойоҡ күңел, баҫынҡы йөрәктәр уянып терелде, ти. Уйнау ҙа көләү, шаян һүҙ башланды, асылған нурҙы йөҙҙәренән нур таралып, көндөҙ ҡояштың, кисен айҙың яҡтылығы менән ишелештеләр, ти. Йырсы ҡоштар һайрашты, йырсылар ҙа уларға ҡушылып йырланы, ти, үҙ йырҙарын, Урал моңдарын.

Иртәгә иртә менән йомшаҡ ҡына таң еленән һөйөлә-һөйөлә, ҡыуанслы ҡоштар тауышын тыңдай-тыңдай, үҙҙәре лә ҡушылышып йырҙашып йәштәр килә башланы. Арттараҡ, һуңламайым, ҡыҙығын күрә алмам, тип, ҡарт әбейҙәр, бабайҙар ашыҡты. Улар, быға булған тонсыҡҡыс* бөркөү һауанан ҡотолоп, таҙа һауа һулай-һулай, еңел йәштәрсә төркөмләшеп, күңелдә һөйләшеп атлап килде, берсе лә:

— Арытты, арыным, — тимәне.

— Көсһөҙлөктән, ҡара һыуға төшөп, тирләнем, — тип өндәшмәне.

— Бәхетле көн башланды, бәхетле икән, — тинеләр.

— Мәңгегә шулай булһын, — тинеләр. Ана, бәхет башланды. Минәй батырҙы күрергә халыҡ, ҡара ҡырсын шикелде, йыйылды, ти. Киң итеп әйләндерелгән ҡорҙоң уртаһына көрәгә-көрәгә ҡымыҙ ҡуйылды. Табаҡ-табаҡ һан-һаны менән мөсәләр* килтерҙеләр, ти. Әҙерләнеп бөтөлгәс тә, күренекле ололарҙан:

— Йә, туғандар, бөгөн ырыуҙарыбыҙҙың һынсы-йондоҙсоһо Өлкәр ҡарттың берҙән-бер генә ҡәҙерлеһен кейәүгә бүләк итеп бирәбеҙ. Буштан-бушҡа түгел, төньяҡтағы ырыуыбыҙҙан баш булып килеп, һуғышта күрһәткән батырҙыҡтары өсөн, дошманды еңеүҙә иҫәпһеҙ, һанһыҙ хеҙмәттәре өсөн. Тағын да һеҙҙең күҙегеҙ алдында эшләнгән эштәрҙе өҫтәп күрһәтәбеҙ. Бәлки, уның менән йәштәш, тиң йәштәр көрәшеп уны еңһә, ул ҡалып та ҡуйыр, — тигәс, һыу һөлөгө шикелле таҙа ҡыҙға ҡарап, күҙҙәре төшөп, егеттәр ырғышып торҙолар. Күптәре көрәшеп ҡаранылар. Көрәшеп ҡараһалар ҙа, Таңдысаны таштай ҙа, йыға ла алманылар, ти. Шунан ҡыҙ:

— Юҡ, мин Минәй менән көрәшә алмайым, һынамай ҙа ҡарап, күреп белдем. Илем йортом, халҡым бүләк иткәс, ризамын, — тип, Минәйгә ҡулын бирҙе, ти.

Шауҙашып сәпәкәй һуғылды, ти. Урал эсе күпкә яңғырап торҙо, ти.

Минәй уртаһына май ҡойолған бер табаҡ бутҡа һорап алды, ти. Ҡорҙоң уртаһына ултырҙы ла, ти:

— Кем дә кем дөрөҫләктө яҡламай һауаға сорғоған уғы бутҡа уртаһына төшә, кем дә кем алдамай, башынан үтеп, ергә инә, — тигәс, Һалпай батыр:

— Мин ялғанламаным бит ул, дөрөҫ талаптаны, Таңдыса миңә ҡалыр. Мин уҡ сорғаймын, — тип килеп баҫты, ти.

— Мә, сорға, — тип, Минәй уғы менән янын бирҙе, ти.

Һалпан батыр уҡтың киҙеһен ян керешенә һалып, үргә күтәрелеп ҡарап самалап, бутҡа уртаһына төшөрәйем тип, атыуы булды, ти — бер аҙҙан уғы кире төшөп, уның башынан үтеп, ергә ҡаҙалды, ти. Халыҡ уның ауа-түнә йығылыуын күреп аптыранды, ти.

— Ҡарағыҙ, күрегеҙ, мына, мин атайым әле, — тип Минәй керешен тартып, уғын сорғоно, ти, һауаға. Уҡ, бутҡа уртаһына төшөп, сәнселеп торҙо, ти. Минәй батыр уҡты ҡулына алып:

— Мин, ялғансы атһа, уты бутҡаның уртаһына төшә, тип ялғансыны алдамаһам, ул, үлеүенән ҡурҡып, урынынан да тормаҫ ине. Күрҙегеҙме, кем ялғансы? — тигәс, Һалпан батырҙың ялғанлап Минәй өҫтөнән һөйләгәнен һөйләп аңлатты, ти. Аранан берәү һамағын да отоп алған икән, ти. Ул баштан-аяҡ әйтемдәне, ти. Йыйын башлығы:

— Беҙҙең Таңдысабыҙ йырҙарға уйҙай, — тине, ти. Бер тауыштан:

— Йырҙаһын да йырҙаһын, — тип, ут ҡабынған һымаҡ дөр иткән тауыш көсәйҙе, ти. Ҡул сабып һоранылар, ти, уның йырлауын. Йәштәр Таңдысаның «Кәкүк» йырын, уның ҡыланғанын ҡыланып күрһәтеүен һоранылар, ти. Таңдыса, ҡаршылашмай, күтәренке рух менән йырҙай ҙа, бейеп, ҡыланып уйнай ҙа башланы, ти. Атаһы Ирандан алып килгән оҙон еңле, оҙон салғыйлы күгелйем еләнен кейеп алып, шундай оҫталыҡ менән һәм килештереп тә бейене лә

йырҙаны ла, ти. Электән күргәндәр ул булып бейергә талпындылар, ти. Тәүге күргәндәр таң ҡалып, ана осам, мына йырҙайым, тип тулҡынып*, йөрәктәре һикереп, күкрәк эстәренән атылып сыҡҡандай булып һиҙҙеләр, ти, үҙҙәрен. Күренгеләренә ҡалдырмай эшләгәс, ҡанаттарын йәйеп, елпеп ағас араһына барып инеп, кәкүккә ҡушылып саҡырышып, туҡтаны, ти, ҡыҙ.

Ҡыҙҙы кейәүгә йәшереп, таң атҡанса эҙләнеп, саҡ яҡтырып килгәндә генә табып, ҡуштылар, ти. Былайтыу дөйөм йола булып һанала ине.

Өс көн үткәс тә Минәй батыр Таңдысаға:

— Беҙгә, кейәүсегә, ҡайтыр ваҡыт етеп килә булһа кәрәк, — тип һүҙ систе, ти, Таңдыса ата-әсәһенә:

— Кейәүегеҙ, ҡайтырға көн яҡыная, тей бит әле, — тигәс тә, Таңдысаның атаһы-әсәһе:

— Ғәҙәт һаҡтаһын: ете көн тулмайынса, уны-мыны һөйҙәмәй торһон әле, көнө етәр-етмәҫтән. Халыҡ, бигерәк тә тиңдәштәрең ишетә ҡалһа, ҡуҙғырышып, маҙаны китәрерҙәр. Оҙатыуында халыҡ күп булыр ул, — тиештеләр, ти. Таңдыса ла, өндәшмәй-тыңдашмай, шунда ла йөрәкһенеп, эсенән генә кисереп, иптәштәре-тиңдәштәре менән йөрөгән-уйнаған, еләк-емешкә йөрөгән ерҙәрен йөрөп ҡарап күрә, уйындарҙа уйнап, йырҙарын йырҙап йөрөштөрә башланы, ти.

Етенсе көнгә сыҡҡанда, улар йыл да һунарға сыға торған, «Бүҙәнә», «Ҡоҙа-ҡоҙасалар» уйыны уйнаған ерҙәргә барып, таң алдына тиклем уйнап, арып, йоҡолары килеп, элмәүһеп иһәнәшеп, йоҡтайыҡ ҡына, тип ултырғанда, әләҫ-йөләҫ бер нәмә күҙгә күренер-күренмәҫ булып ҡалды, ти. Абайҙап ҡараһалар — Таңдыса юҡ ине, ти. Ул арала таң атып та китте, ти. Йәштәр, ғауғалашып, ҡурҡышып, зыу килеп, илаша башланылар, ти.

— Ҡайтҡас та, ни тейергә белмәй, ни тип һөйләргә, ни тиеп яуап бирербеҙ, — тейештеләр, ти. Аранан олораҡ берәү:

— Әйҙәгеҙ, ҡайтайыҡ, сыр-сырлашыуҙан файҙа юҡ, — тигәс тә, барыһы ла аттарына һикерешеп менделәр ҙә кем уҙарҙан сaң томан, ат көсөнә һалып, сабышып ҡайтып еттеләр, ти. Таңдысаның яҡын иптәше Себәрсен генә атаһына эштең әрсәһен һөйләп биргәс тә, ул тиҙ арала ырыу ололары булған ил башы оҙаман, ҡорҙаштарҙы йыйып, ваҡиғаны һөйҙәне, ти. Ололар тыңдап ултырҙылар ҙа:

— Ҡыҙға күҙе төшмәгән, ҡыҙыҡмаған бер кем дә юҡ ине. Берберәүһе, үс итеп, алып ҡасып хурламаһа, уны деүҙәрҙең* береһе урлаған булырға тейеш, — тинеләр, ти. Ҡояш ҡалҡыр-ҡалҡмаҫтан, кисә был хәлде ишетеп йөрәктәре ҡуҙғаланып йоҡларға ятҡан халыҡтар, иртә менән йыйылдылар. Өрәй ҡурҡаҡтар кисәге көндә үк ҡайттылар, ти. Тик ырыу башлығы, оҙамандар, ҡорҙаштар, ара-аймаҡ баштыҡтары, донъя күргәнерәк улай-былай кешеләр, ҡайһы бер ауан* батырҙар ғына ҡалғайны. Абруйлы оҙамандар, ҡорҙаштар һөйләшеп аңдашты ла, ти:

— Ырыу эсендәге аяҡҡа баҫа алған берәүҙең береһе лә ҡалмайынса, Урал эсен, тотош яҡын-тирәне эҙҙәргә, — тип бойорҙо, ти. Ырыу башы: — Һәр берегеҙ һунарсы этегеҙҙе, типкерҙәрегеҙҙе* алығыҙ. Үлтерелһә, эттәр үлек еһенән табыр. Ә типкерҙәрҙең күҙҙәре үткер,

бигерәк тә таҙғара бөркөтө ҡарағоштарҙы ауалатып эҙҙәгеҙ. Уларҙың күҙҙәре үрҙән ете тау, ете диңгеҙ, ун ике даръя ашаһынан күрә. — Минәйҙе саҡырып алып: — Һеҙ Шүлгән батшаһы маҡамы тирәләтеп ҡарағыҙ. Бер-бер шипкерт*, еҫ-меҫ, тауыш-тыны, берәй билге ғәләмәт бәлән* табылмаҫ микән, — тине, ти.

Ырыуҙың эте лә, ҡорто ла ҡалмай, өс көн, өс төн эҙҙәнеләр, ти. Ләкин Таңдысаны түгел, уның еҫен-ҡоҫон да, еҫ-меҫен дә таба алманылар, ти.

Таңдысаның ата-әсәһе, ул яңғыҙ балалары булғанға, йөрәктәрен түшәп, йәш йылғаһы түкте, ти. Тик уларҙы: «Табырҙар, ҡайҙа булыр тейһең», — тип кенә, инеп-сығып, өҙҙөкһөҙ йыуатып торҙолар, ти. Минәй батыр бер үҙе генә, тау аҫтына дейеүҙәр инеп-сығып йөрөй торған тишекте аңдыны, ти. Өс көн, өс төн буйына бер ен дә сыҡмағас, ул, быларҙа бер шом боҙоҡлоҡ бар икән, тип уйҙаны ла йоҡламайитмәй күҙәтеп торҙо ла торҙо, ти. Дүртенсе төндөң таңында абайҙап ҡына тау тишегенән сығып килгән бер йәш ғифритте тотоп алып, алышта еңеп, аяҡ-ҡулын бәйҙәне лә, иптәштәрен саҡырҙы, ти. Иптәштәре бер һүҙҙән: «Ул тиҙ генә әйтә һалмаҫ, ололарға алып ҡайтайыҡ, улар ней эштәргә әйтерҙәр», — тигәстәре, ат артынан уны алып ҡайттылар, ти. Дүртенсе көндә, ишетеп ҡалып, енде күрәбеҙ, тип, кешеләр килеп тулды, ти. Бер тәпәш таҙа ир унан һорау ала башланы, ти. Ул тауға Ен тауы тинеләр, ти. Башта өндәшмәй-тыңдашмай ҙа ине, ти, тора-бара арҡаһын ҡамсы менән һыҙыра, табанын телеп, туралған ҡыл тултырып, аңлатҡас ҡына, исемен, үҙенең Шүлгән батшаһының уртансы улы икәнен әйтте, ти. Башын быраулағас ҡына[5]:

— Ҡыҙығыҙҙы мин урҙаным, — тине, ти.

Ил ағалары, үҙ-ара кәңәшләшкәндән һуң, үҙ ихтыярҙарына ҡарап, батырҙарҙан кемде булһа ла ебәрмәксе булдылар, ти. Ошо үтәлгене* аҡтарыр өсөн, беренсе булып Минәй батыр:

— Мин барам, уны тар-мар итмәй, ҡоротмай тороп, бында ҡайтмайым. Тәнем дә, йәнем дә Уралыма, халҡыма булһын, — тине, ти. Халыҡ:

— Туҡта әле, аңын-тоңон һорашайыҡ, асыҡлайыҡ. Бынан унда улар маҡамында ни барын, ни юғын белешәйек. Топ-томал, һуйыл күтәреп, яуға барыуҙың файҙаһы юҡ, — тиештеләр.

— Атаңдың маҡамына, мөлкәтенә теймәйбеҙ, уныһы һеҙ вариҫтарға ҡалыр, — тигәс тә, Шүлгәндең улы:

— Унда ингәс тә, күптән ыҙа сигеп торған, үҙ тоҡомоғоҙҙан бер батыр бар, шул һөйҙәп бирер, — тигәс тә, унан һорап та тормай, зинданға яптылар, ти.

Ил уҙамандары Минәйҙе ебәрергә риза булып, уны ғына алып ҡалып, уға ништәргә өйрәттеләр, әйттеләр:

— Уҡ-һаҙағыңды, яныңды, ҡылысыңды, суҡмарыңды ҡараштыр. Ҡылысыңды Урал ташына ҡайра, Иҙел беләүенә белә*. Тутыҡмаҫҡа Урал майын һөрт. Бер тырыз май ҙа ал, кәрәге булыр. Үҙең сос, уяу, һиҙгер бул! Аңраланып, алдырып бәлән*, һәләк булып ҡуйма, — тинеләр, ти. Аранан берәү:

— Урал тупрағына йөҙөңдө ҡуй, халыҡҡа, Уралға ант, вәғәҙә бир! — тине, ти.

— Лəкин дə йəлдəнмə*, аяуһыҙ ҡылан, һүҙен тыңдама, теленə һис тə ышанма, — тинелəр, ти. Оло оҙамандың олоһо:

— Мына ырыуҙағы булат ҡылыс. Ул Урал тауының ҡайрағына ҡайралып үткерлəнеп, күптəн йылҡы майына майҙанып ҡуйылған ине. Был ҡылыс үҙенең уҫал, боҙоҡ дошманын кəттə. Ул да булһа яуыз Шүлгəн ине, йəлдəмəй, бар кəсəң менəн һелтə. Бер һелтəүҙə үк өҙəр, — тине, ти.

Ырыу баштығынан ҡалған һəм ырыуҙарҙың ҡарт батырҙарынан һаналған Ҡоҙашман тигəн батыр йəш сағында Шүлгəн күленə инеп, ундағы хəлдəрҙе һəм күл батшаһын да үҙ күҙе менəн күреп сыҡҡаны тураһында һөйҙəне. Минəй батырға нисегерəк яһанып барырға, барғас та, ҡайһы урындарҙа булып, ништəргə кəрəкте аңдатты:

— Ҡылысыңды Урал ҡайрағына ҡайрап ал, үткер йөҙөн Иҙел белəүенə белə*, унда инеү менəн, һөрт тə ҡыныңа тығып ал, башҡа урындарҙа ҡылысыңды һерҙəндəтмə*, һаҡла, ул Шүлгəн батша менəн һуғышҡанда кəрəгер, — тине. — Алған суҡмарың менəн тəүге башта тегеһе-быныһы менəн эш итерһең, һаҡ, сос, уяу бул, алданма, əүрəмə! — тине, ти.

Минəй китергə яҡшылап яһанды, ти. Минəй батырҙы иртə юлға оҙаттылар, ти. Ул, халыҡ менəн хушлашып, Урал тауы Ирəмəл тупрағын үбеп, Шүлгəнде үлтереп, маҡамын тар-мар итеп, малдарын, талап алған мөлкəтен алып сығарырға, əсир һəм тотҡондарҙы ҡотолдорорға ант итте, ти. Атына атланды ла, уҡ-һаҙағын алып, күккə сорғаны, ти. Батырҙар: «Беҙ уғыбыҙҙы сорғап-сорғап ҡараныҡ — гел үҙ алдыбыҙға төшə торғайны. Был нишлəп улай булды əле?» — тиештелəр, ти. Өлкəр ҡарт былай тине, ти:

— Кейəүемдең унда барасағына билге. Уҡ-һаҙағы юл күрһəтə, юл башлай, — тине, ти.

Минəй атына өс-дүрт ҡамсы биреүе булды, ти — аты Шүлгəн күлгə ҡарай сапты, ти.

Өс көн, өс төн тигəндə, яҡындай башлағанымдыр инде, тип, бер көн, бер төн ял алып булашты ла, ти, бишенсе төндөң иртəнге ҡояшы Урал тауы өҫтөнə түңəрəклəнеп ултырғанда, Минəй батыр Шүлгəн күл өйгəһенең* ауыҙына барып инде етəм тигəндə генə, тау-таштарҙың тетрəп, ағастарҙың һелкенеп киткəнен күреп, атын ынтылып Ҡашҡа тауға менде лə, был нимə булды һуң əле тип, йəн-яғын ҡаранып тора ине, ти, алдындағы тауҙың ыңғырашыуын, уртанан йəмһеҙ быуылып һығылып ҡалпаҡланыуын күреп, абайланы, ти. Аңғанса булмай, əсе һыҙғырған тауыш, уның артынса һыҙғыраҡ ел сығып, ҡойондар уйнап, күктəге болоттар ҙа ҡайнатыша башлаған ине, ти. Тағын да əсе һыҙғырыу ишетелде, ти. «Был миңə таныш һыҙғыраҡ таһа», — тип шул яҡҡа табан бер аҙ барыуы булды, ти, ул һарғайған, ҡайһы бер төштəре ағара төшкəн, тауҙы һығып ҡалпаҡландырған юха йыланды күрҙе, ти. Юха йылан Минəйҙе күреүе булды — ете ҡат əйлəндереп уралған ураауын тағатты ла, ти, һонолоп китеп ете башын тау түшенə түшəлтеп һалындырып, ауыҙының йəшкелт һары һыуын ағыҙа-ағыҙа, ал тешен ҡыҫып, теш араларынан һыуын бырғыта башланы, ти. Минəй батыр, аңғара һалып, Урал майы менəн тəненең асыҡ өлөштəрен майҙаны ла, алға атланы, ти. Юха телдəрен

ҡыбырҙатып уйната башлаған ине, ти, ҡылысы менән үҙә-үҙә сабып, уларҙы йән-яҡҡа әллә ҡайҙа ташлап бөттө лә, башына яҡынлап, уның ете башын да, бер ней тип тә белмәй, үҙә сабып ырғытты ла кәүҙәһен тураҡлап ташланы, ти. Минәйгә «Һаҡ бул» тигән халыҡ һүҙе иҫенә төштө лә, ҡоралының торошон ҡараһа, ҡылысы майырылған, юха ыуына тутланған ине, ти. Ул уны Урал ташына ҡабат ҡайрап үткерләп майланы ла, бер йылғаға төшөп, йыуынып, тамағын да туйҙырып алып, алдына ҡарап китте, ти.

Шүлгәнкүл тауының ҡояш байышы итәгенә инде еттем тигәндә генә, тауҙан тәгәрәп төшөп килгән күбәләй ташты күреп ҡалыуы булды — атынан төшә килеп, уны күтәреп алып, түбәһенә ҡарап ташлауы булды, ти. Ошо тәңгәлдән Шүлгән мәғәрәһенең түбәһе емерелеп төшөп уның маҡамына* шом һалды, ти. Ә был тәгәрәгән таш Шүлгән күл батшаһының һағауылсы ташы ине, ти. Ул ошо тауҙы тирәләгән, йә яҡынына килгән шикле кешеләрҙе, тәгәрәп төшөп, тапап үлтереп торған икән, ти. Был юлайы үҙен тау өҫтөнә атҡас та ул ҡабаттан күренмәне, ти.

Шүлгән күлдең тауы өҫтөнә менде лә, суҡмарын ҡулына алып, тауҙы шул төшөнән уя һуғам тип, дөп-дөп һуға башлаған ине, ти. Тау ҡыуышы түбәһе емерелә башлауын күреп, Шүлгән батша ҡол биреләренә:

— Бар, кем ул тауҙы тишергә маташҡан? Барып, күреп, белеп килегеҙ, — тип сығарып ебәрә. Унлаған бире Минәйгә килеп:

— Ағай, ни эшең ул? Нигә тауҙы уяң? — тинеләр, ти.

— Шүлгән батшаһына етәр инде ҡан эсеү, талау-тартыу, ҡолдар менән көн күреү, ҡыҙ-ҡатындар менән шаярыу, — тигәйне, ти, быларҙың күберәге:

— Эйе, —тинеләр, ти, бер өсәүһе шүлгәнсе булып сыҡты. Минәй быларҙың аяҡ-ҡулын бәйләп селек менән ярырға тотонғас та, былар:

— Әйтәбеҙ, барын да һөйҙәйбеҙ, — тигәндәр ҙә, ти, ҡалдырмай һөйҙәнеләр ҙә Минәйҙе күлгә инеп сығыр тишегенә килеп юл өйрәттеләр, ти.

Шулай булһа ла Минәй батыр тауҙы тирәләп абайҙап сыҡты, ти. Тирәләп сыҡты ла эскә инәр тишегенең ауыҙына килеп туҡтаны, ти. Таң атҡанса ни барын, ни юғын күҙәтте лә бер төрҙө лә шипкерт-һәпкерт* булмағас, ҡояш менән бергә күтәрелеп, атын ебәрҙе лә:

— Урал батыр, ҡеүәт бир!
Бер биргәндә, күберәк бир,
Дошманым юҡ ҡылайым —
Таянырға терәк бир!
Мин еңелмәҫ һәләт бир,
Арыу белмәҫ беләк бир,
Дошманымды юҡ ҡылыу —
Минең изге теләктер! —

тип, теләк теләп, сайырлы сыра тоҡандырып, эскә ынтылды, ти, йәнъяғын ҡарап алды ла алға атланы, ти. Эскә инеп, күлдең әйләнәһен тирәләп бара биргәс тә, саҡ-саҡ ҡына йәне сыҡмаған, тамаҡ төбө

менән генә саҡ һөйләшкән, аяғы-ҡулы бығаулы әҙәм затын күрҙе, ти, күрҙе лә:

— Һин кем булаһың — енме, әҙәми затһыңмы? — тине, ти. Шулай тигәс тә:

— Эйе, кеше затынан мин. Һәүбән батырмын. Шүлгән батшаһы менән булған бер һуғышта әсир төштөм. Башҡа әсирҙәр менән ҡаты ҡарауыл аҫтында ас-яланғас көйө уның илен төҙәттек, һарай һалдыҡ. Башҡалар ҡатылыҡҡа түтә алмай үлеп бөттөләр. Мин сыҙамлығым, көсөм арҡаһында һикһән ике йәшемә тиклем ыҙаландым.

— Бының маҡамын*, аҫтыртындарын, йәшерендәрен беләһеңме? Ошо ике юл ҡайҙарға бара? Буйында ҡай урындарында нимәләр бар? — тип һорашты, ти, Минәй батыр.

— Төп өңөн киңәйтергә ошо юлдарҙан әйҙәп алып йөрөнөләр. Бара биргәс тә — ас айыу, унан үткәс тә — ас юлбарыҫ, унан инде ас арыҫлан тора. Былардан үтеүе ҡыйын, — тине, ти, Һәүбән. — Унан ары һул яҡта әсир ирҙәр, унда әсир хатындар бикләнгән таш һарай, ҡапҡалары сөгөндән, һаҡсылары төкөрөктәрен генә һурып (?) эштәткәндәр. Унан ары күлдең төбөндә Шүлгән батшаһының беҙ йылтыр таштан һалған һарайы булыр. Ун ике ҡырлы, ун ике ишекле. Хасияты* шунда: һәр айҙа береһендә була ла йыл теүәлдәнгән бер көндә генә урталағы залға сыға. Көн урталарында ла баҡсаларында йөрөй. Көн дә бер ҡыҙ менән ҡушыла, — тине, ти. Минәй батыр тиҙ генә аңыша һалып:

— Һәүбән ағай, йәнең барҙа үҙ илеңә аяғыңды баҫтырайым, һауаһын һула, һыуын эс, эштә, — тип, уны таныш өңгәйҙән тышҡа сығарҙы ла, ти, үҙе урманға инеп китте, ун ике илек, ун ике ҡуян атып алып, Һәүбәнгә ашарына биреп, хушлашып кире өң эсенә инеп юҡ булды, ти.

Минәй батыр үҙе лә ашанып туйынғанға уйһыҙ, ниһеҙ атлап килә торғас, «ларҫ!» итеп, ас айыу ташланды, ти. Минәй батыр уға бер илеген ырғытты, ти. Унан, килә биргәс, юлбарыҫ ташланды, арыҫлан да шулай итте, ти. Уларҙың да алдарына берәр илек һалды, ти. Айыу, юлбарыҫ, арыҫлан ҡойроҡтарын болғап, көлөмһөрәп, яланып ашап ятып ҡалдылар, ти. Килә биргәс тә бер юлайы ун ике һаҡсы ташланды, ти, уларына берәр ҡуян тотторҙо, ти. Ун ике ҡарауылсы: «Былдайын ҡуян йылына бер тейһә тейә, теймәһә юҡ ине, һин яҡшы хужа икәнһең, ни теләгең, уң булһын!*» — тип, шап та шоп ашанып ултырып ҡалдылар, ти.

Минәй, былардан имен генә үткәс тә, Шүлгән батшаның тәүгә ҡолдар, әсирҙәр тайҙырғандар* йәшәгән урынға килеп сыҡҡанын күреп, ҡаранып торһа, аңғартмаҫтан уға ҡаршы берәү:

— Биленән атламаң! — тип, ҡысҡырып ебәрҙе, ти. Минәй:

— Ниңә? Һинән кем һорай?! — тигәс тә:

— Шүлгән батшанан иҙем* юҡ! Ҡаты тыйыла, — тине лә үҙ йынысына оҡшатып: — Ҡурҡмайынса, бында ингән һин, ҡайҙан, кем булаһың? — тине, ти. Минәй:

— Мин Урал батыр заты. Башҡорт тоҡомонан. Урал тауының төп эйәләренең балаһы — Минәй батыр, — тигәс:

— Мин дә шулай инем дә, йәш йөрәк түҙмәй, ҡурҡмай, батырланып илемде, халҡымды ошо ҡанһыҙ яуыздан ҡотҡарайым, байлығын да халҡыма өләшәйем тип, килеп инеп, ҡулға алындым. Бына ҡырҡ бер йыл буйы бығауҙа торған Олпан батыр булам, ары барма — һәләк булырһың, — тине, ти.

— Ярай, һәләк булырмынмы, юҡмы — уныһын алда күрелер, һин бындағы хәлдең яйын-көйөн әйт әле: ҡайҙа нимәләре, кемдәре, ниҙәре бар? — тине, ти, Минәй.

— Ошо беренсе ек ҡыуышында әсирҙәр, ҡолдар, — тине ти. — Улар таш, сөгөн һарайҙарҙа бикле.

— Ярай, булды, әйҙә, юл башла, — тине лә, ти, уны сынйырынан, бығауынан ысҡындырҙы, ти. Ул аяғын саҡ-саҡ шылдырып алдан барҙы, ти.

— Бына бында урланған ҡыҙҙар, ана теге таш һарайҙа ҡатындар, — тине, ти. Минәй батыр шул яҡтағы бәләкәйерәк кенә таш ҡапҡаға килеп етеүе булды — алдында, лауылдап алты юлбарыҫ пәйҙә булды, ти. Быларҙың һәр береһенә ҙур-ҙур киҫәк айыу итен ташланы ла, һарайҙың ҡапҡаларын аяғы менән емерә тибеп, ҡулы менән йән-яҡҡа алып атып, эскә инде, ти. Уның тәүге бүлмәһендә — утыҙ, икенсеһендә — ҡырҡ, өсөнсөһөндә — илле мынамын тигән һылыуҙанһылыуҙар:

— Ана хур итә инде мине, бына хур итә инде! — тип һыҡташып ултыралар ине, ти. Минәй батыр быларҙы ҡапҡанан берәмләп сығарырға тотондо, ти. Бикле ултырған әсирҙәр һөрҙөгөшөп сыға башланы, ти. Тотҡондар, әҙәм затынан булған Минәй батырҙы күреү менән, ҡыуанышып, уға:

— Тотҡан юлың уң булһын,
Биш теләһәң, ун булһын!
Алға килһен теләгең!
Талыҡмаһын беләгең! —

тип алғыш әйттеләр, ти.

Минәй батыр быларҙан ҡатын-ҡыҙҙар биген, һарайын һораны, ти. Аранан бер аҙ әсир кеше алға сығып:

— Әйҙә, батыр, үҙебеҙ баштайбыҙ, — тигәйнеләр, ти, Минәй:

— Белгәсегеҙ, әйҙәгеҙ, — тип, аяғын алып, батырҙарса атланы, ти. Күп тә бармай, бер емерек тау моронон әйләнеү менән, текә ҡаялыҡ күренде, ти.

— Мына ошонда, ана ишеге, — тигәс тә, Минәй батыр ҡарап та торманы, ти, онтай һуғып, ундағы ҡатындарҙы ла сығарҙы, ти. Бындағы ҡатындарҙың күп кенәләре, ирҙәрен күреп, ҡайһы бер ололары уландарын ҡосаҡлап илаштылар, ти. Минәй батыр:

— Урланған ҡыҙҙар ҡайҙа? — тигәс тә, аранан белгән бер-икәү:

— Улар күршелә, беҙҙең һарайҙан ҡабырғалата булырға тейеш, ләкин ишеге йәшерен тиҙәр, — тине, ти.

Күмәкләшеп эҙләп, шул арала таптылар ҙа, ти. Ватып, эскә инһәләр, күп кенә ҡыҙҙар, ата-әсәләрен танып, күрештеләр, ти. Таңдыса быларҙың араһында булмай сыҡты, ти. Ҡыҙҙарҙан һорашҡас та — улар Таңдысаның төҫ-һынын кәүҙәләндереп:

— Бөгөн генә һайлап, уны алып киттеләр. Шүлгән уға ҡушылмаҡ була, — тинеләр, ти. Минәй батыр халыҡҡа ҡарап:

— Барығыҙ, ҡалмай үҙ илегеҙгә, Уралығыҙға, сығығыҙ. Мине көтөгөҙ, байлыҡ, мал алып ҡайтырһығыҙ, — тине, ти. Олпан батырға:

— Бар, быларҙы тау аҫтына алып сыҡ та беҙҙе көтөгөҙ, — тине, ти. Олпан батыр ҡатындарҙы, ҡыҙҙарҙы алып, тау тишегенән тышҡа сығарырға:

— Әйҙәгеҙ! — тигәйне, ти, барыһы ла ҡыуаныстарынан илап ебәрҙеләр, ти. Уларҙың күҙ йәшенән Шүлгән күленең һыуы ашып, тау тишегенән сылтырап ҡына тышҡа сығып, Иҙелгә ҡушылды, ти. «Күмәк илаһа, күл һыуы ла таша» тигән һүҙ аңа шунан ҡалды, ти.

Минәй батыр ваҡытты һуңлатмай, ашығып, күл төбөнә төштө, ти. Шүлгән күленең урталығында өс яғы көмөрөләнгән яр бер генә төшө, текәләнеп ослайып, күл эсенә ингән урманлы ҡаялыҡ ине, ти. Минәй эҙләнә торғас, унан өҫкә күтәрелә торған сөгөн баҫҡыс күреп, унан камил күтәрелеп, ҡая осона сыҡҡас та, аһау һимертелгән арыҫланға тәл булды* ла ҡуйҙы, ти. Был ятты күреү менән йыртҡыс ташланды, ти. Минәй батыр, сосайып, алҡымынан алды ла, матҡып һыға тотоп ҡоролдайын алды ла, ти, хәнйәрен ҡынынан алып күкрәгенә тыҡты, ти. Арыҫлан, ауыҙынан уттар сәсеп, ҡойроғон ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла һуҡҡанда ғына, Минәй аңғармағанда, уның бер ҡолағын һыпыра һуҡты, ти. Шунан Минәй сонай ҡолаҡ булып ҡалды. Егет, Урал майын һөртөп ҡанын тымыҙҙы ла, ти, эҙләнеп алға атланы, ти. Ошо ташморондоң утрауға яһырып-яһыланып тоташҡан урынында ғына күңеле әүрәп, күҙе алданған йәм юҡ булды, ти. Күҙе алдында Таңдыса һыны кәүҙәләнде, ти. Йоҡоһонан уянғандай, күҙен асалаҡ-йомалаҡ ҡарап, Минәй иҫен йыйҙы ла, тентенергә тотондо, ти. Әй эҙләнде, эй эҙләнде, ти. Эҙләнә торғас, сәр-сер тауышҡа ишектең алтын тотҡаһына тейеүе булды — ул асылды ла китте, ти. Асылғанға барып инһә, унда Шүлгән батшаның һанаттары йыйылып, уны кәңәшкә көтәләр ине, ти. Кәңәштәре лә тотҡондарҙың кемдер тарафынан ҡотҡарылыуы, һарайҙарҙың бер кемһеҙ, бушап ҡалыуы тураһында икән, ти. Шул турала һөйләшеп, бер фекергә килергә тейештәр икән, ти. Быларҙың алдына быларға оҡшамаған зат килеп сыҡҡас, былар, ҡоралдары менән Минәйгә ташландылар, ти, Минәй уҡ-һаҙағы менән берәм-берәм атып йыҡты, ти, уларҙы. Иң һуңында уң һанаты Шүлгәндең берәгәй бер батыры Минәйҙең ҡаршыһына баҫты ла:

— Алышмы, атышмы? — тине, ти.

— Минең өсөн икеһе лә бер. Үҙең икеһенең берен һайла, — тине, ти Минәй.

— Әйҙә, алышайыҡ. Ләкин дә аяҡ салыуҙан булмаһын! Күтәреп алып, таҙа ташлайыҡ, — тине, ти, теге зат.

— Була ул, — тине лә Минәй батыр, былар икәү алыша башланы, ти. Былар алышҡанда аяҡ аҫтары аяҡтарын алып баҫҡан һайын һиңкеп күтәрелгән дә тау-тау таштар сайҡалып, ауыш-тәүеш килеп торҙо, һыҙғырыҡ өндәр зыйылдашып, талдар уйнап, тау таштары доңҡор-доңҡор итеп торҙо, өҫкө ҡаттарҙың ҡай бер урындары емерелеп төшкөләп, унда-мында өйөмдәр хасил булды, ти. Иң аҙаҡтан

Минәй батыр, көйөп китеп, тайшана биреп, тегене күтәреп ҡалҡытҡанда, баш түбәһе тау түшәменә тейгәнгә, ике ҡулы менән дә башын баҫты, ти, тегенең. Ул арала Минәй һарайға бер һуғып, тағын-тағын һуҡҡайны — тауһарайҙың бер мөйөшө емерелде лә һарай шул яҡҡа ыға биреп, ауа яҙып ҡуйҙы, ти. Анса булмай*, теге батыр тырпандап аяҡ-ҡулын һуҙып йән дә бирҙе, ти. Минәй батыр, һарай эсенә инеп эҙләнә торғас, бер уртас* бүлмәлә әҙерләнгән тәмле-татлы аҙыҡтарҙы ашап туйҙы ла, уның икенсе бер бүлмәһендә күпмә күрҙе, ти. Ете көн, ете төн йоҡтамағандан, ныҡ йоҡоһо килгән ине, ти. Барып та ятты — йоҡтап та китте, ти. Эй йоҡтаны, эй йоҡтаны, ти.

Был саҡта Шүлгән батша, бындағы хәлде ишетеп, һарайына бикләнгән ине, ти. Дүртенсе көнгә ҡарағанда, Минәй батырҙың баш осонда Таңдыса баҫып торған кеүек булды ла, башын да битен дә һыйпап: «Тор-тор, батырым, тор!» — тип өндәшкән кеүек булды, ти. Минәй бигерәк тә ауырайып, баҫтыға-баҫтыға, йоҡтауын дауам итте, ти. Шул арала бар ҡоралын да артып ебәргән Күксәйе сыңғыратып, өс-дүрт рәт кешнәп ебәрҙе, ти. Минәй: «Аһ, оҙаҡ йоҡтаған икәнмен», — тип ырғып урынынан тороп, теге ашханаға сығып, ҡалған-боҫҡан аштарҙы ашап алды ла һарайҙан сығып, алдына ҡарап атланы, ти. Китә биреп, кире килеп, һарайға ҡарап: «Мына ҡайҙа ул кешеләр көсөнән эшләнгән ғимарәт, мына ҡайҙа булған ашау-эсеү, ғишғәшәрәт*!» — тип бер мөйөшкә тибеп ебәрҙе, ти. Һарай ауа биреп кире урынына ултырҙы, ти. Минәй: «Әһә, был нигеҙенән ҡумшыған икән. Ана-мына ғына ултыра икән», — тип, емерек мөйөшкә терәп, емерә төртөп, этеп, тырызынан Урал ҡара майын алып һибеүе булды — һарай емеректәре дөрҙәп яна баштаны, ти. Ул арала ел сығып та китте, ти. Ут көсәйеп лаулап янып, күҙ менән ҡаш араһында һарайҙан көл генә ҡалды, ти. Минәй: «Бынһының да осона сыҡтым. Инде Шүлгән яуыздың үҙенә нәүбәт етте. Был ҡыуышта йәшәмәгәс, ҡайҙа булһа ла икенсе бер ҡыуышындалыр, эҙҙәйем, табайым. Ҡоротҡас, ҡоротайым бынһын да! Тамсыһын да ҡалдырмайым!» — тине, ти. Ҡылысын ҡынынан алды ла бер яҡҡа ҡарап — бер, икенсе яҡҡа ҡарап — тағы, өсөнсө яҡҡа ҡарап — өсөнсөгә һелтәнгәйне, ти, ҡылыс йәшен һыҙыҡтары яһап һыҙылып китте, ти. «Булды, ошо яҡта икән», — тип, аяғын алып аттағайны, ти, ике аяғы ла тышалған да, китә алмай тик тороп ҡалды, ти. Әйләнеп артын ҡараһа, һөйәгән суҡмарын онотҡан икән, уны күреп, яурынына алып һалғайны, ти, ике аяғы ла ысҡынған кеүек һиҙеп бер аяғын күтәргән ине, ти — тышау ысҡынып та китте, ти. Аҙымдарын ике-өс ҡолас аралығынан киң алып атлап та китте, ти. Өҫтөндәге тауҙай йөктән ярты таҡәбеле* еңеләйгән һымаҡ тойҙо, үҙенә көс инеп өҫтәлеп дыуамалдығы* ла артты, ти. Минәй ҡылысын һелтәнгәндә юлаҡтанған ут һыҙығынан осо төкәлгән урынға килеп, ҡулы менән һәрмәп ҡараны, ти. Тау тишеге эстәнерәк шыналап, таштар менән тығылғанын төшөндө лә, ти, суҡмары менән туҙҙыра-туҙҙыра һуғып, тишек яһап, күкрәге менән шыуышып, эсен һөйрәп, шылып, көскә эскә табан инә барҙы, тау тишеге киңәйә, иркенәйә барҙы, ти. Был тишекте үнсе-тәнсә* сығып, ухылдап, бер далай* тын алды ла, урынынан тороп алға табан атланы, ти. Күп тә үтмәй алтын-көмөштән, алмас-яҡуттан эшләнгән оло

бер һарай күренде, тирә-яҡтарында боҙ баҡсалары, ҡар яһалышындағы биҙәктәр, нағыш менән матурлап йәмләнгән һарай тора ине. Уның тирә-яғы ун ике ҡат ишегендә ун ике ҡораллы һаҡсыларҙан ине, ти. Барыһы ла быны күреү менән, теге булып үткән хәлдәрҙе ишетеп, еңелдек булыр, Шүлгән үҙе теләһә ништәһен, унан да рәхәтлек күрмәнек, тере ҡалһаҡ булды, тип Минәйгә ҡаршылыҡ күрһәтмәнеләр, ти. Аш-һыуҙары менән ҡаршы алып, Минәйҙе ашатып, һыйҙап оҙаттылар, ти.

Минәй, Шүлгәндең һәр даим йәшәгән даръяһына яҡындау менән, ул Урал батырҙы иҫенә алды, ҡылысын ҡынынан алып:

Урал батыр, көсөң бир,
Бер һораһам, өсөн бир;
Ҡылысыма түҙем бир,
Майырылмаҫ йөҙөн бир;
Беләгемә ҡеүәт бир,
Аяғыма терәк бир;
Ҡалтырамаһын теҙем,
Таштай булайым түҙем;
Сурт һынмаһын суҡмарым,
Белһен ниҙе туҡмарын;
Ҡулға алһам хәнйәрем,
Белһен ҡайҙа керәрен;
Яҙлыҡмаһын һаҙағым,
Күрһәтмәһен ҡазаһын,
Өҙөлмәһен керешем —
Б...ҡа сығар бар эшем;
Һынып ҡуймаһын яным,
Бушҡа аҡмаһын ҡаным!
Урал батыр, ҡурсала,
Эштәр китһә бер сама! —

тип, уңды-һулды майын яғалатып ҡынына кире тыҡты, ти. Урал майына ҡылысы ҡында бешегеп сыныҡты, ти.

Шүлгән йортоноң түгәрәген* әйләнеп, ҡарап бер урап сыҡты, ике, өс сыҡты ти, ләкин дә эсенә инер бер урын да таба алманы, түп-түңәрәк стенаның бер урынында ла, инә торған ишек икән, тип айырырҙыҡ түгел, бер урында ла тишек тә, һыҙыҡ та, ярыҡ, һыҙат та, йөй ҙә юҡ ине, ти. Ахырыһы кире килеп һаҡсыларынан һораны, ти, һаҡсылары: «Хәҙер серҙе йәшереп файҙа булмаҫ. Ишеген тыштан эҙләп файҙа юҡ. Түбәһенән төш тә эстә эҙлә. Ишектәре эстән, тотҡалары ла бер генә яҡтан. Шуға ла уның эсенә бер кем дә инә алмай. Күп кенә үҙ батырҙары, баш күтәреп, йорттоң тышынан орғостап кире боролоп ҡайттылар», — тинеләр, ти. Минәй, былар әйткәнсә, ҡәмәр билғауына тегеләрҙең бил ҡайыштарын ялғаштырып, башҡа арҡандар ҙа өҫтәп бер осон нығытты ла, өҫкө япҡыстан өсөнсө әйләнә түңәрәккә төшөп ишектәрҙе асып, иң эске түңәрәккә ингәндә, Шүлгән батшаһы бешерелгән кеше баштарын кимереп ултыра ине, ти. Минәй инеү менән, Шүлгән:

— Мә, аша! Олаталарыңдың, ата-әсәләреңдең баштарын! Шулар өсөн килдеңме? — тип, уға кимйелгән баш һөйәктәрен тәгәрәтә башланы, ти. Минәй, һәр бер башты ҡулына алып, үҙҙе-үҙен бер урынға урынлаштыра барҙы, ти. Ашалғаны бөтәһе ҡырҡ биш баш ине, ти. Минәйҙең асыуы артты, беләгенә көс, ғәйрәт өҫтәлде, ти. Шүлгән урынынан тороп: «Алышмы, һуғышмы, әллә үлтерешергә килдеңме? Ярай, әйҙә, минең көрәш майҙаныма атла», — тине лә, ти, артындағы ишектән сығып та китте, ти. Минәй батыр уның артынса сығып, уны күрә-күрә эйәрҙе, ти. Күп тә барманы, әллә ҡайҙан түшәлгән түшәкташтҡа, түшәк-таш уртаһындағы кәбәндәй таш эргәһенә килеп туҡтаны, ти. Уны күтәреп, икенсе урынға ҡуйҙы ла: «Мына ошоноң урынында алышырбыҙ ҙа һуғышырбыҙ», — тине, ти.

Урталыҡ алыш майҙанына еткәс тә, Минәй батыр халыҡтың «сос бул» тигән һүҙен иҫтәне, ти. Минәй батыр үҙенең алдында баһып, бужырайып, эсе кәперәйеп торған ғифрәтте күрҙе лә, ти. Үҙенең киң яурынын, ныҡ билен бүлҫерҙе, беләген һелкештереп алды, ти:

Тейер теймәҫкә лә үңәсең һоноп,
Беҙҙең көс байлыҡҡа ҡаныҡтың;
Иркен илдә беҙгә көн күрһәтмәй,
Һәр саҡ тапап тартып байыҡтың.
Ҡара ҡарғамы ни, ерҙе ҡаплай
Ҡомһоҙланып йыйған малдарың.
Һүҙ һөйләгән булаң, тел сығарып,
Ҡан илатып әҙәм балдарын*.
Эсең күбеп, битең бужырайлығы
Беҙҙең ҡандан, көстән алынған.
Тотонғаның, торған ерҙең, тешең
Шуға ла шау көмөш, алтындан, —

тине лә, ти, халҡының, өйрәтеп, «абай бул», тип әйтеүҙәре йәнә иҫенә төшөп, иғтибарлап абайҙаһа, кәбән-таштың урыны тәрән соҡор булып күренде, ти. Минәй:

— Артыңдан эйәреп күп килдем. Торған урынымдан ҡуҙғаласағым юҡ! Кил яҡын, самалашайыҡ, — тине, ти. Асыуынан Шүлгән батшаһының йөҙө бер ҡыҙарып, бер буҙарып китте, ти. Ике ҡабағын да йөк тейәтеп, күҙҙәрен алартып, һөмһөҙләнеп Минәй батырға ҡарап-ҡарап алды ла, ти:

— Йә, шөрҙәйһеңме, ә? Ҡурҡаһыңмы? Хәҙер күрмәгәнеңде күҙеңә күрһәтәм! Көтә бир, — тине лә ти, алдындағы бер япманы асып, гөрҙөләрен* һалған урынынан күтәреп өҫкә ҡуйҙы ла, — үләрең бармы? Әллә ҡуярың бармы?! — тип әйтеп бөтөрөүгә, Минәй батыр ҙа үҙенең суҡмарының һабын һул ҡулына алып тотто ла:

— Мин һуғышырға әҙер, — тине ти. Шул арала суҡмарын күтәрә һалып алды ла, теге гөрҙөһөн алам тип иңкәйгәйне, елкә төпкә берҙе һалдырып та ебәреүе булды, ти. Шүлгән батшаһының өс-дүрт алтын теше яңаҡ һөйәгенән атылып та китте. Уның ауыҙынан да, танауынан да боҙрап ҡан да аға башлаған ине, ти.

*Минәй:*

Кеше ашап, ҡандыңмы?
Елкә төпкә алдыңмы?
Һана ҡылған эшеңде —
Хәҙер ҡырам тешеңде! —

тине, ти. Минәй һамаҡлауын бөтөргән аралыҡта, теге хәлен йыйып алып, гөрҙөһөн* күтәрҙе, ти. Минәй уның һуғыуына ҡаршы суҡмарын тотҡан ине, ти, гөрҙөнөң һәлмәктегенән ике-өс аҙым самаһы алыҫлыҡҡа артына барып төштө, ти. Минәй батыр сапсан ғына* суҡмарын барып алып: «Тот гөрҙөңдө!» — тип әйтте лә, ти, Шүлгән гөрҙөһөн ҡалҡытып алыр алмаҫтан уҡ, етеҙ генә тегенең уң яурынына бик ныҡ ултыртҡан ине, ти, тегенең гөрҙөһө ҡулынан төшөп тә китте, ти. Шүлгән батша, ҡынынан булат ҡылысын алып, Минәйгә һелтәп ебәргән ине, ти, ҡылысының йөҙөн майырылдырҙы, ти. Шул арала Минәй батыр ҡынынан бешегеп сыныҡҡан ҡылысын һурып ала килеп, тегенең башын ҡыйып та алды, ти. Шүлгәндең өҙөлгән башы, туҙғыған мең ҡарыш һаҡалына уралып, тәгәрәп китеп барҙы, ти. Минәй Шүлгәндең йығылған кәүҙәһен тураҡлап, шуға әүрәп тороп ҡалып, уның башы ҡайҙа тәгәрәп, ҡайҙа киткәнен белмәй ҙә ҡалды, ти.

Минәй батыр Шүлгән батшаһының кәүҙәһен турағылап, кәбәндәй итеп өйөп яндырҙы ла, бар эште тамамлап, арып, алйып йоҡомһорап, әлмәүһеп ултырғанында ҡолағына салыныр-салынмаҫ ҡына «Әй-әй! Ау!» тигән тауыш ишетелеп ҡалғас ҡына, Таңдыса иҫенә төшөп, һикереп тороп, йөрәген ҡулы менән баҫты ла, ти, тауыштың түңәрәк көмбәҙ эсенең ҡайһы урынынан килгәнен дә белмәй, һарай эсен түңәрәп, әйләнергә тотондо, ти. Тәүге һуғылған ишекте үтеп барғанда бер ҡыҙ осрап: «Ай, егет!» — тип һөрәндәне, ти. Минәй: «Таңдысалыр», — тип уйлаһа ла, ул булмай сыҡты, ти. Шулай ҙа уны асып сығарҙы ла үҙ эше менән мәшғүл булды, ти. Алты бүлмәнән ҡушылған алты ҡыҙҙы ҡотолдорҙо — Таңдыса юҡ та юҡ, ти. Бүтән ишек бәлән* дә күренмәй башланы, ти. Шулай ҙа батырҙың йөрәге һиҙенә: Таңдыса ҡайҙалыр ошонда булмай булмаҫ. Бер ғауым аптырап торғандан биреһенә*, Минәй батыр ишекһеҙ урындарҙы, суҡмары менән һуҡҡылай-һуҡҡылай, йөрөй башланы, ти.

Шулайтып йөрөп ятһа, бер урында стена, ҡоп-ҡоп итеп, икенсе төрҙө тауыш сығарғайны, йүгереп килеп тибеп ебәрҙе — ялп итеп ҡалды: алдында бүлмә хасил булып, уның Таңдысаһы атылып килеп сыҡты, ти. Атылып килеп сығып:

— Ай, Минәйем! — тип, батырҙың муйынына һарылды — шатлығынан шунда уҡ иҫтән яҙҙы, ти.

— Таңдысам, бәғрем! Был мин. Әйе, мин. Һин иректә, — тип битенән һөйөп, иренәнән үпкәйне — кәләше иҫенә килде, ти. Ирендән үбеү ғәҙәте шунан ҡалды, ти.

Бына шулай Минәй Таңдысаһын табып, уны һарайҙан утрауға алып сыҡты, ти. Был саҡта ағастар ҙа, ҡоштар ҙа: «Беҙҙе лә! Беҙҙе лә!» — тиешкәндәй булдылар, ти. Минәй батыр Ер өҫтө донъяһына сығыр юлды ҡыҙҙарға күрһәтеп: «Һеҙ ошонан тышҡа сығығыҙ ҙа

мине көтөгөҙ. Мин Шүлгәндең малдарын әйҙәп ҡыуалап сығарам, һеҙ ҡаршыларһығыҙ. Таралмаһындар», — тине, ти.

Шүлгән батшаның һанһыҙ һыйыры, иҫәпһеҙ йылҡыһы, бихисап һарыҡ-кәзәһе эйәләренең үлеүен һиҙеп, уны юҡтап, баҡырышалар, үкерешәләр, кешнәшеп, сырҡырашып зыуҙашалар ине, ти.

Минәй алдында ус ояһындай ғына тишек пәйҙә булды, ти. Шул тишектән төшкән яҡтылыҡҡа барып үтә ҡараһа, унан кеше күҙендәй генә булып ҡояш күренеп тора ине, ти. Минәй батыр мыны тиҙ генә аңдап алды ла суҡмары менән тозорорға* тотондо, ти. Шунан, кирелә биреп тороп-тороп өйөрөлтә һуғып ебәргәйне — уймаҡтай тишек һарай һыймалы булды ла ҡалды, ти. Шүлгән батшаның малы, тауҙың тишелеүен күреп, барыһы ла һөрҙөгөшөп шул тишеккә ҡарап ағылдылар, ти. Иң алдан ялын, ҡойроғон һөйрәтеп йылҡы ҡото Буҙ айғыр (Аҡбуҙат) килеп етте лә Минәйҙе күреп, шымырайып, уға уҡталды, ти. Минәй ҡылыс һырты менән маңдайына — бер, һырт буйына бер утыртҡайны, ти, ул: «Мин дә һинеке, өйөрҙәрем дә һинеке», — тине, ти. Минәй Аҡбуҙҙы нуҡтаһынан тотоп алып йылҡыларҙан ситкәрәк тайшанды, ти. Бере лә* ҡалмай, тәүҙә йылҡы малы сыҡты, ти. Йылҡы сығып бөтөүгә, Шүлгән батшаның һыйыр малдары ағылышып, бер-бер артлы төҙәктәлешеп килгәне күренде, ти. Минәй Буҙ айғырҙы янындағы ҡолас еткеһеҙ имәнгә бәйләне лә, ти, үҙе, суҡмарын тотоп, йәтештәнде, ти. Ни өсөн тигәндә, ҡаршыһында ос һәнәгеләй ике мөгөҙөн әллә ҡайҙан уҡ алға һоноп, алғы ике тояғы менән алмаш-тилмәш сапсынып, бер туҡтауһыҙ бышҡырынып, үкерә-үкерә һыйыр малының ҡото Күк үгеҙ, көтөү-көтөү һыйыр эйәртеп, килә ята ине, ти. Күк үгеҙ Минәйгә килеп етеп, уны күреүе булды, ти — башын сайҡап, күҙҙәрен аҡайтып, сапсына-сапсына ер туҙҙырып, мөгөҙө менән әләктереп алып күккә сорғойом быны, тип килә ине, ти. Минәй суҡмар менән Күк үгеҙҙең маңдайы уртаһына еңелсә генә ике-өс рәт ҡундырған ине, ти. Күк үгеҙ: «Мин дә һинеке, көтөүҙәрем дә һинеке», — тине, ти.

Һарыҡ тәкәләре менән кәзә тәкәләре лә шулайтып мөгөҙҙәрен текә тотоп киләләр ине, ти, Минәй ҡылыс менән берәрҙе мөгөҙҙәренә ҡундырғайны, ти: «Һеҙҙекебеҙ, һеҙҙекебеҙ», — тип әйтеп сығып киттеләр, ти.

Өс көн, өс төн буйына өҙлөкһөҙ мал ағылды ла ағылды, ти. Ҡыҙҙарҙың бөтәһе лә иҫән-һау сығып, мал ҡаршыланы, ти. Шүлгән батшаның, малдары сыҡҡан тишекте Малсыҡ-ҡантишек тип аталылар, ти.

Был малдар сыҡҡас ашанырға, эсенергә тотондолар, ти. Минәй, үҙе ҡотолдороп сығарған кешеләренә өйөр-өйөр йылҡы, көтөү-көтөү һыйыр, кәзә, һарыҡ малдарынан өләшеп биреп, үҙҙе-үҙен йорттарына оҙатты, ҡалғандарын Урал эсенә ебәрҙе, ти.

Ул арала Ағиҙелдең ярынан алыҫ түгел бер ҡаянан ҡайнап быу күтәрелә, ул быу томанға әйләнеп, урман тирәләренә, йылға буйҙарына, тау-таш ҡаяларға үрелеп йәйелә башлап, болотҡа әйләнде, ти. Минәй батыр, был ней хәл, кем уны быҫҡыта, тип, Буҙ айғырға менеп алып сапты, ти. Унда барып етеп, күҙен ташлауы булды, ти — ғәжәпкә ҡалды, ти, Минәй. Ни өсөн тигәндә:

Тәгәрәп килеп елеп,
Түбә башына менеп;
Бөтмәгәнгә ҡырҡылып,
Муйынына ултырып;
Алаптай ауыҙ асып,
Эргә-тирәлә һаҫып;
Тамаҡ төбөн килелтеп,
Танауҙарын киңәйтеп;
Һаҡалдарын туҙғытып,
Бар донъяны ыҙғытып,
Ухылдап та бухылдап,
Тамаҡ төбө ҡылҡылдап,
Боҫ-тыныуын боҫратып,
Тирә-йүнде быҫратып,
Тирә-йүнде томалап,
Ебәрә, ти, томанын.
Шул олғашҡан болотҡа,
Аптырап был ҡылыҡҡа
Минәй әйткән: «Эх, яуыз!
Ултыра бир, этауыҙ!» —

тип, ҡылысын ҡулына алып, уға ҡарап китте, ти. Шүлгән батшаның киҫек башына яҡынлай башлауы менән үк шуны күрҙе, ти: баш үҙе ултыра, мең ҡарыш һаҡалы уны тирәләп түшәлеп ята ине, ти. Минәй, уны-мыны уйҙамайынса, атлап бара ине, ти, теге һаҡал, я-а, бер заман, батырҙың аяҡтарына сырмала башланы, ти, бара бирә үҙенә лә урала башланы, ти. Минәй батыр ҡылысы менән өҙә-өҙә сапҡылаһа ла, бер ни сыҡманы, ти: бары ҡылысы тупраҡлана башланы, ти. Ахырыһы, хәл итә алмай, сырмалсыҡтан кире сығып, ергә баҫты ла, ти, янын алып, уҡ-һаҙағын керешкә һалып, төҙәп ата башланы, ти. Атҡан бер уғы башты тишеп сыға, тишелгән бер урындан ҡан бырғыла башлап һауала ла ҡыҙыл-ҡыҙғылт болоттар хасил була башланы, ти. Минәй батыр һаман атыуын белде, ти. Ахырҙа Шүлгән батшаның башы, Минәй батырҙың уғына сыҙай алмай, күккә күтәрелде, ти. Болоттар араһына аралашыу булды, ти — шыбаҡшып ҡойма яуын яуырға тотондо, ти. Шул тиклем көслө яуа башланы, ти, Урал тауының тиҙ таралыусан йомшаҡ тоҡомдарын иҙелдереп йыуып, унан да, мынан да тауҙарҙы өңөп, соҡрайтып ағыҙып төшөрҙө, ти, йылғаларҙы тау түштәренә тиклем күтәрҙе, ти. Уралдағы халыҡтарҙың торлаҡтары ағып китә, малдары, үҙҙәре тау баштарына үрелһәләр ҙә, бик ныҡ күшекте, ҡайһылары үлде лә, ти. Минәй батыр, Буҙ айғырға (Буҙайғыр — толпар ине икән, ти) атланып, болоттар араһына күтәрелде лә Шүлгән башын эҙләп, күреп ҡалып, баҫтыра-баҫтыра, ҡылысын уңды-һулды һелтәп, йәшендәр уйната башланы, ти. Тау аҫтында йәшен уты ни икәнен күреп, күк күкрәүе ни икәнен ишетеп белмәгән Киҫек баш ҡурҡа башлап төньяғына ҡарап ҡаса башланы — Минәй унын һаҡалын ҡылысы менән өҙә һелтәп төшөрә барҙы, ти. Бынын һаҡалы, ҡырҡылып, ҡыҫҡара барған һайын, томан да тарала барҙы, яуын да әҙәйҙе, ти. Төн яғына яҡын-

даған һайын, ул боҙҙауыҡ, ул ҡарҙауыҡ* яуҙыра ине, ти. Минәй батыр ҙа, һаҡал ҡыҫҡарған һайын, Шүлгәндең киҫек башына яҡындаша бара ине, ти. Бисура, деү, ен быуған йылғаларын үтеүгә, уның һаҡалының ҡалған төпсөгөн дә ҡырҡып төшөрөүе булды, ти — ер өҫтөнә шул ап-аҡ булып түшәлеп йәйелде, ти. Киҫәк баш Минәйгә: «Мин хәҙер үлгән Шүлгән булып түгел, Аҡман-тоҡман булып ҡотоғоҙҙо алырмын әле!» — тине лә Боҙ диңгеҙенә ҡасты, ти. Март айҙарындағы көн боларыуы ана шунан була икән ул.

Минәй боролоп бында килгәндә, Таңдыса ла, Күк үгеҙҙе егеп, ямғырҙан ҡасып, оло Урал өҫтөнә сығып, ҡыуыш ҡарағас эсенә инеп ышыҡланды, ти. Был урынды Күк үгеҙ тип атанылар, ти. Теге ҡотолғандар ҙа шулай оло Урал өҫтөнә, уның йәтеш ерҙәренә ҡарап таралыштылар, ти. Ҡурҡыныслы яуындар бөткәс тә үҙ йорттарына таралыштылар, ғүмеренә етәрҙек байҙыҡтар, мал-тыуар алып ҡайттылар, Минәйгә изге теләк, оҙон ғүмер теләнеләр, ти:

Эй, Минәй һин, Минәй һин,
Илде, йортто тиңәйһең*:
Илһеҙ, йортһоҙ, малһыҙҙы,
Илде*, малды итәһең;
Етмәҫ ергә етәһең,
Яуыздарҙы тетәһең,
Барын йыйып бер ергә
Ҡурғы һымаҡ өтәһең;
Йөрөгән юлың аҡ булһын,
Ҡылған эшең хаҡ булһын,
Һөйөп алған Таңдысаң
Үҙеңә гел саҡ булһын*!
Таңдысаң булһын түлде*,
Тапһын улдарҙы — елде*,
Оҡшап атай затына,
Дан килтерһен атына*!
Түшең киреп, ярпайың,
Шипкерт булыр, ҡарпайың*,
Таңдысаң менән икәү
Тиң йәшәп, тиң ҡартайың!

Минәй батыр Урал буйлап, елер ерҙә — елеп, сабыр ерҙә — сабып, ҡайҙа үҙән буйлатып, ҡайҙа шырҙыҡтар үтеп килә ята ине, алда сосайып торған ҡыҙыл ташлы ҡая күрҙе, ти. «Шунда менә һалып, тирә-йүнде ҡарап алғанда инде», тип, ҡыҙыл ҡаянан күҙен алмай килә ине, бер кескәй йылғаның әрәмәһен шатыр-шотор йырып сыҡты — мөлкөлдәп ятҡан ергә тәл булып, Буҙ ат бил бауырынан батты ла ҡуйҙы, ти. Минәй аптырап ҡалманы, һаҙ убып, әрәм итеп ҡуймаһын хайуанды, тип, тиҙ генә ҡылысы менән уңды-һулды һелтәнеп, ике сауҡаны йыға һалып, аттың бауыры аҫтына тығып та ебәрҙе — хайуан үҙе һикереп килеп тә сыҡты, ти. Шул ер әлегәсә Буҙатбатҡан[6] тип йөрөтөлә (хәҙер уны Буҙанбатҡан тиҙәр), ти. Атын һаҙҙан

сығарып, Минәй менеп, тирә-яҡты ҡарап торған ҡыҙыл ташлы ҡая Ҡыҙылташ тип аталды, ти.

Минәйҙең Буҙ айғыры баш бирмәй баштаны, ти. Минәй тартҡан яҡҡа бармай, уны буйҙап* Яйыҡҡа бороллдо, ти. Минәй, уның башын шаҡара тартып, ҡамсыһы менән берҙе тамыҙып алғайны, телгә килеп: «Һыуһаным, Иҙел һыуын тәм итеп* эскеләп йөрөнөм, Яйыҡ һыуын да тәм итәйем тигәйнем», — тине, ти. Айғыр шулай тигәс тә, Минәй ҡаршылашманы, уны иркенә ҡуйҙы, ти. Ул Яйыҡҡа етмәҫ борон, бер арҡанан төшөп, һонолоп Яйыҡ йылғаһының һыуын эсте лә, ти: «Киттек, ҡайҙа теләйһең, шунда», — тине, ти. Был арҡаның уй башының Буҙайғыр[7] тип аталыуы шунан ҡалды, ти. (Был ер Үҙәк ауылынан күп алыҫ түгел.)

Минәй батыр әйләнеп, теге ҡыҙҙар тороп ҡалған тау тишегенә киренән килеп етеп, күҙ һалһа — ете ҡыҙҙың береһе лә юҡ ине, ти, Минәй: «Уф!» — тип, үргә күтәрелеп ҡараһа — бер аҡ яурын сал бөркөттө күрҙе лә, ти, уға ҡарап атты, ти. Бөркөт ялп итеп ҡалғандай булды, ти. Минәй алдына бәләкәс кенә туҙ ярҡаһы килеп төштө, ти. Туҙға: «Беҙ Ирәндек тәңгәлендә Яйыҡ уртаһындағы суҡтабыҙ», — тип яҙылған ине, ти. Минәй батыр уларҙы эҙләп табырға тип, Ирәндек ашаһына табан осоп барып Тағанташ өҫтөнә төшөп, шунан тороп күҙәткән дә уларҙы Яйыҡтың уртаһындағы өс сусайма ташта* күреп ҡалды, ти. Буҙ айғырҙың елгә ялбырҙаған ял, ҡойроҡтарын күреп, ете ҡыҙ барыһы ла шатланышып бейештеләр, ти. Минәй килеп төшкән дә зыңлатып ҡурай уйнай башлаған. Ете ҡыҙ яңынан бейергә тотонған. Шул көй «Ете ҡыҙ» көйө тип йөрөтөлә башланы, ти. Шунда туҙға яҙылған хәбәр килтергән аҡ яурын сал бөркөттө телгә алды ла йәнә бер көй башланы, ти. Уныһы «Аҡ яурын сал бөркөт» тигән исем алды, ти. Яйыҡ уртаһындағы өс сусайтма таш Ете ҡыҙ ташы[8] тип аталды, ти.

Минәй батыр алдына, артына, ял-ҡойроҡтарына йәбештереп ете ҡыҙҙы ла мал сыҡҡан тишек ауыҙына алып барып төшөрҙө, ти. Төшөрҙө лә:

— Һеҙ таралышмағыҙ, мин Күк үгеҙҙе ҡарап киләйем, — тине, ти.

— Ярар, — тиешеп, ете ҡыҙ тороп ҡалды, ти. Ярар, тиһәләр ҙә, Ағиҙел буйын ҡыҙыра башланылар, ти. Тағы бер ташты төйәк итеп, шунда ҡыуышлап, емеш емешәп көн итә башланылар, ти. Ағиҙелдәге Ете ҡыҙ ташы шул мәлдән мәғлүм булды, ти.

«Теге ҡойма ямғырҙа тонсоғоп, үлеп кенә ҡуйманымы икән был мәхлүк», — тип, Минәй Күк үгеҙҙе бәйләп киткән ергә барһа, унда ул юҡ ине, ти. Минәй, берәй яҡҡа олағып сығып китмәнеме икән, тип уйланы ла, ти, юлын ҡыуалатты*, ти. Күк үгеҙ, алдырҙай-алдырҙай* ике айырса тояғын батыра баҫып, ҡуштабаҡтай* эҙ ҡалдырып, Урал өҫтөнә ҡарап сыҡҡан ине, ти. Эҙен ҡыуалата килеп, ҡыуалата килеп, бер урында Ағиҙелде аша сығып, төпкөлдәге әрәмәлектән тауға үрелер ерҙә генә Күк үгеҙҙең сапсынған, ерҙе һөҙгөләгән урынына тап булды, ти. Үгеҙ һөҙгән ерҙән шылтырап ҡына шишмә сығып ята ине, ти. Минәй Буҙ айғырын һуғарып, үҙе лә бит-күҙен йыуып, сарсаған тамағын ебеткәйне, тәненә көс-ҡеүәт ингәндәй булды, ти. Минәй батыр: «Күкүгеҙһөҙгәншишмә[9] булыр һинең исемең», — тине лә, ти, эйәренең

айылын, күмелдереге менән ҡойошҡанын тартҡылаштырып, ике турһығына Күкүгеҙһөҙгәншишмә һыуын тултырып, уларҙы ике ҡанъяғаһына бәйләп алып, Күк үгеҙ юлын ҡыуалатыуын дауам итте, ти. (Теге шишмә хәҙер Үгеҙһөҙгәншишмә тип йөрөтөлә). Шулай ҡыуалата килеп, ҡыуалата килеп, яман йылғаны үтә биргәс тә уны килеп тапты, ти. Шунан алып ул йылға — Яманйылға булып ҡалды, ти.

Күк үгеҙ, иркенлектә сәскә башын өҙөп кенә ашанып, шул ғына ваҡыт эсендә түйынып, күрөгәйеп, ҡойроғон сәнсеп, йыһан ярып үкереп, ажарҙана ине, ти. Минәй батырҙы күргәс тә йыуан-йыуан ағастарҙы йыға-мыға һөҙөп, алдындағы күбәләй таштарҙы осора-мосора сапсып тәгәрәткәнсә һөҙөп, ҡоторона ине, ти. Минәй батыр: «Ажарын баштан уҡ алмаһаң, ыҙалатыр был», — тип, Буҙайғырҙан һикереп төшә килеп, бото йыуанлыҡтан, береһе — ҡайындан, икенсеһе — муйылдан, өсөнсөһө — мышарҙан өс шыйҙа* ҡырҡып алып, бер генә осҡа ҡалдырып*, әҙерләп ҡулына тотоп, һөрәтеп, уны нисек булһа ла артланып* һырт буйға ултыртмаҡсы булды, ти. Уңайын табып, өс мәртәбә бик әсе итеп ялдандыра-ялдандыра һырт буйына тартты, ти. Күк үгеҙ бөгөлөп-бөгөлөп китте, ти. Әммә ике күҙен түңкәрә ҡарап тороуы булды, ти. Минәй батыр уның тағы ла үсегеүен, ҡасырға уйламауын күреп, ике мөгөҙөнә йәбеште лә үгеҙ менән айҡаша башланы, ти. Күк үгеҙ әй алышты, ти. Минәй ҙә бирешмәне, ти. Иң һуңында ул Күк үгеҙҙең муйынын бороп шаҡарҙы ла шаҡарҙы, ти. Шунда ғына үгеҙ телгә килеп: «Йә егет, хәҙер мин башбикәр* һинеке. Теләһәң нишләт», — тине, ти.

Минәй батыр Күк үгеҙ менән айҡашҡан урын Күкүгеҙ[10] булып исемләнеп ҡалды, ти.

Минәй Күк үгеҙҙе үҙҙәренең яғына бара торған юлға төшөрөп ебәрҙе лә, ти, өсөнсө көн тигәндә Малсыҡҡан тишегенә барып еткән. Ул килеп еткәндә, ете ҡыҙҙың етеһе лә: «Минәй юҡ та юҡ, бер нәмә булды инде!»— тип илашалар ине, ти. Тау аҫтынан сығып Иҙелгә ағып төшкән йылғаны элек Күҙ йәше тигәндәр. Әлдә лә ул йылға ете ырыуҙың күҙ йәшен хәтерләтә.

Ҡайтып өлгөрмәгән тотҡондар, Минәйҙе тағы бер күреп ҡалайыҡ, тип, һаманда ла мал сыҡҡан тишек янында көн итә ине, ти. Минәй:

— Үҙ ҡыҫымығыҙҙы* алып ҡайтығыҙ. Ҡоро ҡул менән, ауыҙ асып, ҡайтмағыҙ, инде тынысланырһығыҙ, — тине, ти. Үҙ яуабында халыҡ былай тип алғыш әйтте, ти:

Тәңре һиңә ҡорҙаш булһын,
Яҡты йондоҙ юлдаш булһын,
Ҡайҙа барма — юлың уңһын,
Тоғро дуҫтар ҡулдаш булһын!
Ил терәге һин, Минәй,
Таңдысаңа кинән, әй:
Затлы-затлы түл йәйелһен
Таңдысаң менән һинән.
Яуға барһаң, яу ҡайтар,
Дауға барһаң, дау ҡайтар:

Һин барында ил-йортҡа
Ябырылмаһын яттар.
Уғың булһын уҡлы,
Беләгең булһын ныҡлы.
Һеңгөң тейһен сәбенә,
Ҡылысың, белмәй тутыҡты,
Һәр саҡ торһон, ялт итеп —
Яттар ауһын, ялп итеп!

Минәй батырҙың әйткәне тура килде, ти. Урал эсе күп замандарғаса, ҡылт та итмәй, тыныс торҙо, ти. Халыҡ мендән дә ашыу йылдар буйынса Шүлгән батшаһы йыйған байлыҡ йыйынсағын кәрәгенсә генә килеп алып торҙо, ти, мохтажһыҙ йәшәне, ти. Минәй батыр ҡыҙҙарға ҡарап:

— Әйҙәгеҙ, минең менән Оло Урал өҫтөнә. Унан таралышырбыҙ, — тине, ти. Былар Оло Уралдың бер ҡалҡыуына сыҡҡас та:

— Ана, беҙҙең яҡ.

— Ана, беҙҙең тауҙар.

— Ана, беҙҙең йылға баштары, — тиешә башланылар, ти. Минәй батыр:

— Ярай, алай булғас. Ошонда бер-ике көн ял алығыҙ*. Ашанып, йылға баштауҙарынан* һыу эсегеҙ. Буй алышығыҙ ҙа, унан таралышырбыҙ, — тине, ти. Ҡыҙҙар бер һүҙһеҙ риза булды, ти. Былар өс төн, ике көн бергә булдылар, уйнанылар, көлөштөләр, баштарынан үткәндәрен, епкә теҙгән мәрйендәй итеп, һөйләштеләр, ти. Былар үҙҙеүҙенең* әкиәттәрен отоп алып, һушлашышып*, таралышты, ти. Минәй батыр уларҙың уртаһында тороп:

— Ҡыҙҙар, тағын да берәй тап булышып, күрешербеҙ әле, — тине, ти. Ҡыҙҙар:

— Үлмәһәк, күрешербеҙ, — тине, ти. Аранан берәү ҡайтыр яғына ҡарап тороп:

— Әйәйек, — тине, ти. Икенсеһе:

— Алыҫын алыҫ та түгел, — тигәс, Минәй уға ҡарап:

— Шулай ҙа һаҡ бар, — тине, ти. Бер ҡыҙ, ҡолон таҡырын* күреп:

— Ана, беҙҙең йылға башы, анауында ҡолон бәйләгән иҙем, — тине, ти. Дүртенсе ҡыҙ ҡарап-ҡарап торҙо ла, ти:

— Әй минең йортом, ана, анау яҡта. Бөгөн төндә йондоҙҙо тәңгәлдәп белдем, — тине, ти. Бишенсе ҡыҙҙы һүҙ араһында асыҡ ишетмәнеләр ҙә, ти:

— Нимә тейһең? — тип һорағастары:

— Ана, теге яҡта йортом тим, — тине, ти. Шул ҡыҙҙар ҡайтып, баштан үткәндәрен һөйләгәндә, аралашҡанда, ошолайтып ҡарашып торҙоҡ, тип түкмәй-сәсмәй һөйләнеләр, ти.

Былар ял алып, үлмәһәк, тип айырылышҡан Ҡарт Урал өҫтө хәҙер ҙә Үлмәһәк[11] тип йөрөтөлә. Теге ҡыҙҙар менән Минәйҙең һүҙҙәре Әйек, Һаҡмар, Еҙем, Әй, Дим тигән йылға исемдәре булып китте, ти.

Алты ҡыҙ алты яҡҡа юл алды, ти, Минәй янында Таңдыса ғына тороп ҡалды, ти.

— Таңдысам! — тине, ти, Минәй.

— Минәйем! — тине, ти, Таңдыса.

Шунан ни Минәй батыр Таңдыса матурҙы ҡосоп, күкрәгенә ҡыҫып үпте, ти... Иртәгеһенә иртә менән ҡайны йортона барып та еттеләр, ти. Ошо ваҡиғанан һуң төшлөктәге башҡорт ырыуҙарын һун төрөктәре килеп баҫты, ти. Минәй батыр, төн тарафындағы ырыуҙарыбыҙҙан ғәскәр йыйып, тиҙ генә Таңдысалар яғына ярҙамға ташланды, ти. Һундар менән алышта Минәй батыр йәнә лә үҙенең ғәйрәтле, уҡ атыуға, һөңгө һелтәүгә мәргән, шуның өҫтөнә ҡылыссан да суҡмарсан булыуы менән башҡорттарҙы ла, һундарҙы ла таң ҡалдырҙы, ти.

Яу баҫылғас ҡына Минәйгә Таңдыса менән ҡауышыу насип булды, ти. Яуҙа еңеп, ҡайтып килеүен ишетеп, Таңдысаһы Минәйен ярты юлда ҡаршы алды, ти.

Былар килеп өс көн тороп, ял алып, яңынан буй алышҡас та*, быуаҙ ҡуңыр һыйыр биреп, уларҙы Минәйҙең ырыуына, Уралдың төн башҡорттары йәшәгән яғына, ҙурлап оҙаттылар, ти.

## 3. АҠТАШ ХАН[1]

(Ҡыҫҡартып алынды)

Был Аҡташ ханды шәжәрәләрҙә күргәнебеҙ юҡ. Мәгәр шаһ Зөлҡәрнәйен[2] тимәкле мәшһүр зат шәриф* (тураһындағы) «Шәрех ҡамус»* тигән «Окианус» китабының әйтеүенсә,... ул донъяны гиҙеп мәғриб һәм мәшриҡте* алып, Дәшти Ҡыпсаҡ[3] сигенә еткәс, Мауәрди ҡалаһының батшаһы Яйгирҙан Аҡташ хандың кем икәнен ишетте.

Был Зөлҡәрнәйен тарихында әйтә: шаһ Яйгир Мауәрдигә Дәшт йортонан килеп, Мауәрди ҡалаһын ҡылыс менән алып, 140 йыл унда булды. Рус йорто менән Дәшт араһында кәмә менән йөрөгәндәрҙән баж хиражы* алыр ине. Ул кәмә йөрөгән һыу (йылға. — *Ғ. Ҡ.*) Волга булһа кәрәк. Был Яйгир Зөлҡәрнәйенә былай тип һөйләне: «Эй, шаһ йыһан, мин һәм Дәшт диярында* Юш (Яуш) хандың сәр ләшкәре* инем. Юш (Яуш)хан йыһандан киткәс, уның улы Таҡташты күтәрҙек. Вәли мәғсүм ине*. Әммә дәлирҙән* ҡалмыш бер ханзадә бар ине. Атына Аҡташ йәки Ағташ тирҙәр ине. Был Ағташ хан, жәнг ҡылып*, Таҡташты ҡыуаланы. Унан элек сәр ғәскәр ине, хан булды. Таҡташты Фәрехзадә Дәшт[4] алып ҡасып, был Дербентта бер ута башындағы* Ҡаһһан (Ҡаған) исемле ҡәлғәгә* ҡуйып, Ағташтан хәлас* итте. Ете йылдан һуң, мин Ҡаһһаның сәрүәрен* тупланым. 120 йылдыр ки бында булдым. Таҡташ был ҡәлғәлә мохтаж ултырыр. Был ҡәлғә ике тау араһындағы бер тенектә, йәки тар дәрәләлер*. Мауәрди ҡалаһынан өс көнлөк юлдыр».

Зөлҡәрнәйен Таҡташҡа рәхиме килеп һәм, асыл нәсәбе Һүшнәк (Гушон) шаһ балаларынан булғаны өсөн, иғтибарға алып, илселәр ебәреп алдырҙы. Таҡташҡа: «Бабаң Һүшнәк шаһ йортон алып бирермен», — тине... Зөлҡәрнәйен үҙенең оло вәзире Бертус хакимды башҡа вәзирҙәргә баш итеп Ағташҡа ебәрҙе... Ҡасыйдтар*, ҡырҡ көнлөк юлды егерме дүрт көндә үтеп, Ағиҙел һыуы үҙәнендәге Ағташ хан

урҙаһына еттеләр. Бер ғәжәйеп сәхрәлә, йығын тау башында, бер би баян[13] урҙа күрҙеләр.

Аҕташ ханға хәбәр килгәс, аулаҡта вәзирҙәренән һораны:

— Искәндәр Зөлҡәрнәйен ниндәй кеше, кем илсе күндермеш?

Вәзирҙәр әйттеләр:

— Эй, шаһ, Искәндәр йәнә бер шаһтыр. Румдан ҡупты, ғәжәм* диярын алды, жәбәли кәбирә* сығып (Һиндостан тарафтарында Гималай һырттарында), жәйше* зәнгистан* ерен тотто, унан килеп, Хөрәсәнде алды, Һиндостанды мөсәххәр[5] ҡылды... Унан Чингә, Чиндән Ҡытайға, Ҡытайҙан Уйғырға — ул башҡорт нәүғе[6] ине, унан Төркөстанға, Хауырстанға, Аланға, Бөрйәнгә — был һәм ахыр башҡортҡа ҡатышмыш, йәнә Тыбырстанға, Кәшмиргә,... Заблстанға вә Систанға керҙе. Унан Сәмәрҡанға, Занбурстáнға, Куһстанға[4] кереп, Ғуғыржиға[5] сыҡты... Эй, Аҕташ хан, Искәндәр тигәндәре ошондай кешелер. Искәндәрҙән ғаҡыл мөбаш[9].

Шулай булһа ла Аҕташ илселәрҙе саҡыртып, Бертус вәзирҙән һораны. Ул, ҡаршы тороп, дәшт теленсә Зөлҡәрнәйеңдең һүҙен һөйләне ки. Аҕташ тығыюға* килһен, истиҡбал итһен*. Юғиһә Дәшт дияры Юш (Яуш) хан улы Таҡташ хандыҡылыр. Китһен, китмәҫ иһә, дәхи белерсә*: уш* барырым иһә, торһон, яуап бирһен, — тине.

Был һүҙгә Аҕташ шилә ҡаҡыны ки*, эсе-тышы ғазбилә[13] тулды. Ҡасд * ҡылды кем ҡасыйдтарға хайҡырып какя, йылтырым кеүек шаҡя*. Вәли дәрхәл[18] хәйлә ҡылмаҡ өсөн ғазбы утын тәскин* ҡылды, үҙен терелтте, баҫты (бының хаҡында, йәғни бер Аҡташ ҡиссаһы бөтөн ҙур жилдтер*, әммә һүҙ ҡыҫҡа булһын). Искәндәрҙең кем икәнен ишетеп әйтте: «Һис кем донъяла шаһтарҙан миңә ҡарышманы. Хоҙа бирәүгә ярҙам бирһә, һәм бәндә алыр. Әммә бер хәйлә итәсәкмен».

Уның ҡырҡ сәрүәр* улдары бар ине. Һәр бер ерҙә бәктәр ине. Уларҙы кәңәшкә йыйҙы. Олуғыраҡтары* Таш хан, Түләш хан, Улаш хан, Ҡимаш хан, Суж хан, Күләж хан, Ҡарыж хан, Дәтеж хан, Ептех хан. Ун ике кейәүе дәхи* ун ике ерҙә ханлыҡ ҡылыр ине. Улар Темәнташ, Ҡыманташ, Аманмән, Ҡыманмән, Сынтимер, Темәнтимер, Байтимер, Ҡайтимер, Атлаштимер, Таҡтамыш, Жанхыш, Тарағи татар. Былар ике йөҙ туҡһан мең ғәскәр менән килеп, Аҡташ хан ете йөҙ мең ир (ғәскәр) жәмғе ҡылды ла*, Искәндәргә истиҡбалға* китте. Барып бүләкләне һәм ҡунаҡҡа Ағиҙел һыуындағы урҙаһына саҡырып ҡайтты. Искәндәр Зөлҡәрнәйен Аҡташты Дәшти Ҡыпсаҡта ҡалдырырға вәғәҙә ҡылып, Таҡташ ханға Ҡыпсаҡ урынына Кавказ диярын бирҙе...

Шаһ Зөлҡәрнәйен йөҙ егерме мең ир (ғәскәр) менән Аҡташ ханға ҡунаҡҡа барыр икән. Ул тарафтан Аҡташ ҡаршы алып, Ағиҙел һыуының был тарафында ҡундырҙы. Ат уйнар ерҙе Аҡташ хан үҙе алып торҙо, кейәүҙәрен төрлө этрафҡа ете йөҙ мең ғәскәр менән боҫҡонға ҡуйҙы. «Искәндәриҙәр тәғәмгә мәшғүл булғас та, баҫып, ҡырып, Искәндәрҙе һәләк итеп, йыһанға дастан ҡала», — тине.

Шаһ Зөлҡәрнәйен бер төш күрмеш ине. Һиҫкәнде, вәзирҙәренә: «Һаҡ булығыҙ!» — тине. Вәзирҙәре, ашам-эсемгә мәшғүл булмай, ҡарауыл торҙолар. Шаһтарға һәм рәғайәткә* Аҡташ ниғмәт йыйҙырыр* икән. Искәндәрҙең сәр ғәскәрҙәре төрлө яҡтан сыға килгән

чирей* күреп, хәбәр бирҙеләр һәм ул хәбәр аласаҡ (кеше) аңһыҙҙан бер мәл шилә нәғрә* сығарҙы кем. Ниғмәт йыяр шаһ вә солтандар еренән торғанса, Аҡташ белде кем ләшкәре етеште, рәхешенә* менергә йүгерҙе. Ҡыйтас — ғиҡабләйн* Аҡташҡа тиғ* орҙо. Аҡташ ҡалҡан тотто, сәйфе* менән булат ҡалҡанын ике шиҡаҡ әйләп*, яурынына бер зәхем* орҙо. Аҡташтың уландары Ҡыйтасты аталарынан айырҙылар. Бынан һуң өс көн Ағиҙел буйында һигеҙ йөҙ егерме мең ғәскәр һуғышты.

Был һуғышта шаһ Искәндәрҙең Мисыр шаһының ҡыҙы Шәмаилбаныуҙан тыуған улы Ҡасфран, ете йәшендә, әсәләре менән бергә ине. Ҡасан Аҡташ ғәскәре Искәндәриҙәрҙе сәнжаҡ* төбөнә һөрҙөләр иһә, Ҡасфран шаһзадә жәнгкә* әҙерләнде. Уны күреп, Шәмаилбаныу ғәйрәткә килде, нәғрә ороп*, ҡылысын яланғас ҡылды. Уны күреп, Миһран хан ҡыҙы Дилшат, Дәмнүчәһер ҡыҙы Фарух, Ҡыйҡан ҡыҙы Шәһребан..., ун ике мең сәдран, сәркәбирән* менән Аҡташҡа һөжүм итеп, сәнжаҡ төбөнән киреһенә һөрҙөләр... Унан Аҡташ жәйше* йәнә Искәндәргә ҡылыстар орҙорҙо. Хатта дүртенсе көн шаһ Искәндәр сиуар булып*, сәнжаҡ вә әләм күтәреп, нәғрәләр ороп, Аҡташҡа йөрөнө. Аҡташ дәхи сиуар булып йөрөнө.

Сил[13] кеүек бер-беренә, эй, хиш*,
Аттар ҡыуып ҡаршы йөрөнө ике жиш*.
Асыу менән бер-берен аһәнг* иттеләр,
Нам* өсөн намыҫ менән жәнг иттеләр.

Нам вә намыҫ күргәндең хуш дәүрә*,
Ир улдыр кем ад[4] өсөн башын бирә.

Ад вә һан күҙләмәгән ирҙән, эй ян,
Бик тә бел кем йәк торор[5] бер баш һуған.

Адый бәклә, адый бәклә адыңый*,
Был йыһанда ад күрерһең ядыңый*.

Искәндәриҙәр мөнһәҙим хәдденә ирешкәс*, арттан йөҙ алтмыш мең ғәскәр килеп, хәлас* итеп, Аҡташты мөнһәҙим* итерҙәр. Аҡташ күп замандар Искәндәр менән һуғышып мәғлүб* булһа ла, йортон ташлап, сит йортҡа сығып, ғәйре* шаһтарҙан ярҙам менән һәмишә* һуғышҡан, хатта ғәскәре менән Саксон йортона сығып, унда Искәндәрҙән ҡарар тапмай, Болғар ҡалаһына барып, унда ғәскәр йыйып, йәнә мәғлүб булып, мәшриҡ* тарафына сығып, йөрөй-йөрөй һуғышмыш. Хатта был Аҡташ тиклем һис бер шаһ Искәндәргә ҡаршы тормаған. Ахырҙа Аҡташтың урҙаһын Искәндәр алғанмы, мәғлүм түгел, сөнки беҙ күргән тәуарихтың ахыры юҡ ине. Быны йәд итмәктән морад шул ине: был Аҡташ хандың беҙҙең Ағиҙел буйында төп йорто булып та, үҙебеҙгә хикәйәттәре ҡалмаған. Беҙҙең, йортобоҙҙо сит йорт халҡы яҙған, ә үҙебеҙ белмәйбеҙ. Ағиҙелдең уң яғында, Инйәр менән Эҫем һыуының Ағиҙелгә ҡойған ерендә, Аҡташ тигән бейек тау өҫтөндә һәмишә төрлө урында ҡала әҫәрҙәре бар. Тәуарихта әйтә: «иңе һәм оҙонлоғо етешәр фәрсәх»* тиеү. Һушы, аҡылы бар әҙәмгә был ер шөйлә* дәүләт ғибрәттер ки. Нисә мең йыл был урындан

тороп, мәшриҡ тарафына — Ҡытайға, Һиндостанға, Кавказға тиклем хөкөм ҡылған... Дәшти Ҡыпсаҡ тигән мәшһүр империяның тәхетгәһы* беҙҙең Табын иленең Аҡташ тауында булған имеш... Быларҙы тәфтиш* ҡылырға теләгән әҙәм «Ҡаһарман» вә «Искәндәрнамәнең» өнгә тәуарихтарын ҡараһын. Беҙ күргән тәуарих Зөлҡәрнәйендең ун өшенсе жилдендә, йәғни китабында. Ошондай ҡаһарман китаптары нисәмә жилд тиҙәр. Быға иғтимад* ғәжәп түгел, сөнки Ибн Халдун яҙған тәуарихтар нисәмә жилдтер. Ике жилден беҙ күрҙек, ауырлыҡта ун ҡаҙаҡ булыр. Бынан ҡыяс* ҡылыныр: жәмиғтәрендә* ни тиклем ғилем вә мәғрифәт бәян булыныр. Әһле басыйратҡа* күп фекер итеп ғилем вә мәғрифәткә зауыҡ вә ихлас бирерлек.

Был Аҡташ хан вә ғәйреләр — Өфө ҡалаһынан юғары Ағиҙел буйындағы беҙҙең Кесе Табын, Бишул Табын, Ҡомроҡ Табын, Кәлсер Табын һәм Йомран Табын илендә булған хандар.

## 4. ХАН ҠЫҘЫ АЛТЫНСӘС

Аҡташ тауының аръяҡ өҫтө тип-тигеҙ, унда киң яландар, урмандар һәм боронғо хандарҙан ҡалған ҡала урыны бар. Улар шунда ғүмер иткән ваҡытта, быларҙың өҫтәренә икенсе ерҙән бик ҙур яу килгән.

Был ҡаланың шул замандағы ханы был яуҙың башлығына илсе ебәреп, ни өсөн килгәндәрен белергә ҡушҡан.

Был хандың Алтынсәс исемле бик матур: бер бите — ай, бер бите көн кеүек, һылыу ҡыҙы булған икән. Теге яуҙың башлығы Алтынсәсте алырға килгәнлеген, яҡшылыҡ менән бирмәһә, һуғышып булһа ла, алырға теләгәнлеген әйтеп ебәргән.

Хан, яу башының был һүҙен ишеткәс, ҡыҙына хәбәр биреп, фекерен һораҡан. Алтынсәс:

— Йәйенке битле, Яйыҡ буйы илбаҫарына барыр хәлем юҡ! Аҡташ тауы өҫтөнән Урал тауы аръяғына бармайым! Атайым, дошманға ҡаршы һуғыш асып булһа ла, мине бирмәһен. Әгәр ҙә мине көсләп бирәләр икән, икенсе көн мине яҡты донъяла күрмәҫтәр, — тип яуап ҡайтарған.

Хан, ҡыҙының был һүҙҙәрен ишеткәс, Алтынсәсте бирмәҫ өсөн, дошманға ҡаршы һуғышырға ҡарар биргән. Һәм дә яу башлығына:

— Ҡыҙым һиңә барырға риза түгел, инде үҙ юлыңда булырһың, ҡан түкмәҫ булһаң кире ҡайтып китерһең.

— Булмаһа, миндә лә көс юҡ түгел,
— Башҡаһын, әфәндем, үҙең бел,
Һуғышырға әҙер тора беҙҙең ил! —

тип яуап ҡайтарған.

Яу башы, хандың яуабын ишеткәс, асыуланып:

— Һуғышып Алтынсәсте алырмын, буш ҡул менән илемә ҡайтмам, — тигән.

Алтынсәстең атаһы ла, үҙенең ғәскәрен йыйып, яуға ҡаршы сыҡҡан. Хан ғәскәрҙәре (бабай ҡулы менән күрһәтеп) ана теге тауҙың

өҫтөнән тороп, ана теге арҡанан килгән яуға ҡаршы уҡ менән атҡандар. Ул замандағы халыҡтың һуғыша торған ҡоралдары: уҡ, һөңгө кеүек нәмәләр генә булһа ла, уларҙың уҡтары өс-дүрт саҡрымға етә торған булған.

Хан ғәскәрҙәре, яу менән бик оҙаҡ ваҡыттар һуғышһалар ҙа, яуы бик күп булғанға күрә, хандың ғәскәре еңелеп, ҡасып ҡалаға керә башлаған... Ҡала халҡы, бик ҡурҡыуға төшөп, ҡайҙа барырға белмәй, аптырауҙа ҡалған.

Хан ҡыҙы Алтынсәс, атаһының ғәскәре еңелгәнде күргәс, үҙе, бик шәп ҡара юрғаға атланып, ҡулына уҡ һәм һөңгө алып, яуға ҡаршы сыҡҡан. Алтынсәс яу менән бик ныҡ һуғышһа ла, уң ҡулы йәрәхәтләнеү сәбәпле, кире ҡайтҡан.

Хан эштең ахыры бик насар буласағын белеп, үҙенең хазинаһында булған алтын-көмөштәрен, гәүһәр-яҡуттарын яуҙан йәшермәксе булып, ана шул тауҙың (ана, ана күренә бит әле) иң текә ерендә бер тишек һымаҡ урын бар, ана уның эсе бик киң ти, ана шуның эсенә йыйҙырған.

Үҙе тағы ла, ғәскәре менән яуға ҡаршы сығып, һуғыша башлаған. Хан һаман да еңелгән.

Алтынсәс, дошман ҡулына төшмәҫ өсөн, төнгө ай яҡтыһында, үҙенә хеҙмәт итә торған бер ҡыҙ менән ҡасып, ана шул хандың хазинаһы йәшерелгән тау тишегенә килеп кергән.

Яу хандың ғәскәрен еңеп, хандың үҙен тотҡонлоҡҡа алып киткән. Алтынсәс шунда кереп юғалған...

Шунан һуң Алтынсәстең хәле нисек булғаны мәғлүм түгел. Тик бына уның, йәйге матур төндәрҙә шул тау тишегенән сығып, теге тау киртләсендә ултырғанын күргән кешеләр бар. Ул, шунда сығып, үҙенең аяҡтарына төшөп торған оҙон сәстәренә күмелеп, усына таянып, бик моңайып туғайға табан ҡарап, таң атҡансы ултыра, ти. Шунан һуң тағы ла артына ҡарап, шунда кереп юғала, ти.

Ул борон заманда бик йыш күренгән, инде был көндәрҙә уны күргән кеше ишетелмәй.

Тик беҙҙең олатай, кис менән бында ҡунған ваҡытта үҙенең Алтынсәсте күргәнен, матурлығына иҫе китеп ҡарап торғанын һөйләй торған ине.

Хазиналарға оҙаҡ ваҡыт үткәс, ендәр эйәләшкән. Уларҙы алырға барып, әллә ни ҡәҙәре кеше шунда һәләк булған. Унда мылтыҡлы һалдаттар кеүек ҡарауылсылар тора икән. Алырға теләгән кешеләрҙе яҡын да ебәрмәйҙәр икән.

## 5. ҠОРҠОТ АТА

### 1. Башҡорттоң ҡырғыҙ ырыуы баш бабаһының Ҡорҡот ата булғаны

Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының тәү бабаһы Ҡорҡот атлы булған. Уны борон-борон тәңреләй күрерҙәр ине, ти. Уға бағынып булғандар, ти. Үҙендә бағымсылыҡ ҡөҙрәте лә көслөнән икән. Ул борон

Бохара тарафында бер ҙур дарья буйында йәшәгән, имеш. Шәжәрәләребеҙҙә бинайән, шул Ҡорҡот атанан улы Әхмәт бей, уның улы Мөхәммәт бей, уның улы Янбай бей, унан Ҡушыҡ бей таралып, тармаҡланып киткән. Ҡушыҡ бей, Ағиҙел буйында Татыш күл янында ғүмер һөргәндә, аҡ батшаға барып баш һалған.

## 2. Ҡорҡот атаның табындарҙы ҡурсалағаны

Ҡорҡот ата табын ырыуҙарының да башлығы булып, шәреҡ тарафынан килеп Урал буйҙарына төйәкләнгән икән. Юлда күсеп килешләй бер саҡ алға сығып йәшел үләнгә ятҡан да, думбыраһын сиртеп, өләң әйткән:

Мин — илсе, «кит» — тимәгеҙ,
Минең ырыуға теймәгеҙ,
Тейгәндәрҙе үлтерәм!

Уға ҡаршы бераү әйткән:

— Һеҙгә алда ҡәбер ҡаҙылған, бармағыҙ, артҡа тайығыҙ, — тигән.

— Алда беҙгә рәхмәт, артта — ҡәһәр. Алға барабыҙ, — тип яуап биргән Ҡорҡот. Шунан башҡорттар Ағиҙел буйҙарына ултырған.

Думбыраһын уйнай тигәс, Ҡорҡот ата думбыраһының тарихын да һөйләп китәйексе.

## 3. Ҡорҡот атаның думбыра уйлап тапҡаны

Ҡорҡот ата кеше күңелендәге моңдо көйгә һалыр өсөн бер ҡыллы уйын ҡоралы яһау хаҡында хыялланған. Шуға ярарҙай ағасты бик оҙаҡ эҙләп йөрөгән, ти. Тик күпме ғүмер эҙләмәһен, ундай ағасты һис таба алмаған. Бер саҡ шулай урмандарҙы ҡыҙырып йөрөгәндә, шомло бер ҡара төбәктә ен-пәрейҙәргә тап булған, ти, был Ҡорҡот ата. Ен-пәрейҙәр уның уйын ҡоралы яһарға ниәтләнгәнен белеп, уйынан дүндерергә булғандар. Ни өсөн тигәндә, әгәр ул уйын ҡоралы яһалып, донъяға моң тарала башлаһа, быларға көн бөтә икән. Үҙҙәре был думбыраның ниҙән яһалырын белер булғандар, уны сер итеп тотҡандар.

Ҡорҡот ата, был ен-пәрейҙәрҙән көс-хәл менән ҡотолоп, бер аҙ киткән дә йәшеренеп кенә былар янына кире килгән, ти. Ниәте: теге серҙе белеп-ишетеп булмаҫмы. Әмәлгә таянғандай, быларҙың Ҡорҡот хаҡында һөйләшеп ултырған саҡтары икән.

— Был әҙәм думбыраны яһау серен белмәһә лә, уйынан һаман дүнмәй, — тиҙәр, ти.

— Думбыра өсөн кәрәкле заттың ҡырағай ҡабан һындырып ташлаған ҡоро жиды емеш ағасы ороһо икәнен ҡайҙан белә һәм таба алһын инде ул.

— Белгәндә лә, уны киҫеп, улаҡлап уйып, күләпәһен асы тауышлы дөйәнең баш тиреһе менән көпләгәндә, иң зәһәр кешнәгән тайҙың ҡойроҡ ҡылы менән ике ҡылын тартып, саҡсауыл һабағы менән нығытҡанда, һыҙғысын һаҫы ҡурай үләне емеше менән ышҡыған-да — бына тигән думбыра килеп сығаһын барыбер белә алмаҫ бит...

Шулай тиешкән, ти, ен-пәрей халҡы.

Ҡорҡот ата, тыңлап шулай серҙе белгәс, думбыраны яһай алған. Был думбыраһында ул шул хәтле моңло уйнар булған, хатта бөтә йән эйәһе, бар тәбиғәт уны тып-тын ҡалып тыңлар икән. Унан ен пәрейҙәр ҡасҡан, әжәл уға ҡағылырға үҙе ҡурҡҡан.

## 4. Ҡорҡот атаның Әжәлдән ҡасҡаны

Бик борон Ҡорҡот атаны тәңре итеп танығандар: ул үлмәҫ йән булған имеш. Халыҡ ислам динен ҡабул иткәс, ул әүлиәгә әүерелгән: әжәлле булғаны беленгән.

Бер мәлде төш күргән: ҡара төндә ике кеше ҡәбер ҡаҙа икән, тип. Ҡорҡот ата быларҙан:

— Кемгә ҡаҙаһығыҙ ул ҡәберҙе? — тип һораған.

— Ҡорҡот әүлиәгә, — тигән улар.

Был һүҙҙе ишетеү менән Ҡорҡоттоң ҡото алынған. Шунан һуң ул йәшәп ятҡан ерен ташлап киткән. Ерҙең икенсе тарафына барып сыҡҡан. Бында тағы шул уҡ төштө күргән. Таң менән ҡасып йәнә ситкә юлланған. Туҡталған бер ерендә гел бер төрлө төшөн күреп, үлем әҙәрләүенән ҡурҡып, төрлө ил-ерҙәрҙе ҡыҙырып ҡараған. Тик һис кенә лә хәүефһеҙ урын тапмаған. Ни эшләргә белмәй, әүлиә ерҙең ҡап уртаһында йәшәп ҡарарға ҡарар иткән. Ер уртаһы тигәне Сырдаръя тарафы икән. Тик бында ла әлеге төшө яңынан кергән.

Ҡорҡот әүлиә, әжәлен нисек алдарға тип, үлем ерҙә икән, бәлки, унан һыу эсендә ҡотолоп булыр тип, өҫтөнә кейгән күрпәһен һыу өҫтөнә йәйеп, Сырдаръя уртаһында йәшәй башлаған. Шулай йөҙ йыл ғүмер һөргән, имеш. Думбыраһын уйнап, үлемде алдап ҡыуыр булған.

Тик бер заман йоҡомһорап китеп, ҡулы һыуға тейгән икән, һағалап ятҡан яман йылан быны саҡҡан да үлтергән. Ҡорҡот ата әүлиә мәйетен мосолмандар ҡәҙерләп шул Сырдаръя яры буйына күмгәндәр. Әле лә ул Ҡорҡот атаның маҙары, ҡәбер таштары һаҡлана булыр.

## 5. Ҡорҡот ата рухы

Борон бағымлай, ҡамлап әҙәмдәрҙе һауыҡтыра белер, ислам диненә күскәс, әүлиәгә әйләнгән Ҡорҡот атаның изге рухын ололап, башҡорттар ырым доғаларында ҡот-рухына мөрәжәғәт итер булғандар. Бына шундай им-том ырымдары:

Эй һин, ҡотом, һин, ҡотом,
Саҡырғанда кил, ҡотом.
Хәстә төштө башыма,
Эйәһен табып бир, ҡотом.
Ҡотом әмере буйынса,
Ҡорҡот әмере буйынса
Ҡарымҡырт атай, ҡотоң бир,
Түлкә атай, ҡотоң бир,
Ҡотом ҡайҙа — мин шунда.

## 6. Ҡорҡот ата менән Түпәгүҙ

Маңлайында бер күҙе генә булған Түпәгүҙ (Депегеҙ), уғыҙ илен ташлап, юлбаҫар булып киткән. Ул мал көтөүҙәрен, юлдағы кешеләрҙе баҫа, үҙе йәшәгән мәмерйәгә алып ҡайтып, барыһын ашап тора. Илдә мал, кеше ҡалмай башлай. Күп батырҙар, шул иҫәптән иң гәйрәтле Ҡазан батыр ҙа уны еңә алмай. Аптырағас, һөйләшеп ҡарар өсөн уға Ҡорҡот атаны ебәрәләр. Ә Түпәгүҙ үҙенә ашар өсөн унан һәр көн алтмыш кеше талап итә. Ҡорҡот ата көскә күндереп, көнөнә ике кеше һәм биш йөҙ ҡуй биреп тороуға бара. Шулай итеп, теге ғүж Түпәгүҙ тағы күп кеше, ишле мал башына етә. Бер мәл Басат тигән батыр кеше ашаусы был ғүж менән алышырға уйлай. Ләкин беренсе алышта уҡ еңелеп, яуыҙдың ҡулына эләгә, мәмерйәһенә ябыла. Иртән ризыҡҡа китер тигән төндө, Түпәгүҙ йоҡлағас та, батыр осло беҙ ҡыҙҙырып, тегенең берҙән-бер күҙенә сәнсә, һуҡырайыуҙан, һыҙланыуҙан ярһыған Түпәгүҙ, дошманын тотоп ашау өсөн, мәмерйә ауыҙына баҫып, һарыҡтарын берәмләп ҡапшап ҡарай-ҡарай яланға сығарғанда, егет, һуйған бер һарыҡ тиреһенә төрөнөп, ғүж ауыҙынан ҡотола. Аҙаҡ Түпәгүҙҙең дәһшәтле ҡылысын ҡулына төшөрөп, шуның менән тегене сәнсеп үлтерә.

## КҮЛТӘГИНГӘ БАҒЫШЛАНҒАН КЕСЕ ЯҘМА

*(С. М. Малов күсермәһе буйынса бирелә[1])*

Текст



[1] Ҡар.: Малов С. Е. Памятники древнерусской письменности: Тексты и исследования. — М.; Л.: Изд-во АН СССР, 1951. — С. Руник яҙманың алфавиты менән латин, рус, башҡорт алфавиты сағыштырмаһы «Аңлатмалар»ҙа бирелә.

# 6. КҮЛТӘГИН

## Кесе яҙма

### 1

Мин Тәңрегә оҡшап ергә тыуғанмын,
Күк-Тәңренән булмыш Белгә ҡарғанмын[1].
Ил түренә ултырҙым мин, төркиҙәр,
Тулыһынса һеҙгә ҡағыла был һүҙҙәр:
Ишетегеҙ, ағай-эне, уландар,
Ырыу-ырыу берегеп ил булғандар;
Уң ҡанатым — шадым[2], бей һәм апалар[3],
Һул ҡанатым — тархан-түрә, ағалар.

### 2

Туғыҙ уғыҙ халҡы[4], уның бейҙәре,
Тыңлағыҙсы, һеҙгә минең һүҙҙәрем.
Әйткәнемде ҡолаҡҡа ныҡ алығыҙ,
Ишеткәнде күңелегеҙгә һалығыҙ.
Ал тарафта көн тыуыштың ерҙәре,
Уң тарафта көн уртаһы* илдәре,
Һырт тарафта көн батыштың ерҙәре,
Һәр тарафта көн батыштың ерҙәре,
Һул тарафта төн уртаһы* илдәре —
Барыһы ла улар миңә бағынды,
Ҡул аҫтымда бер ил булып нығынды.

### 3

Үтекәнде[5] ҡулда тотҡан олуғ хан
Азат булһа нәфсе тигән боҙоҡтан,
Илдә муллыҡ — шулай килә электән.
Ал тарафта Шантуң[6] ерен яуланым,
Оло һыуға еттем — кисеү тапманым.
Унда Туғыҙ ирсен[7] илен яуланым.

# КҮЛТӘГИНГӘ БАҒЫШЛАНҒАН ЯҘМАНЫҢ ЛАТИНСА ТРАНСКРИПЦИЯЛАНЫШЫНАН ӨЛГӨ[1]

*(С. М. Малов ҡулланған система)*

(1) 1 Täŋri täg täŋridä bolmyš
2 türk bilgä qaγan bu ödkä olurtym.
3 Sabymyn tükäti äsidgil

4 ulaju inijigünim oγlanγm
5 biriki oγušym budunum
6 birijä šad-apyt bäglär
7 jyraja tarqat bujuruq bäglär.

8 Otuz . . . . . . . . . . . .

(2) 9 Toquz oγuz bägläri buduny
10 bu sabymyn ädgüti äsid
11 qatyγdy tyŋla.

12 İlgärü kün toγsyq(q)a
13 birgärü kün ortusyŋaru
14 quryγaru kün batsyqyŋa
15 jyrγaru tün ortusyŋaru.

16 Anta içräki budun qop m(aŋa körür
17 anč)a budun qop itdim.
(3) 18 Ol amty añyγ joq türk qaγan
19 Ötükän jyš olursar iltä buŋ joq.

20 İlgärü Šantuŋ jazyqa tägi sülädim
21 taluïqa kičig tägmädim.
22 Birgärü Toquz ärsänkä tägi sülädim
23 Tüpütkä kičig tägmädim.

24 Quryγaru Jinčü üg(üz) käčä
(4) 25 Tämir Qapyγqa tägi sülädim.
26 Jyrγaru Jir Bajyrqu jiriŋä tägi sülädim.
27 Bunča jirkä tägi jorytdym.

28 Ötükän jyšda jig idi joq ärmis
29 İl tutsyq jir Ötükän jyš ärmiš.
30 Bu jirdä oluryp
31 Tabγač budun birlä tüzältim.

---

[1] Стеблева И. В. Поэзия тюрков: VI-VIII вв. — М.: Наука, 1965. — С.71.



Монголиялағы Орхон (Урхон) йылғаһының Кошо Цайдам тигән ярында табылған руник яҙма. Ул Күлтәгингә бағышланған.

## КҮЛТӘГИНГӘ БАҒЫШЛАНҒАН ЯҘМАНЫҢ РУС ТЕЛЕНӘ ТӘРЖЕМӘҺЕНӘН ӨЛГӨ[1]

(1) 1. Небоподобный, неборожденный,
2. тюркский мудрый[1] каган, я ныне сел [на царство].
3. Речь мою слушайте до конца:
4. сыновья и младшие родственники, следующие за мной,
5. народы и племена, союзные мне,
6. беки шад и апа, [стоящие] справа,
7. тарканы и приказные, [стоящие] слева,
8. Тридцать . . . . . . . . . . .
(2) 9. Народ и беки «тогуз огузов»,
10. эту речь мою слушайте хорошенько,
11. крепко [ей] внимайте!
12. Вперед, вплоть до солнечного восхода,
13. справа, вплоть до полудня,
14. назад, к солнечному закату,
15. слева, до полуночи —
16. в пределах этих все мне подвластны!
17. Столько народов — всех я устроил!
(3) 18. Тот тюркский каган без теперешней порчи
19. если сидит в Отюкенской черни, то и в государстве нет стеснений.
20. Вперед, до Шантунгской равнины я прошел с войском,
21. немного не дошел до моря.
22. Направо, вплоть до «девяти эрсенов» я прошел с войском,
23. немного не дошел до Тибета.
24. Назад, переправясь через реку Йенчу,
(4) 25. до Железных ворот я прошел с войском.
26. Налево, до страны Йир-Байырку я прошел с войском.
27. До стольких стран я водил войска!
28. В Отюкенской черни не было достойного владыки,
29. [но] Отюкенская чернь была страной, пригодной для созидания племенного союза.
30. В этой стране осев,
31. Я связал свою судьбу с народом табгач.
(5) 32. Золото, серебро, спирт (или: зерно), шелк
33. вот так без ограничения дающий
34. народ табгач имел речь сладкую,
35. драгоценности роскошные.
36. Прельщая сладкой речью, роскошными драгоценностями,
37. он столь сильно привлек [к себе] далекие народы.
38. Поселясь вплотную, они
39. научались там дурным знаниям.

---

[1] Стеблева И. В. Поэзия тюрков. — 107—108.

Тибетҡа еттем — һыртынан юл тапманым.
Яу башында килдем Ынйы-даръяға[9а],
Уны кисеп еттем Тимер ҡапҡаға.
Ер-Байырҡы[10] илен барып яуланым,
Ғәскәр менән мин ҡайҙарҙа булманым?!

4

Үтекәндең ялан-тауы, урманы
Бер ҡасан да һәйбәт түрә күрмәне.
Ә Үтекән тирә-йүндә бер ине,
Нәҡ ил тотоп йәшәй торған ер ине.
Ултырғас та мин хан булып шул илгә,
Юлыҡтыҡ беҙ табағас[11] тигән нәҫелгә.

5

Алтын-көмөш, ҡытат тауар, шараптар —
Барыһын да мул таратты табғастар.
Биргән саҡта хәбәрҙәре бик татлы,
Бүләк иткән әйберҙәре бик затлы.
Балдан татлы теле менән әүрәтеп,
Затлы-затлы бүләгенән арбатып,
Табғас алыҫ ҡәүемдәрҙе үҙенә
Яҡыныраҡ ылыҡтырҙы тиҙ генә.
Табағастарға яҡын күскән халыҡтар
Үҙләштерҙе насар ғәҙәт-ҡылыҡтар.

6

Илдең батыр һәм ҡеүәтле улдары,
Кемдә аҡыл, аң кимәле юғары —
Алданманы табғастарҙың теленә,
Тоғро ҡалды үҙҙәренең юлына.
Әгәр берәү яңылышһа аранан,
Һәр ырыуы төшөп ҡалды арбанан:
Ул табғасҡа тулыһынса йылышты,
Улар менән хатта ҡоҙа булышты.
Татлы һүҙҙең барыһына ышанып,
Затлы, аҫыл әйберҙәргә ымһынып,
Беҙ, төркиҙәр, табғастарға бирелдек,
Ә һуңынан харап булдыҡ — күп үлдек.

7

Төркиҙәрҙең бер өлөшө бүленеп,
Соғай[12] тарафтарын ташлап, күсенеп
Китәм тиһә төн яғына йәйләргә,
Яман телдәр ҡотҡо һалды уларға:
«Кемдәр бынан йыраҡ күсеп китәсәк —
Шуға табғас насар бүләк бирәсәк;
Ә кем дә кем яҡынараҡ ҡаласаҡ —
Шул бүләктең иң һәйбәтен аласаҡ».
Күп кешеләр, белмәйенсә аң-тоңдо,
Был һүҙҙәргә тулыһынса алданды:
Табғастарға улар яҡын һырынды.
Аҙаҡ күпләп һәләк булды, ҡырылды.

8

Халҡым! Әгәр барһаң табғас иленә —
Яҡынлайһың һәләкәттең сигенә.
Шуға күрә бүләк, яһаҡ артынан
Ебәр унда тик илсе һәм карауан.
Тик шул саҡта тыныс булыр ил-көнөң,
Булмаҫ һинең һис бер ҡайғың, бер ғәмең,
Үткәндән айырылмаһаң — уңырһың,
Һис тарҡалмаҫ илгә хужа булырһың.
Тормошоғоҙ булыр мәңге муллыҡта,
Төрки халҡы ғүмер итер туҡлыҡта.
Кисергәндә арыҡлығын, аслығын,
Аңламайһың һин туҡлыҡтың асылын[126].
Әгәр инде берҙе туйһа тамағың,
Хәтереңдән сыға һинең ас сағың.

9

Алдағыңды уйламаған өсөн дә,
Үҙ-үҙеңде аямаған өсөн дә,
Һин: «Халҡым!» — тип өҙөлөп торған ҡағанды
Һанламаның, тотманың ул ҡушҡанды.
Аҙып-туҙып илдән-илгә йөрөнөң,
Ер ҡыҙырып, хәлдән тайҙың, арының.
Ә халыҡтың илдә ҡалған төркөмө
Тарҡалышты, мөшкөл булды ил-көнө:
Тора-бара төштө шундай бөлгөнгә —
Тере килеш иҫәпләнде үлгәнгә.
Тәңре шәфҡәт бүлгән өсөн илемә,
Ҡот һәм ырыҫ биргән өсөн үҙемә,
Ҡаған булып ултырҙым ил түренә.

## 10

Тәүәккәлләп, ултырғас та ханлыҡҡа,
Юл күрһәттем юҡҡа сыҡҡан халыҡҡа.
Ярлы ине — көнкүрешен шәбәйттем,
Бөткән ерҙән халыҡ һанын күбәйттем.
Күҙҙәремдән көй табырмы берегеҙ?
Төрки халҡы, бейҙәр! Быны белегеҙ!
Әйтелгәнгә ҡолаҡ һалып йөрөгөҙ!
Мин был ташҡа яҙҙым һеҙҙең үткәнде —
Төрки халҡын туплап, ныҡ ил тотҡанды.
Яңылышып, бүлгеләнгән сағында
Теркәп ҡуйҙым. Ул да бында яҙылды.

## 11

Әйтә торған һүҙҙәремдең һәммәһен
Мәңгелеккә ташҡа соҡоп яҙҙым мин.
Уға ҡарап, ғибрәт алһын төркиҙәр,
Һәр дәүерҙең түрәләре һәм бейҙәр:
Тәхет ҡоло булған түрә кешеләр
Бик йыш ҡына хата юлға төшәләр.
Ошо ерҙә мәғрур һәйкәл ҡорорға,
Был мәңгелек ташҡа яҙыу ырырға,
Табғастарҙың оҫталарын алдырттым,
Күңелемдәге һүҙҙәремде яҙҙырттым.
Улар яҡшы башҡарҙылар үҙ эшен,
Боҙманылар һүҙҙәремдең айышын.

## 12

Сөнки табғас үҙенең иң һөнәрле
Иң булдыҡлы оҫталарын ебәрҙе.
Мин бойорҙом махсус ҡорам төҙөргә,
Эсен-тышын семәр менән биҙәргә.
Ә һуңынан ошо ташты ҡуйҙырттым,
Күңелдәге һүҙҙәремде яҙҙырттым.
Етһен улар яҡын-алыҫ яҡтарға,
Етһен хатта ун уҡ[13] менән таттарға.[14]
Был һәйкәлде барыһы ла күрһендәр,
Яҙылғандың эстәлеген белһендәр.

## 13

Мәңгелеккә таш ҡуйҙырттым. Әгәр ҙә
Юл сатында торһа ул таш хәҙер ҙә,
Нәҡ шул ерҙә — төрлө юлдар сатында
Ҡуйҙырттым мин был мәңгелек таш һынды.

Был мирасты күргән һайын, бел, туған:
Таш һәйкәлде ҡуйҙыртыусы — мин булам.
Ә яҙыуҙы ташҡа ырып ҡуйғаны —
Юлыҡтәгин, Белгә хандың ейәне.

## Оло яҙма

### 1

Яралғас та өҫтә Тәңре, аҫта Ер,
Ике арала бар ҡылынған — төркиҙер.
Тәүҙә ҡаған булды улар өҫтөнән
Минең апам Боман[1], аҙаҡ — Иҫтәмә[2].
Улар икәү төрки илен ныҡ тотто,
Үҙ дәүләтен ҡурсаланы, нығытты.

### 2

Дүрт тарафта көн итеүсе инсандар
Булды һәр саҡ төркиҙәргә дошмандар.
Дошмандарға ҡаршы хандар яу сапты,
Буйһондорҙо үҙенә дүрт тарафты;
Башы барҙың башын түбән эйҙерҙе,
Теҙе барҙың теҙен ергә тейҙерҙе.
Еттек алда беҙ Ҡаҙырҡан[3] иленә,
Артта Тимер ҡапҡа[4] — беҙҙең биләмә.

### 3

Шул ике сик араһына төркиҙе
Туплап, улар «Күк Төрк» тигән ил төҙҙө.
Ул ҡағандар булды аҡыл эйәһе,
Йөрәге ҡуш, аҫыл ине һөйәге,
Бойроҡто еткереүсе бейҙәре
Аҡыллы һәм батыр — хәс тә үҙҙәре.
Илдең бөтөн халҡы, бей һәм түрәләр
Ҡағандарға һәр саҡ тоғро инеләр.
Шуға улар бик оҙаҡ хан булдылар,
Илде тотоп, ғәҙел хөкөм ҡылдылар.
Ә һуңынан ул ҡағандар үлделәр.

### 4

Мәрхүмдәрҙе ерләшергә килделәр:
Көн тыуыштан — Бүкле[5] тигән ил-йорттан,
Йәнә табғас, тибет, рум, Өс ҡороҡан[6],
Йәнә ҡырҡыҙ[7], татабтар[8] һәм аварҙар,
Килде ҡытай[9], килде утыҙ татарҙар[10а].
Барыһы ла улар илап, һыҡтаны —
Хандарыбыҙ шулай бөйөк зат ине.

## 5

Уларҙан һуң ҡаған булып ултырҙы
Ҡустылары, ә һуңынан — улдары:
Ҡустыһына ағай һүҙе йоҡмағас,
Уландары ата юлын тотмағас,
Белекһеҙгә әүерелгәс ҡағандар,
Елекһеҙгә әүерелде ҡалғандар —
Бойороҡто еткереүсе бейҙәре
Белекһеҙ һәм ҡурҡаҡ — хәс тә үҙҙәре.

## 6

Ҡағанаттың бейҙәре һәм бар халыҡ
Һаҡламаған өсөн ханға тоғролоҡ;
Сихырланып мәкер тулы теленә,
Төшкән өсөн табғастарҙың һүҙенә;
Ағай-эне низағлашып, боларып,
Бейгә ҡаршы халыҡ янъял сығарып,
Дошманлашып бөткән өсөн үҙ-ара,
Ҡағанатта ҡаҡшай барҙы идара,
[Һәм төркиҙәрҙең береге, бисара].
Шул — бар илде бөлгөнлөккә төшөрҙө,
Ҡағандарҙы һәләкәткә килтерҙе.

## 7

Төрки халҡы үҙенең иң ғәйрәтле
Ир нәҫелен табғастарға ҡол итте,
Саф һәм һылыу ҡыҙ нәҫелен көң[10б] итте.
Бей-түрәләр төрк асылын онотто:
Исем-атын алмаштырҙы, бағынды,
Табғастарҙың ҡағанына буйһондо.

## 8

Табғастарға илле йыл көс түктеләр,
Ярты быуат тоғро хеҙмәт иттеләр,
Ә бит Төрки гөрләп торған ил ине:
Көн тыуышта Бүкле ерен яуланы,
Тимер Ҡапҡа ине артта биләме.
Инде килеп барыһын да юғалтты —
Табғастарға иркен һатты, ил һатты[11а].

## 9

Бер көн килеп, төрки халҡы бер булып
Былай тине: «Мин йәшәнем ил булып,
Ә ҡайҙа һуң хәҙер минең дәүләтем?
Мин кем өсөн илдәр, ерҙәр яуланым?
Мин ҡағанлы инем, ҡайҙа ҡағаным?
Кемгә хеҙмәт итеп, көсөм түгәмен?..»
Шул көндән һуң, танып ысын дошманды,
Табғастарға нәфрәт уты тоҡанды.

## 10

Дошманлашып һис эш ҡыра алмағас,
Хәлде үҙгәртергә өмөт ҡалмағас,
Төрки халҡы, төшөнөп үҙ хәленә,
Буйһондо шул йәнә табғас иленә.
Әммә табғас дәүләтенә көс түгеп,
Ҡол хәлендә көн итеүҙе ек күреп,
Улар әйтте: «Йәшәгәнсе хур булып,
Табғастарҙан ҡағылып та һуғылып,
Беҙ, төркиҙәр, барыбыҙ ҙа үләйек,
Үҙебеҙҙе ер йөҙөнән юяйыҡ».
Һәм төркиҙәр бөтөүгә йөҙ борҙолар,
Күрәләтә һәләкәткә барҙылар[116].

## 11

Ләкин өҫтә төркиҙәрҙең Тәңреһе,
Ә түбәндә изгеләрҙән изге Ер-Һыуы
«Төрки халҡы терек ҡалһын, — тинеләр, —
Элеккеләй, халыҡ булһын», — тинеләр.
Минең атам Илтерәште[12а] — ҡағанды,
Илбелгәне[12б] — минең ғәзиз анамды
Бөйөк Тәңре күтәрҙе бик юғары,
Минең атам яу башлаған сағында
Ун ете ир ине бары янында.

## 12

Илтерәштең ситтәрҙе дер һелкетеп,
Һуғыш башлап йөрөгәнен ишетеп,
Ҡала халҡы эркелеште тауҙарға,
Тауҙағылар ҡаршы төштө уларға.

Көлләһә лә тупланышҡас бер күскә,
Яугирҙәрҙең һаны етте етмешкә,
Атама көс биргән өсөн Күк-Тәңре,
Бүре кеүек алғыр булды ғәскәре,
Атайымдың дошмандары мең ине,
Тик һуғышта ҡуй-һарыҡҡа тиң ине.
Йөрөй торғас унда-бында яулашып,
Көн тыуышҡа, көн байышҡа яу асып;
Йыя торғас ир-егеттең иң шәбен,
Ете йөҙгә етте ғәскәр иҫәбе.

## 13

Ете йөҙгә тулғас уның ғәскәре,
Ил нығытыу булды барлыҡ хәстәре:
Илһеҙ ҡалған, ханһыҙ ҡалған халыҡты,
Табғасҡа көң һәм ҡол булған халыҡты —
Үҙ асылын, йөҙөн юйған халыҡты
Ата-бабам ғәҙәтенә күндерҙе,
Илгә төрки тәртиптәрен индерҙе.
Төләс, тарҙыш халҡын шуға өйрәтте,
Ябғы[13] һәм шад[14а] вазифаһын керетте.

## 14

Әгәр ундан атайыма туҡтауһыҙ
Дошмансылыҡ ҡылһа табғас аяуһыҙ,
Һул тарафтан һөжүм итте бик яман
Туғыҙ уғыҙ юлбашсыһы Баҙҡаған,
Ҡырғыҙ, ҡытай, ҡороҡай һәм татабы,
Утыҙ татар — дошмандың юҡ хисабы!

## 15

Минең атам дошманға ал бирмәҫкә,
Ҡырҡ ете рәт күтәрелде көрәшкә.
Ул егерме оло яуҙа ҡатнашты,
Ил-көн өсөн йән аямай һуғышты[14б].
Ярлыҡаған өсөн уны Күк-Тәңре,
Ҡыйратылды дошмандарҙың ғәскәре.
Иле барҙы илһеҙ, йортһоҙ ҡалдырҙы,
Ҡағанлыһын ҡағанынан яҙҙырҙы.
Дошманынан ныҡлы солох төҙҙөрҙө,
Башы барҙың башын түбән эйҙерҙе,
Теҙе барҙың теҙен ергә тейҙерҙе.

## 16

Иң үренә күтәрелгәс ҙур дандың,
Йәне күккә осто атам ҡағандың.
Атайымдың хөрмәтенә ҡуйылған
Балбалдарҙың араһында иң алдан
Баҙҡағанға бағышланған һын-таш торған.
Ғәзиз атам китеп барғас донъянан,
Ул тәхеткә минең апам ултырҙы.
Апам-ҡаған булған кешеләрҙе байытты,
Әҙ халыҡты ҡеүәтле һәм күп итте.

## 17

Апам ҡаған булған саҡта мин үҙем
Тарҙыш тигән ил өҫтөнән шад инем.
Апам ҡаған беҙҙе алып йөрөнө
Ғәскәр менән алға — Шантуң еренә.
Дошман хәнйәр сәнсмәһен, тип арҡаға,
Беҙ яу менән барҙыҡ Тимер Ҡапҡаға,
Кеймән шырлыҡтарын ярып[15а] үттек беҙ,
Ҡырғыҙ ерҙәренә барып еттек беҙ.

## 18

Беҙ барлығы егерме биш яу астыҡ,
Ун өс тапҡыр үлемесле һуғыштыҡ[15б].
Иле барҙы илһеҙ, йортһоҙ ҡалдырҙыҡ,
Ҡағанлыһын ҡағанынан яҙҙырҙыҡ.
Башы барҙың башын түбән эйҙерҙек,
Теҙе барҙың теҙен ергә тейҙерҙек.

## 19

Үҙ төркөбөҙ ине төргәш[16] ҡағаны,
Яҡшылыҡты тик ул аңлай алманы,
Ышанысты беҙҙең аҡлай алманы,
Һөҙөмтәлә — уны үлем ялманы.
Ундағы бар фармансы һәм бей-бетсә
Үлтерелде ҡағанының артынса.
Ун уҡ халҡы, алынып ҙур ҡыҫымға,
Дусар булды беҙҙең йәбер-золомға.
«Ата-бабам инселәгән ер һәм һыу
Тейеш түгел ҡалырға, — тип, — хужаһыҙ», —
Юлбарыҫ бей[17] аз[18] ҡәүемен тупланы
Һәм уларҙы бер ил итеп ныҡланы.

## 20

Уға бирҙек «каған» тигән исемде,
Кәләшлеккә бирҙек ҡонсо[19] һеңлемде.
Тик юлбарыҫ беҙҙең юлды тотманы,
Был донъяла шуға оҙаҡ торманы.
Ир-егете үҙебеҙгә ҡол булды,
Ә ҡыҙҙары, ҡатындары көң булды.
Шул саҡ ҡарар иттек: «Кеймән ерҙәре
Булһын һәр саҡ тәрбиәле, эйәле!»
Беҙ ҡырғыҙҙың киләсәген уйланыҡ:
Бик әҙ ине — ойошторҙоҡ, йопланыҡ,
Һәм тәртипсә бер ил итеп тупланыҡ.
Бының өсөн күп һуғыштыҡ үҙ-ара,
Тик һуңынан, нығынғас та илдәре,
Үҙҙәрендә күсте барлыҡ идара.

## 21

Беҙ уҡталдыҡ алға — үттек тау-урман,
Ятып ҡалды артта күкһел Ҡаҙырҡан.
Күп халыҡты яңы ергә күсерҙек,
Ил-йорттарын бер тәртипкә килтерҙек.
Көн тыуыштан көн батышҡа уҡталдыҡ,
Киң Тарманға[20] барып етеп, туҡталдыҡ.
Беҙ унда ла төркиҙәрҙе күсерҙек,
Ил төҙҙөк һәм ҡаты тәртип индерҙек.
Төрки халҡы йөҙҙө ул саҡ муллыҡта:
Үҙе элек ҡол булғандар ҡол тотто,
Үҙе элек көң булғандар көң тотто.
Төрки иле нығынды ул заманда,
Халыҡ, үрсеп, арта барҙы һаман да —
Хатта улы белмәҫ ине атаһын,
Ҡустылары белмәҫ ине ағаһын.

## 22

Бына шулай ине беҙҙең илебеҙ,
Шулай ине беҙҙең хакимлығыбыҙ!
Ишетегеҙ төрки, уғыҙ бейҙәре,
Төрки халҡы, ишет — һиңә һүҙҙәрем:
Һауанан Тәңребеҙ — Күк убылмаһа,
Аҫтыбыҙҙа Ер-һыуыбыҙ уйылмаһа,
Кем ҡыйрата алыр ине дәүләтте,
Кем ҡаҡшатыр ине һеҙҙең ҡеүәтте?

## 23

Төрки халҡы, үкен һәм ҡайт тәүбәгә!
Һис кем һине төшөрмәне бәләгә;
Үҙең генә ғәйепләһең барыһында
Һине бөйөк иткән ҡаған алдында.
Изгеләрҙән изге булған илеңә
Хыянат иттең — тап төшөрҙөң үҙеңә.
Ҡорал тотоп, әллә дошман килдеме,
Яу ҡырында тар-мар итеп, еңдеме?
Һеңгелә яу килеп әллә тулдымы,
Ҡырғын һалып, һине илдән әллә ҡыуҙымы?
Төрки халҡы! Юғалтып үҙ ҡәҙереңде,
Үҙең ташлап киттең изге ереңде.

## 24

Эй, Үтекән, ҡайҙа барманың,
Ҡай тарафҡа һин атыңды борманың?
Көн тыуыштың ерҙәрен дә байҡаның,
Көн батыштың илдәрен дә айҡаның.
Аҡ донъяла күргәндәрең мул булды,
Тик файҙаһы һинең өсөн шул булды:
Бар тарафта ҡаның аҡты һыу һымаҡ,
Һөйәккәйең өйөлөп ятты тау һымаҡ.
Һөлөк кеүек ир нәҫелең ҡол булды,
Еләк кеүек ҡыҙ нәҫелең көң булды,
Һин белекһеҙ һәм ҡәҙерһеҙ булғанға
Үлем иртә килде апам-ҡағанға.

## 25

Апам-ҡаған хәтеренә иң алда
Мин балбалын ҡуйҙым ҡырғыҙ ҡағандың,
Бөтмәһен тип ерҙә төрки милләте,
Һаҡланһын, тип уның даны, шөһрәте,
Атам ҡаған һәм әсәмде Күк-Тәңре
Буй етмәҫлек бейеклеккә күтәрҙе.
Һаҡланһын тип ерҙә төрки улдары,
Бөтмәһен тип исемдәре, дандары,
Мине Тәңре, яҡынайтып үҙенә,
Ҡаған итеп ултыртты ил түренә.

## 26

Ҡаған булып ултырманым һис кенә
Маллы халыҡ, хәлле халыҡ өҫтөнән.
Мин хан булған халыҡ эстән ас ине,
Ә тыш яҡтан ярым яланғас ине,
Хәле насар, хәле аяныс ине.
Мин был хаҡта Күлтәгингә һүҙ астым,
Уның менән кәңәшләштем, һөйләштем:
«Юғалмаһын, — тип, — көсө һәм шөһрәте
Ата-бабам ойошторған милләттең!»
Мәнфәғәте өсөн туған халҡымдың
Йоҡламаным ҡайсаҡ төнгө йоҡомдо,
Ҡул ҡаушырып ултырманым көндөҙөн,
Яҙмышын бер ситкә ҡуйып төркиҙең.

## 27

Яулағанды бирмәм тигән ант менән,
Ҡустым Күлтәгин һәм ике шад менән
Үлемесле хәлгә етеп тырыштыҡ,
Ҡағанатты киңәйтеүгә ирештек.
Хәтһеҙ ерҙәр яулап, ҡуштым илемә,
Күп халыҡты буйһондорҙом үҙемә.
Улар менән ләкин ут-һыу булманым,
Һыйышып йәшәү сәйәсәтен һайланым.
Ҡаған булып мин ултырған саҡтарҙа,
Таралышып төрлө-төрлө яҡтарға,
Ер ҡыҙырып, үлгән-бөлгән халыҡтар,
Ас-яланғас, атһыҙ ҡалған халыҡтар
Ҡайтып килеп, илдәренә һыйынды,
Йәнә беҙҙең эргәбеҙгә йыйылды.

## 28

Күтәрәм тип төркиҙәрҙе юғары,
Дан алһын, тип төркиҙәрҙең улдары,
Уғыҙҙарға ҡаршы һулға — төньяҡҡа,
Ҡытай менән татабыға — ал яҡҡа,
Табғастарға ҡаршы уңға — көньяҡҡа
Ун ике рәт ҙур яу менән ҡуҙғалдым,
Һәр берендә оло шөһрәт ҡаҙандым.

## 29

Ә унан һуң (ярлыҡаһын Тәңре, тим!)
Булған өсөн ҡотом менән бәхетем,

Бөләп бөткән халыҡты мин терелттем,
Яланғасты тунлы иттем — бөтәйттем,
Ярлыларҙың көнкүрешен шәбәйттем,
Әҙ хисаплы халыҡ ине — күбәйттем.
Тоғро булһа иле менән ҡағаны —
Тик изгелек булды унда ҡылғаным.

## 30

Дүрт тарафта көн итеүсе халыҡтар
Мәжбүр булды төҙөшөргә солохтар.
Дошмансылыҡ тойғолары баҫылды,
Барыһы ла улар миңә бағынды.
Шуныһы йәл: көнө-төнө ил, тигән,
Эшен-көсөн илгә биргән Күлтәгин
Бигерәк иртә кейҙе үлем күлдәген.

## 31

Атам ҡаған үлгән мәлдә Күлтәгин
Тултырғайны әле саҡ-саҡ етеһен.
Ун йәшенә еткән саҡта ул инде,
Ҡыуандырып Һомай төҫлө әсәмде,
Ҡабул итте батыр тигән исемде.
Ун алтыла ир ҡорона тулды ул,
Нығытам тип илен ҡаған апамдың,
Арттырам тип данын ата-бабамдың,
Бына ниндәй егетлектәр ҡылды ул:
Сәғди иленә[21] беҙ бергә яу саптыҡ,
Алты күсен тар-мар иттек, ҡаҡшаттыҡ.
Ә һуңынан табғастарҙан Уңтотоҡ[22],
Биш төмәнлек ғәскәр менән ҡурҡытып,
Беҙгә килде. Табғастарҙың сафтарын
Ҡаршы алдыҡ, уйнатып яу аттарын.

## 32

Был һуғыштың ҡыҙып барған сағында,
Минең ҡустым атһыҙ ғәскәр сафында
Айбарланып яу эсенә атлыҡты,
Әсирлеккә төшөрҙө Уңтотоҡто.
Ҡушып барлыҡ эйәрсенен, ҡоралын,
Яу кейемен, әйҙәп табғас сардарын,
Үҙебеҙгә аманатҡа килтерҙе —
Яу йолаһын урынына еткерҙе.

Беҙ ҡыйратҡанда Сиңен Сәсәне[23],
Күлтәгингә егерме бер йәш ине.
Ҡустым батыр һуғыштың иң башында
Татҡын Сура[24] биргән Аҡбуҙатында,
Ажарланып дошмандарға уҡталды,
Аҫтындағы аты үлде, ул ҡалды.

## 33

Икенсегә минең ҡустым Күлтәгин,
Ышбараның[25] менеп аҫау буртәһен,
Ажарланып дошмандарға уҡталды,
Аҫтындағы аты үлде, ул ҡалды.
Өсөнсөгә минең ҡустым Күлтәгин,
Менеп Йәгин Селек[26а] бейҙең юртағын,
Ажарланып дошмандарға уҡталды,
Аҫтындағы аты үлде, ул ҡалды.
Уның ҡорал-ярсыҡтарын, күлдәген,
Уҡ ямғыры теткеләне, Күлтәгин
Тимер күлдәк, баҡыр торҡа кейгәйне —
Һис теймәне уға уҡтың зыяны.[26б]

## 34

Күлтәгиндең батырлығын, бейҙәр, һеҙ
Һуғыштарҙа күп мәртәбә күрҙегеҙ!
Беҙ дошманды ул һуғышта ҡыйраттыҡ,
Биш төмәнлек ғәскәрҙәрен юҡ иттек.
Ә унан һуң Ер-Байырҡы яғынан
Олуғ Иркен[27] дошман булды бик яман.
Уны еңеп, Төргә-ярғын[28а] күлендә
Сиреүҙәрен тар-мар иттек бер көндә.
Олуғ Иркен, алып әҙ-мәҙ нәүкәрен,
Ташлап ҡасты ҡыйратылған ғәскәрен.

## 35

Ҡырғыҙҙарға яу асҡанда ҡыш көнө,
Күлтәгингә егерме алты йәш ине.
Һөңгө буйы тәрән көрттән юл ярып,
Көймән[28б] тигән тау-урманды артылып,
Ҡырғыҙ халҡын төндә барып таптыҡ беҙ,
Йоҡоһонда уны барып баҫтыҡ беҙ.
Ханы менән Сөңгәлә[29] тап булыштыҡ,
Шул урында уның менән һуғыштыҡ.

## 36

Минең ҡустым, Байырҡынан алынған,
Мундаһына яу эйәре һалынған
Һөттәй ап-аҡ айғырына* атланды,
Һәм, ажғырып, дошмандарға ташланды.
Бер яугирҙе атып йыҡты уҡ менән,
Ә икеһе әжәл тапты һөңгөнән.
Был алышта Ер-Байырҡы тоҡомло
Аты уның харап итеп ҡуйылды:
Бото һынып, Күк айғыры* йығылды.
Ул һуғышта ҡырғыҙҙарҙың ҡағаны
Үлтерелде. Иле беҙгә бағынды.

## 37

Шул уҡ йылды, үтеп Алтын[30] тайгаһын,
Аша сығып бөйөк Иртыш йылғаһын,
Баш бирмәгән төргәштәрҙе таптыҡ беҙ,
Уларҙы ла төндә барып баҫтыҡ беҙ.
Ғәскәр туплап, төргәштәрҙең ҡағаны
Булсы[31a] тигән ерҙә беҙҙе ҡаманы.
Улар беҙгә өйөрмәләй уралды,
Өҫтөбөҙгә ут-ялҡындай урғылды.
Беҙ һуғыштыҡ. Минең ҡустым шул саҡта,
Менеп Башғы ҡушаматлы буҙ атҡа,
Оран һалып, дошмандарға ташланды,
Аҫтындағы аты үлде, ул ҡалды.
Ауғас уның аҫтындағы айғыры,
Ҡотҡаралмай ҡалды ике яугирен...

## 38

Бынан һуң ул яуға кереп яңынан,
Фармансыһын тотто төргәш ханының;
Аз өлкәһе ғәскәренең тотоғон
Әсирлеккә алды йәнә Күлтәгин.
Төргәш ханын беҙ язалап үлтерҙек,
Илен яулап, ҡулыбыҙға төшөрҙөк.
Төргәш халҡы ил эсенә күсенде,
Беҙҙе танып, тулыһынса буйһондо.
Ул халыҡты беҙ тәртипкә килтерҙек,
Табар тигән яңы ергә күсерҙек.

## 39

Был һуғыштан ҡайтҡас тыуған яҡтарға,
Сәғди халҡын нығытырға, туплarға,
Яуға киттек — Ынйы һыуын кистек беҙ,
Тимер Ҡапҡа тигән ергә еттек беҙ.
Тап шул саҡта төргәш халҡы яңынан,
Ҡайтмайынса дошмансылыҡ уйынан,
Белеп беҙҙең йәһәт барып етмәҫте,
Киңрәстәргә[32] ҡаршы ҡаты яу асты.
Беҙҙең ғәскәр йонсоғайны сикһеҙ ныҡ:
Яугирҙәрҙең аты арыҡ, аҙыҡ юҡ.
Шуны ғына көтөп торған дошмандар,
Кисә генә дуҫыбыҙ, тигән ҡуштандар,
Беҙгә биргән вәғәҙәһен онотто —
Йә тегендә, йә бында баш ҡалҡытты.

## 40

Үкенеп, был уңһыҙ юлға сыҡҡанға,
Нәфрәтләнеп, дошман арттан һуҡҡанға,
Әҙ-мәҙ яугир биреп, юрап изгегә,
Күлтәгиндең атын борҙоҡ кирегә.
Аҙаҡ белдек: төргәштәргә ҡаршы ул
Ойошторған бер-бер артлы сабауыл.
Менеп Шалсы исемле* аҡ атына*,
Бәреп ингән дошмандарҙың сафына.
Тар-мар итеп, бихисабын үлтергән,
Ҡалғандарын әсирлеккә төшөргән.

## 41

Һуңынан ул ғәскәр туплап яңынан,
Ҡаршы сыҡҡан Ҡушы тотоҡ[33] яуына.
Яугиренең барын ҡырып һалған ул,
Мал-мөлкәтен үҙенә тартып алған ул.
... Күлтәгингә егерме ете йәш тулды.
Ҡарлуҡ[34] халҡы баш күтәрҙе ул йылды.
Үҙҙәре лә яусыл, ғорур булғанға,
Әүерелде улар беҙҙең дошманға.
Беҙ ҡарлуҡтар менән яуҙа осраштыҡ,
Тамаҡ, тигән изге тауҙа һуғыштыҡ.

## 42

Ҡарлуҡ менән һуғышҡанда ул тауҙа,
Күлтәгиндең йәше еткәс утыҙға,
Алып Шалсы тигән атын* менеп, саптырып,
Он-талҡандай итте дошман сафтарын.
Һөңгө менән сәнсте ике яугирҙе,
Ҡарлуҡтарҙы пыран-заран килтерҙе.
Беҙ уларҙың бик күбеһен үлтерҙек,
Ҡалғандарын бағындырып бөтөрҙөк.
Ә унан һуң аздар менән ыҙғыштыҡ,
Улар менән Ҡара күлдә һуғыштыҡ.
Бынан алда әҙ-мәҙ тыныс булғайны —
Һуңғы яуҙан һуң саҡ бер йыл уҙғайны,
Күлтәгингә утыҙ бер йәш тулғайны.

## 43

Шалсы тигән толпарына атланып,
Дошмандарға арыҫландай ташланып,
Ир Күлтәгин аҙ ғәскәрен бөшкөрҙө*,
Илтәбәрен[35] уның ҡулға төшөрҙө.
Аз халҡына килде тулы һәләкәт,
Өҫтәренән үтте, гүйә, ғәрәсәт.
Ҡаған апам төҙөгән ҙур дәүләттә
Көнсөллөк һәм ыҙғыш артҡас үләттәй,
Беҙ иҙгелдәр[36а] менән дошман булыштыҡ,
Улар менән аяуһыҙ ныҡ һуғыштыҡ.

## 44

Менеп Шалсы тигән ярһыу атына,
Бәреп инде ҡустым дошман сафына.
Был һуғышта үлде уның аҡ аты,
Күлтәгиндең, гүйә, һынды ҡанаты.
Изгелдәр ҙә ләкин шунда ҡыйралды,
Һәләк булды, ер йөҙөнән юйылды.
Туғыҙ уғыҙ (Ай, һөйләүе бик ауыр!)
Түгел ине беҙҙең өсөн ят бауыр.
Өҫтә Тәңре, аҫта Ер-һыу боларҙы —
Беҙгә дошман итте хатта уларҙы.
Туғыҙ уғыҙ халҡы менән айҡаштыҡ,
Йыл эсендә биш мәртәбә һуғыштыҡ.
Тәүҙә Туғы[36б] ҡалаһында осраштыҡ.
Менеп үҙенең аҡ толпары Аҙманды,
Ир Күлтәгин дошмандарға ташланды,

Һөңгө менән сәнсте алты яугирҙе,
Етенсеһен ҡылысынан үткәрҙе.

## 45

Менеп үҙенең аҡ толпары Аҙаманды,
Ир Күлтәгин дошмандарға ташланды.
Һөңгө менән сәнсте алты яугирҙе,
Етенсеһен ҡылысынан үткәрҙе.
Икенсегә әдиз[37] менән осраштыҡ
Ҡушлағаҡта[38]. Йәнә ҡаты һуғыштыҡ.
Аз тоҡомло көрән атҡа атланып,
Дошмандарға ҡойон кеүек ташланып,
Тупраҡ итте әдиздәрҙән күптәрҙе:
Бер яугирҙе һөңгөһөнә күтәрҙе,
Ә туғыҙын ҡыуа барып үлтерҙе.
Әдиз халҡы ул һуғышта ҡыйралды,
Ә илдәре һәләк булды, таралды.

## 46

Өсөнсө рәт Болонда[39] тап булыштыҡ
Уғыҙ менән ана шунда һуғыштыҡ.
Азман тигән атын менеп Күлтәгин
Күпсетте бик күп дошмандың талағын.
Был яуҙа ла тар-мар иттек дошманды,
Илен алдыҡ. Халҡы беҙгә буйһондо.
Дүртенсегә Сош[40] башында осраштыҡ,
Туғыҙ уғыҙ менән шунда һуғыштыҡ.

## 47

Был һуғышта, быуындары ҡалтырап,
Ҡыйратылған ағасҡыһын ҡалдырып,
Төңөләргә әҙер ине төркиҙәр,
Еңелергә әҙер ине төркиҙәр.
Тап шул саҡта күтәрелеп Күлтәгин,
Батырҙарса тиҙ хәл итте бөтәһен:
Дошмандарҙың сафын ҡыуып таратты,
Төркиҙәрҙә еңеүгә сәм уятты.
Дошман сафын тарҡатҡандың һуңында,
Түңгәтәгин[41] зыяраты янында
Түңгрә[42] тигән ырыуҙан ун яугирҙе
Беҙҙекеләр ҡамап алып үлтерҙе.
Беҙ Әзгәнте Ҡадаз[43] тигән урында
Бишенсе ҡат осраштыҡ яу ҡырында.

## 48

Аз тоҡомло көрән атҡа атланып,
Ир Күлтәгин яу эсенә ташланып,
Һөңгө менән сәнсте ике уғыҙҙы,
Дошман ҡанын ҡара ергә ағыҙҙы.
Ҡурҡыуҙың ул ни икәнен белмәне,
Тик дошмандың ҡалаһына инмәне.
Шул ҡаланың эргәһендә яңынан
Тик иҫтәлек ҡалды уғыҙ яуынан.
Мағы Ҡорған[44] тигән ерҙә ҡышланыҡ,
Ҡыш буйына унда ғәскәр туплаНыҡ.
Беҙ хәл йыйҙыҡ, ял иттек. Ә яҙына
Уғыҙҙарға ҡаршы сыҡтыҡ тағы ла.
Беҙ ҡуҙғалып киткәс, күп тә торманы —
Яуыз уғыҙ килеп баҫты урҙаны.

## 49

«Үкһеҙ» тигән аҡ атына атланып,
Баҫып килгән уғыҙҙарға ташланып,
Ир Күлтәгин улар сафын борҡотто,
Туғыҙ ирен ергә сәнсеп ырғытты,
Дошмандарҙан һаҡлап ҡалды төп йортто.
Ғәзиз әсәм, инәйҙәрем-үкелдәрем*,
Апайҙарым, килен, еңгә, һеңлеләрем!
Урҙала бит ул саҡта һәр кемегеҙ
Һәләкәттең тырнағында инегеҙ:
Әгәр ҙә һау ҡалдырһалар, көллөгөҙ
Дошмандарға көл буласаҡ инегеҙ;
Үлтерһәләр, ер өҫтөндә, юлдарҙа
Йыртҡыстарға ем буласаҡ инегеҙ.

## 50

Әгәр шунда Күлтәгиндәр булмаһа,
Ҡурҡыныҫҡа ҡаршы күкрәк ҡуймаһа,
Барығыҙҙы көтә ине һәләкәт,
Ләкин һеҙгә теймәй үтте ғәрәсәт.
Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы*, ҡустым Күлтәгин
Бигерәк иртә кейҙе үлем күлдәген.
Ҡайғы-хәсрәт баҫты минең үҙемде,
Һуҡырайтты, гүйә, күрер күҙемде,
Томаланы, гүйә, үткер зиһенде —
Ҡайғы-хәсрәт баҫты шулай үҙемде.
Ваҡыт, яҙмыш — барыһы ла Тәңренән,
Кеше тыуа, үлер өсөн киренән
(Тыуыр өсөн тағы, үлгән еренән).

## 51

Шул ҡәҙәрле ҡайғы баҫты йәнемде —
Сурлап аҡҡан йәш ҡапланы күҙемде,
Һыҡтау ҡатыш зар тетрәтте күңелде.
Шулай ҡат-ҡат ҡайғы баҫты йәнемде.
Ҡайғы-хәсрәт аралаш мин уйланым:
«Бына, тиҙҙән ике шадым, туғаным,
Ә һуңынан үҫеп килгән уланым,
Бейҙәрем һәм төрки халҡы тигәнем,
Ҡайғыларҙан минең кеүек бөгөлөр,
Күп илауҙан күҙе-ҡашы боҙолор».

## 52

Һыҡтаусылар килде ҡытай иленән,
Йәнә күрше татабылар еренән
Уҙар сәңүн[45] тигән данлы ир менән.
Алтын-көмөш, бүләк тейәп ханынан,
Эҫйә Лекәң[46а] килде табғас яғынан[46б].
Тибет ханы ебәрҙе үҙ бүленен[47].
Килде халыҡ донъяның күп иленән:
Көн батыштан — Сәғди тигән тарафтан,
Бирсәкәрҙән[48], Бохаранан — йыраҡтан
Һыҡтаусылар алып килде Ник Сиңен[49],
Йәнә Уғыл Тархан[50] атлы уҙаман.

## 53

Һыҡтаусылар булып ун уҡ халҡынан,
Һәм үҙемдең улым — төргәш ханынан
Килде Макрас[51] тигән мисәт һаҡлаусы,
Йәнә Уғыҙ Белгә[52] атлы тамғасы;
Ҡырғыҙҙарҙан килде Тарҙыш Инансы[53].
Табғастарҙан килде ҡорам төҙөүсе,
Семәр һалып, ташҡа ырып яҙыусы,
Ул — Саң Сиңен[54]; оҫталарҙың өлкәне,
Табғас ҡағанының үҙенең сыҡаны[55].

## 54

Күлтәгиндең йәне осто тегендә
Ҡуй йылының ун етенсе көнөндә.
Туғыҙынсы айҙа күмдек, иҫемдә,
Айҙың егерме етенсе көнөндә.

Уға арнап беҙ ҡорамды төҙҙөрҙөк,
Семәр менән биҙәп, ташын яҙҙырҙыҡ:
«Маймыл йылының етенсе айында,
Айҙың егерме етенсе көнөндә.
Кейгән саҡта мәңгелектең күлдәген,
Ҡырҡ етелә генә ине Күлтәгин».
Күлтәгиндең был ҡорамын төҙөргә,
Семәр менән биҙәп, ташын яҙырға
Оҫталарҙы күптәр алып килделәр.
Ошо эшкә күп көс һалды шул ҡәҙәр,
Айырыуса Тойғон атлы илтәбәр.

## 7. УҒЫҘ ХИКӘЙӘТЕ

Бик борон-борон Нух ғәләйәссәләм замандарында был пәйғәмбәр өс улына бик күп ерҙәр, илдәр бүлеп биргән, ти. Хам атлы улына Һиндостан тарафтары, Сам тигәненә Иран ерҙәре, Яфәс исемлеһенә Шимал яғы, Иҙел, Яйыҡ буйы ерҙәре тейгән, ти[1].

Яфәс шул тарафта ил-дәүләт ҡороп, балалар үҫтереп, ике йөҙ илле йыл ғүмер хакимлыҡ ҡылған, ти. Үлер сағында, һигеҙ улы араһынан иң аҡыллыһына, Төрөк[2] исем-атлыһына ышанып, ханлығын тапшырған. «Ошо Төрөк ағағыҙға хан тәхетен бирәм, уны олуғ хан итеп ололағыҙ вә ярҙам итегеҙ», — тигән.

Төрөк хандан бер нисә быуын хандар алышынып, әллә ата-уллы, әллә аға-энеле Аланса[3] менән Магул[4] атлы хандарҙан Ҡарахан, Күрхан, Күҙхан, Урхан[5] исемле уғландар ҡалған, ти. Шуларҙан Ҡарахан атлыһы иң шанлы олуғ хан булып танылған[5].

Күрхандан Башҡорт[6] исемле ул тыуған. Ҡарахандан Уғыҙ уғлан тыуған. Уғыҙ Ҡарахандың оло бисәһенән — олуғ ханбикәнән тыуған бала. Тимәк, Уғыҙ менән Башҡорт бер-береһенә ике туған була[7].

Уғыҙҙың тыумышына һәм нисек үҫмешенә бөтә хан туған-тыумасалары, бар ил-йорт халҡы хайран иткән. Үҙе ирәбә, үҙе ай-ҡояштан да былай матур, ти. Бала өс көн, өс төн әсәһенең имсәгенә ҡағылмаған. Һөт имеүҙән ваз кискән. Әсәһе һәр төндө төш күрә икән. Сабыйы: «Әсәкәйем, мосолман булһаңсы! Әгәр мосолман булмаһаң, үлһәм, үлермен, әммә имсәгеңде иммәмен», — ти. Әсә сабыйын йәлләп, Алланың барлығына вә берлегенә иман килтереп: «Әй, тәңрем, мине мосолман ҡылып, ошо баламды ризыҡлы вә бәхетле итһәңсе!» — тигәйне — бала, әсәһенең ыуыҙ һөтөн имеп, теремекләнде лә китте, ти[8].

Әсә улы хаҡына мосолман булғанын бер кемгә лә белгертмәй, әлбиттә. Ҡарахан заманында төркиҙәр әле мәжүси ине, боронғо тәңреботтарға табынды. Дин алмаштырғанын белһәләр, сабыйы менән бергә һәләк итеүҙәре ихтимал.

Улына бер йәш тулды. Шул йәшендә, Ғайса ғәләйәссәләм кеүек, теле асылып һөйләште лә алып китте. Иҫке йола буйынса, уға әле исем дә ҡушылмаған саҡ.

Йәше тулыу менән, атаһы Ҡарахан исем туйы үткәрергә бойороҡ бирҙе. Ат еткән ергә — ат, хат еткән ергә хат ебәреп, бик күп олуғ, мәртәбәле ҡунаҡтар саҡырҙы. Ҡарахан шул затлы ҡунаҡтары, туған-тыумасалары алдында, улын ҡулына алып:

— Бына уғлыма бер йәше тулды, ниндәй исем-ат бирергә тәкдим ҡылаһығыҙ? — тигәйне, сабый үҙе:

— Минең исемем — Уғыҙ, ҡеүәтем — туғыҙ! — тип әйтеп һалмаһынмы! Туйға килгәндәрҙең быға иҫе-аҡылы китеп торҙо, ти.

Бер сәсән был уңай һамаҡлап та ебәрҙе, ти:

Был сабыйҙы барсағыҙ ҙа, йә, күрҙеме,
Хаҡ телгә килгәнен ишеттеме?
«Атым — Уғыҙ, ҡеүәтем — туғыҙ» — тимәнеме!
Бынан хайран, бынан сайран булыр микән,
Олуғ зат-ҡөҙөрәтен аңлар өсөн,
Сабый көйө олуғлап һанлар өсөн?[9]

Шулай туйҙағылар бер һүҙҙән «Уғыҙ»[10] тип исемен ҡуштылар, киләсәгенә изгелектәр, дан-шөһрәттәр теләнеләр. Араларында бағымсылары, фалдар һалып, күрәҙәлек тә ҡылдылар, оҙон ғүмерле вә ҡеүәтле хан булып, илдәр, ерҙәр өҫтөнән хаким итер ҡаған зат икәнен юранылар, ти.

Уғыҙ-бала Хоҙайынан ҡөҙрәт алып, йыл үҫәһен ай үҫеп, егет булып та етте, ти. Атта елһә, ер һелкеткән, ҡылыс һелтәһә, киҫә сапҡан, уҡтан атһа, үтә сәпәгән, көрәштәрҙә ер күрмәгән алыптай батырға әйләнде, ти.

Өйләнер ваҡыты етә Уғыҙҙың, атаһы уға ҡустыһы Күҙхандың ҡыҙын алып бирә. Туй үткән ҡауышыр төндө Уғыҙ кәләшенә былай ти: «Донъяны бар иткән, әҙәмгә тән-йән биргән Алла бар. Минең шикелле һин уға иман килтерергә тейешһең. Шунһыҙ беҙ ир менән ҡатын түгел». Кәләше быға күнмәй. Шуға Уғыҙ уның менән ҡауышыуҙан баш тарта. Күпмелер ғүмер айырым-айырым йоҡлап йөрөйҙәр. Быны хеҙмәтселәре күреп-белеп тора. Ханға еткерәләр был хаҡта. Ҡарахан быны белгәс, мөхәббәттәре юҡ икән, тип, Уғыҙҙы икенсе ҡустыһы Күрхандың ҡыҙына йәрәштерә. Бынһы ла булаһы иренең шартын ҡабул итмәгәс, Уғыҙ уға ла яҡын бармай.

Ҡарахан, улының йәрәшкән ике ҡыҙға ла күңеле ятмауын күргәс, өсөнсө ҡустыһы Урхандың ҡыҙына яусылай. Уғыҙ, быны белгәс, туй ҡорғанға саҡлы был ҡыҙҙы үҙе күреп һөйләшергә була. Уны һыу буйында кәнизәк ҡыҙҙары янында осрата.

— Атайым, беҙҙе өйләндерер өсөн, һиңә яусы ебәрергә йыйына. Әгәр һин минең шартыма күнһәң генә, һиңә өйләнәм, — ти ул туранан-тура.

— Шартың ни һуң? — тип һорай ҡыҙ, ҡыҙыҡһынып.

— Шартым шул: мин — мосолманмын, һинең дә, иман килтереп, мосолман булыуыңды теләйем, — ти егет.

— Минең апайҙарымды ҡатының итергә теләмәүеңдең сәбәбе шунда инеме әллә?

— Эйе, мөхәббәттәрҙән юғары иманда, Алламда ине, — ти егет.

— Мөхәббәт — ғүмерлек, Алла — мәңгелек, тигәндәрен ишеткәнем бар. Ир менән — ҡатын бер бөтөн, улар — Алла ҡоло, — ти был аҡыл-

ны кыҙ. — Булаһы ирем ниндәй иманда, мин шул иманда. Артабан шулай тип һамаҡланы, ти:

— Мин һинең яртың булайым,
Мин һине яратыр булайым,
Ни әйтһәң, тыңлар булайым,
Әйткәнеңде йыҡмаҫ булайым;
Ҡолағыңда алҡаң булайым,
Тамырыңда ал ҡан булайым,
Кәрәк саҡта ҡалҡан булайым,
Ашың бөтһә, талҡан булайым;
Сәстәреңә биҙәк булайым,
Иҙеүеңдә һиҙәп булайым,
Күҙҙәреңә керпек булайым,
Ил эсендә күркең булайым;
Һин юғында бер кем булмайым,
Һин булмаһаң, бер көн тормайым,
Һин — ҡояшым, һин — айым,
Ҡара, үҙеңдең яйың.

Уғыҙ уға ҡаршы былай тип әйтте, ти:

— Һин минең яртым бул,
Һин мине яратыр бул,
Әйткән һүҙем тыңлар бул,
Береһен дә йыҡмаҫ бул;
Ҡолағымда алҡам бул,
Тамырымда ал ҡан бул,
Кәрәк саҡта ҡалҡан бул,
Ашым бөтһә, талҡан бул;
Сәсем биҙәр биҙәк бул,
Иҙеүемдә һиҙәп бул,
Күҙҙәремдә керпек бул,
Ил эсендә күркем бул,
Һинән башҡа алмам бүтәнде,
Эҙләгәнем һинһең күптәнге...

Ирем — ҡолаҡ икән, мин — уның алҡаһы, ирем — күҙ икән, мин — уның керпеге.

Шулай уртаҡ тел табалар, күңелдәре, имандары менән бер булалар был юлы егет менән ҡыҙ. Шаулатып туй үткәрәләр бөтә илдәре менән. Ысын күңелдән һөйөшөп, ҡыуанышып донъя көтөп алып китәләр. Улы менән ҡыҙҙарынан бигерәк аталары Ҡарахан менән Урхан ҡыуана, ҡоҙа булыштыҡ, берҙәмбеҙ, ти.

Ҡарахан улының, өсөнсө ҡат өйләнеүендә генә, ҡауышып, татыу йәшәп китеүенең серен белмәк булып, үҙ ҡатынынан һорай ҡуя:

— Уғыҙҙың ике кәләшен дә кире ҡағып, өсөнсөһөндә генә йәрәшеп, татыу йәшәп китеүҙәренең сәбәбе ниҙә икән? — ти.

— Һин, ханым-солтаным, үҙең яусылатҡан килендәреңдән һораш, — ти ханбикә.

Ҡунаҡҡа саҡырған булып, башта ике оло килененән һораша Ҡарахан.

— Килендәрем, һеҙгә ҡарап-ҡарап торам да, берегеҙҙән-берегеҙ матур, үҙегеҙ таҙа, үҙегеҙ егәрле. Нишләп улым һеҙҙе ҡабул итмәне икән, тип һаман баш ватам, сере, хикмәте ниҙә? — ти хан, тыу килендәрен ҡымыҙ менән һыйлай-һыйлай.

Ике көндәш килен өсөнсө йәш көндәштәренең ғаиләһен боҙорға теләп, үстәрен алырҙай булып ханға серҙәрен түгә:

— Улығыҙ мосолман бит. Беҙҙе лә мосолман булмаға иман килтертергә теләне. Беҙ күнмәнек. Шуға беҙҙе ҡатыны итеүҙән баш тартты, — тиҙәр бер ауыҙҙан.

— Уны, боронғо динебеҙгә кире ҡайтмаһа, үлтерергә кәрәк, олуғ ханыбыҙ, — тип инәлә былар. — Юғиһә, ханлығығыҙ тарҡалыуы бар. Беҙ әйтмәне, ишәтмәне тимәгеҙ, хан-ата.

Быңдай һүҙҙәрҙән шомланып, йөҙҙәре ҡарайып китә Ҡарахандың. Аҙаҡ йәш киленен саҡырып һөйләшеп ҡарай, уныһы ирен ҡурсалай. Ә Уғыҙҙы дүндерерлекме ни[11].

Аптырап-алйып, Ҡарахан бер саҡ, Уғыҙ һунарға киткәнендә, яҡын ярандарын, бейҙәрен янына йыйып ала ла, хәлде аңлатып, Уғыҙҙы үлтермәгә мәкер ҡоралар. Был яман хәбәр, оҙон ҡолаҡтар аша йәш киленгә килеп етеп, ул Уғыҙға сапҡын елдертә тиҙерәк.

Уғыҙ, был хәбәрҙе ишетеү менән, һунарын ташлап, яу ҡайтармаға әҙерләнә, ат саптырып, яҡын туғандарын, ышаныслы ҡорҙаштарын да үҙ тирәһенә йыя. Шулай Ҡарахан ханлығы бер заман ике ярыға айырыла: Ҡарахан яҡлыларға, Уғыҙ батыр яҡлыларға. Уғыҙ үҙ тирәһенә ойошҡандарҙы *уйғырҙар*[12] тип атай. Уйғыр иҫке төрки телендә *уйыгыр (ойогор)* мәғәнәһендә. Беҙҙә әле лә, һөт ойоно, тиҙәр. Йәғни ойоно, һөттән беректе. Иманға, сәждәгә ойоно ла, тиҙәр. Был да берләшеү, бер булыу мәғәнәһендә.

Уғыҙ батыр үҙ тирәһенә тупланған нәүкәрҙәре, кескәй ғәскәре менән Ҡарахандың ҙур ғәскәрен ҡыйратып тарҡата. Байтаҡ ерҙәр, илдәр яулап ала.

Тыныс халыҡтар, уның ҡылысынан ҡотолоп ҡалғандар. Уғыҙға баш һалдылар. Улар әйттеләр:

— Беҙ һинең аҫыл нәҫелеңдән бит, бер тоҡомдан. Ниңә, бер-беребеҙҙе юҡ итер өсөн, бикәргә ҡаҫ түкмәккә, ҡан ҡоймаҡҡа?

Уғыҙ әйтте:

— Әгәр һеҙ Аллаға инанһағыҙ, уның барлығын һәм берлеген таныһағыҙ, һәр беребеҙ иҫән-һау, илебеҙ аман булыр. Һеҙгә йәшәргә хужа итеп Төркөстан ерҙәрен бирермен!

Быны ҡабул иткәндәр Төркөстан ерендә нығынды, ҡабул итмәгәндәре әллә ҡайҙарға ҡарлы тау арттарына, Ҡараҡором тарафтарына ҡыуылды.

Күпмелер яуҙарҙан һуң донъялар тынысланды. Уғыҙ еңеү шәрәфенә ҙур байрам ҡорҙо. Шунда Уғыҙ батырҙы хан итеп аҡ кейеҙҙә күтәрҙеләр.

Ошо хан туйы алдынан дошмандарын ҡыйратып ташлаған бер ырыу бик күп улъя яулап алғайны. Уны тейәп һөйрәтеп килтерергә ат-дөйәләре етешмәгәндән былар ҡаңлы[13] (тәгәрмәсле арба) яһанылар.

Быға тиклем тәгәрмәс, арба тигән нәмәләр юҡ ине донъяла. Улар шулай арба менән тәгәрмәсте беренсе булып уйлап таптылар, яһап алдылар. Бөтә улъя әйберҙәрен шул арбаларға тейәп, Уғыҙханға алып килделәр. Уғыҙхан бынан ары уларҙы *ҡаңлылар*[14] *(арбалылар)* тип атаны. Ҡаңлылар нәҫел-ырыуы ана шуларҙан башланып киткән.

Уғыҙхан ҙур ил-виләйәттәргә хан булып алғас, Хытай[15], Һиндостан кеүек йыраҡ һәм бик бай илдәрҙе яулап алмаға, оло яуға сыға. Бик күп йылдар һуғышып, Хытай, Һиндостан, Масин[16] илдәренең байтаҡ өлөшөн үҙенә беркетә. Шунан ҙур улъя байлыҡтар, мал-тыуарҙар менән Төркөстан иленә әйләнеп ҡайта.

Ҡайтып бер-ике йыл ял итеп, байлығының рәхәтен күреп, хандыҡ шөһрәтенә ҡыҙынып ятамы-юҡмы, — батыр йөрәге нисек тынып торһон, — ғәскәре менән йәнә төньяҡ биләмәләренә юллана. Урал буйҙарына, Кәрел, Башҡорт[17] тарафтарына, атаһы Ҡарахандың төпләнгән, йәйләгән ерҙәренә килеп етә[18]. Оло Бағыр тигән ҡәлғәне баҫып ала, был тарафҡа хужа булырға өлгөргән Ҡарашит яғы тигән берәүҙең яуын туҙҙыра. Атаһының биләмәһендәге ырыуҙаштарына мәрхәмәтлек күрһәтә. Уны күптәр үҙ ханыбыҙ, Уғыҙ ағабыҙ тип ҡаршылай.

Башҡорттарҙың борон Уғыҙ ханды Үҙхан (үҙ ханыбыҙ) тип йөрөтөүҙәре шул замандан ҡалған[19].

Шул замандарҙа, Уғыҙхан яу сапҡанда, уның тирәләй туҡһан мең йортло ҡәүем тупланған икән, уларҙы аҙаҡ Туғыҙ уғыҙ тип исемләгәндәр[20].

Борон әллә нисә йылдар буйы һуҙылыр оло оҙон яуҙарға яугирҙәр бөтә ғаиләләрен, мал-мөлкәтен эйәртеп яу булып, донъя ҡаплап бергә күсеп йөрөр булғандар. Көнитештәре анау ҡаңлылар яһаған көймәле арба өҫтәрендә, туҡталғанда, тирмә эстәрендә үткән.

Бер оҙон яу юлында Уғыҙхан яугирҙәренә ғаиләләре, бала-сағалары, ҡарт-ҡоролары менән бер урында тупланып йәшәп ҡалырға бойорған. Ғәскәр юлға үҙе генә сығып киткән. Арала Ҡараһөлөк тигән бер яугир ханынан йәшереп берҙән-бер яңғыҙ ҡарт атаһын үҙе менән алған. Уны ҙур һандыҡ эсенә бикләп, хан, нәүкәр башлыҡтары күҙенән һаҡлап, үҙ йөгөндә йөрөткән.

Бер миҙгел Башҡорт иленән, йылға-күлгә, емеш-фәләнгә бай Урал буйҙарынан алыҫлашҡас, сүллек ерҙәргә еткәндәр. Ғәскәр һыуһыҙлыҡтан сарсаған, ҡыҙыуҙан әлһерәгән, тамам йонсоп-алйып бөткән. Ҡараһөлөктөң атаһы шундай кәңәш биргән: «Өс-дүрт һыйырҙы бергә бәйләгеҙ ҙә сарсауҙан тамам лапшып йығылғансы ҡыуығыҙ. Шунан үҙҙәрен бәйҙән ысҡындырып үҙ иректәренә ебәрегеҙ. Шул һыйырҙар ҡайһы урынға барып тояҡтары менән ерҙе сапсый башлай, шул урынды ҡаҙығыҙ», — тигән. Шулай итһәләр, һыйырҙар сапсыған урынды ҡаҙып һыу тапҡандар, ғәскәрҙең, ҡыуған малдарының сарсауын баҫҡандар[21].

Иҙел йылғаһының Ҡаракүл тигән ерҙәренә барып юлыҡһалар, ҡара яу килә, бөтә халыҡты ҡырып бөтөрә икән, тигән имеш-мимештәргә ышанып, ҡасып киткән урындағы халыҡ.

Ғәскәр Иҙел яры буйында ял итеп ятһа, һыу төбөндә алтын-көмөштәр ялтырап ятҡанын күрәләр. Ҡыйыуҙар сумып бер итеп эҙләп ҡарай, бер ни тапмай кире сыға тора. Сыҡҡас, һыу тонғас, тағы

ҡараһалар, алтын-көмөш алдарында шул урындарында һаман ялтырап ята. Аптырайҙар бығa — ни хикмәт был. Әллә күҙ быуылыумы? Әлеге Ҡараһөлөк атаһынан килеп һорай:

— Ни ғиллә был? — тип.

— Яр башында шул тапҡырҙа берәй бейек ағас юҡмы? — тип һорай атаһы.

— Бар бер оло ҡарт ағас, — ти улы.

— Улайһа, ул ағастың ботаҡтарына япраҡ араһына алтын-көмөш йәшерелгәндер, шуның ҡояшҡа сағылышы ялтырайҙыр һыуҙа, — тигән атаһы.

Ҡараһөлөк атаһының әйткәне буйынса ағасҡа менеп эҙләһә, әллә бер батман алтын-көмөш йыйып төшкән. Уны илтеп Уғыҙханға бүләк иткән. Бының өсөн хан үҙе Ҡараһөлөккә бер ҡиммәтле бүләк һайлаған, йөҙбашы итеп тәғәйенләгән[22].

Шунан, шимал тарафындағы Ҡыл-Бараҡ тигән бер дәүләтте яуларға ниәтләнеп тә, уны ҡыйрата алмағандар. Үҙҙәре ул ҡараңғы яҡҡа ары бармаҫҡа булып, йәнәһе, һырт биргән.

Аҙаҡ ҙур ике йылға аралығында туҡталып, ғәскәрен ялға таратҡан. Уғыҙхан үҙе яулап алған икһеҙ-сикһеҙ ил-ерҙәрен тәртипкә килтереү, хакимлыҡ итеү менән шөғөлләнгән. Яңы ғәскәр төҙөгән, ҡорал-ҡорамалдарын яңыртҡан, илен ҡеүәтләндергән.

Уғыҙхандың оло бисәһенән тыуған дүрт улы үҫеп еткән. Улар яу башлыҡтары булырлыҡ ҡул араһына ингән, яуға таярланған.

Үткән бер яу осоронда юлда бер ауырлы ҡатындан ир бала тыуған. Ире — Уғыҙхандың данлыҡлы бер батыры — уҙған яуҙа шаһит булған. Баланы орош барған саҡта әсәһе йәшеренеп бер йыуан ағас ҡыуышы эсендә тапҡан. Һуғыш туҡтағас, сабыйҙы Уғыҙханға килтергәндәр, ҡайҙа тыуыуын һөйләгәндәр. Ағас ҡыуышында тыуғаны өсөн Уғыҙхан уға *Ҡыпсаҡ* тип исем ҡушҡан. Ҡыуыш ағас төркисә борон заман ҡыпсаҡ тип аталмыш, имеш. Уғыҙхан үҙ тәрбиәһенә алған Ҡыпсаҡ бала ҙур, батыр ир-егет булып үҫеп киткән. Яу батырлыҡтары өсөн хан уға ил-ерҙәр бүлеп биргән, хан итеп иғлан ҡылған. Хәҙерге ҡыпсаҡ ырыуы халыҡтары шунан таралған[23].

Олуғ хан оҙаҡ тыныс йәшәп сыҙамаған, теге саҡта еңә алмай кире боролған Ҡыл-Бараҡ дәүләтен барып туҙҙырған. Ары үтеп, йүнләп көн булмай төндән торор Ҡараңғылыҡ иленә инергә ниәтләгән.

Уғыҙхан шулай ғәскәре менән шимал тарафына төпкә киткән, тауҙар, урмандар араһына инеп сумған. Юлһыҙ-ниһеҙ ҡараңғылыҡ эсендә һәрмәнә-тоҫмаллай бара торғас, әллә тау тишегенә, әллә тарлауыҡ ҡыҫығына килеп кипсәлгәндәр. Үтмәгә бер тар мәмерйә тишеге лә ары күҙгә төртһәң күренмәҫ дөм ҡараңғылыҡ, ти.

Ғәскәр аҙашмай боролоп сығыр, туңып һәләк булып ҡалмаҫ тимә. Нишләргә? Тәүәккәлләргәме, юҡмы?

Иҫтәренә төшә бит Ҡараһөлөктөң атаһы — зирәк бер ҡарт. Ат саптырып унан кәңәш һорайҙар. Ҡарт әйтә: «Ҡыуып барған мал-тыуарығыҙҙан ҡолонло дүрт бейә, ун ҡолонло ун ишәк инәһе һайлап алығыҙ, шуларға ир-ат атландырығыҙ. Тау тишегенә инеп китерҙән алда был дүрт бейә менән ун ишәк балаһын бейәләр, инә ишәктәр алдында тау тишеге ауыҙында бағанағамы-нәмәгә бәйләп ҡуйығыҙ.

Ҡараңғылыҡ иленә сәфәр ҡылып кире әйләнһәгеҙ, ҡайтыр юлда ошо ыйә менән ишәктәр үҙҙәре табыр, һеҙ уларға эйәреп килерһегеҙ һәм тау тишегенән ҡолондар һәм ишәк балалары бәйләнгән урынығыҙға кире килеп сығырһығыҙ. Бейә, инә ишәк һиҙгер хайуан, балалары ыына юлдан яҙлыҡмаҫ», — ти.

Шул кәңәш менән Уғыҙхан ғәскәрен эйәртеп тау тишегенән Ҡараңғылыҡ иленә инеп китә. Дүрт тәүлек, дүрт ҡараңғы көн, дөм ҡараңғы төн эсендә һәрмәнекләп баралар, баралар, ҡайҙа барғандарын белмәйҙәр: әллә үлемгә, әллә ҡалымға. Етмәһә, яугирҙәр яҙа баҫып төпкә тау соҡорҙарына, упҡындарға батып үлә, осло таштарға барып бәрелә, битен йырта, күҙен сығара. Ҡараңғылыҡ иле түгел, әйтерһең, төпһеҙ мәмерйә, дөмәй йәһәннәмдең һалҡынлыҡ ҡотобо. Өҫтәүенә, йөрәктәргә шом һалып, йә уңдан, йә һулдан иләмһеҙ шомло өндәр ишетелә: «Кем дә кем был дөм ҡараңғыла дөмөкмәй кире әйләнеп иҫән сыға ала, юлда осраған нәмәләргә теймәһен, башы ике булмаһа».

Тағы шулай дүрт тәүлек хәтәр юл үтеп, әлеге бейә һәм ишәктәргә эйәреп, ғәскәр яртылаш ҡына иҫән ҡалып, эштән сығып, арып-йонсоп инеп киткән тау тишеге ауыҙына әйләнеп киләләр. Үҙҙәренә яҡтыла ҡарауы имәнес: биттәре, ҡулдары балсыҡҡа ҡатҡан, өҫтәре лыҡа еүеш, батҡаҡ. Күҙҙәре генә ялтырап күренә — өрәктәрме ни. Бер унлап ҡына батырыраҡ яугир ҡулында таштар тотҡанын абайлайҙар. Яҡтыла ипләберәк ҡараһалар — барыһы ла алтын да аҫыл таштар имеш. Хәҙер ниңә тоҡтар тултырып алмағандарына үкенмәһендәрме[24].

Уғыҙхан ғәскәрен тынысландырып әйтте ти: «Үкенмәгеҙ. Ҡараңғылыҡ иле — хәҙер беҙҙеке. Уға тәү аяҡ баҫҡандар беҙ — беҙ хужа. Ул хазиналарға яйы һәм урыны табылыр. Хәҙергә сер булып ҡалһын. Сер тоталмаҫ башы менән хушлашыр».

Аҙаҡ ошо ғәскәре, хазинаны күргән нәүкәрҙәре Ҡыл-Бараҡ, Ҡаф тауы тарафтарындағы һуғыштарҙа барыһы ла ҡырылып бөттө, ти. Хандың үҙенән, бер-ике иң ышаныслы яу башлыҡтарынан башҡа сер белер әҙәм ҡалмаған.

Уғыҙхан үҙе былардан һуң өс йыл тыныс йәшәгән, йәнә илен тын алдырған, яңы тағы ауырыраҡ һәм оҙонораҡ яуҙарға әҙерләгән.

Уғыҙхандың бөтә донъяға хужа булыр йыһангирлыҡ ҡара яуҙары шулай әҙерләнгән һәм башланып киткән. Һанһыҙ ҡоралды ғәскәре менән Дәрбәнт янында Тимер ҡапҡа ҡәлғәләрен емертеп Кавказ тауҙары аръяғына үтеп ингән, Шам, Анадолу, Юнан, Рум илдәрен, Мысыр ерҙәрен, мәғриптең Франк тарафтарын яулап алған. Шулай ысын Йыһангирға әйләнгән. Ошоноң өсөн илле йыл яулашырға кәрәк булған. Былар үҙҙәре — оло тарих[25].

Йыһангир Уғыҙ ҡағандың ошо оло-оло ил-ерҙәрҙең олуғтарҙан олуғы, ғәскәр башлыҡтары — сәрғәскәр улдары ҡайһыларының хандары ла булып китер. Бына ул Уғыҙҙың шөһрәтле улдары (иң олоһонан кесеһенә таба): Көнхан, Айхан, Йондоҙхан, Күкхан, Таухан, Диңгеҙхан. Уғыҙхандың ейәндәре: һәр алты улынан дүртәр ул, йәмғеһе егерме дүрт ейән. Йәше, заманы еткәс, ул ейәндәре үҙҙәре хандар, атаҡлы шәхестәр[26].

Уғыҙ ҡаған улдарына ла, ейәндәренә лә ил-ерҙәргә хужа итеп тәғәйен тамғалар, ағастар, ҡоштар, орандар өләшеп бирә. Боронғо башҡорттар ҙа Уғыҙхан ҡулынан бында изге тамға, ағас, ҡош, оранға эйә була[27].

Бик олоғайған, ярты донъяға хужа булған миҙгелендә Уғыҙ ҡаған бөтә улдарын, ейәндәрен йыйып, сәрғәскәрҙәр, аҫыл заттар, төрлө аҡһөйәктәрҙе саҡырып, ғәләмәт ҙур йыйын, ғәжәйеп байрам ҡорған. Бының өсөн зиннәтле ҙур һарай төҙөткән. Тәҙрә, ишек баштарын, түбә-көмбәҙҙәрен алтын-көмөштәргә ялатып, аҫыл таштар менән биҙәткән. Бер диуарына алтынға манып шундай шиғыр яҙҙырған:

Был бинаны ҡорҙорҙо, гүйә,
алтындан шаһияр,
Көмбәҙе күктекенән булмаһа
кәм һис әгәр,
Туғыҙ мең ҡуй, туғыҙ йөҙ
йылҡы һуйҙырҙы,
Аҫыл таштарҙан хауз ҡорҙорҙо,
Шуның туғыҙына хәмер, туҡһанына
ҡымыҙ ҡойҙорҙо,
Барса нөгәрҙәрен саҡырып килтерҙе.
Алты уғлына күп нәсихәттәр
әйтеп еткерҙе,
Бәктәрен өйрәтеп йорттар, шәһәрҙәр,
илдәр күндерҙе.
Уғыҙ ҡылды ул туйҙа һәр кемгә
хәйер-хөрмәт,
Алты уғылына бүләктәр ҡылды
ҡиммәт-ҡиммәт.
Быларға күрһәтеп ерҙә мәрҙәнәлек,
Ата менән күп төрлө фәрзәнәлек*,
Атаға улар хуш ҡылдылар ярлыҡ,
Орош көндәрендә барсаһы
бергә барлыҡ.

Унан һуң барса нәүкәрҙәренең яуҙағы хеҙмәттәренә лайыҡ шәһәрҙәр, сәрхәдтәр, ауылдар, бүтән бүләктәр биргән[28].

Унан Уғыҙхан һунар ваҡытында тапҡан өс алтын йәйә менән өс көмөш уҡты алып, өсәр киҫәккә һындырып, өс алтын йәйә киҫәген өс оло улына, өс көмөш уҡ киҫәген өс кесе улына өләшеп тотторған. Һындырып боҙолған өс йәйә киҫәген алғандарын — боҙоҡ, ә өс уҡ киҫәге алғандарын өс уҡ тип атаған. Алтын йәйә өлөшөн алғандар ғәскәренең уң ҡанатын, көмөш уҡ өлөшө тейгәндәр һул ҡанатын тәшкил иткән.

Уғыҙхан аҙаҡта шуны әйткән: «Уғландарым, был алтын-көмөш менән йәйә һеҙҙең бер бөтөн, бер туған икәнегеҙҙе лә аңлатыр, уҡ-йәйәгеҙ бергә, бер бөтөн булғанда ҡеүәтле булырһығыҙ, илдәр менән үҙ аллы һәм тығыҙ берлектә ханлыҡ ҡылырһығыҙ.

Минең вафатымдан һуң, төп тәхеткә иң өлкән улым Көнхан хан булып ултырыр. Васиәтем шул».

Оҙон ғүмер йәшәп, оҙаҡ ханлыҡ ҡылып, Уғыҙхан донъянан үткәс, тәхеткә Көнхан биләр.

# 8. ЛӘЙЛӘ МЕНӘН МӘЖНҮН

## I. Мәжнүндең донъяға килеп, ете йәшенә етеп, мәктәпкә барғаны

Борон заманда ғәрәп ҡәбиләләренән Бәнйғәмир тигән ҡәбилә булған. Халҡы батыр һәм үҙ-ара дуҫ-яран, мал-мөлкәткә бай булып, башҡа ҡәбиләләрҙән айырылып торған. Олуғ башлыҡтары ғәйәт ғәйрәтле һәм дәүләтле булып, һәммәһе уның әмеренә һәм хөкөмөнә баш эйеп, һүҙенән сыҡмаған. Килгән-киткән мосафирҙарға саҡлы ашатып-эсереп, үҙҙәренә дөйәләр биреп, ғиззәт һәм хөрмәт менән оҙатыр икән. Баш хужа һәр кемдең мәслихәте булһа, хәтерен таба белгән. Йыһанда үҙенең һис нәмәгә мохтажлығы юҡ икән.

Әммә ләкин, балаһы булмағанға, хәсрәт сигеп, шуға ут йотоп йәшәгән. «Күңеле мөбәрәк* бер кеше доғаһы бәрәкәте менән Хаҡ тәғәлә миңә бер бала бирһә, донъяла мине бер улым менән шатландырһа, бер ғүмәмде йәлләмәҫ инем», — тип бәдәл-хаҡ әйтһә, ни ғәжәп, ҡатыны ауырға ҡалмыш, ти.

Бер көн мөҙҙәте* еткәс, ҡатыны яңы тыуған айҙай һыҙма ҡашлы матур бер ул тапҡан. Ата-әсәнең күҙҙәре айҙай яҡтырып, Хаҡ тәғәләгә күп шөкөрҙәр итеп, ҡуйҙар вә дөйәләр ҡорбанға салып, фәҡирҙәргә өләшкәндәр. Нисәмә көндәр туй байрамдары ҡорғандар. Балаға Ҡайс тип исем ҡушҡандар. Шулай наҙ һәм ниғмәт менән тәрбиә ҡыла башлағандар. Һалҡын елдән, ҡайнар ҡояштан һаҡлап, күҙ теймәһен тип, маңлайына ҡором менән һыҙыҡ һыҙып төрлөсә хәстәр күргәндәр. Ғәзиз берҙән-бер данә улан булғас, күҙ ҡараһы кеүек һаҡлағандар, баплап тотҡандар. Шулай сабыйҙарының өс йәшенә етә татлы һүҙҙәр менән татылдағаны ата-әсәһенә һандуғас һайрауы кеүек тойолоп, күңелдәрен күтәргән.

Бер заман бала ете йәшенә етеп, аҡыл керә башлағас, атаһы, ғилем һәм һөнәр өйрәнһен, наҙан булып ҡалмаһын, тип мәктәпкә илткән. Мәктәптең абруйлы, уҡымышлы хужаһы Ҡайсҡа әлифбанан алып һабаҡ бирә башлаған. Баланың дәрескә бик әүәҫ, аҡылға зирәк һәм зиһенле икәнен белгән.

## II. Ҡайстың Ләйләгә ғашиҡ булғаны

Хикәйәт ҡылыныр, был тирәлә тағы бер ҡәбилә бар ине. Ул ҡәбилә башлығының айҙай матур бер ҡыҙы булып, исеме Ләйлә ине.

Хоҙайҙың хикмәте, атаһы уны ла әлеге абруйлы хәлфәгә уҡырға бирҙе. Уға Ҡайс менән бергә уҡырға насип булды. Шәкерт балалар уртаҡ тел таптылар, дәрестәрен бергә-бергә өйрәнделәр, һабаҡ арала-

рында уйнап көләшергә, күңел күтәрергә лә өлгөрҙөләр. Бер-беренә көләмәстәр һөйләнеләр.

Көндәрҙән бер көн Ҡайс Ләйләгә ала күҙ* илә баҡҡайны кем, биткәйҙәре гөл, сәсе сөмбөл, төгө ғәмбәр*, ҡашы ҡәмәр*, керпеге хәнйәр, күҙҙәре һөрмәле, буй-һыны зифа талдай икәнен күрҙе. Ҡалай сибәр! Бәс, Ҡайс бәхет моратына ирешмәгән күңел ҡошон сәс тоҙағына төшөргәндәй йән-күңелдән һушһыҙ ҡалды. Ләйлә лә Ҡайстың матурлығына бағып, һөйөклө күреп, һоҡланды. Ҡыҫҡаһы, икеһе бер-береһенә ғашиҡ булды. Шулай араларына ғишыҡ уты төшөп, әкрен-әкрен янмаға, йөрәк-бәғерҙәрен ялмарға башланы. Дәрес уҡығанда, китаптарын ҡаплап, наҙлау һүҙҙәрен ятлағанда, эҫенеп, аҙна араһында бер көн айырылышып торғанда күңелдәре болоҡһоп, хатта һабаҡтарын онотторҙар ине. Дәрт-ғишыҡ уты көндән-көн артыуҙан хатта ки көндө төндән, төндө көндән айырмаҫ хәлгә еттеләр. Бәғзе кемһәләр был хәлде белеп, бошоноп, иплəп кенә өгөт-нәсихәт биреп ҡаранылар: «Был һис ярамаҫ эштер, оялмайһығыҙмы? Ата-әсәләрегеҙ тойһа, асыуланыр. Был ҡылыҡ-нәфсенән тыйылығыҙ!»

Ләкин был һүҙҙәр асла бер файҙа бирмәне. Улар бары бер бәйет (шиғыр) менән яуапланы.

И өгөтсө, ҡуй өгөтөң, күңелдәрҙе
белмәҫһең,
Беҙҙе ғишыҡ диуана итһә, тағы һин
ни тимәҫһең.

Шулай былар҇ҙың ғишҡы һәр кемдең теленә төшөп, ҡәбилә халҡы араһына таралды, бер дастан кеүек һүҙ китте.

Бәс, Ләйләнең атаһы, ғәрлеге килеп, ҡыҙын мәктәпкә ебәрмәне. Һандуғасты гөл баҡсанан ҡыуған кеүек, ике йәш ғашиҡты бер-береһенән айырҙылар, баштарына ҡара ҡайғылы япма яптылар.

Ҡайс бисараның хәле һижран* уты менән янғанында ул шиғыр булып тышҡа бәреп сыҡты:

Фәләк* уғын йәйәһенән атты —
йәнгә айырылыу,
Ҡалманы үлмәктән башҡа сара,
был — айырылыу,
Мин был михнәт балаһымын,
замана ҡоло,
Тыуғанымдан бирле имеҙә ул,
шараптан айырылыу.
Яндырырмын гөрләтеп ут,
мәхшәр-ғәрәсәт* көндәре,
Күкрәгемдән китмәҫ мәгәр был
ауырлыҡ — айырылыу.
Ике нәмә сәрмаялыр* дәртле күңел
ғишҡына,
Йәремә хәлемде белдерҙем яҙып:
был — айырылыу.

Һуҡты изге ниәттән ҡәләм ҡара
һауыты ауыҙына,
Береһе уның хәсрәт бәләһе, биргән
уны — айырылыу.
Ярғыланып бөттө шәфҡәттән был
шыршы күкрәге.
Тауға китеп, өмөтө өҙөлдө
Мәжнүндең. Айырылыу.

Шулай тип илап, күҙҙәренән ҡанлы йәштәр түгәр ине Ҡайс. Халыҡ был хәлде күреп, бәғзеһе әсенеп:

— Бисара, ғишыҡ уты менән ниндәй ауыр дәрткә осрамыш, Алла ярҙам итһен! — тип доға ҡыла, ә бәғзеһе иһә:

— Баҡ әле шул тилегә, бер ҡыҙға ғашиҡмын, тип бар донъяға зар һала. Бының арт һанына типһәләр, бәлки, ғаҡылы башына менер, — тип, атын Мәжнүн* ҡуштылар.

Ләйләнең атаһы ҡыҙын өйөнән тышҡа сығармай Мәжнүндән даими һаҡлай ине. Мәжнүн иһә өйгә яҡын килһә, Ләйләне күрмәмме тип, йыраҡтаныраҡ шул тирәне туғыҙ тапҡыр әйләнер, бер тапҡыр булһа ла күрһәмсе тип, зар-интизар итер ине.

Ләйлә лә, Мәжнүндең өнөн ишеткәндә, тағы күңел ҡеүәһе етһә, ҡош кеүек осорҙай була. Нишләһен, ата-әсәһенән ҡурҡыштан, йыуаш ҡалды.

Мәжнүндең ике-өс дуҫы бар ине. Улар гел янындалар ине. Мәжнүнгә ярҙам итешеп, йыуатып йә даими күҙәтеп, ҡайҙа барһа, бергә йөрөй торғайнылар. Мәжнүн менән гел Ләйлә тураһында һөйләшерҙәр ине. Әгәр башҡалар хаҡында һөйләһәләр, Мәжнүн тыңламаҫ, һәм хәтере ҡалыр ине.

Ләйләнең ҡәбиләһе Нәжид тигән тау янында йәшәне. Мәжнүн һәр иртәлә дуҫ ярандары менән шул тау итәгенә килеп, йыраҡтан Ләйлә торған тирмәне күҙәтер, һағыш хәсрәтенән ҡанлы йәштәр түгеп, аһ-ваһ килер ине. Ләйләләр тарафынан иҫкән елгә шиғыр менән өндәшеп:

И саба ел, йәнде сихырлар
ни әхбарың* бар?
И осоп килгән былбыл, ҡундың
талға, ни хәбәрең бар? —

тир ине. Ел менән Ләйлә сәләм ебәргән кеүек хис итеп, Мәжнүн үҙе шул ел аша һөйгәненә сәләм күндерер ине. Ә тау буйынан Ләйлә тарафына осҡан күгәрсендәрҙе күреү менән, теленә йәнә шиғыр килер:

И күгәрсен, һоҡланам һиңә,
ни сарам бар минең?
Тауға, сәхрәгә осһаң, ҡанатың
бар һинең.

Шулай дуҫ-ярандары менән йөрөп, бер аҙ һағышын баҫып ҡайтыр ине Мәжнүн.

Бер көн барышлай Мәжнүн Ләйләнең тирмәһенә ҡарап торғанда елдән ҡапыл тирмә итәге асылып, тулған айҙай ялтырап ултырған Ләйләне күреп, ул да үҙенә бағыр күҙҙәренән хәсрәтле ынйы йәштәре ағыр икәнен абайланы. Шулай күҙҙәреме, үҙҙәреме осрашты. Бер-береһен табышҡандай, гүйә, ҡауышҡандай, Мәжнүн аһ-зарлы һүҙҙәрен әйтте:

Йыраҡайтып мине сәбүл-зифа
ярҙан яуыз рәҡип*
Ҡалды ҡатында күләгәләй ҡара
йөҙлө рәҡип.
Ҡояш йөҙөнә ҡорор пәрҙә булды —
ҡапланы,
Болоттай таралып киткәнен
күрһәмсе рәҡип.
Ҡыума мине, әйләнәндә йөрөйөм
сәргәрҙәй*.
Ни генә эшләһә лә ул, эшләһен, әйҙә,
рәҡип.
Таштай булһа ла ул әгәр, көл итер
аһым уты.
Керһә лә мәгәр тимер нығытмаға
рәҡип*.
Сәнсмәк өсөн хәнйәр миңә хәйлә
вә ағыу илә,
Ҡауышыуҙы киҫер өсөн
ҡайрайҙыр ул рәҡип*.

Ләкин бисара Мәжнүн, үҙен тота алмайынса, кәүҙәһен ергә ора башлағас, ярандары:

— Бөгөн ошо шау-шыу менән Ләйләнең атаһы һәм ярҙамсылары килеп харап итә күрмәһендәр, — тип Мәжнүнде ҡултыҡлап тауға алып китәләр.

## III. Атаһының Мәжнүнгә Ләйләне кәләшлеккә һоратҡаны

Улы янына килеп, атаһы:

— Әй, улым, ҡайҙарҙа йөрөйһөң? — тигәненә Мәжнүн, Ләйләгә ғишҡы мөнәсәбәте илә сәхрәләрҙә йөрөүен йәшермәй, шиғыр-бәйет менән көйләне:

Ишетеп аһымды хуш күреп
ятраһаң, и саба*,
Ләйлә зөлөфөнә* барып
ирешһәң әгәр, и саба.
Йөҙ ороп әйтһәң уға кем, һиңә
ғашиҡ бер күңел,
Һәр ваҡыт белергә теләй хәлеңде,
и саба.

Күп замандыр, кем, күңел зауҡын
биләне ул золоф
Йән дәхи юлдаш булһын, тип
теләсе, и саба.
Юлдарынан йөрөһәң ине дүнә-дүнә
дәмләнеп*
Ләйләнең хуш еҫтәрен килтерһәңсе,
и саба,
Был даирәлә сын иҫерһәң тутыялай*
сәсем өсөн
Беҙҙәргә ул яҡтан аҙ ғына тупраҡ
килтерһәң, и саба.

Ғәһ Мәжнүн Ләйләнең ҡәбиләһе тарафына барып, хәсрәтенән аһ ваһтар килер ине. Дәрдемәндтең* хәле харап, тип, иптәштәре һөйләгәс, атаһы, улының һүнмәҫ ғишыҡҡа төшөүен тойоп, күҙҙәренән ҡанлы йәштәр ағыҙып, бер аҙҙан, былай ҡоро илап ҡына сара сыҡмаҫ, быға бер ғиләжә* күрергә кәрәк, тип, ҡәбиләһенең аҡһаҡалдарын үҙ янына саҡырып, кәңәш ҡорҙо. Аҙаҡ уртаҡ бер фекергә килеп, олуғтарына улы өсөн Ләйләне кәләшлеккә һоратмаға үтенделәр. Һәм әйттеләр:

— Беҙҙең ҡәбиләбеҙ уларҙан әғләлер*, шуға күрә, күтәрмәҫ ҡалым һораһалар ҙа, риза булып, туғанлашмаҡ лазым*, — тинеләр.

Шулай бер һүҙҙән тороп, Ҡайстың атаһы менән бер нисә аҡһаҡал Ләйлә ҡәбиләһенә [ҡыҙ] яусыламаға йүнәлделәр.

— Ғәмирә ҡәбиләһенең бәғе менән абруйлы аҡһаҡалдары килгән, тип хәбәр биргәс, уларҙы ололоҡлап ҡаршы алдылар:

— Хуш килдегеҙ, сафа* килдегеҙ, — тип хөрмәтләп өй түрҙәренә үткәрҙеләр.

Тәмле-томло ниғмәттәр менән һыйлағас, Ҡайстың атаһы ни өсөн килеүҙәре хаҡында һүҙ асып былай тине:

— Морадыбыҙ шулдыр, кем, күрше бәғебеҙ, әүәл-әүәлдән үҙ-ара уртаҡ дуҫлығыбыҙҙы тағы нығытмаҡ ниәтенән, Хаҡ тәғәләнең әмере илә, ҡыҙығыҙ Ләйләне улыбыҙ Ҡайсҡа никах итеп ҡоҙа-ҡоҙағыйлашайыҡ, тип үтенергә килдек.

Димсе аҡһаҡалдарҙың олуғы еҫтәне:

— Бер-береһенә монасип* һеҙҙең ҡыҙығыҙ үҙегеҙгә — ата-әсәгә бер ғәзиз дана* икән, мәғлүмегеҙ, кем, сәйетебеҙҙең* улы ла ата-әсәһенә бер даналыр. Бәс, ике ҡәбиләнең бер-берeһенә ҡан ҡәрҙәш ҡәбилә — әкрабалар* булмаҡ «арҡа бирҙем» булып, дошман аяҡланһа, бер-берегеҙгә ярҙам итешеүҙән ғәрәп иле лә тыныс көн итер ине.

Ләйләнең атаһы бәк әйтте:

— Һүҙегеҙ бик гүзәл. Ләкин ҡыҙыбыҙҙың әлегә йәше етмәгәндер. Хәҙергә сабыр итәйек. Ваҡыты еткәс, ҡайтырбыҙ. Һеҙҙән артыҡты өҙләмәбеҙ.

Ҡайстың атаһы әйтте:

— Баш өҫтөнә ундай баһаны әйтмәк тейеш түгелдер. Былайтып килгәнбеҙ икән, ярай, әлегә никах ҡылайыҡ. Һуңынан, ҡасан йәше

етте тиһегеҙ, шунда күсереп алырбыҙ. Вә хәҙер үк, ни ҡәҙәр ҡалым һораһағыҙ ҙа, бирәбеҙ. Һеҙҙән мал йәлләмәбеҙ.

Ләйләнең атаһы инде сараһыҙҙан тура ярырға мәжбүр булды:

— Һүҙҙең тураһын әйтергә кәрәк, улығыҙ — бер диуана әҙәм бит. Үҙегеҙгә мәғлүм, ғишыҡтанмы-ниме мәжнүн булып, ваҡыт-ваҡыт ҡәбиләбеҙ тарафында аһ-ваһ ороп, тау-сәхрә ҡыҙырып, әллә ниндәй бәйеттәр һөйләп дәрүиләшеп йөрөй. Ундай әҙәм ҡәбиләбеҙҙе рисуай итер. Әгәр һеҙ улығыҙҙы, дауалап, һауыҡтырһағыҙ, ул саҡта һеҙҙән, ҡыҙ түгел, йәнемде лә йәлләмәм. Әммә иллә-мәгәр был хәлендә — булмаҫ. Бирәйбә. Был урында мине кисерегеҙ, хәтерегеҙ ҡалмаһын! Хижап итәм — оялам*: ҡыҙын диуанаға йәлләмәй бирҙе, тигән иман һүҙ китер илгә. Ғәрлеге ни!

Яусылар шулай, Ләйләнән өмөт өҙөп, ҡайтып киттеләр.

## IV. Атаһының Мәжнүнде Ҡәғбәгә алып барғаны, Ләйләнең атаһы уны үлтерергә ниәтләнгәне; Мәжнүнде ҡом сәхрәһенән йортҡа алып ҡайтҡандары; Мәжнүндең диуаналығының көсәйгәне; Ләйлә менән Мәжнүндең ғишыҡ шиғырҙары

Уңмаған яусылыҡ сәфәренән һуң Мәжнүнгә атаһы төрлө нәсихәттәр күндереп ҡараны:

— Ҡайғырма, Ләйләнән дә гүзәлерәк ҡыҙ табырбыҙ. Үҙ ҡәбиләбеҙ эсендә бына фәләндең ҡыҙы ғәйәт гүзәлдер. Уны оҡшатмаһаң, фәләндең ҡыҙын алып бирермен, — тип, әллә күпме ҡыҙҙы исемләп һанап өгөтләне.

Бәс, быларҙы ишеткәс, бисара Мәжнүндең, яман шашып, иҙеүҙәрен йыртып, диуаналығы артты ғына; егет ашау-эсеүҙән яҙҙы йәш түгә-түгә, бәйеттәр һөйләүен генә белде:

— Мәңгегә миңә ҡауышыу ҡапҡаһы ябылып, айырылыу ҡапҡаһы асылыуы шулдыр, — тип һөйләнде. — Гүзәл наҙлы йөҙөн күрһәтмәйсә, башына айырылыу шәлен бөркәнде. Рәхәт көндәрем ғәммихнәткә дүнеп, күңелем йән ғәме менән тулды, вә айырылыш ҡоштары башыма ҡунды. Вә исем-намым мәжнүндәр дәфтәре башына яҙылды. Бәс, минән дуҫтар ҡайғыртыуынан, дошмандар һөйөнөүенән үтеп, тамам енләнәм генә. Халыҡ ни тиһә тиһен, мәгәр наҙға булған ниәтем кемдер илә асылыр, вә был ғашиҡ бисара һинең хәлеңдән хәбәр алырмы? Вә минең былай янып көйгәнемде белерме? Бер тамсы сәләм ҡайғылы күңелемде шат итһә ине. Ул ғәжәп башында бәхет бармы ки, бер тағы үлеп-терелеп, йәннәт янына барып, аяғына йөҙөмдө һөрөп, донъя күҙе илә күрмәк ирешелерме? — тип, йөрәк аһын түккәнен ишеткәндәр илар ине.

Шулай [егет] атаһының йөрәген яраланы. Бер сара таба алманылар. Ғишығынан тамам диуанаға әйләнде.

Ҡай берәүҙәр атаһына әйттеләр, кем, Ҡәғбәгә илтһәң, доғалар ҡабул булыр өмөтө барҙыр. Атаһы, быны мәғҡүл* күреп, шул йылды хажға ниәт итеп әҙерләнде. Мәжнүнде дөйәгә атландырып, ҡәғбәгә

нүгөлделәр. Барып ирешкәс, атаһы улының ҡулынан тотоп Ҡәғбәнең ҡәрәме шәрифенә* килтереп:

— Улым, был изге урында ниндәй теләк, доға әйтһәк, шул ҡабул ҡылыр. Мәккәи-Мөкәрәмәнең яғаһына йәбешеп, Хоҙайҙан дарман һорап, ғишыҡ зарыңды башыңдан сығарып, мине әүәлге һау хәлемә ҡайтар, тип телә, — тине.

Шул ваҡыт Мәжнүн, «ғишыҡ» һүҙен ишетеүгә, ашығып, Ҡәғбәнең ситенә йәбешеп:

— Йә Рабби, дәрткә дусар булып ҡапҡаңа килдем. Изгелегеңдән минең доғамды ҡабул ит! Йә Рабби! Мине ғишыҡ утынан дүндереп, яныуымдан айырырға теләйҙәр. Илаһи! Ғишыҡ дәртемде көндән-көн арттырыраҡ ит, ғүмеремде ғишыҡ менән тултыр! — тип нияз ҡылды.

Атаһы, был хәлде күреп, доғаһын ҡолағы ишетеп, һуңғы сарам да юҡҡа сыҡты, тип илап, улын эйәртеп ҡайтып китте.

Ләйләнең ҡәбиләһе Мәжнүнде үлтермәккә ҡасд* итеп, атаһы быуынан шомланып, улын эҙләгеләп йөрөнө. Сөнки атаһы менән хаждан ҡайтҡас, Мәжнүн, йәнә элекке ғәҙәте буйынса, Нәжед тауы тирәһендә йөрөп, Ләйләнең өйө тарафын ҡарап, йәш ҡатыш хәсрәт менән үҙенең бәйеттәрен һөйләмәгә башлар ине:

Ҡайҙа ул дәмгә* туларҙай күңел
сафаһы* өмөт,
Яфа дәмендә* ине миңә вафан* өмөт.
Ниңә сәләменән өҙҙө наҙлы
мәғшуҡам* минең?
Килер ине бит саба* еле менән өмөт.
Айырыу зәһәре мине парә-парә*
итмәҫ микән?
Мәдәт бирмәһә* йәнемә дауалай
булып өмөт.
Баш өҫтөндә ҡайғы оя ҡорған
булһа ла,
Әгәр төшһә күләгәһе Һомай
ҡоштоң*, асылыр өмөт.
Ни ҡәҙәр аяға төшһәм дә, өмөтһөҙ
һис булмамын.
Ҡулым ҡушлап ялбарам, минең
доғалы өмөт.

Бәс, Ләйләнең ҡәбиләһенән монафиҡтар килеп, атаһына әйттеләр:

— Ҡәбиләбеҙҙең намыҫы ҡалманы. Мәжнүн һәр көн килеп әҙәпһеҙлек итә. Быға ҡарата бер эш ҡылырға кәрәк бит.

Ләйләнең атаһы хурланып, [егетте] һәләк итеү ғәйрәтенә килде. Әгәр Мәжнүн тағы килһә, ҡәүеменә* уны үлтерергә әмер бирҙе.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Мәжнүндең атаһының ҡайғыһы сәсрәп башына ҡапты. Мәжнүнде эҙләргә әҙәмдәр күндерһә лә, улар унының ҡайҙалығын, иҫәнме-түгелме икәнен һис белә алманы. Һәммәһе лә, тамам өмөттәрен өҙөп, ҡайғыға сумды.

Риүәйәт ителер ки, Бәнисәғит ҡәбиләһенән бер әҙәм, юлда килгәндә, күргән икән: бер йәш егет сәхрәлә илай-илай ғишыҡ бәйеттәре һөйләп ята, имеш. Янына барып хәл-әхүәлен һораған икән, асла* һүҙ өндәшмәйенсә торған да киткән. Был кешенең юлы Мәжнүн ҡәбиләһенә юлыҡһа, күрә-ишетә: ҡәбилә эсендә бер әҙәм юғалғанын халыҡ әсе ҡайғырып һөйләй. Ул ғәйеп әҙәмдең тышҡы ҡиәфәт-йүнен һорашҡас, юлда осраған бәндәнең шул икәнен белде.

Мосафир әйтте:

— Һеҙгә һөйөнөс булһын, ул әҙәмде фәлән ерҙә осраттым, — тигәс, был кемһәнәне Мәжнүндең атаһына килтереп, ҡай ерҙә икәнлеген хәбәр биргәс, атаһы атланып, бер ни тиклем кешеләр, был әҙәмде алып, әлеге ергә барғас, күрҙеләр, кем, Мәжнүн бер таш түбәнә ултырған. Үҙе бысраҡҡа буялып бөткән. Атаһы улын был хәлендә күргәс, илап янына килде.

— Әй минең күҙ нурым, күңел сырурым! Был һинең ғишығың ниндәй төкәнмәҫ ғишыҡ-саүдәлер, — тиеүенә Мәжнүн атаһының аяғына йығылып, ғозер-теләктәр теләп:

— Әй минең хәйәтемә сәбәпсе булған атам, ғәзиҙем! Күпме заман үҙеңә хеҙмәт күрһәтеүҙән йыраҡ булдым. Әммә минең бында тамсы ҡәҙәр ғәйебем юҡтыр. Ғашиҡ падишаһы мине үҙенә ҡол итеп, ғаҡылымны алып, диуанаға төшөрҙө, ҡом сәхрәһенә һөрҙө. Ошо хәлемдә уның хөкөмө аҫтындамын. Атай, итәғәтеңдән башҡа нәмәгә ҡөҙрәтем юҡ. Инде ғүмерем сәхрә гиҙмәктер. Яҡшылыҡ ҡылып, ошо хәлдәремде ғәфү итсе! — тип һүҙен бөтөрҙө. Атаһы аһ итеп:

— Уғлым, һине был хәлдә бындай ҡом сәхрәһендә нисек ҡалдырып китәйем? Әсәйеңә ни тип яуап бирәйем? Ул бит һәр дайым* хәсрәтенән илап диуанда ултыра. Ата-әсәңә мәрхәмәт итеп, шул диуаналығыңдан ҡас! Һине әсәң янына, өйөбөҙгә алып ҡайтайым. Өмөттә булайыҡ, ул дәртеңә бер сара табырбыҙ, — тине.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс Мәжнүн әйтте:

— Әй минең ғүмеремдең сәрмаяһы* булған атам! Ғүмерегеҙ оҙон вә дәүләтегеҙ даҡи* булһын! Минең дәртемдең дарманы өсөн күпме хазиналар сарыф иттең. Ләкин был ғишыҡ сире үтмәҫ. Вә мин был дәрткә үҙ ихтыярым менән грифтар* булманым, бәлки, Хаҡтың ихтыяры шундайҙыр. Вә Ләйләнең зөлф сылбыры муйыныма ҡат-ҡат уралып, инде унан ҡотолмаҡ мөмкин түгелдер. Вә минең ялуарыуыма ҡолаҡ һалып көсәнмәгеҙ, ғашиҡтарҙың хәле һәр саҡ иламаҡталыр. Уларҙың көләүе лә — күҙ йәшелер, вә илауҙары йәштәренең кибеүелер. Вә был ғишыҡлыҡ мәғәнәһеҙ бер шәй күренер. Әммә аҙағы камиллыҡтыр. Вә ғашиҡтар моң ташынан ҡасмаҫтар. Бәс, иң яҡшыһы мине әлеге үҙ хәлемдә ҡалдырып, һеҙ үҙ хәлегеҙҙә булығыҙ, — тип һүҙен тамамланы.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, бисара атаһы яңынан илай башланы. Мәжнүн был хәлде күргәс, аталы-уллы бер заман яман ҡайғырыштылар. Ахырында атаһы, төрлөсә итеп булһа ла, Мәжнүнде ҡәбиләһенә алып ҡайтты.

Әсәһе һәм башҡа туғандары, Мәжнүндең янына йыйылып, уның күңелен йыуатырға, хәтерен табырға тырыштылар. Мәжнүн дә бисара әсәһе хәтере өсөн ике-өс көн сабыр ултырҙы. Аҙаҡ йәнә, ғишыҡ тойғоһо ҡуҙғалып, сабырлыҡ һәм тыныслығын юғалтҡас, сәхрәгә

кире китте. Диуана күңелен йыуатыр өсөн, бер ергә генә туҡталмайынса, Ләйләне һағынып, сәхрәләрҙе ҡыҙырып тегеләй ҙә былай йөрөй башланы.

## V. Ләйләнең Мәжнүнгә ғашиҡ булғаны, Әсәһенең был эште һиҙеп ҡалғаны

Бисара Мәжнүн был хәлендә ҡалып торһон, Ләйләгә киләйек. Ләйләнең иһә сибәрлеге көндән-көн артып, айҙың ун дүртенсе кисәһе шикелле һис күрелмәгән матурлыҡ илә ул да Мәжнүндең диуанаһына мең йәне менән күскәндер. Әммә нишләһен, тышҡа сығарырға көзрәте етмәйсә, ата-әсәһенән ғишҡын ныҡ йәшерә ине. Яңғыҙ сағында:

— Аһ, бисара Мәжнүнем, айырылыу утында янып, сәхрәләр буйлап илап йөрөй, — тип, Нәжед тауы тарафында Мәжнүндең үткән юлдарына һағышлы хәсрәт күҙе менән бағып, ел иҫкәндә Мәжнүндең еҫен тойоп шатлана ине. Вә юлдин үтеп-һүтеп йөрөгәндәр ауыҙынан бисара Мәжнүндең үҙе хаҡында һөйләп бәйеттәрен ишетеп, үҙе лә уларға яуаплап, һиҙҙермәй генә юлға бағып эстән көйләр ине:

Я рабби, дәртемә мөддәт*
дарманымды күтәр!
Йә йәнемде ал, йә йәнәшемде
күрһәт!
Яҡуптыҡы* кеүек күҙҙәрем
асылһын,
Илатма мине, Йософ Кәлғәниды*
күрһәт.

Һис кемгә серҙәрен сисмәйенсә, эстән ут-хәсрәт йотоп көйөр ине Ләйлә. Әхирәт ҡыҙҙары көлөшөп уйнаған саҡтарында, үҙе уларҙың күңел асыуына ҡатышмай. Әхирәттәренең быға хәтерҙәре ҡала ине.

Шул хәлендә бер йыл уҙып китте. Ләйлә ҡәбиләһе ҡыҙҙары гөлбаҡса эсендә ҡайһы саз уйнап, ҡайһы бейеп зауыҡ-сафа табалар. Ләйләнең йөҙө: «Был гөлбаҡса, уйындар минең йәрһеҙ күңелемә бары бер дегәнәктер», — ти.

Ҡыҙҙар уның эргәһенә килеп:

— Солтаным, был уйындар һеҙҙең өсөндөр, йөҙөгөҙ әммә һис асылмай, йылмаймай, — тиһәләр, Ләйлә:

— Бөгөн бер аҙ кәйефем юҡ, — ти. Үҙе иһә:

— Ғәжәп Мәжнүнем хәҙер ҡай ерҙәрҙә йөрөй икән? Минең дәртем менән илауҙалыр инде, — тип бошоноп уйлай.

Шул заман гөлбаҡсаның тышында бер ғәрәп Мәжнүндең Ләйлә хаҡында һөйләгән бәйеттәрен әйтеүен ишеткәс, Ләйләнең йөрәгенә уттар ҡабынып илай башланы. Мәгәр ҡыҙҙарҙың береһе ағас төбөнә ултырып күҙәтеп торҙо ла:

— Ғәжәбә, был кемгә ғашиҡтыр? Бер-бер хәбәр белһәм ине, — тине бәйеттәрҙе тыңлай-тыңлай:

Йән бәләгә осрағас, әй дуҫ,
Рәхәт көйөнөс булды миңә, әй дуҫ.
Сибәрлегең менән күңелемде алдың,
Ҡорбан була йәнем һиңә, әй дуҫ.
Һинең өсөн тулыштым мин эстән,
Кил, мәрхәмәт илә миңә, әй дуҫ.
Ярҙам ит, кем, йәнем үртәләнә,
Ләйләне лә бер ҡат аңла, әй дуҫ.
Шаһитһың, шәһит булмаҡ миңә
Бармы яҙмышымда, әй дуҫ.

Ғәрәп һөйләгән был бәйеттән белеп, Ләйләнең Мәжнүнгә ғашиҡ утында янғанын ҡыҙ Ләйләнең әсәһенә барып һөйләне. Әсәһе бисара хайран итеп, ҡыҙға ялбарҙы:

— Зинһар, был серҙе берәүгә лә һөйләмә! Телгә тағы керһә, ныҡ хур булырбыҙ, — тип киҫәтеп һәм ҡыҙы Ләйләгә ҡаты нәсихәттәр бирҙе. Әммә ни файҙа? Яҙмыш ҡушҡас — күҙҙәр һуҡыр.

## VI. Ибне Сәләмдең Ләйләгә ғашиҡ булғаны, уны кәләшлеккә һоратҡаны, ҡыҙҙың атаһынан ризалыҡ алғаны

Риүәйәт ҡылыныр, Бәннәсад ҡәбиләһенең бөйөк бәктәренән бер егетте Ибне Сәләм тиҙәр. Ул ғәйәт күп мал эйәһе ине. Вә әллә нисә ҡәбиләгә баш ине.

Сәләм бер көн ҡайҙандыр сәфәрҙән ҡайтышлай Ләйләнең ҡәбиләһенә тап килде. Мәгәр ул көн ай йөҙлө Ләйлә әхирәт ҡыҙҙарының бер нисәһе менән гөлбаҡсала инеләр. Ибне Сәләм, юлында Ләйләне күреп, мең йән илә ғашиҡ булмаһынмы! Ҡыҙҙың үҙе һәм кем ҡыҙы икәнлеген белешкәс, үҙ ҡәбиләһенә ҡайтһа, Ибне Сәләм һис тынғылыҡ тапманы, йөҙө һағышлы. Сәбәбен һорағастын, ваҡиғаһын һөйләне. Бәктәре йыуатып:

— Бында ҡайғыраһы бер ни юҡ. Теләһәгеҙ, иртәгә үк атаһына, ни ҡәҙәре теләһә, шунса мал биреп, алабыҙ, — тигәйнеләр, Ибне Сәләм шат булып, мәғлүм ҡарарға килделәр.

Таң атҡас, Ибне Сәләм күп бүләктәр күндерҙе. Былар ҡәбиләгә яҡын килгәндә Ләйлә ҡәбиләһенең ололары ҡаршы сығып ғиззәтиҡрам* менән өйҙәренә индереп ҡунаҡ иттеләр. Һуңынан былар Ибне Сәләмдең бүләктәрен тәҡдим итеп:

— Ҡыҙығыҙҙы әфәндебеҙ булған Ибне Сәләм өсөн димләмәгә килдек, — тинеләр.

Ләйләнең атаһы:

— Хуш килдегеҙ! Ҡәдәмдәр* килтерҙегеҙ башым өҫтөнә! Ҡыҙ түгел, йән дәриғ итәм*. Ләкин ҡыҙым бер нисә көндәр сирләп тора. Һауыҡһын да, хәстәрен күреп, хәбәр итербеҙ. Килеп никахлап алып китерһегеҙ, — тине.

Шулай итеп, доға ҡылынып һүҙ ҡуйыштылар. Был һөйөнөс хәбәрҙе Ибне Сәләмгә алып ҡайттылар. Шат булып, сафаһында мәшғүл итте.

Ләйлә был хәбәрҙе ишеткәс, аҡылы башынан китеп, яңғыҙы ҡайғыға батты. Мәжнүн иһә бер ни белмәй элекке ғәҙәте буйынса сәхрәлә һөйөү уты ғазабында ине.

## VII. Нәүфәлдең Ләйләне ике мәртәбә яу менән Мәжнүнгә алып бирергә иткәне

Ул заман ғәрәп бәктәренән Нәүфәл исемле бәк ғәйәт бай, хисапһыҙ хеҙмәтселәргә һәм ғәскәрҙәргә эйә бер зат бар ине. Бер көн ауға сыҡҡанда, бының ҡолағына тауыш ишетелде. Атын шунда бороп, күрҙе, ишетте ки, бер егет ятҡан көйө бәйеттәр әйтер:

Әсе ғишыҡ өсөн, бәлки, йығлау хәле етәр,  
Тилмереп зар итер ғәжәп хәлгә ни етәр?  
Дәғүәсе хәүефе менән ҡайғым бөтмәҫ,  
Ә байыр ваҡыты ҡояшымдың ҡасан етәр?  
Киҙәнмәһен миңә дошманым, кем,  
Йәремдең наҙлы бер ҡарашы миңә етәр.  
Юҡһа ни хәжәт күҙ ҡәһәрен йәнгә ормаға?  
Заманының типкеләүе сер сафала етәр.

Мәжнүн шул хәтле илар икән — үҙе ҡыҙғаныс, өҫтө яланғас, сәстәре етек. Нәүфәл, уны был хәлдә күреп, хәл-әхүәлен һорашҡайны, бер ҡыҙға ғашиҡ булып илереп ҡом сәхрәләре гиҙеүен белде. Ғәжәпһенеп, бөгөн ау булмаҫын әйтте, атынан төштө һәм әҙәмдәренә аш-һыу әҙерләргә ҡушты. Шул ҡәҙәр илтифат* итеүенә Мәжнүн уға мәйел итте*. Үҙ хәленә бағлы* бәйеттәр һөйләне:

Ҡайғылы күңелемде тынысланырға ҡасд* итмә,  
Йәнә вайран* буласаҡ хәлемде шат итмә.  
Беләмен, хур-яфалар итәһен аҙаҡтан,  
Бары ғәләмдә вафа әйләгәнде яд итмә*.  
Был миҫалдыр ки: әҙәм балаһына игелек ярамаҫ,  
Ни хурлыҡ, йәбер итһәң ит, миңә ярҙам итмә.  
Йә Илаһи, йән ғәмем менән шат булмаҫ иһәм,  
Диуана күңелемде ҡайғы-ғәмдән азат итмә.  
Йығлан зарыңды Мәжнүн кеүек фаш итмә,  
Яратам бер гөлдө — диуананы хур итмә.

Мәжнүндең бәйеттәре Нәүфәлгә тәьҫир итеп, Мәжнүнде йыуатып:

— Мал менәнме, яу менәнме, нисек булыр, Ләйләне һиңә алып биреп, морадыңа ирештермәйенсә, зауығымды терәк итмәй ҡуймам, — тине. Мәжнүн Нәүфәлгә доғалар итеп:

— Минең кеүек ғәрип өсөн һимməттәр* бойордоғоҙ. Был хосуста вөжүдығыҙға* һәм хуш шәрифегеҙгә* рәхмәт, әммә үҙегеҙҙең сафаға*

Лəйлə кеүек наҙлыны нисек бирһендəр? Əгəр көслөк менəн алыр булһағыҙ, һеҙҙəрҙе лə үҙҙəренə буйһондороп алырҙар. Шуға латиф итеп*, мине ошо хəлемдə ҡалдырығыҙ, — тине.

Нəүфəл күрҙе, кем, əйтте:

— Мəжнүн, һине морадыңа ирештереү үҙемə тейеш булһын. Лəкин шуны үтенмəк эсендə беҙҙең менəн бергə əҙəм ҡиəфəтенə керəһең.

Мəжнүн үҙ кəйефенə килешле һүҙҙəрҙе ишеткəс, ни хəтле булмаҫтай тойолһа ла, Нəүфил менəн ҡалаға китте. Унда [уны] мунса индереп, кейемдəр кейҙереп əҙəм ҡиəфəтенə кереттелəр. Бер нисə көн сырайҙары асылып, һəр көн Нəүфəл менəн баҡсаларға барып, əңгəмəлəр ҡороп йөрөнө, Лəйлə исеменə ғəзəлдəр* һөйлəне, Нəүфəл иһə тыңлар һəм йыуатыр булды:

Ғалəмдəрҙе гиҙеп йөрөп өйҙəн өйгə,
Əүəрə булып үҙем дə йəшерен йəргə.
Күргəҙмəк өсөн донъяға йөҙөн ҡояш
Вə еребеҙҙе бөтə көн нурламаймы йыһанға.
Тоткан ине вəғəҙə вафаһын* дуҫ,
Дошман булып атты мине япанға*.
Илатып, ҡайғыға һалдың
 күңелемде, ҡоллоҡ юҡ,
Я Рабби, ни гонаһ иттем һуң мин заманға?
Һəр ерҙə күрə йəн күҙе, йөҙөн йəрҙең,
Кəртə булмаҫ йыраҡлыҡ күрмəккə йəнгə.

Күпмелер заман үтте, Нəүфəл үҙ эше менəн булып, Мəжнүндең хəлен онотто. Мəжнүн битəр менəн* Нəүфəлгə хəлен белдереп, былай тине:

— Мин фəҡир, үҙ иркемə сəхрəлəргə китеп, зар-һағыштарым илə йөрөйөмсе!

Нəүфəл иһə күп ғəскəр туплап, Лəйлə ҡəбилəһенə һөжүм итеп, əүəле илселəр күндереп:

— Был ергə килеүебеҙ маҡсаты — Лəйлəне Мəжнүнгə ризалығығыҙ менəн алмаҡ. Əгəр бирмəҫ итһəгеҙ, һуғышҡа əҙер булығыҙ, — тине. Быға ҡаршы асыуланып:

— Беҙ ундай диуанаға ҡыҙыбыҙҙы бирмəбеҙ, һуғышырға əҙербеҙ, — тип яуап бирҙелəр.

Нəүфəл ғəскəре килеп, бер-береһенə ҡаршы күп ғауғалар итеп, күп əҙəмдəр үлде. Мəжнүн, йыраҡтан ҡарап тороп, Хоҙайҙан:

— Я Рабби, Лəйлəнең ғəскəренə ярҙам ит, ҡеүəт вə саялыҡ биреп, аяҡ аҫтына ташлама, — тип телəне. Быны ишеткəндəр:

— Баҡсы шул диуанаға, беҙҙең əҙəмдəр һəммəһе һинең өсөн йəнен фида итə, — тип ғəжəплəнделəр.

Хоҙа хикмəте, Нəүфəлдең ғəскəре еңелеп, Мəжнүндең телəк доғаһы ҡабул булып, Лəйлəлəр ғəскəре өҫтөнə сыҡты. Нəүфəл быны күреп аңлап, йəн башына сəсрəне.

— Ындай бер кескәй ҡәбиләнән тамам еңелһәм, ғәрәп эсендә хөкөм итә алмам, — тип, үҙ тарафынан бер нисә әҙәм күндереп, солох һөҙөнөләр.

Ләйләнең ғәскәре йәндәренә миннәт*, араларында татыулыҡ яһап, һәр кем үҙ яҡтарына ҡайтып киттеләр. Был хәл Нәүфәлгә ауыр булды. Янында булғандар уны йыуатып күңелен таптылар. Быға аптырап, Мәжнүн үҙенсә доғалар итеп:

— Минең кеүек бер диуана өсөн был ҡәҙәр мәшәҡәттәр сиктегеҙ. Морадым йәнә хасил булманы. Сәхрәләрҙә булған сағымды һәм сафамды*, һеҙҙәргә арҡаланып, ташланым вә Ләйләнең дауаһының юлдары үҙемдең ҡулымда тип уйлай инем. Хәҙер иһә Ләйләнең ҡәбиләһе миңә дошман булып ҡанымды эсерҙәр, — тип, Нәүфәлде һүгеп, яланғас ҡалып ҡом сәхрәһенә доноп китте.

Бәс, Нәүфәл Мәжнүндең был һүҙҙәренә ғәйәт пәришан* һәм оятлы булып, ғәйрәткә килде. Вә, үҙ хөкөмөндә булған ҡәбиләләрҙең йөмләһенә әҙәмдәр күндереп, хисапһыҙ ғәскәр тупланы. Инде барып язаларын биреп, Мәжнүнде морадына ирештермеш тип, йәнә Ләйләнең ҡәбиләһенә яу сапты. Юлында Мәжнүнде осратты.

— И әҙәм! Беҙ һинең өсөн шул ҡәҙәр ғәскәр йыйып, Ләйләне һиңә барыбер алып бирергә барабыҙ, — тип Мәжнүнде үҙҙәре менән алып киттеләр. Ләйләнең ҡәбиләһе хәбәр алып, күп ғәскәр туплап ҡаршы сыҡты. Уртала күп яу-ғауға булып ҡаты һуғыштылар. Мәжнүн иһә, ғәскәр уртаһында ултырып, иҫке ғәҙәте менән, йәнә Ләйлә ғәскәре еңеп сыҡһын өсөн доғалар ҡыла, ҡулына таштар алып Нәүфәлдең ғәскәренә ата ине. Нәүфәлдең ғәскәре быны күреп:

— Әй тиле! Беҙ һинең өсөн һуғышып йөрөйбөҙ, ҡан ҡоябыҙ, йән ҡыябыҙ, ә һин беҙгә таш атаһың, — тинеләр. Мәжнүн:

— Һеҙ минең йәнәнеш* ғәскәрен ни өсөн үлтерәһегеҙ? Уларҙың һәр береһе минең йәнемдән ҡиммәтлерәк. Мин быға нисек түҙеп торайым, — тине.

Ғәскәрҙәр быының ҡылығына хайран итәләр ине. Былар араһында байтаҡ һуғыш булып, аҙаҡта Нәүфәлдең ғәскәре еңеп сыҡты, килешеүгә килделәр. Нәүфәл тағы быларға аман биреп, Ләйләнең атаһы менән бергә [үҙенең] хозурына килеп, доғалар ҡылып әйттеләр:

— Сәғәдәтле солтаным! Ике тапҡыр арала күпме әҙәм һәләк булды. Маҡсатығыҙ әгәр ҡыҙ булһа, әмер һеҙҙекелер, яныгыҙға килтерәйем. Әммә һеҙ бит бер аҡыллы вә ғәҙел шәриф затһығыҙ. Һис кем һеҙҙән золом күрмәгәндер. Фекер итеңсе, нисек бындай диуанаға ҡыҙымды бирәйем дә кейәү итәйем? Халыҡты үҙемдән ниңә көлдөрәйем? Әгәр бир, тиһәгеҙ, әмер, әлбиттә, һеҙҙеке, — тинеләр. Нәүфәл төптән төшөнөп:

— Ваҡиған һүҙегеҙ урынлылыр. Халыҡ башта мине ғәйепләр. Мәғлүм, диуана — дәрүиш әҙәмдәр. Кем белә, бәлки, ул бер нисә көндән төҙәлер. Быларҙы үҙ уңайҙарына ҡуймаҡ монасиптыр*. Бынан һуң ҡарышмаҡ гонаһығыҙҙы ғәфү иттем. Һеҙҙең доғағыҙ дөрөҫтөр, — тип Нәүфәл ғәскәрҙәре менән ҡайтып китте.

Мәжнүн был һүҙҙәрҙе ишетеп, Нәүфәл янына барып, үкенес һүҙҙәрен әйтте.

— Һүҙегеҙгә ышанып, ике тапҡыр янығыҙға килдем, бер эш ҡылған булып, йөрәгемә тауҙар орҙоғоҙ. Һеҙҙең вәғәҙәгеҙ шулмы? — тине, Нәүфәл шул ҡәҙәр ололоҡлап:

— Ләйләнән гүзәлерәктәрҙе табып бирермен, — тиһә лә, Мәжнүн сәхрәгә таба боролоп китте. Артынан эҙләп, кешеләр ебәреп ҡаранылар — таба алмай ҡайттылар.

Хикәйәте шулдыр, Нәүфәл Мәжнүн өсөн Ләйләнең ҡәбиләһенә ғәскәр туплап килгәнен ишеткәс, Ләйлә өмөтләнеп, Хаҡҡа шөкөр әйләне: «Атам, инде Нәүфәл менән даулашмайса, мине Мәжнүнгә биреп, морадыбыҙға ирештерһә ине», — тине.

Әүәлге булған яу-ғауғала Ләйлә йөҙөн ергә һөрөп:

— Беҙҙең ҡәбиләбеҙ еңелһен! Нәүфәл ғәскәре ғали әйлә! — тип доға ҡыла ине. Ләкин Нәүфәл еңелеп солох яһағас, нисә көндәр матәмдәр* тотто:

— Йыһан бағында морадһыҙ Мәжнүндең бер тамсы морад сәскәһе асыла башлағас, яҙмыш, уны артыҡ күреп, йәнә һулытты. Беҙҙәрҙе илатып, дошмандарын көлдөрҙө, — тип аһтар итеп, өмөтөн киҫкән ине.

Күпмелер замандан һуң Нәүфәл яңынан ғәскәр йыйып килгәнен ишеткәс, шаттың шаты булып, хаҡҡа нияз ҡылып*:

— Инде был юлы атам еңелеп, бер күҙе илар, икенсеһе көләр. Теләһә-теләмәһә лә, мине ғашиҡ бисарам Мәжнүнгә сафа итер*, — тип, күҙҙәренә һөрмә тартып ҡыуаныр ине.

Һуңынан хәбәр алды кем, Нәүфәл менән атаһы йәнә солох яһаған. Ҡауышыуҙан өмөт киҫеп, йәнә ҡайғы кейемен кейеп, көндән-көн айырылыш уты менән бәғерен ҡәбәп* ҡыңырмаһы төҫлө янды. Гел ҡайғы-хәсрәтле ине.

## VIII. Мәжнүндең тотҡон кейек, әсир ҡолдарҙы ҡотҡарғаны, үҙенә сынйыр һалдырғаны, Ләйләне күргәс, тауҙарға китеп барғаны

Нәүфәлгә хәтере ҡалып, Мәжнүн сәхрәләргә киткән ине. Ләйләнең ғишҡы илә кис-көндөҙөн йөрөгәндә, юлы бер аусының өҫтөнә туры килеп, күрҙе кем, өс дана кейекте балаларына тотоп бәйләмеш. Кейектәрҙең һөрмәле күҙҙәренән инсан күҙҙәренән аҡҡандай йәштәр ағыр, күргән әҙәмдең бәғрен яғар ине. Аусы, быларҙы тотоп, тере көйө алып ҡайтып булмаҫ — боғаҙлармын да икеһен һатып, береһен ғаиләмә алып ҡайтып бирәйем, тиер икән, Мәжнүн шул саҡта килеп сығып, кейек балаларының тоҙаҡҡа тотолоп, ағар күҙ йәштәрен күргәндә Ләйлә хәтеренә килеп: «Минең йәнәнем*дә ата-әсәһе ауында шулай тотолмош хәсрәте илә күҙенән йәштәр түкмәктәлер», — тип иламаға башланы.

Аусы Мәжнүндең был хәленә хайран булды. Мәжнүн, аусыға ялбарып, был хайуандарҙы ирекккә ебәрергә үтенде. Аусы уға:

— Һин бер мәрхәмәтле әҙәмгә оҡшағанһың. Ләкин, быларҙы аулағансы, күп мәшәҡәт сиктем. Боғаҙлап, ҡайһыһын һатып, ҡайһыһын ғаиләмә аҙыҡҡа алып ҡайтһам, кәрәктер. Кәсебем шулдыр, — тине. Мәжнүн:

— Әй әҙәм! Шундай гүзәл хайуандарҙы нисек боғаҙларһың? — тине. Аусы:

— Гүзәл күҙе миңә бер файҙа бирмәҫ. Инде, хәтерең өсөн, салмам. Әммә өйҙә ғаиләм икмәк теләр, — тине.

Мәжнүн өҫтөндә ҡалған кейемдәренең һәммәһен аусыға бирҙе. Аусы күрҙе кем, Мәжнүндең кейемдәре кейектәрҙән күпкә ҡиммәтлеләр. Кейектәрҙең бауҙарын өҙөп иреккә ебәрҙе. Улар һикерешеп киттеләр.

Мәжнүн дә улар артынан китеп, тағы бер аусыға осраны. Ул, бер болан быҙауының күҙенән үбеп, әүәлге мәйеленсә, был кейекте Ләйләгә оҡшатып, аусыға ялбарҙы. Был аусы ла кейекте йәлләмәгәс, Мәжнүн былай тине:

— Һиңә мин был кисә мосафир булһам, ғәрәптәрҙең ғәҙәтенсә, быны миңә бешереп һыйлар инеңме?

— Ихлас һыйлар инем.

— Шул һүҙеңде тот, кейекте азат әйлә! Кисә һинең кеүек бер аусыға тап килгәйнем, өҫтөмдә булған бөтөн кейемемде биреп, тотҡан кейеген азат иттем. Инде яланғас ҡалдым, янымда һиңә бирер бер нәмәм юҡ. Әгәр ризый булһаң йәнемде һиңә бирәйем, мине боғаҙла, — тигәс, аусы ғәжәпкә ҡалып, быҙауҙы ебәрергә мәжбүр булды.

Быҙау сәхрәгә сабып китте. Мәжнүн шатлығынан кейек артынан һикергеләп, Ләйләнең ғишҡынан ҡысҡырып бәйеттәр һөйләне:

Йәнәбе шаһи әғләгә* ҡул эйәрмәҫ,
көс етмәҫ,
Йыһанды яҡтыртыр Айға ҡул
эйәрмәҫ, көс етмәҫ,
Ул Ай нуры миңә ни итте,
фираҡынан*, эшем бөттө.
Ят илдәргә йыраҡ китте, ҡул
ирешмәҫ, көс етмәҫ,
Рижа тауҙарҙан янҡайға: «Рәхим
итсе ғашиҡ зарға!»
Һағынмаҡта бер залимға, ҡул
ирешмәҫ, көсөм етмәҫ.

Мәжнүн ошо хәлендә йүгереп китеп барғанда, Ҡояш ҡыҙҙырыуынан ғәйәт сарсап һыуһамыш. Күрҙе, кем, бер бейек ағас күләгәһендә бер хауз* эсендә туп-тулы һалҡын һыу. Ятып һыу эскәс, башын юғары күтәрһә, ағас ботағына ҡунған бер ҡара ҡарғаны күрҙе. Уға ҡарап, Мәжнүн былай тине:

— Әй минең йәнем ҡараһы төҫлө ҡара ҡарға! Сәйер яҙмыш һине шаһҡа ҡол итмеш. Һинең дә минең кеүек вәсләтең* ҡиәмәткә ҡалмыштыр. Ғәжәп, ниндәй афәт дәүрән* һинең төҫөңдө оҡшаш итеп, минең йәнемдеке кеүек ҡара ҡайғы кейем кейҙереп яндырмыштыр. Әлбиттә, һиндә бер сер бар, әммә ауыҙың бикле, — тип күңеленән иҡрар итте.

Көтмәгәндә, Мәжнүн янына бер ҡарт әҙәм килде. Сылбырланған бер йәш әҙәмде етәкләп алған. Яҡынлашҡас, Мәжнүн һораны:

— Был әҙәмдең ниндәй ҡәбәхәтлеге бар? Ниңә сылбырланың?

— Мин фәҡир әҙәммен. Эшләр хәлем юҡ. Тырышмаға көсөм юҡ. Был дәрдемән* бәндә бөтөнләй ғажиздыр*: тәкеүә әсир. Уға сылбыр тағып, ҡәбиләнән ҡәбиләгә йөрөтөп, теләнселек итәбеҙ. Ни тапһаҡ та, уртаҡ бүлешәбеҙ, — тине ҡарт.

Мәжнүн ҡартҡа үтенеп әйтте:

— Игелек итеп, быныӊ урынына мине сынйырыӊа бәйлә. Сөнки сылбырға иӊ лайыҡ кеше — минмен. Нисә йылдар, ғишыҡ дәртенә әсир булып, йорт-еремдән айырылып, әүәрә итмештер*. Был хәлгә — муйыны бәйле, егәре тағлы* хозурына мине килтер. Теләһә үлтерһен, теләһә ғәфү әйләһен. Йөрөгән ерҙәреӊдә мине бер нисә йылдар һижран-айырылыу атлы зинданда тотолдо, инде ашау, аҫрау хаҡы өсөн теләнселектә йөрөтөлә, тиерһеӊ. Вә ни саҡлы аҡса йыйһаӊ, һәммәһе үҙеӊә булыр, — тигәс, теге әсир бәндәнән сылбырын сисеп Мәжнүндеӊ муйынына таҡты.

Шул хәлендә бер көн Ләйләнеӊ өйө янына еттеләр. Ләйлә, тауышынан таныл баҡҡанында, Мәжнүн үҙенеӊ ғарыз* хәлен аӊлата башлап әйтте:

— Әй минеӊ наҙлы матурым! Хәлемә мәрхәмәт итеп күҙ һалсы, толомоӊды һөйөүем миӊә ошо сылбырҙы таҡтырҙы. Ҡулы бәйле, йөрәге тағлы ҡапуға* килтерҙе. Әгәр Нәүфәлдеӊ ғәскәре менән илегеҙгә яу илә килеүенән ауырлыҡ күргән булһағыҙ, инде үҙ аяғым менән килдем: үлтерһәгеҙ, һәләк итһәгеҙ, үҙе бәхеттер, ҡапуғыҙҙа* ҡорбан булайым. Һеҙҙеӊ ҡылыс миӊә әбелхәйәттер*, — тип ялҡынлы, ҡайғылы рәжаларын* әйтеп, ҡулынан, аяғынан сылбырҙарын еп кеүек өҙҙө һәм тауға табан йүгереп китте.

Ҡарт был хәлде күреп:

— Хоҙайҙан ҡурҡмаҫ бәндә! Мин сылбырҙыӊ хаҡын да бирмәгән инем һәм һинеӊ менән әле сынйырлыҡ баһа ла ҡаҙана алманым. Аҙаҡта ғүмеремдә мине бер бурыслы итеп киттеӊ, — тип ҡайғырғас, Ләйлә иламһырап:

— Ҡайғырма! Ул морадһыҙ ғашиҡтыр, үҙен тота алмай сабырһыҙланып китте, — тип ҡартҡа сылбыр хаҡын түләп күӊелен тапты. Ул Ләйләгә доға ҡылды.

## IX. Ләйләне Ибне-Сәлимгә никах иткәндәре; шуны ишеткән Мәжнүндеӊ ҡайғыһы артҡаны

Ләйләнеӊ матурлығы шөһрәт булып, ҡәбилә-ҡәбилә ҡауышыу гөлстанында шунса гөл теләмәк өсөн Ләйләнеӊ атаһына күп малдар вәғәҙә итеп, яусылар йыш килеүен ишеткәс, Ибне Сәләмдеӊ сәме сәсрәп ҡуҙғалды. Ҡыҙҙы ҡулына төшөрмәк ниәте менән, Ләйләнеӊ атаһына мул бүләктәр менән кешеләрен күндерҙе. Улар хөрмәтенә табындар ҡоролдо. Килгән яусылар былай тинеләр:

— Әүәлдән вәғәҙәләшкән инегеҙ. Инде Хаҡтыӊ әмере менән ҡыҙығыҙҙы никах әйләмәгә килдек. Мәғлүм, дәүләтегеҙҙә хәйер эште һуҙыу ярамаҫ. Арала берәй төрлө дошманлыҡ пәйдә булып ҡуйыр.

Бер береһенә насип булған был икене, һүҙ-аҡыл беркетеп, ҡауышты-райыҡ та сафа* әйләһендәр.

Ләйләнең атаһы тағы, монасип*, тип, уны мең алтын мәһәр менән Ибне Сәләмгә вәғәҙәләп, доғалар уҡылды. Ләйлә үҙе Ибне Сәләмгә ҡағаи никах ителдектәрен хәбәрдар булғас:

— Ваһ пәдәрем*! Ни яуыҙлыҡтар итеп, көтмәгәндә мине бер ят зарифкә* биреп, ғашиҡ садиғым* Мәжнүндән айырҙың? — тип мотәмдәр* әйтте.

Бәс, туй булып, ҡәбилә ҡатындары һәм ҡыҙҙары килеп: «Ҡотло вә мөбәрәк* булһын!» — тиһәләр, Ләйлә күңеленән: «Ауыҙығыҙ ҡап-ланһын», — тиер ине һәм еңгәләренең уйнауына асла ҡараманы.

Ошолай бер нисә көн туй булғас, Ләйләне ыңныы-йәүһәрҙәргә сум-дырып, шау көмөштән урынға мендереп, күп йәриәләр менән Ибне Сәләмдең йорт-ханаһына күндерҙеләр. Һөйөнсөләп, Ләйләнең туйы аттары яҡынлашҡанын хәбәр биргән һөйөнсөләүселәргә Ибне Сәләм иҡнылыҡ һәм ярҙам йөҙөнән әллә нисәшәр табаҡ йәүһәр һәм алтын-дар һибеп халыҡ йыйҙылар.

Ҡунаҡ-һый тамам булып, бер мөбәрәк* ваҡытта Ибне Сәләм некәре* инде лә, Ләйләнең сибәрлеген күреп, һушһыҙ булып йығыл-ды. Йәриәләре, йөҙөнә гөл һыуҙары һибеп, көскә аңына килтергәс, Ләйлә янына килеп, ҡауышыу теләне. Ләйлә асыуланып, һис бер ри-залыҡ бирмәгәненән аңлатыуы мөмкин булмаған бер мәртәбә тәҡдир әйләне*. Ибне Сәләм мәс* һәм һушһыҙ булып, был саҡлы асыу вә тиргәүенең сәбәбен һораны. Ләйлә яуап биреп:

— Һинең гонаһың шундалыр, кем, миңә ирешеү ниәтенә төшөп ҡул оҙайттың. Миңә ирешеү арзыһынан* булма*! Сөнки мин һиңә бер нисек тә баш эймәм! Һис тә көсөм етмәгән тәҡдирҙә, үҙемде ағыулап һәләк итермен, — тип оло ант эсте.

Бәс, Ибне Сәләм, Ләйләнең шунса асыу ялҡынын күреп һәм ант-тарын ишетеп, үҙен насар тойоп, бары уның йөҙөн күрергә һәм матур-лығына һоҡланырға ғына ла ҡәнәғәт ҡалды. Ләйлә уның ауыҙы өсөн ҡашыҡ түгеллеген белһә лә, башҡа кешегә күңел бирә алмай, Ләйләгә ҡағылмай ололау менән генә йәшәй ине. Һаман сабыр итеп, Ләйләнең үҙ ҡулы аҫтында булыуын ла ҙур дәүләт һанап сикләнде. Ләйләнең көндән-көн аһ-зарлары өҫтәлә барғанын күреп, вә ул һәм Мәжнүндең диуанаһы булдығын белеп, ғәр-намыҫын быраҡтырып вә мөхәббәт майҙанына инде.

Ләйлә һәр көн Мәжнүн тарафынан иҫкән елгә:

— Минең янаным* Мәжнүнем һаумылыр? Минең хәлемдән вә был ҡайғымдан хәбәре бармылыр? — тип күңелен йыуатыр ине.

Бисара Ибне Сәләм, был хәлдәрҙе күреп, сабыр итә ине. Сөнки ул Ләйләнең ғишығы ине. Дуҫтары уны ғәйепләп:

— Бер ҡыҙҙы шул хәтле мәшәҡәттәр менән ҡулға төшөргәнеңдә, ни өсөн ҡауышыу ниәтендә түгелһең? Бер юлаусыға шул ҡәҙәр аһ-ваһ килгәненә ни өсөн сабыр итәһең? Бындай ҡыҙҙы атаһының өйөнә ҡыуып ҡайтар. Мәһәр хаҡын талап ит, — тиҙәр ине.

Ләкин Ләйлә ғашиҡаға тел тейҙереп булмаҫ, дусар булыусы ишләһен. Әҙәмгә миһри* мөхәббәт — бер бәләлер, тигән һүҙҙәр мәғә-нәһенән һөйләнгәндәрҙең хәбәре юҡ ине. Ике ғашиҡтар был хәлдә

икеһе бер ергә килеп осраша алмай бер-береһенә алыҫтан күңелдән шатланышалыр.

Мәжнүндең иһә был хәлдән хәбәре булмайса, һаман сәхрәләр гиҙеп иламаҡта ине. Көндәрҙән бер көндө Ибне Сәләм ҡәбиләһе халҡынан бер ғәрәп, бер мәслихәт өсөн китеп барғанда, ҡапыл ҡолағына Мәжнүн ауазы ишетелгән. Янына барып ҡараһа, берәү ятҡан көйө Ләйлә хаҡында бәйеттәр һөйләп һыҡтай. Ғәрәп Мәжнүнгә әйтте кем:

— Әй бисара Мәжнүн! Был саҡлы күпме йылдарҙан бирле йән атып, ғишыҡтан шул хәлгә төшөп вафадар* йәрем тигән кешеңдең үлгәне артыҡтыр. Һинең менән вәғәҙәләшеп, «Һинән башҡа кешегә йәр булмам, мөхәббәтем фәҡәт һиндер» тигән һүҙҙәре һәммәһе ялған булып, һине сәхрәләргә һалып сәйер итмәк, имеш. Хәлбүки, атаһы үҙенең ризалығы менән Ибне Сәләмгә биреп, туйҙар булып, икеһе бер ергә килеп, кис-көндөҙ зауығы-сафа* итәләр. Һинең был хәлдән хәбәрең юҡ. Илереп, сәхрә гиҙеп фарьяд* итмәктәһең. Һиңә булған золом донъяла бер әҙәмгә лә булмағандыр. Ғүмереңде сәхрәләрҙә заяға әрәм итәһең, — тине.

Мәжнүн был зәһәрле һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡысҡырып, үҙен ергә бәргеләп, күҙҙәренән ҡанлы йәштәр ағыҙып ҡайғы-хәсрәткә батты. Был ғәрәп һөйләгән һүҙенә үкенеп, Мәжнүнгә әйтте:

— Мин һиңә ялған һөйләнем. Гонаһымды ғәфү ит. Миңә хәтерең ҡалмаһын. Морадым бары һынамаҡ ине, ни әйтер тип. Үҙенең ризалығы булмаған көйө Ләйләне көсләп Ибне Сәләмгә бирҙеләр. Әммә ҡыҙ уны янына юллатҡаны юҡ. Вә һинән башҡаға мәйеле* юҡтыр. Һәр саҡ һине уйлап, гел һыҡтап йәшәмәктә, — тип һөйләһә лә, Мәжнүн ҡайғыһын баҫа алманы. Ике төрлө һөйләүенән икеләтә ялғансы булғанын ғына аңланы. Ләкин баштағы һүҙе ауыр тәьҫир итте.

Бәс, Мәжнүндең диуаналығы көсәйеп, Ләйләне хәтеренә килтереп әйтте:

— Элек мин һинең менән күрешкәндә миңә вәғәҙәләр биреп, анттар иттең. Әгәр хурлыҡҡа осраһам, үҙемде һәләк итермен, тигән һүҙеңде онотоп, бер наҙанды үҙ ихтыярың илә осраштырыу бағынан* бәхетле иттең. Минән мөхәббәтте генә көттөң дә вәғәҙәләрең ялған булдымы? Башыма сәхрәларҙе тар итеп, яттар менән йәр булдың. Хуш инде һин, бивафа*, бул! Мин сәрби* ағасы кеүек даими вафала* бер ҡарарҙа булмайым, — тип ҡайғы-хәсрәттәр сикте.

## X. Атаһының Мәжнүнде эҙләп тапҡаны, уға нәсихәт әйткәне, уны алып ҡайтырға иткәне; Мәжнүндең баш тартҡаны; атаһының вафат булғаны

Атаһы Мәжнүндең сәхрәләрҙә айҙар буйы гиҙеп өйгә ҡайтмағанына хәсрәтләнеп, нишләргә белмәй, илай-илай уйланып, үҙе ауырыуға һабышып иңрәй ине.

Бер көн фекер итте, кем:

— Инде ғүмеремдең ахыры етте. Эхирәткә киткәнемдә, мал-байлыҡтарым ғәйре* әҙәмдәргә ҡалып, ерем буш ятыр. Ни булһа ла, йәнә

бер көн барып, нәсихәт итәйем, бәлки, тәьҫир итер, — тип китте. Оҙаҡ гиҙеп кәс илә тауҙа бер мәмерйә эсенә инеп, Мәжнүнде тапты, кем, уның бары һөйәк менән тиреләре генә ҡалмыш, илауҙан күҙҙәре эскә батҡан, үҙе туҙан һәм бысраҡ эсендә ятмыш. Был хәлде күргәс, атаһының йөрәге ярылырҙай булып, күҙҙәренән ҡанлы йәштәр ағыҙып, улының башын тубығына һалып, шәфҡәт менән һыйпай башланы. Мәжнүн күҙен асып күрҙе, кем, бер әҙәм башынан һыйпар. Атаһы эшенен абайламайса:

Кем һин, миңә был ҡәҙәр яҡшылыҡ теләүсе? Ҡайҙан килеп, ҡайҙа бараһың? Лотф* итеп, мине үҙ хәлемдә ҡалдыр, йоҡомдо осорма. Вә хыялымдан янанымды* өркөтөп ҡасырма, — тигәненә атаһы:

Әй бисара Ҡайсым! Ҡурҡма, япансы* түгел, атаңмын, — тине.

Мәжнүн атаһын танығас, ғәфү итеүен теләп, аяғына йығылды. Атаһы уны тағы ҡосаҡлап, ике күҙенән үбеп, илаша башланылар. Күпмелер ваҡыттан һуң атаһы Мәжнүнгә ҡарап күрҙе, кем, улы яп-ялаңғас. Үҙе менән бер ҡат кейем алып килгән ине, уларҙы кейҙереп һәм нәсихәт итеп әйтте:

- Әй минең егәр итем*! Инсан* менән хайуандың мөнәсәбәте нисек? Ә һин, улар менән дуҫ булып, әҙәмдән ҡасаһың. Ғүмереңде зая итеп, уның урынына ни алаһың? Нисә йылдар буйы яңғыҙ яланда гиҙеп, фарьяд* итәһең. Бынан ни файҙа? Фарьяд* менән кем маҡсатына ирешә ала? Монасип* булған аҡылыңды башыңа һалып, яныма ултыр. Бәлки, морадыңа ла ирешерһең. Минең ғүмерем уҙҙы. Һинән башҡа балам юҡ бит. Һин ҡайтмайса, әхирәткә китһәм, урыным буш ҡалыр. Малымды яттар баҫыр, еремә килеп ултырырҙар. Шул саҡлы гүмер атай усағын һүндермәк килешәме?! Ҡайтайыҡ, улым, минең урыныма ултыр. Бөтә малымды, үҙем иҫән сағымда, һиңә тапшырайым. Юҡһа, һуңынан үкенерһең. Мине ҡайғыртма, — тип күп нәсихәттәр уҡыны.

Былар Мәжнүнгә ныҡ тәьҫир итһә лә, ғишығынан айырылыу фекере көслөрәк булып сыҡты.

– Әй минең шәфҡәтле атам! Нәсихәттәрең һәммәһе хаҡтыр. Мең йән менән ҡабул итергә теләйем. Әммә һөйөүем мине үҙенә ҡол әйләмештер. Башҡа бер уй-ниәт ҡабул иттермәҫ. Бары уның бойороғона буйһонғанмын. Бәс, ғишыҡ утына төшкән кеше өсөн мал тупраҡ кеүектер. Йыһан батшаһы булмаҡ — йәнекәш* ишегенең туҙан вә тупрағына тормайҙыр. Миңә бында ҡырағай хайуандар менән бергә булыу артығыраҡтыр. Һеҙҙән шуны үтенәм, мине үҙ хәлемдә ҡалдырып, әҙәпһеҙлектәремде ғәфү итегеҙ. Ата булыу хаҡына хәләл итеп, мине юҡ һанап, дәүләт менән китәһең һәм, йыһан торғанса, ғүмер итеп, рәхәттә булғайһың, — тип һүҙен тамам әйләне.

Атаһы бисара Мәжнүндән был яуапты ишеткәс, был ғишҡынан ваз кисмәҫ, тип өмөтһеҙләнеп әйтте:

— Әй атаның йәне! Һүҙемде ҡабул итмәһәң, һаман һау бул! Ләкин һиңә васыятым шулдыр, кем, ғүмерем бөтөп, әхирәткә кискәнемде ишеткәс, мине күммәгә һин дә бер ус тупраҡ ташлап айырыл. Рухым өсөн бер фатиха уҡып, шат итәрһең, — тип, күҙҙәренән үбеп, бидаг* итеп илап ҡайтып китте.

Байтаҡ заман хаста* булып, йәнен бахаҡҡа тәслим итеп*, донъянан үтте. Был тарафтан Мәжнүн атаһының үлгәненән хәбәре булмаҫтан, Ләйләнең вафаһыҙлығы* тураһында ғашиҡлыҡҡа бәйеттәр һөйләп йөрөр ине.

И гүзәл! Хәнйәр менән һелтәнмә
арыҫлан өҫтөнә,
Күкрәгемдә һыҙланыу етер, ҡан
һыҡма ҡаным өҫтөнә.
Боҙҙо ғишығымдың бинаһын
сибәрлегең зәһәре,
Бер уғырлаусы иреште, ҡунды
вайран өҫтөнә.
Зифалығың һаҡла күҙҙән пәрдә
итеп сәскәйең,
Ҡапла ҡояшты, ҡараңғыла ҡала
бирһен, әйҙә.
Йөҙкәйеңдең уртаһында
миңкәйеңдең һаны юҡ,
Һинд шаһы тирмәләр ҡорғандыр ул
тау өҫтөнә.
Был ғишыҡ Мәжнүн йәнен иҫерек
иткән йән түгел,
Ул ләғил* ирендәренән эскәнем
зәмзәм түгел.
Уғырыны баштан кисерһең, миңә
үлмәк ғәм түгел,
Ҡорбан булмаҡ юлыңа бер рәхәт йән
өҫтөнә.

## XI. Мәжнүндең атаһы вафатынан хәбәр алғаны, уның ҡәберенә килеп ауғаны

Көндәрҙән бер көн аусыларҙың береһе тауҙа Мәжнүнде тап итеп:

— Әй намыҫһыҙ! Һин бында Ләйлә менән фарьяд* итеп йөрөйһөң, ә атаң әхирәткә китеп, туғандарыңдың барыһы ла ҡайғынан фарьядта*. Һинең кеүек балаңың булғанынан булмағаны яҡшыраҡ, — тине.

Был һүҙҙе ишеткәс, Мәжнүндең хәсрәте берҙән икегә әйләнеп, ҡандар сәсеп үҙен бәргеләргә тотондо. Һәм атаһының ҡәберен һорашып табып, хушһыҙ булып, аҙаҡ аҡылына ҡайтҡас, ҡаты хәсрәтләнеп әйтте, кем:

— Әй минең шәфҡәтле атаҡайым! Минең хәсрәтем менән йәнеңде Хаҡҡа тапшырып, мине ғәрип ҡалдырҙың. Нишләйем? Иҫән сағыңда хеҙмәтеңдә була алманым. Миңә рәнйеп киттең. Ни саҡлы ҡайғыхәсрәттән һине тыныс йоҡлатайым, — тип сәхрәләргә кире әйләнде.

## XII. Мәжнүн ҡырағай хайуандар менән татыу булып, гел бергә гиҙмәге

Ниҙер көн юлда бер әҙәмдең ҡулында ҡағыҙ күреп, унда Ләйлә менән Мәжнүндең һүрәттәре яһағанын танымыш. Быны танып, ҡарарын юғалтып, Ләйләнең һүрәтен боҙҙо, ә үҙенекен һау ҡалдырҙы. Кәрип был хәлгә хайран булып:

— Эй диуана! Йәнәшең һүрәтен ник боҙҙоң? — тимәккә Мәжнүн:

— Мин йәнәшем менән бер булдым. Арабыҙҙа һинлек вә минлек китмештер, — тине.

— Улай икән, үҙ һүрәтеңде бөтөрөү ҙә тейештер.

— Хәрифә*, һүҙ аңламаҫ бәндә икәнһең! Минең ҡәлбемә* йәнәшем үҙе барлығы менән инеп ултырып, бер булмышыбыҙ, шуны аңламайһың! — тине лә китеп барҙы.

Тауҙарҙа нисә заман хайуандар менән дуҫ-татыу булып, һәммәһе Мәжнүнгә буйһондолар. Ул ҡайҙа барһа, уға эйәреп йөрөнөләр. Былар араһында бер кейек бар ине, үҙе ғәйәт гүзәл ине, һикергеләп уйнар булды. Мәжнүн уны бик ярата ине. Бәғзеләре аҙыҡ-түлек килтерһә, Мәжнүн бер ҡабым ҡаба ла ҡалғандарын хайуандарға бирә. Улар уны ашатыусы һанап, айырылмаҫтар ине.

## XIII. Хикәйәт вә Ләйләнең — Мәжнүнгә, Мәжнүндең Ләйләгә хат яҙғаны

Хикәйәт ҡылыныр, кем, бер батшаның бер нисә ас, уҫал арыҫландары бар ине. Батша кемделер һәләк итергә теләһә, шуны яланғас ҡалдыртып арыҫландар ситлегенә яптыра. Арыҫландар быны өҙгөләп ашайҙар ине.

Батшаның аҡыллы һәм һөнәрле бер егете бар ине. Батша уны ярата ине. Был йәш кеше бер көндө фекер итеп: «Әгәр батша асыуланып, мине арыҫландар араһына атһа, хәлем нисек булыр?» — тип, арыҫландарҙы ҡараусыға бүләктәр биреп, арыҫландарға үҙ ҡулы менән бер нисә ҡуй бирҙе лә үҙе ҡарап торҙо. Арыҫландар иң тәмле ризыҡ икәнен белеп, ашатыусыға ялағайлыҡ ҡылыр ине. Егет уларҙы һыйпаштырып һыйлай торғайны.

Ни ғәжәп, батша бер көн егеткә асыуланып, уны арыҫландар араһына ташлатты. Арыҫландар ҡойроҡтарын болғап, йөҙҙәрен быныҡ аяғы алдына эйҙеләр — егетте иркәләнеләр.

Һуңыраҡ батша үкенеп:

— Хаталандым, барығыҙ, һөйәктәрен булһа ла йыйып ерләгеҙ! — тип бойорҙо.

Килгән кешеләр:

— Эфәндебеҙҙең бер төгөнә лә зарар булмаған, һап-һау, — тинеләр. Батша ғәжәпһенеп, егетте килтертте. Егет, ер үбеп, доғалар уҡыны. Батшаның:

— Сихыр ҡылдыңмы, йә берәй доға уҡыныңмы? — тигәненә, егет һөйләп бирҙе.

Был хикәйәттең хикмәте: йыртҡыс януарҙар ризыҡ хаҡын белеп, Мәжнүн менән дә дуҫтар, унан айырылмаҫ йәндәр.

Шулай Мәжнүн сәхрәләрҙә януарҙар араһында ғишыҡ менән янып илап йөрөнө. Бер кистә Хаҡҡа игелек теләп, диуана булғанына, бәлки, бер шифа бирер тиеп йоҡоға талды, төш күрҙе: кем бер ағас ерҙән шытып сыҡты, имеш. Ботаҡ вә япраҡтары яралды. Бер гүзәл ҡош осоп килеп, бер ботағына ҡунып, ауыҙынан бер йәүһәр төшөрөп китте. Мәжнүн уянып, был бик яҡшы төш, тип шатланды. Йәнәше тарафынан иҫкән елдәргә бер бәйет шиғыр әйтте:

Киләһең бик тиҙ иҫеп, йәнкәм
янынан, и саба*.
Бер хәбәрең бар кеүек миңә, әйтсе, саба*.

Ҡаршыһында бер атлы кеше күренде. Был әҙәмдә бер хәйерле хәбәр барҙыр, йөҙө нурлы, тип, Мәжнүн:

— Әй мөбәрәк Хызыр*! Бәхет менән ололауығыҙ ауырыуға ниндәй сихәт килтерә икән? — тине.

Изге ҡарт Мәжнүнде һыйпаштырып әйтте:

— Фәлән ерҙә күрҙем, кем, бик үтә һылыу йән туҡтауһыҙ илай. «Ҡыҙым, ниңә илайһың? Сәбәбе ниҙер, һөйлә», — тигәнемә бойорҙолар, кем: «Бәлки, ишетмешһеҙҙәр, Мәжнүндең һөйгәне Ләйлә тигән бер ҡыҙ барҙыр. Бына шул Ләйлә — мин. Мәжнүндән башҡа, әле бер яҡтан, Ибне Сәләмдән яфа, икенсе яҡтан, атам мәнфәғәтенән ғәм* кисерәмен. Дәртемә мәрхәм*, серҙәремә мәхрәм* юҡ.

Ашымдан үҙгә аһтарыма дарман
тапманым.
Күләгәмдән үҙгә серҙәремә асҡыс
тапманым.

Мәжнүн үҙ ихтыярына теләгән ерендә йөрөй, минең бер ергә бармаға ҡөҙрәтем юҡ. Сөнки ата-әсәмдең бәддоғаһынан ҡурҡам. Белгем килә, ул бисара ни хәлдә икән?» — тигәс, мин: «Ул бисара һаман сәхрәләрҙә януарҙар менән һинең ғишҡың илә илап йөрөй», — тинем. Бер генә аһ итте лә һушһыҙ йығылды. Аҙаҡ һушына килеп: «Миңә йәнәшемдән хәбәр бирең. Лотф* итеп, ышаныслы йәремә яҙыу яҙам, уға илтеп бирегеҙ», — тине. Мин дә баш өҫтө, тип ашығып, бире килдем.

Мәжнүн тағы яҙыуҙы алды
һәм әйтте:
И күңел! Серле хат йәниемдән
килде,
Әле асылмаған бер сәскәләр
гөлзардан килде:
«Әүәлендә Хоҙай өсөн маҡтау
һүҙенән ҡала, и ярым!
Ғишҡым менән тауҙарҙы тораҡ
иткән әфәндем!

Хозур шәрифегеҙгә сәләм вә доғаларҙан һуң ишеттем кем, сәхрәнорҙа гиҙеп, шул хәлдә торалыгыҙ. Аһ, минең дә ҡулымдан килһә, һинең хәл-әхүәлеңдән һорау булыр иһә даими һөйөүегеҙ сынйырына йөрәгемде хәсрәт утына бағламыштыр. Әммә халә* һеҙҙең менән мөгәҙәләшкән рәүештәмен. Хәрифтә* асла* янымa яҡынлаштырмаһым. Әйтерлек тә түгел, ул бер ҡара көндөр! Был яҡындарҙа атағыҙ шифатын ишеттекемдә ҡайғырамын, Хоҙай һеҙҙәргә ғүмерҙәр бирһен. Сабырҙан башҡа сара юҡтыр, хаҡтан ражим* булыр, кем, был сиселгән зәхмәттәргә бүләк буларак сафалар һөрәбеҙ», — тип һүҙен тамам итмештер.

Мәжнүн хатты уҡығандан һуң, ирҙең йөҙөн үбеп, доғалар әйтеп:

Мине шат иттең. Әгәр янығыҙҙа ҡағыҙ булһа, яуапты яҙайым.

Ҡарт ҡағыҙ, ҡәләм биреп, яҙҙырып, хатты алып, юлына китте. Ләйләгә барып, хатты биргәндә, йөҙөнә һөрөп уҡыны. Мәжнүндең хатылыр:

«Әүәлендә Хоҙайға маҡтау һүҙенән һуң, и күркәмлек гөлстанының гөлө вә сөмбөлө*! Дәртле күңелемдең дарманы булған кәрамыңдан* ид* итеп, Хаҡ тәғәлә ғүмерегеҙҙе вә гөл ямалығығыҙҙы* йыһан баҡына* таҙа әйләһен!

Әгәр әхүәлемдән соал* булыныр иһә, Хаҡҡа йөҙ мең шөкөрҙәр була кем, әле ғишҡығыҙ көндән-көн арта торалыр. Даима* януарҙар менән дуҫлыҡ ҡылып, әүәлгенән артығыраҡ бошоноп, башымды таштан ташҡа һалып, мөхәббәт дарьяһына талдым. Һамау Алла күләгәгеҙҙе үҙҙәремә бәр ҡарар әйләйә»*, — тип, һүҙҙе тамам әйләмештер.

## XIV. Мәжнүнгә Сәлим Ғәмириҙең килгәне, хикәйәт һөйләгәне, янына әсәһен килтергәне

Риүәйәт ителер ки, Мәжнүн атаһының туғаны Сәлим тигән әҙәм вә ҡарам* әйәһе ине. Мәжнүндең был хәлгә төшөүенә им-том эҙләй ине. Ләкин бер сара таба алманы. Мәжнүн ҡайҙа ғына йөрөһә лә, уны табып, ашамлыҡ һәм кейем-һалым килтерер ине. Йәнә бер көн юллап килеп, Мәжнүнде бер тау итәгендә ултырған хәлендә күрҙе лә хәүефләнеп үҙенә саҡырҙы. Мәжнүн дә Ғәмириҙе танып, тороп ҡаршыланы. Һөйләшеп киттеләр. Мәжнүндең өҫтөндә кейем күрмәгәс, Сәлим кейем кейҙермәк булды, Мәжнүн:

— Һинең хәтерең өсөн кейһәм дә, күңелдә һөйөү уты ҡайнаған ваҡытта өҙгөләп ташлармын, — тип яуап бирҙе.

Сәлим ҡаты ҡыҫтағас, сараһыҙҙан кейенде. Сәлим бер аҙ хәлүә менән майлы аҙыҡ килтергәйне. Шуларҙы алдына ҡуйғайны, Мәжнүн күстәнәсте хайуандарға ташлай башланы. Сәлим хайран итеп:

— Үҙең нимә ашарһың һуң? — тигәндә Мәжнүн:

— Ләйлә тарафынан иҫкән елдәрҙән дә башҡа миңә бер ни аҙыҡ булмаҫ, — тине.

Сәлим, яйына ҡуйып, донъяла ҡәнәғәтлектән яҡшы бер нәмә лә юҡтыр, тип бер хикәйәт һөйләне:

«Заманында ау һәм һунарға әүәҫ бер батша булып, бер көн сәхрәлә гиҙгәндә, бер тауҙың төбөндә мәмерйәлә бер кеше ихтыяр итеп ултыра икән. Батша үҙенең юлдаштарының береһенә:

— Бар, шул әҙәмдең хәлен һораш, маҡсаты ни икән? — тип әмер итте.

Юлдашы барып:

— Һеҙҙең менән батша ҡыҙыҡһына. Һеҙ тауҙарҙа былай нишләйһегеҙ? — тип һорау бирҙе. Шәйех:

— Һеҙгә, халыҡҡа ҡыйынлыҡ булмаһын тип, бында торабыҙ. Вә әҙерәк ҡоро үлән ашап йәшәйем, — тине.

Ул әҙәм хайран иткәс, шәйех көлөп:

— Ул һиңә генә ҡороған ут* булып күренер. Әммә беҙгә гөл һыуы, таттыр, — тине. — Табағынан бер ҡабым ашаһаң, ләззәтенән айырыла алмаҫ инең.

Кире килеп, шәйехтең яуабын әйткәс, батша үҙе уның янына барып, ҡулын үбеп, фәтихаһын алып китте».

Сәлим хикәйәне һөйләп бөткәс, Мәжнүн үҙенә тейешле өлөшөн алып, аҙаҡ дуҫ-иштәрен һорашып, аһ итеп иларға тотондо:

— Ғәжәбә әсәм минең хәсрәтемдән ни хәлдәлер, күптән күргәнем юҡ, — тигәс, Сәлим тиҙ генә йүгереп ҡайтып, Мәжнүндең әсәһен дөйәгә атландырып, улы янына алып килде.

Мәжнүн әсәһен күргәс, ҡосаҡлашып бик оҙаҡ илаштылар. Аҙаҡта әсәһе:

— Уғылым! Һине алып ҡайтып атаңдың урынына ултыртайым, — тип үтенде. Һүҙен үткәрә алмағас, илай-илай әйләнеп ҡайтты. Күп үтмәҫтән, уғылының хәсрәтенән донъянан үтте.

## XV. Ләйләнең Мәжнүн янына килгәне — егеттең әйләнеп киткәне

*(Был бүлек Ләйләне күрмәгә бер сара булыр)*

Ләйлә Ибне Сәләм янында тотҡон булып, һәр саҡ Мәжнүндең дәртенән бошоноп, бер ергә сыға алмайынса эстән ғишыҡ уты менән янып, күктәге Айға ҡарап аһтар итеп, күҙҙәренән ынйы бөртөгө кеүек йәштәр ағыҙып, күкрәгеп еүешләр ине. Шулай Ай менән әңгәмә ҡылып, күкрәген ҡояш кеүек ғишыҡ уты илә бағланы. Ахыр, һис сабыр итә алмайынса, бер яңғыҙ ҡалған ваҡытында тышҡа сығып, башы һуҡҡан яҡҡа китте. Ҡапыл юлда бер ҡарт осрап:

— Бабам, ғәжәбә Мәжнүн тигән бер ғашиҡ барҙыр. Шуны белмәйһеңме? — тип һораны. Ул:

— Эйе, фәлән ерҙә уға тап килдем. Ләйләнең дәрте менән ҡайғылы, — тигәненә Ләйлә:

— Ул бисара Ләйлә — мин, вә мин дә уға уғата ғашиҡмын. Был кистә форсат табып, һис кем күрмәгәндә, сығып киттем. Һинән шуны үтенәм, кем, дәрдемәндте* фәлән ерҙә күреп, миңә йәшерен хәбәр бир, — тип ҡолағындағы алҡанан бер нисә ынйыһын өҙөп бирҙе.

Ул кеше Мәжнүнде табып, һөйөнсө итеп, Ләйлә әйткән һүҙҙәрҙе гиппырҙы. Мәжнүнде үҙе менән алып килде. Ләйләнең өйө тирәһендә урылып, бер яйын табып, Ләйләгә хәбәр иткәстен, ул йәшертен генә сыкты. Башта йыраҡтан бер аҙ ҡарап торҙо. Ҡарт, был хәлде күреп, Ләйләгә әйтте кем:

– Мәжнүн хәсрәт эсендә, янына тиҙерәк бар, — тип Ләйләне алып барҙы.

Мәжнүн, янашын күргәс тә, иҫерек хәленә төштө. Бер аҙҙан аңына килеп, күңел шауҡымы менән ошо бәйеттәрҙе һөйләне:

Ғишыҡ зәмен эсеү менән айырма
юҡ иҫеректән,
Шәм утына осоп янған ни айырма
күбәләктән.
Даим ҡылмаҡталыр дуҫ уғырына
йәнем фида,
Йәнен ҡыҙғанмаҫ ғашиҡтар йән
һөйгән йәрҙәренән.
Йәремде белмәм ниҙер, ҡаршымда,
әй, күҙем нуры,
Әйләрем ғишҡына былбылдай
фәған шам вә сәхәр*.
Ҡылмыш латифаңда* тупланмыш
нисә мең яттар
Күркенә бағар өсөн нәүбәттә күпме
әҙәм.
Садиҡ* илә булдым һиңә мин йән
телдән мөбтәлә*
Һөйләнем сын хәҡиҡәт, тыңла, кил,
әй, әшнә.
Илтифатың* киҫмә был Мәжнүн
кеүек диуананан,
Күңелем интизарда хуш игелек
ихсанынан*.

Был бәйетте ишеткәс, Ләйлә илай башланы, Мәжнүн дә уның илауынан сабыр итә алмайынса, ғазапланып, кире әйләнде. Ләйлә лә ағтырап ҡайтып китте.

## XVI. Был урында Зәйет исемле бер кешенең яҡын туғаны ҡыҙына ғашиҡ булып, Ләйлә Зәйетте уның янына килтергәне

Риүәйәт ителер ки, Зәйет исемле бер егет үҙенә яҡын туғаны ҡыҙға ғашиҡ булған ине. Күпме әҙәмдәр араға кереп, ул ҡыҙҙы һораһалар ҙа, фәкирҙер, тип ҡыҙын бирмәне, илтифат* итмәне.

Бисара Зәйет, ғишыҡ уты менән янып, Мәжнүн кеүек булды. Шулай халыҡ ҡай саҡта Мәжнүндең әхүәлен һөйләһә, шул ваҡыт Зәйетте лә иҫкә алырҙар ине. Һуңынан ҡыҙҙы бер бай кешегә биреп,

Зәйеттең бәғерен хәсрәт уты менән кәбап* урынына көйҙөрҙөләр. Зәйет ҡаты ҡайғырып, Мәжнүн кеүек үҙ хәленә мөнәсәбәтле бәйеттәр сығарыр ине:

Әфәндем, килсе, яҙ булды, вафалар*
ваҡытылыр инде,
Ана баҡсала былбылдар һайрай,
сафалар* ваҡытылыр инде.
Китеп хәсрәт, килеп шатлыҡ,
бөтөрҙө тилмереүҙәрҙе,
Уйнаһын саз вә ҡурайҙар,
уйын-йыр ваҡыты инде.
Кил, и сәрүи* зифа наҙым, һин тип
тилмерә йәнем,
Бәхет килһен хәҙер миңә, быға
ирешер ваҡыт инде.
Айырылыу хәлдәре ҡанға тултырҙы
эсте, инсаф ит,
Ҡауышһаҡ ине, был дәртте дауалар
ваҡыттыр инде.
Ая, һаҡла был Зәйетте,
ҡауышыуҙан йыраҡ итмә,
Бергә ярҙамлашып, бүләкләшер
ваҡыттыр инде.

Көндәрҙән бер көн бер нисә ҡатын Ләйлә янына килеп, бер мөнәсәбәт менән Зәйет һөйләгән ғәзәлдәрҙән* бер нисә бәйет һөйләнеләр. Ләйлә ҡыҙыҡһынып, ниндәй әҙәм икән, тигәс, ҡатындар Зәйет хәлен бермә-бер бәйән иттеләр. Ләйлә уны күрмәгә теләп, кеше ебәрҙе. Шулай Зәйетте саҡырып килтерҙеләр. Ләйлә һорау биргәс, Зәйет үҙ мажараларын һөйләп бирҙе — Ләйлә илай-илай тыңланы. Ләйлә үҙ сиратында үҙенең серен Зәйеткә һөйләне.

Зәйет бер көн Мәжнүнде эҙләп табып әйтте кем:

— Әй Мәжнүн, әгәр ғишҡың йәүһәренә эйә булыуыңды теләһәң, өйөңә ҡайт. Әҙәпле бул. Былай сәхрәләрҙә хайуандар араһында диуаналай йөрөүеңдән ни файҙа? Әлхәмделилла, мин дә ғашиҡмын. Әммә кешеләр менән бергә ашап-эсеп, татыу йәшәмәктәмен. Шулай ҙа ғишығым һис кәмемәй, торған һайын арта ғына бара, — тип Мәжнүнде байтаҡ шелтәләне.

Мәжнүн:

— Әй Зәйет! Бындай һүҙҙәр күптер. Был һүҙҙәрҙе һөйләр кеше һин түгелһең. Әгәр янашымдан хәбәр менән килгән булһаң, мине үҙ хәлемдә ҡалдыр. Һинең аңлауың ҡисса түгелдер. Ашау-эсеү ҡайғыһында булған кеше ғашиҡ була алмаҫ. Һомайғош ҡына күләгәһен бер әҙәм башына төшөрөп, бөтә яратыуҙарҙан ҡул һелтәтеп үҙенә мас* итер кем, ҡиәмәткә ҡәҙәр бындай ғишыҡ даирәһен төшөндә лә күрмәгәнһең, — тине.

Шундай бәхәстәрҙә үҙе күп кенә өмөттәр бирҙе. Зәйет бүтән ауыҙ асмаҫ булды һәм ишеткәндәрен Ләйләгә ҡайтып бермә-бер түкмәй һөйләне.

## XVII. Был урында Ибне Сәләмдең вафатылыр

Ләйлә күпме заман Ибне Сәләм никахында булып, Алланың хикмәте менән бер көн Ибне Сәләм хәлһеҙ булып, дауалаһалар ҙа, сара табылманы — әхирәткә китте. Халыҡ килеп бик ҡайғырыштылар. Ләйлә лә, ғәҙәт талабынса, сәсен йолҡоп, Ибне Сәләмгә ҡайғырҙы. Ләкин уйында һаман Мәжнүн ине.

Әлҡисса, Ибне Сәләмде ерләнеләр. Ғәрәптә шундай йола бар кем, бер ҡатындың хужаһы вафатынан һуң, ҡатын ике йыл хужаһы өйөндә ҡалып, берәүгә лә күренмәйсә йәшәргә, мәтәм-ҡайғы кисерергә тейеш. Ләйлә лә ошо йортонда ҡалып, Мәжнүнде Ибне Сәләм иҫтәлеге илә хәсрәтләндерер ине.

Зәйет Ибне Сәләмдең әхирәткә китеүен ишетте. Шатланып, быны Мәжнүнгә килеп әйтте:

— Әй туғанҡай, Хаҡҡа шөкөрҙәр булһын! Үҙ өмөтөңдөң гөлстанына дегәнәк булып арағыҙҙа үҫкән әҙәм әхирәткә китте. Һин һау бул, был эшеңдә тамам ит, — тине.

Мәжнүн был хәбәрҙе ишетеп бер нәғрә ордо*, кем, ер тетрәне. Берсә шатлығынан, берсә ҡайғыһынан: «Бөгөн уға шулай булһа, иртәгә миңә был хәл килеүе аныҡтыр», — тип хәсрәтләнер ине. Зәйеткә әйтте, кем:

— Әй ҡәҙимге дуҫым, быҒаса михнәт күргән бәндәне шат иттең. Һинең эшләгән яҡшылығыңды һис ҡасан онотмам. Был хәбәрҙе миңә килтереүең гәрсә һөйөнөс булһа ла, хитап итеп*, йәнде һиңә бирҙе, тинең. Ә уны «Ләйләгә бирҙе» тигәне лайыҡ. Уның кеүек мин дә йәнемде йәнәш юлына фида итһәм кәрәк, — тигәс, Зәйет:

— Әй туғанҡай, һин йәнеңде ул заманда фида иттеңме, кем, юлда бер рәсем тотҡан әҙәм осрап, Ләйләнең һүрәтен боҙоп, үҙ һүрәтеңде боҙманың. Һәм янаш илә беҙҙең арала һинлек тә, минлек тә бөткән, тинең. Шул ҡәҙәр заман юлында барлығын юғалтҡан икән, һаман фида буласаҡһыңмы? — тине.

Мәжнүн:

— Ләйләне хәсрәтле сағында, атаһы өйөнә ҡайтмаҫтан элек күрһәм ине, — тигәненә ҡаршы Зәйет:

— Хәҙер инде күрмәк мөшкөлдөр*, һис бер өйҙән сыҡмай. Мин дә байтаҡ ғүмер күрмәнем. Күңелегеҙ булһын өсөн барып теләгегеҙҙе әйтермен. Ни бойорһалар, һиңә килеп әйтермен, — тип китте лә, Ләйләгә килеп, Мәжнүндең хәлен аңлатты, берәй көн йөҙөн күрәһе килгәнен әйтте. Ләйлә тағы:

— Минең дә күргем килә. Ләкин ни сара, мөмкин түгелдер. Фәлән-фәлән көн Ибне Сәләм рухы өсөн фәҡирҙәргә аш-һыу әҙерләп, үҙ ҡулым менән өләшергә ниәтләйем. Шул көн ҡулына бер каса алып килһен, — тине.

Зәйет тағы Мәжнүнгә килеп әйтте. Мәжнүн шат булды. Әлҡисса, вәғәҙә булған көн Зәйет килеп Мәжнүнгә:

— Туғанҡай, әйҙә барайыҡ. Ләкин былай яп-яланғас барыу килешмәҫ, — тине.

Бер иҫке кейем биреп, арҡаһына ҡапсыҡ аҫтырып, башына бер баш кейеме кейҙереп, ҡырҡ йыллыҡ теләнсе ҡиәфәтендә алып кит-

теләр. Шундай ваҡытҡа туры килделәр ки, Ләйлә лә биленә бер яулыҡ быуып, ҡаҙанды уртаға ҡуйып, ҡулына туҫтағын алып, килгән фәҡирҙәргә өләшер сағы ине. Шул мәл Зәйет бер яғы китек сынаяҡты Мәжнүндең ҡулына тотторҙо.

— Туғанҡай, шул яттар араһына ин, янашыңды күр, — тине.

Мәжнүн сынаяҡты ҡулына тотоп яҡынлашты һәм Ләйләне күреүгә аҡылын юйып йығылды. Бер аҙҙан аңына килеп, Ләйлә янына яҡыныраҡ килде, Ләйлә лә уны күргәс, ҡашығы ҡулынан төшөп, бер сынаяҡты ватты, Мәжнүн шатлығынан бейеп, бөтә донъяны үҙенеке тип хис итте. Әммә әллә ни күп тамаша ҡыла алмаҫтан, берәй тағы күрермен әле тип, тауҙарына китте.

Бер саҡ күрмәмме тип шул тирәгә килһә, Ләйлә ҡайғылы көндәрен тамам итеп, байлығын дөйәләргә тейәп китеп бара икән. Мәжнүн бала-сағанан һорап белде, кем, Ләйләнең атаһы өйөнә ҡайтып бара. Йөҙөн бер күрһәтмәҫ микән тип, бер нисә бәйет уҡыны. Ләйлә аңғармаҫтан Мәжнүндең тауышын таныған, йөҙөн асып:

— Ҡәбиләмә ҡайтып урынлашҡас, иншалла, бер көн саҡыртырмын, — тип әйтеп үтте.

Мәжнүн Ләйләне күреүгә тағы хайран ҡалды. Хатта өҫтөнә ҡоштар ҡуныпь, башына оялар яһап, бәбкәләр осорған, имеш.

Был тарафта Ләйлә, атаһы һәм әсәһе менән көрәшеп, күпме замандан бирле Мәжнүнде саҡырып күрешергә форсат таба алманы.

Ваҡыт-ваҡыт Мәжнүн янына Зәйет килеп, күп замандар буйы:

— Әле күрешә алманым. Иншалла, күрешерһегеҙ, — тир ине.

Мәжнүн йәнә тауҙарға китте һәм бер кисте йәнәбе хаҡҡа нияз итеп:

— Я рабби, ғишыҡ дәрте менән хәлем мөшкөлдөр. Теләгем шулдыр кем, тереклек йәнем һүнмәҫтән әүәл бер тамсы янашымды күрһәм ине, — тип күҙҙәренән ҡанлы йәштәр түкте.

Ниһайәт, бер иртәлә Зәйет Ләйлә тарафынан килеп сәләм бирҙе:

— Янашың сәләмен күндереп, һеҙҙән айырылғандан бирле ул һаман хәсрәт уты сигеп, бәғрен кәбап итеп яндырыр ине. Бына бөгөн яңғыҙ ҡалып, мине саҡырып, һеҙҙе саҡырырға күндерҙе, — тине. Мәжнүн шатлығынан:

— Хәҙер үк китәйек! Ҡайҙа һуң янаш? — тип үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә хайуандарын артынан эйәртеп сабып йөрөй башланы.

Зәйет алдан барып, Ләйләнән һөйөнсө алыу менән Ләйлә тағы шашып китте. Мәжнүнде күреүенән иҫерҙе. Мәжнүн тағы бер нәғрә* ороп йығылды.

Һуңынан һушына килеп, Ләйлә Мәжнүндең ҡулына йәбешеп, икеһе бергә килеп, Зәйет тағы араларында хеҙмәт итә ине. Мәжнүн менән бергә килгән арыҫландар вә башҡа януарҙар өйҙө тирәләп әйләндереп алып ҡош та осормайҙар ине.

Бәс, Ләйлә менән Мәжнүн бер ерҙә сөхбәт итәләр* ине. Ләкин әйтер һүҙҙәрен әйтә алмайса, гүйә, ауыҙҙары мөһөрләнеп йәбешеп, берберенә тилмерешеп ҡарашып ҡына торалар ине. Ахыр сиктә Ләйлә өндәште кем:

— И минең йән күңелдән ғашиғым! Күпме замандарҙан бирле ғишыҡ менән илап вә хәсрәт уты менән янып-көйөп, күҙҙәрҙән аҡҡан

ғашиҡлы йәштәр түгелеп, бер сәғәт күрешергә мең йән менән моштаҡ-интизар* теләк кеслә икән! Шөкөр, морадың хасил булып, күркәм-тегем, гөлзарына ирешмеш икән! Кәрәктер кем, былбылдар кеүек фарьяд* итеп тутыйҙар кеүек тел таптыҡ. Ғәжәптер ки, бер һүҙ һөйләмәй ҙә, хәйранат диңгеҙенә талып ҡалдыҡ.

Мәжнүн яуап биреп:

И минең вафадарым*! Хаҡ тәғәлә гәл ямалығыҙҙы* һулыттырмаһын! Аяҡ баҫҡан ерегеҙгә килеп күреүем кеүек барлығымда булған һәр бертөк ҡайғы килтереп, мең күңел менән хәлемде аңлатмаҡ инем. Ләкин ул һөрмәле күҙҙәрең, нәфсемде тыйып дәртемде лә баҫты. Вә һүҙгә ҡадир* булһам да, ғашиҡтың беленмәгән нәмәһе бар?

Үҙ хәлемдән булыр һаман ғашиҡ һүҙе,
Булмаҫ әйтергә тоғроло етди һүҙе.

Вә йөмлә һүҙҙән маҡсат: мөбәрәк ямалығыҙҙы* күрмәк инем, Хаҡҡа шөкөрҙәр кем, ул дәүләткә ирештем вә һине күрҙем. Морадым булды. Башҡа һүҙем ҡалманы, эшем бөттө. Янында ултырҙым, әммә ҡаршынында үҙемдә йән әҫәре ҡалманы. Һаман бер йәнһеҙ һүрәт кеүек минең бар морадым — аяҡ аҫтыңа таралып вә унан да ҡотолам, — тип ғишыҡ ялҡыны менән һөйләп, ахырҙа Ләйләгә һаубуллашыу һүҙе әйтеп китеп барҙы. Үҙе менән бергә килгән хайуандары артынан йөрҙе.

Мәжнүн Ләйлә менән был осрашып ризалашҡандан һуң башҡаса бер-береһенә юлыҡманылар.

## XVIII. Был урында Ләйләнең ғишыҡ утынан хәстә булып, әхирәткә киттелер

Нитәккем риүәйәт булыныр ки, Ләйлә менән Мәжнүн бынан һуң бер-бере менән осрашмауҙарынан ҡауышыу-айырылыу тураһында күктәге болоттар менән генә һөйләшә алалар ине. Вә дәрттәре хаҡында:

«Уның да дәрте минең дәртем кеүек даими хәсрәт уты менән йөрәген яндыра микән?» — тип уйлайҙар. Вә ҡауышыу теләге менән күҙҙәренән ямғыр тамсылары кеүек йәштәр ағыҙып, донъяны кеслә ағышлы силдәргә батырыр дәрәжәлә инеләр.

Бер көндө Ләйләнең хәле ауырайып, йән-тәне ҡурҡыуға дүнеп, гөлдәй матурлығы һулып, күләгә кеүек түшәккә ауҙы. Әсәһенең аҡыллы башынан китеп:

— Күҙем нуры, ни булды? Гөлдәй йөҙөң ниңә һарғайып һулының? — тигәненән Ләйлә лә аһ итеп:

— Эй һөйөклө әсәм! Тормош баҡсама көҙгө ел иҫте. Бынан һуң миңә дарыу-фәлән бирмәгеҙ. Дәртем дарыу ҡабул итмәҫ. Сырхауым ҡабул итмәй. Минән өмөтөңдө өҙөң. Мине Хаҡҡа тапшырың. Вә әхирәт хаҡына хәләл әйлә, — тине вә әсәһенең маңлайынан үбеп әйтте:

— Әсәйем, һинән игелек булыр, кем, мин үлгәс, табутымдың өҫтөн гөлдәр вә сөмбөлдәр менән биҙәп, кәфенемде ҡан менән буя. Ғашиҡ

юлында шәһит булыуым билдәһе булыр. Шул көндә дәфен итәһегеҙ. Ғишҡы менән башы әйләнгән Мәжнүнем минең вафатымды ҡасан ишетеп килһә, ҡәберем өҫтөнә ултырып, мине эҙләгәндә тупрағымдан башҡа билдә таба алмаҫ. Һәм дәртенән яҡаларын өҙөр вә яман-хәсрәтләнер. Вә бер васыятым бар тағы: Мәжнүнем, минән һиңә йәдкәр булып, тәңре аманаты булһын. Кәмһетеү күҙе менән баҡмай-са, яҡшылыҡта торорғоҙ, — тине.

Ләйлә васыятын тамам итеп, бер тапҡыр: «Йә Аллаһ!» — тип рухын тәслим итте*. Атаһы һәм башҡа туғандары ҡайғы-хәсрәт эсендә васыятын еренә еткереп, табутҡа һалып, ҡәбилә халҡы менән һәммәһе барып дәфен иттеләр*.

## XIX. Зәйет Ләйләнең вафатынан ағяһ* булып Мәжнүнгә хәбәр биргәне

Ҡасан кем Зәйет Ләйләнең вафатынан хәбәрдар булып, яҡаһын йыртҡылап һәм ҡара ҡайғы кейемдәре кейеп, күҙҙәренән ҡанлы йәштәр түгеп, Ләйләнең мазарына* барып, ҡайғы-хәсрәттәр әйләне. Аҙаҡ сәхрәгә барып аһ-ваһ илә Мәжнүндең янына килде. Мәжнүн, Зәйеттең хәлен күргәс тә, бында бер оло ҡайғы бар тип, йәне башына сәсрәне:

— Эй ышаныслы дуҫым! Ни бәләгә осрап, бында матәм кейемдәре кейеп фарьяд итәһең? — тине.

Зәйет бер ҡат аһ итеп, илай башлап:

— Өмөтөбөҙ бағына көҙгө елдәр иҫеп харап итте. Һәм яҙмыш ул наҙлыны ҡара тупраҡҡа һалды, — тигәс, Мәжнүн бер ҡаты ҡыс-ҡырҙы ла йығылды вә күпмелер ваҡыт мәйет кеүек ятҡас, фарьяд итеп, таштар менән һуҡҡылана башланы.

Һуңыраҡ Зәйет менән мазарға килделәр. Мәжнүн мазар өҫтөнә ауып һушһыҙ булды. Бер аҙҙан һуң тороп ултырҙы ла әллә нисә көндәр янашы мазары янында ҡалды. Һуңынан йәнә тауҙарға китте. Хәле хөрт вә уны күргән кем әсенеүенән мәрхәмәт итеп илайҙар ине.

Ахыр айырылышыу ҡайғыһынан күҙҙәренә ҡанлы йәштәр ағыҙып, сабыр һәм түҙемлеге ҡалмайынса бер ваҡыт янашы төрбә-һендә* ҡалып, ҡулдарын күтәреп, бер тапҡыр мөнәжәт итеп: «Йә Аллаһ», — тине һәм йәнен хаҡҡа тәслим итте*.

Бер йыл буйы ул тарафҡа бер кем дә килеүсе булманы. Кейек-хай-уандар күрҙеләр кем, Мәжнүндең вожүне* юғалып, бары һөйәктәре ҡалмыш. Мәжнүндең яҡындары һөйәктәрен Ләйләнең мазары янына дәфен итеп, ике ғашиҡты бер ергә килтерҙеләр. Вә инде ысын ҡауы-шыуға ирештеләр.

## XX. Зәйет Ләйлә менән Мәжнүнде төшөндә күргәне

Риүәйәт ителер кем, Мәжнүн мәңгелек донъяға күсеп, рухының ҡошо ҡауышыу ғәләменә осҡандан һуң, Зәйет килеп, рухтарына доға уҡып, ике ғашиҡ хәлдәренә бәйле назым әйтеп, йыһан халҡына дастан әйләне.

Көндәрҙән бер көн Зәйеттең хәтеренә килде ки, дәрдемәнд* Мәжнүн менән Ләйлә донъяла бер-беренән морад алмайса һәр бере ҡырҡ ҡайғы илә морадтарын ҡылмай киттеләр. Ғәжәп инде, әхирәттә кәндәре нисек булыр тип фекер итеп, йоҡоға китеп, төшөндә күрҙе бер бакса. Был баҡсаның миҫалы донъяла күренмәмеш һәм ҡолаҡтар ишетмәмеш эсендә әбелхәйәт* кеүек ағар һыу, төрлө-төрлө ағастар һәм сантар, яҡут, йәүһәр кеүек, бәлки, быларҙан мең тапҡыр нәфис тупрағы, мәсәк һәм ғәмбәр эсендә ғәжәйеп күлдәр, аҫылмыш өҫтөндә былбылдар фарьяд вә фәған* итәләр. Уртала бер һыу буйында алтындан тәхет ҡоролоп, нурға ҡойонған был тәхеттең өҫтөндә Ләйлә менән Мәжнүн ултырмыштыр. Йә бер-береһенә жәм* һоноп мөсәхәбәт* итеп, зауыҡ вә сафа* итмәктәләр. Һәм быларҙың хеҙмәтендә бер әҙәм торалар. Һәм унда һәр төрлө тәғәм* килтереп алдарына ҡуялыр.

Зәйет был хәлде күргәс, бер әҙәмдән һораны:

- Был тәхет үҙәрендә булғандар донъяла ғүмерҙәрене һыуайә иректәләр, был дәүләткә ниҙән лайыҡ булдылар! — тине.

Был әҙәм яуап бирҙе:

– Был ике йәр садиҡ донъяла морадтарына ирешеп, бер-бере менән ҡауыша алманылар һәм һис бер көн рәхәт йөҙөн, йәғни донъяла рәхәтлек күрмәнеләр. Хаҡ тәғәлә хәҙрәттәре камил көйө әхирәткә килдектәрендә быларҙы йәннәткә индереп, зауыҡ вә сафа һөрһөндәр, — тине.

Тәмамат-тамам.

## 9. СЫҢҒЫҘНАМӘ[1]

### 1. Фи* шәжәрәи Чингиз хан<br>(1: Дастан нәсли Чингиз)

...Хәҙрәт Нух пәйғәмбәр ғәлиәссәләмнең дүрт (1: түрт) улы, тәҡи дүрт ҡызы бар ирде. Бере Хәм, бере Сәм, бере Кинфән, дүртенчесе Йәфәт ирделәр. Әммә ҡызларының атлары: әүәл Рөхәб, икенчесе Зөхәб, өченчесе Рөхәт вә дүртенчесе Зөхәт ирделәр. Вә Рөхәб үзенең сөләби* ҡызы улынып, ләкин Зөхәб, Рөхәт вә Зөхәт — өчәгүсе Нух ғәлиәссәләмнең доға нәселе Кучуктин, Ишәктин вә Мәчидин улып ирделәр. Хәмнең нәселе — ғәрәп, вә Сәмнең нәселе — ғәжәм халайыҡ*. Әммә Кинфән туфанда һәләк улмаҡла нәселе киселде. Вә Йәфәт нәселе — рум халҡыдыр.

Йәфәтне «Абу әл-Жахан» тип (1: диеп) һәм әйтерләр. Абу әл-Жахан улы яҡыр хан (Баҡыр хан), аның улы Ужан хан, аның улы Ауаз хан, аның улы Күк хан, аның улы Көтөм хан (1: Көнөм хан), аның улы Рөжәм хан, аның улы Сәм-сәүжи, аның улы Сәләр-сәүжи, аның улы Сикә-борон, аның улы Күчү мәргән, аның улы Кычумән, аның улы Карад-мән, аның улы Торомтай сәсән, аның улы Тумауыл мәргән, аның улы Дуйын Байан, аның улы Чингиз хан, аның улы Жучи хан (1: Йучи хан), аның улы Сәйен хан (1: аның улы Сартаҡ хан), аның улы Буртаҡ хан, аның улы Туғали хан

(1: аның уғлы Туктағи хан), аның уғлы Үзбәк хан, аның уғлы Җәнибәк хан (1: Җәнәбәк хан), аның уғлы Бирдебәк хан (1: Бәрдәбәк хан), аның уғлы Сыпак хан (1: Шыбак хан), аның уғлы Мәрәйгү хан (1: Мортаза хан), аның уғлы Күчүм хан, аның уғлы Арыслан хан, аның уғлы Борһан Солтан. Әммә Борһан солтан, урыс кулында хәбес булып*, мөртәд* булды.

## 2. Имде Чингиз ханның дәфтәре

Әүәл баштин сөйләгел (1: «сөйләйәлек). Әүәл башы нәфәчеләрендин* (1: нәғәж* бабаларындин) сөйләгел.

Әүәл заманда Ак диңгеҙ эчендә Мәлтә дигән шәһәр бар ирде (1: иде). Ул шәһәрнең ханының аты — Алтун хан тигән ирде. Ханшаның аты — Күрләүеч тигән. Ул ике падишаһтин (1: бадишаһтин) бер кыз туғды. Кызның атыны Ғөләмәлек Күрекле атадылар. Тәки айға, көнгә күргәзмәделәр. Кырк колач таш минбәрәйдә* куйдылар.

Әммә Күрекле андағ ирде: көлсә, короғ ағачка яфрак бөтәр* ирде; Такур ергә бакса, үлән бөтәр* ирде; сәчен тараса, энҗе түгелер ирде; төкөрсә алтун түгелер ирде.

Әммә донъяда бер артык (1: артук) туғмыш хан ирде, кашында* дәйәләре* бар ирде. Үҙенә (1: үзегә) якын дәйәсенең аты Урда хан тигән (1: дигән) ирде.

Көнләрдә бер көн балиғ улғандин суң, әйтер ирде кем*:

— Ай, Урда хан! Син сарайдин чыкарсын (1: чыксан) тышкар вә нә* күрерсен? — тиде (1: диде).

— Әммә «донъя» тигән бу сараймыдыр? Йә үзгә* ер бу сарайдин башка бармыдыр? Йә ошбу сарай эчемедер? — тиде. Урда хан әйде (1: әйтте):

— «Донъя» тигән тышкар* вә киң җиһандыр, — тиде. — Әммә «көн» тигән ике нәснә (1: нәрсә) бардыр. Донъяның раушаны* (1: раушанлығы) аның берләдер, — тиде.

Андин Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Ай, Урда хан! Син миңә ул нәснәләрне күргәзгел (1: күргәзәйлек), — тиде. Унда хан әйде:

— Син күрсәң, үләрсен, — тиде. Йәнә Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Үлсәм үләрмен, күргәзгел, — тиде ирсә, тәрәзәне ачып ебәрде (1: йәберде) ирсә, көн яруқы сарайға (1: өйгә) керде. Ғөләмәлек Күрекле аны күрде, (1: һушы китеп), ула калды.

Дәйәләре әйделәр:

— Ханға нә барып әйтермез?! — тип иғлашып ултырырлар ирде.

Бер көн булғандин суң исен йыйып алды. Дәйәләре* сағынышып ултыра тордылар. Тәки әйделәр:

— Нә күрдең? — тиделәр. Анда Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Баяғы күргән көндин корсағыма бала булды. Имде атама нә тип әйтерсез?! — тиде.

Әммә ул Алтун хан үзе вакыт-вакыт берлән (1: берлә) килер ирде, күрә торған ирде. Бер көн Алтун хан үзе кызын күрмәгә килде ирсә, күрәр кем: хәмлә* улыптыр. Кызына (1: кызыға) әйде:

Ай, ҡызым! Биткә сипкел төшөптер. Нә бәлә булды? — тиде.

Йәнә үзе ҡызы берлә өйгә килде. Әйде кем:

Аһ, Күрләүеч, хәләл жефет! Булғали мондайын (1: мондағ) оят ни ҡылғаны юҡ ирде. Ҡызымызға бер бәлә булыптыр. Нә ҡылсаҡ булыр? — тиде. Ан да Күрләүеч әйде:

Имде моны бу ергә, бу йортҡа биреп булмас. Аның өчөн әдәм улы шайтан берлән бер-бердер. Күп сүзләр, күп ауазлар чыҡар, — тиде.

- Имде әйлә улса, гүзәлне кәмә берлән Төн диңгезенә — салып бирелең, — тиде.

Андин суң кәмә төзөделәр. Ҡырҡ ҡыз-ҡырҡыны берлән, күк күгәрчене берлән, алтун ҡоры (1: ҡузы) берлән, тутый ҡошо берлән, сүнмәч чырағы берлән, төкәнмәс* азыҡы берлән Тора тағындин Төн диңгезенә алтун кәмәгә салып ебәрделәр. Вә йәнә әйделәр: Бер насипҡа юлыҡҡай — тип.

Андин суң бер ҡыч көн кичте ирсә, ул ваҡытта Торомтай чәчәннең углы Тумауыл мәргән (1: тигән) атасына ачы ирде. Идел башына чыҡып ятыр ирде. Ҡашында ҡырҡ кешесе бар ирде. Әммә эчендә бер ҡарауылчысы бар ирде. Шыпа Суҡыр тигән төркмән ирде. Маңлайында бер күзе бар ирде.

Бер көн әйде:

— Ай, Тумауыл мәргән! Алыстан бер ҡара күренер, — тиде. Ул Шыпа Суҡыр әйде: — Бер алтун кәмәдер, — тиде. — Бер ҡара таутик* ҡыбат* торадыр, үтә күрәрмен, — тиде. — Синдин (1: синдән) сөйенче үтенәмен. Эче синең булсын, тышы минең булсын ирде. Ул кәмә таңлатуш ваҡытында килер булғанда, — тиде. Андин Тумауыл мәргән әйде:

— Хуш, алай булсын! — тиде.

Андин кем торор — һич бозмаға йурығын-йусығын (1: йурығын-йүнен) белмәделәр. Анда Шыпа Суҡыр төркмән әйде:

— Ай, Мәргән! Атып бозмағыл! — тиде. Андин Тумауыл мәргән әйде:

— Туры атайынмы, ҡыя атайынмы? — тиде. Шыпа Суҡыр төркмән әйде:

— Туры атсаң, эчендә ханлыҡ нәрсә булса, тегәр булғай. Ҡыя атып бозғыл, — тиде.

— Хуш, алай булса, ҡыя атайын — тип, уҡын яға* кизләп тултырып* андағ атты кем — Кәмәнең (1: өж*) таҡтасын ырғытып йәберде.

Имде кәмәне ҡыя атып бозған өчен «Кыят Тумауыл мәргән» тип әйтерләр. Имде ҡыят халҡы асылы төп бунлардыр*...

Йәнә ул кәмәне бозғандин суң Ғөләмәлек Күрекле чыҡты. Ҡырҡ ҡыз-ҡырҡыны берлән, күк күгәрчене берлән, алтун ҡоры берлән, тутый ҡошы берлән — барчасын Тумауыл мәргән алды. Кәмә тышын Шыпа Суҡыр төркмән алды.

Андин суң Тумауыл мәргән, ул кичә чадур (1: чадыр) ҡороп, ҡызны алып ятыр булды. Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Ай, мәргән! Безне сиңә тәңре биргәндер. Ҡачан да булса мин синеңмен. Мәгәр бер әнчә* көнгә сабыр ҡылсаң булыр ирде. Ҡорсағымда бер бала вардыр (1: бардыр). Вә ләкин ҡорсағымдағы бала

әдәмдин (1: әдәмдән) булған дәгелдер, нурдин (1: нурдан), ҡояштин (1: ҡояштан) булғандыр, — тиде. Анда Тумауыл мәргән: — Мин ул ҡорсаҡта булған (1: ҡорсаҡтағы) балаңа баҡмазмын, алып ятырмын, — тиде. Анда Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Һай, син мәргән! Һәр йәнә күктә йөрөгән аҡ шоңҡар ирдем имде. Сезнең ҡарағайтик* буйыныңға ҡунайым. Сез ир кеше. Сезгә күп ҡарыу итеп* булмас, — тиде. Әммә күңелемне ҡалдырмасаң, булыр ирде, — тиде. Андин Тумауыл мәргән әйде:

— Хуш, синең күңелеңне ҡалдырмазмын, — тиде.

Андин суң ул кичә чадур ҡороп яттылар. Морадларын таптылар. Андин Тумауыл мәргән әйде:

— Ай, Ғөләмәлек Күрекле! Бу ҡорсағындағы бала ҡояштин булғаны чин ирмеш. Әдәмдин булған булса, ҡыз бумас ирдең, — тиде. Сөйөклеге артыҡ булды. Андин Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Ғүмеремдә ир йөзөн күргәнем юҡ торор. Бу көн кич сине күрдем, — тиде. Андин Тумауыл мәргән әйде:

— Үзе быуаз, үзе ҡыз! Уразлы* иркә төш булды (1: булсын), — тиде.

— Ашыҡмаҡлыҡҡа (1: ашыҡмаҡлығым) ул ирде, — тиде. Андин Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Минең ҡәдеремне яхшы белгел, — тиде. Андин Тумауыл мәргән әйде:

— Ай, Ғөләмәлек Күрекле! Минең сөймәклегемнең нишаны* улдыр кем:

Минең ағачым — ҡарағай,
Шоңҡар ҡошом сәчен тарағай,
Тамғам ачаманы булсын, — тиде.

Ул сәбәптин «Кыят ачамай тамға» тип әйтер. Сифаты ошбудыр:



Андин йәнә бер әнчә көндин суң ҡорсаҡтағы бала туғды. Аның атыны, тәңре биргән дуйынлыҡтар тип, Дуйын Байан атадылар.

Йәнә бер әнчә көнләрдин суң Тумауыл мәргәнең атасы Торомтай чәчән үлде. Тумауыл мәргән атасы йортона ҡайтып ултырды. Хан булды.

Ханлыҡҡа ултырғандан суң Ғөләмәлек Күрекледән икесе уғлы туғды. Бересене Бүдәнәтәй, икенчесене Билгүтәй атадылар. Ул ике уғыл туғандин суң Ғөләмәлек Күрекленең күңеле яман булды. Анда Тумауыл мәргән әйде:

— Ай, Ғөләмәлек Күрекле! Халыҡ уғыл (1: уғул) тапса сөйенер. Син нә, уғыл табып, күңелең яман булды? — тиде. Анда ул Ғөләмәлек Күрекле әйде:

— Мин боронғы уғлум Дуйын Байан өчөн ҡайғырырмын, — тиде.

Коланга эйәргән чәчәккә аунар,
Дуңгызга эйәргән балчыкка аунар.
Син хан углы дәгелсен,
Йортка лайык дәгелсен, — тиерләр.

Үз хәлен белмәсләр,
Күзе малга туймаслар.
Бүдәнәтәй, Билгутәй
Йортка лайык ирмәсләр.
Мин — арыслан баласы,
Йөрәрмен сиңә килеп,
Нә күрдем? — тигәймен, —

тиде. Анда Тумауыл мәргән әйде:

– Хуш, нә итмәгә куясың? — тиде. Анда Гөләмәлек Күрекле әйде:

– Син үлсәң йортоңны угылларың Бүдәнәтәй, Билгутәй биләр. Мин нурдин, кояштин булган Дуйын-Байан өчөн кайгырырмын, — тиде.

– Имде бу ике углымыз Бүдәнәтәй, Билгутәйне калмакка (1: калмакга) ебәргел! — тиде.

Андин суң Тумауыл мәргән ике углы Бүдәнәтәй, Билгутәйне калмакка ебәрде. Тәки икесенә ите бешәр нөкәр* кошты аулар калмакта барып мәкәм йорт* тоттылар. Бер ердә тордылар.

Имде калмак түрәләренең асылы төп Бүдәнәтәй, Билгутәйдиндер.

Йәнә ул икәү киткәндин суң бу Дуйын Байанга кыз алдылар. Алгун хан нәселендин (1: нәселендән) ете солтан бар ирде. Аның кечесе Торлөклө тигән ирде. Аның кызы Аланґуны Дуйын Байанга алдылар.

Йәнә ул Дуйын Байандин өч угыл тугды. Берсенең аты — Бүдәнжәр, икенчесенең аты — Кәгинжәр, өченчесенең аты — Салжут (1: Салчут). Имде Кыят ыругы (1: орогы) Бүдәнжәрдин торор, тәки* хытай халкының ыругы Кәгинжәрдин торор, тәки салжут халкының (2: салчут) ыругы (2: ыругы) Салжуттин торор.

Имде Тумауыл мәргән егерме йыл ханлык сөрде. Андин суң Дуйын Байан ун тукыз йыл ханлык сөрде.

Йәнә Дуйын Байан үзе үлде. Андин өч көн борон халыктин бәкләрен йыйып әйде:

Аһ, ай, калтак* халык углы!

Беленңләр: үлемдин (1: үлемдән) һич котолгомыз юк ирмеш.

Әҗәл етеп килсә дарыу, дарман булмас ирмеш.

Мин: «Алган хатыным (1: хатуным) Аланґуным берлә бергә үләрмен», — тигән ирдек. Имде әҗәл иреште. Мин үләрмен, сезләр каласызлар.

Имде сезләргә, ай, халык углы, васыят сүзем булсын, — тиде. — Бу миндин туган (1: турган) өч угыл Бүдәнжәр, Кәгинжәр, Салжут — булар йорт тотмакка яхшы ирмәсләрдер. Йәнә имде, ай, халык углы мин, үлгәндин суң, Аланґуга төш-төл булып килермен. Анда йортка яхшы лайык бер угыл пәйдә булыр, — тиде. — Һай, халык углы! Һәр йәнә аны көткәйсез, — тиде. Йәнә:

Билгем ул булыр кем:
Мин, үлгәндин суң,
Көн булып янармын.
Бүре булып чыкармын.
Мине андин белең (1: беленңез! ) —

тиде. Бу сүзне халайыкҡа васыят ҡылғандин суң, Дуйын Байан донъядин үтте.

Әммә, Дуйын Байан донъядин үткәндин суң, ҡалмаҡтағы ике энесе Бүдәнәтәй, Билгүтәй ишетеп кем: «Ағымыз Дуйын Байан үлде, жиңгәмез Аланғу тол ҡалды», — тип видәдгә* килделәр. Утыз үзбәк нөкәрләре берлән урын алдылар. Йәнә Бүдәнәтәй, Билгүтәй әйделәр: «Жиңгәмез Аланғуның ҡайғыра-ҡайғыра ағамыз көйөгендин (1: көйөгендән) күңеле яман булып торор», — тип тупчаҡ атларын* менеп, ау аулай чыҡтылар. Байыр (1: яйыр) тағына бардылар, кик ауладылар. Бер кикне терек тотоп алып ҡайттылар.

Анлар ҡайтып килә торған урмандин (1: урмандан) бер ҡәүем* кеше чыҡтылар. Барып юлыҡтылар (1: юлуҡтылар), сорадылар:

— Һай, ҡайдин килерсез? Ни кешеләрсез? Анлар* әйделәр:

— Безләрне сорасаң, Хытай (1, 2: Ҡатай) шәһәрендин посоп (1, 2: босоп) киләмез (1: киләбездер), — тиделәр. Анлар әйделәр:

— Сезләр һәм ни кешеләрсез? — тиделәр. Бунлар (1: булар) әйделәр:

— Без ҡалмаҡ халҡының түрәләре Бүдәнәтәй, Биләүтәймез, — тиделәр. Анлар әйделәр:

— Безләр өч айдин бирүк посоп киләмез, — тиделәр. — Азығымыз төкәнде, ачмыз, — тиделәр. — Безгә рәхим идеп бер нәрсә бирсәңез йәки ошбу кикне бирсәңез, нә булыр? — тиделәр. Анлар әйделәр:

— Түрәңездин ни өчөн посдоңыз? Бигерәк ач булың? — тиделәр. Анлар әйделәр:

— Түрәләремез көч ҡылдылар, залим булды, чыдамадыҡ, посток, — тиделәр. Бунлар әйделәр:

— Хуш! Алай булса да бу терек кикне бирмәсмез, — тиделәр.

— Бу тол ҡалған жиңгәмез ағамыз үлгәнгә ҡайғырадыр. Аңа уйынға алып барамыз. Күңеле ачылсын, — тиделәр. Анлар әйделәр:

— Яранлар юҡ ирсә, безнең бер уғыл баламызны алыңыз. Безгә бу кикне биреңез. Без ач үлмәлек, — тиделәр.

Бунлар анларға ҡуйның бер ботон биреп, уғыл баласын алдылар. Бүдәнәтәй, Билгүтәй әйделәр:

— Жиңгәмезгә уйынға бу яхшыдыр, — тиделәр. Сөйөнделәр.

Ул алған уғылның аты ялын тигән. Аның атасының аты Миңкәтәй бей (1: Мәңкатай бей) тиген ирде. Ачлыҡтин, сыусызлыҡтин (1: дармансызлыҡтин) бей уғлы ялынны бер ботҡа бирделәр. Бүдәнәтәй, Билгүтәй ул уғылны алып килделәр. «Жиңгәмезнең йылҡысын баҡып, ҡымызны тоторға бу яхшыдыр», — тиделәр.

Ялынны килтереп жиңгәсе Аланғуға тапшырдылар. Аланғу аны төбен, асылын белеп яхшы асырады.

Андин суң Бүдәнәтәй, Билгүтәй әйделәр:

— Ай, жингә! Безгә рөхсәт биргел. Безләр ҡайтырмыз аның өчөн кем: без монда киткәндин суң Таңғуттин (1: Таңуттан) илче килептер. Яман хәбәре бар ирмеш. Без ҡайтамыз (2: ҡайтабыз), — тиделәр. Анда Аланғу әйде:

— Ай, ай, ҡайын энеләрем Бүдәнәтәй, Билгүтәй! Бер әнчә көнгә сабыр итсәңез булыр ирде. Аның өчөн кем: имде минем өч уғлым: Бүдәнжәр, Ҡәғинжәр, Салжут халҡын белмәс булдылар. Золом*, көч ҡылырлар, сүзем дыңламыслар (1: тыңламаслар). Бунларға ғаҡыл, өгөт бирсәңез, — тиде.

Будәнәтәй, Билгүтәй әйделәр:

— Ай, жиңгә! Безнең ғаҡыл, васыят, өгөт улдыр кем: бу энеләремез синә, тәки бәкләренә, йәнә (1: тәки) ил олоғларына яман улалар. Яхшы тотар.

Имде беленләр: уңар йортның нишаны, билгесе бу торор:
Жаудин (1: жаудан) илен күп итәр,
Ҡала төбөн үз итәр;
Тәрәзәсен (1: дәрүәзәсене), түбәсен киң итәр;
Жау илгә, ят нөкәргә серен әйтмәсләр;
Ололарын түргә кечерер (1: кечереп),
Кечеләрен хеҙмәт ҡалдырыр.
Йәнә беленләр кем:
Уңмас йортның нишаны бу торор:
Үз йортон яманлар ,
Кеше йортын маҡтар;
Үз ағасын яманлар,
Кеше ағасын — маҡтар;
Үз ыруғын яманлар,
Кеше ыруғын маҡтар;
Олосы торор, кечесе сүзләр (1: сөйләр);
Атасы торор, уғлы сүзләр,
Мәғҡәлче*(1: мысҡылчы) булыр.
Ерән атҡа (1: ат) менгән
Ҡызыл йөзле уғландин
Киңәш сораған ул — кеше
Кеше булып йорт көтмәс;
Ил утаған (1: улмаған) ил булса (1: улса),
Ул ил ил булмас;
Мал көтмәгән мал көтсә,
Төйә уҡладыр*(1: ҡыу үләнне утлатыр);
Ҡош чөймәгән ҡош чөйсә,
«Ҡарға берлән ҡаз алдырмын!» — тир;
(1: төйә көтмәгән төйә көтсә,
«Кешен атын ейәрмен!» — тир;)
Күн күрмәгән күн күрсә:
«Күн итекне кейәмен (1: киймән)!» — тир;
Мал тапмаған мал тапса,
«Кеше күзгә алмаймын (1: элмән)!» — тир.
Анындик тыуар* (1: тура көтмәгән тура) көтөп,
Малсызлар маллы булып,
Безнең бу энеләремезне андағ кешеләр аздырыр», — тиделәр.
«Һәр йәнә белмәгәнләр белерләр,
Үгрәнмәгәнләр үгрәнерләр, — тиделәр.
(1: Моңа дәлил сүз дә һәм бардыр.)
«Меңәр дәлил сора да һәм beләрдер.
Икмәкчедән (1: әйтмәкчедән) киңәш сорадым (1: сорамағыл),
Тимерчедән киңәш сорадым (1: сорамағыл), ҡасабчыдан* киңәш сорадым (1:сорамағыл).

Күргән күргәнен әйтер,
Күтәргән икмәген сатар.

Имде тәңресенә тәүбә кылсын! Олоғлардин, бәкләрдин киңәш сорасын! Имде васыятым, өгөтем, әйтер сүзем мондин артык юктыр, — тиделәр.

Йәнә бу сүзләрне әйткәндин суң Бүдәнәтәй, Билгүтәй йортларына кайтылыр.

Анлар кайткандин суң бу өч уғыл: Бүдәнжәр, Кәғинжәр, Салжут ағаларының өгөт-васыят сүзен тотмадылар.

Анасын санға санамадылар
Уңмас булдылар.
Йыл, көн бәкләрә,
Йәнә халык уғлына
Вә кызына үч итә башладылар.
Байларның айыры үркәчле кари төйәсен
(1: гәйере үзгә чалыч бонар төйәсен),
Аяғы чалыш юрғасын,
Муйыны озон арғымағын,
Батыр егетләр кейәр көбәсен*,
Яхшы бәкләрнең кызларын алдылар.

Бу эш халык уғлы* күнмәс-чыдамас булды. Жыйылып килеп Аланғуға әйделәр:

— Аһ, Аланғу! Безнең итемезне ейеп (1: итемез бөтөп), сөйәгемез калды. Имде чыдарымыз (1: чыдар хәлемез) калмады, — тиделәр. Анда Аланғу әйде:

— Аһ, ай, халык! Анлар минем сүзем тыңламаслар, сезләрнең һәм кәдереңезне белмәсләр, — тиде. Анда Аланғу әйде:

— Аһ, ай, халык уғлы*! Минем ирем Дуйын Байан сезгә әйтмәдеме: «Мин, үлгәндин суң, төш-төл булып килермен», — тимәдеме? Имде вакыт килгәндер. Расыңыз булса, ир уғыл булғай, — тиде. Анда Аланғудин бу сүзне ишедеп, халык уғлы сөйөнделәр, шад булдылар.

Йәнә андин суң Аланғуның бу сүзе халык арасында мәшһүр булды. «Донъяға качан килерер?» — тип, аны көтәр ирделәр. Анда Аланғуның өч уғлы: Бүдәнжәр, Кәғинжәр, Салжут халайыктин ишеттеләр, ачуланышып, йыйылышып, көн аналарына килделәр.

Анда Аланғу әйде: «Балаларым! Имде кайда барасызлар?» — тиде. Анда анлар әйделәр: «Синең бу утрук* сүзең ишедеп килдек», — тиделәр. Анда Аланғу әйде: «Ай шомлар! Минем сүзем нә өчөн утрук булсын?! — тиде. Анлар әйделәр:

Үтрүк булмай, нә булсын?!

Корсағымда (2: корсакымда) бер бала бар, тип халык уғлына әйдеп, син безне уғылға санамай, корсағыңдагы баланы көттерөрсөн. Үтрүк булмай, нәдер?! — тиделер.

Сакалунмы* (1: сакалуғмы) син,
Сыу эчеп быуаз булмаға?!
Мани тигән кошмы син,
Көн эсесейә (1: эсесенә) быуаз булмаға?!

Ќауын-ќарбузмы син,
ирсез ауырлыќ эймәгә?
Тауыќмы син, көлгә аунап йоморќа
(1, 2: йомғортќа) салмаға?!
Ќорт анасымы син,
күбек ашап быуаз булмаға?!
Синең ирең үлгәндер.
Ќорсағымда бала бар, —

тип халыќны аздырырсың, — тиделәр.

Эллә син төнәге көн бер ботќа сатып алған ялын берлән уйнаш идеп быуаз булғасын?! — тиделәр.

Анда Аланғу эйде:

Аһ, ай, халыќ! Бу сүз бунларның (1, 2: бу шомларның) сүземедер вә йә сезнеңмедер (1: сезләрнеңмедер)? — тиде. Анда халыќ уғлы ачыуланышып (1: иғлашып), гөрелдәшеп эйде:

Бу сүз уғылларның сүзедер, — тиделер. Анда Аланғу эйде:

— Аһ, ай, халыќ! Имде ышанмасаң, сүзем улдыр: бер-ике-өч кеше аңдыңыз! Билгесе улдыр кем: көн* булып янар, бүре* булып чығар», — тиде.

Андин суң Аланғуға белдемәй өч кеше килде. Андин бу өч кешенең атлары бунлардыр:

Берсе Ќыбчаќ (1, 2: Ќыпчаќ) тигән ирде,

Икенчесе — Ќолмөхәмәд (1: Килмөхәмәд) тигән ирде,

Өчөнчесе — Ороч

(1: Урдаж, 2: Орож) тигән ирде.

Бу өч кешене өндәделәр.

Таң мәңе булған ирде.

Һауадин бер яруќ көн инде.

Курделәр ирсә, исләре китте.

Бунлар йәнә бер әнчәдин суң, исләрен йыйып алдылар ирсә, берберендин сорадылар:

Баяғы көн булып ингән нә ирде? — тиделәр.

Киленез, без исергәндик* (1: безләр исергән кешетик*) булып ултырғанча ялларымызны таратып* жикәлиң (1: чигәлик; 2: чыќалың). Бүре булса, чыќар, — тиделәр. Андин, тора салып, ялларын таратып жиктеләр. Күрделәр кем: йылќы яллы күк бүре чыќа килде. Артына ќарап: «Чинкиз (2: Жинкиз)! Чинкиз!» — тип ауаз бирде. Барып урман эченә инде. Бу өч кеше:

Эшкәрә* күрделәр, — тиделәр.

Бунлар йәнә барып бу эшне Бүдәнжәр, Ќәғинжәр, Салжутќа эйделәр: «Буласы булыр, булмай ќалмас, безнең өлешемезне алмас», — тиделәр.

Андин суң Аланғуның күзе йәр үрде. Бер ир уғлан туғды (1: туғырды). Алтун язарлыќ яғрында*, мөһерле мөһерендә Жабраил фәрештәнең аты бар торор ирде. Үзе бүре яғранлы, ир чырайлы, күрекле* нәселе. Йөзен күргән кеше: «Артындин үләйен», — тир ирде. Ќашында ултырғанлар майтик ирер ирделәр. Вә тәки: «Атым, туным синең булсын!» — тип ирде.

Андин суң Чингиз үсте, олоғайды, халыҡҡа ғәдел дад ҡылып*, файдалығ булды. Халыҡ уғлы буны сөйөп, үгүп, Чингизға эйәрә башладылар. Чингизны «ғәйәт яхшы хан» тип, «ханның женесе, баласы» тип маҡтадылар.

Ағалары Бүдәнжәр, Ҡәғинжәр, Салжут бу Чингизны күрә алмас (1: булдылар), көнләделәр (2: Күрекле — тиделәр.) Тәки* әйделәр:

Күреңләр, имде нөкәрләремез, халҡымыз уйнаштин тыуған уғылға әүәрә булды, — тиделәр.

Аны үлтереӊ (1: үлтерәлен)! Юҡ ирсә тынмазмыз (2: тынмазбыз), — тиделәр.

Андин суң йәнә бу өч уғыл, киңәш идеп, йыйылып, бер көн килделәр, халыҡҡа яр салдылар:

Чингизны үлтерәмез (2: үлтерәбез)! — тиделәр. Анда халыҡ уғлы әйделәр:

— Һай, Чингиз сез өчәүеңездин йортҡа лайыҡраҡ охшайдыр. Халыҡҡа файдалығдыр. Бу Чингизны сезгә үлтерергә бирмәсмез (2: бирмәсбез)! — тиделәр.

— Әгәр мал өләшеп алыр булсаңыз, анаңызның малын өләшеп алыңыз! — тиделәр.

— Юҡ ирсә, аның өчөн без үләмез, — тиделәр.

Анда бу өчәү халыҡ уғлындин бу сүзне ишеткәндин суң, ҡурҡып, нәрсә ҡыла алмадылар. Әммә күңелләрендә әйделәр:

— Халыҡ уғлы бу Чингизға ауыптыр. Моны билгеле үлтереп булмас. Халыҡҡа белдермәй үлтерермез, — тиделәр.

— Хуш, андағ булсаңыз, атамызның малын өләшеп алырмыз, — тип аталарының һәр йәнә ҡылған малын өләшеп алдылар. Әммә Дуйын Байанның бер алтунлы гәүһерле садаҡы бар ирде. Баһасын тапмадылар. Өләшмәй ҡуйдылар. «Имде анамыз кемгә халыҡ бойорса, бу садаҡны ул алсын!» — тиделәр.

Өлөшөнә тейгән малларын алғандин суң, садаҡны алып, анасы ҡашыға* килделәр. Тәки әйделәр:

— Ай, анамыз! Сез кемгә ярлыҡап ханлыҡ биреңез — бу алтунлы садаҡны ул уғлуң алсын! — тиделәр. Анда Аланғу әйде:

— Аһ, ай, балаларым!
Үз йортон яманлар (1: яманлаған)
Үзгә йортта сүгүш булыр.
Анасын яманлаған
Ят дошманға тотҡон булыр.
Үз кешесен яманлаған
Ят дошманға хур булыр.
Сез, шомлар,
Минем сүзем тотармысыз? —

тиде. Ул өчәү әйделәр:

— Былай хуш, тотармыз, — тиделәр.

— Имде сезләр сүз тотар булсаңыз, тәрәзәдин төшкән көнгә футалы футаңызны* салыңыз! Ҡайсыңызның футасы аңа әйләнеп туҡтаса — ул уғлым хан булсын, тәки* бу алтун-гәүһәрле садаҡны ул алсын! — тиде ирсә, Аланғуның бу сүзен анлар хуш күрделәр.

Билләрендин (1: билләрендән) алтунлы футаларыны салып, бактылар. Өчәүсенең һәм футасы әйләнмәде. Мәгәр Чингизның ефәк футасы бар ирде. Ул һәм салды. Аның футасы әйләнеп туктады. Анлар, бу эшне күреп, таңга калдылар. Тәки ачыуландылар, әйделәр: «Бу анамыз Аланғу ғәйәт жаду* ирмеш. Күземезне бағлады», — тиделәр. Күңелләренә яман алып киттеләр. Әммә һәр даим Чингизны үлтермәк касыдында* йөрөрләр ирделәр.

Андин суң бу йәш уғыл Чингиз: «Бу ағаларым минең дошман булдылар. Мине андып, үлтерер», — тип киңәш идеп, бер-ике-өч егет үзенә эйәртеп, анасы Аланғуға килде. Әйде: «Ай, анам! Мин имде бу ердин (1: ердән), бу йорттин (1: йорттан) китәрмен. Ошбу Тикәлек сыуының башында Күрлән тигән кара тау (2: тағ) бардыр. Ул тауда мәкам-йорт* тотармын, кош-корт ауларммын. Ул аулап алған кош жөнөн йолкармын, аны сыуға ебәрермен. Безнең тереклегемезне ул жөндин (1: йөндән) белгәйсез! Айыу акыртырмын, арыслан йүгертермен. Һәр кем мине эзләй-сорай барыр булса, мондин белсенләр», — тиде. Үзләре киттеләр, анасы иғлай калды.

Иртәсен халык уғлы күренешкә килделәр ирсә. Чингизны күрмәделәр. Тәки сорадылар: «Чингиз ханымыз кайда?» — тиделәр. Эстәп* тапмадылар. Чырмалып (1: чубырланып, чымғанып*; 2: жыуа шып һәм ғәйәт) иғлаштылар. Андин суң Аланғуға килделәр. Андин сорадылар. Ул һәм әйтмәде.

Чингиз хан казак чығып (2: чыкып) киткәндин суң ағалары Бүдәнжәр, Кәғинжәр, Салжут халык уғлына золым, көч иттеләр. Халык уғлы чыдамайын, Аланғуға килеп әйделәр:

— Аһ, Аланғу! Ул уғлың Чингизны безгә күргезгәнчә күргезмәй жанымызны алсаң ирде. Имде нә өчөн күргәзеп жанымызны алдың? — тиделәр, йәнә иғлашып. Анда Аланғу әйде:

— Аһ, ай, халык уғлы! Андағ булсаңыз, Чингизны сөйсәңез, иртә берлән биш-алты ыруғның яхшы кешеләре килеңез! Аңларға юлын, эзен күрсәтәйен, — тиде.

Андин суң иртә берлән алты ыруғларның яхшы кешеләре килделәр. Сорадылар:

— Юлы кайдадыр? — тиделәр. Анда Аланғу әйде:

— Хуш, имде барып шул Тикәлек сыуыға якын тороңоз! Хәбәре килер, — тиде.

Булар шул сыуның ягасына (1: ягасыға) барып карап тордылар. Һич нәрсә күрмәделәр. Мәгәр бер кәүем* кош жөне күрделәр.

Йәнә кайтып килделәр. Анда Аланғу сорады:

— Нә күрдеңез? — тиде. Анлар әйделәр:

— Юк, нәрсә күрмәдек. Мәгәр бер кәүем кош жөне күрдек, — тиделәр. Анда Аланғу әйде:

— Һай, кил. Имде минем уғлым Чингизның хәбәре ушал сез күргән кош жөнедер, — тиде. Сезләр ошбу Тикәлек сыуыны кыдырып эзләңез! (1: Тикәлек сыуының башында) Күрлән (1, 2: Күр-Күрлән) тигән кара тауның башында биш-алты ағач булыр. «Ушал ердә мәкам-йорт тотармын, кош аулармын, жөнөн йолкоп, сыуға ташлармын», — тигән ирде. Имде ушал жөнне эзләп барың! — тиде. — Әммә

Тикәлек сыуының иске ҡәдим (1: ҡара) йоласы улдыр кем: көндөз ташып ҡабағындин ашар, кичәсе сабасына төшәр, — тиде.

Анда йәнә Аланғу анларға әйде: — Имде сезләр ул ергә барып етеп һәр йәнә юлыҡсаңыз, күрсәңез: «Сезләр монда нә кешесезләр (1: кешеләрсез)?» — тип сорағанда, «Дуйын! Дуйын!» — тигәйсез. Әммә минем уғлым Чингизның төсе-нишаны улдыр кем: аҡ тунлы, күк атлы, алтун йөзөкле (1, 2: бүрекле), йөзе ғәйәт (1: күрекле), алтун садаҡлы, ир чырайлы, жабраилдик сынлы торор. Атын ҡамчылап (1: ҡамчыласа) ғәйеп булғандиктер. Андин аны белгәйсез, — тиде.

Әммә Чингиз ханны эзләп-эстәп барған бәкләрнәң атлары бунлардыр: әүәлгесе (1: әүәл Уйшын) Майҡы бей, икенчесе Ҡалдар бей (2: Ҡалдур бей), өчөнчесе Урдаж бей (2: Урауж бей), дүртенчесе (1, 2: түртенчесе) Ҡыпчаҡ бей, бишенчесе Тамъян бей, алтынчысы Кирәйет бей, етенчесе Юрҡыта бей (1: Буртаҡ бей; 2: Бурҡут бей), сигезенчесе Тимер Ҡотлығ бей (1: Тимер Ҡотло бей); туҡызынчысы Муйтән бей (1,2: Мүтиән бей), унынчысы Теленгут (1: Таңғут)2 ирде. Бу ун бәк, киңәш ҡылып, Чингиз ханны сөйөп, аны эстәмәк* ҡасыдында булдылар. Әммә дүрт бей буны эстәмәккә өнәмәделәр*. «Ҡулдағы ханымызны хурлап, алыстан эстәмәзмез», — тиделәр. Анларның берсе Ҡуңғрат бей (2: Ҡуңрат бей), икенчесе Ҡатай бей, өчөнчесе Салжут бей (1: Салчут бей), дүртенчесе Ҡыят ирде. Әммә бу Ҡатай, Салжут, Ҡыят[3] — өчәгүсе халыҡ уғлын (2: уғылларын) биләр ирделәр. Ҡуңғрат бей анларның ышанычлы кәңәшчесе ирде. Ҡуңғрат бей Чингиз ханны эстәмәккә бармады.

Бу әйтелгән ун кеше ул Ҡуңғратҡа баҡмадылар, киттеләр. Әммә Уйшын Майҡы бей үзгә бәкләргә белдермәй Аланғудин бер мөһәрле йөзөген алды. Андин Тикәлек сыуын ҡыдырып киттеләр. Өч айда барып еттеләр. Бер өчәү ҡая тауына (2: тағына) менеп ҡарадылар. Артларында бер аҡ сарай, бер күк сарай күрделәр.

Йәнә ҡайтып, бер аз йәнә килделәр. Ул сарайларға инмәделәр. Анда бер тау бар ирде. Ул тауның ҡабағында яттылар. Бер аҙна тордылар. Һич нәрсә нишан белмәделәр. Мәгәр бер аҙнадин суң бер ауаз килде. Ҡарға чарлағандик, кеше сүзләгәндик. Ҡарап йөрөп баҡтылар. Бер аз кеше килептер юлының юлы чыҡа ятыр. «Шул тауның ҡабағындин бере килмәгән охшайдыр», — тиделәр. Әммә (1: буларның ауазын ишетеп, ауазлары тынды) булар һич ауаз бирмәделәр. Ул көн һич нәрсә белмәделәр.

Иртәгесен айыу аҡырды, арыслан ҡычҡырды. Белделәр кем: «Чингиз хан ау аулай чыҡты», — тиделәр. Бунлар ул ауазы ишетеп, йүгерешеп бардылар. Күрделәр кем: бер күк атлы, аҡ тунлы, алтун бүрекле, алтун садаҡлы, ир чырайлы, жабраилдик күрекле сынлы Чингизны таныдылар. (1: вә белделәр).

Ул килгән Чингиз әйде:

— Кемсезләр (1: кемләрсез), безләрне (1: ни) андып йөрөрсез? Нә кешеләрсез? — тиде. Бунлар әйделәр:

— Дуйын! Дуйын! — тип. Бунлардин бу сүзен ишеткәндин суң, күзләрендин ғәйеп булды. Бунлар йәнә иғлашып ҡайттылар. Ул кич ҡайғырышып яттылар.

Андин йәнә иртә булды ирсә, оранлары берлән чарладылар. «Ау, туған (дөрөсө: «Актуған-д.с.) тутыя̇к, тутыя̇к (2: татыя̇к, татыя̇к), ак̇ тилак̇!» — тиеү чарладылар. Һич нәрсә ауаз килмәде. Андин суң йәнә ике көн, өч көн яттылар.

Йәнә бер көн айыу ак̇ырды, арыслан к̇ычк̇ырды. Белделәр кем: «Чынғыздыр! Ау аулай чык̇ты», — тип. Сөйөнештеләр. Йәнә барып күрделәр. Ушал кешенең ауазыдыр.

Андин бунларға Чингиз хан әйде: «Һай, сезләр кем? Һәр даим безне андып йөрөрсез!» — тиде. Бунлар әйделәр: «Дуйын! Дуйын!» — тип чаулашып тордылар. Бунлар иғлағанға Чингиз хан үзе һәм иғлады. Йәнә:

— Һай, сез нә өчөн монда килдеңез? — тип сорады. Бунлар әйделәр:

— Синең артыңдин әйәртә йөрөрмез, — тиделер.

Анда ул Чингиз хан әйде:

— Һай, сезне монда килергә кем үгрәтте? — тиде. Бунлар әйделәр:

— Безләргә рәхим к̇ылып бойорған анаңыз Аланғу үгрәтте, — тиделәр. Анда Чингиз хан әйде:

— Хуш! Имде андағ булса, к̇аны, миңә анамның бер билгүсе бармы? — тиде ирсә, үзгә бәкләр тик тордылар ирсә. Әммә Уйшин Майк̇ы бей к̇улындин (1: к̇улындан) Аланғудин (1: Аланғудан) алған мөһөрле йөзөкне чығарып (2: чык̇арып) бирде. Анда Чингиз хан йөзөкне алып бак̇ты ирсә, Аланғуның мөһөрле йөзөген таныды. Тәки колон әйде:

— Ай, Майк̇ы! Әгәр мин хан булсам, бәклек синең булсын! — тиде. — Әгәр син бу мөһөрле йөзөкне алып килмәсәң, миңә анамның бер нишанын килтермәсәң, мин сезгә юк̇ ирдем. Тәки сез миңә иш юлдаш булмас идеңез, — тиде.

— Әммә бу сүздин, үзгә* бәкләрәм, сезләр һәм күңелеңезгә яман алмаңыз! Сезләр барчаңыз минем жанымсыз, — тиде. — Киләңез, имде барчамыз к̇ошк̇а* к̇айталик̇! Анда барып ултыралик̇! — тиде.

Сарайға бардылар. Бер аз ғына (1: анда) ятып аш ейделәр*. Төрлө шараплар эчтеләр. Сүнмәс чырағ, төкәнмәс* тәғәм (1: аш) ейделәр*. Андин суң йәнә Чингиз хан әйде:

— Киләңез, имде киңәш к̇ылып ултыралик̇! — тиде. — Сезләр кем безне эстәп килепсезләр? Ничә ыруғ халык̇ берләнсез? — тиде. Бунлар аяк̇к̇а ултырып (1: үрә тороп) үтенделәр вә тәки әйделәр:

— Ай, олоғымыз, ханымыз! Безләрдин кем сорасаңыз, безләр, монда сезне эстәй килмәк ун кешемез, тук̇ыз (1: тук̇уз) ыруғдан, — тиделәр.

— Әммә К̇алдар бей ялғыз бер үзедер. Анаңыз Аланғу безгә к̇ушып әйде, — тиделәр.

— Әммә К̇уңғрат сезне эстәмәккә өнәмәде. Ул үзе, тәки ыруғы, ағаларының к̇ашындадыр, — тиделәр.

— Без сезнең мөбәрәк йөзөңне (1, 2: йөзөңезне) арзыулап*, артуңыздин (1: артуңыздан) әйәртә (1: үләйәтә) килдек. Сезгә к̇ушылдык̇ һәм үземез һәм барча ыруғ халк̇ымыз. Безләр синең к̇олоңызмыз, — тиделәр.

Анда Чингиз хан анлардин бу сүзне ишетте ирсә, сөйөнеп әйде:

— Бәкләрем, олоғларым! Имде бу көндин суң сез минемсез, мин сезнеңмен, — тиде. Анда бунлар Чингиз хандин бу сүзен ишедеп гәйәт сөйенделәр. Тәки*:

— Имде сине безләргә тәңре бирде. Аның шөкерлеге өчөн бу менеп килгән атларымызны азад ебәр әле, — тиделер. Менеп барған атларын Чингиз ханны булғанлары өчөн азад ебәрделәр.

Андин суң Чингиз хан бунларға әйде:

— Һай, мине нә берлән илтәрсез? — тиде. Анлар нә берлән алып барасын белмәделәр. Әммә Ҡалдар бей әйде:

— Мин бер һөнәр чыҡарайын, — тиде. Бунлар әйделәр: «Күрсәт!» — тиделәр. Һич кем ирсә белмәс ирде. Үз осталығындин (1: осталығындан) бер арба (2: араб) ясады. Арба бәрен* (1: пәрен) сорасалар:

— Ялыҡ бей уғлы Ҡалдар бей, — тимәк кирәк.

Анда арбаны төзөп тамам ҡылғандин суң, Чингиз ханны арбаға ултырырға өнөттеләр (1, 2: үтенделәр). Чингиз хан килеп арбаны ҡарады.

— Хуш ҡылыпсын, — тип Ҡалдар бейне маҡтады.

Андин суң Чингиз ханны арбаға ултырттылар. Бу барған бәкләр үзләре арбаны сөрәделәр, тарттылар. Анда Уйшин Майҡы бей әйде:

— Ай, бәкләр! Мин сезнең шайаңызны бирә алмандыр*. Аяғым (2: аяҡым) ҡысҡадыр, — тиде. Анда бәкләр әйделәр:

— Имде нитәк* ҡылырсын? Анда Майҡы бей әйде:

— Мин хандин үтенәйен. Рөхсәт булса, хан берлә ултырайын. Ҡайсыңыз арбаны тартмаса, мин аны таяҡ берлән күтеңә (1,2: күтегә) төртәйен, — тиде. Анда бунлар әйде:

— Хуш, алай ит! — тиделәр.

Андин суң Майҡы бей Чингиз хандин үтенде. Тәки әйде:

— Ай, ханым! Минем аяғым ҡысҡадыр. Арбаны тарта алмандыр. Бойорсаң, мин синең берлән арбаға ултырырмын, — тиде. Анда хан әйде:

— Хуш, ултыр, — тиде.

Андин суң бу бәкләр бер ничә көнләрдин килә-килә Чингиз ханны алып Аланғуның шәһәренә еттеләр. Аланғуға хәбәр ҡылу сарайға еттеләр. Анда Чингиз ханның артындин ҡайсысы инәрен белмәделәр. Анда Майҡы бей әйде:

— Ай, ханым! Сездин (1: сездән) суң арба тартҡан үгүз инәрме йәки аны екkән эйәсе инәрме? — тиде ирсә, анда хан әйде:

— Эйәсе инмәй, үгүз инәрме?! — тиде ирсә, Майҡы бей рәуан йүгереп керде. Ханның уң янында урын алды. Үзгәләре йәнә ултырды.

Иртәгесен Чингиз хан ул ыруғ-илнең кешесенә олоғ ҡырғын иттеләр. Ушал олоғ ҡырғында Бүдәнжәр, Ҡәгинжәр, Салжутны, тәки Ҡуңғрат бейне тамам ҡырдылар, үлтерделәр, иман бирмәделәр.

Әммә ул ваҡытта Ҡуңғрат бейнең бер ҡыз ҡарындашы бар ирде. Бүртә Ҡучин атлығ ирде. Ул Бүртә Ҡучин: «Олоғ ҡырғында һәләк булмасын», — тип, дүрт уғылны алып ҡалды. Йәшереп асырар ирде. Берсе Бүдәнжәр уғлы ирде, икенчесе Ҡәгинжәр уғлы ирде; өченчесе Салжут уғлы ирде, дүртенчесе (1, 2: ағасы) Ҡуңғрат бейнең уғлы ирде. Һич бер халыҡ уғлыға белдермәде.

Анда халык уғлы айаңлашып (1: аңлашып) тиргәшеп чыкардылар. Тәки Чингиз ханға барып әйттеләр ирсә, Чингиз хан ачыуланып әйде:

— Кешеләрне йәшерептер, кемдер? (1: Кешеләрне йәшергән кемдер?) — тиде. Анда торған бәкләр әйделәр:

— Ай, ханым! Куңғрат бейнең кыз карындашы Бүртә Кучин йәшерептер, — тиделәр. Анда хан әйде:

— Барыңлар, анысын да тезектереңләр! (1: аны монда тиз килтереңләр) — тиде ирсә, рәуан ук бардылар. Бүртә Кучинға әйделәр:

— Тор! Тиз бул! Сине Чингиз хан өндәр! — тиделәр.

Анда Бүртә Кучин бу сүзне ишетте ирсә:

— Хуш, барайын, — тип тора салып чире* кеше тунын (1: тунны) елбәкәй* ябынып. Тәки бер аларның бер башмакы (1: бер ал ефәк бишмәте) бар ирде. Аны кейде. Тәки бер кара төлкө бүрке бар ирде. Аны башына (1: башыка) кейде. Тәки ул йәшереп алып калған дүрт уғлыны үзе берлән бергә алды. Ул уғылларның кайсысы ун йәшәр, тәки берсе ун бер йәшәр, тәки берсе ун өч йәшәр, тәки берсе ун дүрт йәшәр ирделәр. Бу уғланлар ғәйәт күрекле ирделәр. Бүртә Кучин үзе һәм анлардин биш артык ирде. Андағ сулу кешене ул заманда һич (1, 2: кеше) күрәсе юк ирде. Тәңре кодрәте берлән пәйдә булмыш ирде. Кырк колач сәче бар ирде. Артындин (1, 2: ике) дәйәсе* алтун табакка сәчен салып йөрөтөр ирде.

Анда халык уғлы әйделәр:

— Ай, Бүртә Кучин! Син бу сифатлы, күрекле кеше. Нә өчөн мындай эш кылдың, бу уғланларны йәшердең, уғры булдың? — тиделәр. Анда Бүртә Кучин әйде:

— Аһ, ай, халык! Мин сезгә нә эш кылдым?! Уғры булсам, ханға уғры булдым, — тип жауап бирер ирде.

Адин суң Бүртә Кучинны уғланлары берлән Чингиз ханға алып килделәр. Хан, тәки моның күркен күреп, озон сәчен күреп, таңға калды. Тәки әйде:

— Ай, Бүртә! Мына нә өчөн уғры булдың? Бу уғланларны йәшердең? — тиде. Анда Бүртә Кучин (1, 2: үтенеп) әйде:

— Ай, ханым! Мин сине аяған өчөн аяп уғры булдым, йәшердем, — тиде. Анда Чингиз хан әйде:

— Нә өчөн мине аядың? — тиде ирсә, Бүртә Кучин әйде:

— Ай, ханым! Синең жаныңа (1: жаныңға) көч булыр тидем. Анда хан әйде:

— Минем жаныма (1: жанымға) ничек көч булсын (1: булыр)? — тиде. Бүртә Кучин әйде:

— Ай, ханым! Аның өчөн кем: Нух ғәлиәссәләм (1: ғәм) заманында ходай тәбәрәк вә тәғәле, кафырлар кәһәр кылып, туфан сыуын ебәрде. Кафырларны туфан сыуыға батырды, юк кылды. Тәки, ул туфанда һәр ханлыкның иркәке*, тәки* тышы*, нәселе, тохомы киселмәсен, тип Нух пәйғәмбәр ғәлиәссәләмнең кәмәсендә коткарды, азад кылды. Син хан булсаң, тәңре тәғәләнең колы дәгелмесен?! Арыслан кик ир кәжә аша сикереп, артындағын кайтып алмас, азад кылыр, ебәрер. Ай, ханым! Син әдәмсен. Мине, тәки бу уғланларны

азад ҡылғайсын. Ул ачығлығ яман ҡырғында халыҡ уғлы бунларның ҡәдерен белмәсләр. Үлтерерләр. Бунларның тохомы, нәселе, ыруғы киселмәсен тип алып ҡалдым, — тиде. Анда Чингиз хан әйде:

— Һай имде синең шул яхши дәлилле сүзең өчөн, тәҡи синең диңгездик* күңелең өчөн йөз-мең үлемдин азад булсын! — тиде.

— Кил! Имде, ай, Бүртә Ҡучин! Минем ҡатығ* күңелемне ҡалдырмағ. Үзеңне миндин (1: миндән) айырмағыл! — тиде. Анда Бүртә Ҡучин әйде:

— Хуш, сез мине сөйсәңез, мин сезнеңмен! — тиде.

Андин суң Чингиз ханның күңеле иреде. Икүләсе бер-беренә ҡабул булып, хәләл җефет булдылар. Халайыҡҡа олоғ туй ҡылдылар. Бу донъяны уздырдылар.

Йәнә йәшерен ҡалмасын ки:* Чингиз ханның Бүртә Ҡучиндин дүрт уғлы булды. Олоғ уғлының аты Җучи хан (1, 2: Йучи хан), икенчесе Җадай хан, өчөнчесе Кирәй хан, дүртенчесе Тули хан (1, 2: Туни хан) тигән ирде. Йәнә андин суң Чингиз хан яхшы ҡылыҡы берлән, еде нәселе, ләшкәре берлән йөрөп орошоп, күп ханларны, урдаларны үзенә (1: үзегә) баҡтырған ирде. Тәҡи аның аты чаби* донъяға тулған ирде.

Андин суң Чингиз хан үзене эстәйү* барған бәкләргә, тәҡи* үзгә бәкләргә һәр берсенә урын-мәҡам* тәғәйен билгеле ҡылып, ил, көн бирде, сөйөрғади (?) ирде. Андин суң Чингиз хан ошбу бәкләрнең барчасына үзле-үзенә (1: үзле-үзгә) *тамға, ҡош, ағачын, оранлар*[5] (1, 2: оранларын) биреп, бау-бау* халыҡ ҡылып ирде.

Әүәл башлап *Будәнжәр уғлы Ҡыятҡа* әйде: «Синең ағачың ҡарағай булсын, ҡошоң шоңҡар булсын, ораның «аружан», тамғаң ачамай булсын, үрнә тамға тамға булсын!» — тиде. Сифаты ошбудыр:



Йәнә андин суң Чингиз хан *Ҡуңғрат бей уғлы Сенекләгә* әйде: «Синең ағачың алма ағачы (1: алмағач) булсын, ҡошоң лачын булсын, ораның «ҡуңғрат» булсын, тамғаң айтамға булсын!» — тиде. Сифаты ошбудыр:



Андин суң йәнә Чингиз хан әйде: «Ай, Уйшы (1, 2: Уйшын) *Майҡы бей!* Синең ағачың ҡарағач булсын, (1, 2: ҡошоң ҡараҡош булсын), ораның «Салауат» булсын, тамғаң себерке (1: серкә) булсын!» — тиде. Сифаты ошбудыр:



Андин Чингиз хан *Урдаж бейгә* (2: Урауж бейгә) әйде: «Ай, мең садаҡлы Урдаж! «Өч мең» тимәкелек андин ҡалды. Урдаж ғәйәт дә

бай кеше ирде. Орошҡа (1: орошға) чыҡар булса, мең садаҡлы кеше берлән чыҡар ирде». Чингиз хан Урдашҡа әйде: «Синең ағачың ҡайын булсын, ҡошоң ҡарчыға булсын, оранық «алач» булсын, тамғаң ҡош ҡабырғасы булсын!» — тиде. Сифаты будыр (1, 2: ошбудыр):



Андин суң йәнә Чингиз хан әйде: «Ай, *Тамъян бей!* Синең ағачың тирәк булсын, ҡошоң ҡарға булсын, оранық «тутыя» булсын, тамғаң ырғаҡ булсын!» Сифаты ошбудыр:



Андин суң Чингиз хан әйде: «Ай, *Ҡыпчаҡ бей!* Синең ағачың ҡарама булсын, ҡошоң бөркөт булсын, оранық «туҡсаба» булсын, тамғаң тараҡ булсын!» Сифаты ошбудыр:



Андин суң йәнә Чингиз хан әйде: «Ай, *Журматы бей!* Синең ағачың (2: ағасың) өйәнке булсын, ҡошоң итәлгү булсын (1, 2: оранық «аҡтилаҡ» булсын) тамғаң сәнәк (1: сынлы) булсын!» Сифаты ошбудыр:



Андин суң Чингиз хан әйде: «Ай, *Кирәйет бей!* Синең ағачың (2: ағасың) йүкә (2: жүкә) булсын, ҡошоң ҡаз булсын, оранық «бүре» булсын, тамғаң, күзтамға булсын!» — тиде. Сифаты ошбудыр:



Андин суң Чингиз хан әйде: «Ай, *Мөйтән бей!* Синең ағачың миләш булсын, ҡошоң торна булсын, оранық «байғуң» (1: «байғуң-рат»; 2: «балиғун») булсын, тамғаң ҡайышҡан (1: ҡойошған; 2: ҡойошҡан) булсын!» — тиде. Сифаты ошбудыр:



Андин суң Чингиз хан әйде: «Ай, *Бөржән бей!* Синең ағачың (2: ағасың) имән булсын, ҡошоң күчүгән (1: күжүгән) булсын, (1, 2: оранық «аҡтуған» булсын) тамғаң чифалбай (1: жығалбай; 2: жағылбай) булсын!» — тиде. Сифаты будыр:



Андин суң йәнә Чингиз хан әйде: «Ай, *Буркат бей!* (2: Бурат бей) Синең ағачың чаған булсын, ҡошоң һәд-һәд* булсын, ораның «борож» (1: «борох»; 2: «бороғ») булсын, тамған, тамғаң һәзә (1: әмзә; 2 әмез) булсын!» Сифаты ошбудыр:



Андин суң йәнә хан әйде: «Ай, *Ҡәгинжәр уғлы Ҡатай бей!* (2: Ҡыят бей) Синең ағачың артуш (1: артыш) булсын, ҡошоң ҡауыд булсын, ораның «тилаҡ» булсын, тамғаң сеперeү (2: серү) булсын! — тиде. Сифаты ошбудыр:



Андин суң йәнә Чингиз хан әйде: «Ай, *Ҡалдар бей!* Синең ағачың сандал булсын, ҡошың күгәрчен булсын, ораның «арнау» булсын!» — тиде. «Тамғаң чүмеч булсын!» — тиде. Сифаты ошбудыр:



Андин суң йәнә Чингиз хан әйде: «Ай, *Салжут!* (1, 2: Салчут!) Синең ағачың көйөрөч (1: көйөрөж) булсын, ҡошоң көйөлдө булсын, ораның «барлас» (2: «балас») булсын, тамғаң айтамға (1: айтамға; асатамға) булсын!» Сифаты ошбудыр:



Андин суң йәнә хан әйде: «Ай, *Тимер Ҡотлы бей!* Ҡара кешедин (1, 2: кешедән) байлығың берлән, күп мал бирмәгең берлән бейлек таптың. Синең ағачың жирүк булсын, ҡошоң сайысҡан булсын, ораның «табан» булсын, тамғаң ярымтараҡ булсын!» — тиде. Сифаты ошбудыр:



Йәнә Чингиз ханның үзенең ораны «Жанҡаба» ирде.

Чингиз хан ошбу әйткән бәкләрнең һәр берсене ләшкәр* башы ҡылып, урдалар алғалар ебәрер, йөрөтөр ирде. Ул олоғ ағыр* чиреүләрдә халыҡ уғлы бер-берсен үз ораны берлә табалар ирделәр.

Имде барча оранларның атлары ошбудыр: әүәл хан ораны — «жанҡаба». Андин суң барча бәкләрнең оранлары бунлардыр: «аружан», «ҡуңғрат», «салауат», «алач», «тутыяҡ», «саба» (1, 2: «туҡсаба»), «аҡтилаҡ» (2: «тилаҡ»), «арбур» (1: «арбуз»; 2: «арбуру»), «байгуң» (2: «балиғу», «аҡтуған», «борож», «тияҡ» (1: «тилаҡ»), «арнау», «барлас», «ҡайан» (1: «табан»).

Йәнә мәғлүм ула кем: Чингиз хан һәр даим*, кик* аулай чыҡар булһа, ошбу әйтелгән бейләр ҡошлары берлән, ҡошларын алып

чыҡар ирделәр. Имде ул ҡошларның атларын барчысын җәмиғ ҡылып*, әүәл Чингиз ханның үз ҡошы — ике баш ҡарабаш (1: ике айбаш ҡарабаш) ирде. Үзгә бәкләрнең ҡошлары бунлардыр: шоңҡар, лачын, ҡараҡош, ҡарға (1: ҡарчыға), бөркөт, итәлгү, ҡаз, торна, күчүгән, һәд-һәд, ҡауыд, күгәрчен, көйөлдө, сайысҡан.

Йәнә мәғлүм ула кем: Чингиз ханның үзенең агачы чинар ирде. Үзгә бәкләрнең һәм агачларның барчасын җәмиғ ҡылып әйтәйен: ҡарағай, алма ағачы (1: алмағач), ҡарағач, ҡайын, тирәк, ҡарама, өйәнге, җүкә, миләш, имән, чаған, артуш, сандал, көрөч (көрөж) җирүк.

Йәнә мәғлүм ула кем: ханның тамғасы ҡош башы (1: ҡошбаш) тигән ирде. Сифаты ошбудыр:



Үзгә бәкләрнең тамғаларын барчасын җәмиғ ҡылып әйтәйем:



Йәнә мәғлүм ула кем: Чингиз ханның бәкләре һәр берсенә орошҡа лайыҡ һәйбәтлек булмаҡ өчөн бирәр сауыт атап бирде. Әүәл Чингиз ханның үзенең сауыты «буян» тигән (1: сауыт) ирде. Олоғ уғлы Җучиның «каратау» (2: «каратағ») тигән сауыт ирде. Икенче уғлы Җадайның «сандуҡ» (1, 2: «алтун сандуҡ») тигән сауыт ирде. Өчөнчө уғлы Кирәй бейнең «биктәр» тигән сауыт ирде.

Андин суң Чингиз хан бәкләренә (1: һәр берсенә) һәм сауыт бирде. Ҡыятға (1: Бүдәнҗәр уғлы Ҡыятға) «кала» тигән сауытны бирде. Ҡуңғратҡа «айҡумтуҡ» (1: «айҡултуҡ») тигән сауытны бирде. Майҡы бейгә «сиғыр» тигән сауытны бирде. Уружға «чәчәд» (1, 2: «чәчәгүз») тигән сауытны бирде. Тамъянға «күпләк» (1, 2: «көйләксә») тигән сауытны бирде. Ҡыпчаҡҡа «күкъяҡа» тигән сауытны бирде. Журматыға «унҡырмыш» (1: «унҡырыш») тигән сауытны бирде. Кирәйет бейгә «өйөлмә» тигән сауытны бирде. Мүйтәнгә «каҡты ҡабаҡ» (1: «каты ҡабаҡ»; 2: «катҡы ҡабаҡ») тигән сауытны бирде. Бөржәнгә «кусҡач» (1: «кумҡач») тигән сауытны бирде. Бурҡатҡа «күрләч» тигән сауытны бирде. Ҡатайға «без-ҡылбаҡ» (1, 2: «безҡалаҡ) тигән сауытны бирде. Ҡалдарға «чаҡатурғай» тигән сауытны бирде. (1, 2: Салҗутҡа «коборҗаҡ» тигән сауытны бирде.) Тимер Ҡотлыға «безәүбаш» тигән сауытны бирде.

Имде ошбу сауытларның атларын (1, 2: барысын) җәмиғ ҡылып әйтәйек: буян, күн алтун сандуҡ, биктәр, утирәк, ҡала, айҡумтуҡ,

сиғыр, чәчәд, көйләк, бақарын, қырыш, өйелмә, қаты қабақ, қусқач, күрләч, без-қылбақ, чақатурғай, қубур, чақабыз, өйбаш, кирәүкә.

Андин суң Чингиз хан бу бәкләрне күз өстендә қашытик күрер ирде. Ғиш-ғишрәт қылыр ирде. Бу донъясыға қыуанып, падишаһдығына мәғрур, мәшғул ирде. Һәр даим тамаша-тәнғәм* қылыр ирде.

Андин суң йәнә Чингиз хан көнләрдә бер көн уғланлары, бәкләре берлән ау аулап чығып яланда йөрөр ирделәр. Бер «юлбарыс» тигән кикне* күрделәр ирсә, уқын яға күрләп барышқа (1, 2: кизләп ярыштырып) қуйдылар. Қаяларны ашырдылар. Һич берсе житә алмадылар. Бары өч кеше қыуып еттеләр, юлбарысны атып йықтылар. Берсе — Қуңғрат батурның уғлы Сенекләә, икенчесе — мең садақлы Урдаж (1, 2: Урауж), өчөнчесе — Тамъян. Өч кеше юлбарысны, үлтереп, Чингиз ханға килтерделәр. Хан, бунларның ирлекләрен күреп, таңға қалып, һәр берсенә мең тәңкә алып бирде. Һәр ердә, мәжлестә бунларның ирлекләрен сүзләр ирде.

Йәнә көнләрдә бер көн Чингиз хан ауға бәкләре берлән чығып йөрөр ирделәр. Яланда бер болан кейекне күрделәр. Қыудылар. Бөржән бейнең бер йүгерек аты бар ирде. Йүгереклек андағ ирде кем: боланны етеп мөйөзендин (1, 2: муйыныңдан) тотар ирде. Бөржән бей, етеп, боланны атып йықты, хан алдыға килтерде. Хан ана һәм илле тәнкә алып бирде. Һәр көн ошондағ зауық қылыр ирделәр.

Йәнә көнләрдә бер көн хан әйде: «Ай, бәкләрем! Барыңлар, қош аулап килеңләр!» — тип бойорды. Бәкләр һәм қошларын алып чыққтылар. Қошлар аулап китерделәр. Қыят шоңқар илән ақкош типтерде. Сенекләә лачын илән торна типтерде. Урдаж (2: Урауж) қарчыға илән қаз типтерде. Тамъян қарға (2: қыйғыр) илән бүдәнә типтерде. Һәр берсе қошы берлән типтергән қошларын алып килделәр, Чингиз ханның алдыға салдылар. Хан, бу қошларны күреп, һәр қайусына меңәр тәңкә алып бирде. Әммә Қыятқа, Сенеклегә, Урдажға, Тамъянға — анларға икешәр мең тәңкә алып бирде.

Андин суң Чингиз хан олоғ уғлы Жучиға: «Асыл мал анда етәр», — тип, «Алтуны, көмөше күптер», — тип, «Йорты киңдер», — тип, Термез урдасында ханлыққа (2: ханлуққа) қуйды. Тәки икенче уғлы Жадайны «Ил олосы анда булыр», — тип, «Туман төрле халық анда булыр», — тип, «Олоғ йорттар», — тип, Һиндостан урдасында ханлыққа қуйды. Өченче уғлы Кирәйне, «Ир кейәр сауыты, ир қушатыр (1: қушаныр) қылычы күптер», — тип, «Асылзада халықтыр», — тип, Курал урдасында ханлыққа қуйды. Дүртенче уғлы Тулайны, «Халықлары рәхимледер», — тип, (1: «Ирәү йорттор», — тип, «Ир кейәр жуғасы, атласы, торқасы күптер», — тип; 2: «Ир кейә торған атлас күптер», — тип) «Әше қаты, ашы татлы таймас олоғ йорттар», — тип, Мәскәү урдасында ханлыққа қуйды. Һер берсенә ошбу әйтелгән урдаларны халқы берлән анларға өләшеп бирде.

Имде ул шәһәрдәге ханларның асыл төбе бунлардиндыр. Асыл Чингиз хандиндыр.

## Сыңғыҙ хандың нәҫел-нәсәбе




Андин суң йәнә беләсез кем: Чингиз хан пәйғәмбәремез Мөхәмәд Мостафа сәлиулла ғәлиәссәләмнең тарихындин (1: тарихындан) суң биш йөҙ ҡырҡ (1: ҡырыҡ) туҡызынчыда (1: йылда) ирде. Туңғыз йылында зөлҡәиғдә айында анадин туғды. Андин суң Чингиз хан етмеш ике йыл ғүмер кичерде. Ун өч йәшендә ханлыҡҡа ултырды. Хан булды. Илле туҡыз йыл ханлыҡ сөрде. Чингиз ханның туған (1:

туғган) шәһәре, тоткан, торган йорты Кытай ирде. Йәнә етмеш ике йылдин (1, 2: йылдан) суңра туңгыз йылында мөбәрәк рамазан айының ун дүртенче көн, тарих алты йөздә (1, 2: егерме түрттә) донъядин вафат үтте. Сүзе донъяда калды...

## 10. АКЬАК ТИМЕР (ФАСЫЛ ФИ БӘЙӘН ДАСТАНИ АКСАК ТИМЕР)

### Имде йәнә хәзрәт Аксак тимер нәселендин

*(1, 2: нәселендән) сөйләйәлик (1: сөйләйәлең)*

Һиндостан шәһәрендә Чингиз хан уғлы Жадай хан ирде ханлык кылыр ирде.

Көнләрдә бер көн ятып ирде. Яман дөш күрде. Куркып, сискәнеп уйғанды (1: уянды). Дер-дер калтырап торды. Фалкирләрне (1, 2: фалкәрләрне), фал бағыучыларны жыйдырды (1: йыйдырды) Талағын каратды, актартты.

Фалкирлар, фал бағыучылар әйделәр: «Ай, ханым! Талағында андаг күренер кем: үз милкендә (1: милкеңдә), Алмалык тигән ауылда, бер кешедин (1: кешедән) хәтәреңез бардыр (1: бар торор). Ул кеше кыркчы уғлы, казанчы уғлы, улукчы, тауыкчы уғлы, тухчы уғлы Тарағай тигән кешедер», — тиделәр. «Әммә ул Тарағайның нишаны, билгесе улдыр кем: жауырыныда (2: жауырынында) миңе бар, сул күзендә ағы бар (1: бардыр). Ул Тарағайның хатуны йөкле торыр. Аның корсағындағы баласындин (1: баладан) әжәлең, үлемең етеп торор», — тиделәр.

Анда Жадай хан фал бағучылардин бу сүзне ишетеп торор. Ул Алмалык ауылындағы Тарағайны эзләтеп (1: эстәтеп) таптырды. Жадай хан (1: Жадай ханның) кашыға алып килделәр. Карадылар. Ул әйтелгән нишанлары анда бар ирде. Жауырынында миңе, сул күзендә ағы бар торор.

Жадай хан сорады:

— Ай, Тарағай! Синең (1: айлы) йөкле хатуның бармы? — тиде. Ул Тарағай әйде:

— Былы бардыр, — тиде. Андин суң Жадай хан әйде:

— Ай, Тарағай! Синең хануның (1: хатуныңның) корсағындағы балаң мине үлтерер ирмеш. Ул туғмастин борон мин (1, 2: аны) үлтерермен! — тип Тарағайның хатунын алдырды.

Ул ахмак тәкдирне* тәдбир* берлән бозмак теләде. Әммә хак тәғәләнең нитәк бозолор. Андин суң киңәштеләр.

— Бу хатунны үлтерәлик, — тип — Эчен яралик, — тиделәр. Хан үзе әйде:

— Бу хатунның корсағындағы баласын үлтерер булсаңыз, ул корсағындағы баласыны тезләп үлтереңк*! Анасы үлмәсен! — тиде.

Андин суң ул хатунны йыкып, андаг тезләделәр кем: исе-усы китте, үлә калды. Андин хан әйде:

— Имде баласын дәгел, анасы һәм үлде булғай (1: үлә язды булғай кем), ебәреңләр, — тиде. Андин суң ул хатунны (1, 2: күтәреп) алып, арбаға салып, киттеләр.

Андин суң Жадай хан:

— Ҡурҡынычтин ҡотолдым, — тип торор ирде. Ханлыҡҡа мәшғүл ирде.

Андин йәнә бер әнчә көнләрдин (1: көнләрдән) суң ул мескен гәзләп эйгән (1: үлгән) ул хатун (1: хатунның) күзе ярды*, бер ир углан туғырды. Ул уғланын алып баҡтылар ирсә, бер аяғы (2: аяҡы) аксаҡ ирде. Андағ әйделәр кем:

— Ошбундағ имгәктин (1: имгәктән) үлмәдең, ҡотолоп туғдың, жаның тимер икәндер, — тиделәр. Ул уғланның атын ул сәбәптин (1: сәбәптән) Аҡсаҡ Тимер ҡуйдылар.

Имде хәзрәт Аҡсаҡ Тимернең асылы, төбе Барлас тигән ыруғ (1, 2: ырыу) булыр (1: ирде). Нәселендә, ыруғында ханларға жейән уғыл ирде.

Андин суң йәнә Аҡсаҡ Тимернең атасы, анасы үлде. Етем ҡалды. Асырарға, күрәргә һич лайыҡ кеше ҡалмады (1: булмады). Ахры үзе, йөрөрдәй булып ир еткәндин (1: еткәндән) суң, ҡазаҡ чығып (2: чыҡып), ялғузы Шимаҡи шәһәрегә барды. Бер әнчә (1: бер көн) йөрөде. Андин (1, 2: суң) Шимаҡида бызау (1: бузау) көтмәгә жалға (2: ялға) инде. Үзенә (1: үзегә) үзе кебек үксезләрне (1, 2: үксез етемләрне) эйәләндерде һәм етемләрне эйәләндерде. Алты-ете уғыл булып һәр көн бызау көтәр ирделәр (1: тәки уйнар ирделәр).

Андин сун Аҡсаҡ Тимер көнләрдә бер көн бер бозоҡ кәшәнә* төбөндә (1, 2: ялғыз) таянып (1: ятып, баҡып; 2: яҡып) торор ирде. Бер аяғы аҡсаҡ, тәки бер күзе суҡыр ҡырмыҫҡа (1: ҡырмысҡа) килде. Тәки ул кәшәнәгә тырмашып менәргә йәпеште. Бер әнчә юҡару менде. Йығылды (2: йыҡылды). Андин суң йәнә һиммәтләнеп тәки йәпеште. Тырмашып, кәшәнәнең башына (2: башыға) менәйен, чыҡайын тигәнчә йәнә түбән йығылды. Хәзрәт Аҡсаҡ Тимер бу ҡырмысҡаның бу эшенә (2: эшегә) хайран (1, 2: таңға) ҡалып ҡарап торор ирде. Аҡсаҡ ҡырмысҡа ғәрләнеп, йәнә өчөнче мәртәбә кәшәнәнең башына менәргә йәпеште. Ахры, тырмаша-тырмаша торғач, кәшәнәнең түбәсенә (2: түбәсегә) чығып (2: чыҡып) китте.

Ул ҡырмысҡадин хәзрәт Мир Тимер ғибрәт алды. Тәки үзе күңелендә (1: үзегә күңелендән әйде): «Ай, Аҡсаҡ! Күрдеңме?! Бу зәғиф, аяҡсыз, күзсез ҡырмысҡа һиммәтләнеп, йығыла-тора там* түбәсенә менде, юҡары чыҡты. Мин һәм һиммәт берлә хан булып, ил, көн, шәһәрләр алып, урдалар алсам (1: ҡылсам), һич таң-ғәжәйеп булмас. Әгәр тәңре тәғәлә бойорса...» — тип күңеленә бу фекерне салып йөрөр ирде.

Уғланлар берлән уйнар ирде. Көнләрдә бер көн Аҡсаҡ Тимер әйде: «Ай, егетләр! Килеңләр, бер ергә бер нәрсә ҡуй әле! Ҡуйған нәрсәне кем әлек йүгереп етеп алса, аны арамызда хан ҡылалиҡ! (1, 2: ҡылайыҡ)» — тиде. Анда ул егетләр әйделәр: «Хуш, андағ булсын!» — тип.

Алдыға (1: алысҡа) бер нәрсәне алып (2: илтеп) ҡуйдылар. Таҡи барча (2: барса) уғланлар йүгерештеләр. Аҡсаҡ Тимер һәм йүгерер

ирде. Йүгереп уғланлар шайы* бара алмады. Аның өчөн кем: аҡсаҡ ирде! Бер уғлан йүгереп узып ул ҡуйған нәрсәне алаймын элек, хан булайын, тигәнчә, андин боронораҡ ул нәрсәне Аҡсаҡ Тимер бүрке берлән ташлап орды. Тәки әйде:

— Ай, егетләр! Сезләрдин борон мин еттем, мин хан булырмын! — тиде. Ул берәүсе әйде:

— Юҡ, синдин борон мин тейеп алдым! — тиде. Анда Аҡсаҡ Тимер әйде:

— Һай! Синең ҡулын еткәнчә, минем башым етте, — тиде.

Бунлар бу сүз өстендә бәхәсләшеп торорлар ирде. Бер аҡсаҡаллы (1: аҡсаҡаллығ) кеше килде. Бунлар ул ҡартҡа эшләрен сүзләделәр.

— Ханлыҡ ҡайсымызға тикәр? — тиделәр. Анда ул ҡарт әйде:

— Ай, егетләр (1: Сезләр минем сүземне тотармысыз? — тиде. Булар әйделәр:

— Ай, бабай! Син нә дисәң, эшемезне сиңә салдыҡ», — тиделәр. Анда ул әйде:

— Ай, егетләр!) Бу аҡсаҡ уғылның сезнең ҡулыңыздин борон башы етептер. Моны хан ҡылың!» — тиде.

— Сүз моның сүзедер! — тиде. Анда бу үзгә егетләр әйделәр:

— Ай, бабай! Хуш, имде ҡылалиҡ! (1: андағ булсын) — тиделәр. Аҡсаҡ Тимерне үзләре арасында (1: араларында) хан ҡылып уйнар ирделәр.

Йәнә көнләрдә бер көн Аҡсаҡ Тимер әйде:

— Ай, егетләр! Һәр кем ошбу көтә торған бызауләрдин (1, 2: бызаулардан) бызау суйып, барчамызға ейдерсә, туйдырса, арамызда аны хан күтәр әле! — тиде. Анда йәнә үзгәләре ҡыйып бызауны суя алмадылар. Аҡсаҡ Тимер (1: бер) бызауны суйды, (1: суйып) пешерде. Ул уғланларға ейдерде. Ашадылар. Андин суң Аҡсаҡ Тимерне үз араларында хан күтәрделәр.

Андин суң, ҡайтып, ауылларына (1: өйләренә) килделәр. Бызау эйәсенә (1: әйделәр):

— Бызауыңны бүре ашады, — тип. Ул һәм нәрсә тимәде.

— Бүрегә бойорған икәндер, — тиде.

Андин суң көнләрдә бер көн бу Аҡсаҡ Тимер бу уғланларға әйде:

— Ай, егетләр! Киленләр, безләр ҡараҡчы булайыҡ! Базар киләнләрне*, сатучыларны тоталиҡ, малын алалиҡ! — тиде. Андин бу уғланлар әйделәр:

— Хуш, булсын! — тиделәр. Анда Аҡсаҡ Тимер әйде:

— Сезгә сүзем улдыр кем. Имде бу кичә һәр ҡайсың һич үзгә нәрсә алмаңыз! Мәгәр яу ҡоралын ҡуймаңыз, алыңыз! — тиде.

Анда бер бозоҡ каруансарай бар ирде. Бу ләҗәне* анда ҡуйдылар. Төннең ярымында бер-берсенә килеп юлыҡтылар. Ҡайсысы көбә кейеп, мылтыҡ алып, ҡайсы уҡ-садаҡлы ҡылыч алып, ул Шимаҡи шәһәрендин (1: шәһәрендән) чығып киттеләр.

Һиндостан шәһәренә барып, Һиндостан шәһәрен саҡлап яттылар. Узған-барған сатучыларны, асламчаларны бастылар, малларын алыр ирделәр. Оло ҡараҡчылыҡ ҡылдылар. Азған-тузған, ата-анадин (1: ата-анадан) бизгән уғланлар, байдан чыҡкан ҡоллар аңа жыйылдылар, ҡушылдылар. Һәр кем ирсә тыштин (1: тыштан) килеп

кушылса, аңа лайык алайлар* бирә башладылар. Базар киләнләрне, сатучыларны кырдылар. Кол-котанны юлдаш кылдылар. Бер-ике-өч кеше булдылар. Узган-барганны талар ирделәр. Юл киләсе киселде, каруан халкы йөрмәс булдылар.

Анда Һиндостан падишаһы Жадай ханга хәбәр төште (1: дөште): «Юлны карак саклайдыр, кешене йөрөтмәйдер», — тип. Андин суң Жадай хан илче ебәрде, өч йөз кеш берлән. Аксак Тимергә әйделәр: «Ай, Аксак! Ни өчөн мондаг угрылык кылырсын, юлларны басарсың?» — тиде.

Анда Аксак Тимернең чиреүе ул килгән илче (1: илченең) башын (1: кисеп) үлтерделәр, үзгәләрен барчасын, үзләренә юлдаш кылып, күп (1: агыр) алаба* (1: алапалар) бирделәр.

Бу хәбәр йәнә Жадай ханга ишеделде. Үртәнде, көйде. Йәнә икенче мәртәбә илче ебәрде. Ул икенче килгән илченең башын ебәрделәр, үзгәләрен* алып калдылар, илдаш кылдылар.

Андин суң Жадай хан өчөнчө илче ебәрде. «Ул каракларга алтун, көмөш, алабалар бир, әйдә. Узган-барганга, базар киләнләргә (1: йөрөгәнләргә) теймәсенләр», — тип. Анда бунлар әйделәр: «Имде Жадай ханның хазинасындин (1: хазинасындан) безнең хазинамыз күптер, — тиделәр. — Кирәк (1: кәрәк) булса, (1: мал, хазина) бездин алсын!» — тиделәр.

Андин йәнә бер әнчә көнләрдин суң: «Жадай хан үзе чиреүен жыйып киләдер», — тип. Аксак Тимергә хәбәр төште. Анда Аксак Тимер белергә каршы шымчы ебәрде, Жадай хан киләме икән, тип.

Ул шымчы барып күрде. «Жадай хан киләдер», — тиде. Барган шымчы анларның араларына (1, 2: араларыга) барып керде. Жадай хан утыз кеше берлән әлгәре үзе килер ирде. Бу барган шымчыны күрделәр. Мондин сорадылар:

— Һай! Юлда карак күрдеңме? (1: бармы) — тиделәр. Бу әйде:

— Юк. Һәр киз* күрмәдем. Бу юлда һич шиксез йөрәңен, бу юлда карак юктыр, — тиде. Бунлар моның сүзенә карап:

— Карак юк ирмеш. Безнең килер хәбәремезне ишедеп качканлардыр, — тиделәр. Әлгәре* (1: әлгәрү) узып киттеләр. Бу шымчы үз юругына китте.

Анлардин айырылып, аулактин (1: аулакка) чыккандин суң качты. Жадай ханның утыз кеше берлән килә йөрөгәнен Аксак Тимергә килеп әйде. Анда Аксак Тимер әйде: «Алай булса, тиз имде утыз төйәгә йөк йөкләндереңез», — тиде. Шул ук заман утыз төйәгә йөк йөкләделәр. Аксак Тимер Жадай ханның килә торган юлы берлән каршы йөрөделәр.

Хан томора төшөп (2: дөшөп) ятыр ирде. Бунлар (1, 2: каршы) бардылар. Жадай хан бунларга алыстан сүзләште:

— Нә кешеләрсез? Юлда караклар күрдеңезме? — тиде. Бунлар әйделәр:

— (1, 2: Юк.) Һич күрмәдек, — тиделәр.

Андин суң Жадай хан бунларның каршысына килде. Анда бунлар әйделәр:

— Һай! Сезләр нә кешеләрсез? — тиделәр. Анлар әйделәр:

— Безләрне сорасаңыз, без Жадай ханмыз (1, 2: Жадай ханның кешеләребез). Карагкларны эстәй чыктык, — тиделәр. Анда бунлар әйделәр:

— Андаг булсаңыз, безләр сатучымыз. Бездин малымызның безгә һәм юл йөрергә, сатыу кылырга яхшы булыр, — тиделәр. Анда Жадай хан бу сүзгә туктап торды. Бойорды:

— Тамгасын алыңлар! — тип. Жадай хан әйде:

— Безгә шаид* асыл тансук мал (1, 2: алып) килгәндер, — тиде.

Андин суң Жадай хан кешеләре, йөкләрен актарып, тамга алайын тигәнчә, Аксак Тимернең кешеләре берен-берен тотоп үлтерделәр. Хәзрәт Мир Тимер үзе Жадай ханны тотты, үлтерер өчөн. Жадай хан әйде:

— Аһ, ай, Аксак! Мин сиңә якшылык кылдым, син миңә яманлык кылырсын, үлтерерсен, — тиде. Анда Аксак Тимер әйде:

— Син гафил* дәгелсен. Мин гафилмын. Син үзегә яманлык кылмазсын (1, 2: мин) үземгә яхшылык кылырмын, — тиде. Үлтерде. Башын кисте.

Андин суң Аксак Тимер үзе үк Һиндостан шәһәренә барып, анда хан булды. Тәки бу калган чиреүгә юл (15 чапул; 2: сачлык) ебәрде: «Үзгә юл берлән килсенләр!» — тип. Чиреүенә хәбәр төште ирсә, рәуан* килеп анлар һәм шәһәргә инделәр.

Андин йәнә Жадай ханның артындин (1, 2: артындан) калган чиреүе бу хәбәрләрне, бу эшләрне белмәйен: «Ханымызга анда етәрмез (2: етәрбез), монда етәрмез», — тип, бара торгач етә алмай кайттылар. Ханларын югалтып килделәр ирсә: «Шәһәрне Аксак Тимер алыптыр», — тип, һич нәрсә итә алмадылар. Аксак Тимергә багындылар.

Имде «Аксак Тимер Һиндостан шәһәрене ошбулай алды», — тип әйтерләр. Әммә аңа тәңре тәгәле (1: тәгәленең) үзе йәр-юлдаш (1: йәре йәр — юлдаш) булгандыр. Шәһәрләр, йортлар алмакка урдалар вайран булмаклыкка (1: бозмакка) аны сәбәп кылгандыр. Һәр якшыяман тәңре тәгәленең әмере тәкдире берләндер. Аның бойоргандин (1: бойорогондан) тыш һич бер эш булмастыр.

Андин суң Аксак Тимер ләшкәре* берлән (1: йөреп) алмаган йортны куймады. Тәңре тәгәле аңа йәр булды (1: йәре бирде) ирсә, донъяны яктырды (1: үзегә бактырды).

Йәнә тәки* йәшерен калмасын (1: кем): хәзрәт Аксак Тимернең ике углы бар ирде. Берсе Сафи (1: дигән) вә берсе (1: икенче) Дафи (1: Вафи) тигән ирде. Олог углыны, Сафины, үз урынына Һиндостан шәһәренә ханлыкка куйды.

Хәзрәт Мир Тимер үзе ләшкәре* берлән Истамбул шәһәрен алырга ярагланды*. Ауыр чиреү йыйдырды, күп (1: — күп филләргә, тәки күп-күп) төйәләргә хазинадин маллар, тәки күп-күп кораллар йөкләттерде. Сансыз, сакшысыз ләшкәр берлән, Һиндостан кәүеме берлән тебрәнделәр, тау-таш тулып (1: туп-тулы булып) йөрөделәр. Мисыр шәһәренә (1, 2: шәһәрегә) килделәр. Орошоп, кырылышып, ахыр бар аны алдылар.

Андин узып Истанбул шәһәрен алгали килделәр*. Бер ердә төштөләр, кундылар. Сафлар, алайлар* баглап, орошка хәзерләнеп тордылар.

Ол-кисса*, ул заманда Истамбул падишаһы (1: бадишаһының) аты Шаһсолтан хан (1: тигән) ирде. Аңа хәбәр төште кем, «Аксак Тимер шәһәреңне алгай (1: алгали), урдаңызны алгали һәм харап кылгай (1: кылгали) килделәр», — тип. Хан Шаһсолтан һәм ауыр чиреү хәзер кылып*, ярагландырып* Аксак Тимергә каршы чыкарды. Ике чиреү килеп бер-берсенә каршы кундылар. Араларында күп карауыллар (1, 2: есауллар) куйдылар. Сафлар бағлап тордылар.

Иртәгесен ике чиреү бер-берсенә (1, 2: бер-берсегә) карышып андин* орoштылар (1: кем) һәм Шаһсолтанның чиреүене Аксак Тимернең чиреүе кырдылар. Качтылар (1: качырдылар). Андин суң килеп Истамбул шәһәренә берекләнделәр. Аксак Тимер чиреүе берлән, кыуа килеп, мөхасра кылдылар* Йәгни шәһәр гәйәт, харап бейек шәһәр ирде. (1: Шәһәре сигез кат ирде). Биш йыл кымсап ирде* (1: тордылар. Һич бер кешесен ала алмадылар). Һич алырга йургын* тапмадылар.

Имде Истамбул шәһәренең сифаты ошбудыр:

Бу шәһәрне Аксак Тимер орош-кырыш (1, 2: орош-токош*) берлән ала алмады. Ахыр ошбундайын (1: ошбундаг) хәйлә төзөде кем: үзене сырхау кылды. Тамам тәнегә сары зәгәфәрән* сөртте. Тәне, башы күзе сап-сары булды. Андин суң: «Ай, Шаһсолтан! Имде беләсең кем: миңә әжәл иреште. Тамам тәнем сап-сары зәгәфәрәндик булды, гонаһым шомлыгындин (1: шомлыкындан). Имде синдин үтенәмен кем: бу эшләрне, орошмаклыкны куйдым, рәхим кылып син минем берлән бәхилләшсәң ирде», — тип хат табып ебәрде (1, 2: йәберде).

Ул илче килеп (1: шәһәр) капусында* торды. Илчелеген белдерде. Андин суң ул хатны (1: алып) Шаһсолтанга илттеләр. Шаһсолтан карап күрде. Шаид ялгандыр, хәйлә кыладыр, тип ышанмады. Ул һәм моның (1: моноң) сырхаулыкны белмәк өчөн кешесен ебәрде. «Баргыл, күргел!» — тиде. Андин Шаһсолтанның ебәргән кешесе Аксак Тимернең чадурына (1: чадырыга) килеп керде, күрде кем: Аксак Тимер сары зәхмәте берлән хәлсез булып (1: улып) ятыр. Аксак Тимер әйде: «Ай, илче! Минем хәлем ушалдыр...» — тиде.

Андин суң ул ебәргән кешесе Шаһсолтанга килеп нә хәл идеген сүзләде (1: сөйләде): «Сырхау улмыштыр, хәл эчендәдер», — тиде. «Гәйәт илтимас кылды кем, рәхим идеп (1: итеп) килсә, бәхилләшер ирдем, тип әйтер», — тиде.

Шаһсолтан, аның сүзенә ышанып, шәһәрнең тамам капугларын* (1: капгаларын) ачтырды үзе һәм ләшкәре берлән чыкты. Аксак Тимергә килде. Күрешеп, сүзләшә торор иркән. Сырхаулыгындин терелеп, тора салып, Шаһсолтанны тотты, үлтерде.

Килеп, ләшкәре, чиреүе шәһәргә инделәр. Бу хәйлә берлән ул шәһәрне һәм алды. (1: Ул урданы һәм) Үзегә бағындырды.

Бер әнчә* йыллар анда торды. Андин чиреүене ярагландырып, чиреүе берлә Шимаки шәһәрегә килде. Аны һәм алды, үзегә бағындырды. Андин узып, йөрөп, Хажитархан шәһәренә килде. Орошоп токошоп. Хажитарханны һәм алды, бактырды. Анда биш-алты йыл торды.

Андин суң йәнә Болгар шәһәренә килергә ярағланды. Күп-куп катыргалар* (1: кәмәләр) берлән Болгар шәһәрен алырга килергә кәмәгә менде. Кайсысы (1: ошбу чиреү кешеләре) орошоп, ул

сәфәрнең: «Идел сыуының тыш яғындин (1: яғындан) килделәр. Чиреүенең санын, хисабыны алладин (1: алладан) ғәйре кем ирсә (1, 2: кеше) белмәс ирде. Ошда анлар мондай (1: мондағ) олоғ чиреү берлән килмәктә.

Әммә ул дәүердә, ул заманда Болғар шәһәрендә ханлары Ғабдулла хан тигән ирде. Ғабдулла ханға хәбәр иреште кем: «Аҡсаҡ Тимер киләдер», — тип. Шул заман Ғабдулла хан ләшкәре йығдырды (1: жыйдырды). Ағыр чиреү хәзер ҡылып (1: хәзерләп), ҡаршы йөрәде. Ахыр бер-берсенә юлыҡышып, ҡаты орош ҡылдылар. Аҡсаҡ Тимернең орошыға түзмәделәр, сындылар, килеп Болғар шәһәренә керделәр. Үлгәне үлде (1: үлгән үлде ҡалған ҡалды), ҡалғанлар шәһәргә кереп бикләнделәр.

Аҡсаҡ Тимер килеп шәһәр Болғарны еде (1, 2: ете) йыл ҡымсап* (2: ҡамап) торды. Тарих ул ваҡытта еде йөз йылда ирде, зөлхиҗә айының егермесендә шәһәр Болғарны алдылар, харап ҡылдылар. Йөз дә егерме дүрт олоғ бәкләр вар ирде. Анларның тамамысын ҡырдылар: Һәр ҡайсысының Камаҫал аллу лу ал — Макнундик (?) хатунларыны Аҡсаҡ Тимер әсир ҡылды.

Ул бәкләр эчендә дүрт бәк олоғлары бар ирде, асыл шаһзадалар* ирделәр*. Берсе Аҡбаш бәк (2: Аҡъял бәк), вә берсе Ҡолғәли бәк, йәнә бере Хәуаши бәк, йәнә бере Морҡаши бәк тирләр иде. Тамамыны һәләк ҡылдылар. Күп-күп халайыҡ һәләк булдылар. Ғабдулла ханны һәм үлтерделәр.

Әммә Ғабдулла ханның ике уғлы бар ирде. Берсе Алтун бәк, икенчесенең аты Ғалим бәк тигән ирде. Жаудин, ҡырғындин ҡачып ҡалған кешеләр Алтун бәк берлән Ғалим бәкне урман төбенә илтеп (1: алып) йәшерделәр. Берсе еде йәшендә, берсе туҡыз йәшендә ирделәр. Анларны яхшы асырар ирделәр.

Андин суң Аҡсаҡ Тимер шәһәр Болғарны вайран ҡылып*, харап ҡылғандин суң, Бүләр шәһәренә килде. Чиреүе берлән Бүләр шәһәренең ҡаршысына (1: ҡаршысыға) килеп урын (1: ур) ҡазып яттылар. Орош-тоҡош ҡылмадылар.

Ул ваҡытта Бүләр шәһәренең ханы Самат хан тигән ирде. Күпәсе (1, 2: күбәсе) безҡыбаҡ тигән халыҡ ирде, (1: вә йәнә халҡы) бараж тигән халыҡ ирде. Бараж халҡының әүәл замандағы боронғо төп йорты ошбу Зәй тамағында улыр ирде.

Алыплар (1: алыпларның) заманы ирде. Бер Бараж тигән (1: атлығ) аждаһа йылан ирде. Ул шәһәрнең халҡына (1: халҡыға) көч-зыян ҡыла башлады. Чығып (1: чыҡып), аждаһа берлән суғыштылар (1, 2: суҡыштылар). Еңә алмадылар. Ахры үзләре, шәһәрен салып, ҡачтылар[2]. Болғар шәһәре яҡыныға барып, Бүләр сыуының өстенә (1: өстегә) йорт-шәһәр салдылар. Ул шәһәрләрегә һәм Бүләр тип (1: ат) атадылар. Ул сәбәптин халыҡны «бараж халҡы» тип әйтер ирделәр. Оранлары «бараж» ирде.

Анда Самат хан әйде:

— Аһ, ай, бараж халҡым! Борон олоғ бабаларымыз Баражның зыянындин ҡачып, шәһәрләрен салып, ошбу ергә (1: ошбунда) килепләр, мәҡам-йорт* тотоплар. Имде бараждин көчлөрәк (1: көчлөгөрәк)

Аксак Тимер килде. Шәһәремез каршысына төште. Нә кылырмыз? — тиде. Анда ул бараж халкы әйделәр:

— Ай, ханым! Сезләр (1: белерсез), ирек сезнеңдер. Безләр, һәр нә тисәң — иркемез юктыр, — тиделәр. — Әммә, бойорсаңыз, Аксак Тимер ләшкәре берлән һәм орошормыз, үлтерермез йә үземез үләрмез, — тиделәр.

Анда Самат хан әйде: — Имде минем каршымда (1: кашымда) бер (1: оло) кешем бардыр. Андин сорайын. Ул нә бойорор. Аның сүзендин чыкмазмын, — тиде. Ул оло кешене, алдырып, сорадылар. Тәки әйделәр:

— Ай, безнең олоғымыз! Имде безләр ошбу өстемезгә, шәһәремезгә килгән Аксак Тимер берлән орош кылайыкмы? — тиде. Анда ул оло әйде:

— Хуш, карайын, — тип. Бер манараның башына менде. Тәки Аксак Тимернең чиреүгә бакты (1: чиреүе тарафыға карады), карады ирсә, күрде кем: хәзрәт Хызыр ғәлиәссәләм (1: ғәм) Аксак Тимернең чиреүендәдер (1: чиреүендә бергәдер).

Ул, манарандин төшөп (1: дөшөб) Самат ханның кашыға килде. Тәки әйде:

— Орошорға рөхсәт юктыр. Хәзрәт хужа Хызыр ғәлиәссәләм аның чиреүендә бергәдер. Капкаларны ачтырғыл! — тиде ирсә, ул Самат ханның бараж халкы иғлаштылар, тәки әйделәр:

— Нә кылмак кирәк?.. Хак собхана вә тәғәләнең хөкөмөнә муйун (1: буйун) сонмак кирәк, — тип, тамам шәһәрнең капуғларын ачтылар, ирек салдылар, орошмадылар.

Андин суң хәзрәт Аксак Тимер чиреүе берлән шәһәргә инделәр, халыкны кырдылар. Әммә анда Аксак Тимер, кич булды ирсә, үзе шымчы булып, торосон ороп, халайыкларның эченә кереп, сынай йөрөр ирде. Тәки әйтер ирде:

— Ай, халайыклар! Егетләр! Бу бөлөклөк, бу кырғын безләргә кемдин булды? — тип сорар ирде. Анда ултырғанлар (1, 2: торғанлар) әйтер булсалар:

— Безне Аксак Тимер бөлдөрде, аның шомлығындин бөлдөк, чыуалдык (1: жуғалдык), — тигән кешеләрне иртәгесен тамам ыруғ өрлән, тамыры берлән һәләк кылыр ирде. Һәр кем ирсә гонаһны үзендин белеп әйтер берсә ирде:

— Бөлөклек, үз шомлығымыздин, — тип, аны үлтермәде, таламады, аны ебәрделәр.

...Әл-кисса, кичәләрдин бер кичә хәзрәт Аксак Тимер, үзе шымчы булып, бараж халкының арасына инде. Тәки әйде:

— Ай, бараж халкы! Бу бәлә сезләргә кандин килде? Анда анлар әйделәр:

— Кемдин идеген белмәдемесин? Бур Аксак Тимер килде, безне кырды, бөлдөрде, — тиделәр. Анда ул кич жыйынның эчендә бер оло бәкнең ғакыллы тол калған хатуны бар ирде. Ул әйде:

— Ай, егетләр! Бу бөлөклөкләрне үз гонаһымызның шомлығындин әйләйек. Ул Аксак Тимер нә кылыр ирде?! Тәңренең тәкдирелер, — тиде.

Ул хатун ире Жадыш тигән ирде. Ул Жадыш бейнең ике уғлы бар ирде. Берсе Инсан вә берсе (1: икенчесе) Ихсан тигән ирде.

Ул кичнең иртәгесен ул хатунны уғланлары берлән үз ҡашына* алдырды. Бунлар, нә эшкә алдырдығын белмәйен:

— Безләрне үлтерер, — тип иғлашып килделәр. Анда Аҡсаҡ Тимер ул тол хатунға әйде:

— Мин гонаһымызны үземездин белермез, — тип, син (1: гона һыңны белерсен). — Һәр эш үземездин, шомлығымыздин, — тип әйтерсен. Имде бу көндин суң сине тамам уғлың, ҡызың, ҡарындашларың берлән ярлыҡадым. Һәр ҡанда (1: ҡайда) сөйсәң — шул тарафҡа киткәйсез, — тиде. Үзе һәм тамам чиреүгә яр салды: Бу кешегә тиймәңләр, малын таламаңлар, һич нәрсәсегә зыян килтермәңләр! — тиде. — Үзеңә бөлөклөкне, гонаһыны үзендин күргән (1: белгән) өчөн тамам уғлы, ҡызы, ҡарындашлары берлән ярлыҡап ебәрдем.

Андин суң ул Ихсан вә Инсан бәкләр, икүләсе киңәш итеп, күчмәгә ниәт ҡылдылар. Инсан бәк әйде:

— Ай, анам! Мин ошбу олоғ Иделнең эч юлың йүнегә (2: буйыңа) тау еригә барырмын. Анда мәҡам-йорт* тотармын. Аның өчен кем: ул ер һәр ердин беректер, — тиде. Анасы һәм унын сүзен яратып ҡабул ҡылды.

Әммә энесе Ихсан бәк ул тарафҡа барырға өнәмәде:

— Бабаларының иске йорты Зәйгә барырмын, анда мәҡам-йорт тотармын, — тиде. Бәк әйде:

— Мин ул ергә бармамдыр — тип. Айырылды. Тау тарафыға китте. Анасы һәм аның берлән китте. Анда барып, Көйенә тигән сыуның буйында мәҡам тотты.

Ул Инсандин бер уғыл туғды. Сөләймән ҡуйды. Сөләймән уғлы Ҡадир, Ҡадир уғлы Нурдәүләт (2: Нурхәсән): Нурдәүләт уғлы Нурабдал, Нурабдал уғлы Ҡотош, Ҡотош уғлы Маҡтым, Маҡтым улы Икенәй, Икенәй уғлы Мөхәмәд, Мөхәмәт уғлы Хужамөхәмәд, Хужамөхәмәт уғлы Түкел, Түкел уғлы Бирмөхәмәд, Бирмөхәмәд уғлы Жынты, Жынты уғлы Бәбәш, Бәбәш уғлы Үлмәс, Үлмәс уғлы мулла Ғәбдеррахман, мулла Ғәбдеррахман уғлы Ғәбделғәзиз, икенчесе Мөхәмәдшәриф, Ғәбделғәзиз уғлы Ғабдулла, икенчесе Ғәбделислам.

Әммә Ихсан бәк тау тарафына мәйел ҡылмайын* Зәйгә килде. Ихсандин бер уғыл туғды. Атын Әлмөхәмәд ҡуйды. Әлмөхәмәд уғлы Ҡанмөхәмәд (1: Ҡалмөхәмәд), Ҡанмөхәмәд уғлы Туҡмөхәмәд, Туҡмөхәмәд уғлы Атлаҡ, Атлаҡ уғлы Шемәк, Шемәк уғлы Туғи, Туғи уғлы Саман (1: Шаман), Саман уғлы Әндәрже, Әндәрже уғлы Тикәнеш, Тикәнеш уғлы Безергән ирде. Тамғалары ҡош кешән, оранлары «бараж» торор.

Имде йәнә сүзне баштин (1: сөйләйәлик) .

Ул хәзрәт Аҡсаҡ Тимер, Бүләр шәһәрен вайран ҡылғандин суң, Мәскәү тарафына (1, 2: тарафыға) китте. Анда, ләшкәре берлән барып, Владимир (1: тигән) ҡәлғәсенә (1: ғәүер ҡаласына) етте. Ғәүер ҡаласы ирде. Орош ҡылғали идеп, чиреүен жәмиғ ҡылды.* Ғәүер һәм чиреүен ҡаласына жыйдырды.

Хәзрәт Аҡсаҡ Тимер барған ваҡытта кафыр урысның ғәүерханы Михәйла (1, 2: атлығ) ирде. Хәзрәт Аҡсаҡ Тимер ҡалалар (1: шәһәр-

лар) алып, аңа хәбәрләре (1: ул гәүергә һәм) иреште. Катыг (1, 2: каты) куркыгда ирде.

Хәзрәт Мир Тимер гәүернең чит каласы Владимиргә етеп ирде. Хәзрәт хуҗа Хызыр гәлиәссәләм килеп Аксак Тимергә әйде: «Сиңә бу кафырлар берлән орош кылырга вәгдә ирешмәйдер», — тип хәбәр бирде. — Әммә бу кафырга кәрәмәтеңне* күрсәткел! — тиде ирсә, хәзрәт Аксак Тимер шул заман тора салып өч йәшәр тай берлән кафырлар тарафына атты. Хак сөбхана вә тәгәләнең көдрәте берлән ул ташланган тай барып, кафырның таш монастырыны (2: сарайыны) уртара* өзөп, бер чакрум ер барып төште. Таш төшкән ер сыу булды. Андин суң һибәт* оронды, теле агызы тотолды, куркудан битләреңде кан калмады.

Андин суң хәзрәт Мир Тимер орошмады, вәгдә итмәгән (1: ирешмәгән) өчөн чиреүе берлән кайттылар. Кайтып Бохара шәһәренә барырга йүнәлделәр.

Килә йөрөгәндә, кая ерләрендә Амат, Самат тигән (1: күчмәле) ике ханга хәбәр төште. Күчемле ханлар ирде. Аксак Тимер киләдер, тип төйә суйып, халкын йыйып: «Кайу тарафка күчәлик?» — тип киңәш кылдылар. Анда уд халык уңмаслык кылып, берәү атын мактады, берәү этен мактады, берәү алган хатунын мактады. Пешкән (2: бешкән) ит-аш ашалды, киңәш булмады. Халык углы таркалды.

Анда Кинҗә тигән берәү иглан әйде: «Ай, калтаклар! Үзе аласан кеше булганча, үз ыруғы бер кырк кеше булса ирде! Һәр йәнә бер эш кылыр ирдек. Ай, калтак! Бу нә эштер?! Гакыллылар белерләр, гакылсызлар көләрләр, киңәшкә жыйылырлар (1: жыйылдылар). Калтак, бу нә эш?! Берәү атын мактар, берәү этен мактар, берәү хатунын мактар, киңәш булмас. Халык углы таркар, аш ашады (1: ашар) — качар, китәр һәр йәнә. Безнең бөлөкләгемезгә сәбәптер. Безгә бөлөклек якындыр», — тип иглар ирде. Анда ул Кинҗә (1: тигән кемсәнә)* әйтер: «Ай, яранлар! Халык углы әгәр мондин күчсә, (1: сез монда калсаңыз) сыусыз. Монда калыңыз! Куй сыуының (1: ай) башында үлеү өнәдә. Бу әл-хәл* булсын! Без ул тарафка күчәйек!» — тип әйтер ирде. Анда йәнә берәү атының ак күбеген өзөп чәбәләнеп, жымыргаnып,* кычкырып, бакырып йөрөдe (1: әйде): «Һай, ханым! яу етте. Аксак Тимер монда килә йөрөр», — тип хәбәр салды ирсә, хан үзе башлап күчәр булды. (1: монда килер) ирсә: «Әйәсе камышта ултырырмы?!» — тип халыкка яр салды. Хан күчте.

Әл-кисса, күчеп бара торганда бер корткаnың тырма бауы өзелде. Укын барып (1: артын карап) бакканча, корткаnың бүрке төште. Анда бер имәслек тай менгән углан килә торор ирде. Каршында короғы, канчугасында баш күнәкебе (1: күнәге) бар ирде. Бу корткаnың бүркен алып бирәйен тигәнчә әйәре ауды, тайы дулады, йылкы өрөктe. Берәү тайга чапты, берәү йылкыга чапты, берәү (1: үзгә): «Белмәгәнләр, жау етте», — тип халык углы аны күреп, (1: өркеп) башлы — башын вайран кылдылар, етмә тарафыга тордылар (1: төрделәр).

Анда Аксак Тимернең чиреүе (ләшкәре) ханны, халыкны доттылар, кымсады, туктатты. Үлгән үлде, босташ булды. Анда Аксак Тимер үзе:

— Үзе урдасы, — тип ханны үз алдына алдырды. Тәки әйде: — Ай, Амат, Самат! Имде үзеңезне тамуғ утындин ҡотҡарып, башыңызны ҡылычтин аман ҡылыңыз! Мосолман булың! — тип өгөт бирде. Анлар һәм үтенделәр, әйделәр:

— Ай, Аҡсаҡ Тимер! Әгәр без мосолман булсаҡ, безгә халҡымызны бирермесен? — тиделәр. Анда ул әйде:

— Әгәр сез раст мосолман* булсаңыз, ила аллаһи ила алла Мөхәмәд рәсүлулла*, тип иман килтерсәңез, тәңре тәғәлене бер белеп (1: берләп), пәйғәмбәрне хаҡ белеп, һәр көндә биш ваҡыт намаз ҡылып, бер йылда, йәғни һәр йыл сайын утыз көн руза тотоп, жәнәбәттин* ғасил ҡылып, малыңыздин зәкүәт биреп,* әгәр көчеңез етсә, Ҡәғбәгә барып, хаж тәуаф ҡылып*, бу азғынлыҡны ташлап, хас мосолман булсаңыз, үзеңезгә һәм халҡыңызға теймәзмен (1: теймәндер), — тиде (1: тип әйде) ирсә, анлар барчасы мосолман булдылар.

Хәзрәт Аҡсаҡ Тимер аңларға дин исламны үгрәттерде (1: үгрәтте). Үз бер-ике йыл ул күчемле халыҡ арасында торды, мосолманлыҡ динне тамам белдерде. Андин суң үзе, тәки чиреүе илән, анларға исәнләшеп, андин суң киттеләр. Бунлар, мосолман булып, монда ҡалдылар. Һәр йыл бер-бер ергә күчәр ирделәр.

Әл-ҡисса, ул Аҡсаҡ Тимер андин узып Бохара шәһәрегә барды (1: килде). Аны һәм алды. Ташкендны, яркендны һәм алдылар. Ул виләйәтләрне* үзенә бағындырды. Андан суң Сәмәрҡәнд шәһәрегә барды. Аны һәм алды. Әммә үзенең һәм ахры ғүмере анда булды. Хаҡ тәғәләнең тәҡдире ирешеп, хәзрәт Аҡсаҡ Тимер һәм ошбу фани донъядин үттеләр...

Андин хәзрәт Мир Тимернең ҡәберенең өстендә таш өстөнә ҡубардылар. Башындағы гөмбәзене алтундин, көмөштин ясадылар. «Тәкиәмәт килсә (1: ҡиәмәткәчә), андың дастаны халыҡ арасында сөйләнә ҡалсын, халыҡ андан ғибрәт алсын!» — тип ошбу дастанны бөттөк...

## 11. ҒАЙСА УЛЫ ӘМӘТ (ФАСЫЛ ФИ БӘЙӘН ДАСТАНИ ҒАЙСА УҒЛЫ ӘМӘТ)

### *Ғайса уғлы Әмәт сүзләре*

Рүзгәр хан Жәнибәк[1]. Йәғни көнләрдә бер көн хәзрәт Жәнибәк хан ҡош чөймәккә ау аулай чыҡты. Жәнибәк ханның бичәсе Тайдулы ханшаның айы, көне ингән* (1: еткән) ирде. Хан үзе әйде:

— Ай, ханша! Мин аудин ҡайтып килгәнчә уғлан туғса, ҡыз-уғлан туғса, үлтергел, әгәр ир-уғлан булса, төшләк ердин (1: ердән) үзең сөйгән кешене сөенче теләй ебәргел! — тиде. — Әгәр ҡыз-уғлан туғып, үлтермәсәң, үзеңне үлтерермен! — тиде.

Хан ауға киткәндин суң Тайдулы ханшаның күзе ярды, тәңре тәғәләнең фарманы берлән ҡыз-уғлан туғды. Ҡызын үлтермәде. Бирдебәккә ебәрде. Ул олоғ уғлы Бирдебәк ҡызын асырады. Андин суң ханнын үзенә кеше ебәрмәде.

Ханға ҡаршы кеше бармады. Жәнибәк хан ҡыз тыуғанын белде. Килеп сарайға керде. Сорады:

— Ай, дәйәләр*! Үлтерҙеңме? — тип. Белгәнләр әйделәр:

— Үлтермәгән булғай, — тиделәр. Хан сарайға килде. Тайдулы ханша ҡаршы чыҡты. Хан уҡ берлән атты. Ботыға тикте. Хан инанмады.

Ханша туҡыз солтан анасы ирде. Уғланларының ачығы килеп атасыға сүз әйттеләр:

— Уғыл кирәк булса, туғыз уғлың бар. Бер үк ҡыз, анысын күп күрерсен! — тиделәр. Андин суң хан, ачығланып, ҡызны үлтерергә кеше ебәрде.

Тайдулының ике арғамағы вар ирде (1: арғамаҡ аты вар ирде). Бере (1: беренең ) аты «Ашҡыча» тигән, бересенең аты «Тупчак» тигән ирде. «Бу ике атны ҡушландырып, ҡызны ҡачырсын» — тип кеше ебәрде. Бирдебәккә хәбәр төште. Ҡызны алып ҡачты. Чикәчкә барып мәҡам* (1: мәкан*) тотты.

Жәнибәк ханның бу эшегә халыҡның күңеле яман булды.

— Уғланларын ҡыуа башлады, — тип әйтер ирделәр. Хан, халыҡның күңеле яман булғанын белеп, бер көн әйде:

— Кем-кем минем уғлымны килтерсә, ҡызымны ана бирермен, — тиде. Анда Ғайса уғлы Әмәт әйде:

— Ай, ханым! Әгәр сейүрғәли* булсаң, мин килтерермен, — тиде. Хан әйде:

— Хуш, алай булсын! — тиде. Ғайса уғлы Әмәт әйде:

— Син халыҡ алдында ачығланған булғыл, — тиде. — Мин анда барып алдайым (1: алдарыма) яхшы булыр! — тиде.

Бу эшләрне күп кеше белмәс ирде. Әмәтнең китәр көне хан халыҡҡа аш бирде, үз ҡулындин халыҡның барчысына аш бирде (1: бирә килде). Андин Әмәтне өндәде (1: Амат килде), ана (1: Әмәткә) суҡта бирде. Әмәт әйде:

— Ай, ханым! Халыҡҡа яхшы аш бирден. Миңә нә бирдең! — тиде. Ханның бу сүзгә ачығы килеп:

— Тотоң, үлтерең! — тиде. Әмәтнең аты тышта хәзер ирде. Атҡа (1: атға) менеп ҡачып китте.

Бирдебәккә барды.

— Хандин ҡачып килдем, — тиде. Бирдебәк Әмәтне яхшы ғиззәт* ҡылды (1: ҡылып), сыйлар ирде.

Бер көн Бирдебәк ау аулай китте. Әмәт бер ҡортҡаға барып әйтде:

— Мин сине ана идәйем (1: әйтәйен). Синә һазар* мал бирәйен. Син барып әйтәсен (1: әйткел), шул ҡызының бәңә (1: миңә күңеле) булырмы (1: иркән)? — тиде. Ҡортҡа әйде:

— Ҡыз тәғәткәр* булыр (1: торор). Ҡызны белмән. Ул ханша күңел итәр булғай...

— Хуш, алай булсын! Барып әйткел! — тиде.

Ҡортҡа ханшаның ҡашыға варды. Күзен ача алмады (1: алмай) ултырған булды. Ханша әйде:

— Нә өчен йоҡларсың? Ҡортҡа әйде:

— Һич дарманым ҡалмады. Хандан ҡачып килгән Әмәт бей иркемә ҡуймады, — тиде.

— Һич әдәмдә андаг нәрсә күргәнем юк, — тиде. Ханша әйде:

— Барып килтергел! — тиде.

— Безнең берлән уйнасын, — тиде.

Андин корткa барып Әмәтне килтерде. Үзе кайтты. Уйнадылар, көлделәр, (1: гиш-гишрәт кылдылар). Гәйре эш кылмадылар. Әмәт әйде:

Син ирендә — игыл.* «Мин синең берлән итмәндер (1: йокламандыр)!» — тигел кичә берлән. Ул көлөр, син аның берлән «йыйып бәйләүеч»* уйнаган булып, бармагын баглайсын, дәхи зәнҗирне* какгайсын, — тиде. — Мин шунда килеп ултырайын», — тиде.

Кич булды. Бирдебәк килде. Бер сәгәт булып ирде, зәнҗирне* какты. Әмәт бейнең бер колы бар ирде. Ул колга кылыч бирде. «Барып Бирдебәкне син кылыч берлән чапкан булгыл. Ул кылычның йөзе берлән чапмагыл», — тиде. Колы йүгереп етте. Бирдебәкне кылычның сырты берлән орды. Бирдебәк ачыгланып: «Һай! Бу нә эштер?!» — тигүнчә, андин Әмәт үзе йүгереп барып колының кулындин (1: кулындан) тартып алды, колын (1: колон) үлтерде. Андин суң килеп ханшаны һәм үлтерде. Ул кортканы һәм үлтерде.

Андин солтан Бирдебәккә әйде:

— Алгай хатуның мондаг эшне кылды, үзгәләр нә (1: ни) кылмастыр?! — тиде. — Кил бире, ханга кайтырмыз (1: кайтырбыз), — тиде. Андаг ул Бирдебәк әйде:

— Хуш, алай булсын! — тиде. Күчеп кайтты.

Әмәт берлән Бирдебәк үзе илгә килделәр. Хан каршы чыкты. Минкәй (1: Мәнкәл) тигән байның өйенә (1: өйегә) дөштеләр (1: төштеләр), чыгыр шарап эчтеләр (1: эчтеләр). Хан исереп йоклап ятты. Минкәй байның бер Тимер (1: Тимер (атлы)) углы бар ирде. Һич кеше күргәне юк ирде.

Хан ялгуз ятыр ирде. Минкәй углы Тимер килде. Күргән кеше (көн-көндә әйтер ирде (1: күркәм кеше ирде. Күңелендә әйде): Минем кызым моңар (1: тикәр) иркән», — тиде. Ул угыл тороп тәгзим әйләде.*

«Әмәт (1: түрә) килде (1: әйде) охшармы,
Бәкләр әйде: Охшармы?
Монда дәүләт бар булса,
Аргамакның аягын
Ебәк берлән тошармы?
Тимер икән таш аткан,
Гайсә углы Әмәт барында
Минкәй углы Тимергә
Кызын бирмәк охшармы?» —

тиде, кырк кыркын әйәртеп Кырымга китте. Кырымдан кол теләде. Кырым мосолманга чиреү бирмәде. Контикәргә (1: Хөнкәргә) барды. Ул дәхи* ебәрмәде. Андин Кызылбашка барды. Кызылбаш Кырымдан куркып, ул дәхи бирмәде. Кайтып, ил читенә (1: эченә) килеп, шымчы ебәрде. Хан ауга чыкканда кызын алып качты Зөйә тауын-

да (1, 2: тағында). Барып Идел яҡасында торды. Имде аны Ҡыз тауы тирләр.

Хан андин ҡайтып килде, Әмәт ҡызын алып ҡачҡанын белде. Ҡайда барғанын белмәделәр. Ике йылдин (1: йылдан) суң хәбәре килде: «Ҡыз хәмлә* ирмеш, ай, көн булмыш*. Хәлә* барған кеше алыр ирде», — тиде ирсә, хан чиреү ебәрде. Өч йөз кеше берлән Алачин Алауны баш идеп (1: итеп) ебәрде.

Йәй көне ирде. Әмәт бейүк тауның башында ултырып торор ирде. Ҡыз алыстан ҡарап күрде:

— Бер ничә кеше килә йөрөр. Бер ерән атлы кешедер. Артында белмән садаҡы, белмән кеше торор... — тиде.

Бер заман булып ирде. Әмәт үзе күрде.

— Алачин Алаудыр. Хандин килә торған яу иркән, — тиде. Ул ваҡытта улан тыуған ирде. Бишеге берлән алып килә алмады. Бер ағач ботағыны ултыртып китте (1: киттеләр). Ҡуйның ҡойроҡ майын уғлан (1: уғланның) ағызына ҡаптырып, тәңрегә тапшырып, орошҡа ҡаршы бардылар.

Алачин ҡыуып килеп етте. Атны (1: атты) эйәрнең артҡасын (1: артҡашын) орды. Әмәт әйде:

— Ант-шарт әйткән дус (1: дуст) ирдең, ханға ҡасид* булдың. Атҡан алай атмас, болай атар, — тип арғамағын йыға атты. Ятып ҡалды. Йәнә үзгә арғамаҡҡа менеп килде. Дәхи* атты. Атның ялын ярта (1: алып) дөште (1: төште). Әмәт дәхи арғамағын йыға атты. Йәнә ятып ҡалды. Алачин алау бер буз арғамаҡҡа менеп килде. Етте. Садаҡтағы уҡын ҡырҡа атты. Әмәт ҡармап баҡты. Бер наҡысы бар иркән. Килеп атының умуртҡасын ҡырҡа атты. Ат йыҡылды. Алачин Алау атның өстенә дөште. Әмәт, ҡылычын суғырып*, өстенә килде. Алачин Алау әйде:

— Ай, Әмәт дус! Бер ҡашыҡ ҡаным үтенермен. Атымны язып ирдем, үземә килде, — тиде. Әмәт әйде: Нә күрсәң, аны айғайсын*, — тиде.

Идел башына чыҡты. Идел башында мәкам-йорт доттылар (1: тоттылар): Җәнибәк хан үлгәндин суң Бирдебәккә килеп ҡушылды. Ханның ярты йортын биләде.

Ул ваҡытта Әчтерханда Тимер Ҡотлы хан ирде. Уғлы ҡызы юҡ ирде.

Ул заманда Хажитарханда (1, 2: Әчтерханда) бүрәнә аҡтармаға барған кешеләр ул уғланны табып алып килделәр. (1: Алтун бишекле, кеше йөрәкле асыл кешенең баласы иркәнен белеп, ханшаға алып килделәр.) Ханша алып асырады. Уғлан ир еткәндин суң Хажитархан эчендә ҡараҡчы була башлады. Халыҡ (1: халайыҡлар) бу уғланға рәнжеде (1: сөймәс булдылар. Халыҡ уғлы, йыйылып килеп, ханға әйделәр):

— Сөймәс булсаң безне, аны сөйсәң, аны тот! (1: «Ханым! Безне сөйсәң, безне тот; аны сөйсәң, аны тот!»)» — тиделәр. Анда хан әйде:

— Бу бер уғыл нә булыр, миңә халҡым кирәктер, — тиде. Ул уғланны салда алып килгән өчен «Салчы» атаған ирде.

— Йәнә көнләрдә бер көн Салчы чиреүгә барды. Анда ичкәйекле ердә уйынлар үгрәнде. Ҡубуз, думбыра (1: дунбура), төрлө уйынлар үгрәнде. Анда-монда һәр кем берлән сүзгә килешеп:

— Ай, атасыз-анасыз! — тип әйтер булсалар, ул әйтер ирде:

Ай Сарайда ялчымын,
Аҡ Иделдә салчымын,
Хажитарханда тучымын.
Атам сорасаңыз — билгесез,
(1: Анам сорасаңыз — никахсыз.
Үзем артуҡ тыуған суң
Төбөм сорап нидәсез (1: нидәрсез)?!» —

тир ирде.

(1: Имде) Салчы Жәнибәк ханның ҡызындин тыуған уғыл торор (1: уғылдыр), ханларға жейән уғыл торор, Ғайса уғлы Әмәт уғлыдыр...

## 12. ҺУҢҒЫ ҺАРТАЙ

### Һүҙ башы

Уйҙарымды тыя алмай
Үткәндәрҙе уйлаһам;
Өр-яңынан кисереп,
Уйым менән иңләһәм,
Башыма ут ҡапҡандай,
Мейем ҡайнап сыҡҡандай.
Ул көндәрҙе иҫләһәм,
Уйҙарымдан уйылам;
Үҙ-үҙемә хыялый
Бер әҙәмдәй тойолам.
Тик башымдан үткәндең,
Күҙем ниҙәр күргәндең
Һөйләмәһә барыһын,
Тел тигәнем ҡороһон, ау,
Тел тигәнем ҡороһон!

Әйт тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт тиһәгеҙ, әйтәйем;
Баштан үткән хәлдәрҙе
Һеҙгә бәйән итәйем.
Барығыҙ ҙа тыңлағыҙ,
Иғтибарһыҙ булмағыҙ,
Ул-был булһа, аҙаҡтан
Ишетмәнем, тимәгеҙ.

* * *

Боронғонан һүҙ ҡалған,
Быуын-быуын һыналған:
Барыс йылы барын сәс,
Һис булмаһа, тары сәс;
Бар нәмә уңып торор,
Бәрәкәт ҡунып торор.
Барыс йылы бермә-бер
Төрлө фетнә күбәйер;
Ил эсендә, тышында
Талаш-тартыш шәбәйер.
Ошо ғәзиз ергә мин
Барыс йылы килгәнмен.
Ялыҡ — минең исемем,
Бурнаҡ бейҙең улымын.
Уның атаһы — Ташҡай.
Ырыуым була һартай.
Төлкө ҡойроғо — тамғам,
Ата-бабамдан ҡалған.
«Һартай» ине ораным —
Яу килгәндә ҡоралым.
Мин үҙем дә бей инем,
Дәрәжәлә дәү инем.
Яуға ҡаршы яу инем,
Дауға ҡаршы дау инем.
Ир ҡорона инмәҫтән,
Иҫләмәҫтән-көтмәҫтән,
Аҡһаҡал, тип танылдым,
Батыр тигән дан алдым.

Сейәле түбә эргәһен
Тирмәм өсөн һайланым,
Шау-гөр килеп, йыл һайын
Шул тирәлә йәйләнем.
Йылҡыларым сыңрашып,
Һыйырҙарым мөңрәшеп,
Һарыҡ-кәзә баҡырып,
Бәрәстәрен саҡырып,
Дала иңләп, эркелеп,
Ер өҫтөнә һирпелеп
Йөрөнө көтөү булып.
Өйөр-өйөр малымды
Көнө-төнө ҡараусы,
Йәйен-ҡышын ҡурсалап,
Үрсемен арттырыусы
Көтөүсем ине хәтһеҙ.
Барыһы ла ҡарыулы,
Малдар һәр саҡ ҡараулы,
Үҙем уйһыҙ, хәсрәтһеҙ.

Көтөүселәр өҫтөнән
Башлыҡ иттем береһен,
Ау эттәре янында
Алғыр бүре төҫлөһөн.
Жуңғар ине сығышы,
Бөтмөр ине булмышы.
Мин белгәндән, һәр ваҡыт
Һурпаны эсте тоҙһоҙ,
Шуның өсөн төндә лә
Һәйбәт күрҙе — хәс көндөҙ.
Жуңғар минең ҡулыма
Төшкән ине әсиргә.
Шуға һәр саҡ уй ҡорҙо:
Ни булһа ла, ҡасырға,
Үҙ иленә ҡайтырға.
Тик Ялыҡ бей ҡулынан
Еңел түгел ҡасыуы.
Ҡасты — тоттом.
Тағы ҡасты.
Шул саҡ килде асыуым:
Һуңғы тапҡыр ҡасҡанда,
Ысҡындырмай арҡандан,
Кәмәшәүгә ҡолағын
Сөйләп ҡуйҙым, хур иттем,
Әсир ине — ҡол иттем.

* * *

Көс-ғәйрәтем урғылып,
Ташып торҙо йәш саҡта:
Ҡырҡмыш тайҙы ҡулыма
Күтәрҙем мин орсоҡтай.
Дүрт ҡат һалһаң һигеҙҙе,
Шуларға ҡушһаң берҙе —
Миңә шунса йәш тулды
Баш балам тыуған йылды.
Өлөшөмә — көмөшөм,
Өсәү ине кәләшем.
Өсөһө лә сос, уңған,
Әйтерһең дә, бер туған.
Ятҡым килһә бер аҙға,
Ауырайып ҡымыҙҙан,
Урын йәйеп һалалар,
Сымылдыҡҡа ябалар;
Һандуғастай һайрашып,
Күңелемде табалар.
Төндөк ҡаплап тирмәмдә
Береһе ҡала эргәмдә...

Менәм тиһәм — толпарым,
Сөйәм тиһәм — шоңҡарым.
Сыҡһам кейек ауларға,
Һәр саҡ уңды һунарым.
Ауҙан ҡайтһам, ҡымыҙы
Күпереп, күпсеп тора;
Өс тирмәмдә өс кәләш
Һағынып көтөп тора.
Ҡымыҙ эстем, йыйҙым ҡор,
Күңел астым, һөйҙөм йәр.
Шунының өсөн йәшәнем тип
Әйтергә лә хаҡым бар.

* * *

Көн яманы бөтһә лә,
Бөтмәй әҙәм яманы.
Шул арҡала беҙгә лә
Килде ауыр заманы.
Ул саҡтарҙа урҙала
Мәңгү[1] торҙо хан булып;
Көн-төн илде талауҙан
Ауыҙ-мороно ҡан булып.
Килде миңә лә сапҡын,
Алып Мәңгүҙең хатын.
Хат эсендә фарманы,
Фармандың да яманы.
Әммә мин дә нык торҙом —
Минән тыуҙы был донъяға ике ул,
Атаһына ике ҡанат, ике ҡул.
Ҡармасан тип атаным баш баламды,
Ата юлын дауам итер улымды.
Сәрмәсән тип исем ҡуштыҡ кинйәгә,
Бабам иҫтәлеген хөрмәт итмәгә.
Уландарым юҡтар инде эргәлә,
Иҫкә төшһә, йөрәккенәм өйкәлә.
Икеһе лә хәҙер баҡый донъяла,
Шуны уйлап бәғеремдән ҡан тама.
Исемдәре мәңгелектән туҡылып,
Йөрәгемдә янып тора ут булып.
Яҙмыш — һауыт, ә беҙ унан эсәбеҙ,
Ниҙәр генә тулышһа ла кәсәбеҙ.
Әй, Сөбханәм үә Тәғәләм, Хоҙайым,
Бар күңелдән ошоларҙы һорайым:
Яҡты итсе улдарымдың гүрҙәрен,
Шәфҡәт әйлә, күрһәт ожмах түрҙәрен!
Уландарым бер имсәкташ булһа ла,
Өлкөн атлы бер әсәнән тыуһа ла,
Бер-беренә һис тартмаған инеләр,
Әйтерһең дә, түгел ағай-энеләр.

Ҡалҡыуыраҡ ине ҙуры кәүҙәгә,
Тимер типһә, әйләндерер йәймәгә.
Ә күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡараһа —
Гүйә, бешкән, ысыҡ төшкән ҡарағат!
Алышҡанда ҡыйыулыҡта тиңе юҡ,
Йөрәгендә ғәййәрлектең сиге юҡ,
Әйтерһең дә, яраланған балапан.
Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем аҙаҡтан:
Аҡһаҡ Тимер барластары юрамал
Үлтерҙеләр атын.
Ауҙы меҫкен мал.
Аты менән бергә ауҙы Ҡармасан,
Был хурлыҡтың булғаны юҡ бер ҡасан!
Аһ, Ҡармасан, әсирлектән ҡотолоу юҡ:
Боғал ташлай хәҙер мырҙа Ҡотлобәк!
Шул саҡта ул, хәтерләтеп ҡапланды,
Һикереп тороп, Ҡотлобәккә ташланды.
Эйәренән йолҡоп алып мырҙаны,
Уның менән бергә ярҙан ырғыны.
Икәүләшеп бәреләбәрелә ҡаяға,
Барып төштө ҡайнап аҡҡан дарьяға...
Ҡармасаным егет ине, ир ине,
Дошман менән алышҡанда бер ине.
Күп дошмандың торҡа кейгән
баштарын
Сәтләүектәй ярҙы уның суҡмары.
Уғы мәргән, үҙе баһадир ине,
Ҡармасаным егет ине, ир ине.

Ағайҙарым, ҡустыларым, йәмәғәт!
Сәрмәсәнгә күсә хәҙер хикәйәт.
Күргәнегеҙ барҙыр инде: күк тирәк
Нисек үҫә яр буйында күк(е)рәп —
Тымыҡ мәлдә төп-төҙ тора шәм кеүек,
Аяғүрә баҫҡан зифа һын кеүек.
Ел иҫкәндә йомшаҡ ҡына сайҡала,
Керешен тартҡан йәйә төҫлө тартыла.
Йәй ҙә матур, ҡыш та матур күк тирәк,
Уны күреп, һоҡланмаған зат һирәк.
Шул тирәктәй күркәм ине кинйәһе,
Өҫтәүенә, үҙе йыр-моң эйәһе.
Үҙе оҫта ҡурайсы һәм шәп йырсы,
Атҡа менһә — ҡурҡыу белмәҫ
һуғышсы.
Шундай ине кинйә улым Сәрмәсән —
Һис бер ере юҡ ине шул килмәгән.
Мин яраттым, Сәрмәсән тип
йән аттым,
Мин уларҙың икеһен дә яраттым.

Икеһе лә егет ине, ир ине,
Ҡурҡыу белмәҫ, данлы баһадир ине.
Ирек өсөн һәләк булды баштары,
Мәңгелеккә ҡалды яҡшы аттары.
Эй, Хоҙайым, урынын ҡылып йәннәттән,
Әрүахтарын ташлама мәрхәмәттән!

* * *

Тыңлағыҙ һеҙ, барығыҙ ҙа тыңлағыҙ:
Йәшәй ине аҡ һаҡаллы бер абыҙ.
Ҡара абыҙ ине унең исеме,
Ағиҙелдең аръяғында йәшәне.
Шул абыҙҙа үҫә ине ҡыҙ бала,
Һылыулыҡта һис тиңе юҡ донъяла:
Ҡоҙғон ҡанатынан ҡара сәстәре,
Төндә айҙы көнләштерер ҡаштары;
Алһыу нурҙар уйнап тора йөҙөндә,
Тылсым тулы уттар яна күҙендә.
Бер һүҙ менән аңлатҡанда —
хур ҡыҙы,
Яҡын-ара ерҙең сағыу йондоҙо.
Айбикәлер һылыуҡайҙың исеме,
Тура килгән исеменә есеме.
Буялмаһа ла ҡаштары, тырнағы,
Буялғандан артыҡ ине, валлаһи.
Тартмаһа ла керпегенә һөрмәләр,
Ҡарашынан баҙап, телең көрмәлер.
Бының сере ябай ғына, ул — йәшлек,
Ә йәшлектең игеҙәге — гүзәллек.
Мин шул ҡыҙҙы күреп ҡалып
бер заман,
Өлкән улға хәбәр һалдым: «Ҡармасан!
Ҡустың бик йәш — бауырҙары
ҡалҡмаған,
Күңелендә ғишыҡ сәскә атмаған.
Һин беләһең аръяғында Аҡһыуҙың
Йәшәгәнен данлы Ҡара абыҙҙың.
Беләһеңдер, уның ҡыҙы Айбикә
Һылыулыҡта тирә-яҡта бер икән.
Ҡатын эҙләй ҡатын-ҡыҙҙан
тыуған йән,
Ҡалдырырға ер йөҙөндә нәҫелен».
Һәм Ҡармасан теләгемде аңланы,
Кинәйәләп әйткәнемде тыңланы.
Берәү булһа, әйтер ине: «Белмәйем».
Берәү булһа, әйтер ине: «Алмайым».
Ләкин унан бындай хәбәр сыҡманы,
Хөрмәт итте — ата һүҙен йыҡманы.

Ошонаң һуң, һуҡмаҫ тип ауыҙға,
Беҙҙең яусы китте Ҡара абыҙға.
Өс көтөү ҡуй, ярты өйөр йылҡы мал
Талап итте ҡалымына аҡһаҡал.
Баш һау булһа, йәлме
ни мал өлөшө? —
Уға лайыҡ Ҡармасандың кәләше!
Бер аҙҙан һуң булды байрам,
булды туй,
Бик йыш осрап бармай торған оло туй
Ат еткән дә ерҙән килде ҡунаҡтар,
Хат еткән дә ерҙән килде ҡунаҡтар.
Йылға булып аҡты ҡымыҙ, буҙалар,
Әсе балдан ауыҙ итте ҡоҙалар.
Китте бер саҡ уйын-көлкө, йыр,
ҡурай —
Һәр тирмәлә моңло көйҙәр яңғырай.
Булды бейеү, әйтелделәр таҡмаҡтар.
Туй мәлендә ауҙы хатта туҡмаҡтар.
Бар ҡунаҡтар ашап-эсте туйғансы,
Уйнап-көлдө күңелдәре булғансы,
Ҡара атҡа менгән сапҡын арҡылы
Йәйләүемә ҡара хәбәр килгәнсе.

* * *

Эй, Хоҙайым, бирсе миңә сабырлыҡ,
Аҙағына тиклем һөйләй алырлыҡ.
Буталыша башымдағы уйҙарым,
Гүйә, аттың еүеш ҡойроҡ ҡылдары.
Әммә ләкин мин булырмын түҙемле,
Аҙағына еткерермен һүҙемде.
Әйткәнемсә, байрам ине тирмәмдә,
Яҡындарым, дуҫ-иштәрем эргәмдә.
Беҙ бал эстек, эстек ҡымыҙ, буҙалар.
Уйнап-көлөп, күңел асты ҡоҙалар.
Көллөһө лә үҙен яҡшы хис итте.
Шулай байрам итә торғас, кис етте.
Туй һүрелде.
Тынып ҡалды йыр-моңдар,
Тымды ҡурай, туҡталдылар уйындар.
Мин тирмәмдә.
Шалтыратып һауытын,
Бейә һауа һуңға ҡалған ҡыҙ-ҡырҡын.
Ишетелә сиңерткәләр сыңлауы,
Эрәмәлә һандуғастар һайрауы.
Күҙҙәремде йоҡо алмай ниңәлер.
Тышҡа сыҡтым.
Төнгә күсә күк эңер.

Йәйләү тыныс, хәүеф-мажар юк кеүек.
Болоттар юк, шундай аяҙ төнгө күк.
Юғарыла ем-ем итә Етегән.
Гүйә, кемдер ҙур ижауҙы түңкәргән.
Етегән бар йондоҙҙарға баш кеүек,
Етеһе лә яна аҫыл таш кеүек.
Таштар шулай балҡый
ҡылыс һабында,
Зәркәндәргә йомарт черкес яғында.
Тирә-яҡта һиллек, ә мин шикләнәм,
Күңел ҡурҡа әллә ниндәй шөбһәнән.
Күңел юҡҡа уйнамаған, хәйерсе:
Пәйҙә булды шул саҡ тәүге хәбәрсе.
Бик алыҫтан сабып килгән, ахыры —
Аҡ күбеккә батҡан ине айғыры.
Меҫкен аттан тама ергә аҡ күбек,
Хәбәрсенең һүҙ ҡара төн кеүек:
«Түрә! — тине аттан
төшөр-төшмәҫтән,
Сәләменә хатта яуап көтмәҫтән, —
Мин киләмен сабып Барак йортонан,
Күккә ашҡан ябыҡ ҡарағай һыртынан.
Алып килгән хәбәрҙәрем бик яман:
Етеп килә бында төшлөк яғынан
Аҡһаҡ Тимер, осаһын ҡорт саҡҡыры,
Ике күҙе бер ыңғайы сыҡҡыры!
Сарбаздары, барластары ғәйәт күп,
Эҫе йәйҙә үрсер һуҡыр себен күк.
Атабәктәр, мырҙалары янында,
Улар инде Яйыҡтың бирьяғында.
Елберҙәтеп елдә йәшел тыуҙарын,
Артылалар улар Урал тауҙарын».
Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс тә мин унан,
Үҙ-үҙемде тыйҙым нәфрәт утынан.
Насар хәбәр өсөн телен ҡырҡманым,
Һәм үҙенең муйынына таҡманым.
Юҡ, мин уны алып индем тирмәгә,
Алдарына ҡуйҙым тулы көрәгә.
Хәбәрсене ҡунаҡ иттем, һыйланым,
Ҡунаҡсыллыҡ ҡанундарын боҙманым.

* * *

Сапҡындың был хәбәре
Раҫҡа сыҡты, ҡәһәрең.
Һүҙҙәренең артынса
Килеп етте үҙҙәре.
Был хәл булды йәй көнө —
Һәләкәттең тәү көнө;

Урмандағы кәкүктәр
Һаҡауланған мәл ине.
Улар килде саф менән,
Түмән артынан түмән.
Эт күтүүе килгәндәй
Ҡара ерҙең өҫтөнән.
Ләғнәт төшкөрө Жуңғар
Төндә ҡасып дошманға,
Аҡһыу аша кисеүҙе
Күрһәткән бит, суҡынғыр!
Дошман яуы шул саҡта,
Ел тултырып турһыҡҡа,
Бәйләп уны эйәргә
Йөҙөп сыҡҡан бирьяҡҡа.
Тәү ҡат күрҙем дошманды
Сейәле түбә артында;
Арбалары шығырлап,
Яугирҙәре мығырлап
Бур яу килә ятҡанды.
Өс уҡ атым самаһы
Булһалар ҙа, валлаһи,
Инабатһыҙ йөҙҙәрен,
Яҡшы күрҙе күҙҙәрем.
Аңланым шул саҡ үҙем:
Улар килтерә үлем!
Һөңгө осона элеп
Килтерә улар ҡоллоҡ!
Йәнә шуға төшөндөм,
Төшөндөм дә өшәндем:
Дөйәләре, аттары
Ерҙе тапар, аҡтарыр,
Һыуҙарыбыҙ бысраныр,
Аҫты-өҫтө болғаныр.
Киттем дә бер аулаҡҡа,
Бағып ҡибла тарафҡа,
Бағландым ғибәҙәткә,
Тоғро ҡалып ғәҙәткә:
«Тәңрем ярҙам ит, — тинем,
Һәләк булам бит!» — тинем.
Тик Тәңрем ишетмәне,
Ярҙамын күрһәтмәне.
«Ярҙам ит, — тинем шул саҡ, —
Изгебеҙ Хөсәйенбәк[4],
Эруахыңды саҡырам,
Ҡурсыуыңды ялбарам».
Тик ул да ишетмәне,
Миңә ярҙам итмәне.
Һораһам әгәр ихлас,
Килмәҫме Хызыр Ильяс[5]:

«Хызыр Ильяс, килһәңсе,
Хәлебеҙгә керһәңсе!»
Ләкин ул килмәне,
Ишетмәне, күрмәне.
Беҙ ҡалдыҡ япа-яңғыҙ,
Дошман менән йөҙгә-йөҙ.
Шул саҡ, өҙөп өмөттө,
Баҫтым да аяғүрә,
Ҡысҡырҙым ярһып: «Етте!
Үлем дошманға! Ура!»
Уң яғымда — Ҡармасан,
Һул яғымда — Сәрмәсән.
Икеһе лә һәләк йыш
Бөркәләр ҡайнар һулыш.
Алға әйҙәй күҙҙәре,
Уттай яна үҙҙәре,
Ташланмаҫ борон алға,
Баҫып килгән дошманға,
Тирмәләрҙе тағатып,
Ҡаралтыны тейәтеп,
Мал-тыуарҙы эйәртеп,
Барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы,
Бала-саға, ҡарттарҙы
Оҙаттыҡ беҙ төньяҡҡа,
Был урындан йыраҡҡа.
Шунан ян-яҡҡа ҡарай
Оран ташланыҡ: «Һартай!»
Буйы ҡылысты үткән,
Суҡмарға көсө еткән
Ир-ат бергә йыйналды,
Бер алайға[6] тупланды.
Барластары Тимерҙең
Ҡаплап килә бар ерҙе.
Ә беҙ кескәй бер төркөм,
Шулай ҙа унда һәр кем
Батыр йөрәкле ине,
Талмаҫ беләкле ине.
Беләм: ул көн һәр кемдә,
Эстә — йөрәк төбөндә
Урғып ҡайнаны нәфрәт,
Урғып ҡайнаны ғәйрәт.
Беҙ ҡалҡындыҡ дошмандан
Тау-урманды һаҡларға,
Күтәрелдек баҫҡындан
Ҡыр-яланды һакларға,
Иркебеҙҙе яҡларға.
Шуға ла Тимер Аҡһаҡ,
Өмөт итеп бағыныу,

Талап итеп ер һәм һыу
Ебәргәс беҙгә баҫҡаҡ,
Ҡалдырҙыҡ уны тере,
Бороп ҡайтарҙыҡ кире.
Юҡ!
Иң тәүҙә ыштанын
Һалдырҙыҡ та дошмандың
Осаһына бал һөрттөк,
Ҡырмыҫҡаның ҡеүәтле
Иләүенә ултырттыҡ.
Ах, егеттәр, шул саҡта
Күрһәгеҙсе баҫҡаҡты:
Башына һуҡһаң, көсөк
Бәләһен һала нисек,
Ул да шулай сыйнаны,
Шыңшып-шыңшып иланы.
Һуңынан китте һуғыш,
Ҡот осҡос булды алыш:
Китте орош, китте ҡан,
Китте яман ҡыйралыш.
Күрһәгеҙсе һеҙ унда
Беҙ нисек һуғышҡанды!
Минең һөңгөм уйнаны,
Береһен дә ҡуйманы,
Бик күп дошман, йән биреп
Һөңгөм һабын тырнаны.
Һөңгөм һынһа, күптәрҙе
Ҡылысымдан үткәрҙем.
Йөҙ башымы, сарбазмы,
Мең башымы, барласмы —
Минең өсөн ҡаршыла
Дошман ине бары ла.
Тимерлән, йылан саҡҡыр,
Ишетте бик күп тапҡыр
Уҡтарым һыҙғырыуын,
Уғым тейеп, ҡолаған
Сарбаздар ҡысҡырыуын.

Хан сиреүе — һыналмыш,
Яугирҙәре һайланмыш:
Барыһы ла уҡ кеүек,
Алышҡанда ут кеүек.
Шундайҙарҙың береһе,
Кәүҙәгә иң эреһе
Торғот тигән бей ине,
Ғәскәрендә бер ине.
Үҙем күрҙем: Ҡармасан
Уҡталып уға табан,
Бейҙең тимер күлдәген
Йыртты ҡоро ҡул менән,

Әйтерһең дә, ул күлдәк
Серек дөйә йөнөнән.
Ҡармасандың йоҙроғон —
Ҡатылығын, тослоғон
Сағыштырып була тик
Тояғына мышының.
Ялыҡ бейҙең улынан,
Унын суйын ҡулынан
Күп батыры Тимерҙең
Әжәл тапты был ерҙә.
Ах, Сәрмәсән, Сәрмәсән!
Дау өсөн тыуған сәсән.
Ватанына яу килгәс,
Ил һаҡларға яй тыуғас,
Ҡурайын ҡуйып бер яҡҡа,
Атланды арғымаҡҡа;
Ғәййәрләнеп басты ул
Минең менән бер сафҡа.
Күрҙем: унын ҡылысы
Ялтланы, гүйә, йәшен;
Кәүҙәһенән айырҙы
Байтаҡ дошмандың башын.
Аҫтындағы толпары
Дошмандарҙы сапсыны,
Тешләр өсөн уларҙы,
Ажғырып үрәпсене.
Беҙ аяуһыҙ һуғыштыҡ,
Йәнтәслим ҡан ҡойоштоҡ.
Батыр инек барыбыҙ,
Тик әҙ ине һаныбыҙ.
Шуға ла беҙ еңелдек,
Тик ҡасманыҡ — сигендек.

* * *

Ғүмерендә кем яу күргән — шул белә:
Түш менән эс яраланһа, шул үлә.
Яу эсендә алған ундай яранан
Кеше түгел, ат китә донъянан.
Ҡармасаным, Сәрмәсәнем, улдарым!
Ерҙә һеҙҙән айырылды юлдарым.
Тик белегеҙ: ошо фани донъяла
Шәп иҫтәлек ҡалды һеҙҙең турала.
Киң далала, аръяғында Аҡһыуҙың,
Хәтерләтеп Ҡөрьәндәге яҙыуҙы,
Бормаланып аға ике саф йылға,
Һеҙҙең иҫән сағығыҙҙай шат йылға.
Шул исемһеҙ ике йылға үрендә
Һөйәгегеҙ ята ҡәбер төбөндә.

Бер йылғаға исем бирҙем: Ҡармасан,
Икенсеһен атаным мин: Сәрмәсән.
Балаларым!
Яҡты булһын гүрегеҙ,
Раббының гел мәрхәмәтен күрегеҙ.

Ә һуңынан һеҙҙең өсөн изге үс
Йөрәгемә бирҙе ғәйрәт, бирҙе көс.
Ҡон ҡайтарҙым.
Дошман иҫләр ғүмергә:
Береһен дә алманым мин әсиргә.
Тура килгән ерҙә алдым йәндәрен,
Ҡара төнгә әйләндерҙем көндәрен.
Еңелгәндең ыңғырашыуы, илауы,
Тубыҡланып, ярлыҡауҙы һорауы
Ҡандырҙы тик йөрәктәге үсемде,
Йәнем үҫкән кеүек тойҙом үҙемде.
Нәфрәт менән томаланды ҡолағым,
Үс, тип янды күҙем, янды йөрәгем,
Эйе, яуыз дошман иҫләр ғүмергә:
Береһен дә алманым мин әсиргә.
Тура килгән ерҙә алдым йәндәрен,
Ҡара төнгә әйләндерҙем көндәрен.
Мин уларҙың соҡоп алдым күҙҙәрен,
Тере килеш ергә күмдем үҙҙәрен.
Аяманым,
Шуның өсөн илбаҫар
Миңә шундай исем таҡты: юлбаҫар.
Һай, егеттәр!
Ағай-эне, дуҫтарым,
Үс алырға мин шул тиклем оҫтарҙым!
Йәштәр белһен: Тәтегәс менән төндә
Йөҙөп сыҡтыҡ яҙ көнө ташҡын Димде
Һәм үлтерҙек Олоҡай тигән бейҙе.
Хәбәр һөйләп, бер-беренә терәлеп,
Ята ине улар усаҡ тирәләп.
Ләкин беҙҙең ҡулдар сос һәм ныҡ ине,
Дошмандарға һис ҡотолоу юҡ ине.
Улар беҙҙән биш тапҡыр күп —
ун ине,
Ә беҙ икәү.
Өсөнсөһө төн ине.
Беҙ уларҙы йәһәннәмгә оҙаттыҡ,
Ҡолаҡтарын ҡырҡып, утҡа ырғыттыҡ.
Ул төндә беҙ еңеп сыҡтыҡ икебеҙ,
Ғорурлыҡтан күтәрелде рухыбыҙ.
Хәтеремдә һаман: бер көн юл сыҡтым,
Уйламаҫтан Туғай бейгә юлыҡтым.
Улар икәү — эргәһендә йәш нәүкәр.

Мине хурлап һүҙ ҡатты бей.
Ах, ҡәһәр!
Һәр бер һүҙе ағыуҙай, ҡорт саҡҡыры!
Әйтерһең дә, аҫҡорһаҡтың тамыры.
Һөмһөҙ бейгә күрмәгәнен күрһәттем:
Ҡыуып етеп, башын өҙөп ырғыттым.
Ә һуңынан, ағай-эне, белегеҙ,
Хәтерләһен һис юғында берегеҙ:
Бейҙең башын төрөп ҡайын туҙына,
Ебәрттерҙем Тимерләндең үҙенә.
Илбаҫарҙар ҡурҡты минән бик яман,
Ҡарағоштан ҡурҡҡан кеүек үр ҡуян.
Суҡмарымды өлгөрмәҫтән күтәреп,
Дошмандарым ҡасты минән
һырт биреп.
Аҙаҡ хатта Ялыҡ тигән яңғыҙ һүҙ
Бик күптәрҙе итә ине быуынһыҙ.
Шулай дер-дер ҡалтырана йәш ҡолон,
Ишетеп ҡалһа ҡырҙа бүре олоуын.
Улар миңә исем таҡты: юлбаҫар,
Ә үҙҙәре ҡуян йөрәк илбаҫар.
Баҫҡынсыға шундай теләк Һартайҙан:
Ҡәберҙәре булһын буҡлы һарайҙа!

* * *

Барыс йылы тыуғандарҙың яҙмышы —
Тоторогһоҙ яҙғы елдең булмышы;
Нәк ҡатын-ҡыҙ: берсә йылы һулышы,
Берсә һалҡын бөркөлөүҙән йән өшөй.
Шуныһы бар: әсе менән сөсөнө
Тик татыған ғына белер, төшөнөр.
Инде бына мине юлы тәкдирҙең
Ғүмеремдең шәфәгенә килтерҙе.
Һис бер нәмә кәрәкмәй миңә инде,
Минең өсөн барыһы ла — үткәндә.
Бөтәһенән ҡолаҡ ҡаҡтым: ҡаралтым,
Тирмәләрем, мал-тыуарым, ил-йортом.
Ҡатындарым, балаларым, һеҙ ҡайҙа?
Һеҙһеҙ миңә был донъяла ни файҙа?
Мин хужаһыҙ ҡалған эткә бәрәбәр,
Уға ла бит йәлләп һөйәк бирәләр.
Мин — өңөнән яҙған яңғыҙ
бурһыҡмын,
Оя күрмәҫ зарлы кәкүк һымаҡмын,
Мин, дәрүиштәй, йөрөйөм ер ҡыҙырып,
Бер йәйләүҙән икенсегә һуғылып,

Сит усаҡтар эргәһендә йылынып.
Ейгәнем тик ҡаты-ҡото, ҡалған аш,
Уныһын да бирмәһәләр — тамаҡ ас.
Әле тәнем йәлсемәй һис кейемгә,
Йоҡларға ла ятам сит-ят кейеҙгә.
Минең хәҙер бер нәмәм дә юҡ ерҙә,
Мин — байғошмон, көнө-төнө
ил гиҙгән.
Ҡайҙа икән хәҙер минең дуҫтарым,
Иңгә инде терәшкән тиң-тоштарым?
Ҡайҙа Сарым батыр?
Ҡайҙа Тәтегәс?
Улар инде ҡайтып килмәҫ бер үлгәс.
Мин бер үҙем ҡалдым улар артынан,
Мин — иң һуңғы кеше Һартай затынан,
Аҡһаҡал да, бей ҙә булдым мин элек,
Мин үлермен — ғүмер түгел мәңгелек.
Тик белегеҙ: һуңғы Һартай булһам да,
Һуңғы яугир түгелмен мин.
Булмам да!

## 13. ЯЛЫҠ БЕЙ, ҠАРМАСАН МЕНӘН СӘРМӘСӘН

### Һүҙ башы

Башым ҡайнай, йөрәк яна,
Үткәндәрҙе уйлаһам.
Үткән ғүмер — ҡалған хәтер,
Йәшәтә хәтер һаман.

Телем тышауланамы ни,
Кәрем етмәй көйләргә,
Ниҙәр уйлап, ни хәтерләп,
Янғанымды һөйләргә.

Хәтерһеҙ ҙә түгел инем,
Хәтер бөттө күп уйлап —
Бер башлаһам, осонаса
Китәм үткәндәр буйлап.

Әйт тә әйт, тип әйтәһегеҙ,
Әйтеүе еңел түгел.
Әйтер һүҙем улай-былай
Тәләкә* йә ни түгел.

Боронғоно һөйләмәйҙәр
Боронғо өсөн генә.
Боронғола бөгөнгөңдөң
Асылы, төшө генә:
Бөгөнгөң — шул боронғо
Сәскәндең емештәре.
Боронғола — киләсәктең
Тамыры, инештәре.

Аҡылһыҙға әйткәнеңдән,
Мең артыҡ — әйтмәгәнең —
Көллө ғаләм белә уға
Бер һандың етмәгәнен,
Ҡолағының, ҡурай һымаҡ,
Үтәнән тишеклеген:
Бер ҡолағы сығарғанын
Береһе ишеткәнен.

Әйтер һүҙем — аҡыллыға,
Ундайҙар бар, иншалла,
Ундайҙарға етә булыр
Ярты һүҙ, ишараң да.

Изгеләрҙән ҡалған һүҙ бар
Доғалай уҡымалы.
Ишетең дә алың ғибрәт,
Үә фәһем унан тағы:
«Үҙ нәҫелен һанламаған —
Хакимға баралмаған;
Боронғоно аңламаған —
Хан булып торалмаған».

Уянығыҙ, башҡорттарым,
Ятмағыҙ ғәфләт* ҡылып.
Тыңлағыҙҙар, белегеҙҙәр,
Ҡалмағыҙ ғафил* булып.

Әкиәттең әкиәте —
Аңлағанға хәҡиҡәт,
Хәҡиҡәттең хәҡиҡәте —
Мин һөйләйһе хикәйәт.

* * *

Әйтеремде әйтәйем,
Илгә әшкәр итәйем.
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Боронғонан аманат.


7 II-742

Уға итмәң хыянат —
Һеҙҙән ҡалыр яман ат,
Һеҙҙән ҡалыр яманат.
Ай, ҡалдырмаң яман ат,
Вай, ҡалдырмаң яманат!

Аманатҡа тоғро бул,
Булма миҫле* уғры, бур —
Яуаплы эш — аманат,
Сауаплы эш — аманат;
Бәҫле эш ул — аманат,
Нәҫели эш* — аманат;
Намыҫ эше аманат,
Ҡанун эше — аманат;
Уға итһәң хыянат,
Бар алыуың яманат,
Йыуылмаҫлыҡ яманат,
Юйылмаҫлыҡ яманат,
Юғалмаҫлыҡ яманат,
Уңалмаҫлыҡ яманат —
Аталыр гел «Яманат зат»
Һинән тороп ҡалыр зат:
Быуын-быуын быуының,
Аймаҡ, араң, ырыуың.

## Ялыҡ бей

Ун ике йыл — бер мөсәл,
Мөсәл — үҙе бер үлсәм.
Һәр йылдың үҙ ғәҙәте,
Ғәҙәт күпкә сәбәпсе:
Сысҡан йылы ҡыш ауыр,
Ҡар яуыр ҙа ҡар яуыр.
Имен генә ҡыш сығың —
Уңыр көҙөн ашлығың.
Өлгөргәс тә ашлығың,
Йоҡлап ятма, ашығың.
Юҡһа ул — аллаһәкбәр:
Сысҡан уны тәләфләр.
Һыйыр йылы буранлар,
Яҙын булыр мул анһар,*
Иген уңыр ишелеп,
Мул булыр ер емешең.
Барыс йылы барын сәс,
Һис булмаһа тары сәс;
Бөтә нәмә уңыр ул
Елкәңә май ҡуныр ул.

Ана шул йыл эсендә
(Тотоң шуны иҫеңдә),
Уңыр ыҙғыш-низағ та,
Хандар инмәҫ инсафҡа:
Ҡызыҡлашыр үҙ-ара,
Зыҡ ҡубышыр идара;
Бәлә килер илгә лә,
Ерҙә ҡубыр зилзәлә.*

Барыс йылы тыуғанмын,
Атай юлын ҡыуғанмын.
Атым минең Ялыҡ бей,
Атам иһә Бурнаҡ бей,
Ташҡайҙың ул уғланы.
Таштай ҡаты булғаны,
Атты аттан алғаны,
Һүҙемдең юҡ ялғаны.
Ул тыуғансы, олатам,
Барын гүргә оҙатҡан:
Йәлсемәгән балаға,
Һығынһа ла Аллаға.
Атам тыуғас, йола, тип,
Йәшәһен был бала, тип,
Бик үрсемле бер заттың —
Мороно аҡ бер аттың
Ҡуйынына һалдыртҡан,
Һалдыртҡан да алдыртҡан —
Ат ҡуйҙыртҡан «Мороно аҡ»,
Шунан сыҡҡан, ти, «Бурнаҡ».
Ырыуымдың аты ла —
Аттан ҡалған атама:
Булғанғамы үтә сос,
Көнләшерлек хатта ҡош;
Булғанғамы һарыҡай,
Ат алғанбыҙ «Һары тай».
Замана уҙа торғай —
«Һары тай» «Һартай» булғай.

Ырыуымдың атын, тим,
Оран итеп алдым мин.
«Һартай!» — тиеп яр һалһам,
Яттар торҙо: «Йә, Аллам!»
Ҡошом булсы ыласын,
Ырыҫлы итте илаһым.
«Ағасың ни?» — тиһәгеҙ,
Белеп ҡуйың, иҫләгеҙ:
Ағасым булыр уҫаҡ,
Ырыҫлы булды һәр саҡ.
Тамғам айҙай түңәрәк.
Ундай тамға бик һирәк.

Яу килгәндә, яу булдым,
Дау килгәндә, дау булдым.
Эйе, шулай, яу булдым,
Эйе, шулай, дау булдым.
Ғәзел булдым яуҙа ла,
Ғәзел булдым дауҙа ла.
Тиңем менән ярыштым,
Таһыл белеп алыштым;
Табып берәй әмәлен;
Тәүҙә хәлен хәлләнем;
Ҡош, ағасын һораным,
Ырыуының оранын.
«Алыш бармы, көрәшме?» —
Тиеп йәнә өндәштем.
«Алыш — атаң башына!
Көрәш!» — тиеп шашынһа,
Тыҡтым ҡынға ҡылысты,
Алдым ҡара тырышты,
Булһа булһын елленән,
Муйынынан, биленән,
Ысҡындырмай шул ерҙән,
Йыға тарттым эйәрҙән.
«Алыш, — тиһә, — алышҡа!»
Ебәрмәҫтән алыҫҡа,
Төкөрөп, ыуып усты,
Ҡындан һурып ҡылысты,
Алҡымынан ал ҡанын
Алҡындырып, айҡаным...

Дәрәжәлә дәү булдым,
Түң янында тау булдым;
Туң янында ут булдым,
Яй янында уҡ булдым;
Егет дәүрем үтмәҫтән,
Уйламаҫтан-нитмәҫтән,
Батыр бей тип таныл дым,
Аҡһаҡал тип дан алдым.

Шулай ине булмышым,
Гөрләп торҙо тормошом.

Тирмә ҡорҙом сәхрәлә,
Сейә үҫкәс эргәлә,
Сейәле тау, тинеләр,
Эйәһе бай, тинеләр.

Сыңғыр-сыңғыр сыңраған,
Йылҡ-йылҡ килеп йылтыраған,
Мөңгөр-мөңгөр мөңрәгән,
(Ҡуҙғалһа, ер иңрәгән),

Мыҡыр-мыҡыр мыҡраған,
Тыпыр-тыпыр тыпраған,
«Мә! лә «Бә!» — тип баҡырған,
Бәрәстәрен саҡырған
Тай-тулаҡты, ҡолондо,
Туғай-туғай йылҡымды;
Иңләгән урман, ҡырҙы
Көтөү-көтөү һыйырҙы,
Һарыҡ, кәзә, ҡуйымды,
Һауымдарым, һуйымды —
Барыһын да бағыусы,
Үрсемдәрен алыусы
Көтөүсем ине һанһыҙ,
Булманы улар аңһыҙ,
Булманылар уҡ, янһыҙ,
Йөрөмәнеләр яңғыҙ,
Хеҙмәт иттеләр тоғро —
Яҡын килмәне уғры.

Бөтәһенең өҫтөнән,
Көслөнән дә көслөнән,
Шоңҡар, бөркөт төҫлөнән,
Бар яғы ла хуш килгән:
Барынан да күп белгән,
Алдан белеп эш күргән
Көтөүсенең береһен,
Кәүҙәгә иң эреһен
Күҙ өҫтөнә ҡаш иттем —
Башҡаларға баш иттем.
Тоҙһоҙ эсте һурпаны,
Төндә шуға ҡурҡманы;
Үтә күрҙе көлләһен,
Күргән кеүек көндөҙөн.
Жунгар ине — сығышы,
Уңған ине булмышы,
Эшсәндән эшсән ине,
Эсиргә төшкән ине.

Шулай ине эсирем —
Тик булды шул бер сире:
Уйы булды — олаҡмаҡ,
Иленә ҡасып ҡайтмаҡ.
Мин дә һиҙгер — отолдо,
Ҡасҡан һайын тотолдо.
Эләктергәс тағы ла,
Фарман бирҙем ҡағырға
Ҡолағынан аҙмыштың
Ҡолағына ялғаштың,
Ат эсерә торғандың —
Ят эсирем ҡол ҡалды.

«Яҡшылыҡты — яҡшы, тип, —
Белмәгәсең, шаҡшы! — тип, —
Уңай булды! Үсем! — тип, —
Бына ҡанды үсем», — тип,
Әйттем уның үҙенә,
Тоҙ һалғандай күҙенә.

* * *

Егет саҡта бар рәтең,
Ташып тора ғәйрәтең:
Бер тай ҡулдың осонда
Булды миңә осҡондай.

Дүртең һигеҙ мәртәбә,
Шуға ҡушһаң бер йәнә,
Миңә шунса йәш ине,
Донъя менән мәж инем.

Шәбе инем егеттең —
Өсәү ине ефетем.
Өсәүһе лә бер тигән —
Тилберҙән тилбер килгән:
Торһам, өҫтөм бағыулы,
Ятһам түшәк ҡағыулы,
Сымылдыҡ ағартылған,
Мендәрем ҡабартылған;
Ҡымыҙ сыҡһа башыма,
Өсәүләп ҡаршы ала,
Һылап-һыйпап өҫтөмдән,
Өсәүләшеп өс телдә
Иркә һүҙҙәр әйтәләр,
Әкәмәт күрһәтәләр;
Күңелемде табалар,
Сымылдыҡҡа ябалар;
Көнләшкән юҡ көндәштән,
Ауыр һүҙ мән* өндәшкән.

Ауға сыҡһам ян аҫып,
Ҡулда була ыласын.
Уңыр булһа һунар көн,
Ауҙа булдым унар көн;
Ҡайтҡас, күңел ауланым,
Йөрәктәрен яуланым;
Күңел асыу башланды,
Ҡымыҙ эсеп хушландым.
Өсөһөн дә тиң күрҙем,
Сәстәрен сәскә үрҙем;

Йөрәгемдең йылыһын,
Айырмай йәш, олоһон,
Барына ла еткерҙем,
Теттергәндә, теттерҙем —
Бар сағында эрәтем
Йәшәй белдем гөрләтеп.

* * *

Заманаһы — замана
Яман ине һаман да.

Хаиндың иң хаины
Мәнгү түрә[2] хан ине.
Миңә сапҡын саптырҙы
Әллә ниҙәр таптырҙы:
Ебәк таҫма* мән берҙе —
Миңә баҫма* ебәрҙе.
Кире ҡаҡтым баҫмаһын
(Илде талап ятмаһын!).
Уға ҡушып оҙаттым
Һыныҡтарын бер уҡтың,
Үләкһәһен йомрандың* —
Үсемде йомарт алдым.
Унан шулай көлдөм мин:
Йәнәһе лә, бөлдөң һин.
Ниңә унан көлмәҫкә,
Битенә төкөрмәҫкә,
Ҡошом менән ораным,
Тамғам, ағас[4], ҡоралым
Үҙемдеке бар саҡта,
Булғанында форсат та?!

Үҙ хөкөмөм — үҙемдә,
Ҡыҫылмаһын бер кем дә!
Алашалай дан иттем,
Буғашағандай иттем.
Мәңгү түрә ханды, тим,
Үсем уға ҡанды, тим.

Йыйып барлыҡ сардарын*,
Яһау итеп сарбазын*,

---

* Мәнгү түрә — монголдың менгү (мәнгү) династияһы вәкиле булыуы ихтимал.
* Таҫма — фарман, хат яҙылған таҫма.
* Баҫма — фарман, хат.
* Сардар — ғәскәр башы.
* Сарбаз — ҡәҙимге яугир.

Түрә миңә яу сапты —
Шунда әжәлен тапты;
«Кәрәгеңде ал, йомран,
Затың көшөл алйырҙан!»
Килгән ине һағалап,
Уң яҡ ярын яғалап
Ағиҙелдең — аҡ һыуҙың,
Белмәй сиген асыуҙың.

«Ур! Ур!»— тиеп, сарбайлап,
Ҡысҡырышты сарбаздар,
Килгәс хандың фарманы.
Юҡ ине тик дарманы —
Минең сиреү — дан ирҙәр,
Һайлам-һайлам яугирҙәр
Көлдө, ҡатып һындары,
Әсе телдәр, ҡындағы
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай,
Ҡылысыңа торорҙай.
Беренән-бере ҡалышмай,
Барыһы ла — ҡылысбай*.

Шунда минең мәл етте,
Минең уғым тәл* итте
Әҙәмдең иң ямағын,
Мәңгү түрә тамағын.
Уғым тейгәс Мәңгүгә,
Ул юғалды мәңгегә:
Төштө, батты Аҡһыуға,
Бүтән тотмаҫ асыу ҙа...
Уныһы улай булды,
Быныһы былай булды,
Мәңгүгә ҡулай булды —
Дөмөктө! Уңай булды!

Түрәләрҙең ҙурҙарын —
Атабәген, мырҙаһын,
Аллы-артлы эйәртеп,
Бар ғәм, миңә эйәр, тип,
Аҡһаҡ Тимер[5] килгәнсе,
Илем унан бөлгәнсе,
Бына шулай йәшәлде,
Ҡәҙерен белеп йәш мәлдең;
Байрам итте бер йәнем,
Бер ҡайғы ла күрмәнем.

---

* Тәл итте (һөйләш) — тап итте.

## Ҡармасан менән Сәрмәсән

Әйткәнемсә, йәмәғәт, мин
Һартайҙанмын.
Йәшлек дәүерем киткән күптән —
Ҡартайғанмын.
Тал-сыбыҡтай сағым үткән,
Муртайғанмын:
Кәрем етмәй башына ла
Хәҙер тайҙың.

Арағыҙҙа шундай бер ҡарт
Бар сағында.
Тыңлағыҙ һеҙ, барығыҙ ҙа,
Барсағыҙ ҙа,
Тыңлағыҙ һеҙ, хикәйәтем
Дауам итәм,
Балаларым кем булғанын
Бәйән итәм.

Минән тыуҙы ике бала
Был донъяға:
Береһе — ҡусты, икенсеһе —
Уға аға.
Исем туйын туйларға күп
Ат һуйҙырҙым.
Баш балама Ҡармасан тип
Ат ҡуйҙырҙым.

Мәрхүм бабам иҫтәлеген
Хөрмәт итеп,
Кинйәһенә исем бирҙек
Сәрмәсән тип.
Икеһе лә яндарымда
Юҡтар инде...
Иҫкә төшһә, йөрәккенәм
Туҡтар инде.
Икеһе лә күсте баҡый
Донъяларға,
Улар тиеп, йөрәгемдән
Ҡандар тама.
Исемдәре ялҡын менән
Яҙылғандар —
Йөрәгемә мәңгелеккә
Уйылғандар.

Яҙмыш — аяҡ*. Ул аяҡ ҙур —
Дәү ҡоштабаҡ*.
Шул һауытҡа һалыналыр
Әжәл-шарап.

Ул шарапты һемереүҙән
Ҡотолмаҡ юк,
Әжәл өсөн бәндәләрҙән
Отолмаҡ юк.

Эй илаһым! Хаҡ тәғәләм,
Эй хоҙайым,
Һағынамын, ялбарамын
Үә һорайым:
Уландарҙың ҡәберҙәрен
Нурлы әйлә,
Тултырһана ҡәберҙәрен
Рәхмәт илә!

Уландарым инеләр бит
Шәптән шәптәр.
Икеһе лә булды улар
Имсәктәштәр.
Тыуһалар ҙа бер әсәнән,
Бер атанан,
Ине улар беренә-бере
Һис тартмаған.
Әсәләре кем, тиһәгеҙ,
Өлкөн ине,
Ырыуымда абруйы бик
Өлкән ине.

## Өлкән ул

Өлкән улым кесеһенән
Бейек ине,
Торғаны ул арыҫландай
Кейек ине.
Күҙҙәре һуң! Ине улар
Сөмөрт ҡара,
Дөрөҫ булыр ҡарағатҡа
Сағыштырһаҡ.
Ҡыйыулыҡта, ҡыйғырлыҡта
Тиңһеҙ ине,
Тәүәккәллек, дарья һымаҡ,
Иңһеҙ ине.

Аҡһаҡ Тимер биләмәмә
Ингәс баҫып,
Ятманы ул ябалаҡтай
Ҡасып-боҫоп.
Ахырғаса тотто улым
Мин ҡушҡанды:

Тәүҙә уҡтан үткәрҙе ул
Күп дошманды.
Шунан алды уң ҡулына
Ул ҡылысын,
Һул ҡулына — һөңгө, эйе,
Ысын, ысын.
Яраланған бөркөт нисек
Тота үҙен,
Шулай булды яу ҡырында,
Үҙем күрҙем.
Дошман тетрәп төштө, улым
Байҡағанда.
Баштар осто, ҡылысын ул
Айҡағанда.

Барыс һымаҡ ине Тимер
Барластары:
Киҫелһә лә күптәренең
Туң баштары,
Алыштылар улым менән
Аяу белмәй.
Ил өҫтөнә, аяр өсөн,
Ай, яу килмәй.

Айҡағанда, сайҡағанда
Уңлы-һуллы,
Талыҡтырмай тиһең ҡылыс
Ниндәй ҡулды.
Улым, гүйә, арыманы,
Талыҡманы,
Гүйә, талҡы, эй талҡыны,
Эй талҡыны.
Ят бауырҙар уңлы-һуллы
Оса барҙы,
Яуларға тип килгән ерен
Ҡоса барҙы.

Ҡылыстарға ҡылыс сапҡан
Бер сағында,
Сыңҡ итте лә Ҡармасанымдың
яғында
Ҡылыс сыңы шымып ҡалды —
Шып-шымырыҡ,
Арҡа буйлап үтте шул саҡ
Зым-зымбырыҡ.

Ни ишетәм: «сыңҡ-сыңҡ» түгел,
Ә «тыс та тыс»,
«Шаҡ-шоҡ» менән «даң-доң»ына
Ҡатыш-ҡатыш;

Тимер турҡа кейгән баштар
Оса ғына,
Кәүҙәләр ҙә, шеш сыҡҡандай
Осаһына,
Ауып төшә, һыпырылып
Эйәренән,
Алаҡандай аттар, ҡалғас
Эйәһенән;
Турҡа-баштар бешеп еткән
Сәтләүектәй,
Йәки, гүйә, һаҫып бөткән
Серек күкәй,
Ҡармасандың киҫтәненән
Сырҡый тора...
Иҫәр түгел дошман, мәкер
Бер уй ҡора.

...Арғымағы ажарланып
Кешнәне лә,
Һуңғы тапҡыр барлас атын
Тешләне лә,
Ауҙы ергә — йәйәү ҡалды
Ҡармасаным;
Етте сабып яндарыма
Барыр сағым —
Форсатым юҡ, мөмкин түгел
Барып етеү,
Бара һалып, ғәзиземә
Ярҙам итеү.
Сөнки дошман божра яһап
Ҡыҫты мине,
Гүйә, боғал, муйынымдан
Һыҡты мине.
Иллә-мәгәр улымдан күҙ
Яҙҙырманым,
Алдымдағы дошманды ла
Эҙ ҡырманым.

* * *

Ай, Ҡармасан, Ҡармасан,
Эш сыҡмай, һин бармаһаң,
Иң ипһеҙ урындарға.
Ҡалайтаң? Намыҫ бар ҙа?!
Гүйә, тимер ҡыпһыуыр —
Дошманын тотоп быуыр,
Шундай ине ҡулдары,
Бирең генә юл бары.

Үҙең күреп белмәһәң,
Ишеткәнде һөйләһәң,
Яҙыҡ булыр, йәмәғәт,
Булмаҫһығыҙ ҡәнәғәт.
Күргәнемде әйтмәһәм,
Илгә әшкәр итмәһәм,
Яҙыҡ булыр үҙемә —
Ҡолаҡ һалың һүҙемә!

Аҡһаҡ Тимер бейҙәре,
Сарбаздары, ниҙәре —
Һайлам ине бары ла.
Шул һайламдан тағы ла
Һайламдары бар ине.
Киң майҙаның тар ине,
Улар сыҡһа алышҡа,
Ҡылыс менән сабышһа.
Шундайҙарҙың береһе,
Кәүҙәгә иң эреһе —
Торғот тигән бей ине.
Ат янында деү* ине.

Ҡармасаным ҡурҡманы,
Арттан килеп һуҡманы,
Килеп баҫты алдына,
Йәбеште боғаҙына.
Йолҡоп алды Торғотто —
Башы осо сорғотто.
Шулдыр тағы күргәнем:
Үрмә-тимер күлдәген
Бүҫрә тартты күп ерҙән,
Әйтерһең, ул серегән,
Ҡарт дөйәнең йөнөнән
Генә туҡып тегелгән.

Ялыҡ бейҙең улынан,
Уның тимер ҡулынан
Күп батыры Тимерҙең
Эйәһе булды гүрҙең.

* * *

Бер мәл йөрәк жыу итте лә
Шымды, гүйә,
Күҙҙәремә ышанмайым —
Нимә күрә?
Яуыз мырҙа Ҡотлобәкте
Шәйләп алдым;

Гүйә, таш һын булып ҡапыл
Ҡатып ҡалдым;
Бер Хоҙама һығындым да:
«Ярҙам ит!» — тип, —
Ҡотлобәктең ҡулын тый, йә
Ярҙан эт!» — тип.

Әрләп алдым: «Ҡотло түгел,
Ах һин, яуыз!
Инәйеңде эт талағыр,
Ах, буғауыҙ!»

Бындай саҡта ҡайҙан табаң
Бүтән сара —
Ҡотлобәк бит боғал һелтәй,
Ана ҡара!
Бына боғал ятыр улым
Муйынына,
Нисек тыныс ҡалаң әжәл
Уйынына.

Шул мәл улым, кейекме ни,
Ялтарҙы ла,
Ҡотлобәкте ҡымтып алып
Апарҙы ла
Текә ҡая суҡаһынан
Осто аҫҡа,
Икеһе лә бәреләбәрелә
Таштан ташҡа,
Барып төштө ташҡын дарья
Ҡосағына,
Йәйғор ҡалҡты һыу өҫтөндә
Шул сағында...

Егет ине Ҡармасаным,
Шулай ҡалды.
Ваҡытынан алда уны
Әжәл алды.

## Кинйә ул

Ағай-эне, күргәнегеҙ
Барҙыр, тимен.
Был донъялар булған саҡта
Һил һәм имен,
Нисек була йәп-йәш кенә
Һомғол тирәк?

Һоҡланмайынса мөмкин түгел,
Булһа йөрәк.
Ел юғында тора булыр
Ҡәләм кеүек,
Ел һелкетһә, башын сайҡар
Әләм кеүек.
Ел иҫһә тип, ул бөгөлмәй,
Һығыла ғына,
Һығылғандай ян, тим, уғын
Ырғытырға.

Бындай тирәк һәр саҡ матур
Йәйен, ҡышын.
Сәрмәсәнем шундай ине,
Эйе, ысын.
Йыр башлаһа, арбағандай
Итер ине.
Ҡурай тартһа, күңелдәрҙе
Тетер ине.
Йырға-моңға ал бирмәгән
Алғыр ине.
Яу баҫҡанда ял белмәгән
Яугир ине.

* * *

Аҡһаҡ Тимер яу аҫҡас,
Миңә талағы ташҡас,
Ҡынға тыҡты ҡурайын,
Ҡындан алды турайып,
Сәрмәсәнем ҡылысын —
Батырҙарҙың тылсымын.
Ғыж-ғыж ҡурай моңдарын
Сыңҡ-сыңҡ ҡылыс сыңдары
Алмаштырҙы бит кинәт
Сәрмәсәнем дә, тимәк,
Инде яу уртаһына,
Нур төштө торҡаһына.

Батырмын, тип әйтмәне,
Сәсәнмен мин, тимәне;
Батыр булды яуҙа ла,
Ал бирмәне ҡайҙа ла;
Сәсән булды туйҙа ла,
Сәсмәне яуҙа ла.
Ул да ҡатар һуғышты,
Ул да хәтәр алышты;
Ул да ҡаты орошто —

Күп дошманы ҡороштo;
Ул да күп мәрәй йыйҙы —
Баш артынан баш ҡыйҙы.

Ун ҡылысҡа — бер ҡылыс,
Улым алышты тырыш.
Аҫтындағы аты ла —
Аҡбуҙаттың[6] заты ла —
Бергәләште улыма:
Дошман сыҡһа юлына,
Берсә осорҙо тибеп,
Ҡала күрһәләр ебеп;
Сыҡҡанда йәтеш мәле,
Берсә умра тешләне;
Ҡолаҡ, танау, битенән.
Шул кәрәк төртөнгәнгә*,
Аҡһағы менән бергә!

* * *

Яҡшы бала кем булыр?
Яҡшы бала шул булыр:
Ата йөҙөн ҡыҙартмаҫ,
Ата йәнен буҙартмаҫ.
Атаның һүҙен йыҡмаҫ,
Атаның йөҙөн йыртмаҫ;
Улы ҡылған яҡшылыҡ —
Атаһына ҙур шатлыҡ;
Улының яҡшылығы —
Унын да яҡшылығы.

* * *

Сәрмәсәнем ана шундай
Улан ине,
Ишәк эргәһендә ул аҡ
Болан[7] ине.
Шуға микән күҙе ҡыҙҙы
Уға яттың,
Шуға микән уны үҙем
Бик яраттым.

---

* Төртөнгән (һүгенеү һүҙе) — ни ҡылырға белмәй йөрөүсе.

* * *

Ике ул да булды данлы
Баһадирҙар.
Килер заман, уларҙы тиң
Баһаларҙар.

Эй, Хоҙайым, рәхимеңдән
Мәхрүм итмә,
Улдарымды мәхшәр көндә
Ташлап китмә!

## Туй өҫтөнә килгән яу

Ишеткәнде һөйләһәм,
Ғәйбәт булыр,
Күргәнемде бәйән итһәм,
Һәйбәт булыр.
Бар ине заманында
Бер аҡһаҡал,
Мәшһүрлектә берәү ҙә юҡ
Ине ҡатар.
Данлы ине сығышы һәм
Нәҫел, заты,
Ҡара-Абыз ине уның
Исем-аты.
Яҡшыларҙан яҡшы тыуыр,
Шаҡшы тыумаҫ.
Тыуа ҡалһа, Хоҙа уға
Яҡсы булмаҫ.

Бер ҡыҙ бала тыуған ине
Шул Абыздан,
Һылыулыҡта өҫтөн ине
Ул бар ҡыҙҙан.
Толомдары толом тиһәң,
Толом ине!
Үксәһенә етә яҙып
Торор ине;
Ҡаралыҡҡа ҡаранан да
Ҡара ине.
Барса халыҡ хайран ҡалып
Ҡарар ине.
Ата-инәһе исем биргән
Айбикә тип,
Уйламаған, күргән бере,
Ах, итәр тип.

Аҡ йөҙөнә, тырнағына
Ал яҡманы,
Кершән һөртөп, күҙе-ҡашын
Алъятманы.
Йәшлегендә ине уның
Сибәрлеге,
Сибәрлектә ине уның
Йәшлек сере.
Алһыулатып, нурландырһа
Ул аҡ йөҙөн,
Керпектәрен һирпә биреп,
Асһа күҙен;
«Ай-бай!» — тиеп ай йәшенер
Ине төнөн.
Көн болотҡа төрөнөр ине
Ә көндөҙөн.
Тиҙәр ине: «Ергә килгән
Ул хур ҡыҙы.
Сибәрлектә ер ҡыҙының
Барын уҙҙы».

Мин тиклем дә, мин, күргәс тә,
Телһеҙ ҡалдым;
Ҡалһам-ҡалдым, күңелемә
Бер уй һалдым.
«Улым, — тинем Ҡармасанға, —
Күп шашынма,
(Әйтәм, йәғни, күп һайланма,
Бик ашҡынма!)
Боронғоноң йолаһы бар
Иҫкермәгән:
Димһеҙ бер кем улына кәләш
Эпирмәгән.
Мыртыйың* йәш, әле уға
Иҫ кермәгән,
Иҫ керһә лә, танауына
Еҫ кермәгән.
Аҡһыу тигән дарья барын
Беләһеңдер?
Дарьяларға, дарман барҙа,
Керәһең бер.
Дарья аша сығырға ла
Һуҡмаҡ кәрәк;
Егет булһаң, шуны табып,
Сыҡмаҡ кәрәк;
Арғы ярҙа аҡһаҡалды
Тапмаҡ кәрәк,
Ҡартты табып, ҡыҙына күҙ
Атмаҡ кәрәк.

Ҡара-Абыз булыр аты
Аҡһаҡалдың.
Өлгөһө ул зирәклектең,
Аҡ аҡылдың.

«Ҡыҙы ниндәй, аты, атай,
Кем һуң? — тиһәң;
Бер күреүгә әҙерәк булыр
Мең һум бирһәң.
Йөрөр булыр, айҙай балҡып,
Көндәй көлөп,
Тәү күргәс тә, ҡала күрмә
Ебеп, бөлөп.
Исеме лә тура килгән
Есеменә;
(Уртаҡлашма табышыңды
Кеше менән!)
Айбикә тип исем биргән
Ата-инәһе,
Аҡһаҡалдың балларынан
Ул кинйәһе.
Батыр тыуа батыр ирҙән,
Бел, бермә-бер.
Матур тыуа тик матурҙан,
Быны ла бел.
Китап маҡтай шул икәүҙең
Йоп булғанын.
Ошо эште ата-инәнең
Хуп ҡылғанын.

Шуға һиңә үтенес тә,
Фатиха ла,
Шул сибәрҙе әйттерергә,
Никахларға».

Иҫемдә юҡ, белмәйем дә
Ҡармасандың
Атай ҡушҡан ергә берәй
Бармағанын.
Әле лә ул тыңлап торҙо:
«Ҡуй, — тимәне, —
Теләмәйем, миндә бүтән
Уй, — тимәне.
Минән тыуған булһын да, йөҙ
Һытһын имеш,
Ата һүҙен үрләтмәһен,
Йыҡһын имеш!

Ал бирмәгән, баҙар ерҙә*
Баҙамаған.
Теле — сәсән, үҙе — хәсән*
Ил ағаһын
Яусы итеп яһандырҙым
Хәл ҡәҙәрсә.
Ул үҙе лә байғош түгел
Ине гәрсә.

Яусы китте, Ҡармасанды
Эйәртте лә.
Арттарынса йәнә аттар
Эйәрләттем.
Уларына атландырҙым
Нүкерҙәрен —
Ҡармасанға лайыҡ кейәү
Үңерҙәрен.
Шуға етә йылҡысылар
Ҡуҙғалышты.
Йылҡыларым көр сыҡҡайны
Уҙған ҡышты.

Дуға муйын, йомро янбаш
Йылҡыларым
Өйөр-өйөр йөрөнөләр
Йылҡылдашып.
Абыз риза булһын тиеп,
Шатлығынан,
Һайлап-һайлап ярты өйөр
Затлыһынан,
Шуға өҫтәп өс-дүрт көтөү
Һарыҡ-кәзә
(Риза булһа, мал йәл түгел —
Алһын әйҙә!),
Аҡ һыу аша ҡыуҙырттым мин
Ялсыларҙан,
Һал һаллатып, күпте күргән
Һалсыларҙан.
Кем балаһы, шуныҡы, тип
Белһен яттар,
Малым менең Ялыҡ тигән
Даным яҡлар.

Ҡармасандың оҡшанымы
Затлы йөҙө,
Ҡарт сәсәндең йомшарттымы
Татлы һүҙе,
Ҡара-Абыз риза булды

Ҡыҙ бирергә,
Халҡы шунан, эй, тотондо
Мыж килергә.
Экиәт тиһәң, экиәт түгел,
Туй башланды,
Ете көн һәм ете төн ул
Тоташ барҙы.
Түрҙә булды был абызаң,
Абыз ҡоҙа,
Йырсылары йыр башланы
Һуҙа-һуҙа.
Көрәгәләр килә торҙо
Буҙа менән,
Туҫтаҡтарҙы уртаҡ эстек
Ҡоҙа менән.
Буҙалары бөтөүенә,
Ҡоҙаларым,
Тәпән-тәпән бал эсереп,
Ыҙаланы.

Унан килде һаба-һаба
Ҡымыҙҙары,
Уңған икән ҡымыҙ бешкән,
Һай, ҡыҙҙары!
Йырлап биргәс эсмәйенсә,
Сараң юҡтыр,
Бөтәһе лә хәләл ризыҡ,
Харам юҡтыр.
Буҙаһы ла, бал, ҡымыҙы
Бер ҡорһаҡта
Урын тапты, көнө-төнө
Ултырһаҡ та;
Уйын-көлкө, бейеү, көрәш,
Бәйге, ярыш
Барған өсөн һый һәм хөрмәт
Менән ярыш.

Бәлки, тағы һуҙылыр ине
Был туйыбыҙ,
Ҡуҙғалырға юҡ ине лә
Һис уйыбыҙ.
Шул сағында сапҡын килеп
Хәбәр һалды —
Ҡайҙа етһә, шул ерҙә туй
Туҡтап ҡалды.

* * *

«Сабыр төбө — һары алтын,
Сабыр иткән шуны алһын;
Сабыр иткән — солтан булыр,
Сабырһыҙҙар — шайтан булыр».
Шулай тигән борон бабаң,
Балаҡайҙар, шуны аңлаң!
Эй, хоҙайым, сабырлыҡ бир,
Сабыр төбөн табырлыҡ бир!
Аҡылһыҙҙан түгел инем,
Аҡылдарым бөттө минең,
Күп уйлауҙан, күп уйлауҙан,
Уйлай-уйлай, күп илауҙан.
Булған уйым буталыша,
Әйтерһең дә, ҡарт алаша
Ял-ҡойроғо мән талаша,
Йыйырға тип ҡырталаша:
Еүеш ялы, еүеш ҡойроҡ
Һылаша йә, гүйә, ҡороҡ,
Муйынынан һығып ала,
Ҡарт алаша саҡ тын ала.
Ҡарт булһам да, мин бит бәндә,
Йәнем әле барҙа тәндә,
Уйҙарға мин бирешмәнем,
Бирешкән мән килешмәнем.
Ял мән ҡойроҡ, буталһа ла,
Тарай-тарай, ҡул талһа ла,
Ипкә килә берәй заман,
Ебәк кеүек була тамам.

Йылҡы, һыйыр, кәзә, һарыҡ
Буталышһа, бергә барып,
Таралышһа, ялан тулып,
Һанһыҙ ғәскәр һымаҡ булып;
Тирә-яҡтан ҡамап алып,
Ҡыйҡыулашып, һөрән һалып,
Аҙмандарын тыйып була,
Барыһын да йыйып була;
Башҡа-башҡа үҙҙе-үҙен,
Алған һымаҡ тоғро һүҙен;
Айрым-айрым бикләп була,
Шулай итһәң, бик шәп була.

Шуның һымаҡ сабыр ғына,
Уйҙы һүтеп талғын ғына;
Бәйән итәм ахырғаса,
Булғанда ла ахры насар...

* * *

...Ана шулай ултырҙыҡ беҙ
Бал һемереп,
Ҡымыҙ эсеп, ҡаҙы ашап,
Ит кимереп,
Думбра сыңын, иңрәгәнен
Моңло ҡурай —
Тыңлай-тыңлай, буҙа эсеп,
Буҙлай-буҙлай.
Барыһы ла хозур ине,
Һай, ул кистә,
Ҡуҙғалғы ла килмәй ине
Ул кис һис тә.
Эңер төштө, тымды йыр ҙа,
Шымды ҡурай;
Тирә-яҡ тын. Тик һаташа
Бер буҙ турғай;
Ишетелә көбөр-көбөр
Бейә һауған —
Туй сәбәпле килен, ҡыҙҙар
Һуңлап ҡалған;
Ҡолонсаҡтар сирҡылдаша,
Имергә тип,
Шалтыраҡлы[8] ҡыл арҡанды
Өҙөргә тип;
Күккә баҡһаң, бер болот юҡ,
Күк салт аяҙ,
Бындай күкте булды күргән
Сағым бик аҙ.

Унын йөҙөн иңдән-иңгә
Семәрләнгән
Йым-йым йондоҙ мең өҫтөнә
Меңәрләгән.

Аҫыл таштар һабын Чирчик
Ҡылысының[9]
Биҙәп тора бына шулай,
Тылсыммы ни!

Минең бында торғанымды
Белгән кеүек,
Баш осома ҡоҙаларны
Элгән кеүек,
Гүйә, алтын, әллә инде
Көмөш кеүек,
Көрәгәсе ҡулындағы
Сүмес кеүек,
Ем-ем итеп, балҡып яна
Етегәнем.

Һүҙем етмәй тасуирларға
Бөтә йәмен.

Эйе, шулай һиллек ине
Тирә-яҡта,
Йөрәкте шом алыр булыр
Шундай саҡта.
Шуға ла мин толҡа тапмай
Киң тирмәмдә,
Барлағандай барын-юғын
Тирә-йүндә,
Йөрөштөрөп әйләнергә
Сыҡтым тышҡа,
Күҙем һалдым көнсығышҡа,
Көнбатышҡа;
Ҡарап торҙом төшлөк яҡҡа,
Төньяғына,
Бағауылдай баҫҡан кеүек
Төн һағына.

Күңел тиктән шомланмаған
Икән ул кис,
Тынлыҡтан да тынғы тапмай,
Йоҡлатмай һис.
Ана шул мәл килде инде
Теге сапҡын.
Ундай хәбәр ташыусыны
Йәшен атһын!
Үҙем атыр инем белһәм,
Мин, әх, элек!
Әле һаман күҙ алдымда
Ул мәхелүк.
Аҫтындағы арғымағы
Арыуынан,
Яҙған ине бөтөнләйгә
Ҡарыуынан:
Бешкән саҡта ҡымыҙ нисек
Ҡабарына,
Күбекләнеп, таша башлай
Һабаһынан,
Хәс тә шулай аҡ күбеккә
Батҡан ине,
Эйәһенең ҡамсыһынан
Ялыҡҡан ине.

Ә эйәһе, яман телен
Йылан саҡҡыр,
Килә һалып тәнтерәкләп
Миңә тапҡыр,

Хәбәр һалды, хәбәрҙең иң
Аяуһыҙын,
Ҡара йылан саҡҡандайын,
Ағыулыһын.
«Түрәм, — тине саҡ тын алып, —
Бән юл башын
Бәк йыраҡтан алдым. Һәләк —
Яр юлдашым.
Бараҡтарҙың аймағынан[10]
Килешәмдер
(Унда йәшәй һине белгән
Белешең бер),
Шулар төйәк иткән ябыҡ—
Ҡарағайҙан[11],
Һиңә сәләм — ошо хәбәр
Бей ағайҙан:
«Күҙе сыҡҡыр, Аҡһаҡ Тимер
Килә ятыр,
Ырыуыңды ҡырыр йәки
Ҡырға һатыр.
Йәй селләлә нисек үрсей
Яман себен,
Иҫәбе юҡ сарбазының,
Барласының*.
Аҡһаҡ Тимер сиреүҙәре,
Сүл бүреләй;
Күҙен алған күгәүендәй,
Бер ни күрмәй;
Темекһенеп килә улар,
Ерҙе ябып,
Һис бирәүҙе ҡотайтмайҙар,
Алғас табып.
Инде Яйыҡ бирьяғына
Сыҡҡандар, ти.
Сик буйының маяҡтарын
Йыҡҡандар, ти,
Бағауылдар саҡма сағып[12].
Оран һалған —
Беҙҙең түрә көн элгәре
Хәбәр алған».
Сапҡысынан бына шундай
Хәбәр алдым,
Ни тиергә белмәйенсә,
Баҙап ҡалдым.
«Йә, Хоҙа! — тип әйтә һалдым,
Сабырлыҡ бир!
Ахырғаса, — тип һораным, —
Булайым ир».

Меҫкен сапҡын хәтәр хәбәр
Килтерһә лә,
Мине шартлар хәлгә ҡәҙәр
Еткерһә лә,
Тырнаҡ осо тиклем хатта
Ҡағылманым,
Бер Хоҙанан ҡарғыш, шелтә,
Юҡ, алманым.
Телен төптән киҫтерһәм дә,
Була ине —
Ауыҙына ҡара ҡаны
Тула ине;
Тамағына телен тыҡһам,
Була ине,
Ул заманда бындай яза —
Йола ине.
Юҡ, улайтып рәнйетергә
Көс тапманым,
Тамырҙарҙа ташҡанда ла
Ҡайнар ҡаным.

«Аҡ тирмәгә рәхим ит!» — тип
Индерҙем дә,
Буҙа, ҡымыҙ, бал, ҡаҙы-ял
Бирҙерҙем дә,
Ҡунаҡ иттем, алды-артынан
Арттырғансы,
«Ҡуй ҙа ҡуй!» — тип әйттергәнсе,
Ялҡтырғансы.
Ҡунағыңды рәнйетеүең —
Мең-мең гонаһ,
Алдымдағы байғош — Тәңре
Биргән ҡунаҡ[13].
Ундайҙарҙы рәнйетеүең —
Иң ҙур гонаһ —
Рәнйетмәнем, Хаҡ тәғәләм —
Үҙе геүаһ.
Хәҙер булһын шул эшемдән
Ҡәнәғәтмен —
Үҙ-үҙемде әрләр инем:
«Ләғәнәт — мин!»

## Форсат

Буштан-бушҡа сапмаған,
Юлда боҫоп ятмаған
Сапҡынсының хәбәре —
Яман һүҙгә — бәрәбәре,

Раҫҡа сыҡты, көттөрмәй:
Ят бауырҙар, төттөрмәй*,
Баҫып инде ер ябып,
Булманы сара табып.

Кәкүк айы бөткәйне,
Йәй уртаһы еткәйне,
Шунда килде ул эттәр,
Халыҡты ҡырҙы бикәр.

Ҡәһәр төшкөр, жунгарым
Һатҡан уларға барын:
Шул өйрәткән юлды ла,
Уң яҡты ла, һулды ла;
Кисеүҙәрен Аҡ-һыуҙың —
Яттар өсөн ят һыуҙың;
Сиреүҙәре Аҡһаҡтың,
Рәтен белгәс был яҡтың,
Кисер ерҙе кискәндәр,
Беҙҙең яҡҡа күскәндәр:
Ятыуҙарын ятһынмай,
Йөҙөп сыҡҡан бер тынмай,
Һауа өрөп турһыҡҡа
Аттың ике яғына —
Эйәр ҡанъяғаһына
Бәйләгәндәр нығытып,
Ҡуймаҫлыҡ итеп һытып,
Аҡһыу аша сыҡҡандар,
Юлды тура һуҡҡандар.

Арбалары шығырҙап,
Яугирҙәре шарылдап,
Сейәлетауҙан уңда
Бер тау бар ине унда,
Ана шунда менделәр,
Һәләк еңел еңделәр
Сиреүемде ундағы —
Ҡаршылыҡты юлдағы.
Күрше тауҙы алғайны,
Өс атым ер[14] ҡалғайны,
Дошмандың күрҙем йөҙөн —
Ышанмай торҙо күҙем.
Мәгәр шуға төшөндөм,
Етмәҫенә көсөмдөң,
Улар үлем сәсерен,
Аямаҫын әсирен:
Халҡымды ҡол итерен,
Йәки ҡырып китерен.

Мин шуға ла төшөндөм,
Төшөндөм дә өшөндөм:
Дошмандың ат, дөйәһе —
Һөмһөҙ, гүйә, эйәһе,
Болғандырыр һыуымды,
Иҙеп үтер тауымды;
Икһеҙ-сикһеҙ даламды,
Йәйләү, ыҙма, ҡаламды
Эйләндерер сүллеккә,
Бер йән ҡалмаҫ түллеккә...

Китә биреп бер ситкә,
Ҡулым күтәреп күккә,
Бабаларым йолаһын
Атҡарырға уйланым:
«Тәңрем, — тинем, — ярҙам ит,
Ил-халҡымдан яҙам бит!»
Ишетмәне Тәңрем дә,
Һүҙҙәремдең берен дә.
Әүлиәгә өндәштем —
Үҙенә Хөсәйенбәктең[15] —
Ул да бер өн бирмәне,
Әллә хәлем белмәне.
«Хызыр-Ильяс,[16] килһәнә,
Теләгәнде бирһәнә!
Дошмандарҙың юлын быу:
Йә ҡойма һуҡ, сығар һыу!» —
Тип инәлдем, һораным,
Ялбарып та ҡараным —
Ул да хәлгә кермәне,
Минең хәлде белмәне.
Яңғыҙ ҡалдыҡ далала
Юҡ ине бер сара ла.

Төн уртаһы етеүгә
Булған ғына көтөүҙәр,
Тәгәрмәсле тирмәләр,
Тирелмәле тирмәләр,
Бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡын,
Ҡарт-ҡороһо ыҙғышып,
Сейәлетауҙан күсте,
Бергә тупланыҡ көстө.
Оран һалдыҡ: «Һартай!» — тип,
Ҡурҡаҡтарға: «Бар, тай!» — тип,
Кемдәр һеңгө тотарлыҡ,
Боғал һелтәп, быуарлыҡ,
Ҡылыс айҡап, утарлыҡ,
Суҡмар менән һуғарлыҡ,
Йыйылыштыҡ бер ергә,
Кәңәш-төңәш итергә.

Эште шунан башланыҡ —
Алай* төҙөп ташланыҡ.

«Үлем, — тинем, — дошманға!»
Алдан үҙем ташландым,
«Алға!» — тинем, аҡырып,
Яугирҙәрем саҡырып.
Яугирҙәрем ҡуҙғалды:
Һәр кем урынын алды,
Уң яғымдан — Ҡармасан,
Һул яғымдан — Сәрмәсән;
Икеһе лә ярһыуҙар,
Арыҫландай алғырҙар;
Күҙҙәре яна ҡуҙҙай —
Тоҡаныр донъяң туҙҙай;
Улдарымдан артабан
Егеттәр торҙо ҡалған.
Улдарымдай, улар ҙа
Әҙер ятты тунарға:
Яу-күлдәк кейеп алған,
Һул ҡулға тотоп ҡалҡан,
Билдәрендә ҡылыс бар,
Уң беләктәрҙә — суҡмар,
Ҡул осонда — ян, уҡтар —
Юҡ яһауҙары юҡтар,
Яһанышып алғандар,
Барыһы ла һайламдар.

Илдәр талап, һимергән,
Яман атлы Тимерҙән
Ҡайтыш ине көс кенәм,
Шуға һыҙлай эс кенәм.
Мәгәр шуны аңлайым,
(Тар түгел дә маңлайым):
Ят бауырҙар — оғоро,
Минекеләр — тоғоро:
Улар илемде талай,
Минеке илен яҡлай;
Яттар ҡол итмәк була,
Илде тол итмәк була,
Илемде Аҡһаҡ — йүнһеҙ
Ҡалдырмаҡ була түлһеҙ;
Талап үтеп даламды,
Ҡол итмәксе баламды;
Беҙҙең яҡлы урман да,
Йылға, дала, тауҙар ҙа;
Тыуған тупраҡ көс бирә,
Дошман шуға көскүрә*.

Минең тоғро яугирҙәр —
Һайламдан һайлам ирҙәр:
Береһе бишкә торорлоҡ,
Биштең башын ороорлоҡ.

Яуыз Тимер, шул Аҡһаҡ,
Ебәрҙе бер мәл баҫҡаҡ,
Ер-һыу талап итмәгә,
Талап-талап китмәгә.

Мин баҫҡаҡты ебәрҙем
«Аҫыл» яғына ерҙең:
Сисендерттем, баллаттым —
Бар тәненә бал яҡтым;
Ултырттырҙым иләүгә —
Үс юл бирмәй йәлләүгә.

Муйынына бәй һалһаң,
Таяҡ менән уҡталһаң,
Сыйылдап илай көсөк,
Тәндәрең китә өшөп.
Эләкләгәндәй шуны,
Басҡаҡ көн-төн шыңшыны.

Шул арала яу баҫты —
Ҡурҡаҡтар тороп ҡасты,
Ҡыйыуҙар ҡалды тороп,
Баҫҡындарға йөҙ бороп.

Ҡот осҡос булды алыш:
Китте бер мәл сыуалыш
Атыш, сәнсеш үә салыш,
Терелэй утҡа һалыш.

Атабәктәр* ҡалҡаны
Ул көн тынғы тапманы:
Үтә-үтә сәнселде,
Йәнселгәне йәнселде.
«Тиң ҡараным» һәр кемде —
Эсенә тыҡтым һеңгө.
Һеңгөм башы тимерҙе
Күптәр тырнап, кимерҙе.
Сарбаздарҙың ҡалҡаны,
Ҡай саҡ юлды ҡапланы:
Ҡаты ҡалҡан ҡарпайҙы —
Һеңгөм һабы сарпайҙы.
Һеңгөм һынһа, күптәрен,
Ҡылысымдан үткәрҙем.
Аяманым йөҙ башын,
Мең башын үә сарбазын.

Уғымдан йән биргәне —
Бер Хоҙаның белгәне.
Йылан саҡҡыр, Аҡһаҡ та
Ишетте, буғай, хатта
Һыҙғырғанын уғымдың,
Сарбаздарын ҡырғанын.
Ай ҡылысым айҡаным.
Шуны күрһәң, ай, ханым,
Ҡалмаҫ ине лә ҡотоң,
Осор ине лә йоҡоң!

Маҡтанмайым, раҫы шул —
Ҡорос ине минең ҡул.
Һелтәгәндә, талпынып,
Өҙәңгелә ҡалҡынып,
Ы-ых, итеп ҡалаһың —
Һулдан уңға сабаһың —
Ыһ та итмәй сарбазың
Юғалта ахмаҡ башын.

Әйткәнемсә, улдарым —
Ҡанатым, бауырҙарым
Ҡалышманы һис минән
Алышты таһыл менән.

Беҙ аяуһыҙ орошток —
Беребеҙ бишкә торошток.
Тик әҙ ине һаныбыҙ,
Күп түгелде ҡаныбыҙ.

Хәлебеҙҙе белделәр
Ҡаңлы, мырҙа, меңлеләр.
«Түгел эш шәптән», — тиеп,
Барын әшкәрткән инем.
Мин, гүйә, ят, ҡырағай,
Бары тырым-тырағай
Таралышты ян-яҡҡа
Үҙ йәнен һаҡламаҡҡа.

Үсәгәндер ҡай бере:
«Ҡал, әйҙә, яңғыҙ бүре!
Ырыуыма ҡушылмай,
Бер ҙә генә бошонмай,
«Мин үҙем — ил!» — тигәйнең,
Беҙгә ҡырын килгәйнең,
«Халҡымды алам йыйып,
Үҙ аллы булам», — тиеп,
Үтә шаштың элгәре,
Булдың үтә күткәре!*» —

Тигәндер икенсе бей,
Йомортканан әҙләп йөй.

«Бармы һуң ундай һүҙҙә
Хаҡлыҡ? — тиерһегеҙ һеҙ ҙә.
Шунда бөтә хикмәт тә:
Әйтмәҫ улар тиктәҫкә.
Үҙ ырыуым көслө, тип,
Үҙе бер ил төҫлө, тип,
Маҡтанылды бер саҡта,
Ҡулда форсат бар саҡта.
Йәншишмә һыуын һирпкәс,
Әжәл килер мәл еткәс,
Әйткән, ти, бит Урал да:
«Ишетегеҙ, уландар,
Ҡулдаш булыр илемдә
Батыр ирҙәр бар ине.
Шулар ҡәҙерен белмәнем,
Батырлыҡҡа маһайып,
Кәңәш ҡороп торманым —
Яңғыҙ башым уйланым...»
Хәҙер мин дә үкенәм,
Тик төш яҡшы — үткәндән.
Әммә әйткәндәр борон:
«Татыулыҡ менән тороң:
Үткәндәрҙе ҡыулашыу —
Шашып, яраңды ҡашыу»;

«Ағай-эне талашыр,
Атҡа менһә ярашыр».
Шул алтын һүҙгә борон
Ҡалыр булғандар тоғро.

Талашҡанды ҡыулашып,
Берен-бере ыулашып,
Йәшәһәләр бабалар,
Нишләр инек, балалар?
Таптар ине Зөлҡәрнәй*.
Халыҡ әле хәтерләй
Уның ҡылған этлеген,
Уның кирекүтлеген*.
Бабалары бөрйәндең
Белешегеҙ күргәнде.
Һорашығыҙ ҡарттарҙан,
Ҡырғыҙ менән һарттарҙан*.
Һөйләр уны ҡартайың,
Алдыңдағы һартайың.

Әйтәләр, ысын, ысын,
Юғалтҡастын ҡылысын,
Ысыҡкүлгә төшөрөп,
Буштан-бушҡа көс күреп,
Сиреү килтереп ҡыуып,
Күнәк менән күл һыуын
Бушатырға маташҡан —
Бына шулай ул шашҡан.
Шашыуы уның тиңһеҙ:
«Юл бирмәйһең, — тип, — йүнһеҙ!»
Ул диңгеҙҙе туҡматҡан,
Шунан ҙур ҡыҙыҡ тапҡан.

Сәсен алһа сәсҡырғыр,
Булған ул башын ҡырҡыр.
Ҡырҡҡан, сөнки бик ҡурҡҡан
Торҡа аҫтында тотҡан
Мөгөҙөм фаш булыр, тип,
Илгә шыш-быш тулыр, тип.
Ҡылған төрлө әкәмәт,
Белмәгән, ни мәрхәмәт.
Төрлө халыҡ, ырыуҙар
Уйламаһа торорға
Бергә-бергә бер төптән,
Бөтөрҙәр ине күптән.

Ете ырыу башҡорто —
Башҡортомдоң баш йорто
Башҡаларҙы тартмаһа,
Ҡәрҙәште яратмаһа;
Булыр менән дуҫлашып,
Тормаһа ҡуш услашып;
Ҡаршы тормаһа бергә,
Тамырланғандай ергә;
Монгол яуын туҡтатып,
Шул исемде буҡтатып,
Тоҙаҡ ҡорор инеме,
Тотоп торор инеме?!

Жунгарҙарҙан Таласын
Даулағанда Манасым,
Ҡырғыҙ менән иңгә-иң
Яуҙар сапҡан, әйтең, кем?
Башҡорттар йәки истәк —
Ҡуйығыҙ шуны иҫләп.
Үткәндәрҙе иҫләйек,
Яу баҫҡанды көтмәйек;
Талашмайыҡ-итмәйек,
Инде артҡа сикмәйек!

Атҡа менмәҫ элек тә
Килә беләйек ипкә:
Татыу ғүмер итәйек,
Бер маҡсатҡа етәйек!
Илем һил булһын, тиһәң,
Илем ил булһын, тиһәң,
Ирекле булһын, тиһәң,
Күрекле булһын, тиһәң,
Ят ҡаныҡмаһын, тиһәң,
Яу ҡалыҡмаһын, тиһәң,
Яттар һанлаһын, тиһәң,
Яттар аңлаһын, тиһәң,
Яттар таныһын, тиһәң,
Эштең — анығы, тиһәң;
Булыу фарыз бер төптән,
Шул — дошманды өркөткән.
Ошо юлда тороғоҙ,
Илде бергә ҡороғоҙ!
Форсат — түгелгән борсаҡ,
Гүйә, шаян ҡолонсаҡ,
Килә бирә лә саҡ-саҡ,
Үтә лә китә бер саҡ.
Шуға уны баштан уҡ
Алығыҙ башынан уҡ
Йә яланы йәбешең,
Ҡойроғона етешең!

Аҡһаҡ Тимер килгәне —
Башҡорт иле бөлгәне —
Яттар ятып көлгәне,
Үс ҡанды, тип белгәне.

Аҡһаҡ Тимер баҫҡаны —
Беҙгә ҡапҡа асҡаны:
Ҡуйып тороп низағты,
Булһын оло ни саҡлы,
Атҡа менер саҡ ине,
Ярашыр форсат ине.

Төшөнмәне ҡәрҙәштәр,
Булманы фекерҙәштәр,
Булманы көрәштәштәр,
Сыҡманы шуға эштәр.
Берәм-берәм һәр бейҙе
Аҡһаҡ туҡманы, төйҙө.
Үҙеңдеке тартмағас,
Арҡалашып ятмағас,
Торҙоҡ беҙ ахырғаса,
Быңдай саҡ бахыр ҡаса.

Һәр дәүерҙең үҙенең
(Илем, һаҡла түҙемең)
Була килер Аҡһағы,
Табылыр үҙ ахмағы;
Яттар гел дә һағалар;
Дуҫмын, тир ҙә яғалар —
Һайыҫҡандай һаҡ булың,
Илем, халҡым, хаҡ юлың!

## Ҡон

«Ҡайҙа ята уландарың,
Ҡайҙа? — тиеп
Һорарығыҙ билдәле —
Торам һиҙеп.
Ауыр миңә ул турала
Һүҙ башлау ҙа,
Сараһыҙҙан башлағастын,
Һүҙ ташлау ҙа.

Ҡорһағынан, күкрәгенән
Яраланһа,
Кеше түгел, ат та үлә
Бер арала.
Ҡармасаным, Сәрмәсәнем —
Йөрәк итем,
Үлемегеҙ ҡәүемемде
Итте етем.
Уландарым, һеҙ үлгәстен
Бер үк көндә,
Көпә-көндөҙ төн ҡапланы,
Өмөт һүнде.

Уландарым, һеҙҙең үлем, —
Күрәләтә,
Йөрәгемде киҫкеләү ул,
Тереләтә.

Үлемегеҙ шуға һеҙҙең
Бәйән итмәк —
Киҫелгәнде киҫәк-киҫәк
Йәнә киҫмәк.

Исемегеҙ онотолмаҫ
Бер нисек тә,
Иҫләр һеҙҙе бөтә халыҡ
Киләсәктә.

Дандарығыҙ, шөһрәтегеҙ
Үҫте йылдам,
Исемегеҙ күсә барыр
Йырға йырҙан.

Ғәзе хәҙрәт мәсетенә
Инер ерҙә
Бер яҙыу бар саф көмөштән
Иң-иң түрҙә.
Ҡөрьән-кәрим сүрәһелер —
Көмөш яҙма,
Сырмап-сырмап эленгәндәй
Ебәк таҫма.
Аҡ йылғаның аръяғында
Ике йылға,
Шул яҙмалай йырған икән
Ике йырҙа.
Икеһе лә исем-атһыҙ
Йылға ине,
Икеһе лә, йәш юртаҡтай,
Йылдам ине.
Икегеҙҙең исемде лә
Улар алды,
Һеҙҙең хаҡта йырлар өсөн,
Белмәй ялды.
Йөрәк итем, эс-бауырым —
Балаларым,
Уңалмаҫтай минең
Бетәү яраларым.

«Лә илаһа иллалаһу
Мөхәммәҙөр Рәсүлалла!
Иманығыҙ булһын алда!
Фәрештәгеҙ торһон янда!»

Шулай тиеп икегеҙҙе
Йәнәш ерләп,
Дошмандарҙы киттем йәнә
Мин эҙәрләп.
Китеп барып, китеп барып,
Еттем генә,
Иманһыҙҙарҙың тетмәһен
Теттем генә.

* * *

Ил һаҡлаған ир өсөн
Татлынан татлы ни татлы?
Ил һаҡлаған ир өсөн
Дошманыңдың шөмрәйеп,

Арҡалары көмрәйеп,
Ике күҙе өңрәйеп,
Ялбарыуы, йәллә, тип.
Албырғыуы, йәлләтеп,
Татлынан татлы шул булыр,
Татлылығы мул булыр.

* * *

Барыһы өсөн ҡон ҡайтарҙым,
Аяманым,
Алып тормай әсирен үә
Улъя малын.
Кеме генә эләкһә лә
Баҫҡындарҙың,
Минең тимер ҡулды тойҙо,
Бахырҙарың.
Ике күҙен соҡотторҙом
Яуыздарҙың,
Тоҙ һиптерҙем, йырҙым ғына
Ауыҙҙарын.
«Ер тип килдең, — бәғзеләрен, —
Ал, әйҙә! — тип
Ергә күмдем. — Уңай булды,
Алай ҙа!» — тип.
Ҡулдарыма юлыҡҡаны
Көн күрмәне —
«Юлбаҫар» тип атанылар
Мин түрәне.

Әйтерһең дә, ил баҫҡандар,
Аяу һорап;
Улар үткәс, илем ятмай,
Ти, ҡанһырап.
Баҫып инеп, талап китеү
Кеше өйөн,
Әйтерһең дә, итә уны
Һил һәм имен;
Әгәр ҙә ки сәпәһәләр
Уң сикәңә,
Һул сикәңде әҙер генә
Тот икән дә;
Илде һаҡлау — ирек яҡлау
Тигәнебеҙ,
Урал батыр заманынан белгәнебеҙ
Уларса, тим, була икән
«Юлбаҫарлыҡ»,
Аңлашыла ни икәне
«Илбаҫарлыҡ».

* * *

Эй, йәмәғәт, тыңлағыҙ,
Тыңлағыҙ, онотмағыҙ;
Үткән хәл, тип уйламаң,
Ямандан тарих яман:
Ҡабатлар юлын һаман,
Таҡырлар уны тамам.
«Беләмен, — тир, — үҙ самам:
Юлымда булыр туҙан,
Заман артынан заман!»

Баҫып ингән Ватанға
Үҙен кем тип атамаҫ,
Ил һаҡлаған ирҙәрҙе,
Ирек һөйәр илдәрҙе
Ни тип кенә хурламаҫ,
Үҙен ни тип ҙурламаҫ,
Шуны һис онотмағыҙ,
Маңҡорттай булмағыҙ;
Белһендәр балларығыҙ
Үткәнде, алдағыһын.
Йәнә әйтеп ҡалығыҙ,
Күңеленә һалығыҙ
Ейән-ейәнсәрҙәрҙең,
Бүлә-бүләсәләрҙең... —
Үҙегеҙгә киләсәктә
Алмаш киләсәктәрҙең.

* * *

Ҡон ҡайтарҙым уландарым
Ҡаны өсөн.
Ҡон ҡайтарҙым ырыуымдың
Даны өсөн.
Ҡон ҡайтарҙым: «Ике һүҙҙе
Бутамаң!» — тип,
Ҡон ҡайтарҙым: «Ҡабат-ҡабат
Утамаң!» — тип.
Барыһын да ҡыралманы
Наҡыҫ көсөм.
Шунда миңә кәңәш бирҙе
Тәтегәсем.

Яҙғы Димде төнөн кисеп
Сыҡтыҡ та беҙ,
Олоҡай бей тигәндәрен
Йыҡтыҡ та беҙ,

Тамағына үткер хәнйәр
Тыҡтыҡ та беҙ,
Батырҙарын берәм-берәм
Һуҡтыҡ та беҙ,
Төнгә инеп, йәшерендек
Икәү йәнә.
Ҡон ҡайтарыу рәхәт бирә
Икән йәнгә.

Шулай булмай, ҡалай булһын,
Эй, йәмәғәт,
Биш мәртәбә көслөрәктәр
Ята тәгәрәп!

* * *

Ҡыуаныстың ҡыуанысы
Әйт, ни булыр?
Ҡыуаныстың ҡыуанысы —
Эт, шул булыр:
Күкрәгеңдә йөрәгең
Һуғыр тилбер,
Ситлектәге йыртҡысмы ни,
Дарҫлап тибер;
Ян-яғыңа үҫкән кеүек
Ике ҡанат,
Талпынаһың, ҡалҡынаһың,
Көнгә ҡарап.
Ҡулың, ниҙер ҡылыр өсөн,
Тора ҡысып,
Аяҡтарың — йүгерергә
Ҡырсынышып.

* * *

Аҡһаҡ Тимер әсирҙәрен
Нисек итһә,
Шулай иттек, ғәжәп түгел,
Иҫе китһә.

Олоҡай бей батырҙарын
Сыҡҡас һуйып.
Ҡолаҡтарын өттөк, ҡырҡып
Утҡа ҡуйып.

Олоҡайын олаҡтырғас
Йәһәннәмгә,
Башҡалары осрай ҡалһа
Беҙгә — нимә!

Үләкһәгә эйәләгән
Ҡарт ҡарғалай,
Туғай[19] килде, әмәлгә
Ярағандай.
Кәпәренеп, эт ашамаҫ
Һүҙ ырғытты,
Аҫҡарһаҡтың* тамырылай,
Ытырғытты.
Шул тамырҙай ағыулы ыу
Ине ул һүҙ,
Үргә һикер, ырғы ҡырға,
Түҙалһаң, түҙ!
Арғымағым ҡыуа биреп,
Барып еттем.
Әсе телен ыу сәсмәҫлек
«Татлы» иттем:
Башын киҫеп, ҡуржынына
Артмаҡланым
Һәм оҙаттым, күрһен, әйҙә,
Аҡһаҡ ханым.
Улдарымдың һәм илемдең
Ҡонон алдым —
Дошмандарҙың көнәлгәре
Көнөн алдым.
Онотмаһын өсөн тиеп
Ят бауырҙар,
Минән һуң да бындай эште
Атҡарырҙар,
(Башҡа ирҙәр, башҡа быуын,
Башҡа заттар,
Тыуа торор илебеҙҙә
Азаматтар),
Әгәр һабаҡ алмаһалар
Илбаҫарҙар,
(Алмаһа алмаҫ, ғәжәп түгел,
Туң баш — алар).
Ҡарағоштан үр ҡуяны
Нисек ҡурҡа,
Бүре күрһә, тай-тулаҡтар
Нисек өркә,
Шулай ҡурҡты минән гелән
Илбаҫарҙар,
Үҙҙәренсә әйткәндә, бер
«Юлбаҫар»ҙан.

Бәлтерәне исемемде
Ишетеүҙән:
«Ялыҡ батыр шундай-шундай
Кеше», — тиеүҙән.
Күргәс инде яу ҡырына
Кергән саҡта
Ҡото осто, иҫе китте,
Тиҙрәк ҡасты.
Ыштандарын буянылар,
Шыр ебәреп,
Берен-бере тапанылар,
Йығып бәреп.
Батырҙары шул Аҡһаҡтың
Бахыр булды,
Ҡамыр ише бәлйерәшеп
Ҡалыр булды.

## Ялыҡ бейҙең васыят әйткәне

Барыс йылы барын да сәс,
Тигәндәр, ти.
Әйткәнемсә, уны күптән
Белгәндәр, ти.
Һис бәхәс юҡ, боронғолар
Хаҡты әйткән,
Үҙҙәренсә, үҙәгенә
Саҡлы әйткән.
Тыуғандар ҙа уңған була
Барыс йылы,
Яҙғы елдәй әммә һалҡын,
Берсә йылы.

Тәҡдир, ҡырыҫ ҡатын һымаҡ,
Һис буй бирмәҫ;
Буй бирһә лә, ҡуйын бирмәҫ,
Яйға килмәҫ.
Һылаһаң да, һыйпаһаң да,
Ипкә килмәҫ;
Көлөр мәлдә, турһайып, бер
Көлә белмәҫ.
Ундай ҡатын берсә һөйә
Ылдым ғына,
Йә боролоп ҡылтым ғына,
Һыртын ҡуя.
Барыс йылы тыуғандарҙың
Яҙмышы ла
Була нәҡ шул ҡырыҫ ҡатын
Булмышылай.

Тәңрем ҡушып, шундай йылда
Тыуғанғалыр.
Барыһын да татыным мин,
Туғандарым.

Ашағанмы, турағанмы
Яҡшы белә,
Тәмләп-тәмләп ашағаны
Ҡайҙан килә?
Шуның һымаҡ, әсене лә
Сөсөнө лә
Үҙе татып ҡараған, тим,
Кеше белә.
Был донъяла күп нәмәнән
Тороп ҡалдым.
Донъя малын, балаларым
Мин юғалттым.
Әллә ҡайҙа таралышты
Бисәләрем,
Татлы төштәй бергә үткән
Кисәләрем.
Минең хәлем — оя ҡормаҫ
Кәкүк хәле,
Ояһынан биҙгән эт йә
Көтөк* хәле:
Ят йәйләүҙән ят йәйләүгә
Йөрөгән булам,
Ят усаҡта йылы тапһам,
Көлгән булам;
Башҡа кеше ашағанда,
Ҡаҙы-ялды,
Тултыралар һөйәк менән
Минең алды;
Тотторалар йәки ҡатҡан
Тояҡ-мояҡ,
Ҡарын-марын, ҡалдыҡ-малдыҡ,
Ыуаҡ-төйәк;
Өҫтөмдәге кейемем дә
Кешенеке,
Аҫтымдағы кейеҙем дә
Кешенеке.

Бер нием юҡ, бер кемем юҡ —
Мин — байғошмон,
Минең юлдаш — ҡайғы. Уға
Күптән тошмон*.

Иңдәремә ҡулын ҡуйыр
Юҡ дуҫтарым,
Ҡайҙа булды Тәтегәсем,
Батыр Сарым?
Ҡайҙаһың һин, хан уғланым —
Ҡармасаным?
Ҡайҙаһың һин, хан уғланым —
Сәрмәсәнем?
Ҡайҙа булһын, барыһы ла
Ҡайтмаҫ ерҙә.
Оҙаҡламай булырбыҙ беҙ
Бергә-бергә.

Мин яңғыҙаҡ, шыпа яңғыҙ
Бер ырыуҙан.
Аҡһаҡ ханды ахмаҡ иткән
Һартайымдан.
Тик белегеҙ, мин иң һуңғы
Яугир булмам,
Булмаһа ла хәҙер минең
Үҙе донъям.
Үҙем булмаҫ киләсәккә
Өмөтөм ҙур:
Бер саҡта ла ир-егетле
Ил булмаҫ хур!

Ниңә борон һалдырғандар
«Ир-егет»тән?
Булған өсөн генә түгел
Ир енестән.
Йәки мыйыҡ ебәреүҙе
Итеп ғәҙәт,
Аяҡ өҫтө атҡарғанға
Кесе хәжәт.
«Ир-егет» ул — ҙур дәрәжә,
Данлау һүҙе:
«Ил терәге», «ил күрке» тип
Һанлау үҙе.
Ошо оло дәрәжәгә
Лайыҡ булған
Ҡыҙ-ҡырҡын да ил яҡлаған,
Ил һаҡлаған.
«Дәлилең?» — тип һорарһығыҙ,
Бына дәлил,
Һөйләп бирәм баштан-аяҡ,
Етһә хәлем.

Ырғыҙ менән Кәрәлектә
Бар бер улыс*.

Шул улыҫҡа янағанда
Бур ҡурҡыныс —
Баҫҡын баҫҡас, ҡапыл килеп,
Ил таларға,
Сардар үлеп, көс бүленгәс
Урталайға;
Башҡорттарҙы тотонғанда,
Ти, ҡырырға,
Әсе тауыш яңғыраған
Ҡырҙан-ҡырға:
«Башҡорттарым, минең арттан
Ҡалышмаң, тим!
Яттар менән яңғыҙ-ярым
Алышмаң, тим!»

Бер түбәгә менеп бер ҡыҙ
Ҡул болғаған.
Тупланырға фарман биргән
Шул ҡыҙ булған.
Таралғандар килеп етһә —
Гөлөстан, ти.
Ят ҡыҙ түгел, үҙҙәренең
Улыстан, ти;
Егет булып кейенергә
Тырышҡан, ти,
Яһанмышы — уҡ-һаҙаҡтан,
Ҡылыстан, ти.
Ир-ат халҡын дәртләндерер
Һүҙ әйткән дә,
Ҡылыс үбеп, бары менән
Ант иткән дә,
Ҡалдыҡ көстө ҡап уртаға
Бүлә һалып,
Ике яҡҡа оҙата ла,
Үҙе ҡалып,
Шул урындан ишаралап
Әйтеп тора:
Хәйлә менән баҫҡындарға
Тоҙаҡ ҡора.
Истәк[20] ҡаса, тип дошмандар
Ҡыуаныша.
Бүленешеп, бүлектәрҙе
Ҡыуа төшә.

Ҡыуып барып, ҡыҫыҡ ергә
Барып еткәс,
Ике башы ҡапҡа һымаҡ
Шарт бикләнгәс,
Ике бүлек — ике остан,

Ҡыҙ — түбәнән
Тегеләрҙе һыйлай утлы
Уҡтар менән.

Уҡлы итеп юнғас уғын
Оҫталары,
Бөтәһе лә ҡыуандыра
Гөлөстанды.
Сират етеп, башланғыстын
Ҡылыс алыш,
Тар үҙәндә ҡупҡан тағы
Ҙур сыуалыш.

Бер һелтәүе буш китмәгән
Гөлөстандың —
Бик күп баштар татый уның
Ҡылыс данын.
«Гөлөстан ул — ил эсендә
Бер ҡыҙ!» — тиеп,
Әйткән ҡарттар һәм ат биргән
«Ир-ҡыҙ» тиеп,
(Шунан килеп сыҡҡан булыр
«Ырғыҙ» һүҙе.
Яңылыша әйтеүсе: «Ул —
Ҡырғыҙ һүҙе».
Ҡырғыҙҙа ла Ырғыҙ һүҙе
Барлыҡҡа бар.
Әммә уның исеменең
Тарихы тар).

Шулай булған. Шулай ғына
Торһон донъя,
Вариҫтарым өр-яңынан
Ҡорһон донъя,
Йәшәһендәр илсегә ил
Һәм дуҫ булып,
Яусыға — яу, даусыға — дау,
Бер күс булып.

Ирекkәндән ирек килмәҫ
Илебеҙгә,
Ир-егеттәр, ирек һеҙҙең
Иркегеҙҙә.

Бүтән илгә баҫып инеү —
Һай, бик яман.
Ғибрәт алың, фәһем алың
Атиланан[21].

Шул бабабыҙ Ҡырымды ла
Римды алған,
Иңләмәҫлек ил төҙөгән,
Нимә ҡалған?

Ул үҙ иткән ят бауырҙар
Башын киҫкән,
Иле бөткән. Сыҡмаһын шул
Иҫегеҙҙән.

Сабый һымаҡ бер ҡатлы, тип,
Был истәктәр.
Алтын, тауҙар вәғәҙә итер
Килмешәктәр.

Вәғәҙә итер үргә үтер
Башың аша.
Үргә үтһә, ундай заттар
Хәттин шаша.
Һине егеү — булыр уға
Бер тамаша.
Шундай саҡта үҙ-араһы
Кем талаша?

Шул талаша: кемдәр белмәй
Алға ҡарай.
Уйлағаны, миңә теймәй,
Тимәк, ярай.
Ҡабатланыр тағы тарих
Һөйләп биргән:
Ят бауырҙар дөмпәҫләрҙәр
Берәм-берәм.

Ил башында тотоғоҙ тик
Ир аҫылын.
Үҙ башына туплағанын
Ил аҡылын.
Дуҫ булайыҡ, тиеп, яттар
Ҡулын һуҙһа,
Һүҙен раҫлап, яҙыу яҙып,
Ҡулын ҡуйһа;
Алдың-артың уйлап ҡына,
Ҡабул итең,
Булма үгәй ҡулына ҡалған
Үкһеҙ етем.

Дәрәжәбеҙ — Ер хужаһы,
Асабалыҡ.
Унан яҙмаҡ — мәңге янмаҡ
Ғазапланып.

Үҙ илендә ҡолаҡ ҡаҡмаң
Ерегеҙҙән.
Билбауығыҙ сиселмәһен
Билегеҙҙән.
Ҡыҫтырыулы торһон унда
Ай балтаҡай,
Йәй әҙер тот эйәрле ат,
Ҡыш ҡалтағай* —
Был донъялар, һил булһа ла,
Именлек юҡ.
Донъя хәлен белеү ҡыйын —
Фетнәлек күп.

* * *

Ил кесеһе, олоһо!
Боронғоноң йолаһы:
Һеҙгә оран һаламын,
Ғафил булып ҡалмағыл!*

«Байһоңғар! — тим меңлемә,
Бирешмәң бер кеменә».

«Салауат! — тим табынға, —
Йыйыл, туплан, абынма!»

«Туҡсаба! — тим ҡыпсаҡҡа, —
Тупланығыҙ форсатта!»

«Аҡтуған! — тим бөрйәнгә, —
Дуҫтар туплаң эргәңдә!»

Үҫәргәнгә: «Байғун! — тим, —
Дуҫтарға байығың!» — тим.

«Барлас! — тиһәм, һалйыуыт
Дошманын алыр быуып.

«Аҡтайлаҡ! — тим, — юрматым,
Эйәрле торһон атың!»

«Салауат! — тим әйләләр, —
Ат менһен йәйәүлеләр!»

«Арбур!» — тиһәм, кирәйҙәр,
Яуҙа еңеүгә әйҙәр.

«Талаҡ! Талаҡ! Ҡатайым,
Уйламаң: «Тик ятайым!»,

«Тутыя! — тим, тамъяным,
Әҙер торһон уҡ-яның!»

Оран әйтһәм: «Түңгәүер!»
Йөрәктән яҙыр ғәүер*.

Гәйнәм, гәрә, йәнәйем,
Ҡырғыҙ йәнә йәлдәгем;
Ҡаршын, ҡаңлы, ыуаныш,
Һеҙ ҙә — минең йыуаныс.

Ундарым, урандарым,
Үҫәме уландарың?
Балыҡсылар, таныптар
Дуҫтарын гел танһыҡлар.

Юрмыйҙарым, байларым,
Һайлаң дуҫтың айбарын!

Ирәймәһен ирәкте,
Белһен нимә кәрәкте!

Буленмәһен буләрем
Ыңғайына йүләрҙең.

Дыуанайым, таҙҙарым,
Күптәрем үә аҙҙарым!
Барығыҙҙы барлайым,
Уйым менән ҡармайым.

Иллалла ғына торам,
Барыңа һалам оран.
Бер нәмәне аңлағыҙ:
Минең хәлгә ҡалмағыҙ!
Һайыҫҡандан һаҡ тороң!
Йортоң булмаһын торон!
Инәйҙәрем, бабайым,
Апайҙарым, ағайым,
Ҡарындаштар, ҡустылар,
Дошманлылар, дуҫлылар!

Күстән ҡалған күслеләр,
Үсен алған үслеләр!
Башҡорт ерен ил иткән,
Ошо илдә көн иткән
Заты башҡа һәр ҡәүем,
Һеҙгә лә һүҙ бырғауым
(Әйтер һүҙем барғауым*):

Үтенәм һүҙ йыҡмауың,
Уртаҡ йырҙы йырлауың.
Көс — дуҫлыҡ, татыулыҡта,
Иҫәнлектә, һаулыҡта,
Ил берлеген тоймаҡта,
Тарҡалмауҙа ян-яҡҡа;
Яман сирҙәй тәндәге,
Бәндә менән бәндәне,
Сиреү менән сиреүҙе,
Ырыу менән ырыуҙы,
Халыҡ менән халыҡты,
Ҡуҙғытҡандай балыҡты,
Ыҙғыштырып үҙ-ара,
Көҫәүсене низаға,
Хөсөт йөрөткәндәрҙе,
Ҡурҡаҡ, һатлыҡ йәндәрҙе
Араға индермәүҙә,
Уларға сер бирмәүҙә.

Яҡшыһы үә яманы,
Заманына — заманы,
Заман заңы — заңына
Ҡайта-ҡайта яңынан,
Ялғаныр ҙа ялғаныр,
Тарих шулай тулғаныр...
Беҙҙән һеҙгә ни ҡалыр,
Һеҙҙән түбән ни ҡалыр?

Һеҙгә беҙҙән шул ҡалыр:
Фәһем, ғибрәт — мул ҡалыр.

Әйткәнемде тотһағыҙ,
Мәғәнәһен отһағыҙ,
Ҡарышалмаҫ ҡаршылыҡ,
Һеҙҙән ҡалыр яҡшылыҡ.

Аңлағанға — ишара,
Ундай булыр, иншалла!
Шул еткерер бүтәнгә,
Кемдәр килер түбәндә,
Һүҙҙәремдең асылын —
Уятыр ир аҫылын.

Васыятым — нәсихәт,
Нәсихәтем — васыят.

# 14. ТӘТЕГӘС БЕЙ

*(Юрматы ырыуы шәжәрәһе буйынса)*

Чынғыз хан заманындан ҡалған ханлар мәғлүм булсын.

Асыл юрматыларның уғланлары[ндан] Тухал Шәғәли бейнең оруғы күп өчөн барча халайыҡлар «бей» дәйеп әйтәләр. Борон заманда бу ердә нуғай ирде. Зәй, Шишмә дигән ерләрдә һәр тарафтан күчеп йөриләр ирде. Анча нагаһ* ул ердә аждаһа йылан пәйдә булды*. Бер ничә көнлек ердән ятар ирде. Моңар күп йыллар кичте, аның берлән орыш ҡылдылар. Күп халайыҡ һәләк булды. Шундан суң ул йылан ғәйеп булды. Халайыҡ аманда ҡалды.

Ул заманда Амат Хамат дигән ханның ҡул астында тордылар. Анчадан хан-ханға хөсөд* булдылар. Бер-беренә дошман булып бер-беренә ҡылыч чабаһ башладылар. Ул уҡ заманда Җәнибәк хан илән Аҡсаҡ Тимер хан иде. Булар [ваҡытында] йортҡа[1] олоғ бөлгөнлөк булды — һәр тарафҡа яулар булды. Амат Хамат ханның йорты бозылды. Бер аз кешеләр илән ҡачып, олуғ Иделнең ары яғына чыҡтылар һәм йорт урыны ҡазыдылар[2]. Ҡара йылға дигән сишмә буйында ҡундылар. Хан әйдә: «Бер хәл булды, монда бер ҡәүем* үлекләр бар имеш». Хан әйде: «Бу үлекләрдә бер ғәзиз булғай. Ҡәберне баҡыңлар*!»— диде ирсә, һәм шул сәғәт ҡарадылар. Бер зыярат ташы күрделәр. Ташҡа язылмыш: «Шүлкә — ата» дип. Хан әйде: «Моғайын, бу ғәзиз алар имеш», — диеп. Шул ваҡытта тарих сикез йөз ун бердә ирде. Хан бойорды: «Ҡутарып баҡыңлар», — диеп. Һәм ҡарасалар, ҡәберне кирбеч илән әйләндергән, әммә ғәҗәп: ҡара башлы, ҡызыл йөзле бер егет теректик ятыр. Хан әйде: «Йә, Шәғәли бей! Халайыҡлар арасында синдән хаким юҡ, бу ер вә сыу синең улсын, бу ғәзизне син тәрбиә әйлә!» — диде ирсә, Шәғәли бей хуш күрде вә һәм Шәдлек дигән сыу[3] буйына йортлар салдылар. Бу ғәзизнең өстенә ихата ҡылды, һәр йылда, җыйылып, хәтөм ҡылырлар* иде.

Күп заман тордылар, Шәғәли бей донъядин үтте. Чәчәлкә атаһ янына дәфен ҡылдылар*.

Ғәжлүк уғлы Ғәли Шәйех Дәрүиш дигән олоғ бей[4] булды. Йорт аман улды. Шәйех Дәрүиш бей булғач, борынғы аталарның йортына, Зәй, Сишмәгә күчтеләр, һәр тарафтан күчеп йөрөделәр, ғиш-ғишрәттә* булдылар. Бер аздин суң Шәйех Дәрүиш бей донъядин үтте. Андин суң бейнең уғлы Чачлы Дәрүиш дикте* , әммә бейлеккә[5] мөһөр бирелде. Олоғ бей булды, ғиш-ғишрәт* улып тордылар.

Нуғайлар[6] ғәдәте шул ирде: «бей», «мырза» дип баш әйеп йөределәр. Күчә-күчә Саҡмар, Жайыҡҡа һәм Идел буйына життеләр. Сансыз нуғай ышбу ерләрдә торлаҡ ҡылдылар. Әммә Чачлы Дәрүиш бейнең ғүмере ахры булды, уғлы юҡ ирде һәм ҡарындаш-яҡыны юҡ ирде, бер генә ҡызы бар ирде, үз ҡулы астындағы нуғайға ҡызны биргән иде. Әммә ул ҡыздан ике уғлы бар иде, бере Борнаҡ, бере Ядкәр дигән иде. Әммә Борнаҡ дип аны [шуның] өчөн атадылар: һәмче уғлы-ҡызы юҡ сәбәптин, борыны аҡ атның ҡуйынына салып, ат исемен бирделәр. Аталары Нуғай йәш ваҡытында вафат ирде. Чачлы Дәрүиш бейнең ҡулының үскәнләр ирде.

Чачлы Дәруиш бей донъядин күчте. Олуғ уғлы Борнаҡ бей булды. Ядкәр мырза булды. Аның ҡәрдәшләре барча мырза булдылар, ыруғы күп ирде. Әммә ул заманда Төкәй хан ирде. Төкәйгә мөһер бирелде. Төкәй мең дә сиксән биш ҡазаҡҡа баш булы. Һәр тарафҡа күчеп йөрөделәр, ғиш-ғәшрәт ҡылдылар, ғәделлек берлән йорт көттеләр.

Бер заман йыллар ҡытлыҡ булды. Ҡыш бик озаҡ булды, өч йылғача йылҡы, ҡуй бөтте, игенләр һич үчмәде[7], күп халайыҡлар дармансыз булдылар вә күп халайыҡ ач-ялангач булдылар. Нуғайлар, жыйылып, киңәш ҡылдылар:

— Борынғы аталарымыз Ҡубандан килеп ирде, жир-сыу дип, салҡын жир, салҡын сыу эстәп* килгәнләр, әммә ҡыш сыуығы көн өселегендән яман имеш. Әммә сыуыҡ тәжрибәченәһ ҡарағанда, төньяғындан урыс көффәр килгәне. Бу ерләрдә урыс күп булғай. Безгә бу ер лайыҡ ирмәс, — дип сансыз нуғай[лар] почар* булдылар. Әммә ярлы-ябыҡ Борнаҡ бейгә килеп әйттеләр:

— Яхшы ваҡытта бергә тордыҡ. Имде, заман яман булғач, безне ҡанда* ҡуйып китәсез, без ҡанда барайык? — дип бик ялбардылар ирсә, Борнаҡ бей күчмәс булды. Энече Ядкәр мырза баш булып, сансыз нуғай берлән Ҡубанға күчтеләр. Әммә туғыз йөҙ дә илле өчтә ирде[9], Аҡ Иделнең бу[й]ында үрге очы Нөгөш, түбәнге очы Көгөш, шулардин чыҡҡан таралма сыулары, яланлары берлән биләп торалар ирде. Өч йөз нуғай ырыулары илән, Ядкәрдин ҡалғач, анлар дәхи дә Ҡубанға бочтылар.

Борнаҡ бей берлән ҡалған «иштәк»[10] аталдылар. Ошбу нуғайдан ҡалған буш ерләрдә ғүмер сөрде. Идел буйларында һәм урманларда бал ҡорты илән, сыуда ҡондоз илән, яланда сыусар, төлке илән хәрәкәт итеп, ғәни булдылар*. Йәнә тарих туҡыз йөз дә илле дүрт ирде, барча иштәк Борнаҡ бейнең әмере илән тордылар. Борнаҡ бей вафат булғач, бейлек[не] Тәтәгәчкә тапшырдылар.

Тәтәгәч бей булған[дин] суң, тарих туҡыз йөз илле туҡызда, сычҡан йылында ғәкәбрәбнең* икенче көнендә Ҡазан шәһәрен урыс алды. Шундан суң Аҡ бей бадишаһ булды. Андин суң һәр тарафҡа хат языулар илән илчеләр йөрөтөп мәғлүм ҡылғандин суң[11], тарих туҡыз йөз дә алтмыш бердә иде: «Һәр кем ирсә ҡачмасын вә һәр кем үз динендә торсон, үз ҡағидәсен тотсон», — дип.

Шул илчеләр йөрөп мәғлүм ҡылғач, тарих туҡыз йөз дә алтмыш бердә ирде.

Әммә бән, Тәтәгәч бей, башҡа һич тә уй уйларға сарaһ булмағас, өч түбә халыҡтин өч кеше алдым да, әүәл Азнай баба, икенче Илчекәй Тимер баба, өченче Ҡарамыш баба илән дүртемез, бер аз йәр-юлдашлар алып, Ҡазан шәһәренә барып, Аҡ бей бадишаһҡа баш салдыҡ. Ярлыҡаш атлас алдыҡ. «Өч йөз өйле кешемез», — диеп шаһға мәғлүм ҡылдыҡ. Босоп киткән нуғайдан ҡалған жирне үтенеп сорап алдыҡ. Үрге чике Нөгөш, түбәнге чике Көгөшнең ике яғындан чыҡҡан сыулары илән вә яланлары илән, таулары, ташлары илән бирдә. Ясаҡҡа сыусар түләмәк булып, бәйғәт* бирдек.

Мән андин суң Аҡ бей падишаһ бән Тәтәгәчкә рәхим идеп мырзалык чин[е] бирде, Азнайға староссталыҡ бирде. Андиң суң йортҡа ҡайттыҡ. Халайыҡларымызны жыйып алдым да дидем:

— Ай, яранларым! Без Аҡ бей бадишаһҡа бардыҡ, баш салдыҡ, ҡол булдыҡ. Мән Тәтәгәчкә падишаһ рәхим идеп мырзалыҡ чин[е] бирде, Азнайға старосталыҡ бирде, вә һәм бадишаһтин бочҡан нуғайларның жирләрен үтенеп алдыҡ. Йөз сыусар ясаҡ түләмәк булдыҡ. Имдә сез дә ҡабул ҡыламусыз? — дип сорадым. Һәммәсе шул халайыҡлар:

— Яхшы, барчаларымыз жәнделдән ыразый* булдыҡ, — диделәр. Әммә бән әйдем:

— Вә падишаһ, бән мырзаға язаҡ булмас, диде.

— Яхшы булыр! — диделәр. Әммә халайыҡлар әйделәр:

— Имде бу ердә ҡышлаҡ йорт урыны бар, эчмәлек сыуы бар, оялы бөркете, күчегәне бар, сыуда ҡондызы бар, урманда йүкерек төлкече бар һәм сыусары бар, һәм ҡамасы да бар, дип бик шат бул[д]ыҡ. Имде шул ерләрне түбә-түбәгә ясағып һәм жирләрне бүлеп бир, — диделәр һәм. — Бер-беремезгә, ороғ-ҡәрдәшләремезгә татыу халыҡ өчөн көч итешмәскә шарт язылар язышайыҡ! — диделәр. Әммә бән Тәтәгәч мырза әйдүм:

— Бик хуш, булыр, — дидем. — Әммә бадишаһ бәңәһ мырзалыҡ бирде һәм мырзаға ясаҡ юҡ! — дәйеп дидем ирсе, халайыҡлар әйделәр:

— Бадишаһның әмерене хуш күрдек, — диделәр. Мән Тәтәгәчкә ясаҡ салмадылар. Йөз сыусар ясағын тәслим ҡылачаҡ* халайыҡлар түләделәр.

Андин суң, ясаҡ түләп, жирне дүрт түбәгә булдек[12]. Әүәл Ашҡаҙарның башындан тамағынача ике яғындан чыҡҡан таралма сыулары, туғай, ҡамышлары вә яланлары... таулардан Нөгөш тамағынача ҡойғучы йылғалары илән бер өлөш ясадыҡ. Вә һәм йәнә Нөгөш тамығындин Иделнең ике яғындин чыҡҡан таралма сыулары, ағачлары берлән, туғайлары илән, Тор башы вә Сәләүек башы илән, Ҡырыҡ баш ағачындин Тора тау биленектән бер өлөш ясадыҡ. Вә һәм Тора тау һәм Шәке тау һәм Ҡуш тау, Эстәрле тамаҡтан, Ҡуғанаҡ башындан Өршәк берлән ике ара арҡа берлән аҡҡан [сыулар] башындан һәм Асауға аҡҡан сыулар башындан арҡа вә яланлары бер өлөш ясадыҡ. Вә һәм Өршәк, Асау тамағындан Бәләкәй Буләк сытырычындан, Бурсыҡ, ундин Йөрәк таудан Иделнең Ҡара туғай илән Көгөштин Жикәннең икейә таралма сыулары илән, ағышлары илән Ҡаламан башындан, Тор Шинешмәнең башындан бер өлөш ясадыҡ.

Шундан суң дүрт шыбаға салдыҡ. Ул шыбаға шул шарт илән: әүәл шыбаға Ашҡаҙарға сузылған сыулар вә яланлары, урманлары илән мән Тәтәгәчкә чыҡты, икенче шыбаға Тируҡ* язылған сыулар* вә яланлары илән староста Азнайға чыҡты, өченче шыбаға Эстәрле, Ҡуғанаҡ, Сәләүек ярылған сыулары, ябан-урманлары илән Илчекәй Тимергә чыҡты, дүртенче шыбаға Жиркән, Ҡаламан, Шөшнәккә ярылған сыулары, ябанлары*, урманлары илән Ҡарамышҡа чыҡты. Шул жирләрне бүлеп, шыбаға салғандин суң сүз бозмасҡа, көч итмәскә, татыулыҡ илән [торорға] языштыҡ.

Алтмыш ике йылға кергәч, Аҡ бей бадишаһдин купис килде. Бән Тәтәгәчкә, староста Азнайға, шундин суң Илчекәй Тимер илән Ҡара-

мышҡа хәбәр ҡылып, йөз сыусар ясағын, игсас (?) илән тартып, Мәскәүгә бадишаһҡа итеп түләдек. Ошбу жиремезне өләшкәнемезне язып, Мәскәүнең книгәсенә ялғадыҡ. Әммәһ шул книгә буйынча һәр йылда ясаҡ түләдек. Әммә Мәскәүгә илтеп түләмәкне ағыр күреп, ясаҡны Ҡазанға түләмлеккә үтендек. Ҡазанға книгәне килтереп салып түләдек.

Мондин суң күп рузгарлар үтеп, хәл кичте, ҡартайдыҡ. Ғүмер ахрына етештем, белдем ки, бу донъя безгә баҡый тормас*, дәйү. Ҡарындаш оруғ, дусларым, хушларымны өндәп алдым да әйттем ки:

— Бәнем ғүмерем ахрына ирешге. Мондин суң донъяны нә гәмәл илә көтәрсезләр? — дип. Әйделәр:

— Сән яхшы белерсән, — дип. Шундин суң әйдем:

— Ҡайсыдыр мондин әүәл узған бабаларның ничек күреп идем шул рәүешле көтәрсез, — дип.

Үз арманымда узган бабаларның тарихлары илән үткәнне, мулла Баҡыйдан яздырып, староста Азнайға, Илчекәй Тимергә, Ҡарамышҡа тапшырдым.

## 15. ҠЫПСАҠ ЗАТЛЫ ЯМҒЫРСЫ БЕЙ МЕНӘН ҠУСҠАР БЕЙҘЕҢ ЯҢЫ ИЛ ТАПҠАНЫ

*(Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе буйынса)*

...Ҡыпчакның үзе Лоҡман Хәким[1] нәселенәндер. Аның пәдәре* Уғыз хан урдунда сәри[2] ғәскәр улып*, урдуйы* мәғлүп улып,* үзе вафат иттегеңдән суң, Ҡыпчаҡ анасыңдан суғыш сәфәрендә тыуып, Уғыз хан аны үз тәрбиәсендә алмыш.

Ҡыпчаҡ юлда ағач ҡыуышында тыуғанлығы өчөн аңа үзләренең ғәдәтенчә «Ҡыпчаҡ» дәйү* ат* вирмешләрдер.* Ҡәдими* төрөк телендә эче ҡыуыш ағачны «кыпчаҡ» димешләр.

Ҡыпчаҡ үсеп ир булғандан суң, Уғуз Ҡыпчаҡны, ил-урду* биреп, Әтил йылғасы буйына ебәреп, ҡыпчаҡ, мажар*, рус, хазар, әфләх* тайфалар* белән мохараба* итеп[3], Ҡыпчаҡ ғалип* кәлдектән суңыра Дон, Яйыҡ, Әтил йылғалары буйында йәшәгән халыҡларны үзенә ил ҡушып, үзенә күп ил ҡаратып, зур бер ханлыҡ төзөдө.

Ширван артында, бәхри* Русҡа яҡын бер урында, Сәрдәк исемендә шәһәр бина иттереп, шунда бер зур дәүләт ҡороп, ул йортҡа аны хан күтәрмешләр*. Ул ил суңыра «Ҡыпчаҡ иле», ул дәүләт тә суңыра «Ҡыпчаҡ дәүләте» аталып китмештер.

Арзи ҡыпчаҡта* хайуанлар өчөн мәрғәсе,* ут,* печән жәй дә вә ҡыш та бик күп. Жәй өчөн жылы, ҡыш өчөн салҡын диңгез, йылғалар буйында урманлары күп булып, бер ничә ғасырлар Ҡыпчаҡ тайфасы* шунда йәшәмешләр.

Ҡыпчаҡларның тәхти пай* шәһәре Сәрдәк аталып, бәхри хазар яҡасында улмыштыр. Чыңғыз үз басҡынлығы дәүерендә, татар ханларын әүәл алдап, суңырасы Ҡыпчаҡ тайфасын* ҡатилғам* вә ғарат* берлә тамам һәләк итмешләр.

Сәләмәт ҡаланлары* атрафи* шаттаға таралмыштыр. Бәғзеләре татарлар ханы урдуына* ғәскәри булып ҡушылып, жәнен ҡотҡара белде.

Татар ханлары ҡул астында ҡалмышлары, Нуғай мирза ҡул астында күп заман хеҙмәт иттекләрендән, «нуғай тайфасы»* аталып китмештер. Нуғайларның һәммәсе Ҡыпчаҡ йортонда торор.

Ҡыпчаҡ уғлы Һүшнәк, Һүшнәк уғлы Ҡазанҡап, аның уғлы Буда бей, аның уғлы Күрәш, аның уғлы Найман, аның уғлы Турҡаҡ, аның уғлы безнең бабамыз Буға бей. Буға бей татар ханлары һөжүме ваҡытында вафат булып, аның ике уғлы ҡалмыш. Берсе Ямғырчы бей, икенчесе Ҡушҡар бей. Ҡушҡар бей, атасы вафат булдыҡтан, суңра алтмыш кеше эйәртеп, Иделне арҡыры чығып, Яйыҡ һәм Саҡмар тамағына килеп урынлашмыш.

Суңра Ямғырчы бей дә, бергә ҡушылып, һәр икесе монда бей күтәрмешләр: Ҡушҡар бей балалары, Ҡушҡар йорто аталып, Ямғырчы бей балалары Ямғырчы Ҡыпчаҡ-Нуғай Ҡыпчаҡ аталдылар.

Безнең Саҡмарның Яйыҡҡа ҡушылған һәм шул йылғаларға ҡойған ыуаҡ-ыуаҡ йылғалар буйына Ҡыпчаҡ халҡы аталған халыҡлар Иләк бей бине Ҡушҡар бейҙән таралмышлардыр.

Ҡушҡар бейнең уғлы яңғыҙ, Иләк бей исемендә, берәү булып, Иләк бейнең үзендән күп уғанлар туғмыштыр. Иләк бейнең бер уғлы Бөрйән аталып, шул сәбәпле безнең ырыу Бөрйән Ҡыпчаҡ аталмыш. Безнең етенче (быуын) атамыз (бабабыҙ. — төҙ.) Бөрйән бине Илектер.



## 16. БАБСАҠ МЕНӘН КҮСӘК

*(Башҡорттоң ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе буйынса)*

Кыбчакның төб нәселларымыз Лоҡман Хәким ин диб беленгез. Олуғ уғлын Дәшт Кыбчак әйтерләр ирделәр. Жөмлә* Кыбчак шуның нәселенәндер. Рушан нәби Дәшт Кыбчак уғлыдыр, аның уғлы Исмағил хан, аның уғлы Алмай диб әйтер[ләр] ирде. Үзендә вәлилек кирамәте бар ирде. Аның өчөн Алмай солтан диб исем ҡуйдылар. Үзе Тура тағында[1] йорт иткәндер. Әммә Исмағил хан ахыр ғүмерендә халкын жыйыб үзенең вәчиәтен әйтди, үзи: «Кәдим атам йортона барамын», — тиб, Житем* тамағына барди. Бу милекне уғлы Алмай солтанға табшырди; ул һәм анда һижрәт* кичерди. Алмай солтан шул ерләрне биләди, ул һәм ахыр ғүмерендә уғлы Ҡузы солтанға табшырды, үзи анда дәфен улынды. Урынына уғлы Бускун бини ултыртди, ул һәм ерләрни биләди. Аның уғлы Булат би ултырди, әл һәм ерләрни биләди. Аның уғлы Бабсаҡ би, ханның уң яғында ултырди ирди, имди йәнә Бөржаннең атаси Ҡараҡоломбәт ханның сул янында ултырыр икән. «Мәгәр хан үлсә, артындан хан[лыҡ] Бабсаҡка тияр, мән буш ҡалырмын, бу Бабсаҡ үлмайынча бәңа ханлыҡ тимәс». Буның урынын күрә алмай, бер мәжлестә ултырған ваҡытда, Ҡараҡоломбәт килеб, ҡыяҡ башаҡли уҡ илан атуб, Бабсаҡни аңламасдин атуб үлтүрди. Йәнә бер уғли бар ирди Шыкманай атлу, аңа тибенди, ул ҡасти. Ҡараҡоломбәт ҡыуыб килеб: «Бу тери калса, качанда булса, ата дадын һәм ҡанын эстәр* һәм алыр», — диб ҡуа баруб, етүб, Алаҡуян башы, Шыҡманай яланы дирләр, шул яланда үлтүрди. «Инди бунлардин нәсли ҡалмади», — диб — сеүенеб турур ирди. Бу Бабсаҡ би Тура ханның ҡызин алған ирди. Хатуни ата йуртына ҡайтуб китти. Ҡараҡоломбәт [уны] алурға хас итди; ул хатун: «Бармайум ирумның дошмани сән булдың. Бән сиңә баруб, барун ҡыямәт күнүндә ирумә нә жауап бирурмен?» — диб бармади. Атаси йортына кайтди һәм үзе корсакли иркән. Бу[ны] Ҡараҡоломбәткә белгүртмәди. Ул курсакдағи бала ай күнинә етди һәм донъяға килди. Бер уғыл туғди. Тура хан [уға] Күсәк* би диб исем ҡуйди.

Уғлан ун ики йәшкә етди ирсә, атасиның үлгәнини иштүб, Тура хандан нәүкар суради: «Атам ҡанын эстармен», — диб. Әмма бу Тура хан, бу уғланның ғәйрәтен вә һиммәтен күрүб, йөз кеши бирди.

Ун ики яшендә! Күсәк би килүб, Ҡараҡоломбәткә етүб тибенди*. Бу Ҡараҡоломбәт буңа чара табмади, нәүкәри* илә ҡачуб, Шүлгән тишүгенә керди. Анда Ҡараҡоломбәтнең бер кызи берлән бер егет бер түн ҡачуб, Базал тағында чыҡуб китди[ләр]. Бу[ны] Күсәк би тойоб кыуды: «Ҡараҡоломбәт булмасун», — диб, етүб, күрди [ҡыҙ менән егетте. Ҡыз менән егетте] күргәч: — «Нәслиңә зарар итмәйем», — диб анларни жибарди. Олуғ атаси Тура хан әйтүб ирди: «Аллаһыдин носрат* булыб, сән алсан, нәселен өзмәң!» — диб. Олуғ ата сүзи берлән жибәрди. Жөмлә Бөржан нәсли шундан калди.

Ҡараҡоломбәтни табуб алуб, һич бер ни ҡотҡармай, үлтерди. Ул Ҡараҡоломбәтнең ики... кисди,* үзини тимер ҡазанға ҡайнатүб

үлтерди. Бу хөкөмни Тарағы яланында эшләди. Үзи [исеме] илә Иделди би кичеүе дирлар. Шундан чыҡуб, шул ердин йорт итди.

Тура хан биркән нәүкәрләрун ети йылдан суң кайтарди. Жөмлә йортни үзи биләди. Андин һич кем узмай [ине], андан түбән хан булмади, би булди[2]. Ак би бадшаға баш салдилар, ярлукашлар алдилар, вә мырзалыклар алдилар. Бөржан атаси. Юрмати атаси һәм Табын атаси, һәм Катай атаси бергә йорт көтдиләр.

Бабсакдан ана карнында калуб Күсәк би донъяға килди. Бу йортни, тәмам башкорт ерини, ул биләди. Ошбу әйтүлгән барсылари Сыңғыҙ хан заманында ирди. Биғәмбәремез Мөхәммәд Мостафа саллааллаһы тәғәйләйһи вәссәләмнең һижрәтендан ети йөз йылдан суң ирди.

Аҡсаҡ Тимер хан килди. Шәһәр Болгарни[3] алды.

Тарих туҡыз йөздә илли туҡызға еткас, сысҡан йылында, ғәкрәб йолдозының икенси көнөндә Казан шәһәрен алди, Булгарин алди. Тауарих алғандин суң һәр тарафҡа хөкөмларин йөрүтди, илчилар жибартди: «Һич кем ирсә нуғай халҡи кебек йортон ташлаб, ерун салуб касмасун, һәр кем үз динен тутсун, үзи юласын ҡылсын» — диб илчилар йөрөтди һәм хөкөмларүн йөрөткандин суң, тарих туғыз йөз алтмыш бердә Бабсаҡ уғли Күсәк би үч илеүдан үч олуғ ағаларун алуб, йәғни Бикбау һәм Мишәүле Ҡарағужаҡ һәм Шәғали Шаҡман, үч кенәзларни алуб, беренчи юлдашлари илә варуб, Аҡ би бадшаға баш салдилар һәм ярлукашлар алдилар, атлас кармазин тунлар кидиләр. «Йөз иүли халҡымыз», — диб Казанға бадшаға мәғлүм улдилар, бусуб киткән нуғай халкиның ерларун алдилар, Аҡ Иделнең ики яғындан яғы берлан. Шуның хаҡында Аҡ би бадшаға... бу уч илдан барған уч ағаға рәхим идеб...[1] Күсәк кыбчак исемләнеб ошбудан калди. Андан Бурундук туғди, аның уғли Сөйөндөк туғди, Сөйөндөктән алти уғыл туғди. Эммә Кыбсакның төб нәсли түбанда язулур иншааллаһытәғәлә.

Әүүәл Локман Хәким, аның уғли Дәшт Кыбчак, аның уғли Рушан нәби, аның уғли Исмағил хан, аның уғли Алмай-хан, аның уғли Ҡузы солтан, аның уғли Бускун би, аның уғли Бабсаҡ би, аның уғли Күсәк би, аның уғли Икүсан би, аның уғли Бурундук, андин Сөйөндөк, Сөйөндөкдән алты уғыл вежүдкә килгәндур. Ҡыбчак исемләнүб ошбундан ҡалди.

## 17. ҠАЗАНФАРИ БЕЙ ЗАМАНЫ — ИКЕ КИЛМӘТ НИЗАҒЫ

*(Мең ырыуы шәжәрәһе буйынса)*

Чыңғыз заманында Урадач бей ирде. Андан өч атаға тикер* вайран* булды.

Аҡсаҡ Тимер[1] заманында олуғ ҡырғынлар булды[2]. Андан анлар нәселендин бер уғыл ҡалды, [аты] Санғусин ирде, бабасының бейлеген ул тотто. Аның уғлы Сасбоға, аның уғланлары анда һәләк булды-

лар. Анлар нәселендин бер уғыл ҡалды, аның исеме Чыу бей, бейлекне ул тотто, ул һәм хан заманында ирде. Аның уғлы Гәрәй бей, ул һәм хан заманында ирде. Аның уғлы Ҡазанфари бей, ул Ҡаракилмәтне күрә ҡалды. Ҡаракилмәт Гәрәй бейне күрә ҡалды. Гәрәй бей Ҡаракилмәттин ҡартыраҡ ирде, Ҡазанфари бей йәшерәк иде.

Ике Килмәт килә йөрөр иркән, икәүсе дә мырза иделәр. Берәүсенең аты дулап йөрөр иркән. Андин өркөп Ҡаракилмәтнең бейәсе йөрөр иркән. Аңар Аҡсаҡ Килмәт көлөптер. Икесе дә мырзалар. Шундин үчегешеп, ҡырғынлар булды, бу ердин чығып киттеләр[3].

Андин суң ҡалған җәмәғәтләргә Ҡазанфари бей әйтте:

— Эй яранлар, без, мындин китеп, мәҡам тота* алмасмыз. Бу ердәй ер ҡайдан табармыз?! — диде ирсә, барча яранлары иғлашып әйттеләр:

— Эй, Ҡазанфари бей, үлсәк — монда, терелсәк — монда. Ярлымыз вә байымыз бары көн күрә алмасмыз. Булсаҡ, юғалсаҡ, тәүәкәле Алла*, — диерләр.

Ҡазанфари бей берлән өч кеше ҡалдылар. Бере Чүбүлүк (Ҡазанфариның ҡарындашы ирде), Урман, Туман ирделәр. Ҡараман Урман илән бер туғма ирде. Ул Ҡараман, Килмәт берлән килде. Ҡараман уғлы Теңәй монда ҡалды. Әммә Аҡман мырзалар нәселе ирде. Әммә ошбу биш кеше — һәммәсе асыл заты торорлар. «Белеңезләр, ғафил* булмаңызлар, ғаҡыллы аңлар, ғаҡылсызның бер ҡолағындан кереп, бересендин чығар. Имам Әғзәм хәзрәтләре әйтмәдеме: үкен*, йәғни нәселден* белмәгән кеше батшаһ алдында сүз сүзләргә ярамас, ахырғыдин хәбәр белмәгән хакимчылыҡҡа ярамас», — диде.

Туҡыз йөз илле алтыда ирде. Ҡаракилмәт, Аҡсаҡ Килмәт бөлгөнө булды.

Казанфари бей, Чүбүлүк, Урман, Туман, Теңәй, Аҡман монда ҡалдылар, өч олоғҡа ясаҡ түләп тордолар[4]. Ошбу ердин тикереп* түләр ирделәр. Аз ғына халыҡ нә* ҡылсынлар?!

Андин Ҡазанны Калита Иван алды[5]. Андан суң рәхимле бадишаһҡа баҡтылар. Туҡыз йөз алтмыш бердә ирде, сычҡан йылы ирде. Ҡазанны урыс алды. Сүз күп иде, мохтасар ҡылдыҡ.

Бадишаһ олуғ кенәз Алекчай Михайлыч заманында көчләсмәскә ерләрен бүлештеләр. Мин, кенәз Янбаҡты, яздым. Кем белән, дип сорасаңыз, энем, уғлым [белән]. Васыятым: аңлаған ғаҡыллы торор, ғаҡылсызның бер ҡолағындин кереп, берсендин чығар.



Болот бей

Уға бей

Санғусин бей

Сасбоға бей

Чу бей
Муса бей

Ҡазанфари бей

Урман бей
Уразлы бей

## 18. БЕЙ ТУҠСАБА УҒЛАНЫ МӨЙТӘН БЕЙ

Рабби* кәрим* ҡөдрәте,
Мәҙкүр имәм орғатты*,
Кичмеш Әдәм әүләде*,
Чынғыз ханның заманы.
Башҡорт халҡы бабасы
Бей Туҡсаба уғланы,
[Үҫәргәнде[1] үрсеткән,
Ят талағын күпсеткән
Өлөшлө бей булғаны],
Мөйтән[2] тимәккә аны,
Хаҡ* яратмыш дан аны.
Мәшһүр итәлем* аны;
Күреклек ҡылмыш жисмене*,
Булмыш ирнең арысланы,
Йөзөн күрмеш әдәме
Ғиззәт итәрме* аны;
Ярлыҡасын хаҡ тамам,
Ырыуҙы ҡылмыш әғләдән*.
Заманында ул бәйән,
Хаҡның биргән ҡисмәте*, —
Алып* йөрәкле һиммәте
Халыҡ эсендә ғиззәтле.
Булмыш аның дәүләте,
Арғымаҡтан ат алды,
Сын асылдан зат алды.
Биш пар дөйә йөк артты,
Хан Чынғызға ул барды.

## 1. Бей Туҡсаба уғланы Хан вәзире булғаны

Был хаҡта шулай яҙылған: «Сыңғыҙ хан заманында башҡорт халҡынан Үҫәргән ҡәүемләрендән балалары Мөйтән Туҡсаба балаһына ил халҡы һәр төрлө нәрһә йыйып, ҡайһыларға бер аҡыл зат биреп ханға ебәргәннәр. Ханға барып, үҙенең һуғышһыҙ-ниһеҙ ханға бағынғанлығын белдереп, үҙҙәренең ватаны итеп ултырған Урал, Яйыҡ һәм Һаҡмар һыуының буйларын һәм урманларын вә яланларын, ерләрендә булған алтын-көмөшләрен үҙебеҙгә мәңгегә милек итеп биреп, шул бирелгән ерләргә указ тәсдиҡ итеп алып ҡайтыу өсөн, хеҙмәтендә Сыңғыҙ ханға ҡиммәтле күп бүләкләр тейәп барғас, хан да Мөйтәнде бик ололоҡлап, ҡәҙерләп, апарған бүләкләрен ҡабул итеп алып, Мөйтәнде аҡыллы хисап итеп, фарсатлы* әҙәм тип, үҙ мөддәтендә* ҡайтармай, үҙ ваҡытында ебәрмәй, янынан урын биреп, һәр ваҡытта кәңәшкә алып, Мөйтәнде һынағастын, ахырында Мөйтәнгә бейлеккә указмы биргән. Мөйтән хәренде (бүләкте) алып ҡайтҡан.

Шул заманда Мөйтәнде маҡтап ҡобайыр сығарғандар». XX быуаттың 60-сы йылдарында күсереп алынған был дәфтәр халыҡ хәтерендә Мөйтән бей исемле легендалы ҡобайыр булып һаман йөрөп ятыуында.

[Мөйтән дарьялар кисте,  
Хандың иленә етте,  
Хандың үҙен тап итте,  
Хан уны ҡабул итте].  
Ғиззәтләне аны хан,  
Урын бирҙе яныдан,  
[Теләп уға оло дан,  
Уң яғынан тағыдан*.  
Мөйтән ҡаушап тормады,  
Ханға бүләк һыйлады —  
Маҡтау күрҙе ханыдан,  
Урын алып яныдан].

Нуйындарҙан, бейҙәрҙән,  
Мәҙех* алды барынан;  
Мәҙех алмыш һәм хандан.  
[Урын алғас яныдан,  
Һаны артты яңыдан,  
Даны артты яңыдан,  
Дан вәзирҙәр рәтендән],  
Вәзир ҡылмыш дәртендән,  
[Һорап тормай Мөйтәндән.  
Мөйтән рәхмәт әйткән.  
Вәзир булғас Мөйтән бей,  
Ни теләһәң, шуны кей,  
Ниҙе һөйһәң, шуны ей —  
«Хаҡ, ярлыҡа ханды», — ти.

Вәзир атын алды, ти,
Һулды уңға һалды, ти,
Сапты, беште, янды, ти,
Белмәй алды-ялды, ти].
Ханды дауам күҙәткән*,
Ханды камил күҙәткән,
Мәжлестәрен төҙәткән,
Һәр эштәрен төҙәткән;
Нуйын белән бейләрҙең
Белмәгәнен өйрәткән,
[Тыңламаһа, ханға әйткән,
Күрмәгәнен күрһәткән,
Үҙе ҡырҙан күҙәткән.
Хандың сыҡҡан алдына,
Хандың сыҡҡан һыртына*]:
Ауға барһа, ат тотҡан,
Яуға барһа, тыу* тотҡан —
Хан янынан айрылмай,
Ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән.
Ғиззәт — хөрмәт күп иткән,
«Көйлә», — дисә, көйләгән,
«Сөйлә», — дисә, сөйләгән,
Һәр маҡсудын* ул алған.

## 2. Хан хеҙмәтен бөткәне, Илгә ҡайтып киткәне

Тындырғас хан күңелен,
Һәр маҡсатын, теләген,
[Ханда хеҙмәт иткән һуң,
Ханды хөрмәт иткән* һуң,
Ҡайтып тормаҡ иткән һуң,
Илен ҡормаҡ иткән һуң,
Хандан һораған указ:
«Халҡым бирҙе, — тип, — наказ.
Ҡалды, — тип, — халҡым туҡып,
Ергә, һыуға ал хоҡуҡ!»

Хан биргән, ти, ризалыҡ,
Ханлыҡ мөһөрөн һалып:
«Шунса ҡәҙәр ер бирәм,
Күпме һораһа Мөйтән»].

Хан, Мөйтәнде [бына шулай] бер нисә йыл тотоп, бейлек дәрәжәһе биреп, иленең дау-талаштарын тикшереү өсөн, указ биргән. Бирелгән указда шундай һүҙҙәр яҙылған була: «Мөйтән Туҡсаба балаһына бейлек мансабы* бирелде. Үҙе үлгәс, [уның] балаларының берәйһе бей булыр. Шул рәүештә [атанан — балаға], баланан — балаға бирелеп,

Мөйтән нәҫеленән башҡаға бирелмәҫ. [Һәр даим] шул нәҫелдең береһе, һайланып, бей булыр.

Йәнә лә бейлеге өсөн «Туҡҫаба!» сураһы* бирелде.

Йәнә Мөйтән бей һораған төрлө сәхрә, урман, ер-һыу, төрлө мәғдәнләре берлә түбәндәге ерләргә сик бирелде, тип Сыңғыҙ хан тәсдиҡләне»*[3].

Андан ҡайтып Мөйтән бей
Үҙенең илен биләгән,
[Ер-һыу булгән халҡына,
Сыңғыҙ нисек теләгән].

**3. Мөйтән бейҙең баллары,*[4]**
**Ейән, бүлә, тыуары..,**
**Шунан бире, бүтәне,**
**Кемдәр бары, үткәне...**

Мөйтәндең балалары
Ырыу-ырыу айрылған.

Мөйтән уғлы Үҫәргән[5],
Нәселе булған үҫәрмән*,
Бу заманда дүрт волосы
Үҫәргән исемен күтәргән.

Үҫәргән уғлы Шиғалы,
Ат ябыуы соғалы*,
Ҡылып киткән нәс(е)ленә
Ул да изге доғаны.

Аның уғлы Беҙек бей,
Мәжлестәре төҙөк бей,
Күп мәжлестәр төҙөтөп,
Хандан алған йөҙөк бей.

Аның уғлы Жөрөк бей,
Сапсан аты, йөрөк бей,
Риғәйәтне* бирмәгән
Дошманына ирек бей.

Аның уғлы Урал бей,
Бабасының исеменә
Ул да алған оран[6] бей.

Аның уғлы Толобай,
Сөләймән белә Йософтай,
Ул да булған олуғ бей.

Аның уғлы Уралбай,
Ашъяулығы урамдай,
Бәдәне* симез тулалы*,
Ятса, урындан торалмай.

Аның уғлы Ҡара Буға бей,
Жиһандағы ҡотоплар
Биргән аңа доғаны.

Аның уғлы Ҡарача бей,
Баш салғанлар барча бей.

Аның уғлы Сарыбаш бей,
Һәр ханларға йәнәш бей.

Аның уғлы Байғужа,
Ул да булыр ҙур хужа.

Аның уғлы Ҡаҙаҡсал,
Арҡасы булған ҡарыш ял,

Аның уғлы Ҡаръяу,
Даны жиһанға татыр*.

Аның уғлы Туғмат тархан[7],
Ул да билгеле арыслан.
(Торғаны оло дәүләт)
Улы булған Төкөмбәт,
Һәр шаһларға ҙур һиммәт.
Рөтбәсе* бик ҡиммәт,
Урыны булсын жәннәт!

Аның уғлы Ишбирде,
Ул да урыҫҡа бышҡырды,
Тыу күтәреп, ҡул башлап,
Үҙ оранын ҡысҡырды.

Аның уғлы Ҡотло-Кәрәм,
Ул да исемле әдәм,
Әбдәсетсез* донъяда
Басмады ергә ҡәдәм.*
Аның уғлы Тебсек мәргән,
Ул ясаҡ, улъя* алған.

Аның уғлы Жомаҡай,
Көткән малын бер ҡатай[8].
Бөтмәс дәүләт көткән ул,
Ҡайнап торған болоҡтай*.

Аның уғлы Ҡужанаҡ,
Алтын-көмөш тумалап,
Малдан зәкәт* биргәндә,
Мал хисабын белалмай.
Күңеле белән сығарған
Туҡсан меңгә чамалап[9].
Аның сигез уғлы бар:
Әүәлгесе Аҡбулат,
Алтын тәмәллөк* быуынын,
Ҡында ҡылыс саф булат.

Икенче уғлы Исхаҡ,
Өчөнчө уғлы Исмәғил —
Мәргән ирләр алар да,
Сүздә бәхәс ҡылмағыл.

Дүртенче уғлы Ҡыдыр,
Ете иҡлимне* ҡыдыр.
Әгәр тапсаң андай ир,
Тиәрсез: «Пәйғәмбәр Хызыр».
Мәртәбәсе билгелүк,
Олуғ мансап* ғанҡасы*.
Үзе кантон һәм майор,
Рөтбәсен байҡысы.

Бишенче уғлы Ғабдулла,
Мансабы ирҙе есаул,
Ғиззәт итәрде аны
Кәрәк күрсен ҡайсы ауыл.

Алтынчы уғлы Мәһәди,
Һөнәрдә булған уртараҡ,
Яйыҡ кисеп, ул ята
Йөрөгән икән юртараҡ.
Етенче Кинжәбулат,
Янына булмай юлап,
Чикәсе [унын] бик тар,
Асыуы [унын бик] зур,
Тора лисаны* тулап.

Сигезенче дингә зыя*,
Мулла Хисаметдин аты,
Телдә ҡөрьән ағызып,
Сүзенән баллар татып.
Ҡабул әйләсен хода,
Бәндән* аларға доға.

Һәр йәдкәр* нәселенә
Будыр Төҡөмбәт заты.

Ҡыдыр майор уғланы
Алтау булған булғаны.
Бәйән итәм мораттабасын*,
Алар кем-кем булғаны.
Ғәбделғәфар әфисәр
Ҡылды баҡыйа* сәфәр,
Аның өчөн ул ирнең
Мәҙехе булды мөхтәсәр*.

Икенче уғлы Сәғди,
Ул да булған әфисәр,
Күрке башҡа әдәмдән,
Ул да күчте жиһандан.
Шәрәфетдин — өчөнчө
Ҡаплан кебек әфисәр,
Батырлығы чамасыз.
Алар күткән заманда
Йорт булманы ағасыз.

Дүртенче уғлы Рөстәм,
Эчәге майға бөрөшкән,
Памушник итеп ҡуйғандар
Аның ғаҡылы дөрөстән.
Ул да әфисәр булған,
Дәүләте донъя тулған.
Суңыра зәһәр мәмәте*.
Әжәлгә лә туҡынған.
Бишенче Әбелғата,
Рөтбәсе ҡайда ята?
Алды күпләрдән бата*,
Ҡылсын аңа хаҡ ғата*.
Ул да алған өлөштән,
Балит * һалған көмөштән,
Мундирлары уҡалы,
Хөллә* кеүек нәфистәй.

Алтынчысы Муллағол,
Донъяда юҡтыр гәме,
Күзендән ағып йәше,
Салған мәсжет сары*[10].
[Кемдәр булған ҡалғаны,
Яҙыр заман баллары*,
Кемдә бар тарих сәме,
Кемдә — тарихҡа гәме.
Ваҡыт уҙмаған әле...]

4. **Сыңғыҙ хандың тәсдиғы*,**
**Аҡ бей батша тәсрифы:**
**«Булың, — тигән, — асаба,**
**Ораның дан — Туҡсаба!»**

Йәнә Мөйтән биҙен һораған ергә, урман һәм сәхрәләре, һәр төрлө мәғдәнләре түбәндәге бирелгән ерләр...

...Әүәл Аҡ Иделдең башынан тамағына саҡлы Аҡ Иделгә ҡойған үҙәнләре белән һәм урман вә йылғалары менән һәм Урал тауының көнсығыш яғы Уралға яҡын Ишем ҡушылған һыулар, Ирман, Иртыш тигән үҙәнләр, үҙәнләренә ҡушылған бар йылғалары, урман вә ялан менән, йәнәлә Яйыҡ башы ялпы таулары, Яйыҡдин ике яғы. Ер Яйыҡтың көнсығыш яғы Тубыл һыуына саҡлы һәм Яйыҡҡа ҡойған ни бары һыулар һәм үҙәнләре һәм урманлары вә яланлары, ердән сыға торған мәғдәнләре белән Туҡһаба оранлы башҡортларға күсеп йәйләгән, ултырып ҡышлау урынларын мәңгелек итеп бирелде», тип яҙылған указында[11].

Шунан Мөйтән иленә ҡайтып, илен йыйып уҡып ишеттереп ил халҡын шатландырып, үҙенең билеген үҙенән һуңына балаларының беренә, андан һуң нәҫелләренә мираҫ булып ҡаласағын белдерҙе. Үҙе шул көндән башлап ил халҡының талаш дауларын тикшереп, бик туғрылыҡ менән хөкөм итеп, ил халҡын тынысларан[12].

## Туҡсаба бей уғланы Мөйтән бейҙең нәсәбнәмаһы

Туҡсаба → Мөйтән бей → Шиғәле → Беҙек бей → Жөрөк бей → Урал бей
↓
Толобай бей → Уралбай → Карабуға бей → Карача бей → Сарыбаш бей
↓
Байғужа → Ҡаҙаҡсал → Ҡарьяу → Туғмат тархан → Туҡөмбәт → Ишбирде
↓
Ҡотло-Кәрим → Төбсек мәргән → Жомаҡай → Ҡужанаҡ
↓
Аҡбулат
Исхаҡ
Исмәғил
Ҡыдыр кантон, майор
Ғабдулла
Мәһәди
Кинжәбулат
Хисаметдин

Ҡыдыр кантон, майор →
Ғәбделғәфәр эфисәр
Сәғди эфисәр
Шәрәфетдин эфисәр
Рәстәм эфисәр
Әбәлғата
Муллағол

Үҫәргәндең билдәләре:

Ҡошо — торна,
ағасы — миләш (мышар)
тамғаһы — (ҡойошҡан),
ораны — *«Туҡһаба!» (Туксаба!).*

## 19. МӨЙТӘН БЕЙ

(Һарнау ҡобайыр)

1

Ырыу башы һеҙ бейҙәр,
Олуғ вә зарлы бейҙәр!
Түрҙә ултырған түрәләр,
Урталағы муллалар,
Майҙан тотҡан батырҙар!
Һеҙгә әйтер һүҙем бар.
Һеҙгә һөйләр һүҙем бар.
Әйтер һүҙем шул булыр —
Елгән атҡа тиң булыр.
Аҡ мамыҡтан йөн булыр,
Аҡыллынан йүн булыр,
Аҡылһыҙға ни булыр,
Һүҙ айышын боймаһа?

Тыуғанмын, тип ҡыуанма,
Тыуғас, үлер көн килер,
Малым күп, тип маһайма,
Малың ҡалыр көн килер.
Ярлыға ла, байға ла,
Ханға ла, бейгә лә
Гүргә инер көн килер.
Ә ерҙә һуң ни ҡалыр?
Мал-мөлкәтең мул ҡалыр,
Исем-атың шул ҡалыр,
Сәсәндәрҙән һүҙ ҡалыр,
Уҙамандан дан ҡалыр,
Мөйтән бейҙән шан ҡалыр,
Мөйтән бейҙән шан ҡалыр!

Манғыт улы Мөйтән бей —
Ул да үткән донъянан,
Төмән улы Майҡы бей —
Ул да үткән донъянан,
Ер йөҙөнә килгәндәр —
Бары ла үткән донъянан.

Ерҙе ҡара һыу алған,
Күптәр йәтмәлә ҡалған,
Ер ҡортона әйләнгән,
Ҡулдар ҡуша бәйләнгән.
Шул заманда Мөйтән бей
Ил-йорт биләп йәшәгән,
Йәшен булып йәшнәгән.
Унан Сыңғыҙ хан булған,
Шунан ханлыҡтар ҡалған,
Ер-һыу ҡанға буялған,
Илде ҡара яу алған.
Урал менән Болғарҙы
Сыңғыҙ хан яулап алған,
Яулап алған ерҙәрен
Төрлө уланға бүлгән,
Шул заманды Мөйтән бей
Сыңғыҙға башын эйгән.

2

Хаҡ тәғәлә ҡөҙрәте
Мәҙкүр* итәйем аны.
Илебеҙҙә булған эш —
Борон ханлыҡ заманы.
Башҡорттарҙың бабаһы —
Туҡсаба бей балаһы,
Мөйтән тибеҙ беҙ аны,
Хаҡ яратмыш дананы*.
Күрекле булмыш исеме,
Булмыш ирҙең арыҫланы,
Йөҙөн күргән һәр әҙәм
Хөрмәт итмештер аны.
Алып йөрәкле һиммәте,
Халыҡ эсендә ғиззәте
Булмыш уның дәүләте,
Хаҡтың биргән ғисмәте*.
Арғымаҡтан ат алды,
Төрлө йыһаз, зат алды.
Ете дөйәгә йөк артып,
Хан Сыңғыҙға ул барҙы.
Ханға бүләк һыйланы,
Хандың күңелен ауланы.
Маҡтау күрҙе ханынан,
Урын алды янынан.
Нойондарҙан*, бейҙәрҙән,
Мәдех алды барынан.

Ханды камил күҙәткән,
Һәр эштәрен төҙәткән,
Ҡойон менән бейҙәрҙең
Белмәгәнен өйрәткән.
Ауға барһа, ат тотҡан,
Яуға барһа, тыу тотҡан,
Хан янынан айырылмай
Ҡәҙер итеп бик көткән.
Көйлә тиһә, көйләгән,
Һөйлә тиһә, һөйләгән —
Ханға үтә килешкән,
Маҡсатына ирешкән.
Тамға, оран, ағасын,
Барыһын алған ханынан,
Бейлек тигән исемен,
Ер-һыуҙарын, есемен
Беркеттергән ханынан.
Унан ҡайтып бей Мөйтән
Үҙенең илен биләгән.
Үҙе баш та түш булып,
Теләгәнсә йәшәгән.

## 3

Булған шундай заманы:
Кеше аяҡ баҫмаған,
Ҡоштар осоп етмәгән
Ер-һыу күргән Мөйтән бей,
Һаҡмар менән Һайылмыштан
Данға еткән Мөйтән бей.
Сыңғыҙ хандан ҡайтҡастын
Утыҙ йыл бейлек иткән бей.
Хаким эше тигәндә
Хаҡ һүҙлеһе булған ул,
Үҙ тоҡомо халҡының
Данлыҡлыһы булған ул.
Арыҫландай ажғырып,
Урман-тауҙары ашып
Дошмандарын ҡырған ул;
Яңы ер-һыуҙар яулап,
Үҙ бейлеген ҡылған ул;
Илем, ерем, халҡым тип,
Йәнен фиҙа ҡылған ул.
Нәғрә* орһа, ҡар яуыр,
Теле ҡылыстан үткер,
Әйтһә, һүҙҙәре үтер,
Даны хандарҙан ашыр,
Ғәҙеллектә тиңе юҡ
Олуғ бейҙән булыр ул.

Ошо бейлек исеме,
Оло даны-есеме
Быуын-быуынға күсер,
Йөҙ тамғалы башҡорттар
Уға килеп баш эйер.
Бөрйән, ҡыпсаҡ бейҙәре
Уға килеп ҡул бирер,
Үҫәргәнең үҙ итер,
Дошмандарын ер итер
Мөйтән батыр бей булыр.
Уралында ҡыш ҡышлап,
Һаҡмарында йәй йәйләп,
Өс йылға һыуын һыулап,
Маҙрап йәшәр зат булыр.

4

Булған, тиҙәр, хан Талай,
Данлы булһа ул ҡалай,
Хан булмаһа ла алай,
Унығынан бер талай*
Данлыраҡ булған Мөйтән,
Булғас, булған, ни әйтәң.
Мөйтән бей — башҡорт заты,
Хандай былай соланаты*,
Ҡарағайлы ҡара урман
Һаҡмар буйы мәҡаматы*.
Дүрт ил-йорт башы икән —
Көнө-төнө йоҡо юҡ,
Донъяла батырҙар күп —
Уға еткән батыр юҡ.
Дүрт ырыуҙың исем-аты,
Һәр бейҙең үҙ яҡшаты,
Ырыу башҡа, ҡәүем бер —
Ата-баба башҡорт заты.
Һәр ырыуҙың үҙ яугире,
Ырыу ҡурғау — бар иреге,
Туплам-туплам сиреүҙәре*,
Тирмә-тирмә йорт-ерҙәре.
Бер ырыуы бөрйән булған,
Ағиҙел буйын биләм иткән,
Рәхәтләнеп шунда йәйрәп,
Хеҙмәтен дә бергә көткән.
Икенсе ырыу ҡыпсаҡ булған,
Ырыу башы Бабсаҡ булған,
Ҡыпсаҡ ҡаны Ураз дуҫы
Бабсаҡты сардар* ҡылған,
Дошманын илдән ҡыуған.

Өсөнсө ырыу түңгәүер, ти,
Төп шөғөлө ер эше, ти.
Башлыҡтары Ҡотло Тимер
Көслөләрҙең көслөһө, ти.
Ҡотло Тимер батыр булған,
Дан-ҡеүәте ташыр булған,
Атлап барған көйөнсә лә
Аяғы ерґә батыр булған.
Туғыҙаҡ хан ерҙәрен
Тамъян бей биләгән, ти.
Тамъян ырыу исеме лә
Шунан килеп ингән, ти...
Ул да, таныл Мөйтәнде,
Тыңлаған ул әйткәнде,
Булғанға ул олуғ бей,
Һүҙенән сыҡмаған, ти.
Ере, һыуы, ырыуы —
Булған барлыҡ байлығы.
Йыйын йыйған йәйҙәрен,
Яратҡан ат бәйгеһен;
Һынаштырып билдәрен,
Батыр һайлай, билдәле;
Ҡунаҡ иткән Мөйтәнде,
Ҡәҙерләгән бүтәнде.
Шулай күңел асҡандар,
Шунан зауыҡ тапҡандар.

## 5

**Мөйтәндең батырҙарына әйткәне:**

Башҡорттоң ил-йортонда,
Данлы ҡыпсаҡ ерендә,
Тамъяндарҙың илендә,
Түңгәүерҙәр күлендә,
Бөрйәндәр урман-тауында
Урал тауҙай тау булмаҫ,
Ағиҙелдәй һыу булмаҫ.
Батырҙарым, һеҙгә әйтәм,
Ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ!
Ҡыпсаҡ батыр, һиңә әйтәм,
Бөрйән батыр, һиңә әйтәм,
Тамъян батыр, һиңә әйтәм
Түңгәүер батыр, һиңә әйтәм
Ҡотло Тимер, һиңә әйтәм
Ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ!

— Илгә ҡара яу килә,
Ил-ерҙәр тапап килә,
Уралды алмаҡ итә,
Яйыҡты кисмәк итә,
Иҙелде эсмәк итә.
Ҡаһарман батырҙарым,
Аттарға атланығыҙ,
Сиреүгә тупланығыҙ!
Бар ғәйрәт-ҡеүәт менән
Дошманға ташланығыҙ!
Яуҙарын ҡайтарығыҙ!

### 6

**Мөйтәндең Бабсаҡ батырға төбәп әйткәне:**

Бысаҡ менән хәнйәрең
Икеһе йәнәш ятҡанда,
Уғы менән һаҙағың
Икеһе бергә ятҡанда,
Көмөш һаплы ҡылысың
Ҡыныһында ятҡанда,
Ил-йорттар имен саҡта
Йорт башлығы һин инең.
Исем-атың арҙаҡлы,
Батырлығың данлыҡлы,
Ханзадаға торошло
Бабсаҡ бейем, һиңә әйтәм:
Башҡорт иленә яу килә,
Атыңа һикереп мен, батыр,
Сиреүеңде теҙ, батыр,
Дошманды ҡанға батыр!
Ил күскәндә һаҡ булдың,
Ил эсендә пак булдың,
Һүҙең менән хаҡ булдың,
Уҡ-һаҙаҡ билгә элдең,
Үҙ бурысыңды белдең.
Дошман яуын һиҙгәндә
Күктәй булып күкрәнең,
Ҡара яуға атылғанда
Арыҫлан булып үкерҙең.
Яуға ҡуҙғал, батырым!
Яуҙы ҡанға батырың!

## 7

**Тамъян батырға төбәп әйткәне:**

Тамъян ырыуы башлығы
Мәрҙәс Тамъян батырым!
Яу килгәндә йортоңа
Булмаç сыҙап ятырың,
Ҡулыңа булат ҡылыс ал!
Яу дошманын ҡырып һал!
Бөркөттәй яуға атыл,
Тибеп яу башын килтер,
Йә урынында бөтөр!

## 8

**Бөрйән батырға төбәп әйткәне:**

Бөрйән башы, Бөрйәнем,
Батырҙарҙан бер йәнеш!
Төндә шәмдәй ялҡыным,
Рухыма яҡыным!
Дошмандың ҡотон алыр,
Батырлығың танытыр
Тағы бер яйы төшкәс,
Яуға инер көн килде,
Яуға инер көн килде!
Йәйәңде кирелеп тарт,
Уғың алыр алыçтан.
Ҡылысыңды айҡап сап,
Ярылыр булһын арыçлан!

## 9

**Ҡотло Тимер баһадирға төбәп әйткәне:**

Ҡарт арыçландай үкергән,
Күп эштәрҙе бөтөргән,
Һөңгө-өңгө һындырған,
Ҡылыстан күпте үткәргән
Ил-йортомдоң маҡтанысы,
Ҡан-дошманға ҡурҡынысы,
Ҡонон, ҡотон алыусы
Ҡотло Тимер баһадирым,
Яуға сығыр көн етте,
Ҡоноң алыр мәл етте.

## 10

**Түңгәүер батырға төбәп әйткәне:**

Түңгәүер бейле, батырым!
Уғың дөйә үтә тишмәле,
Ҡеүәтең күктән төшмәле, —
Илдә шундай шаның бар.
Йыйындарҙа һин, даусы,
Яу ҡырында һин, яусы.
Һунарҙарҙа һин, аусы,
Майҙандарҙа һин батыр —
Дошманды ҡанға батыр!
Дошманды ҡанға батыр!

## 11

**Битексеһенә* әйткәне:**

Ҡараңғыла юл табыр,
Кәрәк саҡта һүҙ табыр
Минең йүнсел битексем!
Яман һүҙҙәрҙән ҡурҡма,
Яу килгәндә өрөкмә,
Һунар йөрөгәндә бирешмә.
Бейеңә ярҙамсы бул,
Белеп эшен эшләй бел,
Бойороғомдо үтәй бел!

## 12

**Мөйтән бейҙең ҡарт көнөндә әйткәне:**

Ҡартлыҡ көнөм тыңлағыҙ,
Ҡарый һүҙем тыңлағыҙ,
Оҙон ғүмер һөргәндә
Күргәндәрҙе һөйләйем,
Белгәндәрҙе көйләйем,
Ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ!
Эй, бей заттар, батырҙар,
Йәшлектә — йәшел саҡта,
Яҙыҡ, гонаһ ҡылһағыҙ,
Тәүбәләргә килегеҙ!
Тәүбә иткән — таш ярған,
Тәүбәһеҙҙәр — баш ярған.

Ауыҙың ас — Аллам, тиң,
Күҙеңде ас — көнөм, тиң.
Алты айҙы йәй иткән,
Алты айҙы ҡыш иткән,
Йомортҡаны ҡош иткән,
Ураҙ бейҙең алты улын
Бай вә баймаңлы* иткән.
Кейемдәрен — ебәктән,
Аттарын — арғымаҡтан
Иткәндәре кем? — тиһәң,
Алла булмай, кем булһын!
Япа-яңғыҙ Ҡансураны
Көнө-төнө ялбарһа ла
Бейлегенән яҙҙырған,
Бәйеленән аҙҙырған,
Йәнкәйенән яҙҙыртҡан
Алла булмай, кем булһын!
Аллаға итәғәт итегеҙ,
Донъяны йүнле көтөгөҙ,
Донъянан сауаплы үтегеҙ,
Үтегеҙ, ау, үтегеҙ!
Күгәреп ятҡан күк арҡа,
Мал төбәге туғайың
Аҙыра* ҡалыр малдан һуң;
Биҙәрләнгән* бейбисәң
Ҡурайҙай ҡалыр һулған һуң;
Өҫтөңдәге ҡамҡа туның
Сепрәк булыр туҙған һуң;
Үҙгәйең дә йән биҙерәр
Ғүмеркәйең уҙған һуң.

Ҡуралы буйы ҡыу татыр
Ҡурай булмаҫ, тимәгеҙ;
Ҡыу сыбыҡҡа таянғанға,
Этлек менән туйынғанға,
Милек ҡунмаҫ, тимәгеҙ;
Сереп бөткән байҙарҙы
Һеләүһен баҫмаҫ, тимәгеҙ,
Бей, тигәндең улдары ла
Етем ҡалмаҫ, тимәгеҙ.
Етем, етем, тимәгеҙ,
Етем хаҡын еймәгеҙ*,
Етем хаҡын ейһәгеҙ,
Еңел үтер, тимәгеҙ.
Ҡарыш башлы ҡара ҡорт
Гүрҙә тормаҫ, тимәгеҙ.

Ҡарыш, ҡарыш, ҡарышҡан,
Оҙонлоғон һораһаң,
Ерҙән күккәсә, тиҙәр;

Йыуанлығын һораһаң,
Оло тау саҡлы, тиҙәр;
Теш-тырнағын һораһаң,
Илле арышын*, тиҙәр;
Ауыҙы ни саҡлы, тиһәң,
Алтмыш арышын, тиҙәр;
Ялмауыҙ ауыҙын асһа,
Яман үкерер, тиҙәр,
Гонаһлы бәндәне
Имеп бөтөрөр, тиҙәр,
Гонаһһыҙҙар имен-аман
Йәннәткә үтер, тиҙәр.

Бер һүҙ әйт тә береһен ҡуй,
Көтә булыр тик бер уй:
Ап-аҡ тәнең ҡара гүрҙә
Аҙыҡ булыр ҡарышҡа.
Тәнең серер ыу булып.
Һөйәгең ҡалыр ҡыу булып,
Ҡыу себен һөлдәһендәй, ау,
Ҡыу себен һөлдәһендәй.

## 13

Йөҙйәшәр Мөйтән бей
Донъяларҙан үткән һуң,
Уландары бүленеп,
Ейәндәре айырылып
Тармаҡ-тармаҡ таралған.
Мөйтән уғлы Үҫәргән,
Нәҫеле булған үҫәрмән*,
Һуң заманда дүрт волосы
Үҫәргән исемен күтәргән.
Үҫәргән уғлы Шығалы
Өҫ кейеме соғалы*
Ҡылып киткән нәҫеленә
Ул да изге доғаны.
Уның уғлы Беҙек бей,
Мәжлестәре төҙөк бей,
Күп мәжлестәр төҙәтеп,
Хандан алған йөҙөк бей.
Уның уғлы Йөрәк бей,
Сапсан аты йөрәк бей,
Рәғйәте* бирмәгән
Дошманына ирек бей.
Уның уғлы Урал бей
Бабаһының исеменә
Ул да алған аран бей.

Унын уғлы Толобай
Сөләймән менән Йософтай
Ул да булған олуғ бей.
Унын уғлы Уралбай,
Ашъяулығы урамдай,
Бәҙәне* һимеҙ тулылы*,
Ятһа, урындан торалмай
(ятҡан көйө ҡалала*).
Унын уғлы Ҡарабуға бей,
Йыһандағы ҡотобтар*
Биргән уға доғаны.
Унын уғлы Ҡараса бей,
Баш һалғандар барса бей:
Унын уғлы Һарыш бей,
Һәр хандарға ярыш бей;
Унын уғлы Байғужа,
Ул да булыр ҙур хужа,
Унын улы Ҡаҙаҡсал,
Арҡаһы булған ҡарыш ял.
Унын уғлы Ҡарьяу,
Даны йыһанға татыр*.
Унын уғлы Туғмат тархан,
Ул да билдәле арыҫлан.
Исеме булған Төкөмбәт,
Һәр шаһтарға ҙур ҡиммәт,
Урыны булһын йәннәт!
Унын уғлы Ишбирде,
Ул да урыҫҡа бышҡырҙы,
Тыу күтәреп, ҡул башлап,
Ул да оранын ҡысҡырҙы.
Унын уғлы Ҡотло Ҡәдәм,
Ул да исемле әҙәм,
Тәһәрәтһеҙ донъяға
Баҫмани ергә ҡәдәм*
Унын уғлы Төпсөк мәргән,
Ул үҙенсә улъя* алған.
Унын уғлы Йомабай,
Көткән малын бер ҡатай
Бөтмәҫ дәүләт көткән ул,
Ҡайнап торған балыҡтай.
Унын уғлы Ҡужанаҡ,
Алтын көмөш тумалап,
Малдан зәки биргәндә,
Мал хисабын белалмай,
Күңеле менән сығарып,
Туҡһан меңгә самалап.
Унын һигеҙ уғлы бар:
Әүәлгеһе Аҡбулат,
Алтын тимләк быуынып,
Ҡында ҡылыс син булат.

Икенсе уғлы Исхаҡ,
Өсөнсө уғлы Исмәғил,
Мәргән ирҙәр улар ҙа
Һүҙҙә бәхәс ҡылмаға.
Дүртенсе уғлы Ҡыҙыр,
Ете иклимде* ҡыҙыр*,
Әгәр тапһаң ундай ир
Тейерһеҙ пәйғәмбәр Хызыр.
Мәртәбәһе мансаң ғәнкәһе*
Үҙе кантон һәм майор,
Ниәтен байҡайһы.
Бишенсе уғлы Ғабдулла,
Мәнсәбы* ине есаул,
Ғиззәт итәлер уны
Кәрәк күрһә, ҡайһы ауыл.
Алтынсы уғлы Мәһәди,
Һөнәрҙә булған уртараҡ.
Етенсеһе Кинйәбулат,
Янына булмай юлап,
Сикәһе бик тар, асыуы ҙур,
Тора телкәйе тулап.
Һигеҙенсеһе дингә яҡты,
Мулла Хисаметдин аты,
Телдә ҡөрьән ағыҙып,
Һүҙенән балдар татый,
Ҡабул әйләһен Хоҙа,
Беҙҙән уларға доға.
Һәр йәдкәр нәҫеленә
Былдыр Төкөмбәт заты.
Ҡыҙыр майор уғланы
Алтау булған булғаны,
Бәйән итәм мәртәбәһен,
Улар кем-кем булғанын:
Ғәбделғафар әфисәр
Ҡылды баҡыйға сәфәр,
Мәдехе булды мөхтәсәр*.
Икенсе уғлы Сәғди,
Ул да булған әфисәр,
Күрке башҡа әҙәмдән,
Ул да күркле йыһандан.
Шәрәфетдин — өсөнсө,
Ҡаплан кеүек әфисәр,
Батырлығы самаһыҙ.
Улар көткән заманда
Йорт булманы ағаһыҙ.
Дүртенсе уғлы Рөстәм,
Эсәге майға бөрөшкән,
Памушник итеп ҡуйғандар
Унының ғаҡылы дөрөҫтән.

Ул да әфисәр булған,
Дәүләте донъя тулған,
Аҙаҡ ағыу эскәне
Әжәлгә лә төкөнгән*.
Бишенсеһе Әбелғата,
Ниәте ҡайҙа ята?
Алды күптәрҙән бата*,
Ҡылһын уға хаҡ ғата*.
Ул да алған өлөштән,
Эполет һалған көмөштән,
Мундирҙары уҡалы,
Хөллә* кеүек нәфисле.
Алтынсыһы Муллағол,
Донъяла юктыр ғәме,
Күҙенән ағып йәше,
Һалған мәсеткә ҡарай.

## 20. МӨЙТӘН

Һеҙгә, затлы бейҙәргә,
Олуғ атлы бейҙәргә;
Түрҙәге түрәләргә,
Күреше-тирәләргә:
Уңда ултырғандарға,
Һулда ултырғандарға,
Урталыҡтағыларға,
Хәҙрәт вә муллаларға,
Йыйын күрке һеҙҙәргә,
Рөхсәт итең һөйләргә —
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Борондан килгән ғәҙәт —
Һеҙгә әйтер һүҙем бар,
Һеҙгә әйтер һүҙем бар.
Һүҙем — бер аҙ, күп түгел,
Күҙгә төшөр сүп түгел.
Унан-бынан әйтәмен,
Унан-бынан әйтәмен.
Әйтер һүҙем бик сыбар,
Тыңлағыҙ, ҡылып сабыр.

Ниндәй затлы атың да,
Затлынан да затлың да,
Бер көн һуҙылып ятыр ул,
Ерғә кире ҡайтыр ул,
Нисек ҡырталашмаһын,
Ҡайтмаҫҡа тырышмаһын.

Ағын һыуҙан боҙ булыр,
Һыуҙы ҡыуһаң, тоҙ булыр;
Дымлы ерҙә тал булыр,
Аҡылы бар мал булыр*.
Бер мәл шундай көн тыуыр,
Ул көн барын тиң ҡылыр:
Тупраҡ алыр барын да,
Кем яралған ҡарында,
Хандарын да, бейен дә,
Ҡәҙими әҙәмен дә —
Саҡыртырҙар тегендә*,
Унан ҡалмаҫ бер кем дә.

Был донъяла ни ҡалыр,
Булырлыҡ иҫкә алыр?
Батырҙарҙан дан ҡалыр,
Уғы менән ян ҡалыр,
Быуын-быуын күсмәле,
Алынмаған үстәре;
Иртәк, тарих, ҡобайыр,
Данын мәңге данлар йыр...

Борондан килгән ғәҙәт,
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт!
Сит-ситләп уратһам да,
Һүҙем бей тураһында.
Манғыт[1] улы Мөйтән бей,
Ер йөҙөнән үткән бей.

Ул да үткән донъянан,
Был да үткән донъянан.
Ил артынан ил алған
(Һүҙем түгел һис ялған),
Донъяға баш булам, тип,
Күҙ менән ҡаш булам, тип,
Биләп тотҡан йыһан ер,
Ғәйрәтле ир, йыһангир,
Искәндәр тигән батша,
Бик шашынһа ла башта,
Ул да күскән донъянан,
Бәндәм, һин дә бел саман!

Был донъяла кем ҡалыр,
Кем тыумаған, шул ҡалыр —
Бары ла яҙмыш ҡулында,
Ауырыуын, һауын да,
Шул ауға эләктереп,
Әпкитә ул һөйрәтеп,
Әжәлдең уйынына —

Ҡара ер ҡуйынына
Был донъяла кем ҡалыр,
Ни ҡалмаһын, шул ҡалыр:
Ерҙе ҡара һыу алыр,
Ҡалған яғы ҡыу ҡалыр.
Ошо ерҙә әлегә
Тороп ҡалған — беҙ генә.
Мыр ҡорто һымаҡ, мыжғып,
Ер ҡорто һымаҡ, ыҙғып.

Әйт тә әйт, тип әйтһәгеҙ,
Йә лә йә, тип әйтһәгеҙ,
Мөйтән бейҙер — һүҙ башым,
Мөйтән — илдең күҙ, ҡашы.
Ил башы ине Мөйтән,
Күҙ, ҡашы ине Мөйтән.
Мөйтән ерҙән киткән һуң,
Әхирәткә күскән һуң,
Хан булды беҙгә Сыңғыҙ,
Йөрөмәне ул яңғыҙ.
Һанһыҙ ине нөгәре*,
Ҡанһыҙ ине нөгәре.
Үҙе — хандар ханы ине,
Яулар өсөн яна ине
Үҙе бөтә донъяны,
Киң донъяға һыйманы.
Ул да ерҙә ҡалманы —
Өҫтөн үлән ҡапланы,
Вариҫтары, заттары
Ҡәберен дә тапманы.

Сыңғыҙ китте ҡайтмаҫҡа,
Ҡабат илдәр баҫмаҫҡа.
Тороп ҡалды ханлығы,
Уны алды хан улы.
Булған ул да батырҙан,
Ерҙе ҡанға батырған.
Шул хан алған Уралды,
Анан ары Болғарҙы.
Аның үлерен белгәндәр,
Йыйылышып килгәндәр.
Тапҡан һымаҡ ҙур кеәт,
Биләмәһен бүлгеләп,
Ҡыйышҡандар үҙ-ара,
Ҡыйыралған идара,
Тарҡалған Алтын Урҙа,
Иң аҙаҡ, ҡалып хурға.

Борон-борон борондан,
Борондан да иң алда
Мөйтән кеүек бейҙәрҙе,
Майҡы кеүек бейҙәрҙе,
Ил-йорт бер ҙә күрмәгән,
Күрмәгәс ни, белмәгән.
Улар ҡулдаш булғандар,
Бергә ҡыуған булғарҙы;
Унан ҡыуған ҡалмыҡты,
Булһалар ҙа бик мыҡты;
Шунан, тип, бер ҡыҙғанда,
Ҡотолғандар ҡырғыҙҙан.
Шулар ҡыуған, моғайын,
Башҡаһын вә нуғайын.
Икәүләшеп, иркенләп
Гиҙеп сыҡҡас илде иңләп,
Бүлешкәндәр ер-һыуҙы,
Һис талашһыҙ, һис яуһыҙ.
Мөйтән алған Һаҡмарҙы —
Бар нигмәткә һаҡ барҙы*.
Төйҙәгәндәй төйөлөп,
Ҡарағоштай кәйелеп,
Арыҫландай ажғырып,
Бар көсөнә аҡырып,
Оран һалған ҡалҡынып,
Алдан барып халҡының.

Аҡыллынан аҡыллы,
Булғаны өсөн халҡы уны
Яратҡан да данлаған,
Артынан бер ҡалмаған.
Халҡым, тиеп, Мөйтән бей,
Башын йәлләмәгән, ти.
Илдә булмаһа Мөйтән,
Бөтәр ине ил күптән.
Ҡайтмаҫ ергә киткәстен
Ил ҡашҡаһы* Мөйтән бей,
Ил теҙгене бушаған,
Буш турһыҡҡа оҡшаған.

Ул тыуған алдар* булып,
Тыумыштан сардар* булып.
Ил теҙгенен алған ул,
Барын күреп алдан ул.
Аҙашһаҡ, шундай ирҙәр
Беҙгә сыраҡ иneләр.
Юлыбыҙҙы яҡтыртҡан,
Етәкләгәндәй ҡулдан;
Йә асыҡ ҡапҡа ише
Үтеүгә юлсы кеше.

Мөйтән күрҙе алыҫтан,
Эшен ҡылды яңлышмай:
Ул күрҙе күп ерҙәрҙе,
Ул гиҙҙе күп илдәрҙе.
Әҙәм аяҡ баҫмаған,
Ҡоштар осоп тапмаған
Ерҙәрҙе лә күрҙе ул,
Илдәрҙе лә гиҙҙе ул.
Һаҡмарҙан — һайылмышҡа
Китте ул көнбайышҡа,
Кисте Оло Иҙелде*,
Тын* буйҙарына килде.
Бейе булды Сыңғыҙҙың
Теүәл генә утыҙ йыл,
Беҙгә бирҙе ун йылын,
Өҫтөбөҙҙән бей булып.
Ул булды ғәҙел хаким,
Сығарҙы ғәҙел хөкөм.
Күтәрелде тауҙарға,
Илдә сыҡһа ҙур ғауға.
Арыҫландай үкерҙе,
Ҡасан дошманын күрҙе:
Нуғайҙы ун тамғалы
Ул итте он-талҡаны.
Дошманына ябрылды —
Ҡапыл яуған ҡар булды.
Телгә ул сәсән булды.
Дошманы сәсәр булды,
Үткән кеүек ҡылыстан,
Шулай булды һүҙгә оҫта.

Ул хандан бейек ине,
Хан өҫтөнән бей ине,
Килгәс бары ҡулынан —
Бейлек башланды унан.
Ятты Мөйтән ят күрҙе,
Күрһә әгәр, екерҙе.
Йортон унға еткерҙе,
Йортондағын тиң күрҙе;
Бөтә булған башҡортто
Үҙенә тартып торҙо:
Ҡыпсаҡ, Бөрйән бейҙәре
Бер үк көйҙө көйләне.
Уға килеп, дуҫ булды,
Иш янына ҡуш булды.

Туҙған Үҫәргән илен
Ҡулына алды ирең:

Үҙҙе-үҙе бер ярлы*,
Һигеҙ йөҙ ине бары
Тирмәләренең һаны.
Мөйтән бей китте ары —
Яңы йорттар һалдырҙы,
Ят йөрәген яндырҙы.

Илдә ҡалманы нуғай,
Ҡалмыҡ та бөттө шулай.
Йөҙ тамғалы башҡорттар
Булды илдә башлыҡтар.
Мөйтән ирек бирмәне:
Таратманы тирмәне
(Минең «тирмә» тигәнем —
«Илен-йортон» тигәнем).
Унан көслө булманы,
Халҡы уны тыңланы.
Ҡышын Уралда торҙо,
Ул шулай ҡышлар булды.
Йәйен күсте Һаҡмарға,
Ҡарамайса юк-барға.
Шунда бейә бәйләне.
Шунда ул алды һыуһын,
Эсеп өс йылға һыуын.

## 21. ТҮЛЛЕ МӘМБӘТ

Бисмилләһи-ррәхмани-ррәхим!

Мөхтәрәм атабыҙ Мәмбәт ҡаҙаҡтың Урта Йөҙ Арғын[1] ырыуынан, атаһы [Мырҙабәк][2] Һары Ҡупала Аҡбулат нәҫеленән булып, зат-ырыуы ил-йортта мәшһүрҙер. (Ауылын) Мәмбәт ауылы[3] тип тә әйтәләр, Ҡаҙаҡ ауылы тип тә әйтәләр, Иҫәнғол ауылы тип тә йөрөтәләр. Бөрйән халҡы Ҡаҙаҡ Иҫәнғоло тиҙәр.

1921 йыл октябрҙә Ырыҫмөхәмәт мулланан һорағанымда «Быйыл Мәмбәт атабыҙҙың донъяға тыуыуына 220 йыл була», тине, һәм «вафат 75 йәшендә», тине[4].

[Мырҙабәктең] өс улдары: Байһары, Ҡуйһары, Йәнһары.

### Булһа ла заты ҡаҙаҡ,
### Башҡорт булған ул аҙаҡ

Йәнһары [Мәмбәт], йәй көнө бейәләрҙе һауып ағытҡас, йылҡыларҙы эңерләтеп йөрөгән*. Мәмбәттең тотош көтөү йылҡыларын иштәктең унлап уғрылары[5] килеп ҡыуалағанда Мәмбәт тә йылҡы араһында ҡуша киткәнен күреп, [тәүҙә], уғрылар ҡайтармаҡсы булһалар ҙа, «илгә хәбәр биреп, артыбыҙҙан ҡыуғын төшәр», тип,

Мәмбәттең менгән атының эйәр-йүгәнен алып, йылаҡ бер байталға мендереп, ике аяғын байталдың бауыр аҫтынан бәйләп, йылҡылар менән бергә ҡыуалап, Һаҡмарға алып киләләр.

Иштәк батырҙарының мал алып, улъяланып ҡайтҡанын ишетеп, Һабыр ҡарт [ауылы Һабыр][6] барып бер дуҫына төшә.

— Иптәш, улъянан — һауға!* — тип әйткәс:

— Булыр. Бөгөн ҡунаҡ бул, — тип ҡундыра. Һабыр төндә уянһа, сыуал арты яҡтырып торғанға барып ҡараһа, әлеге Мәмбәттең өҫтө тулы нур булған хәлдә йоҡлап ята. Һабыр был хәлде күргәс: «Был бала бер бәхетле бала икән», тип, йоҡонан тороп ҡайтмаҡсы булғанында дуҫы әлеге Мәмбәтте Һабырға бирә. Һабыр ҡыуана-ҡыуана Мәмбәтте атына меңгәштереп алып ҡайтып, ҡатын-балаларына күргәндәрен барын һөйләп, «Был бала бер өлөшлө бала, яҡшы тәрбиә күрһәтегеҙ», — ти. Шунан ауыл ҡарттарын һәм муллаһын саҡырып, бер ҡорбан салып, «Бына бер бала алып килдем. Был баланың исеме Йәнһары. Мулла, был балаға бер яҡшы исем ҡуш», — тигәс, мулла аҙан, доға уҡып, Йәнһарыға **МӘМБӘТ** тип исем бирә лә, нәҫелең күп булһын, тип доға ҡылалар.

Мулланың шул доғаһы ҡабул булғандыр: 1921 йылда Мәмбәттең был балаларының балалары теүәл 200 өйлө булған ине. 1928 йыл Сәғит [Ҡалтай] ауылында 44 душ [йән] Мәмбәт балаһы бар, Ураҙай [Таңатар] ауылында 22 душ Мәмбәт балаһы бар, Мәмбәт ауылында — 60 душ. Йәмғеһе 126 була. 1921 йыл аслыҡтан бына халыҡ ҡалай үлде!

Мәмбәт Һабыр ҡарт тәрбиәһендә, Һабырҙың мал көтөүсеһе булып, ғәзиз атаның иленән, ер-һыуынан айырылып, төрлө ҡатылыҡтар күреп, әсирлектә ғүмер кисерә. Һабыр уғылдары ҙур кәүҙәле, дыуамал тәбиғәтле, холоҡһоҙҙар, һәр ваҡыт рәнйетеүҙәренә сабыр итә алмай, Мәмбәт Арғынға ҡайтмаҡсы булғанында Һабырҙың балалары: «Әйҙә, Мәмбәт, ҡайтһаң, юлға сығарып ебәрәйек, бына ята юлың», — тип Эйек яғына сығарып ебәрәләр. Мәмбәт юл табып ҡайта алмай, кире Һабыр ауылына килә.

Шулай итеп үҫеп еткәс, Һабыр ҡарт Бөрйән [ырыуы] Йомаш ауылы[7] Йомаш мулланың Һағындыҡ исемле ҡыҙын Мәмбәткә никахландыра.

Туйына тыу бейә етәкләп, күп халыҡ туй һуйырға барғанда Мәмбәт тә кейәү булып, мулла шикелле бара. Кис булғас, анабыҙ Һағындыҡты Мәмбәткә килтереп, башҡорт тәртибе менән ҡулынан Мәмбәткә тотторалар. Мәмбәт шул ваҡытта: «Ай, ҡатыным Һағындыҡ, бармағың йыуан ҡыҫҡа икән. Балаларың, нәҫел-нәсәбең йыйылыштарҙа алға сығып һүҙ һөйләй алмаҫ, һүҙгә тупаҫ булыр. Ләкин балаларың, балаларыңдың балалары ла бай булырҙар. Шул байлыҡтары менән ауылдың башы булып, алдын бирмәҫтәр», — ти.

Мәмбәттең ошо һүҙе фатиха булып төшкәндер: Һағындыҡ балалары ошо көндә йә бай, мулла, йә түрә булып, дәүләттәре менән килдекитте мосафирҙы, фәҡир-меҫкенде, ярлы-ябағаны мәслихәт мәктәптә тәрбиәләп, уҡыттырып килеүсе булдылар. Алла әжерен насиб итһен, амин.

Анабыҙ Һағындыҡты Һабыр ауылына оҙатып алғас, Һағындыҡ килен хеҙмәтен үтәй. Һабыр ҡарт бер ваҡыт Мәмбәткә енси мал тоҡомдары биреп, башҡа сығарғас, Мәмбәт терлек-маллы булып донъя көтә. Малы көндән-көн үҫә, күбәйә. Мәмбәттең байып барғанын иштәктәр күрә алмай, төрлө-төрлө яфалар күрһәтеүҙәренә түҙә алмай, ҡатыны, йәш кенә сабый балалары менән Арғынға кире күсеп, нағыҙ Арғынға етмәй, кейәүгә бирелгән бер апайында ҡыш сығып, яҙ-көҙ малдарын ҡарап йөрөп өйгә ҡайтып килһә, балалары ҡаҙаҡ балаларына эйәреп, бескән аттың инен*, ҡолонлаған бейәнең сыуынын утҡа өтөп ашағандарын күреп: «Һай, динһеҙ ҡаҙаҡ, был динһеҙ ерҙә нәҫелнәсәбемде ҡалдырмам, билләһи, ҡайтып иштәккә күсәрмен», — тип башындағы бүркен күтәреп ергә ора ла ҡатыны Һағындыҡҡа: «Итте көн дә күберәк бешер ҙә бынау һабаға һал, фәләнсә көндә күсербеҙ», — тип, үҙе ҡайтыуға лайыҡлы юл ҡарап, бер тип-тигеҙ сәхрәлә бер ғар (тишек, соҡор) табып ҡуя ла, төндә йылҡыларын көтөп йөрөп килгәс, ҡаҙаҡтарҙың арҡанлы, кешәнле, тышаулы аттарын һәммәһен бушатып ҡыуалап ебәрә лә, апайы Мәмбәттең ҡайтыуға әҙерләнгәнен белеп тирмә өйөнөң ишегенә арҡыры ятҡанын күреп, тирмә өйҙөң артынан ҡырҡып кереп, үҙенә тейеш ҡаралдыларын дөйәләргә артып йөрөгәндә апайы уяна. Мәмбәт: «Ай, апай, ҡысҡырма, атармын!» — тип, уҡ-һаҙағын апаһының күкрәгенә терәп тора. Йән ғәзиз — [апайы], үләргә күнмәй, күҙе баҡрайып ята бирә. Ҡатын-балаларын дөйәләргә мендереп, «Бынау йондоҙға тура ҡарап барығыҙ!» — тип, әлеге ғар-соҡор тарафына ебәрә. Балалары йырағыраҡ киткәнсә апайы илгә хәбәр бирмәһен тип, апаһын уҡ-һаҙағы менән көтөп ҡала ла, балалары камил йыраҡ киткәс, яратып әҙерләгән пар аттарына менеп, балалары артынан киткәс, апайы: «Ай, Мәмбәт китеп ҡалды!» — тип, ай-һай һала. Ҡаҙаҡтар тороп, Мәмбәтте ҡыуайыҡ, тип һырттағы аттарына йүгерешеп барһалар, Мәмбәт күптән алдан уйлап бушатып ебәргән аттарҙы таба алмай аптырап, төндө саҡ үткәреп, йылҡы көтөүе килеү менән ат тотоп менеп алып, Мәмбәттең артынан ҡыуалар. Мәмбәт шул соҡорҙа ятҡанында ҡаҙаҡтар соҡорҙоң йәнйағынан үтеп китәләр. (Был хаҡта:) «Алла һаҡланы», — тип һөйләгән Мәмбәт. Ҡаҙаҡтар өс көн ҡыуып таба алмай ҡайтҡандан һуң Мәмбәт ғарҙан* сығып, Яйыҡҡа етәһең, тип дөйәнең башын тарта биреп, Яйыҡты үтеп, хәҙерге Мәмбәт ауылының ултырған урынында «Биреле күл аралы» тигән ағаслыҡ араһына килеп ҡуна ла: «Балалар, аслан көндөҙ ут яҡмағыҙ, төндә генә яғырһығыҙ», — тип, үҙе ҡуш аттарына менеп, «Был иштәктәр миңә тынyслыҡ бирмәҫ, Аҡ батшаға ҡол булып, ер алайым», — тип, Ырымбурға барып, губернаторға кереп: «Ай, губернатор, мин үҙем ҡаҙаҡмын, Аҡ батшаға ҡол булып теләгән урындан ер алайым тип килдем»[8], — тигәс, губернатор бик яҡшы ҡабул итеп, теләгән урындан ер алырға эт тиреһенә яҙып, мөһөрөн баҫып, ҡулына шаһадатнамә (танытма) ҡағыҙын бирә. Мәмбәт шатланып, шул ерҙән Туҡ, Соран[9] буйҙарын барып ҡарап, ерен яратып, «өс йылға байып, бер көндә ярлы була торған ер икәнһең», тигән. Сәбәбе: терлек-мал өсөн сағылһыҙ ер лайыҡ түгеллектән әйткән тиҙәр. Шунан һуң Эйек[10] буйына килеп ҡарап: «Ай, Эйек,

һыуың да һыу икән, алабың да алаб (ялан) икән,ләкин шулай ҙа булһа һыуың ҙур — урыҫ тиҙ алыр», — ти. Беҙҙең ҡарттар әйтә торғандыр инде: «Беҙҙең был яҡҡа ҡарағанда Эйек буйын урыҫ ҡырҡ йыл элек алды», — тип. Шунан һуң Мәмбәт Ирәндеккә бара: «Ай, Ирәндек, ерең яҡшы браҡ (тупраҡ), аҫтың тулы алтын икән, бер заман арҡаңды сорҡалай тишәрҙәр», — ти. Күҙеңде асып ҡара: Ирәндектең тишелмәгән тауы бармы? Юҡ бит.

Шунан балаларына ҡайтып килеп, бында яңғыҙ тороуы хәүефле булыр, тип, өйрәнгән кешеһе Һабыр янына килеп донъя көтә. Мәмбәт бик шәп байып бара. Иштәктәр күрә алмай хөсидләнеп, бик яфалағас, «Артабан был иштәктәр миңә һәм нәҫел-нәсәптәремә тыныслыҡ бирмәй икән, бер сәсән тоҡомдан ҡатын алайым, Алла тәғәлә бер бала бирмәҫ микән», — тип китеп, Верхне-Уральск өйәҙе Яхыя сәсәндең[11] ҡыҙы Һыйлыҡайға никахлана. Был Һыйлыҡайҙан Иҫәнғол[12] тыумаҫмы, ун ике кантондың өҫтөнән йөрөмәҫме, тип әйтә торғандар ине.

Шунан бер ваҡыт [Мәмбәт] Ырымбурға мал һатырға китә. Самаҙы йылғаһы[13] буйына барып төшәләр. Мәмбәт йылға[ға] тәһәрәт алырға барһа, өс ҡыҙ һыу буйында балыҡ ҡармаҡлайҙар. Бер ҙур кәүҙәле бойора сәсле ҡыҙ ҡармағын һыуҙан алған һайын балыҡ алып ташлай, анау ике ҡыҙҙарҙың ҡармаҡтары алған һайын буш сыға. «Бынау балыҡтың ҡабыуында бер бәхет икән, был ҡыҙҙы мин алайым», — тип, Мәмбәт ҡыҙҙарҙың яндарына барып, «Ҡыҙым, һин кем ҡыҙы, атаңдың исеме кем?» — тип һорап белә лә, хеҙмәтселәренә килеп: «Баҡыр ҡаҙанға ҙур (киҫәк) итте, маҡтаб һалығыҙ, бынау ауылдың муллаһын, ҡарттарын саҡырам», — тип, саҡырып, ҡунаҡ иткәс: «Ай, фәлән ағай, һинең Йомаһултан исемле ҡыҙыңды ҡатынлыҡҡа һорайым, ҡабул итһәгеҙ, ошо мәжлестә мулланан ижаб ҡабул никах уҡытыуығыҙҙы үтенәм», — тигәс, Мәмбәт, әлбиттә, билгеле, бер бай булып танылыуы арҡаһында, ҡыҙҙы бирәләр. Мәмбәттең был тәжрибәһе лә тоғро килә: был Йомаһултандан (тыуған) Күбәк мөәзин булып, Күбәк балаларынан ошо көнгә хәтле биш дана әҙәм имамлыҡ хеҙмәтен башҡармаҡталар.

Мәмбәт Һабыр ауылында донъя көтә. Йылҡы малдары биш-алты йөҙгә етеп, ҡуй, ваҡ-эре малдары ла күбәйеп барыуына иштәктәрҙең эсе бошоп, төрлө яфалар тигеҙеп, Һаҡмар бирьяғында Кәзә башы[14] тигән йылғала йөрөгәнендә, иштәктәрҙең Мәмбәтте үлтерергә мәслихәт (кәңәш) иткәндәрен белеп, Мәмбәткә хәбәр итәләр: «Иртәгә һине үлтерергә киләләр, килгәндә һин өйҙә булма», — тигәс, Мәмбәт урманға ҡасырға әҙерләнә лә ҡатындарына әйтә: «Ай, Һағындыҡ, һин иштәктәр килгәндә фәлән батырҙың ат башынан алып төшөр, Йомаһултан, һин фәлән батырҙың ат башынан алып төшөрөгөҙ ҙә, тиҙәк йәймәләренә иҫке ефәк, тун, аҫыл ҡаралдыларҙың һәммәһен сығарып һалығыҙ, теләгәнен алһындар. Баш һау ҡалһа, мал табылыр, бушҡа йыйылған мал. Фәлән һимеҙ тайҙы һуйып ҡунаҡ итерһегеҙ», — тип, урманға ағас араһына йәшенә.

Бер ваҡыт иштәктәр киләләр. Ҡатындары, Мәмбәттең ҡушыуынса, ҡаршы сығып, [килеүселәрҙе] хөрмәтләп аттарынан төшөрәләр. Батырҙар: «Ай, Мәмбәт ҡаҙаҡ — уҫал, хәйләкәр, әгәр ҙә шулай

итмәгәндә, үлә инең, ярай, бер үлемдән ҡотолдоң», — тип, ҡунаҡ булып, иҫке тундар, ефәк, затлы ҡаралдылар алып, шат булып ҡайталар.

Мәмбәт Бараҡал[15] йылғаһында утар һалып та ҡышлаған, өлкән урманда ҡыш оҙаҡ була, бесән күп кәрәк, тип әйткән. Бараҡалдағы утары Рәхмәт заманында[16] ла булғанын Мөхәмәтйәр ҡарт һөйләне.

Мәмбәт Завод[17] ерҙәрендә лә йәйләп йөрөгән. Завод ерендә хәҙер ҙә бер Аҡса исемле күл барлығын һөйләйҙәр. Мәмбәттең Аҡсабикә исемле ҡыҙынан аталып ҡалған тиҙәр.

Һабырҙа көн итеү бик ауыр булғас, Айыулы[18] йылғаһының буйында Сәнскәнташ тигән ергә килеп, ҡышлаү өй һалып ултырғандар. Көҙ көнө ҡайны-атам Зөлҡәрнәй ҡарттарға барғанымда, «Әйҙә, кейәү, тор, тәһәрәт ал, оло атаң Мәмбәттең өй урындарына барып, көрьән уҡып, рухына бағышлайыҡ», — тигәс, барҙыҡ. Айыулы йылғаһының төньяғында кесерәк кенә бер убаның башында аршын ярым самаһында ултыртҡан таш бар. Ун-ун бер өй урындары бар, шунда ултырып минән: «Йә, кейәү, көрьән уҡы», — тип көрьән уҡыттырып, атабыҙ Мәмбәткә бағышланыҡ. Мостафа бин Аллаяр...

Унан күсеп Айыулы тамағына, Быҙаулыҡ[19] һыуында ултырған Мәмбәттең өйөнөң урыны Ғилажетдин улы Мөхәмәтхандың ултырған урыны, тип Зөлҡәрнәй ҡарт һөйләне. «Яҙ көнө ишек алдында торһам, аръяҡта Мәмбәттең ҡәберендә бер ҡатын кеше ултырып, көрьән уҡып, доға ҡылды. Унан һуң бирге яҡтарҙың йорттарын әйләндереп ҡарап йөрөп, миңә килде.

— Әй, улым, минең атам Мәмбәттең урынында ултыра икәнһең, атамдың урынын һепереп таҙа тота икәнһең, бай булырһың, — тине. — Анау аръяҡта ҡайын аҫтында атамдың йәйлегендә ултырған кем ул? — тип һорағас:

— Бирҙеғол, — тинем.

— Атамдың урынын, һепермәй, бысратып тота икән, ярлы булыр, — тине.

Шул әбейҙең әйтеүе дөрөҫ булды: мин бай булдым, әлеге Бирҙеғол ғүмер буйына ярлы булды, тине [Зөлҡәрнәй ҡарт].

— Инәй, һин кем? — тип һорағас:

— Мин Мәмбәттең Рәхимә исемле ҡыҙымын, бына Яҡуп[20] ауылында Мозафарҙың әсәһе буламын, — тине...»

Бына Мәмбәт ошо ҡатындары менән Айыулы тамағында донъя көтә. Анабыҙ Һағындыҡтан: Сәйфулла бай, Рәхмәтулла бай исемендә ике уғылдары, Алһыубикә, Науруз, Аҡсабикә, Миңлебикә, Хәмиҙә исемләрендә биш дана ҡыҙ балалары; икенсе ҡатыны анабыҙ Һыйлыҡайҙан: Иҫәнғол майор, Ғәбит батыр, Хәбибулла исемдәрендә өс дана уғылдары, Рәхимә исемендә бер ҡыҙы; өсөнсө ҡатыны анабыҙ Йомаһултандан: Иҫәндәүләт есаул, Мөхәмәтрәхим бай, Көбәк мөәзин исемдәрендә өс дана уғылдары була. Йәмғеһе: һигеҙ ул, алты ҡыҙ — ун дүрт була. Шул ваҡытта Мәмбәттең йылҡыһы мең була, ҡуйы ике мең була, дөйә етмеш була, һыйыр ҙа шулай күп. Бик ҙур бер бай булып ғүмер кисерә.

* * *

Инде Мәмбәт шул байлыҡ менән нимә эшләгән, шуны яҙабыҙ. Мәмбәт бер ваҡытта ла муллаһыҙ тормаған. Мәмбәттең муллаһында уҡыған Беренсе Бөрйән Вараш[21] ауылының Ғөмөрҙаҡ исемле шәкерт һөйләне тип, Ғөмөрҙаҡтың Миңһылыу исемле ҡыҙынан тыуған Зөлҡәрнәй ҡарт һөйләне: «Мин яҙ һабанға ҡайтмай Айыулы тамағында уҡып ятам, һабан бөткәс, Мәмбәт бай һәр яҡтағы муллаларға хәбәр ебәрә: «Мин фәлән малымдан зәкәт (налог) бирәм, килеп малымдың зәкәтен алығыҙ», — тип саҡыра. Муллалар килеп йыйылғас, ҡунаҡ итә. Шунан һәммә малдарын көтөүселәренән Айыулының ҡәберлегенең һырт яғы тигеҙ ергә йыйҙырып ҡуя ла, мал килеп бөттө, тип Мәмбәткә хәбәр биргәс, Мәмбәт, муллаларҙы алып малдары янына килә лә: «Ай, муллалар, минең йылҡым — мең баш, дөйәм — етмеш баш, һыйырым — фәләнсә баш. Мин үҙем һис уҡымаған, бер нәмә белмәгән наҙан ҡаҙаҡмын, ошо малдарымдан күпме зәкәт тейешлеген дә белмәймен. Ошо малдарҙың зәкәтен камиллап алығыҙ, ләкин, бай ихтыяр ҡуйҙы, тип, зәкәттән артығын алып, Иншалла ҡашында яуапта ҡалмағыҙ, — ти. — Байҙың күңелен уйлап, малымдың зәкәтен еткермәй алып, Иншалла ҡашында мине яуапта ҡалдырмағыҙ», — тип, муллаларҙың ҡулдарына боғал, ҡороҡ бирәп, малдың араһына керетеп ебәргәс, муллалар һәр төрлө малдан ни саҡлы тейә, тейешле булған ҡәҙәрен алып, аҫау-аҫау йылҡыларҙы ушҡыртып, дөйәләрҙе үкертеп, һыйырҙарҙы баҡыртып, ҡуйҙарҙы мөңрәтеп, алып ҡайтып китәләр», — тип [Зөлҡәрнәй ҡарт] һөйләй торған ине.

* * *

Мәмбәт бер малға ҡарап ятмайынса иген дә сәскән. Яҙ ваҡыт еттениһә, һәр ауылдан башҡорттар орлоҡ һорай килә:

— Бай, мин орлоҡ һорай килдем, орлоҡ бир, — ти.

— Ярай, — ти, келәткә килә Мәмбәт. Бер бот ҡоя, ике бот ҡоя.

— Бай, тағы бер бот ҡой, ерем өс бот һыярлыҡ.

— Ике етәр, һирәк сәс. Һин — сәсеүсе, үҫтереүсе — Алла, — ти.

Тағы килә торған кешенең ишеген бикләп китәйекме, тип, һәр килгән кеше һайын ике боттан биреп тора, — тип баяғы Ғөмөрҙаҡ һөйләгәнен Ғөмөрҙаҡтың ҡыҙы Миңһылыу — Зөлҡәрнәйҙең әсәһе — ишеткән. Зөлҡәрнәй беҙгә һөйләне.

* * *

«Мәмбәт Ҡурғашлы[22] заводының урынында ла ултырған. Унан һуң Аҡсура[23] тамағында Вәкәйҙең урынында ла ултырған», — тип һөйләне Зөлҡәрнәй ҡарт.

* * *

Мәмбәт улы Иҫәнғолдо Түбәнге Һаҡмар буйы Ҡундрау[24] ауылына Ҡараҡай ишанға уҡырға ебәрә. Бер ваҡыт Иҫәнғол ҡайтып килә. Мәмбәт Иҫәнғолдо имам итеп, намаҙ уҡыйҙар. «Алты хаят»ка ултырғас, Мәмбәт ҡарт:

— «Алты хаят»тан элек «Бисмиллаһи рәхмән әл-рәхим!» — тип уҡый. Намаҙҙы уҡып бөткәс, Иҫәнғол:

— Ай, ағә, «Алты хаят»тан алда «Бисмилла» уҡылмай, — ти.

— Әстәғәфирула, хоҙайым, бисмилланың да һыймаған урыны бар икән, — ти Мәмбәт.

Юлыҡта[25] остазыбыҙ Салих ахун хәҙрәт: «Бына һис нәмә уҡымаған наҙан ҡаҙаҡ, шулай була тороп, ҡалай килештереп яуап биргән», — тип, ғәжәп итеп һөйләне.

* * *

Бер ваҡыт Мәмбәттең бер айғыр өйөрө, ҡыҫыр йылҡылары юҡ була. Улы Рәхмәтулла менән эҙләргә китәләр. Барып бер ергә төшә лә: «Баҡырсаға* ярма һалып, өйрә бешер, мин тәһәрәт алып, намаҙ уҡып ятам, үҙем тормайынса мине уятма!» — тип ята. Бер ваҡыт ырғып тора ла: «Тиҙ бул, йылҡылар китеп бара, ҡана, бешкән булһа, ашайыҡ. Бешмәһә, һыуын түк тә ярмаһын ҡуржынға һал», — ти. Китәләр. Барып-барып бер ергә төшәләр. Баяғы тәртип менән Мәмбәт тағы ла ята. Бер ваҡыт ырғып тора: «Тиҙ бул, байталдарҙың береһе һаҙлыҡта батып ята!» — тип, сабып китәләр. Барып йылҡыларҙы табалар, ләкин байталдарҙың береһе юҡ. «Ошо ерҙә булырға кәрәк», — тип эҙләп, Таналыҡ башы Талҡаҫ[26] күленең түбән яғы һаҙлыҡ араһынан батып ятҡандан табып алып ҡайтҡан. Мәмбәттең улы Рәхмәтулла шулай һөйләне тип, Мөхәмәтйәр ҡарт һөйләне.

* * *

Мәмбәт ҡунаҡ һөйөүсе лә булған. Олоғ уғлы Сәйфулланың Ҡыуандыҡ[27] исемле уғлы бер ваҡыт бай булып, түрә лә булғас, килгән мулла, түрә, ваҡ-эре ҡунаҡтар Ҡыуандыҡҡа төшәләр. Мәмбәт ҡунаҡһыҙ ҡала. «Ай, Ҡыуандыҡ, ҡунағымды тартып алдың, мин ҡунаҡһыҙ ҡалдым, янымдан күс, бында килгән ҡунаҡ миңә төшәр, унда барған ҡунаҡ һеҙгә төшәр», — тип, (Ҡыуандыҡты) Быҙаулыҡ һыуының мәшриҡ (көнсығыш) тарафына күсерә. Ҡыпсаҡ[28] ауылы түбән яғындағы «Ҡыуандыҡ ҡыйы», «Ҡыуандыҡ уры» шунан ҡалған. Байлыҡ ҡунаҡ һөйҙәрә, фәҡирлек ҡунаҡ биҙҙерә.

* * *

Быҙаулыҡ һыуы ҡыш ваҡыт шәре сығып, малға һыу эсерергә яйһыҙ булып ҡалғанлыҡтан, хәҙерге Мәмбәт ауылының ултырған урынында, «Биреле күл» аралына утар һалып, малын шунда ҡыш-

латҡан. Ул утарға Ғабдулла Теләүембәтовты баш итеп ҡуйған. Ҡыш көндәрендә иртәнге мал һуғарыуға Айыулы тамағынан Мәмбәт ошо утарына килеп, Ғабдулланың мал тәрбиәһен һәм Таналыҡ һыуында яһаған мәкеһен күреп, шул ыңғайы бында төшмәҫтән Айыулыға ҡайтып, Айыулылағы хеҙмәтселәрен орошоп, «Мал тәрбиә итә белмәйһегеҙ, ана, Ғабдулланың мәкеһен барып күрегеҙ», — тип донъяны дыу килтергән.

* * *

Мәмбәт, мал ҡарап төшөнһөн тип, Иҫәнғолдо йылҡы ҡарарға ҡуша. Йәй көнө иртә менән йылҡыларҙы алып килгәндәрендә, Мәмбәт малға ҡаршы сыға. [Сыға ла:] «Ай, фәләнсә өйөр йылҡы юҡ. Ҡайҙа ҡалды?» — ти. Иҫәнғол яуап бирмәй. Артабан ҡасып йөрөй. «Һай-й, Иҫәнғол, мал көтмәҫһең, кеше көтәрһең», — ти [ҙә Мәмбәт], — Аттан төш, аттан төш, — тип, аттан [уны] төшөрә.

Мәмбәттең әйтеүе тоғро килгән: мосолманса һәм урыҫсаһын да отоп, бер заман Иҫәнғол түрә булып, бара торғас ун ике кантон өҫтөнән ҡарап йөрөй торған бер контроль[29] булып хеҙмәт итә.

* * *

Һауынсылар бейә һауа сыҡҡанда Сәйфулланың ҡатыны күнәк төбөнә ҡымыҙ ҡойоп, бейә һауған ерҙә бейәләр араһында эсеп йөрөгәнен күреп: «А, ҡомһоҙ, балаларың фәҡир булыр», — ти. Әйтеүе тоғро булғандыр, беҙҙең ваҡытта ла Сәйфулла балаларының еле ҡатып, ҡолон бәйләп, бейә һауғанын күрмәнек. Бына «ата доғаһы — пәйғәмбәр доғаһы» кеүек тигән һүҙ шундай була.

* * *

Мәмбәттең өс ҡатындары бәғзе ваҡыт даулашып киткәндәрендә: «Ай, ниңә даулашаһығыҙ?! Мин һеҙләрҙе ҡатынһырап алғаным юҡ! Миңә яңғыҙ ҡатын да етә. Һеҙләрҙе, нәҫелем күп булһын тип, алдым», — тигән. Бына был һүҙе лә тоғро килгән: Мәмбәттең нәҫеле ошо көндә ике йөҙ өйлө булғанда, Мәмбәт менән бергә килеп, бергә йәшәгән Ғабдулла балалары ошо көндә булғаны һигеҙ өйлө.

Мәмбәт, ҡандай ҙур бай була тороп та, ҡот-садихты (ҡот-ырыҫты) урта торош, исраф итмәй тороуына һөйөп-яратып:

Тартай ейһәң, тай ҡалыр,
Бейә бирһәң, ни ҡалыр;

Тағы:

Атың ебер (убыр, ашамһаҡ) булһа, бирҙе Хоҙай,
Ҡатының ебер булһа, орҙо Хоҙай, —

тигән бөйөк фекер менән иҡтисад (һаҡсыллыҡ, экономия) хаҡында һөйләгән түгелме?

* * *

Мәмбәт Таштуғайҙың һыуын, яланын, туғайын, тауын, ағасын, төрлө емештәр, еләк булған ҡоҙоҡ-йылғаларын күреп: «Егәре бар* ир, ниндәй генә йот булһа ла, йүгәнен тотоп ҡалмаҫ», — тигән.

Мәмбәт был Алатауҙың[30] ҡарағайынан бура буратып, өй һалдырған. Был өй Мәмбәттең улы Ғәбит батырҙың[31] Ғилман исемле улының балаһы Сәйфуллала хәҙерге көндә лә бар. Элек Мәмбәттең келәте булған, ике мәртәбә кесертеп* өй иттеләр, ти. Мәмбәттең өйөнөң урыны мәсеттең ихата ишегенән сыҡҡан ерҙә генә бер һары балсыҡ ятҡан ер, тип Мөхәмәтйәр ҡарт һөйләне.

* * *

Мәмбәт Турат ауылы Иләс[32] ҡарттың ҡиәмәтлек үкел кейәүе булған. Икәүһе ер бүлешкән. Мәмбәт: «Ҡайным, тәүҙә һин ал», — тигән. Шул ваҡытта Иләс Турат (йылғаһы) буйын алған. «Ай, ҡайным, әүәлдә һайлауҙы һиңә ҡуйғайным, ерҙе ала белмәнең», — тип, Мәмбәт, ахырға ҡалһа ла, Таштуғайҙы[33] алған. Иләстең Таштуғайҙы алмауының сәбәбе: ул заманда ҡаҙаҡ менән иштәк бер-береһенә яу булған. Таштуғай ситтә булғанлыҡтан ҡурҡыныслы булһа ла, Мәмбәт үҙе ҡаҙаҡ нәҫеле булғанлыҡтан, ҡаҙаҡтан хөрөф итмәй (ҡурҡмай) Таштуғайҙы алған.

* * *

Мәмбәт, был ер һәм байлығы өсөн иштәктән күп йәбер-яфа күреп, туҡмалыуынан ауырыу булып, 75 йәшендә Алланан тәҡдир ирешеп, фани донъянан әхирәт йортона күсә. Ай, Мәмбәт атабыҙ балаларының динен һаҡлап Арғындан бында күстек, Һаҡмарға күстек, Һаҡмарҙа иштәк тыныслыҡ бирмәгәс, балаларҙың тыныс йәшәүен уйлап, Айыулыға күстек. Айыулынан ер һайлап, Таштуғайға күсеп, төрлө михнәт сигеп, яфа тарттыҡ. Алла кәрим рухлыны бөйөк итһен. Амин.

* * *

Мәмбәттең вафаты Айыулыла булып, ҡәбере Айыулы ҡәберлегенең мәшриҡ (көнсығыш) тарафында, ауыл яҡ ситтә, борон бүрәнәнән бураулы булып, йәй көнө ут сыҡҡанда бураһы янып китте, ти. «Әйҙә, кейәү, оло атаң Мәмбәттең ҡәберен күрһәтәйем. Барыбер, мин үлһәм, уны белгән кеше юҡ», — тип, килеп күрһәтеп, ҡәбере өйөлгән, билдә итеп Айыулы йылғаһынан йоҙроҡтай өс аҡ таш һалып, ҡөрьән уҡып, сауабын рухына бағышлап ҡайттыҡ. Ул ҡәберҙе мин шул ваҡытта танып ҡалдым.

* * *

Мәмбәттең Алсыубикә исемле ҡыҙы — Һултаста[34], Аҡсабикә — Вәлиттә[35], Миңлебикә, Науруз — Бөрйән Шәһәрғәли улында булғандар. Хәмиҙә — Бөрйән Ярат[36] ауылында мәхтәсиб никахында булды, Ғәбделхалиҡ Әхмәров фамилиялы мәхтәсиб (мулланан өҫтөн дин әһеле). Хәмиҙәнең улы Тубар Ғиналдинов. Ғиналдин ҡарт көнөндә Юлыҡ мәҙрәсәһендә булды. Йыуан ғына, сәсән һөйләшкән кеше ине.

Юлыҡ һыуында Бөрйән Исмаҡай[37] ауылының Хәлилулла исемле бер ҡарты етмеш йәштәрендә Юлыҡ мәҙрәсәһендә булды. «Ошо Мәмбәттең Миңлебикә тигән ҡыҙының уғлы мән туған икәнһең», — тип, миңә яҙ көнө өс һыҙырма уҡ* яһап биргән ине. Миңлебикәнән йәнә беҙ бала саҡта Ғәбделнафиҡ муллаға Мостафа тигән бер мулла килә торған ине. Уның улы Хәмит мулла, уның улы Риян муллалар була. Бөрйән Шуралыла[38] Көсөкбай ағай, уғыллары Мәхтүм, Һабилмуллалар — Миңлебикә балалары, Бөрйән Баймырҙа[39] ауылында Фазила анам мөхтәсиб нәҫеленән була.

Рәхимә Түңгәүер волосы Яҡуп ауылында булған.

**Мәмбәт**

| Һағындыҡ | Һыйлыҡай | Йомаһултан |
|---|---|---|
| Сәйфулла бай<br>Рәхмәтулла бай<br>Алсыубикә<br>Науруз<br>Аҡчабикә<br>Миңлебикә<br>Хәмидә | Исәнғол майор<br>Ғәбил батыр<br>Хәбибулла<br>Рәхимә | Исәндәүләт<br>Ясауыл<br>Мөхәмәтрәхим бай<br>Көбәк мәзин |

## Мәмбәт менән Сағындыҡтан тыуған Сәйфулланың уғлы Ҡыуандыҡтың батыр булғаны тармаҡ-тармаҡ зат ҡалдырғаны

Мәмбәттең өлкән улы Сәйфулла[40] бай тип һөйләйҙәр. Был Сәйфулланың Вәли, Ҡыуандыҡ, Хисаметдин исемдәрендә уғылдары булған. Вәлиҙән — Абулҡасим, Ҡасимдан — Ибраһим, Ибраһимдан — Харис, Зариф, Хәсән, Ғәбделмән. Харистан Мөхәммәд исемендә бер генә бала бар. Зарифтан нәҫел юҡ. Хәсән мал, ит сауҙаһы менән яҡшы ғына бер кеше булып килгәндә ҡырҡ йәштәрендә вафат, ҡәбере Мәмбәттә. Ике уғылдары: береһе — Шәкирйән, атаһы йортонда йәшәй, кәсепле генә күренә инде, туфраҡ айырһын; Ғәбделмән герман һуғышында вафат булды, ҡалған урыны мәғлүм түгел.




* * *

Ҡыуандыҡ байлығы өҫтөнә уғры ла, батыр ҙа булып, егерме йыл старшина булып ғүмер иткән. Ҡыуандыҡ бала замандарында Иҫәнғолдар менән уҡ-һаҙаҡ атышып йөрөгәндә: «Ай, Ҡыуандыҡ, миңә ҡарап керпегеңде ҡаҡмай тор, башыңдағы түбәтәйеңдән үтә атам», — тигәндә Ҡыуандыҡ ҡаршы ҡарап тора, Иҫәнғол түбәтәйҙән үтә атып ебәрә. Бына Ҡыуандыҡ батырҙан түгелме?!

Ҡыуандыҡ ҡаҙаҡ яғына уғрылыҡҡа сыға. Яйыҡ буйына барып, тәһәрәт алып, намаҙға керешә. Ике ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ килеп, намаҙҙан бушаныуын көтөп тороп, сәләм биреү менән ҡаҙаҡтар Ҡыуандыҡтың кейемдәрен сисеп алып, арҡан менән аяҡ-ҡулдарын бәйләп, нығытып, ҡыбырлаһа — төшкәндәй итеп, яланғас [көйө] Яйыҡ ярының

башына ғына һалып китәләр. Күгәүен, серәкәйҙәр бәйле ятҡан Ҡыуандыҡты ашай башлағас, тулайым тиһә, Яйыҡҡа төшөп бара. Шунан ҡаҙаҡтарға ҡысҡыра: «Йә, мине былай яланғас таштағанса, үлтереп китегеҙ!» — тигәс, ике ҡаҙаҡтарҙың береһе дөп-дөп юртып килә лә бәйләгән ептәрҙе аҙыраҡ бушатып китә. Шунан Ҡыуандыҡ арҡандан бушанып алып, ат, эйәр, кейемһеҙ, яп-яланғас йөрөп, төндә бер ҡаҙаҡ ауылына барып, ситтәге бер өйҙән ҡаҙаҡтың кейемдәрен кейеп алып, ауылда бер туй булып, халыҡ тотош шул мәжлестә икән, Ҡыуандыҡ шул мәжлескә барып, туйында ҡаҙаҡтың бер атын менеп алып, бер талай йылҡыларҙы әйҙәп илгә килә. Бына Ҡыуандыҡ батырлығы!

* * *

Бөрйән Мансур[41] ауылынан ҡунаҡтар Ҡыуандыҡҡа килеп төшәләр. Ҡыуандыҡ тәпәндең ауыҙын асып ебәрһә, тәпәндә ҡымыҙ әҙ генә ҡалған икән. Бер туҫтаҡҡа ҡымыҙҙы ҡойоп: «Йә, ҡунаҡтар, бата ҡылығыҙ», — тип, бата аяғын эсеп ебәрә. Йәнә бер туҫтаҡ ҡойоп алып: «Мыныһы һалыу аяғы!» — тип эсеп ебәрә лә: «Ҡунаҡтар, һеҙгә хуш, инде әйҙәгеҙ, һеҙҙе Рәхмәтулла ағайым көтөп тора», — тип Рәхмәт ҡартҡа алып бара. Шунда бөрйән ҡунаҡтар: «Һай, Ҡыуандыҡ, батырлығын да батыр икәнһең!» — тиҙәр. Мөхәмәтйәрҙән ишеттем.

* * *

Ҡыуандыҡ батырҙың балалары: Шаһимгәрәй, Динмөхәмәд, Мөхәмәтдин, Мөхәмәтшәриф, Мөхәмәтхәсән, Әбүлхәсән. Шаһимдан — Исхаҡ, Мәхзүм. Исхаҡтан Зәйнулла исемендә бер уғыл сабуж ине, 1912 йылдарҙа булһа кәрәк, һабан кәсебендә Бикет[42] хуторында Башинков балаһы Бориста йөрөгәндә шунда үлтерелде. 35 йәштәрҙә булһа кәрәк. Мәхзүмдән бала юҡ. Шаһимгәрәй нәҫеле донъяла юҡтыр.

## Динмөхәмәт

Динмөхәмәт (Ҡыуандыҡ уғлы) борон Кинә Һары[43] ғәскәр йыйып, хөкүмәт — бадша илә һуғышып, Яйыҡ казактарын[44] талап йөрөгәндә, хөкүмәткә ғәскәр булып, Кинә Һарыны ҡыуып киткәндәр. Кинә Һары ғәскәре Ҡомаҡтың[45] һыйыр көтөүҙәрен алып киткән. Шул көтөүҙе ике көн ҡыуып барып, алып килеп биргәндә, һыйырҙарҙың имсәгенән һөттәре саптырып йөрөнө, ти.

Шунан Кинә Һары ғәскәре ҡасып, хөкүмәт ғәскәре ҡыуып, улар беҙгә һыу бирмәй, бәғзе ваҡыт ике ғәскәр ике күлгә төшөп ҡунабыҙ. Шул ваҡытта төндә түрәләр: «Кинә Һары ғәскәре килеп баҫмаһын,

иткан урыныбыҙҙы белмәһен, ҡысҡырмағыҙ, ҡысҡыртып һеңгермәгеҙ», — тип тыйып йөрөгәндә, Динмөхәмәт эйәренең өҫтөнә менеп, шәп итеп аҙан уҡығанда Динмөхәмәт яңғыҙ өҙгөләнә:

— Уҡығанда, әкрен уҡыһаҡ та ярар, — тигәндә:

— Ярар, үҙегеҙ урыҫ булғанығыҙ, инде мине урыҫ итмәксе булаһығыҙмы? — тип (әйткәне өсөн), дүрт ай буйына ҡыуып тишелгән тауҙы[46] үткәреп ҡайтҡанда, бер ваҡыт та намаҙын ҡалдырмай йөрөгән.

Инде бер төндә, батша ғәскәренең 20 кешеһе ҡарауылда йөрөгәндәрендә, һәммәһе аттан төшөп йоҡлағандарында, егермеһен дә Кинә һары ғәскәре үлтереп киткәндәр. Иртә менән үлектәрҙе тикшереп йөрөгәндә вожак (етәксе, башлыҡ), йәғни башсы булып йөрөгән ҡаҙаҡ та шунда үлтерелгән. Шул ҡаҙаҡты күреп, Динмөхәмәт:

— Ай, Ҡужаҡан, үлеп ҡалдыңмы? — тип ай-хай һалғанда:

— Был Ҡужаҡан кем ул? — тигәндәр.

— Иҫәнғолда хеҙмәтсе булып йөрөгән ине, — тигән. Айыулы тамағы [ауылынан] Зөлкәрнәй Эрсәнбәтов ҡарт та шунда булған. (Шул) һөйләне. Хәҙерге кеше үҙенең йылы өйөндә лә муйынында беренсе нәмә [бурыс] — намаҙын уҡымайҙар. Боронғоноң наҙаны хәҙергенең муллаһынан артыҡ.

Был Динмөхәмәттән биш уғыл була: Таһир, Мәжит, Ғәбит, Сабит, Хәмит батыр. Был Таһирға «Тәмәкесе Таһир» тип исем биргәндәр. Таһир балта оҫтаһы ине. Таһирҙан — Муллахәлит, Хәлит бер бәләүә, бушаҡлау ғына ине. Әхмәт байҙың кантурында эш эшләргә килгәс, кантурщик Шәкир:

— Ай, атың кем? — тигәс:

— Атым — Көрәш ҡашҡа, — тип менгән атының исемен әйткән был Муллахәлит.

Өс уғылдары ҡалған ине. Егерме беренсе йыл Ҡалтай (Сәғит) Сәлимйәндең ҡуй көтөүенән ун һигеҙен берсән ҡасаб ҡылып (һуйып), һуғыш ваҡыты йәнә тотолоп, Питрак отряды тарафынан Фидерски[47] урманы араһында үлтерелделәр. Бер генә балаһы донъяла ҡалды.

Мәжиттең вафаты Аҡъярҙа[48] булһа кәрәк. Мәжиттәрҙең әсәһе Әлифә әбейҙе күрҙем. Түңгәүерҙән. Мәжиттең Ғиззәтулла исемендә бер генә уғлы молотилка ташы яһап йөрөгәндән «Ташсы Ғиззәт» ләҡәпләнеп вафат булды.

Ғәбит борон әрме хеҙмәттәрендә йөрөп килеп, ҡатыны ла юҡ, күҙе лә насар ғына. Йәй көнө көн буйына ҡымыҙ эсеп, төн буйына ҡуй көтөп: «Ҡорһайт! Ҡорһайт!» — тип ҡысҡырып төн кисерә ине.

Сабит ғүмер буйына байҙарҙа хеҙмәтсе, ялсы булды. Дәмим исемле бер уғлы донъя көтөп йөрөгәндә вафат. Бөрйән (волосы) Йүкә ауылында Ҡазбаков ҡурайсыла бер ҡыҙы бар. Сабиттың ҡатыны Бәширә Иҙел[49] ауылынан. Сабит үлгәс, Бәширә духтырниса (табибә) булып, ҡан алып, яҡшы ғына, туҡ ғүмер үткәрҙе.

Хәмит батыр Күк бесән, Самара[50], Иҫке хутор (яҡтарында йөрөгән). Яңы килгән заманда бер мужик Таналыҡ тамағына барып, йәйәү ҡайтып, йәй көнө ауылды үтеп, яңы Сәүел үҙәкте үткәреп, Сара[51] яҡтан Бикмөхәмәттәр менән барып, иман уҡыу тип күсеп баралар

икән. Хәмит барып етеү менән, иман килтергәс, үлтерергә ярамай бит, тип суҡмар менән баш һөйәген ырғыта һуғып, Миңлеаяғыһынған буйына ташлағандар. Рустар эҙләп табып алдылар.

Хәмиттең Рәхмәтулла, Әхмәтсафа, Мөхәмәтсафа исемдәрендә уғылдары булды. Был егеттәр ҙә атаһы кеүек батыр булмаҡсы булып, 1921 йыл Сәйфулла Кәиповтың бер бейәһен һуйып, Туржы башы яңғыҙ бешәлә табып алып, был Рәхмәт менән Әхмәтсафаның һөйәктәре лә Фидерски урманында ҡалдылар. Мөхәмәтсафа донъяла арлы-бирле йөрөй. Улар тамам.




* * *

Мөхәмәтдин Ҡыуандыҡ улынан — Хөбби, Вәлит, Ғосман. Хөббиҙән — Собханғол, Ҡорбанғәле суфый. Собханғолдан нәҫел юҡ. Ҡорбанғәле ике күҙһеҙ булып, Аҡъяр Мөфтәхетдин хәҙрәттә уҡып, яҡшы ғына булып, Ҡолбирҙе[52] ҡариәһенән ҡатын алып, шунда вафат, ҡәбере лә шунда.

Вәлит үҙ кәсебе менән ашап, ғибәҙәтле бер кеше, һикһән йәштәрендә микән — 1907 йылдарҙа Ҡалтайҙа йәйләүгә килгән йылы вафат. Мәмбәткә ҡуйҙылар. «Вәлит күле» ошо кешенән ҡалған исем. Рахманғол, Иҙрис, Хәсән (тигән) уғылдары булды. Рахманғол да, атаһы кеүек, әҙәмгә зарары теймәгән бер кеше ине, ҡылтамаҡ ауырыуынан вафат булды. Ҡәбере Сәғиттә. Сәйфулла заманында бер уғлы Сәғит ауылында атаһының тәрбиәсеһе була, бер ун биш йәштәрҙә уғлы менән бергә.

Иҙрис 13—14 йәшле ике уғылдары менән 1921 йыл аслыкта һәләк булдылар. Хәсән дә ете-һигеҙ эре маллы, шәп. Ағайы Иҙрис кеүек һәләк булып, икеһенең дә катындары, тыу бейәләй, уйнаклап йот йылын үткәрҙеләр. Аҙ ашаһаң, күп ашарһың, күп ашаһаң, ни ашарһың, тигәндәр.

Ғосмандан — Котлоәхмәт, унан — Ғатаулла. Былар ҙан нәҫеле юк. «Котлоәхмәт каракыуғаһы» — ошо кешенән калған исем.




* * *

Мөхәмәтшәриф (Кыуандык улы) ҙур кәүҙәле, балуан кеше булған. Иҫәнғол түрәгә килеп тә ғәйепле булып, язаға тейеш булған кеше язаһын Шәрифкә бирҙерткән. Мөхәмәтшәриф бөркөт тотоп, каҙак яғына сығарып һатып, шуның менән кәсеп итеп йөрөгән. Үлмәҫкә үле балык.

Мөхәмметшәрифтең Баһауетдин, Вәли, Ғәли — өс дана уғылдары булған.

Баһауетдин ҙур кәүҙәле булып, борон, йәш вакытында, көрәшкә шәп булғанын һөйләйҙәр. Карт көнөндә балык аулап йөрөгәнен беҙ ҙә күрҙек. Балык кармаклағанда, кармакты һалғанда:

Минең кармағым түгел,
Баһау карттың кармағы, —
тип һала торған инек.

Яҡшыбикә исемле әбейенән Аллағол, Хәйретдин, Ғәйнетдин — өс дана уғылдары булды. Яҡшыбикә әбейҙең Түңгәүер Ғәбделкәрим[53] ауылының аръяғында урман эсендә булған Шәрип исемле ҡарт ағаһын күрҙем. Ишан хәҙрәт өйөндә ваҡытта.

Баһау бесән сабыуға шәп булған. Иҫке яҡҡа барып, бер бесән өмәһендә өмәгә сыҡҡан. Иҫке яҡтың шәптәре, алдан өс кеше төшөп, сабып киткән. Шунан Баһау төшөп, бер йөҙ сажин барғас боролоп үтеп, алға төшөп киткәс, Иҫке яҡтың шәптәре, намыҫ итеп үпкәләп ҡайтып киткәндәр. Баһау өлөш һөйәгенә бейәнең һебәһен алып ҡайтҡан.

Ауылыбыҙҙың Ғималетдин муллаға Таңатар төбәге тейгән. Шуны сабырға Баһауҙы яллап төшөргән дә Ғималетдин ҡайтҡан. «Иртән килмә, бөрҫөгөн (иртәнән һуңға) кил», — тигән [Баһау]. Мулла килә. Баһау әлеге төбәкте бөтөрөп ҡуйған.

Аллағол йәш ваҡытында Ҡалбаҡ[54] ҡалаһында эш эшләгән. Шунда урыҫ байҙарына көнөгө ялланып* сапҡанда урыҫ байы:

— Аллағол, ураҙа тотмай сап, көнөнә бер һум бирәм, — тигән. Аллағол:

— Эй, һинең бер һумың өсөн ауыҙымды асмайым, ураҙа булһам да һинең урыҫтарыңдан ҡалмам, — тип, көнө буйына күмәк кешеләр менән талашып сапҡанда, һис бер ваҡыт ураҙаһын ҡалдырмағанын юлдаштары һөйләйҙәр. Харис Ибраһим улы һөйләне. Борон кеше юғарынан (Алланан) ишеткәнен тотҡан, хәҙерге кеше үҙе күреп белһә лә тотмай.

Аллағолдоң Шәрәфетдин исемле уғлы сауҙагәр булып, яҡшы ғына тормош күреп тора. Ҡатыны Зәйнәп Ислебташ (?) Һәйетбаттал ҡыҙы ине.

Хәйретдин здарауай кеше. Бының кәсебе балыҡ булды. Аҡъярҙа тороп, шунда вафат, Ғәйнетдиндең ләҡәбе «Балыҡсы» ине. Унан да уғылдар ҡалманы.

* * *

Вәли (Мөхәммәтшәриф уғлы) мулла Мәмбәттә һәм ҡаҙаҡта ғүмер буйына балалар уҡытҡан. Аяҡтан зәғиф. Яр ҡабаҡлы, ярһыу кеше ине. Ҡатынын Бибиһан тип йөрөткәндәр. Ул мулланың Мөхәмәтшакир, Мөхәмәтсадиҡ исемле уғылдары. Шакир ҡаҙаҡта балалар уҡыта, ярһыу, һүҙгә шәп, ғибәҙәтле кеше. 1921 йыл Орскигә[55] барып, шунда вафат. Садиҡ мулла — Мифтахетдин хәҙрәттә, Орскиҙә — Ҡари хәҙрәттә, Мөхәмәҙи хәҙрәттә уҡып, Һултаста ун биш йылдар имам булып, яҡшы ғына мал йыйып, Ҡалтайға килеп дүрт-биш йылдар тороп, 21-се йылда Орскиҙә вафат. Аслыҡтан киттеләр.

Шакирҙың Мөхәмәдрәхим исемендә уғлы уҡып, ҡаҙаҡта мөғәллим булып, шунда вафат.

Садиҡ мулланың Мөхәмәтзакир, Мөхәмәтсабир, Ғабдулла («Итексе Ғабдулла»), Ғәбдулрәхмән уғылдары, ике дана ҡыҙҙары һәм ҡатыны Орскиҙә торалар. Сабир хөкүмәт мөғәллиме булып, етем-етемәләрҙе вазифаһы менән тәрбиә итә.

* * *

Ғәли (Мөхәмәтшәриф улы) ҡарт булғас та Орскиҙә муллала уҡып, ҡаҙаҡта балалар уҡытып, яҡшы аттар менеп, илгә ҡунаҡҡа килеп йөрөгәнен күрҙем. Хәким, Мөхлис — ике уғылдары, икеһе лә балалары менән 1921 йыл бергә киттеләр. Хәким буш кеше. Яңғыҙ ғына улы баянсы ине, Ғәҙел[56] ауылында үлтерелде. 1921 йыл ҡыш сығып, ашарға йомран аулап ҡайтып, Салауат ыҙмаһы ҡаршыһында үҙәндә, ҡар һыуында батып, шунда үлде. Ҡәбере Мәмбәттә.

Мөхлис ҙур ҡалын кәүҙәле, һүҙгә сәсән кеше ине, шулай ҙа арамһыҙ (арамьяһыҙ), бер ҡатһыҙ. Сапожник кәсебе менән ғүмерен тәләф итте.

Мөхәмәтшәрифтең Назия исемле ҡыҙы Иҫәнғолдоң муллаһы Хәсән хәҙрәттән уҡып, ғалимә булып, Ғәбделнасир[57] ауылы Ғәбделхалиҡ мулла никахында ғүмере буйына балалар уҡытып торҙо. Талип мулла, Вәлиулла мулла, Ғосман муллалар — уның балалары.



* * *

Мөхәмәтхәсәндән — Хөсәйен, Хөсәйендән — Хисаметдин (вафат), Шәмсетдин (вафат), Шәйхетдин, Әбүлхәсән — икеһе хәҙер ҙә бар. Әбүлхәсән Таналыҡ тамағында Михей исемендә бер эфисәр ғәскәр менән һәр йыл килеп, Таштуғайҙың Ырҙын күлендә ятып бесән сабып, ер биләп йөрөгән Урта Маҡан, Оҙон күлдә йәйләүҙән ошо Әбүлхәсән уғры, унлап ҡарттар килеп, ҡороҡ, һуйыл менән, урыҫтан ерҙе биләтмәйек, тип, туҡмап-ҡыуалап, Алатауҙы ашырып, Таналыҡҡа[58] ҡайтарып ебәргәндәрен Ғөмөрҙаҡ Әбүлхәсән улы һөйләне.

Был Әбүлхәсәндең Ғөмөрҙаҡ, Йәноҙаҡ, Муллагилде, Баян исемдәрендә балалары булған.

Ғөмөрҙаҡ еҙнәһе Кәлимулла хәҙрәттән уҡып, ахыр ғүмерендә шәйех Зәйнулла[59] хәҙрәткә мөрид булып, биш намаҙҙа хәлле булып, алты бармаҡ китап ҡарап, күп нәмәләр һөйләй ине. 1917 йыл ноябрҙә 23-ләрендә вафат. Йәше 80-дә булһа кәрәк. Ҡыҙҙары — Хәлисә, Сәрби. Хәлисә Аҡъярҙа Әмир никахында. Минһажетдин мөғәллим — шуның балаһы. Сәрби — Бөрйән Ғәбделжәлил никахында.

Өсөнсөһө [Йәноҙаҡ] — Һаҡтауҙа[60]. Ҡатыны Тайба Турат ауылы Ҡазихандың апаһы, шунда вафат. Йәноҙаҡ Әҙелдә, һуғыш һуңынан суфый булып, диндар булып ғүмер үткәрҙе. Ахыр ғүмерҙәрендә күҙһеҙ булып, бер йылы Орски Мөхәмәтрәхмән ҡарый мәҙрәсәһендә уҡығанда бер нуғай ҡатыны ирҙән айырылып, ҡабаттан шул иренә барам тиһә, тәхлил (эште бөҙоу) — яңылыш бер иргә никахлап, бер төн ҡушып, йәнә айырып, ғәҙәт һаҡлай*. Бар уйы кәрәк була шәриғәттә. «Һуҡыр күргәндән яҙмаҫ» тигән һүҙ дөрөҫтөр.

Һиҙиәтулла, Фәткулла исемендә ике уғыллары бар. Фәткулла йәш кенә, Сары ҡариәсендә тора. Һиҙиәтулла 1927 йыл Ураҙайға күсте. Балта кәсебе менән көн күрә.

Муллагилденән Нәҡиулла исемендә бер генә уғыл Мәмбәттә. Гөлбәҙән Юлдыбай[61] Иҙрис мулла никахында булды. Заһиҙулла мулла — Гөлбәҙән балаһы. Балалары — Баян, Ғәбиҙулла, Кәлимулла хәҙрәт никахында булып, Аҡмалетдин мулла Зәйнулла хәҙрәттә уҡып, икеме йылдар Таналыҡ тамағында имам булып, хәҙер Суртанлы үҙәктә[62] Яңы ауыл булдылар.

Хисаметдиндән — Салих яҡшы дәүләт менән ғүмер итте. Исмәғил, Баязит исемендә уғыллары, Мәрхәбә исемле ҡыҙы Ғүмәр хорунжий никахында булып, Хәлидйән, Садиҡ уғылдары. Исмәғилдең — Мостафа, Мофаззал, Ильяс. Мостафа 21-се йыл вафат, балалары ҡалманы. Ильяс та бөттө. Мофаззал Мәмбәттә ҡарт әсәһендә. Баязиттан — Заһидулла балуан Мәмбәттә (Заһидулла бин Баязит бин Салих бин Хисаметдин бин Сәйфулла бин Мәмбәт).

Сәйфулла балалары шунда тамам. Мәмбәт, Сәйфулла, Ҡыуандыҡ — быларҙың ҡәберҙәре Айыулы тамағында.




## Мәмбәт бин Рәхмәтулла

Мәмбәттең икенсе уғлы — Рәхмәтулла. Мәмбәт вафат булғас, атаһының донъяһына, етем ҡалмыш аҫыл балаларына, мал-хайуандарына, ҡымыҙ бейәләренә баш булып ҡалыуы менән «Рәхмәтулла бай» аталып ҡалған. Энеләренең һәммәләренә ҡатын алып биреп, йорт һалып, мал-тыуар биреп, тәрбиә итеүсе булғандан «Рәхмәтулла аға» аталып йөрөгән.

Көҙ көнө бейә ағытҡас, Ҡыуандыҡ менән Иҫәнғол Маҡан[63] Ҡуянлы тауҙа йылҡы, хайуан көтөп йөрөгәндәрендә ҡаҙаҡтың уғрылары әлеге Мәмбәттән ҡалған мең йылҡыларҙы әйҙәгәндәр. Ҡыуандыҡ менән Иҫәнғолдо йылҡы араһында бергә алып киткәндәрендә ҡаҙаҡтар, арттан ҡыуғын килә, тип, ҡауға һалып, арттарына ҡараһалар, туҙан туҙҙырып ун бишләп ҡарасҡы күренә. Тикшереп ҡараһалар, Рәхмәтулла байҙың ҡоро-буш йөрөгән аттары тау аръяғында ятып ҡалған да, бынау йылҡыларҙың тотош китеп барғанын күреп, сабып килеп ҡушылғас, уғрылар шатланып ҡыуғандар. Маҡан йылғаһы тамағынан, Таналыҡ һыуынан сығарып, Мәмбәт ауылының ҡаршы туғайынан китеп барғанда, хәҙерге Степан исемле күлдә Степан тигән

урыҫ балыҡ аулап йөрөгәндә, «илгә хәбәр бирер» тип, уны ла алып китәләр. Өсөһөнөң дә аяҡтарын аттың бауыр аҫтынан ныҡ итеп бәйләп, йүгәнһеҙ, яйлаҡ ҡыуалайҙар. Килә торғас Степан Ҡыуандыҡҡа: «Тебе булса как бит, Ҡыуандыҡ, күт ауырта бит», — тигән. Шул Степандан ҡалған [лаҡап] һүҙ.

Уғрылар йылҡыларҙы ҡаҙаҡ иленә алып барып, Тутай батыр алдында бүлгәс, Тутай Ҡыуандыҡҡа ҡарап: «Мунау бала-чаға шаб батыр булса дә суңындан киек тота турған имас», — ди. Иҫәнғолға ҡарап: «Мунау бала кәнчек бүре күзле, качан булса дә киигенен тадын алмай ҡуймас. Икауен дә ҡунаҡ итүгез», — тигәс, бер сал (аҡһаҡал) тороп: «Рәхмәт байның малын бер ал, энеләрен бер үлтер, Ҡанчә булса дә Рәхмәт үз исирмез ғуй, бу ике баланы мән сезгә ирек бирмаймен», — тип өйөнә алып барып, тамаҡтарын туйҙырып, икәүһенә ике тай мендереп, юлға төшөрөп ҡайтарып ебәрә.

Шунан Рәхмәтулла йылҡыһыҙ ҡалғас, Мәмбәттең ҡайны йорттары, ҡоҙалары һәр бере берәр йылҡы биреп, Рәхмәтулла үлән үҫкән ергә күсә. Бер ваҡыт яҡшы ғына дәүләтле була, ҡусты-балалары үҫеп етә. Ҡыуандыҡ батыр була, Иҫәнғол урыҫса ла уҡып, түрә лә була. Бына Рәхмәтулла бай ҡанатлы-ҡойроҡло булып ала. Ҡыуандыҡ барымтаға ҡаҙаҡтан мал ташый, Иҫәнғол, түрә булып, әлеге иштәктәрҙе усының эсендә йөрөтә, бейетә. Мәмбәттең улы Ғәбит батыр уҡ-һаҙағы менән ҡаҙаҡтың-ҡырғыҙҙың ҡанын эсә. Рәхмәтулла, шулай итеп, бер ҙур бай булып, ике бейәнең тиреһенән һаба тегеп, ҡырҡ бейә һауғанын атабыҙҙың анаһы Сафия өләсәй һөйләне.

Рәхмәтулла ҡуйға ла бик бай булған. Ҡустыһы «Бәләкәй ҡарт», Мөхәмәдрәхим бай: «Ҡуйымды Рәхмәт ағайымдың ҡуйына еткерәйем, тип ашамай, һуймай нисә йылдар әйтеү ҙә әйтеп ҡараным, ахыры етә алманым», тигән. Рәхмәтулланың ҡуйҙары ҡуранан далаға сығарғанда бер осо Степанда (күлдә), бер осо ҡарала булған.

* * *

Аралбай[64] балаһы Искәндәр Рәхмәтулла ҡарт менән бүре ҡыуалар. Бүрегә барып етәләр, бүре бер үҙәктең аръяғына сығып, хәле бөтөп ята. Рәхмәтулла уҡ менән бер мәртәбә, ике, өс тә ата, бүре һис тә ҡуҙғалмай. «Барып ҡарағыҙ, уҡ тейгәндер», тип (Рәхмәтулла Искәндәрҙе ебәрһә, уҡтарҙың өсәүһе лә, бүренән үтеп), ергә кергәндәр. «Шул уҡтарҙы бысаҡ менән ҡаҙып саҡ алдыҡ», тип Искәндәр һөйләгән.

* * *

Рәхмәтулланың ҡатыны Беренсе Бөрйән волосы Татлыбай[65] ауылы Аҡбикәнән Аралбай, Ишмөхәмәт, Ғәбделнафиҡ — уғылдары, бер ҡыҙы Түбән Һаҡмар өйө Бәкәтәр[66] ауылында Ярҡынбай никахында Солтан, Дүсән, Морат исемләрендә уғылдары булып, нәҫелдәре 22-се йылда бөткән. 1927 йыл Ишан[67] ауылынан Бәкәтәрҙән бер ҡарт кеше һөйләгән ине, тип ағайым Мөхәмәтйәр һөйләне.

Ишмөхәмәтте Ҡундрау Ҡараҡай ишанда уҡытып Ғәбделнафиҡты Юлыҡ Ғәбделлатиф хәҙрәттә уҡытып һәм Ғәбделлатиф хәҙрәттең мал-хайуандары Рәхмәтулла тәрбиәһендә булған.

Юлыҡ ауылынан Ғәбделлатиф хәҙрәттең Рәхмәтуллаға яҙған бер хатын ошонда яҙып китәм.

«Хөрмәтле ағайыбыҙ Рәхмәт ағайға, барса йәмәғәттәрең менән, әссәләмәғәләйкүм һәм янығыҙҙағы кешеләргә лә сәләм. Алла тәғәләбеҙ афәтләрен үҙе ярлыҡаһын (һаҡлаһын). Үҙебеҙ һеҙҙең хәйер-фатихағыҙҙа әүәлгесә ҡыймылдап йөрөйбөҙ.

Хайуандар ҡазалап тора икән, аҙағы хәйерле булһын. Бер барып күрергә теләк бар ине, валлаһиғәләм, барып булмаҫ маһшәриф (хөрмәтле ай) үткәнсә, унан аҙаҡ Хоҙа белә. Йылҡы көткән балаларға әйтеп ҡуйһаң, яҡшыраҡ булыр ине, беҙҙең һатыр малдарҙы һаҡлабыраҡ тоторға мөмкин булһа, һатыр инек. Доғалы вә мәғлүмегеҙ Ғәбделлатиф. 1823 йыл апрель 30 көнө. Хәсән мулланы... ебәрҙем, бер-ике һимеҙерәк ҡуй һуйып алып килер өсөн. Ундағы ҡуй осаһы-фәләне бергә бәрәкәтлерәк була. Береһе — һеҙҙән, ә береһе Иҫәнғол ағайҙан булһа ла буш тамаҡҡа түгел. Хоҙа яҙғаны хаҡ хисапланыр. Һимеҙерәген бирһәгеҙ, яҡшы теләгегеҙҙән булыр ине. Бында бөтөп тора».

Хаттың тышында: «Һабыр ауылы Рәхмәт Мәмбәт уғлына ебәрелде Юлыҡтан».

* * *

Рәхмәтулланың Орскиҙән алған Шәһәрбаныу исемле биҫтә ҡатынынан Шәрифә исемендә бер ҡыҙы Ҡайраҡлы[68] (ауылы) Ҡәнзәфәр мулла никахында булып, ғүмер буйына ауыл балалары менән ҡуша ен балалары уҡытҡанын атайыма Аллаяр һөйләне. Ауыл балалары һабаҡҡа килә башлаһа, һап-һары төҫтә ят ҡыҙҙар йыйылып, һабаҡ уҡып китәләр, ти. Ҡәнзәфәрҙең улы Ғәбделкәрим урманда бесән сапҡан, кәбән ҡойорға күбәләре күбәйеп киткәс, ул үгәй әсәһе Шәрифәгә: «Апай, шәкерттәреңдән ошо күбәләрҙән кәбән өйҙөрөп ҡуй», — тип үтенгәс, «ярар», тип, әлеге ен шәкерттәренә бойора. Бер ваҡыт ендәр күбәләрҙе анан-бынан ташып, кәбән итеп ҡуялар. Ғәбделкәрим мулла һөйләне.

* * *

Рәхмәтуллаға бер ваҡыт Алланың тәҡдире ирешеп (килеп етеп), үлем ауырыуында ятҡанда уландарын янына саҡырып: «Эй, балаларым, минең ғүмерем бөттө, Алла тәғәлә ахырын хәйерле итһен, Һеҙләргә һүҙем шул: яҡшы, тоғро булығыҙ, айырылышмағыҙ, бер тәүфиҡтә булығыҙ. Аралбай — оло, Ишмөхәмәт — кесе. Ишмөхәмәткә мәслихәтһеҙ (килешмәгән) эш ҡылмағыҙ. Ишмөхәмәттең һүҙе муллаға ла һыяр, түрәгә лә һыяр», — ти. Мең һигеҙ йөҙ... йылдарҙа баҡый (мәңгелек) йортҡа күсә. Рухың рәхәттә булһын. Бынау һүҙҙәрҙе һөйләгәнендә Рәхмәт янында Мөхәмәдйәр булып, шул миңә һөйләне. Ҡәбере Мәмбәт ҡәберлегендә, уртала таш буралған.




## Аралбай үсекмәйсә тора алмай

Аралбай бин Рәхмәтулла Бөрйән волосы Мансур байҙың Гөлзәминә исемле ҡыҙына никахланған. «Аралбай — оло, Ишмөхәмәт — кесе» тигән һүҙҙең мәғәнәһе: Аралбай үпкәсел генә бер кеше булған. Бурибай[69] ауылдары менән йыйын иткәндә сәй әҙерләтеп, сынаяҡ өләшкәндә тотҡаһы һыныҡ сынаяҡ тура килгәс, үпкәләп, үҙ өйөнә килеп сәй эсеп барғас: «Аралбайҙың өйөндә сынаяғы юҡ, шикле кугауай сынаяҡ менән эсмәне, шикле», — тип һөйләгәндәр.

Аралбай бер йәй көнө Айыулы тамағында уғлы Искәндәрҙең ҡайныһына килеп төшә. Ҡоҙаһы тәкә һуймай, мөстәндән ҡазаланған һыйырҙың итен бешереп килтерә. Аралбай үпкәләп ашамағанын Зөлҡәрнәй ҡарт һөйләне.

Аралбайҙың — Искәндәр, Әсфәндиәр, Ғимаҙетдин мулла — уғылдары; Сәбилә исемендә бер ҡыҙы Хәсән хәҙрәттә уҡып, Ҡарағас[70] ауылы Ғәбделкәрим хәлфә никахында булып, ғүмер буйына балалар уҡыта.

Искәндәр урта тормош менән көн күрә. Тоғро һүҙле, йомшаҡ, сабыр тәбиғәтле булған. 71-се йәшендә вафат, Мәмбәттә. Әүәлге ҡатыны Рафиҡ[71] ауылынан — Ямалетдин тигән улы; икенсе ҡатыны Мәликә — Айыулы тамағынан: Мифтахетдин, Йәләлетдин, Хәйбулла; Васби исемендә бер ҡыҙы Ҡолбирҙе ауылы Бикмөхәмәт хәлфә никахында. Утарбай[72] ауылында Әхмәтйән мулла — Бикмөхәмәт мулла балаһы. Искәндәрҙең өсөнсө ҡатыны Ҡарағас ауылынан Сафия, дүртенсе ҡатыны Ғәбделнасир ауылы Батыйҙан. Хөсниә исемендә бер ҡыҙы Ерәнағас[73] ауылында ирҙә булды. Гөлзәминә әбей ҙур кәүҙәле, уҡыған бер ҡатын булып, Ишмөхәмәт Ғабдуллин фәхир (маҡтап) һорашты, уға ла мәслихәт иткәндәр.

## Йоҙроҡло Искәндәрҙән ҡалған зат

Ямалетдин бин Искәндәр — ҙур кәүҙәле, ҡара төҫтә, ҡалын тәнле батыр әҙәм ине. Рәхмәт балаларына йоҙроғо менән кәртә булған кеше ине. Ҡулы асыҡ, ярҙамлы ине. Сыбағайындан Марфунға тирмән урыны биргәс, Марфунды, ана күсеп килде, тип хәбәр булғас, Ямалетдин бер-ике кеше эйәртеп барып, ҡыуалап килгәндә Аҡъяр Мифтахетдин хәҙрәт: «Килсәле, Ямалетдин, бынау ҡымыҙҙы эс, батырлығың ҡөҙрәти хәлдәй [Ғәлеләй?] бар икән», — тип маҡтаны. 1913 йылдарҙа вафат, 75-тәрҙә булһа кәрәк. Ҡәбере Сәғиттә. Кәрим ауылы Ҡанифа ҡыҙы Мәхүбъямалдан Дауыт, Мырҙағәле, Шәмсетдин — өс уғылдары. Дауыт кәсеп менән мәшғүл. Йомағужа исемле уғлы менән бергә 1927 йыл Ураҙайға күсте. Мырҙағәле Питербурҙа[74] хеҙмәт итеп, герман һуғыштарында йөрөп, тура тәбиғәтле, яҡшы көрәүсән, уйлап эшләүсән. Биш дана уғылдары менән Ураҙайҙа. Ике һөйгән йәрҙе тиң көтөп донъяны теттерә.

Шәмсетдин герман һуғышында плен ҡалып, 1917 йыл большевиктар килер алдынан ғына ҡайтып, мал һуйып, ит сауҙаһы менән яҡшы бай булып, ҡунаҡ һыйлаусан, әҙәмгә ярҙамлы, ҡарт әсәһенең тәрбиәсеһе булып, ағаһы Мырҙағәле менән йәшерен кәсеп итәләр. Тормошо Ураҙайҙа.



* * *

Мифтахетдин бин Искәндәр — бер ҡатлы, бер йыуан кеше ине. Һултас ҡариәһенән алған ҡатынынан Нәжметдин, Ғилажетдин, Хисаметдин, Минһажетдин, Ҡотлоәхмәт, Хәмит уғылдары. Минһаж менән Хәмиттең әсәләре башҡа. Хәмит 1921 йыл аслыҡ менән Бәкәтәр ауылында вафат. Минһаж бына йөрөй, ни булырға белмәй йәшлек ҡеүәһе менән. Нәжметдин ау ауларға оҫта булып, хәҙерге замандың бер суфыйы булып, ишан-мәзинлекте муйынынан төшөрә.

Ғилажетдин совет һуғыштарында булып, уҡымай, русса белеп, сәркәтип, яҙыусы-писарь булып, хеҙмәте менән Таштуғайҙы русҡа бирмәймен тип, 27 өйлө кешене Ураҙайға күсереп, шунда көн күрә.

Хисаметдин Миктә (?) хөрмәтле Ғабдуллала уҡып совет һуғышында йөрөп килеп, хәҙер балта, сүкеш оҫталығы менән көн күрә.

Ҡотлоәхмәт Ураҙайҙа кафырәнән мосолман булған ҡатыны менән Әнүәр исемендә йәш кенә уғлы менән Байымаҡта хеҙмәт итә.

* * *

Йәләлетдин бин Искәндәр — Юлыҡ ауылында ишан хәҙрәттә уҡып, мулла булып, Ғәбделҡәюм ҡыҙы Фирүзәне никах итеп, илле йылҡы, ике йөҙ баш ҡуйға хужа булып, ҙур бай ғына. Күп ваҡыттар балалар уҡытып, ғибәдәтле ине. 1921 йылы 1 мартта 65 йәштәрендә вафат, Сәғиттә.

Ғәбделбарый, Ғәбделһаҙый, Сәйҙә, Тайба, Өмөниса, Хөббөниса — балалары; Сәйҙә Йүкә[75] ауылы Ғибадулланан талаҡ (айырылғандан һуң) Аҡъяр Шафиҡ никахында. Тайба прапорщик Әбүбәкер никахында, Урҙайҙа. Өмөниса Быҙаулыҡ Зыятдин никахында. Хөббөниса Сәғидуллала вафат. Ғәбделбарый Утарбай ауылы Хәйрулла ҡыҙы Нәфисәгә никахланып, 21-се йылдарҙа вафат. Сәхиулла исемендә 13 йәшлек уғлы бар. Ғәбделһаҙый зирәк, уҡып мулла булып килгәндә вафат булды.

* * *

Хәйбулла бин Искәндәр яҡшы ғына, туҡ торған бер кеше ине, алтмыш йәштәрендә вафат, Мөхәммәт исемле уғлы Мәмбәттә. Айыулы ауылы Бирҙеғол ҡыҙы Мәрғизә исемле ҡатыны Ураҙайҙа, ике улы вафат булған, ҡәбере шунда.

* * *

Сафиулла бин Искәндәр Орскиҙә хеҙмәт итеп, Бикйән Шәмсетдин сотниктың* Гөлзаһира исемле ҡыҙына никахынан ун биш йылдар ҙур бай булып, донъяны теттереп, егерме беренсе йыл кемгә теймәне! — март айында яңғыҙ күк бейәгә ҡалып, бер көнө ҡатыны:

— Нишләп ултыраһың, әйтеү намаҙыңды уҡып ят! — тигәндә:

— Уҡымайым, ун бейәнән [Алла] бер бейәгә ҡалдырҙы! — тип ятҡан икән, иртән торһа, уғрылар күк бейәне алып киткәс, еңгәй:

— Инде намаҙҙы уҡыр инең дә, күк бейә китте, — тип үсекләгән.

Сафиулланың Сәләхетдин, Мөхәмәдфәләх — уғылдары, ҡыҙы — Юлдыбай Мөхәммәд мулла никахында. Икенсе ҡыҙы Ерәнағаста, өсөнсө ҡыҙы Юлдыбайҙан ҡайтып, Лотфулла никахында. Искәндәр бин Аралбай балалары тамам.

## Һыр бирмәҫ Әсфәндиәр, асыҡһа ла: «Мин туҡ!» — диәр

Әсфәндиәр бин Аралбай, фәҡир генә булһа ла, Ишмөхәмәд бай ҡолон һуя тип, яңғыҙ ҡолонон һуйып ашаған. Бер йылы тары сәскән. Тарыһы бик уңған. «Бураның эсенә төшмәгеҙ, батып үлерһегеҙ», — тигән. Бер яҡшы ғына йүгерек ҡара аты булған. «Ҡара ат менән йөрөгәндә, алдан килгән ямғыр булмаһа, арттан килгән ямғырҙы еткермәйем», — тигән. Мең һигеҙ йөҙ... йылдарҙа вафат, ҡәбере Мәмбәттә. Бөрйән Татлыбайҙан алған ҡатынынан — Ғәләүетдин, Камалетдин; Фәтхиә, Хәйерниса, Ымһанай — ҡыҙҙары.

## Сәсән телле Ғәләүетдин, теле үткен Камалетдин

Ғәләүетдин балта оҫтаһы һәм яҙыусы, һүҙгә, ҡаҙаҡ үләңенә* лә шәп ине. Әҙел ауылының бер үләңсеһе менән әйтешкәндә*.

Әҙел ауылының өйө лапаҡтыр,
Ит һоғондорайым тиһәм,
Мөхәмәтйән ҡарттың
Ауыҙы шапаҡтыр, —

тигән. [Йәнә]:

Әлебсен ә, әлеб асын ки, кабсен кә,
каб асын ки, рәсрә душенки, —

тигән. Ғәләүетдиндән нәҫел юҡ.

Камалетдин 1871 йылдар тәүге хеҙмәткә алынып, төрөк һуғышында[76] Арзрумды[77] Рәсәйгә алып биреүсе. Шунда русса ла яҙыу белеп килгәс, түрә лә булып, күп ваҡыттар писарь булып, Бикет ерен хохолға* биреүсе булып, шулай ҙа ғилемгә мөхәббәтле, ғәләмгә ярҙамлы, асыҡ йөҙлө, һүҙгә сәсән бер кеше булып, 1920 йылдарҙа вафат, йәше алтмыш биштәрҙә. Мәмбәттә Муса исемле уғлы бар. Фәтхиә, Кәримә Камалетдин никахында булып, Һиҙиәтулла, Хәмиҙулла уғылдары. Һиҙиәт Дубинскиҙә[78], Хәмиҙулла мосолманса-урыҫса уҡып, Темәстә[79] хөкүмәт хеҙмәтендә, мәғлүмәте яҡшы ғына, үҙ башҡортон хөрмәт итә.

Әсфәндиәрҙең Хәйерниса исемендә ҡыҙы Яҡуп ауылы Шәмсетдин мулла никахында,... исемле уғлы Түңгәүерҙең бер байы булып тора.

Әсфәндиәрҙең Мәрғизә исемле ҡатынынан Зәйнулла исемле уғлы Мәмбәттең бер ҡарты булып, һүҙҙе тура һөйләп, йыртыҡһыҙ ерҙән дә йыртып ебәрә. Бер уғлы илә Мәмбәттә торалар. Ымһанай Быҙаулыҡта ирҙә булып вафат. Әсфәндиәр шунда тамам.

* * *

Ғимаҙетдин бин Аралбай Юлыҡ Әхмәт хәҙрәттән уҡып, Мәмбәттә имам булып, мең һигеҙ йөҙ ... йылда вафат. Ҙур кәүҙәле, ҙур күҙле, ғилеме яҡшы, ғәййәр динсе булып донъянан үткән. Ғәбделкәрим, Ғәбделхәким — уғылдары, Фирүзә ҡыҙы Һултантимер[80] Сафиулла никахында вафат. Түңгәүер Һибәтулла Буранчин никахында мөәзин булған бер уғлы имам. Ғәбделкәрим Ғәлләм хәлфәлә һәм Юлыҡ ишанда уҡып, ғибәҙәтле ине, 30 йәштәрендә вафат, нәҫеле юҡ. Ғәбделхәким Мәмбәттә мөәзин булып, ҡытлыҡта вафат. Аҡъяр Ғөмөрҙаҡта бер ҡыҙы бар. Аралбай балалары шунда тамам.






## Ишмөхәмәт бин Рәхмәтулла

Ишмөхәмәт бин Рәхмәтулла[81] Ҡараҡай ишанда уҡып, заманында сотник булған, старшина ла булып хеҙмәт иткән. Өс-дүрт йөҙ йылҡылар көтөп, ҙур бай ҙа булған. Атаһы Рәхмәттең һүҙе фатиха булып төшкәндер: бер заман ауылдың башы, бер мәслихәтсеһе булып торған. Форсат-ғилеме лә яҡшы ғына булған. Урамдан килгән кешене [күрһә]: «Бынау минән фәлән йомош һорарға килә икән», — тип, килеп етмәҫ борон өйҙән сығарып биреп ебәргәнен күп ҡарттарҙан ишеттек.

Беҙ бала заманда, һабан бөтөп, май башында йәйләүгә күскәндә Ишмөхәмәт олатай: «Фәлән көн күсербеҙ, шул көнгә ҡарап әҙерләнегеҙ», — ти һәм шул көн иртәлә ҡаралдыларын тейәп, аттарын егеп, урамдан сығып көтөп тора, шунан һәммә халыҡ арттан теҙелеп сығып бөткәс, Ҡанифа инәй, Ишмөхәмәт олатай башлап күсеп бара. Бына боронғо кеше ҡалай инсафлы, өлкәндәрҙе ҡәҙерләп, бер булып, айырылмағандар. Хәҙерге кеше бүре тейгән ҡуй көтөүе шикелле: берәү был яҡҡа, берәүһе был яҡҡа тартыша ла, арҡанды өҙөп, йәнъяҡҡа тарҡалып китәләр ҙә татыусылыҡ та юҡ, бәрәкәт тә юҡ. Берберенә мөхәббәт тә юҡ. Байлыҡ та юҡ, яҡшылыҡ та юҡ. Уйлағаны, эшләгәне, һөйләгәне боҙоҡлоҡ.

Ишмөхәмәт урта ҡалын кәүҙәле, һаҡаллы, ҡуңыр төҫлө, тоғро, аҙ һүҙле, һүҙе тыңлаулы, байлығы менән фәҡир-меҫкендәргә ярҙамлы булып, 1885 йылда 90 йәшендә вафат. Таш мәсеттә[82] ҡәбергә барғанда мин дә ат башында барҙым. Алла рәхмәтенә кинәнһен әйҙә.

Түңгәүер Рафиҡ ауылы Рафиҡ байҙың ҡыҙы Ҡаҙна исемле ҡатынынан — Ғөмәр, Ғосман, Ғайса, ҡыҙы Ғәзизә Ҡолбаҡты[83] ауылында, хәҙер ҙә балаларының балалары бар. Бер ҡыҙы Бүребай ауылы Юныс никахында ине. Бер ҡыҙы Мансур балаһы Ғәбиттә булған.

## Ғүмәр харунжий

Ғөмәр (бин Ишмөхәмәт) Юлыҡ Хәммәт хәҙрәттә уҡып, ғәскәри хеҙмәткә алынып, Ҡыҙыл сәкмән[84] әрмеләрҙә йөрөп, хорунжий булып, Кәрим сотниктың Вазифа исемле ҡыҙына никахланып донъя көтә.

Ике йөҙ йылҡылар көтөп, игендәр сәсеп, көҙ ваҡыт ашлыҡ баҫып ултырғандан «Ғөмәр күле» аталып ҡалды. Волость[85] булып йөрөгәндә Ғүмәр халыҡтан ылау алмай, үҙ аттары менән йөрөнө.

Ырымбурҙан Гржанауиски[86] губернатор Аҡъярға халыҡты йыйып, ер үлсәтеүгә һәм балаларҙы урыҫса уҡытыуға приговор* һорағанда халыҡ приговор бирмәгәс, губернатор Ғүмәр түрәгә:

— Халыҡтан приговор бирҙертмәүсе һин икәнһең, миҙалыңдан (вазифаға хоҡуҡтан) ҡалдырырмын, — тигәндә:

— Ана тора халыҡ, бирһә ал приговор, мә, луазымды муйыныңа түмәр итеп таҡ, — тип, миҙалын биреп, — алһаң, минең миҙалымды алырһың, бәхетемде алмаҫһың, — тип миҙалын бирә. Шунан (губернатор) волослыҡ миҙалын Ҡотлоғужа Кулибаевҡа бирә.

Ҡотлоғужа ер үлсәтергә приговор әйтеп, ер шунан башланып үлсәнеп китә. Боронғо ҡарттар, түрәләр ер өсөн ҡалай ныҡ иттифаҡ (берҙәмлек, бер төптән) менән тороп, ерҙе һаҡлағандар.

Боронғолар йылҡы хайуандарын күп көткәнлектән аҫау йылҡыларҙы ҡороҡ, боғал менән тотоуға шәп булғандар. Ғүмәр түрә менән Ғәбделғәзиз хажи ҡоҙа булғас, хажи Ишмөхәмәт олатайға бер байтал биргән. Күлле йортта бер өйөр ҡыҫыр атты ҡыуалап хажиҙың бер кешеһе килде. Йәйгелектән ҡыҫыр аттар сабып үткәндә Ғүмәр хорунжий* ҡороҡ менән байталды түкмәстерә тартып йыҡты. Шул ерҙә байталды һуйып алдылар.

* * *

Сырдарья яғына ғәскәр булып[87] киткәндәрендә, ҡаҙаҡтың Мәмбәт тигән правителе* янына барып төшкәс, правитель (беҙҙең) ғәскәр башлығынан бында Мәмбәт балалары барлығын һорап белгәс: «Мәмбәт балаларын һис кем күрһәтмәһен, үҙем табып алам», — тип, ғәскәр араһын тикшереп, Әүәл Мөхийән хорунжийҙы табып алған, икенсе — Ғүмәр хорунжийҙы, өсөнсө — Солтанморат есаулды*, дүртенсегә — Аллаяр хорунжийҙы, бишенсене табалмай күп йөрөп, ахырҙа Солтанғәли хорунжийҙы саҡҡа табып алып: «А, байғош, иштәккә оҡшап, танауың ялпашып ҡалған икән, — тип, — бишәүһен дә ҡунаҡ итәмен», — тип, ғәскәр башлығынан һорап алып, өйөндә фәләнсә көн ҡунаҡ ҡылып ебәрҙе, тип Ғүмәр хорунжий һөйләне тип, Сәғит бай[88] әйтте. Бынау правителдә ғилем-форсат булған. Беҙҙең хәҙерге халыҡ үҙенең яңғыҙ һыйырының быҙауын танымай аптырап ҡала.

Кәрим сотник ҡыҙы Вазифа еңгәйҙән [Ғүмәрҙең] Сәғит, Әхмәтйән — уғылдары, Хәйбә, Хәҙисә — ҡыҙҙары. Хәйбә Бөрйән Мансур ауылы Төрөкмән мулла улы Ихсан никахында. Хәҙисә Бүребай Ғайса улы Хәммәт никахында (ине), хәҙер Сәғит тәрбиәһендә тора.




## Ғәҙел Сәғит

Сәғит Юлыҡ ауылы Ишан хәҙрәттә уҡып, Аҡъяр Ғәбделғәзиз хажиҙың Хәйернисә исемле ҡыҙына никахланып, оҙатып алғанда ике айғыр өйөрө йылҡылар, унлап ат, ҡырҡ-илле ҡуйҙар менән, йәштән үк «Сәғит бай» аталып, 1913 йылдарҙан элек йылҡылары ике йөҙҙән ашыу булғанын һөйләйҙәр һәм ике йөҙләп ҡуйҙары булды.

Сәғит байҙың өйөндә мулла булһын, түрә булһын, ҡарт булһын, йәш булһын, бай булһын, фәҡир булһын, зәғиф-сәләмәт булһын — һәммәһе бер дәрәжәлә ихтирам менән ҡунаҡ итеүә. Һис кемде маҡтамаҫ, бер кешене лә хурламаҫ, дуҫы булһын, дошманы булһын, урта дәрәжәлә һөйләшеп ултырыр. Өйөндә оҙон көн буйына ҡымыҙ эскәндә, дыулағанда аҙ ғына эсеп, табағын ҡуйып, һәр кемде тигеҙләп эсерер, бер «йырла» тимәҫ, (кеше) йырлаһа, «үәшкәй» тимәҫ. Уйнағанға ҡарап зауыҡланмаҫ, ҡаты ҡарап көлмәҫ, ғүмерендә бер мәртәбә әҙәмде ғәйбәт ҡылмаған, тиһәм, яңылыш булмаҫ.

Халыҡ ер һатыуға әйләнгәс[89], һатмағандарға... уңдырышлы ерҙе айырып, Ҡалтайға[75] өйлө кешеләрҙе күсереп, ауылдың исемен Сәғит бай исеменә ҡуйҙыҡ.

Бәләкәй кәүҙәле, шулай ҙа аҡылы ҙур ғына. Хәҙер 65 йәштәрендә. Хәйерниса еңгәй ике-өс йылдар тороп вафат булғас, Бүребай Хәйҙәр мөәзиндең Сабира исемле ҡыҙына никахланып, Хәмзә, Ҡотломөхәмәт, Ғәбделхаҡ, Мәхмүзә, Мәфтүха, Саҙиҡа — балалары. Хәмзә 25 йәштәрендә 1917 йыл большевиктарҙа шәһит тинеләр. Һултаста ҡорбан ителеп, Ҡалтай ҡәберлегендә ерләнде. Бала ҡалманы. Ҡотломөхәммәт атаһы менән бергә, Мирхәбиб, Мирсәйет — балалары. Мирхәбиб — Кәримә исемле ҡатындан. Мирсәйет Аҡъяр Бәҙәмша ҡыҙынан.

Ғәбделхаҡ 13 йәштәрендә. Сәғит бай һуғыштан һуң да 10 бейә һауып, килде-китте ҡунаҡты һыйлап, ғүмер кисермәктә Ҡалтай ауылында донъя көтә.

* * *

Әхмәтйән (бин Ғүмәр) ғәскәри хеҙмәткә алынып, 5 йылдар йөрөп килеп, Шаһмораттың Ғәйшә исемле ҡыҙына никахланып, Ғабдулла исемендә уғлы Сәғит ауылында атаһы йортонда. Фатима Әҙел (ауылы) Әхмәт никахында.

* * *

Ғүмәрҙең икенсе ҡатыны Миһырбандан — Хәмитйән, Саҙиҡ, Хәкимә, Нәғимә. Тағы бер ҡыҙы Ерәнағас Мирғәле мулла никахында. Бер ҡыҙы Бөрйән Орск Солтанғәли никахында вафат. Ҡәбере Орскиҙә. Хәкимә Тиргәмеш[90] Вәлитдин никахында. Нәғимә Ҡалтай Сабирйән никахында.

Хәмитйән Юлыҡ ишанда уҡып, ҡатыны Әҙел ауылы Йәҙгәр ҡыҙы. 18 йәшлек уғлы Хәфиз большевик һуғышында Кустанай[91] яғында юғалды. Хәмитйән тоғро, ҡаты һүҙле, йәше 59-ҙа вафат, ҡәбере Сәғиттә. Саҙиҡ Юлыҡта шәкерт булған еренән Ҡыпсаҡ Ғәлиәхмәт байҙың ҡыҙын алып, шунан туйға барҙыҡ. Хәҙерге көндә Мәмбәттең мәсет ҡарты булып, бер уғлы менән ике һөйгән йәрҙәрҙе тиктән-тик көтөп, Мәмбәттә тора.

## Өс никахлы Ғосман бин Ишмөхәмәт

Ғосман бин Ишмөхәмәт ҡырҡ башлап йылҡы хайуандарына хужа булып, эре-эре йүгерек аттар, Тубылғы туры юрғалар[92] менеп, ҡарсығалар менән ҡоштар аулап, ифрат дәрәжәлә тоғро, зыянһыҙ, йомшаҡ күңелле, фәҡирҙәргә асыҡ ярҙамлы, ҙур ҡалын кәүҙәле, ҙур һаҡал, ерән мыйыҡлы кеше ине. 1892 йыл вафат, йәше илле етеләрендә. Беренсе ҡатынынан бер ҡыҙы Вәлиттә, ире ҡулында вафат. Икенсе ҡатыны Өмөкәйҙән — Сөләймән, Зөлҡәрнәй, Муллағәле, Мәхмүтйән; Ғәлимә исемендә ҡыҙы Сары ауылында вафат. Сөләймән арыу, тоғро ғына, яҡшы, туҡ ҡына көн күреп, 55 йәштәрендә булһа кәрәк, Сәғит ауылында вафат. Мөхәмәткәрим тигән уғлы Ураҙайға күсте.

Зөлҡәрнәй Юлыҡта һәм Аҡъяр Мифтахетдин хәҙрәттә уҡып, ғәскәрлектә биш йылдар йөрөп килеп, Ҡалтайҙан өркөп китеп, Ураҙайҙа ултыра. Мисбахитдин исемле улы Кустахи яғында үлеп ҡалды. Фәйзерәхмән исемендә улы аслыҡта үлде. Уғылһыҙ ҡыйын тормошта көн күрә. Хәҙер үҙе ҡартайҙы, ләкин кәләше йәш кенә.

Муллағәли лә хеҙмәттә һәм һуғыштарҙа күп йөрөп, күпте күрһә лә ғибрәтләнмәгәндер ахыры, егерме беренсе йыл яҙ сыҡҡас, Сәғит байҙың ун биш көнлөк кенә йәш быҙауын урлап һуйып, тотолоп, туҡмалып, Аҡъярҙа үлтерелде. Хәлиулла, Сәйфулла исемендә уғылдары шул йыл аслыҡтан һәләк булдылар. Уғрылыҡта файҙа юҡ, тоғролоҡта зарар юҡ.

Мәхмүтйән дә урынһыҙ батыр ине. 1921 йыл Разур хахулдары[93] өйөнән алып китеп, Өлкән Ҡалтай түңендә үлтерҙеләр. Шәрифйән, Сәйетйән — ике уғылдары етем ҡалып, Ураҙайҙа торалар.

[Ғосмандың] өсөнсө ҡатыны Хөсниямал Әсхәр ҡыҙынан — Йософ, Исхаҡ, Әбүбәкер. Бер ҡыҙы Аҡсура ауылында ирҙә тора. Йософ күп хеҙмәт һәм һуғыштарҙа булып, хәҙер яҡшы ғына хәләл кәсеп менән көн итеп, Ураҙайҙа, Ғабдулхаҡ исемендә улы бар. Исхаҡ һуғым ит менән сауҙа итеп, Аҡъярҙа, Исмәғил исемле улы бар. Әбүбәкер — прапорщик*, һуғыш мәшәҡәттәрен күреп, Уфа ҡалаһына барып, трах* ғилеменә уҡып, трахты алып килеп, ана йөрөй Ураҙайҙа һабан һөрөп. Ғәлимйән исемендә бер улы бар. Ғосман балалары шунда тамам.



## Дүрт никахлы Ғайса мәзин бин Ишмөхәмәт

Ғайса (бин Ишмөхәмәт) Юлыҡ ишанда уҡып, Мәмбәттә мөәзин булып, Ҡалтайға күскәндә мөәзинлеген Хөснөтдин Сөнәғәтулла улына бирҙе. Йәштән үк бай булып, йөҙ илле йылҡы хайуандары, йөҙҙән ашыу ҡуй малдары көтөп, һимметле бер кеше булып йәшәне. Ошо көндә туҡһан ике йәштә, йомғаға килә[94]. Теше шул көйө, ҡолағы ла ишетә, күҙе лә күрә. Яҙ көнө лә урамда өйөлгән ҡарҙарҙы күрәп, таратып ташлай. Янына барһаң: «Йәш ваҡыттағы шикелле түгел, ҡар күрәһәң, хәл бөтә», — ти. Ҡара инде, нәфсе, шул ваҡытта ла (йәштә лә) хәл бөтмәһен!

Түңгәүер Һултантимер Ғәбит мулла ҡыҙы Мәҙинәнән — Ғәбделғәлләм Юлыҡта уҡып, бик ҙур бай булып, йомшаҡ тәбиғәтле, хәләл кәсеп менән мәшғүл бер кеше ине. 1927 йыл көҙ көнө ҡыл тамаҡ рәнйеүенән (сиренән) вафат. 60 йәшендә ине. Ғәбделғәлләмдең Ҡыпсаҡ Кутул (?) Ғәлиәхмәт байҙың ҡыҙынан — Хәкимйән, Эюп, Ҡаһарман, ике ҡыҙҙары: береһе Сәлим[95] (ауылы) Аллабирҙе балаһы никахында, береһе Бүребай Баймөхәмәт мулла никахында. Хәкимйән — һуғымсы, мал һуйып, ит сауҙаһы менән яҡшы ғына көн күрә. Насирйән, Мәхийән исемле уғылдары менән Сәғиттә хәҙерге көндә ауылдың икенсе байы булып, мөритле (иманлы) генә, Алла тәүфиҡ бирһен!

Мөәзиндең икенсе ҡатыны Ғәбит мулла ҡыҙы Фатиманан Сәғилә исемендә ҡыҙы Атингән[96] ауылы Эюп уғлы никахында вафат. Өсөнсө ҡатыны Бүребай ҡыҙы Ғәфүрәнән — Мирсаяф, Мөхәммәт — Баймаҡта ауырып, Ғәбделнасир ауылында вафат, ҡәбере шунда. Мирсаяф — Рәхимйән, Зәкирйән, Мөхәммәт — өс ваҡ ҡына уғылдары, 92 йәштәге атаһын тәрбиә итеп, Сәғит ауылында. Ғәфүрәнең Рәхимә, Рабиға — ике дана ҡыҙҙары. Рабиға Турат Ғибадулла никахында, Сәғитов тиеп йөрөтәләр.

Дүртенсе ҡатыны Хөсниямалдан бер ҡыҙы Һултас Собханғол никахында. Ишмөхәмәт балалары шунда тамам.






## Рәхмәтулла уғлы Ғәбделнафиҡтың һәр нәмәгә маһир булғаны

Рәхмәтулланың өсөнсө уғлы Ғәбделнафиҡ Юлыҡ Ғәбделлатиф хәҙрәттә ғилем «Фикрә» (әҙәби хрестоматия), «Фараиз» (логика) ғилеменә беренсе булып уҡытҡанда, фаразый мәсьәләһен һәр ауылдан килеп һорап, Мәмбәттең малын тәҡсим иткәндәр (бүлеп иҫәпләгәндәр). Яҙыуға маһир ҙа булып, «Жамғиялармуз», «Мөхәммәдиә», «Фараиз», «Тарикә» (метод, ысул), «Төркиб», «Тасриф» (грамматика), «Шәрех» (аңлатма, анализ), «Ғабдулла» китаптарын үҙ ҡулы менән яҙған (күсергән), хәҙер ҙә был китаптар бар әле.

Борон ваҡытта уҡ атыу муду (мода) булып, Ғәбделнафиҡ уҡ атыуға һәм яһауға оҫта булған. Осоп йөрөгән ҡошто, ҡайһы еренә атайым, тип иптәштәренән һорап, ҡайһы урынға ат, тип әйтһәләр, шул урынға атып төшөргән.

Уҡҡа маһир кешеләрҙе бер майҙанға йыйып атышҡандарында көмөш балдаҡтан үтә атып, мөкяфәт (премия, приз, бүләк) бәйге алған. Тәрән һуғып, ураҡ тешәгән, көмөш тә эшләгән. Ләкин Юлыҡ Мөхәмәтйән ишан көмөш эшләүҙән тыйған: «Берәүҙең көмөшөнөң табы икенсе кешенең көмөшөнә ҡушылып, кеше хаҡы булып китер», — тигән. Ҡымыҙ туҫтаҡтары, тоҡҡаларынан ҡанса (нисәмә) селтәр дүңгәләктәр төшөрөп, ижау яһаған.

Өс йөҙләп йылҡы хайуандарына хужа булып, йүгерек ат тотоп, бәйгеләрҙә йүгертеп йөрөгән. Йүгерек аттың алда килерен, икенсе, өсөнсө, әлхасыл (йыйып әйткәндә) ҡайһы урында килерен белеп һөйләгән. Әйткәне тоғро килгән.

Ырымбурҙа батша туйында аттары алда килгәнен Мөхәмәт ҡарт һөйләне.

Быҙаулыҡ тамағы Баһауетдин — кантон ярҙамсыһы, Бөрйән байы Мырҙа[97] ауылы Хәби (Жәми?) кантонды саҡырғанда, кантон аҡкүк арғымаҡҡа менеп уртанан, алтмышлап бөрйән ике яғынан ҡаҙ ҡанатлап килеп, Өлкән Маҡан (һыуы), Бороллы күл яғына, Аҡ балсыҡлы (балсыҡлы?) күлдә килеп ҡунаҡ булып, ат сабырға тәғәйенләгән көнө Ғүмәр хорунжий — күксәйҙе, Аллаяр хорунжий көрән атты саптырырға алып барғас, саба торған егерме бишләп аттарҙы Ғәбделнафиҡ муллаға фронт тороп күрһәтәләр. Мулла, ике ҡулдарын ян кеҫәгә һалып ҡына, ҡыҙыулап (ярһып) торған аттарҙың алдынан-артынан бер өйөрөлөп килеп:

— Аттарҙы ҡайһы яҡтан ебәрәһегеҙ? — тип һорағас, — Тимерһуҡҡандан[98], хәҙергесә Ғәбделлатиф утарынан, — тип яуап биргәс, Ғүмәр хорунжийҙың аты Күксәйгә ҡарап:

— Күксәй, йә көйөң дә килгән, ереӊ дә килгән икән, оло юлы отмаһаң, ғүмере лә үтә алмаҫһың, — ти. — Күксәй, шулай булһа ла, мынау арҡыры ҡолаҡтан ҡурҡам, ти ҙә, бәйгегә етәр ер һарҡыу, алдыңды бирмәҫһең әле, — ти. Уғлы Аллаяр хорунжийҙың көрән атына ҡарап:

— Ай, Көрән ат, ярауың килмәгән, һимеҙһең, шулай булһа ла ебәр, дүртенсе бәйгене алыр, — ти. — Өс саҡрым сапҡанса аҡ күперегә сығып, ите ташыр, шунда йығылып ҡалмаһа, шунан өс саҡрым сапһа, тире һыуыныр, шунан бирешмәҫ, — ти. — Бөрйән ҡунаҡтар, һеҙгә туғыҙ аттан алда бәйге юҡ, — тигәс, бөрйәндәр:

— Һаңрау ҡарт, һин ни беләһең! — тиҙәр. Хәби кантон да Күк арғымаҡты ебәрә.

Бер ваҡыт аттар сабып килә. Алда бер күк ат килә. Халыҡ:

— Кантун аты килә, — тиҙәр. Ғәбделнафиҡ мулла:

— Булмаҫ кантун аты, алда беҙҙең Күксәй, — ти.

Ат яҡынлап килә. Мулланың һүҙе бер ҙә хата түгел, әлеге Ғүмәр хорунжийҙың Күксәйе, әлеге арҡыры ҡолаҡ Күксәйҙе ҡойроҡлап килә. Көрән ат дүртенсе бәйгене ала. Бында ҡоро намыҫ һис нәмә эшләй алмай. Туғыҙ бәйгене лә Үҫәргән[99] аттары алып, бөрйән аттары туғыҙҙан артта киләләр.

Ғәбделнафиҡ та атаһы Рәхмәтулла кеүек, (Юлыҡтағы) Ғәбделлатиф хәҙрәт вафат булғас, абыстайҙың малдарын тәрбиәләп, йәй көнө Маҡандан Юлыҡҡа һаба менән ҡымыҙ ташып, ҡыш булһа һуғымлыҡ малын алып барып, һуйып биреп торған. Ғәбделлатиф хәҙрәттең балалары Мөхәмәтйән, Мөхәмәтшәриф, Мөхәмәтвәли мәхдүмнәр (хөрмәткә лайыҡ кешеләр)...

(Төп нөсхәлә ике бит (292-293) юғалған)

. . . . . . . . . . . . .

(Ат) менеп, сабып килеп, малдар һуйып, ауыл муллаларын, ҡарттарын йыйып, шатланышып ҡунаҡ иткәс, «Беҙгә рөхсәт итегеҙ, беҙҙе хеҙмәткә тотоп алырҙар, бер ерҙә оҙаҡ килешмәҫ, беҙ Ишан ауылындағы еҙнәй-апайыбыҙҙы барып күрәбеҙ», — тип Ишанға китәләр. Шунан һуң хәҙрәттәрҙе хеҙмәткә тотоп ебәрергә батша әҙләтә. Ғәбделнафиҡ мулла үҙе һәм ағай-энеләренән, Бөрйән, Түңгәүерҙәрҙән йөрөп, утыҙ башлап ат-айғырҙар йыйып килтергәс, ул ваҡытта бында баҙар

булмау сәбәпле, Ырымбурға малдарҙы һатырға киткәндәр. Ике-өс кеше һәм дә мулла Мөхәмәтшәриф[100] хәҙрәтте ҡоба итек, ҡоба сәкмән, ҡулында ҡороҡ, һыбай атҡа мендереп, (Ғәбделнафиҡтың) уғлы Аллаяр исеменә удостоверение (танытма) алып, малдарҙы ҡыуалашып Ырымбур барып, унда һатып бөтә алмай, Стәрлегә барып һатып килеп, баяғы аҡсаға Верхнеуральск өйәҙенән бер кешене яллап, эйәртеп ебәреп, хәҙрәттәрҙе Юлыҡта русса өйрәтергә ҡушҡан.

Бына Ғәбделнафиҡ 18... йылда ... йәшендә фани донъянан әхирәт йортона күсә. Алла Кәрим йәнеңде йәннәттә ҡылһын. Амин!

Ғәбделнафиҡ мулла Темәс волосы Ҡыҙыл һыуы буйында Ҡулбаҡты ауылында Рәхмәтулланың Сафия исемле ҡыҙына никахланып, Быҙаулыҡ тамағының үрьяғында Һыулыүҙәк йылғаһына оҙатып алып килә. Килеүендә Смаҡ Һары күл[101] ауылына төшөп, шунан Һары күлдең йәш килен-ҡыҙҙары баш өҫтөнә шаршау тотоп пәрҙәләп, анау ултырған бейек Ҡаҙуҡа тауының башына мендергәс, Ирәндектең ҡарағасынан алып килгән аҡ һағыҙҙы килен-ҡыҙҙарға өләшкәс, атына мендереп, хуш бул, тип оҙатып ҡалдылар, тип Сафия олабсәй (өләсәй) һөйләне.

Ғәбделнафиҡ мулланың Мөхәмәтйәр, Аллаяр, Бәхтийәр — өс дана уғылдары, биш дана ҡыҙҙары булған.

Беренсе ҡыҙы Һары күл (ауылы) Исмаҡ байҙың улы Ғәбделғәни никахында булып — Ғабдулла «Абаит мулла» аталып, Ғәбделнасир ауылында «Абаит мөәзин» булып — шунда вафат. Исмаҡта Нуритдин мулла шул Ғабдулла мулланың уғлы.

Икенсе ҡыҙы Фирүзә Һултантимерҙән. Мең ярым йылҡы көткән Ғәбделлатиф мулланың Сәғиҙулла исемле уғлына ғаҡыд (вәғәҙәләшеү, һүҙ ҡуйышыу) никах көнөндә мәһәренә ҡырҡ йылҡы һалғандар һәм шул һалынмыш йылҡыларҙы кәмләп алып бөткән ҡағыҙҙары бар. Сибәғәтулла исемендә уғлы бар ине, вафат.

Өсөнсө — Кафия исемле ҡыҙы Аҡъяр Рәхмәт балаһы Дәүләт никахында вафат. Бер уғлы 1921 йыл вафат. Дауыт исемендә бер уғлы бар.

Дүртенсе — Камила исемле ҡыҙы Байғаҙаҡ[102] ауылы Шәрип мулла уғлы Дәүләтша мулла никахында вафат. Уғыл-балалары юҡ. Бишенсе — Хәтирә исемле ҡыҙы Юлдыбай Кәлимулла никахында вафат. Уғылдары ҡалманы.

* * *

Мөхәмәтйәр (бин Ғәбделнафиҡ) Юлыҡ Хаммат хәҙрәттә уҡып, өс айғыр өйөрө йылҡылар көтөп, ҡуй малын да, яҡшы ғына бай булып, ҡымыҙ менән халыҡты һыйлап, Юлыҡ ишан хәҙрәтенә ике мәртәбә килеп ҡунаҡ булып, ашлыҡҡа өмәләр итеп, ғилемгә дуҫ, ғибәҙәтле әҙәм. Троицк[103] Зәйнулла ишанға мөрит (эйәреүсе, шәкерт) булып урта ҡалын кәүҙәле, кәзә һаҡаллы, аҡыллы, аҙ һүҙле ине. Ҡалтайға күсеп килгәс, 19... йылда 97 йәшендә вафат.

Һәр ваҡыт: «Балам, үҙең турыла яҡшы һүҙ һөйлә, яҡшы һөйләргә белмәһәң, тик ултыр», — тип һәр ваҡыт һөйләй торған ине.

Ҡатыны Утарбай ауылы Һәйет ҡыҙы Бибиҙән: Мөхәмәтйән, Ғәлимйән, Ноғман, Уйылдан; Ғәйшә, Хәлимә, Рабиға, Әминә, Саҙиҡа, Салиха — ҡыҙҙары. Ғәйшә Бүребай Ғилман никахында вафат. Ир бала ҡалманы. Мәмбәт Әҙелмырҙала ҡыҙы бар. Хәлимә Һултантимер Ғәбит мулланың Шаһимарҙан исемле улы никахында, хәҙерге көндә 5 дана терек улылдары бар. Рабиға Бирмәҫ тамағы[104] Ғәлиулла мулланың улы Хәммәт мулланың никахында. Хәммәт мулла Бохараи шәрифтә вафат булғас, Рабиға Ғәлләм мулла никахында вафат.

Әминә Айыулы тамағы Зөлҡәрнәй балаһы Ғәйнулла никахында. Лотфулла исемендә улы бар. Саҙиҡа Зиятдин улы никахында вафат.

Мөхәмәтйән Орск Ғариф хәҙрәттә уҡып, Мәнәүез Шәрәфетдин хажиҙың Нәсихә исемле ҡыҙына никахланып, яҡшы дәүләт менән, ғибәҙәт менән ғүмер кисереп, 19... йыл ... йәшендә вафат Сәғиттә. Ҡотлозаман, Шакирйән, Ғилман; Хәлимә, Камила, Вәғиҙә (балалары), Аҡъяр Вәзирхан балаһында. Камила Ғабдулла мулла никахында, ике улы бар.

Ҡотлозаман бер һәйбәт егет ине, йәшләй вафат. Шәрифулла исемле бер улы ҡалды. Бөрйән Йомаш ауылында «бөрйән (ырыуынан) булам» тип йөрөй.

Шакирйән — хисле йөрөгән, таҙа торған бер кеше. Закирйән, Мөхәмәтғәли — ике йәшлек улы менән Ураҙайға китте. Хуш бул! Ғилман — йәш егет, алла тәүфиҡ бирһен! Ураҙайҙа йөрөй.

Нәсиха еңгәй Айыулы тамағында вафат булып, ҡәбере шунда. Яҡшы ҡатын ине. Вәлиттән алған Фәғиләнән Ғибадулла исемендә улы Ғилман тәрбиәһендә.

Ғәлимйән бин Мөхәмәтйәр Юлыҡ хәҙрәтендә уҡып, ғибәҙәтле, сауҙагәр — ит, ваҡ тауар сауҙаһы менән көн күреп — йәмәғәт намаҙынан ҡалмай, мәсетте тәрбиәләп, аҙан уҡып тора ине. Ҙур ҡалын кәүҙәле, боғдай (бойҙай) түшле, күркәм һаҡаллы, ҡунаҡ һөйөүсе, мөритле һәм илтифатлы, ҡуштан хеҙмәтсән, ауылдың алдына сығып, халыҡтың бер кәңәшсеһе булып йөрөгәндә, 1909 йылдарҙа 48 йәшендә вафат, ҡәбере Мәмбәттә. Маҡан күле йортоноң үр яғында ҡамыш эсендә — ана ултырған Оҙон ташта исеме яҙыулы.

Ул таш бер аршын ҡәҙәре ерҙән күренеп ултыра ине. Шуны йәй ҡымыҙ эйәләре менән унлап егет күтәреп ултыртты. Шунда яҙылды. 1877 йылдарҙа булыр кәрәк, беҙ бала инек, барып торҙоҡ.

Ҡатыны Аҡъяр Ҡотлоғужа Ҡулбай ҡыҙы Зөлхиәнән Сабирйән исемендә бер генә улы. Ғәзизә исемле ҡыҙы Айыулы Рәхмәтулла никахында. Шәһидә исемендә ҡыҙы Өсөнсө Үҫәргән Гөбөрлө[105] Нурбулат ауылында кейәүҙә.

Сабирҙың хәҙергә һулау-тыны Ураҙайҙа. Ҡарт әсәһе тәрбиәсеһе булып тора.

Ноғман бин Мөхәмәтйәр Юлыҡта уҡып, биш йылдар атлы хеҙмәттә Киев[106] ҡалаһында булып ҡайтып, Аҡъяр Сәйфетдин байҙың Өммөниса исемендә ҡыҙына никахланып, яҡшы, туҡ ҡына донъяла йөрөп, ана, Ураҙайға күсте: «Прашшайте бака! Насип булһа, на той эсбиттә күрешербеҙ»[107]. Сабит, Ғәбделғәлим — улдары. Хәйерниса тигән ҡыҙы Түңгәүер Насретдин бин мулла Ғәйнулла никахында вафат. Бер ҡыҙ бала ҡалды. Сабит Турат ауылы Минһажетдин

кантон ҡыҙын алып, атаһы менән бергә. Әсмә Насирйән Сәлимйән уғлы никахында, Сәғиттә.

Уйылдан бин Мөхәмәтйәр Юлыҡта уҡып, бер мәсет ҡарты ине. Мәсеттән өркөп, Ураҙайға китеп ҡалды. Хәҙерге заманда Уйылданды түгел, үҙ балаңды ла тыңлатып булмай, ни хәл итмәк кәрәк. Хәлим мулла Ғәлимбәк ҡыҙынан Әхмәҙи исемендә уғлы большевик һуғышында Ҡустайҙа[108] вафат. Әхмәтғәли тигән уғлы атаһы менән бергә, Хәспиямал Ғәлләм суфый ҡыҙынан уғлы бар. Мөхәмәтйәр балалары шунда тамам.



## Аллаяр бин Рәхимйән

Аллаяр бин Ғәбделнафиҡ Юлыҡ, Ҡарғалы[109] Хәммәт хәҙрәттән уҡып, ғәскәрлеккә алынып, әрме Ҡыҙыл сәкмән хеҙмәттәрендә[110] йөрөп, хорунжий булып, Аҡ мәсет һуғышына[111] барырға тәғәйен ителгәс, урынына Һабыр ауылы Вәкәйҙе шул заманда өс йөҙ һумлыҡ бер ҡыҙыл туры юрға ат биреп яллап (үҙе) ҡалған. Вәкәй шул юрғаны Ибрсман тигән рус түрәһенә һыйлап биреп, хорунжий булып, үлгәнсә ҡаҙнанан жалунйә[112] ашап, донъянан китте.

Аллаяр ике айғыр өйөрө йылҡы, бер йөҙ илле ҡуй хайуандары тотоп, бик шәп игендәр сәсеп, хәләл кәсеп менән хәләл ризыҡ ашап, ғибәҙәтле, тоғро, хаҡ һүҙле, асыҡ йөҙлө, ғилемгә дуҫ, урта ҡалын кәүҙәле, ҡара түңәрәк һаҡаллы, ҙур күҙле ине. 1890 йыл 29 июлдә шишәмбе көн 63 йәшендә тамағына шешек сығып, ике көн ауырып, өсөнсө көнө — шәмбелә көндөҙ вафат. Шул мазлум (рәнйетелгән) ҡәбере Мәмбәттә, тау яҡ ситтә. Эй, атам, рухың Алланың рәхмәтендә ғарыҡ (туйған) булһын!

Беренсе ҡатыны Зөләйхә Ҡайраҡлы ауылы Ҡәнзәфәр мулла ҡыҙынан: Ғабдулла, Дәүләтйәр, Лотфулла, Хөснөтдин, Хәсән, Хөсәйен — уғылдары. Икенсе ҡатыны Фәғилә Ғәбделнасир Ғәбделхалиҡ мулла ҡыҙынан: Мостафа, Мортаҙа, Сәләхетдин, Сәғәҙетдин — уғылдары, Ғәйшә, Хәҙисә, Мәфтуха — өс дана ҡыҙҙары.

Ғабдулла һәр төрлө дин ғилемдәренә мәшғүл булып, хыянатһыҙ, хәләл кәсеп менән көн күреп, 19... йылдарҙа 70 йәштәрендә вафат, Сәғиттә. Ҡатыны Аҡъяр Муллағәләм ҡыҙы Сәрбиямалдан бала булманы, нәҫел дә ҡалманы. Аҫыл балаларың булмағас, иншалла, ҡиәмәттә сөал (һорау) хисабың аҙ булып, йәнең рәхәттә булһын.

Дәүләтйәр Утарбай мулла Дауыттың Сәғиҙә исемендә ҡыҙына никахланып, 90 баш йылҡы, бер йөҙ илле ҡуйҙар көтөп, иген кәсептәренә хөрмәтле булып, тоғро, хәләл ризыҡлы кеше булып, 19... йылдарҙа, 97 йәштәрендә вафат. Низаметдин, Илһаметдин, Баһауетдин, Нәғимә, Рабиға — балалары булды. Нәғимә Кәрим (ауылы) Шәрәфетдин никахында, Рабиға Кәрим[113] Ғибаҙулла бин Йомағужа никахында вафат.

Низаметдин Мәнәүез[114] Заһиҙулла хәҙрәттә уҡып, хәҙерге заманда ла намаҙын уҡығаны күренә. Хәләл кәсеп менән, яҡшы, туҡ ҡына мәғишәт (тормош) көтә. Беренсе ҡатыны Фатима Йософ мөәзин ҡыҙынан — Ғәйшә, икенсе ҡатыны Бәҙерниса Сиражетдин ҡыҙынан Хәйретдин, Йәүҙәт, Әсғәт исемендә сабый уғылдары, өсөнсө ҡатыны Кафия Сәләхетдин ҡыҙынан Заһира исемендә ҡыҙы бар.

Илһаметдин большевик һуғышында ауырып, Орск дауаханаһында вафат булды. Бер уғлы ҡалды. Баһауетдин ун йылдар һуғышта булып, төрлө ҡатылыҡтар (михнәттәр) күреп, хәҙер ҡарт анаһының тәрбиәсеһе булып, яҡшы дәүләтле, хәләл кәсеп менән атаһы йортонда, бер уғлы бар.

Лотфулла бин Аллаяр Аҡъяр Ғәбделхәй хәҙрәттә уҡып, Ырымбурҙа эскадронда атлы хеҙмәттә алты йылдар йөрөп, Сары ауылы Оҙон Үтәмиш уғлының Фатима исемле ҡыҙына никахланып, Лоҡман-

хәким, Сибәғәтулла, Өммөкамал, Шәмсикамал исемендә балалары булды. Өммөкамал Сәлим (ауылы) Шафиҡ никахында 1921 йыл аслыҡта һәләк булды. Шәмсикамал Турат Ҡазыхан уғлы никахында вафат булды.

Лоҡманхәким биш йылдар ғәскәрлектә йөрөп, шунан япон-ҡытай һуғыштарында[115] йөрөп, эфисәренә пуля тейеп һәләк булыу илә, ғәскәрҙе туҡратмай командовать итеүе сәбәпле эфисәр булып, шунан герман һуғышында[116] төрлө ҡатылыҡтар күреп, шунан өс йыл буйына мәшғүл бер тоташтан һуғышҡа бара торған һалдаттарға уйын (һуғыш тәртиптәре) өйрәтеп, ахырында сирләп ҡайтып, утыҙ йәштәрендә вафат булды. Алла рәхмәт итһен. Был замандағы йәштәр күрҙеләр.

Айыулы тамағындағы Ҡотлоғәфәр ҡыҙынан Фәрхиямал исемле йәш кенә ҡыҙы ҡалып, Сибәғәтулла тәрбиәһендә тора. Оҙон кәүҙәле, асыҡ йөҙлө, хеҙмәткә ирәбе бер ир ине.

Сибәғәтулла ла Лоҡман күргәнде күреп, хәҙер Аҡъярҙа тора, беҙҙең шәриғәтебеҙ дингә һәм көнгә ҡайһы ерҙә йомшаҡ булһа, шунда торорға ҡуша. Сибәғәтулла Төрөк Һарыҡармыш һуғыштарында[117] йөрөп ҡайтҡанда Мөнирә исемле бер төрөк ҡыҙы алып, ике генә йыл торғас вафат булды. Бисара әсирәнең жәсәде (изге кәүҙәһе) Ҡалтай ҡәберлегендә ҡалды. Тупраҡ, әжәл ҡайҙан тартып алып килә! Ислам йортоноң балаһы булыуы менән әҙәпле генә ине.

(Сибәғәтулланың) икенсе ҡатыны Зөләйханан — Күк азбан тауындағы Фатима ҡоҙоғо шул Фатима еңгәй ғосел ҡылғандан (ҡойоноу, йыуыныу) ҡалған.

Фәтхулла советҡа ғәскәр булып Бохараи Шәреҡ[118] тарафында басмач, бандит, дезертирҙар һуғышында йөрөп, яңы ғына килеп, донъя көтәм тип тора.

Хөснөтдин (ибн Аллаяр) Ғәлләм хәлфәлә, унан Юлыҡта уҡып, ишандың беренсе һөйөклө шәкерте булып, хәлфә булып йөрөгәндә, ғәскәрлеккә китеп, Ырымбурҙа биш йылдар йөрөп килеп, Аҡъяр Хәлилулланың Фариза исемле ҡыҙына никахланып, Хисаметдин, Сәйфетдин уғылдары булып, Хөснөтдин холоҡло, ғибәҙәтле бер кеше булып, 33 йәшендә 1890 йыл августа вафат, ҡәбере Мәмбәттә.

Хисаметдин ауыр ғына уҡыһа ла, биш намаҙын ҡалдырмай, күркәм холоҡло бер кеше ине. 1921 йыл Орскигә барып, ете миллионға йорт һатып, шунда бик яҡшы ғына тора ине, егерме етенсе йыл вафат булды. Ҡәбере Орскиҙә. Ҡатыны, йәш кенә ике ҡыҙы ҡалды.

Хәсән дә Юлыҡта уҡып, әүәлдә Ырымбурҙа атлы хеҙмәттә булып, кесерәк кәүҙәле, сарға, бер һуҡҡанда бер кәзәлек һуғып йөрөнө. Йомшаҡ тәбиғәтле, мөрәүәтле (егетлек, ирлек) ине. 19.. йылдарҙа вафат, Сәғиттә. Ҡатыны Ғилмизада Солтанғәли ҡыҙынан: Ғәбделәхәт исемендә уғлы, Саҙиҡа, Сәмиға, Хәмиҙә. Саҙиҡа Әҙел ауылы Хәбибулла бәһлеүән никахында. Сәмиға Суҡраҡта вафат. Хәмиҙә Сәлим ауылы Мәһәҙей никахында. Бер ҡыҙы Ҡыпсаҡ Ғәбделбасир никахында вафат. Ғөбделәхәт Сәғит ауылында ҡарт әсәһен тәрбиә итеп тора. Йәш кеше, Алла тәүфиҡ бирһен.

Хөсәйен (бин Аллаяр) суфый Юлыҡта уҡып, бер ғибәҙәтле, хәләл кәсепле. Ана Ҡалтай мәсетендә шул ғына инде. Ваҡыттар үҙгәреп

тора. Мәсеттәр яҙмышы ҡалай булыр, Алла белә. (Хөсәйен) хәҙер 63 йәштәрендә улы Мәхмүтйән менән бергә. Мәхмүтйәндең бер улы, бер ҡыҙы бар. Ҡатыны Хәфизә Ғатаулла ҡыҙынан: Таһир, Мәхмүтйән, Сабира, Шәмсиҡәмәр, Мәстүрә исемендә балалары. Сабира Бүребай Ҡотломөхәмәт никахында. Мәстүрә лә Түбәнге Ерән-ҡыҙылағас ауылында Ғатаулла никахында. Таһир Орск ҡалаһы Ғибаҙулла, Сәлих хәҙрәттә уҡып, һуғыштарҙа йөрөп, хәҙер ауылда кәсеп-һолло булып, ике йәш кенә улдары менән тора.

## Яңыса уҡытыусы Мостафа бин Аллаяр

Мостафа бин Аллаяр Юлыҡ ишан, Салих ахундарҙа уҡып, 1897 йылдарҙа Ғәбделғәни Хөсәйеновтың Юлыҡ Салих ахундан дүрт хәлфә ебәрегеҙ (тигәс), ысул йәдид[119] яңы тәртип, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙса түтә уҡыуҙы Ҡарғалыла Ғәбиҙулла байҙың мәсетенең имамы Саҙиҡ хәҙрәт мәҙрәсәһендә бер ай ғына байҙың икмәген ашап, яңы тәртипте, Ғәбиҙуллаға мәғлүм, уҡыуҙан өйрәнеп килеп, ике ҡыш Юлыҡ ауылында балаларҙы уҡытып, айына ун һумлыҡ вазифа алып, биш һумы ғәниҙән (байҙан), биш һумы шәкерт-мәйефтән.

Ике ҡыштан Мәмбәткә ҡайтып, унда ике йыл вазифа менән уҡытып, унан халыҡ тәрбиәһендә туғыҙ санә уҡытып, балалар һәм халыҡтың яңынан яңыға әйләнеп килә-килә, ошо көндә динһеҙлеккә әйләнеүенә беҙ сәбәпсе булдыҡ иллә. Әстәғәфирулла, был хәтле ҙур гонаһым, тәүбә менән ярлыҡармы?.. Алла Кәрим үҙенең фазылы (өҫтөнлөгө, кешелеклеге) менән ярлыҡармы, был эштәр бәндәгә мәғлүм түгел. Беҙҙең исемебеҙ мөшкөл. Алдал ғали эше гонаһлы тигән.

Мәмбәттән Ҡалтайға күсеп, унан 1927 йыл Ишанға күсеп, имам булып, ахыры хәйерле булһын. Хәүефле ваҡыт.

## Изге эшкә ижтиһатлы Мортаза бин Аллаяр

Мортаза бин Аллаяр — бер генә ҡыш Мифтахетдин хәҙрәттә, бер генә ҡыш Юлыҡта уҡып, тоғро, ғибәҙәтле, хәләл кәсепкә иждиһатлы. Ҡалтайҙа мәсет эшләргә башлағанда ун ат йыйып алып, Баймаҡтан өрләк, бруслыҡ бүрәнәләрҙе килтереп, манара күтәргәндә, Мәмбәт ауылдарын саҡырып, манара туйлап*, мәсет эшләнеп тамам булғас, Солтанғәли Яналиндың эшләтеп әҙерләткән менбәр (трибуна, кафедра), шәриф (кәҙерле) таяҡты килтереүсе шул Мортаза ине.

Ҡалтайға күскәндә, башлап юл һалып, Мортаза исемендә юл ҡалдырыусы ла шул. Мортаза, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, байлығы булмаһа ла, изге эшкә ижтиһатлы (ихлас) ине. 1914 йылда вафат булды. Алла Кәрим, хисабын асан әйлә*. Кәрим (ауылы) Хажмөхәмәттең Сәрбиямал исемле ҡыҙына никахланып, Исмәғил, Ғосман, Йәмилә — өс дана балалары ҡалды. Йәш кенә булһалар ҙа, кәсепкә ҙур теләкле булдылар. Исмәғилдең Фазылйән исемендә улы бар.

Сәләхетдин Орск Ҡарый хәҙрәттә ике ҡыш уҡып, ғәскәрлектә биш йыл булды. Сағит ауылында кәсеп менән көн күрә. Ике йәш кенә уғылдары Ғәлимәһендә. Ҡыҙы Аҡъяр Ғабдулланың Сағиҙулла тигән уғлының никахында.

Сәғәҙәтдин (бин Аллаяр) Юлыҡта 1897-1898 йылдарҙа түтә уҡыу менән уҡып, унан Ҡарыйҙа бер ҡыш булып, Абҙан[120], Троискиҙән илле йәшендә уҡып, унан аҙаҡ Ғибадуллала уҡып, совет мөғәллиме булып, вазифа менән... көн күрә. Ҡалтайҙың ере ташлы тип, 27 өйлө кешеләрҙе Ураҙайға күсереп, үҙе Һабыр ауылында мөғәллим-мөғәллимә булып торалар.

Ғәйшә банат Аллаяр Ҡыпсаҡ (ауылы) мулла Хәкимйән никахында вафат. Мөхәммәт, Зариф исемендә ике уғылдары ҡалды.

Хәҙисә Аллаяр ҡыҙы Кәрим (ауылы) Хажимөхәмәт никахында, биш дана ҡыҙҙары бар.

Мәфтүхә банат Аллаяр Сурай[121] Хәмзә никахында вафат. Сағиҙә исемендә ҡыҙы Ҡасҡын[122] ауылы Хужахмәт уғлы никахында.

Аллаяр уғылдары шунда тамам булды.



## Ғәбделнафиҡ уғлы Бәхтийәрҙең зат-зорияты

Бәхтийәр Ғәбделнафиҡ уғлы Юлыҡ ишанда уҡып, иҫәп-хисап ғилемдәренә алдынғы булып, күп кешеләрҙең малын иҫәпләгәндә иҫәбе тоғро килеп, күп кешеләрҙең тәһәрәтен һындырҙы. Белгәнен маҡтау буш булмаҫ.

Сауҙагәр булып, 25 йыллап игендәр сәсеп, яҡшы, иркен генә тормош көтөп, мәсет-мәҙрәсә тәрбиәһендә ғүмерен үткәрҙе. Ҡалтайға күскәс тә әүәл башлап бол (ағас-таш, материал) йыйып, баш булып, ойошторма ла итеп, мәсетте тамам иттерҙе... Зәйнулла хәҙрәткә мөрит булып, ордендар алған ине. 1920 йыл 82 йәштәрендә вафат, ҡәбере Сәғиттә. Ҡатыны Хәлимә... Мөхәмәт ҡыҙынан Муллаяр, Сабирйән, Ильяс, Ғәббәс, Зөлхиә, Ғәлимә, Хәтирә — балалары булды. Муллаяр, 1921 йыл уабала вафат. Ильяс совет һуғыштарында йөрөп, шәп кеше ине, Һабыр ауылында дезертирҙар үлтерҙе. Шәмсиғәлимә Һабыр ауылында ирҙә тора. Хәтирә Аҡъярҙа Хәмиҙулла мөғәллимдә.

Сабирйән Юлыҡта бер ҡыш ҡына булып, ... йәшендә, сауҙагәр ҙә ине. 21-се йыл Тинкраб (?) ҡарт әйтте: Нурбулат кантоны ҡыҙы Латифанан Ғәли исемле уғлы Орскиҙән ҡатын алып, Камил, Ғамир исемендә ике уғылдары менән Баймаҡта кәсеп итә. Ҡыҙылағас[123] ауылы Хәмит ҡыҙы Файза сәсәндән Ғибаҙулла, Әхмәҙулла, Ғабдулла — (өс) дана уғылдары. Сабирйәнде юғарыла ҡартайҙы тип яҙыуым хата булып сыҡты. Бынау балаларҙы күрмәйһеңме!..

...Юлыҡта ике ҡыш шәкерт булып, ғибәдәтле, сауҙагәр булып, бик алға сыҡҡанда, 49 йәштәрендә вафат булды. Сәмиғә Мөхәмәтғәли ҡыҙында, Ғималетдин, Һәжәр ағаларында балалары ҡалды. 1927 йыл Аҡъярҙың һабан туйында Ғималетдин йәйәү йүгереп икенсе бәйгегә бер күлдәклек тауар алды. Яҡшы кәсепле генә, әсәһен тәрбиә итеп арыу тора.

Ғәббәс Ғабделнасир ауылы Ғабдулла хәҙрәттә уҡып, биш намаҙын ҡалдырмай. Һуғышта пленда күп йылдар йөрөп, кәсеп менән көн күрә. Шәрифә Бирмәҫтамаҡ ауылында Мәхмүт никахында аслыҡта вафат. Бәхтийәр балалары тамам.



## Рәхимйәндең Сибәрбикә тигән ҡатынынан таралған зат

Рәхмәтулла бин Мәмбәттең Сибәрбикә исемле ҡатынынан: Мөхәмәтшафиҡ, Ғәбиҙулла, Ғәбделғәфәр, Ваһиба.

Мөхәмәтшафиҡ өс айғыр өйөрө йылҡылар көтөп, ҙур ғына бай булып (йәшәне), ҡарт көнөндә беҙ ҙә күрҙек. Көн буйына ҡымыҙ эскәндә бер ҙә һүҙ һөйләмәй ултыра ине. Ғибәҙәтле бер кеше ине. Ҡатыны Юлдыбикә Ғәбделнасир ауылынан. Ғәбделрафиҡ, Ғәбделрәхим, Ғәбделлатиф, Ғәйнизар, Мәүғиҙә, Бибижәүһәр — ҡыҙҙары. Мәүғиҙә Бөрйән Мансур ауылында ирҙә булды. Ғәйнизәр Аҡъяр Һибәтулла никахында, хәҙер бар әле. Өс дана уғылдары бар. Бибижәүһәр Юлдыбай Өтөк Кәли еҙнәй никахында вафат.

Ғәбделрафиҡ Кәлимулла хәҙрәттән уҡып, йәш ваҡытында сауҙагәр булып, динле, мәсет тәрбиәһенә лә яҡшы, донъяһында совет тороп ғүмер кисерҙе. 80-гә яҡынлап вафат, Мәмбәттә. Ҡатыны Рәйхандан Сәлимйән Рәхмәтуллала ғүмеренең барын да сауҙагәрселек менән анһат йөрөп (көн итте), яҡшы, иғтибарлы ине. 1928 йыл 55 йәшендә вафат. Ҡатыны Сары ауылы Шаһморат ҡыҙынан Хәйрулла тигән уғлы атаһы урынында. Зәйнәп исемле ҡыҙы Ерән ағаста... никахында вафат. Мәғфүрә Вәлит ауылында вафат.

Ғәбделрәхим ахыр ғүмерендә ҡырҡҡа яҡын йылҡыға эйә булған бер бай булып, 75 йәштәрендә вафат. Фазылйән исемендә уғлы Мәмбәттә. Насирйән исемендә уғлы Бикет мужигының аттарын сабынлыҡҡа төшкәндә тотоп, шул хахул бысаҡ менән ҡарынын ярып, шунан вафат булды. Урынһыҙ батырлыҡ. Бына бер бот бесән өсөн үлеп ҡалды. Сәғиҙулла исемендә уғлы утыҙ йәштәрендә, 27-се йыл вафат булды.

Ғәбделлатиф Мөхәмәтшафиҡ уғлы ҙур кәүҙәле, көрәшкә бәһлеүән, йомшаҡ һүҙле, маллы, ризығы киң бер кеше булды, ... йәштәрендә вафат, Мәмбәттә. Хәкимйән, Ғарифйән ҡалды, Сәлихйән, Мирзаян, Нәзирә. Бер ҡыҙы Ҡолбирҙе Аллаяр никахында. Нәзирә Хужа никахында, ике уғылдары бар. Хәкимйән герман һуғышында юғалды. Мирзаян 25 йәштәрендә вафат. Салихйән герман һуғышында плен төшөп, туп тейеп ҡаҙып алғас, илгә ҡайтҡас та өс-дүрт йылдар аҡылһыҙ, диуана тәбиғәтле йөрөп, шунан һуң сәләмәтләнеп, хәҙер яҡшы ғына хәләл кәсеп, ғибәҙәт менән ғүмерен үткәрә.

Ғәрифйән Мәмбәттә, кәсепкә иждиһатлы. Бер-ике дана балалары менән Мәмбәттә атаһы йортонда.

Шафиҡ балалары шунда тамам.

Ғәрифйән бин Ғәбделлатиф бин Мөхәмәтшафиҡ бин.

## Моңһоҙ Әбит, йәғни Ғәбиҙулла бин Рәхимйән

Ғәбиҙулла, ҡушаматы Әбит ҡарт, бин Рәхмәтулла бөлөүә (аҡылға бер төрлө) генә бер кеше булған тиҙәр. Уғлы Хажи сауҙа итеп йөрөгәндә, Хажиҙың сауҙа малынан бар тайҙы, Хажи өйҙә юҡ ваҡытта, ун бот ярым арпаға Аҡъяр Шаһморатҡа һатҡан. Хажи ҡайтып килеп:

— Тай ҡайҙа? — тигәндә:

— Һаттым, — ти.

— Ни хаҡҡа? — тигәндә:

— Ун бот арпа бер алдым, йәнә бер бот үлсәп, ярты ботон Шаһморат, ярты ботон мин алдым, — тип яуап бирә. Ун бот ярым, тип әйтергә белмәй.

Шунан Хажи:

— Ул тайҙы арзан һатҡанһың, барып алам, — тигәндә:

— Алырһың, алырлыҡ иттем шикелле, — тип яуап биргән. Былай итеп яуап биреүе «сколько менән бирҙем!» тигән һүҙе булған тиҙәр. Хажи шунан тайҙы алырға барһа, Хажиҙың килерен белеп, Шаһморат ҡасҡан. Киткәндә, ике ҡатынына әйткән: «Хажи тайҙы алырға килер, килһә ҡыйнап сығарығыҙ». Хажи килгән, әлеге ике ҡатын көйәнтә, тәртешкә менән туҡмап, ҡыуалап ебәрәләр.

Борон, канауға йөрөгән заман[124] ауыл ҡарттары йыйылып, канауға ебәрергә кеше таба алмайҙар. Әбит ҡарт: «Ҡарттар, һеҙ ебәрергә кеше таба алмайһығыҙ, беҙҙең Хажи бер ҙә барғаны юҡ, шуны яҙҙырығыҙ», — тип, улы Хажиҙы яҙҙырып, бер айлыҡ канауға ебәргән. Былай (Ғәбиҙулланың) бөлөүәлегенә ошо дәлилдәр етәр.

Әбит яңы күлдәк тектереп, еңгәһе Сафияға күрһәтергә:

— Еңгәй, быналиненең күлдәк тегеп кейҙерҙе, — тигәс, Сафия теккәндәрен ҡарап:

— Һуҡыр кеше лә былай текмәҫ, ҡайтып бармағын сәйнә, — тигән. Әбит ҡайтып:

— Хәбиб, ҡана бармағың, — тип, Хәбибтең бармағын теше менән сәйнәгән. Әбит Хәбибъямал ҡушаматы шунан. Хәбибъямалдан — Хажи, Ғәлиәхмәт (улдары) Гөлгөнә исемендә ҡыҙы Аҡъяр Сәйфулла сулаҡ никахында вафат.

## Суфый аты алған Әбит улы Хажи

Хажи ғүмерендә Бирле Хажи һәм Хажи суфый булып та йөрөнө. Бирле Хажи булыуы: йәй ваҡытта йылҡы көткәндә аттан төшөп бәүел иткәс, менгән атының ҡылына һөртөп ҡороҡҡан. Шунан атына менеп йөрөмәксе булһа, аты тулап-тулап сығып киткән.

Йәш ваҡытында ҡыҙҙар менән ҡурсаҡ уйнайым тип Иҫәнғолдоң Салиха исемле ҡатынының йыуып ҡуйған өр-яңы күлдәген йыртҡылап ҡурсаҡ уйнаған.

Йәй көнө Ғәбделнафиҡ мулланың бесәндәге малайҙарына һыуһын* ташығанда сүлмәк ярсығы тағып калакул*, итеп, ауыл халҡын ҡауғаға төшөрөп[149] йөрөгәндә Ишмөхәмәт ҡарт «Әбиттең бирле балаһы» тип атап, шунан ҡалған исем.

Йәш сағында Филатов[125] булып, бәлки булып ҡыланған, ауыл менән Стапан күле араһына аҡ ҡарға маяҡ сәнстереп, үҙенең ҡорҙаштары, егеттәрҙе балалар санаһына егеп, үҙе аҡ йүкәнән шарфтар тартып, сана төбөндә ятып йөрөгән.

Ҡазандан килгән Ибраһим хәҙрәттән уҡып, Вәлит Ғатаулла инанға мөрит булып, Суфый аталған. Шул арала Хажи бер мишәрҙе мөрит

итеп алғанда, мишәр: «Ахыры хәйерле булһын, Хажи абзыйға керҙек», — тигән.

Орск Лотфулла мөәзин Троицк Зәйнулла ишанға барыуында Бәхтиәргә килеп төшкән. Хажи суфый мөәзингә күрешкәс, мөәзин:

— Һеҙ кем булаһығыҙ? — тип һорай ҡуйған.

— Мин Хажи Ғәбиҙулла балаһымын, — тигәс:

— Ғәбиҙулла кем балаһы? — ти икән (мөәзин).

— Ғәбиҙулла Рәхмәт балаһы, — ти Хажи.

Мөәзин:

— Мин Рәхмәт балаларынан Аралбайҙы беләм, Ишмөхәмәтте беләм, Ғабделнафиҡты, Шафиҡты, Ғәбделғәфәр ағайҙарҙың һәммәһен беләм, Ғәбиҙулланы мин белмәймен, мәгәр һары ғына, йөнтәҫ кенә бер Әбит тигәнен беләм, — тигәс, Хажи ҙа:

— Ана, ана шул Әбит беҙҙең атабыҙ, — тигән.

Рәхмәткин утары[126] янында ғына туғайға һыу сығарыр өсөн һикһәнләп кеше быуа быуып йөрөгәнебеҙҙә, Турат туғайынан бер көймәгә ике ат еккән күсмәле мужик[127] килә ине. Хажи Суфый бирьяҡ ҡаршынан барғас, хахул:

— Можно сығырға? — тип һорағас, Хажи Суфый:

— Мужнә, мужнә, — тип, Таналыҡҡа мужикты төшөрә.

Мужик килә-килә, аттары бата, шунан Суфый быуа быуып йөрөгән егеттәргә ҡысҡыра. Бынан өс кеше барып, хахулды сығарып алалар. Мужик Суфыйға бер бот шөкәри икмәге* бирә. «Ай, суфый, бында кисеүһеҙ ергә ниңә кешене төшөрөп батыраһың?» — тигәс, — «Батмаһа мужик һиңә шөкәри бирәме?» — тип яуап бирә, ти Мостафа.

(Хажи) табип та булып, ҡан алып та кәсепләнде. Разур хуторынан Лукашканың әсәһе: «Ну, Хажи, мин захварал, бжалуйста мине ҡара», — тигәс, Суфый ҡарап-ҡарап, ауырыуың насар, ҡан алдырмаһаң, барыбер үләһең, тигәс, ни хәл итһен ауырыу кеше, табиптың һүҙенә ышанып салҡан ятҡан. Мәрйәнән ҡан алғас, Суфый Лукашканың ике бот онон да алып ҡайта.

Хажи Суфый төрлө шиғырҙар, «Мөхәмәдиә» уҡырға бик шәп бер шағир булып, һүҙгә оҫта бер мәжлес күрке әҙәм ине. Юлыҡ ишан хәҙрәттәре Мөхәмәдйәр байға бер йәй килгәндә, Хажиҙы уҡытып, шунан ҡайтыуында Маҡан буйҙарында түңкәүҙәрҙә* алып йөрөп, ауҙар менән ҡайтарып ебәрҙе. Юлай хәлфә тирмә өй туйлауға ишан Сәлих ахун Хәмзәне саҡырғанда «Ишан хәҙрәт Миңлеәхмәт йәнә Мостафа, иртәгә һин ыҙмаға йомаға барғаныңда Хажи суфыйҙы алып кил», — ти. Мин йома намаҙына барып, Хажи Суфыйҙы алып килһәм, ишан хәҙрәт килгән икән. Хажи миңә: «Мостафа, атыңды туғар ҙа бергә инәйек, мин ишанды илатам, һин шуны күр», — тигәс, бергә индек. Ауыл ситенә тирмә-өй ҡорғандар. Өй тулы халыҡ, ҡымыҙ эсәләр. Суфый менән күрешеп, хәҙрәттәргә сәләм биреп доға ҡылғас та, ишан хәҙрәт: «Хажи, уҡы!» — тине. Суфый йөрәкһеп уҡыны, Суфый икенсе мәртәбә уҡығанда, ишан илап та ебәрҙе. Хәҙрәтте илатты тигәс тә, Суфый үҙе төрки китаптарын да саҡҡа ғына танып уҡыған әҙәм. Ләкин уның уҡыуында, мәкәмендә (көйөндә, мотив, тонында) бер дәрт, бер ләззәт, бер сауыҡ, бер ғашиҡлыҡ бар ине.

Шәкерт сағымда Юлыҡта бер мәжлестә, фәлән кеше бик шағир, тип мәдех ҡылғандарында (маҡтағандарында) ишан хәҙрәт: «Ана ҡаҙаҡтар — Хажи менән Әбиттәй уҡыған кеше ҡайҙа?.. Уларҙың уҡыуында бер ләззәт, бер дәрт бар», — тип маҡтаған ине. Әлхасил, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, Суфый бер ғалим, дуҫ, фәкир меҫкендәргә шәфҡәтле уйлы бер мосафир йән ине. Хажи Суфый ғәрәпсә һөйләргә лә шәп ине. Юлыҡтың Уйылдан (исемле) сауҙагәре Әхмәтязариға килеп төшә. Суфый ҙа сауҙагәр булғас, Әхмәт уны Уйылдан янына сәйгә саҡыра. Килеп кергәс, Суфый ҡатыны Ғәзизә абыстайға ғәрәпсә һүҙ ҡуша: ...алып бир, тип, дастархан (йәғни,) ашъяулыҡ урынына, ғәрәп теле менән, Ғәзизә ыштанын һорағас, Әхмәтязари йоҙроҡ төйә.

Бер йылы йәй Орскиҙан ҡарый хәҙрәт Бадамша хәлфә Хәлиулла муллаға ҡунаҡҡа килгәс, Бәхтийәр аға менән беҙҙе ҡунаҡ янына алды, Суфый булды. Хәлиулла мулла:

— Суфый, ебәр! — тине. Ҡарый:

— Мәмдухмы, мәзмуммы? (маҡтарлыҡмы, хурларлыҡмы) тигәндә: Суфый:

— Юҡ, хәҙрәт, беҙҙә мәмдух нәмә булмаҫ, мәзмүме, мәзмүме, — тип яуап бирҙе. Шунан тағы Хәлиулла мулла Хажиҙы маҡтап:

— Беҙҙең Суфый табип булып ҡан да ала, — тигәс,

— Ә, улай булһа, беҙҙең абыстай ҙа, ...һис ҡаны йөрөмәй, ауырый, — тине. Шунан Суфый баяғы Лукашканың хикәйәтен һөйләгәс, ҡарый хәҙрәт:

— Абыстайым бөгөн үлеп ҡалһа ла, был Суфыйҙан ҡан алдырмам, — тине.

Суфый русса һөйләшергә лә шәп булған. Йәш заманында дирауни начаник* булып йөрөгән сағында бер ҙур түрә килеп төшкән. Суфый ҡылысты билгә тағып, малайҙарҙан ылау аттары ектереп йөрөй икән. Әлеге түрә русса бер һүҙ ҡушыу менән, Суфый:

— Я — Рахмет Кайпов, по русски знаш, — тип яуап биреү менән түрә:

— Врешь, ятбаймат, — ти. Ат егеп йөрөгән бисер:

— Ниту, ваше висеулгарадиә*! — тип яуап биреп, Хажиҙы ҡотҡарып ебәрә.

Хажи Суфый бер йыл буйына ауырып ятҡанда, Мөхәмәтйәр бай Маҡан күленә йортҡа күсеп сығыу менән, ҡымыҙ эсергә бара. Шунда ҡымыҙ эсеп дауаланып ятҡанда, бер көн Хәлиулла мулла килгән.

— Хажи, ауырыуың нисек, тамағыңа ҡымыҙ эсеп, аш ашай алаһыңмы? — ти.

— Көнөнә ун һигеҙ туҫтаҡ ҡымыҙ эсәм, яҡшы һимеҙ бәрән ите булһа ашайым, — тигәс, Хәлиулла мулла:

— Хажи, ошо ауырыуыңдан яҙма, ошо ун һигеҙ туҫтаҡ эсеүеңдән-ашауыңдан яҙма, — ти.

Суфый әҙәп, тәрбиәгә лә шәп кеше. Яҙ һабан ваҡытында, ирҙәр өйҙә юҡ, һабан кәсебендә. Суфый ҡустыһының ҡатыны Һандуғас, Фәйзерғәфәр ҡатыны Яныбай мулла ҡыҙы — Суфыйҙың килендәре. Төн ҡыҫҡа ваҡыт. Көндә Суфый ишраҡ (яҡтырыу, ҡояш сығыу) намаҙын уҡып килә, килендәрҙе саҡ-ҡа уятып һыйырҙарҙы һауҙыра. Суфый бер көн ишраҡтан килә, самауырҙы ҡайната, сынаяҡ, сәй,

шәкәр, май-ҡаймаҡтарҙы мул итеп ултырта, уң ҡулына — ҡомған, һул ҡулына — тас, муйынына һөлгө һалып: «Тороғоҙ, ҡунаҡтар, сәй әҙерләнде, бына бит-ҡулдарығыҙҙы йыуығыҙ ҙа сәйгә ултырығыҙ», — тип уята. Уянып торһалар, ғәжәп рәүештә сәйҙәр әҙерләнгән, Суфый тәвазығ (кеселекле, тыйнаҡ) сифатта хөрмәттә торғанын күреп, килендәр, шунан һуң килендәрҙә йоҡо бөттө, тип Суфый һөйләй торған ине.

Хажи Суфый абыстайы Ғәзизә менән балаһыҙ, Суфыйҙың әсәһе менән өсәүләп, Ғәлиәхмәт тәрбиәһендә ғүмер иттеләр.

Беҙ белгән заманда Суфый һис донъя эше эшләмәне, мәгәр мейес эшләй ине. Мейес эшләттереүсе бай яҡшы ҡунаҡ итмәһә, төтөн юлын кирбес менән ҡаплай, хужа ут яҡһа, мейес бер ҙә тартмай. Суфый ҡайтып китә. Шунан Суфыйға барып: «Йүнәтеп бир, аш һалып ҡунаҡ итәм», — тиһә, Суфый үҙе ҡуйған кирбесте үҙе ала ла ут яға, мейес тартҡас, байға шатлыҡ булған кеүек Суфыйға ла ит ашау ҙур шатлыҡ була. Бына Суфый бәғзе ваҡыт шулай ҙа итеп йөрөнө.

Орск бер һуғымсы ит сауҙагәре ҡуйҙар һуйҙырырға Суфыйҙы ҡуша. Суфыйҙың әжере-ялы: ҡуйҙың баш-тояҡ, эс-ҡарыны. Бай сауҙагәр аяҡты күтәреп мендәр өҫтөндә ята. Суфый ҡуйҙарҙы һуйып, күкрәк алдынан салып ташлай. Бай күргәс:

— Ай, Хажи абзый, ниңә был ерҙән салаһың? — тигәс:

— ...үңәсте төйгән төйөн арт яҡҡа китә, шул төйөндөң арт яҡҡа китеп, ҡуйҙарҙың һәммәһенең ит-майҙары хәрәм булып ҡалыр тип күкрәктән салдым, — ти.

Әммә Суфыйҙың фекере (уйы) — баш ҙурыраҡ булһын. Бына Суфыйҙың эштәре. Суфыйҙы тәрбиәләп, ашатыусы, аҫраусы булғас, уның эше урам ҡыҙырыу ине. Шуның өсөн дә Әҙел ауылы Йәһүҙә мулла шиғыр-бәйет яҙа:

Хажи Суфый ауыл гиҙәр,
Кешенең серен һиҙәр,
Сәй эсәм тип муйын һуҙар,
Эсе тулы ас өмөттәр...
. . . . . . . . . . .

Быларҙы Суфый бик һөйөп уҡыны. Аҡъярҙар ҡымыҙ эсеп иҫергәндәрендә, Вәхит хәлфәне туҡмағандарында Суфыйҙың яҙған шиғыры:

Көмөш йөҙөк филисәрҙер,
Тишегенән ел иҫәрҙер.
Ҡымыҙ эсеп иҫерҙиһә,
Муллаларҙы ҡыйнайҙарҙыр.

Суфыйҙың хәҙрәттәр алдында ебәргән шиғыры:

Бөҙрә генә бөҙрә бурыл атым,
Бойора ғына яллы бүртә атым.
Һөйгән генә йәрем — ай дәүләтем,
Ағай-энем — минең ҡанатым.

1890 йыл ҡытлыҡта Өлкән Ҡалтай башына утар һалып, «Хажи утары» исеме шунан ҡалды. 1916 йылдарҙа 83 йәштәрендә вафат. Суфый ҙур ҡалын кәүҙәле, ауыр тәнле ине. Алла рухын шат итһен, амин.

## Йомарт Ғәлиәхмәт бин Рәхмәтулла

Ғәлиәхмәт бин Әбит йәш көндәрендә Таналыҡ тамағында[128] күп йылдар хеҙмәткәр булып, Һултаста Васпиямал еңгәйгә никахланғас, иген кәсебенә ижтиһад (дәрт) итеп, 25 десятиналар игендәр сәсеп, үгеҙҙәр егеп, унлап бейәләр һауып, ҡуйҙар көтөп, 30 йылдар көсҡеүәтле, яҡшы ғына байлыҡ, йомартлыҡ менән йәшәп, Йомашҡа күсте. Һимеҙ тәнле, ярҙамлы булып, 1921 йыл уабала вафат. Ҡотлоғәфәр исемендә уғлы атаһы йортонда тора. Фазылғәфәр исемендә уғлы вафат булып, бер ҡыҙ балаһы ҡалды. Ҡотлоғәфәр бин Ғәлиәхмәт бин Ғәбидулла бин Рәхмәтулла бин Мәмбәттер.

* * *

Ғәбделғәфәр бин Рәхмәтулла һүҙгә сәсән, бер мәжлес күрке булған. Юлыҡ ишан хәҙрәт Мөхәмәтйәр байҙа ҡунаҡта сағында йәй көнө таң менән, хәҙрәттең иртәнге сәйенә килеп керә. Хәҙрәт: «Бөгөн иртәнге намаҙға йыуынып уҡып йоҡлаһам, төшөмдә һин ҡулыңда аҡ ҡарсыға тотҡаныңды күрҙем», — ти Ғәбделғәфәр ағай. «Абыстайым ауырлы ине, әгәр ҙә уғыл бала булһа, һиңә бер ҡаҙаҡ[129] сәй менән бер ҡаҙаҡ шәкәр», ти (ишан). Хәҙрәт ҡайтып барһа, абыстай ул табып ҡуйған — хәҙерге Шакирйән хәҙрәт.

Ҡыш ишан хәҙрәт хат яҙа: «Ғәбделғәфәр ағай, әлеге һөйөнсө сәй менән шәкәреңде килеп ал», — тип. Ғәбделғәфәр ағай барғас, хәҙрәт ҡунаҡ итеп, мунса яҡҡас:

— Ғәбделғәфәр ағай, һеҙгә абыстай мунса яҡҡан, мунсаға керегеҙ, һөйөнсө сәй-шәкәрегеҙ ҙә мунсала, шунан алып ҡайтығыҙ, — тигәс:

— Уй, хәҙрәт ҡуя күр, мунсаң да үҙеңә, сәй-шәкәрең дә үҙеңә! — тип кермәгән. Хәҙрәттең былай итеп уйнатыуы(ның сәбәбе): Ғәбделғәфәр мунса төшмәй торған әҙәм икән.

Был Ғәбделғәфәрҙән — Әхмәтша, Дәүләтша исемендә ҡыҙы Һултас... никахында вафат. Әхмәтшаһ, Дәүләтшаһ, атаһы Ғәбделғәфәр йәш кенә саҡтарында вафат булғас, Ерекле ҡалаһында[130] хеҙмәт иткәндәрендә, шунан Әхмәтша ҡайтып килеп, Һултастан ҡатын алып, яҡшы ғына туҡ торҙо. Ауыл түрәһе булып ғүмер кисерҙе. Насибулла, Сәмиғулла уғылдары булып, Насибулла яҡшы ғына уҡып, бынау һуғыштарҙа йөрөп килеп вафат булды. Хәҙер ике уғылдары бар.

Дәүләтша ағай — Мәмбәттең беренсе ҡарты, 75 йәштәрендә, тоғро һүҙле, балаһыҙ ҡатын менән генә көн күрә.

Сибәрбикә балалары шунда тамам. Насибулла бин Әхмәтша бин Ғәбделғәфәр бин Рәхмәтулла бин Мәмбәт бин Мырҙабәк[131]. Мәмбәттең Рәхмәтулла уғлының балалары шунда тамам булды.




## Мәмбәт менән Һыйлыҡай улы Иҫәнғол майор хикмәттәре

Инде Мәмбәттең Һыйлыҡай исемле ҡатынынан тыуған балалары: Иҫәнғол майор, Ғәбит батыр, Хәбибулла; Рәхимә — бер ҡыҙы, Түңгәүер Яҡуп ауылында, Мозафар суфыйҙарҙың әсәһе.

«Иҫәнғол Түбән Һаҡмар буйы Ҡундрау ауылы Ҡараҡай ишанда уҡыған һәм русса ла уҡыған, йәштән үк түрә булып хеҙмәт итеп, ун ике кантон өҫтөнән ҡарап йөрөп, үҙе үлгәс майорлыҡ син* (чин, хәрби дәрәжә) килгән ине, мәслихәт менән кире ҡайтарҙылар», — тип Мөхәмәтйәр һөйләне.

Иҫәнғол ҡандай ҙур түрә булһа ла, ғилемде һөйөүсе, ғилемгә ҡәҙер-хөрмәтле булған.

Ҡарғалы (ауылы) Мөхәмәтхәсән бин Мостафа әлкрман (мәктәп, гимназия) тотоп, ауылының ир һәм ҡыҙ балаларын уҡыттырған. Хәсән хәҙрәттән ҡыҙ балалар, ҡайһы ғына ауылға иргә барһа ла урындарында ғүмер буйҙарына мөғәллимлек менән ғүмер иткәндәр. Шуның өсөн дә Мәмбәт балалары бик динле, ғибәҙәтле булып йәшәгәндәр ине.

* * *

Иҫәнғол баучкаға* өс аттар егеп, ҡуш калакулдар менән йөрөп, боролма-бараулға* килеп етеү менән туҡтап, колоколдарының телдәрен бәйләтеп, үҙе йәйәү, повозка янынан атлап килеп: «Әссәләмәғәләйкем», — тип хәҙрәт менән күрешеп, саҙаҡаһын биреп, икенсе фатирға төшә. Унан Айыулынан[132] Мәмбәт ауылына күсеп килгәс, атамдың урынына мәсет һалайым тип, мәсет эшләтеп[133], уғлы Ғәбделмоталлипты — имам, энеһе Кубаҡты мөәзин итә.

Мәсет эшләтеп ятҡанда Ырымбурға бара. Салкауиски[134], Пирауиски[135] губернаторҙар:

— Йә, Иҫәнғол Каипов, мәсетеңде эшләтеп бөттөңмө? — тигәндәр.

— Юҡ, бөтөп булмай әле, — тигән (Иҫәнғол).

— Алай булғас, ҡалай итәһең? — тигәндәр.

— Ике ағайым бар, шулар ярҙам итһәләр, бөтәр инем, — тигәс (Иҫәнғол),

— Ул ағайҙарың кем? — тигәндәр.

— Ул ағайымдар: бере — Салкауски, бере — Пирауиски, — тигәс (Иҫәнғол), икәүһе ике йөҙ тәңкә сығарып биргәндәр. Бына шулай итеп мәсет тә эшләткән.

Иҫәнғол Ырымбурҙан ҡайтып килеп, Эйек һыуына еткәс, күсере Ғабдулҡадир кисеүгә килһә, (Иҫәнғол) «Атты үргә тарт!» — тип, һыуға төшөп, һыуҙан йөҙөп сыға ла, тауарҙарҙы ҡояшҡа йәйҙереп, башлы шәкәрҙәрҙе турһыҡ, ботлоҡҡа һалдырып, килеп бер баярға төшә. Баяр менән күрешеп, иҙәндә арлы-бирле йөрөйҙәр. Шунан баяр кеҫәһенән бер ҡағыҙ сығарып Иҫәнғолға бирә. Иҫәнғол йомарлап кеҫәһенә һалып, хушлашып ҡырға сыҡҡас:

— Улым, бына урыҫтың аҡсаһын шулай итеп алаһың! — тип күрһәтә. Бер йөҙ һум аҡса була.

— Олатай, быны нишләп бирҙе? — тигәс (күсер Ғабдулҡадир).

— Мин Ырымбурҙан ҡайтып бара ята инем, һине күреп сәләмәтлегеңде белеп китәйем тигәнсе, кисеүҙе белмәү сәбәпле һыуға йөҙөп, ҡазаға юлыҡтым, — тигәс, баяр:

— Улай булһа, ҡаза уртаҡ булһын, — тип йөҙ тәңкә бирҙе, — тине ти, (Иҫәнғол). «Бына, улым, урыҫтың аҡсаһын шулай итеп алаһың», — тине, тип Ғабдулҡадир Ғәбит уғлы һөйләгән.

Припраждың мужиктары[136] борон баяр ҡулында булып, бер ваҡыт азатлыҡты теләп, баярға илтифат итмәй башлағас, батшаһ мужиктарҙы Иҫәнғолға тапшырған. Иҫәнғол шул ваҡытта мужиктарҙы ҡол итеп тотҡан. Нимә эшләтһә лә, эшләткән. Мәмбәт ауылына ҡыш — сана, дуға, йәй булһа — арба, тәгәрмәс, ҡороҡ сыбығын, хатта көйәнтә кеүек ваҡ нәмәләргә тиклем тейәтеп ебәргән.

Айыулы тамағы Зөлҡәрнәй ҡарт һөйләне: «Олатам Ғөмөрҙаҡ әбейе менән, мин — өсәүбеҙ ике айғыр өйөрө йылҡы, ун быҙаулы һыйыр, ҡуй, кәзә менән Туҡ-Соранға[137] күсеп барғанда, Эйек буйына еткән инек, артыбыҙҙан ҡағыҙ килеп, беҙҙе тотоп, мине Иҫәнғолға алып барҙылар. Өй янына барғас, бер кеше миңә:

— Өйгә сәләм биреп кер ҙә, Иҫәнғолға: «Еҙнәй, һаумы!» — тип күреш. «Ҡайҙа ҡасып бараһың?» — тиһә: «Уҡый барам!» — тип әйт, — тип өйрәтте. Шул рәүешсә кереп, күрешеп яуап бирҙем. «А, бер

мейеһе тишек өйрәткән икән, — тине лә, — бына баланың тамағын туйҙырығыҙ, — тип, тамағымды туйҙырғас, повозкаһына ултыртты. — Китмә, ошо ҡаралдыларҙы ҡарап ултыр», — тип ҡушты.

Бер-ике көн торғас, Ырымбурға барып сплавтан[138] ҡайтҡан бөрйәндәр аяҡтары боҙолоп килеп: «Йә, Иҫәнғол түрә, беҙләр йәйәү килеп аяҡтарыбыҙ боҙолдо, беҙләрҙең ҡулдарыбыҙға аткрлис (?)* яһап, ылау алып бир, өйөбөҙгә хәтле ылау менән ҡайтайыҡ», — тинеләр. Шунан Иҫәнғол ҡырҡ биш пар (ат) әҙерләргә ҡушҡас, аттар әҙерләнде. Иҫәнғол: «Ай, бала, бынау аттарҙың араһынан йыуан ҡорһаҡлы, баштары төҙ торған аттан ике ат һайлап ал, үҙебеҙҙең повозкаға егербеҙ», — тигәс, ике атты һайлап алдым. Ҡалғандарын бөрйәндәр икешәрҙән егеп алды. Беҙ пар атлы повозка, ҡуш колокол, алда күсер, арабыҙҙа — Һултас ауылы Салауат менән Ҡаҙаҡ[139] ауылы — Кинйәбай ҡурайсылар тажлап килә.

Беҙ йылға үткән һайын, Иҫәнғол тәһәрәт алып, повозкаға ултырып: «Намаҙ ваҡыты етмәйме?» — тип көймәнән ҡарап килә. Шунан намаҙ ваҡыты булһа, аттарҙы туҡтатып, төшөп, сәлләһен кейеп, нағышлы бохара намаҙлығын* түшәп, аҙан ҡысҡырып, намаҙын уҡып, тағы китеп, килеп, Припраждың заводына килеп, фатирға төштөк. Иҫәнғол Бөрйәндәрҙе ҡайтарып ебәрҙе. Фатирға төшкәс:

— Бала, бар, тыштан бер тауыҡ тотоп, салып алып кер. Мәрйә тауыҡты бирмәһә, Иҫәнғол алырға ҡушты, тип әйт, — тине. Шулай итеп алып керҙем. Мәрйә лә кереп:

— Ну, Кайпов Исангул, тауыҡ минеке, — тигәс, мәрйәгә егерме тин көмөш — тауыҡ хаҡына биреп, тауыҡты ярма менән ҡушып бешереп ашаныҡ.

Шунан, кискә көтөү ҡайтҡас салыуға көтөүҙән бер тәкә тотоп алырға ҡушты. Ул тәкәне лә һуйып ашап, иртән заводтан[140] ҡайтып, өлкән Маҡанға килеп, «Ай, бала, ана ултырған ҙур аҡ өй Ҡәнзәфәр олатаңдың өйө», — тип, мине повозканан төшөрөп, үҙе Урта Маҡан йәйләүенә геүләп китте...»

Шунан, 75 йыл ғүмер иткәндә намаҙын ҡалдырмай йөрөгән Иҫәнғол түрә менән беҙҙең Ғилажетдин, тип ошо түрәләрҙе маҡтаны. Хәҙерге кеше бөгөн сотский* булһа, иртәгәһенә намаҙын уҡымай, ташлай, тине.

Иҫәнғол өлкәнгә — ҡәҙер, кесегә ярҙам иткән. Ағаһы Рәхмәтуллаға бер-ике ай илдә йөрөп ҡайтҡанында көндөҙ булһа, Рәхмәт ағаһының өйөнә төшөп, күрешеп, күстәнәс балын, бер сәй менән шәкәрен биреп, шунан һуң ғына үҙ өйөнә килә. Әгәр ҙә төндә ҡайтһа, иртән самауырҙы әҙерләтеп, Рәхмәтулла ағаһы менән Аҡбикә еңгәһен саҡыртып, уларҙың килеүенә үҙе һәм ҡатыны Салиха батша биргән елән, алтмыш көмөш менән бөрөлгән ҡашмауын[141] кейеп, мәсет тапҡырына барып ҡаршы алып, күрешеп, өйөндә ҡунаҡ итеп, баяғы күстәнәстәрен биреп ҡайтарып ебәрә.

Хәҙерге кеше, түрә булһа, әүәлдә ағайына тейә.

* * *

Түбәнге Һаҡмар буйы Буранғол кантон[142] ун ике бүлмәле йорт яһатып, туйларға ҡулының аҫтында булған түрә, мулла булһын, бай,

фәкир — тотошлай халыҡты ҡунаҡҡа саҡырып ала, халыҡ тәғәйенләнгән ваҡытында килә, ләкин Иҫәнғол килмәй. Бер ваҡыт Иҫәнғол килеп, өйгә кереп, күрешеп, доға ҡылып, һаулыҡ һорашҡас, «Йорт хәйерле булһын» урынына: «А, Буранғол, ғүмер буйына түрә булырмын да, үлмәм дә тип уйланыңмы? Бер ваҡыт луазыңдан (хоҡуғыңдан) ҡалырһың, бер ваҡыт үлерһең, шунан балаларың бер йортто бүлешеп алырҙар. Бергә торһа, низағалашырҙар, башҡа алып, икенсе урынға һалыр инең — өсәр яҡ була, бер заман балаларың һәр бере бер яҡҡа таралышып, төп өйөң буш тороп, ен эйәләр, бының һуңында ҡырҡып-ҡырҡып русҡа һатырҙар. Икешәрҙән эшләтһәң, ул ваҡытта балаларыңа өй булыр ине», — тигәс Иҫәнғол, «Ай, ҡаҙаҡ, батаң бар булһын», — тип Буранғол, өйҙән сығып китә.

* * *

Һултас ауылы — түңгәүерҙәр Бикет йылғаларын биләп, бесәнен сабып йөрөгәндәр. Бер ваҡыт [Буранғол кантон] земнамир* килтереп, Бикет йылғаһынан (алып) межа ҡаҙып, һабан йөрөтөп, Турат (яғына) үтеп китә.

Иҫәнғолға хәбәр итәләр. Иҫәнғол атҡа менеп, тауҙан бер өс һабаҡлы сейә ағасы менән (алып), земнамир артынан барып етеп, һаулыҡ һорағас, «Иҫәнғол, был ҡулыңдағы сейәне миңә бир», — тигәс, «А, ауыҙы бар икән», — ти. Ауыҙы булғанға ашатып, ерҙе алып ҡалған.

* * *

Бүребай ауылы борон Рәхмәтулла хахулы урынында булған[143]. Бесән ваҡыты етеү менән Бүребайҙар Иҫәнғолдоң биләгән Хәҙрәт төбәгенән 70—80 салғы менән саба башлағандар. Иҫәнғол өйҙә. Халыҡ ни эшләргә белмәй аптырап ҡалған. Бер (ваҡыт) Иҫәнғол килеп төшә. «Бүребайҙар туғайҙы сабып ята», — тигән хәбәр биргәс, [Иҫәнғол] иртәгә ун ике йәштәге ир бала [ғаса], ҡалмай, атҡа менеп барырға ҡуша. «Әгәр илтифат итмәй бармаһа, ерҙән мәхрүм булыр», — ти.

Ауылдан ике йүгерек аттарҙы һайлап мендереп, Иҫәнғол үҙенең тирмәне янындағы тал араһында ятып: «Иртән беҙ бынан Аҡ морондан барып күренеү менән һеҙ икәү минең тирмәнемә ут һалып, тауға ҡасығыҙ. Улар һеҙҙең артығыҙҙан ҡыуырҙар. Әгәр ҙә ҡыуып етеп барһа[лар], барып Мәмбәттәге ыҙмаға ут һалығыҙ. Уларҙың бәһлеүәндәре һеҙҙе ҡыуып киткәс, беҙ бында аты арып кире килгән берен туҡмап, аяҡ-ҡулын бәйләп алырбыҙ», — ти. Һәм шулай итеп ут һалып ҡасҡас: «Ана, Иҫәнғол хәйлә менән үҙ тирмәненә ут һалдырҙы, ут һалыусыны тотайыҡ», — тип, халыҡ китеп бөткәс, Иҫәнғолдар был яҡтан килеп, әйҙә, ҡыуышта ҡалғандарын туҡмап, бәйләп ташлайҙар. Ҡыуып киткәндәрҙең аттары арығандары берәм-берәм әйләнеп ҡайта башлай. Яңғыҙ килгән кешене тотоп бәйләүе анһат, шулай итеп, Бүребайҙың кешеләрен ристауант итеп*, йәйләүгә, Сәскә күлгә, хәҙерге Ҡолбирҙе урьяғы Һарыбай хуторы[144] ултырған ергә

килтереп, быҙау бәйләй торған бәйләгес ағастарына бәйләп ҡуйып, һис кем тамаҡ бирмәҫкә ҡуша. «Әгәр тамаҡ биргән кеше булһа, ерҙән мәхрүм булыр», — ти.

Иҫәнғол халыҡты йыйып: «Йә, йәмәғәт, эште боҙҙоҡ, беҙҙең был эшебеҙ хөкөмгә бирелеп, судҡа тартылырбыҙ. Һеҙҙән, кем бойороғо менән барҙығыҙ, тигәндә Иҫәнғол бойороғо менән барҙыҡ, тип, яңғыҙ мине тотоп бирегеҙ, яңғыҙ мин китәйем, һеҙ бынан миңә бол* ебәреп, мал көсө менән мине ҡотҡарып алырһығыҙ. Әгәр ҙә шулай тотош китһәк, ул ваҡытта беҙҙе ҡотҡарып алыр кеше булмай, барыбыҙ ҙа баструкта* үлеп бөтәрбеҙ», — ти. Әлеге кешеләрҙе Иҫәнғол барын да Ырымбурға ебәрә. Шунан Бүребай Иҫәнғол өҫтөнән губернаторға гариза-прошение биргәс, Ырымбурҙан дүрт-биш повозка түрәләр хөкөм итергә шул һуғыш урынына килә. Иҫәнғол түрәләр өсөн булған тирмә өйҙәрҙе кеше ҡатышмаҫлыҡ бер аралға ҡорҙора.

Халыҡтан яуап алғас, халыҡ Иҫәнғолдо тотоп бирә. Иҫәнғол язаға тейеш булып, Ырымбурға алдырыла. Былдағы халыҡ мал-бол менән, Иҫәнғол аҡылы менән, Бүребай илап-даулашып, Иҫәнғолдоң зарарына хөкөм булғас, Иҫәнғол бол, аҡса биреп, үҙенең зарарына яҙылған һүҙ урынына, шул яҙыусы писарҙы яллап, икенсе һүҙ яҙҙыра. Әлеге һүҙҙе алыштырып яҙыусы писарь ғәйепле булып, һөргөнгә китеп, Иҫәнғол ҡотолоп ҡала. Әлеге туҡмалып баструкта ятҡан Мәмбәтте туҡмап донъяла тыныслыҡ күрһәтмәгән Һабырҙың балалары Ҡолош, Ураҙай Ырымбурҙа үлеп ҡалалар. Бүребай ауылынан күсеп килгән Һабыр балаларынан Иҫәнғол, шулай итеп, туғайын алып, ултырған урынынан күсереп ебәреп, ана ултыра (хәҙер) Аҡъяр үрьяғында.

Рәхмәткин ултырған ер беҙ бала заманда «Әбей үлеге» исемендә аталып йөрөнө. Ер өсөн күп михнәттәр күргән Иҫәнғол: «Ер менән ҡатын дауына кермәгеҙ», — тип һәр ваҡыт әйтеп йөрөгән.

* * *

Иҫәнғол Йәғәфәр менән Солтанморат исемле ике уғылдарына Ҡыуатов Әлмөхәмәт кантондарҙан[145] ҡыҙ алып, ике ҡоҙаны берсән ҡалынға* саҡырып, Ҡыуатовтар килгәндә кульной (туй үткән йортта, урында) йортта ҡалын биргән. Ярҙамға ҡырҙан да (ситтән дә) күп мал килеп, көнө буйына шуларҙы һуйып бешереп, күп ҡаҙанға ҡаҙып яһаған усаҡтар, шунда сәйнүктән ҡаҡҡан шаманың уба булып өйөлөп ҡалғанын Мөхәмәтшафиҡ олатай күрһәтте.

* * *

Бер ваҡыт Тутай батыр[146], башына бер эш төшөп, Иҫәнғол ҡулына эләгә. Иҫәнғол Тутайҙы Ырымбурҙа хибескә (төрмәгә) һалдыра. Күп замандар үткәс, Иҫәнғол Ырымбурҙың хибесхана баҫҡысында Тутай ҡарт ултырғанын күреп, сығарып ҡайтарып ебәрә. Тутай иленә ҡайтып килгәс, ҡаҙаҡтар килеп:

— А, Тутай, игүлек-имкакдан ни күрдең? — тигәндәрендә, [Тутай]:

— Имкакде Иҫанғолдан күркан идем, хурлыкты бетдән күрдем, игүлекте һәм Иҫанғолдан күрдем, — тигән. Иҫәнғол төрмәгә керетеп, Иҫәнғол сығарғанға әйткән һүҙе.

* * *

Иҫәнғол бер ваҡыт Ырымбурға саҡыртылып барғас, һәр волостарға мөгәзәй* һалдырырға бойороҡ биргәс, шул ыңғайы Өфө тарафтарына йөрөп, һәр тейеш урындарға мөгәзәй һалырға бойороҡ еткереп ҡайта. Ырымбурҙа ваҡытында елкәһенә бер шешек сыға. Шул шешектән яфаланып, башҡорттарҙың мөгәзәй һалыуға тейеш урындарына бойороҡ ебәреп, өйөнә ҡайта.

* * *

Иҫәнғолдоң Солтанморат исемендәге уғлы Хәсән хәҙрәттең бер тайын урлап, шунан ике арала мөхәббәт китеп, бер ваҡыт Хәсән хәҙрәт үпкәләп, Ҡарғалыға күсә. Иҫәнғол балаға эйәреп үҙенең эше хата икәнлеген белеп, хәҙрәт артынан кеше ебәреп, хәҙрәттең кире килеүен үтенһә лә, хәҙрәт кире килмәй. «Мин дә киттем, Иҫәнғол да күп тормай китер», — тип, Ҡарғалы китә. Иҫәнғол бәһар (яҙ көнө) йәйләүгә күскәндә туғыҙ ат(тарҙы) егеп, унынсы атҡа дуға таба алмағандарында: «Был донъяла мин етешмәгәс, берәү ҙә етешмәҫ», — тигән.

* * *

Иҫәнғол оҙон, арыҡ быуынлы, шәп тауышлы булған. Һабырҙың правлениеһынан һөйләгән хәбәрен урамдың түбәнге осондағы кеше шул көйө ишетте, тип Һабырҙан Ғәбделмәжит суфый һөйләне.

* * *

Иҫәнғол иҫке яҡ Иҫәнғол ауылынан алған Фатима исемле ҡатынынан: Йәрмөхәмәт сотник[147], Мөхәмәткәрим сотник, Әхмәтязари полный хорунжий[148], Йәғәфәр, Ғәбделмоталлиб мулла, Солтанморат есаул, Шаһморат, Мырҙабулат (исемендә уғылдары); бер ҡыҙы Бирмәҫ башында[149] булған. Ырымбурҙан алған бисҭә ҡатынынан* Ғәли исемендә бер улы Һаҡмар буйы Буранғол кантон ауылында булған. Бөгөн дә балалары барлығынан хәбәрем юҡ.

* * *

Иҫәнғол бала ваҡытында Ноғай чисы[150] Яхыя сәсәнгә ҡунаҡҡа барған. Аш әҙерләнгән, халыҡ йыйылған, Иҫәнғол юҡ. Күп көтөп, килмәгәндән һуң, Яхыя сәсән:

— Килмәһә — торһон, алып килегеҙ ашты. Ейән иш булмаҫ, елкә аш булмаҫ, — тигәндә, (килеп ингән) Иҫәнғол:

— Иш булыр ейән ишегеңә кергәне юктыр, аш булыр елкә казаныңа төшкәне юктыр, — тигән. [Яхыя сәсән].

— Булмаҫ, сәсәнлек ҡыҙға киткән икән, — тигән[151]. Бына: булыр бала буғынан.

* * *

Иҫәнғол, елкәһендәге шешеге ҙурайып, ғүмере бөткәнен һиҙеп, «Ғүмеремдә өс эште эшләмәгәнемә үкенеп ятам», — тигән. — Бере: алтмышлап дөйә көтөп, дөйәнән ҡорбан салманым[152]. Икенсе: ҡаҙаҡ — үткен халыҡ ине, ҡаҙаҡтан ҡатын алып, бала ҡалдырманым. Өсөнсө: Таналыҡ һыуын Камар аҫтынан[153] ағыҙманым», — тигән. (Мөхәмәтйәр һөйләне).

* * *

Иҫәнғол ҡартайып өйҙә ятҡанда: «Салиха, ошо халыҡ мине ниңә ҡунаҡҡа саҡырмай ҡалдыра икән?» — тигәндә, ҡатыны Салиха: «Саҡырғанда бармаһаң, саҡырылыуға зар булырһың», — тигән.

* * *

Иҫәнғол, Бүребай менән даулашып, Таштуғайҙы үҙенә ҡаратып алып килгәс, ҡаҙаҡ тамыры Ҡарабайға[154] барып: «А, тамыр Ҡарабай, еремде истәккә[155] бирмәй алдым, әлхәмделилла, инде балаларыма ер иркенләне», — тигәндә, (Ҡарабай) «А, Исанғол канча мал түгеп, михнәт чигуб алған ереңнең кәдерен балаларың белсә ярар. Телем-телем ҡилуб, бер заман кауүргә (ҡафырға) сатуб бөтөрөрләр», — тигән. Ҡарабайҙың һүҙе дөрөҫ килде. Иҫәнғолдоң хеҙмәте — балаларына ер алып биреү, ер һатыу — балаларының эше. Һәр кемдең хеҙмәте Аллаға мәғлүм. Иншалла, Иҫәнғолдоң хеҙмәте, хеҙмәтенең әжере (хаҡы) заих (әрәм, файҙаһыҙ) булмаҫ.

* * *

«Таштуғай» аталмыш көйҙө Иҫәнғол майор бер шәп йыраусы һәм ике дөйә ботлоғона* ҡымыҙҙы тултырып, баҡан ағасына* элеп, ике кеше һыбай аттар менән күтәреп, Мәмбәт ауылының үр яғында кисеүҙе сыҡҡан ерҙә Туржы[156] тамағынан түбән ерҙән үҫеп сыҡҡан ике башҡа ҡара ташта ултырып, ҡымыҙҙы эсереп, «Таштуғай» көйөн[157] йырлатҡан, — тип беҙҙең атабыҙҙың әсәһе Сафия әбей һөйләне. — «Турһыҡҡа ҡымыҙҙы мин ҡойҙом», — ти(не).

Кәрим ауылдары[158]: «Таштуғай — беҙ», тип хата һөйләйҙәр.

* * *

Иҫәнғол түрә, шулай ғүмерҙәр һөрөп, етмеш биш йәштәрендә вафат. Ҡәбере Мәмбәттә. Ҡәберлек уртаһында анау ҙур ихаталы ҡәбер шул. Алла тәғәлә йәнен йәннәттә итһен. ...Мәғәнәһе: «үлем һәр кемде тигеҙләй, берәүҙе лә ҡалдырмай. Иҫәнғол майор, Йәрмөхәмәт бин Иҫәнғол, Мөхәмәткәрим, Әхмәтязари, Йәғәфәр — дүрт уғылдары, үҙе икешәр тирмә өйҙәр ҡороп, бишәүһенең дә йыҡма повозкалары булды»,— тип Мөхәмәтйәр һөйләне.

## Илен, динен ҡурсалаған итәғәтле Йәрмөхәмәт сотник

Йәрмөхәмәт йәш ваҡытында Сыр-Дарья аръяғынан ғәскәр башлығы булып[159] ҡайтып килгәндә, Сыр-Дарья ташып, һыуҙың моҙо* ҡалҡып, ҡыбырлап ятҡан була. Йәрмөхәмәт тәһәрәт алып: «Аллаһу әкбәр!» — тип тәкбир әйтеп, моҙҙан сығып, яр башында намаҙ уҡырға керешә. Шунан ғәскәр, тәкбир әйтеп, моҙҙан сыға, иң арттағы ат, моҙ китеп, һыуға бата башлағас, ғәскәр саҡ тартып алды. Шунан полковой начальник: «Йәрмөхәмәт Каиповтың намаҙы арҡаһында, иҫәнһау сыҡтыҡ», — тип доноситъ иткәс, (Йәрмөхәмәткә) полный әфисәрлек чин килде, ти.

Шул сәфәрҙә, дүрт-биш ай йөрөгәндә, ҡар өҫтөндә лә һис бер ваҡыт намаҙын ҡалдырманы (Йәрмөхәмәт), тип, атам Аллаяр[160] һөйләне.

* * *

«Йәй көнө, ғәскәр Эйек буйында лагерҙа ятҡанда, Циалковский губернатор[161]:

— Ну, Ярмухамат Каипов, фәләнсә ат кәрәк. Мин һинең ҡулыңа аҡса бирәйем, һин башҡорттан ярарлыҡ ат, айғырҙарҙы алып, аҡсаһын бир ҙә, алған аттарҙы бында миңә ебәр, — тигән.

Шунан Каипов :

— Ярар мин ярарлыҡ ат-айғырҙарҙы алып һиңә ебәрәйем, ләкин аҡса һинең ҡулыңда торһон, малына ҡарап, хаҡын үҙең бирерһең, — ти. (Циалковский:) — «Аҡсаны ниңә алмайһың? — ти. (Йәрмөхәмәт:)

— Әгәр ҙә аҡса миндә булһа, сомнение итәрһең (шикләнерһең), — тигәс, Циалковский:

— Эслиш, каспада, Ярмухамат Каипов ни тип әйтә?! — тип, Каиповтың арҡаһынан тапаны ти, — Э һеҙҙең барығыҙ ҙа, аҡсаны миңә бирһен, тип тораһығыҙҙыр, — тине», — тип Зөлҡәрнәй Исәнбәтов һөйләне.

Шунан Каипов (Йәрмөхәмәт) Үҫәргән, Түңгәүер, Бөрйәндән йөрөп, ярарлыҡ ат-айғырҙарҙы Ырымбурға ебәреп, Циалковский үҙе аҡсаһын биреп торған.

* * *

Бер заман, Хәби кантонға[162] помощник булып хеҙмәт иткәндә, Каипов алдан килеп һыбай, писары-яҙыусыһы Лапшин русҡа ауыл һыртына тирмә өйө ҡорҙороп, ылау аттары әҙерләтеп йөрөгәндә:

«Балалар, руста иман юҡ, урыҫтан һүҙ ишетеүе ҡыйын булыр», — тип, мосолман башҡорт балаһын ҡалай итеп ҡурсып йөрөгән. Шул турҙарға ҡатышып, хеҙмәт итеп йөрөгәнендә, ҡара яға ғына кейеп, күн ҡаптырға быуынып, шашкаһын биленә тағып йөрөгән. Башында картузы, өҫтөндә пальтоһы булмаһа ла, хөкүмәт ҡашында ҡәҙере һис кемдән кәм булмаған. Бәлки, үҙенең ҡатарынан (үҙ тиңенән) артыҡ булған. Хикмәт сифатта (ҡиәфәттә) түгел, бәлки, хикмәт хеҙмәттә. Шуно урында (бән) фәҡир бер мәҡәл яҙа:

Илен ҡурсыған ил ағаһы булыр,
Илен борсоған ил буҫағаһы булыр.

Каипов ҙур байлыҡ менән, ваҡытында ауылдың рәсми башы булып, ғибәҙәтле, Аллаға итәғәтле булып, Ишан ауылы әл-шәйех Нәжметдин ишанға кереп, мөрит, мотиҡ булып (ишан шәкерте, эйәреүсеһе, баш эйеүсеһе), хатта тәһәрәткә тигән һыуын да үҙе алып килеп әҙерләгәнен һөйләйҙәр. Бына шулай итеп боронғолар әхирәткә күскәндәр. Алла рухын шат ҡылһын!

* * *

Йәрмөхәмәттең ҡатыны — Хәби кантон менән бер туған ҡыҙынан балалары: Солтанғәли хорунжий, Мәхийән хорунжий, Фәхретдин, Нурмөхәмәт урядник, Дусмөхәмәт, Ҡаһарман — уғылдары. Бер ҡыҙы Верхурал Кәшәндә булған.

Солтанғәли ғәскәрлектә йөрөп, хорунжий булып, унан һуң старшина ла булып хеҙмәт иткән. Йәш ваҡытында һунарсы булып, кейекте бик күп алғанын һөйләйҙәр. Бур бай булып, бер заман Солтанғәли-Мәхийән исеме сығып торған[163] Боронғолар, әлбиттә, уҡығандар. Ғәрәптән яҙыу-һыҙыуға ла барымлы ине. Туҡһан йәштәрендә вафат, Мәмбәттә.

Беренсе ҡатыны Ишкенә Сары (Һары) ауылы Ғәбиҙулла бай ҡыҙынан — Шаһимарҙан. Бер ҡыҙы Иҙел, бай ауылы Жеййәс Ярлыҡаповта булған. Бер ҡыҙы Аҡъяр Ғайсала булды.

Шаһимарҙан ҙур кәүҙәле, ҡалын һаҡаллы, яҡшы дәүләтле ине. Мәмбәт мәсетенең таш ихатаһын шул кеше саҙаҡаи жария* (сауабы дауамлы саҙаҡа) итеп һалдырҙы. 191...-нсы йыл вафат. Ҡәбере Мәмбәттә. Ҡатыны Бирмәҫ башы ... ҡыҙы Баныуҙан — Ҡарҙаншаһ. (Ул) Мәмбәттә атаһы йортонда. Кешегә иғтибарлы, хәҙерге замандың бер байы булып тора. Икенсе (ҡатыны) Вәлит ауылы Кафыянан: 1) Шаһишәриф 2)Хикмәтулла вафат, бер ҡыҙ балаһы ҡалды. Ғилмизада исемендә ҡыҙы Хәсәндә, хәҙерге көндә терек.

Шаһишәриф (бин Солтанғәли) совет хөкүмәтенең рөхсәте менән аусы-һунарсы булып, һунар кәсебе бик алда һәм бик файҙалана. 1922 йыл 28 төлкө, 4 бүре алды. Ауға бик маһир булып, дәүләте яҡшы, туҡ тора. Беренсе ҡатыны Суҡраҡ Ғәлиморад суфый ҡыҙынан Ғәлләметдин исемендә уғлы кәсепсән, хәләлдән ашап, замананың бер иғтибарлы кешеһе күренә.

Икенсе ҡатыны Вәлит (ауылы) Ямалетдин ҡыҙы Нәфисәнән Аҡмалетдин, Имаметдин исемендә ике уғылдары. Өсөнсө ҡатыны Айыулы тамағы Ғәбит мулла ҡыҙынан бер балаһы бар. Хәҙерге көндә, ике һөйгән йәрийәләрҙе тигеҙ көтөп, Мәмбәттә ғүмер кисерә, йәше 54-тәрҙә бар.



## Йәрмөхәмәт уландары Мәхийән, Фәхретдин, Дусмөхәмәттәрҙең тармаҡтары.

Мәхийән (Йәрмөхәмәт улы) ғәскәри хеҙмәттә йөрөп, хорунжий булып, ҙур бай һәм суфый булып ... йәшендә вафат, Мәмбәттә. Ағаһы Солтанғәли менән икеһе хөкүмәттән айына биш һум алып торҙолар. 1) Ғилажетдин 2) Зияетдин — ике дана уғылдары. Бер ҡыҙы Бөрйән Йомаш Әхмәтсафа муллала булды. Шәмсиғәлимә исемле ҡыҙы Турат ауылы имам мулла Сәлмән никахында вафат, бер уғлы бар.

Ғилажетдин йәш ваҡытында бай булып, ифрат дәрәжәлә тоғро, хыянатһыҙ булғанын һөйләйҙәр. Мөрит, ғалим; яҡшы донъя көтөп йөрөгәндә вафат. Ғәлимйән исемле уғлы 17 йәшендә генә балшауиктар шәһит иттеләр (үлтерҙеләр). Ғәлләметдин, Низаметдин бин Ғилажетдиндар — йәш егеттәр, Мәмбәттә торалар.

Шәмсиғәлимә банат Ғилажетдин Аҡмалетдин хәҙрәт[164] никахында вафат. Ҡәбере Таналыҡ тамағында. Хәжмөхәмәт исемендә уғлы бар. Бер ҡыҙы Йософ никахында Ҡалтайҙа. Бер ҡыҙы Һултаста.

Зияетдин бин Мәхийән яҡшы ғына дәүләт менән бер тоғро, ғибәҙәтле кеше ине, ҡылтамаҡ рәнйеүенән вафат. Һары күл Ғилман ҡыҙынан Минһажетдин исемендә уғлы сауҙагәр булып, яҡшы, мохтажһыҙ ғүмер итә. Алла тәүфиҡ бирһен! Икенсе ҡатыны Айыулы ауылы Исмәғил мөәзин ҡыҙынан бер уғлы атаһы йортонда әсәһе менән бергә торалар.

1) Насирйән 2) бин Минһажетдин 3) бин Зияетдин 4) бин Мәхийән 5) бин Йәрмөхәмәт 6) бин Иҫәнғол 7) бин Мәмбәт ата.

* * *

Фәхретдин бин Йәрмөхәмәт йәш ваҡытында дәүләтле булып, ҡарт көнөндә фәҡир булып, ғибәҙәт эйәһе бер кеше ине. ... йәштәрендә вафат.

Нурмөхәмәт (бин Йәрмөхәмәт) урядник булып, Турат Мәннәф байҙың ҡыҙын алып, бай булып, ҡарт көнөндә вафат. 1) Ғәйепғәле 2) Ғәҙелша — уғылдары. Ғәйепғәле мулла ҡаҙаҡта балалар уҡытып килеп, Мөхәмәтлатиф ҡыҙы Рәбиғаға никахланып, кейәүләй килгәндә: «Һикеһен нығытмаған нә ҡылған кесе (ниндәй кеше) икән?» — тигән. Бик мотиғи бер мәсет ҡарты булып йөрөгәндә йәшләй вафат. Ғәҙелша ғәскәрлеккә алынып, урядник булып, хәҙер Мәмбәттең бер тоғро кешеһе булып, бер уғлы менән (Йыһанша) бергә.

* * *

Дусмөхәмәт (бин Йәрмөхәмәт) тә күп йылҡылар көтөп, йөрөк аттар менән, яҡшы кир ат менән иртәнән ҡара кискә хәтле бер бүрене туҡмап ала алмай килгәнендә, бүре ала алманыңмы, тип һорағандарында, ала алмаһам да, туҡмап-туҡмап, был яҡҡа ҡабат килмәҫтәй итеп ебәрҙем, тигән.

Дусмөхәмәт ағай шул тиклем йәмәғәт намаҙына егәрле булды, һәр көндәге биш мәртәбә уҡылған аҙанды мәсет шәриф тә ысында ишетте.

Ҡатыны Ғәбделнасир (ауылы) ... ҡыҙынан: 1) Вәли 2) Баймөхәмәт 3) Шаһиәхмәт 4) Ялмырҙа 5) Ғәҙелмырҙа — биш бөртөк уғылдары булды.

Вәли ғәскәрлектә йөрөп, йыуаш, хыянатһыҙ, ғибәҙәтле ине. Вафат, уғлы юҡ. Бер ҡыҙы Заһретдиндә, Йәләлетдин исемендә уғлы бар. Бер ҡыҙы Хәсәндә. Баймөхәмәт Ташлы ҡәрйәһендә (ауылында) Мифтахетдин хәҙрәттә уҡып, ғилеме лә бар. Йәше етмештәрҙә. Мәмбәттең бер ҡарты булып, бер уғлы (Ғәлимырҙа) менән бергә көн күрә.

Шаһиәхмәт бин Дусмөхәмәт биш йыл һалдатта йөрөп ҡайтҡан. Кәсепкә иждиһат (дәрт) итеп, дүрт ҡолонло бейәләр һауып, ғибәҙәтле, йыуаш бер кеше ине, илле йәштәрендә вафат. Ике уғылдары (Хәйбулла, Насибулла) Мәмбәттә.

Ялмырҙа бин Дусмөхәмәт һуғыштан һуң сауҙа менән яҡшы ғына мал йыйып, яҡшы ниәтле булып йөрөгәндә, 21-се йот йылы ҡағылып, уғлы, балаһы юҡ. Үҙе генә кәсеп итә, йәше илле етеләрҙә. Ғәҙелмырҙа бин Дусмөхәмәт кәсеп менән көн күреп, ҡулы асыҡ бер егет. Мәмбәттә ике уғылдары менән тора (Хәсән, Хәким...).

Ҡаһарман бин Йәрмөхәмәттән: Дәминдар, Сәйфетдин. Дәминдарҙан бала ҡалмағандыр. Йәрмөхәмәт балалары шунда тамам.



## Мөхәмәткәрим-Батыр бин Иҫәнғол бин Мәмбәт хикмәттәре

### 1. Мөхәмәткәримдең Батыр аталғаны

Мөхәмәткәрим батыр (бин Иҫәнғол) егет ваҡытында атаhы (Иҫәнғол) Ырымбурға батша туйына барғанда[165], бергә барып, Иҫәнғол кискә батшаh уйынына саҡырылып киткәнендә: «Мөхәмәткәримде төндә сығарып йөрөтмәгеҙ», — тип китеүенә ҡарамайынса, Мөхәмәткәрим, ҡанса ҡараусыларҙы үтеп, барып кереп, бер ваҡыт шул мәжлестә Мөхәмәткәримдең бейеп йөрөгәнен Иҫәнғол күреп, (Мөхәмәткәримдең) рөхсәтhеҙ кереп йөрөүенән хәүеф итеп торhа ла, Кәрим бейеп йөрөп, бер ҡаптырға, көмөш тәңкә — бүләктәр алып сыҡҡан. Шул мәжлескә кереп йөрөгәнлеге өсөн, Мөхәмәткәримде Иҫәнғол Батыр исеме менән атаған.

Мөхәмәткәрим донъяла Батыр исемләнеп ғүмер итте. Батыр хорунжий, сотник чинлы булып, ауылдың ҙур байы, бер ҡәҙерлеhе, өлкәне булып, кәсепле hәм ғибәҙәтле, донъяла баҡыйҙа әсбаб тотоп ғүмер иткән. Күп бейәләр hауҙырып, ҡымыҙҙы яҡшы яhатып, ҡулын йыумаған кешенән hабаның бешкәген тоттормаған, тип hөйләйҙәр.

### 2. Батырҙың «биле өҙөлгәне»

Батыр бер ваҡыт Бөрйән Баймырҙа ауылы Хәбби кантонға барып төшөп, йәй ваҡыт, ҡунаҡ өйөнә керhә, өс кеше — түрәләр, түрҙә аяҡтарын бер-бере өҫтөнә hалып, hөйләшеп яталар. Батыр кереп, сәләм биреп, күрешергә ҡулын hуҙhа, түрәләр Батырға аяҡтарын биргәс, Батыр салҡанан ҡолап:

— Алла, Алла, мосолманмы икән (тип) күрешәйем тип, ҡулымды hуҙған инем, кафыр икән дә баhа, билем өҙөлдө! — тип ҡысҡырып, тулап йөрөгәндә, Батырҙың тауышын ишетеп кантон килеп кереп:

— Ай ахмаҡтар, бынаулар бик ҙурҙар (икән) ниңә алай итәhегеҙ? Ул Иҫәнғол балаhы Мөхәмәткәрим бит! Уның биле өҙөлмәгән, hеҙ тәкәбберләнеп, эреләнгәнгә шулай итә, — тигән.

### 3. Батырҙың тунын hыйлағаны

Бер ваҡыт Батыр Бөрйән Хәсән кантонға[166] төшөп, ашты табаҡҡа бүлгәндә, бөрйәндәр талашып, түрҙән урын бирмәй, (Батырҙы) түбән ултыртҡандар. Батыр, ғәҙәттә кейә торған кейемдәр менән барғанлығы өсөн, булған икән.

Батыр, икенсе барғанда, төлкө тун, ҡамсат бүрек, ебәк билбауҙар менән салтанат* барғас, Батырҙың урыны түрҙә булып, аш килеү менән Батыр төлкө тунының еңен табаҡҡа майға, hеҙләккә тығып: «Эй, туным, аша, был аш миңә килмәгән, hиңә килгән», — тигән. Бына боронғо ҡарттарҙың hүҙе (Улар): «Таныған ерҙә — ир hыйлы, танымаған ерҙә — тун hыйлы» — тигәндәр.

### 4. Батырҙың Филатов менән көрәшкәне

Батыр иген кәсебенә лә шәп булған. «Батыр күле»ндә күҙ күнә ашлыҡ баҫтырып, бейәләр һауҙырып ятҡанында, бәғзе хәситтәр: «Батыр ыҙмаға (ҡышлауға) кермәй, турайҙа бейә һауып, кәбән ашата», — тип, Филатовҡа ҡағыҙ биргәс, (Батыр) саҡырылып Филатҡа килә. Маҡанда кунни забудын[167] яһатып ятҡан ваҡыт икән. Батырҙы Филат асалы бағана төбө ҡаҙырға ҡуша, Батыр ҡаҙып бөткәндә, ҡаҙыусыларҙы ҡарап Филат: «Яҡшы ҡаҙығыҙ, осағыҙға сыбыҡ тейәр», — тип Батырға килгәндә, Батыр ҡулын һыулы тупраҡҡа болғап, ырғып тороп: «Здрасти, Филатоф!» — тип күрешә. Филат төкөрөнөп, күрешмәй китә.

Иҫәнғол балаһы һәм сотник булыу сәбәпле (Батырға) һис нәмә эшләй алмай. Филат шунан ҡағыҙ яһай, Батырҙы Ырымбурға ебәрергә яһаған ҡағыҙын Батырға уҡып ишеттергәс, Батыр үҙ алдына һөйләнә. Ырымбурға барыуында, юлда тап булған кеше һорай була инде:

— Батыр, ҡайҙа бараһың?

— Ырымбурға!

— Нишләп?

— Игенде күп сәсәһең, күҙ буйына шул ашлыҡты баҫып, туғайҙа ултыраһың, тип, шуның өсөн мине Филатоф Ырымбурға ебәрҙе. Ырымбурҙа баструкта ятырға барам, — ти.

### 5. Батырҙың ат яҡшылығын күрһәткәне

Филатов:

— Әйҙә, Батыр, ыступай, кит! — тип, протоколын йыртып ташлай. Бына ни эшләгән Батыр ҡарт.

Батыр бер ваҡыт Ырымбурға китә. Юлда тап булған кеше:

— Батыр, ҡайҙа бараһың? — ти.

— Ырымбурға барам, — ти.

— Нишләп? — ти.

— Бер ҡаҙаҡ сәй алырға, — ти.

— Бер ҡаҙаҡ сәй алыр өсөн генә бармай, аттың яҡшылығын күрһәтер өсөн йөрөгән, ти. Аттың яҡшылығы шул: юлда ҡаршы килгән кешегә ҡысҡырып сәләм биреү менән, аты алғы аяҡтарын күтәреп, артҡы аяҡтары менән торған. Ҡасан: «Хуш бул», — тип киткәнсә, шулай торған, тип остазым Салих ахун хәҙрәт һөйләне.

### 6. Батырҙың ҡаҙаҡ киленен үпкәне

Батыр атаһы Иҫәнғол (үҙенең) хеҙмәтселәре менән Ырымбурға мал һатырға китеп барһалар, далала йәш килен-ҡыҙҙар йәйәүләп уйнағандарын күреп, Батыр һыбай ат менән сабып киткәнендә Иҫәнғол:

— Ай әттә, ниңә ебәрәһегеҙ? — тип ҡалһа ла, Батыр:

— Күҙемә дегәнәк төштө, Алла ризалығы өсөн берәүегеҙ ялап алығыҙ, — тигәс, бер йәш килен:

— Хоҙа өсөн алайым, — тип, тубығына ятҡырып ялап алмаҡсы булып ынтылған икән, Батыр килендең муйынынан ҡосаҡлап үбеп, атына менеп сабып киткәндә, башҡа килен-ҡыҙҙар сыу булышып, әлеге киленгә көлөшөп ҡалғандар.

## 7. Батырҙың сеңләгәне

Урта Маҡан, Оҙон күл буйы халыҡ тулы йәйләүҙә ваҡыт. Батыр ҡатындар кейеме кейенеп, шәл ябынып һыбай атҡа менеп, аттың ялын ҡосаҡлап ятып, ҡысҡырып, сеңләп илап үткәндә, һис берәү барып баҙнат итә алмай, бер ҡасып килгән килендер, тип, халыҡ аптырап ҡалған.

## 8. Батырҙың ҡаҙаҡ ҡатыны булғаны

Разарун хахулы ултырған урын борон Бикет аталған. Бикет аталыуының сәбәбе: батша ғәскәре шунда ҡаҙаҡ менән башҡорттар бер-берен үлтереп, малдарын урлап йөрөгәндәрен бөтөрөү өсөн, пикет (бикәт — ҡаҙаҡса) ҡуя.

Бикет көтөп ятҡан ғәскәр башлығы бер көн Батырға:

— Бөгөн миңә бер ҡатын ҡуш, — тигәс, Батыр:

— Ярар, кискә фәлән үҙәккә килтерермен, шунда кил, — тип китә лә (Батыр) ҡатындарҙың уҡалы елән, ҡашмауларын кейеп, әлеге үҙәккә килеп, әҙерләнеп торғанда, әлеге урыҫ түрәһе килеү менән Батырҙы үпкеләп, йығып, яфәғелгә (йәҫкәлләргә) яҡынлағанда, аҫтан Батыр(ҙыҡы) килеп тейеү менән, урыҫ ҡасып китмәксе булһа ла, Батыр ебәрмәй урыҫтың фәләнсә аҡсаһын алып, урыҫ саҡҡа ҡотолоп ҡала.

## 9. Батырҙың бал алғаны

Батыр бер заман иҫке яҡҡа[168] бер әбейгә барып төшә. Әбей Батырға ашарға бал ултырта.

— Инәй, был нимә? — ти Батыр. Әбей:

— Бал, — ти.

— Быны ҡайҙан алаһығыҙ? — ти (Батыр). Әбей:

— Быны себен йыя, шунан алабыҙ, — ти.

— Эй, инәй, беҙҙә лә себендәр бик күп, нисек йыймайҙар икән?

— Эй, балам, бигүк белмәй икәнһең, ул себен түгел шул, — ти. Батыр ашап ҡарау менән:

— Ҡаяуы ҡаҙалды! — тип ҡысҡыра.

— Эй, беҙгә лә ҡаҙала, бер ҙә ауыртмай, — ти, әбей. Батыр:

— Эй, инәй, һиңә ҡаҙалып өйрәнгән, — ти. Шунан Батыр:

— Эй, инәй, был балдан аҙыраҡ һалып бир, мин алып ҡайтып, халыҡҡа күрһәтәйем, — тигәс, әбей:

— Ярар, аҙыраҡ бирәйем — тигәс, Батыр (ҡул)яулығын алып бара, бал һалдырмаҡсы булып.

— Уй, балам, бер ҙә белмәй икәнһең, — тигәс, ҡаптырғаһын тота. Шунан әбей бер тырызға һалып биреп ебәрә. Бына Батырҙың эше. Батыр Иҫәнғол балаһы булһын да балды белмәһен!

## 10. Батырҙың һаран байҙа һыйланғаны

Батыр шулай күп йөрөй торғас, кеше төшөрмәй торған бер байға бара ла өйгә кермәй, байҙың донъяһын, кәртә-ҡаралдыларын, малдарын күреп:

— Донъяла былдай ҙа бай, былдай ҙа донъяны, бөтөн (етеш, теүәл) кешене күп ерҙә йөрөп, һис күргәнем юҡ, — тип ҡысҡырып һөйләп йөрөгәнен күреп, бай өйгә керергә (саҡырыу өсөн) кеше сығарһа ла, юҡ, кермәй, шунан:

— Бер шәп бай барлығын ишетеп, шул байҙың донъяһын күрә килдем, — тигәс, бай ҡабат-ҡабат кеше сығарғанға, өйгә керһә, бай рәнйеп (сирләп) ята икән. Сәләм-һаулыҡ һораған һуңында, байҙың рәнйеүен ҡарап:

— Эй, бай, һинең ауырыуыңа им шул булыр — өс йыл тыу йөрөгән бейә тиреһенә ятһаң, йүнәләһең, — тигәс, мал йәндән ҡәҙерле түгел, бай өс йыл тыу булған бер һимеҙ бейәне һуйҙырғас, Батыр ҡаҙыларының һәм ҡарталарының яҡшыларынан үҙе алып, күп итеп ҡаҙанды тултырып һалып, аҡрын ғына ҡайнатығыҙ, шәп ҡайнатып итте ҡаты итмәгеҙ, ауырыуға шифаһы теймәҫ, тип, үҙе аш бешкәнсә, бейәнең тиреһен тоҙ һалып ыуып, тәрбиәләп, аш бешеү менән иң шәп ерҙәрен һайлап алып, үҙе һәм байға көсләп ашатып, байға бер туҫтаҡ ҡоротло һурпа эсереп, тирегә һалғас, байҙы тирләтеп (йүнәлткән). Бына шулай әлеге һаран байҙың бейәһен һуйҙырып ашап киткән. Бына Батыр ҡалай эшләгән. Ә беҙләр, алай итеү түгел, саҡ ҡына, фатир табып төшөп йөрөйбөҙ.

## 11. Батырҙың розганан ҡурҡмағаны, кантонды тапалап, алға үткәне

Бөрйән Ғәли ауылының Ҡотлоәхмәт кантон Иҫәнғол балаһы Әхмәтязариға килеп, иртә намаҙына (кантон) мәсеткә барып керә лә, ике саф (рәт) ҡәҙәре ергә барып ултыра ла, кем дә кем (кантонды үтеп) алғы сафҡа барып ултыра, намаҙҙан сыҡҡас шул кешене егерме биш розга һуғып китә икән. Ҡарттар, шул һуғылыуҙан ҡурҡып, һәммәһе кантондың артына тулып ултырғандар, артта һис тә урын юҡ.

Батыр мәсеткә керә лә кантондың яурынынан аша тапалап, алғы сафҡа барып ултырып, намаҙҙы уҡып сыҡҡас, кантон мәсет алдында:

— Мине тапалап алға үткән кем икән, хәҙер егерме биш розга һуғам! — тигәнен Батыр ишетеп:

— Тәҡсир, кантун хәҙрәт, мин ул алға үткән, — тип яуап биреү менән кантон:

— Давай розга, хәҙер һуғам, — ти. Батыр:

— Кантун, һин мине бер һуҡһаң, мин һине ике һуғырмын! — ти. Шулай һөйләшеп торғандарында Әхмәтязари:

— Ағай, ҡуй, ағай, ҡуй! — тигәс, кантон:

— Әхмәтязари, һинең ағайыңмы ни ул? — тигән була.

Батыр шулай батыр ҙа булып, уның өҫтөнә бай ҙа, ғибәҙәтле лә булып ғүмер иткән.

## 12. Батырҙың мөртәдтәрҙән башҡа ашағаны

Батыр бер заманда Силәбе яғына убужрға[169] киткәндәрендә, барып фатирға төшөү менән, фатирға (хужаға): «Инәй, минең бынау иптәштәрем мөртәд*, диндән сыҡҡан кешеләр, мин алар менән бергә ашамайым. Миңә ашты башҡа әҙерләп бирегеҙ» — тип, башҡа ашап йөрөнө, тип Бөрйән Ислам ауылы Ғоссам мулла һөйләне. Иптәштәрен мөртәдләр тип йөрөтөүе (шунан): Улары гел оҙон сәсле, урыҫ тәбиғәтлеләр ине, ти.

Ҡартайған көнөндә беҙ ҙә Батыр ҡартты күрҙек. Оҙон буйлы, алға бөкрәйгән, ҡыҙыл күҙле. Шәп тауыш менән: «Эй, Аллаһым, бир, мәүләм, эй Хоҙайым, ярлыҡа гонаһымды!» — тип һорап йөрөй торған ине. 90 нисә йәштәрендә вафат булғанын һөйләйҙәр Мәмбәттә.

## 13. Батырҙың бутҡа бешергән һаран ҡатындан ит саптырғаны

Ай эттәгенә, бер хикәйәте ҡалған икән.

Бер йылы Припраждың завудына Хажи суфый менән иген һата киткәндәрендә, Һаҡмар (һыуы) Ҡайраҡлы ауылы янына барып еткәс, Хажи:

— Ҡайһы өйҙөң төтөнө шәп сыҡһа, шул өйгә барып төшәйек, — тигәс, (Хажи) бер шәп төтөнлө өйгә барып төшһәләр, ире өйҙә юҡ бер ҡатын кеше икән. Ҡатын бутҡа бешергән икән. Батыр менән Хажи икенде намаҙы уҡырға торалар. Бутҡа ҡаҙанда бырҫ-бырҫ ҡайнағанын яратмай, Батыр намаҙ өҫтөндә:

— Шеш, яғың төш! — ти. Батыр төтөнө шәп кешегә төшөп, ит ашау ниәте менән төшөп, бутҡа быртылдағанға, яратмай әйткән һүҙе булған.

## 14. Батырҙың Хажиҙы ниәтенән баш тартырға мәжбүр иткәне

Бутҡаны ашап, иртә менән торғас, Батыр ҡатындан бүлмәнең асҡысын һорап ала, бүлмәләге ҡамыт-дуғаларымды алам, тип бүлмәгә кереп:

— Килен, ит юҡ, тип алдап, бутҡа бешергән икәнһең, һөйөнсө! Килен, мин ит таптым! — ти(гәс)п, йылҡы бото менән балта һоноп: — Килен, бына янбашының осонан ғына, ошо ерҙән сап, — тип саптырып, ҡаҙанға һалдырып, аҙыраҡ ҡайнау менән, — Ярар, килен, ит һүлле булһа, егет елле булыр тигән, — тип, итте алып ашамаҡсы булһа, ит ҡаты булған. — Килен, һин алып ҡалмаҡсы булып, итте

ҡаты иткәнһең. Хажи, бынауы итте ҡуржынға һалып ал, завут — рус ере, шунда бешереп ашарбыҙ, — тип һалып алып китәләр. Заводта игендәрен һатып ҡайтып, юл айырмасына килгәс, Хажи олатай:

— Бына ята һинең Утарбай[170] (ауылы) Дауыт муллаға бара торған юлың, мин Аҡсуранан ҡайтам, хуш бул! — тигәс:

— Тороп тор, Хажи! — тип, Батыр сананан төшөп, ҡиблаға ҡаршы тороп, ҡул күтәреп доға ҡыла:

— Ай, Мәүләм, мине мосолман итеп яраттың, берлегеңә, барлығыңа ышаныып, нисә йылдар доғалығыңды алайым тип, көн-төн ғибәҙәттәр ҡылдым, мин хәҙер ҡартайҙым, күҙем күрмәй, юлдашым Хажи ошо ерҙә ташлап, айырылып китмәксе була. Әгәр ҙә мине ташлап, айырылып китә торған булһа, был Хажиҙың юлда аты үлһен ине! Ҡайтып барһа, өйөндә ҡатыны үлһә ине! — тип доға ҡылғас, Хажи ҡурҡып, бергә Дауыт муллаға килеп төшһәләр, Батырҙың ҡустыһы Әхмәтязариҙар туйға килеп, ҡайтып та киткәндәр икән. Батыр шул сәфәренән туйға килмәксе икән, етә алмай ҡалған.

## 15. Батырҙың һаран ҡоҙала һыйланғаны

Дауыт мулла сәй әҙерләп йөрөй. Батыр:

— Мулла ҡоҙа, беҙҙең Әхмәт бик ашам* кеше, һарҡыт* күп ҡалғандыр, беҙҙәр юлаусы кешебеҙ, — ти. Дауыт:

— Юҡ, ҡоҙа, кеше күп булды, һарҡыт ҡалманы, — ти.

Дауыт мулла икенсе өйгә сығып ҡына китеүе менән, Батыр өйҙөң баҙына төшөп, бер талай ҡалған жайә, ҡаҙы, ҡарта, ваҡ-эре ит киҫәктәре алып сығып, бер табаҡ итеп ултыртып ҡуя ла ... (342—343-сө биттәрҙең өҫ яғынан бер мөйөшө йыртылған — Ҡ. А.):

— ... алай алдап һөйләшмә, мин таптым, — тип ашап ҡайта.

## 16. Батырҙан ҡалған нәҫел

Мөхәмәткәримдең шул Утарбай ауылынан алған Сәхип исемле ҡатынынан: 1) Ҡыҙыр 2) Солтантимер 3) Солтансәлим исемендә уғылдары.

## Ҡыҙыр

Ҡыҙыр бик шәп байып, беҙҙең бала заманыбыҙҙа туғыҙ айғыр өйөрө йылҡылары өс йөҙ ҡырҡ баш булды, тинеләр. Тағы бер көтөү ҡуйҙары булды.

Йәй көндәре көн буйына халыҡ ындырҙай ҙур тирмә өйөндә ҡымыҙ эсеп (уның ҡымыҙ туҫтаҡтары аш табаҡтары кеүек ине) (рәхәтләнде), шунда фәҡир-меҫкендәре. Ҡатыны Баян, түгә-түгә, ҡойоп сығарып, ҡыш һуғым иттәренә, беҙҙең атам күрше булыу сәбәпле саҡырғанда, беҙ ҙә барып, бала булып, ҡасан ит бирә (тип көтөп) торғаныбыҙҙа, бер табаҡ тулы ит, ҡаҙылар — ҡырҡылған, һимеҙ — ашатып ебәрә ине.

Ҡыҙыр бай, заманында Иҫәнғол һалдырған мәсетте боҙоп, яңынан мәсет һалғанда, мәсеткә баҡый (ғүмерлек) тәғәйен ителеп, мәсетте тамам һалдырҙы.

Ҡыҙыл күҙле кеше ине. Вафат Мәмбәттә. Ҡатыны Баян Түңгәүер Рыҫкилде мулланың апайы ине. Ҡыҙыр үлгәндә лә байбисә булып тороп, Мәмбәттә бер ағас мәҙрәсә һалдырып, һаман шәкерттәр уҡытып торҙолар.

Мин дә балалар уҡытҡанымда: «Ай, улым-мулла, көнөн-төнөн бала уҡытаһың, һине бик йәлләйем», — тип, ваҡыт-ваҡыт саҡырып, саҡырмаған ваҡыттарында ит, икмәк, шәкәрләр алып килеп бирә торған ине. Алла рәхмәт итһен! Бур Мәмбәт ауылының ҡайһы ғына урамында бер кеше ауырыһын, унын хәлеӊ белеп, күнәк менән ҡымыҙ, ҡыш булһа, ҡатыҡтар апарып йөрөгәнен күп күрҙек.

Ҡыҙырҙың был Баян инәйҙән: 1) Кәлимулла 2) Төхфәтулла; Ғәрифә исемендә ҡыҙы Вәлид (ауылы) Ғәфәрҙә булды.

Кәлимулла йәштән үк бай, кәсепкә иждиһатлы, ғүмер буйына йомарт, мул ҡуллы, динсел булып, 70 йәштәрендә вафат. Ҡатыны Бүре[171] ауылы ҡыҙы Аҫылбикәнән Вәис, ... исемендә ҡыҙы ... Сабирйән никахында. Вәис тоғро, аҡ һүҙле, кәсепле бер кеше булып, Сәғит ауылында. Ул балаһыҙ ғына донъя көтә. Орскиҙа вафат. Ғәзизулла ла совет байы булып тора. Бер улы бар, Ғәбиҙулла исемендә.

Төхфәтулла (бин Ҡыҙыр) йәш ваҡытында ҡасып йөрөп, бер генә ҡыш Муллаҡай[172] (ауылы) Ғабдулла хәҙрәттә уҡып, Бүребай (ауылы) мең йылҡы көткән Хөсәйен байҙың Рәхимә ҡыҙына никахланып, йылҡы малына бай булып, ҡымыҙ, аш мәжлесендә күп булдыҡ. Алла әжерен (хаҡын) бирһен! Ҡунаҡҡа, һыйлауға бик шәп кеше. Йылҡы ҡарағанда: «Бөгөн берегеҙ ҙә бармағыҙ, мин теүәлләп ҡайтырмын», — тип киткәнен күргән кешеләр һөйләп, рәхмәт уҡыйҙар.

Төхфәтулланың : 1) Сәйфулла 2) Ғәбделбасир; дүрт дана ҡыҙҙары. Бер ҡыҙы Тиргәмеш ауылы Әхмәт никахында вафат. Васби — Аҡъяр Бәдәмша никахында. Фатима Йәнтүрә[173] Рәхимйән никахында ине ... Дүртенсе ҡыҙы — Мәмбәт Рәхмәтулла никахында.

Сәйфулла Орски Ҡари хәҙрәттә уҡып, яҡшы ғына ғилемле... Ул хәҙерге көндә Мәмбәттең бер иғтибарлы кешеһе булып көн күрә. Ғабдулсаних исемендә уғлы ... 1922 йылда тыуған уғлы хәйерле, ғүмерле булһын. Өс бөртөк ҡыҙҙары бар. Ҡатыны Мәликә — Вәлит ауылы. Ҡыҙыр шунда тамам.

## Солтантимер

Солтантимер (бин Мөхәмәткәрим) йәш ваҡытында бай булып, беҙ бала заманда тотош йылҡыларын ҡаҙаҡтар урлап бөлөндө. Ғибәҙәткә шәп ине. Мәсеттә уҡығанында ...

(бер бит юҡ. — К. А.)

тигән хәҙис күрҙем. «Улай булғас барыбыҙ ҙа йоҡлайбыҙ, барыбыҙ ҙа ожмахҡа кермәбеҙ», — тине. Мин әйттем: «Юҡ, улай булмаҫ, һүҙ йөрөткән кеше ожмахҡа кермәһен», — тинем. «Юҡ, улай түгел!» — тип килеп, ҡапҡаһына кереп ҡалды. Мин был өйгә хәтле килмәм, тип ҡайтып киттем.

Киндерле[174] ауылы Зөлҡәғиҙә исемле ҡатынынан : Муллағәләм, Хансолтан (уғылдары); Ғәйшә, Сәмиға исемдә ҡыҙҙары булды. Ғәйшә апайҙы Тиргәмеш мулла Сафый алды, шунда вафат. Сәмиға Бик бауҙа[175] вафат.

Муллағәләм бер асыҡ йөҙлө, шәп тауышлы, хеҙмәткәр, кәсепле генә кеше булып, ауырыу кеше ине, 1921 йыл вафат, аслыҡта. Бер уғлы Ғәрифйән...

Хансолтан Мостафа хәҙрәттән уҡып, йәштән ғибәҙәтле һәм кәсеп менән мәшғүл кеше. Өс бөртөк уғылдары менән Сәғиттә.

## Солтансәлим

Солтансәлим (бин Мөхәмәткәрим) күрше, таҙа, күркәм йөҙлө, һылыу, ҙур һаҡаллы бер мәслихәт ҡарт. Ике айғыр өйөрө йылҡылар көтөп, бай булып ятмыш, етмеш биш йәштәрендә вафат, 1908 йылдарҙа, Сәғиттә. Балапан ҡыҙы — ҡатыны Мәғрифәнән: Сәлимйән, Сабирйән, Зөлхиә; Зөләйха исемендә ҡыҙы Сәлим ауылы Рәхмәтулла мөәзин никахында вафат. Сәлимйән хәҙерге көндә ауылдың икенсе байы булып, кеселекле, ихтирамлы, ғәйбәт һөйләмәй, бер тыныс кеше. Ҡатыны Хәҙисә Һары (ауылы) Хәжекәй ҡыҙы ине.

Насирйән, Ғәбид, Мәннәф — уғылдары...

Батыр (Мөхәмәткәрим бин Иҫәнғол) балалары шунда тамам.



## Ғәбделмоталлиб бин Иҫәнғол бин Мәмбәт

Ғәбделмоталлиб бин Иҫәнғол атаһының мәсетендә имам булып хеҙмәт иткән. Ҡатыны Сәхиптән: Сибәғәтулла, Ғәбделҡәйүм, Сөнәғәтулла, Фәйзулла — дүрт бөртөк уғылдары.

Сибәғәтулла яҡшы ғына уҡыған, ғибәҙәтле кеше ине. Мөхәмәт исемендә уғлы сауҙа кәсебе менән Мәмбәт ауылының беренсе байы булып донъя көтә, Ишмөхәмәт исемле уғлы менән бергә.

Ғәбделҡәйүм йәш ваҡытында сауҙагәр булып, яҡшы тереклек итеп вафат, ҡәбере Мәмбәттә. Ҡатыны Сәбилә Һибәт ҡыҙынан: Мәсғүт, Суфиян, Ғәйнулла, Шәрифә, Фирүзә... — алты бөртөк балалары. Шәрифә Ҡарғалы ауылы мулла уғлы Әхмәтшәриф никахында бер уғлы менән Орскиҙа тора.

Сөнәғәтулла Юлыҡ Ишан хәҙрәттә уҡып ҡайтҡас, Мәмбәттә имам булып вафат булды. Тоғро, хаятһыҙ, яҡшы кеше ине. Һары (ауылы) Үтәмиш ҡыҙынан: Хөснөтдин, Сәләхетдин, Фәизхан, Шакирйән исемләрендә уғылдары булды.

Хөснөтдин Юлыҡта уҡып, сельскийҙа яҙыусы-писарь ҙа булып, халыҡтың бер мәслихәт сәсән аҡыллы, зирәк, ҡаҙаҡ ҡиәфәтле, ҙур күҙле, 1917 йылдарҙа мөәзин булып, 1921 йылда вабала (вафат).

Сәләхетдин ғәскәри хеҙмәттә вафат. Фәизхан Орскиҙа Ҡари хәҙрәттә уҡып, яҡшы мулла булғанда, Орскиҙа вафат. Шакирйән һуғыштарҙа булып, аслыҡ, һыуыҡлыҡтар касафатынан һәләк булды.

Фәйзулла (бин Ғәбделмоталлиб) ер һатмайым тип, һәр ваҡыт һатҡандар менән һүҙгә бәйләнеп, һуғышып, боҙоҡта туҡмалып йөрөй ине, Ҡалтайға күсеп килеп, ... йәштәрендә вафат. Хәйбулла исемендә уғлы сауҙагәрселек менән яҡшы көн күреп тора. Ураҙайҙа бер уғлы менән бергә. Моталлиб мулла балалары тамам. Сәмиғулла бин Хәйбулла, бин Фәйзулла, бин Ғәбделмоталлиб, бин Иҫәнғол, бин Мәмбәт.



## Әхмәтязари бин Иҫәнғол бин Мәмбәт

Әхмәтязари бин Иҫәнғол ғәскәри хеҙмәттә йөрөп, полный әфисәр булып, ҡайтып килгәндә, шырпы алып, килеп: «Мин ағастан ут сығарам!» — тип, шырпыны тәүгә алып килеп күрһәтеүсе булды, тип Бәхтиәр һөйләне.

Бур бай булып, ғибәҙәтле, аҡыллы, ваҡытында ауылдың рәсми башы булғыл. Атаһы Иҫәнғол вафат булғас, Дәүләтшин Ғабдулла кантон[176] килеп :

— Әхмәт, һине кантон итәм, — тигәндә:

— Юҡ, һин мине кантон итмә, мин кенәсел, киекселмен (ҡырыҫмын), мин яуызмын: йә кешене боҙормон (йә ни), — тип Ғабдулла кантонға үҙенең яратып еккән, яратып менә торған яҡшы күк атын биреп, кантунлыҡтан ҡотолоп ҡалған.

Әхмәтязари Ырымбур өйәҙе Ҡыҙыл Мәсеткә[177] 17 саҡрым Бикес[178] ауылы Ҡотлоғилде Ишемғоловтың[179] Хәбилә исемле ҡыҙына никахланған. Бикес — Өҫкәлек һыуында[180]. Хәбиләнән: Дәүләткирәй, Ғәлимбәк, Хәмзә; Сәрүиямал исемендә ҡыҙы Камал никахында вафат, уғылдары бар, бер ҡыҙы иҫке яҡ Иҫәнғол[181] ауылында, ә өс бөртөк уғылдары барлығын Хәмзә һөйләне. Бер ҡыҙы Оло Һаҙ[182] Бек Арслан никахында. Мәстүрә абыстай Вәлит (ауылы) Ғатаулла ишан никахында вафат. Хәҙрәт һигеҙ йылдар һөргөндә йөрөгәндә (абыстайы) бергә булып ҡайтып килде. Ғабдулла, Ғилажетдин, Имаметдин, Ҡыяметдин — уғылдары булды.

Дәүләткирәй (бин Әхмәтязари) ҙур ҡалын кәүҙәле, бәһлеүәнсә көрәшеп йөрөгән. Йәш ваҡытында дәүләтле булып, һуңғы ғүмерендә фәҡирләнеп, йылҡы көтөп тә йөрөнө, тоғро һүҙле, шәп тауышлы, икенсегә ярҙамлы ине. Ҡәбере Сәғиттә. Оло Һаҙ ҡыҙы — ҡатыны Мәймүнәнән: Мөхәммәт, Мөхәммәтғәли, Мырҙағәли, Хәсән — уғылдары; бер ҡыҙы Яҡуп ауылы имамы Сәләхетдин никахында; бер ҡыҙы Аҡъяр Сабирйән никахында вафат.

Мөхәммәт тоғро һүҙле бер ир булып килгәндә вафат булып ҡалды Сәғиттә. Мөхәмәтғәли ит менән сауҙа итеп, яҡшы мал йыйып, байып килгәндә 21-се йыл вафат булды, Мөхәмәтхан исемендә уғлы ҡалды.

Мырҙағәле киҫеп-яҫау оҫталығы менән (йәшәмеш). Ризаитдин, Хәйретдин, Фәтхетдин, Хәбир — уғылдары.

Хәсән (бин Дәүләткирәй) Мостафа хәҙрәттән уҡып, ауыр ғына бер егет, сәй сауҙаһы менән йөрөп, бер иғтибарлы кеше, йәшләй вафат булды.

Ғәлимбәк мулла (бин Әхмәтязари) ғилем, уҡыуҙан хәтере яҡшы ине, бик дәүләтле һәм иген кәсебенә лә етерлек... булып йөрөгәндә Мөхәммәт исемендә уғлы герман һуғышында[183] юғалып, улһыҙ, ауырлыҡ менән генә көн күреп, ифрат дәрәжәлә тырыш ине, 1921 йылда һәләк булды. Бер ҡыҙы Һултаста, бер ҡыҙы Тиргәмештә. Икенсе ҡатынынан: бер уғлы (Нуретдин), бер ҡыҙы — Аҡмалетдин хәҙрәт тәрбиәһендә.

Хәмзә (бин Әхмәтязари) Ырымбурҙа атлы эскадронда хеҙмәт итте, хәҙер ҙә, 75 йәштәрендә, Мәмбәт мәсетенең бер ғибәҙәтле кешеһе булып, асыҡ йөҙлө, сәсән һүҙле бер кеше булып йәшәй. Ҡатыны Оло-

һаҙ Ғабдулмәннәф ҡыҙынан: Сәғит мөәзин, Ғәбделхалиҡ, Мөхәмәҙи[184]; бер ҡыҙы Аҡъяр Йософ никахында. Бер ҡыҙы Аҡъярҙа... Сәғит Мағаз хәҙрәттә уҡып, Мәмбәттең мәсетендә мөәзин хеҙмәтен үтәп, бик яҡшы холоҡло бер кеше булып тора.

Әхмәтязариҙың Балапан[185] (ауылы) ҡыҙы Мәрхәбәнән: Ғабдулла, Шәрифулла — ике бөртөк уғылдары. Ғабдулла — һүҙгә сәсән; байлыҡ юҡ: ир кешене фәҡирлек түбән төшөрә. Шәрифулла — беҙҙең ҡорлашыбыҙ, бер яҡшы егет ине, вафат. Лотфулла исемендә уғлы Мокрушин заводында хөкүмәткә хеҙмәт итә. Әхмәтязари тамам. Лотфулла бин Шәрифулла бин Әхмәтязари бин Иҫәнғол бин Мәмбәт.



## Кантон башлығы Әлмөхәмәт Ҡыуатов кейәүе Йәғәфәр бин Иҫәнғол бин Мәмбәт

Йәғәфәр бин Иҫәнғол мәсеттә аҙан уҡып, биш ваҡытта ла булғанын һөйләнеләр.

Ҡыуатов Әлмөхәмәт — Әлми кантондарға[186] кейәү булып, Солтанморат бин Иҫәнғолға Ҡыуатовтарҙың Гөлбостан исемендәге ҡыҙын алып, Иҫәнғол ике ҡоҙаға бирсән ҡалын (туй, ҡалым) биргәндә Маҡан күлендә йортта булып, күп халыҡ йыйылып, шул ҡалын туйында ҡунаҡтарға эсергән сәйҙәрҙең сәйнүктән ҡағылған шамаһы өйөлөп, уба булып ятҡанын Мөхәмәтшафиҡ олатабыҙ күрһәтә торған ине.

Был Ҡыуатовтар ҡыҙынан: Солтан, Мөхәмәтғәлим, Мөхәмәтғәзиз уғылдары булды. Солтан йыуаш ҡына бер кеше ине, бала ҡалманы. Хәким, Ҡотой исемендә уғылдары үҙенән элек вафат булдылар.

Мөхәмәтғәлим ағай һары төҫтә, яр ҡабаҡлы, оҙон ҡашлы, ифрат дәрәжәлә һүҙгә оҫта, фәкир хәлдә ғүмер итте. Башлап ер һатып та йөрөнө. Бөрйән Шәмшәриф Мәтинов ахун[187] Мөхәмәтйәр ҡартҡа килеп төшкәндә, Ғәлим кереп һөйләшеп:

— Өс сәғәт бер һүҙ ҙә булмай ҡалмаҫ, — тигәндә, ахун хәҙрәтебеҙ:

— Был өсәүҙең береһенән дә хәрәм түгелбеҙ, — тигән.

Мәтинов ҡарттарҙы йыйып:

— Әгәр ҙә мәслихәт күрһәгеҙ, мин һеҙгә имам булыр инем, — тигәндә, Ғәлим:

— Ай, Мәтинов ҡуя күрһен. Беҙгә имам булһаң, беҙҙең ауылдың ҡарттарын баструктан сығармаҫһың, — тигән.

Әхмәт бай Күкшелеккә утар һалғас, Мәмбәт ерҙәрен дә алып, йәй көндәрендә ҡырҡ меңләп ҡуйлар, бер йөҙләп тыу һыйырҙар йөрөткәндә, Ғәлим унлап иптәштәре менән байҙың утар башлығы Мостафа Фәйзуллинға еренең әжерен (хаҡын) һәм үҙ иштәре быны һорағанда Мостафа:

— Ай, башҡорттоң сукондан остауы (тотоуы) бөтмәҫ. Һоранма, Ғәлим, бирмәйем, — тигәндә:

— Ай Мостафа, бик бирерһең, Ҡашҡар менән Муйнаҡ кеүек, арттан элек намаҙ бирерһең, — тип татарҙың көйөүенә һис асыуланмай, татарҙан ашап йөрөгәнен һөйләгәйне.

Ғәлим ағай һуңғы ғүмерендә, Ярлыҡов тигән становой* Таналыҡтан килеү менән, арбаһына ултыртып алып китеп йөрөй торған ине. Яҙ һыу ташҡан ваҡытта, Ярлыҡов кәмә менән сығып, Таналыҡҡа ҡайтмаҡсы була. Ерле халыҡ һабанға йылҡы, һыйыр малдарын һыуҙан йөҙҙөрөп сығарып йөрөгәндәрендә Ғәлим ағайҙың бер кескенә ҡыҙы илап тора. Ярлыҡов:

— Ғәлим, был ҡыҙың ниңә илай? — ти. Ғәлим:

— Беҙҙең дә һыйырыбыҙ булһа, шулай беҙ ҙә һыуҙан сығарыр инек, — тигәс, Ярлыҡов шул ерҙә Ғәлим ағайҙың ҡыҙына бер быҙау бирә. Шул быҙауҙы күп йылдар һыйыр итеп һауҙы. Бына Ғәлим ағай бәғзе ваҡыт шулай ҙа итеп урыҫтың бер быҙауын алған. Ғәлим ағай вафат. Һау көнөндә күршеһенән һораным:

— Ниндәй ғәмәлдәр эшләй торған ине? — тип.

— Һәр көн иртә менән ясин шәрифәне уҡый торған ғәҙәте бар ине, — тип һөйләне.

Ғәлимдең Мысырғәли исемендә уғлы Кәрим ауылында туйға барғандарында бер мәйет булып, ашты кис кенә ашатҡандарында:

— Ҡунаҡтар, бөгөн мәйет булыу сәбәпле аш һуңлап китте, — тигәндә, Мысырғәли:

— Ярай, бөгөн үтте, иртән кемегеҙ үләр икән, — тигән.




* * *

Мөхәмәтғәзиз бин Йәғәфәрҙе, Ибраһим мулланан ун ике йәшемдә «Ширутал салуҡ» китап уҡыу нығыта йөрөгәнемдә, кантуннай бамушник Йәрмөхәмәт олатам писарлыҡҡа алып китте. Шулай йөрөп, Хәби кантундың урыҫ писарҙарына аралашып йөрөү менән русса белеп, шунан ғүмер буйына яҙыусы булып, унан һуң ҡаҙаҡ Арғын Алмат вулысында писарь булып йөрөп, Иҫке яҡ* Һүрәм буйы Биктаһир волоста урядник власлы булып, унан Һабыр волосында яҙыусы булып, шунан бер ялбыр яллы ғына туры тай алып килеп, шул ҡолонлап, күбәйеп, ете-һигеҙ бейәләр һауып, алты-ете һыйырлар һауып, яҡшы ғына дәүләтле булып та, уға ҡарап тормай һаман ауылда сильски писер булып, 1919 йылдарҙа, 82 йәштәрендә вафат. Алла рухын рәхәтлектә итһен! Ҡиәфәте оҙон, арыҡ, һылыу ғына, ҡарсыға күҙле, аҙ һүҙле, ғүмерендә бер ҙә ғәйбәт һөйләмәгәндер. Беҙгә лә күп хөрмәт итте. Алла рәхмәт итһен. Уғыл бала ҡалманы.

Иҫәнғол шунда тамам. Ғәзиз бин Йәғәфәр бин Иҫәнғол бин Мәмбәт.

## Ҡуңыр атлы Ғәбит батыр бин Мәмбәттең, һөңгө тотоп, хәнйәр тағып, барымтаға — барымта сапҡаны

Ғәбит батыр[188] бин Мәмбәт ҡаҙаҡтың далай уғрыларының уҡ-һаҙаҡ атып, ҡанын эсеп, күп малдарын алған. «Ғәбит батыр килә!» — тигәндә, ҡаҙаҡтың илаған балаһы илауынан тымған.

Хәҙерге Этҡолда[189] Сунатай байҙарҙың олатаһы Уңғар Кәрим ауылының янында Уңғар таш исемле урында ултырған. Ғәбит батыр бер көн Уңғарға барып төшһә, Уңғар:

— Ай, Ғәбит батыр, өс көндән бирле бер киленебеҙ бала килтерә алмай рәнйеп (ауырып) ятып алды. Һин килеү менән бер уғыл бала донъяға килде, килеүең хәйерле икән, — тигәнендә:

— Ай, мин бар ерҙә шайтан булмаҫ, — тигән. Шунан ҡорбан боғаҙлап, Ғәбит батыр:

— Был балаға үҙемдең исемемдә биреп китәм, — тип аҙан ҡамәт уҡып, Ғәбит тип атап киткән. Ғәбит-Әбит исеме шунан ҡалған.

Аралбай бин Рәхмәтулланың ун ике ҡолонло бер айғыр өйөрө йылҡыларын ҡаҙаҡтар алып киткәндәр. Бер көндө Аралбайҙың бер ҡыҙы Ғәбиткә килеп керә.

— Ҡарындаш, ата-анаң нишләп йөрөйҙәр? — тигәс,

— Ҡаҙаҡтар бейәләребеҙҙе урлап алып киткәс, анабыҙ һабамыҙҙы йыуып киптереп, кирәгә башына аҫып ҡуйҙы, — тип, бала илағанға Ғәбит баланы ялап-һылап:

— Тиҙ алып килегеҙ Ҡуңыр атты, — тип, атын менеп, һөңгөһөн ҡулына тотоп, хәнйәрен биленә бәйләп, ҡаҙаҡҡа барып йөрөп, ун ике ҡолонло бейәләр, тайына — тай, айғырына — айғыр, башына — баш, алып киткән малдан бер баш артыҡ алмай, бер баш кәм алмай, теүәл генә алып килеп биргәнен һөйләйҙәр.

Ғәбиттең һис аяҡ салып (бөкләп) ултырмай, йөгөнөкләп ултырғанын һөйләйҙәр. Ҡунаҡлыҡта булһын, үҙенең өйөндә булһын, хәнйәрен һаман теҙе аҫтында һалып ултырҙы, тиҙәр. Бур кәүҙәле, бөркөт яурынлы, аҙ һүҙле, күп һөйләшмәгән, тиҙәр. Ғәбиттең Бөрйән Һәмән[190] ауылынан алған ҡатынынан балалары: Ғәбделҡадир, Таһир, Ғилман.



## Ике сәсән үҫтергән Ғәбделҡадир бин Ғәбит бин Мәмбәт

Ғабдулҡадир бин Ғәбит Иҫәнғолдоң Хәсән хәҙрәтенән уҡып, яҡшы ғилеме бар ине. Мин йәш кенә сағымда «Фәтҡулла күле»ндә бесәндә ятҡанымда яныма килеп: «Эй, улым, харыҡ менән тағараҡ араһында айырма ни?» — тип һораны. Мин яуап бирә алманым.

Ғабдулҡадир Ғабдулла кантон Дәүләтшиндә яҙыусы-писарь булып йөрөгән.

Түңгәүер Сибәғәтулла ахун бер йылын Мәмбәттә шәкерт уҡытҡанда Ғайса мөәзиндең «Мәжлес әл абрар» исемле китабын күсереп алыуға Ғабдулҡадирға биргән. Шул китапты яҙғанда: «Ахун хәҙрәт, ошо кәлимәттең мәғәнәһенә төшөнмәйем. Ғибрәт хатамы, мин хата аңлайыммы?» — тип шул бөтөн китапты яҙғанда, мәғәнәһенә төшөнөп барғанын һөйләйҙәр.

Йәш ваҡытында бай булып, ҡарт көнөндә фәҡир хәлдә булды. Ҡиәфәте оҙон буйлы, ҡара төҫлө, күҙҙәре үткен. Аҙыраҡ кәзә малдары булғанын һөйләйҙәр. Ҡустыһы Таһир менән һүҙгә килешеп киткәндә Таһир: «А, атикә, һинең тартҡан тәмәкең утыҙ күбәнән ҡойған кәбәндәй булды», — тигән. Был Ғабдулҡадирҙың Ноғоман, Ғимран исемендә ике уғылдары булды.

Ноғоман Кәлимулла хәҙрәттә уҡыған, ифрат дәрәжәлә зирәк, мәсеттә ҡөрьән уҡып һәм йыраусы, шағир ине. 1908 йыл Ҡалтай «Ғүмәр күле»ндә йәйләү тирмә өйөндә салҡатан ятып, мин бесәндән, туғайҙан ҡайтып ишектең алдынан үтеп барғанымда, ошо йырҙы йырлап ята ине:

Бер Алланан тәҡдир килһә,<br>
Нисәмәләү мең дауа итһәң дә,<br>
Булмаһа булмаҫ, тей, әй...

Ҡыл тамаҡ рәнйеүе менән ауырый ине, шул йыл вафат булды. Иҙрис, Жиржис, Ҡасим исемендәге уғылдары бар ине, 21-се йылдарҙа нәҫеле ҡалманы. Мәгәр Аҡъярҙа Рияитдин скрипкасы — (Ноғомандың) Мәликә исемле ҡыҙынан, атаһы Бауус (Баяс?) исемле ине.

Ғимран (бин Ғабдулҡадир) асыҡ йөҙлө кеше, ярҙамлы бер шағир ине. Был кеше лә ҡыл тамаҡтан вафат булды, ... йәштәрендә Турат ҡыҙы — ҡатыны Тутыянан: Рәхмәтулла, Ғәниулла, Мотиғулла, Сәғиҙулла — дүрт уғылдары бар. Дүртенсе уғлы һуғышта (1914 йыл) юғалды.

Рәхмәтулла ғибәҙәтле, мәсеттең беренсе кешеһе булып, мынтыҡсы*, балта оҫтаһы булып, яҡшы тора.

Ғәниулла — бүтән егеттәр алты йыл буйына һуғышта йөрөгәндә — Ғәни Ырымбур, Орски, Ҡыуандыҡтан үтмәй йөрөп ҡалып, хәҙер Мәмбәт балаларының сильски саветы булып хеҙмәт итә. Егет ярарлыҡ. Ғәни уҡымаған.

Мотиғулла ла Мәмбәттә мәғишәт итә.

Таһир ҡатынһыҙ, бер үҙенә генә ике айғыр өйөрө йылҡылары булып, һуғымға ике бейә, бер-ике һимеҙ ябағыларҙы моҙ өҫтөндә һуйҙырып ала ине. Атабыҙ күрше булыу сәбәпле күрә инем. Силәбе Ғәбделхәким ишанға мөрит булып, ғилем башынан һабаҡ алып, Та-

һир суфый аталып йөрөп, ҡырҡ башлап йылҡыларын тотош һатып, хаж сәфәренә киткәндә, Бохара үтә Хивадә...[191] зыярат әйтеү ниәте менән барып, шунда вафат. Ҡәбере Хива янында булғанын Рысмөхәмәт мулла һөйләне. Урта ҡалын кәүҙәле, һары тулы һаҡал лы, туны-колаҡсыны аҡ елән тышлы. Мәсеттә аҙанды ҡысҡырып, мәтами менән көйләп уҡый ине. Ҡыш ваҡыт урам, тыҡрыҡ буй ҙарын ҙур һепертке менән һепереп, таҙалап ҡуя ине.

* * *

Ғилман бин Ғәбит — Хәсән хәҙрәттең шәкерте. Аҙ һүҙле, дәүләт менән ғүмер итте. Борон йәш ваҡытымда йәйләүҙән ыҙмаға (ҡышҡы йортҡа) килеп йөрөһәм, бер иштәк һыбай Таналыҡтан килеп мәсеттең...

(Бит юҡ)

## Мәмбәттең ейәне Вәлләмдән ҡалған тармаҡ

...Мөхәмәтшаның (бин Вәлләми бин Хәйбулла бин Мәмбәт) Ғәҙелша исемендә бер уғлы гүйә атаһы кеүек булып, .?. балта оҫтаһы булып, Мәмбәттә вафат. Ғүмәр, Әхмәтша — ике уғылдары бар. Ғүмәр — духтыр, Аҡъяр балнисларында хеҙмәт итеп, биргән дауалары килешеп, алға сығып барғанын урыҫ духтырҙары хөсид, көнсөлләп, сығарҙылар. Әхмәтша русса мәғлүмәте яҡшы ғына. Аҡъярҙа почтала хеҙмәт итә. Асыҡ, хеҙмәткәр егет.

Йәһүҙә (бин Мөхәмматғәли бин Вәлләми бин Хәйбулла) кәсепкәр әҙәм ине. Шәмсетдин, Ғәбиҙулла — ике уғылдары булып, Орск, Троицк мәктәптәрендә булып, аҡыл, өгөт уҡыу ғәҙәт ине ... йәшендә вафат. Ғәбиҙулла 21-се йылдың касафатынан китеп, Ҡыуандыҡ яғында тора. Вәлләми тамам.




* * *

Мәмбәттең Йомаһултан[192] исемле өсөнсө ҡатынынан 3 уғылдары булған: 1) Иҫәндәүләт 2) Мөхәмәтрәхим 3) Күбәк.

Иҫәндәүләт һыйыр, ҡуй малдарына бай булып, үгеҙ менән һабан һөрөп, уғылдары үгеҙҙәрҙе йәлләп, ҡуналыҡҡа барып йөрөнөләр.

Иҫәндәүләт ҡунаҡ һыйлап, йомарт исеме лә алған. Бер көндә килгән ҡунаҡтарға ике тәкә һуйып ашатҡан, өсөнсөгә еңгә вә килендәре йыйылып барғандар. Уларға ла тәкә һуйып ашатҡан (Анабыҙҙың әсәһе Сәүиә әбей һөйләгән ине).

Йәнә фәҡир, мескендәргә лә ярҙамлы, шәфҡәтле булған. Бер ваҡыт бер мескен, яланғас әҙәм килеп кергән. Шул мескенде йәлләп, өҫтөндәге күлдәген сисеп биреп, үҙе күлдәкһеҙ ҡалғанын һөйләнеләр.

Иҫәндәүләт аға шулай бер иғтибарлы, итәғәтле кеше булһа ла, улдары улай булмағандар. Аталары ҡунаҡҡа тәкә һуйып, ҡаҙанға һалғас, ҡайнап сығыу менән ҡаҙан өҫтөнән алып ашап бөтөргәндәр. Унан һуң йәйләүгә сығыу менән һәр бере бер атҡа менеп, һәр ауылдарға барып, ҡайҙа мәжлес, ҡайҙа уйын-көлкө, шунда ғүмер итеп, бесән ваҡыттарын буш үткәреп, атаһының малдарына бесән әҙерләмәй, атаһының фәҡирлегенә сәбәпсе булып, ата-әсәләренән изге доға алмай, балаларының һәммәһе лә фәҡир хал (хәл, көс), иман фал (яҡшыға юрау, өмөт) менән ғүмерен үткәрҙеләр. Был Иҫәндәүләт ағаның уғылдары: 1) Әйүп 2) Юныс 3) Ғәлиәкбәр 4) Ғүмәр 5) Мөхәмәтйәр 6) Салих 7) Мөхәмәтшафиҡ.

Әйүп үгеҙҙәр көтөп, һабан һөрөп, иген кәсебенә яҡшы ғына тырыш булып, аҙыраҡ уғрылыҡҡа ла керешеп, Ҡотлоәхмәт кантон егерме биш розганы осаһына биргәнен һөйләйҙәр. Ҡалтайҙан ул «ер һөрөүсе Әйүп» булып, «Ҡалтайҙың мыйығы ҡата» тигән һүҙ шунан ҡалған. Ҡалын кәүҙәле, урта буйлы әҙәм ине. Был Әйүптән: 1) Хәйрулла 2) Һибәтулла 3) Ғиззәтулла 4) Рамазан 5) Мөхәмәтйән уғылдары булып, һәммәһе лә фәҡирлек менән ғүмер иттеләр. Мәгәр Рамазан уғры исемен алып та йөрөгәндә атаһы Әйүп: «Әй, Рамазан, егерме биш йәште үткәрһәң, Алла, йөрөр инең», — тигән һүҙе тоғро килеп, егерме бишче имен үткәрә алмай, үлтерелеп ҡалды. Хәйрулланан: Сәғитйән, Ғәйсәр исемләрендә ике уғылдары булып, Ғәйсәрҙе 21-се йыл Бикет мужиктары үлтерҙеләр.

Юныс (бин Иҫәндәүләт) йылҡы хайуандарына духтыр ине. Беҙҙең дә йылҡыларҙы бесә, маңҡа рәнйеүе төшөп, (малды) дауалаттым да өйгә керетеп, сәй эсерҙем. Шунда ғүмерендә күргәндәрен һөйләне: «Бөрйән Буранбайҙың[193] бер ҡыҙын, Бейешов Хәсән кантон[194] балаларына биргәндә, арала мөхәббәттәре булмай, фирҡәт иғәнә (никахты бөтөрөп) айырып алғас, «Был ҡыҙҙы ҡайҙа ғына кейәүгә бирһәк тә, Бейешовтар ҡуймаҫтар, был ҡыҙҙы Каипов Иҫәнғолдоң бирәүһенә бирәйек», — тигәндәр.

Шунан Иҫәнғол ҡарт, минең ҡулыма хат биреп, Буранбайға: «Ошо егет кейәү булырға ярар», — тип ебәрҙе. Менгәнем яҡшы ат. Әйәр-өпсөн һәммәһе көмөштән. Башымда — ҡамсат бүрек, аяғымда саури (һауыр)[195] бейек үксәле итек менән барҙым. Ҡыҙҙы бирҙеләр. Ҡыҙҙы ла бер яҡшы атҡа мендереп алып, ҡыҙ менән Өфөгә мөфти хәҙрәттәренә никах уҡытырға киттем. Иҫәнғол мөфтигә һәм никах уҡып бирергә хат яҙған ине. Өфөгә барып, Иҫәнғолдоң билдәләп ебәргән фатирына, бер түрәгә төштөк. Түрәнең егә торған яҡшы аты ауырып ята икән. Шул атты дауаланым. Алла шифа бирҙе, йүнәлде. Мөфти хәҙрәттәренә Иҫәнғол олатамдың яҙған хатын бирҙем. Мөфти хәҙрәт ғаҡыд (килешеү, вәғәҙә) никах уҡыны. Ҡыҙ минең кәләш

булды. Шунан ҡайтып килеп, шул инәйең менән күп ғүмер иттем. Шунан һуң ғүмере бөтөп үлеп ҡалғас, ошо инәйеңде алып, көн итеп ятам, — тине. — Улым юҡ. Бесәнде үҙем сабам. Ҡартайҙым. Улым, йәш саҡта мин шулай булдым, — тип һөйләгән ине. Юныстан нәҫел ҡалманы. Юныс бин Иҫәндәүләт бин Мәмбәт[196].




## Ер һатмағыҙ, башҡорттар, Ерҙәй дәүләт һис тә юҡ

Беҙҙең бала заманыбыҙҙа, Яйыҡ буйында ғына, казачий рустан[197] башҡа һис рус мужик, хахул юҡ ине. Батшаның, абрук ерҙәрегеҙ[198] алына, һатып ҡалығыҙ, тигән бойороҡтары йөрөгәс, әйҙә башҡорт ерен һата башланы.

Рус килмәҫтән элгәре беҙҙең ауылдар Сәскә күл, Һарыбай мужигы урынында йәйләгән, Урта Маҡан, Оҙон күл, хәҙерге Тамаҡ, Иҫке хахул урынында йәйләгән.

1875 йылдар микән, беҙҙең бала ғына заманыбыҙҙа, Ураҙайҙың Ҡолош, Бирле күл тарафтарын 12 йылға арендаға зряға (бушҡа) биреп, ун бишләп хахулды Ураҙайға ултырттылар. Ваҡыты (срогы) тулғас, ул мужиктар китте, унан һуң Хәммәт байға биреп, Иҫәнғол быуаһынан үргә бесәнен сабып, нисәмә меңдәр ҡуйҙар ҡышлатып торҙо. Шунан һуң һәр ергә мужик килеп ултыра башлағас, йәйләүҙәр ҡыҫҡара килеп, 1907 йылдарҙа ер һатҡандарҙан айырылып, еребеҙҙе алып ҡалайыҡ тип, 75 душ еребеҙҙе алып, Ҡалтайға күсеп, унда егерме йыл яҡшы ғына ауыл булып, мәсет һалып, ойошоп торғанда, ун дүртенсе йылдар һуғыштар булып, холоҡ та, тыныслыҡтар китеп, бәрәкәт бөтөп, халыҡтың бер-беренә шәфҡәте бөтөп, хәя (оятлылыҡ, тыйнаҡлылыҡ) бөтөп, 1921 йылдарҙа аслыҡтан үлеп халыҡ әҙәйеп, ҡалғаны малдан яҙып, ярлы булып, аслыҡҡа ҡарамай, һаман халыҡ холоҡһоҙланып, тәүфиҡһеҙләнеп, иттихад (берҙәмлек), берлек, иттифаҡ (бер һүҙҙә булыу, кәңәш) бөтөп, телендә иҡрар (таныу, дөрөҫтө һөйләү), ҡәләбендә тәсдиҡ (күңелендә хаҡлыҡ) бөтөп, бер Мәмбәт балаһы дүрткә бүленеп, бишенсеһе лә иртәгә ҡайҙа күсеп бүленәм тигән уй-фараз менән ғүмер уткәрә. Бынан һуң бар әҙәм күрер, Алла Кәрим ярҙам өйрәтһен, амин!

Атабыҙ Мәмбәт — мең йылҡы, уғлы Рәхмәтулла, Иҫәнғолдар бишәр йөҙ йылҡылар көтөп, унан Ишмөхәмәт, Ғәбделнафиҡ, Кәбәк батыр, Йәрмөхәмәт, Әхмәтязари — өсәр йөҙ, бәғзеһе — бер йөҙ илле, беҙҙең заманыбыҙҙа Ҡадир бай өс йөҙ ҡырҡ баш йылҡы көтөп, унан

Ғүмәр хорунжий, Ғайса мөәзин, Мөхәмәтйәрҙәр — йөҙ илле баш, Солтанғол, Мөхәмәтйән, Солтансәлим уҙамандар ҙа шул миҡдары, уларҙан һуң Сәғит — ике йөҙ, Ғәлләм, Дәүләтъяр, Кәлимулла, Төхфәтулла, Юлай хәлфә илле-алтмышар йылҡыларға хужа булып, хәҙерге көндә ауылыбыҙҙың иң байы — Сәғит утыҙ баш (йылҡылы), унан ҡалғандарыбыҙ — икешәр, бәғзебеҙ — өсәр, бер-ике һыйырҙан бүлешеп алып, ас та түгел, туҡ та түгел, сыҡмаған йән йөрөй икән.

Беҙ бала заманда Яйыҡта иртәнән кискә хәтле ҡымыҙ эсеп, байы-фәҡире бергә, һис кемде айырмай, ҡунаҡта фәҡирҙәр һис тәкә һуйып аш әҙерләп расход итеү юҡ, һаман байҙа, байҙың өйөндә, байҙың һыйында, иртәнән ҡара кискә шунда була. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, фәҡирҙәр төндә йоҡлағанда ғына үҙ өйөндә булалар.

Йәйләүҙең иң аҙағы 14-се, 15-се йылдарҙа бөттө. Иң башта ауылда башҡорттоң ере бөттө. Ере бөткәс, малы бөттө: малы бөткәс, башҡорттоң йәне ярты: дәрәжәһе кәмене, бөттө. «Ере байҙың — иле бай» тигән һүҙ — хаҡ һүҙ. Күрҙек. Фәҡир дир:

*Ер һатмағыҙ, башҡорттар,*
*Ерҙәй дәүләт һис тә юҡ.*
*Һәммә мәғдән ерҙән сыға —*
*Ерҙең ҡәҙере беҙҙә юҡ...*

Беҙ бесән сапҡан заманда бер кеше бесән бөтһә, икенсеһенең кәбәнен ҡойошоп бөтөрөшөп, берәү һабанын бөтһә, икенсеһенең һабанын бөтөрөшөп, бергә ҡонан менеп, ярышып ҡайта торған ине.

Халыҡтың ата-анаға, олаталарға ҡәҙере шул хәтле ҙур ине, улар мәжлесендә шаулашмай һөйләшә, әкрен, әҙәп менән генә уларҙың алдына тәғзим (хөрмәтләү), тәкрим (ололау, ҙурлау) менән генә, хеҙмәт-хөрмәт менән генә йөрөү, оло кешеләрҙән айырым, башҡа мәжлес яһамау, араҡы-тәмәкенең заты-еҫе юҡ, уйын-көлкө булып ҡалһа, өлкәндәр күрмәгәнерәк ерҙә генә, унда ла беленеп ҡалһа орошоп-һуғып уны тыя, бөтөрә һәм шуның менән тыйыла, һис ҡаршы һүҙ әйтеп ҡаршы килмәй.

Дин дә, намаҙ ҙа шул ҡәҙәре ҡөҙрәтле ине, көн иртә намаҙында Мәмбәттең анау ҙур мәсетендә иртә намаҙында, «Йәмәғәт, тоғролап, тығыҙлап», — тип мөәзиндәр, халыҡ саҡ-ҡа һыйып уҡып сыҡҡанда, мәсеттән дүрт яҡ урамға таралып ҡайтҡанда, урамдар тулы була ине.

Ала тауҙар тулы ағаслыҡ, емешлек, сейә, еләк, бөлдөргән, ҡарағат, муйыл, балан. Сейәнең күплеге, Айғыр тауының бер яғына менһәк, икенсе яғы ҡып-ҡыҙыл булып ятыр ине. Беҙҙең аталарыбыҙ заманында, ҡыш йылҡы ҡарағанда, ҡар өҫтөндә ҡап-ҡара булып ултырған сейәне ашай торған инек, тип һөйләне. Хәҙер инде ул ағастарҙың саҡ ҡына төҙөктәре ҡалды, сейә ағастары мал тапалыу һәм косилка менән сабыу арҡаһында аҙ ғына була.

Таштуғайҙың Таналыҡ һыуы буйҙары, туғайы, үҙән буйынан башҡа ерҙәре йылҡы күренмәҫлек ҡараған*, тубылғылыҡ* ине. Көҙ көндәре ашлыҡ баҫҡанда һауын бейәләрҙе һауҙырырға ҡайтарырға

саҡ табып алына ине. Хәҙерге көндә косилка менән сабып, бөтөн туғай эсендә бер һеперткелек ҡараған юҡ. Тотош сабын бесәнлек булды.

Таналыҡ һыуының балығы, рус килмәҫтән элек һыуҙың эсе тулы балыҡ ине. Энә ҡармаҡ менән ҡармаҡлағанда ла аршын буйы йәйен, суртан ҡаба ине. Алабуға балыҡтары итек ҡунысы кеүек була ине. Уларҙың бөтөүенә хахулдар сәбәпсе булды.

Маҡан буйҙары бөгәл-бөгәл күлдәр ине. Макруш заводының[199] үр яғынан беҙ бала саҡта һөҙөп, буйы сирек ярым ҡанса табан балыҡтары алдыҡ. Хәҙер, быны күрмәгән балалар, ошо балыҡ булған тип яҙған кешегә һәм яҙыуына ышанырҙармы? Әлбиттә, ышанмаҫтар.

Хәҙерге кешеләр боронғо кешеләрҙе иген сәсмәгән, икмәк ашамаған, ас булғандар, ти. Дөрөҫ, йәй көнө икмәк ашаманы. Ғәҙәт шулай ине. Ләкин ашағаның — ит, ҡымыҙ. Балалар һөт-ҡатыҡ, ҡорот ашап, халыҡ көнөн-төнөн ҡымыҙ эсеп, ҡарттар мискә ҡорһаҡлы, ҡыҙыл йөҙлө, пак күлмәкле булып, бай бисәләр тирмә өйҙөң ишегенә саҡ ҡына һыйып керәләр ине. Ҡыш булһа, байҙар өсәр бейә, ая-өс иле (ҡаҙы) сыҡмалы һимеҙ-һимеҙ тыу, тыуса һыйырҙар, тана үгеҙҙәр ҡанса булһа, барыһын һуя. Хатта иң фәҡирҙәр ҙә бер һыйыр һуйып, ҡыш буйына ҡалын туй (үткәреп), шатлыҡта ғүмер кисерерҙәр ине.

Ас булһа булғандыр, ләкин беҙ күрмәнек. Байҙар — егерме, ун биш, бәғзеләре — ун, фәҡирҙәр ҙә биш һыйыр һауып, байҙар майҙы шанға*, ҙур көбөләргә һалалар ине. Хәҙерге кеүек бер-ике генә һыйырҙың майы шикелле көршәккә генә һалмайҙар ине. Ас булһа булғандыр. Фәҡирлекте, аслыҡты 21-се йылдан бирле күрҙек. Минән башҡа кешеләр ҙә күрмәнем, тип әйтә алмаҫ.

Күргән эште йәшерергә ярамаҫ. Хәҙерге көндә әсәһе иткә туймай, балаһы һөткә туймай. Туя, тип әйтер инем, ҡатындарҙа имсәк юҡ, балаларҙа инсаф юҡ. Һөт урынына ашағаны манный ярмаһы, әсәһенең ит урынына ашағаны тәмһеҙ ҡоро һалмаһы.

Был дәүләттәрҙең (байлыҡтарҙың) китеүенә балаларҙың ер һатҡан аталары сәбәпсе булып, балаларын ерһеҙ, дәүләтһеҙ, малһыҙ ҡалдырҙылар. Алла тәғәлә кемдең эшләгән эше өсөн яза бирәсәк, кешенән күрмәҫ, үҙенән күрер.

1890 йыл призывҡа барып*, бираүай инуалит* булып ҡалып, 1891 йыл Зөлҡәрнәй Рсәнбәтовтың Мәймүнә исемендә ҡыҙына никахланып, Мәрфүғә, Мәрхәбә, Рәхимә, Ғәбделрәхмән, Ғәбделвәкил — ике уғыл. Мәрфүғә (ҡыҙым) Суҡраҡ Ғәзизйән никахында вафат, 25 йәшендә. 4 йәшлек кенә Хәбибъямал исемендә ҡыҙы ҡалды. Ире 21-се йыл аш бирмәй һәләк итте. Язаһын әхирәттә күрер. Мәрхәбә (ҡыҙым) Бөрйән (волосе) Йомаш Солтанғәли никахында, Әхмәдулла исемендә ун йәшле уғлы бар. Рәхимә (ҡыҙым) был көн ун алты йәшендә. Ғәбделрәхмән (улым) 1904 йыл февраль 13—14 дүшәмбе көн донъяға килде. Егерме икенсе йыл Юлыҡ (ауылы) Сибәғәтулла Әҙһәмовтың Мәфтүхә исемендә ҡыҙына никахланды. Назим исемле уғлы, Миңнур исемендә ҡыҙы бар. Ғәбделвәкил (улым) 1907 йыл ғинуар берендә донъяға килде. 1913 йыл апрелдең 24-дә пәнжишәмбе көн икенденән бер сәғәт элек Мәймүнә вафат булып, йома көн ерләнде. Ай, Аллам, рәхмәтеңә ғарыҡ ит (туйҙыр)!

1913 йыл 14 июндә Ишан ауылы Харис ҡыҙы Шәрифәне никахландым. Рәкиә исемендә бер ҡыҙ донъяға килеп, 3 йәшендә сәсәктән вафат, Мәмбәттә. 1918 йыл Хәмзә исемендә бер уғыл донъяға килеп, дүрт көндән һуң вафат булды. Әй, Аллаһым, рәхмәткә йөҙҙәр!

1919 йыл 14 июндә Стәрле өйәҙе Ноғман[200] ауылы Шакир ҡыҙы Ғәзизәгә никахландым. 1924 йылда Сәкинә исемендә ҡыҙыбыҙ бар. Изгелекле ҡыҙ булһын. 1869 йыл 25 сентябрҙә донъяға килеп, бөгөн 59 йәштә Ишанда имам булып хеҙмәт итәм. Ахыры хәйерле булһын, амин! Мөхтәрәмә әсәм Фәғилә имам Ғәбделхалиҡ ҡыҙы һижрә 1343... вафат булып, шул көн ерләнде, 75 йәшендә, милади 1924 апрелдә. Әй, Илаһым, гонаһтарын ярлыҡа, амин!

## 22. ЗАМАНАЛАР ҠИССАҺЫ

### 1. Әлшәй Мәргән — ил ағаһы, ырыу башлығы

Бөтөн төркмән-ҡыпсаҡлар Әлшәй ҫүҙенән сыҡмағаннар. Бик арҙаҡлы, ғәййәр кеше булған (ул).

Әлшәй Мәргән(дән) хәҙергә тиклем килеп еткән нәҫел ағасы, башҡорттарҙың төркмән-ҡыпсаҡ (йәғни, беҙҙең белеүебеҙсә, мең. — *Р. Ш.*) ҡәүеме(н хасил итә). (Әйткәндәй, мең ырыуы, мең ҡәбиләһе тигән атаманы ул ишетергә лә теләмәне — *Р. Ш.*)

Төркмән-ҡыпсаҡтарҙың[1] йәшәгән ерҙәре Туҡ, Соран, Дим, Өршәк, Өйҙөрәк, шунан был яғы Ағиҙелгә еткәнсе, көнбайыш сигерәһе Сәрмәсән, Ҡармасан һыуы буйында йәшәгән башҡорттар, Ҡандракүл, Асылыкүл буйҙары. Ошо ерҙәр.

Беҙҙең быңа был Ташлы ауылына яҡын Шарлы урман — Теләүкәй батырҙың ере. Шарлап аҡҡан һыуы булғанға Шарлы урман тигәндәр. Ҡайҡымбирҙе һыуының шарламаһы бар, Ҡайҡымбирҙе буйы ла Теләүкәй батырҙыҡы. Теләүкәй батыр — Әлшәй Мәргәндең бер туған апаһының улы. Уны урыҫтар үлтереп, ерен алалар. Килеп баҫҡандар көтмәгәндә. Утлы ҡорал ярҙамында еңгән улар. Торған ере Шарлы урманда. Аҙаҡ ана шул Шарлы урманды һағынып йырлағандар:

Шарлы урманҡай кевек урман ҡайҙа,
Ҡайҡымбирҙе кевек ҫыу ҡайҙа?
Шарлы урманҡай ҡулларҙан киткәннән ҫуң
Үкереп-тәгәрәп эсергә бал ҡайҙа?

Шарлы урманҡайларҙың уртаҫында
Боролоп-һарылып үҫкән дә бер уҫаҡ.
Шарлы урманнар ҡулларҙан китмәҫ үк ине,
Йыйын Яйыҡҫыбы ырыуы бер булҫаҡ.

Беҙҙең Әлшәй ҡарттың улы Яубай Мәргән, уның улы Ғәлекәй Мәргән, Теләүкәй батырҙың фажиғәһен ишетеп, үҙҙәренең әҙәмдәре менән барғандар. Барһалар, бер тере әҙәм ҡалмаған. Бөтөн байлыҡтарын талап, малдарын ҡыуып алып киткәндәр.

Ҡайтырға сығалар — башҡорттарҙың йөрөй торған башҡа юлы менән. Шунда юлда ятҡан бер балаға тап булалар. Ауырыу бала.

— Һин кем? — тип һорағас:

— Теләүкәй батырҙың улы. Исемем Сурағол, — тип яуап бирә. — Атайым бик ҡаты яраланғайны, инәйем бәйләне лә, тиҙ барып ет Оло йортҡа, ярҙам һорап, тип ебәрҙе, — ти.

Теләүкәй батыр барып та еткән Оло йортҡа — йән дә биргән (икән. Шуны белә бынан тегеләр).

— Һин нисек килеп ҡалдың бында? — тип һорағас:

— Имергә — ҡаҙылыҡ, ял, сәйнәргә — яҡшы ит, тоҙо кәм генә ҡорот ҡашынға* тултырҙым, шуны алаһың балаға ашап ятырға. Ана, ботлоҡ тулы ҡымыҙ, ҡуллыҡ тулы һыу, һыуһап ятмаһын. Ғүмере булһа, шул бала ҡалыр, башҡорттарҙың юлына алып барып, ташлап кит , — тип инәйем беҙҙе оҙатып ҡалды, — ти малай.

Баланы алып ҡайталар. Ғәлекәй Мәргән үҫтереп, өйләндереп, Ҡорһаҡ һыуының үр яғына башҡа сығара. Етем булғас (ни), исеме Сурағол түгел, Сураҡай булып ҡала. Ни өсөн тигәндә, Ҡармыш батырҙың да улы Сурағол була. Уны Сурай тип йөрөтә башлайҙар. Сурайҙар — төп ана шул Сурағолдоң балалары. Ҡармыштың ҡатыны йәнә ике ир бала таба: Ишғәле, Ҡушғәле. Ишғәле кесе йәштән вафат була, Ҡушғәлене, үҫеп еткәс, өйләндереп, Сурағол янына, Сурайға, башҡа сығаралар. Хәҙерге көнгә хәтле Сурай балалары бер яғы — Сурай, бер яғы Ҡушғәле балалары тип йөрөтөлә.

Әлшәйҙең оло энеһе — Ҡармыш. Ҡармыш «көслө йоҙроҡ» тигән һүҙ («карыулы мыш»). «Мыш» — йоҙроҡ. Беҙҙең тел төркмәнгә яҡын. Тыуғас та, ҡараған атаһы: «Әһә, исеме Ҡармыш булҫын!» — тигән. Үҫкәс, башҡа сығарып, Дим буйындағы бер түбәлеккә ултыртып ҡуйған — тирә-яҡты күреп, хәбәр алып торорға. Ҡармыш та, ағай-энеләре кеүек, бик батыр булған. Шулай ҙа Мәргән түгел. Һуғышҡа балта, ҡылыс күтәреп керә торған булған. Уның ҡалҡаны киптерелгән фил ҡолағынан булған, тимер менән әйләндереп, урталарына тимерләп гөлдәр ҡуйып, тимерҙең өҫтөнән көмөш йүгертелгән.

(Әлшәйҙең) икенсе энеһе — Илсебәк. Өйләндереп, Төйлән буйына юғарыға алып барып ултыртып киткән. «Ерең ташлы — ауылдың исеме Ташлы булһын», — тигән.

Өсөнсө энеһе — Кинәгәс. Өйләндереп, Йыбансай тауына алып барған. Шунда еткәс: «Мына тигеҙ ер, аҡлан, ҡышлауға ҡулай», — тигән.

Дүртенсе энеһе — Ҡайып. Өйләндереп, Димдең арьяғына күсергән. Хәҙерге ваҡытта Сәпәш тип йөрөйҙәр — Иҫке һәм Яңы Сәпәш.

Дүрт энеһе, бишенсегә үҙе биш ауыл булып ултырғандар. Әлшәй ҡарт үлгәс: «Ағайымдың һөйәге үҙемдең яҡта булһын, таулы-ташлы ерҙә», — тип, Ҡайып уны Димдең уң яғына алып сығып күмгән.

Әлшәй Мәргәндең балалары күп уның. Күҙгә күренгәне, данлыҡлыһы — беренсе ҡатынынан оло улы Яубай Мәргән. Егет булып еткәс, ауырлығы ун алты бот. Уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс менән ҡоралланған булған. Ҡайҙа һуғышҡа барһа, ғәскәрҙе башлап йөрөгән. 160 йәшкә етеп, үлгән көнөнә хәтле, баяғы, ат өҫтөндә йөрөгән. Әлшәй ауылының иҫке ҡәберлегендә ерләнгән. Яубай Мәргәндең оло улы Ғәлекәй Мәргән.

Ауырлығы ун дүрт бот, 141 йыл ғүмер кисергән. Ул да, һуғышҡа барғанда, ғәскәр башы булып йөрөгән. Уның оло улы Уҫман палуан. Ауырлығы ун ике бот, 119 йыл ғүмер кисергән. Төркмән-ҡыпсаҡ ырыуының ғәскәренә баш булып, төрөк һуғышына барып, еңеп ҡайтҡан кеше ул. Уның ярҙамсыһы Кинәгәстең улының улы Ҡотлозаман палуан булған, ышанған энеһе Яҡшембәт батыр менән икеһе — ярҙамсылар (яҡшымбәт — «яҡшы өммәт» тигән һүҙ). Ғәлекәй Мәргәндең ҡәбере атаһының ҡәбере менән ҡушлап ята. Уҫман палуандың ҡәбере лә атаһының ҡәбере янында.

Уҫман палуандың оло улы Ситдыҡ, унан һуң Әбдрәхмән, унан һуң Абыҙгилде, унан һуң Ноғман, Әбделкәбир, Фәйзулла, Зәйҙулла, икенсе ҡатынынан иң кесенәһе Тимербай — минең атай. 1900 йылда Төйлән буйындағы үҙенең йәйләүендә В. И. Ленинды ҡунаҡ итеп, исеме Әлшәй тарихына инеп ҡалған Яхыя Туҡаев та туранан-тура Әлшәй Мәргән нәҫеленән. Яхыяның улы Миңнеғәле, туҡһанды үтеп, яңыраҡ[3] Ташкентта донъя ҡуйҙы.

Совет осоронда Әлшәй Мәргәндең нәҫел-нәсәбен тырым-тырағай таратып, иленән, еренән һөрөп, тамырынан аҡтарырға яҫҡындылар[4]. Әммә, шөкөр, Әлшәйҙең ырыуҙаштары ауыл-ауыл булып бөгөн дә Дим буйының иң күркәм, иң гүзәл ерҙәрен биләп ултыралар. Әлшәй ауылы ла, район үҙәгенең бер урамы ғына булып ҡалһа ла, барыбер үҙ урынында ултыра.

Халыҡ хәтере һүнмәй ҙә, һүрелмәй ҙә. Арҙаҡлы ырыу башлығы, ил ағаһы Әлшәй Мәргәндең исеме яҡташтарыбыҙҙың күңел түрендә йәшәй. Тыуған төйәгебеҙ — Әлшәй районы. Заманында район үҙәге булған Әлшәй ауылының исеме менән аталған ул. Ә Әлшәй ауылы — Әлшәй Мәргән нигеҙ ҡорған, уның иҫтәлеген һаҡлаған ауылдарҙың береһе.

## 2. Фәкихтәр* яҙыуы йәки Боронғо тарих китабы

Беҙҙең хөкүмәт бөткәс, идара башлығы әйткән Ғәлекәй ҡартҡа: һеҙҙең илегеҙ ҙә, уҡығандарығыҙ ҙа күберәк, ошо тарихты (Башҡорт тарихын) һин һаҡла, тип уға биргән.

Ул тарих балыҡ (йәйен) тиреһенә ҡыҙыл ҡара (зәғфран) менән яҙылғайны. Китап аҙаҡ беҙҙең өйҙә һаҡланды. Атайым йөҙҙө үткән ҡәртнәйемә духтыр алып килеп, күҙлек һайлап алып бирҙе. Ҡотлозаман палуандың ҡыҙы, Байбикә. Шунан мине ҡәртнәйем боронғо ҡәләмгә уҡыта башланы. Миңә һигеҙ йәш тулып, туғыҙынсы киткәйне. Шунда һорау ҡуйҙым:

— Ҡәртнәй, ни эшләп мыны ҡыҙыл белән яҙғаннар, ҡара белән түгел?

— Балам, ҡара белән яҙһа, ул тора-бара үҙенән-үҙе юғала. Әллә күҙгә күренмәгән нәмәләр ашай инде. Мының ҡыҙылы зәғфран. Нисек яҙғанһың, шул көйө тора бирә, үҙгәрмәй. Иң башлап тирегә яҙылғайны. Мына бы, балам, йәйен балығының тиреһе. Үҙебеҙҙә эшләгәннәр, — тип аңлатты ҡәртнәйем.

Ахырында бер аҙы ҡыяғаҙға яҙылғайны. Ул ҡыйағаҙ Ҡытайҙан килгән.

— Мынау шыма аҡ ҫарғылт ҡыйағаҙ — Сәмәрҡәнд ҡыйағаҙы. Йәйен тиреҫе ныҡ инде ул, әммә үтә аҡ түгел, — тине ҡәртнәйем, китаптың биттәрен асып күрһәтә-күрһәтә.

Мосолман дине килгәндән һуң яҙылған инде ул китап. Төп йөкмәткеһе мал менән көн күргән күсмә халыҡтар һәм шәһәр төрөләре хаҡында.

Ҡалын ине. Һәр ҡайһыһы Ҡөрьән ҡыйағаҙы һанындағы өс китап. Тышлыҡтары үгеҙ тиреһенән эшләнгән күн ине. Өҫтән, аҫтан, ҡабырғанан — өс ерҙән бәйләй торған шнуры бар ине. Төптәрен нығытып теккән ептәр кенәп үҫемлегенән булған. (Ул канаф икән, һуңынан белһәм, шунан брезент эшләтәләр булып сыҡты.) Тәүге битте башлаған урынында биҙәктәр бар ине. Китаптың исеме «Фәкихтәрҙең халыҡ тормошонан яҙғаны» тип ҡуйылғайны. Был - беренсе китап. Икенсеһе — «Халыҡтың ваҡ хөкөмәттәргә бүленеүе һәм шәһәрҙәр». Өсөнсөһө — «Хөкөмәттәрҙең сауҙа юлы, бер-береңә мөнәсәбәттәре...»

Беренсе китапта ил-йорттоң ырыуҙарға бүленеше һөйләп бирелә. Ҡайһы шәһәрҙең халҡы ниндәй халыҡтан, тирә-яғындағы халҡы кемдәр. Шунан башлай. Саруа халыҡтар (саруа — төрки халыҡтарында «скотовод» тигән һүҙ), үҙҙәренең палуандарына яҡын булып, бер төркөмдө барлыҡҡа килтерә. Шәһәр халҡы төрлө яҡтан килгән сеймалды эшкәртә, оҫтасылыҡ менән шөғөлләнә, башҡа шәһәрҙәргә сауҙаға йөрөй. Шәһәр башлыҡтарына итәғәт иткән саруалар уларға ла мал баҡҡан, үҙҙәренең дә малдарын ҡарағандар. Әммә ләкин, нәфсәниәткә* бирелеп, ҡайһы бер ырыуҙарҙы бик талағандар — малдары өсөн дә, ҡыҙ, ҡатындары өсөн дә.

Дин берҙәй булмаған: ҡайһы хан, ни теләһә, шулай йәшәй биргән. Ҡайһы берҙәре утҡа табынған, ҡайһы берҙәре ҡулдан яһаған ботҡа табынған (бот тигәне — тәре), ҡайһы берҙәре ниндәй хайуандан ҡурҡһа, шуны раббы* тип таныған (юлбарыҫ, арыҫлан), ҡысмандары (ҡайһы бер бүлектәре) шаман дinendә булған. (Бер заман) шул тормоштан туйған халыҡ. Туҡтауһыҙ берен-бере баҫып талау, үлгәндән ҡалғанын, ҡул-аяғын бәйләп, ҡоллоҡҡа һатырға алып китеү быларҙың йәненә тейгән. Сауҙагәрҙәрҙән ишеткән һүҙҙәргә ҡарап, ҡытайҙарҙың үҙенә күрә дине бар, ҡануны бар, үҙенә күрә ғилеме бар, икенсе һинделәр, улар һәм ҡануни тормош менән йәшәгәндәр — быларҙы ла ишетәләр, өсөнсө Юнан халҡы (хәҙер ул Греция) дин ҡабул ҡылғандар, диндәре, ғилемдәре бар үҙҙәренә күрә. Ни өсөн беҙ былай бәдәүи* тормошта йәшәйбеҙ? Мәҙинә шәһәрендә әйтәләр «ислам дине» тип, уны ла бик маҡтайҙар, мәҙәниәткә сыҡты, тип үҙҙәре ғорурланалар. Беҙ ҙә мәҙәниәткә ынтылһаҡ була бит, тип, ырыуға, даны сыҡҡан батырҙарға хәбәр ебәрелгән. Аҡылы барҙарҙы йыйнап, дин эҙләү сәйәхәтенә сығабыҙ тип, йыйналып, сәфәр сыҡҡандар[5]. Ҡараҡалпаҡтар, төркмәндәрҙең, Сәмәрҡәнд, Шәһресабыз, Ташкәнт, Уратүбә, Марғилон шәһәрҙәренең илдән һайлап биргән батырҙарын йыйнап алалар. Ил башы булып йөрөгән аҡыллы дана (белеүсе) аҙамдарҙы* ҡушып бирәләр батырҙарға. Шунан былар, хәҙерге Ҡаҙағстан ерҙәрен

үтеп, Монголияға баралар. Монголияны үтеп, Ҡытайға еткәс, бер обидәгә осрайҙар (обидә — «ғибәҙәтхана» тигән һүҙ). Шундағы обид (гүмер буйы ғибәҙәт ҡылыусы, намаҙ уҡыусы кеше), үҙенең мөридтәре менән тасуирлап, Ҡытайҙың динен төшөндөрәләр. Яҙып биргәндәрен алып, сығалар Һиндостанға. Һиндостан халҡының тормошон, хөкүмәт тәртибен нисә төрлө дин бар — уларҙы күреп, унан киләләр Луғанға (Афғанстанға). Афғанстандан сығалар Ғәрәбстанға (Һижрәттең фәлән йылында, тигәне бар ине лә, иҫемдә ҡалмаған). Был яҡтағы диндәрҙе күреп, төшөнгәс, хаттарын уҡып, яҙырға өйрәнгәс, ҡайтырға сығалар.

Палестинаға, Бәйрүткә[6] киләләр. Килеп-килеп, төрөк мәмләкәтен күреп үтәләр. Дәрдәнилде үтеп Юнанға (Грецияға) баралар. Грецияны, әхүәлен күреп, танышып, дин тәртиптәрен өйрәнеп, күсәләр Балҡан яғына. Балҡандан үтәләр Румға. Румды[7] үткәс Гамбургка киләләр. Герман халҡынан һорашалар, диндәре ниндәй — беҙҙең кеүек. Улай булһа, барыуҙың хәжәте юҡ. Унан Кавказға боролалар.

Ҡайтҡан саҡта урыҫтарҙың тормоштарын күреп үтәләр. Урыҫтарға дин килеп етмәгән була әле. Кавказдар ҙа дин ҡабул итмәгән була. Волганың тамағынан төркмән яғына үтәләр. Амударъяны үтеп, Харәзмгә етәләр. Харәзм халҡының тәртибен, динен, китаптарын күрәләр. Шунда бер хәбәр ишетәләр, ғәрәптәр, мосолман ҡылыу өсөн, Бохараға килгәндәр, тип.

Ошо юлдарҙы былар егерме бер ай үтәләр. Егерме бер ай тигәндә Ҡыҙылҡомға барып етәләр (Шул арала 150 атлыҡ әҙәмдән туғыҙ кеше сәфәрҙә сирләп үлгән). Ҡараһалар — мосолман байраҡлылар бохараныҡылар менән һуғышып яталар. Бохара әҙәмдәре, ғәрәптәрҙе һыуға яҡын ебәрмәй, Ҡыҙылҡомдо ҡыҫып ҡуйғандар, хәлдәрен бөтөрөп. Әхүәлдәре насар ғәрәптәрҙең. Береһе генә иҫенә килә. Шунда Юлай батыр өс кешегә бойороҡ бирә:

— Әхүәлегеҙ насар. Әгәр рөхсәт булһа, беҙ хәҙер, ҡылыс күтәреп, һуғышҡа керәбеҙ. Беҙ фәлән-фәлән, — тип хәбәр (ит, — тип тегеләр яғына) ебәргән. Теге өс кеше барып:

— Беҙҙе башлығыбыҙ Юлай (батыр) ебәрҙе, — тип, (унық әйткәнен) хәбәр иткән.

Быға яуап итеп:

— Ошо ергә килеп (теҙләнеп) теҙелеп ултырып, мосолман динен ҡабул ҡылһағыҙ, шунда рөхсәт бирәм, — ти хәҙрәте Уҫман.

Былар, килеп, хәҙрәте Уҫман[8] алдында киләмә ҡайтарып, мосолман динен ҡабул ҡылалар:

— Беҙҙең яратып ҡайтҡан динебеҙ шул, — тип.

Ул заманда Мөхәммәт ғәлиәссәләм терек булмаған. Хәҙрәте Ғүмәргә[9] хәҙрәте Уҫман хәбәр ебәргән: «Хәҙер беҙгә ярҙам килде», — тип.

Шунан былар, ғәрәптәргә ҡушылып, бохараныҡыларға ҡаршы һуғыш башлай. Бохараныҡылар, иң дандар батырҙарҙың килгәнен күреп, танып, һуғышты туҡтата торған барабан һуғалар. Үҙҙәренең ҡорғандарына ҡайтып, бикләнеп алалар. Шунда ғәрәптәр, Зәрәфшан[10] һыуына етеп, бит-ҡулдарын йыуып, (сарсауҙары баҫылғансы), һыу эсеп, хәл йыялар. Үлектәрҙе, ярадарҙарҙы* айырып, мәрхүмдәрҙе

ерләйҙәр. Һуңынан киске ашҡа заң орола*. Хәҙрәте Уҫман әйтә: «Беҙгә ярҙамға килгәндәрҙе саҡырығыҙ, теҙелеп ултырһындар», ти. Ярҙам күрһәтеүселәр килеп ултыралар. Хәҙрәте Уҫман, быларҙың алдына баҫып, ҡыуана, рәхмәттәр әйтә. Ғәрәпсә доға уҡып, фатиха бирә. Фатиха биргәндән һуң, уң ҡулын күкрәгенә ҡуйып:

— Рәхмәт ярҙамға вахыти хупсаҡ!* — ти. («Иң кәрәк ваҡытта килеп ярҙам итеүегеҙгә рәхмәт!» — тигән һүҙ). Юлай батыр әйтә:

— Мына был *хупсаҡ* тигән ҫүҙ беҙгә ләҡәп булып ҡалҫын, — ти.

— Ул ни була? — тип һорай берәү.

— Минең ырыуым төркмән, инде төркмән-ҡыпсаҡ була, — ти. Мәҫәлән, ҫин мына Нурата тауы яғындағы йалайыр ырыуынан. Йалайыр-ҡыпсаҡ булаҫың, — ти.

— Төшөндөк, — ти башҡалары ла.

Иртәнән торһалар, шәһәрҙең ҡапҡаһы асыҡ. Был ни хәл был? Баралар йөҙҙән артыҡ һыбайлы. Барһалар ни күрһендәр: шәһәрҙе ҡалдырып, күсеп киткәндәр. Шулай иттереп, Бохараға барып керәләр. Унан ҡуҙғалып, Кәттә-Ҡорғанға[11] киләләр. Кәттә-Ҡорғанда һуғыш булмай, тегеләр мынан да күсеп киткәндәр. Күсеп киткән саҡта ниндәй оҫта бар — ағас оҫтаһы, тимер оҫтаһы, ебәк һуға торған оҫтамы — береһен дә ҡалдырмай алып киткән була шәһәр әйәләре.

Шунан Сәмәрҡәндкә[12] барып Сәмәрҡәндте алалар. Әйләнә-тирәләре барыһы ла саруа*, уларҙың батырҙары килгәс, шәһәрҙәрҙе ташлап сығып китәләр. Шунан Фирғәнә оазисына[13] керәләр. Марғилонды[14] итәғәт ҡылдыралар. Уның халҡы ла яртыһынан күбе саруа* халыҡ. Унан һуң Ташкәнткә йыйыналар. Унда ла ҡаршы алмайҙар, ташлап сығып китәләр. Унан һуң хәҙерге Алматы торған ергә баралар. Шуның аръяғына туҡтай торған шәһәр юҡ, быларҙы ҡыуып алып сығып китәләр Монголияға хәтле. Монголдың ерен яратмағандар ғәрәптәр — кермәгәндәр. Шунан былар үрләйҙәр Ҡытайҙың көньяғына. Ҡашғар[15], уйғур, дүнгән[16] — шул милләттәрҙе мосолман ҡылып, быларға ҡыпсаҡтарҙы баш итеп ҡуйып, ҡайтып китә ғәрәптәр. Рәһбәрлеккә (башлыҡ ҡылырға) кеше, уларҙы һаҡлай торған ғәскәр ҡалдыралар. Һәр бер алған шәһәрҙә башлыҡ ҡалдырыу тәртибе шундай: ислам шәриғәте буйынса, кемдең ғилеме ҙур — шул баш була. Ошо ерҙә баш була торған кеше арала иң көслөһө, иң аҡыллыһы булырға тейеш. Хужалар ана шул инде.

Ғәрәптәр ете шәһәргә ете ырыуҙан ете башлыҡ ҡуйған ҡыпсаҡтарҙан[17]. Ул башлыҡтар, үҙ ырыуҙарын ҡурсып, хужа булып ятҡандар Бохара, Сәмәрҡәнд, Ташкәнт, Хужән[18], Марғилон шәһәрҙәренә, Алматы урынында элек тә шәһәр булған — шуға, етенсе бына был Үремсе[19]. Үремсе — Ҡашғарҙыҡы (Беҙҙең тамъян-ҡатай Көньяҡ-Көнбайыш Ҡытайҙан ҡыҫырыҡлап сығарылған). Ете батшалыҡ инде әлеге. Бара-бара элекке хөкөмәттең ҡалған әҙәмдәре — хәҙергесә әйткәндә, оппозиция була — быларға ҡаршы эш алып бара башлайҙар. Ҡыпсаҡ башлыҡтарының нисек тә данын һатырға, абруйын төшөрөргә кәрәк. Эскелек, ҡатын-ҡыҙ... Быны ғәрәптәр төшөнөп алған, тажиктар ҙа. Һуғыша башлайҙар шәһәрлек үзбәктәр[20] менән ҡыпсаҡтар. Ҡыпсаҡтың ете ырыуы, ҡыуылып сығып, хәҙерге Ҡыҙыл Урҙала[21] (элекке Аҡ мәсет[22]) кескенә хөкөмәт, бер мәсет ҡороп, йәшәй башлайҙар.

(Беҙҙең башҡорттарҙың ҡорған мәсете ана шул Аҡ мәсеттә). Ҡараһалар, халыҡ күп, ер ҙә етмәй, үлән дә насар. Ҡыпсаҡтар туҡһан ике ырыу. Былар башҡаларын вазифаға алмаған. Ғәмәл ҡулығыҙҙа ваҡытта беҙ сүлдә ҡалып киткәйнек, тип ярҙам итмәгәндәр. Был ете ырыу Аҡ мәсеттә, йәш балаларҙы үҫтереп ғәскәрҙе күбәйтәйек тип, ҡорал эшләтеп, һигеҙ йыл ултырғандар. Туғыҙынсы йылды күсеп киткәндәр, был яҡҡа ҡарап. Килеп туҡтаған ерҙәре — Һаҡмар буйы, Йыйыҡ буйы. Был ерҙең дә һауаһына өйрәндек, ти, Ирәндек тигәндәр. Аҡ мәсеттең был яғына Бохарала, Сәмәрҡәндтә ҡоллоҡтан сыҡҡан ҡорд ҡәбиләһе[23] кешеләре алып килгән. Шул ҡорд ҡәбиләһе кешеләре юл башлап килгән өсөн баш ҡорд булып киткән. Ә беҙҙең арала уларҙы Ҡыйғы башҡорттары тиҙәр, ҡыйғылар. Арғаяшта ла ҡордтар бар.

Бында хәҙер беҙҙекеләр — хөкүмәт өйө, Ҡыҙыл мәсет ҡоралар Ирәндек буйында.

Былар бында урынлашып, йәшәй-йәшәй, күп ғүмерҙәр үтә, быуын артынан быуын алмашына. Бер ваҡыт шулай йәшәп ятҡан саҡта, Ҡасым түрә[24] баш булып ҡала. Ҡасым түрә әйтә: беҙ бәдәүи тормошта ҡалабыҙ. Мәҙәниәткә ҡушылыу өсөн, халыҡтың юл өҫтөнә сығып ултырырға кәрәк, ти Йайыҡ буйында Һаҡмар ҡойған ерҙе һайлайҙар. Әүәл хөкөмәт өйө һалырға оҫталарҙы Франциянан алып килергә бойороҡ бирә. Оҫталар алып киләләр. Беҙҙең башҡорттар уларҙың әйткән ағастарын, таштарын килтерәләр. Каруанһарайҙы һалғанда серемәй торған ясень ағасы килтергәндәр. Ҡаҙаҡ та шунан, таҡтаһы ла — дранка башын ябыуға. Сауҙагәрҙәр ямғыр көндәрҙә бик ыҙаланалар. Иң элек шунда каруанһарай һалалар, паром сығып йөрөгән ергә. Үҙҙәре лә, оҫталар ҙа шунда ятып-ҡунып йөрөйҙәр. Килгән сауҙагәрҙәр шунда туҡталалар. Хатта малды малға алмаштыра торған меновый баҙар хасил була. Хөкөмәт йорто ҡоролоп бөткәс, хөкөмәтте күсереп килтерәләр. Шәһәргә Каруанһарай тип исем ҡушалар. Сөнки беренсе башлап каруанһарай һалынған. Был хәҙерге Ырымбур ултырған ер. Шулай иттереп, ырыу-ырыуҙарҙы урынлаштыралар.

Каруанһарай шәһәренә килеп урынлашҡас, берҙән-бер көндө Ҡасим түрә Ҡазанға хат яҙа. Хатта, хәтерләүемсә, ошондай һүҙҙәр яҙған була:

«Әссәләмәғәләйкем, Мырҙабәк хан! Әселдә (асылында) беҙнең телебеҙ яҡын, динебеҙ бер, халыҡҡа башлыҡ була торған уҡыған кешеләрем аҙ ҡалды, мәҙәниәт үҫешендә тотҡарлыҡлар кисерәбеҙ. Яуҙан ҡайтмаҫ егетләренә ҡорал яҫап бирә торған оҫталарым яу ваҡытларында ҡырылып бөттө. Аны яҡшы беләҫеҙ. Син мосолман динен ҡабул ҡылғас, ҡысманнарың* Монголияға ҡайтып китте, әҙәмнәрең әҙәйҙе, шул сәбәпле урыҫ ҡулыңнан сығып китте. Ҫин донъя ҡапҡасының ауыҙында. Урыҫ ҫине баҫып алҫа һәм беҙне баҫып алҫа, артабан баҫып үтеү аңа бер нәрҫә түгел. Барып үзбәкләрҙе алҫа төркмәннәр белән, Мәккә-Мәҙинәгә хәтле етеүе лә ихтимал. Шуның өсөн беҙ мәмләкәтләрне нығытҫаҡ, бүтәннәрнең ҡулына ҡалыу түгел, ҡайтанан элекке көс-ҡөҙрәтне ҡайтарыу мөмкин. Ҫинең ышанғаның — төрөк, минең ышанғаным — үзбәк белән тажиҡ. Ана шуның белән беҙнең мәмләкәтләр киңәйеп китәсәк. Аръяғына башың етә,

ҫиңә ышанып, дуҫлыҡ хисиәте белән, Ҡасым түрә». Ҡул ҡуя, мисөт баҫа. Вәкил итеп илле яҫауыл ебәрә.

Йылмайып, көлөп уҡып ултыра (Мырҙабәк хан). Уҡып бөткәс:

— Ҡунаҡларны ишек алдындағы фәлән өйгә урынлаштырығыҙ, — ти. Һарайҙың хадимы йүгереп килеп керә:

— Ҡунаҡларға зияфат биргәндә* ҫеҙ ҙә булаҫығыҙмы? — ти. — Юҡ, шуның өсөн мин айырым өйгә тәғәйенләдем, ҫарай хеҙмәтселәрен ҡуйығыҙ, берҙәм килеп, ишеген, тәҙрәҫен бикләп, өҫтөнә май ҫибеп, ут төртҫөннәр. Шулай итеп, илле вәкилде яндырып ебәрә...

Ҡазандың Бохараға китәргә әҙерләнгән сауҙа хадимы ашығыс рәүештә төндә юлға сыға Сәмәрҡәндкә. Мырҙабәктең алдына килгән, саҡырғас. «Мынау хатны Каруанҫарайның түрәҫенә керетеп бир. Ләкин үс алырға ихтимал хәбәр был, үтеп киткәс, берәй кеше аша ебәрҫәң дә була, онотоп киткәнмен, тип».

Килеп, былар паромдан үтеп, Каруанһарай артта ҡала. Аҡтүбәгә еткәс:

— Фәлән ҡолдо атландырып ебәрегеҙ, ошо хатты итеп бирһен, ти (теге хадим). Шунан ҡол килә Каруанһарай ҡапҡаһына. Ҡапҡа һаҡсыларына әйтә:

— Ҡасим хан кәрәк, — ти. Кереп әйтәләр:

— Бер ҡол ҫине юллай, ҡулында мөһөрлө ҡыяғаҙы бар.

— Ҡол булмай, бәла булҫын, ҡулында мөһөрлө ҡыяғаҙы булғас, алып керегеҙ! — ти хан. Хатты асып уҡыһа, үҙе яҙған хаттың икенсе яғына уҡ яҙып ебәргән: «Эй, ҡыпсаҡ — ҡара сәкмән! Мал күтендә* йөрөп үҫкән егетләр! Ҫеҙнең кем икәнне беләбеҙ. Хәйлә белән беҙнең мәмләкәтнең эсенә кереп алмаҡсыҫыҙ. Бохараҙа нисек итеп хөкөмәткә хужа булғанығыҙҙы беләбеҙ, — тигән дә ҡул ҡуйған. — Ҫеҙҙән дошман сыҡҫа сыға, дуҫ сыҡмай», — тип.

«Хәҙер ҡолдо алып барып, сәртарашҡа* ултыртығыҙ. Сәс-ҫаҡалын төҙәтеп, мунсала йыуындырып, вәкилләргә әҙерләнгән кейемнәрнең берҫен кейендерегеҙ баштан-аяҡ, биленә ҡәмәр быуығыҙ (көмөш ҡәмәр, ефәктән эшләнгән), һәм янына (ҡәмәрҙең кеҫәҫе) алтын ҫалығыҙ», — тип бойороҡ бирә Ҡасим хан. Ҡолдо үҙ янына ултыртып, аш бирә. «Эй, катиб*, хат яҙ! Был ханның вәкиллек вазифаҫын үтәгән ҡолно, ҡайтҡас та, ҡоллоҡтан азат итәҫең, күҙгә күренерлек эшкә ҡуяҫың. (Ҡолларҙың ярты сәсе, ярты ҫаҡалы алынған була икән. Ә был бөтөнләй алдырған). Әгәр ҙә әйткәнне үтәмәҫәң, иҫән-аман ҡалҫаң да, Ҡазанда тыныс йәшәй алмаҫҫың. Көлөң күккә осҡан булыр. Мин хатны яҙғайным аҡ күңел белән. Ләкин Мырҙабәк хан төшөнмәгән. Гонаһҫыҙ илле әҙәмне яндырған. Ул хәбәр ҫеҙҙән алда килгәйне. Мырҙабәк ханның ишеткәне юҡмы икән ни, илсегә — үлем юҡ, тигәнде. Үс алырға уйлаҫам, каруанны үткәрмәгән булыр инем. Минең күңелдә яманлыҡ юҡ», — тип ҡул ҡуя, мөһөр баҫа. Ҡол вәкилдең менеп килгән атын етәккә биреп, эйәрләнгән яҡшы атҡа мендереп ебәрәләр.

Ҡол барып еткән. Ҡасым түрәнең һүҙен әйтеп, хатты биргән «Дөрөҫ яҙған, аҡыллы икән, — ти Мырҙабәк хан. — Мин дә ҡабул ҡылдым аның яҙған хатын. Хәҙерҙән башлап ҫин ҡоллоҡтан азат. Бөгөннән ҫин каруан башы», — тип ҡолдо ирекке сығара.

Йәнә бер хат әҙерләп ҡуя Ҡасым түрә каруан ҡайтҡанда. «Мосолманнан мосолман ҡан сығарып үс алыу — харам. Башыңа бер бәлә төшкәндә, һине ҡотҡарып алһаҡ, шунда күҙең асылыр, әҙәмде таныр-һың, ҡылмыш гонаһыңнан фәкиһ булырһың*, батҡаҡҡа батҡаннан алып сайҡағандай булырһың», — тигән. Шул мәсьәләгә Мырҙабәк хандың ҡатынының бик асыуы килгән уның, Сөйөмбикәнең.

Мырҙабәк үлгәс, биш йәшлек улы Абдулла бәлиғ булғансы, ханлыҡты Сөйөмбикәгә, ҡатынға, тапшыралар. Дәүер шулай барған саҡта берҙән-бер көн вәзирҙең береһе әйтә:

— Бер һүҙем бар, — ти.

— Күреп торам, һөйлә, — ти.

— Башҡорттарның Ҡасым түрәһе белеп яҙған икән. Беҙнең аранан боҙоҡлар сыға, урыҫ батшаһына һатылған. Ҡасым түрәгә хат яҙ, — ти, — бәлки, ул беҙне ғәфү итер, ике мәмләкәт бер төптән эш итербеҙ, — ти. Хат яҙыла. (Хатҡа ҡаршы): «Башыбыҙға бәлә төшкәндә, үҙебеҙ яуап бирербеҙ. Гонаһһыҙ яндырылған вәкилләрне иҫтән сығарып булмай. (Мәгәр) һеҙгә ярҙам кәрәк булһа, бирербеҙ», — тиҙәр (касимдар).

Ҡасан да урыҫ батшаһы беҙгә һуғыш иғлан иткән саҡта, беҙҙекеләр үзбәктәргә вәкил ебәргәндәр. Ай ярым ваҡыт биргәндәр. «Казан татарлары ҡапҡаның ауыҙында. Икенсе — беҙ. Шуның өсөн һеҙҙән ярҙам һорайбыҙ». Аҡ нар дөйә менән ебәрәләр. Ташкентҡа өс көндә барып керәләр. Хатты тапшыралар. Тиҙ-тиҙ генә мәслихәтләшеп, Хужан, Марғилон, Сәмәрҡәндкә хәбәр бирәләр.

Бына улар ун биш көн эсендә юлға сыға. Ул хәбәр еткерелә урыҫ батшаһына. Батша, ярандарын саҡырып, хисаплағандар. Эһә, улар сыҡҡанда ай башы була, ун биш көн килһәләр, ай тула. Аҡтүбә түрәһе алтынға ҡомһоҙ. Бына шуға уральский казак татарҙарын ебәрәбеҙ, өс бот алтын биреп, пусть договариваются на восемь пудов золота. Һөйләшәләр: бына улар килә, Һырҙың һыуын эсеп, янып-көйөп. Уларҙың килеүенә һуйырға бирә торған малдарҙың барыһын да фәҡәт тоҙло һыу менән бағаһығыҙ. Эсә торған ҡымыҙығыҙҙы, һыуығыҙҙы үҙегеҙҙекен ергә күмәһегеҙ. Уларҙы әҙерләп бөткәс, бөтөн ҡоҙоҡтарға һыу һалаһығыҙ. Тоҙһоҙ булмаһын бер ерҙә лә. Шунан, улар тоҙло ит ашап, тоҙло һыу эскәс, бер нәрһәгә яраҡһыҙ булып ҡалалар. Ҡалған яғына ғәскәрҙе ҡайтарыу һеҙҙең эшегеҙ. Етмәһә, ана, казактар үлтерешергә.

Шулай итеп, егерме биш мең ғәскәр шул ерҙә һәләк итәлә, ылау әҙәмдәре менән: ылау әҙәмдәре унда булған бер меңдән артыҡ.

Беҙгә килгән ярҙамды һәләк иткәндән һуң:

— Сдавайся. Булмаһа, бишектә ятҡан баланан башлап ҡартыңа тиклем, бер кемде ҡалдырмай, үлтереп бөтәбеҙ, — тип хәбәр еткерә.

Алай булһа, договор төҙөйбөҙ. Еребеҙгә, динебеҙгә, илебеҙгә, малға теймәйһеҙ. Фәҡәт мәслихәт беләп* эш алып барырға. Равный права беләп ҡушылырға. Кәрәк булһа, беҙ һеҙгә, башҡа мәмләкәттән яу килһә, ярҙам бирәбеҙ. Тиң хоҡуҡта ғәскәр алаһың. Урыҫтан нисек алһаң, беҙҙән дә шулай алыу шарты беләп, — тигән башҡорттар.

— Була, — тигән урыҫ батшаһы.

Быныһы — урыҫтың беҙгә дүртенсе һөжүме. Уға тиклем өс тап ҡыр һөжүм иткәндәр. Урыҫтар, әлбиттә, башҡорттоң яу ваҡыттарын дағы ғәййәрлеген яҡшы белгәндәр. Беҙҙең башҡорттоң тактикаһы шундай: уңдан, һулдан, артҡы яғынан да ғәскәр ебәргән. Лобовойҙы бик ҡаты ҡуйған. Яу сигенә башлаһа, йә уңғамы, һулғамы, унда ли ҡырғандар.

Һуңыраҡ, Мырҙабәк хандың башҡорт вәкилдәрен — 50 кешене яндырғанын онотторою өсөн, Ҡазан татарҙары әйткәндәр Урал казактары менән Тәфкилевкә: «Әйҙә, юғиһә башҡортларның ҡанын ҡайнатып тора», — тип ҡоторталар. Тәфкилев иң элек утыҙ башҡортто яндыра. Шунан тағы, 1736 йылда баш күтәреүселәрҙе баҫтырған ваҡытта, балыҡсы башҡорттарының Сөйәнтөҙ ауылын яндырып, йөҙ кешене терелэй ут эсенә ҡалдырып, үҙенә һәм ырыуы-затына мәңгелек ҡарғыш ала.

Бына шулар барыһы ла яҙылғайны боронғо тарих китабында.

## 3. Түбәнге Волга буйында башҡорт ерҙәре

Көндәрҙең береһендә урыҫ батшалығына килгән немецтарға ер кәрәк булған. Урыҫ хөкүмәте Түбәнге Волга буйына барып ҡарап, шул ерҙе мәғҡүл күргән, немецтарға ла оҡшаған. Игенгә ере яҡшы, урмандары бар. Башҡорттарҙың балыҡ аулағанын күреп, йәнә нығыраҡ оҡшатҡандар. Әммә ергә бөрйәндәр хужа. Шунан бөрйәндәр, бирмәйбеҙ тип, һуғыш башларға уйлағандар. Тиҙ генә һәр ырыуға ат саптырғандар. Шунда Әлшәй Мәргән дә барған үҙенең ғәскәре менән. Барған да әйткән, урыҫтың башлығы:

— Ни уйлайһың? — тигәс:

— Беҙҙә ер етәрлек! Халыҡты күсереп алып китәбеҙ. Шул әҙ генә ер өсөн ҡан түгеп, дошман арттырып ятыуҙың кәрәге юҡ, — тигән. Шунан урыҫ батшаһы әйткән:

— Особо значимый человек. Пишите указ: мин бирәм дворянский звание, и һәм ерҙе лә уға күберәк ҡалдырабыҙ.

Әлшәй Мәргәнгә, шулай итеп, деүәрәнлек бирелә.

Бөгөнгө көндә лә аҫаба тип йөрөгәнебеҙ әлеге особо тигәндән сыҡҡан ул.

— Ҡайҙа урынлаштырабыҙ һуң? — Әлшәй ҡартҡа һорау бирәләр.

— Фәлән батырҙың ырыуын мин алам (Исеме иҫемдә ҡалмаған). Ҡалғандарын Ирәндек буйына урынлаштырығыҙ, — тигән.

Күсереп алып ҡайтҡан әҙәмнәрен (ә-ә, башлыҡтары Ҡыпсаҡ Әсҡәр палуан), алып килеп, Дим буйына урынлаштырған. Хәҙерге Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылы, Туҡтар, Ибрай, Дүртөйлө ауылдары ана шуларҙан ҡалған бөрйәндәр улар.

Быларҙы Усман палуанның инә башҡа, ата бер энеһе Әбделкәбир яҙған. Бик грамоталы кеше булған. Фамилияһы Яубаев, атаһының исеме Ғәлекәй Мәргән. Әлшәй ауылыныҡы. Яубаевты Яуаев тип тә йөрөткәндәр.

## 4. Отҡол

Әлшәй башҡорттары йәйләүгә Өйҙөрәк буйына күсеп йөрөгәндәр. Шул йәйләүҙә ултырғанда, бер ҙур туй була. Ҡыҙ бирәләр. Бары ла туйға киткән. Фәҡәт бейә һауырға дүрт-биш килен ҡалған. Һауым бейәләрен ҡайтарып торорға ат менергә яраған дүрт-биш бала ла ҡала. Шул ваҡытта бөр төркөм мордва килеп сыға. Башҡорттарҙың ҡымыҙын эсеп китәйек тип, кергәндәр. Ҡараһалар, (ир-аттан) берәү ҙә юҡ. Берсенең күҙе кәүҙәле киленгә төшә. Уны тотоп алып, ҡулға әләккән байлыҡ менән тейәнеп, ҡайтып китәләр. Киленде аҙаҡ әлшәйҙекеләр эҙләп таба алмағандар.

Ҡыш көндәрендә башҡорттар ҙа тик ятмаған. Волга буйлап Днепрға хәтле етеп, йөрөп ҡайтҡандар. Ҡайтып килгәндә, төньяҡтан көслө буран сыҡҡан. Туҡтағандар. «Ағас йығып ут яғабыҙмы?» — тип уйлашып торған саҡта эт тауышы ишетелгән. Эт тауышы сыҡҡан яҡҡа ике-өс кеше китә. Кескенә ауыл икән был. Килеп, өй һайын таралалар. Ир заты күп өйгә күмәкләберәк туҡталалар. Ауылдың ситендә ирле-ҡатынлы икәү генә икән. Аңа ике кеше туҡтала. Эйберҙәрен урынлаштырып, ылауҙарын ышыҡҡа тыҡҡас, өйгә керәләр. Ире ҡатынға әйтә:

— Мин башҡа өйҙәрҙе күреп киләйем әле, — тип. Өй хужаһының артынан ҡалмай, юлаусыларҙың берәүһе ҡорал менән сыға.

— Артыңа ҡарамайһың, бара торған ереңә барып ҡайт, әйҙә.

Ире сығып киткәс, ҡатыны:

— Ағай, һеҙ ҡайһы яҡтан? — тип, башҡортса һорай (ҡуя).

— Һин нисек башҡорт телен беләһең? — тигәс:

— Мин Әлшәй-Мәргәннең энеһе Кинәгәс затынан урланып киткән килен, — тип яуай бирә ҡатын.

— Э-эй, беҙ һине эҙләп таба алманыҡ бишенсе йыл. Хәҙер үк тә ала алмайбыҙ, һине лә таба алмайбыҙ. Ireңә белдермә, беҙ һине ҡабаттан килеп алырбыҙ, — ти өйҙә ҡалған юлаусы. Иртән тороп, ҡайтып китәләр. Ҡайтып, иренә әйтһәләр:

— Инде минең ҡатыным бар, мин ҡабул ҡылмайым, — ти.

— Ул бит һинән ҡасып киткәне юҡ, арағыҙ татыу булған. Әсир төшөп, мәжбүри киткән, — тиҙәр.

Көс йыйып баралар за, уғрыларҙан үстәрен алып, әлеге ауылдан киленде һалдырып алып ҡайтып китәләр. Килен йөклө ҡайта. Ул бәбәйләгәнсе, элекке ҡайныһы менән ҡәйнәһенең ҡулында тора.

Йәйләүҙән көҙләүгә күскәс, баланың тыуыуына ҡырҡ көн тула. Ил,* балаға исем ҡушабыҙ тип, аш әҙәрләй. Халыҡтар йыйылғас:

— Ашҡа хәтле мәслихәтләшеп алайыҡ. Килен мәжбүри киткән, әсир төшөп. Никахты яңылап, йәнә ҡушыласың, — тип никах уҡыйҙар.

— Инде балаға исемде кем тип ҡушабыҙ? — тигән һорау ҡуйыла. Берәү әйтә:

— Килен буш ҡайтмаған. Матур, таҙа ир бала отоп ҡайтҡан. Шуның өсөн исеме Отҡол булһын, — тигән. Был һүҙ мәжлестәге һәммә кешегә мәғҡул төшөп, Отҡол тигән исем биргәндәр. Отҡол үҫеп етеп, өйләндергәндәр. Икенсе балаһы тыуғас:

— Инде балалы булдың, бер түгел, ике. Инде башҡа сыҡ, улым, — тип, башҡа сығаралар. Сыҡҡас, ил башының ҡамсы һелтәүенә:

— Ярыш тауының көнбайыш итәгенән башлап, Ябалаҡлыға етмәй — бы яғы, Димдең Ҡаҙанғолға етмәй — бы яғы, Балҡантауға етмәй — ана шул ер синеке, — тип башҡа сығарғандар. Шул Отҡол ауылы булып ҡала[25]. Хәҙер Дәүләкәндең уртаһында бер урам булып ултыра.

Көрмәнкәй ауылдары, иҫкеһе, яңыһы бер булып, Отҡол ҡарттың башҡа сыҡҡан баш балаһының исеме — Ҡорманҡайҙан.

## 5. Йәйләүҙә ятҡанда

Сәрмәсәнкәй буйларын, ай, ҫәрмәҫәң,
Ҡармасанҡай буйын ҡармаҫаң,
Бер туғанҡайларың, ай, ят була бит,
Хәл белергә тиҙ-тиҙ бармаҫаң.

Ғәлекәй ҡарттың улы Уҫман ҡарт, йыраҡтағы йәйләүҙәргә барып, бер аҙна-ун көн йөрөп ҡайтҡан. Беҙҙең ырыу бит инде унда. Мал ҡараусы төн уртаһында ҡайтып ятып, төн үткәс, таң беленеү менән ат менеп эттәр ихтыярында йөрөгән малдарҙы тикшереп, ҡарап ҡайтырға киткән. Йәйләүҙең беренсе өйөнән башлап хәбәр итә:

— Әһелулла ағай, һинең һауым бейәләрең фәләндәрҙең йылҡылары менән Ҡарамалыҡҡа яҡын, һыйыр-һарыҡтарың Көтөк ҡулының* аҫ яғындағы яланда Ғәлекәй ҡарт, тәһәрәт алып, намаҙ уҡый. Намаҙ бөткәс, ошондай әңгәмә башлана:

— Бөгөн ҡаҙан кемдә?

— Ҡотлобайҙарҙа.

— Бә, Ишмөхәммәткә етмәгәнме әле?

Ҡотлобай, бәхәсләшеп көрәшеп, Бикмөхәммәткә отторған. Ике мәртәбә билләшеп, ике мәртәбә йығылған. Шуның өсөн йәйләүгә ике көн ҡаҙан аҫып биреү уның сиратына төшкән.

— Ана, әҙәмдәр йыйыла башлаған. Һиңә ике ботлоҡ ҡымыҙ. Миңә бер ҡуллыҡ*, бер күнәк етәр. Башҡа ҡымыҙым юҡ әле, — ти ҡатыны Уҫман палуанға.

Барып, сәләм биреп күрешеп, ултырып ҡымыҙ эсәләр ит бешкәнсе. Шунда ике ир бала һуғышып китә.

— Айырып ҡуйығыҙ! — тип ҡыҫҡыра бирәү. Икенсеһе әйтә:

— Айырмағыҙ, көрәшһендәр! Бына минең бер тинем бар, — ти.

— Бына минең ике тинем бар, — ти тағы береһе. Көрәш ҡыҙа барып, еткән егеттәргә барып етә. Шул ваҡытта һауым бейәләрен ҡайтарырға барған ике бала аттарын саптырып үтә.

— Мынау һинең саптарың фәлән кешенең ҡашҡаһын үтә буғай.

— Үтмәй!

— Үтһә, нимә бирәһең?

— Ике көнгә ҡаҙанды үҙем аҫам, — тип бәхәс ҡороп алалар.

Һауым бейәләрен ҡайтарып, ҡолондарҙы елегә бәйләгәс, бейәләр үләнгә тарала.

Инде ат сабыштырып алырға ла була.

Үҫмер балалар ат менеп килгәс:

— Сатыр күперҙән анау һыҙатҡа тиклем саптырып киләһегеҙ. Кем алдан килә, шуны беләбеҙ.

Шулай итеп, үҫмерҙәр, Сатыр күперенән урап, «Һайт!» тигәндә сабып китәләр. Килгәндә Саптар ат алдан килә. Шуның менән Ҡашҡаның хужаһына ике көн буйы ҡаҙан аҫыу бурысы төшә.

Йәйләүҙә шулай мәрәкәләшеп, уйын-көлкө менән йәшәп ятҡанда Туҡтар ауылы бөрйәндәрҙең ҡарт мәргәне Ғүмәр килеп етә. Сәләм биреп аттан төшөп, һәммәһе менән күрешеп сыға.

— Нишләп былай яңғыҙ-ялпы йөрөйһөң? — тиҙәр уға.

— Ашығыс килергә мәжбүрмен. Бөгөн барырға вәғәҙә бирҙем. Бер ҡасҡын мине бәхәскә саҡыра. Балыҡҡа барғанда, күреп ҡалды ла: «Һин Ғүмәрме?» — ти. «Эйе», — мин әйтәм. «Мин һине эҙләп килдем», — ти. Үлгән сағында фәлән батыр, татарҙарҙың баҫҡынсылар башлығы, Ғүмәр менән Фәлекәйҙе үлтерәһең, тип васыят әйтеп үлгән. «Мин ҡарама ҡыуышында ботаҡ тишегенә маңлайҙы ҡуйып торам. Бер уҡ менән алһаң, мин — һинеке. Бер атҡан уғың теймәһә, мин һине мылтыҡ менән атып үлтерәм», — ти ҡасҡын. «Ҡоралһыҙҙы һәр кем үлтерә ала. Бына минең бер нәмә юҡ кәмәлә, ишкәктән башҡа», — ти Ғүмәр ҡарт. «Бар, ҡайтып алып кил», — тиеүенә: «Бөгөн килә алмайым, иртәгә киләм», — тип яуап бирә Ғүмәр.

— Ҡартайғанмын хәҙер. Ул бәләкәй ботаҡ тишегенә тейҙерә аламмы, юҡмы. Һиңә лә хәбәр бирергә кәрәк ине, һине лә яҫҡып килгән күрергә. Хәбәр биреүем шул булыр, — ти Ғүмәр ҡарт.

Ул арала ит ашап, һурпа эсеп, бер аҙ ҡымыҙ эсеп ултырһалар, дүрт ҡош килеп ҡуна оло тирәккә.

— Миңә уҡҡа шуларҙың ҡанаты кәрәк ине, — ти Фәлекәй.

— Миңә лә кәрәк.

— Һин ҡайһыһына атаһың?

— Төшлөк яҡҡа ҡарап ултырған анау ситтәгегә атам.

Аттан төшөп, күренмәй генә барып, эре ағас күләгәһендә боҫоп ултыралар.

— Ҡай еренә атаһың?

— Ултырған оло ҡоштоң ҡанат тупсыйы тураһында була йөрәге.

— Ә һин ҡайһы ҡошҡа атаһың?

— Юғарыраҡ ултырғанының күҙен күҙләйем, — ти Фәлекәй.

Шулай итеп, икәүе лә ата, икәүе лә әйткән ергә тейҙереп, ҡолатып төшөрәләр. Ҡанаттың эре ҡауырһындарын ҡауырыйҙарынан ғына тотоп ҡырҡып алып, ҡауырый төбөнән генә ҡырҡалар. Ҡанаттың ел ҡырҡа торған ал яғы тар була, шуны һыҙырып алып ҡына уҡҡа йәбештергәндәр мәргәндәр.

«Инде уҡҡа ҡауырый ҙа булды, киттек һеҙгә», — тип юлға төшәләр. Барғас, Ғүмәр ҡарттың тирмәһендә әйберҙәрен ҡуйып, аттарын ҡалдырып, кәмәгә ултырып, ау ҡарарға китәләр. Быларҙы күреп, ҡасҡын:

— Әһә-ә, Ғәләкәйҙе лә эҙләп йөрөргә тура килмәне миңә. Һүҙемдән ҡайтмайым. Мин ағас ҡыуыш эсендә булған өсөн, беренсе нәүбәтте һеҙгә бирәм, — тип ҡысҡыра.

— Ярар, — ти ҙә Ғәләкәй ҡарт, кәмә өҫтөнән тороп, ике тин аҡса хәтле ботаҡ тишегенә уҡ ата. Ҡарама һелкенеп китә.

— Хәйлә менән булмаһын, кәмәне түбән яҡҡа бор! — ти Ғәләкәй ҡарт Ғүмәргә.

Түбәндәнерәк сығалар ергә. Уҡтарын әҙерләп, икеһе лә киләләр. Ҡараһалар, ҡараманың аҫҡы тишегенән аяҡ күренеп ята. Ысынлап та, бер күҙ менән ҡарап торған икән ботаҡ тишегенән. Уҡ, уң күҙҙән керәп, суңҡанан юғарыраҡ үтеп сыҡҡан икән.

Ҡарайҙар, сөннәте юҡ. Мосолман түгел икән, тип мәмерйә төбөндә өҫтөнә тупраҡ өйөп ерләп ҡуйғандар. Биш дана ҡороулы ҡыҫҡа мылтыҡтарын алып, китәр ваҡытта бер ат сыйнап кешнәп ебәргән. Барһалар, ике ат арҡанда, бер ҡоралл кеше йоҡлап ята. Уятҡандар.

— Һин кем?

— Керәшен Ивандың ат ҡарауылы.

Тимәк, яңғыҙ булмаған ҡасҡын.

Аттарын, ҡоралдарын алып, ҡайтып киткәндәр.

— Шундай ҙа ат күргәнем юҡ ине. Һәр ике-өс сәғәт һайын атҡа ял бирә инем. Көнө буйы менеп тә, «ыһ» та итмәҫ. Һинең дә ауырлыҡ байтаҡ барҙыр әле, — ти Ғүмәр.

— Күлмәксән генә ун дүрт ботмон, — ти Ғәләкәй Мәргән. — Кейә торған һауытым өс бот.

Ғәләкәй Мәргән, ҡайтып еткәс ҡараһа, ҡыҙы Зәйнәп бук ағасынан ҡырып яһаған уҡтарына (ҡыҙы яһай икән уҡты) ошо бөгөн атып алған оло ҡоштоң ҡанатынан ҡауырһындарҙы һыҙырып, елемләп, йәбештереп ултыра икән.

Шундай хәлдәр ҙә булған.

## 6. Ғәләкәй батырҙың ҡыҙы Зәйнәп һылыу

Ғәләкәй Мәргән һорай бер мәл:

— Алап[26] тауышы киләме?

— Эйе.

— Үҙебеҙҙекеләр һуғышҡа әҙерләнә икән. Гөрләтеп ут яғығыҙ, — ти Ғәләкәй Мәргән.

Бәләкәйерәк ут яғалар гөрләтеп. Әҙерләп ҡуйған эре әрем ут өҫтөнә ташлана. Ҡуйы төтөн сыға.

Әҙәмдәре йыйылып, сәхәр ваҡытында, иртәнге һалҡында юл алайыҡ, тип сығып китәләр. Һуғыш булып ятҡан ергә шул көндө үк — кисенә барып етәләр. Һуғыш туҡтамаған. Икенде ваҡыты. Былар ҙа барып ҡушылалар.

Берәү оран әйтә. Шул илдең башы ҡамауҙа ҡалған икән. Ғәләкәй Мәргән, ҡылысын һурып алып, кереп китә, быны әрсәләп ала. Һуғыш та туҡтай. Быларҙы күреп, ҡурҡалар. Яралыларын алып, ял итә торған ергә йыйылалар. Ил башы өс ерҙән ныҡ ҡына яраланған икән — яраларын бәйләйҙәр.

— Ярай, һин килдең. Юғиһә теге донъяға киткән булыр инем инде. Һинең кемең бар? — ти ил башы.

— Минең ҡыҙым бар, — ти Ғәлекәй батыр.

— Улай булһа, минең улым бар — ҡоҙа булышайыҡ!

— Бик яҡшы, мин риза.

Ике-өс көн ял иткәс, былар һаубуллашып ҡайтып китәләр.

Шул һуғышта, ҡоҙа булырбыҙ, тип вәғәҙәләшкән ил башы, ҡартайыуҙан бигерәк, яраларым алып китәр, ахыры, күҙем күргәндә, барып күреп, килендең никахын уҡытып ҡайтайыҡ, ти.

Улы өйҙә булмаған. Кейәүҙәге апаһы янына ҡунаҡҡа киткән икән. Уны көтөп тормайынса, ҡыҙҙың мәһәренә, имсеһенә*, барғас һуйып бирергә мал ҡыуып киткәндәр, ҡоҙа-ҡоҙағыйға, килене өҫбаштарына кейем алғандар.

Никах уҡытып, туй үткәрәләр. Туйҙан һуң ике йыл үткәс, егеттең атаһы донъя ҡуя. Тағы ла дүрт йыл ваҡыт үтә. Быларҙың иртә ҡолонлай торған бер йүгерек бейәләре булған икән. Теге ҡолонлаһа, ҡолонон бүре ала ла тора. Егет бер көндө, март айында, тибенгә сыҡһа, быуаҙ бейәне яҫҡап йөрөүсе бүрене күрә. Уның торҡонона ҡарап, йүгерек икәнен аңлай был. Ҡыуып алып китә. Бүре ҡояш байышына ҡарап саба.

Шул көндө Ғәлекәй Мәргән үҙенең торомона сыға, ат менеп. Тором тигәне — яҙлау йылғаһының көнбайыш яғында бер түбә, бер урман аҫтында. Ғәлекәй Мәргән һәр дайым шунда ҡышлаған, ыҙмаға ҡайтмаған. Шул түбәнән ҡышҡы ҡояш байышына табан бер һуҡмаҡ бар, урман аша үтә. Урман бөткән генә ерҙә — бер түбә. Шул түбәнән тороп, тирә-яҡты күрә икән. Яҡын-тирәлә булған йәнлекте атып ала икән уҡ менән. Шунан тороп ҡараһа, биш-алты саҡрымдан күреп ҡала: бер бүре Димде аша сығып, Һынташ тауына үрләп бара. (Хәҙер шул тау өҫтөндә — откормбаза). Алдына сығырға тип, уңғараҡ, Алабай сағылына ҡарай сығып китә. Ләкин йүгереккә лә йүгерек икән — Ғәлекәй Мәргән уның алдына сыға алмай. Тигеҙлектән бүре саба, был уның артынан ҡалышмай бара. Кәмәсапҡан урманының ҡышҡы көнсығыш яғында бер сағыл бар, бүре шуға үрләй. Ике-өс мәртәбә шыуып төшә сағылдан, ни өсөн тигәндә — туңған.

Кәмәсапҡан урманына ҡасмаҡты бер ҡул бар, был ҡарт, шунан барып, ара яҡынайғас, уҡ ебәрә. Шул уҡ менән ала бүрене.

Ғәлекәй ҡарт, бүрене ат ҡойроғона тағып, һөйрәтеп сағылдан төшә. Ул арала ат менгән бер егет килеп етә. Сәләм бирә. Күрешкәс:

— Бабай, был әллә мин эҙенән килгән бүреме? — ти.

— Шул үҙе, балам. Әйҙә, беҙҙә ҡунарһың инде, — ти Ғәлекәй Мәргән. Юлда һорай: һин ҡайҙан, кемдең улы? Ҡайһы ырыуҙан, араның ниндәй?

Егет әйтеп бирә.

— Һин фәлән батырҙың улы бит, — ти Ғәлекәй ҡарт.

— Таныйһың икән дә атайымды.

— Был бүрене ҡасан ҡыуа башланың?

— Ҡояш сыҡҡан саҡта.

— Ай-һа-ай, улым. Бүренең эҙенән атыңдың етешә алмағанын күрмәнеңме ни?

— Күрҙем: бүренең бер ырғығанын дүрт, дүрт ярым мәртәбә һикерҙе минең атым, — ти.

— Нимәгә ышанып ҡыуырға сыҡтың?

— Берәй ил осрар, шунда кереп ятырмын. Таң атҡансы бүре ҡатыныр, тиҙ генә яҙылып саба алмаҫ, шунда алырмын, тигән өмөт менән саптым.

— Ул уйың да дөрөҫ, улым.

Ҡайтып етеп, бүрене тунап, өйҙәгеләргә, фәлән-фәләндәрҙе саҡырығыҙ, шунса кешегә етәрлек аш һалығыҙ, тип әш ҡуша.

Ашҡа ултыралар. Шунда ҡарт әйтә:

— Балам, хаталанмаһам, исемең шулаймы? — ти.

— Ҡайҙан беләһең?

— Бәй, үҙемдең кейәүҙең исемен белмәй буламы? Атайың әйтмәнеме ни никах уҡытҡанды?

— Мин апайымдарҙа ҡунаҡта йөрөгәндә, никах уҡыттыҡ, тип әйттеләр ҙә, ысын түгелдер, тип уйланым, — ти егет.

— Саҡырығыҙ әле бында Зәйнәпте, — ти Ғәлекәй ҡарт.

— Бына килдем, атай.

— Балам, туйығыҙ үткәнде һин беләһең. Ана шунда никахланған ғүмер иптәшең ошо булыр. Теҙ сүгеп, сәләм бир. (Бер генә теҙ менән сүгелә.)

Уң аяҡ менән сүгеп теҙләнеп, икенсе теҙҙең башына ике ҡулын ҡуйып, шуға әйәген терәй Зәйнәп.

— Инде, кейәү, һин ҡулынан тотоп (кәләшеңде) торғоҙ. Ҡулынан үп. Ул һинең ҡулыңды үбер.

Шуларҙы үтәгәс:

— Оло килен, кейәү менән ҡыҙҙы рәсем буйынса ҡушып сығығыҙ. Шуның менән хуш бөгөнгә. Оҙатып барыусы баш еңгә лә һин булырһың, — ти. — Ғүмер булһа, көн йылытҡас, беҙ барырбыҙ әле, ҡарттар, — ти.

Шулай иттереп, өс көн ҡунаҡ итеп, дүртенсе көнөнә оҙаталар. Мине юғалтып илап бөтөрҙәр, тип кейәү оҙаҡ тормай. Тейешле малдарын ҡыуып, бирә торған әйберҙәрен дөйәләргә йөкмәп, оҙата китәләр. (Ҡыҙ менән кейәүгә, бүләк итеп, яңы тирмә, кейеҙ, балаҫтар, өҫкә-башҡа кейем бирелгән.)

Барып еткәс:

— Һи-ий, минең Зәйнәп киленем дә баһа, ҡалай үҫеп киткән, — тип ҡәйнәһе ҡосаҡлап үбә.

«Бүре табып бирмәһә, ҡатыныңды барып ала ла алмаҫ инең», — тип көлгәндәр унда егеттән. Шунда баштан үткәндәрҙе һөйләп, ил-йортҡа аш бирәләр. Оҙатып барыусылар, дүрт-биш көн ҡунаҡ булып, ҡайтырға сығалар.

Йыраҡ ер бит — Ғәлекәй ҡарт бара алмаған, донъяның мәшәҡәте сығып торған. Уның оло улы Уҫман да, барам, тип йыйынып йөрөгәндә, төрөк һуғышы сығып киткән. Төрөк һуғышына полковник булып барған, шуның өсөн уны Уҫман палуан тип йөрөткәндәр. Атайым да, барам, тип йөрөнө, әммә Беренсе донъя һуғышы сығып китте. Ағай-энене һалдатҡа алдылар. Унан һуң — революция, граждандар һуғышы, тиф, аслыҡ килеп, юлды бәйләне.

Шулай ара өҙөлөп ҡалды. Атайымдың: — (Ай,) бара алманым (шул), — тип ултырғандары иҫемдә. Уның балаһы мин дә хәҙер һикһәнде үтеп киттем. Шул тарихты белеүселәр булһа, хәбәр итһен. Беҙҙең ырыу төркмән-ҡыпсаҡ, ил башы — Әлшәй Мәргән. Ағасыбыҙ — ҡарама, ҡошобоҙ — шоңҡар, тамғабыҙ — Әлшәй Мәргән затынан Ейәнбай Тимербай улы Усманов тип белерһегеҙ.




## 23. КҮБӘЛӘК-ТИЛӘҮ БАТЫРҘАРЫ

### 1. Күбәләк менән Тиләүҙең Уралға килгәне

Борон-борон, бик борон,
Бер әҙәм баҫмаҫ борон,
Бер әҙәм килмәҫ борон,
Берәү эҙ һалмаҫ борон,
Берәү юл һалмаҫ борон.
Алыҫ, ауыр юл үтеп,
Яҡшылыҡ өмөт итеп,

Яҡтылыҡ өмөт итеп,
Аяҡ-ҡулын талдырып,
Тыуған яғын ҡалдырып,
Килеп сыҡҡан был яҡҡа
Бер туғандар — икәү, ти,
Күбәләк һәм Тиләү, ти.
Ҡара урман, ҡая-таш:
Әйләнерлек булған баш,
Ете ҡолас еткеһеҙ
Йыуан булған ҡарағас.
Әгәр үргә ҡараһаң,
Түбәтәйең төшөрлөк,
Бейек булған ҡарағас,
Һомғол булған һәр ағас,
Эт үткеһеҙ урманы,
Елгә шаулап торғаны,
Бейек-бейек тауҙарға
Томан ятып торғаны.
Йылға-күлдә иртә-кис
Көмөш тәңкәле балыҡ
Көнгә ялтлап торғаны.
Һанһыҙ булған сабағы,
Суртаны ла ҡарманы,
Көн тимәй ул, төн тимәй,
Ҡарпып уйын ҡорғаны.
Йәшен йәшнәп, күк күкрәп,
Ямғыр яуып торғаны.
Оялсан йәш килендәй,
Ап-аҡ ҡорған ҡорғаны,
Данлап туғай-болонон,
Ҡоштары көй һуҙғаны,
Сырлауығы* болотҡа
Ҡанат ҡағып уҙғаны,
Һаҙ, ҡыуаҡта туп ҡороп,
Һонай* уйын ҡорғаны,
Бил быуарҙан булған, ти,
Ерҙең йәшел юрғаны.
Емештәре ер ябып,
Ҡыҙарып бешеп торғаны,
Сәскәләрҙән бал тамып,
Хуш еҫ бөркөп торғаны.
Бал ҡорттары кәрәҙгә
Бал тултырып торғаны,
Ҡыйғыр ҡоштар, «ыһ», тимәй,
Һауа ярып уҙғаны.
Ит һөрһөтөп, айыуы
Оло байрам ҡорғаны.
Тауыштары тау ярып,
Ишетелеп торғаны.

Торналары һаҙ тулып,
Ярышып оя ҡорғаны,
Мүкле һаҙы һәмгелсәк
Түшәк-мендәр булғаны,
Торрайыҡлап торналар
Күңелле туй ҡорғаны.
Ҡаурый ярғас ҡанаты,
Сабыйын күккә күтәргән
Ҡыр ҡаҙҙары, өйрәктәр
Бында түгел һирәктәр.
Бына шундай дан ерҙә
Ожмах та булған, гүр ҙә —
Кеше килеп төпләнһә,
Ташламаҫ ине бер ҙә.

## 2. Күбәләк менән Тиләүҙең Уралда тороп ҡалғаны

Күбәләк һәм дә Тиләү
Был ергә аяҡ баҫҡас.
Тәүге ҡаҙыҡты ҡаҡҡас,
Сатыр ҡороп, йәм табып,
Шишмәһенән һыу алып,
Шифалы сәй ҡайнатҡас,
Урау-урау юл үтеп,
Аяҡтар арып-талғас,
Бәһлеүәндәй, йән белмәй,
Ятып бер аҙ ял иткәс,
Керешен кирә тартып,
Башаҡлы уғын атҡас:
Һиҫкәнеп ҡуйған ерем,
Һиҫкәнеп ҡуйған тауҙар,
Һиҫкәнеп ҡуйған ҡая,
Һиҫкәнеп ҡуйған урман,
Һиҫкәнеп ҡуйған ялан,
Һиҫкәнеп ҡуйған йылға.
Шишмәләр ҙә һағайған,
Йәнлек, ҡош-ҡорт, бөжәге —
Һауалағы, ерҙәге,
Оялағы, өңдәге:
— Былар ниндәй зат булыр,
Әллә инде ят бауыр?
Шунда әйткән дәү ҡая:
— Ир-уҙаман ат булыр,
Ни ҡылһа ла, хаҡ булыр,
Ни ҡылһа ла, пак булыр,
Бер теләге нан* булыр.

Бер теләге хан булыр,
Бер теләге дан булыр,
Ишлеләргә иш булыр,
Ҡушлыларға ҡуш булыр.
Яуҙа ул яуҙаш булыр,
Ҡорҙа ул ҡорҙаш булыр.
Аяғаны ла аҙ булыр,
Күбәләк мән* Тиләүҙең
Күңелендә наҙ булыр.
Уң ҡулында уҡ-һаҙаҡ,
Күрәсәктәр күп ғазап,
Ҡаяға башаҡ ҡайрап,
Эштәрен көйләп-яйлап.
Ерҙе һаҡлар зат булыр,
Уң ҡанаты ат булыр.
Тау, урманын, ҡаяһын,
Ҡурсалап көн тыуаһын,
Йылғыр йәнлек, ҡош-ҡортон,
Уларҙың өң ил-йортон.
Яу баҫҡанда ил-йортто,
Ҡурсалаусы шул булыр,
Ҡылған эштәр уң булыр.
Ҡояш үтмәҫ ҡарурман
Һалған, ти, ергә фарман:
Күбәләк менән Тиләү,
Беҙгә тигән бик таман:
Һеҙҙән башҡа килмәһен,
Ер байлығын бүлмәһен,
Ерҙе, илде ботарлап,
Һыу-һауанан көлмәһен,
Ҡанға батып аяғы,
Илем буйлап гиҙмәһен;
Илдә булған байлыҡты
Иләк аша һөҙмәһен.
Бер туғандар бар эште,
Беҙ ҡушҡанса, көйләһен.
Беҙҙең һүҙҙе һөйләһен,
Беҙҙе данлап көйләһен:
Ҡурай алып ҡулына,
Бирһен, тигән, улына,
Ейән-ейәнсәренә,
Барлыҡ әҙәмдәренә,
«Урал» тигән көй уйнап.
Тағын бик күп көй уйлап,
Оло итеп ҡор йыйһын,
Туй үткәрһен еремдә,
Ҡалдырмайса берен дә.
Һеҙгә урын шул булыр,
Ерҙең иң түре булыр,
Ҡорҙоң иң түре булыр.

## 3. Күбәләк менән Тиләүҙең данлы эштәр ҡылғаны

Көндәр үткән, ай үткән,
Шулай йылдар ҙа үткән.
Оҙаҡ көткән көн еткән,
Уңышлы булған һунар,
Урын да яйлы ҡунар.
Көндән-көнгә сатыр ҙа
Арта торған, тей, унар.
Ейәндәр, ейәнсәрҙәр
Ишәйгән — ялан тулыр.
Кем өй һалған, ер һөргән,
Кемгә, ти, яйлы һунар,
Кемдер тотҡан балығын,
Бал йыйғандар күнәкләп,
Тотонғандар күмәкләп,
Уйлап халҡы һаулығын.
Икенселәр һайлаған
Үҙенә эштең яйлыһын, —
Яйлыһын, ҡулайлыһын.
Өйөр-өйөр мал көткән,
Эшкә мөкиббән киткән,
Йылҡы, һыйыр, һарығы
Бик күп, ти, һанай китһәң.
Йөрөйҙәр, ти, көтөүһеҙ.
Бер ни хәстәр итеүһеҙ,
Һыйырҙары мөңрәшеп,
Йылҡылары кешнәшеп
Йәй(е)рәп гиҙә икән,
Һайлап ҡына шифалы
Үләнде өҙә икән.
Сылтырап аҡҡан шишмәнең
Һыуҙарын һөҙә икән.

Кәкүк өҙөлөп саҡырмай,
Һандуғастар һайрамай,
Һай, нисек түҙә икән?
Эштәр киткән яйланып.
Сәй ҙә, бал да майланып,
Бейә һауған күп итеп,
Ҡымыҙ эскән күпертеп,
Һаумал ҡуйған кикертеп.
Сатырҙан өйгә күскән —
Халыҡ бит ҡорттай эшсән.
Күбәләк һәм Тиләүҙең
Даны алыҫҡа киткән.

Төрлө яҡтан яусылар,
Ҡоҙалар килеп еткән,
Шаулатып тирә-яҡты,
Бик оло туйҙар үткән;
Ейәнсәрҙәр, ейәндәр
Һә тигәнсе буй еткән —
Нәҫел-нәсәбәләре
Бик тә ишәйеп киткән,

Һәр бер ҡылған эштәре,
Аҡ та пак булған һөттән,
Күбәләк мән Тиләүҙең
Өмөт аҡланған көткән:
Ырыу ишәйеп киткән,
Ырыу көсәйеп киткән,
Даны алыҫҡа киткән.
Күбәләк менән Тиләү
Татыу ғүмер һөргәндәр.
Йәшәү йүнен күргәндәр.

Йәшәү шарты шул булған:
Кем изгелек күп ҡылған,
Шуға рәхмәт күп яуған,
Бейек булған, ти, тауҙай.
Шуның өсөн изге йән
Илде ҡотҡарған яуҙан,
Илде ҡотҡарған дауҙан
Күбәләк менән Тиләү
Берен-бере ҡаҡмауҙы,
Хәтер, күңел һаҡлауҙы
Бик тә ныҡ хуплағандар,
Маҡтаған-ҡотлағандар.
Береһе юҡта береһе
Туҫтағын тотмағандар,
Һаумалын йотмағандар.
Илгә ҡаза урелһә,
Ут-ялҡыны күренһә,
Күбәләк менән Тиләү,
Ҡалмайынса һис бераү
Һалған көслө орандан —
Хәтәрерәк бурандан —
Хатта тау-таш һелкенгән.
Барлыҡ ырыу йыйылған
Ҡалмайым тип иркемдән,
Яҙмайым тип илемдән,
Яҙмайым тип күркемдән,
Ҡурҡмай-өркмәй бер кемдән,
Яуға берҙәй ташланған,
Шунда яуыз дошмандың
Уй-теләге фашланған.

Уҡ-һаҙағы, ҡалъяһы —
Илен һаҡлар донъяһы, —
Осоп барған ҡылыңды
Ҡырҡҡа ярыр ҡылысы.
Арғымағы ажарлы
Осоп сығыр тауҙарҙы:
Ҡуй һарығындай тапап,
Үтәр барлыҡ яуҙарҙы.
Ҡаяларың ни уға —
Йоҙороҡлап онтар ул;
Ҡарурманды ҡылғандай
Турап-ҡырып үтер ул.
Ҡыйыу батыр шул булыр, ау,
Батыр йөрәк шул булыр.

## 4. Ҡобағош батыр

Яңы тыуған сабыйҙы —
Ҡобағошто ҡурсалап,
Халҡы ҡуйған ҙур талап,
Әүлиә ҡойоһонан
Һыу алып йыуған сәсен,
Һыу алып йыуған тәнен.
Шул шифалы һыу менән
Ҡурсалағандар йәнен.
Тылсымлы һыуҙың сабыйға
Татытҡандар, ти, тәмен.
Шул һыу килешкән уға:
Ҡурсалаған зиһенен,
Оҙайтҡан, ти, ғүмерен,
Белгән ниҙәр килерен.
Белгән ниҙәр китерен.
Эй шифалы һыу икән,
Ай үҫәһен көн үҫкән,
Йыл үҫәһен ай үҫкән,
Һәр тарафҡа батырҙың,
Һәр тарафҡа сәсәндең
Даны таралып киткән.
Ерҙә генә ҡалмаған,
Ай, йондоҙҙарҙы үткән.
Һөйөнгән, ти, әсәһе,
Һоҡланған, ти, атаһы.
Башы күккә тейәрҙәй
Булған, ти, олатаһы.
Көн-төн доғалар уҡып,
Изге теләктәр теләп
Ултырған өләсәһе.

— Үтер юлың аҡ булһын,
Ҡылған эшең хаҡ булһын, —
Тип теләгән, ти, халҡы,
Тип юраған, ти, халҡы.

Изге теләк им булған,
Барыр юлын киң ҡылған,
Оран булған һәр һүҙе,
Тура булған һәр һүҙе.
Көндәй-айҙай гел балҡып
Торор булған, ти, йөҙө,
Ҡобағош(та) батыр буй етеп,
Матур тормош ҡорған, ти,
Айбағыш һәм Көнбағыш —
Ике улы тыуған, ти,
Уландары бик етеҙ
Һәм дә ҡыйыу булған, ти.
Уландар булғас ҡыйыу,
Атайға булған табыш.
Иш янына булған ҡуш,
Әйткән һүҙем булмаҫ буш.
Уландан улан тыуған
Атайҙар юлын ҡыуған,
Тамыр киткән тәрәнгә —
Ғүмер үтмәҫ әрәмгә.
Айбағыштан тыуған, ти,
Килдеш тигән дан батыр.
Барыһы бер ҡандан бит,
Олатаһына тартыр.
Килдеш тә, һис ҡалышмай,
Тамыр йәйгән, ти, ергә,
Ҡарас тигән сәсәнде,
Ҡарас тигән батырҙы
Бүләк иткән ул беҙгә.
Урман, тауҙарҙы гиҙеп,
Яу-дауҙарына түҙеп,
Күбәләк-Тиләү ырыуы
Йәшәгәндәр, ти, бергә.
Береһе өсөн береһе
Керерҙәй булған гүргә.

Көнбағыш та ҡушылып
Китте башланған һүҙгә.
Унан тыуған Ҡушкилде
Элмәй китмәйек күҙгә,
Ҡушмай китмәйек һүҙгә.
Атаһына ҡуш килгән,
Ырыуына хуш килгән,
Тиҙ арала эшкингән,

Дошмандарын йыш еңгән:
Урман, һыуым, ерем, тип,
Кем менән алышмаған,
Ҡылыс һелтәп киҙәнеп.
Олатаһы, атаһы,
Ағалары, бабаһы, —
Барынан ҡалышмаған.
Дошман яуын ҡырған ул,
Ҡылыс, һөңгө етмәһә,
Уҡ-һаҙағын ҡорған ул.
Ҡабарып килгән болоттай
Яуға ҡаршы торған ул.
Яуға ҡаршы торған ул,
Дауҙы кире борған ул.

### 5. Ҡарас батыр

Ҡарас батыр ҡан һөймәҫ,
Урынһыҙ йоҙроҡ төймәҫ,
Сала-сарпы һүҙҙәрҙән
Башы аша сүп өймәҫ;
Тиләүемә ымлаһа,
Күбәләккә ымлаһа.
Бары берҙәй йыйылыр:
Ергә ятып тыңлаһа,
Бал ҡортолай гөж килер,
Атҡан уғы төҙ йөрөр —
Батыр тигән һүҙ йөрөр.
Сәсәнлеген ил белер.
Дошманының йөрәген
Һүҙ менән яра телер.

Тирмә яны буш тормаҫ,
Батырлығы буш булмаҫ,
Эйәрле өс йүгерек
Бәйле торор кәртәлә.
Барымта-ҡарымтаһы*
Йөрөр булған эргәлә.
Уҡ-һаҙағы, хәнйәре,
Ҡылысы ла һөңгөһө —
Әҙер торған көллөһө.
Ҡоралдың иң яҡшыһы,
Яҡшыһы ла көйлөһө.
Науырҙаның йәйләүе —
Хозур Баҙай яланы.
Әйтерһең, ҙур дауамы.
Бар ырыу һыйған шунда,
Туй уҙғарғандар йыл да.

Туй булғас, ярыш булған,
Көс һынау, көрәш ҡыҙған.
Уҡ атҡандар ярышып —
Бер кем тормай ҡарышып.
Йүгеректәр ярышҡан
Ҡыҙылуттан[1] — алыҫтан.
Йылғырҙар килгән алдан,
Кемдәрҙер артта ҡалған,
Алда килгән, билдәле,
Алған яҡшы йөлдәне*.
Берәй ая ҡаҙылы
Йылҡы һуйып бешергән.
Ҡаҙылы ял кимереп,
Татыулыҡ йүнен күреп,
Ҡарас сәсән һүҙ әйткән,
Яңылышты төҙәткән.

Йәш килендәр һаумалды
Шапырған-бешкәкләгән.
Ҡымыҙ эскәс, аҡһаҡал
Ҡурайында һыҙҙырған.
Йәш-йән дә ҡалышмаған,
Бер-беренән уҙҙырған.
Бейеүселәр бейегән,
Ерҙең саңын туҙҙырған.
Көн төшлөктән уҙғанда,
Мәжлес ярһып ҡыҙғанда,
Сәсән күңеле ниҙер
Һиҙенгәндәй була, ти,
Барымтаға килгәндәр —
Ҡаҙаҡ малдар ҡыуа, ти,
Ҡаҙаҡтар ҡыуған малын,
Боҙған халыҡтың ялын,
Ҡарас атланған атҡа,
Тотонған уҡ-һаҙаҡҡа,
Ара Түбәгә[2] етмәй
Ҡыуып еткән ҡаҙаҡты.
Аҡса[3] ҡуйған елтәндәп,
Ҡурҡа төшкән тертәндәп,
— Уй-бай, — тигән, — боролоп,
Тамаҡ төбө ҡурылып.
Бер аҙ торғас, тын алып,
Телгә килгән, ти, Аҡса:
— Минең янда йөҙ ҡаҙаҡ,
Һәр ҡайһында уҡ-һаҙаҡ.
(Кәрәк булһа хәнйәр бар,
Биш ҡаҙаҡлы суҡмарҙар).

Бер «һайт», тиеп әйтеүгә —
Әйләнерҙәр көтөүгә,
Ҡаныӊ-йәнеӊ туҙҙырып,
Аяҡ-ҡулыӊ һуҙҙырып,
Һиӊә яман һүҙ ороп,
Ҡыйнарҙар, ғуй, ҡайт, улым,
Әйлән, атыӊды бороп.

Аҡса йәнен телерҙәй
Булған һүҙе Ҡарастыӊ:
— Ҡанын ҡойған күп булды
Һинеӊ ише ҡараҡтыӊ.
Батыр һыны ул булмаҫ,
Артҡа сүгәр юл булмаҫ,
Ҡурҡаҡ йәнгә әйләнһәм,
Тиләүемдә түр булмаҫ.
Минеӊ ажар ырыуым
Ҡаҙаҡҡа һис ҡол булмаҫ.
Аҡса, ҡалдыр малымды,
Ҡойҙормасы ҡаныӊды.
Ҡырҡты үткән Ҡарасмын
Юлым кире бороуҙан,
Үткән ҡурҡып тороуҙан.

«Киҙәк»*, — тигәс батырым,
Аҡса күҙе аҡайған.
Йөрәк телеп үткәндәй
Артҡа бер аҙ ҡаҡайған.
Үлемесле төҫ кереп,
Ҡаҙаҡ теленән яҙған,
Ҡаҙаҡ өнөнән яҙған,
Алышһыҙ кереп ятыр,
Хәтерҙән ҡәбер ҡаҙһаӊ.

Ҡарас Аҡсаға өнәп:
— Килдеӊме һин, гүр эҙләп,
Үҙеӊә яйлы түр эҙләп!

Аҡсаныӊ ярандары
Бик тә шунда ер(е)ккән,
Ошонан һуӊ Ҡарастыӊ,
Ошонан һуӊ башҡорттоӊ
Ҡаҙаҡҡа даны киткән.
Ат етмәҫ ергә еткән,
Хат етмәҫ ергә еткән.
Башҡорт тынғылыҡ тапҡан,
Барымта килеү бөткән.

## 6. Ғариф батыр ҡылысы

Арғымағын кешнәтеп,
Ҡылыс-йәшен йәшнәтеп,
Барын күктәй күкрәтеп,
Ер һелкетеп, тетрәтеп,
Саң бураны ойҡотоп,
Илем, тиеп, ут йотоп,
Ил һаҡлаған башҡортом,
Яу ҡайтарған башҡортом,
Дан һаҡлаған башҡортом,
Дан яҡлаған башҡортом,
Дан һатмаған башҡортом.

Ҡылыс, һөңгө сыңдары
Сыңлағандай йырымда,
Ишетелә ҡоромда
Йырлай халҡым бөгөн дә,
Йырлағандар борон да.

Халҡым мәңге онотмаç,
Маҡтап йырлар-һамаҡлар,
Күбәләгем-Тиләүем
Батырҙары турында:
«Мәскәүҙе лә күрҙек беҙ,
Парижға ла керҙек беҙ...»

Беҙ Парижға барышлай
Юлда тауҙар ҡыйралған,
Дәү ҡаялар ыуалған.
Ҙур дарьялар болғаныл,
Ҡала, ауыл тын ҡалған.
Бөтә донъя шомланып,
Ҡанға батып, ҡан кисеп,
Күҙ-йәш түгеп, йәш һөртөп.
Торған сағын күрҙек беҙ,
Шуға шаһит булдыҡ беҙ.

Ҡан уртлаһа — түкөрмәç,
Илбаçарға юл бирмәç,
Ерҙе уя баçыусы,
Халҡын әйҙәп барыусы
Күбәләк-Тиләү улы
Ғариф тигән батыры
Париж ҡапҡа йоҙағын
Ҡылыс менән бер һелтәп
Өҙә сабыусы булыр.
Көмөрө яурын, киң күкрәк,
Ҡорос беләк, ҡуш йөрәк.

Халҡыма булған терәк.
Күбәләгем, Тиләүҙә
Ундайҙар түгел һирәк.

### 7. Муса батыр

Тарих мең дә һигеҙ йөҙ
Туҡһан беренсе йылда,
Егерменсе декабрь
Муса батыр Лут улы
Донъяға оран һала.
Ишетә, ти, Уралтау,
Болоттарға етер тау.
Ишетә өндә ҡаялар,
Ишетә Яйыҡ, Иҙел,
Таң ҡалалар барыһы:
«Был, — тиҙәр, — юҡҡа түгел,
Ҡуш йөрәкле ир булыр.
Ни теләһә, шул булыр,
Ҡорос беләк, киң яурын,
Битлек менән тыуған ул.*
Ирекҡә киң юл булыр,
Иштәргә ул иш булыр,
Тиңдәргә ул тиң булыр.
Сабый буйға тиҙ етә,
Ай үҫәһен көн үҫә,
Йыл үҫәһен ай үҫә.
Үҫеп аҡыл йыйғанын,
Ир ҡорона тулғанын
Ата-әсәһе көтә.
Ыҙа сиккән башҡорто
Унан күп өмөт итә.
Эй уҙаман-уҙаман,
Тиңһеҙ батыр уҙаман,
Атаң һорап алдымы,
Әсәң теләп алдымы,
Төн йоҡоһон ҡалдырып,
Таң йоҡоһон ҡалдырып,
Ике күҙен талдырып,
Йөрәккәйен яндырып,
Оран һалып Хоҙайға,
Түҙмәй барлыҡ ыҙаға.
Күргән барлыҡ нужаға
Халҡың һорап алдымы?
Доға ҡылып, ялбарып,
Ҡайғы, хәсрәт ауҙарып,
Бөттөләр микән арып,
Көттөләр микән арып?

Дошманына яу сапһа,
Ҡойон булып туҙған ул,
Еңеү яулап, дан алып,
Ил түренә уҙған ул,
Ил күркенә әйләнеп.
Ер күркенә бәйләнеп,
Ете төҫкә әйләнеп,
Ерҙә ете әйләнеп,
Халҡы күңелен арбаған,
Йәшен-ҡартын барлаған.
Башҡортом, тип йәшәгән.
Күкте телеп, тау ярып,
Йәшен булып йәшнәгән.
Күбәләгем, Тиләүҙә
Бары бит ул бер генә,
Мәңге тынмаҫ йыр ғына
Аңлай бел һәм күр генә.
Һис бер айыра алмаҫ
Беҙҙән һалҡын гүр генә.
Ай, батырым, батырым,
Яу сапҡанда ярһынып,
Үткән юлың тарһынып,
Арғымағың ал бирмәҫ,
Яуҙаштарың яу белмәҫ.
Яра телеп тауҙарҙы,
Ауҙарып ҡаяларҙы,
Дала торҙо ҡалтырап,
Урман торҙо яңғырап,
Йән аямай алыштың,
Дошман башын ҡыйманың —
Ҡамыш киҫеп уйнаның,
Дошман өркөп ҡасҡанда,
Өркәк һарыҡ көтөүе
Ҡаса, тиеп уйланың.
Еңеү яулап талсыҡҡас,
Ялдар иттең уйланып.
Үҙ алдыңа йылмайҙың, —
Ҡуйҙыңмы ғорурланып?
Ҡаш йыйырып, ҡаш төйөп.
Яндыңмы ҡай саҡ көйөп?
Үҙ халҡыңдың шатлығын,
Үҙ халҡыңдың ҡайғыһын
Башыңдан аша өйөп,
Халҡым, тип янып-көйөп,
Илем, тип янып-көйөп
Йөрөүҙәрең бушҡамы,
Әллә барын татырға,
Иңеңдә кисерергә
Һиңә Хоҙай ҡушҡанмы?
Шундай ине заманы —
Һис кемде аяманы.

Хәтерләтә ине бит
Илем ҡыҙған табаны.
Ирен һис ир тимәне,
Ҡыҙын һис ҡыҙ тимәне.
Күҙҙәр ҡоторған эттәй,
Бик күптәрҙе ас беттәй
Йәбешеп ҡан һурҙылар,
Изгелекте-яҡшыны
Ситкә алып орҙолар.
Аҡ-ҡараны күрмәне,
Бер кемгә һүҙ бирмәне.
Этеп-төртөп һәм янап,
Кешене эткә һанап,
Ҡара ҡоҙғон* ил буйлап
Кеше ҡанын ҡойҙорҙо.
Ҡарар күҙгә кешеләр
Вәхшиҙәрҙән уҙҙырҙы.
Оҙаҡламай-көттөрмәй
Беҙҙең Муса батырға
Шундай ҡара көн тыуҙы:
Уның йөрөгән юлына
Һибеп сыҡтылар ыуҙы.
Илем, халҡым, ерем тип
Оҙаҡ көрәште батыр,
Шатлыҡ өләште батыр,
Тик шатлыҡтың сиге бар,
Тип әйтте уға күптәр,
Өрмәй тешләгән эттәр,
Ундайҙар бит бик күптәр.
Хыянат, ялған ҡылыу,
Әйтсе, Муса эшеме?
Ялған һөйләп яндырҙы
Тамаҡ туйҙырған хөрттәр
Шундай бейек кешене,
Шундай данлы кешене,
Салауатым ишене,
Батыршалай кешене,
Ҡараһаҡал, Күсемдәр,
Һанһыҙ батыр ишене.

## 24. ӘБЕРӘЙ БАТЫР МЕНӘН АЛБИРМӘҪ АЛАСАБЫР[1]

Элгәре Тәлгәшле ауылында Бөрөк исемле ярлы ғына бер ҡарт йәшәгән. Шул Бөрөк ҡарттың бик шәп бер йүгерек аты булған. Ул ат бәйгеләрҙә бер генә йүгеректе лә алдына сығармаған. Йүгеректең төҫө ала булғанға Бөрөк ҡарт уға Аласабыр тип исем биргән. Аласабырҙы бөтә ерҙә маҡтап һөйләр булғандар. Хатта уның тураһында Яйыҡ буйы ҡаҙаҡтары ла белгән.

Бер мәлде, саҡ ҡороноуанъя ваҡытында, батша тәхеткә ултырған саҡта инде, беҙҙеңсә, Ырымбурҙа бик ҙур бер йыйын ҡорола. Был йыйында ҡаҙаҡтар, башҡорттар ҡатнаша. Көрәшергә төрлө яҡтан батырҙар саҡырыла. Һәр ырыу үҙенең батырын алып бара. Беҙҙең тирәнән Әберәй батырҙы[2] алып барырға булалар. Ләкин Әберәй батырҙы Лоҡман кантон, йыйыу аҡсаһын түләмәгән өсөн, туҡмап келәткә яптырып ҡуйған була. Ярлы булғас, түләй алмағандыр инде, күрәһең. Ҡарттар:

— Әберәй батырҙы йыйынға ебәрергә кәрәк! — тип даулашып, кантон янына баралар. Кантон ҡарттарҙың һүҙен тыңлай. Уның кантонынан барған батыр көрәшеп, булған батырҙарҙы ла йыҡһа, Лоҡман кантондың үҙенә лә дан бит инде.

— Бик мәслихәт, — ти кантон. — Ләкин ул бикле ултыра бит әле, уны сығарырға кәрәк улай булғас, ҡайҙа һаҡсылар? Бар әйтегеҙ, асып сығарһындар.

Һаҡсылар килә, ә уларҙың береһе, келәттең асҡысын кеҫәһенә һалып, йәйләүгә киткән дә барған. Асҡыс юҡ. Батырҙы нисек асып сығарырға? Әберәй батырҙың иптәштәре келәт алдына барып кантондың сығарырға тигән әмерен әйтәләр. Ат менеп, йәйләүгә сабалар. Әберәй батыр, эштең былай икәнен белгәс, аптырап тормай, келәттең бер мөйөшөн ҡалҡыта ла сыға. Бөтә халыҡ шунда уның көсөнә, батырлығына хайран ҡала. Әберәй батырҙы Лоҡман кантон янына килтерәләр. Кантон уға:

— Йә, Әбдерәхим мырҙам, һине Ырымбурға йыйынға көрәшергә апарырға кәңәш беркеттек ҡарттар менән. Ырыуҙың, кантоныбыҙҙың олпатына, йөҙ ҡыҙыллығы килтермә. Барып еткәнсе торнанан — тояҡ, барғас, ҡырмыҫҡанан көс теләйбеҙ һиңә. Йыйындағы батырҙарҙың булғанын да йыҡһаң, хибестән* ҡотҡарам, өҫтәүенә бер йылҡы орлоғо нәҙер итәм, — тигән Лоҡман кантон.

Ҡарттар ҙа Әберәй батырҙы йыйынға барырға димләгәндәр.

Шунан Әберәй батыр, кантондың хәбәрен тыңлап торғандан һуң, әйткән:

— Мин, барып, көрәштә беренселекте алыуын алырмын да бит, уның менән генә түгел. Бәйгелә лә беренселекте алыу кәрәк. Анауы, Тәлгәшле ауылы Бөрөк ҡарт та Аласабырын йүгертергә апарһын ине. Шулай булмағанда, мин көрәшергә бармайым, — тигән.

Шунан кантон Тәлгәшле Бөрөк ҡартҡа сапҡын ебәргән, Бөрөк ҡарт, бик ҡартлыҡтан сырхап тороу сәбәпле:

— Йыйынға барырлыҡ хәлем юҡ, — тигән. Шулай ҙа, кантон һынлы кантон ҡушҡас, уның һүҙен кире ҡаҡмай, Аласабырға мендереп улы Зөлҡәрнәйҙе ебәрергә булған.

Ырымбурға барғас, йүгертеү алдынан Аласабырҙы яратҡандар.* Ат сабыштырыу башланмаҫ борон, һынсылдар йүгерәсәк аттарҙы йөрөп ҡарап сыҡҡандар. Ҡарап бөткәс, һынсылдар халыҡҡа былай тип әйткәндәр:

— Иҙел буйынан килгән бер ат бар был юлы. Уның алдына бер йүгерек тә сыға алмаҫ. Ләкин уның йүгерек икәнен бер кем дә белмәй бында, — тигәндәр.

Шулай тигәс, бәйгегә йүгерек аттарын килтергән байҙар, хәйлә ҡороп:

— Ат сабыштырыу бөгөн булмай, — тигән.

Зөлҡәрнәй, уны-быны уйламай, Аласабырға һоло бирә. Уғаса булмай, байҙар аттарын йүгертергә ебәрә. Бәхтиһәң, теге «бөгөн ат сабыштырыу булмай» тигән хәбәр хәйлә генә булған икән... Әберәй батыр, быны белеп ҡалып, Зөлҡәрнәйҙе эҙләргә тотона, ә Зөлҡәрнәй юҡ та юҡ. Барһалар, фатирында ҡымыҙ эсеп ултыра был. Уны Лоҡман кантон янына килтерәләр.

— Аласабырҙы ебәр ҙә ебәр, — тиҙәр икән тегегә.

— Юҡ, булмаҫ, һыу эсереп, һоло бирҙем, йүгерә алмаҫ, — ти икән Зөлҡәрнәй. Лоҡман кантон үҙе әйткәс, Зөлҡәрнәй күнгән: Аласабырҙы йүгертергә ебәрергә булғандар.

Бер малайҙы мендереп, Аласабырҙы йүгерек аттар артынан ебәрәләр.

Ул ваҡытта аттарҙы егерме саҡрымдан йүгертер булғандар. Билдәләнгән урында тиңләшеп, сабыша башлағас, Аласабырҙы менгән малай тегенең башын тартып, ауыҙлыҡ менән ауыҙын бысып тик килә икән. Шулай ҙа хайуан, теге малайға баш бирмәй, булған йүгеректәрҙе уҙып бөткән. Яртылыҡ юлға еткәс, хайуан бахыр һөрөнөп йығылған, сәсәгән. Малайы әллә ҡайҙа тәкмәсеп барып төшкән.

Аласабыр, әҙерәк ятҡас, тороп бер һелкенгән. Шунан һуң туҙан туҙҙырып, сәсрәтеп сабып сығып киткән, артынан саңдар ғына уйнап ҡалған. Юлда йүгеректәрҙең барыһын да уҙып бөтөп, ике-өс ер буйы ташлап, малайһыҙ-ниһеҙ майҙанға килеп кергән хайуан.

Майҙан халҡы хайран ҡалған. Киткән шау-шыу. «Кем йүгереге лә кем аты? Ҡайҙан килгән был? Ҡайһы ырыуҙыҡы?» Зөлҡәрнәй оялышынан йәшенгән. Аласабырҙы Әберәй батыр тотоп алған. Зөлҡәрнәйҙе килтергәндәр. Өҫтө-башы алама ғына бер йәш егет. Оялышынан атының алдында башын баҫып тик тора икән был.

Һөбәнән* тыш, Бохара яғынан килгән купецтар хайуандың муйынына аҫыл-аҫыл ебәк тауарҙар килтереп эләләр икән. Ул Мәкәрйә яғынан килеүсе купецтар ҡыйбатлы тауарҙар килтереп һалалар икән хайуандың өҫтөнә. Зөлҡәрнәйҙең алдына аҡса ташлау булһынмы! Ғәжәп булған. Аласабырҙы ебәккә урағандар ҙа ҡуйғандар.

Байҙар шунда уҡ һиҙеп алған. Туҡта, был ярлы малайға ниңә кәрәк йүгерек, тип уйлағандар. Береһе әйтә икән:

— Мин һиңә биш баш йылҡы бирәм, һайлап алырһың, һат әйҙә йүгерегеңде, — ти икән. Икенсеһе:

— Мин ун биш йылҡы бирәм, өҫтәүенә бер көтөү ҡуй бирәм, — ти икән. Ҡаҙаҡта йылҡы, ҡуй моңмо ни? Дала тулып йөрөй бит уларҙа.

Зөлҡәрнәй ни уйламаған-нитмәгән, Аласабырҙы һатҡан да ебәргән.

Башҡорт иҫәүән була бит ул. Бер өйөр йылҡы менән бер өйөр ҡуйҙы ҡыуалап алған да ҡайтҡан.

Аласабырҙы һатҡанды Лоҡман кантон тәүҙә белмәй ҡала. Аҙаҡтан белә лә, инде эш уҙған була шул.

Ҡайтҡас, Бөрөк ҡарт бик ҡыуанған. Шунан байып киткән.

Зөлҡәрнәй Аласабырҙы һатып ебәргәс, һынсылдарҙың берәүһе тороп әйткән:

— Аласабыр йылҡының ҡото ине. Башҡорт ул ҡотто ҡәҙерләп тота белмәне. Аласабыр менән йылҡы ҡото ҡаҙаҡ далаһына күсте хәҙер. Ләкин Иҙел буйынан йәнә Аласабырҙан да шәберәк бер йүгерек сығасаҡ. Әгәр башҡорт шул йүгеректе ҡәҙерләп тота белһә, йылҡының ҡото йәнә кире башҡортҡа күсәсәк, башҡортта йылҡы үрсейәсәк. Шуға тиклем башҡорт йылҡыһы мандый алмаясаҡ, — тигән...

Ана шул Аласабырҙың нәҫеленән булған йүгерек әллә нисә йылда бер килеп сыға. Беҙҙең тирәнән йәнә бер данлыҡлы йүгерек ат сығырға тейеш әле. Уны ҡәҙерләп тота белергә кәрәк. Ул йылҡының ҡото. Ләкин беҙҙә шуның кеүек аҫыл йылҡы малын ҡәҙерләй белмәйҙәр. Тәрбиә юҡ йүнләп. Бесәнде етерлек сапмайҙар. Ҡышҡы сатлама һыуыҡтарҙа ҡарағура ашаталар, яҙ буйы йыла кимерә. Байҙар уның менән «баймын» тигән булып, кәртә тулы йылҡы аҫыраған булалар...

Әй теге Әберәй, Әберәй батыр ни эшләгән һуң йыйында? Көрәшкән... Көрәшеү генә тиһең тағы! Йыйынға килгән батырҙарҙы, көрәшселәрҙе яурынынан аша ташлап ҡына тик торған.

Батырҙар береһе артынан икенсеһе сығып ҡына торалар икән тегегә. Халыҡ әйтә икән:

— Әберәй батыр ял итһен бәләкәс, — тиҙәр икән. Башҡа яҡтан килгән батырҙар һәм байҙар:

— Көрәшһен әйҙә батыр булғас! — тип ҡысҡыралар, ти. Халыҡ:

— Батырға ла ял кәрәк! Мынау эҫелә яндырып үлтерергә итәһегеҙме ни кешене? — тигәс, һүҙ әйтә алмағандар.

«Батырға ла ял кәрәк» тигән һүҙ шунан ҡалған инде ана.

Әберәй батырға ашарға, эсергә төрлө әйберҙәр килтерәләр, ти. Ул һимеҙ-һимеҙ ҡуй иттәре, ул йылҡы иттәре, ул йылҡы ҡаҙыһы, ул ҡымыҙ тиһеңме — барыһын-барыһын килтергәндәр. Береһен дә ашамай икән Әберәй батыр быларҙың. Шунан ул әйткән:

— Килтерегеҙ миңә бер самауыр сәй һәм еллеһенән ҙур бер ҡалас, — тигән. Шунан тас дәүмәллек ҙур бер ҡалас менән бер оло самауыр сәй килтергәндәр быға. Был шуның менән үҙәк ялғаған да йәнә көрәшә башлаған. Яҡын-тирәнән килгән батырҙарҙың барыһын да йығып бөткән.

Хәҙер Төркиәнән килгән батыр менән көрәшәһе ҡалған. Былар алыша башлағандар. Тегенең дә beләк бар, ти. Бик оҙаҡ алышҡандың һуңында Әберәй батыр йыҡҡан бит быны. Төрөк батыры, ғәрләнеп, майҙанды ташлап сығып киткән. Әберәй батырға һөбәне бирә башлағандар, ул ебәк тауарҙар, ул былай тауарҙар тиһеңме, күбә ҙурлыҡ булып өйөлгән дә ҡуйған алдына.

Тора биргәс, бер төркөм халыҡ:

— Туҡтағыҙ әле, ҡалмыҡтан килгән бер батыр бар. Яңы ғына килде. Әйҙә, көрәшһендәр, — тигән.

Ҡалмыҡ батыры сыҡҡан, ул да бик көслө икән. Алышалар, алышалар, ти, былар. Көстәр тигеҙ, берәү ҙә алдыра алмай, ти. Былар икәүһе, билдәшеп, майҙанды урап сыҡҡандар. Шунан Әберәй батыр тегене майҙан уртаһына килтереп, биленән һауаға күтәреп байтаҡ торғоҙғас, ергә лап иттереп күтәргән дә һуҡҡан. Тегенең, муйыны сығып, иҫһеҙ булған. Киткән тауыш:

— Үлтерҙе лә үлтерҙе, — ти икән бер төркөм халыҡ. — Урядниктарҙы, полицияны килтерегеҙ!

— Улай кешене үлтерергә яраймы ни! — тип ғауға күтәрә башлағандар. Бер төркөм халыҡ әйтә икән:

— Ҡулынан килмәгәс, сыҡмаһын көрәшергә. Аш булған* уға, — ти икән. Шунда уҡ урядниктәр, полициялар килеп еткәндәр. Әберәй батыр тороп әйткән:

— Бына, беҙ билдәшеп майҙанды урап сыҡҡан саҡта һеҙ уның йөҙөн, ҡиәфәтен асыҡ күрҙегеҙ. Ул бер ҙә ҡалмыҡ батыры түгел, ә баяғы төрөк батыры ине. Ул, өҫтөндәге кейемен алыштырып, битенә әҙерәк дегет һөртөп кенә килгән. Мин уны бая бер йыҡҡайным. Һеҙ үҙегеҙ шаһит. Бында һәр бер батыр көс һынашырға килгән, алдашырға килмәгән, — тигән. Шунда халыҡ Әберәй батырҙы күтәреп майҙандан алып сығып киткән...

## 25. БИКЙӘН МӘРГӘН

Борон заманда батша булмайынса, фәкәт хан ғына булып, хөкүмәт эштәрен бейҙәр ауылдағы яһаҡ йыйыусылар аша йөрөткәндәр. Бейҙәрҙән түбән бер нисә ауылға баш булып ҡазыйҙар торған. Улар, һайланмыштар менән һүҙ беркетеп, бейҙең ауылдарға һирәк килеүенән файҙаланып, ауыл халҡын төрлө яҡлап талай торған булғандар. Яһаҡты, кем нисек теләһә, шулай алған кеүек, һунарсыларҙан да, һунарға йөрөгәндәре өсөн йәнлек тиреһен бейҙәр теләһә күпме алғандар. Уларға эйәреп, ҡазый йәки һайланмыш булмаған байҙар, теллетешле ҡомһоҙҙар ҙа шулай талағандар, халыҡты ҡурҡытҡандар. Бәғзе бер бейҙәр ауылға килгән саҡтарында байҙар менән ашап-эсеп, улар йырын йырлап, ярлыларҙың зарына иғтибар бирмәгәндәр. Мәгәр, халыҡ араһында бола сығып китеүҙе күҙ уңында тотоп, халыҡҡа йәбер-яфа күрһәткәндәрҙе, кемдең кем икәненә ҡарамаҫтан, бәғзе бер ваҡыттары язаға тарта торған булғандар.

Шул замандарҙа, Ағиҙел баштарында тау-таш һәм ҡуйы урман араһындағы бер ауылда Кейекбай исемле данлыҡлы һунарсы, Көнәфиә исемле ил ҡарты йәнә килеп Йәреш исемле, яман ҡылыҡлы уҫал бер кеше булған.

Кейекбай ҡарт уҡ-һаҙаҡ атыуға үтә мәргән, ҡалтағай менән йөрөүгә ғәйәт дәрәжәлә оҫта булған. Әгәр кем дә булһа берәү халыҡтан айырым, йәки улар арендә бүтән бер һунарсы йөрөй икән, ул ваҡытта ул уны ҡабат һунарға сыҡмаҫлыҡ итеп ҡурҡытыу өсөн алыҫтан тороп һаҙаҡ менән уның йә кәпәсен осорғансы, йәки теҙгене менән өҙәңге бауын өҙә атҡан. Шулай итеп, бер-ике тапҡыр Йәреште лә кәпәсһеҙ, өҙәңге-теҙгенһеҙ, ҡошһоҙ йәки кейекһеҙ ҡайтарған. Шул сәбәптән Йәреш ҡарт, бер килке һунарға сыҡмайынса: «Кейекбай ҡарт үлмәй тороп, һунарға йөрөмәйем; ҡасан да булһа бер ибен табып, ҡон алмай ҡуймам әле», — тип ғәһет* иткән.

Кейекбай ҡарт ҡалтағай менән мышы, болан ҡыуа икән, буй сапһа, баҫтырып һуҡҡан. Хатта текә ярҙарҙан, бейек тауҙарҙан

ҡалтағай менән төшкән. Кейекбай ҡарт мөгөҙҙән — ян, уҡ-һаҙаҡ, һәр төрлө эйәр-өпсөн*, тимерҙән — һауыт, кейем, торҡа*, һеңгө, ҡылыс һәм бүтән ҡоралдар ҙа эшләгән. Һуғыш мәлендә ҡорал яһау өсөн бөтә тимерселәр уның ҡулы аҫтында булған. Донъя тыныс саҡта ҡыҙҙатындарға биҙәнеү нәмәләренән беләҙек, йөҙөк, балдаҡ, ҡаптырма, сулпы, бөйөрсә, яуырынса һәм сәсмәүҙәр ҙә яһаған.

Кейекбай ҡарттың ике улы булып, олоһо кәләш алыу менән башҡа сығып китә, өйөндә үҫмер улы Бикйән генә ҡала. Донъя бит, аттан ала ла, ҡола ла тыуған кеүек, Кейекбай ҡарттың да оло улы холоҡһоҙ була. Кәләше үлгәндең һуңында ауылда бер бик бай тол ҡатынға өйгә инә. Ҡатыны бик һаран булыу сәбәпле, был да һаранлыҡҡа өйрәнеп ала. Шул һаранлығы арҡаһында, ҡартайып, эштән сыҡҡан атаһын да ҡарамай. Күрше-тирәне саҡырып һыйлау ары торһон, хатта майҡоротто, ит-ҡымыҙҙы үҙе лә ашап-эсеп кинәнмәгән. Әгәр ҙә уның берәр бүлтерек кәзә-һарығы әйләнсек, йәки берәр башмағын мөстән төртә* икән, ул уны нисек булһа ла бысаҡлап үҙенсә хәләллəгән*. Кеше белеп ҡалып унан:

— Һинең бөгөн фәләнсә малың фәлән сир менән ҡазаланып ҡалған икән, — тип һорағансы, ул:

— Мин бөгөн фәләнсә мал һуйҙым әле. Бик көр булды, фәлән тиклем майы сыҡты, — тип һөйләнеп, кешегә баяғыса һөйләнергә юл ҡалдырмаған.

Кейекбай ҡарт, бик ҡарт булыу сәбәпле, һунарға ла йөрөй алмай башлаған, тимерлектә лә эшләй алмаған. Шул арҡала малының һуйғанын һуйып, алмашҡанын алмашып ашап, һауып эсәрлек кәзәһеҙ ҙә тороп ҡалған. Йорт-йыһаз да туҙып, кейем-кейсән дә бөткән. Бер көндө ул, улы Бикйәнде эргәһенә ултыртып алған да:

— Улым, әсәң менән беҙ ҡартайҙыҡ, бөлөндөк, ағайыңдан бер ярҙам да юҡ. Үлге килмәһә лә, унан ҡотолоп ҡалынмаясаҡ, шулай ҙа тамаҡты бер ҙә алдап булмай. Бик беләм, балам, йәшһең, эшкә үмгәнең юҡ*. Һунарға ла йөрөрлөк түгелһең әле, бәлки, йөрөр ҙә инең, һаҙаҡтар ҙа ҡалманы. Әллә булмаһа ялсылыҡҡа инеп ҡарайһыңмы? Көсөң еткән генә эште эшләрһең, — тигән.

Бик иғтибар менән тыңлап ултырған Бикйән. Шунан:

— Атай, эште булдыра алмам: берҙән, эшләп байҙы кинәндерә алмаһам, икенсенән, үҙем имгәнермен. Булмаһа һин миңә еҙ ҡурайыңды биреп ситкә сығарға изен ит.* Мин илдән илгә йөрөп ҡурай уйнармын. Бәлки, тамаҡ туйғандай нәмә табырмын, — тип, тормошҡа аяҡ баҫырға уйлағанын әйткән. Атаһы ла ҡарышып тормаған, изен иткән. Бер көндө Бикйән йыйынып, ҡыны менән еҙ ҡурайын алған да, ата-әсәһе менән хушлашып, илгә сығып киткән.

## Бикйән Мәргәндең ил гиҙгәне[1]

Йәйәү көйө һәрпәндәп бер нисә көн барғас, Бикйән Аҡауаз йылғаһы[2] буйындағы йәйләүгә барып сыҡты[3]. Йәйләүҙән йәйләүгә йөрөп туй һәм ҡалымдарҙа ҡурай уйнап, күҙгә-башҡа күренә башланы. Йәш, буйға-һынға ҡупшы булыу сәбәпле уны, «алыҫтан килгән үҙ кешебеҙ», тип, халыҡ бик яратты, арҙаҡлап хупланы. Һый-хөрмәт

күрһәтеп, тамағын туйҙырҙылар, түшәк-яҫтыҡтың йомшағына ятҡырып, йоҡоһон ҡандырҙылар.

Талай көндәр үткәндең һуңында Бикйән, ата-әсәһенә һибә* итеп алған ҡаҡланған ит, ҡарындыҡҡа төрөп май, ҡорот һалып, бер юлаусы артынан күстәнәс ебәрҙе. Сәләмен әйтеп, бер аҙ йөрөйәсәген белгертте.

Яҙ миҙгеленең аҙағы. Бер йәйләүҙә бик ҙур бәйге йыйылған. Майҙан — халыҡ менән ала сыбар. Унда көрәш. Һәр төрлө уйын-көлкө. Сапҡан аттарға биреү өсөн эленгән бәйгелектәр* елберләй. Майҙандың бер яғында аяҡ бөкләп, ҡатын-ҡантаһы, бала-сағалары менән бер-ике бей, ҡазый менән һайланмыштар ултырған. Улар эргәһенә ике яҡлап байҙар, телле-тешле ҡуштандар урынлашҡан. Уларҙан артабан ҡарттар ултырып, бүтән төрлө кешеләр теҙелгән. Бейҙәргә, байҙарға ҡаршы атаҡлы ҡурайсылар, бейеүселәр, йырсылар, сәсәндәр, шиҡымдар*, масҡарҙар* ултырған.

Бәйгене көрәш менән асыу өсөн иң тәүҙә ун-ун бер йәшлек тәнәйҙәрҙән башланылар. Улар көрәшеп, бәйге бирелгәндең һуңында, ҙурыраҡтарҙы сығарып, үҫмерҙәргә еттеләр. Үҫмерҙәр араһынан бер байҙың улы көрәшеп, бер-ике егетте йығып, батырға сыҡты. Көрәштереп йөрөүселәрҙең береһе:

— Йә, был батырға йәнә кем сыға? — тиеүгә, «Мин сығам», тип әйтергә ҡыймай ултырған Бикйән — эргәһендәге Бейембәт ҡартҡа:

— Бәйгелә көрәшкәнем юҡ-юғын, мин сыҡһам, нисек булыр икән, олатай? — тип, үҙенең көрәшергә ираҙаһы барын белдерҙе. Бейембәт ҡарт тороп:

— Бына бында бер ят егет бар, көрәшкеһе килә булһа кәрәк, бик йөрәкһеп ултыра, тел төбөнә ҡарағанда, буш түгелдер. Кеше йөрәкһеһә, бер нәмә була торған: мәгәр теге улыма әйт, иплә ташлаһын. Аяуһыҙ ташлап, һөйәк-һаяғын онтамаһын, — тип, байҙың улын маҡтап алды, ти. Халыҡ йәнә:

— Көрәшһен, яурыны киң күренә. Аяҡ баҫыуына ҡарағанда, ҡоларлыҡ түгел әле ул, — тип ҡысҡырҙы, ти.

Бына алпан-толпан баҫып, Бикйән уртаға сыҡты. Уға билбау бирҙеләр — көрәшә башланылар. Батырға сыҡҡан егет Бикйәндең көсөн байҡау өсөн, баш бармаҡтарын бөкләп, бөйөрөнә батырып ҡараны. Мәгәр Бикйән ҡырт та итмәне, уның һымаҡ һынап-нитеп торманы, күтәреп алды ла тегенең үҙен ергә бырҡтырҙы. Шунан теге егет, намыҫланып, йәнә йәбешкәйне, Бикйән йәнә атып орҙо. Бай улы хәҙер оторо намыҫланды, ғәрлегенән асыуланды, билбауын ташларға тип, абайһыҙ торған Бикйәндең ас биленә йәбеште. Бикйән дә, намыҫланып китеп, күтәреп алды ла быны, бер нисә тапҡыр зыр әйләндереп, һапҡын[1] менән бәргән таштай итеп ситкә елләне — теге егетең биш-алтыға тәгәрләп барып аяҡҡа баҫты, ҡурҡыуынан йәнә ҡоланы. Был юлы бөтә майҙан халҡы, туғай гөрләтеп, бик оҙаҡ көлдө.

Бәйге өләшеүсе Бикйәнгә бәйге биреп торған мәлдә, баяғы егеттең атаһы был хурлыҡҡа түҙмәне, йыуан ҡорһағын тулҡындырып, майҙан уртаһына килеп сыҡты. Бикйәнде ҡурҡытырҙай ҡарап:

— Бик көслө булһаң, минең менән көрәш, һөйәк-һаяғыңды ҡулыңа тотторол ебәрәйем, тыума*! — тип баҡырҙы.

Халыҡ Бикйәнде яҡланы:

— Ул ни аҙабың йәнә, бала менән көрәшергә әллә башыңа тай типкәнме? Көрәшкең килһә, үҙ ҡорҙашың менән көрәш! — тип шелтәләне. Уға үҙе һымаҡ елкәһе төрөлөп торған йыуан ҡорһаҡты сығарҙылар. Улар көрәшкән кешеләй булып, билбау алып билләшә башланылар. Мәгәр туҡ талпанға оҡшаған ҡорһаҡтары күтәргәндә оронсоҡлау сәбәпле, әле был яҡҡа, әле теге яҡҡа тумарҙай аунаҡлап, бер-берен йыға алманылар, айпалаштылар ғына, ти.

Хәҙер инде бәйге ҡыҙҙы. Унда — көрәш, бында — масҡарҙар, арҡандар буйлау, тегендә — бағанаға менеү. Йәнә бер ерҙә — бер нисә шиҡым төрлө һүрәткә инеп*, кеше үсекләү, бейеү һәм башҡалар. Халыҡтың бәғзеһе, һыны ҡатып, эсен ыуалап, төрлө мәрәкәгә түҙә алмай көлә. Бәғзеһе бағана башына менеп баҫып, күлмәк йәки ыштанын сисеп кире кейеп тороусыларға ҡарап ғәжәпләнә. Берәр түрә йәки бай, юҡ нәмә өсөн дә бисәләрен әрләгәнен, туҡмамаҡ булғанын, йәки ялсыларын нисек ҡыҫымға алғанын һәм бүтән төрлө бысраҡлыҡ эшләгәндәрен шул булып шиҡымланыусыларға ҡарап, һыны ҡатып көлә. Бәғзе берәүе, үҙе хаҡында булған был ҡыланышҡа аптырап ни көләргә, ни асыуланырға ла белмәйенсә, ҡылған эшенә үкенеп: «Әстәғәфирулла! Был ҡайҙан белеп бөткән был тиклем эште?» — тип хайран ҡала, ти. Мәгәр әле булһа күпселек Бикйәнде маҡтай, арҙаҡлай. Етек ҡыҙҙар Бикйәнде күреп һөйләшкеһе, уның менән мәрәкәләшкеһе килеү хаялындалар.

Көрәш һәм башҡалар бөтөп, бейеү башланды. Бейембәт ҡарт Бикйәндең бейеүен һораны. Бикйән ҡарышманы, бейеп китте. Талай* бейегәндең һуңында, ҡынынан ҡурайын алды ла, ҡурайға ҡушылып уйнай башланы. Ул көйҙө ташлап, «Кәкүк» көйөн башланы. Үҙе йырланы, үҙе бейене, ти. Бикйәндең һәр нәмәгә оҫталығына ҡыҙҙар ғына түгел, бөтә халыҡ һоҡланды, ти.

Шул саҡ халыҡ араһынан берәү аттар килеүен хәбәр итә. Бөтә майҙан халҡы күҙен аттар килгән яҡҡа бора. Аттар 25—80 саҡрым ерҙән ҡуна сабыу* сәбәпле бик һайланған, күбеһе сарсып ярты юлда ҡолап ҡалған. Аттарҙы күҙ күреме ер ташлап, бер ҡарттың берҙән-бер «Саң ҡунмаҫ» исемле аты, икенсегә бер байҙың «Көн теймәҫ» исемле аты килде. Аттарға бәйге өләшелде. Уйын тамам булып, бәйгене хуш итеп йырлай башланылар:

Урал тауын урап, ат саптырҙыҡ,
Бәйге тегеп көрәш яһаныҡ.
Бик күп уйнап көлдөк, күңел астыҡ,
Инде өйөбөҙгә ҡайтайыҡ, —

тип, бер ҡарт халыҡты бәйгенән таралырға өндәне. Шунда уҡ икенсе ҡарт:

Иҫән дә генә булығыҙ, һау булығыҙ,
Тигеҙ тороп, ғөмөр һөрөгөҙ.
Киләһе йыл йәнә ошо ергә
Асыҡ сырай менән килегеҙ, —

тып йырлап, бәғзе бер йылда аттар сабышҡанда, бәйгегә етәр саҡтарыҡ артта килгән бер ат уҙып, бәйгене уға биргәне өсөн талаштар, һуғыштар, йәки, көрәшкәндә, йығылыу сәбәпле юҡҡа талаш сығарыусылар булғанға, киләһе йыл бәйгегә фәҡәт күңел асыу, ғүмерлек дуҫлыҡ табыу өсөн килеүҙәрен һораны, ти.

Халыҡ таралышып, ашап-эсеү өсөн ҡоролған урынға киттеләр. Һәр кем үҙ тиңе менән ултырып ашарға, эсергә башланы. Ҡайҙа ҡарама унда ҡымыҙ, буҙа эсәләр. Мас булып алғандары бейергә тотондолар.

Мәжлестән алыҫ түгел бер ергә йәш егеттәр, йәш ҡыҙҙар йыйылып, һәр төрлө уйын уйнайҙар, йырлайҙар. Ындай уйындары бөткәс, ҡушлап бейей башланылар. Бикйән дә бейҙер'ярсылар* башлығы Ҡоҙаш ҡарттар кинйә ҡыҙы Көләйшә менән бейей. Бикйән Көләйшәгә бик оҡшап, ғүмерлеккә ҡауышыу билгеһе итеп, (ҡыҙ) бармағындағы балдағын Бикйәндең бармағына кейҙерҙе.

Инде хәҙер көн кискә һарҡа башлау сәбәпле, һый-хөрмәт тә, уйын да бөттө, таралыша башланылар. Йәштәр араһында Бикйәнде үҙенә ҡунаҡҡа алып ҡайтыу хаҡында һүҙҙәр китте. Былай ғына риза булышмағас, шыбаға тотоша башланылар. Шыбаға тотоша башлағандарында, Бейембәт ҡарттың улы килеп етеп, шыбаға тотошоуҙың әрәсәһен белгәндән һуң:

— Егеттәр, һеҙ шыбаға тотошаһығыҙ ҙа тотошоуын, Бикйәнде атайым саҡырғайны бит әле. Ул ҡайһылай була? Быға нимә тиһегеҙ? — тигәс, йәштәр ҙә ҡарышманы:

— Оло кешенән үтмәйек, — тиешеп, Бикйәнде Бейембәт ҡартҡа ебәрҙеләр, ти.

Бейембәт ҡарт оло менән олоса, кесе менән кесесә һөйләшә белеүе сәбәпле Бикйәнде кеселекле һүҙҙәр менән әүрәтте, бынан һуң юк-барға ҡайғырырға урын ҡалдырмайынса өгөтләне, хөрмәтләп һыйланы. Ҡайҙан, кем балаһы икәнен, көн итмеше һәм был яҡҡа ни өсөн килеп сыҡҡанын һорашты. Бикйән уға үҙ хәлен баштан-аяҡ әнәһенән-ебенә тиклем тиреп һөйләп, ҡартты таныштырҙы. Бейембәт ҡарт Кейекбай ҡартты яҡындан күреп белмәһә лә, данлыҡлы һунарсы икәнен ишеткән, унан һуң ҡайҙалыр Кейекбай ҡарт менән бер мәжлестә ултырҙаш булғанын хәтерләне. Шул сәбәпле шундай бер кешенең шул хәлгә төшкәнен, уның балаһы саилсылай* булып йөрөгәне өсөн, ысын һыҡырау менән ҡыҙғанды. Шуға күрә Бикйәнде үҙ өйөндә бер ҡыш тәрбиәләйәсәген, ата-әсәһенә аҙыҡ ебәреп торасағы менән Бикйәнде тынысландырҙы.

## 2. Бикйәндең Көләйшәне алып ҡасҡаны

Бикйән ҡышты Бейембәт ҡартта уҙҙырҙы. Бейембәт ҡарттың яҡшылығы арҡаһында, Бикйән һис бер ҡыйын-ҡыҫтаҡ күрмәне. Үҙе нисек ғүмерендә бер тапҡыр рәхәтлек күрһә, ата-әсәһен дә Бейембәт ҡарттың йомартлығы менән туйҙырҙы. Егәрле Бикйән ҡышты бикәргә* үткәрмәне. Ҡарттың уҡ-һаҙағын алып һунарға йөрөнө. Мәргәнлектә алдына кеше сығарманы. Кистәрен туйға йәки ҡалымға киткән кешеләрҙең өйөнә йыйылған йәштәр менән уйнаны, көлдө.

һөйгәне Көләйшә менән һөйләшеп күңел асты. Ҡыш үтеп, яҙ булыу менән ҡояш та, ергә тапҡыр ҡарап, тауҙың башын асты; камил уйнарлыҡ булып кибеп, йәшел үләндәр моронланы. Миҙгелдең бер тымыҡ көнөндә йәштәр тауға сыҡты. Бикйән менән Көләйшә лә хәҙер кешенән йәшенеп йөрөмәһәләр ҙә, серҙәрен бераүгә лә белдермәйҙәр ине әле. Әбдән уйын ҡыҙғандан* файҙаланып, Бикйән менән Көләйшә ҡуйы бешәлек араһына инеп юғалдылар. Күрешеп һөйләшкәндәренә күп булмаһа ла, ул сағында күкрәктәрендәге һаҡланған иң серле мәсьәләне сисмәгәндәр ине әле. Быға тиклем мәсләктәре* бер булыу сәбәпле, Бикйән күп һөйләшеп торманы, туранан-тура:

— Көләйшә, мәсьәләгә һин ни рәүешле ҡарай торғанһыңдыр, мин ул хаҡта ҡырҡа ҡарарға килдем, — тине.

— Мин һинең был һүҙеңә төшөнә алмайым, алыҫтан әйләндереп кинәйә менән һөйләмә, асыҡ әйт, — тине, ти, Көләйшәһе.

— «Ҡош телен ҡош белә» тигән һүҙ бик дөрөҫ. Икебеҙ ике илдең балаһы булыуға ҡарамаҫтан, бер-беребеҙҙе оҡшатыштыҡ, арабыҙҙағы булған хәлде күрше-тирә, шулай уҡ бөтә ауыл белә. Был хаҡта әсәң дә хәбәрһеҙ түгел. Раҫ булһа, икебеҙҙе йоплаштырыуҙы үҙе үк теләй. Йә, туй көнөн ҡасанға тибеҙ, улар беҙҙән яуап көтә икән.

— Бөгөнгә.

— Көлмә, Көләйшә, ысынлап яуап бир.

— Һинеңсә, ҡасанға булһын һуң?

— Мин бер ваҡыт әйткәйнем бит инде.

— Мин дә әйтеп торам да баһа.

— Һин йәнә уйынға һабыштыраһың.

— Ярар, һин әйткән көн булһын туйыбыҙ.

— Тимәк, ағастар япраҡ ярып, ер ябып, шаңҡытып кәкүк ҡысҡырған саҡта, беҙҙең туйыбыҙ була! Бары ла яҡшы, тик бына атаңдың ни фекерҙә икәнен белгән юҡ. Кеше һүҙе раҫ була торған булһа, ул һине икенсе бераүгә бирмәксе икән?

— Ул һүҙ раҫ: кисә яусылар килде. Атам мине уға биргән. Тик туй көнөн генә айырып билдәләмәгәндәр.

— Һин шуға ризамы?

— Юҡ.

— Әсәң?

— Ул да риза түгел.

— Инде нимә эшләйбеҙ?

— Икәүләп ҡасабыҙ.

— Бир ҡулыңды, Көләйшә!.. Ярар, ҡасырбыҙ, мәгәр беркеткән вәғәҙәне боҙма, — тип, Бикйән ҡыҙҙы ҡосағына алды. Шунан икеһе ике яҡтан килеп, уйынға ҡушылдылар, уйнай башланылар.

Ағастар япраҡ ярып, кәкүктәр ҡысҡырған саҡта, Көләйшәнең атаһы Ҡоҙаш ҡарт, никах көнөн билдәләп, туйға ҡоҙалар саҡырған. Кейәү килер көн кис менән Көләйшә көйәнтәләп йылға буйына һыуға төшә. Һыу алып тормай, күнәктәрен ултыртып, көйәнтәһен ергә ташлай ҙа аръяҡҡа туғай араһына инеп китә. Ул аҡланға барып сыҡҡанда, Бикйән эйәрҙең айыл тартҡыларын ныҒытып тора ине. Килеү менән: «Йә, тиҙ бул. Күҙ бәйләнгәнсе бер талай юл алайыҡ», — тип, Көләйшә Бикйән ҡулынан теҙгенде ала. Һикереп атҡа менәләр ҙә Бикйәндәр иленә ҡарап сабалар былар.

Ҡасҡан көн төнө буйы китәләр. Гел сабып барғас, аттар ҙа талыға, үҙҙәре лә йонсой. Таш баҙырлап, баш түбән аҡҡан йылғаның бер туғайына инеп китеп, аттан төшәләр. Шарлап аҡҡан һыу тауышы бик көслө. Хатта эргәндәге кешенең дә тауышы ишетелерлек түгел. Шул сәбәпле аттар бышҡырһа ла ишетелмәүҙе уйлап, ошонда ат ашатырға, ял итергә булалар. Эйәрҙәрен алып, сергеләрен түшәйҙәр ҙә, бер аҙ серем итергә яталар.

Былар уянып, бит-күҙен йыуған саҡта, ҡояш ағас башына күтәрелгәйне инде. Бикйән менән Көләйшә аттарын менеп алалар ҙа, йәнә юлға сығалар. Ҡояш байып барғанда, ауылға яҡынлашалар. Аттар кешенеке булыу сәбәпле, эйәрҙәрен алып, йүгәндәрен һыпыралар ҙа кире ҡайтарып ебәрәләр. Күҙ бәйләнеп, маҙы ҡапҡан мәлдә*, Бикйән менән Көләйшә өйгә килеп инәләр. Был саҡ Ҡәнәфиә ҡарт, әле генә донъя ҡуйған Кейекбай ҡарттың битенә аҡ сепрәк ябып, урынына ултыра ине. Ишек асылғанға әйләнеп ҡараһа — Бикйән тора. Тороп, ҡаршы барып, ҡосаҡлап һөйә, ата-әсәһенең хәлен һөйләй.

Бикйәндең ҡатын алып ҡайтҡанын белгәс, йәш киленде Ҡәнәфиә мәйет бар өйгә һалаһы килмәгән, үҙенә ебәргән. Ҡәләмфер әбей ҙә Көләйшәне яҡшылап ҡаршы алған, һәйбәтләп хөрмәтләгән. Шулай итеп, Бикйән атаһын ерләгән дә ҡоро өйгә хужа булып ҡалған.

Эйе, «өйө бейек — өйрәһе һыйыҡ», тигәндәй, өй булыу менәнме ни, кәртәлә ҡолаҡ ҡыбырлатҡандай мал, ашар-эсергә ризыҡ булмағас! Нисек итһә шулай, атаһы мәрхүмдең етеһен үткәрә лә, ҡатынынан ҡасып булһа ла, бер аҙ эшләү өсөн, бер байҙан, ҡазалап һуйып ҡаҡлаған итен, ярты көжнә ярсыҡ ҡоротон алып ҡайта. Ҡушымтаға бүтән нәмә булмағас, был ит менән ҡорот оҙаҡҡа бармай, бөтә.

Ҡатыны менән икәүләп ялсылыҡта ла йөрөп ҡарайҙар. Мәгәр мандый алмайҙар. Сөнки ял хаҡын бирмәй интектерәләр. Бәғзеһе, эш хаҡын бирмәҫ өсөн, ял көнө тулыуға яҡынлашҡас: «Шуны еткермәй эшләгәнһең, быны былай итмәгәнһең, боҙғанһың, һындырғанһың, эшкә булдыҡһыҙ, фәлән дә төгән», — тип һөйләнгән булып, бер нәмә бирмәйенсә ҡыуып сығара. Шул сәбәпле, былдай ғәҙелһеҙлектән зарланып, нимә эшләргә белмәй ҡаңғырған Бикйән ял хаҡын бирмәгән байҙың өҫтөнән ҡазыйға барып ошаҡлағайны, ҡазый уға: «Кит бынан, юҡ менән булып йөрөмә. Үҙ ялҡаулығыңды белмәйһең, тирәяҡта дан тотҡан кеше өҫтөнән ошаҡ бирәһең. Уларҙың һөйләүенә ҡарағанда, һинең өҫтөңә сыға икән әле, шуны юлламағаны өсөн, күп рәхмәт әйт», — тип әрләп ҡайтарған. Ни хәл итһен, бахыр, быларҙан да бойомға ашҡандай ярҙам булмағас, башына һуҡҡан кеүек сығып киткән дә, өйөнә ҡайтып, инеп илай биргән. Бүтәнсә нимә эшләһен. Ҡайғыһын тик Көләйшәһе менән генә уртаҡлашҡан.

## 3. Бикйәндең йәнә яфа эсендә ҡалғаны

Унһыҙ ҙа толҡаһыҙ тормошҡа йәнә аслыҡ килеп ҡушылғас, Бикйән ярҙам һорап, ағаһына барып ҡараған. Уныһы ярҙам итеү түгел, ойотҡан* эсереп, тамағын да туйҙырып сығармаған. Юҡлыҡтың әсеһен татыған Бикйән, аҙаҡ килеп, ата кәсебе һунарға тотонмаҡ булған. Мәгәр, эҙләп табып, ҡараһа, ҡалъянда* бер бөртөк һаҙаҡ*

ҡалмаған. Һатып алыр ине, хәл юҡ. Янын тотоп ҡарап ултырған да, тәрән уйға батҡан. Ниндәй йәнлек, нисә йәнлек тиреһе һораһалар ҙа биреп алыу ниәте менән урамға сыҡҡан. Ҡапҡа төбөндә тороп кемгә барыу хаҡында уйланған.

Ахырҙа Йәреш ҡартҡа ҡарап атланы, өйгә инеп бер аҙ хәл-әхүәл һорашып ултырҙы ла, һаҙаҡ һорай килгәнен әйтте. Йәреш ҡарт уның һорауын кире ҡаҡманы, бер ҡалъян һаҙаҡ бирергә булды. Мәгәр биргәндә лә, Бикйәндең атаһының ауыҙ-моронон ҡалдырмай хурлап: «Һаҙаҡты биреүен бирәм, мәгәр буш түгел. Әгәр ҙә бер ҡара төлкө, бер ҡама, бер ҡондоҙ бирһәң, алаһың; бирмәһәң, ана тора юлың!» — тип шарт ҡуйҙы. Һаҙаҡтар араһында эшкә ярамаҫтайҙары күп булыуға ҡарамаҫтан, сараһыҙҙан алырға риза булды. Ҡулына ҡалъянды алғанда Бикйән атҡа менгәндәй булып ҡыуанды. Өйөнә ҡайтып, сәп яһаны ла һаҙаҡтарҙың йөрөшөн һынап ҡараны.

Көндөң бер тымығында янын, ҡалъяны менән һаҙағын алып һунарға китте. Ул көндө уға күп йөрөргә лә тура килмәне, бер ҡондоҙ, бер ҡама, өс ҡара төлкө алып ҡайтты. Бер сығыуҙа биш баш йән аҙ түгел, ул күптәргә эләкмәй. Бикйәндең йәнлек күтәреп ҡайтып килгәнен күргән бәғзе бер һунарсы көнләшеп:

— Атаһы бахырҙай булып, бик мәргән булмаҡсы икән был. Былай булһа, беҙгә көн күрһәтәсәк түгел икән, һәптән! Быға бер әмәл итергә кәрәк, — тип, кенә тотоп, яман уй тупланы. Киң күңелле ил ҡарттары:

— Һай, ярыҡтыҡ*, ата юлын ҡыуа бит. Мәрҙәс* егеткә! Тора-бара һунарсыларҙың мәргәне буласаҡ был. Бының ҡулына һаҙаҡ бир ҙә, аҫтына ат бир. Арьяғын үҙе беләсәк.

— Әйҙә, атаң данын бәреүгә лә бирмә, һөйгән эшеңә ныҡлап ең һыҙған. Әгәр ҙә уҡ-һаҙағың булмаһа, үҙемә бар. Һис бер хаҡһыҙ-ялһыҙ бирермен, — тип, ағымлы һүҙҙәр менән ҡыуандырҙылар. Ә Йәреш, Бикйәндән көнсөллөгө килеп, ҡомһоҙлоғо артып, һаҙаҡ биргәндә, һорағанынан арттырып һорай башланы. Кеше көнөндә булғас, ни әмәл итһен, сараһыҙҙан аптыраны. Бирмәҫ ине, һаҙаҡтарҙы кире һорай, ә иртән йәнә барырға кәрәк, һунары матур. Ыҡ-мыҡ итеп торманы, бирҙе.

Бикйән өйөнә ҡайтып, ҡатыны күжә өйрәһе* бешергәнсе, йәнлектәрҙең тиреләрен һуйып алып, киргегә керҙе. Тамаҡ туйҙырғандың һуңында йоҡларға яттылар.

Йоҡо ни ул һис бер ҡайғыһы юҡ, тормошо иркен, күңеле тыныс, кешеләр менән дуҫ. Ә, Бикйән кеүек, һулау* һайын ут йотоп йөрөгәндәргә дуҫ түгел. Бикйән йоҡлай алмайынса, күп нәмәләр хаҡында уйланды, мәгәр береһенең дә осона барып сығырҙай булманы. Ғәҙелһеҙ илде ташлап ситкә олағыр ине, ят бауырға һыймаҫтай тойолдо. Шулай итеп, тормоштан зарланап ята торғас, таң да беленде. Тороп кейенеп бысағын ҡайраны, кисә ҡалған күжәне урындыҡ ҡаҙнаһына сүкәйеп ултырып эсте лә, йәнә һунарға сығып китте. Был юлы ул тиклем күп алмаһа ла, ике төлкө, бер һеләүһен, ике ҡондоҙ һәм, һорҡон* менән бәреп, өс һуйыр алды. Бикйән бөгөн бигерәк тә шат. Ни өсөн тиһәң, — бешереп ашарға һуйырҙар бар.

Ҡомһоҙ булһаң, оят кәрәкмәй бит ул. Йәреш ҡарт Бикйәндең ҡайтып килгәнен күрҙе лә, ҡаршыһына сығып, урам уртаһында туҡтатты. Туймаҫ күҙҙәре менән темеҫкенеп, йәнлектәрҙең ҡайныһын алыу хаҡында уйланды. Һуйырҙы күреү менән ауыҙын шапылдатып, тамшанып ҡуйҙы, хәйләләй башланы.

— Ҡустым, мин һиңә был һаҙаҡтарҙы абайламай яңылыш биргәнмен, быларҙы хәҙер кире алырға тура килә, үҙемә кәрәк, — тип, Бикйәндең арҡаһына үрелде, ҡалъяндан һаҙаҡтарҙы һурып алды. Бикйән быға иғтибар итмәне, китмәксе булды. Йәреш ҡулындағы һаҙаҡтарға ҡарап торҙо ла, бөгөн йәнлек эләкмәгәнгә ғәрләнеп, өйләнергә тотондо:

— Бүтән һаҙаҡтар ҡайҙа, тыума? — тип, урам ярып ҡысҡырҙы. Бикйән әйләнеп Йәрештең күҙенә тилмереп ҡарап:

— Юғалттым, ағай, атҡан ерҙе эҙләп ҡараным, таба алманым. Үпкәләмә инде, ҡасан булһа ла бер ризалармын әле, — тине. Мәгәр Йәреш, шарт буйынса, һаҙаҡ хаҡын бер генә тапҡыр алырға тейешле булһа ла, ҡомһоҙлоғон баҫа алмайынса:

— Һаҙаҡтарҙың әжерен бир! — тип ҡондоҙ менән ике һуйырға барып йәбеште. Ни хәл итһен, әҙәм дуңғыҙы менән һөйләшеүе, уртаҡ тел табыуы үлемдән дә ҡыйын. Бикйән Мәргән, ҡондоҙ менән ике һуйырҙы ергә ырғытып ташланы ла:

— Һөс, алабай! — тип, китеп тә барҙы.

Бикйән өйөнә ҡайтып ингәндә, Көләйшә кисәге йәнлек тиреләрен алыҫтан килгән тире йыйыусыға биреп, он, ярма һәм шуның һымаҡ нәмәләр алып тора ине. Тире йыйыусы Бикйәндең бөгөн йәнә хәтһеҙ йәнлек алып ҡайтҡанын күреп, үтә мәргән икәнен белде. Киләсәктә йәнлекте бүтән кешегә бирмәүен һораны, үҙе нәмәне күп бирәсәген, тотасаҡ йәнлектәренә хатта алдан биреп китәсәген әйтте, бынан түбән күберәк ҡара төлкө тоторға ҡушты. Бөгөн Бикйән дә, Көләйшә лә көр күңелле. Сөнки ит тә, һалмалыҡ он да бар. Был төндө улар иң бәхетле төндәре итеп үткәрҙеләр.

Һаҙаҡ юҡ, уларҙың барын да Йәреш алып ҡалды. Шул сәбәпле Бикйән бөгөн һунарға сыға алманы. Көләйшә тороп аяғына кейеп бит-күҙен йыуҙы ла, ике-өс өй аша торған бер сирле ҡатындың һыйырын һауып ул-былын ҡарарға китте. Ул киткәндә, Бикйән йоҡлап ятып ҡалды. Ысын әсе йоҡоһонда әлеге Йәреш Бикйәндең йәнлек тиреһе биреп аҙ-маҙ нәмә алғанын ишеткән дә килгән. Бикйәндең йоҡлап ятҡанын белгәс, нәмәләрҙе эҙләү өсөн соланға сығам тип ишек асҡан да, алдыр менән һөт алып ҡайтып килгән Көләйшәнең һөтөн түктерҙе. Һөт түгелеү Йәреш өсөн бер нәмә тиклем булмаһа, Көләйшә өсөн ҙур юғалтыу ине. Көләйшә артынан Йәреш тә өйгә инде, Бикйән дә тороп ултырҙы. Он һәм ярмаларҙы былай алып сығып китеүҙе ип күрмәне, Бикйәнде аяған кеше булған булып:

— Һин теге ҡартҡа бик күп нәмә биргәнһең икән, ул һиңә ондо ла, ярманы ла кәм биргән, ҡана үлсәп ҡарайыҡ әле. Килен, алып ин әле, — тине. Бының хәйләһен белмәгән Көләйшә бер нәмә лә уйламаны, алып инде. Йәреш үлсәп ҡараған булды ла. — Шулай шул, бик кәм биргән. Ярар, быларҙы алып барып үҙенә күрһәтәйем. Әйҙә, килен,

минең менән, — тип нәмәләрҙе күтәреп сыға башланы. Артынан эйәр мәк булып Көләйшә лә аяҡ атлаған ине, Бикйән уға:

— Йөрөмә, уның артынан ике аяғыңдың берен тә атлама, — тип тыйҙы.

Бикйән Көләйшә сығып китеү менән, Йәрештең был ҡылығы тураһында кәңәш һорау өсөн, Ҡәнәфейә ҡартҡа киткән ине. Ҡәнәфейә ҡартҡа бөтә булған эште күҙ йәшен түгә-түгә һөйләп бирҙе. Иғтибар менән тыңлап ултырған Ҡәнәфейә ҡарт Бикйәнгә ҡымыҙ эсерҙе, яғымлы һүҙҙәр һөйләп күңелен тынысландырҙы. Шуның менән бергә тиҙҙән үҙ йомошо менән бейгә китәсәген, уға был хәлдәрҙең барын да һөйләп бирәсәген әйтте. Былар шулай итеп һөйләшеп ултырған саҡта, Көләйшә лә ҡайтып бара ине. Бикйән уны күреп ҡалды ла саҡырып индереп эште һораша башланы. Көләйшә уларға Йәрештең һүҙҙәрен түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе. Ҡәнәфейә ҡарт уға:

— Килен, һүҙең раҫмы? Һүҙеңә эйә булып һөйлә. Дөрөҫ булһа, мин хәҙер үк бейгә китәм, Йәрештең был ата-әсәһеҙ һүҙе өсөн бер таҡтаға баҫтырасаҡмын! — тине. Көләйшә йәнә ҡабатлап:

— Раҫ! — тигәс, улын ат егергә сығарҙы. Урындыҡтан төшөп ишек төбөндә элеүле торған бер ҡалъянды алып Бикйәнгә һондо. Бикйәндең арҡаһынан һөйөп:

— Ярар, балам, Йәреш һинән көлә икән, көлә бирһен. Көлгән көлә китәр, артынан һөрә етәр, ти.

Ярлы ла ярлы, тимәгеҙ,
Ярлыларҙан көлмәгеҙ,
Ҡолонсаҡтай бай балаһы
Ярлы ла булмаҫ, тимәгеҙ,
Ҡыу таяҡҡа таянған
Ул мал көтмәҫ тимәгеҙ,
Ҡара ҡаҙандан һыу эскән
Ул мал көтмәҫ тимәгеҙ, —

тип, әҙәм балаһын йәберләүселәргә ҡәһәрләнде лә, сығып, атына ултырып бейгә китте. Байғоштай эйәртенешеп Бикйән менән Көләйшә лә өйөнә ҡайтты.

Ҡәнәфейә ҡарт бейҙең ауылына барып етеп, күптәнге бер танышына төшөп атын туғарып бәйләне лә өйгә инеп иҫәнлек-һаулыҡ һорашты. Бейҙең мәжлесе бар икәне хаҡта ишетеү менән байғы һатып* ултырманы, бейгә китте. Ҡәнәфейә ҡарт ингәндә, бей төрлө яҡтан килгән ил ҡарттары менән һәр төрлө эш хаҡында һөйләшеп ултыра ине. Бөтәһе лә үҙ илдәрендәге хәлдәр менән бейҙе таныштырып бөткәс, Ҡәнәфейә ҡарт һүҙ һөйләргә изен алды*. Бикйән Мәргәндең башынан үткәндәрен алып, Йәрештең бейҙән алған ярлығы менән халыҡты ҡыҫҡан хәлдәрен һөйләп һүҙен тамамланы. Был эштәрҙе Ҡәнәфейә ҡарттан ғына ишеткәне өсөн бей ни эшләргә белмәй аптыраны, алъяны, Йәреш ҡартҡа ундай ярлыҡ биреү түгел, ул хаҡта уйлай ҙа алмағанын белдерҙе һәм Ҡәнәфейә ҡартҡа:

— Ҡәнәфейә уҙаман, һүҙең раҫмы, уҫләшеү менән генә әйтелгән һүҙ булмаһын, — тине. Ҡәнәфейә ҡарт аяғына баҫты ла һаҡалын тотомлап:

— Билемә еткән һаҡалым, ҡылғандай аҡ сәсем менән ошаҡ һөйләп ултырырға мин сабый түгел. Йәреш менән минең уртаҡ малым юҡ. Уҫләшеү түгел, бейем, хағы шул. Был һүҙҙе мин генә әйтмәйем, ил халҡы әйтә. Эште уңдырһаң да һин, һүндерһәң дә һин, форсат үҙеңдә. Минең бүтәнсә һүҙем юҡ, — тине лә урынына ултырҙы, ҡуйынынан яулығын алып маңлайындағы тирен һөрттө, елпенде. Бей һәм ил ҡарттары ни ҡиәфәттә ултырғандарын белеү өсөн бармаҡ араһынан бөтәһенә лә күҙен йөрөтөп сыҡты. Бейҙең тәрән уйға батҡанын күргәс:

— Шулай, түрәм, эш матурҙан түгел. Был йүгәнһеҙҙәргә бер сик ҡуйырға кәрәк, — тип өҫтәне. Бей башын ҡалҡытып бөтәһенә лә ҡарап:

— Ярар, ғәрезегеҙҙе* ҡабул итәм, иртән был тәртипһеҙлектәрҙе бөтөрөү хаҡында ярдыҡ алырһығыҙ, ҡайтыу менән илдән илгә йөрөп йәүкәләрһегеҙ. Бөгөн миндә ҡунаҡ булығыҙ, иртән ҡайтырһығыҙ, — тип ҡарттарҙы ҡунаҡ итә, һыйлай башланы.

## Ҡәнәфейә ҡарт үҙенә абруй, халыҡҡа ҡыуаныс алып ҡайтты.

Ҡәнәфейә ҡарт ҡайтҡанды Бикйән белмәне. Ҡалъян тулы һаҙаҡ булһа ла, Йәрештең анау ҡылығынан* ҡасып, «ас тамағым, тыныс ҡолағым», тип һунарға бармайынса өйөндә ята бирҙе. Мәгәр көс түкмәйенсә килгән малдың тәмен татыған Йәреш, Бикйәндең өс-дүрт көн буйы күренмәгәненә аптырап, «әллә, булмаһа, был икенсе яҡта һунарсылыҡ итәме икән», тип бер нисә тапҡыр Бикйәндең өйө тирәһендә әйләнде. Бикйән өйҙә һәрпәндәгәс, ҡулға мал төшмәүҙән асыуланып, ҡайтып китте. Ҡәнәфейә ҡарт ҡайтҡанда көн нәҡ төш ваҡыты ине. Санаһынан төшөү менән, бер балаһын йүгертеп, ике урамдан ике ярсыны саҡыртып алды ла, бейҙең әмерен йәүкәләү өсөн урам һайын яр ҡысҡырырға* ҡушты. Ярсылар өйҙәренә ҡайтып тамаҡ туйҙырып, маҙы ҡабыу менән*, халыҡтың да киске тамаҡҡа ултырыуын көттөләр. Бөтә халыҡ ашарға ултырған саҡта ярсылар, ауылдың осонан-осона йөрөп, тош-тош ерҙә туҡтап:

Вайһәләү, ай, вайһәләү!
Ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ,
Ишетмәгән ишетһен,
Белмәгәндәр белһен
Алда буласаҡ ғибрәтте
Күрмәгәндәр күрһен.
Уҫалдар көйөнһөн,
Илағандар һөйөнһөн.
Уҡ-һаҙағын ҡулына алып
Һунар кейемен кейенһен.

Илебеҙҙең бейе
Ҡотло булһын өйө,
Шат булһын көнө,
Оҙон булһын ғүмере.
Ил ялпыһын* яҡланы,
Ләүәземен* аҡланы,
Уҫалдарҙан йыуаштарҙы
Талатыуҙан һаҡланы.

Йәреш ҡарттай ҡомһоҙҙар
Боҙоҡ юлды ҡараны,
Көнө-төнө йыртҡысланып
Төрлө яҡтан таланы.

Мин ҡысҡырам һеҙгә яр —
Бөгөн бейҙән әмер бар,
Бер кемгә лә тотҡары юҡ,
Ихтыярлы — ау, һунар.
Уҡ-һаҙағын алығыҙ,
Ялан яҡҡа барығыҙ,
Һылыу ҡыҙҙай ҡыр кейеген
Һайлап-һайлап атығыҙ.

Бераүҙән дә ҡурҡмағыҙ,
Йәреш ҡарттан өркмәгеҙ,
Бөгөндән һуң берегеҙ ҙә
Ауыр яфа сикмәгеҙ.

Йәреш ҡартты ҡулға алырға
Әмер биргән түрәбеҙ,
Өйөнә инеп бәйләү өсөн,
Һеҙ ярҙамға килегеҙ, ааау, —

тип һүҙҙәрен бөтөрҙөләр.

«Вайһәләү, ай, вайһәләү», тип ярсылар яр ҡысҡыра башлаған саҡта ашағандар — ашауынан, йоҡларға ятҡандар — йоҡоһонан уянып ҡолаҡтарын ҡырпайтты, ентекләп тыңланы.

Йәреш ҡарт Бикйәндән талап алған йәнлек тиреләрен әйләндереп-әйләндереп маҡтап ҡарай ине. Башта бейҙе маҡтаған һүҙҙәрҙе ишеткән саҡта ярға ҡолаҡ һалманы, йәнә талау эше хаҡында хыялланды. Ярсы уның өйө тапҡырына туҡтап: «Йәреш ҡарт, һунарсыны таланы», — тип һуңғы һүҙҙәрен әйткәнде ишетеү менән, ҡулындағы йәнлек тиреһе — иҙәнгә, үҙе быуындары шаушап, бауһыҙ (кеүек булып) лап итеп, урындыҡҡа ултыра төштө.

Ҡәнәфейә ҡарттың ҡайтыуын дүрт күҙләп көтөп торған Бикйән «ишетмәгән ишетһен, күрмәгән күрһен», тигән яғымлы һүҙҙәрҙе ишетеү менән, ғәйрәтләнде, таш баҫырлап аҡҡан йылғалай булып, бере артынан бере тынып торған ярҙы бик ихлас тыңланы. Ярсының һүҙе гел Йәреш ҡартты тай типтереү, халыҡты яҡлау хаҡында барғанды ишеткәс, сыҙай алманы, ашап ултырған ойотҡанын ташлап, атылып урамға сыҡты. Ярсы алыҫ киткән ине. Көндөң һыуыҡ булыуына ҡарамайынса, һүҙҙе асыҡ ишетеү өсөн, ҡолаҡсынын ҡулына алды. Ярсының:

«Йәреш ҡарттан өркмәгеҙ,
Берҙәмлектән сикмәгеҙ —
Берҙәм булһаҡ барыбыҙ,
Унан яфа сикмәбеҙ.
Йәреш ҡартҡа киләйек,
Күмәкләшеп еңәйек,
Арт һабағын уҡытып,
Аяҡ-ҡулын бәйләйек!»

тигән иң һуңғы һүҙҙәрҙе ишетеү менән соланға инеп, атаһы мәрхүмдең туйра суҡмарын алды. Йәреш ҡарт тапҡырында һөйләшеп торған ярсылар эргәһенә китте. Ярсылар ҙа эште эҫе мәлендә эшләү өсөн Йәреш ҡартҡа инеп киттеләр.

Былар инеүгә Йәреш һиҫкәнеп урынынан торҙо. Ҡурҡытмаҡ булып быларға баҡырырға уйлаған ине, Бикйәнде күреп, туҡтаны.

Ярсылар уға уны ҡулға алыу хаҡында бей әмере бар икәнде әйтеп, ҡулын артҡа ҡуйып һырт биреп торорға бойорҙолар. Йәреш ҡарышып тора алманы, буйһонды. Ишек төбөндәге сөйҙә элеүле торған ҡыл муйынсаҡты алып Бикйән бик ҡаты итеп беркетеп бәйләне. Эште бөтөрөп урамға сыҡтылар, Йәреште алып барып бер буш өйгә бикләнеләр. Шулай итеп, иртәгеһенә Йәреште бейгә лә оҙаттылар.

Бикйән Мәргән менән бүтән һунарсылар иркенләп һунар йөрөй башланылар.

## 26. СУРА БАТЫР

Борон нуғай хандары заманында Нарыҡбай исемле бик бай бей булған. Сығышы менән үҙе Ҡырымдан, нуғайлылар аҫыл затынан икән. Өйөр-өйөр малдары, йылҡылары, ҡуйҙары яландарҙы ҡаплап йөрөр, һутлынан-һутлы йәйләү ерҙәргә күсер булған, ти. Ҡырым ханы, был маллы, абруйлы Нарыҡ бейҙе үҙенә тағы нығыраҡ яҡынайтыр өсөн, сибәрҙәрҙән сибәр Миңһылыу исемле бер ҡыҙҙы димләп өйләндерешкән, баш ҡоҙа ла булып киткән, ти. Туйҙа Миңһылыуҙы ынйы биҙәкле ебәк кейемдәргә кейендергәс, уның ханбикәләрҙән дә һылыу икәнен күреп, хан үҙе ғашиҡ булған, ти. Бейгә түгел, минең үҙемә лайыҡ икән, тигән ти эсенән генә.

Туйын шаулатып үткәргән, бейен дәрәжәле иткән, һылыу бейбикә тапҡан, хуш, Нарыҡбай бейҙе нарыҡ хеҙмәткә ҡушырға ваҡыт. Мәскәү кенәзлегенә башта үҙен генә илсе итеп ебәрергә күндерә быны хан. Нишләһен инде бей, хан фарманы менән ризалашып, быны йәш кәләшенә ҡайтып һөйләй. Аптырап шиккә төшә Миңһылыу: шәрбәт айҙары үткәнен дә көтмәй, бейен бейбикәһенән айырмаҡта ни хикмәт? Хандың — фарманы, ҡатын кешенең — хәйләһе. Миңһылыу хан ярандары менән бей ирен илсе итеп оҙатышып ебәргән кеше була ла, йәшерен рәүештә кире ҡайтарып, өйөнә йәшерә.

Икенсе көндөң төнөндә үк Миңһылыу бейбикәнең ишеген шаҡыйҙар. Кем булһын — хандары, бейбикәнең асмай сараһы юҡ. Аса. Хандары яһанып-биҙәнеп килгән, затлы бүләктәр килтергән.

— Эй, Миңһылыу, һин бейбикә түгел, ханбикә булырға лайыҡ, — ти хан.

— Ханым, тәҡсир, үҙең баш ҡоҙа булып бейбикә иттең, мин үҙ бейемде ташламам вә хыянат итмәм! — ти Миңһылыу.

— Нарыҡ бейеңдән ваз кис, уның башы хәҙер ҡайтмаҫ ергә олаҡтырылды, — ти хан.

— Алланы уйла, ханым, Хоҙай язаһынан ҡурҡ!

— Хоҙаның мин ерҙәге наибы*, гонаһ булһа, ярлыҡауы ла үҙемдә. Яратам үҙеңде, һис юғы яриәм бул!

— Улайһа, бер һүҙемде тыңла.

— Һөйлә һүҙеңде, һылыуым.

— Януарҙар батшаһы арыҫлан бар, — тип башлаған һүҙен Миңһылыу. — Уға көн һайын йәш януарҙы ашарға биреп торғандар. Бер көндө әллә яңылышып, әллә һынамаҡ өсөн хеҙмәтселәре арыҫ-

ланға бүре яралаған ҡолондо кереткәндәр. Арыҫлан уны һоғоноуҙан баш тартҡан: «Бүре бүлтереген арыҫлан ейməҫ», — тигән.

Миңһылыуҙың тел төбөн тиҙ төшөнгән, әлбиттә, хан. Ләкин нәфсеһен тыя алмайынса, «ханмы, бейме, әлегә барыбер, мин ир кеше», тип, бейбикәгә йомолған хан көсләмәк булып. Шул саҡ йәшеренгән урынынан Нарыҡ бей килеп сыҡҡан да ярһыуынан бер һелтәүҙә ханды ҡылысы менән сабып үлтергән.

Ханын үлтергән Нарыҡ бейгә хәҙер бар мөлкәтен, байлығын, тыуған ерен ташлап Миңһылыуы менән бергә ҡасып китеүҙән башҡа сара ҡалмаған. Улар шул уҡ төндө юлға иң кәрәк-ярағын, аҙыҡ-түлеген төйнәп, йорт-ерҙәренән ҡасып сығып киткәндәр. Ҡырым яландарынан Тын* далаларына килеп сыҡҡандар, Иҙел һыуҙарын кискәндәр, Яйыҡ буйҙарынаса еткәндәр.

Шунда Миңһылыу бер төш күргән, төшөн Нарығына һөйләп биргән.

— Төшөмдә аяғымдың араһынан бер ут сыҡты, — тигән ул. — Уттың бер осо ерҙә, икенсе осо күккә олғашты. Йыйылып киткән кешеләр төрлө нәмәләр менән һуғып ҡаранылар, һыу һиптеләр — ут тамсы ла һүрелмәне. Ҡапыл ҡара ямғыр сығып, яуып үткәйне — ут һүнеп ҡалды. Быны нимәгә юрайһың, бейем? — тине. Ләкин Нарыҡ ҡасҡы бей бер нигә юрай алманы, тик шомланыбыраҡ ҡалды.

— Мин үҙем улым тыуырына юрайым, — тине Миңһылыу. — Тик улымдың үлеме һыуҙан булыр тип ҡурҡам.

Шулай ҡасаҡ юлсылар юлдарын нисә айҙар дауам итә-итә Урал тауҙарына етә. Миңһылыу тарпан итен көҫәй башланы. Нарыҡбай бер тарпанды уҡ менән атып, ҡороҡ менән тотоп көҫәгән итен ашатты. Оҙаҡламай Миңһылыуҙы тулғағы тоторға кереште. Үҙе ыҙалана-яфалана, ә аптырап ҡалған иренә ояла-ояла ситләтеп һүҙ менән шуны тулғаны:

Иҙел башы — Ирәмәлтау,
Яйыҡ башы — Ялпаҡтау,
Турат башы — Аҡ сатырт
Аҡ сатырҙа ни ятыр:
Яйыҡ һыуы яй ағыр,
Яй аҡһа ла һал ағыр.
Һалы ни арҡыры тормағайы,
Кеше һуң туры бормағаны, аһ...
Бейгенәм, һин, бейгенәм,
Үҙең булышсы бейбикәңә!..

Нарыҡтың һаман аҙап торғанын күргәс, Миңһылыу ҡаты тулғағынан ыңғырашып тағы һамаҡланы, ти:

Эй, бейгенәм, бейгенәм,
Аҙамасы, бейгенәм.
Ханды үҙ ҡулың менән сапҡан
Аҙамасы, батырым!
Аҙамасы, батырым!

Алдыңда мин ятырмын,
Аҙаһаң, таштай ҡатырмын.
Улыңды юғалтырһың,
Үҙемде юғалтырһың.
Үҙеңде ҡулға ал һана,
Улыңды ҡотҡар һана!

Шунан Нарыҡ бей, тиҙ генә тәһәрәт алып, уҡыр доғаларын уҡып, кендек әбейе вазифаһын атҡарырға тотона. Сабыйҙы азат ҡылып, кендеген киҫеп, әсәһе ҡуйынына һала. Тумалаҡтай бала әсәһенең күкрәк һөтөн ҡарһаланып имергә керешә.

Ҡоллоҡтан ҡотолған икәү улдарына Сура тип исем ҡушалар.

Шулай Яйыҡ үренәрәк тау буйҙарына төпләнеп, уллы булып, яңынан донъя көтөп алып китәләр. Ҡабат мал-тыуарға тейенәләр. Иркен йәйләү, ҡышлау ерҙәрендә малдары үрсей, донъялары ҡотая. Башҡорттар үҙен Яйыҡ буйының абруйлы бейе итеп таныйҙар, Миңһылыуҙы һылыуҙарҙан һылыу бейбикә тип йөрөтәләр. Хатта уға бағышлап маҡтау йырҙары сығаралар:

Ирәмәлкәй тауҙың аҡ таштары
Йәмләп ята Урал буйҙарын,
Миңһылыуҡай, кемде ғашиҡ итмәҫ,
Ҡыйғас ҡашың, зифа буйҙарың.

Һылыуҙарҙан һылыу күп Уралда,
Һиндәй һылыуҙарҙы күрмәнек.
Хоҙай һине беҙгә ебәргәндер,
Булһын тиеп фәрештә-күрмәлек.

Сура, ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, батыр егет булып етте, ти. Ете йәшенән атҡа менде, ун йәшенән суҡмар, уҡ-һаҙаҡ тотоп, һунар йөрөй башланы, ти. 13—14 йәшенән ҡылыс тағып яуға сығыр батыр булып китте, ти.

Үҙенә тиң ир-егеттәр менән һунар сыҡһа, аҙна-ун көн йөрөп йөк-йөк ҡош-ҡорт, йәнлек тейәп ҡайтты, ти. Нөгәр* туплап, ил-йорт күреп, күрше батырҙар менән көс һынашып, ярыштар ҡороп та, ил ҡыҙырып ҡайтҡыланы, ти.

Бер саҡ шулай ситтә шаҡтай оҙаҡ ҡына йөрөп ҡайтһа, ҡатайҙарҙың яуыз түрәһе Ғәли бей тамъяндарҙың йорт-ерен баҫып, мал-тыуарын алып, атаһы Нарыҡбайҙы ҡурҡытып, мыҫҡыллап киткән, ти. Нарыҡбай, хәсрәтләнеп улына һамаҡлап шуларҙы һөйләне, ти:

Әй уғылым, әй Сурам,
Үҙем-үҙем үҙ булып,
Исемем Нарыҡ бей булып,
Күпме донъялар күреп,
Мал-тыуарға бай булып,
Дуҫ-иштәргә иш булып,
Былдай хурлыҡ күргәнем

Быға саҡлы һис юҡ ине,
Йорт-ерем бөтөн ине,
Донъялар имен ине.
Уғылым, һин юғында
Яуыз Ғәли бей килде лә
Ҡуйымдан һуғым һуйҙы,
Йылҡымдан аттар тотто.

Ҡарт атаң Нарыҡты
Ҡамсы менән орҙо ла,
Эсәң Миңһылыуға
Күтәрмәс һүҙҙәр әйтте лә
Оло ғауға сығарҙы,
Йортобоҙға яу булды.
Уртаҡ тел тапмаҡ булып,
Һимеҙ ҡуйҙар һуйҙырҙым,
Һыуһынына эсмәгә
Ҡымыҙ, балдар ҡуйҙырҙым.
Һыйым ҡабул ҡылманы,
Бүләгемде алманы,
Аҡырҙы ла баҡырҙы.
Ниәте уның бер булған:
Һарымһаҡтай аҙаулы
Сәхтиәндәй ҡабаҡлы,
Туҫтағандай тояҡлы
Ҡойроҡҡайы ҡыналы,
Ялҡайҙары еләле
Ҡарайғырҙа күҙе икән.
Тартып алды айғырҙы,
Малды ҡотһоҙ ҡалдырҙы.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Сура батыр былай тине:

Арғымағым килтерең,
Ауыҙлыҡлап менәйем.
Аҡ күбәгем килтерең,
Өҫкәйемә кейәйем.
Ҡушағымды* килтерең.
Билкәйемә урайым,
Йәһәт барып тотмаға
Арттарынан ҡыуайым.
Ҡыуып барып етәйем,
Пыран-зыран итәйем,
Күҙ ҡарабыҙ ҡарайғырҙы
Тартып алып ҡайтайым.
Был әйткәнсә итмәһәм,
Мораҙыма етмәһәм.
Нарыҡ улы Сура тигән
Исемемә тормайым.

Сура батыр, шулай итеп, атына менеп, тиҙҙән Ғәли бейҙе ҡыуып еткәс, былай тигән:

Эссәләмәғәләйкүм,
Күрше түрә Ғәли бей,
Ҡарайғырҙың башына
Нисек етте нуҡтағыҙ,
Аңлашайыҡ, туҡтағыҙ!
Күрше түрә Ғәли бей,
Арғымаҡҡа менгән бей.
Атам булған Нарыҡтың
Тирмәһенә инмәнең.
Һонған ҡымыҙын эсмәнең,
Ҡуйған һыйын еймәнең,
Ат өҫтөнән аҡырып,
Арғымаҡ талап иткән бей.
Ҡарайғыр нәҫел атымды
Тартып алып менгән бей.
Бей уғылы мин һиңә
Ел етмәҫен бирәйем,
Көс етмәҫен бирәйем.
Янындағы был көндә
Йән һаҡлаусың булайым.
Оло яу сығарғансы,
Әйткән һүҙгә күнһәнә,
Ҡарайғырым бирһәнә!

Сура батырҙың яҡшылыҡ теләүенә Ғәли бей бик әре генә былай ти:

— Мин миндермен, миндермен,
Йән күтәрмәҫ ирҙер мин,
Ҡан ташмалы был көндә
Ҡарайғырҙы бирмәм мин.
Икене биреп, берҙе алмаҡ
Һинең өсөн түгел был.

*Сура батыр:*

Ҡатай түрә Ғәли бей,
Күсәр тауға күскән бей,
Күк һарайға ҡунған бей,
Аҡташта атҡа атланып,
Атам булған Нарыҡҡа
Ҡунаҡлыҡҡа төшкән бей.
Ҡамсыңды орған бей,
Ҡылысыңды һуҙған бей,
Миңһылыу атлы әсәмә
Күкрәк күтәрмәҫ һүҙ әйткән.
Һеңлекәшем Ҡарасәскә
Тимерҙән һыуыҡ һүҙ әйткән бей.
Минең Ҡарайғырымды
Тартып алып менгән бей.
Бей уғылы мин һиңә
Бир тейәмен, бирмәйһең,
Көн теләймен, күнмәйһең.
Бал ағасын ватмайса
Балын ҡалай ашарһың?

*Ғәли бей:*

Күсәр тауға сыҡ, Сура,
Күркеңде һинең күрәйем.
Күк күбәнде* кей, Сура,
Һөнәреңде беләйем.
Күсәрле тауҙан артылма,
Ғәли бейгә ҡағылма,
Күсәрле тауҙан артылһаң,
Ғәли бейгә ҡағылһаң,
Үлгәндә яман үлерһең,
Ҡара ерҙең төбөнә
Күҙ йомалмай үтерһең.

*Сура батыр:*

Аҡташынан Ғәли бей,
Ағын һыуға дәли бей,
Ямантауҙан
Һинең күңелең бейек бей,
Ил эсендә һыйлы бей,
Күптән күңелең тулы бей,
Һаҡлауым минең ныҡлы тип,
Күп маҡтанма, Ғәли бей.
Һаҡлауың һинең һан булһын,
Һан етмәгән көн булһын,
Һин һаҡлауҙан күсерһең,
Ҡарайғырым өҫтөнән төшөрһөң.
Ҡарайғырҙы алырмын,

Ташып барған ҡаныңды
Ҡылысыма буярмын,
Ҡара ҡаның ҡоярмын.

*Ғәли бей:*

Үсең булғас, һин алдан ат, Сура!

*Сура батыр:*

Ҡан көҫәгән Ғәли бей,
Ул сағында мин атһам.
Күңелең үҫеп баралыр,
Һин башлап ат, Ғәли бей!

Ҡаны ташҡан Ғәли бей
Үгеҙ кеүек үкереп,
Һыйыр һымаҡ баҡырып,
Йәйәһен тартып атты, ти.
Эйәренең ҡашынан,
Ашаһының аҫтынан
Уғы зырлап үтте, ти.
Сират еткәс Сураға
Үгеҙ кеүек үкереп,
Һыйыр һымаҡ мөңөрәп,
Уғын киҙегә ҡалды, ти.

Сура батыр киҙәк алышта Ғәли бейҙе үлтереп, Ҡарайғырын үҙ йорттарына алып ҡайтһа ла, был ҡанлы көн уның башында ауыр уйҙар, күңелендә тәрән яралар ҡалдырҙы, ти.

Ҡатай бейе үлгән көн,
Ҡара дауыл килгән көн;
Баштан бүркем төшкән көн,
Күңелемдән бөлгән көн;
Һыныҡ күңел ҡарт атам
Йөҙө ҡарайып ҡатҡан көн;
Ғәрипләнгән ҡарт әсәм
Сәсенә сал ҡунған көн.
Арғымағым, сапсынма.
Ғәйрәтле көндә елермен.
Йәш йөрәгем, тибенмә,
Яҡшы теләк теләрмен.
Ҡылысым, ҡындан күп сыҡма —
Ҡара ташҡа орормон.
Әсәм, артыҡ моңайма,
Тынысыраҡ торормон.
Ҡарасәсем, моңайма,
Ҡауғалы көндәр үтермен.
Йөрәккәйем, көрһөнмә,
Имен көндәр көтөрмөн.

Шулай бик бошоноп йөрөгәндә Сура батыр бер төш күрҙе, ти. Төшөндә Сура батыр Ҡазанда, имеш. Был заман Ҡазан ҡалаһына урыҫ Аҡ батша ғәскәре һөжүм иткән яулы ваҡыттар икән. Сура батыр Ҡазанды һаҡлашырға яуға китергә йыйына. Был хаҡта атаһына былай тип аңлата:

Әй атам, әй атам,
Һаулыҡ теләп ҡал, атам,
Аҡташ бейен үлтерҙек,
Башҡа ҡайғы килтерҙек.
Ҡазан ҡалған ҡазаға:
Ят тейә, ти, маҙаға.
Уны яҡлау кәрәк, тип,
Киттем, атай, йөрәкһеп
Яуға барыр уйым бар.

*Нарыҡбай:*

Бар, бар, улым, бар, улым,
Барғанда, юлың асылһын,
Ҡазан тигән илдәрҙең
Ҡапҡаһы көнәлек асылһын.
Асмалы бишеккә таянған,
Ала таңдан уянған,
Төн йоҡоһон дүрт бүлгән,
Ике имсәгенән һөт биргән.
Миңһылыу атлы әсәңә
Һүҙең әйтеп, кит, балам.

*Сура батыр әсәһенә барып:*

Әй әсәм, әй әсәм,
Һаулыҡ теләп ҡал, әсәм,
Аҡташ бейен үлтерҙек,
Китмәҫ хурлыҡ килтерҙек.
Ҡазан тигән ил бар, тип,
Башты ташлар ер бар, тип,
Шунда юлға сыҡмаҡсым,
Фатиханды бир, әсәм.

*Миңһылыу:*

Бар, бар, балам, бар, балам,
Барғанда, күңелең баҫылһын,
Ҡазан тигән ҡаланың
Ҡапҡалары асылһын.
Иҫән-һау йөрөп ҡайт,
Фатихамды бирәмен.

*Сура батыр ҡатыны янына инеп:*

Әй, әйелем, әйелем*,
Һаулыҡ теләп ҡал, әйелем,
Күрше бейҙе үлтерҙек,
Башҡа бәлә килтерҙек.

Ҡазан тигән ил бар, тип,
Башты ташлар ер бар, тип,
Ҡазан сыға бармаҡсым.

*Ҡатыны:*

Ай ни була көндән һуң,
Көн ни була айҙан һуң,
Батырҙарға ни ҡала,
Илгә яуҙар килгән һуң?
Ала кит, батырым, ала кит,
Ат ялына һала кит.
Алыҫ юлға сығаһың,
Тыуған ерең ҡала бит,
Атаң-әсәң, аялың (ҡатының — *Ә. С.*),
Ҡала бит балаларың.

*Миңһылыу:*

Ирмен тигән ир кеше
Өйҙә ятып ҡалалмаҫ,
Ҡатын, балаларының
Ай-вайына ҡарамаҫ.
Ҡылған эшең хаҡ булһын,
Йөрөгән юлың таҡ булһын,
Хоҙай үҙе һаҡлаһын,
Имен-аман йөрөп ҡайт!

Юл кәрәк-ярағы, ҡоралы-ние менән яһанып, арғымағына атланып алған Сура батырҙы ата-әсәһе, ғаиләһе, бөтә ауыл халҡы оҙатып ҡалған. Икенсе ауылға етеү менән, шишмә юлында силәктәре тулы һыу көйәнтәләгән йәш килен юлына тап булған.

*Йәш килен:*

Арғымаҡҡа атланып,
Уҡ-һаҙаҡтарың алып,
Уҡалы сәкмән кейеп,
Ҡылысың иңгә тағып,
Икенденән үк тороп,
Ниндәй уй-ниәт ҡороп,
Батырым, ҡайҙа юл алдың?

*Сура батыр:*

Сура, Сура, Сурамын,
Түрә түгел, ҡарамын,
Асылымды һораһаң,
Мин тамъяндан буламын.
Ҡазан илен яу баҫҡан,
Шуға таба барамын.

Һәр ауылды үткән һайын, Сура батырға атҡа атланған байтаҡ ир-егеттәр ҡушылған. Уның нөгәре ҙурайғандан-ҙурая барған.

Юлда нисәмә көндәр, аҙналар барғанда, һорашҡан бер кешегә яу-яһаулы Сура батыр һамаҡҡа әйләнгән һүҙҙәрен ҡабатлар булған:

Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазанға китеп барамын.
Мин Ҡазанға барғансы,
Ҡар яумағай, ҡан яуғай,
Мин Ҡазанға барған һуң
Ҡан яумағай, ҡар яуғай.
Ҡанатбайҙың алаты,
Ҡултығында ҡанаты,
Яуҙы күрһә, сәйнәй, ти,
Ҡуй-һарыҡтай әйҙәй, ти,
Ҡуй-һарыҡтай әйҙәй, ти.
Анауыл менән мынауыл,
Ике яғы ҡарауыл,
Буҙ турғайҙай булайым,
Ҡапҡаһына ҡунайым,
Туҙып ятҡан дошмандың
Күҙен соҡоп уҙайым,
Ярҙамың ҡыл, Хоҙайым!
Йортта бармы ир-аты,
Өйҙә бармы ир заты?
Аттар — батыр ҡанаты,
Ир-ат — яуҙың ҡанаты.
Өйҙә ҡала ҡатын-ҡыҙ.
Түрҙә ҡала ҡарт, ҡортҡа,
Ҡатын булһа, сара юҡ,
Әгәр иркәк* булғанда,
Булыр илгә бер тотҡа!
Сура, Сура, Сурамын,
Урар ерҙә турамын,
Илгә инһә илбаҫар,
Урармын* да турармын.
Сура, Сура, Сурамын,
Толпар менеп, тыу алып,
Яуға — яу, тип барамын,
Кем булмаһын яуыз яу,
Уға табам сараһын:
Ҡан көҫәгән килмешәк
Килһә тотоп табағын,
Үҙ ҡанында йөҙҙөрөп,
Уҡытам арт һабағын;
Ҡәүер дошман тап булһа,
Күпсетермен талағын,
Ҡапҡаһына Ҡазандың
Ҡаттан һуҡмаҡ һалырмын,
Ҡәүер алһа Ҡазанды,
Ҡабат тартып алырмын,
Ау, ҡабат тартып алырмын!
Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазан илен ҡотҡарғас,
Ҡайтып ҡылыс һаламын.

Ҡазан тарафына яҡынлағас, Сура батыр яу юлдаштары менән бер кис Күгәле тигән күл буйында ҡуна. Төрлө ҡош-ҡорт, ҡырағай ҡаҙ, өйрәктең көҙөн көньяҡҡа осҡанда туҡтаған мәлдәре икән. Сура ҙур һуна өйрәк атып ала, икенсеһе, эрерәк аҡ күгәле, уғы тейһә лә, ергә ҡолап төшмәй, осоп китә. Аҙаҡ Ҡазанға барғас ишетеүенсә, шул үтәләй уҡ үткән күгәл өйрәк яу яланы ҡырына килеп йығылған. Быны йә батыр килеренә, йә уның еңелерҙәренә юрағандар, ти.

Сура батыр Ҡазанға етәрәк, ҡалаға тура барып инмәй бер ауылда туҡтала, нөгәрҙәре менән Сәли атлы йөҙйәшәр бер ҡарттың өйөнә керә. Сәләмләп:

— Сәләм булһын һеҙҙәргә,
Йөҙйәшәр ҡарт Сәлигә:
Һаумы, һаумы, Сәли ағай,
Әйт бер һүҙең, йәле, ағай,
Бирәһеңме ҡуналҡа?
Инергәме ҡунаҡҡа?

*Сәли ҡарт:*

Һикһән бишкә еткәндә,
Һикһән батыр күргәнмен,
Туҡһан бишкә кергәндә,
Туҡһан батыр күргәнмен.
Әлегеһе был көндә
Туҡһан туғыҙ тултырам,
Кем икәнен белмәйем,
Хайран ҡалып ултырам.
Исем-атың әйтсәле,
Асылыңды әйтсәле.

*Сура батыр:*

Мин арғынмын, арғынмын,
Аҡ шоңҡарҙан тарғылмын,
Асылымды һораһаң,
Урал яғы тамъянмын.
Ата-бабам һораһаң,
Арыҫлан улы Байғаҙы,
Унының улы Ир-Түләк,
Нарыҡ улы Сурамын.

Шулай Сәли ҡартта оҙаҡ ҡына хәл йыйып, ҡунаҡ булып ятҡандан һуң Сура батырҙы йөҙйәшәр ҡарт бер ҙур йыйынға алып бара. Өй һайын таралған үҙ егеттәрен дә бергә ала. Йыйын менән таныштырып, Сәли ҡарт шулай һөйләй:

Ниҙәр юҡ та, ниҙәр бар
Был йыйындың эсендә:
Төрлө-төрлө байҙар бар,
Таныр-танылыр батыр бар,
Surҡалы күлдә суртан бар,
Урман-тауҙа шоңҡар бар,
Һыу-күлдәрҙә ҡондоҙ бар,
Күктә янар йондоҙ бар,
Танаһы ҡасып быҙаулар,
Тубы туҡтап ҡолонлар
Тошта Ҡазый мырҙа бар.
Арбаһынан май тамған,
Ҡылысынан ҡан тамған,
Иҙел йортта аға-энеле
Ураҡ менән Мамай бар,
Ҡазан тәхетен биләгән
Шәғәле атлы ханы бар.

Йыйында ат сабыштары, батырҙар көрәше, мәрәйгә атыш ярыштары була. Сура батыр, ярышҡа сығып, ҡазандарҙың Ҡолонсаҡ батыры менән көрәшә, уны еңеп сыға, мәрәйгә атышта ҡатнаша — мәргәнлекте бирмәй. Ҡазан батырҙары әллә ҡайҙағы сит батырҙың еңеп сығыуына көнләшкәндәй итәләр, һыр бирмәҫкә булашалар.

Хан ҡыҙының батырҙарға бүләктәр өләшеүе лә Сура батырға сәйер тойола. Үҙ батырҙарының кеменә — арғымаҡ, кеменә — алтын ҡынлы ҡылыс, кеменә уҡалы елән бүләк итһә, Сура батырға бер кескәй генә ҡумта-ҡалта бирәләр. Тыштан белгертмәһә лә, Сура батыр эстән бығa бик хурлана һәм үпкәләй.

Ҡолонсаҡ батыр Сура батырҙы үҙ табындарына ҡабул иткәндәй булып былай ти:

Йыйынға килгән батырға
Яҡшы аяҡ* ҡуйығыҙ,
Табындан урын бирегеҙ,
Һый-хөрмәтте татыһын.

Иҙел аша ҡара яу тора,
Батырмы, кем икәне
Шул яуҙарҙа күренер,
Кем икәне беленер.

Ҡазанға аҡ батша яу асҡас та, әле Сура батыр, үпкәләп, яуға ҡатнашмай ята. Сәбәбен белер өсөн, Ҡазандың бер нисә аҡһаҡалы менән хан ҡыҙы Сура батыр янына килә.

— Ҡазанға яу килгәндә, батыр нисек инде өйҙә ҡасып ятыр? — тиҙәр.

— Утыҙ ике батырығыҙ бар бит, улар яу ҡайтара алмаймы ни? — ти Сура батыр. — Затлы бүләк алған батырҙарығыҙсы!

Хан ҡыҙы башҡорт батырының үпкәһен аңлап, бүләк ҡумтаны асып ҡарауын һорай. Асып ҡараһалар, эсендә һигеҙгә бөкләп һалынған алтын һаплы алмас ҡылыс ята имеш.

Яҙып ҡуйғайнылар — ялтлап торған алмас ҡылыс, ти.

*Сура батыр гәйрәтләнеп һикереп торҙо ла әйтте ти:*

Алып килеп атымды —
Арғымаҡҡа менәйем,
Бүләк алмас ҡылысты
Билгенәмә eләйем!
Ҡазан килгән дошманға
Ҡаршы яуға еләйем!
Ҡаҙна, ҡаҙна мал килһә,
Ҡаҙнасылар һөйөнөр,
Ил ҡаршына яу килһә,
Ҡылыс ҡанға ҡойонор.

*Яуға инер алдынан шулай һамаҡлаған:*

Сура, Сура, Сурамын,
Толпар менеп, тыу алып,
Яуға ҡаршы барамын,
Гәүер дошман тап булғас,
Күпсетермен талағын,
Ҡапҡаһына Ҡазандың
Ҡаттан һуҡмаҡ һалырмын.

Шулай Сура батыр башҡорт иленән килгән нөгәрҙәрҙе туплап, Ҡазандың ҡапҡа төбөнә килеп еткән дошман ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡаты яуҙарҙа ҡатнаша, ал-ял белмәй һуғыша. Ҡазан яуында ғәйрәтлек күрһәткән батыр тигән даны аҙаҡ бөтә Ҡазан, Нуғай илдәренә тарала.

Бер заман ҡаты һуғыштарҙың береһендә иң яҡын ярандары менән Сура батыр ҡапыл ғәйеп була. Яуҙағылар, ул Иҙел һыуына батып, һәләк булды, тиҙәр. Яҡташтары, хан-ярандары, Сура — ят тип ситләткәнгә, тыуған иленә ҡайтып китте, тиҙәр. Үҙ илендә, Сура батыр иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан тигән риүәйәттәр әле һаман йөрөй, маҡтау йырҙары бар.

## 27. СУРА БАТЫР

*(Версия)*

Ата-бабаларыбыҙ һәр ваҡыт һөйләгән тарихы буйынса, ҡаҙаҡ халҡының Йағылбай нәҫеленән Нүрәкмырҙа исемле бер бай Бохара иленән күсеп Чалкар күле тирәһенә килеп урынлашҡан. Нүрәкмырҙа бик бай булған. Уның туғыҙ туғай йылҡыһы булған. [Сура батыр шул Нүрәкмырҙаның улы булған].

### Нүрәкмырҙаның арыҫлан һыйлағаны

Бер ваҡыт Нүрәк байҙың йылҡыһына афәт булып бер арыҫлан эйәләшкән: һәр көн бер йылҡыны тартып ашап китер булған. Был афәткә Нүрәкмырҙа [әммә] һис рәнйемәгән. Йылҡының ҡыуып, туҙып йөрөүен лайыҡ күрмәй, [тағы] күпме ашар икән, тип, үҙ ихтыяры менән бер һимеҙ йылҡыны [һәр даим] арыҫлан ята торған ергә бәйләп ҡуя торған булған. Арыҫлан шуны тартып ашар булған. [Көндән көнгә йылҡы малы кәмегәндән-кәмей барған. Шуны күреп, Нүрәкмырҙа бай хафаға төштө, ти. Хафаланып былай тине, ти:

Мундаһы бейек менгем юҡ,  
Айыл етмәҫ ала ат юҡ,  
Ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ,  
Күмелдерек киймәҫ күк ат юҡ,  
Йүгән һөймәҫ ерән юҡ,  
Тарпан затлы турат юҡ,  
Ҡарлуғас ботло ҡара ат юҡ,  
Бөйөрө бөрөк бүртә юҡ,  
Ҡарпыш ҡолаҡ ҡонан юҡ,  
Дөп-дөп тояҡ дүнән юҡ,  
Олпат-олпат оло ат юҡ,  
Сыңғыр-сыңғыр саптар юҡ,  
Йоморо тояҡ юртағым,  
Ул да булһа, йортта юҡ  
Барын ейгән арыҫлан,  
Аңдып тороп алыҫтан.  
Инде ни хәл итәйем,  
Затлы малым ҡалманы —  
Арыҫлан атлы ялмауыҙ  
Барыһын да ялманы].

Бер көн: «Ҡолон ваҡытында бүре тартып, [яраһы] уңалмаған һимеҙ бейәне алып [бәйләгеҙ! — тине, ти]. Бәйләһәләр — арыҫлан ашамаған. Был хәлде күргәс, Нүрәк бай: «Ҡасҡырҙан* ҡалған һыныҡты арыҫлан еймәҫ», — тип мәкәл әйткән.

Һуңырак икенсе бер байталды ағаска бәйләгәс, арыҫлан шуны ашаған. [Ашаған] да үҙ юлына киткән. Шунан һуң йылкы имен калған.

## Сура батырҙың донъяға килгәне, Казанға яу сапканы

Чалкар күле буйында йәйләп ғүмер кисергәндә, Нүрәкмырҙаның Тайдулла исемле катынынан бер ир бала тыуып, исемен Сура куйҙы. Бер нисә йыл үткәс, йәнә бер ул тыуып исемен Ширин куйҙы. Был ике бала Нүрәк байҙың фәрәвәнселек* менән булған тормошонда киңлектә наҙ-ниғмәт* эсендә горык* булып үҫтеләр. Халык кашында, ай менән көндәй булып, кәҙерле булдылар. Үҙҙәре һүҙгә оҫта, эшкә етеҙ булдылар.

XIV—XV быуат заманында татар хандары, рус кенәздәренә хилафлык кылып, теңкәләренә тейгәс, рус кенәздәре уйлап, берләшеп, татар хандарына каршы һуғыш кылдылар.

Башта Куликов һуғышында татар ғәскәренә каршы тороп, уларҙы кыуҙылар. Унан һуң татарҙар менән рус ғәскәрҙәре араһында һуғыштар булып, Казан ханлығы — Казан халкы араһында сыуалыш, башбаштаклык хәлдәре лә булды.

Рус ғәскәренең Казан калаһын камаған вакыттар булған.

[Был хакта Сураға Казан сапкынынан мәғлүм булды. Сапкындың әйткәне:

Сура-Сура-Сураман,
Һин булғанда, ил аман.
Казан илен яу баҫты —
Күп халык сығып касты,
Һин мәргәнһең, кылыссан,
Үткәр ятты кылыстан,
Хәлдәребеҙ бер сама —
Кил, батыр, кил, курсала!

*Сураның әйткәне:*

Сура-Сура-Сурамын,
Кыйышым юк турамын,
Ил өҫтөнән түрәмен —
Илде үтә күрәмен,
Өйҙә булған ир заты,
Йортта* булған ир заты,
Барсаң, килгел кашыма,
Дошман яуы шашына,
Быңдай сакта ил-йортта
Калһа калыр кыҙ, кортка,
Боҫоп яткан — ир уңмаҫ,
Батыр боҫһа, ил булмаҫ,
Боҫкан ирҙе катын, тим,
Катын булып калһын, тим.

Мин барам тыу күтәреп,
Дошманды дыу күтәреп,
Ҡырып һалам ҡоймалап —
Күтәрмәһендәр маҙам.
Мин Ҡазанға барамын,
Ҡазан илен аламын,
Инде тағын яу баҫһа,
Ҡаттан һуҡмаҡ һаламын.
Мин Ҡазанға барғансы,
Ҡар яумағай, ҡан яуғай.
Мин Ҡазанды алған һуң,
Ҡан яумағай, таш яуғай].

Шул ваҡыт Сура егет, иптәше Ҡолонсаҡ батыр үҙҙәренә эйәргән егеттәрен ҡоралландырып, уларҙы йыйып, Ҡазан ханына ярҙамға барҙы.

Ҡазанға етеп, Күңелгәгә төшөп, сатыр ҡороп ятҡандар. Хан менән хәбәрләшкәндәр.

Бер көн рус ғәскәренән Сура егеттең сатырына өс кеше килеп керә. Сура егет: «Ниңә һеҙ рөхсәтһеҙ сатырға керәһегеҙ?» — тип асыуланған һәм, ҡылысын ҡынынан сығарып, ике рус һалдатының башын сабып өҙгән, ҡалған береһенә: «Бар һин ҡайт һәм кенәзеңә әйт, һуғышаһы килһә, майҙанға сыҡһын!» — тигән.

Шул асыу сәбәпле рус ғәскәре менән Сура егеттең ғәскәре араһында һуғыштар булған. Ҡазан ғәскәре менән Сура ғәскәре бер булып рус ғәскәрҙәрен ҡыуғандар. Ҡазан ханы шундай ярҙамы өсөн Сураны батыр тип иғлан иткән.

Рус ғәскәрен ҡыуып, Ҡазан иле тынысланғас, Сура, батыр булып Ҡазан ҡалаһында тороп, үҙенә йәмәғәт итеп татар ҡыҙын алды. Шул ҡатындан ир балаһы булып, нәҫеле таралды. Ҡазан шәһәрендәге Оҙондар нәҫеле — шул Сура батыр тоҡомо, имеш.

Ҡазанда тамам тыныслыҡ урынлашҡан, Сура батыр үҙенең һуғыштан ҡалған егеттәре менән иленә — Чалкар күле буйына ҡайтырға сыҡҡан. Иленә етмәҫ борон Ҡолонсаҡты хәбәрсе итеп алға ебәргән. Ҡолонсаҡ батыр — илгә етеп, халыҡҡа: «Сура батыр булды, Ҡазанды урыҫтарҙан ҡотҡарҙы!» — тип һөйөнсө хәбәр таратты.

Ниһайәт, Сура батыр үҙенә эйәргән ғәскәре менән таң ҡараңғыһында ҡайтып етте. Өйөнә килгән ваҡытында бер таҙа йәш егет сыҡҡанын күреп һәм ҡатынын ҡыҙғанып:

— Һай, был өйгә сит кеше баш булған икән, башын сабып өҙәйем! — тип, ҡылысын ҡынынан сығарып күтәрҙе. Шул ваҡыт бер туған энеһе Ширин үҙен таныҡҡас [Сура]: «Әһә, ғәйрәтем кире ҡайтмаһын», — тип, ҡылысын кире ҡынына тыҡмайынса, менеп килгән атының билен сабып өҙгән...

Шул ваҡиғанан бер нисә йыл үткәс Ҡазан ҡалаһы рустар тарафынан баҫып алынған һәм Ҡазан тарихында асыҡ яҙылған русса: «1552-се йыл 2-се октябрь көнөндә рус ғәскәре тарафынан Ҡазан шәһәре алынған. Татар ханлығы бөтөрөлөп, Мәскәү кенәзе Иван Грозный падишаһына табих булған».

Иван Грозный Ҡазан ханлығын үҙенә ҡаратҡас, татар халҡына дошман күҙе менән ҡарап, ҡатылыҡ менән мөғәмәлә ҡылды.

Уларҙың иленә, ер-һыуына хужа булғанына ҡәнәғәт итмәй, мосолман халҡының диненә ҡаршы булды, татарҙарға урыҫлашыу сәйәсәте тотоп, ҡаршы килгәндәргә бик ҡаты мөғәмәлә ҡылды. Иван Грозныйҙың шундай ҡаты мөғәмәләһенән ҡурҡып, Сура батыр, үҙенә эйәргән халҡы менән рус ғәскәрҙәренең ҡамауынан сығып, Уралдың ҡалын урманына килеп боҫҡан. Һәм Сура батырҙың нәҫеле үлеп бөткән тейеп хәлкәйәр* һалдырған. Үҙе Сура батыр бик ҡаты ауырып китеп, бер йылдан һуң вафат була.

Был хәлдәр ҡайһы ерҙә булғаны хаҡында мәғлүмәттәр юҡ.

## Сура батыр нәҫеле

Сура батырҙан Йәнбәт тыуған. Йәнбәттән — Нүркә, Нүркәнән Биксура тыуған, Биксуранан тыуған Ғосман.

Ғосман, Дағыстан иленә барып, күп йылдар дин-ғилем уҡып Ғосман мулла булып ҡайтҡан.

Шул заманда Силәбе һәм Верхне-Урал араһында булған оло юл буйында ултырған Илтабан иленә — Өссапан улына килеп һыйынған. Үҙенә ҡараған ғаиләһе менән күсеп килеп Илтабан түрә хозурында мулла булып ғүмер иткән. Балалары булып, бер улының исеме Имәнғол булған. Имәнғол, атаһы Ғосман мулланан рөхсәт алып, Илтабан ауылынан ситкә күсеп ултырған. Уның янына (халыҡ) һәр ваҡыт йыйылып, Имәнғол ауылы тип исем алды. Хәҙерге көн Учалы районында Имәнғол ауылы шул.

Имәнғолдоң ике ҡатынынан 12 ул донъяға килгән. Оло ҡатынынан тыуғандар: Ғәбделғәфәр, Ғәбделәссәм, Ғабдулла, Монасип, Ғәлделмәжит, Ғәбделғәфүр исемле улдары, мал аҫрап көн күргәндәр. Мал йәйләү өсөн Йәнәшкүл буйына, йәғни Оло Ҡыҙылташ аръяғына килеп Имәнғол ауылында йәйләп, ҡышлау өсөн, Ташкисеү ауылына ҡайта торған булғандар.



## 28. СУРА БАТЫРҘЫҢ ЯУ САПҠАНЫ

Борон заманда Иҫәнбәт ауылында Иҫәнбәт батырҙың Сурағол исемле улы була. Иҫәнбәт ауылы хәҙер ҙә бар. Был ауыл Ирәндек тауының көнсығыш итәгендә Төйәләҫ йылғаһының бер тармағы буйлап урынлашҡан (хәҙерге Баймаҡ районы).

Сурағол бала сағында уҡ шалҡан кеүек тығыҙ тешле, мыҡты кәүҙәле, ҡалын тауышлы, һынға матур малай булған. Үҙ тиҫтерҙәре менән ҡаты уйнаған, малайҙарҙы илатҡан. Малайҙар уның менән уйнамағандар һәм күп ваҡыт уны: «Сураш! Сура-аш!..» — тип үсекләгәндәр. Сурағол малайҙар үсекләгән һайын уҫаллашҡан, үсекләгән малайҙарҙы тотоп алып, бер һуғыуҙа уҡ иҫһеҙ ҡалдырған, зәғифләгән. Ете-һигеҙ йәштәрендә унан ауыл кешеләре лә ҡурҡа башлағандар. Уны күреү менән, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар, ҡурҡып, тиҙерәк унан ҡасып, күҙҙән юғалғандар.

Ауыл халҡы:

— Сурағол киләсәктә атаһына ҡарағанда ла көслө батыр буласаҡ, тик уны атаһы ҡулынан ысҡындырмай тәрбиәләп үҫтереү яҡшы булыр ине, — тигәндәр.

Хәҙер Иҫәнбәт батыр улы Сурағолдо һәр ваҡыт үҙ янында ғына йөрөткән. Атта һыбай йөрөргә, уҡ-һаҙаҡтан атырға өйрәткән. Үҫә-бара, улын еңел һөнәрҙәргә ла үҙе менән алғылаған. 14—15 йәшендә үк ул атаһы менән тиң кәүҙәле, көслө батыр булып, егет ҡорона етә. Үҙ алдына һунарҙарға йөрөй. Ҙур йыйындарҙа көрәш, уҡтан атыу ярыштарында беренселекте ала башлай. Ошонан һуң инде уның Сура батыр тигән даны халыҡ араһына таралып китә.

Иҫәнбәт батырҙың ҡарындыҡ тәҙрәле ҡарағас йорто ауыл осонда, Ыҙма тауы башында булған. Был йорттоң тәҙрәләре кеше һыймаҫлыҡ бәләкәй генә, ишектәре типке менән бикләрлек, эскә ҡарай асмалы булған. Боронғо кешеләр ишекте эске яғынан йыуаныраҡ ҡарағас бүрәнә менән терәтеп бикләгәндәр. Бындай бикте тыш яҡтан күпме типһәләр ҙә, ишекте аса алмағандар. Ошо йортта тороп, Иҫәнбәт батыр ситтән килеүсе дошманды күҙәткән һәм ауылды дошман ҡулына бирмәгән. Сура батыр, сәсән һүҙле булыу менән бергә, оҫта йырлаған да, шәп ҡурайсы ла булған. Ул күкрәккә һалып ҡурай уйнаған саҡта кешеләр хатта бер-береһенең һөйләшкән тауышын ишетә алмағандар. Сура батыр үткер күҙле булған һәм бик алыҫтан дошманды күреп таный алған. Шуға күрә улар аталы-уллы һәм башҡа уҡсылар менән бергә дошманды алыҫтан осратып тар-мар иткәндәр.

Иҫәнбәт ауылының яртыһы тип әйтерлек хәҙер ҙә Сураш араһы, Сураш тоҡомдары тип йөрөтөлә. Яҡшы ҡурайсылар һәм көрәшселәр фәҡәт сураштар араһынан була килде.

XVI быуат урталары, 1540—1550 йылдар араһында Рәсәй батшаһы Иван Грозный, Рәсәйгә буйһондороу маҡсатында, Ҡазан ханлығына ҡаршы аяуһыҙ һуғыш башлап ебәрә. Рус ғәскәрҙәре тарафынан баҫып алынған ауылдарҙа татар халҡын христиан диненә көсләргә, тәрегә ҡарап табынырға, сиркәүгә йөрөргә мәжбүр итә башлайҙар. Христиан диненә күсеп, тәрегә суҡынған татарҙарҙы керәшендәр дип йөрөткәндәр. (Керәшендәр араһында нуғайбәк тигән бәләкәйерәк бер төркөм дә

бар. Улары инде беҙҙең Башҡортостан керәшендәре. Айырым төркөм булып һуңыраҡ, XVIII—XIX быуаттарҙа ойошҡандар. Силәбе өлкәһенең беҙгә күрше Нуғайбәк районында ла нуғайбәк керәшендәренең ауылдары бар.) Батша Иван Грозный ебәргән ғәскәрҙәр Ҡазанды уратып алалар, ҡамауға ҡалдыралар. Ҡазан халҡына ҡурҡыныс тыуа. Был хәл башҡорт халҡына ла тиҙ ишетелә һәм башҡорттар ғауғалана башлай. Беҙҙе лә рус диненә буйһондорорҙар, тәрегә ҡарап суҡынырға мәжбүр итерҙәр, тиҙерәк татарҙарға ярҙамға барырға кәрәк, тиҙәр.

Сура батыр иң яҡшы уҡсы башҡорттарҙан атлы ғәскәр туплай. Улар уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс һәм баҡыр һөңгөләр менән ҡораллана. Атлы ғәскәрҙең күбеһе ҡурайсылар булған. Сура батыр ғәскәрен походҡа теҙгән дә ҡурайсыларҙы алғы сафҡа ҡуйған. Шунда Сура батыр үҙе сығарған марш көйөн ҡурайсыларына ҡурайҙа уйнап ишеттерә һәм бөтөн ҡурайсылар бергәләп был маршты гөрләтеп ат өҫтөндә килеш уйнап ебәрәләр. Марш көйөн ҡурайҙа уйнай-уйнай, Ҡазанға табан походҡа сығалар. Халыҡ уларға изге теләк теләп ҡала.

Сура батырҙың һыбайлы ғәскәре Ҡазанға еткәнгә тиклем ҡурай маршын уйнап барған. Улар Ҡазанға барып етеүҙән алда Иван Грозный Ҡазанды яулаған була.

Сура батыр, ҡурай маршын уйнатып, ҡораллы ғәскәрен кирегә бороп, тыуған иленә ҡайтып китә. Уларҙы түҙемһеҙлек менән көтөп торған халыҡҡа: «Беҙҙән алда уҡ Ҡазанды яу алған инде», — тип яуап бирәләр. Ошо ваҡыттан был марш «Сура батыр сығарған, Ҡазанды яу алған көй» тигән исем менән башҡорт халҡы араһында таралып китә. Артабан «Ҡазанды алған көй» тип кенә йөрөтөлә башлай. Был көйҙө ҡурайсылар хәҙер ҙә ҡурайҙа уйнайҙар.



## 29. КИНЙӘКӘЙ

I

Атым-бәнем Мөхәмәдулла,
Атам булған Әхмәдулла,
Ҡушаматым — Дауыти.
Илем ошбу волостан,
Үҙем башҡорт йыныстан.

Ошбу заман сәнәлә,
Хажи хәҙрәт мәҙрәсендә
Йыйылып ятмаҡ шәкерттәр,
Эстәп ғилем исламды,
Уҡымаҡта китаптар.

Мына яҙам мөнәжәт*,
Уҡымаҡ та көйләмәк,
Мөнәжәттә һөйләмәк
Тыуған илем хаҡында,
Янған ҡышлау турында.

Борон булған Тора хан[2],
Хан йәшәгән бик тархан:
Сарҙаҡ ҡорған ҙур тауҙа,
Тирә-яҡҡа дан сәсеп,
Шунда ҡорған ҡышлау ҙа.

Йәйен күсеп йәйләүгә,
Сахра ергә, битләүгә,
Ергә ҡаҙан биш ҡаҙау,
Тирмә ҡороп Аҡ ярға,
Йәшәгәндәр икәүләп.

Хан бикәһе бик уңған,
Хоҙай биргән өс улан,
Өсөһө лә бәһлеүән,
Миҫле батыр арыҫлан:
Ишәй, Салих, Ҡарайған[3].

Ҡарайғаны ҡартайған,
Салих киткән салшайып,
Мал күбәйеп, бик байып.
Ишәй киткән ишәйеп,
Уландары күбәйеп.

Ишәй алған дүрт бисә,
Һәр бисәгә биш улан.
Уландан улан тыуған,
Һәр бере ишле булған,
Зат менән йыһан тулған.

Баш бисәнең улдары:
Ишембай һәм Байғужа,
Ташбулат, Кинйәбулат
Вә дәхи ҙә Көҫәпҡол
Тотҡандар бер яҡҡа юл.

Урта бикә улдары,
Уныңса булған юлдары:
Мыраҡ[4] киткән бик йыраҡ,
Үтәғоло — Үтәккә[5]
Ҡармыш[6] — Ҡайын битләккә.

Һайран, Һарғай, Иҫәкәй
Тапҡан кесе бисәкәй.
Тағын булған ике улан:
Ғүмәр, Һарун — бер туған,
Был икәү игеҙ булған.

Һарун киткән Маҡарға,
Китеп бер сит яҡтарға
Өйләнгән, ти, татарға.
Ғүмәр, табып ағаһын,
Бажа булған уңарға.

Бер бикәһе Шәмсенур
Тапҡан, ти, гел уҫал ул,
Илсек менән Сәмерхан,
Ҡаҙанғол һәм Ҡаһарман,
Иң уҫалы — Тимерхан.

Тимерханы шаһ булып,
Ғәйрәтләнеп, аһ ороп,
Ғәйре, бүтән улдарға,
Миҫле ҡара ҡолдарға
Йәшәгән, ти, баш булып.

Шуға түҙмәй Кинйәғол
Тотҡан, ти, алыҫҡа юл.
Һалып үҙенә яңы юл,
Үтеп аша ҡара урман,
Битләүгә сатыр ҡорған.

Ошо ерҙә Кинйәкәй —
Кинйә улан Кинйәғол
Йәшәгән оҙаҡ заман.
Уландар, ҡыҙҙар булған,
Ғаиләһе лә ҙурайған.

Үтә торғас күп заман
Шулай тыныс тормошта,
Беҙҙең бында тарханға
Баярҙар, байҙар килгән,
Күп әҙәм яфа күргән.

II

Темәс баяр[7] хәйләкәр
Булған төлкө миҫлендә.
Ғәбделкәрим, Кәркәләр
Булған ишәк миҫлендә:
Ялған, яуыз, мәкерҙе
Аңламаған ерҙе лә*.

Темәс менән дуҫлашҡан,
Бүрек, сәкмән, билбауға
Мал ебәргән туплауға,
Кинйә ауыл — ҡышлауға.
Йәйләүгә күскәс әҙәм,
Йөрөгән Темәс малдары
Беҙ йәшәгән ҡышлауҙа,
Кинйәкәйҙең урамын
Әйләндереп туплауға.
Йорт-ҡураны емереп,
Бар үләнде кимереп,
Ҡырҡ баҙ араһында
Бик иркенләп, иңерәп,
Йөрөгәндәр һимереп.

Көҙөн әҙәм малдары
Кире ҡайтҡас ҡышлауға,
Көйөп бөткән туплауҙа,
Нәрҫә тапмай ашарға,
Йөрөгәндәр тилмереп.

Шуға түҙмәй әҙәмдәр
Темәс малын ҡыуғандар.
Ҡабат кире ҡайтмаһын тип,
Ҡарун[8] мәлғүндең малы,
Юлға кәртә ҡорғандар.

Шуға үс итеп, туғандар,
Темәс баяр, алпауыт,
Туймаҫ тамаҡ, убыр, йот,
Ғазраил, ҡанһыҙ йән
Илгә афәт килтергән.

Саҡырып алып Кәркәне,
Аңра тауыҡ, кәрләне,
Ышанысһыҙ бәндәне,
Яҙылмыш мәктүб* ҡағыҙға
Мөһөр, тамға һалдырған.
Шулай беҙҙең еребеҙ,
Ҡышлауыбыҙ, көнөбөҙ
Бүрек, билбау, сәкмәнгә,
Дәхи, сәйгә, шәкәргә
Мәңгелеккә һатылған.

III

Батша, баяр ғәскәре
Бар ҙа ҡара атлылар.
Исеме — убыр команда[9],
Миҫле — афәт саранча,
Есеме казак атлылар.

Темәс баяр килтерткәс,
Кинйәкәйҙе баҫтылар.
Миҫле мөстән*, йот булып,
Йорт, ҡураны ҡоротоп,
Убыр ашап яттылар.

Был афәттән әҙәмдәр
Йәйләүҙәргә ҡасҡастын,
Мәсеткә үрт яҡтылар.
Бында ҡайтһа ҡышлауға
Ҡылыс илә саптылар.
Мылтыҡ илә аттылар.

Аһ-зарынан әҙәмдең,
Ҡан-йәшенән бәндәнең
Донъя тулды, имдия.
Миҫле «Егән»[10] һыу булып,
Дарья аҡты, имдия.
Ҡарғышынан әҙәмдең,
Күҙ йәшенән бәндәнең
Иман һатҡан бәндәгә,
Керәшен булған Кәркәгә
Ләғнәт төшһөн, имдия.

Килһә ине Йәмәлкә[11],
Күрһә ине Кинйәкәй[12],
Ҡайтһа ине Салауат[13] —
Ил батыры арыҫлан,
(Дошман көсөн самалап,
Барын күреп алыҫтан),
Түҙмәҫ ине был хәлгә.

Ҡылысын алып ҡынынан,
Уғын осло сайғаҡлап,
Аҡ толпарға атланып,
Һөрән һалып Уралға,
Йыйып егет-еләнде,
Арыҫландай ирҙәрҙе,
Ташҡын төҫлө яу булып,
Азат итеп ҡышлауҙы,
Ҡыуыр ине йоттарҙы,
Миҫле* ҡара ҡорттарҙы.

Ошбу мәктүб мөнәжәт*
Аҡмулланан аманат[14].
Уҡып күр ҙә яҙып ал,
Бүтәндәргә хәбәр һал
Янған ҡышлау турында.
Уҡыһындар, белһендәр,
Бай дуҫлығын күрһендәр:
Баяр миҫле ҡарт бүре,
Баяр миҫле ҡарт төлкө;
Бүре — йыртҡыс януар,
Төлкө — мәкер, хәйләкәр.



# ҺҮҘ АХЫРЫ

## Кешелектең ата-инәһе Әҙәм менән Һауа йәшәгән мифик замандан XX быуатҡа тиклемге дәүерҙе иңләгән ҡисса һәм дастандар

Ваҡыт, дәрәсәрәге, дәүер һәм арауыҡ ҡоласының киңлеге йәһәтенән ҡарағанда, яҙма дастандар бөтәһе бергә ислам мифологияһы күҙ уңында тотҡан иң борондан да боронғораҡ замандарҙан, кешелектең ата-инәһе — тәүбабабыҙ Әҙәм менән тәүинәбеҙ Һауа йәннәттән ҡыуылған саҡтан алып ҡанлы һәм шанлы XX быуаттың тәүге сирегенәсә, аныҡыраҡ әйткәндә, халҡыбыҙҙың бөйөк улы, танылған сардар Муса Мортазинға тиклемге оҙайлынан да оҙайлы дәүерҙе үҙ эсенә ала.

Төрки халҡының байтағы өсөн уртаҡ «Сыңғыҙнамә», «Аҡһаҡ Тимер», «Ғайса улы Әмәт» тураһындағы дастандар менән Ялыҡ бей хаҡындағы башҡорт эпосы сюжетына ҡоролған әҫәрҙәр араһында билдәле кимәлдә тематик һәм хронологик яҡынлыҡ күҙәтелһә лә, дөйөм алғанда, был томға ингән эпик әҫәрҙәрҙең һәр береһе үҙе бер башҡа (суверенлы) художестволы бер бөтөндө тәшкил итә. Шуға күрә лә улар хаҡындағы ҡыҫҡаса күҙәтеүҙәрҙе «әҫәр башынан йөрөү» рәүешендә яһау үҙен аҡлай кеүек. Әлбиттә, мөмкин булған ҡәҙәрле, урыны-урыны менән хронологик, тематик, поэтик яҡынлыҡтар, уртаҡлыҡ һәм оҡшашлыҡтар ҙа иҫәпкә алынмай ҡалмаҫ.

### 1. «Ҡөрьән Кәрим» сюжетынан яралған ҡисса

Һуңғы осорға тиклем беҙ М. Ғафуриҙың ижадын өйрәнгәндә, «Ҡыҙыл байраҡ», «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын», «Шағирҙың алтын приискыһында» һ.б. әҫәрҙәре аша уны капиталистик ҡоролошто һәм ислам тәғлимәттәрен тәнҡитләүсе әҙип буларак белеп килдек.

Баҡтиһәң, ул «Әҙәм үә Иблис» ҡиссаһы , «Рәсүл ғәләйһиссәләм үә дүрт хәлифә» китабы, «Мулла Һибәтулла бин шәйх Зәйнулла эн-Нәҡшбәнди хәҙрәттәренең мәрҫиәһе» һәм башҡа дини мотивлы әҫәр-ҙәр ҙә ижад итеүсе әҙип булған икән.

1910 йылда Өфөлә баҫылған уның «Әҙәм вә Иблис» ҡиссаһы тотошлайы менән «Ҡөрьән» сюжеттарына нигеҙләнгән. Мәғлүм булыуынса, «Ҡөрьән»дә әҙәби сюжеттар, риүәйәттәр, легендалар күп. Ләкин унда хикәйәләү айырым өҙөктәр, йәғни йәшникле композиция ысулы менән бара. Ғафури иһә ошондай айырым сюжет өлөштәрен бер урынға туплап, эҙмә-эҙлекле ваҡиғалар үҫешен биреүгә өлгәшә. Ҡиссала «Ҡөрьән»дең донъяның барлыҡҡа килеүе (7:52—54)[1], (11:7—9), (25:59—60), (50:37—38); Әҙәм, Һауа һәм уларҙың ожмахтан ҡыуылыуы (2:30—38), (20:117—122) һәм Әҙәмдең улдары Ҡабил менән Һабил тураһындағы (5:28—33) риүәйәттәр һәм легендалар урын алған.

Ҡисса донъяның барлыҡҡа килеүе тураһындағы «Ҡөрьән» легендаһының сюжет өлөшө менән башланып китә.

Хоҙа ғәзимәт үә ҡөҙрәт менән был
ерҙе хаҡ иткәс,
Ер өҫтөндә әҙәмдәр яратырға ваҡыт еткәс,
Ниһайәтһеҙ кешеләргә булыр тип
ер йөҙө меҫкен,
Ер йөҙөнә үҙенең фәйзене әсрарҙы сәскән.
Ҡояш нур сәсте ергә күктән,
яҡтырҙы ай төндә
Кешеләрҙе яралтмаҡ булды шунан ер
өҫтөнә.

М. Ғафури бында, дини мифологияға ярашлы рәүештә, Хоҙайҙың донъяны яралтыуының биш көнөнә ишара яһай. Ошоларҙы инеш рәүешле һүрәтләгәндән һуң, ул алтынсы көнгә, йәғни Тәүкеше-Әҙәмдең барлыҡҡа килеүенә, ентекләберәк туҡталып үтә. «Ҡөрьән» сюжетында ла артабанғы ваҡиғалар Хоҙайҙың Әҙәмде яралтыуы һәм, барлыҡ фәрештәләрҙе йыйып, уларға был хаҡта хәбәр итеүе тасуирлана. «Бына раббың фәрештәләргә әйтте: «Мин яңғырап торғандан, сүрәткә килтерелгән балсыҡтан кеше яһайым, ә мин уны тигеҙләгәс һәм үҙемдең рухымдан өргәс, уға сәждә ҡылып, йөҙ түбән йығылығыҙ!» (15:28—29).

Ҡиссала М. Ғафури «Ҡөрьән» легендаһының сюжетынан һәм эске композицияһынан алыҫ китмәй. Эҫәрҙә лә Хоҙай тәғәлә фәрештәләргә ошоға оҡшаш монолог менән мөрәжәғәт итә. Ләкин, Ҡөрьәндән айырмалы рәүештә, бында автор уны ситләтелгән телмәр рәүешле бирә.

Дини риүәйәттәргә, изгеләр тураһындағы хикәйәттәргә һәм алда күрһәтелгән «Ҡөрьән» сүрәләренә таянып, Хоҙайҙың Әҙәмде барлыҡҡа килтереүен автор ошо рәүешле күҙ алдына баҫтыра:

Әҙәмде Алла хаҡ итте, уға ит һәм дә ҡан бирҙе.
Нисә йылдар үтеп киткәс, Әҙәмгә Алла йән бирҙе.
Хоҙа баштуҡ Әҙәмде ерҙең өҫтөнә яратҡан, ти.
Әҙәм шунда ята торғас, кеше сүрәтенә кергәс,
Үҙенең рәхмәте менән рух менән ғаҡыл биргәс,
Хоҙа сын мәбһүт итмәксе булып, бахыҫ, хисамдарҙы,
Һөйөп яратҡан Әҙәмгә өйрәтте күп исемдәрҙе.

Бынан һуң Хоҙай тәғәлә, барлыҡ фәрештәләрҙе йыйып, уларға Әҙәмгә баш эйергә — сәждә ҡылырға бойора. Барыһы ла уның әмеренә буйһона, тик Иблис кенә риза булмай.

М. Ғафури был осраҡта ла «Ҡөрьән» сюжетынан алыҫ китмәй. Ҡиссаның ҡайһы бер урындары «Ҡөрьән» юлдарын һүҙмә-һүҙ тиерлек ҡабатлай.

Иблистең кешеләргә ҡарата беренсе яуызлығы Әҙәм менән Һауаны ожмахтан ҡыуҙырыуҙан башлана. Дини легендалар буйынса, йәннәт (ожмах) һаҡсыһы Йылан Иблисте йәшерен рәүештә генә ожмах баҡсаһына индерә. Баҡсаға ингәс, Иблис юхалап-алдаштырып, Алла тарафынан тыйылған емеште Әҙәмгә ашата. Был турала «Ҡөрьән»дең «Та һа» сүрәһендә (20:117—122) әйтелә.

«Әҙәм үә Иблис» киссаһының был өлөшө «Көрьән»дән бер ни тиклем айырыла. Әгәр ҙә «Көрьән»дә, Иблис тыйылған емеште тәүҙә Әҙәмгә бирҙе, тиелһә, М. Ғафури иһә тәүгонаһтың башын Һауала күрә.

Тине Иблис: «Был ағастан ашауҙан ни өсөн тыйҙы?
Бына шуның өсөн тыйҙы: бер ерҙә мәңге тормаҫка,
Үлемде күрмәй көн иткән фәрештәләрҙән булмаҫка.
Теге мәмнуғ емеш ысын-ысын дауалыр мәңге үлмәҫкә.
Аша тиҙерәк, теләһәң һин кара ергә күмелмәҫкә!»

Баҡсалағы хәлде күргәс, Хоҙай бик ныҡ асыуланып, уларҙы ожмах баҡсаһынан ергә ҡыуып төшөрә. Ошо ваҡиғанан һуң Әҙәм менән Һауа һәм уларҙың балалары, ыҙа-михнәттәр күреп, ерҙә көн итергә мәжбүр була.

Әҫәрҙәге артабанғы хикәйәләү Ҡабил менән Һабил тураһындағы дини легенда[2] сюжетына бәйле. Был хаҡта Ҡөрьәндең «Әл-Мәидә» сүрәһендә бәйән ителә (5:27—35), ләкин унда уларҙың исемдәре генә әйтелмәй.

Ике туған Аллаға ҡорбан килтерә. Тик уларҙың береһенең генә ҡорбаны ҡабул була. Шуға көнләшеп икенсеһе уны үлтерә.

Бына ошо рәүешле ерҙә беренсе тапҡыр кеше ҡаны түгелә. Ә артабан түгелгәндәрен күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Ошоларҙан сығып, М. Ғафури бөтә кешелек өсөн һәр ваҡыт әһәмиәтен юғалтмай торған бер һығымта яһап ҡуя:

Әҙәм балаһы ла шулай ҡыла ла бер-бер гонаһ эште,
Үҙе саф, тап-таҙа ҡала, ғәйепле итә лә Иблисте.
Кеше ҡылмаҫ гонаһ эште, әгәр ҙә нәфсеһен тыйһа,
Тирә-яғында булған нәмәләр менән күҙе туйһа.

Ҡабил менән Һабил тураһындағы хикәйәт Ҡөрьәнгә «Тәүрат» һәм «Инжил» китаптары аша килеп ингән. Бынан тыш был хаҡта айырым дини легендалар ҙа осрай. Уларҙың сюжеты күп осраҡта «Көрьән» сюжетынан ҡырҡа айырыла.

Әҫәргә Ҡабил менән Һабил тураһындағы «Ҡөрьән» легендаһын индереп, М. Ғафури ике ҙур маҡсатҡа өлгәшкән: 1) ошо рәүешле ҡиссаны сюжет-композицион яҡтан байыта, 2) 1905—1907-се йылдарҙа һәм унан һуң Рәсәйҙә хөкөм һөргән реакция һәм пессимизм осоронда «Тәүрат»та, «Ҡөрьән»дә урын алған «Яҡыныңды рәнйетмә» принцибын уҡыусы күңеленә һеңдерә.

Ҡиссаның һуңғы XI бүлеге композицион яҡтан әҫәрҙә эпилог ролен башҡара. Бында әҙип Әҙәм үҙе үлгәндән һуң Ерҙә булып үткән ваҡиғаларға, кешелек тарихына ҡыҫҡаса байҡау яһай, бынан тыш Әҙәм балаларының ҡылған эштәре, Алла тарафынан кешеләрҙе тура юлға күндереү өсөн ебәрелгән пәйғәмбәрҙәр тураһында ла телгә ала. Һәм ахырҙа ваҡиғаларҙы үҙе йәшәгән осорға килтереп ялғай.

## 2. «Минәй батыр менән Шүлгән батша» — «Урал батыр» һәм «Аҡбуҙат»ҡа ауаздаш иртәк

«Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосы тәүгә баҫыла. Бындай эпос барлығы бығаса фольклор ғилемебеҙгә мәғлүм түгел ине. Дөрөҫ, Әбйәлил районының үҙәге булған Асҡар ауылында йәшәгән Мөғәл ләм сәсән Мирхәйҙәров һау саҡта уның ауыҙынан ишетмеш буйынса һәм унан яҙып алынған «Ҡуңыр буға» эпосынан аңлашылыуынса, Уралдың төшлөк тарафтарында йәшәгән башҡорт ырыуҙарына һундар ябырылғанда, уларҙы ғәскәре менән ҡурсалап ҡалған, шул батырлығы өсөн Таңдыса тигән һылыу ҡыҙҙы кәләш итеү бәхетенә ирешкән Төн башҡорто Минәй батыр[1] хаҡында тағы бер эпик сюжет булыуы ихтималын белә инек. Был сюжетҡа һалынған әҫәр күптән түгел Мөғәлләм сәсәндең шәхси архивынан табылды (был хаҡта аңлатмаларҙан мәғлүмәт алырға була).

Ысынлап та, яңы табылған эпоста ла Минәй батыр сығыш яһай. Бында шулай уҡ «Ҡуңыр буға» иртәгенең Мөғәлләм сәсән версия һынан таныш Таңдыса менән дә осрашабыҙ. Әле табылғанында бәйән ителгән ваҡиғалар хронологик яҡтан «Ҡуңыр буға»лағынан алдараҡ бара. Һуңғыһында телгә алынған һун тигән күсмә халыҡ Урал тирәһендә йәшәгән төрки телле һунну (хунну) һәм уғыр, сармат ҡәбиләләренән II—IV быуаттарҙа ойошоп, IV быуатта көнбайышҡа ябырылып, донъя халыҡтарының бөйөк күсешенә сәбәпсе була. Бы лай ҙа ҡеүәтле ырыуҙар берегенән торған һундар Аттила тигән баш лыҡтары батшалыҡ иткән заманда айырыуса ныҡ көсәйә. Тимәк, тарихи яҡтан ҡарағанда, «Ҡуңыр буға» иртәгенең башында шул дәүерҙең саҡҡыһы сағыла бирел ҡала. Ихтимал, Ҡуңыр буғаны етәк ләп Таңдысаның ире иленә китеп барыуында, аҙаҡ, юғалған малын йәүкәләп, кире ата йортона ҡайтыуында әлеге шул халыҡтарҙың бөйөк күсеш дәүерендә айырым ҡәүемдәрҙең әүеш-төйөш килеүенең образлы сығылышы менән осрашабыҙҙыр. Ҡыҫҡаһы, «Ҡуңыр буға» эпосында һүрәтләнгән ваҡиғалар билдәле тарихи дәүер ҡулсаһы эсендә бара. «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосы тарафтарына килһәк иһә, бында беҙ тәүҙә осоро бик үк аныҡ билдәләнмәгән, әммә башҡорттоң Ете ырыуы төшөнсәһе мәғлүм булған дәүергә юлығабыҙ. Төрлө ырыу вәкилдәре шул ырыуҙар берегенең йыйынын үткәрә торған ергә йыйыла. Мөғәлләм сәсән уны Темәс тирәһендә тип белә. Тарихтан, фольклорҙан ул урындың, ысынлап та, шул Темәс тараф тарындараҡ ятҡан тарихи Тарауыл (Тарыуал) ауылына (хәҙерге Бөрйән районы Яңы Усман ауылына) яҡын ерҙә икәне мәғлүм. Тимәк, эпостың башланмышында тасуирланған ваҡиғаның урыны ла, дәүере лә, ғөмүми планда ғына булһа ла, мәғлүм. Ул ваҡиға, йәғни йәштәрҙең уйынға сығыуы, батырҙар бәйгеһе, Минәй батырҙың һәр яҡтан да өлгөр һәм өлгөлө булыуы (тереләй айыу тотоп алып килеүе һ.б.), реаль ерлеге булмаған сүрәттә лә, реалистик һүрәтләнә. Әммә артабан, көтмәгәндә, мифик дәүергә, ирреаль шарттарға юлыҡҡандай булабыҙ. Минәй батыр тәүҙә ун ике башлы, шунан һуң юхаға әүерелгән аждаһа менән алышып, уларҙы үлтерә. Был эпизодтар бер

ни тиклем батырҙар тураһындағы әкиәт геройының өс, алты, туғыҙ йә ун ике башлы аждаһа, дейеү менән алышыуын хәтерләтә (әйткәндәй, йыш ҡына уларҙа был ике мифик зат бер үк төрлө, йәғни «синоним» һымаҡ аңлатыла). Артабан Минәй батыр беҙгә «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ише эпостарҙан таныш күл батшаһы Шүлгәндең һыу аҫты донъяһын аҫтын өҫкә килтереп, болартып йөрөй, уның иҫәпһеҙ мал-тыуарын ер өҫтөнә сығара, өйөр ҡото Буҙ айғырҙы менеп ала. Минәйҙең Таңдыса менән ҡушылып та, етенсе таңдары тигәндә, уны юғалтыуы, аҙаҡ асыҡланыуынса, кәләшен Шүлгән батша улы алып китеүе беҙҙе йәнә батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә, «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» ише эпостарҙа һүрәтләнеүсән донъяға алып барып сығарғандай итә. Сюжеттың «Минәй батыр Шүлгән батшаһы донъяһына барып юлыға» мотивы юҫығында үҫтерелеүенә әкиәти мотив, «Юғалған кәләш артынан сәйәхәт» мотивы, сәбәпсе була ла инде. Батырҙар тураһындағы әкиәт геройҙары башта кәләшен юғалта икән, артабан мотлаҡ «Юғалғанды юллау: уны эҙләү», «Ҡотҡарылған кәләш менән яңынан ҡауышыу» мотивы килә. Һүҙ барған эпоста ла, әле әйтелгәндәрҙән үк аңлашылыуынса, сюжет йышылып бөткән ошо үҙән буйынса үҫеш ала. Әгәр халыҡ-ара әкиәт сюжеттары күрһәткесе менән сағыштырһаҡ, был эпоста АТ 300 (Аждаһаны еңеүсе), АТ 300 А (Күперҙә аждаһа менән алыш: беҙҙең миҫалда — Күл төбө һарайында Шүлгән менән алыш), АТ — 300А (Аждаһаны еңеүсенең тылсымлы атҡа эйә булыуы: беҙҙең миҫалда — Минәйҙең Шүлгән төбөнән толпар затлы Буҙ айғырҙы алыуы) һ.б. мотивтар хас та әкиәтте хәтерләтеүенә тағы бер төшөнөрбөҙ. Был да — Минәйҙең кәләш алыуына һәм юғалған кәләшен эҙләүенә бәйле эпизодтарҙың боронғо миф эстетикаһы күҙлегенән образлаштырылыуына миҫал. Шул юл менән батыр никахын героика пафосы менән һуғарып, уның ғәҙәти булмауына иғтибар иттерергә тырышылған булһа кәрәк. Ошо эстетик маҡсат хаҡына ваҡыт тойғоһо менән реаль арауыҡ тойғоһо ҡорбан ителгән. Тимәк, был эпоста ла, ғөмүмән, эпик традицияға хас булғанынса, анахронизм үҙе үк образлылыҡ сараһы вазифаһын башҡарыуға ирешә.

Шуныһы ла мөһим, ер өҫтө донъяһына ҡайтыуы була, эпос геройы үҙенең эшмәкәрлеген йәнә реаль географик арауыҡта йәйелдереп ебәрә: Шүлгән төбөнән алынған иҫәпһеҙ малды әсирлектән үҙе ҡотҡарған кешеләргә өләшә, Яйыҡ менән Оло Ҡыҙыл йылғаһы сатындағы Ете ҡыҙ ташы тип йөрөтөлгән ерҙә хурлыҡтан үҙе азат иткән ете ҡыҙҙы табып алып, уларҙың алтауһын алты яҡҡа оҙатып, етенсеһе булған Таңдыса иленә барып, уның менән яңынан ҡауыша. Ошо финал, асылда, «Куңыр буға» эпосы өсөн экспозиция хеҙмәтен атҡара. Шулай итеп, беҙ бында, асылда, эпик дилогия менән эш итәбеҙ.

Минәй батыр Шүлгән күле төбөнән сығып, кәләшенең йортона килеп, уның менән «Яңынан буй алышып», йәғни өр-яңынан ҡауышып, уны үҙ иленә алып ҡайтҡансы, йәғни икеһе художестволы бер бөтөндө тәшкил итеүсе ошо ике сюжеттың төкәтмәһенә тиклем, ваҡиғалар реаль ерлектә, хатта аныҡ географик урында барһа ла,

ваҡиғаның темпын күтәреү, геройҙы йылғыр, хәрәкәтсән, өлгөр итеп күрһәтеү өсөн, эпос йәнә лә традицион, хатта ки мифологик алымға таяна: ул берсә — Урал һыртына, берсә — Тағанташҡа, берсә Яйыҡ буйына толпарында осоп ҡына бара, кәрәк булһа, ете ҡыҙҙы ла бер юлы осортоп алып китә ала. Реаль тормош шарттары, конкрет географик арауыҡ һәм... тылсымлы ат, тип, бер ҙә генә аптырайһы юҡ. Сөнки толпар — халыҡ өсөн мифтарҙа, легендаларҙа, әкиәттәрҙә һәм эпостарҙа ғына һүрәтләнер баштан-аяҡ уйҙырма образ ғына түгел. Беҙҙең бабаларыбыҙ ҡанатлы ат булыуына, ысынлап та, ышанған. Риүәйәттәрҙән мәғлүм: Ерәнсә сәсән, Тулыбай һынсы кеүектәр яңы тыуған ҡолондарҙың ҡайһыныһы толпар булырын күрәҙәлек итә алған. Улар хатта ҡыу ат башына ҡарап та, уның эйәһе толпар булғанмы, түгелме икәнен әйтә белгән. Беҙҙең бөгөнгө эстетик зауығыбыҙ, эстетик ҡараштарыбыҙ кимәленән ҡарағанда ғына толпар тик уйҙырма персонаж кеүек тойола.

«Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосын уның туранан-тура дауамы булған «Ҡуңыр буға» менән сағыштырғанда, шулар ҙа күҙгә асыҡ ташлана. Беренсенән, әгәр тәүгеһендә Минәй батыр үтә лә әүҙем сығыш яһаһа, икенсеһендә ул артҡы планға күсерелә, алғы планды Таңдыса биләй. Икенсенән, тәүгеһендә Урал батыр эшен дауам итеү (ерҙе ҡара көстәрҙән таҙартыу маҡсаты) геройҙың ғаилә ҡороу өсөн көрәшенән айырылғыһыҙ проблема итеп күтәрелә. Асылда, бында «беренсе» итеп күрһәтелгән билдәгә — шартлы рәүештә, «икенсе» тигәнебеҙ төп сәбәпсе. Ни өсөн тигәндә, Таңдысаны ил бүләге итеп Минәйгә бирергә булғас, ил ололарының, әгәр ҙә ҡыҙҙы еңеүсе булһа, уға илдә ҡалыу мөмкинлеге лә бирелеүен иғлан итеп, уны егеттәр менән бил һынаштырыуҙа ғаилә ҡорғанда ҡатын-ҡыҙ инициативаһына өҫтөнлөк биреүсе матриархат башланғысы бер аҙ һиҙелә биреп ҡалыуына, мифологик дәүер төшөнсәһенә урын бирелеүенә ҡарамаҫтан, дөйөм алғанда, никах мәсьәләһендә ир кешегә өҫтөнлөк бирелгән заман үҙенекен иткән.

Өсөнсөнән, шул уҡ Мөғәлләм сәсәндән яҙып алынған «Ҡуңыр буға» эпосындағы һымаҡ, этиологик мотивҡа, айырым алғанда, ваҡиға барған йә ваҡиғаға туранан-тура бәйле ер-һыуҙың исемдәренә аңлатма биреп барылған. Буҙатбатҡан, Буҙайғыр, Ете ҡыҙ ташы, Күкүгеҙһөҙгән һ.б. — ана шундай атамалар рәтенә инә.

Иғтибар менән күҙәткәндә «Минәй батыр менән Шүлгән батша» иртәгендә башҡорттоң башҡа эпостары менән уртаҡ һәм оҡшаш мотивтарҙы асыҡларға була. Быға тиклем әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, эпостың Шүлгән менән бәйле өлөшө «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпостарында һүрәтләнгән ваҡиғалар барған урындар менән бәйле булғанға, улар менән ассоциациялашыу ярайһы ғына тойомлана. Минәйҙең Шүлгән батшалығынан мал-тыуар сығарыуы, йылҡы ҡото Буҙ айғырҙы менеп алыуы, ер өҫтөндә фәҡир-фоҡраларҙың маллы, түлле йәшәп алып китеүенә сәбәп ҡылыуы, мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосын, уның төп ҡаһарманы Һәүбәндең Мәсем ханға ҡаршы яу асыуын, тотҡондағы батырҙарҙы ҡотҡарыуын, ерҙә социаль ғәҙеллек урынлаштырыуын хәтерләргә мәжбүр итә. Әйткәндәй,

Шүлгән мәмерйәһенә ингәс Минәй бығауланған хәлдә ҡартайған һәүбән менән осраша, уны азат итә. Һәүбәндең әйтеүенә ҡарағанда, ул Шүлгәнгә ҡаршы яу асҡан сағында әсирлеккә юлыҡҡан, имеш. Ошо мәғлүмәт төбөндә беҙгә мәғлүм булмаған, «Аҡбуҙат» эпосын дилогияның бер өлөшө тип баһаланмалы сюжет ятһа, берәй заман уныһы ла табылһа, ни ғәжәп.

Шүлгән донъяһының аҫтын өҫкә килтерергә уҡталғанында, Минәйҙең:

Урал батыр, көсөң бир,
Бер һораһам, өсөн бир...,—

тип Урал батырға һығыныуы, күл батшалығында Шүлгән менән йөҙмә-йөҙ килеп алышыуы, ер өҫтөнә сыҡҡас, Буҙ айғырҙы менеп, унан ярҙам күреүе һәр саҡ Урал батыр рухын тойорға мәжбүр итә.

«Минәй батыр менән Шүлгән батша» үҙе мифологик башланғысҡа эйә булғас, уның мифологик эпостар менән ауаздашлығына аптырайһы түгел инде, тип әйтергә лә мөмкин. Әлбиттә. Әммә бынан тыш был иртәктә тарихи эпостарыбыҙ менән ауаздашлыҡ та табырға була. Мәҫәлән, ил ағаларының халыҡҡа, мал-тыуарға яфа һалып торған аждаһаны үлтерергә саҡырып, батырҙарға мөрәжәғәт итеүҙәре «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосында Мәсем хандың дүрт ырыуҙың дүрт батырын саҡырып, илде хафаға һалған, һанһыҙ яфа килтергән арыҫланды үлтерергә ҡушыуын хәтерләтә. Алдына ҡуйылған бурысты атҡарып сыҡҡан Минәй батыр — теге арыҫланды үлтергән Бабсаҡ бей менән сағыштырмалы ҡаһарман.

«Бабсаҡ менән Күсәк» эпосын хәтерләргә тағы шул да мәжбүр итә. Әгәр был эпостың ҡыпсаҡ версияһы буйынса, арыҫланды үлтереүсенең Бабсаҡ икәнен Ҡарағөләмбәт шик аҫтына алдыртырға тырышһа, Минәйҙең дә аждаһа үлтереүенә шик белдереүсе табыла. Ул Һалпан тигән бәндә була. Ике эпоста ла был шик төбөндә уртаҡ маҡсат йәшеренгән: Ҡарағөләмбәт тә, Һалпан да ҡуйылған бурысты атҡарыу шарты — ҡыҙға эйә булыу икәненән сығып эш итә. Әгәр шик белдереп, хаҡ батырҙы бахыр хәленә төшөрә алһа, уны рухи яҡтан үлтерһә, приз рәүешендә тәғәйенләнгән ҡыҙ шикһеҙ уныҡы буласаҡ.

«Сура батыр» эпосында ла мал-тыуарға арыҫлан яфа һалыу мотивы бар, тик уның сиселеше бөтөнләй икенсе. Әммә мотивтың булыу факты ғына ла уны «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосына — туранан-тура, «Минәй батыр менән Шүлгән батша» иртәгенә иһә ситләтеп кенә, бары «Аждаһа яфаға һала» мотивы тәңгәлендә генә бер аҙ ауаздаш итә.

Яҡынса һәм ҡыҫҡаса ғына күҙәтеүҙәрҙән дә шундай һығымтаға килергә нигеҙ бар: «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосы, образдар, мотивтар системаһының, реаль һәм ирреаль башланғыстар, уларҙың сиратланышының, пропорцияһының үҙенсәлекле булыуы, этнографик күренештәр менән мул байытылыуы һ.б. менән башҡа эпостарыбыҙҙан ярайһы ғына айырылып торһа ла, башҡорт халҡының эпик мираҫына хас иң мөһим традицион уртаҡлыҡ һәм оҡшашлыҡтарға эйә.

## 3. Мәкерлекте фашлаусы эпос

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың «Йәдкәр» китабында «Аҡташ» тигән топоним йыш телгә алына. «Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар» тигән мәҡәләһенән, мәҫәлән, берсә ошо атама менән айырып йөрөтөлгән тауҙың Ағиҙел буйында урынлашыуы, унда кеше йәшәргә яраҡлаштырылған мәмерйә булыуы хаҡында мәғлүмәт алһаҡ, берсә «Өфөгә нигеҙ һалғанға тиклем, төҙөүсе-инженерҙар тәүҙә Аҡташ яҫылығын ... һайлағандар» тигән имеш-мимеш йөрөүе хаҡында беләбеҙ. Ә өсөнсө урында: «Ҡыпсаҡтан сыҡҡан яуыштың Аҡташ тауында ханлыҡ иткән заманында уның ғәскәр башлығы, күренекле полководец Аҡташтың хәҙерге Өфө тирәһендә ҡалғәләр һәм нығытмалар төҙөүе бик ихтимал», — тип уҡыйбыҙ[1]. «Аҡташ хан» дастанында нәҡ ана шул кеше төп ҡаһарман ролен атҡара.

Өмөтбаев үҙе иҫкәртеүенсә, был дастанды ул «Шәрех ҡамус» тигән «Окианус» китабынан уҡыған булған да, ана шул Аҡташҡа ҡағылышлы өлөшөн генә бәйән итеү менән сикләнгән. Әммә, шулай «ҡуяндың һурпаһының һурпаһы» хисабында ғына булһа ла, был баҫма беҙҙең тарихи эпостарыбыҙ репертуарының борон ни тиклем бай булыуын тулыраҡ күҙалларға булышыуы менән әһәмиәтле. Тағы шуныһы: нәҡ ошо баҫмала беҙ Урта Азия сығышлы ҡәүемдәрҙең тарихында билдәле бер урын алған Искәндәр Зөлҡәрнәйен — Александр Македонскийҙы башҡорт дастаны ҡаһарманы сифатында күрәбеҙ.

Әҫәрҙең төп геройы ғәскәр башы Аҡташ. Ул хәйләкәр һәм мәкер зат булып хәтерҙә ҡала. Уның был сифаттары нисек фашлана һуң? «Юш (Яуш) хан йыһандан киткәс, улы Таҡташты» хан итеп күтәргәнде көткән кеүек, полководец Аҡташ был йәш малайҙы тәхеттән ҡыуа ла, үҙе хан булып ала. Уның нәфсеһе бының менән генә сикләнмәй, киреһенсә, үҫә генә. Ул ярты донъяны яулап алған Искәндәр атлы йыһангирҙы буйһондороу хаҡында хыялланырға батырсылыҡ итә һәм: «Һис кем донъяла шаһтарҙан миңә ҡарышманы. Хоҙа берәүгә ярҙам бирһә, һәм бәндә алыр», — тип, уны хәйлә тоҙағына эләктерергә йыйына. Әммә мәкерле уйы уның үҙ башына ғына була. Аҡташ үҙе хәйлә тигәнде беҙ ни өсөн мәкерлек тип беләбеҙ һуң? Шуның өсөн, сөнки яҡшы ниәтле кеше саҡырған ҡунағына яманлыҡ ҡылмаҫ булыр.

Дастанда һигеҙ йөҙ егерме яугирҙең ҡан ҡаҙанында ҡайнауы дәһшәтле бер күренеш төҫөн ала. Әммә Искәндәрҙең яу тәжрибәһе, һаҡланыу сараһын көнәлгәре күрә белеүе үҙенекен итә: әҙ көсө менән аҡташтарҙы еңеп сыға. Искәндәрҙең полководец оҫталығына һоҡланырға ғына ҡала.

Яуҙың шулай Искәндәр файҙаһына тамамланыуында уның Ҡасфран тигән ете йәшлек улы менән Мысырҙан алған ҡатыны Шәмалбаныу һәм Миһран хандың ҡыҙы Дилшат, Дәмнүчәһәр ҡыҙы

---

[1] Өмөтбаев М. И. Йәдкәр/Текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ғ. С. Ҡунафин. — Өфө: БКН, 1984. — 195—205-се б.

Фарух, Ҡыйҡан ҡыҙы Шәһребан, башҡаларҙың да өлөшө бар. Сөнки аҡташтар искәндәрҙәрҙе байраҡ төбөнә ҡыҫырыҡлаған мәлдә тап шул малай менән шул ҡатын-ҡыҙ ҡорал тотоп, тегеләр өҫтөнә ташлана һәм шуның менән үҙ яугирҙәренең рухын күтәрә. Шул күтәренкелек ну финалын хәл итә лә инде.

## 4. «Хан ҡыҙы Алтынсәс» хаҡында

Был әҫәрҙең сюжеты халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың 1914 йылда донъя күргән «Әҙәбиәт киҫәктәре» йыйынтығына индерелгән «Ағиҙел буйында» тигән нәҫергә тартым хикәйәһенә теркәлгән була. Ос бүлектән торған хикәйә-нәҫер контексында уға бары бер генә бүлек бүленһә лә, асылда, тап ошо сюжетҡа уны композицион яҡтан ойоштороу бурысы йөкмәтелгән. Баштағы ике бүлек иһә бары, авторҙың бөтән ҡайһы бер әҫәрҙәренә хас булған композицион алым — оҙайлы экспозиция хеҙмәтен генә үтәй. Беренсе бүлектә Ғафури бала саҡта иптәштәре менән Ағиҙел буйына балыҡҡа барырға әүәҫ булыуҙарын, балыҡ ҡармаҡлай торғас, исемһеҙ балыҡсы ҡарт янына барып, тамаҡ ялғап, уның әңгәмәләрен тыңларға яратыуҙары хаҡында бәйән итә. Икенсеһендә иһә балаларҙың ҡаршылағы Аҡташ тауындағы ҡаяға менеү хаҡында хыялланыуына ҡаршы ҡарттан: «Сығырһың унда, атаң башы! Бар әле сығып ҡара — үҙеңде ендәр ботарлап ташламаҫтар!» — тип реплика әйттерә. Шул реплика үҙе уҡыусыларҙа ла балалар биргән «нисек һуң улай?» тигән һорау тыуыуына, тимәк, һүҙҙең артабан яңы юҫыҡта ялғаныуына, һәр кемдең тәбиғәт хозурлығын күҙәтеп ултырыусынан тыңлаусыға әүрелеүенә сәбәпсе була. Ул шулай уҡ әҫәрҙең стилен үҙгәртеүгә лә сәбәпсе була. Ике бүлеккә тартылған экспозиция «беҙ» исеменән шаһитлы үткән заманда хәтирә стилендә бирелһә, балыҡсы ҡарт исеменән теркәлгән эпик сюжетта тасуирланған ваҡиғалар шаһитһыҙ борон үткән заманда бәйән ителә.

«Хан ҡыҙы Алтынсәс» әҫәрендә һүрәтләнгән ваҡиғалар, асылда, М. Өмөтбаев бәйән иткән «Аҡташ хан» дастанында телгә алынған Аҡташ тигән ерҙә бара. Ихтимал, ҡасандыр был әҫәр «Урал батыр», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» һымаҡ шау ҡобайырҙан йә «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға» иртәктәре кеүек, сәсмәүер менән ҡобайыр теҙемдәренең аралашып килеүе рәүешендә мәғлүм булғандыр һәм күләмле генә эпос рәүешендә йәшәгәндер. Үкенескә ҡаршы, Ғафури ул хаҡта иҫкәрмә бирмәгән. Үҙе иһә балыҡсы ҡарт исеменән уның бер вариантын ҡыҫҡаса ғына бәйән иткән. Бәлки, әҫәрҙең балаларға тәғәйенләп яҙылыуы ла шуны талап иткәндер. Ғафури бәйән иткән эпос, бәлки, ырыуҙашы М. Өмөтбаев теркәгән «Аҡташ хан» эпосы менән йә тамырҙаш булғандыр, йә бер бөтөндө хасил иткәндер. Үкенескә ҡаршы, был «ихтимал» һәм «бәлки»ҙәрҙең береһенә лә аныҡлыҡ индереү мөмкинлеге юҡ.

«Хан ҡыҙы Алтынсәс»тең сюжеты эпик фольклор әҫәрҙәренә хас традицион конфликтты үҙ эсенә алған мотивҡа, *«сит хаким үҙен үҙһенмәгән сибәрҙе көс менән алырға итә»* мотивына, нигеҙләнә.

Мәжит Ғафури ижадын монографик планда тикшергән Ғилемдар Рамазанов был әҫәрҙең героиняһы хаҡында: «Хан ҡыҙы Алтынсәс көслө характерлы ҡыҙ булып һүрәтләнә», — тип яҙғайны[1]. Ысынлап та шулай. Алтынсәстең был һыҙаты, уны Яйыҡ буйы яу башлығы һораҡканда уҡ, асыла башлай. Берҙән, яусыға яуап биргәнсе, атаһы ҡыҙының фекерен һорай. Ә был үҙе үк ҙур мәғәнәгә эйә. Бынан беҙ Алтынсәстең үҙ фекере менән башҡаларҙы ла, хатта хакимдарҙы ла, иҫәпләшергә мәжбүр итерлек ихтыяр эйәһе, тимәк, ирек һөйөүсән һәм үҙ аллы булыуына төшөнәбеҙ. Икенсенән, ошо баһабыҙҙы атаһына ҡыҙҙың: «Йәйенке битле Яйыҡ буйы илбаҫарына барыр хәлем юҡ! Аҡташ тауы өҫтөнән Урал тауы аръяғына бармайым. Атайым, дошманға ҡаршы һуғыш асып булһа ла, мине бирмәһен. Әгәр ҙә мине көсләп бирәләр икән, икенсе көн мине яҡты донъяла күрмәҫтәр», — тип әйткән яуабы уҡ ҡеүәтләй. Беҙҙә тыуған ошо фекерҙе артабан Алтынсәскә эш-хәрәкәттә дәлилләргә генә ҡала. Һәм ул шулай итә лә. Атаһының ғәскәре Яйыҡ илбаҫарынан еңелгәс, «үҙе, бик шәп ҡара юрғаға атланып, ҡулына уҡ һәм һөңгө алып», яуға ҡаршы сыға. Ошо ҡыланышы уны «Алдар менән Зөһрә» иртәге[2], «Ырғыҙ» («Ир ҡыҙ»)[3] риүәйәте героинялары менән бер рәткә ҡуя.

Яйыҡтан килеп ҡыҙ һораҡан яу башының образы иһә әҫәрҙә Алтынсәс образы менән контраст планда асыла. Контраслылыҡ, аңлашылыуынса, уның файҙаһына түгел. Алтынсәс уны, бары яратмаған өсөн генә илбаҫар тип атамай. Ул — ысындан да илбаҫар. Алтынсәсте һоратыуы уҡ эс тартырға мәжбүр итә. Һоратыуы — һоратыу түгел, торғаны ультиматум. Сөнки ул «Алтынсәсте алырға килгәнен», әгәр ҙә мәгәр хан уны «яҡшылыҡ менән бирмәһә, һуғышып булһа ла, алырға теләгәнен әйтеп ебәргән». Алтынсәс уның талабын кире ҡаҡҡас иһә, һүҙҙән эшкә күсә. Тимәк, ул кәләш алыу мәсьәләһендә лә илбаҫарҙарса, ҡараҡтарса, эш итә.

Илбаҫар яу башлығы менән Алтынсәс образдары уларҙың сағыштырма юҫыҡта бирелешендә лә контраслаша. Илбаҫар портреты ҡыҙ күҙлегенән «яҫы бит» тигән *«ямаҡайлыҡ формулаһы»* менән бирелһә, ҡыҙҙың үҙе хаҡында эпик ҡомарҡылар, тылсымлы әкиәттәр өсөн традицион стереотип стилистик формула, «бер бите — ай, бер бите — көн кеүек һылыу ҡыҙ» тигән *«матурлыҡ формулаһы»*, ярҙамында баһа әйтелә.

«Хан ҡыҙы Алтынсәс» эпосы легендаларға хас *«әмәлләнгән хазина»* мотивы менән тамамлана: йәнәһе лә, илбаҫарҙы еңә алмағас, Алтынсәс атаһы алтын-көмөш йәшергән мәмерйәгә инеп юғала ла йәйге матур төндәрҙә таң атҡансы тау киртләсенә сығып ултыра була, ә теге хан хазинаһына ендәр эйәләшкән дә, уны алырға килеүселәргә ҡоралды ҡарауыл булып күренә була. М. Өмөтбаев яҙып ҡалдырғанса, уның замандаштары, ысынлап та, Ағиҙел буйындағы Нараш,

---

[1] Рамазанов Ғ. З. Мәжит Ғафури ижады. — Өфө: БКН, 1965. —163-сө б.
[2] БХИ. 4-се том. Эпос. — 150—276-сы б.
[3] БХИ. 1-се том.

Аҡташ тауҙарында кеше «торорға ярақлаштырып эшкәртелгән ҙур мәмерйәләр бар», тип һөйләр булғандар[1].

*«Әмәлләнгән хазина»* мотивы тарафтарына килһәк, эпосҡа ул ғҙағырак ялғанғанға оҡшай. Ниндәйҙер фантастик мотивты эпосҡа ялғап ҡуйыу хәлдәре әле лә осраштыра. «Урал батыр» эпосы йә уның төп ҡаһарманы хаҡында һүҙ барғанда, Шүлгән мәмерйәһе һыртында төнөн Аҡбуҙат йөрөүен күреүселәр булыуы, Урал тауы буйлап Аҡбуҙатҡа атланған, ҡулына ҡылыс тотҡан, буй-һыны болоттан ашҡан Урал батыр күренгеләп ҡалыуы хаҡындағы имеш-мимештәрҙе өҫтәп ҡуйыу — шуға миҫал (тәүгеһе хаҡында 1991 йылда Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбе уҡытыусыһы Вәлиева Асыянан яҙып алынды, икенсеһе — Мөғәлләм сәсән Мирхәйҙәров мәғлүмәте).

«Хан ҡыҙы Алтынсәс» эпосының төп иҙеяһы *«ҡыҙ намыҫын яттан һаҡлау ни ҙә — ил намыҫын илбаҫарҙан яҡлау ни»* тигәнгә ҡайтып ҡала. Алтынсәсте Яйыҡ илбаҫарына бирмәҫ өсөн, хандың яуға — яу булыуы, улай ғына ла түгел, ҡыҙҙың үҙенең дә, атҡа атланып, ҡулына ҡорал алыуы шуны раҫлай. «Ҡыҙ намыҫы — ил намыҫы» идеяһы кимәлендә был эпос «Тарғын менән Ҡужаҡ» эпосын хәтерләтә. Икеһендә лә килмешәк алырға маташҡан ҡыҙ — әллә кемдең түгел, мотлаҡ хан ҡыҙы. Килмешәкте ҡыҙыҡтырған ҡыҙҙың социаль сығышының шулай күрһәтелеүе — һис кенә лә формаль мәғлүмәт кенә түгел. Ул үҙе үк художество әһәмиәтенә эйә булған деталь. Элекке ҡараш буйынса, хан балаһы булыу — элита балаһы булыу, затлы булыу тигәнде аңлатҡан. Шулай булғас, шундай ҡыҙ баланы ятҡа бирмәү — әлеге идеяны тағы тәрәнәйтә төшөү тигән һүҙ.

Әммә эпос: «Эш бының менән генә бөтмәй әле. Аңлағанға ишара», — тигән кеүек көсләшмәй-ҡыҫташмай ғына, ошо идеяны аҙаҡҡа тиклем «һуҙа», уны онорорға ирек бирмәй. Әҫәрҙең аҙағында эпилог рәүешендә бирелгән легендар мотив бына шуға тәғәйен дә инде. Йылдар үткәс тә, «йәйге матур төндәрҙә Алтынсәс, тау тишегенән сығып, оҙон сәстәренә күмелеп, туғайға табан ҡарап, таң атҡансы ултыра». Үҙе ил намыҫы символына әүерелгән ҡыҙҙың шулай ваҡыт-ваҡыт күренеүе — ил намыҫын ҡурсалау фарыз икәнлеген һәр саҡ хәтергә төшөрөү ихтыяжын аңлата булһа кәрәк. Тимәк, аҙаҡ өҫтәлгәнме, нисек, эпилог рәүешендә бирелгән легендар мотив был осраҡта традицияға күҙ йомоп эйәреү һөҙөмтәһе генә түгел. Ул әҫәрҙең эске логикаһы, идея тәғәйенләнеше менән аҡлана.

## 5. Башҡорттарҙа «Ҡорҡот ата» сюжеты һәм мотивтары

«Ҡорҡот ата» хикәйәте башҡорттар араһында Ҡорҡот ата хаҡында әүәлерәк телдә йөрөгән һәм яҙып алынған йәки баҫып сығарылған легенда, экиәт һәм шәжәрә сюжеттарын бер ергә туплап, йыйылма тексы рәүешендә тәҡдим ителә. Ул текстар 1913 йылда «Шура» жур-

---

[1] Өмөтбаев М. Йәдкәр/ Текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ғиниәт Ҡунафин. — Өфө: БКН, 1984. — 204-се б.

налының 10-сы һанында баҫылған «Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары шәжәрәһенән», «Башҡорт халыҡ ижады» серияһының «Риүәйәттәр, легендалар» томлығынан «Башҡорттар ҡайҙан килгән» легендаһынан (Өфө, 1980, 65-се б.), 1859 йылда «Записки Восточного отделения Русского археологического общества» тигән журналда баҫылған В. В. Вельяминов-Зерновтың «Памятник с арабско-татарской надписью в Башкирии» исемле мәҡәләһенән, беҙҙең ҡулда һаҡланған иҫке ҡулъяҙманан алып индерелде.

Был хикәйәт «Уғыҙ хикәйәте» сюжетының туранан-тура дауамы кеүек тә. Сөнки «Уғыҙнамә» менән «Ҡорҡот ата китабы» сюжеты төрки халыҡтары ауыҙ-тел ижадында һәм яҙма әҙәбиәтендә бер-береһенән айырылғыһыҙ уртаҡ рухи күренеш. Асылда «Ҡорҡот ата» «Уғыҙнамә» ҡомартҡыһының артабан үҫтерелешенән һәм цикл рәүешендә берләшеүенән ғибәрәт.

Академиктар В. В. Бартольд һәм В. М. Жирмунский раҫлауынса, «Ҡорҡот ата китабы» боронғо сығанаҡтар ерлегендә XIV—XV быуаттар араһында тамам формалашып, XV быуаттың икенсе сирегендә әҙәби эшкәртелгән яҙма әҫәр төҫөн алған[1]. Хәҙерге көндә ун ике оғузнамә циклын берләштергән «Ҡорҡот ата китабы» (йәки «Китаби дәдәм Ҡорҡут») Дрезден һәм Ватикан китапханаларында һаҡланған ике боронғо ҡулъяҙмаһы менән яҡшы билдәле. Шулар нигеҙендә ул әҫәрҙең бер нисә фәнни баҫмаһы әҙерләп сығарылған[2].

«Ҡорҡот ата китабы»ның баҙыҡланып етеүенең оҙон ғына тарихы бар. Был тарих төрки ҡәбиләләрҙең, иң беренсе сиратта уғыҙҙарҙың, этник яҡтан ойошоу процесы менән туранан-тура бәйле. Әгәр был ҡомартҡы, үрҙә әйтелгәнсә, XIV—XV быуат араларында Кавказ аръяғында һәм Кесе Азияла көнбайыш уғыҙҙар мөхитендә ныҡлы формалашып етешһә, уның тәүге этабы, уғыҙ ҡәбиләләренең ҡыпсаҡтар менән йәнәшә йә аралаш Урта Азия, Арал, Яйыҡ буйҙарында йәшәүҙәренә бәйле рәүештә, В. М. Жирмунский, мәҫәлән, «Ҡорҡот ата китабы»ндағы Ҡорҡот ата, Салор-Ҡазан, Алпамыша-Бамси сюжеттарына ҡарар легендаларҙы Урта Азия ерлегендә кәм тигәндә XI быуат башынан алдараҡ барлыҡҡа килгәндәр, тип иҫәпләй[3]. Ә шул уҡ легендаларҙың, һәр хәлдә Ҡорҡот ата һәм Алпамыш сюжеттарының, башҡорттар араһында киң таралғанлығын иҫкә алғанда, беҙҙең фольклор материалдарынан да «Ҡорҡот ата китабы»ның боронғо сығанаҡтарын, хәҙергәсә килгән һыҙыҡтарын тоҫмалларға булыр.

М. Әүәзов әзербайжан, төрөкмән, башҡорт халыҡтарында Ҡорҡот ата сюжетының киң таралыуын һәм боронғолоғон билдәләй[4].

«Ҡорҡот ата китабы»ның бөтә эпик сюжеттарын тоташтырыусы, төп ҡаһармандарының береһе һәм әҫәрҙе ижад итеүсе һүҙ оҫтаһы, аҡһаҡал һәм бағымсы сифатында Ҡорҡот ата образы тора. Ул халыҡ

---

[1] Книга моего деда Коркута. — М.— Л., 1962; Жирмунский В. М. Тюркский героический эпос. — Л., 1974.

[2] Dede Korkut kitabi, t. I—II. Ankara, 1959—1963; Книга моего деда Коркута. — М. — Л., 1962

[3] Жирмунский В.М. Тюркский героический эпос, 532-се б.

[4] Ауэзов М.О. Мысли разных лет. — Алма-Ата, 1959, — 248-се б.

аҡылын һәм һәләтен туплаған абруйлы аҡһаҡал, сәсән телле кеше булып күҙ алдына баҫа. Ул боронғо һүҙ оҫтаһы озан тип исемләнә. Ағас ҡумыҙын йәки думбыраһын сиртеп, ул көйләп, һамаҡлап, «Уғыҙнамә» йырҙарын башҡарыр булған. Халыҡҡа кәңәш-төңәшен биргән, кәрәк сағында бағымсылыҡ ҡылған.

Рәшитетдиндең «Жәмәиғ әт-тәуарих» һәм Әбелғазиҙың «Шәжәрәи төрк» тарихи яҙмаларында Ҡорҡот ата исеме уғыҙҙарҙың Сырдарья буйҙарындағы тарихи осорона бәйләп әйтелә һәм ул «биш уғыҙ халҡының аҡыллы кәңәшсеһе» итеп тәҡдим ҡылына. Йәғни был яҙмаларҙа Ҡорҡот ата тарихи шәхес булып күренә.

Башҡорттарҙың элекке Бөгөлмә өйәҙендә йәшәгән ҡырғыҙ ырыуҙары үҙ шәжәрәләрендә ырыу башлыҡтары итеп ошо Ҡорҡот атаны атайҙар[5]. Шуға таянып, профессор Р. Ғ. Кузеев: «Башҡорттарҙың ҡырғыҙ ырыуы шәжәрәһендә уларҙың Ҡорҡот ата исеменә бәйле ата-бабаларының боронғо тарихынан Сырдарья һәм Арал буйында уғыҙ ырыуҙары берләшмәһендә йәшәгән дәүерҙәре күҙ алдында тотола, тип һығымта яһарға мөмкин»,[6] — ти. VIII—X быуаттарҙа Арал, Сырдарья буйҙарында уғыҙҙар менән аралашҡан башҡорт ырыуҙары аҙаҡ ҡыпсаҡтар составында Волга, Урал буйҙарына үтеп ингәндәр һәм Ҡорҡот атаға ҡағылышлы иҫтәлектәрен, легендаларын һаҡлап ҡалғандар булһа кәрәк[7].

Табын ырыуҙары ла легендаларҙа үҙҙәренең сығыштарын шул уҡ Алтай тауы, шул яҡтан үҙҙәрен алып килеүсе аҡыллы башлыҡтары менән бәйләйҙәр: «Бик борон табындар Алтайҙа йәшәгәндәр... Бер ваҡыт табындарҙың башлығы ырыуҙаштарын Алтайҙан Иртышҡа алып киткән. Башлыҡтарының ҡыллы музыка ҡоралы булған икән, ти. Иртыш тулҡындары тауышына оҡшатып, тәьҫирләнеп, ул көй сығарған. Ул көйҙө табындар әле лә йырлайҙар. Иртышта кеше бик күбәйгән, табындар Ағиҙел буйҙарына киткәндәр»[8].

Боронғо Византия тарихсыһы император Константин Багрянородный (X б.) «Хроника»һында Иҙел (Атиль), Яйыҡ (Гейхе) буйҙарында йәшәгән бәжәнәктәрҙең Ҡорҡот атлы башлыҡтары булғанлығы яҙыла[9].

Ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ легендаларында Ҡорҡот ата башлыса думбырасы, йырсы, музыкант булып һынландырыла. Табындарҙы Алтайҙан Себер аша Уралға алып килгән ҡыллы музыка ҡораллы (думбырасы) йырсы башлыҡтары йөҙөндә алдағы башҡорт риүәйәтендә һәм боронғо хроникала исемләп әйтелгән Ҡорҡот атаны күҙ алдына килтермәү мөмкин түгел.

Әйткәндәй, ҡаҙаҡтарҙа әлеге Ҡорҡот ата сығарған тип иҫәпләнеүсе «Ҡорҡут көй» тигән йырҙың үҙе лә, легендаһы ла хәҙергәсә хәтерҙә һаҡланған. Легенда һөйләүенсә, Ҡорҡот йәштән үк, кеше ғүмеренең ҡыҫҡалығы менән һис ризалашмай, үлемгә ҡаршы көрәшергә уйла-

---

[5] Кузеев Р.Г. Происхождение башкирского народа. — 361-се б.
[6] Шунда уҡ. 361—362-се б.
[7] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. — 254-се б.
[8] БХИ. Легендалар һәм риүәйәттәр.
[9] Багрянородный К. Сочинения. М., 1899, 140-сы б.

ған, үҙе, үлемде эҙәрләп, төрлө ерҙәрҙе үтһә лә, гел шуны күреп йөрөр булған, имеш: урманда сереп ауған ағасты күрһә, шул да әжәлде хәтерләткән, далала ҡояштан көйгән ҡылғандарға осраһа, йәнә әжәл иҫенә төшкән: хатта тауҙар емерелеүен күреп, үлемдең ҡотолғоһоҙлоғон самалаған. Шуларҙы күрә-белә йөрөп, йәне ҡыйылыуҙан Ҡорҡот ағас ҡумыҙ яһаған.

Шулай итеп, легендаларҙа Ҡорҡот ата йырсы ла, думбырасы ла, хатта думбыра яһаусы оҫта ла булып күҙ алдына килә. Уның ағас ҡумыҙ, думбыра сиртеп йыр йырлауында, һүҙ әйтеүендә боронғо сәнғәттең синкретизмы сағыла. Ҡорҡот ата — алдан күреүсе, һүҙ менән бағыусы, ҡот килтереүсе ҡам (шаман) булып һынлана.

Әгәр «Уғыҙнамә» сюжеттарының көнсығышта тәүге ойошоу осоронда, шул иҫәптән ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, башҡорт легенда, риүәйәттәрендә Ҡорҡот ата аҡһаҡал, йырсы, ҡам, әүлиә сифаттарында сағылған икән, икенсе этапта «Ҡорҡот ата китабы» булып формалашҡан әҫәрҙә уның киң эпик дөйөмләштерелгән образғаса үҫеше шулай уҡ зарури.

Боронғо ҡыпсаҡ версияларында «Ҡорҡот ата китабы»на үтеп инеүе яғынан айырата «Алпамыша» сюжеты фәһемле.

## 6. Ҡаһарманлыҡ пафослы нәсихәти дастан

Фәндә иҫбатланыуынса, башҡорт халҡының килеп сығышы Алтай, Көньяҡ Себер, Урта Азияның төрки телле халыҡтары менән бәйле. Был хаҡта Н. А. Аристов, С. И. Руденко, Р. Г. Кузеев, Н. В. Бикбулатов, А. Халиҡов, Н. А. Мәжитов, З. Я. Шәрипова, Р. Х. Халиҡова һ.б. хеҙмәттәрендә ҡайта-ҡайта әйтелгәне бар. Шуға күрә лә «Боронғо төрки дәүере»ндә тыуған тел сәнғәте ҡомартҡылары һис шиндәй бәхәсһеҙ уртаҡ ҡомартҡы иҫәпләнергә тейеш. Шундай ҡомартҡыларҙан был урында бары береһе хаҡында һүҙ алып бармаҡсыбыҙ. Ул да булһа — бар донъяның ғилми йәмәғәтселегенә быуа дүрт быуат буйы тынғы бирмәгән төрки руникаһы, айырым алғанда, фәндә «Орхон (дөрөҫөрәге, Урхон. — *авт.*) — Йәнәсәй (дөрөҫөрәге, Инә сай. — *авт.*) яҙмалары».

XVII быуат аҙағында рус ғалимы С. У. Ремезов Йәнәсәй йылғаһы буйында билдәһеҙ хәрефтәр менән ҡәбер таштарына соҡоп яҙылған текстар күреүе тураһында яҙып сыға. Бер аҙ һуңыраҡ шундай уҡ сәйер яҙыулы таштарҙың Монголиялағы Орхон йылғаһы буйында ла барлығы асыҡлана. Был хәл ғалимдарҙа тәрән ҡыҙыҡһыныу уята. Улар Орхон һәм Йәнәсәй буйҙарына экспедициялар ойоштороп, текстарҙың ниндәй телдә, ҡасан һәм кем тарафынан яҙылғанлығын белергә ынтыла. Ләкин оҙаҡ йылдар буйына мәсьәлә хәл ителмәй ҡала. Ниһайәт, 1893 йылда Дания ғалимы В. Томсен яҙыуҙарҙың серен аса: текстар V—VIII быуаттарға ҡарар боронғо төрки эпитафиялары булып сыға. В. Томсендең асышына таянып, академик В. В. Радлов Орхон буйындағы ҙур текстарҙың тәржемәһен әҙерләй һәм уларҙы матбуғатта баҫтырып сығара. Таштағы яҙыуҙарҙы уҡыу, тәржемә

итеү һәм баҫтырып сығарыу эшенә П. М. Мелиоранский, С. Е. Малов, фин А. Гейкель, венгр Ю. Немет кеүек ғалимдар ҙур өлөш индерә.

Әлеге көндә Орхон-Йәнәсәй руник яҙмалары төрлө яҡлы һәм ентекле өйрәнелгән, тип әйтергә мөмкин. Был эштән башҡорт ғалимдары ла ситтә ҡалманы. Уларҙың тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһендә яҙмалар менән хәҙерге башҡорт теле араһында байтаҡ уртаҡлыҡтар булыуы, рун хәрефтәре менән ҡайһы бер боронғо башҡорт ырыу тамғалары тап килеүе асыҡланды.

Беҙҙең өсөн был ҡомартҡының айырыуса «Кесе яҙма» һәм «Оло яҙма» тип йөрөтөлгән өлөштәре әһәмиәтле. Ошо яҙмаларҙы тикшереүгә күп көс һалған һәм бер нисә хеҙмәт баҫтырып сығарған төркиәттең күренекле белгесе И. В. Стеблева, уның композицияһының бик тә үҙенсәлекле ҡоролоуына иғтибар иткән. Уның уйынса, ҡомартҡының йөкмәткеһе, циклдарға бүлә-бүлә, теркәлгән: «Һәр циклдың төп фекере, яҡынса алғанда, бер төрлөрәк урынлаштырылған һөйләмдәр йә синтагмалар менән бирелә. Шуныһы ла бар унда, айырыуса, һөйләм һәм синтагмалар башында бер ишерәк өндәр файҙаланырға тырышыу аныҡ күҙәтелә»[1].

Ә циклдарҙың үҙҙәренә килгәндә, Күлтэгин хаҡындағы «Бәләкәй яҙма»ның шул ҡағандың үҙ вариҫтарына мөрәжәғәте һымаҡ яҙылған тәүге өлөшөн ғалимә I цикл, тип иҫәпләй, Төрки ҡағанлығының биләмәләре һаналған урынды — II, хәрби походтар тасуирланғанын — III, IV, табғастарҙың төркиҙәргә яфа һалып тороуы — V һ.б., тип бүлеп сыға. Ошо уҡ принцип менән ул «Оло яҙма»ны ла бүлгеләй.

Орхон-Йәнәсәй яҙмаларының теле бөгөнгө төрки халыҡтарыныҡы, шул иҫәптән башҡорт теле менән дә, байтаҡ оҡшашлыҡтарға эйә. Был хаҡта М. Ә. Әхмәтов, Р. Х. Халиҡова, Ф. Ғ. Хисаметдинова һ.б. тел ғалимдары үҙҙәренең хеҙмәттәрендә конкрет миҫалдарға нигеҙләнгән төплө фекерҙәрен әйткәйнеләр инде.

Төркиҙәрҙең һүҙ барған уртаҡ яҙма ҡомартҡыһы башҡорт әҙәбиәте тарихын тикшереүселәрҙең дә өйрәнеү объекты булғаны бар (Ғ. Б. Хөсәйенов, З. Я. Шәрипова, С. Ә. Галин, М. Х. Нәҙерғолов, М. Б. Ямалетдинов)[2]. Ә бына фольклор күҙлегенән «Орхон-Йәнәсәй» яҙмалары әлегәсә тикшерелгәне юҡ.

Ҡомартҡының ваҡыт һәм арауыҡ иңләнеше (шул хронотоп ҡулсаһы эсенә алған хәл-ваҡиғалар ҡәҙимге иртәк, эпик ҡобайырҙарҙағыса) — бер планда ул теҙеп һәм ентекләп бәйән итеүгә ҡоролған. Төп герой тип айырып алынған Күлтэгин менән Билгә ҡаған да, уларға мөнәсәбәте яҡын булған ҡалған персонаждарҙы гел бер яҡлап ҡына күрһәтелә: ҡылған эштәренә Күк (йәғни, боронғо мәжүси башҡорт инаныуынса, иң юғары Тәңре (Әхмәт ибн Фадлан)

---

[1] Стеблева И. В. Поэзия тюрков: VI—VIII веков. — М.: Наука, 1965. С. 7.

[2] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 1-се том. — 32—43-сө б., Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. 1-се том. — 10—12-се б.; Ямалетдинов М. Орхон руник яҙмаларында тарихи-мәҙәни ҡатлам.//Ватандаш. — 2001. — V10. — 117—128-се б.; V11. — 42—53-сө б.

Галин С. Ә. Төрки әҙәбиәттәренең юл башы // Ағиҙел. — 1988. — № 8.

гел ыңғай мөнәсәбәттә, гел теләктәш. Ҡаршы көстәр иһә (улар табғас йөҙөндә кәүҙәләнәме, ҡырғыҙ, уғыҙ йә башҡалар йөҙөндә һынландырыламы) һәр саҡ тик хас дошман, мәкер зат итеп, тик кире яҡтан һүрәтләнә. Герой үҫә, бил-беләген нығыта барған һайын, уға ҡаршы торған көстәрҙең дә бәрәбәр арта бара. Ошо әйтелгәндәр һәм тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙан һығымталар яһай-яһай, ошо ташъяҙманы яҙҙырған кеше исеменән уҡыусыға мөрәжәғәт итеп, уны ғибрәт алырҙайынан — ғибрәт, һабаҡ алырҙайынан — һабаҡ, фәһем алырҙайынан — фәһем алырға саҡырыуҙар, башҡаһы был әҫәрҙе халыҡтың эпик поэмаларына, атап әйткәндә, уларҙың тарихи һәм героик дастан кәштәһендә урын дәғүәләшеүселәренә яҡынайта.

«Орхон-Йәнәсәй» яҙмаһы — әйткәнебеҙсә, тарихи әҫәр. Ул VI быуаттан йәшәй башлаған төрки ҡағанаты тарихы хаҡында бәйән итә. Төркиҙәр башлығы Бумын шул дәүерҙә, анығын әйткәндә, быуат уртаһында, ҡаған исеме алып, жужандарҙы ҡырып, уларҙың ҡулы аҫтынан ысҡына. Монголияның төньяғында хасил булған Төрки ҡағанаты (551—744), Бумын ҡағандың Мухан тигән улы ҡағанлыҡ иткәндә, ҡеүәтле дәүләткә әүерелә: Корея ҡултығынан Каспийғаса һуҙылып, Ҡытай, Иран, Византия менән бәйләнештә тора[1]. Төрки тарихының шул өлөшө Күлтәгингә бағышланған Оло яҙмала сағыла. Әммә был яҙма ҡомартҡы — йылъяҙма түгел. Тарих унда поэтик иретмәлә генә сағыла. Юҡһа VI быуатта йәшәгән Бумын ҡаған һәм шулай уҡ Истәми ҡаған, донъя яралғанда уҡ йәшәгән кешеләр итеп күрһәтелер инеме?

Үзә Күк-Тәңри,
Асра яғус ер ҡулунуҡда,
Экин ара киши оғлу ҡулунмус,
Киси оғлунта үзә әчүм апам,
Бумун ҡаған, Истами ҡаған олурмуш.

Өҫтә Күк-тәңре,
Аҫта һоро Ер (моғайын, Ер-һыу) бар ҡылынғас,
Ике арала кеше улы ҡылынмыш,
Кеше уландары өҫтөнән минең апам,
Бумун ҡаған, Истәми ҡаған ултырмыш.

Ташъяҙма дастандың бына ошолай башланмышы, әлбиттә, башҡорт шәжәрәләрендәге кеүек, үҙ ҡәүемең башын изгеләргә ялғау традицияһын хәтерләтә. Моғайын, шул традицияның башы ошо йә уның кеүек башҡа ташъяҙмаларға барып тоташалыр.

Икенсе яҡтан, әҫәрҙең төп геройын донъя яралған дәүергә үк күсереп ҡуйыу — үҙебеҙҙең «Урал батыр» эпосын хәтерләргә мәжбүр итә. Урал батыр ҙа Ер өҫтө әле кеше йәшәрлек булмаған дәүерҙә, дүрт тарафы ла диңгеҙ уратып алған саҡта тыуған. Тик, әгәр Билге ҡаған һәм уның вариҫтары, төрки халҡы иркен йәшәһен өсөн, Ер өҫтөн

[1] Стеблева. Поэзия тюрков. — С. 51.

камиллаштырыу менән шөғөлләнһә, Урал батыр был эште бөтөн тереклек хаҡына атҡара.

Ташъяҙманың «Урал батыр»ҙы хәтерләтеүенә йәнә бер сәбәп бар. Уныһы тарихты бәйән итеүсенең изге Һомайҙы телгә алыуына бәйле. Орхон-Йәнәсәй геройы үҙенең әсәһен шул изге затҡа оҡшата.

Оҡшатыу тигәндән, Күлтәгин һәр яуға ат яңырта. Уның һәр яу аты — Буҙ йә Аҡ. Һүҙ Урал батырҙың Күктән төшкән Аҡбуҙаты хаҡында барамы ни. Ысынлап та, был ике төҫ — бер үк төҫтөң төрлөсә әйтелеше генә. Уны Аҡбуҙат тип кенә «транскрипцияларға» ла була.

Йәнә шул. Башҡорт аҡ төҫтәге атты, «аҡ ат», тимәй, «күк ат», ти. Бының этимологияһы «күк»тең «Иң юғары Тәңре» тигәне менән тура килеүенә, Аҡбуҙаттың күктән төшөүенә ишара яһауы менән бәйле булыуы ихтимал.

Күлтәгин вафат булғас, уны ерләү тантанаһына ҡытайҙарҙан, татаб, табғас, тибет, согд, бүкәрәк, ун уҡ, ҡырғыҙҙан, башҡа тарафтан вәкилдәр килә. Ошолай төрки башлығын ерләүҙең халыҡ-ара церемонияға әүрелеүе ҡырғыҙҙың «Манас» эпосындағы Күкетәйҙе ергә биреү тантанаһының һүрәтләнешен[1] хәтерләтә биреп ҡуя. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, шул йыназа йыйынында бөгөнгө көндә башҡорт этносы составында мәғлүм ҡайһы бер ҡәүемдәрҙең бабалары ҡатнашыуы иғтибарға лайыҡ. Шиғри телдә ул йыйын хаҡында былай тип әйтелә:

Көн тауыштан Бүкле тигән ил-йорттан,
Йәнә *Табғас*, Тибет Рум, өс ҡороҡай,
Йәнә ҡырғыҙ, *татабтар* һәм аварҙар,
Килде *ҡытай*, килде утыҙ татарҙар.

Ғалимдар шуны асыҡлаған: «табғас» тигән этноним менән боронғо төркиҙәр ҡытайҙарҙы атаған, шуға күрә лә ҡомартҡыла телгә алынған «ҡытай» һүҙе (йәки «ҡытаң») — «ҡатай», «татабы» — «табын» тигәнде аңлатҡан, тиҙәр. Ә инде Бумын ҡаған йөҙөндә Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев төҙөп ҡалдырған «Табын ырыуы шәжәрәһе»ндә ырыу башы итеп күрһәтелгән Төмән ханды танырйҙар.[2]

Ә инде Күлтәгиндең, Иртышты аша сығып, түргештәргә төнөн һөжүм итеүе башҡорттоң «Ек Мәргән» эпосы геройының бабалары Суламан (Кама) буйҙарында тотош илдең ҡотон алып ошондай уҡ ысул менән һөжүм ҡылырға яратыуын хәтерләтә. Согдийҙар менән алышта ун алты йәшлек Күлтәгин, атһыҙ ҡалғас, йәйәү һуғыша, уларҙың тимер көплө башлығы Олуг тотаны ярандары-ниһе менән әсир итә. Ошо картинаның тасуирланышы уны «Һуңғы Һартай» менән сағыштырырға мәжбүр итә. Ялыҡ бейҙең өлкән улы Ҡармасан дошман батыры менән алышта атһыҙ ҡала, әммә сослоғо, етеҙлеге менән уны еңеп сыға. Ғөмүмән, Күлтәгин хаҡындағы хикәйәт пафосы, дөйөм идея йүнәлеше менән «Һуңғы Һартай» менән ауаздаш. Улар икеһе лә,

---

[1] Манас: Эпизоды из киргизского эпоса. — М.: Госиздат худ. лит., 1960. — С. 64.

[2] Ямалетдинов М. Орхон-руник яҙмаларында тарихи-мәҙәни ҡатлам / Ватандаш. — 2001. — №10. — 121—122-се б.

дәүләт — имен, сиктәр ныҡ булһын өсөн, үҙ-ара татыу, ярҙамсыл булырға саҡыра.

«Күлтәгин» дастанын, йәғни ҙә Орхон-Йәнәсәй яҙмаларын, тотошлайы менән, энәһенән ебенәсә, башҡорт фольклоры күҙлегенән үткәргәндә, әлегә сер булып тойолған тағы әллә күпме уртаҡ һәм оҡшаш билдәләрҙе табырға булыр ине. Башҡорттоң милли гимны хисабындағы «Урал» йырындағы «Арал диңгеҙенән Алтайғаса (йәки — Иртышҡаса) йәйелеп ята башҡорттоң далаһы», тигән һүҙҙәр бар. Имтомдарыбыҙҙа ла (мәҫәлән, татран ҡыуғанда, әйтелә торған ҡара доғала), «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының Т. С. Беляев версияһында, «Ҡуңыр буға» эпосында, табындарҙың риүәйәттәрендә Иртыштың, Ағиҙел кеүек үк үҙ күреп, телгә алына. Сыңғыҙ хандың замандашы Майҡы тигән бейҙең улы Ҡара Табын бей үҙенең кинйә улын (Әхмәт шәйехте) ҡул осонда һикерткәндә: «Минең улым — иртышлы», — тигән. Иртыш үрендә Башҡорт йылғаһы, Башҡорт далаһы тигән урындар булыуы[1] билдәле. Бына шуның ише мәғлүмәттәрҙе иҫәпкә алғанда, айырыуса ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр яһарға, фән өсөн бик тә әһәмиәтле һығымталар яһарға мөмкин. Ғөмүмән, Орхон-Йәнәсәй (Урхон-Инә сай) яҙмалары ҡағандарҙың походтары, ил төҙөүҙәре, ил сиктәре тураһында хәбәр итеү менән бергә, бөгөнгө көн өсөн дә әһәмиәтен юғалтмаған нәсихәттәр ҙә бирә. Мәҫәлән «Кесе яҙма» тип йөрөтөлгән өлөшөндә: «Өткәндә боҙолмаған төрөк ҡағаны ултырһа, Илдә лә боҙоҡлоҡ булмаҫ ине», — тиелә. Уҡығыҙ ҙа уйлағыҙ! Ҡайһылай ҙа бөгөнгөсә! Шул уҡ яҙмала «Татлы һүҙгә, алтынкөмөшкә ымһынып, Һин, төрөк халҡы, күпләп ҡырылдың» тигән үпкә лә бар. Унда шулай уҡ: яман кешеләр төрөк халҡына шулай тип ҡотҡо һала: «Кем алыҫта йәшәй, табғастар насар хазина бирер, Кем яҡын йәшәй, шуға затлыһын бирер», «Белер-белмәҫ көйө ят һүҙенә ҡарап, күпләп ҡырылдығыҙ» тигән һүҙҙәр ҙә бар. Был иһә — Күлтәгиндең үҙенә тиклемгеләргә лә, замандаштарына ла үпкәһе, ә беҙҙе иҫкәртеүе, киҫәтеүе.

Ғөмүмән, ҡаһарманлыҡ пафослы Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыһы нәсихәти башланғыслы булыуы менән айырылып тора. Быға унда ҡулланылған мәҡәлдәр ҙә ныҡ булыша. Бына бер нисә миҫал: «Ыраҡ эрсәр — йаблаҡ ағы берүр, йағуҡ эрсәр — эдгү ағы берүр» («Йыраҡ булһа — яман бүләк бирер, Яҡын булһа — яҡшы бүләк бирер»), «Эдгүти эшид, Ҡатығды тыңла» («Яҡшы ишет, Ныҡлап тыңла»), «Көзин көрмәдик, Ҡолаҡын эшидмәдик» (әкиәт алымынса әйтем: «Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән»), «Өртчә ҡызып келти» («Ут һымаҡ ҡыҙып килде»), «Бирин-бирин миң болур, Тама-тама көл болур» («Берәм-берәм мең булыр, Тама-тама күл булыр»), «Ит ҡары болсар, Ятып үрүр» («Эт ҡартайһа, Ятып өрөр»), «Ҡочу тағынта ҡаплан йоҡ, Ҡудуғ сувында балыҡ йоҡ» («Ҡочу тауында ҡаплан юҡ, Ҡоҙоҡ һыуында балыҡ юҡ») һ.б.

---

[1] Сөләймәнов Ә. М., Рәжәпов Р. Ф. Башҡорт халҡының архаик эпосы. — Өфө: Ғилем, 2000. — 115—119-сы б.

Ҡомартҡының «Күлтәгин» тигән исем аҫтында Мәүлит сәсән Ямалетдинов атҡарған поэтик тәржемәһе лә ҡаһарманлыҡ пафосының нәсихәти пафос менән гармонияһын һәйбәт бирә алған. Орхон-Йәнәсәй яҙмаларының поэтик әҫәр өлгөһө булыуы тураһында Ф. Е. Корш, А. Н. Бернштам кеүек тикшереүселәрҙең фекерен яҡлап, И. В. Стеблева был ҡомартҡыны теҙмә телмәр рәүешенә килтереп баҫтырыу эшен атҡарып, уның шиғыр үлсәменең, нигеҙҙә, Йософ Баласағунлының мәшһүр «Ҡотаҙғу белек» поэмаһының (1068—1069) үлсәменә тура килеүен билдәләгәйне. М. Ямалетдинов та ошо үлсәм менән эш иткән.

## 7. «Уғыҙнамә» дастанының башҡорт версияһы

Боронғо төрки әҙәби-фольклор ҡомартҡыларынан атаҡлы Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмалары, Йософ Баласағуниҙың «Ҡотаҙғу белек» поэмаһы, Мәхмүт Ҡашғариҙың «Диуану лөғәт әт-төрк» һүҙлеге, Уғыҙ дастаны, «Ҡорҡот ата китабы», урта быуаттарҙың байтаҡ төрки яҙма дастандары һәм поэтик йәдкәрҙәре фәндә төрки халыҡтарының уртаҡ әҙәби мираҫы булып ҡабул ителгән. Алты томлыҡ «Башҡорт әҙәбиәте тарихы» китаптарында ул әҫәрҙәр шул аспектта, башҡорт әҙәби мираҫына мөнәсәбәттә яҡтыртылған.

Шулай ҙа был өлкәлә беҙгә, башҡорт әҙәбиәтселәренә һәм фольклорсыларына, артабан өйрәнәһе һәм ғилми-тикшеренеү, текстологик яҡтан асыҡлайһы һәм тәрәнәйтәһе эштәр байтаҡ әле. Мәҫәлән, уғыҙ дастанында һәм башҡорт халыҡ ижадында, яҙма әҙәбиәтендә сағылған Уғыҙхан, уғыҙ мотивтары хәҙер ентеклерәк өйрәнеүҙе һәм йыйылма текстарын булдырыуҙы талап итә.

Билдәле булыуынса, Уғыҙ дастаны төрки халыҡтарының иң боронғо фольклор әҫәрҙәренең береһе. Ул ике версияла шаҡтай тулы көйөнсә боронғо ҡулъяҙмаларҙа һаҡланыуы менән дә ҡиммәтле. Иҫке төрки телендә боронғо архаик уғыҙ тел элементтары теркәлеп ҡалған. Был дастан боронғо төрки тарихын аныҡлау өсөн дә бик күп мәғлүмәттәр бирә; боронғо төрки ҡәүемдәренең, төрки дәүләттәренең ғәйәт ҙур географик киңлектәргә йәйелгәнлеген таныта.

Уғыҙхан төрки ҡәбиләләренең иң тәүге легендар бабаһы тип иҫәпләнә. Беренсе төрки дәүләтенең — ҡағанатының олуғ ҡағаны, донъя йыһангиры тип һанала. Уғыҙ дастанында ошо заттың мөғжизәле тыуыуы, баһадирҙарса үҫеүе, әллә күпме яуҙарҙа шанлы ҡаһарманға, ҡағанға әйләнеүе, уның батыр улдары хаҡында мажаралы хикәйәттәр һөйләнә. Төрлө тарафтарҙа төрки ҡәүемдәренең тыуып, үрсеп китеүҙәре әйтелә. Уғыҙхан урҙаһына уғыҙ ҡәбиләләренән башҡа ҡыпсаҡ, кәрлек, ҡалаж, ҡаңлы, ҡай һ.б. ҡәбиләләр ингән була. Тимәк, башҡорттарҙың ҡыпсаҡ, ҡаңлы, бөрйән ырыу тармаҡтары боронғо Уғыҙ урҙаһы ханы замандарынан уҡ килә. Уғыҙхан был ырыу-ҡәбиләләргә исем, тамға, ағас, ҡош (тотем) тәғәйенләй. Был ырыу атрибуттары башҡорттар араһында беҙҙең быуатҡа тиклем тулы исемдәре менән һаҡланып килгән.

Шуға башҡорт фольклорында Уғыҙхан исеменә бәйле легенда ҡалдыҡтары һаҡланып килеүе лә һис осраҡлы түгел. Уғыҙхан исеме,

уның батырлыҡтары күпмелер дәрәжәлә башҡорт тәуарих (тарих) яҙмаларында, шәжәрәләрендә осрай. Уғыҙхан хаҡында бынан бер йөҙ, йөҙ илле йылдар элек кенә ҡобайырҙар ҙа һөйләнеп йөрөр булған. Мәҫәлән, Әхмәтзәки Вәлиди уларҙы бабаһы Вәли мулла ауыҙынан һәм сәсәндәрҙән бала сағында ишетеүе хаҡында яҙа. Тамъян ырыуы уҡымышлыһы Солтанмәхмүт Юлдаши ҙа яҙма анкетаһында Уғыҙхан хаҡында йыш ҡына исемләй һәм «Алтын һапҡа тотонған, (алмас тауҙың башында), ил ағаһы Уҙхан (яратмағанын белгәс, үҙ атаһын (йәғни Ҡараханды. — *F. X.*) үлтергән) ил ағаһы Үҙхандыр» тип был ҡобайырҙан айырым юлдарын да иҫенә төшөрөп үтә. Ә.-З. Вәлиди Туған «Хәтирәләр» китабында әйтеүенсә, үткән быуат аҙағында Башҡортостанда булған венгр ғалимы Месарош башҡорттарҙан Уғыҙ дастанының (ҡобайырының) бер вариантын яҙып алған (ул яҙма Венгрияла баҫылып сыҡҡанмы йәки архив фондтарында ҡалғанмы — әлегә беҙгә мәғлүм түгел).

Хәҙерге көндә Уғыҙ дастанының төрлө илдәрҙең дәүләт архивтарында бер нисә боронғо ҡулъяҙмаһы һаҡланғаны билдәле. Шуларҙың иң ҡиммәтлеләре — XIV быуатҡа ҡараған һәм фарсы тарихсыһы Рәшит-әт-диндең «Жәмәиғәт-тәуарих» китабына нигеҙ ителгән тулы версия һәм XV быуатта күсерелгән уйғыр версияһы, XVII быуатта Әбүлғази хандың «Шәжәрәи тәракимә» китабына ингән нөсхәләре.

Вәлиди Туған тарафынан «Уғыҙ дастаны» китабына (Истанбул, 1972) алынған тексы Рәшит-әт-дин Фазлуллаһтың XIV быуат ҡомартҡыһы булған «Жәмәиғ әт-тәуарих» йыйынтығының икенсе киҫәгенә «Уғыҙҙарҙың һәм төрктәрҙең тарихы» исеме менән индерелгән фарсыса нөсхәһенән төрөк теленә тәржемәһенән ғибәрәт. Икенсе бүлеге — текстҡа иҫкәрмәләрҙән, өсөнсө бүлеге Уғыҙ дастаны хаҡында ҡараштарҙан, эҫәрҙең яҙылыу датаһы, урыны, шарттары, текста исемләнгән хакимдар, династиялар, шәхестәр һәм ваҡиғалар хаҡында аңлатмаларҙан тора.

Алда әйткәнебеҙсә, Уғыҙ дастаны сюжеты башҡорт халҡы хәтерендә һәм яҙма иҫтәлектәрендә ярым легенда, тарих, шәжәрә өлөштәре, ҡайһы бер иҫке баҫмаларҙа фрагмент рәүешендә генә һаҡланып ҡалған. Текстология ғилемендә ҡабул ителгәнсә, уларҙы бергә йыйнап, бер сюжет ебенә теҙеп *йыйылма тәнҡиди тексын* төҙөү филологтарыбыҙҙың бер бурысы.

Ошо йүнәлештә бер тәжрибә рәүешендә беҙ Уғыҙ хикәйәтенең башҡорт версияһын төҙөп ҡараныҡ. Уның фабулаһына төп тотмары, үҙәге шәкелендә Рәшит-әт-диндең «Жәмәиғ әт-тәуарих» тарихнамәһенән «Уғыҙҙарҙың һәм төрктәрҙең тарихы» киҫәген, фарсынан төрөксәгә тәржемәһенең Ә.-З. Вәлиди әҙерләгән һәм исемләгән «Уғыҙ дастаны» менән Әбүлғази хандың «Шәжәрәи төркмән» сюжетының ебе алынды. Шул епкә Ҡадир Ғәлиҙең «Жәмәиғ әт-тәуарих» фасылынан, башҡорт тәуарих яҙмаларынан, башҡорт ҡыпсаҡ шәжәрәһенән, башҡорт генеалогик теҙмәһенән, сәсән Мөғәлләм Мирхәйҙәров һөйләгән Уғыҙ хаҡындағы хикәйәттән өлөш-киҫәктәр эҙмә-эҙлекле бер сюжетҡа ялғай-ялғай ижади теҙеп сығылды.

Археологтар ватылып, ваҡланып бөткән боронғо көршәк, төрлө зиннәтле һауыт киҫәктәрен нисек үҙ урынына ҡуйып, бер бөтөн

көршәк-һауыт йәки ҡоролма конструкцияһын ҡорған шикелле, текстологтарға ла шулай айырым сюжет, күренеш киҫәктәрен конструкциялап төҙөп ҡарарға, боронғо ҡомартҡыларҙы бер бөтөн итеп күҙ алдына килтереп баҫтырырға тура килә. Боронғоноң үҙенсә бер реконструктив версияһы барлыҡҡа килтерелә.

«Уғыҙнамә»нең Рәшит-әт-дин версияһы һәм уның варианттарындағы һымаҡ уҡ, беҙ тәҡдим иткәнендә лә Уғыҙ тыумыштан уҡ өлөшлө зат итеп күрһәтелә. Өс көн, өс төн буйы әсәһенең имсәген ауыҙына ла алмауы, яҡты донъяла шунса ғына йәшәп тә, характер белдерерлек кимәлдә булғанлығы, әсәһенең төшөнә кереп, уны имеү-иммәү мәсьәләһендә шарт ҡуя алыуы үҙе үк уның ғәҙәттән тыш бала булыуынан. Ә инде шарттың йөкмәткеһенә килһәк, ул ғәҙәти булмаған мөмкинлегенең ҡайҙан килеүенә төшөнөрбөҙ. Иғтибар итегеҙ, шул сабый әсәһенең төшөндә уға ни ти: «Әсәкәйем, мосолман булһаңсы! Әгәр мосолман булмаһаң, үлһәм, үлермен, әммә имсәгеңде иммәмен». Быуа нисек ҡабырғаһы менән ҡуя ул мәсьәләне. Хәҙер аңлашылалыр ки. Уға теге ғәҙәти булмаған мөмкинлек Аллаһы тәғәләнән килә. Тимәк, ул илаһи ҡөҙрәт менән тыумыштан мосолман. Эҫәрҙең сюжетын хәрәкәткә килтерер көс-ҡеүәт тап быуа ошо мосолманлыҡҡа бәйле. Шуның арҡаһында тәүге ике кәләше менән яҡынлыҡ ҡылыуҙан баш тарта. Ә ошо ҡылығы үҙ нәүбәтендә, берҙән, уның шартын ҡабул итерлек, йәғни уның кеүек үк мосолман булырға күнгән ҡыҙ табыуға сәбәпсе була. Ә был ҡыҙ биргән вәғәҙәһен ғаилә даирәһендә генә тотоп ҡалмай, уға дәүләт әһәмиәтендәге мәғәнә биреүгә лә өлгәшә. Ул үҙенең иренә ҡаршы ойошторолған заговорҙы фашлай, дөрөҫөрәге, бер уйһыҙ һунарҙа йөрөгән Уғыҙханға ошо хаҡта хәбәр итеп өлгөрә. Ә ошо ҡылығы артабан иренең заговорсы атаһы менән ағайҙарын еңеп сығыуына, ахырҙа хан тәхетенә ирешеүенә килтерә.

Икенсе яҡтан, Уғыҙҙың мосолман булыуы, тәүге ике кәләше менән шул сәбәптән ирле-ҡатынлы кеүек йәшәй алмауы тегеләренең уға хыянатына килтерә: уның мосолман булыуын шул икәү ҡайныларына, йәғни Ҡараханға фаш итә. Тимәк, Уғыҙға ҡаршы атаһы менән ағайҙарының заговор ойоштороуына ла уның мосолманлығы сәбәпсе була. Быуа шулай бер сәбәп — төп геройҙың тыумыштан уҡ мосолманлығы — был әҫәрҙең сюжетының тармаҡланып үҫеүенә, һәр тармаҡта яңы конфликт төйөнләнеүенә стимул була. Уғыҙхандың Йыһангир булып, ярты донъяны уңышлы яулауы ла ана шул мосолманлығы арҡаһында, йәғни көнәлгәре илаһи программаланыш һөҙөмтәһе кеүек аңлашыла. «Уғыҙнамә»нең төп версияһы буйынса, ул мең йәшкә етеп үлгән, тип раҫланыуы ла[1] шуға бәйле, әлбиттә.

«Уғыҙнамә»нең мәғлүм версиялары һәм уларҙың варианттары, әйтелгәненсә, хәҙер инде үҙ аллы легенда, риүәйәт йә әкиәт сюжеты йә үҙ аллы мотивтар рәүешендә осрай. Донъя халыҡтарына, шул иҫәптән башҡорттарға ла әкиәт күрһәткестәрендә АТ 981 *(Ни өсөн ҡарт-*

---

[1] Рашид ад-дин Фазаллах. Огузнаме / Пер. с персидск., коммент., примеч. и указатели Р. М. Шукуровой. — Баку: Элм, 1987. — С.15.

*тарҙы үлтереүҙән туҡтағандар)* тип тамғаланған бер сюжет яҡшы мәғлүм. Ғәҙәттә, мәҫәлән, башҡорттоң «Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша» әкиәтендә, билдәле бер йәшкә еткән ҡарттарҙы батша үлтертеп тора. Бер егет атаһын йәшереп алып ҡалып, шуның кәңәше буйынса, гел ҡыйын хәлдән сыға.[2] Башҡорт әкиәтендә уның кәңәше буйынса, улы яу ҡырында, ниндәй ауырлыҡҡа осраһа ла, эйәр-өпсөнөнән айырылмай. Шул арҡала, бөтә ғәскәр атһыҙ ҡалған саҡта, әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан арғымаҡты тотоп алып, батшаға бүләк итә. Икенсе юлайы, тәрән һыу төбөнән батшаға хазина алып бирәбеҙ, тигәнсе, күп яугирҙәр үлемен таба, ә ата кәңәшен тотҡан егет уны һыу янындағы ағас башынан алып төшә. «Уғыҙнамә»нең әле тәҡдим ителгән вариантында ошо сюжеттың икенсеһе ҡабатлана. Ә тәүгеһе урынына икенсе мотив бирелә. Уғыҙхандың һыуға сарсаған ғәскәренә Ҡараһөлөк тигән егеттең йәшереп алып ҡалған атаһы (дөрөҫ, бында уға үлем янамаған, Уғыҙ походҡа ғына алмай, йәнәһе) дүрт һыйыр ярҙамында һыу табыу юлын өйрәтә, һыуһаған һыйырҙар ерҙе һөҙөп, соҡонған ерҙән һыу табыла. Был мотивты 1989 йылда Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Һунарсы ауылы аҡһаҡалы Искәндәр бабай «Башҡорт» һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан» тигән легендаға ҡушып һөйләгәне булыр. Уның варианты буйынса, йәшереп кенә походта алып йөрөгән атаһы, егеткә һыу табыу өсөн, бүгәй үгеҙҙе үҙ иркенә ебәрергә лә артынан барырға, ҡайҙа ул ерҙе һөҙгөләй, сапсый башлай, шул ерҙе соҡорға ҡуша. Һыуға сарсаған күскенселәр уны шулай таба.

«Уғыҙнамә»нән айырмалы рәүештә, Искәндәр бабай вариантында «Һыу табыу» мотивының геройы булған ҡарт үлемгә дусар ителгән ерҙән улы тарафынан йәшереп алып ҡалына. Был яғы менән ул әкиәттәгегә тап килә, ә дастандағынан айырыла. Әммә эш унда түгел. Эш «Уғыҙнамә» мотивтарының башҡорт фольклорында осрай тороуында. Был осраҡлы түгелдер. Сөнки, берҙән, башҡорттар составында уғыҙ тел төркөмөнә ингән халыҡтар менән генетик яҡтан бәйле ҡәүемдәр әҙ түгел. «Уғыҙнамә»нең фарсы, уғыҙ версияларында ла, әле баҫырға тәҡдим ителгәнендә лә *ҡыпсаҡ, ҡаңлы* ырыуҙары телгә алына. Үҫәргән шәжәрәһендә телгә алынған Мөйтән бейҙең нәҫел-нәсәбенең тамырҙары ла Урта Азияға тартыла, Бөрйән, Әйле ҡәбиләләренеке лә. Икенсенән, беҙҙең текста ла Рәшит-әт-диндең версияһында ла Уғыҙхан тәүләп баҫып алған илдәр хисабында Башҡорт иле лә бар. Тимәк, Урал иле менән оғуз донъяһы араһында генетик бәйләнеш тә, тарихи бәйләнеш тә етәһе. Шуға күрә лә «Уғыҙнамә» һәм уның айырым мотивтарының беҙгә ят булмауына аптырайһы түгел.

## 8. Шағирҙы мәжнүн иткән мөхәббәт хаҡындағы дастан

Көнсығыш халыҡтары, айырыуса төркиҙәр араһында, мөхәббәт дастандары киң таралған. Шуларҙың иң күркәм өлгөләренең береһе «Ләйлә менән Мәжнүн» дастаны.

---

[2] БХИ: Әкиәттәр. 4-се кит. — № 33.

Тарихи яҡтан был дастандың сюжет башы VII—VIII быуаттар арауығында йәшәгән һәм ижад иткән Мәжнүн ҡушаматы алған Ҡайс исемле ғәрәп шағирының фажиғәле мөхәббәте хаҡындағы боронғо ғәрәп риүәйәтенә барып тоташа. Ҡайс ибн Муадтың тормошо һәм шиғриәте буйынса тәү мәғлүмәттәр менән IX быуат әҙибе Ибн-Ҡотайбаның «Китаб аш-шағир вә ша-шуара» («Шиғриәт һәм шағирҙар китабы») һәм Әбүлфәрәж әл-Исфаханиҙың «Китаб әл-әғаһи» («Йырҙар китабы») йыйынтыҡтарында теркәлгән. XI быуатта ғәрәп шағиры Әбүбәкер әл-Вәлиби Ҡайс-Мәжнүндең «Мәжнүн диуандары» исемле шиғырҙар китабын шәрех-аңлатмалар менән ҡушып сығарған. Ҡайс-Мәжнүндән 100—150 йылдар әүәл йәшәгән боронғо ғәрәп шағиры Имрул-Ҡайс та үҙенең донъя, сәхрәләр гиҙеп көн иткән ярым берәҙәк көнкүреше һәм фажиғәле мөхәббәте менән «Ләйлә илә Мәжнүн» дастаны өсөн тағы бер прототип булыуы бик мөмкин.

Тарихсылар раҫлауынса, Ләйлә менән Ҡайстың үтә йәшләй ҡабынған мөхәббәте, уларҙың сәхрәләрҙә ҡуй көтөүҙәре, ғишыҡ утының илертер хәлдәргә илтеүе, Ҡайстың Мәжнүн ләҡәбен алып, мөхәббәтһағыш шиғырҙарының бәдәүи халыҡ араһына таралып китеүе һәм ятлап алыныуҙары тураһындағы риүәйәттәр оҙаҡ ғүмер йөрөп ятҡан.

Көнсығыш әҙәбиәттәренең бөйөк классигы Низами 1188 йылда фарсы телендә яҙып тамамлаған атаҡлы «Ләйлә менән Мәжнүн» дастанында ике йәш кешенең, фажиғәле ғишҡы хаҡында ғәрәп һәм фарсы телдәрендә осраған киҫәк-киҫәк риүәйәт сюжеттарына таянып, тәрән социаль-философик йөкмәткеле, тетрәткес психологик һәм трагик рухлы, төҙөк сюжетлы поэтик шедевр тыуҙырыуға өлгәшкән. Аҙаҡ ошо дастанға эйәреп, шиғри нәзирә ысулында урта быуаттарҙа Хөсрәү Дәхләүиҙең, Абдрахман Жәмиҙең — фарсы телендә, Ғәлишир Науаиҙың — иҫке үзбәк телендә, Физулиҙың әзербайжан телендә бер үк исемдәге дастандары майҙанға килгән. Ошо дастандар аша был сюжет төрлө халыҡтар араһында бик популярлашып, уның төрлө яҙма варианттары һәм телдән-телгә тапшырыла килгән халыҡлашҡан версиялары хасил булған. Әҙәбиәт белгестәре иҫәпләүенсә, уларҙың иң тулылары фарсы телендә — егермегә, төрки телдәрендә утыҙға етә икән.

«Ләйлә менән Мәжнүн» дастаны башҡорт һәм татар халыҡтары араһына башлыса төрөк һәм төрки әҙәби теленә тәржемәләр аша ингәнлеге күҙәтелә. Әүәлге замандарҙа Низамиҙың фарсы телендәге дастаны ла, һуңыраҡ Науаиҙың һәм Физулиҙың төрки телендәгеләре күсермәләрҙә Урал — Волга буйы мосолмандары араһына киң таралған. Ҡулъяҙмаларҙа, шәкерт дәфтәрҙәрендә осраған айырым өлгөләр, мәғлүмәттәр шул хаҡта һөйләй. Шуларҙан, мәҫәлән, төркисә бер иҫке ҡулъяҙмаһы әле Рәсәйҙә төркисә типография эше юлға һалынмаған осорҙа литография ысулы менән таш баҫмаға күсерелеп тулыһынса һаҡланып ҡалған. Уның теле бик иҫке төрки. Шуны беҙ стилен, айырым тел хосусиәттәрен һаҡлап, бер аҙ адаптациялап хәҙерге башҡорт әҙәби теленә ауҙарҙыҡ. Үткән быуат башында был версия иҫке төркисә-сығатайса ябай халыҡҡа ауыр аңлайышлы булғанғалыр, моғайын, 1901 йылда Ҡазанда адаптациялап, типографияла яңы төркисә нәшер ителгән. Баҫмаға әҙерләүсе был хаҡта шулай ти: «Ошбу мәш-

һүр «Ләйлә вә Мәжнүн» хикәйәсен Русиәдә булған мосолманлар төркисенә тәртип ҡылдым ҡазанлыҡ мәхдүм Мөхәммәд Фатих Халиди. 31 октябрь, 1901 йылда».

Башҡортостан Республикаһының, Ә.-З. Вәлиди исемендәге Милли китапханаһында һирәк осрар китаптар фондында һаҡланып ҡалған, боронғо ҡулъяҙманан алып таш баҫмаға әйләндерелгән «Ләйлә илә Мәжнүн» дастанының берҙән-бер данаһы үҙенең сюжет ағышы, бөтә деталдәре, поэтик үҙенсәлектәре менән Низамиҙың, шулай уҡ Физулиҙың «Ләйлә илә Мәжнүн» дастандарына яҡын. Әммә был шиғри дастандарҙан айырмалы рәүештә, беҙҙең ҡарамаҡтағы «Ләйлә менән Мәжнүн» XV быуатта йәшәгән төрөк шағиры Хәмидулла Чәләбиҙең шиғыр менән проза аралашҡан «Ләйлә илә Мәжнүн» дастанына, шулай уҡ ошо сюжеттағы һәм структуралағы төрөк халыҡ дастандарына оҡшаш. Йәғни уның ошо сығанаҡтар арҡылы беҙҙең тарафтарҙа ныҡлы ереген китеүе мөмкин.

Ғөмүмән, Көнсығыш әҙәбиәттәре һәм фольклоры аша ингән уртаҡ сюжетлы «Йософ менән Зөләйха», «Таһир менән Зөһрә», «Ләйлә менән Мәжнүн» кеүек яҙма китаби әҫәрҙәр өсөн ярым әҙәби, ярым фольклор сифаттарҙың берләшеп китеүе хас. Шуға уларҙа көнсығыш дастансылыҡ традициялары ла бик көслө. Мөхәббәт дастандары өсөн фажиғәлелек, драматизм — характерлы һыҙат. Бер традицион сюжетта яҙыу йәки хикәйәләү, нәзирәселек традицияһы төп сюжеттан ситкә сығып китергә, үтә иркенәйеүгә лә ирек ҡуймай. Уның ҡанундары ҡаты: төп сюжетты, лейтмотивты тот, поэтик дастан икән, хатта шиғыр үлсәмдәрен, строфа, рифма ҡалыптарын һаҡла; берҙәй образ, тасуири алымдар менән эш ит; әммә үҙ шиғри оҫталығыңды, фараз маһирлығыңды күрһәт — шунда бар хикмәт. Былар инде ысын һүҙ оҫталары өлөшө, улар һәләтенә бағлы. Ә урта һәләтлеләрҙең остаздарына, элгәргеләргә эйәреүсе, әҙер поэтик ҡаҙаныштарҙы хәл ҡәҙәрҙәренсә тәкрарлауы ғына мөмкин. Теҙмә һәм сәсмә формаларҙың аралашып китеүе лә шунан килә. Ҡалыплашҡан сюжетты һөйләүселәр иһә дастанды ярым ҡиссаға, хатта хикәйәткә әйләндерә. Шулай уртаҡ сюжетты хикәйә иткән халыҡ версиялары ишәйә.

Башҡортостан Республикаһы Милли китапханаһындағы «Ләйлә илә Мәжнүн» дастаны Низами, Физули ижад иткән дастандарҙың төрөк, төрки телдәренә әйләндерелгән өлгөләре нигеҙендә ябайлашып, халыҡлашып киткән бер версияһы булырға тейеш. Сюжет һыҙығының бөтә деталдәре менән эҙмә-эҙ үҫтерелеше, айырым образлау, тасуирлауҙарҙың һүҙмә-һүҙ тиерлек ҡабатланышы, шиғри үрнәктәрҙең оҡшашлығы шуны дәлилләй.

Өфө архив фондтарындағы иҫке ҡулъяҙма китаптарҙа Ләйлә менән Мәжнүн мөхәббәтенә бәйле ҡайһы бер эпизодтар, сағыштырыуҙар, шиғыр үрнәктәре осраштыра. Уның бер варианты Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ҡулъяҙмалар бүлегендә лә һаҡлана.

Ҡулъяҙмаларҙағы, баҫма китаптарҙағы, халыҡ хәтерендәге мәғлүмәттәр буйынса, XIX быуат дауамында, XX быуат башында мәҙрәсәлә уҡыған, ислам мәҙәниәтенән, милли әҙәбиәттән, халыҡ ижадынан күпмелер белеме булған башҡорттар мөхәббәт дастандары, ҡиссалары һәм хикәйәттәренең, яҙмала, баҫмала һәм телдән йөрөгән

өлгөләренән хәбәрдар булғанлығы, байтаҡтарын яттан көйләп һөйләгәне, төп тотмарҙарын хәтерҙәрендә тотҡаны аңлашыла. Ундай өлгөләр йыйылған-теркәлгәне халыҡ ижады фондтарында тупланған.

Йомғаҡлап әйткәндә, күп кенә халыҡтар өсөн уртаҡ рухи хазина булып әүерелгән мөхәббәт дастандары башҡорт рухи донъяһына ла инеп, әйтәйек, уларҙың «Йософ менән Зөләйха», «Таһир менән Зөһрә», «Бәдегөльямал менән Сәйфелмөлөк», «Ләйлә менән Мәжнүн» сюжеттары беҙҙең яҙма әҙәбиәттә һәм халыҡ ижадында күсмә сюжеттар рәүешендә нисек йәшәүен, ниндәй жанр формалары алып китеүен, халыҡлашыуын, уртаҡ әҙәби һәм фольклор традицияларының ҡайһылайыраҡ берләшеүен күҙәтеү йәһәтенән дә әһәмиәттәре ҙур. Улар халыҡтар, әҙәбиәттәр араһындағы боронғонан килгән ижади бәйләнештәрҙе асыҡларға ла ярҙам итә.

«Ләйлә менән Мәжнүн» дастаны ла, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәге, «Таһир менән Зөһрә» дастаны, ҡырғыҙҙың мәшһүр «Манас»ы ише ҡомартҡыларға хас уртаҡ мотивтан, төп геройҙың ата-әсәһенең оҙаҡ ваҡыттар бала бағыу бәхетенән мәхрүм булыуҙары хаҡында бәйән итеүҙән, башланып китә. Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә лә осрай проблемалы был мотив. Ләкин унда ул, ғәҙәттә, анһат ҡына хәл ителә: әсәлек бәхетенә бик тә ирешергә теләүсе ҡатын ҡамырҙан ир бала һынын әүәләүе була — уға йән инә («Ҡамыр батыр»), түлдең ни икәнен белмәгән ҡарсығы менән икенсе берәүҙе, ниндәйҙер ҡөҙрәт арҡаһында, буҙ бейә уланлы итә — уның ҡолоно кешегә әүерелә («Буҙансы батыр»), ҡатын кеше, тылсымлы емеш йә һурпа эсеү арҡаһында ла, ауыр аяҡлы булып ҡалырға мөмкин.

Эпоста иһә балаһыҙға балаға ҡалыуға, ғәҙәттә, Тәңрегә (йә Аллаға) ялбарыу ярҙам итә. «Ләйлә менән Мәжнүн» дастанының башҡорттарға мәғлүм версияһы буйынса, Бәниғәмир ҡәбиләһенең «балаһы булмағанға, хәсрәт сигеп, шуға ут йотоп йәшәгән «олуғ башлығының» атай булыу бәхетенә ирешеүендә иһә ике фактор мөһим роль уйнай. Уның береһе — халыҡ фатихаһы. Әҫәрҙә был хаҡта төбәп кенә әйтелмәй. Әммә уның «килгән-киткән мосафирҙарға саҡлы (тимәк, башҡалары хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. — *Ә. С.*) — ашатып-эсереп, үҙҙәренә дөйәләр биреп, ғиззәт һәм хөрмәт менән» оҙатып тороуы ана шул турала һөйләй ҙә инде. Икенсе фактор шунан ғибәрәт: олуғ башлыҡ, «күңеле мөбәрәк бер кеше доғаһы бәрәкәте менән Хаҡ тәғәлә миңә бер бала бирһә, донъяла мине бер уғыл менән шатландырһа, бер нәмәмде йәлләмәҫ инем», — тип әйтеү (нәҙер) әйтә — «ни ғәжәп, ҡатыны ауырға ҡалмыш, ти».

«Таһир менән Зөһрә» дастанының Теләкәева Рәхилә версияһы буйынса, Таһир менән Зөһрә араһындағы мөхәббәт, улар мәҙрәсәлә бергә уҡығандарында, сәскә ата. Ләйлә менән Ҡайс-Мәжнүн дә бергә уҡый. Ана шул саҡта үҫмер ир бала Ләйләгә «ала күҙ илә» бер бағыуы була — ҡыҙҙың «биткәйҙәре гөл, сәсе сөмбөл, төгө ғәмбәр, ҡашы ҡәмәр, керпеге хәнйәр, күҙҙәре һөрмәле, буй-һыны зифа талдай икәнен» баһалап, ғашиҡ булып та өлгөрә, ҡыҙ ҙа яуапһыҙ ҡалмай. Таһир менән Зөһрә лә, Ҡайс-Мәжнүн менән Ләйлә лә, дәрт-ғишыҡ уты көндән-көн артыуҙан, хатта ки көндө — төндән, төндө көндән айырмаҫ хәлгә етәләр.

Ошо кимәлдә лә мөхәббәт темаһы дастанда уҡыусыны ярайһы ғына ылыҡтырмалы, ҡыҙыҡтырмалы һәм ышандырмалы итеп яҡтыртыла. Әммә йәштәрҙең бер-береһенә булған хистәренең ихласлығын, ҡайнарлығын һәм саф икәнен тәрәнерәк асыу өсөн, көнсығыш дастаны, ғәҙәттә, традицион стереотип сюжет алымын файҙалана: бер-береһен бер көн күрмәһәләр ҙә, үлеп барған, бер-береһенән башҡа йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмаған ике йәш йөрәкте кинәт кенә айыра. Мөхәббәт уты тоҡанып, үҙ-араһы шул ут менән уртаҡлашып, бер хис, бер тойғо, бер уй-ниәт менән йәшәй башлаған Таһир менән Зөһрәне айырылырға мәжбүр иткән кеүек, Ҡайс менән Ләйлә лә шул яҙмышҡа дусар ителә.

Баштараҡ беҙ «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының әле һүҙ барған ике дастанға яҡынлығын әйтеп кенә үткәйнек. *«Яратышҡандарҙы айыралар»* мотивы был иртәктә нисек ҡулланыла? Хәҙер бына ошо һорауға яуап биреп ҡарайыҡ. Башта уҡ өҙөп кенә шуны әйтергә кәрәк: һүҙ барған мотив унда ла бар һәм художестволы әһәмиәте яғынан ҡарағанда, быларындағы кеүек үк, бер үк эстетик функция үтәй, атап әйткәндә, сюжеттың көтөлмәгән, һәр хәлдә уҡыусы теләмәгән йүнәлештә үҫтерелеүенә сәбәп итә. Бының менән генә лә сикләнмәй, уның сиселешендә хәл иткес роль аҡкара. Әммә «Таһир менән Зөһрә», «Ләйлә менән Мәжнүн» дастандары менән сағыштырғанда, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгендә был мотив икегә бүлеп бирелгәндәй була: герой менән героиня башта айырылышыуға дусар ителә, аҙаҡ ҡына осрашып, шунда ғына мөхәббәттең ни икәнен татырға өлгөрәләр. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу был донъяға тыумаҫ элек үк, аталарының ҡоҙа булышырға вәғәҙәләшеп ҡуйыуынан алып (йәғни уларҙың киләсәктә мотлаҡ бергә булырға тейеш икәнен вәғәҙә итеүсе вазифаһын үтәүсе шул йола аҡкарылған моменттан алып) бер-береһен белмәгән шул йәштәрҙең осрашыуына тиклемге ваҡиғалар, улар ни тиклем генә ҡатмарлаштырылмаһын, сюжет күҙлегенән, бары экспозиция (экспозицияның да оҙайлыһы) вазифаһын ғына аҡкара. Шуның иҫәбенә йәштәрҙең мөхәббәт тарихын үҙ эсенә алған кульминация һәм сиселеш моменты күпкә ҡыҫылыуына килтергән. Ә был, үҙ сиратында, сюжеттың шул өлөшөнөң үҫеү динамикаһын ашыҡтырыуға сәбәп булған. Егет менән ҡыҙҙы сабый саҡтарында уҡ (йәғни улар иҫ белмәҫ элек үк) айырып, үҫеп еткәс кенә, уларҙы осраштырып иртәк, әйтерһең дә *«ҡушылыусыларҙың урындарын алмаштырыуҙан, ҡушылдыҡ үҙгәрмәй»* тигән мәғлүм арифметика ҡағиҙәһенә таянып эш иткән. Әммә тормоштоң үҙ арифметикаһы: был ҡағиҙә йәштәр яҙмышын ыңғай хәл итә алмай. Бына ни өсөн «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәге «Таһир менән Зөһрә» һәм «Ләйлә менән Мәжнүн» дастандары менән бер рәттә тора ала. Сөнки, ул мотивтың файҙаланылыу хронологияһынан түгел, ә һөҙөмтә уртаҡлығынан сығып фекер йөрөткәндә, был әҫәрҙең дә төп асылы әлеге традицион дастан алымына нигеҙләнеүгә ҡайтып ҡала.

Әгәр «Таһир менән Зөһрә» дастанының төп версияһы буйынса, егетте һандыҡҡа һалып ағыҙһалар, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа иһә ҡыҙ кеше ситкә ебәрелә: сабый сағында уны атаһы ситкә

алып китә. «Ләйлә менән Мәжнүн» дастанында ҡыҙҙы ситкә алып китеү мотивы атай кеше ҡыҙын өйөнән сығармай мотивы менән алмаштырылған. Бына шул Ҡайстың уны ни тиклем өҙөлөп яратыуын асыу сараһына әүерелә лә. Һөйгәнен юҡһынып, егет ул йәшәгән урынды, алыҫтан ғына булһа ла, көн дә туғыҙ тапҡыр урап сыға: йылғыр елдән, осҡан ҡоштарҙан уның хәлен һораша, үҙен-үҙе тота алмайынса, кәүҙәһен ергә ора.

«Ләйлә менән Мәжнүн» дастаны башҡа мөхәббәт дастандарына шуныһы менән дә яҡын: ул да ғашиҡтар хәлен тасуирлай, ул да һөйә һәм һөйөлә белгәндәрҙе данлай.

И саба ел, йәнде сихырлар ни хәбәрең бар?
Осоп килгән былбыл, ҡундың талға, ни хәбәрең бар? —

тип, Ләйләләр тарафынан иҫкән ел, шул яҡтан килгән һандуғас менән серләшергә генә ҡала.

Мөхәббәт хисе кешене эске яҡтан, йәғни рухи йәһәттән «яңынан ҡороу» ҡеҙрәтенә эйә. Был ҡеҙрәттән Ҡайсҡа ла өлөш тейә: ул сәсәншағирға әүерелә. «Баш өҫтөндә ҡайғы оя ҡорған булһа ла», ул бер саҡ Һомай ҡоштоң күләгәһе төшөрөнә өмөт итеп: «Әгәр төшһә, күләгәһе Һомай ҡоштоң, асылыр өмөт», — ти. Ә Һомайғош — мифология буйынса, бәхет ҡошо. Һиңә уның шәүләһе төшөүе — һиңә бәхет килеүе. Тимәк, Мәжнүн бәхеткә ирешеренә өмөт итә. Ә уның өсөн һөйгәненең наҙлы бер ҡарашы ла бәхет. Юҡҡа ул:

«Киҙәнмәһен миңә дошманым, кем,
Йәремдең наҙлы бер ҡарашы миңә етә», —

тимәҫ ине, икенсе бер тапҡыр:

«Йә Илаһи, йән ғәмем менән шат булмаҫ иһәм,
Диуана күңелемде ҡайғы-ғәмдән азат итмә», —

тип өҫтәмәҫ ине. Мәжнүн өсөн донъяла Ләйләнән башҡа бер кем һәм бер ни ҙә кәрәкмәй. Уға булған сикһеҙ мөхәббәте хаҡына ул күп нәмәнән ваз кисә, хатта ки ата-әсәһенән дә баш тарта. Һөйгәне менән осрашыу мөмкин булмаған сүрәттә лә. Хатта бары уның хаҡындағы һағышлы уйҙарынан арынырға теләмәгән өсөн генә лә...

Экиәт, эпос геройы, ғәҙәттә, тыйылған эште ҡыла. Сюжеттың, көтөлмәгән бөгөлөштәр яһай-яһай, артабан үҫеү етеҙлеген ана шул тәьмин итә лә инде. «Ләйлә менән Мәжнүн» дастанына был мотив хас түгел. Егет тә, ҡыҙ ҙа үтә күндәм: икеһе лә тыйыу кәртәһен аша сығырға һәләтле түгел. Характер булараҡ, улар ваҡиға үҫешенә үҙҙәре туранан-тура бер ниндәй ҙә этәреш яһамай. Шуға күрә лә сюжет һүлпән. Улай ғына ла түгел, ваҡиғалар геройҙар файҙаһына ағышырға торһа, уға улар ҡаршы сығалар. Был йәһәттән ғишыҡ тойғоһоноң үтә көслө булыуы арҡаһында, өй-йортонан, ата-әсәһенән биҙеп, хыяли тормошта йәшәгәне өсөн, Мәжнүн ҡушаматы алған Ҡайс айырыуса айырылып тора. Атаһы йә әсәһе, йә ҡәрҙәше Сәлим йортҡа ҡайтырға, әҙәмсә йәшәргә өгөтләгәндә, Мәжнүн уларҙың һү-

ҙен өнәмәй. Атаһының: «Монасип булған аҡылыңды башыңа һалып, яныма ултыр. Бәлки, мораҙыңа ла ирешерһең. Минең ғүмерем уҙҙы. Һинән башҡа балам юҡ бит. Һин ҡайтмайса, әхирәткә китһәм, урыным буш ҡалыр. Малымды яттар баҫыр, еремә килеп ултырырҙар. Шул саҡлы ғүмер атай усағын һүндермәк килешәме?! Ҡайтайыҡ, улым, минең урыныма ултыр. Бөтә малымды, үҙем иҫән сағымда, һиңә тапшырайым», — тигәне лә, әсәһенең: «Уғланым! Һине алып ҡайтып, атаңдың урынына ултыртайым!» — тип ялбарыуҙары ла Мәжнүнде хыяли хистәренән айыра алмай. Ата-әсәһенең үлеме лә уны айнытмай, үҙ яҙмышын ҡулға алыу яғына аҙым яһарға мәжбүр итә алмай. Ә бит атай нәсихәтендә уйһыҙҙы ла уйландырырлыҡ һүҙҙәр бар. Был урында уның мал-монаятының туҙып юҡҡа сығыуы ихтималын хаҡындағы борсолоу зарынан бигерәк, «атай усағын һүндермәк килешәме?!» тигән риторик һорауы күҙ уңында тотола. Тәрән мәғәнәле оло һүҙ был. Мал-монаяттың юҡҡа сығыу ихтималын аңлатыу менән генә сикләнмәй был һүҙҙәр. Унда иң әүәл атай кешенең нәҫел ебенең өҙөлөү хәүефе хаҡындағы тәрән борсолоуы әйтелгән.

Ошо урында Ләйләне Мәжнүнгә кәләшлеккә яусыларға килгән уның атаһына ҡыҙ атаһы әйткән һүҙҙәр хәтергә килә. «Улығыҙ — бер диуана әҙәм бит», — тип Ләйләне Мәжнүнгә биреүҙән баш тартҡан атай кеше быны ни ти: «Әгәр һеҙ улығыҙҙы, дауалап, һауыҡтырһағыҙ, ул саҡта һеҙҙән, ҡыҙ түгел, йәнемде лә йәлләмәм».

Тимәк, Мәжнүн ошо мөмкинлекте файҙаланыр кимәлдә лә түгел. Ата-әсәһен дә бик актив тип булмай. Сүллеккә киткән Ҡайсты өгөтләү менән генә сикләнмәй, уны, Ләйләнең атаһы әйткәнсә, дауалаһалар ҙа, улай уҡ булмаҫ ине. Бынан, Ҡайстың мәжнүнләнеүендә ата-әсәһенең дә ғәйебе бар, тип һығымта яһарға мөмкин булыр ине, әммә бер «ләкин» бар.

Мәғлүм булыуынса, Мәжнүнде атаһы Ҡәғбәгә алып бара. Быный ҡыҙ атаһы әйткән әлеге һүҙҙе ғәмәлгә ашырыу ниәтенән атҡарылыуына төшөнөүе ҡыйын түгел. Әммә, иғтибар итегеҙ, атай кешенең: «Уғлым, был изге урында ниндәй теләк, доға әйтһәк, шул ҡабулдыр. Мәккәи-Мөкәрәмәнең яғаһына йәбешеп, Хоҙайҙан дарман һорап, ғишыҡ зарыңды башыңдан сығарып, мине әүәлге һау хәлемә ҡайтар, тип телә», — тигәнен Мәжнүн ана нисек «ҡабатлай»: «Йә Рабби, дәрткә дусар булып ҡапҡаңа килдем... йә Рабби! Мине ғишыҡ утынан дүндереп, янашымдан айырырға теләйҙәр... Ғишыҡ дәртемде көндән-көн артығыраҡ ит, ғүмеремде ғишыҡ менән тултыр!» Бәлки, атаһы артығырағын ысҡындырғандыр? Бәлки, беренсе һөйләме менән сикләнеп, икенсеһен әйтмәй торорға кәрәк булғандыр уға. Хәйер, ярҙамы тейере шикле: Мәжнүн барыбер шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлар ине. Быға нимә нигеҙ? Шул нигеҙ. Ғәрәптең Нәүфәл тигән бер бәге, бер түгел, ике тапҡыр Ләйләне, яусылап түгел, яу менән Мәжнүнгә алып бирергә, ҡыҙ атаһына ҡаршы сиреү менән сапҡын яһағанда, егет: «Я рабби, Ләйләнең ғәскәренә ярҙам ит, ҡеүәт вә саялыҡ биреп, аяҡ аҫтына ташлама!» — тип теләк теләй.

Улай ғына ла түгел, әҫәрҙең эске логикаһы, Ләйләнең Ибне Сәләмдән ҡотолоуына Мәжнүн ҡыуаныр, тип өмөтләндерә. Әммә Ләйләне кәләшлеккә алған Ибне Сәләм тигән бөйөк бәктең вафаты хаҡында

Зәйет атлы егеттең ҡыуанып һөйләүенә һис тә һөйөнөс белдермәй. Киреһенсә: «Бөгөн уға шулай булһа, иртәгә миңә был хәл килеүе аныҡтыр», — тип, был хәбәргә иҫе китмәүен генә аңлата Мәжнүн. Зәйет ярҙамында Ләйләһе менән осрашырға насип булғас, ерҙән теләгәнен Хаҡ тәғәлә күктән биргән был форсатты файҙаланмай ҡалмаҫ, тип өмөт итәһең. Ә Мәжнүн йәнә көтөлмәгәнсә эш итә: «И минең вафадарым! Хаҡ тәғәлә Гөл ямалығыҙҙы һулытмаһын!» Шулай тын тора ла йәнә көтөлгәндең киреһен һөйләп алып китә: «...мең күңел менән хәлемде аңлатмаҡ инем. Ләкин дә һөрмәле күҙҙәрең, нәфсемде тыйып, дәртемде лә баҫты». Йәнәһе лә, Мәжнүндең ғишыҡлыҡ сиренә генә түгел, егетлек ғәйрәтенең ҡайтыуына ла сәбәпсе — бер Ләйлә булып сыға. Был һүҙҙәрҙе ғәйепләү һүҙе, Ләйләгә хөкөм ҡарары сығарыу тип тә аңларға мөмкин. Ысынлап та, Мәжнүндең артабанғы һүҙҙәренән һуң уның Ләйлә менән ҡауышыу теләге күптән һүнеүе, уны бер күреүе менән дә ҡәнәғәтлек кисереүе аңлашыла: «Мөбәрәк ямалығыҙҙы күрмәк инем. Хаҡҡа шөкөрҙөр, кем. Морадым булды, башҡа һүҙем ҡалманы. Эшем бөттө». Бындай һүҙҙәрҙән һуң Мәжнүндең ҡыҙ менән ҡауышырына ла өмөт һүнә әҫәр менән танышыусыла. Һәм шулай була ла: Мәжнүн Ләйлә менән һаубуллаша ла, януарҙарын эйәртеп, китеп тә бара.

Бындай ситуацияға юлыҡҡан ҡыҙ ни эшләргә тейеш? Бигерәк тә уның Мәжнүнде күргәс тә, тәүҙә телһеҙ ҡалыуы, шунан ғына: «И, минең йән күңелдән ғашиғым! Күпме замандарҙан бирле ғишыҡ менән илап вә хәсрәт уты менән янып-көйөп, күҙҙәрҙән аҡҡан ҡанлы йәштәр түгелеп, бер сәғәт күрешергә мең йән менән моштаҡ-интизар теләк көслө икән!» — тигәнен иҫәпкә алғанда? Сөнки уның был һүҙҙәре, бары егеттең күңелен уйлап ҡына түгел, ысын күңелдән әйтелгән. Юҡһа, Ҡайс менән бергә уҡыған сағында уҡ, уның «матурлығына бағып, һөйөклө күреп» һоҡланып, уға ғашиҡ булмаҫ ине; «дәрес уҡығанда», икәүләшеп, «китаптарын ҡаплап, наҙлау һүҙҙәрен ятлағанда, эҫенеп, аҙна араһында бер көн айырылышып торғанда, күңелдәре болоҡһоп, хатта һабаҡтарын» онотмаҫ ине; атаһы осрашыуҙан мәхрүм итмәҫтән, Ләйләне күрмәмме тип, уның өй тирәһендә ураланып, бәйет әйтеп йөрөгән «Мәжнүндең өнөн ишеткәндә, ... күңел ҡеүәһе етһә, ҡош кеүек осорҙай» булмаҫ ине: теләк, ихтыярын иҫәпкә алмай, Ибне Сәлимгә кейәүгә бирелгәс, иренә: «Миңә ирешеү арзыһынан булма!» — тип, уның менән яҡынлыҡ ҡылмай, Йософона тоғро Зөләйха һымаҡ, үҙен Мәжнүнгә һаҡламаҫ ине. Шулай булғас, әсәһенә әйткәнсә, Ләйләнең «ғашиҡ юлында шаһит» булыуы ҡотолғоһоҙ. Һәм шулай була ла.

Шулай итеп, мөхәббәт темаһына ижад ителгән башҡа эпик ҡомартҡыларҙан айырмалы рәүештә, «Ләйлә менән Мәжнүн» дастаны үтә сентименталь, элегик пафослы. Ул, асылда, шундай метамарфозаға ҡоролған: уның төп геройы мөхәббәт хаҡына мөхәббәттән мәхрүм ҡала. Ҡайс-Мәжнүн үтә пассив. Үҙ хисенә бикләнгәнлеге уны тыуған йорто, ата-әсәһе, туғандарынан ғына түгел, шул хистәренә сәбәпсе булған Ләйләнән дә айырыуға сәбәп була. Ул айырылыу сиге шул тиклем тәрән, шул тиклем ҡалын һәм бейек. Уны аша сығыр өсөн егеттә көс тә, ғәйрәт тә юҡ. Мәжнүндең активлығы бары шунда

күренә: ҡасан уға морадына ирештерер юл асыла (атаһы Ҡәғбәгә килтереп, аҡын асырға теләй; Нәүфәл Ләйләне яу менән алмаҡ була; ата-әсәһе ил-йортҡа алып ҡайтырға теләй; Ләйләһе менән аңлашыу, ҡауышыу форсаты сыға) — ул гел генә кире ялтара, артҡа сигенә, ғәҙәтләнгән яңғыҙлығына һыйына. Быны ул атаһына шулай ғына аңлата:

«Һөйөүем мине үҙенә ҡол әйләнмештер.
Башҡа бер уй-ниәт ҡабул иттермәҫ.
Бары уның бойроғона буйһонғанмын».

Мәжнүн — һөйөү ҡоло. Ә ҡолдоң ирке лә, ихтыяры ла, ихтыяжы ла сикле, хатта булмауы ла ихтимал. Сөнки ҡолға, ҡаһарманлыҡ түгел, ҡол психологияһы хас.

Ләйлә тарафтарына килһәк, үҙ иркенән тыш Ибне Сәләмгә кәләшлеккә бирелгәс, уға: «Миңә ирешеү арзыһынан булма!» — тип, үҙен ҡыҙ хәлендә һаҡларға теләүен белдереп кенә ҡалмай. «Сөнки мин һиңә бер нисек тә баш эймәм! Һис тә көсөм етмәгән тәҡдирҙә, үҙемде ағыулап һәләк итермен», — тип, хатта ант итә. Әйтергә кәрәк, иренең дуҫтары: «Бер ҡыҙҙы шул хәтле мәшәҡәттәр менән ҡулға төшөргәндә, ни өсөн ҡауышыу ниәтендә түгелһең? Бер юлаусыға (йәғни Мәжнүн өсөн. — *Ә.С.*) шул ҡәҙәр аһ-ваһ килгәнгә, ни өсөн сабыр итәһең? Бындай ҡыҙҙы атаһының өйөнә ҡыуып ҡайтар! Мәһәр хаҡын талап ит», — тиһәлә̀р ҙә, Ибне Сәләм сабыр итә. Сөнки ул да Ләйләне үҙенсә ярата. Юҡһа, «уның йөҙөн күрергә һәм матурлығына һоҡланыуына ғына ла ҡәнәғәт» булып йәшәмәҫ ине. Әҫәрҙең «тел төбөнән» Ибне Сәләмдең башҡалар мөхәббәтен хөрмәт итә белеүсәнлеге лә аңлашыла биреп ҡуя. Ләйләнең мөхәббәтенә һоҡланыуына шул да сәбәпсе.

Ләйләнең: «Минең янашым Мәжнүнем һаумылыр? Минең хәлемдән вә был ҡайғымдан хәбәре бармылыр?» — тип өҙгөләнеүе башҡорттоң һырға туйында башҡарыла торған бер йырын хәтерләтә. Бына ул йыр:

Күктә һайрап осҡан буҙ турғай ҙа,
Күкте маҡтап та, шул, ҡалҡына.
Ат тирләтеп килгән егетенән
Бүләк көтөп ҡыҙы талпына.

Шул ҡыҙ кеүек, Ләйлә лә Мәжнүненең әүҙем булыуына өмөт итә, уны көтә. Әммә, бығаса әйтелгәнсә, ул өмөтлө көтөүҙәре бушҡа ғына булып сыға.

«Ләйлә менән Мәжнүн» дастанының иҫке төркисә яҙма рәүешендә башҡорттар араһына килеп юлыҡҡан варианты хаҡында юғарыла әйтелгәндәрҙе, асылда, үзбәк, ҡарағалпаҡ, әзри, төрөк версияларының варианттарына ҡарата ла ҡабатларға булыр ине. Сөнки башҡортсаға ҡайтарылған ул вариант сюжеттың төрки донъяһында киң мәғлүм варианттарынан әллә ни айырылмай. Айырмалыҡтар сюжет тотороҡлоғона зыян килтермәҫлек миҡдарҙа ғына күҙәтелә.

## 9. Хандар хаҡындағы дастандарҙың башҡорт версиялары

«Сыңғыҙнамә» әҫәре Урал — Волга буйында ижад ителгән төрки тәуарихтарҙың матур үрнәктәренән һанала. Исеме билдәһеҙ автор тарафынан яҙылған был китап башҡорттар араһында ғына түгел, татарҙар һәм ҡаҙаҡтар араһында ла киң таралған. Уның баҫма һәм ҡулъяҙма варианттары беҙҙең көндәрҙә лә табылып тора. Әҫәрҙең яҙылыу датаһы текста күрһәтелмәгән. Мәгәр, Сәйет Йәғәфәр етәкселегендәге 1681—1683 йылдарҙағы башҡорт восстаниеһы тураһындағы хикәйәт менән тамамланыуына ҡарап, уны XVII быуат аҙаҡтарында ижад ителгән тип фараз ҡылырға мөмкин. Шуйыһы ҡыҙыҡлы, күренекле башҡорт тарихсыһы Ә. З. Вәлиди-Туған үҙенең «Рус археографик йәмғиәтенең Көнсығыш бүлеге яҙмалары»ның 422-се томында (Петроград, 1915) баҫылған мәҡәләһендә XX быуат башында башҡорттарҙа 1610—1611 йылдарҙа яҙылған «Сыңғыҙнамә» әҫәре һаҡланыуы тураһында хәбәр итә. Тимәк, хәҙерге көндәргә килеп еткән «Сыңғыҙнамә» боронғораҡ тәуарихтың тулыландырылған варианты булыуы ихтимал. Әҫәрҙең XIX быуат башҡорт яҙыусыһы Ғәли Соҡоройҙоң улы Ғарифулла Кейековтың яҙма мираҫында һаҡланған варианты[1] ла ошо уҡ фекерҙе нығыта.

Ҡазан университетының уҡытыусыһы Ибраһим Халфин 1822 йылда «Әхүәли Чынғыз хан вә Аҡсаҡ Тимер вә тәуарихлар, мәхсуси бәғзе ҡисем ҡитғалар сәмим вә тәлмидлар...»[2] тигән оҙон исем менән бер китап баҫтырып сығара. Был исем үҙе үк китаптың төп йөкмәткеһен һәм шаҡтай сыбар жанр формалары берләшмәһен күпмелер әйтеп тора. Ул мәҙрәсәләрҙә, университетта уҡыу китабы урынына ҡулланыуға ла яйлаштырылған. Аҙаҡ ул рус теленә лә тәржемә ителеп, әллә нисә тапҡыр баҫылып, киң тарала, ныҡлап фәнни әйләнешкә инә[3].

Әйтергә кәрәк, йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө буйынса Урал — Волга регионында ижад ителгән «Сыңғыҙнамә» шул уҡ исемдәге Урта Азия ҡомартҡыһынан шаҡтай айырыла. «Сыңғыҙ хаҡындағы китап» тип аталһа ла, уның бер бүлеге генә Сыңғыҙ ханға арналған һәм унда төп геройҙың хәрби походтары түгел, ә донъяға килеүен алып тәхеткә ултырыуына тиклемге хәл-ваҡиғалар тасуир ителгән.

Композицион йәһәттән аноним «Сыңғыҙнамә» инеш өлөшкә һәм алты «дастан»ға (ҡайһы бер варианттарында әйтелгәнсә, «ҡисса»ға) бүленгән. Инештә Сыңғыҙ хандың нәҫел-нәсәп силсиләһе бирелгән. Генеалогик сылбыр дини-мифик геройҙар — Нух пәйғәмбәр һәм уның улы Йәфәттән башлана һәм Борһам солтан исеме менән тамамлана. Әҫәрҙең төп өлөшөн тәшкил иткән бүлектәр жанр һәм күләм яғынан

---

[1] Был хаҡта ҡара: Нәҙерғолов М. Шағир һәм ғалим Ғарифулла Кейеков / Ағиҙел, 1986, №8, 123-сө б.

[2] Әхүәл Чынгыз хан вә Аҡсаҡ Тимер вә тәуарихлар... — Ҡазан, 1822.— 32—33-сө б.

[3] Березин И. Турецкая хрестоматия. — Казань, 1876.

бер үк түгел. Автор уларҙың һәммәһен дә «дастан» («кисса») тип атаһа ла[1], тәүге өс бүлек һуңғыларынан ҡырҡа айырыла.

Сыңғыҙ хан, Аҡһаҡ Тимер һәм Ғайса улы Әмәт хаҡындағы бүлектәр ысын мәғәнәһендә әҙәби әҫәр булып әүерелгән. Уларҙың һәр береһенең мөстәҡил сюжеты, образдар системаһы бар. Һуңғы өс бүлектә урта быуат көнсығыш агиографик әҙәбиәте һәм шәжәрә жанры традициялары нык һиҙелә. Улар асылда хандар һәм батшалар исеме теҙмәһенән һәм шуның менән аралашҡан легенда һәм риүәйәттәрҙән ғибәрәт.

Ҡомартҡының нигеҙендә патриархаль ырыу һәм феодализм ҡоролошо идеологияһы ята. Уның төп геройҙары — хеҙмәтсән халыҡ массалары түгел, ә хакимлыҡ итеүсе класс вәкилдәре, бейҙәр, хандар һәм батшалар. Әҫәр ислам тәғлимәте йоғонтоһонан да азат түгел. Был бигерәк тә Хызыр Ильяс образында асыҡ сағыла.

Шулай ҙа «Сыңғыҙнамә»не бөтөнләйе менән реакцион рухтағы әҫәр тип ҡарарға нигеҙ юҡ. Сөнки унда демократик һәм гуманистик характерҙағы идеялар ҙа күп урын алған. Бүдәнәтәй менән Билгүтәйҙең халыҡтың күп йыллыҡ тәжрибәһенә, мәҡәл-әйтемдәренә нигеҙләнгән васыяты быны асыҡ миҫалы була ала. Ҡомартҡыла күпмелер кимәлдә реаль тормош күренештәре һәм ябай халыҡтың уй-хыялдары ла сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, унда Сыңғыҙ хан менән Бирдебәк хан изге күңелле, йомарт, ғәҙел батшалар итеп һүрәтләнә һәм халыҡтың тормошон тик улар ғына бәхетле итә ала тигән идея үткәрелә. Был, әлбиттә, синфи аң үҫешенең түбән булыуы һөҙөмтәһе. «Идеаль» батша проблемаһы, билдәле булыуынса, Ҡол Ғәлиҙең «Киссаи Йософ» (XIII б.), Ҡотбиҙың «Хәсрәү вә Ширин» (XIV б.), Харәзмиҙең «Мөхәббәтнамә» (XIV б.) һәм Хөсәм Кәтиптең «Жөмжөмә солтан»ы (XIV б.) кеүек күп кенә урта быуат төрки әҙәбиәте йәдкәрҙәренең үҙәгендә тора.

Әҫәрҙәге айырым мотивтар сығышы менән урта быуат ғәрәп, фарсы, монгол һәм боронғо төрки тарихи-әҙәби ҡомартҡыларына, шул иҫәптән Жувәйниҙең «Тарихи жиһанһуш» («Донъяны яулап алыусы тарихы»), Рәшит-әт-диндең «Жәмиғ әт-тәуарих», монголдарҙың «Юань чао би ши» («Ҡәҙерле риүәйәт») һәм «Алтан дептер» («Алтын дәфтәр») әҫәрҙәренә, «Китабы дәдәм Ҡорҡот» («Ҡорҡот ата китабы») һәм Абулғазиҙың «Шәжәрәи төрк» кеүек яҙмаларға барып тоташа.

Тәуарихтың һәр бүлегендә тиерлек боронғо башҡорт шәжәрәләре менән бәйләнеш күҙәтелә. Мәҫәлән, беренсе бүлектәге ырыу башлыҡтарының ханды эҙләп табып, үҙ илдәренә алып ҡайтыуы тураһын-

---

[1] Бер үк әҫәрҙе төрлө жанр атамаһы менән йөрөтөү урта быуат көнсығыш әҙәбиәтендә типик күренеш булған. Был осраҡта Сыңғыҙ хан, Аҡһаҡ Тимер һәм Ғайса улы Әмәт тураһындағы бүлектәр жанр тәбиғәте менән күберәк ҡиссаға тартым. Сөнки дастандарҙың төп үҙенсәлеге героик йәки мөхәббәт сюжетына ҡоролған шиғри йәки шиғыр менән проза аралашҡан формалағы ҙур эпик әҫәрҙәрҙә сағылһа, ҡиссаларҙыҡы сәсмә рәүештә яҙылған сағыштырмаса бәләкәй күләмле тарихи-әҙәби әҫәрҙәрҙә кәүҙәләнеш таба. (Ҡара: Краткая литературная энциклопедия: В 9-ти т. — М., 1964. — Т.2. — 530—532-се б.; Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы. — Өфө, 1984, — 228-232-се б.)

дағы мотив Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһендә, икенсе бүлектәге Самат ханға һәм аждаһаға бәйле легенда Юрматы ырыуы шәжәрәһендә осрай. Ҡиссала хәрәкәт иткән бейҙәрҙең күпселеге башҡорт ырыу-ҡәбилә башлыҡтары: Ҡыпсаҡ, Тамъян, Ҡатай, Юрматы, Һалйут, Бөрйән, Майҡы, Мөйтән, Урҙас. Ә ырыу атрибуттары булыр әлеге атамаларҙың, тамға рәүештәренең шул бейҙәр исемен йөрөткән башҡорт ырыуҙарының ағас, ҡош, оран, тамға атамалары һәм рәүештәре менән тура килеүе лә — бик характерлы күренеш. Тимәк, бында ниндәйҙер уртаҡ сығанаҡ бар.

Әүәл, әйтәйек, Табын ырыуы шәжәрәһенә нигеҙ булып ятҡан Майҡы бей легендаһынан һәм ҡайһы бер бүтән риүәйәттәрҙән күренеүенсә, башҡорттарҙың ағас, ҡош, оран, тамға алыуҙарына бәйле эпик әҫәрҙең йәки шул мотивты сағылдырған ҙур ҡобайырҙарҙың булыуы ла бик ихтимал. Һалйут башҡорттары араһында 20-се йылдарҙа яҙып алынған бер риүәйәттә характерлы деталь диҡҡәтте тарта. «Башҡорттарҙың Сырҙы аймағынан Тимерҡотто Сыңғыҙҙың бейе булған», — тиелә унда. Сыңғыҙ үҙҙәренең бейҙәренә ағас, ҡош биргән. Сырҙыларҙың ағасы — ерек, ҡошо — һайыҫҡан булған. Башҡалар унан көлгәс, Сыңғыҙ хан әйткән, ти:

Һеҙҙең арала Тимерҡотто аҡыллы:
Тимерҡотто, ағасы барҙа, һыу табыр,
Ҡошо барҙа, ил табыр;
Һайыҫҡан илһеҙ булмаҫ,
Ерек һыуһыҙ булмаҫ.[1]

Ләкин шулай ҙа Сыңғыҙ хан хаҡындағы ҡисса күпме ил-ерҙәрҙе яулап алған, күпме халыҡтарҙы үҙенә буйһондорған хандың оло яуҙары, бар тормош юлын бәйән ҡылыр, шундай сығанаҡтарға ныҡлы таянып ижад ителер дөйөм монгол-төрки тибындағы әҫәр булыуға ҡарағанда, күберәк башҡорт ырыу башлыҡтары менән бәйләнешле бер локаль әҫәр һымағыраҡ килеп сыҡҡан. Аноним автор боронғо сығанаҡтан төп мотивты алған да уны күпселеге башҡорт ырыу башлыҡтарының нисек итеп ханды күтәреү, үҙҙәре бей, ырыу атрибуттары алыу ситуацияһына көйләп һәм төйнәп ебәргән. Был ситуация үҙе лә тарихи хәҡиҡәткә түгел, шул уҡ фантазияға ҡоролған. Ҡиссаның йөкмәткеһе лә, хикәйәләү рәүеше лә, хатта бөтөн рухы башҡортлоҡ, башҡорт шәжәрәләре менән һуғарылған тиерлек. Хатта Сыңғыҙҙың башҡорт бейҙәре менән яуға сығыу, ҡош сөйөү ваҡиғаларын бәян иткән өлөштәре башҡорт халыҡ эпосының айырым киҫәктәрен иҫкә төшөрә.

Эпостарҙың төп эпик формаһынан килер ҡобайыр, әйтем алымдары ҡиссала үҙҙәрен ныҡ һиҙҙерә. Мәҫәлән, Аланғу ханбикәнең улдарына ике аҡһаҡал шундай өгөт-нәсихәт бирә:

«Уңар йортноң нишан вә билгесе ул тороp:
Жаудан илен күп итәр, ҡала төбөн ур итәр,
Дыруазсын (?) киң итәр...

---

[1] Ғилми архив, ф. 3. оп. 26, 2-се том, 57-се б.

Уңмас йортноң нишан вә билгесе ул торор:
Үз йортон яманлар, кеше йортон маҡтар;
Үз ыруғын яманлар, кеше ыруғын маҡтар;
Үз ағасын яманлар, кеше ағасын маҡтар;
Олосо торор, кечесе сөйләр, атасы торор,
Уғлы сөйләр вә мысҡылчы булыр.
Жирән ат бенгән ҡызыл йөзлө уғландин
Киңәш сораған ул кеше — кеше булып йорт көтмәс,
Ил булмаған ил улса, ул ил — ил улмас;
Мал көтмәгән мал көтсә,
Ҡыу үләнне утлатыр,
Ҡош чөймәгән ҡош чөйсә, ҡарға берлә ҡаҙ алдырырмын дир;
Түрә көтмәгән түрә көтсә,
Кеше итен ейәрмен дир,
Көн күрмәгән көн күрсә,
Көн итүне ҡиәмәт дир;
Мал тапмаған мал тапса,
Кешене күзгә әлмәм дир» һ.б.

Бындай әйтем һүҙҙәр, ҡобайырҙарҙағыса, үҙенсә һарнап бирелгән.

«Сыңғыҙнамә»лә башҡорт фольклоры менән ауаздаш бындай юлдар байтаҡ. Мәҫәлән, аҡһаҡалдар Бүдәнәтәй менән Билгүтәйҙең әйткәне күп йәһәттән «Яҡшы ҡатын менән яман ҡатын», «Яҡшы әҙәм менән яман әҙәм», «Тоғро һүҙ», «Йырау һүҙе» исемле дидактик ҡобайырҙарға тартым. Аҡһаҡ Тимергә бағышланған ҡиссаның төп мотивы Буяғым хан тураһындағы боронғо йыр һәм уның тарихы өсөн дә уртаҡ. Ҡомартҡыла «Куҙыйкүрпәс һәм Маянһылыу», «Кужаҡ һәм Тарғын», «Ҡарас батыр» кеүек халыҡ эпосы әҫәрҙәре менән уртаҡ художестволы һүрәтләү саралары күп урын алған. Әҙәби тел тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар текста башҡорт теленә хас ифрат күп лексик-грамматик берәмектәр, синтаксик формалар һәм стилистик биҙәктәр таба ала.

Тәуарихтағы айырым темалар һәм мотивтар XVIII—XX быуат баштарында Тажетдин Ялсығол, Ғәли Соҡорой, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Ғарифулла Кейеков һәм Шәйехзада Бабич әҫәрҙәрендә һәм хеҙмәттәрендә дауам итә. Тәүге бүлегенең төп геройҙары булып башлыса башҡорт ырыу башлыҡтары сығыш яһауы һәм һуңғы ике бүлектә күберәк Көньяҡ Уралда барған хәл-ваҡиғалар һәм башҡорт восстаниелары яҡтыртылыуы ла «Сыңғыҙнамә»не башҡорт ерлегенә яҡынайта.

Был ҡиссаның башҡорт шәжәрәләре менән бәйләнеше бик тығыҙ булыуы ла шуға дәлил. Мәҫәлән, башҡорттарҙың табын ырыуҙары шәжәрәләрендә Майҡы бей исеме һәм эштәре йыш телгә алына.

Майҡы бей — тарихи шәхес. XIII быуаттың баштарында йәшәгән Ҡаҙаҡ легендаларындағы шикелле[1] башҡорт шәжәрәләрендә һәм ле-

---

[1] Валиханов Ч. Собрание сочинений, т. I. — Алма-Ата, 1961. — С. 107, 109, 539.

гендаларында Майҡы бей шулай уҡ Сыңғыҙҙы ханлыҡҡа күтәреүҙә башлап йөрөүселәрҙең береһе булып күренә.

Ҡара Табын шәжәрәһе былай ти: «Ҡара Табын аймағы Майҡы бейҙән таралмышдыр. Майҡы бей Чыңғыз хан дәүерләрендә Урал тауының Миәдәк тигән урынында булып, Миәс йылғасы буйында мәҡәм иткән; ул Чыңғыз ханға бүләк алып барып, аның белән юлдаш булып, Чыңғыз хан белән бер арбаға ултырып йөрөгән; аты Уйшин Майҡы бей тигәнләр»[1].

«Кесе Табын халҡының нәсәбнамә»һендә шулай яҙыла: «... Майҡы Чыңғыз ханның зур бейләренең берсе була. Чыңғыз хандан ҡағидә өчөн тамға, ағач, ҡош, оран һәм сауыт алмыш. Тамғамыз — ҡабырға, себерке мисалы, ағачымыз — ҡарағач, ҡошомоҙ — ҡарағош, оранымыз — салауат, сауытымыз — сәйгәр. Бу Майҡы Чыңғызны ханлыҡҡа күтәрергә сәбәпче булған. Ҡағидәле бей — Майҡы бей диләр»[2].

Башҡорт ырыуҙарының бүтән шәжәрәләрендә шулай уҡ Сыңғыҙ ханға бәйле ептәрҙе табырға мөмкин. Үҫәргән шәжәрәһе, мәҫәлән, ырыу башы Мөйтәнде шулай уҡ ханға килтереп ялғай һ.б.

«Сыңғыҙнамә» китабы, аноним автор һәм төҙөүсе әйткәнсә, шәжәрәләр һәм легендалар нигеҙендә килеп тыуған. «Автор башҡорт тарихи традицияларының мәғлүмәттәре менән файҙаланған»лығын татарҙың күренекле ғалимы М. А. Усманов таный[3]. Ә бер төрөк энциклопедияһында: «Ҡыпсаҡсаға яҡын бер әҙәби теле булған башҡорт әҙәбиәтенең иң характерлы үрнәге XVI быуатта башҡорт ерендә ижад ителгән «Сыңғыҙнамә» дастанылыр»[4], — тип әйтелә.

Абдулҡадир Инан да, был дастандың башҡорттоң рухи ҡомартҡыһы булыуын ҡайта-ҡайта дәлилләп, унда «Ҡазан иле»н хәтерләткән хатта бер һүҙ ҙә табылмаҫ», «Ҡазан илендә «Сыңғыҙнамә» кеүек дастандың яҙылыуы мөмкин түгел», тигән. (Ҡушымтаны ҡарағыҙ).

Әгәр Сыңғыҙ хан менән уның ярандары хаҡындағы мәғлүмәттәр башҡорт тарихи традицияларында — тарихи риүәйәттәрҙә һәм шәжәрәләрҙә ҡыҫҡаса хәбәр итеү, башҡорт ырыу атрибуттары тирәһенә туплау рәүешендәрәк булһа, аноним автор иһә әҫәрендә быларҙы эпик жанр киңлектәренә йәйеп ебәрә; дастан ҡоласы менән эш итә.

Әгәр автор ҡиссала, башҡорт шәжәрә традицияларына тоғро ҡалып, ырыуҙарҙың хан заты менән бәйләнешенә бик ныҡ баҫым яһаһа, икенсе бер тарихи яҙмаларҙа, киреһенсә, башҡорттарҙың Сыңғыҙ хан хакимлығы менән һис тә генә килешә алмауҙары әйтелә. «Башҡорттар өҫтөнән бер заман Сыңғыҙ хан хакимлыҡ иткән, — тигән раҫлауға, мәҫәлән, иғтибар итмәйенсә булмай. — Ул 17 йәшенән хан булған, 69 йәштә үлгән. Уны (йәғни Сыңғыҙ ханды) башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәрен ҡыҫа торған фарман сығарғаны өсөн Мир-Тимер исемле башҡорт батыры үлтергән»[5]. Феодаль-патриархаль рухтағы яҙмаларға ҡапма-ҡаршы демократик, халыҡсан быңдай йүнәлеште

---

[1] Башкирские шежере. — С.164.

[2] Өмөтбаев М. Ядкәр, 1897.— 50-се б.

[3] Усманов М. А. Татарские исторические источники XVII—XVIII вв., с. 110.

[4] Baskurt edebiyate. Turk anseklapedisi, çilt 5.-Ankara. 1952.

[5] Назаров П.С. К этнографии башкир//Этнографическое обозрение. — М, 1890. — №1.

Сыңғыҙ хан һәм, ғөмүмән, татар-монгол яуҙарына ҡаршы көрәште сағылдырған «Биксура», «Аҡман-Тоҡман», «Бөрйәндәр хан заманында» тибындағы бик күп тарихи риүәйәттәр ҡеүәтләй. Әлек башҡорттар араһында «Сыңғыҙнамә» әҫәренең үҙ аллы яҙма һәм баҫма версиялары киң таралғанлығы ла мәғлүм[1].

Заманында Аҡһаҡ Тимер хаҡында ла төрлө халыҡтарҙа төрлө риүәйәттәр, легендалар тыуған, яҙма әҫәрҙәр, хатта шуның автобиографик формаһы ла барлыҡҡа килгән[2]. Башҡорттар араһында ла Аҡһаҡ Тимер хаҡында төрлө риүәйәттәр, яҙма әҫәрҙәр шаҡтай киң таралған булған, улар шәжәрәләргә, тәуарихтарға килеп ингән. Шуларҙың берәгәйле бер үрнәге, мәҫәлән, «Һуңғы Һартай» әҫәре. Байтаҡ мотивтар яҙма «Аҡһаҡ Тимер ҡиссаһы»на ла килеп ялғана. «Аҡһаҡ Тимер» тигән тарихи риүәйәттә лә күпмелер ҡабатлана[3].

«Буяғым хандың көйө һәм тарихы» тигән башҡорт риүәйәтендә ҡиссала үҫтереләсәк мотивтың нигеҙе ята.

Ҡиссаның икенсе яртыһында Аҡһаҡ Тимерҙең нисек итеп Әстрхан, Бүләр ҡалаларын, Болғар ерҙәрен яулап алыуҙары хаҡында яҙыла. Бында ла ниндәйҙер риүәйәт, легенда һәм шәжәрә мотивтары сағыла. Аҙаҡ улар тәуарихтарҙа ҡабатлана.

Аҡһаҡ Тимерҙең Бүләр ҡалаһына һөжүменә бәйле рәүештә был ҡала һәм уның халҡы, ханы хаҡында ҡиссала ҡыҙыҡ хәлдәр тасуир ителә. «Ул ваҡытта Бүләр шәһәренең ханы Самат хан дигән, күбесе Бес-Ҡыбаҡ дигән ирде, халайыҡы бараж дигән халыҡ, — тип яҙыла ҡиссала. — Әүәл ул бараж халҡының боронғо йорто ошбу Зәй тамағында ирде. Качан алпларның заманы ирде, бер Бараж атлығ аждаһа йылан килеп, ул шәһәрнең халҡыға көч вә зыян суғышдылар...»[4] Был ситуация башҡорттарҙың Юрматы ырыуы шәжәрәһендә лә үҙенсә сағылып уҙа[5].

Был мотив башҡорт тәуарихында ла бар.

Шәжәрә менән ҡиссаның был ситуация нигеҙендә аждаһа исеме менән бәйле мифологик сюжет ятһа ла, уның боронғо башҡорт ырыуҙарының болғарҙар менән тығыҙ аралашыуын, Бүләр ҡалаһына нигеҙ һалыуҙарын Зәй, Шишмә, Волга буйҙарындағы миграцияһын, ниһайәт, Аҡһаҡ Тимер яуына ҡаршы сығыуҙарын төҫмөрләү яғынан тарихи ерлеге бар.

Ҡиссаның авторы Аҡһаҡ Тимерҙең юлбаҫарлыҡ ҡылып йөрөүҙәрен, төрлө хәйлә һәм золомдарын, ил-халыҡтарҙы баҫып алыуын, талауҙарын хикәйәләүендә уның бөтә яу юлын, ҡанһыҙлығын хөкөм

---

[1] Игнатьев Р. Г. Сказания, сказки и песни, сохранившиеся в рукописях... // Записки Оренбургского русского географического общ-ва. Оренбург, 1875. — Вып.3. — С.202; Краеведческий сборник. — Уфа, 1930. — С. 76.

[2] Автобиография Тимура. Богатырские сказания о Чингиз-хане и Аксак-Тимире. Перевод, вступительная статья и комментарий В. А. Панова. М.: Академия, 1934.

[3] БХИ. 2-се том. РЛ. — №216.

[4] Әхүәл Чынгызхан вә Аҡсаҡ Тимер вә тәуарихлар... — Ҡазан, 1822. — 75-се б.

[5] Башкирские шежере. — С.27.

итә. Халыҡ риүәйәттәрендәге кеүек, ул да Аҡһаҡ Тимергә ил баҫыусы итеп ҡарай.

Мөһиме тағы шул, аноним авторҙың был Аҡһаҡ Тимер ҡиссаһы аҙаҡ Ш. Мөслими, Т. Ялсығол, Ғ. Соҡоройҙарҙың «Тәуарихи Болғарийа» китаптарына туранан-тура күсеп, башҡорт әҙәбиәтендә ул сюжеттың артабанғы дауамын, художестволы традицияһын хасил итешә.

Ахырҙа шуныһын да әйтәйек: «Сыңғыҙнамә»нең икенсе өлөшө итеп бирелгән «Аҡһаҡ Тимер» дастаны күп кенә ҡулъяҙмаларҙа «Фасыл фи бәяни дастани Аҡсаҡ Тимер» тип атала. Ә И. Халфин баҫмаһында ул «Ҡиссаи Аҡсаҡ Тимер» тип исемләнгән. Был һуңғы исем әҫәрҙең жанр тәбиғәтенә нығыраҡ ярашлы.

«Сынғыҙнамә» йыйынтығының өсөнсө бүлеген «Ғайса улы Әмәт» тигән әҫәр тәшкил итә. Ул тулы ҡулъяҙма исемлектәрҙең барыһында ла тиерлек осрай. Тик И. Халфин баҫмаһында ғына ул, ни эшләптер, төшөрөп ҡалдырылған. Китаптың баш һүҙенә ҡарағанда, ул әҫәр башта индерелгән булған[1]. Рәхимйән Жиһаншин әҙерләп сығарған 1882 йылғы баҫмала — «Һәҙа китабы фаслы дастан нәсли Чынғыз хан вә һәм Аҡсаҡ Тимер нәслиндән бәян идәр» тигән йыйынтыҡта «Ғайса улы Әмәт» тулы көйө баҫылған. Быға тиклем ул С. Күкләшевтең 1859 йылғы хрестоматияһында донъя күргән була[2]. Башҡорттар араһында таралған ҡулъяҙма китаптарҙа ул «Хикәйәте Ғайса улы Әмәт» исеме менән осрай[3]. Башҡорт тәуарихтарында ла Ғайса улы Әмәт телгә алына.

«Ғайса улы Әмәт» әҫәре алда килгән әҫәрҙәрҙән үҙенең йөкмәткеһе, жанр тәбиғәте, художество үҙенсәлектәре менән шаҡтай айырылып тора. Был, берҙән, һарай интригаларына, мөхәббәт сюжетына ҡоролған әҫәр. Икенсенән, унда дастансылыҡ һәм тарихи хикәйәт сифаттары көслөрәк.

Йөкмәткеһе һәм стиле менән был сюжет тарихи хикәйәткә яҡын булһа ла, нигеҙе менән халыҡ эпосына барып тоташа. «Ғайса улы Әмәт» асылда ҡырҡ батыр циклына ҡараған нуғай эпосы төркөмөнән. Уның ҡаҙаҡтарҙа булған версиялары, нуғайҙарҙа һаҡланған «Айсылдың улы Әмәт батыр» эпик йырҙары шуны раҫлай[4]. В. В. Радлов уның ике версияһын яҙып алған һәм баҫтырып сығарған[5].

Башҡорттар һәм татарҙар араһында яҙма һәм баҫма рәүештә таралған «Ғайса улы Әмәт» әҫәре шул эпик традициянан үҫеп сыҡҡан яҙма әҙәби форма ул. Унда тарихи хикәйәт стиле үҙәкләшкән. Алда әйтелгәнсә, башҡорт ҡулъяҙмаларында әҫәрҙең исеме лә «Хикәйәте Ғайса улы Әмәт» тип атала. Ҡаһармандары Жәнебәк[6] Бирдебәк хан,

---

[1] Әхүәл Чынгыз хан вә Аҡсаҡ Тимер вә тәуарихлар... — 2-се б.

[2] Күкләшев С. Диуане хикәйәте татар. — Ҡазан, 1859. — 45—50 се б.

[3] Башҡорт әҙәбиәтендә метод һәм стиль мәсьәләләре. — Өфө, 1982, 99—109-сы б.

[4] Жирмунский В. М. Тюркский героический эпос. М., «Наука», 1974, С.395; Ногай халыҡ йырлары М., 1969, 27—33-сө б.

[5] Радлов В. В. Образцы народной литературы тюркских племен, Т. VII. 1896.

[6] Йәнебәк хаҡында аңлатмалар өлөшөн ҡарағыҙ.

шулай уҡ Ғайса һәм Әмәт — тарихи шәхестәр. Хикәйәттәргә хас булғанса, бында һарай интригалары, сюжет мажаралылығы көслө. Хан һәм бейҙәр рәхимһеҙ һәм ҡанһыҙ деспоттар итеп ҡылыҡһырлана, улар араһындағы тәкәбберлек, мәкерлелек, үлтереш-талаштар бәйән ҡылына.

Әҫәрҙең теле төркиҙең иҫке формаларын шаҡтай ныҡ һаҡлауы менән бергә, унда халыҡсан тел — башҡорт лексик ҡатламы ярайһы уҡ ҡалын. Стиле йыйнаҡ, тапҡыр, экспрессив сараларға, монолог, диалог, реплика алымдарына бай. Сәсмә форма менән теҙмә формаларының аралашыуы характерлы.

Уның ҡайһы бер өлөштәре, эстәлегенә ҡарап, тәуарих, шәжәрәләр стиленә көйләнә: «(Әмәт) Идел башына чыкты. Идел башында мәкамйорт тоттолар. Жәнебәк хан үлгәндән суң, Бирдебәккә килеп ҡушылды. Ханның ярты йортон биләде. Ул ваҡытта Әстерханда Тимер Ҡотло хан ирде. Уғылы, ҡыҙы юҡ ирде» һ.б.

Батырҙарҙың алышын йә сәфәрҙәрен һөйләгән өлөштәрҙә иһә эпостарҙағыса халыҡсан тасуирлау саралары, алымдары килеп инә. Мәҫәлән, Әмәт менән Аласын алауҙың алыштары, алыш алдынан ҡара-ҡаршы әйтешкән һүҙҙәре, башта уҡты һаҙаҡҡа атыуҙары нәк «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Ҡуҗаҡ менән Тарғын», «Ҡарас батыр» эпостарындағыса һүрәтләнә.

Ә инде (Йәнебәк) «хан һунар ҡоштары менән ауға сыҡҡанында, бисәһе ҡыҙ тапһа, сабыйҙы үлтерергә, ул тапһа, килеп һөйөнсө алырға бойора» мотивы «Таһир менән Зөһрә» дастанының башҡорт версияһының бер вариантында ҡабатлана.

Йәнебәк хан ҡыҙын Мәңгәл байҙың Тимер атлы улына бирергә уйлағас, Әмәт, үпкәләп, ханға былай тип һамаҡлай:

Охшармы, бикләр, охшармы,
Монча дәүләт бар булса,
Арғымаҡның аяғын
Ебәк берлә тышармы?
Тимер икән ҡош атҡан,
Ғайса уғылы Әмәт барында,
Мәнгәл уғылы Тимергә
Ҡызын бирмәк охшармы?[1]

Ә бына «Айсылдың улы Әмәт батыр» тигән нуғай йырында был эпизод түбәндәгесә яңғырай. (Ул версияла Мәңгәл бай урынына Бугалы бай — малға бай тип алынған.)

«Әмәт ҡымыз аяғын ҡулға алып, булай толгады:

...Усармы, яннар, усармы
Арғымаҡтан айванның
Аяғын ший ебек пен тысармы?
Илдең басы Янибек хан

[1] Ногай халҡ йырлары, 28—29-сы б.

Бугалы байдың улына,
Бугасын баҡҡан ҡолона,
Айсылдың батыр Әмәте сауында
Ҡызын бирер осармы?
Усады, яннар, усады,
Арғымаҡтай айванның
Аяғын ший ебек пен тысады,
Ике йөзли Янибек,
Бугалы байдың улына,
Бугасын баҡҡан ҡолона,
Айсылдың батыр Әмәте сауында
Арам эвлет кетермен[1].

Нуғай версияһында был эпизод ҡобайыр, тулғауҙарҙың эпик традицияһы буйынса һорау — яуап (был урында һораулы өндәш һәм раҫлау) рәүешендә үҫтерелә. Унда үскә күскән толғау һүҙен Әмәт шулай дауам итә:

Булҡыншаған бурарман,
Бурып йолға саларман,
Кедегеңди кесермен,
Кесип шонтыҡ этермен,
Эленди эки белермен,
Элтер тивга ябарман,
Белик-шөлик этермен,
Бөриккен койдай этермен,
Бу айтҡанымды этермен,
Морадыма етермен.
Бу айтканымды этпесем,
Морадыма етпесем,
Атам Айсыл, мен Амет,
Атамнан үлисте алмай, мал да алмай
Ҡызын бирер осайды[2].

Бындай традицион алым — поэтик клише башҡорт ҡобайырҙарына ла уртаҡ.

«Ғайса улы Әмәт» әҫәренең ике версияһын сағыштырып ҡарау шундай фекергә килтерә: Нуғай урҙаһы дәүерендә барлыҡҡа килгән батырҙар йыры (ҡобайыры) циклынан был сюжет нуғайҙарҙа эпик йыр формаһынан теҙмә һәм сәсмә форма аралашҡан жанрға таба, ә башҡорттарҙа, нигеҙҙә, сәсмә хикәйәт рәүешен алған яҙма форма йүнәлешендәге эволюцияһын, милли үҙ аллы версияларын тыуҙырған. Һуңғыһында эпик йыр (ҡобайыр) формаһы ике шиғри киҫәк булып рудементар төҫтә генә һаҡланып ҡалған. Шуныһы ла бар, нуғайҙарҙа эпик сюжет, тарихилыҡ билдәләрен шаҡтай юйып, халыҡ иртәктәренә яҡынайған, төп батыры тамам халыҡлашҡан. Ә ҡулъяҙма «Ғайса улы Әмәт» версияһында тарихилыҡ ныҡлыраҡ һаҡланған, сюжеты, теле-стиле яҙма традицияға ауышҡан.

---

[1] Ногай халҡ йырлары, 28—29-сы б.
[2] Ногай халҡ йырлары, 29-сы б.

## 10. Ялыҡ бей хаҡындағы дастандың теҙмә варианттары

1935 йылда М. И. Касьянов тарафынан рус телендә теркәлеп, ғилми архивта һаҡланған «Һуңғы Һартай» эпосы 1971 йылдан алып ара-тирә баҫтырылып килә. (Был хаҡта «Аңлатмалар» бүлегендә махсус әйтелә). Үҙенең йөкмәткеһе, бәйән ителеү рәүеше, пафосы менән был сәсмә эпос тикшеренеүселәрҙең генә түгел (ә уның хаҡында Мөхтәр Сәғитов, Ғайса Хөсәйенов, Фәнүзә Нәҙершина, Салауат Галин, Бериән Байымовтар яҙғаны бар) шағир халҡын да, уларҙан күрмәксе ҡәләм тибрәтеүсе һәүәҫкәрҙәрҙең дә иғтибарын үҙенә тартып тора. Шул иғтибарҙың һөҙөмтәһе булараҡ донъяға яралған өс яҙма дастан өлгөһө ошо томда уҡыусылар хөкөмөнә тәҡдим ителә. Уларҙың барыһы ла теҙмә телмәр рәүешендә ижад ителгән.

«Һуңғы Һартай» әҫәрен М. И. Касьянов ниндәй хәлдә тапҡан: кемдеңдер тәржемә итеүен ишетмеш буйынса теркәгәнме, әллә боронғо берәй яҙманы тәржемә итеп биргәндерме, был хаҡта ул бер төрлө лә мәғлүмәт ҡалдырмаған. Әммә шуныһы хаҡ: тексы рус телендә булыуына ҡарамаҫтан, әҫәрҙең төп нөсхәһенең башҡорт телендә һәм мотлаҡ ҡобайыр рәүешендәге теҙемдән тороуын күҙаллатырлыҡ билдәләре бар. Эш бында рус транскрипцияһында *«тамға», «яу», «әйе», «көтөрсе», «был якшы», «һурпа», «аҡһаҡал»* ише башҡорт һүҙҙәре йә һүҙбәйләнештәре ҡулланылыуҙа ғына түгел, русса йә башҡортса «Тыңлағыҙ, барығыҙ ҙа!», «Эй, ағаларым!», «Тыңлағыҙ!» («Слушайте все! Имя мое — Джалык...», «Тынлагыз барыгыз да! Я расскажу...» «Слушайте...», «Я вам скажу...») — тигән өндәштәр, һөйләмдәрҙең ниндәйҙер эске ритмға буйһоноп, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа итеп бирелеүҙәрендә лә. Бындай мөрәжәғәт рәүештәре ҡобайыр ҡойоу маһиры тип танылған сәсәндәр стиленә хас. Ә улар үҙҙәренең ҡобайырын шулай башлар булған:

> Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
> Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
> Илгә әшкәр итәйем:
> Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
> Боронғонан аманат...

Бындай өндәмә — инеш, мәҫәлән, «Ишет быны ҡартыңдан», «Бейек тауҙың үлгәне» ише ҡобайырҙарҙа күҙәтелә[1]. Йәнә лә ҡобайырҙарҙа:

> Уҙамандар, ағайҙар,
> Аҫыл туған, мырҙалар!
> Ҡолағыңа һүҙ әйтһәң,
> Ҡолағының эсенән...

кеүек мөрәжәғәт формулаһы ла ҡулланылыусан[2].

---

[1] БХИ: Эпос. 3-сө кит. — 164-се б.

[2] Шунда уҡ. — 172-се б.

Башҡортса килтерелгән миҫалдар ҙа, руссаһы ла сәсәндең тыңлаусылар иғтибарын йәлеп итергә теләүенән әйтелә. Күренеүенсә, мөрәжәғәт формаларының ике осраҡта ла бер үк тәғәйенләнеше, стилистик яҡтан һүҙмә-һүҙ тиерлек тап килеше күҙәтелә. Бушҡа түгел был. Бынан тыш Касьянов тексындағы һөйләмдәрҙең ыҡсымлығы ла, мәғәнәүи яҡтан тос булыуы ла иғтибарҙы йәлеп итә. Ошо ғына билдәләр ҙә, был әҫәр төп нөсхәһендә мотлаҡ ҡобайыр формаһында башҡарылған, тигән фекерҙе ҡеүәтләй. Шуға ла уны хәҙерге көндә теҙмә юлға күсереү тәжрибәһе яһала башлауы бер ҙә генә осраҡлы хәл түгел (хәйер, Касьянов тексы ла аҡ шиғыр рәүешендә баҫтырылһа, хәкиҡәткә яҡын булыр ине). Шуларҙан бөгөнгәсә мәғлүм булған өсәүһенә ошо томда урын бирелде. Томдың «Аңлатмалар» өлөшөндә — шул теҙмә текстар хаҡында, ә «Башҡорт халыҡ ижады»ның 5-се томының инешендә (авторҙары Мөхтәр Сәғитов, Берйән Байымов, Салауат Галин) Касьянов тексы хаҡында ҡайһы бер фекерҙәр әйтелгән. Бында шуны ғына билдәләмәксебеҙ. Эпостың беҙгә әлегәсә рус телендә генә килеп еткән вариантындағы исемен һаҡлаған теҙмә текста авторы (Мәүлит Ямалетдинов) һәм «Ялыҡ бей» тип аталған поэмала (авторы Роберт Паль), нигеҙҙә, шул «төп» нөсхәнең йөкмәткеһе һаҡланған, ә «Ялыҡ бей, Ҡармасан менән Сәрмәсән» тигәне автор интерпретацияһынан ғибәрәт (төп нөсхәнең сюжеты нигеҙ булған сүрәттә лә, унда моронлап ҡына ҡуйылған мотивтарға йәйелергә ирек бирелгән. Бынан тыш, бөгөнгө көн өсөн дә актуаллеген юғалтмаған проблемаларын рельефлыраҡ итеп биреү маҡсатында, фольклорыбыҙҙан мәғлүм ҡайһы бер сюжеттар, мотивтар индерелгән).

«Һуңғы Һартай» эпосы, мәғлүм булыуынса, «мин» исеменән, йәғни беренсе заттан, шаһитлы үткән заманда башҡарылған. Ошо яғы менән ул «Орхон-Йәнәсәй», «Тәтегәс бей» кеүек әҫәрҙәрҙе хәтерләтә. Ә улар ташҡа йә ҡағыҙға, йә тирегә беренсе заттан теркәлгән. Әммә, ул ҡомартҡылар мотлаҡ шул «мин»дең эйәһе тарафынан ғына яҙылған, тип булмай. Сөнки хан һәм бей (кенәз) тиклем дәрәжәле кешенең ташты соҡой-соҡой яҙып ултырыуын күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Шулай уҡ тотош эпосты әйтеп яҙҙырыуын да. Тимәк, тарихты «мин» исеменән теркәү, быға тиклем дә әйтелеүенсә, үҙе бер традиция, стиль традицияһы ла, күренекле кешене олоҡлауҙың бер формаһының традицияһы ла булған. Был әйтелгәндәр «Ялыҡ бей»ҙең дә Касьяновҡа яҙма текст рәүешендә осрау ихтималы хаҡында һөйләй.

## 11. Шәжәрәләргә теркәлгән дастандар

Йырауҙар, абыздар, абруйлыраҡ аҡһаҡалдар ырыу тормошонда булып үткән мөһим хәл-ваҡиғаларҙы ла ҡушып, ырыуҙың яҙылмаған тарихы рәүешендә хәтерҙәрендә һаҡлағандар һәм уны телдән быуындан быуынға аманатлап тапшыра килгәндәр. Шул ерлектә һуңынанараҡ, мәҫәлән, Европа халыҡтарындағы — хроника, скандинавиялыларҙағы — сага, славяндарҙағы — летопись, төрки һәм бүтән Көнсығыш халыҡтарындағы тәуарих, ваҡиғнамә, шәжәрә кеүек бик әһәмиәтле тарихи, йылъяҙма йәдкәрҙәр формалашҡан.

Шулар рәтенә хаҡлы рәүештә башҡорт шәжәрәләрен дә индерергә мөмкин.

Башҡорттар араһында һуңыраҡ яҙма культура ингәс, шәжәрәләр ҡағыҙға теркәлеп, яҙма формаһын да алған.

Шәжәрәләрҙең, әлбиттә, төрлөһө бар. Бар исемдәр теҙмәһенә ҡоролғаны, исемдәрҙең мөһим тарихи хәл-ваҡиғалар менән үрелгәне. Ырыуҙың тулы йылъяҙмаһына, яҙма тарихына әйләнеп киткәне.

Күләмле шәжәрәләрҙең төп сығанағы һәм объекты булып конкрет тарихи факттар тора. Шул арҡала улар ҡоро йылъяҙма йәки ырыу генеалогияһы характерында ғына ҡалмайынса, авторҙың ырыу, халыҡ тарихын аңлауы һәм баһалауы менән бәйләнешле тарихи хикәйәгә тартыла. Шәжәрәсе факттарҙы теркәүсенән тасуирлаусыға әйләнә, тарихты әҙәби-художество формаһына төрә, материал наҡыҫ урында фараз, хыял ҡеүәһен файҙалана. Шулай итеп, күп кенә шәжәрәлә документаллек — художестволылыҡ менән, факт хыял менән ҡауыша. Шул яҡтан, мәҫәлән, Юрматы, Мең, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Табын, Тамъян, Әйле ырыуҙарының шаҡтай ҙур тексلы шәжәрәләре — башҡорт ырыуҙары тарихының, ырыу-ара мөнәсәбәттәренең халыҡ тормошоноң күпмелер дәрәжәлә художестволы сағылыштары ла ул.

Уҡымышлылар тарафынан яҙылыуы һәм ҡайһы берҙәренең авторҙары ла билдәле булыуы менән шәжәрә индивидуаль ижад, ә уның күбеһенең бер нисә аҡһаҡалдың ҡатнашлығында төҙөлөүе, быуындан быуынға тулыландырыла килеүе менән ул — коллектив ижад сылбыры. Шунлыҡтан уның структураһы ла быуын-быуын, стиле лә башҡалыҡлы. Ғөмүмән, шәжәрә өсөн халыҡ ижады — үҙенсә бер сығанаҡ та, мөһим стиль һыҙаты ла.

Ғәҙәттә, шәжәрәләрҙең борон заман ваҡиғаларына ҡараған тәүге өлөшөндә йыш ҡына миф, легенда, риүәйәт рәүешендәге фольклор материалдары өҫтөнлөк итә. Был өлөштә тарихлыҡ бик самалы. Бына Юрматы ырыуы башҡорттарының шәжәрәһенән бер үрнәк: «Борон заманда бу ердә Нуғай ирде. Зәй, Шишмә дигән ерләрдә һәр тарафдан күчеп йөрөрләр ирде. Анча нәгаһ ул ердә бер аждаһа йылан бәйдә булды. Бер ничә көнлөк ердән ятар ирде. Моңар күп йыллар кичде, аның берлән орош ҡылдылар. Күп халайыҡ һәләк булды. Шунан соң ул йылан ғәйеп булды».

Бында ҡасандыр хан замандарындағы хәл-ваҡиғалар мифик формала яҡтыртыла. Быны башҡорттарҙың боронғо мифологияһынан йәки һуңыраҡ миф формаһында телдә йөрөгән тарихынан, телдән һөйләнгән шәжәрәһенән ингән элемент тип тә ҡарарға мөмкин.

Бынан һуң илгә Аҡһаҡ Тимерҙең һөжүм итеүен, Нуғай урҙаһы заманындағы хәл-ваҡиғаларҙы теҙеп һөйләп алып китеү шәжәрәгә тарихи конкретлыҡ һәм арыу уҡ реаллек сифаттарын индерә. Шәжәрәнең бына шул һуңғараҡ дәүер — XIV—XVI быуат ваҡиғаларына ҡағылышлы өлөштәрендә тарихи факттар йышыраҡ осрай, әммә улар ҙа, ғәҙәттә, хикәйәләү, аралаш фараз менән һөйләү, тасуирлау шикелле художестволы фекер формаһында һипләнә барыусан.

Ҡайһы бер хәл-ваҡиғаларҙы һөйләгәндә шәжәрә авторы ысын мәғәнәһендә хикәйәсегә, һүҙ оҫтаһына әйләнә. Әлеге шәжәрәнең,

мәсәлән: «Бер заман йыл ҡытлыҡ булды. Ҡыш бик оҙаҡ булды, өс йылгача йылҡы, ҡуй бөттө. Игенләр һич уңмады, күп халайыҡлар дәрмансыз булдылар, вә күп халайыҡ ач-яланғач булдылар... Нуғайлар жыйылыб киңәш ҡылдылар», — тип башланған өлөшө бөтөнләй художестволы әҫәр төҫөн ала.

Шәжәрә — ғәрәп һүҙе — «ағас» тигәнде аңлата. Ул, ағас һымаҡ, быуын-быуын, ботаҡ-тармаҡ булып тармаҡланып, ырыу-нәҫел ағасын барлыҡҡа килтерә, быуындан быуынға тармаҡланып йәйелә һәм ҡуйыра бара.

Башҡорт шәжәрәләренең стиле һәм структураһы шунан ғибәрәт: ул бер олондан таралған ағас ботаҡтары һәм япраҡтары рәүешендә төҙөлгән ырыу быуындарының исемдәр теҙмәһенән тора һәм, — йә был теҙмәнән һуң, йәки алда, — ошо ырыу тарихында булып үткән ваҡиғаларҙың яҙмаһы — шәжәрәнең тексы килтерелә. Ҡайһы бер шәжәрәләрҙә айырым текст булмауы ла ихтимал.

Шәжәрәләрҙең текст өлөшөндә уның башланышы, ғәҙәттә, дини йәки ярым фантастик, мифологик легенда һәм риүәйәттәрҙән тороусан: унан исемдәр теҙмәһе осрай башлай, улар йыш ҡына теге йәки был исемгә бәйләнешле хәл-ваҡиғаларҙы, тарихи факттарҙы бәйән итеү менән аралашыусан. Ул мәғлүмәттәр башлыса «белең», «мәғлүм булсын» тибындағы «асҡыс» менән бирелеүсән.

«Бабсаҡ менән Күсәк» сюжетының эпос рәүешендә телдән таралған версияларының (версияларының тигәндә, беҙ уның Ҡыпсаҡ ырыуы иртәкселәре һәм сәсәндәре тарафынан бер төрлөрәк, аныҡын әйткәндә, Бабсаҡ менән Күсәкте идеаллаштырып, һөйләнелеүен, ә Бөрйән ырыуыныҡылырҙың тап шул ике шәхесте яманлап, ә үҙҙәренең ырыу башлығы Ҡараҡөләмбәтте маҡтап телгә алыуҙарын күҙ уңында тотабыҙ), варианттарының күпселеге буйынса, Бабсаҡ менән Ҡараҡөләмбәт араһындағы низағ Мәсем хандың мал-тыуарына яфа һалған арыҫланды үлтереү мәсьәләһенең кем файҙаһына сиселеүенә бәйле: Ҡыпсаҡ версияһына ҡарағандарында ул йыртҡыстың башына етеүе — Бабсаҡ, тиелһә, Бөрйәндекендә, Ҡараҡөләмбәт, тип раҫлана. Ә Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе был сюжетты үҙенсә интерпретациялай. Унда эпостарҙа ғына телгә алыныусан Мәсем хандың исеме бөтөнләй «иҫтән сығарылған». Ике бей араһында низағ туранан-тура сәйәсәт менән нигеҙләнә. Хикмәт шунда: йәнәһе лә, Бабсаҡ бей хандың уң яғында ултырған: «Мәгәр хан үлсә, артында дан хан(лыҡ) Бабсаҡҡа тиәр, мән буш ҡалырмын», — тип, Ҡараҡөләмбәт уны «ҡыяҡ башаҡли уҡ илан атуб» үлтерә була.

Тарихи яҡтан шулай булыуы хаҡында һис бер документ юҡ. Әммә Ҡараҡөләмбәттең был хаинлығының сәбәбе этнографик яҡтан нигеҙле: хандың, солтандың, шахтың уң яғында ултырыусы уның уң ҡулы иҫәпләнгән. Хәйер, ошо яҡтан ҡарағанда, сюжеттың телдән башҡарылыр версиялары ла был тәңгәлдә этнографик яҡтан дөрөҫ. Тик, саф художестволы әҫәр булараҡ, был мотив образлы кәүҙәләнеш алған: туранан-тура һүҙ алып бармай, тик тел төбө менән генә ымишара яһай. Телдәге версияларының варианттары буйынса, Мәсем хан дүрт ырыу башлығына шундай шартын иғлан итә: кем дә кем әлеге йыртҡысты юҡ итә, шул уның ҡыҙын алыу бәхетенә ирешәсәк.

һарай ҡануны иһә шуны талап иткән: кем хаким ҡыҙын кәләш итеп алыуға өлгәшә, шул уның тәхетенең уң яғынан урын ала. Тәфтишселәр теге яуыз януарҙың Бабсаҡ тарафынан үлтерелеүен геүаһлай, тимәк, хан ҡыҙының ҡуйынына инеү, шулай булғас, шул хакимдың уң яғынан урын алыу бәхете лә ошо батыр өлөшөнә төшә тигән һүҙ. Бына ни өсөн Ҡараҡөләмбәт ниндәй маҡсат менән уҙағының билен өҙә атырға ниәтләнеүенә комментарий биреп тормай эпос.

«Бабсаҡ менән Күсәк» сюжетының телдән таралған версияларының варианттары буйынса, ғәҙәттә, Ҡараҡөләмбәт Бабсаҡтың кәләшен ала. Улай ғына ла түгел, Бабсаҡтан ауыры булмағайы, тип шикләнеп, йә өлкән бисәләренең ҡотҡоһо буйынса, уны ауырынан арындырырға маташа. Ә шәжәрәләге версияла был хаҡта бер ауыҙ һүҙ ҙә юҡ. Улай ғына ла түгел, йәш ҡатын атаһы һарайына, Турахан янына ҡаса. Ул ғына етмәгән, Ҡараҡөләмбәт уны «алырға хас иткәс», хан ҡыҙы ғорур рәүештә унан баш тарта. Бына уның яуабы: «Бармайум — ирүмнең дошманы сән булдың. Бән сиңә баруб, барун ҡыямат күнүндә ирүмә нә жауап бирүрмен?» Был яуапта йәш ҡатындың ҡыҫҡа ғына ваҡытта ла Бабсаҡты яратып өлгөрөүе лә (тимәк, батырҙың хан тиклем хан ҡыҙын яраттырырлыҡ булыуы ла), шуға күрә уның ҡан дошманын үҙ дошман итеп күреүе лә, ире хәтирәһенә тоғролоғо ла, ислам ҡанундарын белеүе лә, диндарлығы ла — барыһы ла бер юлы әйтелгән.

Эпос сюжетының шәжәрә версияһы Күсәктең үҙ атаһы хаҡындағы хәҡиҡәтте нисек белеүен деталләп тормай. Телдән таралғандарында ул «әсә ҡулына (имсәгенә) эҫе ҡурмас баҫыу» мотивы менән нигеҙләнә. Ә шуның, сер белеүҙең, һөҙөмтәһе ике осраҡта ла бер үк Күсәк, Ҡараҡөләмбәттең хәүефе раҫҡа сығып, «ата дадын һәм ҡанын эстәр» өсөн, юлға сыға. Тап ошо урында шәжәрә версияһы, көтөлмәгәнсә, художестволы дөйөмләштереү өлгөһөнә ирешә. Телдән таралған версияларҙың варианттары Күсәккә шул осорҙа нисә йәш булыуына бик үк иғтибар итмәй. Йә ул ун алты йәштә, йә ун дүрттә, йә нисәлә «ата дадын һәм ҡанын эстәргә» Турахан олатаһынан рөхсәт ала. Ә шәжәрә был моментҡа айырым баҫым яһай. Маҡсатын әйтеп олатаһынан, ғәскәр һораға «Тура хан, бу уғланның ғәйрәтен вә һиммәтен күрүб, йөз кеше бирди», ти. Ошо хаҡта уҡыға беҙ үҙебеҙ үк: «Ун ике йәшлек кенә малайғамы?!» — тип, ҡысҡырып ебәргәндәй итер инек. Ә шәжәрә шуға яуап иткәндәй, айырым-асыҡ итеп: «Ун ике йәшендә!» — тип һоҡланыу белдерә. Ҡырғыҙҙың «Манас» тигән эпосында ла малай (Манастың улы Сәмәтәй), ун ике йәшкә еткәс кенә, атаһы хаҡында белә. Ун ике йәш, сөнки ир баланың ир ҡорона инеү йәше тип иҫәпләнгән. Тимәк, боронғо йола буйынса, шуға тиклем ул «ир-ат курсын үткән» булырға тейеш, тип иҫәпләнгән[1]. Тимәк, шәжәрәлә ун ике генә йәшле Күсәктең йөҙ кешелек ғәскәргә баш итеп тәғәйенләнеүенә һоҡланыу артында уның инде «ир-ат курсын» уңышлы үтеүе хаҡындағы мәғлүмәт йомдоролған.

---

[1] Был хаҡта аныҡыраҡ мәғлүмәтте ошо хеҙмәттән алырға була: Бараг Л. Г., Сулейманов А. М. Повествовательные жанры башкирского фольклора — Уфа: Гилем, 2000. — С.142—145.

Беҙҙең уйыбыҙса Бабсаҡ, Ҡараҡөләмбәт, Күсәк бейҙәр — бөтәһе лә тарихи шәхес булып, уларҙың ырыу тарихындағы урыны башта шәжәрәлә теркәлеп, аҙаҡ уларҙың эшсәнлеге ярым риүәйәт рәүешен, ахырҙа эпос формаһын алыуы мөмкин. Шәжәрә, легенда һәм эпостарҙа сюжетҡа бәйле аталған ер-һыу исемдәренең хәҙерге көндә лә һаҡланыуы шулай уҡ тарихилыҡ хаҡындағы фекерҙе нығыта.

Ысынлап та, эпостың шәжәрә версияһында телгә алынған Шыҡманай яланы, Баҙал тауы (Бөрйәндәге Яңы Мөсәт йәки Алағуян ауылы ерҙәре), Бей кисеүе, Тарағы яланы (Бөрйәндәге Байназар ауылы биләмәһенә ингән урындар) әле лә үҙ атамалары менән йөрөтөлә. Әгәр сюжеттың телдән таралған варианттарын да иҫәпкә алһаҡ, был исемлеккә Атайсал, Аҡбулат, Бабсаҡ ҡәбере, Ямашлы, Батыран, Ҡара һыйыр тауы, Бүкиһәк, Үтәнәк, Ҡара һыйыр кисеүе, Ҡурыуҙы һ.б. ер-һыу атамалары өҫтәлер.

Академик Р. Ғ. Кузеев раҫлауынса, борон башҡорт шәжәрәләре хәтерҙә һаҡланһын өсөн оҫта йырауҙар уны ҡобайырға һалып әйтер булғандар һәм отҡорҙар уны ятлап алғандар[1]. Беҙҙең көндәргә ана шундай шиғри шәжәрәләрҙән Мөйтән бейгә һәм унан һуңғы бейҙәргә, тоҡомдаштарына арналған Үҫәргән ырыуының поэтик шәжәрәһе генә килеп етә алған. Фараз ителеүенсә, күп йылдар, күп дәүерҙәр һуҙымында телдән-телгә, быуындан-быуынға изге аманат итеп тапшырыла килгән. Әгәр сәсмә варианттары үткән быуаттарҙа уҡ яҙма рәүеш алған булһа, теҙмә һәм теҙмә-сәсмә ике вариант иһә XX быуат башында ғына ҡағыҙға теркәлгән. Һуңғыларының береһе — ҡатнаш формала яҙылғаны — академик Ғайса Хөсәйеновтың шәхси архивында һаҡлана. Уның баштағы сәсмә юлдарында ырыу башлығы Мөйтәндең, ҡиммәтле бүләктәр алып барып, Сыңғыҙ хандан үҙенә бей дәрәжәһе һәм туған ырыуына ер һорап алыуы хаҡында бәйән ителә. Ошо ваҡиғанан һуң ырыуҙаштары уны ололап-данлап «шиғыр» сығарған, тиелә унда.

«Алып йөрәкле» һәм «ғиззәтле» Мөйтән бейҙең туған ырыуы хаҡына башҡарған эштәре ҡобайырға һалынып ошо рәүешле бәйнә-бәйнә хикәйәләп үтелә. Аҙаҡ шиғри юлдарҙы йәнә теҙмә текст алмаштыра. Бына шулай шәжәрә иртәк рәүешен ала. Дөрөҫ, «Башҡорт шәжәрәләре» китабында баҫылған вариантынан күләм йәһәтенән ул күпкә ҡайтыш. Сөнки ундағы һымаҡ Мөйтәндән ҡалған нәҫел-нәсәп берәм-берәм һаналмай. Тимәк, уларҙы ҡылыҡһырлау ҙа юҡ. Уның ҡарауы, сәсмәүер рәүешендәге өлөшө уны эпик йөкмәткелерәк итә. Унан беҙ тарихтан мәғлүм Сыңғыҙ осоро, Мөйтәндең, ике ырыу исеменән олуғ ханға юлланған илсе, унан дәүләт эшмәкәре икәнен беләбеҙ. Сыңғыҙ хандан тәсдиҡлатып* башҡортҡа ер, үҙенә бейлек алыуына шул эшмәкәрлеге сәбәпсе икәненә лә әҫәрҙең шул сәсмәүер өлөшө төшөндөрә. Әҫәрҙең был вариантынан шул сәбәпсенең дә сәбәпсеһе асыла: Мөйтән, аҡыл эйәһе, «фарасатлы* әҙәм» була.

Уның был сифаттары Сыңғыҙ баһаһында бирелә. Ә Сыңғыҙ баһаһы — иң юғары үлсәм мәғәнәһенә эйә.

---

[1] Башкирские шежере. — С. 200.

Үҫәргән тарихының шау шиғырға ҡоролған варианты художество-эстетик йәһәттән тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ. Был ҡомартҡы беҙҙең көндәргә Йылайыр кантоны Ҡужанаҡ ауылы (хәҙер Ейәнсура районына ҡарай) башҡорто Шаһиғалим Тоҡомбәтов күсермәһендә килеп еткән. 1960 йылда уның тексы тарихсы-этнограф Р. Ғ. Кузеев тарафынан әҙерләнгән «Башҡорт шәжәрәләре» йыйынтығында баҫылып сыҡты.

Үҙенең поэтик төҙөлөшө менән был ҡулъяҙма ла башҡорт фольклорындағы боронғо эпик ҡобайырҙы хәтерләтә. Строфаларҙағы юлдар һаны, юлдарҙағы ижектәр нисбәте, рифма-ритмик яңғыраш — барыһы ла ҡобайырҙағыса, ҡобайыр рухында.

Рабби кәрим ҡөдрәте,
Мәҙкүр итәм орғатты (ырыуҙарҙы),
Кичмеш Әдәм әүләде,
Чынғыз ханның заманы.
Башҡорт халҡы бабасы,
Бей Туҡсаба уғланы,
Мөйтән тимәккә аны,
Хаҡ яратмыштан аны,
Мәшһүр итәлем аны...

Шуныһын да билдәләү фарыз: ҡомартҡының Мөйтән бейҙе һүрәтләгән юлдарында үрҙә телгә алынған вариант менән бер ни тиклем оҡшашлыҡтар бар, хатта һүҙмә-һүҙ ҡабатлауҙар ҙа осрай.

Хаҡ тәғәлә ҡөҙрәте,
Мәлкүр* итәйем аны.
Илебеҙҙә булған эш —
Сыңғыҙ хандың заманы.
Башҡорттарҙың бабаһы,
Мөйтән тимәккә аны,
Хаҡ яратмыш дан аны.
Мәшһүр итәм иҫемдән
Күркле булған исемде:
Булмыш ирнең арыҫланы,
Йөҙөн күргән әҙәмең
Хөрмәт итмештер аны...
Рабби кәрим ҡодрәте
Мәзкүр* идәм орғатты*
Кичмеш Адәм әүлады*,
Чыңғыз ханның заманы.
Башҡырт халҡы бабасы,
Би Туҡ-саба уғланы,
Мөйтән димәккә аны,
Хаҡ яратмыш дан аны,
Мәшһүр идәлем* аны:
Күреклек ҡылмыш жисмени*
Булмыш ирнең арысланы,
Йөзен күрмеш адәме
Ғиззәт* идарме аны:

Тәүге юлдарҙа шәжәрәсе «Сыңғыҙ хандың замандашы» Мөйтән бейҙе яҡшы сифаттары, олуғ эштәре өсөн һәр яҡлап маҡтай. Маҡтауҙан уҙып, данлай. Ә Мөйтәндең данланырлығы бар, ысынлап та. Ул алып йөрәкле, тимәк, ҡыйыу ҙа, көслө лә. Халыҡ эсендә ғиззәтле. Тик шул физик сифаттары өсөн генә хөрмәт итмәйҙәр уны. Әйткәндәй, ғиззәтлелекте ул бөтә халыҡ алдында яулаған. Ни өсөн? Сөнки «рыуҙы ҡылмыш әғладан*», йәғни үҙ ырыуының бәҫен күтәргән. Тимәк, Мөйтән образы иң әүәл йәмәғәт һәм йәмғиәт күҙлегенән баһалана. Мөйтән иһә был мөнәсәбәттең ҡәҙерен белә торған кеше булып хәтерҙә ҡала. Халыҡ эсендә ғиззәтле булыу — уның дәүләте икәне хаҡында әйтелеүе сәбәпсе быға.

Мөйтәнде маҡтағандан һуң, шәжәрәсе һүҙҙе уның уландарына, ейәндәренә, бүлә, тыуа, башҡаларына күсерә — эҙмә-эҙлекле рәүештә нәҫел ебен тағата башлай. Быуын-быуын булып килгән шәхестәрҙең исемдәрен атау менән генә сикләнмәй ул, тапҡыр һүҙҙәр аша һәр береһенә ҡылыҡһырлама бирә, ырыу тарихында тотҡан урынын күрһәтә.

Берәүҙәре йәмәғәт һәм йәмғиәт алдында тотҡан урынына, ҡылған эшенә ҡарап баһалана. Мөйтән улы Үҫәргән ырыуын үҫтергән. Шуға күрә лә дүрт волостың «үҫәргән атын күтәреүе», тимәк, ырыуға ла шул исемдең күсеүе уның оло эштәр атҡарыуы хаҡында һөйләй. Мөйтән затлы Ҡужанаҡтың дүртенсе улы, Ҡыдыр, уның уландары Ғәбделғафар, Сәғди офицер булараҡ ҡылыҡһырлана. Юғары хәрби дәрәжәгә шәжәрәсе шулай уҡ ҙур мәғәнә һала. Ә инде шул Ҡыдыр Хызыр Ильяс-пәйғәмбәргә, Үҫәргәндең тыуа яты Толобай бей Сөләймән пәйғәмбәргә һәм Йософ пәйғәмбәргә сағыштырыла. Шуның менән шәжәрәсе артыҡ тасуирлау һәм баһалауҙан ҡотола: шул изгеләр хаҡында төшөнсәһе булған әҙәм былай ҙа аңлар, йәнәһе. Ысынлап та, шундай төшөнсәнән сығып, беҙ ҙә тәүгеһен — аҙашҡанға юлдаш һәм юл күрһәтеүсе, башҡа ауырлыҡҡа дусар булғанға изгелек ҡылыусы, тип, икенсеһен тәрән зиһен эйәһе, мөхәббәтле зат рәүешендә күҙ алдына килтерәбеҙ. Ошондайыраҡ ҡылыҡһырламалар арҡаһында урыны-урыны менән әҫәр ода пафослы булып китә, йәғни ысын мәғәнәһендә, форма йәһәтенән генә түгел, йөкмәткеһе яғынан да ҡобайыр ҡоба йырына — маҡтау йырына әүерелә, үҙ асылына ҡайта.

Нәҫелдәштәрен һынландырғанда, автор урыны-урыны менән юмор һәм сатира алымдарын да ҡулланып ебәргән. Әле телгә алған Толобай, мәҫәлән, торғаны менән атаһының киреһе булған. Һәр хәлдә уның хаҡында тәүҙә:

Аның уғлы Уралбай,
Ашъяулығы урамдай.., —

тиелә. Ошо юлдарҙы уҡығас та, был кеше бик бай, бик ҡунаҡсыл, йомарт булғандыр, тип уйлап та өлгөрмәйһең, мә һиңә, тигәндәй:

Бәдәне* симез, туламы* —
Ятса, урындан торалмай, —

тип өҫтәп ҡуя шәжәрәсе һәм беҙҙең күҙ алдыбыҙға һис кенә лә ҡунаҡсыл йомарт зат түгел, ә үҙ тамағын ҡайғыртыусан бирән ҡорһаҡтың карикатур һыны килеп баҫа (дөрөҫөрәге, ята). Төпсөк мәргәндең ейәне Ҡужанаҡ та ошондай уҡ планда һүрәтләнә. Ул да бай («алтын-көмөш тумалай»)*. Зәкәт биргәндә, малының хисабын белә алмай.

Бына шулай Үҫәргән шәжәрәһенең яҙма варианты, телдән теркәлгәне менән бергә ҡарағанда, улар, бер-береһен тулыландырып, художестволы бер бөтөндө тәшкил итеп, тулы ҡанлы эпос барлыҡҡа килтерә. Шартлы рәүештә «Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей» тип аталған был әҫәрҙең жанр йәһәтенән мөһим бер үҙенсәлеге шунан ғибәрәт: унда эпос башланғысының пародик һәм ироник эпиграмма, ода жанрҙары башланғыстары менән айырылмаҫ булып уҡмашып килә.

Мөйтән бей хаҡында әлегәсә билдәле мәғлүмәттәр үтә наҡыҫ. Уның исемен һәм эшмәкәрлеген халыҡ хәтере үҙенең тарихи риүәйәттәрендә, шәжәрәләрендә һәм тәуарих яҙмаларында ғына һаҡлаған.

Тарихтан билдәле булыуынса, Мөйтән бей үҫәргән ырыуҙарының ырыу башлығы, Сыңғыҙ хан заманында йәшәгән тарихи шәхес. «Башҡорт тәуарихы ҡульяҙмаһында уның шәжәрә башы былай теркәлгән: Туҡсаба — Баба Төкләҫ (?) — Тирәй Тирмә — Ҡаҙансы — Дусбән — Мөйтән бей — ... Тарихта Туҡсаба исеме Дәшти-Ҡыпсаҡ илендә күренекле бер ырыу башлығы булараҡ ғәрәп сәйәхәтсеһе Ин-Нувәйти яҙмалары буйынса билдәле. Рустарҙың Ипатьев исемендәге йылъяҙмаларында ул ырыу тоҡсобалар (тоҡсобичи) атамаһы менән күрһәтелгән. Йәғни Туҡсабаның йәшәгән заманы самаса XI—XII быуат арауыҡтарына тура килә. Мөйтән бейҙең ғүмере нәҡ Сыңғыҙ хандың Көнсығыш Европаны яулап ала башлаған (XIII быуат башында) дәүергә ҡарай.

Мөйтән бейҙең исеме тарихта татар-монгол яуҙарына тиклем дә киң билдәле булыуы ихтимал. Сөнки башҡорттарҙың ғына түгел, үзбәктәрҙең ҡарағалпаҡтарҙың ҡайһы бер ырыуҙары ла үҙ ырыу башлығы итеп Мөйтән бейҙе иҫәпләй. Үзбәктә лә уның ырыу тамырҙары йәшәп килә. Тарихсылар, этнографтар был Мөйтән ырыуының боронғо скиф-саҡтарҙың массагет ырыу тармағына уҡ барып тоташыуын тоҫмал итә. Профессор Т. А. Жданко раҫлауынса, ҡарағалпаҡтарҙағы Мөйтән ырыуының ата-бабалары беҙҙең эра башында Арал менән Урал араһында йәшәп массагет ырыу-ара берләшмә-конфедерацияға ингәндәр («Археология и этнография Башкирии». Том IV). Тарихта IX—XI быуаттарҙа башҡорт, ҡарағалпаҡ ырыуҙарының ҙур ғына өлөшө Дәшти-Ҡыпсаҡ иле заманында Дон, Днепр буйҙарынаса йәйелеп йәшәүҙәре күҙәтелә. Боронғо Мөйтән бей тураһындағы йыр-легендала шундай юлдарҙы уҡырға мөмкин: «Башҡорттар мөйтәндәргә баш эйгән, үҫәргәндәр тағы күбәйгән, бөрйән, ҡыпсаҡ бейҙәре уларға буйһонған, йөҙ тамғалылар Уралда нығынған» (Р. Кузеев. Происхождение башкирского народа. — М., 1974 — С. 143).

XVI быуатта ижад ителгән «Сыңғыҙнамә» исемендәге тәуарих китабында башҡорт бейҙәренең Сыңғыҙ ханды хан итеп ҡуйыуҙары һәм үҙҙәренә бейлекте унан алып, ер, ил биләргә хоҡуҡтары тураһында бәйән ителә. Араларында Мөйтән бей ҙә бар. Сыңғыҙ хан уға: «Әй,

Мөйтән бей! Һинең ағасың миләш булһын, ҡошоң торна булһын, ораның байғон булһын, тамғаң ҡойошҡан булһын!» — тине.

Үҫәргән ырыуы шәжәрәләрендә иһә Мөйтән бей хакимлегендә үҫәргәндәр биләгән Яйыҡ, Һаҡмар, Эйек, Һүрәм йылғалары буйҙарындағы ер-һыуы атап күрһәтелә.

Мөйтән бейҙең бейлек исеме һәм ырыуҙаштарына бик күп ер-һыуҙар, биләмәләр алып биреүе, күрәһең, уның дәрәжәһен һәм абруйын ғәйәт күтәргәндер: халыҡ уны ололап, данлап йырҙар, ҡобайырҙар сығарған, легендар исеме «Сыңғыҙнамә» китабына индерелгән, риүәйәттәр һөйләнгән Үҫәргән ырыуына ҡараған «Башҡорт тәуарихы» ҡулъяҙмаһында уға ҙур ғына урын бирелгән.

Ул төрки-әҙәби ҡомартҡының юғалмай, онотолмай килеүенең төп сәбәбе Мөйтән бей исеменең абруйлы булыуы, уның хаҡындағы мәғлүмәттең риүәйәт, ҡобайырҙарға «Сыңғыҙнамә», «Башҡорт тәуарихы» кеүек яҙма йәдкәрҙәре беҙгә теркәлеп ҡалыуы, Үҫәргән ырыуы шәжәрәһенең оҙаҡ замандар телдә яттан йөрөүе, аҙаҡ күсерелеп алыныуы менән бәйлелер, моғайын.

* * *

Шәжәрәләрҙең композицияһында шундай бер үҙенсәлек күҙәтелеүсән: улар, ғәҙәттә, зат-зуриәттың башын йә пәйғәмбәргә, йә оло хакимға, йә берәй Изге әҙәми мифик затҡа алып барып ялғаусан. Һис тә булмаһа, тәүҙә күренекле заттың заманы йә уның янында булған кеше исемләнә. Ҡыпсаҡ йәки Ҡарағай-Ҡыпсаҡ шәжәрәһенең сюжетлы варианттары ла оло традицияға тоғро: улар ҡәбилә башын Лоҡман Хәким тигән легендар изгегә ялғай. Ә бына китапта беҙ «Тәтегәс бей» дастаны рәүешендә тәҡдим иткән Юрматы шәжәрәһе тәүҙә Сыңғыҙ хан заманында йәшәгән ырыу башы, «асыл юрматыларның уғланларындан» Тухал Шәғәли бейҙе телгә алып, Зәй, Шишмә тирәһендә аждаһа менән орош ҡылыуҙарын, Аҡһаҡ Тимер яуынан ҡасып Оло Иҙел (Волга) аръяғына күсенеүҙәрен хәтерләп үткәндән һуң ғына, теге бушлыҡты тулыландырып ҡуя: был ырыуҙың да изгеләргә мөнәсәбәте бар икәнен әйтелә. Йәнәһе лә, яңы ерҙә Шүлкә ата ҡәберенә юлыға юрматылар. Хан фарманы буйынса, «халайыҡлар арасында» иң олуғ аҡыл эйәһе (хан әйтеүенсә, иң танылған хәким) Шәғәли бей, уның ҡәберен асып, үҙенә күрә эксгумация үткәреп, унда ятҡан заттың, ысынлап та, изгеләрҙән икәнен асыҡлай. Шуның менән генә сикләнеп ҡалмай, уны яңынан күмеп, өҫтөнә «ихата ҡылып» (мазара, йәғни кәшәнә ҡороп), «һәр йылды жыйылып, хәтөм ҡылыр» (йәғни Ҡөрьән уҡып, иҫкә алып торор) булған юрматылар. Ә беҙҙең заманда үҙҙәрен оло ғилем эйәһе тип белгән ҡайһы бер археологтар ана шулай борон аяттар уҡып иҫкә алыныр булған, өҫтөнә өйөлгән убаны, ҡәҙерләп ҡоролған кәшәнәне емереп, уларҙы шул көйөнсә ташлап китә, үҙҙәренең ошо гонаһтарын оло ғилми асышҡа иҫәпләп, конференцияларҙа оран һалалар, етәкселәре алдында иҫәп-хисап тоталар, халыҡтан иһә ҡарғыш алалар. Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы бейе, Мәсем хандың уң ҡулы, мәшһүр эпос геройы булған

бөйөк Бабсаҡтың даны Ҡаҙағстанға, Урта Азияға еткән, ул тарафтарҙы ла ашҡан Ерәнсә сәсәндең хәләл ефете Бәндәбикәнең кәшәнәһе ана шундай яҙмышҡа дусар ителде. Быны вәхшилек тип кенә нарыҡларға мөмкин.

Чүлкә-ата тарафтарына әйләнеп килһәк, йәнә шуны әйтергә була. Уның изге исем-шәрифтәре ҡот ҡуйғанда әйтелә торған ҡара доғала Ҡорҡот ата менән бер ҡатарҙан телгә алына. Доғанан аңлашылыуынса, борон уға һығыныр, табыныр булғандар. Бына ул ҡара доға:

...Ҡотом әмере буйынса,
Ҡорҡот әмере буйынса,
Ҡорҡот атай, ҡотоң бир,
Шүлкә атай, ҡотоң бир...[1]

Шәжәрә тексының кем исеменән һәм нисәнсе заттан һөйләнеүе лә уның стилен төрләндереү сараһына әүрелә. Мәмбәт шәжәрәһен теркәүсе һәр саҡ: «Таштуғай көйөн йырлатҡан, — тип беҙҙең ата-быҙҙың әсәһе Сафия әбей һөйләне», «...сәйнүктән ҡаҡҡан шаманың уба булып өйөлөп ҡалғанын Мөхәмәтшафиҡ олатай күрһәтте» ише иҫкәрмәләр, башҡаларға һынатмалар яһай бара. Был, бер яҡтан, шәжәрәсенең эске мәҙәнилеген күрһәтеүсе бер фактор булһа, икенсе яҡтан, билдәле бер эпизодты, фрагментты ослап ҡуйыу формаһы булараҡ композицион әһәмиәткә эйә, өсөнсөнән, шәжәрәнең стиленә үҙгәлек тә бирә. «Бабсаҡ менән Күсәк» әҫәренең шәжәрә версияһының ахырында сюжет сиктәрендә тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙы аннотация стилендә яңынан ҡабатлау, уларға тиклем һәм уларҙан һуң булғандарының хронологияһына аныҡлыҡ индереүгә лә (Күсәк бейҙең эшмәкәрлегенең Сыңғыҙ хан заманаһына, Мөхәммәт пәйғәмбәр һижрәтенән ете йөҙ йылдан һуңғы дәүергә тура килеүе, ә ул хәҙергә иҫәп менән 622 йылда Мәккәнән Мәҙинәгә күскән, Аҡһаҡ Тимер походы, Ҡазанды рустар алыуы хаҡындағы мәғлүммәттәрҙә), асылда, шундай уҡ эстетик вазифа атҡара, бер үк ваҡытта бәйән ителгәнгә һығымта, әҫәрҙең эпилогы үтәр йомошто ла үтәй.

Меңле ырыуы шәжәрәһе баштан-аяҡ тиерлек нәсихәти пафослы булыуы менән айырылып тора. Ике ағай — ике Килембәттең юҡ сәбәптән сәбәп табып, үҙ-ара ҡан ҡойошҡа тиклем барып етеүҙәре хаҡында бәйән итеп, шәжәрә татыулыҡҡа саҡыра. Ере бына шулай әҙәм ҡаны менән һуғарылһа ла, Ҡанзафар бейҙең: «Эй, яранлар, беҙ мындин китеп, мәкам тота алмабыҙ», — тип халҡын таралып китеүҙән ҡурсалауына иһә — торған ер генә түгел, тыуған ер булғанға ла, ул алыштырғыһыҙ тигән идея һалынған. Э инде «Белеңезләр, ғафил булмаңызлар, ғаҡыллы аңлар, ғаҡылсызның бер ҡолағындан кереп, берсендән чығар:... үкен, йәғни нәседен белмәгән кеше (киләсәкте — Э. С.) батшаһ алдында (тарихын белмәгән кеше. — Э. С.) сүз сүзләргә ярамас, ахырғыдын хәбәр хакимчылыҡҡа ярамас» тигән һүҙҙәр классикаға теркәлмәле нәсихәт.

---

[1] БХИ. 1-се том. Йола фольклоры. — 62-се б. / Тик бында ул Түлкә ата тип баҫылған/.

Стиль йәһәтенән Юрматы шәжәрәһе йәки «Тәтегәс бей» әҫәре бик үҙенсәлекле. Ул «мин» исеменән Тәтегәс бей ауыҙынан бәйән ителә. Әммә быны мотлаҡ бей һөйләгәнде яҙа барғандар, тип уйларға ярамайҙыр. Ни өсөн тигәндә, беренсе заттан тарих бәйән итеү — борондан килгән традиция. Хатта ташҡа ла ошо формала ырып яҙғандар (Орхон-Инәсай яҙмалары). Ошондай стиль алымын ҡулланыу «Тәтегәс бей» әҫәрендә бер кеше күреп белгәнде, күрмәһә, иһә, бары үҙе ишеткәнде генә «теркәү»ҙе төшөндөрә, уның раҫлау пафосын арттырыуға хеҙмәт итә. Икенсе яҡтан, Тәтегәс бейҙең үҙен төп герой урынына ҡуя. Ә был геройҙың образы бик тә уңышлы табылған, һайлап алынған реаль факттар ярҙамында тыуҙырыла. Иң әүәл ул беҙҙең хәтерҙә дәүләтсә фекер йөрөтөүгә маһир бей сифатында урын ала. Ҡазан ханлығы ҡолатылғас һәм аҡ бей батшаның Рәсәйгә ҡушылырға саҡырыусы өндәмәләргә башҡорттар араһында тарала башлағас, тота килеп Ҡазанға сапмай. Тәүҙә уныһын, быныһын уйлап, бизмәнгә һалып ҡарай. «...башҡа һич тә уй уйларға сараһ булмағас, өч түбә халыҡтан өч кеше алдым да, ...Ҡазан шәһәренә барып, Аҡ бей бадишаһҡа баш салдыҡ» тигән һүҙ ҙә ҡеүәтләй ул фекерҙе. Ни хаҡында уйлаһын инде Тәтегәс? Әлбиттә, Мәскәүгә элек даими рәүештә хәүеф һалып торған Ҡазан тиклем Ҡазан емерелгәс, шул ханлыҡтан иҙелгән беҙҙәргә ни һан! Тимәк, үҙеңдең иркең менән Аҡ бей бадишаһҡа бирелмәһәң, һинең халҡыңды ла шул уҡ яҙмыш көтөүе көн кеүек асыҡ. Бына ни өсөн «башҡа уй уйларға сараһ» табалмай Тәтегәс. Тимәк, Рәсәйгә ҡушылыу аҙымын яһауы — берҙән-бер дөрөҫ юл була. Уның дәүләтсә фекер йөрөтөр ир булыуы үҙенә аҡыллы юлдаштар табыуында ла, тимәк, улар менән кәңәшләшкәс кенә, теге аҙымды яһауы ла ҡеүәтләй. Ә инде шул миссияны атҡарғандан һуң, халҡын йыйып, улар алдында иҫәп-хисап тотоп, хәҡиҡәттә йәшермәй, һөйләүен ни тиһең? «Ай, ярандарым! Без Аҡ бей бадишаһҡа бардыҡ, баш салдыҡ, ҡол булдыҡ», — ти ҙә күпме яһаҡ түләнергә тейеш икәнен әйтеп бөткәс: «Имде сез дә ҡабул ҡыламусыз?» — тип һорай. Был бит беҙҙең Рәсәй яңы файҙалана башлаған референдум үткәреү өлгөһө! Өлгө, сөнки ул асыҡ тауыш менән үткәрелгән. Һәм бер ниндәй агитаторҙарһыҙ ҙа, бер ниндәй һатып алыуҙарһыҙ ҙа бей үҙенең тарихи аҙымының хупланыуына ирешә. Халыҡ: «Яхшы, барчаларымыз жәнделдән ыразый* булдыҡ», — ти. Шул рәүешле Тәтегәс бей йөҙөндә беҙ халҡы менән бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән эш итеүсе дәүләт эшмәкәре, алдан күрә белеүсән дипломат һәм ысын демократ образын танымай булдыра алмайбыҙ.

Шәжәрәләрҙә йыш телгә алыныусан, телгә алыныу менән генә сикләнмәйсә, бәйән ителеүсән легенда һәм риүәйәттәр ҙә уларҙың стилен төрләндерә, йәнле итә. Уларҙан тыш, шәжәрәгә героик эпос, ҡобайыр, йыр, афористик ижад, хатта йола фольклоры элементтары ла иркен үтеп инеүе иһә был яҙма ҡомартҡыны йөкмәтке һәм форма йәһәтенән халыҡсанлыҡ менән һуғарыуҙа мөһим роль уйнай.

Мәҫәлән,Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе. Уның үҙәгендә Бөрйән һәм Ҡыпсаҡ ырыуҙары, шул иҫәптән ҡарағай-ҡыпсаҡтар араһында киң таралған «Күсәк бей» йәки «Бабсаҡ бей менән Ҡараҡөләмбәт бей» эпосының төп мотивы һәм сюжет һыҙығы ята.

Шуныһы характерлы: Күсәк бей эпосы версияларынан айырмалы рәүештә, шәжәрәлә был сюжет бик реаль, тормошта булған рәүешле

күрһәтелә. Улар нигеҙендә тарихи ваҡиғалар ятырға тейеш. Күсәк бей хаҡындағы риүәйәттәр ҙә ысынбарлыҡҡа үтә яҡын.

Шәжәрәләрҙә телгә алынған йә бәйән ителгән эпик сюжеттар элек-электән халыҡтың йәнле телендә лә әүҙем йәшәгән. Әхмәтзәки Вәлидиҙең хәтерләүенсә, ул йәш саҡта әле беҙ томға, Юрматы шәжәрәһенән алып, «Тәтегәс бей» исеме менән индерелгән әҫәрҙә телгә алынған Борнаҡ бей, йәнә Аллабирҙе бей тураһында телдән һөйләгәндәрен ишетеү мөмкинлеге булған. Бынан тыш, уның тыуған ауылына исеме берегеп ҡалған Көҙән бей, шул ауылдағы Суҡлыҡай, Уңғут ҡәүемдәренең сығышы хаҡында ла һөйләр булғандар.

Мораҙым, Едигей, Ерәнсә, Исай (Ғайса) улы Әмәт хаҡындағы дастандарҙың ҡайһы берәүҙәрен яҙып алғаны[1] кеүек, үҙ ҡәүеменең шәжәрәләренә бәйле сюжеттарҙы ла теркәштергән булһа, ни ғәжәп. Башҡортостан тарихын өйрәнеүгә һиҙелерлек өлөш индергән краевед В. С. Юматов 1848 йылда «Оренбургские губернские ведомости» тигән гәзиттә «Древние предания у башкирцев Чубиминской волости» тигән мәҡәлә баҫтыра (№ 7. — С. 45—48). Ана шунда ул Мең ырыуы шәжәрәһендә килтерелгән эпик сюжеттың (йәғни ошо томға «Казанфари бей заманы — ике Килмәт низағы» тигән исем аҫтында индерелгән әҫәрҙең) фабулаһын һөйләп сыҡҡан да[2] шундай иҫкәрмә биргән: «Передаю предание так, как его слышал, сократив несколько рассказ; у башкирцев он, большею частью, облечен в драматическую форму, едва ли не древнейшую, в какой передавались все предания и первобытные истории»[3]. Ә әҫәрҙә бәйән итер алдынан әйтеүенсә, Юматов уны, ысынлап та, Субыл меңе башҡорттарынан үҙ ҡолағы менән ишеткән («я решился сообщить некоторые из преданий услышанных мною от башкирцев, Чубиминской волости»)[4]. Тыуған яғыбыҙҙы өйрәнеүҙә ҙур тәжрибә туплаған был авторҙың ошо әйткәндәренән генә лә шундай һығымтаға килеп була: беренсенән, XIX быуатта Аҡһаҡ Килембәт менән Ҡара Килембәт хаҡында халҡыбыҙҙың фольклор репертуарында әле һүҙ барған сюжет бик тә популяр булған; икенсенән, ул легендар мотивтар менән байытылған, драматик картиналар менән йәнләндерелгән күләмле эпик әҫәр рәүешендә йәшәгән. Шуға ла уға ғалимдарҙың йыш мөрәжәғәт итеүе һәйбәт аңлашыла. Уның хаҡында П. И. Рычков, В. Филоненко, Р. Ғ. Кузеев, Ғ. Б. Хөсәйенов, Н. А. Мәжитов, А. Н. Солтанова һ.б. ҙа яҙған[5]. XVI быуаттың

---

[1] Вәлиди Ә.-З. Хәтирәләр: Төркөстандың һәм башҡа көнсығыш төрөктәрҙең милли булмыш һәм культура өсөн көрәше/Тәржемәсеһе Әмир Юлдашбаев; Фәнни мөхәррире Әхиәр Хәким. — Өфө: Китап, 1996. — 6—12-се б.

[2] БРЛ. Т.1. — С.402-403.

[3] Там же. — С.403.

[4] Там же. — С.402.

[5] П. И. Рычков. История Оренбургская. — Оренбург, 1896. — С. 69; Филоненко В. Башкиры // Вестник Оренбургского учебного округа. — 1913. — №6. — С. 204—205 (По кн. «Очерки по истории Башкирской АССР. Т.1., ч.1. Уфа: БКИ, 1956. — С. 53—55); Кузеев Р. Г. Башкирские шежере. — С. 187; Хөсәйенов Ғ. Б. Шәжәрәләр. // Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 1-се том. — 270—290-сы б.; Мәжитов Н. А., Султанова А. Н. История Башкортостана с древнейших времен до XVI века. — Уфа: Китап, 1994. — С. 319—320.

тәүге яртыһында башҡорт ырыуҙарының Нуғай ханлығы биләмәһенә ингәндәре өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе ике Килмәт хаҡындағы мәғлүмәт Мәскәү кенәзлеге менән өсөнсө Иван етәкселек иткән дәүерҙәге рус сығанаҡтарына ла теркәлгән[1].

Яҙма һәм баҫма сығанаҡтарҙа башҡа ырыуҙарҙың шәжәрәләрендә бирелгән йә телгә алынған сюжеттар хаҡында ла мәғлүмәттәр осратырға мөмкин. Шундай эпик характерҙағы сюжеттар нигеҙендә ижад ителгән әҫәрҙәр ҙә бар. «Кинйәкәй» дастаны, мәҫәлән, Тора хандан ҡалған бер ҡәүемдең яҙмышын бәйән итә. Уға шул ҡәүемдең шәжәрәһе нигеҙ булғанға оҡшай. Унда генеологик таблица элементтары төйөрөм генә һаҡланған. Ул әҫәрҙе яҙған кешенең исем-аты ла мәғлүм. Был хаҡта ул инештә үк үҙе әйтеп ҡалдырған:

Атым бәнем Мөхәмәдулла,
Атам булған Әхмәдулла,
Ҡушаматым (йәғни, псевдонимым. — *Ә. С.*) — Дауыти,
Илем ошбу волостан,
Үҙем башҡорт йыныстан.

«Бабсаҡ менән Күсәк» эпосының ҡыпсаҡ версияһының шиғри вариантын Сабирйән сәсән Мөхәмәтҡолов ижад итеүе мәғлүм[2]. Был әҫәрҙе яҙғанда, ул эпостың телдән таралған варианттары менән бер рәттән яҙма вариантын да файҙаланған булырға тейеш. Ошо традицияны яҙыусыларыбыҙ ҙа дауам итә. Мәҫәлән, Мең ырыуындағы ике Килембәт хаҡындағы сюжетты Кирәй Мәргән үҙенең «Бөркөт ҡанаты» романында[3] һүрәтләнгән ваҡиғалар контексына айырылғыһыҙ мөһим бер эпизодты тасуирлауға оҫта файҙалана. Яҙыусы риүәйәтте шәжәрәләгесә бүтән сығанаҡтарҙа бирелгәненсә (цитата рәүешендә) теркәмәй. Уға яңы эпизодтар, ситуациялар, персонаждар өҫтәй. Ваҡиға барған шарттарҙы үҙгәртә. Психологизация, тәфсирләп хикәйәләү, деталләштереүҙәр ярҙамында уға йән өрә. Романда ике ағай араһындағы аңлашылмаусылыҡ айсбергтың күҙгә күренгән өлөшө кеүек кенә итеп бирелә. Ә төп конфликт Аҡназар хан (Мең ырыуы менән идара итеүсе мырҙа романда шулай исемләнә) менән Йәдкәр баҫҡаҡ араһында тыуа. Йәдкәр баҫҡаҡ Аҡназарҙың урынын алыу өсөн, уны ҡустыһы Килембәткә ҡаршы ҡоторта: йәнәһе, уны юҡ итеп, үҙе хан булмаҡсы. Ә Килембәттең үҙенә шундай ҡотҡо һала: йәнәһе, Аҡназар хан, тәхетен бирмәү ярауын күреп, унан ҡотолорға уйлай, йәнәһе, Йәдкәр үҙе уның яҡлы. Баҫҡаҡ Килембәтте ҡасып китергә күндерә лә юлда уны үҙе үк үлтерә, ә Аҡназарҙы мең ырыуы кешеләренә ҡаршы ҡоторта, йәнәһе, уның ҡустыһын улар үлтергән.

Донъя әҙәбиәтендә билдәле булған мәкерҙәрҙең классик үрнәктәре менән тиңләшерлек Йәдкәр баҫҡаҡ образын индереү, романдың әле һүҙ барған өлөшөндәге ваҡиғаларҙы уның ихтыярынан килгән

---

[1] Очерки по истории БАССР. — С.54.

[2] БКИ. 4-се том. Эпос. — 319—344-се, 382-се б.

[3] Кирәй Мәргән. Бөркөт ҡанаты: Роман. Беренсе һәм икенсе китап. — Өфө: БКН, 1981. — 189—214-се б.

һымаҡ биреү, күрәһегеҙ, риүәйәттең танымаҫлыҡ булып үҙгәреүенә килтергән. Халыҡ әҫәрен бына шулай үҙләштереү башҡорт ырыуҙарының үҙ иректәре менән Рус дәүләтенә ҡушылыуҙарының сәйәси сәбәптәрен тәрәнерәк асыуға, уҡыусыға, ғөмүмән, шул дәүерҙә Башҡортостанға хас ижтимағи-сәйәси шарттарҙы йәнлерәк күҙалларға мөмкинлек биреү маҡсатынан килә, әлбиттә. Риүәйәт романда танымаҫлыҡ итеп ижади үҙләштерелһә лә, уның сюжетының төп схемаһы, яҙа-йоҙа булһа ла, барыбер төҫмөрләнә. Ғәҙәттә, белгестәр бындай күренеште «йәшерен фольклорлылыҡҡа» миҫал итеп килтереүсәндәр. Шул яҡтан ҡараһаҡ, Килембәт исеме лә үҙгәртелһә, һүҙ барған был эпизодтағы «фольклорлылыҡ»тың осо тағы ла нығыраҡ йәшерелгән булыр ине. Ләкин автор быны маҡсат итеп ҡуймаған, күрәһең. Улай ғына ла түгел, шундай «йәшеренлеккә» юл ҡуймаҫҡа тырышҡандай итә. Икенсе китаптың егерме дүртенсе бүлегенең тәүге өлөшө менән танышҡас, бының ысынлап та, шулай икәнлегенә ышанаһың. Яҙыусы унда әлеге ваҡиғаға халыҡтың мөнәсәбәте тураһында һүҙ алып бара. «Фажиғәле ваҡиға һәр саҡ халыҡтың күңелен аҡтара, аҫтын өҫкә килтерә. Яман эш ни тиклем генә йәшерен эшләнмәһен, ниндәй генә серле йоҙаҡ менән бикләнгән булмаһын, халыҡ күңеле барыбер һиҙә, эҙләй һәм ғәйепләне таба. Килембәт мырҙаның үлеме лә ни тиклем генә сер булмаһын һәм йәшерер өсөн ниндәй генә ялған саралар күрелмәһен, халыҡ күңеле барыбер эҙенә төштө. Баштараҡ уны: «Тәхетенә килеп ултырыуҙан ҡурҡып, Аҡназар хан үҙе үлтерткән икән», — тип һөйләнеләр. Әммә бындай тоҫмаллауҙың нигеҙһеҙ булыуы шунда уҡ асылды. «Килембәт мырҙа Аҡназар хан өсөн ни эшләп ҡурҡыныс булырға тейеш тә, тәхеткә ҡайһы яҡлап ҡулын һуҙырға тейеш? Хандың егет ҡорона инеп барған улы Әхмәтгәрәй бар ҙа баһа!» (345-се б.).

Артабан үлтереүсенең Йәдкәр баҫҡаҡ булыуына халыҡтың төшөнөүе, үлеүсе Килембәтте яҡлап (сөнки халыҡ «үлемгә дусар итеүсене ҡәһәрләй, ә ҡорбан булған шәхесте йәлләй»), уны «Аҡкилембәт» тип үлтереүсене Ҡаракилембәт тип атауы тураһында һүҙ бара. Шулай итеп, һүҙҙе ниҙән башлаһаҡ, тағы ла шуға килеп юлыҡтыҡ: яҙыусы риүәйәтте тарҡатып, әҫәренең төп идея асылына яраҡлаштырып үҙгәртә лә үҙенең версияһында һүрәтләнгән ваҡиғаларҙы әлеге риүәйәттең килеп сығыуына нигеҙ булған һымағыраҡ итеп нигеҙләп ҡуя. Бындай «ҡайырып ҡуйыу» халыҡтың булып ятҡан хәл-ваҡиғаны, үҙенең ынтылыштарына, мәнфәғәтенә ярашлы «социаль-сәйәси ҡараш күҙлегенән сығып» үҙләштереүен күҙәтергә мөмкинлек бирә. Был да романдың рухы менән бәйле: ул халыҡтың мырҙаларҙан, баҫҡаҡтарҙан, феодаль ыҙғыштарҙан арыуын, уларҙы ек күрә башлауын, Рус дәүләтенә ҡушылыуға сәйәси мохтажлыҡтың арҡандан-арта барыуын нигеҙләүгә булыша.

Фольклорсы күҙлегенән ҡарағанда, был миҫал тағы шул яғы менән әһәмиәтле. Үҙе фольклор мәсьәләләре менән шөғөлләнгән автор, әйтерһең дә, риүәйәттең нисек тыуыуын, формалашыуын күҙәтергә лә форсат бирә.

Бер үк хәл-ваҡиға халыҡ ижадының төрлө жанрҙарында төрлөсә сағылырға мөмкин. Әле ҡаралған бүлектә шуға ла миҫал бар. Килем-

бәттең үлтерелеүе айҡанлы ҡобайыр сығарылыуы хаҡында әйтелә. Ҡобайыр формаһы әлеге ваҡиғаны «социаль-сәйәси ҡараш күҙлегенән сығып» үҙләштереү һөҙөмтәһе булған әлеге риүәйәттә әйтелгәндәргә поэтик һығымта кеүек аңлашыла.

Шом һалма әҙәм күңеленә —
Үҙеңә шом килгән саҡ булыр,
Уҡталма әҙәм ғүмеренә —
Үҙең дә ҡолаған саҡ булыр.
Хайуанды хайуан бөтөрөп,
Бәндәне бәндә бөтөрөп.
Йоторҙай булып тарһынып,
Мырҙаны мырҙа үлтерер,
Килембәтте Килембәт үлтерер.

Ындай һығымта авторға халыҡтың тарихҡа актив мөнәсәбәтен асыуға ярҙам итә, ул шулай уҡ бөгөнгө көн талаптарына ла ауаздаш: милләт менән милләт сәкәшеүен көҫәүселәрҙе, үҙенең мөстәҡиллеге, азатлығы өсөн көрәшеүселәрҙе «юлбаҫарҙар» тип, шул ынтылыштарға ҡаршы ҡорал күтәреүселәрҙе «именлек урынлаштырыусылар» тип, күрәләтә ялғансыларҙы ла иҫкәрткәндәй була.

Килтерелгән миҫалдарҙың радиусын тағы киңәйтә төшкәндә, фольклорҙағы эпик сюжеттарҙың телдән йәшәү менән бергә шәжәрә, эпос рәүешендә яҙылған вариант һәм версиялары менән йәнәш йәшәүҙәре, шул формаларҙың әҙәби эҫәрҙәрҙә ижади үҙләштерелеше хаҡында ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр яһарға мөмкинлек бирер ине.

## 12. Халыҡ романы тип нарыҡланмалы дастан

Фольклор ғилеме күҙлегенән ҡарағанда, башҡорт шәжәрәләре араһында «Мәмбәт шәжәрәһе» тигән исем менән мәғлүм булғаны айырым бер урын алып тора. Ғәҙәттә, шәжәрәләр берәй этник төркөмгә нигеҙ һалыусы менән таныштырып, уның башынан үткәндәрҙе, хәл ҡәҙәренсә бәйән итеп, шул танышлыҡты нығыта бирә лә унан түбән килгәндәрҙе һанап сыға, уларҙың генеологик таблицаһын теркәй, шул ҡәүемдең күренекле шәхестәре хаҡында белешмә лә биргеләй. Шәжәрәнең төп тәғәйенләнеше лә шуны талап итә. «Мәмбәт шәжәрәһе» лә ошондай тәғәйенләнешкә тулыһынса яуап бирә. Тик ҡәҙимге шәжәрәләр әле әйтелгәндәр менән сикләнеүсән. «Мәмбәт шәжәрәһе» иһә был традициянан бик күпкә ситләшә. Тәүҙә ул, һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙып тормаҫтан, Үҫәргән ырыуында Мәмбәт этнонимын йөрөтөүсе бер тармаҡ тамыр йәйеүенә сәбәпсе кешенең ҡаҙаҡ сығышлы булыуы хаҡында мәғлүмәт бирә һала ла, уның ата-әсәһе ҡушҡан Жансары исемен үҙ ихтыярынан тыш ташлап, Мәмбәт тигәнен ҡабул итергә мәжбүр ителеүе менән таныштыра. Артабан иһә әле һүҙ барған ҡомартҡының төп геройына әүереләсәк шул заттың ун-ун ике йәштәр тирәһенән алып (Был шәжәрәне 1966 йылда Хәйбулла районы Сәғит ауылында илле туғыҙ йәшлек Мәмбәтов Ғәбделвәкил Мостафа улын-

да һаҡланған ҡулъяҙманан күсереп алып, беренсе булып ғилми әйләнешкә индергән шағир Ҡәҙим Аралбаев яҙыуынса, дала бөрйәндәренең батырҙары Ҡустанай яҡтарынан алып ҡайтҡанда, уның йәше ана шул сама була ла инде)[1], етмеш бишен тултырып, «Алладан тәҡдир ирешеб фани донъядан әхирәт йортона» күскәнгә тиклем ул ҡыҫылышы булған ваҡиғалар, һәм артабан унан түбән килгән быуындарҙың ир заттарының башынан үткәндәренең дә байтағы бәйән ителгән. Ахырҙа, күптән патриархаттың йола хөкөмө урынлаштырған традиция буйынса, ата-баба яғынан шуларҙың нәҫел-нәсәбенең генеологик таблицаһы теркәлгән.

Әммә хикмәт унда ғына түгел, ә теге тәғәйенләнеште нисек үтәүҙә. Шәжәрәләрҙең күптәре башлап этносҡа түл биргән һәм унан ҡалған быуындарҙың күренекле шәхестәре кисергән хәл-ваҡиғаларға ҡағылған сүрәттә лә, уларҙы объектив планда, әммә нейтраль тондараҡ бәйән итергә тырыша, һөҙөмтәлә ундай шәжәрәләрҙә факттарҙың булған-булмағанын констатациялау өҫтөнлөк ала. Бәйән итеү стиле иһә бары хәбәрнамә (информация) стиле булыуҙан ары китмәй, уҙа барһа, публицистик стилгә тарта. Ә һүҙ барған шәжәрә, фактик материалға бик тә бай. Ул үҙенең мәғлүмәти тығыҙлығы, телгә алынған ваҡиғаларҙың оҙайлы һәм киң ҡоласлылығы менән айырылып тора. Быныһы — мәсьәләнең бер яғы ғына. Икенсе яғы иһә — шуларҙың нисек еткерелеүендә. Материалдың байлығы, анығыраҡ әйткәндә, ситуатив хәлдәр, ваҡиғалар теҙмәһенең күплеге, шуларҙың үҙәгендә быуын-быуын ялғана килгән бер ҡәүем йөҙөндә кәүҙәләнеш алған коллектив геройҙың яҙмышы бирелеүе «Мәмбәт шәжәрәһе»нән эпик сюжетлылыҡты талап иткән. Бында шәжәрәсенең баштан-аяҡ билдәле бер тенденцияны алға һөрөүенең дә, атап әйткәндә, данлыҡлы Үҫәргән ырыуының ҙур ыҙалыҡтар менән тамыр йәйеп ебәргән ырыҫлы һәм түлле тармағының шул данды ишәйтеүгә тос өлөш индереүен иҫбатларға тырышыуының да, өлөшө ҙур. Һуңғыһына — шәжәрәсенең үҙ ҡәүеменән уҡымышлы кешеләрҙең күп сығыуына баҫым яһауы ла шик-миккә урын ҡалдырмаҫлыҡ миҫал. Мәмбәттең Һағындыҡ тигән ҡатынынан тыуған Рәхмәтулланың улы Ишмөхәмәт Ҡараҡай ишанда уҡыған, йөҙбашы булып хеҙмәт иткән. Юлыҡ хәҙрәтендә ғилем эстәгән Ғүмәр тигәне харунжи дәрәжәһенә тиклем күтәрелгән. Ғәбделнафиҡ тигәне Ғәбделлатиф хәҙрәттә ғилем алған. Мәмбәттең Һыйлыҡай тигән йәмәғәтенән тыуған Иҫәнғол да Ҡараҡай ишан мәҙрәсәһендә белем алған. Ошо мәмбәттәр араһында Хажи Суфый, Ғәләүетдин, Ноғман менән Ғимран ише йырауҙар, сәсән һәм шағирҙар ҙа булған. Ошо ҡәүемдән сыҡҡан скрипкасыһы ла, гармунсыһы ла, көмөшсөһө лә, игенсеһе лә, тракторсыһы ла — башҡаһы ла үҙ тәңгәлендә телгә алына, баһалана барған. Уларҙы һанап сығыу ғына ла был ҡәүемдең мәртәбәһен арттырыр ине. Шәжәрәсе ундай еңел юлды үҙ итмәгән. Мәмбәт ырыуы шәхестәре хаҡында һүҙ алып

[1] Ҡар.: Аралбаев К. А. Фольклорные мотивы и шежере Мамбетова рода // Башкирские шежере: Филологические исследования и публикации. — Уфа, 1985. — С. 44.

барғанда, мәғлүмәтте, факттарҙы теркәү менән генә сикләнмәй. Уларҙың характер һыҙаттарын, интеллектуаль кимәлен дә (ғилемлелеген, белемлелеген дә) ғәмәлдә күрһәтеү юлы менән асырға тырышҡан.

Башта Ғәбделнафиҡҡа туҡталып уҙайыҡ. Ул «яҙыуға ла маһир булып (мәҙрәсәлә фарыз уҡытыла торған) «Жәмғяләрмүз», «Мөхәммәдиә», «Фараиз», «Тариҡә», «Төркиб», «Тасриф», «Шәрех», «Ғабдулла» китабларын үз ҡулы илә язған». Шуныһын да әйтергә кәрәк, әлеге цитаталағы «яҙыуға ла маһир» тип бушҡа ғына әйтелмәгән икән. Быға шәжәрә менән артабан таныша килә төшөнәһең. Баҡһаң, был шәхес торғаны универсаль һөнәр эйәһе булған; «төрән һуғып, ураҡ тешәгән (Тимәк, ер эшкәртеү, игенселек менән дә шөғөлләнгән. — Ә.С.), көмөш тә эшләгән». Әүлиәләргә генә хас һынсыллығы ла булған уның. Быға дәлил итеп шәжәрәнән бер эпизодты телгә алыу ҙа етәлер. «Кантуннай бамушник* Бөрйән байы Жәми (Хөбби?), үҙенең түрәһен саҡырып, ат бәйгеһе тәғәйенләгәндә, ул «ике ҡулын ян кесәгә салуб ғына», «фрунт тороб», «теҙелеп торған атларның алдындан — артындан бер өйрөлөб килүб», уларҙың ҡайһыныһы — алдан, кемдеке арттан килерен әйтә — юраған юш килә лә ҡуя.

Хажи Суфыйҙың иһә ғилемлелегенә Орскиҙан килгән Бәҙәмша хәҙрәт менән ғәрәпсә генә аңлашыуынан, сәсәндәргә хас импровизаторлыҡ сәнғәтенә эйә булыуынан, айҡараларҙың иҫергәнсе ҡымыҙ эсеп, һуғышыр сиккә еткәне айҡанлы сатирик шиғыр сығара һалыуынан уҡ та яҡшы төшөнәбеҙ.

Шәжәрәсенең үҙен дә ул үҙе һоҡланып ҡылыҡһырлаған уҡымышлы ырыуҙаштары исемлегенә индерергә була. Ни өсөн тигәндә, быға, беренсенән, уның шундай заттарҙы, телгә алыу һәм ҡоро һанап сығыу менән генә сикләнеү «алымынан» тайшанып, уларҙың ҡылған ҡылыҡтарын айырым бер хөрмәт менән һоҡланып тасуирлау аша, бөгөнгө уҡыусы ла күҙ алдына килтермәле итеп, йәнле образдарын тыуҙыра алыуы уҡ нигеҙ бирә. Икенсенән, уның бәйән итеү, материалды композицион йәһәттән ойоштороу стилендә, үҙенә тиклемге шәжәрәселәрҙең тәжрибәһен яҡшы үҙләштереүе нық һиҙелә. Атап әйткәндә, урта быуатта йәшәгән Рәшит-әт-дин менән Әбүлғази хан кеүек көнсығыштың мәшһүр тәуарихсылары төҙөгән шәжәрәләр менән уның бик яҡындан таныш булыуы ихтимал. Улар ҙа шау факттарҙы теҙеп сығыу юлын үҙ итмәгән: һүрәттәрен тасуирлап тороп һүрәтләгән, бәйән итмәлеһен йәнле итеп бәйән иткән.

Мәмбәт шәжәрәсеһенең сюжет ҡора белеүе иһә фольклор ғилемендә шартлы рәүештә «тормош-көнкүреш әкиәттәре» тип йөрөтөлгән халыҡ новеллаһына ҡараған өлөшө һәм, шуға таянып, үҙ аллы йәшәү юлына баҫҡан көнсығыш сәсмәүере менән дә яҡшы таныш булыуын таныулы итә. Ә уларҙың (халыҡ новелалларының) сюжеты береһе осланып бөтөр-бөтмәҫтән, уға — икенсеһе, икенсеһенә — өсөнсөһө, бүтәненә — башҡаһы, тартма эсенә тартма ултыртып, бөтәһен дә бер йоҙаҡ менән бикләгәндәге кеүек, эстән тағылышып килгән тематик мотивтар ойошоуҙан хасил булыусан, һәм шуныһы: шулай үҙ-араһы бәйләнештә торһалар ҙа, ул мотивтар тулы автономияға эйә була.

Ошо хоҡуғын файҙаланып, уларҙың һәр береһе үҙ аллы әҫәр ойоштороусы мөстәҡил сюжет статусын алыуға ла һәләтле. Ғәрәптең мәшһүр «Мең дә бер кисә»һе, һиндтарҙың «Панчатантра»һы менән «Шукасаптати»һы, фарсының «Тутыйнамә»һе, мәҫәлән, ана шундай «мөстәҡил» сюжеттарҙың билдәле бер әҙмә-эҙлелеккә килтерелеп, уҡмаштырылыуынан барлыҡҡа килгән. «Мәмбәт шәжәрәһе» лә бөгөн булһын Хәйбулла, Ейәнсура, Баймаҡ, Йылайыр районлдарында һәм Ырымбур өлкәһенең уларға, бигерәк тә тәүгеләренә яҡын райондарында йәшәүсе Үҫәргән, ялан Бөрйәне, Түңгәүер ырыуы кешеләренән әле лә үҙ аллы риүәйәт рәүешендә ишетергә мөмкин булған әҫәрҙәрҙең варианттарынан ойошҡан. Ҡаҙаҡ балаһы Йәнһарының (Жансарының) башҡорт араһында Мәмбәт атын алып, шунда ир етеп, бер түгел, өс мәртәбә никахланып, нигеҙләнер ер эҙләй торғас, уға ирешеүе һәм ахыр сиктә үҙенең яңы ерендә әжәлен табыуы — үҙе бер тарих. Шәжәрәнең башында бәйән ителгән ошо тарих — үҙе генә лә үҙ аллы сюжет һыҙығы хасил итә.

Ә инде *«Ҡаҙаҡ малайы Жансарыны урлау»* мотивы пролог хеҙмәтен үтәһә, «ялан Бөрйәне булған «иштәк батырлары» алып ҡайтҡан шул ҡаҙаҡ малайының төнөн *«тулы нур хәлендә йоҡлап ятыуы»* — бер юлы өс вазифа атҡара: бер тигәс тә, ул «Мәмбәт тарихы»на ла, әҫәрҙең ҡалған өлөштәре өсөн дә экспозиция хеҙмәтен атҡара: образлы итеп әйткәндә, ҡаҙаҡ ҡанлы башҡорт Мәмбәттең нуры шәжәрәлә тасуирланған тарихтарҙың һәр береһенә лә төшкәндәй була. Хикмәт шунда: «Иштәк батырларының, (ҡаҙаҡ далаларынан. — *Ә. С.*) мал алып, улжаланып* ҡайтҡанын ишетеб, Һабыр ҡарт барып бер дустына төшә.

— Иптәш, улжанан һауға! — диб әйткәч (күрәһең, боронғо йола хоҡуғы буйынса, был һүҙ яуҙа табылған малдан бүтән ҡәрҙәштәргә лә өлөш тейеш тигәнде аңлатыр булған. — *Ә. С.*), (хужа):

— Булыр, бөгөн ҡунаҡ бул, — тип, (уны) ҡундыра.

Һабыр, төндә уянһа, сыуал арты яҡтырыб торғанға, барыб ҡараса, әлеге Мәмбәт(нең) өсте тулы нур булған хәлдә йоҡлаб ята. Был хәлде күргәс, Һабыр: «Был бала бер бәхетле бала икән», — диб, йоҡодан тороб ҡайтмаҡчы булғач, дусты Мәмбәтне (дөрөҫө, Жансарыны, сөнки был исемде, аҙан әйтеп, аҙаҡ Һабыр йортонда, ҡушалар уға. — *Ә. С.*) Һабырға бирә. Һабыр, ҡуана-ҡуана, Мәмбәтне атына мөңгәштерүб алыб ҡайтыб, хатын-балаларына күркәнләрен барын сөйләб: «Бу бала — өлөшлө бала. Яхшы тәрбиә итекүз», — ди». Был өҙөктөң бөтә тулылығында килтерелеүенең мәғәнәһе шул тороп. Нәк ошо өҙөктә «Жансары (Мәмбәт) тулы нур булған хәлдә йоҡлаб ята» мотивының, бығаса әйтелгән ике вазифаһынан тыш, өсөнсө вазифаһы асыҡлыҡ ала, дөрөҫөрәге, кинәйәләнә. Әсир баланы Һабырҙың нурлы итеп күреүе — уның өлөшлө булырын үтә күреүе ул. Өлөшлө булыуын күрәҙәләү — уның киләсәктә ырыҫлы булыуын күрәҙәләү. Ырыҫлы булыу, әлдән-әле яу ҡайтарып торған күсмә башҡорт идеалы буйынса, түлле булыуҙы, маллы булыуҙы аңлатҡан. Һәр хәлдә, «Мәмбәт шәжәрәһе» бына шуны раҫлай.

Килмешәк малайҙы бөтәһе лә ҡушҡуллап ҡаршы алмай Һабыр йортонда. Яңы ағайҙары уны ситләтә, төрлөсә эҙәрлекләй. Хатта үлте-

рергә ниәтләнгән саҡтары ла булғылай. Тәүгеһенең сәбәбе — уның икенсе йыныстан* булыуында ғына түгел, ә шуның өҫтөнә, Һабыр ҡарттың ишле ғаиләһе иерархияһында кинйә ул тигән статустың ошо килмешәк малайға күсеүендә. Әгәр ҙә мәгәр был ҡаҙаҡ балаһы ҡыҙ затынан булһа, яңы ғаиләлә ул Кинйәбикә урынын алыуына ҡарамаҫтан, ағайҙары уға тырнаҡ осо менән дә ҡағылмаҫтар ине, хатта ҡурсалап ҡына торорҙар ине. Ек күрә ҡалһалар иһә, бары килмешәк ят йыныс булғаны өсөн генә ек күрерҙәр ине. Һабырҙың үҙ уландары менән (ошо ҡарт тарафынан) уллыҡҡа алынған Мәмбәт араһындағы ыҙғыш — ғаилә-көнкүреш әһәмиәтендәге конфликт ҡына түгел, ул ыҙғышыусыларҙың ихтыярына ла, биографияһына ла бәйләнмәгән социаль пландағы конфликт. Ә уның үҙенә генә хас тарихи-этнографик нигеҙе бар.

Борондан килгән минорат йолаһы буйынса, башҡорттарҙа атайҙан ҡалған нигеҙ, аяҡлы малдың күп өлөшө иң кесе улдың, кинйәнең, ҡулына күсә. Әммә «Башҡорттарҙа минорат хоҡуҡты ғына түгел, бурысты ла аңлатҡан: кинйә ул атаһын ерләргә, уның бурыстарын түләргә, әсәһен ҡарарға тейеш. Кейәүгә бармаған ҡыҙ ҡәрендәше була икән, ул уның туйын үткәрергә, уны бирнә менән тәьмин итергә тейеш булған»[2]. Тимәк, Һабырҙың үҙ уландары, ул уллыҡҡа алған малайҙың хоҡуҡтарын ғына иҫәпкә алып, эш итәләр, ә бурыстары хаҡында уйлап та бирмәйҙәр. Бына шул, теләһәк-теләмәһәк тә, уларҙы тар эсле, тар күңелле кешеләр тип күҙалларға мәжбүр итә лә ҡуя.

«Мәмбәтте ни өсөн үлтерергә теш ҡайрайҙар инде?» Был һорауға — бынан алдағы абзацтың һуңғы һөйләме яуап. Шулай ҙа уға асыҡлыҡ индереү зарур. Ағай-энеһенең был яуыз ниәте хаҡында хәбәр алғанда, Мәмбәт күптән инде үҙенә атай иҫәпләнергә тейеш Һабырҙан, тимәк, ағайҙарынан да, башҡаланып, үҙ аллы донъя көтә башлаған була: өс ҡатыны, бала-сағалары менән бергә уларҙан башҡа йәшәгән бит. Ошоға тиклем ағайҙарынан ҡасып, кире ҡаҙаҡтар араһына барып та йәшәп ҡараған, Ырымбур губернаторынан ергә рөхсәт алып, Туҡ, Соран, Эйек, Ирәндек буйҙарын ҡарап сығып, береһен дә ерһенмәй, «өйрәнгән кешеһе Һабыр янына» кире ҡайтҡан була. Аңлашылалыр ки, тимәк, был юлайы, ағайҙарының уға яҫҡаныуына, аңлашыла торғандыр, минорат институтының талабы нигеҙенән сыҡҡан бәхәс кенә түгел, бөтөнләй икенсе фактор сәбәпсе була. Ул фактор — әлеге лә баяғы тар эслелек, күңел тарлығы, дөрөҫөрәге шул хистәрҙең көнләшеү тойғоһона әүерелеүе. Көнләшерлектәре лә бар шул: «Жылҡы маллары биш-алты йөҙ житеб, ҡуй, ваҡ-эре маллары да ҡубайуб» бара Мәмбәттең. Ул «ҡубайуб» һүҙе ни аңлатҡанын шунан да белеп була. Мәмбәттең тәүге ҡатыны Һағындыҡтан тыуған икенсе улы Рәхмәтуллаға унан мең баш йылҡыһы ҡала. Ә унан тыш шул уҡ ҡатыны башлап бүләк иткән өлкән улы Сәйфуллала, икенсе ҡатыны Һыйлыҡайҙан тыуған Иҫәнғол майорҙа, Ғәбит батырҙа, Хәбибуллала,

---

[2] Бикбулатов Н. В., Фатыхова Ф. Ф. Семейный быт башкир XIX—XX вв. — М.: Наука, 1991. —С.145, 146.

Йомаһултандан донъяға килгән Иҫәндәүләттә, Мөхәмәтрәхимдә, Көбәк мәзиндә, уларҙың балаларында күпмешәр баш йылҡы, нисәшәр баш башҡа мал булған — иҫәбе-хисабы юҡ.

Борон башҡорт байы малының һанына, ысынлап та, иғтибар итмәгән. Сөнки халыҡ һанауҙың кире магик көсөнә ышанған, иҫәпле нәмә кәмей, тип белгән. Шуға күрә лә, тау араһы йә туғай тулып йөрөһә, мал теүәл, тип белгән. Мал «иҫәбен алыуҙың» ошо оригиналь ысулы «Мәмбәт шәжәрәһе»ндә лә сағылыш таба биреп ҡалған. Мәмбәттең Рәхмәтулла тигән улы хаҡында һүҙ барғанда, унда шундай һүҙҙәрҙе уҡыйбыҙ: «Рәхмәтулланың ҡуйларын ҡуранан далаға сығарғанда, бер осо Стабанда (уның ҡураларынан байтаҡ ерҙә ятҡан күл ҡырында. — *Ә. С.*), бер осо ҡурада булған».

Унда шулай уҡ Мәмбәт затының малды үҙ-ара сәмләнешеп үрсетеүе хаҡында ла мәғлүмәт бар. Рәхмәтулланың аталаш ҡустыларының береһе, Йомаһултан тигән үгәй әсәһенән тыуған Мөхәмәтрәхим өсөн ул өлгөлө бай иҫәпләнгән. Шулай булмаһа: «Ҡуйымды Рәхмәт ағайымдың ҡуйына еткерәм тип», үҙе әйтмешләй, «ашамай, эсмәй, әйтеүҙәр әйтә-әйтә», мал үрсетергә маташмаҫ ине.

Ошо әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, Һабыр ҡарттың Мәмбәт (Жансары) хаҡында: «Бу бала — өлөшлө бала», — тип юрағаны юш килгән. Тимәк, *«Жансары өҫтө тулы нур булған хәлдә йоҡлаб ята»* мотивы Мәмбәт атлы байға әүерелгән ошо заттың үҙенең генә түгел, бөтә нәҫел-нәсәбенең дә өлөшлө: ырыҫлы — түлле лә, маллы ла булырын, шуға өлгәшеү өсөн, уларҙың тырышып ятырҙарын көн элгәре билдәләү сараһына әүерелә. Ә был һөҙөмтәгә ирешеү өсөн, яҙмыштарҙы бәғзе ваҡыт һуңғы сик һыҙығына еткергеләгән күпме ваҡиғалар булып үткән дә, күпме уй-хистәр кисерелгән. Уларҙың да сығанағы — асылда, *«Жансары өҫтө тулы нур булған хәлдә йоҡлаб ята»* мотивы. Бынан иһә шәжәрәлә бәйән ителгән ваҡиғалар хаҡындағы хикәйәләрҙең һәр береһе башҡа-башҡа риүәйәт рәүешен алыу ихтималы төҫмөрләнә. Мөстәҡил булған ана шул риүәйәти сюжеттар, бер-береһенә тағылышып, тематик мотивтар (йәғни мини-сюжеттар) вазифаһын атҡара. Шуның һөҙөмтәһендә тотош әҫәрҙең сюжеты хасил булған. *«Жансары өҫтө тулы нур булған хәлдә йоҡлаб ята»* мотивы бына шул оло сюжеттың тәбиғәтен прогнозлау вазифаһын да атҡара. Уның өсөнсө вазифаһы бына шунан ғибәрәт.

Борон бит һәр кемгә лә хәреф таныу бәхете менән яҙыу-һыҙыу маһирлығы тәтемәгән. Шуға күрә лә шәжәрәләрҙе, тәуарихтарҙы, туҙға, эт тиреһенә, йәйен тиреһенә, ахырҙа килеп, ҡағыҙ битенә теркәү менән бер рәттән, уларҙы ятҡа бикләү ғәҙәте лә киң таралған булған. Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ ауылы аҡһаҡалы Илһаметдин сәсән Баҙаров, мәҫәлән, башҡорттоң Тамъян тигән ырыуының Дим бассейнына ерегеп, шунда төпләнеп ҡалған тармағының шәжәрәһен (уның сюжетлы хикәйәт төҫөн алған өлөшөн дә, генеалогик таблицаһын да) әле генә үтеп киткән быуаттың 70-се йылдарында ла ятҡа һөйләп ултырыр ине. Ә инде Әлшәй районы уҙаманы Ейәнбай Тимербай улы Усманов (1908) күренекле тел белгесе һәм шағир Рәшит Шәкүргә өс көн оҙонона бере-бере «Көрьән» ҡалынлығындағы өс китапҡа теркәлгән тәуарихтың ҡыҫҡаса йөкмәткеһен һөйләгән («Заманалар ҡисса-

һы» һәм уға бирелгән аңлатмаларҙы ҡарағыҙ). Көнсығыш сәсмәүере менән ни тиклем генә яҡшы таныш булмаһын, хикәйәләү оҫталығын ни тиклем матур үҙләштермәһен, Мәмбәт ырыуы шәжәрәһен төҙөүсе ҡәләм эйәһе лә уның телдән таралыу ихтималын иҫәпкә алғанға оҡшай. Шуға күрә лә, нисек кенә ҡыҙыҡтырғыс булмаһын, *тартмалы композиция алымын* тулыһынса файҙаланмай. Ул сағында мәмбәттәрҙең төрлө шәхестәре тураһындағы риүәйәттәрҙе нисек бер епкә теҙә алған һуң? Мәмбәт затлы шәхестәрҙең һәр береһенә бәйле хәлваҡиғаларҙы эске (микро-) сюжет рәүешендә ойоштороуға, әле генә әйтеп үтелгәненсә, Жансарының илаһи ҡөҙрәт менән нурланыуы хаҡындағы мотивтың (ошо ҡәүемдең күренекле шәхестәре яҙмышының булмышын, башынан кисән хәл-ваҡиғаларҙың, тимәк), дастанды хәтерләтеүсе шәжәрәнең дөйөм сюжетының да үҙенсәлеген прогнозлау һәләте булышҡан. Бынан тыш һәр шәхес хаҡындағы риүәйәттең шул шәхестән ҡалған бала-сағаны һанау менән тамамланыуы ла уларҙың композицион яҡтан ойошоуына стимул тыуҙыра. Әҫәрҙең композицияһына хас ошо үҙенсәлектең үҙ сиратында шундай нескәлеге лә бар: бер шәхескә бәйле сюжет уның балалары һанынса «суҡлана». Мәҫәлән, Мәмбәттең ир балалары һанап сығылған икән, артабан мотлаҡ уларҙың һәр береһе хаҡында берәй риүәйәт йә риүәйәттәр циклы, хатта һәр береһе бер новелланы хәтерләткән күләмәстәр, лаҡаптар теркәлә, уларына артабанғы быуындарға бәйләһе теркәлә...

Шәжәрә сюжетының экспозицияһында Һабырҙың, бер күреүҙә үк, Жансары-Мәмбәттең өлөшлө булырын юрауы, артабан ошо юрауҙың тар планда ла, киң планда ла (йәғни яңы ҡәүемгә нигеҙ һалыусының үҙе кимәлендә лә), ырыу кимәлендә лә юш килеүе беҙгә уны һынсы тип танырға форсат бирә. Улай ғына булһа бер хәл: уның әүлиәлек, һынсыллыҡ һәләте унан ике ейәненә, (улы Рәхмәтулланың Ишмөхәмәт, Ғәбделнәфиҡ тигән уландарына) күсә. Мәмбәт үҙе, мәҫәлән, тәүге кәләшен алғас, бына ни ти: «А, хатуным Сағындыҡ, бармағың жуан, ҡыҫҡа ғына икан. Балаларың, нәҫел-нәсәбең жиулышларда, алға чығуб, сүз сөйләй алмас, сүзгә тупаҫ булыр. Ләкин балаларың, балаларыңның балалары да бай булурлар. Шул байлыҡлары илә ауылның башы булып, алдын бирмәсләр». Был юрау ҙа юш килә. Мәҫәлән, тәүге никахынан баш балаһы Сәйфулланың улы Ҡыуандыҡ тәүҙә, йәшлек дыуамаллығы менәндер, моғайын, барымтасы була, шул сәбәптән шәжәрәлә уғры тип тә атала. Аҙаҡ хәләл көсө менән байый, йорт өҫтөнән старшиналыҡ итә. Бынан тыш ул ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәгән батыр итеп тә таныта үҙен. Уның был сифаты, эпос традицияһын хәтерләтерлек итеп, бала сағынан уҡ асыла. Шулай икәнен шәжәрәсе әйтеп кенә уҙмай, тасуирлап уҡ күрһәтә. Малай сағында, уҡ атыш уйыны уйнағанда, атаһы менән бер туған (киләсәктә майор дәрәжәһе аласаҡ Иҫәнғол) ағаһы: «А, Ҡыуандыҡ, миңа ҡараб, кербегеңне ҡаҡмай тор, башыңдағы түбәтәйеңдән үтә атам», — тип уҡ атҡанда, ул, ысынлап та ҡымшанмай ҙа. Атанан күргән уҡ юнған Ҡыуандыҡтың улы Динмөхәмәт иһә ҡаҙаҡ ханы Кинәһарыға( ҡырғыҙҙар уны Кенәнсары тип исемләй) ҡаршы яуҙа батша ғәскәре яҡлы булып ҡатнашҡан яугир итеп күрһәтелгән.

Мәмбәттең тәүге ҡатынына әйткән һынамышын унан тыуған башҡа балаларының балалары ла раҫлай. Быны: «Сағындыҡ балалары ошо көндә лә бай булуб, дәүләтләре илә килде-китде мосафир, фәкир вә мәскин (меҫкен) түгел: мәслихәд мәктәб тәрбиәләп, укытдырып килеүсе булдылар», — тип, шәжәрәнең хронологик сиктәрен аша баҫып, шәжәрәсе үҙе лә ҡеүәтләп ҡуя.

Шуныһы ҡыҙыҡ: әле тыуып та өлгөрмәгән, балаһын алдан уҡ исемләп, уға әсәй эҙләй. Бына ул ни ти: «Түбән дә (бынан кире лә. — *Ә. С.*) иштәкләр (Һабыр яғынан ағай энеһе күҙ уңында тотола. — *Ә. С.*) миңгә һәм нәсел-нәсәбләремә тынычлыҡ бирмай икән, бер *чәчән тоҡомдан*(?) хатун алайым. Алла тәғәлә бер бала бирмәҫ микән?» — тип, Верхне-Уральскиҙән Яхыя сәсәндең ҡыҙын ала. Уның ошо һүҙҙәренә һәм шул һүҙҙәрен бойомға ашырыуына айырым бер диҡҡәт туплаттырғы килә. Сөнки уларҙа әлегә этнографтарыбыҙ ҙа, фольклорсыларбыҙ ҙа иҫәпкә алмаған бер ырым, инаныс — һүҙ оҫтаһы, дөрөҫөрәге, поэтик һүҙгә, көйгә, моңға маһир зат, менән ҡәрҙәшлек бәйләнешенә инеүе низағтан ҡотҡара тигән инаныс — ғәмәлләшкәнгә оҡшай. Быны шиғри һүҙ, көй, моң магияһына инаныу менән генә аңлатып була торғандыр, моғайын. Бәлки, бүтән нигеҙе лә барҙыр. Эҫәрҙә тап бына шул инаныс сағылышы шуның менән дә дәлилләнә: ахырҙа «иштәктәр», үҙ үҫәргәне тип иҫәпләп, Мәмбәтте тынысһыҙлауҙан туҡталалар.

Ырым өҫтөнә ырым: шулай икенсегә никахланған Мәмбәт, һынсыллығына барып, йәнә шулай ти: «Бу Сыйлыҡайдан (йәғни Яхыя сәсән ҡыҙынан. — *Ә. С.*) Исанғол тыумасмы, ун ике кантондың өстөндән йөрмәсме?» Был юлы ла юрауы һынатмай: Һыйлыҡайҙан тыуған Иҫәнғол майор ун ике кантон өҫтөнән ҡарап йөрөй. Мәмбәттең һынсыллығының был осраҡтағы һөҙөмтәһен «затлынан затлы тыуа» тигән инаныстың ғәмәлләшеүе тип кенә аңлатырға булалыр. Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ, үҙенең оло маҡсатын бойомға ашырыу өсөн, йәғни Әжәлдең үҙен тотоп алып үлтереү, ер өҫтөндә мәңге йәшәү һәләте бирер Йәншишмәне эҙләп табырға тип, китеп барған Урал батыр юлайҡан ғына туҡталған бер урында халыҡ уны мотлаҡ кейәү итергә тырышып ята. Ә быны халыҡтың, затлынан затлы тыуа, тип инаныуы менән генә аңлатып була. Һәр хәлдә, Әзрәкәне еңгәс тә, юлын дауам итергә йыйынған Урал батырға Алғыр батырҙың ҡыҙы Гөлстанды кәләш итергә тәҡдим иткәндә, ил ҡарттары бушҡа ғына:

«Ил батыры — батырҙан,
Батыр ирҙән тыуыр ул», —

тип әйтмәгәндер.

Өсөнсө ҡатынын алғанда ла, Мәмбәткә һынсыллығының булышлығы тейә. Балыҡсы ҡыҙ ҡармаҡ һелтәгән һайын, балыҡ ҡабып тороуынан: «Мынау балыҡның ҡабыуында бер бәхет икан, бу ҡызны мин алайым», — тип ниәт итә — ниәтенә ирешә лә. Шул кәләше уға өс ул табып биреп, ул да Мәмбәттең түлле вә ырыҫлы буласағы хаҡында Һабыр ҡарт әйткән юрауҙың юш килеүенә йәнә бер раҫлау булып кәүҙәләнеш ала.

Ҡыры сыҡҡанда, шуны ла әйтеп үтеү лазым. Мәмбәт ырыуы хаҡындағы әле беҙ һүҙ алып барған эпик ҡомартҡыны баштан-аяҡ күҙҙән кисереп сыҡҡас, ирекһеҙҙән, был ҡәүемгә — күп никахлылыҡ ғәҙәти күренеш булған икән, тип уйлап ҡуяһың. Хатта ки, күп никахлылыҡ был этнос өсөн фарыз эш тип иҫәпләнмәнеме икән тигән уй ҙа килә башҡа. Ике фекергә лә урын бар: әйтелгәненсә, Мәмбәт — өс никахлы, уның менән Һағындыҡтан тыуған икенсе улы, Рәхмәтуллаһы — ике, Рәхмәтулланың ейәне Искәндәр — дүрт, Аралбай тигән улынан тыуған Әсфәндиәр — ике, уның улы Камалетдин — өс, Аралбайҙың Ғимаҙетдин тигән улы — ике, Рәхмәтулланың Ишмөхәмәт тигән улының улы Ғүмәр хорунжи — ике, Ғәбделғәни тигән бүләһе — дүрт, Аллаяр тигән улы — ике, Мәмбәт менән Һыйлыҡайҙың улы Иҫәнғол майор — ике, уның улы Йәрмөхәмәт сотник — ике, Рәхмәтулланың Ғосман тигән ейәне — өс никахлы булған. Араларында дүрт никахлы булғандары ла бар. Ошо теҙмәнән генә сығып, бөгөнгө аң, бөгөнгө ҡанундар кимәленән генә фекер йөрөткәндә, ул ҡәүемдең ир-аты йә нәфсеһен тыя алмаған, йә исламдың дүрт ҡатын алырға рөхсәт ҡылыуынан файҙаланып ҡалырға тырышҡандар, тип еңел генә яуап биреү менән сикләнергә лә мөмкин (әйтерһең, ундай традиция исламға тиклем булмаған, шәриғәттең ни икәнен дә белмәгән Урал батырҙың да, экиәт батырҙары ла өҫтө-өҫтөнә кәләш алыуы — бер ни ҙә түгел; әйтерһең, шул йоланың кире яғы ла йәшәмәгән, йәғни бөгөнгө көнгәсә Тибетта һәм уға күрше Непалдағы һымаҡ, бер ҡатынға бер юлы бер нисә ир менән никахта тороу хоҡуғы бирелмәгән). Әммә һүҙ барған эпик ҡомартҡының үҙендә үк был мәсьәләгә бер һәм берәгәй яуап бар. Өс ҡатыны үҙ-ара дыулашып киткеләгәндә (донъя булғас, ундай хәлдәр ҙә була тора), Мәмбәт: «Ай, ниңә дыулашаһығыҙ?! Мин һеҙҙе ҡатынһырап (йәғни, күмәк ҡатын менән енси ихтыяжымды ҡәнәғәтләндерергә теләгәндән. — *Ә. С.*) алғаным юҡ! Миңә яңғыҙ ҡатын да етә!!! Һеҙләрҙе, нәҫелем күп булһын тип алдым!» — тип әйтер булған. Унан ҡалған заттар ҙа, моғайын, иң әүәл патриотизмдың бер кәүҙәләнешен никахтың ошондай формаһында күргәндер (аңлашылыуынса, был фекер бер мәмбәттәргә генә ҡағылмай). Бында беҙ нәфсенең өлөшө булыуын да, ҡатындары үлгән һайын, мәмбәттәрҙең түшәк яңыртыуы ихтималын да күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ, әлбиттә.

Мәмбәт шәжәрәһен беренсе тапҡыр ғилми әйләнешкә индергәндә, Ҡ. Ә. Аралбаев: «Легендала (бында шәжәрәнең туранан-тура Жанһары-Мәмбәткә ҡағылған өлөшө тураһында һүҙ бара. — *Ә. С.*) Мәмбәттең шәхесе идеаллаштырылған. Вариҫтары үҙҙәренең ырыу башлығы йөҙөндә изгелек эйәһен күрергә теләгән», — тигәйне[3]. Юғарыла әйтелгәндәр авторҙың хаҡлы икәненә бер дәлил ул. Жансары-Мәмбәт, йоҡлаған сағында, нурланып ята, тип раҫлау — уны илаһи заттар рәтенә ҡуйыу менән бер. Пәйғәмбәрҙәр генә күҙ алдына шулай баҫтырылыр булған. Ана шуға ла ул, үҙе генә өлөшлө булыу менән сикләнмәйенсә, үҙенән ҡалыр нәҫел-нәсәбенә лә өлөш сығарған зат итеп идеаллаштырыла булыр.

---

[3] Аралбаев К.А. Фольклорные мотивы в шежере мамбетова рода. — С. 44.

Автор Мәмбәттең шәхесен идеаллаштырыуҙың серен халыҡтың ҡараштарының сикләнгәнлегендә, Хаҡ тәғәлә генә әҙәмде бәхетле итә ала, тип инаныуҙа күрә. Уныһы менән дә килешергә була, тик тулыһынса түгел. Ни өсөн? Сөнки бының сәбәбе шәжәрәсенең үҙенә түгел, ә ул эйәргән традицияға бәйле. Традиция иһә этностың килеп сығышын Нух пәйғәмбәр, Лоҡман Хәким кеүек изгеләргә, Сыңғыҙ хан, Искәндәр, Салауат ише күренекле заттарға, һис булмағанда, уларҙың осорона ялғауҙы фарыз, тип иҫәпләй. Мәғлүмдер ки, Мәмбәт тигән кесе ырыу үҙе Үҫәргән тигән оло ырыуҙың бер ярсығын ғына тәшкил итә. Оло ырыуҙың шәжәрәһе Сыңғыҙ заманынан, шул йыһангир менән замандаш, ҡулдаш булған Туҡсаба уғлы Мөйтән бейҙән башлана. Генеалогик таблицаһына ҡарап иҫәпләгәндә, Мәмбәтте иһә һис кенә лә уларҙың замандашы тип булмай, ҡарағай-ҡыпсаҡтарға эйәреп Лоҡман Хәкимгә, ҡары-ҡыпсаҡтарса Нух пәйғәмбәр кеүек изгеләргә яҡын юлатыу күптән ситен. Шуға күрә өр-яңы кесе ырыуҙың башлығының үҙен изгеләштерергә генә ҡала.

Уны, тыумыштан мөһөрлө бала, тамғалы бала, йәғни өлөшлөк тамғаһы мәғәнәһендә нур сәсеүгә, һынсы һәләтенә эйә булған зат итеп күрһәтеү — ана шул бушлыҡты тултырыу сараһы ул. Ошо һәләт быуындан быуынға күсә бара тип иҫбатланыуы иһә йәнә лә шәжәрә эсендәге риүәйәттәрҙе бер сюжет ебенә теҙеүгә булышлыҡ итеүсе композиция алымы хеҙмәтен үтәй.

Әйткәндәй, Мәмбәт шәжәрәһенең оло сюжетын хасил итеүсе һәр төрлө тематик мотивтар, үҙаллылыҡ алған сүрәттә, тик риүәйәт кенә хасил итмәй. Ҡайһы бер мотивтарҙан көләмәстәр, лаҡаптар яралырға ла мөмкин. Мәҫәлән, Ҡыуандыҡ старшинаның Бөрйәндән килгән ҡунаҡтарҙы башта ҡымыҙға ымһындырып, һылтауын табып, уны үҙе генә эсеп бөтөп, тегеләрҙе әсе һемәйтеүе; Рәхмәтулла кеүек бай булам тип, уның бер ҡустыһының ашамай-эсмәй, мал һуймай йөрөп ҡарауы; Мәмбәттең Һыйлыҡайҙан тыуған Иҫәнғол тигән улының, Циалковский менән Перовскийҙы мәрәкәләп, мәсет һалдырырға уларҙан аҡса алыуға өлгәшеүе тасуирланған урындар халыҡ юморы менән һуғарылған һәм, үҙ аллы йәшәгән сүрәттә, шул сәбәптән көләмәстәр рәтен тулыландырыуға булышырлыҡ. Ә инде «Мәмбәт шәжәрәһе»н (йәки «Түлле Мәмбәт») дастанын китапҡа әҙерләгәндә, Мәмбәттең күп һанлы ейәндәрҙең береһе хаҡындағы өлөшө «Мөхәмәткәрим-Батыр бин Иҫәнғол бин Мәлебәт» бушҡа ғына айырым бүлек рәүешендә бирелмәне. Әгәр ваҡытында кемдер ошо шәхестең мажараларына шаһит булған кешеләрҙең хәтирәләрен, хатта уның хаҡындағы имеш-мимештәрҙе лә бөртөкләп, берәмтекләп теркәй барһа, моғайын да, Хужа Насретдин тураһындағы латифа-көләмәстәрҙән туҡылған юмористик «Халыҡ романы»на яңырыу дәүере яңы башланып ҡына торғанда Италия әҙибе Джованни Бокаччо (1313—1375) яҙған мәшһүр «Декамерон»ға тиңләшмәгән хәлдә лә, уларға баҫымлай биреп ҡуйған әҫәр хасил булыр ине. Беҙгә килеп еткәне лә (ә улар махсус тикшереүгә лайыҡ) башҡа персонаждарға бәйле комик ситуациялар хаҡындағылар менән бергә, шәжәрә контексында ҡарағанда, уның стилен төрләндереүгә, урыны-урыны менән уға новеллизм рухы бирергә булыша.

Элекке заман менән яңы заманды сағыштырып, Мәмбәттең Сәйфулла тигән улы яғынан бүләһе Динмөхәмәттең теләһә ҡайһы шарттарҙа ла намаҙын ҡалдырмауын бәйән иткәндән һуң, шәжәрәсе: *«Хәҙерге кеше үҙең жылы өйөндә муйынында беренче нәрсә — намаҙын уҡымый(лар). Боронғоноң наданы хәзергенең мулласынан артук!»* — тип реплика ташлай. Ишмөхәмәттең хөрмәтле кеше булыуын тасуирлап тора ла: *«Муна боронғо кеше ҡалай инҡаҡлы*, өлкәнләрне ҡәдерләп, бер булуб, айырылмағандар. Хәзерге кеше бүре тейгән, ҡуй көтөүе шикелле, тарҡалуб китәләр дә, татыусылыҡ да юҡ, бәрәкәт тә юҡ, бер-беренә мөхәббәт тә юҡ, байлыҡ та юҡ — уйлағаны, эшләгәне, сөйләгәне — боҙоҡлоҡ.»* Элек байы ла, ярлыһы ла туҡ булыуы, бергә йәшәүҙәре хаҡындағы хикәйәт иһә *«Хәҙерге көндә анасы иткә туймай, баласы сөткә туймай. Туя, диб әйтер идем, хатунларда имчәк юҡ, балаларда инсаф юҡ»* тигән нәсихәти һығымта менән айырымлана. Быңдай миҫалдар иһә шәжәрәгә эпик ҡомартҡы формаһы биреүсе сюжетты хасил итеүсе тематик мотивтарҙы ғибрәтле әкиәттәр менән ауаздаш итә.

«Мәмбәт шәжәрә»һенең нәсихәти пафосын боронғоно — яңыға, яңыны боронғоға сағыштырыу, шунан шәжәрәсе тарафынан яһалған йә уҡыусы ихтыярына ҡалдырылған һығымталар ғына тыуҙырып ҡалмай. Был шәжәрәне эпик ҡомартҡыға, айырыуса дидактик дастанға яҡынлаштырыуҙа фәһемле ваҡиғаларҙы тасуирлап, нәсихәти идеяларҙы «күргәҙмәле итеү», «аңлағанға ишара» принцибынан сығып, кинәйәләп кенә еткереү, художестволылыҡ күҙлегенән айырыуса мөһим роль уйнаған. Башҡортта борон-борондан ҡайны кеше — һәр төрлө хөрмәткә лайыҡ кеше иҫәпләнгән. Уның бер туған ҡайны булыуы шарт түгел. «Яһалма» ҡайнымы, йәғни ҡыяматлыҡ йәки үкел ҡайнымы — уныһы мөһим түгел. Ер бүлешеү шул уҡ башҡорт өсөн йән бүлешеү менән бер булған. Шулай булһа ла, Мәмбәт: «Ҡайным, тәүлә син ал», — тип, беренсе булып ер һайлау нәүбәтен үкел ҡайныһына бирә. «Һин үкел ҡайны ғына бит әле, законнай булһын: әйҙә, тәүҙә йәрәбә тартайыҡ», — тип тормай. Төптән уйлап ҡарағанда, уның был аҙымы артында йола ҡанунының ике «статьяһы»ның йөҙмө-йөҙ осрашыуын шәйләргә була. Берҙән, үкел булһа ла, кейәү кеше һәр саҡтағыса ҡайны кешегә хөрмәт күрһәтергә бурыслы. Икенсенән, әйбер бүлешкәндә, айырыуса һүҙ ер хаҡында барғанда, ғәҙеллек тантана итһен өсөн, йәрәбә һалынырға тейеш. Кейәү кеше буларак Мәмбәт тәүгеһенә өҫтөнлөк бирә: йәрәбә һалышыуҙан да баш тарта. Был иһә — «ул тәҡдимде Мәмбәт, һис икеләнеүһеҙ, ысын күңелдән әйткән» тигән менән бер. Ошо эпизодҡа шәжәрәсенең махсус туҡталыуы, берҙән, Мәмбәт изге күңелле кеше булған, тип ҡылыҡһырлауға тиң. Тимәк, уның образын да һиҙелерлек кимәлдә тулыландырыуға булыша был туҡталыу. Бында уның кеселеклелеге, итәғәтлелеге асыла. Икенсе яҡтан, ул әҫәрҙе уҡыусыларға өгөтһөҙ-ниһеҙ генә нәсихәт күндерергә мөмкинлек бирә: ана унан өлгө алығыҙ, кейәү кешегә ҡайныһын (һәм, ғөмүмән, йәш кешенең ололарҙы) һәр саҡ хөрмәт итеү — лазым, тигәндәй була. «Һәр саҡ» тигәнгә — Мәмбәттең бай булыуы, ҡайны тигәненә үкел кейәү генә булыуы ла аңлатма бирә буғай.

Шәжәрәнең Мәмбәт менән һағындыҡтан тыуған икенсе улы Рәхмәтуллаға бағышланған өлөшө иһә «Ҡайны кеше лә бурыслы булып ҡалмаҫҡа тейеш, кәрәк саҡта кейәүенә ул да булышырға, уға үҙ хөрмәтен ул да күрһәтә белергә тейеш» тигән фекерҙе алға һөрә. Рәхимйән атаһынан ҡалған мең баш йылҡынан ҡолаҡ ҡаҡҡас (уны ҡаҙаҡтар ҡыуып алып китә), «Мәмбәтнең ҡайын (ҡайны) йортлары, ҡодалары бирәр жылҡы бирүб, [Рәхмәтулла] үлән үскән еренә күсә».

«Мәмбәт шәжәрәһе» йәки «Түлле Мәмбәт» дастаны, ғөмүмән, кеше үҙ-ара хөрмәт итешеп йәшәргә тейеш икәнен дә иҫкәртә. Бында «ғөмүмән» һүҙе киңерәк һәм тәрәнерәк мәғәнә ала. Үҙегеҙ хөкөм йөрөтөгөҙ. «Ғәбделнафиҡ да, атасы Рәхмәтулла кебек, Ғәбделатиф хәҙрәт (остазы. — *Ә. С.*) вафат булғач, абстайның малдарын тарбиәләб, йәй көнө һаба менән ҡымыҙ ташыб, ҡыш булса, суғымлыҡ малын абарыб суйыб биреб [торған]». Был мәғлүмәт, бер яҡтан, атаһы Рәхмәтулла кеүек үк, Ғәбделнафиҡтың да игелекле кеше булыуын күрһәткәндәй итһә, икенсе яҡтан, шәкерттең остазын хөрмәт итергә тейешлеге, үҙ нәүбәтендә остаздың шуға, хаҡлы ғына түгел, лайыҡ булыуы ла фарыз икәне хаҡында ла уйланырға мәжбүр итә. Шәжәрәсе беҙгә Ғәбделатиф хәҙрәттең үҙен айырып күрһәтмәй. Әммә Рәхмәтулланың ғына түгел, үҙен әүлиә затлы һынсы тип танытҡан улының да, Ғәбделнафиҡтың да уға оло хөрмәт тойғоһо менән тулы мөнәсәбәте хәҙрәттең әле әйтелгән талаптарға төкмә-төк яуап биргән остаз булыуына шик ҡалдырмай.

Өсөнсө яҡтан, тере сағында ғына түгел, үлеп киткәс тә, хөрмәт күрмәле остаз була ул: уға булған хөрмәте йөҙөнән Ғәбделнафиҡ уның ғаиләһенә булыша. Ысын мәғәнәһендә фәһем алырлыҡ өлгөлө мөнәсәбәт был.

Дүртенсенән, Рәхмәтулла менән уның улының ярҙамсыллығын шәжәрәсе бушҡа ғына сағыштырмай. Тимәк, Ғәбделнафиҡ ҡылған изгелектә уның үҙ атаһы Рәхмәтулланың изгелекле, игелекле кеше булыуы ла сағылыш ала. Бынан иһә шәжәрәсенең, һөнәр, кәсеп тәңгәлендә генә түгел, изгелек һәм игелек ҡылыу тәңгәлендә лә «атанан күргән уҡ юнған» мәҡәле хаҡ, тип әйтергә теләгәне кинәйәләнеүе аңлашыла.

Рәхимйәндең икенсе улы Ишмөхәммәт хаҡында бәйән иткәнендә, ана шул фекерҙе шәжәрәсе йәнә бер хәтергә төшөрөргә һәм уның хаҡлығына йәнә бер инанырға мәжбүр итә. Заманында Ҡараҡай атлы ишанда ғилем эстәгән, йөҙ башы дәрәжәһендә хәрби хеҙмәт тә атҡарған, 300—400 йылҡы аҫраған бай ҙа булған Рәхимйәндең был уланы. «Атасы Рәхимйәннең сүзе фәтиха булып төшкәндер: бер заман ауылның башы, мәслихәдсесе булып торған. Форсат ғилемен дә яхшы ғына булған». Старшина булып хеҙмәт иткәнендә, «урамдан килкән кеше [не күрсә]: «Муну миндән фәлән йомош сорарға килә икән», диб, [ул] килүб етмас бурун, сорамас бурун, өйдән чығып, бирүб жебарканен күб картлардан ишетдек», — тип яҙа шәжәрәсе. Бына атайҙан игелеккә өйрәнеү өлгөһө нисек була ул! Тимәк, Рәхимйәндең, бөтә балалары ла — әҙәп өлгөһө. Ишмөхәммәттең иһә һынсыллыҡ, әүлиәлек һәләтен дә шул сәләмәт әхлаҡ мәнфәғәтендә файҙаланыуы уны әҙәплелек өлгөһөнөң дә өлгөһө итә.

Әҙәп, әхлаҡ проблемаһын ҡуйғанда, шәжәрәсе уны ағай-эне араһындағы мөнәсәбәт юҫығында ла яҡтырта. Мәмбәттең Һыйлыҡайҙан тыуған Иҫәнғол тигән улы «кандай зур түрә булса да, ғилемне сөйөүче, ғилемгә ҡәдер-хөрмәт[ле]» булған. Ауылда үҙе хәҙрәт тотоп, ир балаларҙы ла, ҡыҙ балаларҙы ла уҡытҡан. Әҙәп тәрбиәһе һымаҡ, ғилемгә һөйөү ҙә остаздан шәкерткә күсә: ауылынан ҡыҙҙар ҡайҙа кейәүгә сыҡһа, улар шунда мөғәллимлек итер булған. Быныһы бер булһа, икенсенән, Иҫәнғол үҙ ауылын мәсетле итә. Уны һалдырыу өсөн, хатта губерна башлыҡтары булған Циалковский менән Перовскийҙың да аҡса бүлеүенә ирешә.

Ғилемле лә, йүнсел дә, үткен дә булған ошо кешегә нескә туғанлыҡ хисе лә хас. Был йәһәттән уны, туған ҡәҙерен белеүселек өлгөһө, тип атарға булыр ине. Бер-ике ай ситтә йөрөп, ќөндөҙ ҡайтып төшһә, өйөнә етерҙән алда, «Рәхмәт ағаһының өйөнә төшөб, күрешеб, күчтәнәч балын, бер чай илә шәкәрен бирүб, шундан суң үз өйөнә килә. Әкәр дә төндә ҡайтса, иртән самауырын хәзерләтеб, Рәхмәтулла ағасы илә Аҡбикә женкасун чаҡыртыб, аларның килүинә, үзе һәм хатуны Салиха бадшаһ бирган жилан, алтмыш көмөш илә бер өлкән ҡашмауын киеб мәсжид табҡырында баруб ҡаршы алуб, күрешеб алуб, өйөндә ҡунаҡ итеб, баяғы күчтәнәчтәрен бирүб ҡайтаруб жебәрә». Бындай тулҡынландырғыс һүрәтләмәне уҡығас, уға өҫтәп ниндәйҙер аңлатмалар биреп тороуы ла артыҡ тойола. Бары: «Афарин! Ағай-энеләр бына шундай мөнәсәбәттә булырға тейеш», — тип әйтергә генә ҡала. Шәжәрәсе лә тел төбө менән шуны нәсихәт итә булыр.

Ғөмүмән, дидактик дастан тип баһаланмалы был шәжәрә әхлаҡ, әҙәп мәсьәләһен төрлө аспектта яҡтырта, уның әһәмиәтлелегенә ныҡ баҫым яһай.

Был әҫәрҙә йәнле диалогтар, репликалар, мәҡәлдәр йыш ҡулланыла. Сатирик йә юмористик, йә дидактик шиғыр, йыр өлгөләренә лә урын бар. Уларҙың барыһы ла стилде монотонлылыҡтан ҡотҡара, уны йәнләндерә, тотош алғанда, әҫәрҙең үҙен уҡымлы итә, уның нәсихәти пафосын көсәйтә.

«Мәмбәт шәжәрәһе» тип аталһа ла, тимәк, бер этностың яҙма тарихы тип ҡаралыуға тәғәйен булһа ла, асылы менән был әҫәр — дастан. Уны халыҡ романы тип ҡарарға ла була. Иңләгән ваҡыт һәм арауыҡ ҡоласы, ырыу тарихы өсөн генә түгел, тотош халҡыбыҙ тарихында мөһим урын алып торған хәл-ваҡиғаларға бай булыуы, эреле-ваҡлы тарихи шәхестәрҙең портрет һыҙаттарының бирелешенә, этнография, философия, фольклор, милли этика, милли эстетика өлкәләре буйынса материалдарҙың күплеге уны мөһим ғилми әһәмиәткә эйә булған ырыу энциклопедияһы, тип баһаларға нигеҙ бирә.

## 13. Заманға заман ялғанған

Егермense быуат буҫағала торғанда ғына, «Ағиҙел» журналы фольклор һөйөүселәргә көтөлмәгән бүләк һәҙиә итте. Бында һүҙ уның 2000 йылғы ун икенсе һанында күренекле тел ғалимы, шағир, профессор Рәшит Шәкүров имзаһы менән баҫылған «Заманалар ҡис-

саһы» тигән яҙма хаҡында бара. Имза эйәһенең «Ейәнбай олатайҙың аманаты» тип исемләнгән инеш мәҡәләһендә иҫкәртеүенсә, ул уны «ил башы Әлшәй Мәргәндең балаһының балаһының балаһының балаһының балаһы», элекке Әлшәй ауылы Усманов Ейәнбай Тимербай улынан (1908) яҙып алған булған.

Исеменә — есеме. Был баҫма, ысынлап та — заманалар ҡиссаһы. Унда телгә алынған, тасуирланған хәл-ваҡиғалар, быуаттарҙан ашып, быуаттарға олғашҡан дәүерҙәрҙе иңләй ҙә Европа менән Азия тип аталған ҡитғаларға йәйелә.

Ҡарамаҡҡа, «Заманалар ҡиссаһы» айырым-айырым риүәйәттәр тупламаһынан ғына ғибәрәт кеүек тойола. Информатор үҙенең һүҙен буштҡа ғына башта уҡ быҒаса, беҙгә генә түгел, яҙып алыусыға ла ят тойолған батыр, Әлшәй батыр, затының бишенсе быуыны, йәғни ҡәрҙәшлек йәһәтенән уға тыуа ят булыуын иҫкәртеүҙән башламаған икән. Тәүҙә үк шул батырҙың исеменә бәйле тарихи риүәйәт менән таныштырып ала. Тарихи риүәйәт тигәс тә, ниндәйҙер үҙ аллы сюжет һыҙаты ярылып ятмай унда. Бер ни тиклем «Түлле Мәмбәт» дастанынынан таныш Йәнһары-Мәмбәт менән яҙмышташ булған СураҒол-Сураҡай хаҡындағы *«Табылдыҡ бала»* мотивын иҫәпкә алмағанда, үҙҙәрен Төрөкмән-ҡыпсаҡ тип йөрөткән ырыу биләгән биләмә, был риүәйәтте шул ҡәүемдең башлығы Әлшәй батырҙан ҡалған зат-зөриәт нигеҙ ҡорған урындарҙа ауылдар хасил булыуы, ә батыр нәҫеленең оҙон ғүмер кисереүгә һәләтле икәне хаҡындағы белешмәләр тупламаһы тип кенә баһаларға мөмкин. Әйтелгәндән аңлашылыуынса, «Түлле Мәмбәт» әҫәрендәге ҡулланылышынан айырмалы рәүештә, әлеге традицион мотив, «тыумыштан уҡ» әһәмиәте йәһәтенән үҙәк булырлыҡ сюжет хасил итеү мөмкинлеге һалынһа ла, шуны ғәмәлгә ашыра алмаған. Бының үҙ сәбәптәре бар. Шуның иң еллеһе, иң тосо — табылдыҡтың ниндәйҙер икенсе йыныстан булыуы. «Түлле Мәмбәт» дастанында тасуирланған ваҡиғанан беҙ табылдыҡтың ҡаҙаҡ балаһы икәнен беләбеҙ (табылдыҡ, тибеҙ, сөнки ул малайҙы алып ҡайтыу барымтасы башҡорттарҙың ниәт-маҡсатына инмәгән була: башҡорттар ҡыуған малдар араһында буталып килеүе уны ла, көтмәгәндә, юлда табылған бала менән тиң итә. Риүәйәт рәүешендә Һабыр батыр тураһында бәйән итеүсе варианттарҙа иһә, Мәмбәт, ысынлап та яу ваҡытында табыла).

Ә Ейәнбай бабай хикәйәте геуаһлауынса, Әлшәй батырҙың уландары юлда табып алған бала бер ҙә ят ҡәүемдән булмай уларға. Шуға күрә лә йортҡа алып ҡайтҡас, тыуыр ерендә лә уны екһенмәүгә нигеҙләнгән конфликт тыумай ҡала. Традицион мотивтың шулай интерпретация алыуының тағы бер нигеҙе бар. Ул да булһа — табылдыҡ баланың батырҙар ҡайтырға сыҡҡан юлда ятыуының сәбәбе. Ә уға шул сәбәп була: ер баҫып алыусы рустар был баланың атаһын, Теләүкәй батырҙың үҙен үлемесле яралаған, халҡын ҡырған. Малайын иһә, «ғүмере булһа, ҡалыр», тип, әсәһе ҡушыуы буйынса, ырыуҙаштары башҡорттар ғына йөрөй торған юлға махсус һалып ҡалдырған булалар. Ҡәрҙәш булыу өҫтөнә, бына шулай уртаҡ ҡазаға тарыған яҡтың балаһы булыуы ла *«Табылдыҡ бала»* мотивының,

«Түлле Мәмбәт» сюжеты йырҙаһына төшөүҙән, артабан ҡатмарлы төҫ алып үҫеп китеүҙән «тыйылып ҡалыуына» сәбәпсе булған.

Ҡаҙаҡ та башҡорт өсөн ҡәрҙәш бит, ниңә «Түлле Мәмбәт»тә *«Табылдыҡ бала»* мотивы сюжет кимәлендә йәйелеп китә алған? Шундай һорау тыуырға ла мөмкин. Эйе, ҡәрҙәш. Әммә варварлыҡ дәүеренә һәм шул дәүер традицияларына йәреүселәрҙең үҙ ҡануны — ҡанун да, үҙ йолаһы — йола: барымтасылыҡ, ҡарымтасылыҡ юлын ҡыуыусылар өсөн — ҡәрҙәшлек түгел, мал мөһим. Ә башҡорт менән ҡаҙаҡтар араһында ошо йола һәм ҡанундар оҙаҡ һаҡланған, хатта бөгөн булһын дауам итә. Шуға күрә лә «Түлле Мәмбәт»тә Һабыр ҡарттың үҙ балалары менән табылдыҡ ҡаҙаҡ балаһы араһында конфликт ҡотолғоһоҙ була һәм заманы өсөн бик тә тәбиғи тойола.

Әммә Ейәнбирҙе бабай бәйән иткән әҫәрҙә *«Табылдыҡ бала»* мотивының эпик сюжет булып йәйелеүҙән «тыйылып ҡалыуының», «цикләнгәнлегенең» үҙ өҫтөнлөгө бар. Традицион мотивтың, тыумыштан уҡ үҙенә һалынған мөмкинлекте файҙаланмай, тоҡан ғына сиселеүе Ҡазан ханлығы иҙеүенән азат булған Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышын, айыуҙан ҡасҡан — бүрегә тигән кеүек, тағы яттар баҫып алырға тотонған дәүерҙә башҡорт ырыуҙарының үҙ-ара татыулаша, бер-береһенә теләктәш була башлауын асыуға хеҙмәт итә.

Әле әйтелгән фекер *«Табылдыҡ бала»* мотивына, ул сабый ҡайһы тарафтыҡы, кем булыуына ҡарамаҫтан, тәүбаштан уҡ милләтебеҙҙең яҙылмаған боронғо бер йола ҡануны талабы һалыныуы хаҡында һөйләй. Ул йола буйынса, яу ҡупһа, нәҫелдең тамыры өҙөлмәһен өсөн, ир затынан, бер генә бөртөк йәнде булһа ла, ҡотҡарыу сараһын күреү фарыз эш иҫәпләнгән. (Әйткәндәй, «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосынан күренеүенсә, хатта үҙ-араһы ҡан дошманға әүерелгән ырыуҙар ҙа был ҡанун менән иҫәпләшкән).

Әммә беҙ шуға ла күҙ йома алмайбыҙ: ни генә тимә, ят бала ят бала булып ҡала. Дөрөҫ, юлда табылған ир баланы Ғәлекәй Мәргән ала. Егет ҡорона еткәнсе, тәрбиәләп, кәләш алып биреп, «Ҡорһаҡ һыуының аръяғына башҡа сығара». Бөтәһе лә һәйбәт. Әммә, бер деталь генә һағайта. Табылдыҡ малайға, Сурағол тигән исемен үҙгәртеп, «Сураҡай», тип өндәшә башлайҙар. Башҡортта, кешегә түбәнһетеп ҡарағанда ғына, уға ялған исеме, боҙолған исеме менән өндәшеү йолаһы бар. Әйткәндәй, Ғәлекәйҙең үҙ улына ла Сурағол тигән исем ҡушылған була, йәғни табылдыҡ менән табыусы улы аҙаштар булып сыға. Әммә батыр бер ҙә генә үҙ улының исемен боҙмай: ул Сурағол исемен йөрөтөүен дауам итә. Тимәк, Мәмбәт менән Һабырҙың үҙ ułандары араһындағы ҡырҡыу мөнәсәбәттән айырмалы рәүештә, Ғәлекәй балалары Сураҡай менән ҡәҙеүәт китәрешмәһәләр ҙә, визуаль ғына күҙәтелгән шул татыулыҡтың Ейәнбай бабайға ла, беҙгә лә мәғлүм булмаған ниндәйҙер эске этнәкәләре (рустар был урында, нюансы, тип әйтер ине) булған.

Шулай итеп, дөйөм алғанда, «Заманалар ҡиссаһы»ның тәүге бүлегенә әҫәрҙең үҙәк өлөшөндә тасуирланасаҡ хәл-ваҡиғаларға мөнәсәбәтле тарихи-этнографик белешмә биреү вазифаһы йөкмәтелгән. Ә шул фактография эсендә урын алған *«Табылдыҡ бала»* мотивына белешмәселек башланғысын йәнлерәк итеп еткерешеү менән хушһынырға тура килгән.

Ейәнбай бабай яҙҙырған әҫәрҙең үҙәк өлөшө М. Өмөтбаев теркәп ҡалдырған «Аҡташ хан» дастанын иҫкә төшөрә. Икеһе лә хакимдарҙың үҙ-ара, һыйышып түгел, ҡыйышып йәшәүҙәре хаҡында бәйән итә. Дөрөҫ, хронологик яҡтан ҡарағанда, уларҙың һәр ҡайһыһында тасуирланған ваҡиғалар араһында тотош эраларҙы иңләмәле дәүерҙәр ята: М. Өмөтбаев теркәгәне — Александр Македонский (б.э.т. 356-323 йылдар) дәүеренә, Ейәнбай бабай бәйән иткәне беҙҙең эраның урта быуаттарының баштарынан алып Рус дәүләтенең Ҡазан ханлығын емереп, башҡорт ерҙәрен яулай башлаған осорҙарға ҡарай. Әммә эш унда ғына ла түгел. Эш шунда: Өмөтбаев та, Ейәнбай бабай ҙа, үҙҙәре әйтеүенсә, ҡасандыр үҙҙәре уҡыған китаптың йөкмәткеһен бәйән итә.

Ейәнбай бабай хикәйәт иткәндең был өлөшө «Фәкихтәр яҙыуы йәки Боронғо тарих китабы» тип аталған. Әммә, йөкмәткеһенән сығып, уны изге китап тураһындағы героик дастан, тип атарға ла булыр ине. Һүҙ бында информаторға бала сағында уҡ танышыу бәхете тейгән, һәр береһе «Ҡөрьән» ҡалынлығы өс китап хаҡында бара. Дөрөҫөрәге, XX быуаттың тәүге сирегендә СССР-ҙа үткәрелгән «мәҙәниәт революцияһы» ҡорбаны ителгән өс тарих китабы хаҡында әйтелә лә, нигеҙҙә, шуларҙың береһенең йөкмәткеһе генә бәйән ителә.

«Заманалар ҡиссаһы»ның был өлөшө лә композицияһы яғынан күпмелер кимәлдә уның тәүге бүлеген хәтерләтә. Был бүлектә лә һүҙ тәүҙә белешмә биреүҙән башлана. Әҫәрҙең төп йөкмәткеһенә лә, мотив һәм сюжет үҫешенә лә баштағыһының бер ниндәй ҙә әһәмиәте юҡ. Унда һүҙ боронғоларҙың китап әҙерләү технологияһы хаҡында бара. Икенсеһе ҡала һәм ауыл халҡы араһындағы иҡтисади бәйләнештәрҙең урта быуаттарға хас үҙенсәлектәренең ҡайһы бер яҡтарын хәбәр итә. Шунда уҡ ырыуҙарҙың үҙ-ара һыйышып ҡына йәшәй алмауҙары хаҡында ла бер-ике ауыҙ һүҙ ҡатыла. Өсөнсөһө генә әҫәрҙең был өлөшөн дастан итеүгә сәбәпсе булған сюжет өсөн экспозиция хеҙмәтен үтәй. Бында төрлө ҡәүемдең төрлө дин тотоуы, мәжүсилеге — бер дин, бер ҡанун булмауы арҡаһында, халыҡтарҙың ҙур яфалар сигеүе хаҡындағы белешмә күҙ уңында тотола. Шул белешмәгә берҙәм дингә инаныу ғына уларҙы хаҡ юлға сығарыу сараһы була ала тигән идея һалынған. Тимәк, ваҡиғаларҙың артабан ниндәй йырҙа буйынса үҫере лә шунда төҫмөрләнә.

Ысынлап та, артабан «берҙәм дин эҙләү» мотивына юлығабыҙ. Әҫәрҙең ошо төп бүлегенең тәүге сюжеты ана шул мотивтан ярала ла инде. Шуға күрә бүлектең был өлөшөн «Төрөкмән ырыуы илселәренең берҙәм ҡабул итмәле дин эҙләүҙәре» тип атарға ла була. Сөнки төрлөһө төрлө нәмәгә инанып, төрлөсә табыныуҙың үкенесле сәйәси һөҙөмтәһенә төшөнә улар. Тимәк, берҙәм дин идеяһы — табыныу идеяһынан әһәмиәтлерәк тә, мөһимерәк тә тигән фекер ята ул эҙләнеүҙә. Ни өсөн тигәндә, был идеяны күтәреүселәр берҙәм диндең ойоштороу, тарҡау ырыуҙарҙы берләштереү мөмкинлегенә төшөнгәндәрен, тимәк, дәүләтсә фекерләү кимәленә күтәрелеүҙәрен күрһәтә. Ә киңерәк алғанда, был әҫәр беҙҙең дәүерҙә Рәсәйҙә халыҡтарҙы тупларлыҡ берҙәм идеология булмауына төрттөргәндәй була. Был иһә — һүҙ барған дастандың актуаллегенә бер дәлил.

Әммә шуны раҫлағанда, дастандың тап ошо өлөшөндә билдәле кимәлдә тенденциозлыҡ та һиҙҙертә үҙен. Берҙән, дин эстәүсе төрөкмән ырыуы кешеләре, йәнәһе лә, ҡытайҙар, юнандар (гректар), һиндтар, германдар, башҡалар тотҡан диндәр хаҡында хәбәрдар булһалар ҙа, үҙҙәре барып күреп, егерме бер ай буйы ике ҡитғаны — Европа менән Азияны — бер итеп ҡыҙырып сыҡҡас ҡына, һис икеләнеүһеҙ, һис көсләп тағыу кисермәйенсә, Исламды ҡабул итә лә ҡуялар: уларға бер тәҡдим дә етә. Ә был тәҡдимде улар, йәнәһе лә, үҙҙәренең тәҡдиме бәрәбәренә ишетә: ғәрәптәрҙең, Бохараны ала алмай аҙапланыуына шаһит булған дин эҙләүсе илгиҙәрҙәр, әле дин хаҡында ауыҙ ҙа асмаҫтан, йәнәһе лә, уларға ярҙам тәҡдим итәләр. Ә тегеләре, үҙҙәренең хәле мөшкөл булыуына, ситтән килгән ярҙамға бик тә мохтажлыҡ кисереүҙәренә ҡарамаҫтан, тәүҙә уларҙың Исламды ҡабул итеүен шарт итеп ҡуялар. Әйтерһең дә, һүҙ ғәрәптәргә ярҙам тәҡдим итеү хаҡында түгел, ә уларҙың илгиҙәрҙәргә ярҙам итеү-итмәүе хаҡында бара!

Бында шуны ла иҫтә тотоу зарур: илгиҙәрҙәр егерме бер ай буйы ярты донъяны урап сыҡҡан мәлдә була был хәл. Шул тиклем оҙайлы походтан һуң, етмәһә йөҙ ҙә ҡырҡ бер кеше менән генә (илдән сығып киткән йөҙ илле һыбайлының туғыҙы сәфәрҙә сирҙән үлә) ни эш ҡыра алыу мөмкиндер. Әммә дастансы, хәҙерге Рәсәйҙең «Альфа» төркөмө йә АҠШ-тың тиҙ хәрәкәтсән, һә тигәнсе яу майҙанын биләүсән көстәре кеүек яугирҙарҙы күҙ уңында тотҡандай, был хаҡта борсолмай ғына, бәйән итеүен белә. Дөрөҫ, был динһеҙ илгиҙәрҙәрҙе ул, «иң диндар батырҙар», тип нарыҡлай һәм, ғәрәптәрҙең өҫтөнлөк алыуына, бохараларҙың ҡаушап ҡалып, һуғышты туҡтатыуы өсөн, шул еткән, тип белә: «Бохараныҡылар, иң диндар батырҙарҙың килгәнен күреп, танып(?), һуғышты туҡтата торған барабан һуғалар», хатта ки төнөн ҡаланы ташлап ҡасалар. Шунан ни, ғәрәптәрҙән — дин, «хупсаҡ» тигән рәхмәт белдереү һүҙен лаҡап исем итеп алып, мосолман Төрөкмән-Ҡыпсаҡ ырыуы тигән ат (этноним) алғас, тегеләр менән бергәләшеп, бер-бер артлы Сәмәрҡәндте, Фирғәнәне, Марғиланды, Ташкентты, хәҙерге Алматы биләп торған ерҙе яулап алып, Монголияға, Ҡытайға тиклем барып етеү, һәр ерҙә еңеү тантанаһы кисереү уларға, йәнәһе, бер ни ҙә тормай.

Ғәрәптәр был ҡәүемгә хатта бергәләп яуланған ҡалалар, илдәр өҫтөнән хакимлыҡ итеү хоҡуғы бирә, тик аҙаҡ оппозициянан еңелеп, уларға Уралға килеп ерегергә тура килә.

Тенденциозлыҡ төрөкмән-ҡыпсаҡтарҙың артабанғы яҙмышын бәйән иткәндә лә ярылып ята: эҫәрҙең яңы сюжет үҙәненә төшөп киткән дүртенсе өлөшөндә лә улар элеккесә ғәҙеллек идеалына хыянат итә белмәгән ҡәүем итеп күрһәтелә. Төрөкмән-ҡыпсаҡтарҙың был сифаты айырыуса дипломатия өлкәһендәге эшмәкәрлектәре миҫалында яҡшы асыла. Мәскәүҙең көнсығышҡа экспанцияһы ҡотолғоһоҙ икәнен иҫкәртеп, уларҙың Ҡасим атлы түрәләре татыулыҡ, кәрәк икән үҙ-ара ярҙам итешеү тураһында тәүҙә Ҡазан ханына, торараҡ Урта Азия хакимдарына хат яҙа. Был иһә уны алдан күрә белеүсе итеп танытырға тырышыуҙан килә, әлбиттә. Әммә уның инициативаһы, ғәмәлдә, бер яҡлы һәм, бер ниндәй ҡорбандарға ла ҡарамай,

популизмға ашҡыныу күек кенә аңлашылып та ҡуйғылай. Бында ул дипломатик бәйләнешкә инергә теләгән яҡтың хаинлығы ла үҙенекен итә, әлбиттә. Ҡазан ханы уның илле илсеһен дә тереләй үртәй, һәм уның был яуызлығы 1736 йылдың 24 ғинуарында Башҡортостандың Себер даруғаһындағы Һөйәнтөҙ ауылында булған фажиғә хаҡында хәбәрдар кеше өсөн шул вәхшилектең прологы күек ҡабул ителә. Ул саҡта караттар етәксеһе, динен ташлап, христианлыҡҡа күскән мишәр мырҙаһы А. И. Тәвкилев («Тәфтиләү»), шул ауылда 1000 башҡортто аттырыуынан үсе ҡанмай, 105 кешене һарайға ҡыуып индереп, тереләй ҡура.

Урта Азия хакимдары ла хаинлыҡта Ҡазан ханынан ҡалышмай, хатта арттырып уҡ ебәрә. Берҙән, Ҡасим түрәнең иҫкәртеү һәм өндәмә рәүешендә яҙылған хатының йөкмәткеһе Мәскәү батшаһына мәғлүм була. Бында ла уларҙың ҡыҫылышы булмауы мөмкин түгел. Икенсенән, Аҡ батша алтынына ымһынған бер хаким, башҡорттарҙы 1552 йылда Ҡазан кисергән яҙмыштан ҡурсалауға тәғәйен егерме биш меңлек үҙ ғәскәренең башына үҙе етә.

Төрөкмән-ҡыпсаҡ яғын ғәҙеллек өлгөһө итеп күрһәтергә теләү уларҙың ҡазандарға ла, Урта Азия халыҡтарына ла берҙәй таныш, быуаттар һынауын үткән бер йола ҡанунына мөнәсәбәтте контраслаштырып күрһәтеүҙә бик тә аныҡ сағыла. Ҡазан ханы Ҡасим түрәнең илле илсеһен яндырып үлтереү менән генә сикләнмәй, үҙенең яуап хатын уның хаты һыртына сыймаҡлауы менән дә, бысраҡ һүҙҙәр менән дә тотош ҡәүемде тәккәбер рәүештә кәмһетеүенә ҡарамаҫтан, башлыҡтарының әмере буйынса, Төрөкмән-ҡыпсаҡ яғы үҙҙәренә илсе итеп ул ебәргән ҡолдо йыуындыртып, ҡырындыртып, аҫыл кейемдәр кейҙертеп, кеҫәһенә алтын һалдыртып, етмәһә, иленә ҡайтып инеүгә, уның ҡоллоҡтан азат ителеүен талап итеп, хат яҙып, уны ҡәҙерхөрмәт итә. Шул турала һөйләү — «Илсегә үлем юҡ» тигән һүҙ бына нисек була ул!» — тип әйтеү менән бер. Ошо фонда Ҡазан ханын халыҡ дипломатияһы ҡанунын аяҡ аҫтына һалып тапаусы, тимәк, үҙ халҡының да ҡанундарын хөрмәт итә белмәгән залим тип танырға тура килә.

Ейәнбай бабай бәйән иткән әҫәрҙең «Түбәнге Волга буйында башҡорт ерҙәре» тигән бүлеге, бер яҡтан, ҡасандыр Ҡасим түрә иҫкәрткәндең иркенләп ғәмәлгә аша барыуына бер миҫал булһа, икенсе яҡтан, ауырлыҡтар тыуғанда, башҡорт ырыуҙарының бер-береһен ҡурсалай белеүе идеяһын тәрәнәйтә.

Был әйтелгәндәргә шул дәлил: Рәсәй батшаһы, Волга буйына немец колонистарын ултыртыу өсөн, унан башҡорттарҙы ҡыуа башлағас, Әлшәй Мәргән, бара килеп, ҡыйырһытылған милләттәштәрен үҙ еренә күсереп ала. Үҙенең был изге ҡылығын ул: «Беҙҙә ер етәрлек!» — тип кенә аңлата: Волга түбәнендәге «әҙ генә ер өсөн ҡан түгеп, дошман арттырып ятыуҙың кәрәге юҡ», йәнәһе. Бына шулай мул һөйләшә ырыу башлығы. Кем кем алдында бит әле: батшаның үҙе алдында. Бында башҡорттоң, эстән дөрләп янһа ла, ят алдында һыр бирмәүсәнлеге матур асылыш алған. Шуныһы ла мөһим: әле әйтелгән ҡылыҡһырлама — бармаҡтан һурылған ҡылыҡһырлама түгел. Дастансы ла шуны күҙ уңында тота. Батша ауыҙынан Әлшәй Мәргән

хаҡында «Особо значимый человек. Пишите указ: мин бирәм дворянский звание и, һәм ерҙе лә уға күберәк ҡалдырабыҙ» тигән һүҙ әйттереүе — ана шуға дәлил: башҡорттоң һыр бирмәүсәнлеген батша тиклем батша ла баһалай белгән, йәнәһе. Әлшәйҙең һүҙендә йәнә бер тарихи хәҡиҡәт, башҡорттоң килмешәктәргә ерҙе был ерҙе еңел өлгәшеүе, киреһенсә баһалана, үтә йомартлығы ла асыла.

Бына шулай итеп, урта быуаттарҙың тәүге дәүерҙәренә сигенеп, «Дин эҙләү» мотивына «Ер эҙләү», «Ил ҡурсалау» мотивын, уныһына бүтәнен ялғап, бәйән итә торғас, композицион яҡтан әҫәрҙең осо-осҡа ялғанып ҡуя: һүҙ Әлшәй Мәргәндән башланғайны, китап тарихын бәйән иткән дастан йәнә шул батырҙың эшмәкәрлегенә барып тоташа.

Артабанғы бүлектәр, ҡарамаҡҡа, үҙ аллы сюжетлы риүәйәттәрҙән ғибәрәт. Әммә уларҙы дастандың артыҡ өлөшө тип алып ташлау яҙыҡ булыр ине. Сөнки бығаса тарих тәгәрмәсенең етеҙ әйләнеүенә эйәрергә теләгәндәй, дастансы ваҡиға артынан ҡыуынҡыраһа, һуңғы бүлектәр талғыныраҡ бәйән ителә: әйтерһең, быға са һыпыртып үтеү темпын бер аҙ һыуындырыу өсөн, махсус килтерелә улар. Был бүлектәрҙән беҙ Дим буйы башҡорттарының йолалары, кәсебе, һөнәре, көнкүреше хаҡында бай мәғлүмәт алабыҙ: улар йәйге буш ваҡыттарында бәйге ойошторалар, уҡ атышта ярышалар, малсылыҡ, балыҡсылыҡ менән шөғөлләнәләр, ҡышын бүре ҡыуырға әүәҫтәр. Туй, никах йолаларының да әлегә фәндә билдәһеҙ үҙенсәлектәре асыла. Ғәлекәй Мәргән үҙе ҡотҡарған алып менән ҡоҙалашырға һүҙ ҡуйышып, никах уҡытып, туй үткәргәндә, кейәү егет ҡатнашмай: кәләше менән егет дүрт-биш йылдан ғына осраша. Кейәүһеҙ никах, туй үткәреү йәнә килеп, кейәүе менән таныштырғанда, ҡыҙҙың бер теҙгә сүгеүе (әгәр һуңғыһы яһалма булмаһа) иғтибарға лайыҡ йолалар.

Ә инде Әлшәй Мәргән һәм уның уландары тураһындағы тәүге бүлек менән һуңғы бүлектәр, ул дастандың йөкмәткеһе менән тура-нан-тура бәйләнмәһә лә, унда тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙың логик дауамы һәм һөҙөмтәһе кеүек аңлашыла. Уларҙың «Ағиҙел»дә баҫтырылған эҙмә-эҙлелектә биреләүе форма яғынан да аҡлана: дастанды хасил итеүсе мотив һәм сюжеттар композицион яҡтан ике яҡлап ҡаймаланған художестволы бер бөтөндө тәшкил итә. Икенсе яҡтан, саф тарихи дастан өлөшө үҙе үк бер композицион алым тойғоһо ҡалдыра: ул әҙәби әҫәрҙәрҙә ҡулланылыусан көндәлек, хат, артҡа сигенеп (ретроспектив планда) хикәйәләү, хәтирәгә бирелеү кеүек алымдарҙы хәтерләтә.

«Заманалар ҡиссаһы»нда башҡорттоң риүәйәт, легендаларынан ойошҡан моменттары хаҡында әйтелде инде. (Был хаҡта тағы ла һүҙ буласаҡ әле). Эпик ҡомартҡыларыбыҙҙы хәтергә төшөрмәле миҫалдар ҙа осрап ҡуя. Уларҙың береһе, был әҫәрҙә лә, «Түлле Мәмбәт»тәге һымаҡ, «Табылдыҡ бала» мотивы ҡулланылыуы телгә алынды инде. Тағы бер-ике миҫал, «Һуңғы Һартай» эпосында Аҡһаҡ Тимер сиреүенең, «йәйге эҫелә себен ни тиклем булһа», шундай булып башҡорт иленә ябрылыуы хаҡында яман хәбәр алып килгән сапҡынға Ялыҡ бей, изге хәбәр килтергән кешеләй күреп, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә. Бына нисек хәтерләй был хаҡта йылдар үткәс ул үҙе: «Насар хәбәре өсөн,

телен ҡырҡып, муйынына тағырға бойороҡ бирмәнем. Юҡ! Мин уны тирмәмә алып индем, ашаттым. Ҡунаҡ иттем. Яҡшы иттем»[1].

Традицион эпик ҡомартҡылар менән ауаздашлыҡ күҙлегенән ҡарағанда, әҫәрҙең «Ғәлекәй батырҙың ҡыҙы Зәйнәп һылыу» тигән бүлегендәге шундай бер эпизод иғтибарҙы йәлеп итә. Бер яу ваҡытында Ғәлекәй Мәргән, «кылысын һурып алып», һуғыштың иң ҡыҙыу урынына барып инеп, ят илдең өс ерҙән яраланған башлығын Әжәл тырнағынан йолоп алып сыға. Яраларын бәйләгәс, теге яу башы:

— Ярай (рустың «ладно»һының тәңгәл тәржемәһе. Башҡорт иһә: «Әл дә», — тип әйтер ине. — *Ә. С.*), һин килдең. Юғиһә, теге донъяға киткән булыр инем инде («Иначе, отправился бы я на тот свет»тың тәңгәл тәржемәһе. — *Ә. С.*). Һинең кемең бар? — ти.

— Минең ҡыҙым бар, — ти Ғәлекәй батыр.

— Улай булһа, минең улым бар — ҡоҙа булышайыҡ!

— Бик яҡшы, мин риза.

Был эпизод «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының Т. С. Беляев версияһындағы бер эпизодты хәтерләтә. Ҡырғыҙ батыры Сарбайға һунар ваҡытында юлбарыҫ ташлана. Был ир ҙә бик мөшкөл хәлдә ҡала. Тап шул ваҡыт башҡорт батыры Ҡарабай килеп сығып, уның йәненә инә: ҡыйыу һунарсы йыртҡысты үлтергәс, ҡырғыҙ батыры уға дуҫлыҡ тәҡдим итә, шул дуҫлыҡты нығытыу өсөн, киләсәктә ҡоҙалашырға әйтә. Тик Ейәнбай бабай һөйләгән әҫәрҙән айырмалы рәүештә, улар инде еткән балаларын түгел, әле генә донъяға килгән балаларын ҡауыштырырға һүҙ ҡуйыша. Әммә әҫәр өсөн быны ул тиклем әһәмиәте юҡ. Иң мөһиме, «ҡоҙалашырға көн элгәре һүҙ ҡуйышыу» мотивы ике әҫәр өсөн дә уртаҡ. Был осраҡта ла инициатива үлемдән ҡотҡарылыусы яғынан сыға[2].

Ейәнбай бабайҙың шул уҡ сибәр ҡыҙ тураһындағы хикәйәтенән йәнә бер эпизод. Әлеге вәғәҙәләшеү буйынса, Ғәлекәйгә кейәү булған егеттең бер йүгерек бейәһе ҡолонлауы була — гел генә ҡолонон бүре алып тик тора. Егет, аңдып тороп, һуңғы тыуғанын уға бирмәй. Был мотив иһә тылсымлы әкиәттәрҙә осраусан («Алтын ҡойроҡ көмөш ял» тигән хрестоматик әкиәт шуға миҫал).

Былдай традицион башланғыстар «Заманалар ҡиссаһы»нда ниндәйҙер кимәлдә шәхсән башланғыстар менән үрелеп килеңкерәй. Был йәһәттән бигерәк тә этиологик мотивтар иғтибарға ныҡ ташлана: «Шарлап аҡҡан һыуы булғанға», урманы — Шарлы урман, «ҡарыулы мыш» (йоҙроҡ) һүҙенән — Ҡармыш тигән ауыл, ғәрәптәрҙең «рәхмәт» мәғәнәһендә төрөкмән ырыуы илгиҙәрҙәренә, «хупсаҡ», тип әйтеүенән — «Ҡыпсаҡ» этнонимы, «Сәмәрҡәндтә ҡоллоҡтан сыҡҡан ҡорд ҡәбиләһе кешеләре» ҡыпсаҡтарҙы Ирәндеккә алып килгәнгә(?), улар — «Башҡорт», яңы ерҙең «һауаһына өйрәндек»тән — Ирәндек тигән исем алыуы кеүек, топоним йә этнонимдарҙың; батшаның Әлшәй Мәргән хаҡында «особо значимый человек» тигәненән Рәсәйҙең социаль ҡатламдары иерархияһында ергә мөнәсәбәт йәһәтенән

---

[1] БХИ. 4-се том, Эпос. — 291-се б.

[2] БРЛ. Т.1. — С. 254-256.

«аҫаба» тигән төркөм барлыҡҡа килеүе, әсирҙә йөрөп ҡайтҡан килен, буш ҡул менән ҡайтмай, «таҙа ир бала отоп ҡайтҡан» өсөн (бында сит-ситләтеп боронғо «түл алыу» йолаһының саҡҡыһы һиҙелеп ҡала), ул балаға Отҡол исеме бирелеүе һ.б. — һәр береһе үҙ тапҡырында аңлатыла бара. Топонимик һәм этнонимик легендаларға хас бындай этиологик мотивтар эпик ҡомартҡыларҙа ла ҡулланылыусан. Шуның менән риүәйәтселәр, иртәкселәр, сәсәндәр, дастансылар, үҙҙәре бәйән иткәнде документаль башланғыслы итергә, уларҙың ышандырыу ҡеүәһен арттырырға тырышҡан. Бәхәс юҡ — бында ла улар шул уҡ вазифаны еренә еткереп үтәй. Шулай ҙа, улар менән таныша килә, әллә Ейәнбай бабай үҙе лә уның, ауыҙынан сыҡҡан бер һүҙҙе «өс көн буйы» аҡ ҡағыҙға теркәп ултырған Рәшит Шәкүр һымаҡ уҡ, шундай атамаларҙы аңлатыуға әүәҫ, әллә яҙмаһын редакторлағанда, ғалим үҙе ҡул тыҡҡылаған, тип уйлап ҡуяһың. «Башҡорт» этнонимының яңыса, һәр хәлдә, Салауат Ғәлләмовса интерпретацияланыуына (йәғни уның килеп сығышын курдтарға алып барып бәйләп) аңлатылыуына ҡарағанда, ике башланғыс та эҙ ҡалдырғандыр, моғайын, тигән фекергә килмәй ҡалмайһың.

«Шәхсәнлелек» башланғысы һүҙ барған әҫәрҙә Ейәнбай бабайҙың баштан-аяҡ Дим буйы, унда йәшәгән ҡәүемдәргә, бигерәген дә төрөкмән-ҡыпсаҡтарға (йәғни меңдәргә) һоҡланып бөтә алмауында ла үҙен һиҙҙертә. Шунлыҡтан уның ауыҙынан яҙып алынған әҫәр бер ни тиклем маҡтау-маһайыу тойғоһо менән һуғарып алғандай була. Үҙ ҡәүеме, унан сыҡҡан шәхестәр хаҡында һүҙ алып барғанда, тенденциозыраҡ эш итеүе лә, уларҙың образын идеаллаштырыңҡырап биреүе лә шуның менән аңлатыла торғандыр. Бында бер ҙә яҙыҡлыҡ юҡ. Үҙе, бер яҡтан, төрөкмән затлы ҡыпсаҡ кешеһе булһын да, ғүмере буйы тиерлек төп төрөкмәндәр араһында йәшәһен дә, улар менән көн дә аралаша-аралаша, Дим һөйләше менән уларҙың телендәге оҡшашлыҡтарҙы ишетә йөрөһөн дә, тамырҙар берлегенә кеше аша түгел, үҙе төшөнһөн дә, бөтә белгәнен нисек итеп тыныс ҡына, битараф тонда һөйләй алһын инде! Заманында үҙенән өлкәндәрҙән ишеткәнде яңы заманда формалашҡан үҙ ҡараштары ҡаҙанында ҡайнатып, уларҙы хәҙер үҙенсә интерпретациялауына сит-ят ерҙәрҙә тыуған төйәген һағыныуы ла үҙенекен иткән, әлбиттә.

## 14. Намыҫ тойғоло ир-ат һәм ил намыҫын һаҡлаған ир менән ат

*(йәки романдағы дастан)*

Заманыбыҙҙың күренекле тел белгесе, филология фәндәре докторы, профессор, танылған сәсмәүер оҫтаһы Жәлил сәсән Кейекбаев (1911—1968) 1945 йылда Ғафури районы Тайыш ауылында Мирсаяф Сәйфуллин тигән риүәйәтсенән «Аласабыр» легендаһы менән «Әбрәй батыр» риүәйәтенең берәр вариантын яҙып алып, уларҙы хәҙерге Рәсәй фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге ҡарамағындағы ғил-

ми архивҡа тапшыра (ф. 3, оп. 10, ед.хр. 40). Аҙаҡ мәғлүм булыуынса, ошо ике әҫәргә әҙ генә үҙгәрештәр индереп, уларҙан йыйылма текст төҙөп, шуны ул үҙенең «Туғандар һәм таныштар» романында (Өфө: БКН, 1975.— 67—73) файҙаланған имеш. Ана шуны роман персонаждарының береһе Әҙһәм тигән ҡарт, «Бүҙрәтчик» Әхмәдиҙең зымзыя юҡ булған* Ҡола байталын телгә алыуға бәйләп, дастан рәүешендә бәйән итә.

Фольклор әҫәрҙәренә әҙип тарафынан әҙ генә үҙгәрештәр индереү мәсьәләһенә килгәндә, ул яҙыусының үҙ алдына ҡуйған ижади уйниәте (замыселы) һәм өҫмаҡсаты (сверхзадачаһы) менән аңлатыла һәм шуның менән аҡлана ла. Мирсаяф ҡарт һөйләгән легенда менән риүәйәтте романдағы дастан менән сағыштырып ҡарағанда, иң әүәл шул иғтибарға ташланыр. Өс әҫәрҙә лә һүҙ йыйындағы ярыштар хаҡында бара. Әммә уларҙың үткәрелеү ваҡыты, урыны һөҙөмтәһе тәңгәлендә һиҙелерлек айырмалыҡтар күҙәтелә.

Тәүҙә ваҡиға барған ваҡыт төшөнсәһенең бирелеше мәсьәләһенә туҡталайыҡ. «Аласабыр» легендаһында ул билдәһеҙлек төшөнсәһенә генә эйә булған «бер ваҡыт» тигән һүҙбәйләнеш менән генә бирелгән. «Әбрәй батыр»ҙа һүрәтләнгән ваҡиғаның ваҡыты ла шундай уҡ мәғәнәлә теркәлгән. Тик ул төшөнсәнең бирелеше тәүгеһенән лексик яҡтан ғына айырыла: «бер йылды» тигән һүҙбәйләнеш ярҙамында ғына хәбәр ителә.

Ә урын мәсьәләһенә килгәндә, шуны әйтергә ҡала: тәүгеһендә ваҡиға «Ырымбурҙа бик ҙур йыйын»да бара, икенсеһендә — Ҡазан тарафтарында. Тимәк, легенда менән риүәйәттә бәйән ителгән ваҡиғаларҙың ваҡыты хаҡында төшөнсә — билдәһеҙлек категорияһы ярҙамында ғына бирелә, урыны иһә аныҡ күрһәтелә.

Романдағы дастанға килһәк, ни күрәбеҙ? Унда ваҡыт та, урын да аныҡ. Аласабыр — бәйгелә, Әбрәй батыр бил һынашта ҡатнашҡан йыйын ҡороноуанъя ваҡытында була. Тик Рәсәй батшаларының ҡайһыныһы тәхеткә менгән мәлдә булыуын ғына асыҡларға ҡала.

Дастан буйынса, Аласабыр ҙа, Әбрәй ҙә бер үк йыйында ҡатнаша. Тимәк, «Аласабыр» легендаһы менән «Әбрәй батыр» риүәйәте күҙлегенән ҡарағанда, ваҡиға барған урын дастанда «берләштерелә»: аңлашылалыр ки, Ҡазан йыйыны был осраҡта иҫкә лә төшөрөлмәй, телгә лә алынмай.

Телгә алынған легенда һәм риүәйәт менән яҡшы таныш уҡыусы йәнә шуға иғтибар итмәй ҡалмай: «Аласабыр»ҙа Бөрөк ҡарт үҙенең йүгереген оло йыйынға үҙ белдеге менән үҙе ебәрә. Дастан буйынса иһә бының өсөн ҡартты, сапҡын саптырып тороп, кантон тиклем кантон башлығының әжүәләүе талап ителә.

Бәйге башланғас иһә, легенда буйынса, Аласабырға Бөрөктөң үҙ улы ултыра, сюжеттың дастан вариантында иһә — исемһеҙ бер малай.

Йәнә килеп шул: Аласабырҙың затының тамыры хаҡында белешмә биреү маҡсатында, легендаға мифик тау, Ҡаф тау артындағы күл тирәһен төйәк иткән толпарҙарҙы ҡулға эйәләштереү тарихын үҙ эсенә һыйҙырған тотош бер ярҙамсы (ҡушма) сюжет ялғап бирелгән. Романдағы дастанда иһә ул сюжеттың эҙе лә юҡ, еҫе лә тойолмай.

Риүәйәттә Әбрәй менән бил һынашҡан батырҙың кем икәне билдәһеҙ ҡалған. Шул билдәһеҙ батыр уны еңә. Сәбәбе шул: Әбрәйҙе дәртләндереп, һай-һаулап торор урынға, теге батырҙың үтенесе буйынса, тамаша ҡылыусылар өнһөҙ ҡала. Ә дастанда Әбрәй хәл иткес бил һынашта, бер түгел, ике тапҡыр төрөк батырын күтәреп һуға: еңеүсе тип табыла. Тамашасының уны ҡеүәтләү-ҡеүәтләмәүе хаҡында — ләм-мим.

Ҡарамаҡҡа, «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» сюжетына һалынған йөкмәтке ябай ғына. Унда Тәлгәшле ауылы Бөрөк тигән ҡарттың «Яйыҡ буйы ҡаҙаҡтары ла белгән» (тимәк, шунда тиклем йәйелгән башҡорт иле хаҡында әйтеп тораһы ла түгел, йәнәһе) «бәйгеләрҙә бер генә йүгеректе лә алдына сығармаған» Аласабыр тигән атының «короноуанъя ваҡытында» үткәрелгән (тимәк, иң оло) бәйгелә лә беренселекте алыуы, шул байрамда майҙан тотҡан Әбрәй атлы башҡорт егетенең, берәүгә лә бил бирмәй, беренселеккә сығыуын бәйән итә.

Шул йөкмәткене асыуҙа әҙәби дастанға нигеҙ-легенданан һүҙмә-һүҙ күсерелгән этнографик яҡтан аныҡ деталь һәм йолаларҙың да әһәмиәте бар. Мәҫәлән, «ат сабыштырыу башланмаҫ борон, һынсылдар йүгерәсәк аттарҙы йөрөп ҡарап сыҡҡандар» тигән мәғлүмәт бар унда. Был актты атҡарыу борон фарыз йола хисабында булған булырға тейеш. Һәр хәлдә, «Түлле Мәмбәт» дастанында ла ҡабатлана быңдай хәл. Мәмбәттең ейәне Ғәбделнафиҡ мулла бәйгелә ҡатнашыусы аттарҙың ҡайһыныһы алдан килерен әйтә — шул раҫҡа сыға. Бында ла шулай була. Йүгеректәрҙе ҡарап сыҡҡас, һынсылдар: «Иҙел буйынан килгән бер ат бар был юлы, — тиҙәр, Бөрөк ҡарттың Аласабырын күҙ уңында тотоп. — Уның алдына бер йүгерек тә сыға алмаҫ», — тип, уның еңеүсе булырын юрайҙар. Сюжет кимәленән ҡарағанда, ошо мәғлүмәткә мөһим эстетик бурыс йөкмәтелгән. Борон һынсыл тигән исем күтәргән кешенең һәр һүҙе фәрештәләрҙең: «Амин!» — тигән сағына тура килеүенә һәр кемдең иманы камил булған.

Фольклорҙың башҡа жанрҙарынан айырмалы рәүештә, легенданың шундай үҙенсәлеге бар. Ул үҙенсәлектең әрәсәһе — уның әллә ниндәй тылсым, мөғжизәләрҙе, фантастиканы ла «реаль» итеп таныуында, тыңлаусыларға уларҙы шулай күндерергә тырышыуында һәм, әлбиттә, инаныстарҙы ла үҙ итеүсе, шул иҫәптән һынсыл тиклем һынсылдар юрағандың мотлаҡ юш килеренә күндереүсе жанр булыуында. Риүәйәтсе Мирсаяф ҡарт ауыҙынан яҙып алынған «Аласабыр» легендаһының эҙенән генә барған кеүек итеп бирелгән «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» дастаны ла, бигерәк тә уның бәйгегә бәйле өлөшө, һынсылдар юрауына шик белдермәй. Сөнки романдың ошо сюжеты күләмле цитата рәүешендә бирелгән урыны, хронологик яҡтан ҡарағанда, халыҡтың аңы әле мифологик һәм мифологияға нигеҙләнгән фольклорса фекерләүҙән азат булмаған дәүеренә тура килә. Шулай булғас, сюжеттың ни йүнәлештә үҫеше ике осраҡта ла көн элгәре билдәләнеп (прогнозланып) ҡуйыла, тип әйтә алабыҙ.

Легендалағы һымаҡ уҡ, дастанда ла һынсылдың, берәү түгел, бер нисәү булыуы иһә — әле әйтелгәндең дә раҫ булырына тулы гарантия

бар, тигәнгә бәрәбәр. Тимәк, артабан сабыр ғына «Түлле Мәмбәт» дастанында һүрәтләнгән бәйге һөҙөмтәһенең бында ла ғәмәлгә ашырын күтәргә генә ҡала кеүек. Эйе. Әммә «Һынсылдарҙың юрауы» мотивына был юлайы ҡатмарлыраҡ вазифа йөкмәтелгән булып сыҡҡан. Ә быға әллә кем йә әллә нәмә түгел, юрауҙың юш килеренә «тулы гарантия биреүсе» билдә — уны бер түгел, күмәк һынсылдар әйтеүе — сәбәпсе.

*«Һынсылдар юрауы»* мотивына дастанда һәм уға нигеҙ булған легендала ҡатмарлыраҡ вазифа йөкмәтелеүе, быға юрауҙың юш килеренә тулы гарантия биреүсе билдәнең сәбәпсе булыуы нимәлә күренә һуң? Шуға иғтибар итәйек: һынсылдарҙың һүҙен ишеткәс тә, «йүгерек аттарын килтергән байҙар»: «Ат сабыштырыу бөгөн булмай», — тип, Зөлҡәрнәйҙең, тынысланып, Аласабырҙы һуғарып тороп, һоло менән һыйлауына сәбәпсе була. Ә ат тотоу тәжрибәһе булған кеше яҡшы белә: бындай ат менән сабышҡа сығыу мөмкин түгел. Бына шулай үҙенән-үҙе аңлашылып торһа ла, был сюжеттың легенда рәүешендәге вариантында ла, романға дастандың бер өлөшө рәүешендә ингәнендә лә, Аласабырға ни өсөн бәйгелә ҡатнашырға ярамағанына аңлатма биреү артыҡ һаналмаған. Байҙарҙың «бөгөн ат сабыштырыу булмай» тигән хәбәре хәйлә булып сығыуы асыҡланғас, Бөрөк ҡарттың улын, Зөлҡәрнәйҙе табып, Аласабырҙы йүгертергә әйтһәләр, ул: «Юҡ, булмаҫ, һыу эсереп, һоло бирҙем, йүгерә алмаҫ», — тип яуап бирә. Сюжеттың легенда вариантында иһә ошо уҡ яуапты һүҙмә-һүҙ ҡабатлаған Зөлҡәрнәй, атының бәйгелә ҡатнаша алмауының сәбәбен тағы ла асыҡлай төшөп: «Сәсәр», — тип өҫтәй.

Һәр башҡортҡа һәм, ғөмүмән, йыйын ҡағиҙәләре менән таныш кешегә шул да яҡшы мәғлүм: ярыштарҙа еңеүселәр мотлаҡ бүләкләнергә тейеш. «Ике икең — дүрт», тигән кеүек аңлашылып торған ошо деталде легенда ла, дастан да шулай уҡ асыҡлап китеүҙе кәрәк тапҡан. Бәйгелә ал бирмәгән Аласабыр өсөн — Зөлҡәрнәй, көрәштә бил бирмәгәне өсөн, Әбрәй батырҙың ҡиммәтле бүләктәргә лайыҡ булыуы дастанда ла легендалағыса тәфсирләп тороп бирелгән.

Шуныһы ҡыҙыҡ: телгә алынғас та, этнографик яҡтан бөтә тулылығында күҙ алдына баҫмалы, йәғни һүрәтләүгә мохтажлыҡ кисермәгән, күренештәр хаҡында һүҙ йөрөткәндә, легенда ла, Жәлил Кейекбаевтың дастаны ла уларҙы, деталләп, тасуирлап күрһәтеп үк бирә, ә бына бөгөн инде этнографик яҡтан һирәк осрай торған күренеш иҫәпләнгәнен атап китеү менән генә хушһына. «Ырымбурға барғас, йүгертеү алдынан Аласабырҙы яратҡандар». Романдағы дастанда, уға нигеҙ булған легенданан айырмалы, бына шундай һөйләм бар. Бәйгегә ат әҙерләү йолаһы менән хәбәрдар булмаған замана кешеһе был һөйләмдә әйтелгәнде, «аттың янбашынан йә һыртынан ҡағыу (яратыу)» тип кенә аңлаһа, һис тә ғәжәп итәһе түгел. Ә бына белеме буйынса зоотехник, күңеле менән йыраусы һәм һәүәҫкәр фольклорсы Спартак Ильясов (Учалы районы Поляковка совхозы) аңлаты-

[1] БХИ. 1-се том, Йола фольклоры. 234-се б.

уынса, «ат яратыу» Барын башҡорттары диалектында [атты ярышҡа] «әҙерләү», «күнектереү» тигәнде аңлата.[1]

Ж. Кейекбаев, «Туғандар һәм таныштар» романын ундағы дастанға нигеҙ хеҙмәтен үтәгән легенданы Мирсаяф Сәйфуллиндан яҙып алған мәлдәрәк тә яҙып ятҡан. Ә легенданы ул, бығаса әйтелгәненсә, 1945 йылда теркәгән булған. Ихтимал, авторҙың ул дәүерҙәге замандаштарына «ат яратыу» йолаһы яҡшы таныш булғандыр. Һәм автор, шул таныШлыҡҡа иҫәп тотоп, уға асыҡлыҡ индереүҙә ихтыяж юҡ, тип белгәндер.

«Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» дастаны этнографик яҡтан нигеҙле йөкмәтке өсөн генә романға индерелмәгән, әлбиттә. Ошо дастандың тел төбө мөһим проблеманы, намыҫ, намыҫланыу һәм намыҫһыҙлыҡ, ғорурлыҡ һәм түбәнселек кеүек һәр заман өсөн дә көнүҙәк булып ҡалған этик проблеманы кинәйәләй.

Кинәйәләүҙе төпкәрәк йәшереү өсөн, Жәлил Кейекбаев дастан сюжетының тышына сыҡҡас та, композицион яҡтан уға тағылма рәүешендә Аласабыр менән Әбрәй батыр хаҡында һүҙ алып барыуын дауам итә. Сюжеттан тыш композицион ҡушымтаның тәғәйенләнеше, ҡарамаҡҡа, дастанда бәйән ителгәнгә тыңлаусыларҙың реакцияһын асыҡлауға ҡайтып ҡала. Ысынлап та, дастансы роленә ингән Әҙһәм ҡарт «атты тәрбиәләп тотһаң ғына, уның ат булыуы» хаҡындағы фекерен, һурпа эсмәй йөрөгәндә, быуын бөтөүе менән сағыштыра. Роман контексынан айырмай ҡарағанда, ҡарттың был һүҙҙәре юғалған ат хужаһы бүҙрәтчик Әхмәдиҙе мал ҡәҙерен белмәүҙә ғәйепләү акты булып аңлашыла. Ә йәштәр өсөн Әҙһәм ҡарттың сағыштырыу рәүешендәге репликаһы ғына ҡыҙыҡ. Тимәк, улар дастансының репликаһының асылына төшөнөрлөк түгелдәр әле. Үҙегеҙ хөкөм йөрөтөп ҡарағыҙ, ҡарттың сағыштырыуына Әпхалиҡ тигән егет «Һурпа эсеңкерәп тотонһаң, арыу булып ҡала ул» тигән реплика һелтәй. Әҙһәм ҡарттың тел төбөнә төшөнмәһәләр ҙә, йәштәр үҙҙәренең тиңдәшенең был репликаһында ни кинәйәләнгәнен тиҙ аңлап ала. Әммә, улар уны ниндәй мәғәнәлә ҡабул иткән, был хаҡта яҙыусы өндәшеп тә тормай, бары: «Йәштәр көлөштөләр», — тип әйтеү менән генә сикләнә. Әпхалиҡ әйткән һүҙгә бирелергә тейеш аңлатманы уға йәштәрҙең реакцияһы менән алмаштырыу — уның репликаһының кинәйәһенә кинәйә генә. Асылда, егеттәр бында Аласабыр — ат тәрбиәләү — һурпа бәйләнешен эротик темаға килтереп ялғап ҡуялар. Яҙыусы тарафынан былай ҙа төпкә йәшерелгән әхлаҡи-этик проблема бына шулай кинәйәле юмор аҫтына күмелеп ҡалғандай була.

Әхмәди атлы ҡурайсы ғына Аласабырҙың һатылыуына үкенес белдерә. Сәмиғулла тигәне менән йәнә берәү иһә Әбрәйҙең төрөк батырын, икенсе еңеүендә, имгәткәнсе алып атыуын хуплай. Яҙыусы бына шулай дастандың ни маҡсат менән һөйләнеүенә күпселектең әһәмиәт бирмәүенә иғтибар иттерә. Ни өсөн шулай икәненә яҙыусы аңлатма биреп тормаһа ла, төпсөр уҡыусы быға яҡшы төшөнә аласағына ышанған ул. Ни тимә, кеше ҡайғыһы төштән кире: Аласабыр затынан булған аты юғалыуға ҡайғырған Әхмәди ҡайғырһын, йәнәһе. Ул, әлбиттә, ҡайғыра. Уйы менән юғалған Ҡола байталының шәжәрәһен барлай башлауы, уның, ысынлап та, Аласабыр затынан булыу ихти-

малы хаҡында уйланырға тотоноуының билдәһе булып ҡабул ителә лә инде. «Бәлки, уның нәҫеле шул Тәлгәшле ауылынан сыҡҡандыр, теге Аласабыр сыҡҡан ауылдандыр, кем белә...» тигән фекергә килеүе Әхмәдиҙе шәхси юғалтыу ҡайғыһы ғына иҙмәүен, ошо юғалтыуҙың олораҡ проблемаға олғашыуын тойомлауы асыла. Һәр хәлдә, уның фекеренең осо, Аласабыр, Бөрөк ҡарттың хосуси мөлкәте иҫәпләнһә лә, бөтә халыҡ өсөн — ил күрке, милли ғорурлыҡ хисабында булыуына, шулай булғас, уны ҡәҙерләп һаҡлау кәрәк булған икән тигән һығымтаға һәм шуның аша үҙенең байталы юғалыуын да дөйөм халыҡ мәнфәғәте күҙлегенән баһалауға барып тоташырына шик ҡалмай. Тимәк, йәштәрҙең Әҙһәм ҡарттың һүҙҙәрен уйынға бороуы, кемдәрҙеңдер Әбрәй батырҙың төрөк батырын имгәтеүен хуплау менән генә хушһыныуы — уларҙың интеллектуаль яҡтан сикләнгәнлегенә, күмәгенең бер Әхмәди кимәлендә лә фекерләр кимәлдә түгел икәнлектәренә ишара. «Бүҙрәтчик» булып байырға тырышып ятҡаны өсөн, Әхмәдигә ҡарата халыҡ оппозицияла торһа ла, уны күралмаған сүрәттә лә, уның уйланыуҙары хаҡында әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, бында синфи мәнфәғәттән патриотизм тойғоһо, милли ғорурлыҡ хисе әһәмиәтлерәк икәне асыла.

Дастандың үҙендә ошо проблема нисегерәк ҡуйыла һуң? Бер һүҙ менән әйткәндә — әле генә билдәләгәнсә. Әгәр инде был һығымтаға анығлыҡ индерергә теләһәк, дастанда уны йөпләрлек дәлилдәрҙе табырға була. Ҡороноуанъя тантанаһында ил, халыҡ намыҫын яҡлау мәсьәләһе сыҡҡас, хатта кантон башлығы тиклем кантон башлығы булған Лоҡман, ошо хаҡта ҡайғыртып, йүгермәләп йөрөй. Тотҡонда ултырған Әбрәйҙе ошо оло маҡсат хаҡына ирекҡә сығара, Аласабырҙы бәйгелә ҡатнаштырыуға Бөрөк ҡартты күндерә. Дастанда һәр нәмәгә социологик күҙлектән баһа биреү традицияһына ярашлы: «Уның кантонынан барған батыр, күрәшеп, булған батырҙарҙы ла йыҡһа, Лоҡман кантондың үҙенә лә дан бит инде», — тип әйтелһә лә, ярыштарҙа үҙ төбәк батыры менән йүгереге ҡатнашыуын хәстәрләп йөрөүе: «Әбрәй батырҙы йыйынға ебәрергә кәрәк!» — тип даулашҡан ҡарттарҙың һүҙен тыңлауы, барыбер уның ил хәстәре менән йәшәүенә, ярыштарҙа ҡатнашыу — намыҫ эше, еңеп сығыу — ил данын, халыҡ данын күтәреү икәненә төшөнөрлөк хаким икәненә дәлил ул.

Тимәк, Әбрәй батыр менән Аласабырға ил намыҫын яҡлау бурысы йөкмәтелә. Нисегерәк атҡара һуң улар был изге бурысты? Ярышҡа барасағын килеп әйтеү менән — Әбрәй, үҙе тотҡонда ултырған келәттең асҡысын килтереүҙәрен көтөп тә тормаҫтан, мөйөштө күтәрә һалып, килеп тә сыға. Ошо урында: «Бәй, улай булғас ниңә шуға тиклем бикле килеш ултырған һуң ул?» — тип һорарға урын бар кеүек. Иң элек бик тә урынлы ҡуйылыуы ихтимал булған «ниңә асҡысты килтергәнде көтөп тормаған?» тигән һорауға яуап биреп ҡарайыҡ. Ҡарттарҙың Әбрәйҙе ярышҡа ебәрергә ходатай булып, кантонға барыуынан уҡ йыйындарҙа майҙан тотоу — уның өсөн ғәҙәти хәл икәненә төшөнөүе ҡыйын түгел. Тимәк, ул көрәш майҙанына сығып бил һынашыу — ил намыҫын яҡлау, унда еңеп сығыу — ил намыҫын һаҡлау икәнен яҡшы аңлай. Тимәк, йыйынға барырға тәғәйенләнеүе

хаҡында ишеткәс тә, ишекте асыуҙарын да көтөп тормаҫтан, мөйөш күтәреп килеп сығыуына уның ил тойғоһо, намыҫ тойғоһо сәбәпсе булған. Ошо әйтелгәндәрҙә әлеге тәүге һорауға ла яуап бар: ул һәр эште, шул иҫәптән, хатта тотҡонлоғон да сабыр кисереүҙе намыҫ үлсәме менән баһалай белә.

Эпос йә әкиәт батырына берәй бурыс йөкмәтелдеме, уның шарты әйтелеүсән. Ошо ҡағиҙә был дастанда ла күҙәтелә, әммә мөһим бер төҙәтмә менән. Әбрәйгә көрәшкә барыу бурысы йөкмәтелеүен ил ҡарттары исеменән әшкәр итеп: «Барып еткәнсе, торнанан — тояҡ, барғас, ҡырмыҫҡанан көс! — тип алғыш әйткәндән һуң, Лоҡман кантон, — йыйындағы батырҙарҙың булғанын да йыҡһаң, хибестән* ҡотҡарам, өҫтәүенә бер йылҡы орлоғо нәҙер итәм», — ти.' Әкиәт һәм эпостарҙа бурыс үтәлмәгән хәлдә, геройҙың язаға тарттырыласағы хаҡында ла әйтелә. Ә бында ул хаҡта — ләм-мим. Әммә кантондың ауыҙынан сыҡҡан һуңғы һүҙҙәрҙең шарт һөйләм рәүешендә әйтелешенән ул ҡанундың бында ла үҙ көсөндә ҡалыуы, йәғни әгәр ҙә мәгәр еңелеп ҡайтһа, егеттең йәнә хибескә юлығасағы һәйбәт аңлашыла.

Ә ул шартҡа «мөһим төҙәтмә» тигәнебеҙ ниҙән ғибәрәт? Был һорауға шул яуап: кантондың шартына ҡаршы Әбрәй үҙ шартын әйтә. «Шартҡа — шарт» алымы ни әкиәт эстетикаһы ҡанунына, ни эпостыҡына ярашып етмәй. Кемгә кемгә, ғүмер буйы үҙе балалар өсөн әкиәттәр ижад иткән, туғандаш венгр халҡының әкиәттәрен башҡорт теленә тәржемә иткән, Башҡорт дәүләт университетындағы башҡорт бүлеге студенттарына әҙәби һәм фольклор әҫәрҙәре, шул иҫәптән әкиәт стиле буйынса махсус курс уҡыған (әйткәндәй, был юлдарҙың авторына БДУ-ла уның ошо курсын тыңлау, лекцияларының бер өлөшөн донъяға сығарыу бәхете тейгәйне)[1], ошо хаҡта хеҙмәттәр баҫтырған Жәлил Кейекбаев ни өсөн ҡанундан ситкә тайпылған? Бындай һорау тыуа ҡалған хәлдә, уға: «Уның яуабы ла ошо һорау эсендә», — тип кенә яуап бирергә лә булыр ине. Ни өсөн тигәндә, әкиәт, эпос ҡанундарын белгән өсөн дә шулай иткән. Ә әкиәт, эпос эстетикаһы ҡануны буйынса, герой алдына ниндәйҙер шарт ҡуйыла икән, мотлаҡ уның нигеҙе булырға тейеш. Кантон ғали йәнәптәре генә түгел, Әбрәй ҙә үҙ шартын нигеҙләй алған. Ана ул ни ти: «Мин, барып, беренселекте алыуын алырмын да бит, уның менән генә түгел. Бәйгелә лә беренселекте алыу кәрәк. Анауы Тәлгәшле Бөрөк ҡарт та Аласабырын йүгертергә апарһын ине. Шулай булмағанда, мин көрәшергә бармайым». Тимәк, Әбрәй, әле кем менән бил һынашырын белмәгән саҡта уҡ, үҙенең мотлаҡ еңеп сығырына инанған сүрәттә лә (быныһы өсөн үк афарин уға!), үҙ ҡәүеменең намыҫын ышаныс менән яҡлаусыларҙың, тимәк, уның данын үрсетеүселәр яңғыҙ ғына, тимәк, осраҡлы күренеш, тип баһаларлыҡ булмауы, ишле булыуы, тимәк, бында бер эске законсалыҡ бар икәнен оло йыйынға йыйылған бөтә ғәм, шул иҫәптән губерна башлыҡтары алдында иҫбат итеү хаҡында ҡайғырта. Быны

---

[1] Сөләймәнов Әхмәт. Халыҡ ижадынан һут алып: Жәлил Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романында фольклор башланғыстары. — Өфө: Ғилем, 2000. — 42—47-се б.

нимә менән аҡлана «шарт ҡуйыу» принцибына төҙәтмә индереп, уны «шартҡа-шарт»ҡа әүерелдереүҙең сәбәбе.

Намыҫ менән намыҫланыу Әбрәй өсөн айырылғыһыҙ төшөнсә. Кантон башлығы һәм ил ҡарттары алдында «Мин барып беренселекте алыуын алырмын» тигән һүҙендә тора: «йыйынға килгән батырҙарҙы, көрәшселәрҙе яурыны аша ташлап ҡына торған... Яҡын-тирәнән килгән батырҙарҙың барыһын да йығып бөткән».

Үҙе хәрәмләшмәй көрәшкән кеше булараҡ, хәрәмләшкәндәрҙе аямай Әбрәй: унан бер тапҡыр еңелгән төрөк батыры, йөҙөн дегет менән буяп, ҡалмыҡ батыры булып майҙанға сыҡҡас, ул уны, муйыны сығырлыҡ итеп алып һелтәй. Халыҡтың: «Үлтерҙе лә үлтерҙе!» — тип зыулашыуына ҡаршы уның алдашыуы хаҡында әйтеп: «Бында һәр бер батыр көс һынашырға килгән, алдашырға килмәгән!» — тип өҫтәй.

Төрөк батырын аяуһыҙ һелтәүе менән Әбрәй батыр, берҙән, үҙенең ғәҙеллекте яратыусы намыҫсан батыр икәнен күрһәтһә, икенсенән, мәкерҙәрҙе, алдаҡсыларҙы — намыҫһыҙҙарҙы күрә алмауын иҫбатлай.

Намыҫ һәм намыҫсанлыҡ проблемаһы дастанда айырыуса Аласабырға бәйле ике эпизодта үтә лә фәһемле хәл ителә. Бәйге алдынан ғына һыу ҙа эскән, һоло ла ашап алған Аласабырға егерме саҡрымлыҡ дистанцияны үтеү үтә лә ауырға төшәсәге баштан уҡ көн кеүек асыҡ була. Бәйгенең кисектерелеүе хаҡында ялған хәбәр таратыуҙары менән үҙҙәрен эпос һәм әкиәттәрҙә геройҙың юлын ҡыйырға тырышҡан мәкер заттар рәтенә ҡуйған байҙар тап ана шуға иҫәп тоталар ҙа инде. Етмәһә, Аласабырҙы ғүмерҙә лә күрмәһә лә, һыртына ултыртылған малай аҡтығы юл оҙоно ауыҙлыҡ менән уның ауыҙын бысып килә. Йүгеректең, уға баш бирмәй, шулай ҙа бөтә бәйге аттарын уҙыуында уҡ ошо мал затының намыҫсанлығы асыла. Уның был сифаты уны яй барырға мәжбүр итергә маташыусы малайҙың намыҫһыҙлығына ҡапма-ҡаршы ҡуйыла. Ат башындағы ул малайҙың шул ҡыланышы уның кемдеңдер заказын үтәүе, һатлыҡ булыуы хаҡында шикле уйҙар уйларға мәжбүр итә.

Аласабырҙың намыҫсан булыуын асҡан икенсе эпизод шунан ғибәрәт: әлеге шул сабыш алдынан һыу эсеп, һоло ашауының касафатынан ярты юлда сәсәп йығылып, һыртындағы малайын тәкмәс аттырғас, ул «әҙерәк ятҡас, тороп, бер һелкенгән. Шунан һуң, туҙан туҙҙырып, сәсрәтеп сабып киткән... — юлда йүгеректәрҙең барыһын да уҙып бөтөрөп, ике-өс ер буйы ташлап, малайһыҙ-ниһеҙ майҙанға килеп кергән хайуан. Майҙан халҡы хайран ҡалған». Хайран ҡалырлығы булған да шул. Юлдан ситкә тайпылмай, тиҙлеген кәметмәй, үҙе белеп «финишҡа» етһен әле! Аласабырҙың был ҡылығы, берҙән, бындай бәйгеләрҙә уның күп тапҡырҙар ҡатнашыуы, тимәк, ярыш тәжрибәһенең ҙур булыуы тураһында һөйләһә, икенсе яҡтан, уның, ысын ир-егеттәрсә, намыҫсан булыуы тураһында фекер уята. Аттың аты шулай булғас, Әбрәй ише егеттәргә ни һан! Дастан уҡыусыларҙың ошондай фекергә килеренә иҫәп тота ла инде.

Тотош алғанда, «ир намыҫы — ил намыҫы» тигән изге төшөнсәнең тере кәүҙәләнешен һынландырған Әбрәй дастанда Зөлҡәрнәйгә ҡар-

шы ҡуйыла. Бөрөк ҡарттың ошо улы мал-монаятҡа алданып, ил данын, ҡәүем данын, ил-йорт намыҫының бәҫен күтәргән Аласабырҙы... һатып ебәрә. Уның шул ҡылығы уның үҙен ил намыҫы, халыҡ намыҫы, уларҙың даны менән иҫәпләшә белмәүсе кеше итеп таныта.

Шулай итеп, «Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр» дастаны — асылда, намыҫ һәм намыҫсанлыҡ һәм шуларҙың антиподы тураһындағы әҫәр. Роман контексында был сюжет Әхмәдиҙең намыҫ тураһында уйланырына иҫәп тотоп, бәйән ителгән. Мал ҡәҙерен белмәү тураһында Әҙһәм ҡарт әйткән һүҙҙәр һәм ил өсөн дан һәм намыҫ символы булған Аласабырҙы һатҡан Зөлҡәрнәй образы уны, ысынлап та, уйға һала.

Ғөмүмән, был дастан ил намыҫын яҡлаған ат хаҡында һөйләп, ундай мал бер кешенең хосусийәтенә ҡараһа ла, асылда илдеке булыуын раҫлай. Ә был үҙ нәүбәтендә, дастан сиктәрен үтеп, донъяға быуатҡа бер генә яралыусан талант эйәһенең ҡәҙерен белеү, ундай һәләт айырым кешегә бирелһә лә, уға ул ғына хужа түгел, ил, халыҡ хужа тигән хәҡиҡәт хаҡында ла уйландыра. Әбрәй батыр образы ла ошо юҫыҡта ҡабул ителә. Дастан үҙе лә, уға нигеҙ булған легенда ла «Аҡбуҙат», «Ҡара юрға», «Аҡһаҡ ҡола» иҫе мал-тыуар эпостары контексына һәйбәт яраҡлаша.

## 15. Бейҙең ғәҙел хөкөмөнә ирешкән фәҡир һунарсы хаҡындағы дастан

«Бикйән Мәргән» әҫәре заманында Нур Зарипов тарафынан ниндәйҙер том өсөн әҙерләнгән булған. Әммә мөхәрририәт ағзалары араһында фекер берегеп етмәүе сәбәплемелер, бер томда ла урын алмаған. Үҙ нәүбәтендә, фекер берекмәүенә был әҫәр әҙәби яҡтан эшкәртелгән, шуға күрә лә уны фольклор томында биреп булмай тигән ҡараш сәбәпсе булғанға оҡшай. Был фаразыбыҙ әҫәрҙең аңлатмаларында килтерелгән ҡыҫҡа ғына баһаламаларға нигеҙләнә. Уларҙан күренеүенсә, Әхнәф Харисов был әҫәрҙе әкиәт (?) тип иҫәпләгән. Ғайса Хөсәйеновса иһә, «Бикйән Мәргән» — эпик элементтары булған әкиәттең «хикәйәткә боролоуы»на бер миҫал, шул яғы менән «ҡыҙыҡлы күренеш» тигән. Үҙе яҙған аңлатмала Н. Т. Зарипов, хәбәр ҡылымдың шаһитлы үткән заманда бирелеүенән сығып ҡына, уны художестволы әҙәбиәт йоғонтоһон кисергән, тип иҫәпләй. Марат Минһажетдинов хаҡлы: быңдай форма ысынында, «әҙәби булыуға ҡарағанда, халыҡтыҡы ул». Ни өсөн тигәндә, борон теркәлгән сәсмә әҫәрҙәрҙә ул форма йыш осрай. Хикәйәсе үҙе тасуирлаған ваҡиғаға шаһит булмаған сүрәттә лә. Шәжәрәләр ҙә шул стилдә үҙ итеүсән, Орхон-Йәнәсәй яҙмалары, башҡа руник ҡомартҡылар ҙа. Әммә, әкиәттәрҙә һәм эпостарҙа, әле һүҙ барған әҫәрҙәге кеүек, хикәйәләү стиле шаһитлы үткән заман рәүешен үҙ иткәндә, ара-тирә (ғәҙәттә, текстың бер абзацты тәшкил итерлек урынындағы һуңғы һөйләм артынса) «шаһитлылыҡты» «һүндерә» торған алым ҡулланылыусан. Был вазифаны «ти» ярҙамлығы еренә еткереп атҡара.

Марат Минһажетдинов тағы шуның менән дә хаҡлы: һүҙ барған әҫәр йөкмәткеһе йәһәтенән шартлы рәүештә тормош-көнкүреш эпостары тип йөрөтөлгән әҫәрҙәребеҙ рәтен тулыландыра. Иң мөһиме, ул сюжеттың — эпик характерҙа булыуына иғтибар иткән. Ни өсөн «иң мөһиме?» Сөнки заманалар үтә килә, хикәйәләү стиле төрләнергә мөмкин. Мөмкин генә түгел, был процесс ҡотолғоһоҙ. Шуға күрә, әгәр информаторҙан туранан-тура йәки ҡасандыр кемдәрҙәндер ишеткән халыҡ сәсмәүере өлгөһөн, йылдар үткәс кенә, хәтер буйынса ҡағыҙға теркәүсе үҙе матур әҙәбиәт менән таныш, хатта ки билдәле кимәлдә әҙәбиәтсәрәк фекерләү ҡеүәһенә ирешкән кеше булһа, «Бикйән Мәргән»дә күҙәтелгән «әҙәбиләштереү» кеүек башланғыстар ҡотолғоһоҙ. «Бикйән Мәргән»де Ә. Һ. Исламғолов (Н. Т. Зариповтың фекере менән килешергә кәрәк) ҡасандыр ишеткәнен йылдар үткәс кенә, ҡағыҙға төшөргән булған. Әйткәндәй, XX быуаттың 30-сы йылдарында уның имзаһы менән тағы байтаҡ әкиәттәр, риүәйәттәр яҙып алынған. Уларҙан күренеүенсә, заманы өсөн был кеше ярайһы мәғлүмәтле һәм уҡымышлы булған.

«Бикйән Мәргән» әҫәре беҙҙе «батша булмайынса, фәҡәт хан ғына булып, хөкүмәт эштәрен бейҙәр, ауылдағы яһаҡ йыйыусылар аша» йөрөткән замандарға алып китә. Ил менән идара итеү иерархияһынан артабан иң түбәнге ике баҫҡысы ла телгә алына. Бейҙәр бер нисә ауылға баш итеп ҡазыйҙарҙы ҡуйһа, улары үҙ нәүбәтендә һайланмыш байҙар менән «һүҙ беркетеп, бейҙең ауылдарға һирәк килеүенән файҙаланып, ауыл халҡын төрлөсә» талауы хаҡында ла мәғлүмәт бирелә. Әҫәрҙең башында уҡ ил идараһын шулай баҫҡыслап-баҫҡыслап күрһәтеп, йәмғиәттең төрлө социаль ҡатламдарға тарҡалыуы, унда синфи ҡаршылыҡтарҙың ҡотолғоһоҙ булыуы нигеҙләнә. Был күренеш эпоста бер ғаилә яҙмышы аша ла яҡшы уҡ асыла. Кейекбай ҡарт һунарсылыҡ менән көн күрә. Ул малсы түгел. Ә уның өлкән улы — замана кешеһе. Ул мал да көтә, хәрәмде хәләлгә иҫәпләүсе һыҡмыр зат та. Ә кесе улы Бикйәне — ирекле фәҡир: ул да һунар итә, әммә кәсебенән Йәреш йөҙөндәге ростовщик, тире һатып алып йөрөүсе йөҙөндә әҫәрҙә кәүҙәләнгән алыпһатарҙар файҙа күрә.

Әҫәрҙә социаль ғәҙелһеҙлеккә ике көс ҡаршы ҡуйыла. Бер яҡтан, бер-береһенә булышыусы фәҡирҙәр шундай көстө кәүҙәләндерә. Кәсеп эҙләп ситкә сығып киткән Бикйәнде атаһының танышы Бейембәт ҡарт һыйындыра. Кейекбай ҡарт үлеп киткәс, уның кеүек үк фәҡир Ҡөнәфиә уны арыулап ҡуйыша. Ә уның әбейе егеттең урлап алып ҡайтҡан кәләшен яҡшылап ҡаршы алған, һәйбәтләп хөрмәтләгән. Йыйын ваҡытында, бай малайын Бикйән еңгәс, улының үсен алмаҡ булып, майҙанға сыҡҡан байҙан уны ябай халыҡ ҡурсалап алып ҡала. Бикйән бына шулай яҡшылыҡты, ғәҙеллекте үҙе ишеләрҙән генә күрә. Әҫәр шуның менән синыфташтар берҙәмлегенә саҡырғандай итә. Был, әйтелгәненсә, мәсьәләнең бер яғы ғына.

Икенсе яғы шул. Бикйәнгә Йәреш ҡарттың йоғоноуын, уны тура мәғәнәһендә лә, күсмә мәғәнәлә лә көпә-көндөҙ, урам уртаһында талауы хаҡында хәбәр алған бей ғәҙеллекте урынлаштыра: Йәреш язаға тарттырыла.

Бында ҡыҙ урлау рәүешенә шаһит булабыҙ. Һунар кәсебе, һунарсылыҡ итеү сиктәрен ситтәрҙән һаҡлау, һөнәрселек кәсебе, тәғәйен ярсыларҙың (яр һалып ҡыҫҡырыусыларҙың) нисек һәм ҡасан ниндәй маҡсат менән яр һалыуы, йәбер-золом күрһәтеүсене, йәмәғәт хөкөмөнә дусар итеп, бейгә тапшырыу күренештәре бөгөнгө этнография фәне, фольклор ғилеме, мәҙәниәт тарихы буйынса тикшеренеүселәр ҡыҙыҡһынырлыҡ итеп тасуирланған.

## 16. Нуғай сығышлы эпостың башҡортлашҡаны

«Сура батыр» әҫәре нуғай батырҙары циклына ҡараған нуғайлы эпик ҡомартҡыларға ингән ҡобайырҙарҙың береһе.

Тарихтан билдәле булыуынса, XIV—XVI быуаттарҙа көнбайыштан Дунай йылғаһы буйҙарынан көнсығышҡа Обь, Тобол йылғалары буйҙарынаса һуҙылған бик ҙур территорияла Нуғай урҙалығы барлыҡҡа килә. Уның составына нуғай, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ халыҡтары инә. Был халыҡ-ҡәүемдәрҙе шул замандарҙа бөтәһен бергә нуғайлылар тип тә атап йөрөтәләр. Нуғай урҙаһы ҡул аҫтында йәшәгән был халыҡтарҙа XV—XVI быуаттарҙа ауыҙ-тел һәм яҙма әҙәбиәттәрендә байтаҡ уртаҡ әҫәрҙәр ижад ителә, улар дөйөм рухи байлыҡ булып китә. Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Һабрау кеүек уртаҡ йырауҙар майҙанға сыға.

Нәҡ ошо дәүерҙәрҙә нуғай батырҙары хаҡындағы тарихи ҡаһарманлыҡ йырҙары, ҡобайырҙары, тулғауҙары, йәғни нуғайлыларҙың халыҡ эпостары һәр халыҡ-ҡәүемдә киң танылыу таба. Академик В. М. Жирмунский ошондай «Ҡырҡ нуғай батыры» эпостары циклын уртаҡ фольклор йәдкәрҙәренә индерә[1].

Шул ҙур төркөмдән ҡаҙаҡтарҙа 1942—1943 йылдарҙа Морон жырау ауыҙынан 25 мең шиғыр юлдарынан торған 27 сюжет (йәки эпосы) яҙып алынған. Ҡарағалпаҡтарҙа уның 15 сюжеты һаҡланған, йәғни 15 батыры тураһында айырым эпостары ҡағыҙға теркәлгән. Нуғайҙарҙа хәҙерге көндә 11 сюжеты, йәғни эпосы билдәле: «Идегә», «Муса», «Мамай», «Ораҡ», «Шура батыр», «Фәҙел солтан», «Казы-Тоган», «Эр Тарғын», «Кобланды батыр», «Ғайса улы Әмәт».

Башҡорттарҙа иһә «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосынан-ҡобайырынан башҡаһы айырым сюжет элементтары, фрагменттар рәүешендә генә халыҡ хәтерендә ҡалған, бер ни тиклеме ҡағыҙға күсерелгән. Бына улар: «Иҙеүкәй менән Мораҙым» (ике мең шиғыр юлына яҡын иң ҙурыһы), «Мамай хан хаҡында хикәйәт», «Ҡоблан батыр», «Сура батыр», «Ир Тарғын», «Ғайса улы Әмәт», «Ҡарасай менән Ҡаҙы батыр».

Шулар араһынан, мәҫәлән, «Сура батыр» сюжетын да үткән быуатта башҡорттар хәтерҙән ҡобайыр шиғыры менән йәки ярым сәсмә, ярым теҙмә рәүештә хикәйәт итеп һөйләп йөрөгән. Был хаҡта Ә. Вәлиди Туған һәм Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев хәбәр итәләр. М. Өмөтбаев бер

---

[1] В. М. Жирмунский. Тюркский героический эпос. — Л., 1976. — С. 394—395.

киҫәген яҙып та алған. Ризаитдин Фәхретдин Сура батыр хаҡындағы сюжеттарҙы үҙ яҙмаларында иҫкә ала, Сура батыр хаҡында ла һүҙ барған бер башҡорт шәжәрәһен таба.

XX быуатта «Сура батыр» әҫәренең 1923 йылда «Яңы юл» журналында баҫылған, 1939—1940 йылдарҙа «Сура батыр йыры», 1960 йыл «Сура батыр» исемендә яҙып алынған шиғри өлөштәре бар. 1960 йыл Ырымбур өлкәһендә Кирәй Мәргән тарафынан яҙылған «Сура батыр» өлгөһө «Башҡорт халыҡ ижады» китаптарының «Эпос» томдарының өсөнсө китабында баҫылған (Өфө, 1982. — 69—70-се б.).

Халыҡ телендә хәҙерге көндә Сура батыр хаҡында риүәйәт рәүешендә төрлө ваҡ сюжеттар ҙа йөрөп ята. Ләкин улар нисектер төбәк батырҙары хаҡында кеүек (мәҫәлән, Әбйәлил, Ейәнсура райондарында ишетелгәндәре).

Ә бына Учалы районы — Имәнғол, Силәбе өлкәһенең Уйск районы Әмин ауылдарына ҡараған шәжәрәләге сюжет элементынан йәки үҙаллы үҫеп сыҡҡан легендала тарихи Сура батыр хаҡындағы бер сюжет өлөшө ҡыҙыҡлы ғына сағыла. Томда ул «Сура батыр» эпосының башҡорт версияһының бер варианты рәүешендә тулы килеш бирелде.

Уларҙа Сура батырҙың эшмәкәрлеге төрлөсә баһалана. Ә халыҡ хәтере Сураның эшмәкәрлегенең төп асылын уның Ҡазан ханлығына ниндәй мөнәсәбәттә булыуы менән билдәләгән.

«Сура батыр» эпосының башҡорт версияһының Силәбе өлкәһе Уйск районы Әмин ауылы уҙаманы Рәхмәтуллин Тимершаһ Әхмәтшәриф улы төҙөгән шәжәрәгә теркәлгән варианты буйынса ла, Ғ. Б. Хөсәйенов төҙөгән йыйылма тексында әйтелеүенсә лә, Сура батыр, Ҡазанды Иван Грозныйҙан ҡурсалау өсөн, яу саба. Шәжәрәгә теркәлгәнендә был хаҡта бына ни тиелә: «Рус ғәскәренең Ҡазан шәһәрен ҡамаған ваҡыттары булған. Шул ваҡыт Сура егет, иптәше Ҡолонсаҡ батыр, үҙҙәренә эйәргән егеттәрен ҡоралландырып, уларҙы йыйып, Ҡазан ханына ярҙамға барҙы. Ҡазан шәһәренә етеп, Күңелгәгә төшөп, сатыр ҡороп ятҡандар, хан менән хәбәрләшкәндәр». Эпостың башҡорт версияһының был варианты буйынса, «Ҡазан ғәскәре менән Сура ғәскәре бер булып, рус ғәскәрен ҡыуғандар». Шул яуҙа, Сура батырлыҡ өлгөһө күрһәткән булырға тейеш. Һәр хәлдә, хан уны батыр тип иғлан иткән. Дөрөҫ, әҫәрҙә был хаҡта туранан-тура әйтелмәй, ул бары «шундай ярҙамы өсөн» тигән иҫкәрмә менән генә сикләнгән. Әммә «батыр тип иғлан иткән» тигән мәғлүмәт ҙур нәмә хаҡында һөйләй. *«Батыр»* һүҙе бында *«хәрби дәрәжә* (яугирлек дәрәжәһе — *звание)»* тигән мәғәнәгә эйә. Ә ундай дәрәжәне тота килеп бирмәгәндәр.

Артабан Сураның, «батыр булып, Ҡазан шәһәрендә тороп» ҡалыуы хаҡында әйтелеүе был эпоста «батыр» һүҙенең, «яугирлыҡ дәрәжәһе (звание)» тигәнде аңлатыу менән сикләнмәйенсә, «билгән вазифа» мәғәнәһенә лә эйә икәне һәйбәт аңлашыла.

Эле беҙ яңы һөйләмдең тәүге өлөшөнә генә туҡталдыҡ. Уның дауамы былай: «... үҙенә йәмәғәт итеп, татар ҡыҙын алды. Шул ҡатынынан ир балаһы булып, нәҫеле таралды. Ҡазан шәһәрендәге *оҙондар* нәҫеле — шул Сура батыр тоҡомо имеш». Был һүҙҙәрҙә лә тәрән мәғәнә

бар. Хикмәт шунда: боронғо йола буйынса, сит ҡәүем кешеһенең түлен алып ҡалырға тырышҡандар[1]. Быға дәлилде туған фольклоры-быҙҙан да, башҡа халыҡтарҙың ижадынан да, этнографиянан да күп табырға була[2]. Был йоланы урындағы халыҡ, үҙ ҡәүеменең ҡанын яңыртыу өсөн, атҡарыр булған. Шуға күрә лә ваҡытлыса кейәү ролен атҡартырға телөһәләр, теләһә кемде түгел, ә затлы кешене йәлеп итергә тырышҡандар. Тимәк, Сура батырҙың Ҡазанда кәләш алыуы, унда унан зат ҡалыуын айырата әйтеү ҙә эпос геройының шул ханлыҡта батырлыҡ ҡылыуын дәлилләүгә хеҙмәт итә.

Эпостың йыйылма тексында иһә Сураның Ҡазан янындағы алышта ҡатнашыуы, «ал-ял белмәй» һуғышыуы, ике илгә, шул уҡ Ҡазанға һәм Нуғай иленә, даны таралыуы хаҡында бары хәбәр ителә генә. Шәжәрәләге вариантынан айырмалы рәүештә, ошо мәғлүмәтте дәлилләрлек миҫалдар бөтөнләй юҡ. Уның ҡарауы эпос, Ҡазанға килгәс тә, Сураның йыйында ҡатнашыуы, шунда ат сабышында ла, мәргәнлектә, бил һынашта ла ал бирмәүе хаҡында хәбәр итә. Бының менән генә лә сикләнеп ҡалмай, хан ҡыҙы ҡулынан бүләккә «Буҙйегет» дастанының геройы эйә булған ҡылысты хәтерләтмәле һигеҙгә бөкләнмәле алтын һаплы алмас ҡылыс алыуы хаҡында ла әйтеп ҡуя. Халҡыбыҙҙың эстетик аңы буйынса, майҙандағы ярышта еңеү — бер эш, яу яланында һынатмау — икенсе эш. Салауат Юлаев бушҡа ғына:

«Батырмын, тип кем әйтмәй —
Яу килгәндә, йүне юҡ;
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй,
Дау килгәндә, өнө юҡ», —

тип әйтмәгәндер. Әммә йыйылма текста, асылда, Сураның бәйгелә ал бирмәүе хаҡында һүҙ алып барылыуына уның ысын яуҙа нисек алышҡанын күҙаллатыу бурысы йөкмәтелгән. Әле һүҙ барған эпостың күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевҡа мәғлүм вариантында ла Сура батырҙың мәргәнлегенә иғтибар иттерелгән булған. Аҡташ хандың ҡырҡ кешеһе атын урлағас, Сура, уларҙы ҡыуып етеп, «барыһын да уҡ менән үлтереп», иленә ҡайтып китә. Ул вариантта ла Сураның «Ҡазанды русҡа бирмәҫкә» һуғышҡанлығы хаҡында әйтелә[3].

Сура батырҙың, Ҡазанды ҡурсалап, яу сабыуын 1923 йылда «Яңы юл» журналында баҫтырылған ҡобайыр өҙөгө лә, 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман (Ҡоръян) ауылында Мөхәммәт сәсән Агишевтан Кирәй Мәргән яҙып алған ҡобайыр ҙа, мәшһүр йырау, ҡурайсы һәм бейеүсе Кәрим Диаров репертуарынан мәғлүм «Ҡазанды алған көй» тарихы ла, 1964 йылда Баймаҡ районы

---

[1] Абдулҡадир Инан. Күсмә төрки ҡәбиләләрендә уллыҡҡа алыу йолаһы менән бәйле традициялар // Ватандаш. — 2000. — №6. — 122-се б.

[2] Сөләймәнов Э. М. Абдулҡадир Инан-фольклорсы // Ватандаш.—2001.— №12.—134—147-се б.

[3] Өмөтбаев М. Йәдкәр — Өфө: БКН, 1984. —248-се б.

Газин Ибраһим Әбүбәкер улынан (1903) Рәйсә Яхина яҙып алған «Һары батыр менән Сура батыр» риүәйәте лә, 1966 йылда Хәйбулла районы Байғусҡар ауылы Р. Х. Дәүләтбаевтан Барый Әхмәтшин яҙып алған риүәйәт тә, башҡорт фольклорынан мәғлүм башҡа әҫәрҙәр ҙә дәлилләй[1].

Әлбиттә, Сура батырҙың Ҡазан походының нигеҙләнеш, асылыш кимәле лә, уларҙың айышы ла төрлө әҫәрҙә төрлөсә. Әгәр «Һары батыр менән Сура батыр» риүәйәтендә Сураның ошо походы хаҡында халҡыбыҙ хәтерендә берсә «Сура батыр», берсә «Ҡазан яу алған» тип исемләнгән көй булыуына нигеҙләнеп, унда ла һүҙ ыңғайында ғына, әйтелһә, Кәрим Диаровтан яҙып алынған риүәйәт был көйҙөң, Сура батыр Ҡазан тарафтарына походҡа сыҡҡансы уҡ, уның үҙе тарафынан ижад ителеүен раҫлай: «Сура батыр үҙе сығарған марш көйөн ... бөтөн ҡурайсылар бергәләп ... ат өҫтөндә килеш уйнап ебәрәләр. Марш көйөн ҡурайҙа уйнай-уйнай, Ҡазанға походҡа сығалар»[2]. Сура батыр тураһындағы ҡобайырҙарҙың айырым мотивтар рәүешендә генә беҙгә килеп еткән өҙөмтәләрендә уның Ҡазанға яу сабыуы хаҡында үҙ ауыҙынан әйттерелә:

Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын.
Ҡазан илен алған һуң,
Ҡайтып, ҡылысым һаламын.

Шулай тиелә Мөхәммәт сәсән Агишевтан яҙып алынған өҙөмтәлә. Ҡылыс һалыу — яулашыуҙы ҡуйыу. Шуға күрә лә әле килтерелгән дүрт юллыҡтан Сура батырҙың Ҡазан илен алырға, шунһыҙ яуҙы туҡтатмаҫҡа ҡәтғи ҡарарға килгәнлегенә төшөнәһең (әлегә «Ҡазан илен алыу» ни аңлатҡанына туҡталып тормайбыҙ). Хәбибулла Ғәбитов «Яңы юл» журналында баҫтырып сығарған өҙөмтәлә иһә:

Сура, Сура, Сурамын,
Толпар менеп, тыу алып,
Яуға ҡаршы барамын:
Ҡәүер дошман тап булһа,
Күпсетермен талағын,
Ҡапҡаһына Ҡазандың
Ҡаттан һуҡмаҡ һаламын! —

тип, батырҙың әлеге ҡарарының ни тиклем ҡәтғи икәненә айырата баҫым яһалған. Былай тип әйтергә нимә нигеҙ бирә һуң, тигәндә, шулай тип яуап бирергә булыр ине. Беренсенән, Сура батыр улай-былай ғына бармай, тыу (байраҡ) күтәреп, тимәк, башҡаларҙы әйҙәп, дошманды еңеренә ҙур ышаныс менән яу саба. Икенсенән, шул ышанысы

---

[1] Яңы юл. — 1923. №№ 2—3. — 64—65-се б.; БХИ. 5-се том. — 210-сы б.; Диаров К. Сал Уралдың моңдары. — Өфө: БКН, 1988. — 38—39-сы б.; БЭФК, һаҡл. бер. 60. — 107—108-се б.; БНТ. Т. 2. ПЛ. — № 202 һ.6.
[2] Диаров К. Сал Уралдың моңдары. — 39-сы б.

ҡәүер (кафыр) дошман тап булһа, уның талағын күпсетергә, йәғни уны ҡырып һалырға ғәйрәт ороуынан да билдәле. Өсөнсөнән, Ҡазан ҡапҡаһына ҡаттан юл һалырға йыйыныуы — дошманды еңмәй тороп, туҡтамаясағын көллө ғәләмгә иғлан итеүе ул. Вәғәҙә кеүек иғлан ителгән батыр ҡарары, асылда, анттан ғибәрәт, сөнки ул яугир ауыҙынан әйттерелә. Дүртенсенән, әлеге һүҙҙәр тыңлаусыға (беҙҙең осраҡта уҡыусыға), кеше аша еткерелгән һүҙ төшөнсәһе биреүсән ситләтелгән телмәр рәүешендә түгел, ә уның үҙ ауыҙынан «мин» исеменән еткерелә.

Хәҙер инде «Ә ни маҡсат менән Ҡазанға яу саба һуң ул Сура батыр?» тигән һорауҙы ҡуйырға ла нәүбәт етте буғай. Тарихтан мәғлүм булыуынса, башҡа халыҡтар һымаҡ уҡ, башҡорттаҙ ҙа өс быуат буйына татар-монгол иҙеүен кисерә. Аҙаҡ иһә Алтын урҙа емереклектәрендә хасил булған Ҡазан, Нуғай, Әстерхан, Себер ханлыҡтары ҡулына юлыға. Ошо тарихи хәҡиҡәт күҙлегенән ҡарағанда, Сура батырҙың Ҡазан походы (әгәр ул үҙен башҡорт батыры тип иҫәпләһә, әлбиттә) һис һүҙһеҙ ошо ханлыҡҡа ҡаршы ойошторолған булырға тейеш кеүек. Юғарыла телгә алынған ҡобайыр өҙөмтәләрендәге «Ҡазан илен алырмын», «Ҡапҡаһына Ҡазандың ҡаттан һуҡмаҡ һаламын» тигән һүҙҙәр шуны ҡеүәтләгән кеүек.

Икенсе яҡтан, тарихи хәҡиҡәт Сура етәкселегендәге башҡорт яугирҙарының, һис юғында, рустарҙың (ә ҡәүер дошман тигәндә, тап шуларҙың Ҡазанға поход яһауы күҙ уңында тотолоуы яҡшы аңлашыла) баҫып инеүен хуплауын талап иткән булырға тейеш кеүек. Әммә «Сура батыр» эпосының башҡорт версияһының беҙгә мәғлүм варианттары һәм уларҙың өҙөмтәләре, бер генә миҫалды иҫәпкә алмағанда, был «тейеш кеүек» менән иҫәпләшмәй. Дөрөҫ, ул миҫал да Сура батырҙың Ҡазан ханында оҙаҡ ҡына хеҙмәттә тороуын таный. Ләкин быға ул геройҙың үҙ ихтыярынан тыш, мәжбүри атҡарылған бурысы тигән мәғәнә һала: йәнәһе лә, Сура йәш кенә сағында ҡазандар тарафынан әсиргә алынған да байтаҡ ҡына йылдар уларҙа хәрби хеҙмәт атҡарырға мәжбүр ителгән һәм рустар килеп Ҡазанды ала алмай ыҙалағанда ғына, уларға йәшерен юлдарҙы аса була. Р. Х. Дәүләтбаев яҙҙырған риүәйәт бына шундай хәбәр һала.

Мәғлүм ҡобайыр өҙөктәре иһә «Сура батыр Ҡазанға ни сәбәптән яу сапҡан?» тигән һорауға бер төрлө лә яуап бирмәй. «Һары батыр менән Сура батыр» риүәйәте лә — был йәһәттән өнһөҙ. «Сура батыр» эпосының башҡорт версияһының Тамъян-түңгәүер шәжәрәһендә килтерелгән варианты менән йыйылма тексы иһә Сураның, Ҡазан ханын яҡлашып, ҡаланы Аҡ батша ғәскәренән ҡурсалау өсөн, яу сабыуын хәбәр итә. Эпостың беҙгә мәғлүм булмаған вариантына таянып, М. Өмөтбаев та: «Сура батыр Ҡазанды русҡа бирмәҫкә һуғышҡан», — тип яҙып ҡалдырған бит[1].

Фольклорыбыҙҙағы Сура батырға ҡағылышлы беҙгә мәғлүм бөтә әҫәрҙәр ҙә, бер тауыштан, уны башҡорт сығышлы батыр, тип иҫәпләй. Тап бына шуға ла, тарихи хәҡиҡәткә хилафлыҡ итергә теләгәндәй,

---

[1] Өмөтбаев М. Йәдкәр. —248-се б.

уның Ҡазан ханлығын, башҡорт халҡын иҙеүсене, яҡлаусы итеп күрһәтелеүе аңлашылып бөтмәй. Бының сәбәбен, эпостың тәүҙә нуғай мөхитендә ижад ителеп тә, аҙағыраҡ башҡорт фольклоры репертуарына ерегеүе менән генә аңлатырға булалыр.

1552 йылдың 9 мартында ҡазандар Аҡ батшаның был ханлыҡты тыныс юл менән буйһондороу хаҡындағы хыялын юҡҡа сығара: ил менән идара итеүгә тәғәйенләнгән наместникты баш ҡалаға индермәй, эстә ҡалған рус ғәскәрен ҡырып, ҡалғандарын дәүләт сиктәренән ҡыуыу маҡсатында көрәш башлай. Шул ҡанлы алыштарҙа улар яғында *Шах-Чура* тигән кенәз дә ҡатнаша. Шул йылдың көҙөндә Ҡазанды обороналаусы татарҙар араһында өс мең нуғай һуғышсыһы була. Нуғайҙар был һуғышта Ҡазандың союзнигы иҫәпләнгән[1]. Ихтимал, элекке Нуғай ханлығы биләмәһендә таралыш алған «Сура батыр» эпосында ана шул ваҡиғалар сағылыш алғандыр. Быны аңлауы ҡыйын түгел. Сөнки, ҡазандар һымаҡ уҡ, Башҡортостандың бер өлөшөн үҙ ҡулында тотҡан Нуғай ханлығы, Ҡазандың ҡолауын — үҙенең дә көнө иҫәпле ҡалыуы икәнен яҡшы аңлаған. Был хаҡта Юрматы ырыуы шәжәрәһе ана ни ти: «Нуғайлар жыйылып, киңаш ҡылдылдар. «Боронғы аталарымыз Ҡубандан килеб ирди, жир-сыу диб. Салкын жир, салкын сыу истаб килгәнләр. Әммә кыш сывығы көн эсселегендән яман имеш. Әмма сыуык тәжрибәчинаһ ҡарағанда, төньяғындан урыс кәффар килгәне» яман. Шулай тиешеп, нуғайҙар Кубань яғына ҡасып китә. Әммә ярлы-ябаға, тимәк, нуғайҙың күптәре, Уралда тороп ҡала. Шәжәрәлә был хаҡта ла һүҙ бар: «Әмма ярлы-ябыҡ Бурнаҡ бигә килеб: «Яхшы ваҡытта бергә тордыҡ, имди заман яман булгач, безне ҡандә ҡуйып китәсез, без ҡандә барыйыҡ?» — диб бик ялбардылар ирсә, Бурнак би кучмәс булды»[2].

Башҡорттоң теге йәки был ырыуы үҙ составында «нуғай», «нуғайбәк» тигән ара (аймаҡ, тармыт, түбә, кесе ырыу) этнонимдарын, Нуғай юлы, Нуғай түбәһе, Үрге Нуғай, Түбәнге Нуғай, Һаҡмар Нуғайы, Нуғайбәк ише, топонимдарын һаҡлаған сүрәттә лә, күптән инде башҡортлашҡан ана шул ҡәүемдәр, уларҙан күрмәксе башҡалар ҙа Сура батырҙы ла күптән башҡортлаштырған. Әммә элекке хәтер һаман үҙенекен иткән. Эпоста уның һаман да Ҡазан союзнигы итеп күрһәтелеүен шуның менән генә аңлатып була торғандыр, моғайын. Ошо фонда Кәрим Диаровтан теркәлгән риүәйәт кенә диссонанс кеүек яңғырағандай була. Башҡорт батыры Сураның Ҡазанға походы унда шулай нигеҙләнә: «Иван Грозный, Россияға буйһондороу маҡсатында, Ҡазан ханлығына ҡаршы аяуһыҙ һуғыш башлап ебәрә. Рус ғәскәрҙәре тарафынан баҫып алынған ауылдарҙа татар халҡын христиан диненә күсергә, тәрегә ҡарап, табынырға, сиркәүгә йөрөргә мәжбүр итә башлайҙар... Иван Грозный ебәргән ғәскәрҙәр Ҡазанды уратып ала. Ҡазан халҡына ҡурҡыныс тыуа. Был хәл башҡорт

---

[1] Худяков М. Г. Очерки по истории Казанского ханства // На стыке континетов и цивилизаций: Из опыта образования и распада империй X—XVI вв.— М.: Инсан, 1996.— С.640, 641.

[2] Башкирские шежере / Сост., пер. текстов, введение и коммент. Р. Г. Кузеева. — Уфа: БКИ, 1960. — С. 28—29.

халҡына ла тиҙ ишетелә... Беҙҙе лә рус диненә буйһондорорҙар.., тиҙерәк татарҙарға ярҙамға барырға кәрәк, тиҙәр. Сура батыр иң яҡшы уҡсы башҡорттарҙан атлы ғәскәр туплай ҙа, ҡурайҙар уйнатып, походҡа сығып китә[1]. Күрәһең, тарихты ла, совет осороноң милли сәйәсәтен дә арыу ғына үҙләштергән был информатор, Ҡазан ханлығы менән башҡорттарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрендәге ҡыҙыршылыҡтарҙы, «иҫкегә ҡатышһаң, иҫ китә» принцибынан сығып, сүкоп тороуҙы урынһыҙ һанап, ситуацияға дин берлеге һәм совет интернационализмы күҙлегенән ҡараған. Шуның менән бергә ҡәрҙәш ике халыҡтың яҙмышташ икәнен онотмаҫҡа саҡырыу ҙа бар тарихи ваҡиғаны уның трактов-калауында. Ошо күҙлектән эпостың башҡорт версияһының башҡа варианттарына, өҙөмтәләренә яңынан бер күҙ һирпһәк, Башҡортостандың бер өлөшөн үҙенең колонияһына әүерелдергән Ҡазанға башҡорт Сураһының ярҙамға ашығыуы, улай ғына ла түгел, «Ҡазан илен алған һуң» ғына, йәғни уны ят бауырҙарҙан азат иткәс кенә, «ҡайтып ҡылысым һаламын», кәрәк булһа, «Ҡапҡаһына Ҡазандың ҡаттан һуҡмаҡ һалырмын», тип ант итеүе тәү ҡарашҡа ғына аңлашылмаған икәненә, уларҙың да тел төбө, ике халыҡтың да яҙмышы бер, тигәненә төшөнәһең.

Татар фольклорсыһы Флора Әхмәтова Татарстанда боронғо мәғәнәһе «крепостной», «ғәскәр башлығы» тигәнде аңлатыусы «Чура» һүҙенә бәйле күп кенә ауыл исемдәре барлығына баҫым яһап: «Уларҙың ҡайһы берәүҙәре «Чура батыр» дастанының халыҡсан нигеҙҙәренә барып тоташһа, бер ҙә ғәжәп түгел», — тип яҙғайны[2]. Был фекергә беҙ ҙә ҡушылабыҙ, әммә — өлөшләтә. Башҡортостанда ла ундай ауыл исемдәре етәһе. Хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге Ейәнсура ауылының исеме, риүәйәт буйынса, Сура батырҙың ейәненең исеменә бәйле[3]. Шул уҡ өлкәлә — Аҡсура тигән, күршеләге Башҡортостандың Ейәнсура районында Ҡансура тигән ауыл бар. Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл районындағы Ҡыҙыл ҡасабаһының көнсығышында кәбән һымаҡ һерәйеп торған ҡаяны Сура ташы тип beләләр. Риүәйәт буйынса, йәнәһе лә, Сура батыр шул «текә ҡая-ташта мәҡәм* тотҡан». Шул уҡ райондағы Грязной ауылы янындағы «тауҙың башындағы убаны Сура батыр ҡәберлеге тиҙәр»[4].

Башҡорттар йәшәгән тарафтарҙа туранан-тура *«Сура»* исеме инмәгән, әммә барыбер ошо шәхескә бәйле урындар ҙа байтаҡ. Ейәнсура районы Саҙалы ауылы эргәһендәге тауҙың Имән ҡарауылсыһы тип аталыуы ла Сура батыр исеменә бәйләп аңлатыла: йәнәһе, нәҡ ошо тау башында сигналсы ҡурайсыға быға тиклем бер тапҡыр телгә алынған «Нишләп дошмандың килгәнен күрмәнең? Имән ҡарауыллап торҙоңмо?» тигән һүҙҙәрен әйткән дә инде[5]. Учалы районында бер

---

[1] Диаров К. Сал Уралдың моңдары. — 38—39-сы б.

[2] Әхмәтова Ф. М. Татар халык дастаннары // Татар халык иҗаты: Дастаннар / Төҙ., кереш мәк. һәм искәрмәләрне язучы Ф. М. Әхмәтова; Фәнни ред. М. Г. Госманов. — Казан: ТКИ, 1984.

[3] БӘФК, һаҡл. бер. 60. — 47-се б.

[4] Һары батыр менән Сура батыр. — 107—108-се б.

[5] БӘФК, һаҡл. бер. 60. — 100-сө б.

ауылдың Имәнғол тип аталыуында ла, ситләтеп булһа ла, Сура батырҙың ҡыҫылышы бар. Ул ауылға нигеҙ һалыусы Иманғолдоң атаһы Ғосман мулла Сура батырҙан тыуған Йәнбәттең (дөрөҫө Ейәнбәт булғандыр, моғайын) улы Нүркәнең улы Биксуранан тыуған булған («Сура батыр» эпосының шәжәрә өлөшөнән).

Сура батырҙың исеме ярым мифологик, ярым донъяуи йөкмәткеле «Аҡбуҙат» эпосында ла телгә алына: йәнәһе лә, эпостың төп геройының атаһы булған ошо батыр һунарҙан арып килеп, башын терәп, серем иткән арала, Мәсем хан үҙенең тоғро яраны Аҡбулат менән икәүләшеп уны үлтерә лә һыуға һала була.

«Аҡбуҙат» эпосында исемһеҙ ҡарт Сура батырҙың нисек үлтерелеүе хаҡында һөйләп бөткәс, Һәүбән унан: «Олатай, бы тирәлә Сура батыр берәү инеме, икәү инеме?» — тип һорай ҡуя. Ҡарт уға былай тип кенә яуап бирә: «Мырҙам, илдә дан тотҡан, ил намыҫын һаҡтаған Сура батыр берәү ине. Мин Урал япрағында ла, Урал армыттарында ла бүтән телгә алып һөйҙәрҙек Сура тигән кешене ишеткәнем юҡ»[1]. Килтерелгән миҫалдарҙан сығып, беҙ ҙә Һәүбән биргән һорауҙы ҡабатлай алабыҙ. Тик Сура тигән батырҙың бер-икәү генә түгел күберәк булыуына өмөт итеп, бирер инек ул һорауҙы. Ни өсөн тигәндә, башҡа ҡәрҙәш халыҡтарҙағы һымаҡ, беҙҙә «Сура батыр» эпосында, Ф. В. Әхмәтова телгә алған «мифик заттар, бөркөттәр, арыҫландар менән көрәшеү» мотивтары[2] осрамаһа ла, әле генә килтерелгән миҫалдан күренеүенсә, бер Сураның ярым мифик дәүерҙә үк йәшәүе мәғлүм булды. Шуның кеүек тәүҙә Ейәнсура, Хәйбулла төбәгендә таралған риүәйәттәрҙә — шул яҡтарҙа дан тотҡан Үҫәргән ырыуы Сураһы Учалы, Әбйәлил яҡтарында — Күбәләк, Тиләү, Барын, Табын ырыуҙары батыры, Баймаҡ тирәһендә — Бөрйән ырыуыныҡы хаҡында һүҙ барып та, аҙаҡ шул мәғлүмәттәрҙе эсенә алған үҙаллы риүәйәттәр, аҙаш батырҙарҙың исемдәре үҙ-ара ассоциациялашыуы арҡаһында, уларҙың образын контаминациялауы ихтимал.

Ф. Әхмәтова менән килешкәнебеҙҙе белдергән сүрәттә лә, был килешеүҙең «өлөшләтә» тигәнебеҙҙең бер өлөшөнә яуап бирҙек буғай. Шул яуаптың үҙендә үк «өлөшләтә» тигән иҫкәрмәгә лә аңлатма бар. Әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, Сура батырға ҡарата «Чура» һүҙенең этимологияһы (бер тармағының) «крепостной» тигән мәғәнәһе яҡын да юламай, ә «ғәскәр башлығы» тигәне төкмә-төк тап килә.

«Сура батыр» эпосының шәжәрәлә бирелгән вариантының сюжеты үҙенең композицияһы менән үҙенсәлекле. Ул, асылда, бер нисә мотивтан ойошҡан. Күләм яғынан ыҡсым ғына булһа ла, ул өс быуындың эшмәкәрлеген үҙ эсенә ала. Тәүҙә бер ни тиклем «Күсәк бей» эпосының башланғыс мотивын хәтерләткән мотив килә: Сура батырҙың атаһы мал-тыуарына арыҫлан тейеүҙән йонсой. Әммә, ошондай уҡ ҡаза кисергән Мәсем хандан айырмалы рәүештә, яр һалып, батырҙарын саҡырмай, ә януарҙы һыйлап, уны ризаландырыу менән сикләнә. Бында ниндәйҙер кимәлдә боронғо бер инаныс, атап әйткәндә, батыр-

[1] БХИ. 3-сө том. Эпос.— Өфө: Китап, 1998. — 160-сы б.
[2] Әхмәтова Ф. В. Татар халыҡ дастаннары. — 19-сы б.

ҙар тураһындағы әкиәттәргә хас йола үҙенең сағылышын тапҡанға оҡшай. Әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, аждаһаға (ғифриткә йә дейеүгә) көндә лә бер ҡыҙҙы ҡорбан итәләр. Эпоста ваҡиғалар реаль ерлектә бара. Шуға күрә әлеге мотив беҙҙе фантастик заттар донъяһына алып китмәй.

Икенсе мотив — төп мотив. Сөнки тап ошонда Сура батырҙың донъяға килеүе, ир етеп, Ҡазанға яу сабыуы хаҡында бәйән ителә. Артабан иһә «Кинйәкәй», «Түлле Мәмбәт», «Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей»ҙәге (Үсәргән шәжәрәһендәге) кеүек Сура батырҙан тыуған уландар ҡылған йә улар башынан үткән эштәр хаҡында һүҙ бара.

Артабан Сура батырҙан таралған зат, шул зат төйәк иткән урын хаҡында бәйән ителә. Быныһы иһә, заманында Ҡазан тиклем Ҡазанға яу сапҡан батырға, шәжәрә традицияһы буйынса, информаторҙарҙың үҙен һәм үҙенең затын мөнәсәбәтле итеп күрһәтергә тырышыуы менән аңлатыла.

## 17. Башҡа эпостарға оҡшамаған «Күбәләк-тиләү батырҙары» ҡобайырының улар менән уртаҡлығы

Томға ингән яҙма дастандар араһында «Күбәләк-Тиләү батырҙары» ҡобайыры ла бар. Башҡаларҙан ул ярайһы ғына айырылып тора. Был әҫәр үҙенең ижад ителеше менән һуңғы осорға ҡарай. Уның авторы ла мәғлүм. Ул — хәҙерге көндә Учалы районы Миндәк ҡасабаһында йәшәгән Әхмәҙи сәсән Шәрипов булыр. Әҫәр баштан аяҡ башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары рухында. Берҙән, уның формаһы ла, пафосы ла, фекер йөрөтмөшө лә ҡобайырса. Икенсенән, сәсән таныш мотивтарға таяна. Һүҙҙе ул:

Борон-борон, бик борон:  
Бер әҙәм булмаҫ борон,  
Бер әҙәм килмәҫ борон,  
Берәү эҙ һалмаҫ борон,  
Берәү юл һалмаҫ борон, —

тип, беҙҙе хронология күҙлегенән иң боронғо дәүергә (Uhr Zeit-ҡа): әллә «Урал батыр», әллә «Аҡбуҙат», әллә «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек эпостарыбыҙҙың геройҙары йәшәгән дәүергә алып киткәндәй була. Артабан тасуирланған бай пейзаж картинаһы иһә беҙҙе Урал батыр заманынан күпкә бирерәк дәүергә күсергә мәжбүр итә. Сөнки тирә-яҡта төрлө-төрлө ҡош-ҡортҡа бай ҡара урманлы ҡая-ташлы ил, йәғни ҡасандыр Урал батыр бар иткән тәбиғәт тасуирлана. Әммә артабан ошо ергә Күбәләк менән Тиләү атлы ике ағай килеп сығыуы, уны үҙләштереп, түл йәйеүе хаҡындағы мәғлүмәт беҙҙе йәнә дәүер билдәһеҙлеге тойғоһо кисерергә мәжбүр итә. Тик Тиләүенән нисәнселер быуында мәшһүр Ҡобағош сәсән тыуып, унан — Айбағыш менән Көнбағыш, Айбағыштан — Килдеш батыр, Көнбағыштан — Ҡушкилде батыр, Ҡушкилденән Ҡарас атлы яугир-сәсән тыуыуы хаҡындағы мәғлүмәткә ирешеүебеҙ була — әҫәр иңләгән эпик дәүерҙең ярайһы ғына асыҡлана, әммә бик күпкә ҡыҫыла төшөүенә төшөнәбеҙ. Ни

өсөн тигәндә, беҙгә Ҡобағош сәсән — XV быуат аҙаҡтарында — XVI быуаттың урталарында, Ҡарас сәсән иһә XVI—XVII быуат араһында йәшәгән тигән фекер мәғлүм[1].

«Күбәләк-Тиләү батырҙары» әҫәре — асылда, ҡобайырҙар шәлкеменән ғибәрәт. Шәлкемде хасил итеүсе ҡобайырҙарҙың береһе лә сюжетҡа ҡоролмаған. Улар герой кисергән, ул сәбәпсе булған ваҡиғаларҙың бай һәм ҡатмарлы булыуы хаҡында беҙҙә төшөнсә биреү өсөн, уларҙы тасуирлап тормай, шул турала хәбәр итеү (констатациялау), уларға ым-ишара яһау менән генә сикләнеп, төп иғтибарҙы йә уларҙың сәбәбенә, йә һөҙөмтәһенә йүнәлтеү менән генә сикләнә. Ике ағайҙың ер табыуы, уны үҙләштереп, түл йәйеүе — нигеҙҙә ике мотивты (йәғни микро-сюжетты) хасил итә. Шуға күрә бына-бына улар сюжет булып йәйелеп китер кеүек. Әммә ҡобайыр ошо реаль мөмкинлекте файҙаланыуҙан «баш тарта». Һүҙ Тиләүҙән ҡалған заттар юҫығына күсә башлауы була — беҙ уның шул форсатты файҙаланмауының үҙ сәбәбе булыуына, йәғни уның сәсән алға һөргән уй-ниәткә ярашлы икәненә, художество күҙлегенән аҡланғанлығына төшөнәбеҙ. Асылы шул: ҡобайырҙың Күбәләк менән Тиләүгә бағышланған өлөшө уларҙан һуң килгән Ҡобағош, Айбағыш, Көнбағыш, Килдеш, Ҡушкилде һәм Ҡарас ише күренекле шәхестәрҙың сығышы ҡайҙан икәнен, улар йәшәгән, эшмәкәрлектәре йәйелгән, шуларға сәбәп булған шарттарҙы билдәләүгә тәғәйен. Әммә, әйтелгәненсә, улары ла сюжет хасил итмәй, уҙа барһа сюжет башланғысы менән генә сикләнә. Һуңғыһына «Ҡарас батыр» һәм «Ғариф батыр ҡылысы» ҡобайыры миҫал. Ҡыҫҡаһы, дөйөм алғанда, «Күбәләк-Тиләү» ҡобайырында информацион башланғыс өҫтөнлөк ала. Мәҫәлән, яңы ил тапҡан, ер үҙләштергән ике ағайҙың ҡылған эштәре хаҡында

«Һәр ҡылған эштәре
Аҡ та пак булған һөттән.
Күбәләк менән Тиләүҙең
Өмөт аҡланған көткән:
Ырыу ишәйеп киткән», —

тибындағы дөйөм һүҙҙәр менән генә әйтелә.

Һүҙ Ҡобағош темаһына күскәс иһә, уның зирәклеге, әүлиәлеге данлана, уландарының ҡаршы килгән яуға ҡаршы торорлоҡ, дауҙы кире борорлоҡ булып үҫеп етеүен хәбәр итеп, уларҙың атай-олатайҙар юлын ҡыуыуына ҡыуаныс белдерелә. Һүҙ Ҡобағоштоң ейәне Ҡарас сәсән тарафтарына күсеүгә, төп иғтибар был заттың һәр саҡ уяу, һәр саҡ яуға әҙер тороуына йүнәлтелә:

Эйәрле өс йүгерек
Бәйле торор кәртәлә...
Уҡ-һаҙағы, хәнйәре,
Ҡылысы ла һөңгөһө —
Әҙер торған көллөһө.

---

[1] Хөсәйенов Ғ. Б. Заман, әҙәбиәт, әҙип: Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тәнҡит мәҡәләләре.— Өфө: БКН, 1978. — 50—52-се б.

Бүтән бүлектәр менән сағыштырғанда, ҡобайырҙың «Ҡарас батыр» тип аталған бүлеге дөйөм һүҙ менән генә сикләнмәй. Әйтәйек, «Ҡарасҡа шул тиклем әҙерлек ни өсөн кәрәк булған?» тигәнерәк һорау тыуырын көн элгәре иҫәпкә алғандай, Әхмәҙи сәсән: «Ҡарымта-барымтаһы йөрөр булған эргәлә», — тип ҡуя. Сәсәндең, хәрби телдә әйткәндә, гел генә беренсе һанлы әҙерлектә тороуының сәбәбен шулай констатациялау менән генә сикләнеп ҡалмай, ҡаҙаҡ барымтасыһы Аҡса батыр менән бәрелешен дә хикәйәләй биреп ҡуя. Мәғлүм булыуынса, Ҡарас менән Аҡса (йәки Аҡша) хаҡында үҙ аллы әйтешле иртәк бар (БХИ. 5-се том. Эпос. — 217—220-се б.; 364—367-се б.). Сәсән уҡыусының шул әҫәр менән таныш булыуын иҫтә тотоп эш итә. Ваҡиғаны деталләп һүрәтләп тормай. Шуның байы, һүҙҙе оҙон-оҙаҡҡа һурытып тормаҫтан, психологизациялау алымын файҙалана биреп ҡуя. Мәғлүмдер ки, Ҡарас батыр Аҡсаға тота килеп дәғүә белдермәй, тота килеп уның менән алышмай, мәсьәләне ҡанҡойошһоҙ ғына хәл итеү юлын тәҡдим итеп ҡарай. Аҡса ярандары менән, барымтаға килеп, тиләү башҡорттарының малын әйҙәп алып китеп барғанда, Ҡарас батыр уны ҡыуып етеп:

«Аҡса, ҡалдыр малымды,
Ҡойҙормасы ҡаныңды», —

тип, конфликтты һәүәтемсә генә, тыныс ҡына хәл итеү юлын тәҡдим итә. Ҡарастың был тәҡдименә ҡаҙаҡ баҫҡынсыһы ни тип яуап биреүенә сәсән туҡталып тормай. Әммә Ҡарастың: «Киҙәк!» — тип әйтеүенән беҙ Аҡсаның башҡорт малын ҡалдырырға самаһы булмауын аңлайбыҙ. Ә кем «Аҡса менән Ҡарас» ҡобайыры йә ошо ике батыр хаҡындағы тарихи риүәйәт менән яҡшы таныш, ул ҡаҙаҡ батырының бик тәккәбер ҡыланыуын хәтерләй торғандыр әле. Уларҙа иһә Аҡса шәжәрәһенең данлы булыуы, үҙенең еңелеү белмәүен әйтеп:

«Аҡша батыр, тигәндә,
Күп батыры ҡалмыҡтың
Яҙа ине аҡылдан», —

тип маҡтана. Әле һүҙ барған ҡобайырҙа иһә Ҡарас ауыҙынан «киҙәк» һүҙен ишеткәс, Аҡсаның күҙе аҡайыуына, шул һүҙ йөрәген телеп үткәндәй, артҡа ҡаҡайыуына, йөҙөнә үлек төҫө кереүенә генә иғтибар иттерелә. Шуның менән сәсән ҡаҙаҡ барымтасыһының Ҡарас әйткән бер ауыҙ һүҙҙән дә бәлтерәп төшөүен психологик яҡтан нигеҙле итеп бирә алған.

Артабан, риүәйәт һәм әлегәсә донъя күргән ҡобайыр күҙлегенән ҡарағанда, тәүҙә Аҡса менән Ҡарастың ҡан ҡыҙҙырмалы әйтеше, киҙәк ташлашыуы, батырҙарҙың уҡ-һаҙаҡтарына ҡара доға уҡыуы, нәүбәтләп атышыуы тасуирланырға тейеш кеүек. Әммә бында уларҙың береһе лә юҡ. Тик трагик финал ғына уртаҡ. Тимәк, Әхмәҙиә сәсән үҙ алдына алғанды ҡуймаған: бая әйтеп үтелгәнде, уҡыусыларының Аҡса менән Ҡарас хаҡында хәбәрдар булыуына иҫәп тотоуын, дауам итә, уны принцип кимәленә күтәрә.

Ошо принципҡа ул ахырынаса тоғро ҡала. Беренсе Ватан һуғышы ҡаһарманы — Күбәләк-Тиләү егете Ғарифтың батырлығы хаҡында әйтергә булғанда, егеттең Париж йоҙағын вата сабыуын ғына хәтергә төшөрә лә «корос беләк, ҡуш йөрәкле» тип, уны маҡтауға күсә. Муса Мортазинға бағышланған ҡобайыры ла ошондай уҡ рухта. Тик Ғариф батыр һәм башҡа батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙан айырмалы рәүештә, Мусаның оло эштәр ҡылырға тәғәйен булыуы, Ҡарас һымаҡ уҡ, тыумыштан беленеүенә иғтибар иттерелә: ул битлек менән тыуа. Ундайҙар иһә Хаҡ тәғәлә тарафынан айырым иҫәптә тора, ти. Бына шулай Мусаның ил эсендә дан алыр, ил тышында һан алыр батыр буласағы инаныс нигеҙендә илаһилаштырыла. Сәсән уның батырлыҡтарын данлауға ҡобайырҙың үҙ тәбиғәтенә һалынған мөмкинлектәрҙе иркен файҙалана, шуның менән бергә Мусаның нахаҡтан рәнйетелеүен, язаға тарттырылыуын да — уның ғәҙелһеҙлек ҡорбаны булыуын да онотмай. Шул арҡала юғары стиль жанры булған ҡобайырҙың финалы бер аҙ элегик пафослыраҡ булып китә.

Аңлашылыуынса, «Күбәләк-Тиләү» ҡобайыры томда үҙе менән йәнәш торған «Тәтегәс бей»гә лә, «Түлле Мәмбәт»кә лә, «Кинйәкәй»гә лә, «Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей»гә лә, «Заманалар ҡиссаһы»на ла оҡшамаған. «Урал батыр» эпик ҡобайыры менән сағыштырып тораһы ла түгел. Әммә уларҙың барыһына ла был әҫәрҙе ныҡ ҡына яҡынайтҡан бер билдә бар. Ул да булһа ер проблемаһы. Дөрөҫ, был проблема уларҙың һәр береһендә билдәле бер юҫыҡта күтәрелә. Күтәрелеп кенә ҡалмай, хатта үҙенсә хәл дә ителгәндәй. «Урал батыр» эпосының геройы, һүҙмә-һүҙ әйткәндә, кеше йәшәр ерҙе үҙе бар ҡыла. Бының менән генә сикләнеп ҡалмай, эшен ахырынаса еткереп, был донъя менән үтәлгән бурыс тойғоһон кисереп, шунан һуң ғына бәхилләшә. Йәншишмәнең һыуын һирпеп, уны бар тереклек, шул иҫәптән, үҙенән һуң килер быуындар йәшәрлек хәлгә килтереп китә. Тора хан заты иһә, ҡайҙа теләһә, шул ерҙе иркенләп биләй алған, аҙаҡ ерҙе талаусылар менән алыша башлаған («Кинйәкәй»). Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей — Сыңғыҙ хандан боронғо бабалары биләгән ергә ырыуының хоҡуғы һаҡланыуын раҫлаттыра («Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей»), Тәтегәс бей үҙенең тоғро яр-юлдаштары менән Ҡазанға барып, Аҡ бей батшанан Кубань яғына ҡасҡан нуғайҙарҙың биләмәләрен биләргә рөхсәт ала («Тәтегәс бей»), ә төрөкмән-ҡыпсаҡтар (Мең ырыуы) Волганың түбәнендәге ерҙәренән яҙа: уны батша башҡорттарҙан тартып алып, Урта Европанан күсерелгән немец колонистарына бирә («Заманалар ҡиссаһы»). «Һуңғы Һартай» эпосы элек тирә-йүндә дан тотҡан, хан баҫҡаҡтары менән иҫәпләшеп бармаған Ялыҡ бейҙең ахырҙа нәҫел ебе өҙөлөп, ғаиләһенән, еренән, иленән яҙып, байғош хәленә төшөүен бәйән итеп, ерһеҙҙе бына ни көтә, тип иҫкәрткәндәй була. Шул сюжетты ҡобайыр, поэма үлсәмдәренә күсергән вариант һәм версияларҙа ла был идеяға хилафлыҡ килтерелмәгән, киреһенсә, тәрәнәйтелә биргән. Бында беҙ уның «Джалык» (Роберт Паль), «Һуңғы Һартай» (Мәүлит Ямалетдинов), «Ялыҡ бей, Ҡармасан менән Сәрмәсән» (Әхмәт Сөләймәнов) тигән яҙма версияларын күҙ уңында тотабыҙ.

Шулай ҙа «ерһеҙ ҡалыу — илһеҙ ҡалыу» идеяһы айырыуса «Ек Мәргән» эпосында тетрәндергес итеп үткәрелә. Был иртәк шуныһы менән дә әһәмиәтле: ул бер үк идеяның бер үк әҫәрҙә ике яҡлы асылышына уңышлы миҫал. Шул үҙенсәлек әҫәрҙең үҙен дә, башҡа эпостарыбыҙ менән уртаҡ идеяһын да фәһемле итә. Әйткәнебеҙҙең асылы шулдыр ки. Туғыҙаҡ тигән әбейҙең ире лә, туғыҙ улы ла сит халыҡтарҙы талап көн күрә. Ундай саҡта илен, ерен, һыуын яттар баҫып алғанды шул илдең, ер-һыуҙың хужалары нисек кисереүен уларға аңламаҡ ҡайҙа ла белмәк ҡайҙа. Әммә яҙмыш уларға ла бирә бындай форсатты. Тик самаһыҙ мул бирә. Хатта илһеҙлек, ерһеҙ ҡалыу хисен татырға ла өлгөрмәй улар: төнөн баҫҡан яу бөтәһен дә хәл итә — ил дә, китә ҡулдан, ер ҙә, ике йәшлек бер генә бөртөк малайҙы иҫәпкә алмағанда, уларҙы ҡурсалар ир заты ла ҡалмай, бөтәһе лә ҡорбан була. Ере юктың — иле юҡ, иле юктың — ере юҡ; иле, ере булмағандың көн итерлек хәле юҡ. Шуның өҫтөнә теге ир баланы имеҙер инәһе лә ҡалмай — ил-йортҡа килгән фажиғә ҡайғыһынан ул да әхирәткә китә. Ата-әсәнән дә, иле-еренән дә етем ҡалған ир бала мауглиға әүерелә. Шулай ҙа, «Һуңғы Һартай» менән сағыштырғанда, «Ек Мәргән» иртәге оптимистик рухтараҡ. Төшөнә кергән атаһының кәңәше буйынса, ул унан ҡалған яу аты, яу ҡоралдарын ҡулына төшөрә. Халыҡ бына шулай унда генетик аңдың ууяныуына ишара яһай, уның ата юлын ҡыуасағына ышанысын белдерә.

Ер проблемаһы «Ҡуңыр буға» эпосында иһә тыуған ер ғәзизлеге юҫығында яҡтыртылыш ала. Уралдан әллә ҡайҙа, ер аяғы-ер башында ятҡан Каспий тарафтарына ҡыҙ артынан оҙатылған һыйыр ҡорһағында барып, яңы ерҙә тыуған Ҡуңыр буға шул ерҙе ерһенмәй, бөтә көтөүен эйәртеп, ата-әсәһе тыуған төйәккә ҡайта. Был осраҡта бары: «Малдың малы ят ерҙе ерһенмәгәс, әҙәм балаһына ни һан?!» — тип әйтергә генә ҡала. Әҫәр үҙе лә беҙҙең шул фекергә килеүебеҙҙе көҫәй.

Башҡорт еренең иркенлеге һәм ахырҙа юҡ-бар хаҡҡа һатылыуы, дөрөҫөрәге, «Заманалар ҡиссаһы»нда йәшермәй әйтелгәнсә, тартып алыныуы, хәкиҡәт булараҡ, «Түлле Мәмбәт» дастанында бөтә асылында асыла. Башҡорттоң ере шул тиклем иркен, хатта губернатор тиклем губернатор ҙа Мәмбәткә теләгән еренә нигеҙ ҡорорға рөхсәт итә. Ысынлап та, Мәмбәт тәүҙә Туҡ менән Соран ерҙәренә күҙ һала, унан — Эйек буйына, унан — Ирәндеккә... Ошо уҡ әҫәрҙә, аҙаҡ ер һатыу һөҙөмтәһендә, уның ҡәҙере китеүенә, тәбиғи байлығының тәләфләнеүенә үкенеү һәм әрнеү белдерелә. Халыҡтың, сынйырлы реакция (цепная реакция) һымаҡ, бер сәбәптең һөҙөмтәһе икенсеһе өсөн сәбәпкә әүерелеүе, уныһына — өсөнсөһө, өсөнсөһөнә — дүртенсеһе... тағылышыуына бәйле рәүештә, ғөмүмән, милләт яҙмышы хаҡында борсолоулы уй-фекерҙәре әйтелә. Был хис, был тойғо һәм фекер түбәндәге юлдарҙа ифрат та асыҡ сағылыш тапҡан: «Йәйләүҙең аҙағы 14-се, 15-се йылдарҙа бөттө. Иң башта ауылда башҡорттоң ере бөттө. Ере бөткәс, малы бөттө. Малы бөткәс, башҡорттоң йәне ярты: дәрәжәһе кәмене, бөттө. «Ере байҙың — иле бай» тигән һүҙ — хаҡ һүҙ. Күрҙек. Фәкир дир:

Ер һатмағыҙ, башҡорттар,
Ерҙәй дәүләт һис тә юҡ.

Һәммә мәғдән ерҙән сыға —
Ерҙең ҡәҙере беҙҙә юҡ.

Был проблема — бөгөн дә актуаль. Тимәк, һүҙ барған дастандарыбыҙ ҙа актуаль.

* * *

Билдәле кимәлдә яҙыу мәҙәниәтенең, әҙәби ижад традицияларының йоғонтоһо ярылып ятыуына ҡарамаҫтан, ғөмүмән алғанда, яҙма эпостар донъя халыҡтары мәҙәниәтендә мөһим урын алып тора. Гректың «Илиада»һы менән «Одиссея»һы, фин һәм карелдарҙың «Калевала»һы менән ярышыуға дәғүә итмәһәләр ҙә, беҙҙең яҙма ҡисса һәм дастандарыбыҙ ҙа башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары донъяһында үҙ урынына эйә. Сөнки, ҡарап үтелгәненсә, улар ҙа бөтөнләй буш урында барлыҡҡа килмәгән, ә заманында халыҡтың һүҙ оҫталарының теленән төшмәгән эпостарына, ҡобайыр, риүәйәт һәм легендаларына хас сюжеттарға, мотивтарға, образдарға таяна, шулар үҙ иткән поэтик сараларҙы, алымдарҙы файҙалана. Килер заман, әле һеҙ танышып сыҡҡан әҫәрҙәрҙе яңынан эшкәртеп, тағы ла камилыраҡ версияларын, шул версияларҙың яңы варианттарын ижад итерҙәр. Минәй батыр менән Ялыҡ бей образына, улар хаҡындағы сюжетҡа ҡайта-ҡайта тотоноусылар булыуы үҙе үк был өмөттәрҙең ҡасанда ла аҡланырына ышаныс тыуҙыра.

Шулай итеп, беҙ һеҙҙең менән яҙма ҡисса һәм дастандар донъяһына бер байҡау яһап сыҡтыҡ. Был томға ингән әҫәрҙәр менән таныша килә, һеҙ үҙегеҙҙе, Орхон-Йәнәсәй яҙмаларының Күлтәгингә бағышланған «Оло яҙма» тигәнең инешендә әйтелгәненсә,

> «Үзә Көк тәңри,
> Асра яғуз еир ҡулунтуҡда,
> Әкин ара киши оғлу ҡулунмуш», —

йәғни «өҫтә Күк, аҫта ҡара Ер (бәлки, Ер-һыу күҙ уңында тотолған булғандыр әле ул) яралғанда, шул икәү араһында әҙәм балалары бар ҡылынмыш» замандан, Иблис ҡотҡоһона бирелеп, Хаҡ тәғәләнең һүҙен тотмаған атабыҙ Әҙәм менән Инәбеҙ Һауаның йәннәттән ҡыуылыу дәүеренән — боронғонан да боронғо, мифик дәүерҙәрҙән башлап, әле генә үҙебеҙ берсә ҡарғыш, берсә һағыш менән оҙатҡан XX быуатҡа ҡарай сәйәхәт иткәндәй булғанһығыҙҙыр, моғайын. Ҡолағығыҙ төбөндә, изге «Ҡөрьән»гә ауаздаш нәсихәттәр менән бер рәттән, ҡәрҙәш ҡәүемдәрҙең бер төптән булмауҙары арҡаһында, уларҙың һәләкәттәргә дусар ителеүе хаҡында төрки бабаһы Күлтәгин әйткән үкенесле һүҙҙәре яңғырағандай булғандыр, халҡыбыҙ ҡылыслы, ҡамсылы Сыңғыҙ хан, Аҡһаҡ әмир Тимер заманын нисек кисереүе, ырыу-ара ыҙғыштар, барымта-ҡарымталар хаҡында уҡығанда, уның шул һүҙҙәренең әүлиә күрәҙәлеге булыуына, ә инде «Тәтегәс бей», «Түлле Мәмбәт», «Сура батыр», «Кинйәкәй» ише әҫәрҙәр яҡын тарих, тарихи яңы заман, башҡорт халҡының, Башҡортостандың бөгөнгө ысынбарлығы менән мөнәсәбәтле икәненә төшөнгәнһегеҙҙер.

*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,*
*Миңлегәли НӘҘЕРҒОЛОВ, Флүр СИБӘҒӘТОВ*



# АҢЛАТМАЛАР

## Шартлы ҡыҫҡартмалар

А. А. — Андреев Н. П. Указатель сказочных сюжетов по системе Ларне. — Л.,1929.

АТ — The Types of the Folktale. A.Classification and Bibliography Anti Aarne's Verzeichnis der Marchentypen (FFC 3). Translated and Enlarged by S. Thompson. — Helsinki, 1961 (FFC 184).

Башкирские шежере — Башкирские шежере/Сост., пер. текстов, введение и коммент. Р. Г. Кузеева. — Уфа: БКИ, 1960.

Башҡорт шиғриәте антологияһы — Башҡорт шиғриәте антологияһы/Төҙ. Р. Бикбаев, Ғ. Хөсәйенов, М. Нәҙерғолов, И. Кинйәбулатов, Ф. Әхмәтова; Сығарылыш өсөн яуаплы Ғ. Ғәлимова. — Өфө: Китап, 2001.

Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. 1-се том. — Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Ике томда. 1-се том: XIII—XVIII быуаттар/Төҙ., баш һүҙ авт. М. Нәҙерғолов, Ғ. Хөсәйенов; Яуаплы мөхәрр. Ғ. Хөсәйенов. — Өфө: Китап, 1996.

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 1-се том.— Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 1-се том: Урта быуаттар осоро/Яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. — Өфө: БКН, 1990.

БКИ — Башкирское книжное издательство.

БКН — Башҡортостан китап нәшриәте.

БНТ. Т.2. ПЛ — Башкирское народное творчество. Т.2. Предания и легенды/ Сост., авт. вступит. ст. и коммент. Ф. А. Надршина; Отв.ред. Л. Г. Бараг. — Уфа: БКИ, 1987.

БРЛ. Т.1. — Башкирия в русской литературе. Т.1/Сост., предисл., коммент. и библиогр. М. Г. Рахимкулова. — Уфа: БКИ, 1989.

БХИ. 2-се том, 1959 — Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том/Төҙ., ред., баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр Ә. И. Харисовтыҡы. — Өфө: БКН, 1959.

БХИ: Эпос. 3-сө кит. — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. 3-сө китап/Төҙ., инеш мәҡ. һәм аңлатмалар авт. Н. Т. Зарипов; яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. — Өфө: БКН, 1981.

БХИ: 2-се том. РЛ — Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том. Риүәйәттәр, легендалар/Төҙ., инеш мәҡ. һәм аңлатмалар авт. Ф. А. Нәҙершина; Яуаплы мөхәрр. Кирәй Мәргән, Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө: Китап, 1996.

БХИ. 3-сө том. Эпос — башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том. Эпос/Төҙ. Ә. М. Сөләймәнов; Инеш мәҡ. М. М. Сәғитовтыҡы; Һүҙ ахыры Ә. М. Сөләймәнов менән Р. Ф. Рәжәповтыҡы; Аңлатмалар һәм һүҙлек М. М. Сәғитов менән Ә. М. Сөләймәновтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. — Өфө: Китап, 1994.

БХИ. 4-се том. Эпос — Башҡорт халыҡ ижады. 4-се том. Эпос/Материал һайлаусылар, төҙөүселәр, аңлатма биреүселәр М. М. Сәғитов, Б. С. Байымов; Инеш мәҡ. авт. М. М. Сәғитов, Б. С. Байымов, С. Ә. Галин; Яуаплы мөхәрр. Ә. И. Харисов, С. Ә. Галин. — Өфө: Китап, 1999.

БХИ. 5-се том. — Башҡорт халыҡ ижады. 5-се том. Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (Иртәктәр)/Төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар һәм һүҙлектең авт. Н. Т. Зарипов; Яуаплы мөхәрр. З. Ғ. Ураҡсин. — Өфө: Китап, 2000.

БӘФК ФФ, һаҡл. бер. — башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһының фольклор фонды, һаҡланыу берәмеге.

Ғ. — ғәрәп һүҙе.

ҒА — Рәсәй фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге ғилми архивы.

ед.хр. — единица хранения.

рус. — рус һүҙе.

оп. — опись.

СУС — Сравнительный указатель сюжетов: Восточно-славянская сказка/ Сост. Л. Г. Бараг, И. П. Березовский, К. П. Кабашников, Н. В. Новиков. — Л.: Наука, 1979.

т. — боронғо төрки һүҙе.

ТКН — Татарстан китап нәшрияты.

ТХИ: Дастаннар — Татар халыҡ ижаты: Дастаннар/Томны төз., кереш мәк. һәм искәрмәләрне язучы Ф. М. Әхмәтова; Фәнни ред. М. Г. Госманов. — Казан: ТКН, 1984.

ф. — фонд.

фарсы — фарсы теленән ингән һүҙ.

һөйл. — һөйләш.

## 1. ӘҘӘМ ВӘ ИБЛИС

Ватандаш. — 1999. — №4. — 86—95-се б.

Башҡортостандың иң тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың «Әҫәрҙәр» күп томлыҡтары башҡорт һәм татар телдәрендә бер нисә тапҡыр тулы ғына баҫтырып сығарылһалар ҙа, уның бай әҙәби мираҫынан байтаҡ ҡына әҫәрҙәре, илебеҙҙә атеистик ҡараштар хөкөм һөргән осорҙарҙа, бигерәк тә дини йөкмәткеле, рухани тәбиғәтле поэзия өлгөләре уларға инмәй йә индерелмәй ҡалды.

Әле тәҡдим ителгән «Әҙәм вә Иблис» ҡиссаһы 1910 йылда Өфөлә шул исемдә айырым китап булып донъя күргән. Ул ҡиссаның яҙылыуына тотош быуат булып килһә лә, әҫәрҙең актуаллеге хәҙерге көндәр өсөн дә тамсы ла кәмемәгән. «Тәүрәт», «Инжил», «Ҡөрьән» китаптарында урын алған дини легенда сюжеттарын, Әҙәмдең тәү гонаһ эшләү, әҙәм балаларының тәүләп кеше үлтереү, Иблистың яуызлығы, нәфсе аҙыу, иблислыҡ мотивтарын авторҙың үҙенсә тасуирлауы һәм поэтик аңлатмалары әле лә фәһемле.

Тексты хәҙерге графикаға транскрипциялауҙы һәм хәҙерге әҙәби телгә күсереү эшен академик Ғайса Хөсәйенов атҡарҙы.

[1] *7: 52—54* — тәүге һан — «Ҡөрьән Кәрим» сүрәһенең рәт һаны, икенсеһе, өсөнсөһө — аяттарҙыҡы.

[2] «Ҡабил менән Һабил» ҡиссаһының тулы тексын башҡорт теленә Төрөк Республикаһының Сельчук университетында (Конья ҡалаһы) белем алыусы Эбйәлил районы Байым ауылы егете Айгиз Ғабдуллин ауҙарҙы. Был текст беренсе тапҡыр «Ватандаш» журналында баҫылғайны.

## ҠАБИЛ МЕНӘН ҺАБИЛ

*(Беренсе үлтерелгән кеше)*

Әҙәм менән Һауа йәннәттә ҡотло бер ғүмер йәшәйҙәр, арыу һәм ҡурҡыу тигән нәмәне белмәйҙәр ине. Ләкин Алланың әмеренә ҡаршы килгәндәре өсөн Тәңре уларҙы ер йөҙөнә төшөрҙө. Ер йөҙө бейек ағастар һәм үләндәр менән ҡапланған, текә ҡаялар һәм ҡурҡыныс тауҙар менән тулы. Бөтә ерҙә йыртҡыс хайуандарҙың, арыҫландарҙың, филдәрҙең һәм башҡа бик күп йыртҡыс ҡоштарҙың йәшәгәндәрен күрҙеләр. Был вәхши хайуандар үҙҙәрен тотоп ашамаһындар өсөн бейек бер мәмерйәгә һыйындылар. Асыҡҡан ваҡытта йәннәттәге һымаҡ аҙыҡты яҡын-тирәлә таба алманылар, ризыҡты урман, ағастар араһында йөрөп эҙләргә тура килә ине.

Хәҙер инде ашарға табыр өсөн арығансы эшләргә һәм тир түгергә кәрәк. Һауа ла уға ярҙам итешә һәм ауыр эштәрен уртаҡлаша башланы, Һауа ауырға ҡалып бер ул тыуҙырҙы. Уға Ҡабил тигән исем бирҙеләр. Хәҙрәт Әҙәм балаһы тыуыуына бик ныҡ шатланды. Ләкин Һауа хәҙер уға эштә ярҙам итә алмай ине. Уның хәҙер башҡа хәстәре бар — бала ҡарай.

Әҙәм бер үҙе сығып көнө буйы ашарға йүнләй, кис булыу менән мәмерйәгә кире ҡайта, улы менән уйнай, үҙе шат һәм мотло.

Бер йылдан Һауа йәнә ауырға ҡалып бер ул тапты. Быныһына Һабил исемен бирҙеләр. Хәҙрәт Әҙәм ғаиләһе өсөн аҙыҡ-түлек табып килтереүен дауам итте. Йылдар һаман үтә тора, Һауа балалар таба. Йыл һайын ишәйә барған ғаиләне туйындырыр өсөн Хәҙрәт Әҙәм бер үҙе эшләй.

Ҡабил менән Һабил ҙурайҙылар. Икеһе лә йәш егет булдылар. Хәҙер инде уйын уйнауҙарын ташлап, ҙур ғаиләгә ризыҡ әҙерләүҙә һәм йыртҡыс хайуандарҙан һаҡланыуҙа аталары Хәҙрәт Әҙәмгә ярҙам итә башланылар.

Ҡабил Һабилдан ҙурыраҡ, әммә Һабил ағаһынан көслөрәк, йомшаҡ күңелле һәм яҡшы кеше ине. Хайуандарҙы бик яратты һәм уларҙы һыйлауҙан ләззәт тапты. Артабан Хәҙрәт Әҙәм был ике улдары араһында эш бүлеп бирергә теләне. Ҡабилға баҫыу эштәрен ҡушты, сөнки ул ҡаты бәғерле һәм ҡомһоҙ ине. Ерҙең иһә шәфҡәткә, йомшаҡ күңелгә әллә ни ихтыяжы юҡ тип, был эште уға тапшырҙы. Мал йәнле Һабилға иһә һарыҡ һәм һыйырҙарын көтөргә ҡушты. Был эш уның үҙенә лә оҡшай ине.

Таң атып ҡояш тыуғас, Ҡабил емеш-еләк йыйырға, Һабил ваҡ малдарын көтөргә китә, Хәҙрәт Әҙәм ҡоштарҙы тотоп ашата, мәмерйәгә һыу ташый, Һауа иһә һыу менән балаларын йыуындыра. Ирҙәр кис еткәс мәмерйәгә ҡайта, Ҡабил емеш-еләк, Һабил һөт килтерә. Хәҙрәт Әҙәм дә аулаған ҡоштарын алып мәмерйәгә ҡайта. Ашамлыҡтар уртаға ҡуйыла һәм бөтә ғаилә ризыҡҡа йәбешә.

Аллаһ Әҙәмдең һәм балаларының ризыҡтарын арттырған ине, был ниғмәттәрҙе арттырған өсөн Хәҙрәт Әҙәм Бөйөк Аллаға Һабил менән Ҡабилға нисек шөкөрана ҡылыуҙы өйрәтергә теләне. Улдарына тауҙың төбәһенә менергә һәм тапҡан ризыҡтарының бер өлөшөн хайуандар ашаһын өсөн шунда ҡалдырып китергә ҡушты. Ҡалдырып китәсәк ризыҡ Аллаһ өсөн ҡорбан һәм саҙаҡаһы буласаҡ.

Йомшаҡ күңелле Һабил был һүҙгә бик ҡыуанды. Ә Ҡабилдың күңеле был эшкә хуш килмәне. «Ҡыйынлыҡ менән ҡаҙанған байлығымды ниңә бер тауҙың башына ташлап китергә тейешмен», — тип уйланы, шулай ҙа атаһына ҡаршы төшә алманы.

Һабил шунда уҡ һарыҡтарының янына китте. Малдарын ҡарап сыҡты, иң һәйбәтен, иң һимеҙен һайлап алды ла ҡорбан итеп салды. Үҙҙәренә ошо хәтле ашамлыҡ, эсемлекте биргән Аллаға шөкөрана ҡылып йөрәге шатлыҡ менән тулды.

Ҡабил иһә бик көйһөҙ йөрөнө, емеш-еләктәренең иң насарҙарын, серегәндәрен айырып килтерҙе. Уның күңеле лә бүләге һымаҡ боҙоҡ һәм насар ине.

Икенсе көнө бүләктәренең ҡабул булыу-булмауын күрер өсөн аталары Әҙәм менән былар тау башына китте. Һабил бүләген таба алмағас, Аллаһы тәғәләнең уны ҡабул иткәнен аңланы. Ҡабил иһә ҡуйып киткән серек емеш-еләктәренең шул килеш ятҡанын күрҙе. Бүләге ҡабул ҡылынмаған булып сыҡты.

Һабил шатланып Аллаға шөкөрана ҡыла, ә Ҡабил иһә асыулана, ҡустыһынан көнләшә ине. Аптырағас атаһына ошолай тине:

— Һин Һабилға доға әйткәйнең, шуға Аллаһ уның бүләген ҡабул итте. Миңә доға әйтмәнең. Мине яратмайһың.

Хәҙрәт Әҙәм:

— Улым, — тине, — Аллаһ Һабилдың бүләген ҡабул итте, сөнки ул ысын күңелдән байлығының иң яҡшыһын тәҡдим итте. Ә һин иһә, байлығыңдың иң насарын һонғаның өсөн Аллаһ бүләгеңде ҡабул итмәгән.

Һабил килде. Ҡабил иһә асыулы ҡараш менән уға ҡараны, йөрәге тулы нәфрәт менән уның артынан атланы. Күңеле бик төшкәйне, сөнки Аллаһ ҡустыһын ағаһынан өҫтөн ҡуйҙы. Шулай ҙа Ҡабил үҙен ғәйепле һанамай, бөтә яуызлыҡты Һабилға япһара ине.

Шул саҡ Шайтан килеп Ҡабилдың ҡолағына шыбырланы:

— Ниңә тик тораһың? Ҡустыңды үлтер, Һабилды үлтер!

Ҡабил башын күтәреп ҡараны, Һабил һуҡмаҡ буйлап китеп бара, был уның артынан төштө. Шайтан да уның эргәһендә, ҡотортоп бара: «Үлтер, үлтер!»

Ҡабил ҡустыһын ҡыуып етте лә:

— Туҡта! Мин хәҙер һине үлтерәм! — тип ҡысҡырҙы.

Һабил аптыраны:

— Мине ниңә үлтерәһең?!

Ҡабил асыу менән тештәрен шығырлатты:

— Сөнки атайым һине ныҡыраҡ ярата. Аллаһы тәғәлә һинең бүләгеңде ҡабул итте.

Һабил йомшаҡ ҡына тауыш менән:

— Мине үлтереүең менән бер нәмә лә үҙгәрмәҫ, мине үлтерһәң, атайым һине бөтөнләй яратмаҫ. Алланың да асыуы артыр, һине ғәфү итмәҫ.

Әммә Ҡабил бер ниндәй өгөтләүҙәргә лә килмәй, уның күңелен асыу һәм көнсөллөк яулап алған. Ул яһилланып ҡустыһының муйынынан быуа башланы:

— Һине үлтермәһәм, рәхәт күрә алмам, һине үлтерәсәкмен! — тип ҡысҡырҙы.

Һабил ағаһына былай яуап бирҙе:

— Әгәр мине үлтерһәң, бөтөнләй рәхәтлек күрә алмаясаҡһың, һин мине үлтереү өсөн ҡулыңды һуҙһаң да, мин һинән көслөрәк булыуыма ҡарамаҫтан, һине үлтерәм тип ҡулымды һуҙмаясаҡмын. Бөтә ғаләмдең раббыһы булған Алланан ҡурҡам.

Һабил яйлап атлап китте. Ҡабил башын эйгән килеш тора, күңелендә һаман ҡустыһына ҡарата нәфрәт тойғолары уйнай. Үҙе һаман да:

— Уны үлтерәсәкмен!— тип ҡабатлай.

Ҡабил моңһоу кәйеф менән мәмерйәгә ҡайтты, йоҡларға ятты, ләкин йоҡлай алманы, булғандарҙы уйланы. Ә Шайтан һаман ҡолағына шыбырлай:

— Һабилдан ҡотолоу өсөн уны үлтер! Һабилды үлтер, Һабилды үлтер!

Таң атыу менән Ҡабил мәмерйәнән сыҡты, ҡустыһын үлтерергә тигән ныҡлы ҡарарға килде.

Ә Һабил һарыҡтары янына киткән, ҡыуаныс менән мал көтөп йөрөй.

Ҡабил баҫыуға орлоҡ сәсергә тип килде. Ҡустыһын тыныс һәм ҡыуаныслы кәйефтә күреп асыуы артты. Ә шайтан һаман:

— Уны үлтер ҙә ҡотол, — тип бышылдай.

Ҡабил тирә-яғына ҡаранды һәм ҙур бер таш күрҙе. Шуны алды ла ҡустыһына ҡарай атланы, ташты күтәреп уның башына һуҡты. Һабил ергә йығылды ла үлде. Ошолай итеп ер йөҙөндә беренсе енәйәт эшләнде һәм беренсе ҡан тупраҡҡа аҡты.

Ҡабил аңына килде. Ҡустыһының ҡан эсендә ятҡанын күреп үкенергә тотондо. Бик насар эш ҡылғанын аңланы. Ҡустыһы һәйбәт ине, гел яҡшылыҡ эшләй ине. Ә Ҡабил иһә насар холоҡло һәм боҙоҡлоҡ эшләне, үҙе быны аңларға теләмәне, ҡустыһынан көнләште, уны үлтерҙе. Бик яман эш ҡылды. Хәҙер нимә эшләр инде?! Ҡустыһын үлтереп үҙенә ниндәй файҙа булды? Ҡабил ҡурҡа, үкенә, ҡайғыра башланы. Тыныслығы ҡасты, ышанысы юғалды, хәсрәткә төштө. Ыжғырған ел, шундағы ағастар, вәхши хайуандар яғындағы һәр нәмә бер ауыҙҙан: — Һин кеше үлтереүсе! Һин кеше үлтереүсе! — тип ҡысҡырғандай ине.

Әллә ниндәй тауыштар яңғырай, Ҡабилдың ҡолаҡтарын сеңләтә: — Үлтереүсе... Үлтереүсе...

Ҡабил ҡурҡыуынан ҡалтырай, аяҡтарында көс-ҡеүәт ҡалмаған, ҡустыһының янына йығылды ла, уны һелкетергә тотондо: — Һабил, Һабил! Тор!

Һабил тауышһыҙ-йәнһеҙ ята, күптән үлгән. Хәҙер нимә эшләргә инде? Ҡайҙа ҡуясаҡ был мәйетте? Ҡустыһының кәүҙәһен йыртҡыс ҡоштарға, хайуандарға ҡалдырасаҡмы? Юҡ, былай булмаҫ!

Ҡустыһының үле кәүҙәһен алып китеү аҡылына килде. Мәйетте йөкмәне лә китте, арығансы атланы. Бик арығас мәйетте ергә ҡуйҙы. Баш осона ултырып, ҡайғылы төҫ менән уға ҡарап ултырҙы. «Ниңә уны үлтерҙем икән?» — тип илай башланы.

Әҙерәк ял итеп алғас ҡустыһын йәнә йөкмәп алды. Шулай йөрөй ҙә йөрөй, мәйетте нимә эшләтергә лә белмәй. Бына тағын арып ял итергә ултырҙы. Шул саҡ бер ҡарға күҙенә салынды, был ҡоштоң янында тағы бер үлгән ҡарға бар. Ҡабил шуларҙы күҙәтә башланы. Ҡош суҡышы, тырнаҡтары менән ҙур ғына соҡор ҡаҙҙы, ҡарға емтеген, шул соҡорға төшөрөп, өҫтөн тупраҡ менән күмде.

Ҡабил үҙ-үҙенә:

— Йә, бер ҡарға хәтле лә була алманым, — тине. Шунда уҡ бер соҡор ҡаҙып, мәйетте күмде. Йәне бер аҙ тынысланғандай итте.

Был ваҡытта Хәҙрәт Әҙәм, балаларының юҡлығына аптырап, уларҙы эҙләргә сыҡҡайны. Ҡабил атаһын күргәс ҡурҡыуға төшә, был енәйәтен атаһының ғәфү итмәйәсәген уйлап, ҡаса башланы. Хәҙрәт Әҙәм улының ҡасып барғанын күреп аптырауға төштө. Тирә-яғына ҡарап Һабилдың ҡанын күрҙе. Ҡабилдың Һабилды үлтергәнен аңланы. Күҙенән йәштәр тамды.

— Ҡабил! Ҡустыңды нимә эшләттең? — тип ҡысҡырып, артынан йүгерә башланы. Үҙе шул хәтлем ярһығайны, Ҡабилға бөтә донъя ҡысҡыра кеүек тойолдо.

Ҡабил тау итәгенә төшөп ҡасыуын дауам итте.

Атаһы һаман да ҡысҡыра:

— Ҡабил! Һис бер ваҡыт рәхәт йөҙө күрмәйәсәкһең! Һин үҙеңә ҡурҡыу ишектәрен астың! Кит! Гел ҡурҡыу эсендә, күргәндәреңә ышанмай йәшә!

Атаһының бәддоғаһын алған Ҡабилға ғүмер зиндан кеүек булды, ҡарғыш төшкән һәм бер кемгә лә кәрәкһеҙ кеше булып йәшәргә дусар булды.

Ҡөрьән Кәримдән ҡиссаға бәйле өлгөләр: беренсе һан — сүрәне, икенсеһе аятты аңлата. Сүрә һәм аяттар 1993 йылда Өфөлә башҡортса сыҡҡан нөсхә буйынса һүҙ ахырында телгә алынған тәртиптә бирелә.

7:52. Бына Беҙ уларға китап килтерҙек, уны белем менән, иман килтергән кешеләргә тура юл һәм рәхмәт итеп аңлаттыҡ.

7:53. Уны аңлатыуҙан башҡа тағы нимә булһа ла көтәләрме ни улар? Уны элек онотҡан кешеләр уның аңлатыуы килгән көндә. «Раббыбыҙҙың рәсүлдәре хаҡлыҡ менән килде. Беҙҙе яҡларҙай яҡлаусыларыбыҙ бармы һуң? Йәки беҙ ҡайтарылырбыҙмы һәм эшләгән эштәребеҙҙән башҡаны эшләрбеҙме?» — тип әйттеләр. Улар үҙ-үҙҙәренә зыян килтерҙе, һәм уларҙың ялған рәүештә уйлап сығарғандары уларҙан юғалды!

7:54. Ысынлап та, Раббығыҙ — Алла! Ул күктәрҙе һәм Ерҙе алты көндә яратты һәм шунан тәхеткә урынлашты. Ул төндөң артынан ашығыусы көндө төн менән ҡаплай. Һәм Уның әмеренә буйһоноусы Ҡояшты, һәм Айҙы, һәм йондоҙҙарҙы. Яратыу һәм хакимлыҡ Уның ҡулында түгелме ни? Алла — ғаләмдәрҙең Раббыһы — мөбәрәк!

* * *

25:59. Күктәрҙе һәм Ерҙе, һәм улар араһындағы нәмәләрҙе алты көндә барлыҡҡа килтереүсе, унан һуң тәхеттә ултырыусы — Әр-Рәхман, — Уның тураһында хәбәрҙарҙан һора!

25:60. Һәм уларға: «Әр-Рәхманға сәждә ҡылығыҙ!» — тип әйтелһә, улар: «Нимә ул Әр-Рәхман? Нишләп беҙ һин ҡушҡан нәмәгә сәждә ҡылайыҡ әле?» — тиҙәр. Һәм был уларҙың [иманға] нәфрәттәрен генә арттыра.

* * *

50:37. Был, ысынлап та, йөрәге бар йәки ҡолаҡ һалып тыңлап тороусы кеше өсөн иҫкә төшөрөү.

50:38. Һәм Беҙ алты көн эсендә Күктәрҙе һәм Ерҙе, улар араһындағы нәмәләрҙе барлыҡҡа килтерҙек, һәм Беҙгә арыу-талыу теймәне.

* * *

2:30. Һәм бына Раббың фәрештәләргә: «Мин Ер йөҙөндә Үҙемдең урынбаҫарымды булдырасаҡмын», — тине. Улар «Һин әллә унда боҙоҡлоҡ ҡылыу-

сыны һәм ҡан түгеүсене булдырмаҡсы булаһыңмы? Ә беҙ Һине маҡтайбыҙ, Һине изге тибеҙ», — тинеләр. Ул: «Ысынлап та, Мин һеҙ белмәгән нәмәләрҙе беләм!» — тине.

2:31. Һәм Ул Әҙәмгә барлыҡ исемдәрҙе өйрәтте һәм уларҙы фәрештәләр алдына ҡуйып: «Әгәр хаҡ һүҙле булһағыҙ, быны быларҙың исемдәрен Миңә әйтеп бирегеҙ әле!» — тип мөрәжәғәт итте.

2.32. Улар: «Дан һиңә! Беҙ бит ни бары Һин өйрәткәнде генә беләбеҙ. Ысынлап та, Һин беләһең, Һин хикмәтле!» — тинеләр.

2:33. Ул: «Эй, әҙәм! Шуларҙың исемдәрен уларға әйтеп бир!» — тине. Уларҙың исемдәрен әйтеп биргәс, Ул: «Мин һеҙгә Ерҙәге һәм күктәрҙәге ғәйеп нәмәләрҙе лә беләм, һеҙҙең асыҡ ҡылған һәм йәшергәндәрегеҙҙе лә беләм тип әйтмәнемме ни?» — тине.

2:34. Һәм бына Беҙ фәрештәләргә: «Әҙәмгә сәждә ҡылығыҙ!» — тип әйттек. Иблистән башҡаһы сәждә ҡылды. Ул ҡарышты, тәкәбберләнде һәм кафырҙарҙан булды.

2:35. Һәм Беҙ: «Эй, Әҙәм, һин дә, хәләлең дә йәннәттә торорғоҙ. Теләгән ерҙә рәхәтләнеп ашағыҙ. Ләкин, залимдарҙан булмау өсөн, бына был ағасҡа яҡын килмәгеҙ!» — тинек.

2:36. Ә шайтан уларҙы уға [ағасҡа] һөрөндөрҙө һәм уларҙы торған ерҙәренән сығарҙы. Һәм Беҙ: «Бер-берегеҙгә дошман булып, һөрөлөп китегеҙ! Һеҙгә урын һәм ваҡытына тиклем файҙаланыу [әйберҙәре] — Ер йөҙөндә», — тинек.

2:37. Һәм Әҙәм Раббыһынан — һүҙҙәр, ә Ул тәүбәһен ҡабул итте. Ысынлап та, Ул рәхимле, тәүбәләрҙе ҡабул итеүсе.

2:38. Беҙ: «Барығыҙ, унан бергә һөрөлөп китегеҙ! Әгәр һеҙгә минән Ҡулланма килһә, Минең Ҡулланмама эйәрең, шуға ҡурҡыныс та юҡ, ҡайғы-хәсрәт тә булмаҫ», — тинек.

20:116. Һәм Беҙ фәрештәләргә: «Әҙәмгә сәждә ҡылығыҙ!» — тинек. Иблистән башҡалары сәждә ҡылды, ә ул ҡарышты.

20:117. Һәм Беҙ әйттек: «Эй, Әҙәм! Был — һинең ҡатыныңдың дошманы, һеҙҙе ул ожмахтан сығара күрмәһен, ул ваҡытта бәхетһеҙ булырһығыҙ.

20:118. Унда һин асыҡмаҫһың да, яланғас та булмаҫһың.

* * *

20:119. Һәм унда һыуһамаҫһың да эҫенән дә яфаланмаҫһың».

20:120. Шайтан уны үәсүәсәләне һәм: «Эй, Әҙәм, мәңгелек ағасына һәм бөтмәй торған батшалыҡҡа күрһәтмәҫкәме икән һиңә?» — тине.

20:121. Улар икеһе лә шунан ашанылар һәм улар алдында оят ерҙәре күренде, һәм улар ожмах япраҡтарын үҙҙәренең оят ерҙәренә йәбештерә башланылар, һәм Әҙәм Раббыһын тыңламаны, һәм юлдан яҙҙы.

20:122. Бынан һуң Раббыһы уны һыйланы, кисерҙе һәм тура юлға күндерҙе.

* * *

15:28. Бына Раббың фәрештәләргә әйтте «Мин яңғырап торғандан һүрәткә килтерелгән балсыҡтан кеше яһайым,

15:29. ә Мин уны тигеҙләгәс һәм Үҙемдең, рухымдан өргәс, уға сәждә ҡылып, йөҙ түбән йығылығыҙ!»

15:30. Һәм фәрештәләр барыһы ла сәждә ҡылды,

15:31. Иблистән башҡа. Ул сәждә ҡылыусылар менән булыуҙан баш тартты.

15:32. Ул: «Эй, Иблис! Нимә булды һиңә, сәждә ҡылыусылар менән бергә булманың?» — тине.

15:33. Ул: «Һин яңғырап торғандан, һүрәткә килтерелгән балсыҡтан яратҡан кешегә мин сәждә ҡылыусы булмаясаҡмын», — тине.

## 2. МИНӘЙ БАТЫР МЕНӘН ШҮЛГӘН БАТША

2001 йылдың йәйендә «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосын Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор һәм сәнғәт бүлеге мөдире Әхмәт Сөләймәновҡа Әбйәлил районы Асҡар ауылы Марсель Мөғәлләм улы Мирхәйҙәров тапшырҙы. Был эпик әҫәрҙе, яҙманың ҡап уртаһындағы яҙыуға ҡарағанда, 1961 йылда танылған сәсән Мөғәлләм Мирхәйҙәров (1900—19..) ҡағыҙға теркәгән булған. Был эште ул Кирәй Мәргәндең (1912—1984) кәңәше буйынса атҡарған. 1963 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетындағы башҡорт-рус бүлеге башҡорт әҙәбиәте кафедраһы (мөдире доцент Хәнифә Шәкүр ҡыҙы Зиннәтуллина), фольклор һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы доцент Марат Хәләф улы Минһажетдиновтың (1934—1972) инициативаһы менән Әбйәлил районына минең етәкселектә студенттарҙың бер айлыҡ ғилми фольклор экспедицияһын ойошторғайны. Унда Вафа Әхмәҙиев, Биктимер Шәрипов һәм Нафиҡ Хәмитовтар ҡатнашҡайны. Район үҙәгендә йөрөгәндә, беҙ Мөғәлләм сәсәнгә инеп фатиха алырға булдыҡ. Сәсән беҙҙе ҡунаҡ итте. Көн яҡтыһында барғайныҡ, унан төн уртаһында ғына киттек. Ана шул осрашыу ваҡытында ул беҙҙән аҙаҡ ете йыл үткәс шағир Рәшит Шәкүр яҙып алған «Куңыр буға» эпосының бер версияһы менән таныштырып: «Әле быны камиллаштыраһы бар», — тигәйне. Шуға күрә ул һөйләр ерен һөйләп, көйләр ерен көйләп, һамаҡларын һамаҡлап ҡына башҡарған был әҫәрҙе яҙып алып торманыҡ. Мәғлүм эпостың был версияһының бер нисә вариантын төҙөгән ине сәсән. Аҙаҡ 1993 йылдың йәйендә Асҡарға юл төшкәндә, сәсәндең архивы менән (ул уның кесе улы, район дауаханаһы врачы Марсель Мирхәйҙәровта һаҡлана) танышыу бәхете тейҙе. Ундағы яҙмалар араһында шул варианттар әле лә һаҡлана. Бынан тыш сәсәндең байтаҡ яҙмалары Ғилми архивта ла бар. 1993 йылдағы осрашыу ваҡытында Мөғәлләм сәсән «Куңыр буға» эпосының төп геройының — Минәй батырҙың биографияһын тулыраҡ күҙаллатмалы йәнә бер сюжет белеүен дә әйткәйне. Марсель уҙаман беҙгә тапшырған яҙма ана шул әҫәрҙең үҙе булып сыҡты.

Йәмғеһе илле биттән ашыу яҙманың бер өлөшө «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосының (8 битлек итеп) ҡыҫҡартылған вариантынан ғибәрәт ине. Ҡайһы бер ваҡ деталдәрендәге айырмалыҡтарына ҡарамаҫтан, был варианттың йөкмәткеһе тулы вариантыныҡы менән тап килә. Айырым урындарында хатта һүҙмә-һүҙ ҡабатлауҙар ҙа бар. Китап өсөн әҙерләгәндә шуға ла икенсе вариант беренсеһен тулыландырыу өсөн файҙаланылды.

Шуныһын да әйтергә кәрәк, сәсән үҙе үк «40-сы табаҡ» тип билдәләгән биткә ҡулдан: «Ошо ерҙән икенсе варианты бар. Был (йәғни быға тиклемге биттәрҙең артабанғы өлөшө. — *Ә. С.*) — беренсе», — тип иҫкәрмә яһап киткән. «Икенсе вариант» тигәненең һуңғы битендә лә иҫкәрмәләр бар. Тап шунда сәсән үҙенең ҡулы менән был эпик ҡомартҡының ҡағыҙға төшөрөлөүенә Кирәй Мәргәндең сәбәпсе булыуын әйтә. Артабан Марселдең өҫтәмәһе: «1961 йылдың март айҙарында К. Мәргән килде. Атайымды ултырғысҡа ултыр-

тып, үҙе менән килгән һөрәтсе атайымдың портретын төшөрөүе иҫтә ҡалған. Миңә туғыҙ йәш. Марсель Мирхәйҙәров» (Орфография текстағыса).

Шунда уҡ Мөғәлләм сәсәндең үпкә һүҙҙәре лә бар. Күрәһең, Кирәй Мәргән Шүлгән тураһындағы сюжетты ҡағыҙға теркәү эшен сәсәндең үҙенә үк атҡарырға тәҡдим иткәндән һуң, бәйләнештәре өҙөлөп торған. Сәсән:

*«Һөрәтемде төшөргәндә, талап иттең,*
*Үҙ арала үҙеңдеңме ысын һүҙең?*
*Хәҙер инде ник оноттоң?*
*Хат-хәбәр юҡ, килеп хәлем*
*Белмәй киттең.*

*4.11.1961 йыл.*

*Үҙем ҡәбергә яҡын... Эштәр күмелгән инде... Мына шулай әле ул «Ҡуңыр буға»[ға] өҫтәмәнән(?)... Шул мәсьәләләр тураһында яҙайыммы? Яҙғанда, нисегерәк яҙайым? Кәңәшегеҙҙе биреп яҙығыҙ. Ята-тора эш араһында булһа ла яҙырмын.*

*Тағын да Аҡмулла тураһында. К. Мәргәндең фекерен ҡеүәтләүемсә (?), материал таптым. Аҡмулла 1912 йылдарҙа беҙҙең районда булған икән. [Сәсән датала яңылыша булыр. Мәғлүм булыуынса, Мифтахетдин Аҡмулла, 1831 йылда тыуып, 1895 йылда вафат булған. — Ә. С.].*

*Больницанан сыҡтым әле. «Шүлгән»де эшләүгә һаулыҡ тороп етмәгән. Шуны яҡшылап эшләгәндә инде, «Ҡуңыр буға» [менән] бер бөтөн әҫәр булыр кеүек. Ә тарихи өҫтәмәһе (?) уның ҡиммәтен арттырасаҡ. Ләкин яҙып, алып барып, кәңәшләшеп эшләргә кәрәк була. Уның һыҙыҡтаһы (сюжеты. — Ә. С.) шунан ғибәрәт: минең һорашып эшләүемдән йыйыла-йыйыла килгәндәр. Хәҙер асылып, өҫтәлеп ялғанып, бер бөтөнлөк тыуҙыра ала һәм «Ҡуңыр буға»ға өҫтәмә [була ала].*

*Ярай хушығыҙ. Уңыштар! Изге теләктәр һеҙгә!*

*Уҡымышлыларҙың күбәйеүенә, артып өҫтәлеүенә ҡыуанам мин. Совет хөкүмәтенә рәхмәт уҡыйым. Тиҙҙән мына-мына профессор, академиктар күбәйерҙәр. Ниндәй ҡыуаныс!*

*Мөғәллим Мирхәйҙәров.*
*4.11.61 йыл.»*
*(Ҡыҫҡартып алынды)*

Был хат-үйланыуҙар кемгә адресланыуын өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын. Теҙмә өлөшөнә ҡарағанда, Кирәй Мәргәнгә өндәшә һымаҡ. Әммә ул теҙмә юлдар артынса яҙылыу көнө күрһәтелеүенән һәм хатта К. Мәргәндең телгә алыныуынан сығып, фекер йөрөткәндә, үҙенең ижади ниәттәрен икенсе кешегә (мотлаҡ фольклорсыға) һөйләй кеүек.

Мөғәлләм сәсән (әйткәндәй, үҙе «Мөғәллим» тип яҙһа ла, яҙмаларҙа, китапта ул Мөғәлләм сәсән тип телгә алына) «Ҡуңыр буға» эпосын: «Төнлөк яҡтағы башҡорттарҙы дошман яуы баҫа. Төн башҡорттарынан ярҙамға ғәскәр башы булып Минәй батыр бара. Минәй батыр илде баҫып килгән дошмандар — һун төрөктәре менән аяуһыҙ һуғыша, үҙенең бәһлеүәнлеге менән барса халыҡты таң ҡалдыра. Минәйҙең яу ҡайтарыу батырлығы өсөн, ошо яҡ, төшлөк яҡта берәгәй булып һаналған Таңдыса исемле һылыу ҡыҙҙы бирәләр. Ата-әсәһе Таңдысаны кейәү йортона бер ҡуңыр буға эйәртеп, оҙата», — тип бәйән итә башлай. Ә «Минәй батыр менән Шүлгән батша»ның ахыры Шүлгәнде еңгән Минәйҙең Таңдысаны тыуған иленә оҙатып килеп,

ҡауышып, шунан төн башҡорттары яғына оҙатылыуҙары хаҡында бәйән итеү менән тамамлана. Тимәк, «Ҡуңыр буға» эпосынан айырмалы рәүештә, Минәй был ҡыҙ менән әллә ҡасан уҡ таныш була. Ысынлап та шулай. Бер йыйын ваҡытында аждаһаны үлтереп, майҙан тотоп, үҙенең көс-ғәйрәтен, мәргәнлеген күрһәтеп кенә ҡалмай, юхаға әүерелгән аждаһаны тураҡлап, ҡайта-ҡайта батырлығын раҫлағаны өсөн, уға ил һылыуын, ырыуҙың һынсы-йондоҙсоһо Өлкәр ҡарттың яңғыҙ ҡыҙын, Таңдысаны, бирәләр. Ҡауышып, өс көн үткәс, Минәй үҙ йортона ҡайтырға иткәс, ҡыҙҙың ата-әсәһе, ғәҙәт буйынса, ете көн тулмайынса, ебәрмәҫкә итә. Етенсе көн таң алдынан Таңдысаны Шүлгән батшаның улы урлай. Минәй шул батшалыҡты тар-мар итеп, әсирҙәрҙе ҡотҡара, Таңдысаны ла имен-аман алып ҡайта.

Шулай итеп, Мөғәлләм ҡарт үҙенең хатында әйткән ниәтенә ирешкән. Әммә ике эпосты тоташтырып ҡарағанда, хронологик эҙмә-эҙлелектең боҙолоуы күҙәтелә: «Ҡуңыр буға» Минәй менән Таңдысаның ҡауышыуынан башлана. Эпостарҙа анахронизм, мәғлүм булыуынса, дилогия, трилогия хасил итеүсе сюжеттарҙа ғына түгел, береһенең эсендә лә һаҡланмауы бик тәбиғи: телдән башҡарылғанда, бер ултырғанда ғына, уны һөйләп бөтөп булмай, ғәҙәттә. Шуға күрә тәнәфес яһай-яһай, бер нисә көн һөйләү осраҡтары ла була. Анахронизмға шул да сәбәпсе булыуы ихтимал. Ә бында иһә сәсән элегерәк яҙҙырған әҫәр менән унда һүрәтләнгән ваҡиғаларға тиклемге хәлдәрҙе бәйән итһә лә, унан аҙаҡ ҡағыҙға теркәлгәнендә анахронизмға юл ҡуйылыуы бик тә ихтимал була. Һәм шул «ихтимал» бойомға аша ла. Шуға күрә әҫәрҙең баҫмаһын әҙерләгәндә быны иҫәпкә алырға һәм, фәндә ҡабул ителгән ҡағиҙәгә ярашлы рәүештә, ҡырлы йәйәләр эсендә текстың финалына өҫтәлмә бирергә тура килде. Был өҫтәлмә — төҙөүсенең уйҙырмаһы түгел, ә «Ҡуңыр буға» эпосының башындағы мәғлүмәттән, Минәй батырҙың һун яуын ҡыйратыуы хаҡындағы мәғлүмәттән генә, ғибәрәт. Шул арҡала әҫәрҙең аҙағы традицион мотив — «Герой менән героиня яңынан ҡауыша» мотивы менән тамамланғандай булды ла ҡуйҙы. Бөтә йөкмәткегә бик тә ярашлы был мотив. Ошо арҡала «Ҡуңыр буға» эпосына ла яңыса бағыу, уны яңынан күҙҙән кисереү мөмкинлеге тыуа. Һәр хәлдә, «Минәйҙең... батырлығы өсөн... Таңдыса исемле һылыу ҡыҙҙы бирәләр» тигәнде «уларҙы яңынан ҡауыштыралар» тип аңлау мөмкинлеге тыуа.

Әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, был эпоста Минәй батыр образы үҙәк фигура. Шуға күрә лә, Мөғәлләм сәсән уны «Шүлгән» тип кенә исемләһә лә, уны «Минәй батыр менән Шүлгән батша» тигәне менән алмаштырыу урынлы тип табылды.

[1] *Һары һәм Буҙ ат ҡына* — башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтары мифологияһы буйынса, Кесе Етегән йондоҙлоғондағы Тимер ҡаҙыҡҡа бәйле торған ике толпар. Был сюжет «Урал батыр» эпосында ла бар.

[2] *Аждаһа* — 1. Ҡәҙимге йылан 100 йыл йәшәһә аждаһаға әүерелә, ти. 500 йыл йәшәһә, юхаға әүерелә. Юха — әүермән. Әгәр аждаһа тыны менән тартып, кешене, мал-тыуарҙы йотор булһа, юха, төрлө ҡиәфәттәргә инеп, кешегә зыян итә. 2. БДУ-ның Учалы филиалы студенты И. Ирғәлин өләсәһе Солтанова Ғәҙилә Ғәлимжан ҡыҙынан ишетеп, яҙыуынса, йылан, йөҙ тапҡыр кеше күҙенә күренеп тә, үлтерелмәһә, ул аждаһаға әүерелә. Зыян итә башлаһа, аждаһаны күктәге изге көстәр күтәреп алып китә.

[3] *Темәс тигән ерҙә* — дөрөҫөрәге, Темәстән бик алыҫ булмаған Тар(ы)уал (боронғоса — Тарауыл) тигән ер (хәҙерге Бөрйән районы Иҫке Усман ауылы) йәки шуның янындағы урын күҙ уңында тотолған булырға тейеш. Сөнки ете ырыу йыйыны шунда үткәрелер булған.

[4] *Урал майы* — Урал нефте.

[5] *Башын быраулагас ҡына* — БДУ-ның 1975 йылғы фольклор экспедицияһы материалдары буйынса, был — боронғо язалау рәүеше: башты быуып, бауының ҡатына таяҡ тығып өйрөлтөп, башты ҡыҫыр булғандар.

[6] *Буҙатбатҡан* (хәҙерге әйтелештә: *Буҙанбатҡан*) — Бөрйән районы Нәби ауылы ерендәге Ҡыҙылташ тигән ҡая аҫтындағы аҡлан.

[7] *Буҙайғыр* — 1932 йылға тиклем Әбйәлил районы Үҙәк ауылы игенлеге, аҙаҡ Йәнгел совхозы ере (М.М.).

[8] *Ете ҡыҙ ташы* — Оло Ҡыҙыл ҡушылған ерҙә Яйыҡ уртаһындағы таш. Ҡыҙыл ҡасабаһы янында (М.М.).

[9] *Күкүгеҙһөҙгәншишмә* — Бөрйән районы Байназар ауылы туғайының төпкөлөндәге шишмә. Хәҙер уны Үгеҙһөҙгән тип кенә йөрөтәләр.

[10] *Күкүгеҙ* — Әбйәлил районы Үтәгән ауылына яҡын (Уралдағы) бер урын (М.М.)

[11] *Үлмәһәк* — Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылы ере (М.М.).

## 3. АҠТАШ ХАН

Өмөтбаев М. И. Йәдкәр/ Текстол. эштәрҙе башҡ., тәҙ., баш һүҙ яҙ., аңлатмалар биреүсе Ғиниәт Ҡунафин; Яуаплы мөхәрр. Ғайса Хөсәйенов. — Өфө: БКН, 1984. — 241—257-се б.

[1] Аҡташ хан//Өмөтбаев М. И. Йәдкәр. — Ҡазан, 1897. — 38—44-се б.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙ ҡулы менән был әҫәргә «ҡыҫҡартып алынды» тигән иҫкәрмә биргән. Уның тулы варианты, текстың тәүге абзацындағы аңлатмала әйтелеүенсә, беҙгә әлегә мәғлүм булмаған «Шәрех ҡамус», «Океанус» тигән китаптарҙа бирелгән.


آقطاش خان

امادلیمدان قالمش بر خانزاده وار ایدی آدینه آقطاس یا که اعطاش دیرلسر ایدی
بو آعطاش ینک قیلوب تحتاشی قوالادی مقدم سرعسکر ایدی حال اولدی تحتاشی فرخ
زادهٔ دشت آلوب قاچوب بودر بندهٔ بر اوته باشنده قولان اسملی قلعه عه قویوب
اعطاشدان خلاص ایتدی یعنی یلدین صکره بن کلوب خانننك سزورون دوپلادوم
یوزیکرمی بلطور که بوینی اولدوم تحتایش بو قلعه دو محتاج اولتر یبو قلعه ایکی طاغ آراسی
بر تناك یعنی طار دره دور دیمی بوملر ودی شهر ندان اوچ کونلك یولدور القصه ذالقرنین
تحتاشه رحیمی کیلوب هم آصل نسب هوسنك شاه اولادندان اولدغیچون رعایه قیلوب
ایلچی لر یبلروب آلدوردی بیابانك هوسنك شاه یورطن آلوب ور ایم دیدی تحتاش شاد
اولیحق ذالقرنین اولوغ ورنیزی بر طوس حکیمنی باشقه وزیرلر که بلس ایدوب آعطاشقه
یبلردی ذالقرنین اوری اون آلطی کره یورمك عسکر برلن بر میلیوبده آلطی یورمك
کشی اولور اولم ببرماس یعنی قولغی صوین طاسدان کویرصالاقالدی قاصدلار قرق کونلك
یولنی یکرمی دورت کونده آی ایدل صوی اوریده آعطاس خان اوردا سنه یتدیلار
بر عجایب صحراده یعنی طاغ باشنده بربی پایان اوردا کوردیلار شیله کم اینی هم اوروی
یدی فرسخ یرنی بر اوی طوتمش اویلر حبیل خرکاهلر قورولمش سیبوانلار
اورلمش شیله کم بی حد بی قیاس بی پایان اولوسی قوم القصه آعطاس خبر
کیلکاچ آولانی ده وزیرلر یدان صوردی اسکندر ذالقرنین نه کشید ورکم ایلچی کوندرمش
وزیرلری ایتدیلار ای شاه اسکندر دهی بر شاهدور رومدان قوبدی عجم دیارین آلدی
جبل کیبره عقوب ( هندستان اطرافنده عیمالای صرطلر وبدا ) حبش زنکستانی
اقلیمنی طوتدی اندان کلوب هر اسانی آلدی هندستان وسندستانی مسخر قیلدی آندان
هندستان دیاری ننك منك دورهٔ یوزجزیره سن کیردی آندان چینه جیندان خطایه خطا
یدان آیعوره که اول باشقرط توعی ایدی آندان ترکستانه آندان خاورستانه اندان
آلان بر جانه بومش آخر باشقر دقه قالطشمش ینه طبرستانه کشیمیره بینه تعرغره اندان کوه
البرز اینا کننه یا جوج وماجوج شاتی یا بدی اندان ابلیستانه وسیستانه کردی آندان





سمکانه آندان نبورستانه اندان کتوالستانه کروب عورغرجیه حقدی آنلری تیجی
توطدی آندان روسه املرینی فتح ایتمیلده سنکا ایلچی کوندردی ای آعطاش خان
اسکندر دیدکلری شونینك کبی کتیبلسون اشکند اردان عاملمباش دیدیلر انداع اولصیچ
آغطاس خان ایلچی لری چاقروب بزطوتش وربر دین صورادی اول قارشو طروب
دست تلنچه ذالقرنین ننك سورین سویلادی که آعطاس طبوعه کلسون یعنی استقبال
قیلسون یوق ایرسه دشت دیاری بوش قلن اوعلی تحتاش خانکد ورقوسون کیتسون
کتمز اسه دهی بلورسه اوس بار وریم ایرسه طورسون جواب ورسون دیدی بوسورکه
آعطاش شیله قاقیدی که ایچی طشی غضبله طولدی قصد قیلدیکم قاصدلره میقروب
واقعه یلدرم کبی شاقیه ولی در حال بیلوقیلماچیچون غصی اوطن تسکین قیلدی کندوی دیردی
طوردی ( بوسك حقنده یعنی بن آعطاش قصه سی ستون صورجلد ورامسور قصقه
بولصون ) اسکندر سك کم ایدوکین ایشدوب انتدی هیچ کم دناده سلار دان
بنکا قارونسادی امامد ابر اوکه یاردام ویر ورسه هم بسد ه آلور اماتر حیله ایدالم دیوب
قرق دورت سرور اوعلی بار ایلچی هر بری بر برده تکلر ایدی آنلاری کینکاشکه جیدی
اولوغراقلری اوّل طاش خان تولیتی خان اولاش خان قمش خان سرح خان کونج خان قرجج
خان دنج خان یتیچ خان هر قانوسی اوطر هم قری منك ایر ایله اون ایکی کباوی دهی اون ایکی
برده خانلق قیلوردیلار آنلار اوّل اولوسی تمن تاس قمان تاش امسان من ممن من
حین تیمورینه تمن تیمورینه یابتمورنته قایتیمورینه اطلاش سه تحتمش یه ماتمش یه
تلراعی تاتار بوبلر ایکی نور طوقسان منك لشکر ایله کیلوب جمعسی آعطاش خان یدی
یوربنك ایر جمع قیلدیلار اسکندر که استقبالغه کتدی بلروب بولا کلادی هم قو باقعه آع ایدل
صویدا اعی اورداسنه یاقتروب قایتدی اسکنلر ذالقرنین اعطاشی دشت قیچاقدان فالدور ورعه
وعده قیلوب تحتاش خانغه دشت قیچاق اورنیغه ویردی قافکار دیارین یعنی دربند تیمور
قپونی تاشیروان شهرینه ینه شیر ازنی آذربیجان دیرلار تاعر اقعه وار ایچه بیله وعده برلن
آنلاری آرام قیلوب اعطاشی قرق دورت اوعلی اون ایکی کیاوی برله بلرمش ایدی

بلرچه‌سی آغر یه‌لار آلوب قلیدیلار شاه ذالقرنین یوز یکرمی منك لر ایله اعطاش
خانه‌قو تلعه‌بار ور ایکان اول طرافدان آعطاش قارشو آلوب آغیدیلار صوی تینك بر طرف
افنده قونغان‌دی آطا اویناتیر ی آعطاش اوزی آلوب طرفدی کیناولرین الطراقفه‌بندی
یوز منك عسکر برلن یوصقون قویندی تا کم اسکندریلار طعامه مشغول بولغاننه باصوب
کیروب اشکلتری هلاک ایتسوت جهانعه داستان قالادیلدی شاه ذالقرنین بر دوین کورمس
ایدی سبسکانلندی ور یولرینه صاف بولونکز دیدی وزیرلری اشام اچم که مشغول بولمای
قل اول طرفدیلار شاهلار عقم عنت که اعطاش نعمت ییف وروراکان اسکندری لار
بر عسکرلری قیطاسه آلوب قتالدان چقه‌کلن چری کوروب یتمیز بیر دیلار قم اول عبر آلاچق
انکسردان برگر شیله یعر مجقار دیکم نعمت بیر شاه وسلاطین بر نعدان طوراچه آعطاش
بلدیکم لشکری یتوشتدی یوکردیلر حشه بنارکه قیطاس عقاب لین آعطاشه تبع اوردی
آعطاش قالقان طوطدی سبقی ایله پولاط قالقاندن ایکی شق ایلاب یعر ینته برزهم اوردی
آعطاشنك اوغلانلاری قیطاسنی آطاسندان آیردیلار بوندین صونك اوچ کون
آغیدل بوینده سکز یوز یکرمی منك عسکر صوغوشدیلار بو صوغشده شاه اسکندر
ینك نصر شلعی ننك قزی شمائل بانودان طوغان اوغلی قصغران یندی یلسنده انالاری
بر له برکه ایدی یان اعطاش عسکری اسکندری لنزنی صیوب سنجاق توبنه سوز
دیلار ایر سعقصغرانی شاه منکه حاضرلاندی آنی کوروب شمائل بانو غیرتده کلوب
نعره اوروب قلیچ یالانچق قیلیچی آنی کوزوب مهراج خان قزی دلشا
دنو چهر قزی فرح کیکان قزی شهربان روس شاهی قبلان قزی سوتان
اردان هلالی پهتران اون ایکی منك سرداران سر کیران برله سنجق دوبندان
درسو قوبوب اعطاشه هجوم ایدوب کیروسنه سردیلار تاچادرینه ایرکوز دیلار اندان
ینه اعطاش جیش اسکندره قایلار اوردوردی حتی چورتیچی کون شاه اسکندر سوار
اولوب سنجق وعلم کوتاروب کوس وتقرطلر اوروب اعطاشه یورودی اعطاش دخی
سوار اولوب یورودی

[2] *Зөлҡәрнәй* — Александр Македонский.

[3] *Дәшти Ҡыпсаҡ* — Ҡыпсаҡ далаһы, йәғни Сырдаръяның түбәнге ағымынан һәм Балхаш күленән алып Дунай тамағынаса йәйрәп ята.

[4] *Мөсәххәр ҡылды* — яулап алды, буйһондорҙо.

[5] *Фәрехзадә Дәшт* — Фәрехзада /атлы бер кеше/.

[6] *Ғуғыржи* — Рузия.

[7] *Ғаз билә* — асыу менән.

## 4. ХАН ҠЫҘЫ АЛТЫНСӘС

Әҫәрҙең сюжетын Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафури үҙенең «Ағиҙел буйында» тигән әҫәрендә (автор үҙе уны әкиәт тип атаған) файҙаланған //Ғафури Мәжит. Әҫәрҙәр. 6 томда. — 2-се том. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1953. — 297—302-се б. Шул уҡ автор. Әҫәрҙәр. 4 томда. II том./Төҙ., аңлатма биреүселәр Ғилемдар Рамазанов, Мәҙинә Хәмидуллина. — Өфө: БКН, 1978. — 314—319-сы б.

Күләмле генә эпик ҡомартҡының топонимик легенда рәүешендәрәк бирелгән йөкмәткеһен бәйән иткәнгә тиклем яҙыусы ярайһы ғына киң экспозиция тыуҙырған. Унда һүҙ эйәһе балыҡсы ҡарт, ваҡиға барған конкрет урын Ағиҙел буйындағы Аҡташ тауы һәм хикәйәләүгә күсеү шарты тасуирлана.

### 1.

Беҙ, иптәштәребеҙ менән бергә йыйылышып, йәй көнө, Ағиҙел буйына балыҡ тоторға — ҡармаҡ һалырға — бара торған инек. Көн матур булһа, был эш беҙҙең ғәҙәтебеҙ ине. Күп ваҡытта иртән тороу менән сәй-шәкәр һәм ашамлыҡтарыбыҙҙы алып, Ағиҙел буйына килтерә торған инек.

Беҙ унда барып, ҡармаҡ һалып арығандан һуң, балыҡсы бабай янына барып, балыҡ бешереп, сәй эсеп, көндө үткәреп, ҡояш байыр алдынан ғына ҡайта торған инек. Ҡара болотло ямғыр сығып ҡына беҙҙең был планыбыҙҙы боҙмаһа, был эш һис бер ваҡытта эшләнмәй ҡалмай ине.

Балыҡсы бабай, беҙҙе бергә йыйырға, беҙҙең күңелебеҙҙе асырға иң ҙур сәбәпсе бер кеше ине. Был ҡарт, ҡыш булһа — мәсет ҡарты, мәҙрәсә ҡарауылсыһы, йәй көнө балыҡсы булып, шул Ағиҙел буйында көн үткәреүсе ине. Ул үҙенең бөтә ғүмерен ошо Ағиҙел буйында үткәргән. Уның һаҡалы ошо ерҙә, был матур туғайҙа йөрөп ағарған. Ул бына был — беҙ аҫтында ултырған ҡарт ҡарама менән бергә ҡартайған. Был бабай был тирәләге серҙәрҙе, был тирәлә булған нәмәләрҙе, ваҡ-төйәгенә ҡәҙәре белә. Был дала, был урман, был туғай, был Ағиҙел буйының һәммә нәмәләре бабайға таныш. Ул матур йәйге кисте ошо урман араһында, һандуғас тауыштары тыңлап үткәрә. Бабай был нәмәләрҙең һәммәһенә үҙенеке итеп ҡарай.

Был бәхетле ҡарт ошо матур урындарҙа хәрәкәт итеп тапҡан аҙ-маҙ аҡсаһы менән бәхетле көн итә. Ул һәммә нәмәгә, һәммә кешеләргә дуҫ. Ул беҙҙең менән беҙ булып — балалар булып һөйләшә.

### 2.

Ғәҙәтебеҙ буйынса, бөгөн дә Ағиҙел буйына барып, бер аҙ ҡармаҡ һалып ултырғандан һуң, ҡояш ҡыҙыуына сыҙай алмай, балыҡсы ҡарт янына, әлеге ҡарт ҡараманың аҫтына йыйылдыҡ. Беҙ барған ваҡытта беҙҙең һөйөклө бабай нәрәтәләрен элеп киптерә, өҙөлгән урындарын рәтләп тора ине.

Беҙ барғас та бабай:

— Йәгеҙ, балалар, һыу алып килеп, сәй ҡайнатып ебәрегеҙ әле, һин, Ғабдрахман, бынау балыҡтарҙы әрсеп бешерә башла, — тип, япраҡ аҫтында ятҡан балыҡтарҙы күрһәтте. Үҙе һаман нәрәтәләрен рәтләп йөрөй ине.

Беҙ, үҙебеҙҙе аҫтына алған ҡарт ҡараманың ботаҡтарына әйберҙәребеҙҙе элеп, ҡайһыбыҙ балыҡ таҙартырға, ҡайһыбыҙ һыу алып килеп, сәй ҡайнатырға, бәғзеләребеҙ утын йыйып ут яғырға керештек.

Был ваҡытта балыҡсы бабай, үҙенең, эштәрен бөтөргән, еүешләнгән кейемдәрен һалып, яланаяҡ көйөнсә, беҙҙең янға килеп ултырған ине.

Беҙҙең эштәр бер яҡтан рәткә ҡуйылды. Балыҡтар таҙартылып, ҡаҙанға һалынды, ҡоромланып бөткән ҙур тимер сәйнүкте, ҡарама ботағына тағылған епкә бәйләп, ут уртаһына ҡуйҙыҡ. Беҙ инде балыҡтарҙың бешкәнен, сәй ҡайнағанын көтөп, ҡарама аҫтына теләһә нисек ултырған хәлдә, тәбиғәтте тамаша итә башланыҡ. Беҙҙе үҙ аҫтына алған ҡарама Ағиҙелдең яр башына үҫкән, уның ҙур, ҡалын ботаҡтары Иҙелгә табан ауышып торалар ине. Иҙелдең беҙгә ҡаршы икенсе яғында торған Аҡташ тауы Иҙел буйлап һуҙылып ята; ҡояштың нурын сағылдырып, күҙҙе ҡамаштырып тора ине.

Саф һауа, матур тәбиғәт, Ағиҙелдең тауышһыҙ ғына ағыуы беҙҙе еңеләйтә, ашҡындырып тора ине.

Тип-тигеҙ, тыныс ҡына аҡҡан Иҙел өҫтөнән һалсы башҡорттар, үҙҙәренең һалдарын һыу ағымының ихтыярына ҡуйып, аҡрын ғына ағалар, ишкәктәренең баштарына ултырған хәлдә, бик моңландырып, оҙон көйҙәрен йырлап баралар ине.

Быларҙың йырлаған тауыштары Аҡташ тауының таштарына бәрелеп, беҙгә икәү булып ишетелә, тирә-яҡҡа тарала, Ағиҙел буйы яңғырай ине.

Беҙ уларҙың йырҙарын бүлмәҫ, моңло тауыштарын өҙмәҫ өсөн, уларға һүҙ ҡушманыҡ. Уларҙы рухани ләззәттәренән айырырға теләмәнек. Улар шулай аҡрын ғына китеп, Иҙелдең боролған еренә, урман араһына кереп киттеләр. Был ваҡытта беҙҙең сәйнүк аҡтарылып ҡайнап сыҡты. Һыуҙары түгелеп, уттың көлдәрен күккә осорҙо. Был беҙҙе хәрәкәткә килтерҙе. Шунан һуң беҙ йәш үләндәрҙе ҡул менән тигеҙләп, балыҡсы бабайҙың сыбар буйлы сепрәк балаҫын, уның өҫтөнә ашъяулығын йәйҙек. Һыуға тығып ҡуйған һөтлө шешәләребеҙҙе алып килдек.

Беҙ сәй эсеп бөтөүгә балыҡ та бешеп өлгөрҙө. Беҙ үҙебеҙҙең өлөшөбөҙгә тейгән балыҡтарҙы ағас япраҡтары өҫтөнә ҡуйып, ашарға керештек. Был ваҡытта беҙҙең күҙебеҙ һаман тирә-яҡты, тәбиғәтте тамаша итеүҙә ине.

Беҙҙең арабыҙҙан берәү:

— Иҙелдең арғы яғына сығып, ҡаршылағы Аҡташ тауының өҫтөнә, ана, теге өйөлөп-өйөлөп киртләсләнеп, һалынып төпөргә торған ҙур таштарҙың башына менеп йөрөргә кәрәк ине, — тине.

Беҙҙең балыҡсы ҡарт, булыуы мөмкин булмаған бер нәмәне ишеткән һымаҡ, бик ҡыҙыҡ иттереп көлдө лә:

— Сығырһың унда, атаң башы! Бар әле, сығып ҡара, үҙеңде ендәр ботарлап ташларҙар! — тине.

Беҙ был балыҡсы бабайҙың һүҙенә ғәжәпләндек. Һәм бабайҙан:

— Нисек һуң улай? — тип, һөйләүен үтендек.

Бабай, һүҙгә башлап... (Артабан Алтынсәс хаҡында бәйән итәлә. — *Ә. С.*).

М. Ғафури үҙенең әҫәрен шундай һүҙҙәр менән тамамлаған: «Бабай һүҙен бөтөргәс, тағы ла тауға табан, бик ҡурҡыныслы итеп, ҡайғылы рәүештә ҡарап ҡуйҙы. Ниңәлер, бик тәрән көрһөндө.

Беҙ ысын ихлас менән бабайҙың һүҙҙәрен тыңлап бөттөк. Беҙҙең күҙ алдыбыҙға хан ҡыҙы Алтынсәстең аҡ таштар араһынан абына-һөрөнә ҡасып килеп, тирә-яғына моңло итеп ҡарауы, уның ҡурҡыуҙан ағарған матур йөҙҙәре, йәш менән сыланған оҙон керпектәре аҫтындағы ҙур ҡара күҙҙәре күҙ алдыбыҙға килгән кеүек тойолдо. Гүйә, был минутта, Алтынсәс үҙенең иптәше Ҡаракүҙ менән тау тишегенә кереп барған кеүек ине.

Балыҡсы бабай һүҙен бөтөргән ваҡытта һәммәбеҙҙең дә күҙе, ҡаршыбыҙҙағы дәһшәтле тауҙың тишегендә ине».

## 5. ҠОРҠОТ АТА

Ватандаш. — 2000. — № 9. — 121—122-се б. Журнал баҫмаһы — йыйылма текстан ғибәрәт. Уны, башҡорт халыҡ ижадында өҙөк-йолпоҡ осраған Ҡорҡот мотивтарынан Ғ. Б. Хөсәйенов туплаған.

[1] 6-сы бүлек «Ҡорҡот ата китабынан» алынған. Уны ла башҡорт материалдарына теркәүҙең үҙ логикаһы бар. Йыйылма тексты «Ватандаш» журналында баҫтырыуға әҙерләүсе Ғ. Б. Хөсәйенов уны шулай нигеҙләгән: «Был сюжет бөтөн донъя халыҡтары араһында бик киң таралған. Уның Европа халыҡтарында ғына ла ике йөҙләп версияһы һәм варианттары осрай, Көнсығыш халыҡтарында ул тағы ишлерәк. Һыңар күҙле циклоп легендаһы «Одиссея»ла бар. Антик Грецияның «ата тарихсыһы» Геродот был сюжеттың борон ассидон тигән көнсығыш ҡәбиләләрендә булыуын, уның скифтар аша Грецияға үтеп инеүен теркәй. Ә ассидондар Урал менән Алтай араһында йәшәгәндәр.

Башҡорт экиәттәрендә лә шул сюжет сағыла.

### Ғуж

*Башҡорт әкиәтенән*

Жағыр тигән бер хан, үҙ биләмәләренең сигендәге Тишектау аръяғында ни бар икән, тип ун ете кешене белергә ебәрә. Тегеләр иң шәп һайлам аттарға менеп, алмас ҡылыс тағып, Тишектауға барып етәләр. Тау тишеге тар икән, аттарын шунда ҡалдырып, үҙҙәре йәйәүләп теге тишеккә инәләр. Әй китәләр, әй китәләр. Ялан да ҡомлоҡ. Ни ҡала, ни ауыл, ни әҙәм эҫәре юҡ. Бер саҡ быларға ғәләмәт дәү кәүҙәле кеше тап була. Китә бит быларҙы ҡыуып.

Баҫҡанда ер һелкенеп, ҡысҡырғанда тау-таш гөрһөлдәп тора. Ҡыуып барыһын да тота быларҙың. Оло устары менән ҡармап, һәр береһен ҡыҫыҡ тау тишегенә бикләй, ауыҙын ҙур таш менән ҡаплай. Араларынан бер һимеҙ кешене тотоп, башын-ҡулын ботарлап, былар алдында сәйнәй-сәйнәй һоғоноп та ҡуя. Һәммәһенең ҡоттары оса. Кеше ашаусы ғуж икән был. Ғырылдауынан мәмерйә эсе һелкенеп торғандай. Нишләргә инде быларға? Алмас ҡылыс менән сабыр инеләр, был алып зат дулап барыһын иҙеп бөтәсәк. Башына, күҙенә яҡын килерлек түгел. Ҡапшанҡырап ҡараһалар, ҡаплаулы таштың бер асығыраҡ ерен күрәләр. Шул урынды ҡылыс менән ҡаҙып, үҙҙәре һыйырлыҡ тишек-юл асалар. Йәһәт кенә ун бише сыға, аҙаҡҡа ҡалған береһе йыуан, һимеҙ икән, тишеккә һыймай бит — ҡыҫылып ҡала. Ауыртыныуынан ҡысҡыра, ялбара башлай. Иптәштәре көс-хәл менән быны иҫһеҙ итеп тартып сығара-сығарыуын. Уңарсы теге ғуж уяныл китә. Китә ҡыуып быларҙы. Береһе, иптәштәрен ҡотҡарайым тип, юлды ҡаплап ҡала. Ғуж ҡыуып етә, ат ҡойроғонан әләктерәйем тигәнсе, теге ҡылысы менән бармаҡтарын өҙә саба, икенсе ҡулы менән һонолоуына ла ҡылыс бармаҡтарына әләгә. Кеше ашар әҙәм шулай ҡыуа-ҡыуа килгәндә ҡанһырап хәлдән тая, оҙаҡламай йән дә бирә. Был батырҙар, йыйылып, кеше ашар әҙәмдең дәлил өсөн бер ҡолағын ҡырҡып алалар. Дәү ҡолаҡ оло бер ҡуржындарына саҡ-саҡ һыя. Ҡайтып, булған хәлде ханға һөйләйҙәр, дәлил итеп дәү ҡолаҡты күрһәтәләр. Хан быларҙы батырлыҡтары өсөн бүләкләй. (Ғ. Б. Хөсәйеновтың шәхси архивынан //Ватандаш. — 2000. — № 9. — 122—123-сө б.).

«Ҡорҡот ата менән Түпәгүҙ» сюжеты, асылда, халыҡ-ара әкиәт сюжеттары күрһәткесендә АТ1137 (Һуҡырайтылған һыңар күҙле дәү) тибына ҡарай. Ошо типҡа ҡараған тағы ике башҡорт әкиәте барлығы мәғлүм. «Дейеү менән

Ғабдулла», «Йыһангир хан илселәренең дейеүгә тарығаны» тип аталған был экиәттәрҙең икеһе лә хәйләкәр кеше менән иҫәр дейеү хаҡындағы юмористик экиәттәр төркөмөнә инә. Ҡар.: БНТ: Экиәттәр. 4-се кит./Төҙ., инеш мәҡ. авт. Ә. М. Сөләймәнов; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән Ә. М. Сөләймәновтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. — Өфө: БКН, 1983. — №№ 101, 102.

## 6. КҮЛТӘГИН

Шағир Мәүлит Ямалетдинов тәржемәһе. Был ҡулъяҙманы ул 2001 йылда Ә. М. Сөләймәновҡа тәҡдим иткәйне. Тәржемәсе И. В. Стеблеваның «Поэзия Тюрков: VI—VIII вв.» тигән китабында бирелгән латин графикаһындағы транскрипцияны һәм ҡомартҡының рус теленә тәржемәһен файҙаланып, мөмкин тиклем йөкмәткегә хилафлыҡ килтермәҫкә тырышҡан.

Мәғлүм булыуынса, С. Е. Малов үҙенең «Памятники древнетюркской письменности» тигән китабында (М.; Л., 1951) Орхон-Йәнәсәй яҙмаларын сәсмәүер рәүешендә тәҡдим иткән. И. В. Соболева иһә уны, бағаналап урынлаштырып, строфаларға бүлеп сыға. Һәр строфаһы — нигеҙҙә дүртәр юллыҡтарҙан, һәр юлдағы ижектәр һаны 6—7-нән алып 12—13-кә тиклем барып етә. Шиғыр юлдарының нисәшәр ижектән тороуында ниндәйҙер кимәлдә тотороҡло система күҙәтелә.

Мәүлит Ямалетдинов иһә *аа бб* системаһындағы рифмалы 11-әр юллыҡ шиғри строфа формаһын файҙаланған. Шул үҙе үк әҫәрҙең башҡортса аһәңле булыуына булышҡан, эпик йөкмәткеле әҫәрҙең пафосына тура килә: эпик талғынлыҡ эффектын көсәйтә.

### ОРХОН-ЙӘНӘСӘЙ ЯҘМАЛАРЫНЫҢ АЛФАВИТЫ[1]





| Начертание | русск. | лат. | баш | | русск. | лат. | баш |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | а, ä | а, ä | ә | | й | й | [illegible] |
| | б¹ | b¹ | | | нт | nt | |
| | б², ä | b², ä | ә | | нч | nč | |
| | ҕ | γ | ғ | | о, у | o, u | |
| | г | q | | | ö, ÿ | ö, ü | өү |
| | д¹ | d¹ | | | п | p | |
| | д² | d² | | | р¹ | r¹ | |
| | з | z | | | р¹ | r² | |

[1] С. Е. Маловтан



## Кесе яҙма

[1] *Белгә ҡаған* /«Зирәк аҡыллы хан»/ — Илтерәш хандың оло улы, Күлтәгиндең бер туған ағаһы Мөгилән, ханлыҡҡа ултырғанда, ошо исемде ҡабул итә. Ул 716—734 йылдарҙа хакимлыҡ итә.

[2] *Шад* — Төрки ҡағанатындағы юғары хәрби һәм административ титулдарҙың береһе, ҡағандың наместнигы.

[3] *Апа* — Оло кеше, аҡһаҡал, олатай. Ололарға өндәштең был формаһы хәҙерге көндә ҡарағай-ҡыпсаҡ, тамъян һәм күбәләк ырыуҙарында (атай-әсәйҙән өлкән ир-атты унда «апа» тиҙәр) һаҡланып ҡалған.

[4] *Туғыҙ уғыҙ* — төрки-уғыҙҙарҙың туғыҙ ҡәбиләһе берләшмәһе.

[5] *Үтекән* — Төньяҡ Монголиялағы Хангай тау теҙмәләренең бер өлөшө, төрки ҡағандарының идара итеү урыны, пайтәхет.

[6] *Шантуң* — Көнсығыш Ҡытайҙағы ярым утрау һәм провинция исеме.

[7] *Туғыҙ ирсен* — төрки ҡәбиләләре берләшмәләренең береһе.

[8] *Ынйы-даръя* — Һырдаръя йылғаһы.

[9] *Тимер ҡапҡа* — Үзбәкстандағы Гиссар артылышының көньяҡ-көнбайыш өлөшөндәге Байсунтау тауҙарындағы тарлауыҡ.

[10] *Ер-Байырҡы* — ер атамаһы. Ер-Байырҡы (Jir Bajyrqu) — менән Ҡыл-Бараҡ бер үк ил түгелме икән? «Оғузнамә» буйынса, һуңғыһы Волга дельтаһында урынлашҡан була. Ҡылбараҡтар, һуғышыр алдынан, аҡ елемле бассейнға сумып сығып, аҡ ҡомда аунап, ҡара елемле бассейнға сумып сығып, ҡара ҡомда аунай — тәндәрен уҡ та, һөңгө менән ҡылыс та ала алмай. Ҡар.: Фазаллах Рәшид әд-дин. Огуз-наме/Пер. с персидск. предисл., коммент., примеч. и указатели Р. М. Шукоровой. — Баку: Элм, 1987. — С. 34—36.

[11] *Табғас* — Ҡытай менән ҡытай халҡының боронғо төркисә атамаһы.
[12а] *Соғай* — ер-һыу атамаһы.
[12б] *Асылыны* — асылын.
[13] *Ун уҡ* — көнбайыш уғыҙ-төркиҙәрҙең ун ырыу берләшмәһе.
[14] *Тат* — иранлыларҙың боронғо төркисә атамаһы.
[15] *Юлыҡтәгин* — исем. Тәгин — хан ғаиләһенең кесе ағзаһы.

## Оло яҙма

[1] *Бомон ҡаған* — Боронғо төрки дәүләтенә — Төрки ҡағанатына нигеҙ һалып, уның менән идара иткән тарихи шәхес (552 йылда үлә).

[2] *Иҫтәмә (Исиги ҡаған)* — Бомон ҡағандың вариҫы (553 йылда үлә).

[3] *Ҡыҙырҡан* — Оло Хинган тауҙары.

[4] *Тимер ҡапҡа* — Кесе яҙмаға бирелгән 4-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[5] *Бүкле* — Кореяның төньяғындағы Күгүре дәүләте.

[6] *Өс ҡорыҡан* — Байкал күле тирәһендә һәм Ангара буйында йәшәгән ҡурыҡан ҡәбиләләренең, төньяҡ-көнсығыш төркиҙәрҙең — яҡуттарҙың ата-бабаларының берләшмәһе.

[7] *Ҡырғыҙ* — хәҙерге хакастарҙың бабалары.

[8] *Татабтар* — халыҡ этнонимы.

[9] *Ҡытай* — X—XII быуаттарҙа дәүләт төҙөүгә өлгәшкән монгол сығышлы ҡәбиләләр атамаһы.

[10а] *Утыҙ татар (otuz tatar)* — боронғо монгол ҡәбиләләре берләшмәләренең береһе шулай аталған. Был атама рус телендәге баҫмала «огуз-татар» тип бирелгән (Ҡар.: Стеблева.— С. III, 30-сы юл).

[10б] *Көң* — тотҡондағы ҡатын-ҡыҙ, әсирә.

[11а] Стеблевала 7—8 бүлектәге 49—60-сы юлдарҙың бирелеше бына былай:

49 türk budun illädük ilin yčγynu ydmys
(7) 50 qaγanladuq qaγanyn jitürü ydmys
51 Tabγač budunqa bägilik ury oγlyn qul bolty
52 silik qyz oγlyn küŋ bolty.

53 Türk bäglär türk atyn yty
54 tabγačγy bäglär tabγač atyn tutypan
55 tabγač qaγanqa körmis
56 älig jyl isig küčig birmis.

(8) 57 İlgärü kün toγsyqda
58 Bökli qaγanqa tägi süläjü birmis
59 Quryγaru Tämir Qapyγqa tägi süläjü birmis
60 Tabγač qaγanqa ilin törüsin aly birmis.

49. тюркский народ расстроил свой уже образованный племенной союз
(7) 50. [и] навлек гибель на уже царствующего кагана
51. Своим крепким (мужским) потомством он (тюркский народ) стал народу табгач рабом,
52. чистым (прекрасным) женским потомством он стал рабыней.

53. Тюркские беки сложили [с себя] тюркские имена (титулы).
54. Приняв табгачские имена табгачских правителей,
55. они подчинились кагану табгачей.
56. Пятьдесят лет они отдавали [ему] свои труды и силу.

(8) 57. Вперед, в [страну] солнечного восхода,
58. вплоть до Бёклийского кагана, они ходили войной
59. Назад, вплоть до Железных ворот, они ходили войной
60. Табгачскому кагану они отдали свое государство и [его] установления

53—60-сы юлдарҙы былай уҡырға ла була:

Төрк бейҙәре исем-атын алғастын
Хакимдарының бар табғастың,
Баш эймәгән төрки заты/бейе/ ҡалманы —
Буйһондорҙо табғастарҙың ҡағаны
(Аңлашыла торғандыр бит ҡалғаны).

Табғастарға илле йыл көс түктеләр,
Ярты быуат билде бишкә бөктеләр.
Төрки иле гөрләп торған ил ине:
Иңһеҙ ине, тиңһеҙ ине биләме —
Көн тыуышта Бүкле ере, артта
Ҙур яу менән яулағайны Тимер ҡапҡа.
Илен-көнөн бирҙе ҡағанына табғастың,
Бөтәһенән яҙҙы илһеҙ ҡалғастын.

[116] Сағыштырырға мөмкин: Стеблевала 9—10-сы бүлек быna нисек:

(9) 61 Türk qara qamуγ budun anča timis
62 Illig budun ärtim
63 Ilim amty qany
64 Kämkä ilig qazγanurmän tir ärmis.

65 Qaγanlyγ budun ärtim.
66 Qaγanym qany
67 Na qaγanqa isig küčig birürmän tir ärmis.
68 Anča tip tabγač qaγanqa jaγy bolmys.

(10) 69 Jaγy bolyp
70 Itinü jaratunu umaduq
71 jana ičikmis.
72 Bunča isig küčig
73 birtükgaru saqynmaty.
74 Türk budun ölürajin
75 uruγsyratajyn tir ärmis
76 joqadu baryr ärmis.

(9) 61 Вся масса тюркского народа сказала так:
62 «Я была народом, имевшим свое государство
63 Где теперь мое государство?
64 Для кого я добываю государства, — сказала она —

65 Я была народом, имевшим своего кагана.
66. Где мой каган?
67 Какому кагану я отдаю свои труды и силу?» — она сказала
68 Вот так сказав, она (масса тюркского народа) стала врагом табгачскому кагану
69 Став врагом,
70 [но] не будучи в состоянии [что-либо] сделать и создать,
71 он (тюркский народ) снова подчинился [табгачам].
72 Вот тогда, свои труды и силу
73 не желая отдавать [табгачам],
74 тюркский народ сказал «Лучше погибнуть!
75 Искореним [сами себя]!» —
76 [и] начал идти к гибели

[12а] *Илтерәш ҡаған* — Ҡытай хакимлығына ҡаршы ихтилалдың етәксеһе, икенсе Көнсығыш төрки ҡағанатына нигеҙ һалыусы Ҡотлоҡтоң ҡабул иткән исеме (691 йылда үлә).

[12б] *Илбелгә* — Илтереш ҡағандың ҡатыны, Билге ҡаған менән Күлтәгиндең әсәһе.

[13] *Ябғы* — Көнбайыш төркиҙәрҙә баш етәксенең титулы.

[14а] *Шад* — Кесе яҙмаға бирелгән 2-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[14б] 106—108-се юлдарҙы (Стеблева буйынса) ошолай башҡортсалаштырырға ла булыр ине:

Ҡаған атам ҡыҙған ине шул саҡлы —
Ҡырҡ ете рәт яуға ҡаршы яу сапты,
Егерме рәт үҙе башлап яу асты,
Ил-көн өсөн, йән аямай, алышты.

Сағыштырығыҙ. Стеблевала:

106 Qaŋym qaγan bunča...
107 qyrq artuq(y jit)i joly sülämis
108 jägirmi süŋüs süŋüsmis.

106 Мой отец каган столько...
107 Сорок семь раз он ходил с войском (в поход),
108 дал двадцать сражений.

[15а] *Көймән* — Көнбайыш Саяндағы тауҙар теҙмәһе һәм урын атамаһы. Шуға күрә: «тигән артылышты» тиһәк, уңышлыраҡ булыр ине.

[15б] Киреһенсә булырға тейеш:

Яуға ҡаршы егерме биш яу астыҡ,
Үҙебеҙ ҙә ун өс тапҡыр яу астыҡ.

Сағыштырығыҙ. Стеблевала:

(18) 131 Qamuγy bis otuz sülädimiz
132 üc jägirmi süŋüšdimiz

(18) 131 Всего мы ходили войной двадцать пять (раз),
132 дали тринадцать сражений.

[16а] *Төргәш* — VIII быуат башында Талас үҙәненән алып Алтайға тиклемге ерҙәрҙе биләгән көнбайыш төркиҙәре.

[16б] Боронғо руник яҙмалағыса (Стеблева буйынса):

(19) 143 Äčümiz apamyz tutmys
144 jir sub idisiz bolmazun tijin

Бында «Ер-һыу» тәңре булараҡ телгә алынған. Шуға күрә был ике юлды шулайыраҡ тәржемә итеп була:

Ата-бабам тотмош (инанмы. — *Ә. С.*), Ер-Һыу инәбеҙ,
Тейеш түгел ҡалырға һис эйәһеҙ.

[17] *Юлбарыҫ бей* — Төрки юлбашсыларының береһенең исеме.

[18] *Аз* — төргәштәрҙең бер тармағының исеме.

[19] *Ҡонсо* — Хан нәҫеленән булған ҡыҙ, княжна.

[20] *Киң Тарман* — Урта Азияла, Һырдарья йылғаһының урта ағымындағы урын.

[21] *Сөгди* — Урта Азия биләмәләрендә йәшәгән көнсығыш иран халҡының атамаһы.

[22] *Уң тотоҡ* — Ҡытай хәрби чины һәм титулы (уң — ҡытайса ван — «кенәз», тотоҡ — ҡытайса дуду — өлкәнең хәрби етәксеһе). Бында 701—702 йй. Ҡытайҙың төркиҙәргә ҡаршы һуғышында ҡытай ғәскәренең баш сардары, буласаҡ ҡытай императоры Ли Дан күҙ уңында тотола.

[23] *Сиңен Сәсә* — 706 й. төркиҙәрҙең Ҡытайға ҡаршы һуғышында ҡытай ғәскәрҙәренең баш сардарының титулы һәм исеме.

[24] *Татҡын Сура* — Төрки хәрби етәкселәренең береһенең исеме һәм титулы.

[25] *Ышбара Ямтар* —Исем.

[26а] *Йәгин Селек* — Исем.

[26б] Һуңғы дүрт юллыҡҡа вариант:

Яраҡумта*, өҫтөндәге япманы,
Йөҙҙән артыҡ уҡ тейҙе лә, ҡапланы —
Еҙ торҡалы башын энем эймәне,
Эймәһә лә, торҡаға уҡ теймәне.

Сағыштырығыҙ. Стеблевала:
(33) 257 Jaraqynta jalmasynta
258 jüz artuq oqun urty
259 jizkä bašyŋa bir (tägürmädi).
(33) 257 В его броню и его плащ
258 более ста стрел попало,
259 (но) его головы в медном шлеме ни одна (стрела) не коснулась.[7]

[27] *Олуғ Иркен* — Төркиҙәргә дошмансыл юлбашсының исеме. Ҡалмыҡтар араһында был исем әле лә осрай.

[28а] *Төргә-Ярғын* —Күл исеме.

[28б] Стеблевала «Көгмән».

[29] *Сөнгә* — Ер-һыу атамаһы.

[30] *Алтын* — Алтай биләмәләрендәге тау-урманлы урын атамаһы һәм Алтайҙың үҙенең атамаһы.

[31] *Булсы* — Ер-һыу атамаһы.

[32] *Киңрәс* — Һырдарьяның урта ағымында йәшәүсе төрки ҡәбиләләренең береһе.

[33] *Ҡушы тотоҡ* — Өлкә хәрби етәксеһенең исеме һәм титулы.

[34] *Ҡарлуҡ* — Етеһыу өлкәһендә (Урта Азия) йәшәүсе төрки халыҡтарҙың береһе.

[35] *Илтәбәр* — Аздарҙа хәрби юлбашсы титулы.

[36а] *Изгел* —Халыҡ атамаһы (болғарҙарҙың бер тармағы булыуы ихтимал).

[36б] *Туғы* — Төп нөсхәлә Тоғу (То u).

[37] *Эдиз* — Уғыҙ тармаҡлы төрки ҡәбиләһе.

[38] *Ҡушлағаҡ* — Ер-һыу атамаһы (һүҙ парлы әйбер хаҡында).

[39] *Бол...нда* — Ер-һыу атамаһы (төп нөсхәлә шулай).

[40] *Оуш* — Йылға (йәки тау түбәһе) атамаһы.

[41] *Түңгәтәгин* — Исем («Каплан») һәм хан ғаиләһенең кесе ағзаһы титулы.

[42] *Түңгрә* — Ҡәбилә исеме (Башҡорттағы түңгәүер ырыуына бәйле булыуы ихтимал).

[43] *Ҡадаз* — Ер-һыу атамаһы.

[44] *Мағы Ҡорған* — Күлтәгин ғәскәренең ҡышлау урыны, ҡәлғә.

[45] *Узар сәңүн* — Исем һәм хәрби етәксе титулы.

[46] *Эҫйә Ликәң* — Ҡытай императоры илсеһенең исеме.
[47] *Бүлен* —Атаҡлы нәҫелдән сыҡҡан түрә, сановник.
[48] *Бирсәкәр* — Өлкә исеме.
[49] *Ник Сиңен* —Хәрби етәксенең исеме һәм титулы.
[50] *Макрас* — (Санскриттан — махараджа) —Исем.
[51] *Уғыҙ белгә* — Исем.
[52] *Тарҙыш инансы* — Исем.
[53] *Саң Сиңен* — Хәрби етәксенең исеме һәм титулы.
[54] *Сыҡан* — ырып яҙыу оҫтаһы.

## 7. УҒЫҘ ХИКӘЙӘТЕ

Ватандаш. — 2000. — № 8. — 25—59-сы б.

Был йыйылма тексты башҡорт фольклорында ара-тирә осраштырған айырым мотивтар, үҙ аллы сюжет рәүешен алған күренештәр һ.б. сығанаҡтар буйынса Ғ. Б. Хөсәйенов төҙөнө. Ҡырлы йәйәләр эсендәгеләре М. Сөләймәновтың өҫтәмәләре.

[1] Төрки дастандары, тәуарихтары традицияһы буйынса Әҙәм, Нух пәйғәмбәрҙән хикәйәләү башланып китеүсән. Башҡорт тәуарихтары һәм шәжәрәләре лә, ғәҙәттә, шулай пәйғәмбәрҙәр тарихы менән асыла.

[2] *Төрөк.* Төрки генеалогияһында Төрөк төрки халыҡтарының тәү атабабаһы тип һанала.

[3] Әбелғазихандың «Шәжәрәи төрк» китабында Алынса хан Күкхандың улы.

[4] *Магул* — Аланса хандың улы (Әбелғазихан «Шәжәрәи төрк»).

[5] *Ҡарахан, Күрхан, Күҙхан, Урхан* төрки шәжәрәһе буйынса, Магулдың дүрт улы.

[5а] Бер анкетала шулай тиелә: «Беҙҙең башҡорт Ҡарахандан элек үк ошо Урал буйында булғанлығын ҡарттар әйтә торғандар ине. Ҡырҡты тауы Ҡарахандың курганы, Ҡурнаҡ тауы — Ҡарахандың йәйләүе тигәндәре бардыр». (Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡулъяҙмалар һәм иҫке баҫма китаптар фонды //Ватандаш. — 2000. — № 8).

[6] Төрки-монгол халыҡтары генеалогияһында Башҡорт — Күрхандың улы (Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фонды, 1а, 114, 1аә, 110-сы б.).

[7] Юғарылағы генеалогия:

Магул — Ҡарахан — Уғыҙхан
Магул — Күрхан — Башҡорт

Бер башҡорт ҡулъяҙма анкетала: «Башҡорттар йәнә Күрхан, тимәк көр тигән тамырҙан», тип әйтелә (Ватандаш. — 2000.— № 8).

Башҡорт халыҡ легендалары был боронғо тарих, ырыу-ара бәйләнештәр хаҡында былай бәйән ҡыла: «Хәҙрәте Яфәстең Урал, Иҙел, Йайыҡ араларына килеп ерләшеүе тарихларда мәғлүм. Һәм дә һигеҙ уғылының нәҫеленән Аланса хан, Ҡарахан, уның уғылы Увыҙ (Уғыҙ)хан замандарынан бирле — ҡартлар әйтеүенә бинайән һәм дә ҡайһы дәлилгә бинайән — беҙем жәмиғ башҡорт халҡы Урал, Йайыҡ йәйләп һәм бер күбәйә башлайан» (юғарылағы ТТӘИ фонды, 1а, 114, 1аә, 110-сы б.).

[8] Уғыҙҙың әсәһенең имсәген имеү-иммәүенә бәйле эпизод Рәшитетдиндең «Жәмәиғ әт-тәуарих», Әбүлғази хандың «Шәжәрәи төрк», «Шәжәрәи тәракимә», уйғырҙарҙың «Уғыҙнамә» ҡулъяҙмалары версияларында, башҡорт шәжәрәләрендә шаҡтай тулы сағыла. Башҡорт шәжәрәһендә был ситуация былай хикәйәләнә: «Ҡарахандың Уғыҙ исемле улы тыуған, ти. Уның күркәмлеге ай менән ҡояштан өҫтөн имеш. Шул сабый өс көн буйы имсәк ҡапмаған. Шунан һуң әсәһе төш күргән. Төшөндә уға балаһы: «Әгәр ҙә мосолман булмаһаң, асла имсәк иммәм», — тигән, ти. Сабыйын ҡыҙғаныл, әсә йәшерен рәүештә ислам динен ҡабул иткән икән, шунан ғына Уғыҙ уғлан имсәк имеп, теремекләнеп, ай үҫәһен көн үҫеп киткән, ти» (Башҡортостан Республикаһы Фәндәр Академияһының Ғилми архивы. Шәжәрәләр төпләмәһе, фонд 3, оп. 2, д. 36).

[9] Уғыҙға исем ҡушыу ваҡиғаһы Әбүлғази хандың «Шәжәрәи тәракимә» әҫәренә нигеҙләнеп хикәйә ителде (А. Кононов. Әбелғази хан: Шәжәрәи тәракимә. — М., 1958, 13—14-се б.).

[10] Уғыҙ исеменең этимологияһын халыҡ хәтере һәм ғалимдар төрлөсәрәк аңлата. Иҫке төрки телендә Огуз — Окүз үгеҙ төшөнсәһен биреү фекере күберәк нығынған. Беҙҙең фаразыбыҙға, Уғыҙ исеменең мәғәнәһе ыуыҙ һүҙе менән дә бәйләнешле булыуы бик ихтимал, сөнки ул уғлан әсәһенең тәүге ыуыҙ һөтөн имеп кенә әҙәм булып теремекләнеп китә. «Уғыҙнамә» дастанында: «Ошо уғыл анаһының күкрәгенән ыуыҙ һөттө бер-ике һурҙы ла бүтән иммәне», — тиелә. Йәғни ыуыҙ һөткә иғтибар бирелә. Ыуыҙ — Ывуз — Овуз — Оғуз теҙмәһе лә шуны раҫлағандай. Башҡорт легендаларында Уғыҙ «Увыҙ» тип исемләнә.

[11] Уғыҙҙың өйләнеүенә бәйле мажаралар Уғыҙ дастаны һәм тәуарихтарының һәр версияһында йә киң тасуирлау йәиһә ҡыҫҡаса бәйән итеү (хикәйәләү) рәүешендә ҡабатлана.

[12] Уйғыр һүҙенең этимологияһын күпселек ғалимдар ойоу, берегеү мәғәнәһенә бәйләп аңлаталар. Уйғыр иҫке төрки телендә уйығыр (ойоғор) мәғәнәһендә. Беҙҙә әле лә, һөт ойоно, тиҙәр. Йәғни ойоно, һөттән беректе. Иманға, сәждәгә ойоно ла, тиҙәр. Был да берләшеү, бер булыу мәғәнәһендә. Ҡар.: ул хаҡтағы әҙәбиәт А. Н. Кононовтың «Родословная туркмен. Шәжәрәи тәракимә» китабында (М., 1958, 84—85-се б.).

С. Юлдаши былай ти: «Уғыҙҙың бер ыруғ халыҡҡа уйғыр исемен биреүе лә халә беҙҙең ойоҡҡан йоҡоға, йәғни йоҡоға талыуға, йәнә иманға ойоғанмын, тип әйткән һүҙҙәребеҙ туры килә» (Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡулъяҙмалар һәм иҫке баҫма китаптар фонды//Ватандаш. — 2000. —№ 8).

[13] Ҡаңлы һүҙе арбалы тигән мәғәнәлә (Древнетюркский словарь, Л., 1969, 418, 419-сы биттәр), В. А. Бартольд. Сочинения, т. IV, 406—408-се б.).

[14] *Ҡаңлылар.* Башҡорт ырыуҙарының ҡаңлы тармағы ошо боронғо төрки ҡаңлылар ырыуына барып тоташа.

[15] Хытай, Масин — боронғо ҡытай дәүләте, Масин тип боронғо Көньяҡ Ҡытай өлөшөн атағандар.

[16] Шул уҡ.

[17] *Кәрел, Башҡорт.* Ғәрәп сәйәхәтселәре Худуд һәм Жувәйни яҙмаларында Кәрел менән Башҡорт иле бергә телгә алына. Рәшитетдиндең «Жәмәиғ әт-тәуарих» китабында ла был исемдәр бар.

[18] Бер исемләнгән анкетала «Уғыҙхан һамаҡтарына ҡарағанда ла, беҙҙең башҡорт шул замандарҙан, йәғни 3—4 мең йылдан бирле ошо Урал түңәрәгендә икәне беленһә кәрәк» тиелә. (Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡулъяҙмалар һәм иҫке баҫмалар фонды//Ватандаш. — 2000. — № 8).

[19] Анкета: «Тарихтарҙа Үҙханды Уғыҙхан тип яҙһалар ҙа беҙҙең симағыбыҙ Үҙхан ине. Бәғзе әбейҙәр мин бала ваҡытта йырлай торғайнылар: «Аңа маҡтабыраҡ увыҙында һөйләшкән ил ағаһы Үҙхан», тип» (Юғарылағы сығанаҡ).

[20] Әхмәтзәки Вәлиди «Уғыҙхан Күк Ғүрк вә Башҡорт мәмләкәтенә килерҙән алда туҡһан мең ҡәҙәр ҡәүем туплаған»ын, уларҙың төрлө һандағы уйғыр ырыуҙары булыуын иҫкә ала (Огуз дастаны, Истанбул, 1972, 88-се б.). Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев «Йәдкәр» китабында ла уйғыр-башҡорт бәйләнештәре хаҡында байтаҡ фекер әйтә.

[21] Был сюжет Рәшит-әт-диндең «Жәмәиғ әт-тәуарих»ында сағыла.

[22] Был сюжет шулай уҡ «Жәмәиғ әт-тәуарих»тан. Ул башҡорт хикмәтле хикәйәттәрендә лә һаҡланған.

[23] Был сюжет Уғыҙхан хаҡындағы дастанда һәм тәуарихтарҙың барыһында ла урын алған. Башҡорт шәжәрәләренә килеп ингән. Мәҫәлән, Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә ул былай бәйән ителә: «Ҡыпсаҡтың үҙе Лоҡман Хәким нәҫеленәндер, уның атаһы Уғыҙхан урҙаһында сәрғәскәр булып, урҙаһы еңелеп, үҙе вафат ителгәненән һуң, Ҡыпсаҡ анаһынан һуғыш сәфәрендә тыуып, Уғыҙхан уны үҙ тәрбиәһенә алмыш. Ҡыпсаҡ юлда ағас ҡыуышында тыуғанлығы өсөн, аңа, үҙҙәренең ғәҙәтенсә, Ҡыпсаҡ тип ат бирмештәр. Ҡыпсаҡ үҫеп ир булғандан һуң, Уғыҙ Ҡыпсаҡты ил урҙа биреп, Этил йылғаһы буйына ебәреп... Дон, Яйыҡ, Этил йылғалары буйында йәшәгән халыҡтарҙы үҙенә ил ҡушып, үҙенә күп ил ҡаратып, ҙур бер ханлыҡ төҙөнө». (Башҡорт шәжәрәләре. — 93-сө б.)

[24] Ҡараңғылыҡ иленә сәйәхәт Уғыҙ дастанында бәйән ителә. Былдай ваҡиға Европа сәйәхәтсеһе Марко Поло сәйәхәтнамәһендә осрай: «Татары (кипчаки) приходят сюда (т.е. в Страну Мрака — *Г. Х.)*, и вот как: приходят они сюда на жеребых кобылах, а жеребят оставляют на границе, чтобы кобылы возвращались к своим жеребятам, и знают они дорогу лучше людей. Так-то приходят сюда татары на кобылах, а жеребят оставляют позади, и грабят они тут все, что находят, а когда награбят, возвращаются. Кобылы идут к своим жеребятам, и знают они хорошо свою дорогу» (Книга Марко Поло. — М., 1955. — С. 166).

[25] Рәшит-әт-диндең «Жәмәиғ әт-тәуарих» яҙмаһында был тарих бик киң яҡтыртыла.

[26] Уғыҙхандың улдары, ейәндәре башҡорт тәуарихтарында, шәжәрәләрендә, генеалогик яҙмаларҙа йыш телгә алына.

[27] Ҡадир Ғәлиҙең «Жәмәиғ әт-тәуарих» ҡульяҙма әҫәрендә лә Уғыҙхандың генеалогияһына, тоҡомдаштарына ҙур ғына урын бирелә, төрки ырыуҙарына нисек итеп тамға, ағас, оран, әйбер өләшеүе тасуир ителә. Рус ғалимы П. И. Рычков «История Оренбургская (1730—1756)» китабында (Ырымбур, 1896) шундай уҡ мәғлүмәттәрҙе бирә. Швед Страленбергтың Көнсығыш Европа һәм Азия хаҡында мәғлүмәт килтергәндә, Уғыҙхандың скиф һәм монгол халыҡтарына башлыҡ булып, Урта һәм Кесе Азияға Волга йылғаһы аша Азов диңгеҙе буйлап алып килеүен атап китеүе лә иғтибарҙы тарта (А. И. Рычков. История Оренбургская, 70-се б.).

[28] Был олуғ йыйын тамашаһы һәм уға бағлы шиғыр Әбүлғали хандың «Шәжәрәи тәракимә» ҡомартҡыһы буйынса килтерелде (А. Н. Кононов. Шәжәрәи тәракимә. — М., 1958. 27—28-се б.).

## 8. ЛӘЙЛӘ МЕНӘН МӘЖНҮН

Ватандаш. — 2000. — №8. — 143—161-се б.

Баҫманы академик Ғ. Б. Хөсәйенов әҙерләгән. Төрки донъяһына киң таралған был ғәрәп дастанының иҫке төркисә бер күсереге булған был тексты башҡортсаға ауҙарыу эшен дә ул атҡарған.

Дастандың журналда баҫтырылған вариантын әҙерләүсенең әйтеүенсә элек был әҫәр башҡорт, татар халыҡтары араһында ла киң билдәле булған. Уны, күсереп, ҡулдан-ҡулға йөрөтөп, яратып уҡыр булғандар. Шундай күсеректәрҙең береһе Республикабыҙҙың Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге милли китапханаһында, бер яҙмаһы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Был әҫәрҙең башҡорттар араһында таралышы мәсьәләһенә ҡағылып, Ғ. Б. Хөсәйенов шулай тип яҙғайны: «Минең үҙемә, мәҫәлән, заманында атаҡлы Үтәк мәҙрәсәһендә уҡыған, яҙма әҙәбиәтте, халыҡ ижадын яҡшы белгән һәм үҙе лә күңел өсөн мөнәжәттәр, бәйеттәр сығарғылаған ҡәйнәм Ғәзизә Ғүмәрованан һораштырып, Йософ-Зөләйха, Таһир-Зөһрә, Сәйфелмөлөк, Ләйлә-Мәжнүн сюжеттарын теркәштереп, ҡайһыларын хәтергә беркетеп ҡуйғаным бар. Ҡәйнәм Йософ-Зөләйха, Таһир-Зөһрә әҫәрҙәренең байтаҡ өлөшөн шиғырҙары менән яттан да белә ине. Әммә Ләйлә-Мәжнүн сюжетын бик ҡыҫҡа ғына һөйләне, шиғыр өлөштәрен онотҡан. Ҡыҫҡа, схематик булһа ла шул сюжетты ла аҡҡа күсерҙем». (Ватандаш. — 2000. — №8. — 142-се б.)

## 9. СЫҢҒЫҘНАМӘ

Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Ике томда. 1-се том. — 252—274-се б. Был әҫәр хаҡында 1934 йылда Абдулҡадир Инан/Фәтхелҡадир Сөләймәновтың «Дастан-ы Несл-и Ченгиз Хан» тигән хеҙмәте баҫылып сыҡҡан (Азербайжан Йурт Билгиси. — 1934. — 25—28.05; Ватандаш. — 1998. — №6. — 104—110-сы б.).

Урта төрөк ҡәүемдәрендә ошо исем менән йөрөгән әҫәрҙәр (ҡыҫҡаса «Сыңғыҙнамә»ләр) төркиәт ғилем донъяһына ла мәғлүм. Остазыбыҙ Көпрүлөзаде Мәхмәт Фуат бей, үҙенең «Төрөк әҙәбиәте тарихы» исемле ҡиммәтле әҫәрендә (11-се бүлек, §§ 12, 13, 270—280-се биттәр) был дастандың барлыҡҡа килеү тарихы һәм эстәлегенә ҡағылып, әҫәрҙең мотивы, гүзәл һүрәтләү ысулдары һәм башҡа төрки дастандарына мөнәсәбәте тураһында үҙ фекерҙәрен әйтеп үтә. Көнбайыш ғилем донъяһына был әҫәр күптән билдәле булып, төрлө ғилми хеҙмәттәрҙә сығанаҡ итеп файҙаланыла, хатта уның бер нөсхәһе русса ла тәржемә ителгән. Фәҡәт мәсьәләнең күңелдә ҡырған тарафы ла бар: ошоға тиклем бер кемдең дә «Сыңғыҙнамә»нең төрлө нөсхәләре табылыу, яҙып алыныу ваҡыты һәм урыны, саф монгол риүәйәттәре (Юань-Чао-Би-Ши, Сананг Сәчән, Алтан Топчи) һәм ислам-монгол әҫәрҙәре (Рәшит-әт-дин, Әбүлғази һ.б.) менән бәйләнеше буйынса махсус шөғөлләнгәне юҡ. Хәлбүки, дастан урта төрөктәрҙең әҙәби хеҙмәте булһа ла, унда бөтә төрки ырыу-ҡәбиләләренә ҡағылышлы боронғо легендаларҙы тәсмерләп була, был йәһәттән «Сыңғыҙнамә»нең әһәмиәте Ҡытай сығанаҡтарынан кәм түгел.

«Сыңғыҙнамә»ләрҙең нөсхәләре:

I. Ташҡа баҫылған нөсхәләр (текстар): а. 1822 йылғы Халфин Ҡазан баҫмаһы; б. 1882 йылғы Жиһаншин баҫмаһы; в. 1870 йылғы Радлов йыйынтығындағы (Proben III, 63—68) ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ риүәйәте. Быныһы бик ҡыҫҡа

бер хикәйәнән ғибәрәт. Садиҡ Рәми тарафынан бүләк ителгән ҡаҙаҡ-ҡырғыҙса бер нөсхә, Васильев һәм Балгамбай улы тарафынан тәржемә ителеп, 1907—1908 йылда Ырымбурҙа нәшер ителә (Т.А.U.А.К., Oeuvres de la comission schientifique des archives d'Orenburg, t. XIX). Профессор Бартольд был тәржемә өсөн яҙылған «Инеш һүҙ»ендә нөсхәнең телен ниңәлер *сығатайса* тип атай. Хәлбүки, тәржемәлә күрһәтелгән өҙөктәргә, шәхси һәм географик исемдәргә ҡарап, нөсхәнең ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ шиүәһендә яҙылыуына шик юҡ. Эстәлеге буйынса был нөсхә Халфин нөсхәһенән бер яғы менән дә айырылмай.

II. Ҡулъяҙма нөсхәләр. Бер ҡулъяҙма Париж милли китапханаһында һаҡлана (Suppl. Turc. №143). Ҡулъяҙма Халфин нөсхәһенең көҙгөләге сағылышы кеүек, тик Халфин нөсхәһендә күҙәтелгән Осман тәьҫире ҡулъяҙмала осрамай. Нөсхәнең яҙылыу тарихы ла билдәле түгел.

III. Берлин нөсхәһе (Дәүләт китапханаһы, Diez, 137). Был нөсхә Халфин нөсхәһенән ярайһы уҡ айырылып тора. Хәрәкәләр менән яҙылған. Бында Халфин нөсхәһендә әйтеп үтелгән Бөрйән, Юрматы, Тамъян кеүек тик башҡорттарға ғына хас булған ҡәбилә исемдәре, Торатау кеүек географик исемдәр иҫкә алынмай. Ихтимал, был нөсхә һуңыраҡ ҡырым ноғайҙары араһында табылғандыр. «Гәрәй нәҫеле»нең килеп сығыуы хаҡындағы риүәйәт тә (17а-18а) быға ишара итә кеүек. Был нөсхәлә Халфин, Жиһаншин һәм Мәхмүт Садиҡ Рәми нөсхәләрендә осраған мөҡәддимә (инеш һүҙ) юҡ. Әҫәр туранан-тура «Өләмалик» хикәйәһенән башлана.

IV. Британ музеум (Британия музейы) нөсхәһе. Риеу каталогына ингән (Catalogue of the Turc. Manuscr. in the British Mus., 281).

V. А. Рәхим һәм А. Азиз бейҙәрҙең «Татар әҙәбиәте тарихы»нда (феодализм дәүере, 89—97-се биттәр) килтерелгән өс нөсхә. Уларҙан Ғалимьян Баруди нөсхәһе айырыуса әһәмиәтле. Был нөсхә, 1635 йылда Хан Кирманда яҙылып, бөгөнгә тиклем билдәле булған нөсхәләр араһында иң боронғоһо һанала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең өсөн үтә мөһим булған был нөсхәнең Халфин нөсхәһенән айырмалы булыуына бер кем дә иғтибар итмәгән.

VI. Катанов һәм Покровскийҙың уртаҡ әҫәрендә[1] иҫкә алынған нөсхәләр: а. Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ шиүәһендә яҙылған булып, Алматыла күсереп алынған Пантусов нөсхәһе. б. Баһаутдин Семберле нөсхәһе.

Ырымбур мосолмандарының ташҡа баҫылған һәм баҫылмаған әҫәрҙәре хаҡында һүҙ алып барғанда, Р. Игнатьев «бик боронғо бер Тимучин хикәйәһе»н иҫкә ала. Игнатьев фекеренсә, был нөсхә «Сыңғыҙнамә»нән бик аҙ айырылған була. Ғалим, «был нөсхә» тип, Халфиндың нөсхәһен күҙ уңында тота икән, уның был фекерен нигеҙле тип атауы ҡыйын. Сөнки уның, руссаға тәржемә итеп, уҡыусыға тәҡдим иткән өҙөктәре беҙҙең «Сыңғыҙнамә»ләрҙең һис береһендә осрамай: «Тимучин падишахлыҡҡа Тәңре тарафынан тәғәйенләнде. Тимучиндың тыуасағы хаҡында күрәҙәселәр алдан уҡ хәбәр биргәйнеләр. Тимучин тыуған саҡта уның атаһы татарҙарҙың Тимучин исемле берәүһен еңелеүгә дусар иткәйне. Шуға ла уның исемен улына бирҙе. Тимучин ун ете йәшенә тиклем Дауыт (пәйғәмбәр) кеүек көтөүсе булды. Атаһы үлгәс, халыҡ йыйылып килеп, уның хан булыуын үтенде... Хан «Йенучи»гә харадж, йәғни һалым түләү талап ителә ине. Ҡырҡ мең сатыр фетнә башланы. Тимучин, уларҙы язалап, башлыҡтарын етмеш ҡаҙанда бешерҙе... Бер әүлиә абыз килде. Тимучиндың бынан һуң Сыңғыҙ тип йөрөтөләсәге, бөтөн

---

[1] Катанов, Покровский. Отрывок из одной татарской летописи, Казань, 1905, 1—26.

донъяны яулап аласағы хаҡында әйтте. Абыздан көлдөләр. Әммә бер ҡош килеп ултырҙы һәм «ченгиз, ченгиз...» тип һайрай башланы»[2].

Был һөйләмдәргә ҡарап, риүәйәттең беҙҙәге нөсхәләргә ҡарағанда ла, тарихираҡ икәнлеген шәйләп була. Риүәйәттәге Әүлиә абыҙдың Рәшит-әт-дин иҫкә алған Бут Тәңре Көкчә Шаман[3] булыуына шик юҡ. Шул да иғтибарға лайыҡ, Игнатьев тикшергән «Сыңғыҙнамә»ләрҙә Сыңғыҙ ислам дине өсөн һуғышҡан бер мөжәһид сифатында тасуир ителә.

«Сыңғыҙнамә» ҡайҙа һәм ҡасан табыла? Алдан уҡ иҫкәртеп китеү кәрәктер, беҙ бында «Сыңғыҙнамә» сифатында «Сыңғыҙнамә» йыйынтыктарының Сыңғыҙға арналған өлөшөн генә алабыҙ (Халфин һәм Жиһаншин нәшерҙәрендә «Фасл-ы фи бәйан-ы дастан-ы Аҡһаҡ Тимер» бабына тиклем; Берлин нөсхәһендә 1—12а биттәр; русса тәржемәлә 118—139-сы биттәр). Йыйынтыҡҡа өҫтәлгән «Аҡһаҡ Тимер» кеүек хикәйәләр, хроникалар әлегә беҙҙе ҡыҙыҡһындырмай.

«Сыңғыҙнамә»нең ҡайҙа табылыу мәсьәләһе А. Азизи һәм А. Рәхим бейҙәрҙең «Татар әҙәбиәте тарихы» исемле әҫәрендә лә ҡуҙғатылып китә. Уларҙың фараздарына күрә, әҫәрҙең теле һәм географик исемдәр әҫәрҙең Ҡазан илендә яҙылыуын дәлилләй икән (90-сы бит). Фәҡәт әҙәбиәт тарихсыларының был дәлилдәре ышаныслы нигеҙҙәргә таянмаған. Беренсенән, әҫәрҙең теле — бөтөн урта төрөк ҡәүемдәре өсөн уртаҡ әҙәби тел булған сығатай теленең тәьҫире аҫтында торған, дөйөм халыҡ әҙәбиәтендә ҡулланылған бер телдән ғибәрәт. «Сыңғыҙнамә» тел һәм ысул йәһәтенән Әбүлғази һәм Үтәмеш Хажиҙың теле менән яҙылған. XIX быуат урталарына тиклем Ҡазан иленең халҡында был әҙәби тел хаким булған кеүек, Башҡортостан, Себер һәм Ҡаҙағстан сахраларында ла был тел хакимлыҡ итә. Икенсенән, әҫәрҙең «Сыңғыҙнамә» өлөшөндә «Ҡазан иле»н хәтерләткән хатта бер һүҙ ҙә табылмаҫ. Киреһенсә, географик исемдәрҙән «Туратау», ҡәбилә исемдәренән «Юрматы», «Бөржән», «Тамъян» кеүек башҡа төрки ҡәүемдәрҙә осрамаған башҡорт ҡәбилә исемдәре тулып ята. Дастандың иң мөһим өлөшөн тәшкил иткән тема — Сыңғыҙхан тарафынан һәр ҡәбиләгә махсус темаға, ағас һәм ҡош бирелеү кеүек йола, тик башҡорттарҙа ғына бик йәнле рәүештә һаҡланған[4]. Хатта ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ һәм нуғай кеүек боронғо ҡәбилә тәшкиләтен шул көйөнсә һаҡлаған төрки ҡәүемдәрендә лә был йоланың эҙен табыу мөмкин.

Беҙгә мәғлүм булыуынса, рус ғилми әҙәбиәтендә «Сыңғыҙнамә» беренсе мәртәбә «Лепехин сәйәхәтнамәһе»ндә иҫкә алына: «Ағиҙел ярынан 11 саҡрым алыҫлыҡта Туратау тигән бейек тау бар. Башҡорттар был тауҙы изге тип иҫәпләйҙәр. Риүәйәттәргә ҡарағанда, бында элекке нуғай хандарының урҙаһы торған, һуңынан тау әүлиә һәм изгеләр өсөн һыйыныу урыны булған. Ошонда уҡ «Ҡыҙҙар тауы» тип аталған бер түбә бар. Бында боронғо хандарҙың дөйөм мәжлестәре булған, имеш. Башҡорттар Туратауға менеүҙән тартынырҙар. «Сыңғыҙ китабы»нда был тау хаҡында күп нәмә яҙылған тиҙәр»[5].

Башҡортостанда, Туратау яҡтарында Лепехин 1769 йылда була. Уның һүҙҙәренән «Сыңғыҙнамә»нең, башҡорттарҙа бик таралған булып, бер «дини китап кеүек» ҡабул ителеүе аңлашыла.

---

[2] Р. Г. Игнатьев. Сказания, сказки и песни (Зап.Оренб. отд. РГО, 1875, III, 197—198).

[3] Рәшит-әт-дин. 105 (ТВО, XIII).

[4] Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. Йәдкәр. Ҡазан. 1897, 58.

[5] Полное собр. учен. путеш. по России. Петербург, 1822, IV, 35—37.

Ысынлап та, «Сыңғыҙнамә»лә Торатау иҫкә алына. Һәр хәлдә был әҫәрҙең Башҡортостандың мәркәзендә, боронғо хандарҙың традицион урҙаһы булған Туратау тирәһендә яҙылған булыуы аңлашыла. «Туратау» исеме, был тауҙың тирә яғында йәшәгән Юрматы, Бөрйән, Тамъян кеүек ҡәбиләләрҙең телгә алыныуы быға дәлил. Яҙма нөсхәләрҙең иң күп табылған ере лә, көнсығыш һәм көньяҡ Башҡортостан булып, Сыңғыҙ йолалары ла уларға яҡшы таныш. Буддасы монголдарҙа Сыңғыҙ «һары дин»дең көрәшсеһе һәм изгеһе булһа, башҡорт мөхитендә «ислам мөжәһиде» һәм әүлиә кеүек ҡабул ителә. Был иһә «Сыңғыҙнамә»нең яҙылыу урынын асыҡлау мәсьәләһендә бик әһәмиәтле дәлил булып тора.

Ҡазан мосолмандары, болғар-ислам ғәҙәттәрен дауам иттереүселәр булғанғамы, Сыңғыҙға бер мәжүси һәм ислам дошманы итеп ҡарайҙар. XX быуаттың тәүге ун йылында үтә көсәйеп киткән милли хәрәкәттең идеологияһына ҡарамаҫтан, Сыңғыҙ һәм Тимурға ҡарата нәфрәт хисе Осман төрөктәрендәге кеүек дауам итә әле. Тимәк, бер Ҡазан муллаһы «Ябраил кеүек, күркле, яурынында мөһөрлө» Сыңғыҙ тураһында ҡисса яҙа алмаҫ ине. Ҡазанда хакимлыҡ иткән Алтын Урҙа нәҫелдәре булһынмы, Ҡырым хандарының ырыу ғәҙәттәре булһынмы, улар Ҡазан илендә һис бер эҙ ҡалдырмай[6]. Сөнки был династиялар болғар-сыуаш мәҙәниәтенең традицияларына түгел, Орхон яҡтарынан килгән, күк төрөк йолаларын йәшәткән төркөмдәргә таянған була. Урындағы Ҡазан халҡы иһә, тел яғынан ҡыпсаҡлашһа ла, милли йола йәһәтенән һаман сыуаш-болғар булып ҡала килә һәм һуңыраҡ, монгол дәүерендә килгән төрки элементтарына «оккупант», ят, тип ҡарай. Улар әлеге оккупанттар йөрөткән «татар», «монгол» һәм «төрк» исемдәренең һис береһен ҡабул итмәй, үҙҙәрен «мосолман», ҡайһы саҡта «болғар» тип атайҙар ине. Иҫке төрки-уйғыр традицияларына тоғро ҡалған элементтарҙың бер өлөшө Ҡырым-нуғай урҙаһына, бер өлөшө башҡорт иленә күсеп ултыра, ә өсөнсө бер өлөшө, туранан-тура хәрби көс сифатында урыҫ батшаларының ғәскәренә китә һәм унда күптән ойоша башлаған Ҡасим ханлығын ҡеүәтләндерә. Тарихта һис бер шик тыуҙырмаған хәҡиҡәт шул: урыҫ оккупацияһынан һуң да Ҡазан илендәге халыҡтың ҙур күпселеген элекке (урындағы) болғар-төрки элементы тәшкил итә. Был күҙлектән ҡарағанда, болғар-ислам мәҙәниәтен, традицияларын йәшәткән Ҡазан илендә «Сыңғыҙнамә» кеүек дастандарҙың яҙылыуы мөмкин түгел ине.

Ошо факторҙар иҫәпкә алынһа, ҡулыбыҙҙағы «Сыңғыҙнамә»нең (Берлин нөсхәһенән тыш) Башҡортостанда, Нуғай ханлығы хакимлыҡ иткән төбәктә яҙылыуын ҡәтғи рәүештә һөйләй алабыҙ.

«Сыңғыҙнамә»нең яҙылыу ваҡытына килгәндә, эш шулай тора: әлегә билдәле нөсхәләрҙең мөҡәддимәһендә Сыңғыҙ хан нәҫеленең һуңғы вәкиле, Себер шаһзадәләренән булған Солтан Борһан һәм был шаһзадәнең суҡындырылыуы иҫкә алынғанға, Риеу был әҫәрҙең XVII быуатҡа (1653) ҡарауын алға һөрә. Профессор Бартольд иһә (T.Or.Uç. А.К. XIX, 118), «Сыңғыҙнамә» йыйынтығының аҙаҡҡы өлөшөндәге 1735 йыл ваҡиғаһына ҡарап, әҫәрҙең һуңыраҡ яҙылыуы хаҡында һөйләй. Шулай итеп, Риеуҙың фаразы «Сыңғыҙнамә»нең инеш һүҙендәге «Борһан Солтандың суҡындырылыуы» хаҡындағы хикәйәгә, Бартольдтың фаразы «Сыңғыҙнамә» йыйынтығының (Аҡһаҡ Тимер дастанын һәм башҡа хикәйәләрҙе лә индереп) тотошлайы менән бер автор

---

[6] Сөйөмбикә улы Үтәмеш Гәрәйгә ҡағылышлы бәғзе риүәйәттәрҙең ҡазанлыларҙа эҙ ҡалдырыуы уның көсләп суҡындырылыуы менән бәйләнгәндер.

әҫәре булыуы фекеренә таяна. Әммә «Сыңғыҙнамә»нең 1635 йылда күсерелгән бер нөсхәһенең табылыуы был фараздарҙың яңылыш икәнлеген күрһәтә.

Беҙҙеңсә, «Сыңғыҙнамә»нең яҙылыу ваҡытында ике төрлө ихтимал булыуы мөмкин:

1. Иран илханидтары һарайында «Алтын дәфтәр», Ҡытай чингизидтәре һарайында «Топчән»[7] исемле династия тарихы бар ине. Алтын Урҙа чингизидтәренең һарайында ла быңдай дәфтәрҙең булыуын инҡар итеп булмай. Беҙҙең «Сыңғыҙнамә»беҙ ошо типтағы бер әҫәрҙең халыҡ традицияларына яраҡлаштырылған, «төркиләштерелгән» бер нөсхәһе булырға мөмкин. Ихтимал, уның асыл нөсхәһе уйғырса, Алтын Урҙа төрки элементының иң көслө урынында, яҙылғандыр. Сөнки әҫәрҙә боронғо классик уйғыр теленә хас тәғбирҙәрҙең күп осрауы, Сыңғыҙҙың тормош хикәйәләренә ҡарағанда, иҫке төрки нәҫелдәре хаҡында риүәйәттәрҙең күберәк булыуы ла был фекерҙе ҡеүәтләй. Быларҙың бөтәһен иғтибарға алһаҡ, ҡулыбыҙҙағы «Сыңғыҙнамә»нең Алтын Урҙаның бер «ярсығы» булған Тура хандары (Себер һәм Башҡортостанда хакимлыҡ иткән династия) заманында яҙылып алыныуын ҡабул итеү кәрәктер. Һәр хәлдә, был әҫәрҙең яҙылыу тарихы 1500 йылдан да һуңыраҡ була алмаҫ.

2. Икенсе ихтимал. Был әҫәрҙең төп нөсхәһе уйғырса булып, ҡалмыҡ оккупацияһы ваҡытында Шәрҡи Төркөстан һәм Жунгариянан килгән һәм, ислам диненә күсеп, башҡорттар араһында хан булырға теләгән ҡалмыҡ принцтары ярҙамында урындағы әҙәби төркисәгә тәржемә ителеүе мөмкин. Халыҡ араһында Алтын Урҙа династиялары хаҡында ла быңдай риүәйәттәр күп йөрөгәнгә, әҫәрҙең халыҡ араһында Ҡөрьән кеүек яратып уҡылыуына аптырарға ярамай. «Сыңғыҙнамә», әле генә әйтеп үтеүебеҙсә, ҡалмыҡ яуы ваҡытында Шәреҡтән килгән бер әҫәрҙең күсермәһе булған сүрәттә лә, уның яҙып алыныу тарихы XVI быуаттан һуңыраҡ була алмаҫ.

«Сыңғыҙнамә» — боронғо уғыҙ һәм уйғыр династиялары хаҡында төрки ҡәүемдәре араһында йөрөгән легендаларҙы монгол яуынан һуң Сыңғыҙ исеме тирәһендә туплаған бер әҫәр ул. Легенданы яҙып алған исеме билдәһеҙ автор ҙа Сыңғыҙхандың Оғуз улы Күк хандың нәҫеленән булыуына ышанған. Быны дастанға инеш һүҙ сифатында өҫтәлгән шәжәрәнән дә яҡшы аңлайбыҙ.

«Сыңғыҙнамә»нең сығанағы Рәшит-әт-диндең «Жәмәиғ әт-тәуарих»ы ла, йәки уның төркисә күсермәһе булған «Жәмәиғ әт-тәуарих» та (Ғәли Желайыр), «Шибанинамә»[8]лә, «Ченгиз-намә-и Өтәмиш Хажи» ҙа түгелдер, Әбулғази Хан «Жәмәиғ әт-тәуарих»ты бик яҡшы белгән тарихсы булһа ла, үҙе файҙаланған сығанаҡтар сифатында «ун ете нөсхә «Сыңғыҙнамә»не генә иҫкә ала[9].

«Сыңғыҙнамә»нең эстәлеген «Жәмәиғ әт-тәуарих»тың (дар бөйан дастанһа падишаһан аҡуәм могул үә әтрак үә ғәйриһим) бабы[10] менән сағыштырып ҡараһаҡ, «Сыңғыҙнамә»ләге ҡайһы бер мотивтарҙың Рәшит-әт-дин тарафынан алынмай ташлап ҡалдырылыуын күрербеҙ. Был мотивтар араһында иғтибарға иң лайыҡ булғандары — «Өләмалик Көрүклүнең ҡәлғәгә ябып ҡуйылып, бер кемгә лә күрһәтелмәүе» һәм «Добон Байандың үлеменән һуң Аланҡуаның, бүре менән мөнәсәбәткә инеп, Сыңғыҙҙы тыуҙырыуы»[10].

---

[7] Палладий, Юань Чао-Миши (Би-Ши) (ТПДМ, IV, 4).

[8] Ғәли Желайырҙың «Жәмәиғ әт-тәуарих»ы һәм «Шибанинамә» исемле бер аноним әҫәр профессор Березиндың «Шәреҡ тарихсылары китапханаһы» исемле йыйынтығының I һәм VII китабы сифатында нәшер ителә.

[9] Березин нәшере (Т.В.О., 515).

[10] Риза Нур «Шәжәрә-и Төрк», 40 бит.

«Гүзәл принцессаның ҡалғаға биклəп ҡуйылыуы» мотивы беҙгə билдəле булған башҡа ислам əҫəрҙəрендə осрамай.[11] Был мотив Ҡытай йылъяҙмаларында уйғыр династиялары хаҡында һүҙ сыҡҡанда, телгә алына. Был риүәйәткә ҡарағанда, «һун ҡағаны үҙенең һылыу ҡыҙын өс йылға ҡалғаға бикләп ҡуя. Унда бер бүре үтеп инә һәм ҡыҙ менән мөнәсәбәткә керә. Бер бала тыуа. Уйғыр ҡағандарының ата-бабалары ошо баланан башланып, китә»,[12] имеш.

Рәшит-әт-диндең «Җәмәиғ әт-тәуарих»ында ғына түгел, башҡа ислам тарихсыларының əҫəрҙəрендə лә осрамаған был мотивтың «Сыңғыҙнамә»лә урын алыуы был əҫəрҙең сығанағы булып ислам тәьҫиренән азат булған бик боронғо төрки риүәйәте, ихтимал, берәй төрки яҙма əҫəре тороуын күрһәтә. Беҙҙең «Сыңғыҙнамә»ләге был мотив монгол риүәйәте булған «Юань Чао-Би-ши», «Алтан Топчи» һәм «Сананг Сәчән»дә лә осрамай. Шулай итеп, төрки «Сыңғыҙнамә»ләрен монгол «Сыңғыҙнамә»ләренән айырыусы иң мөһим үҙенсәлек — тап ошо «Ҡалғаға бикләп ҡуйылған принцесса» мотивы ла инде.

«Сыңғыҙнамә»лә Сыңғыҙхандың ун ике ҡәбиләгә тамға, оран, ҡош, ағас һәм тимер күлдәк (көбә) биреүе хаҡында әйтелә. Был риүәйәт Рәшит-әт-диндә лә, монгол əҫəрҙəрендə лә юҡ. «Оғузнамә»ләрҙә иһә тамға Оғуз хан тарафынан бирелә, ҡәбиләләр ҙә исемдәрен Оғуз хандан алалар. Шулай итеп, «Сыңғыҙнамә»ләге был риүәйәттең «Оғузнамә»ләрҙән алыныуына шик юҡ.

«Сыңғыҙнамә»ләге «Ҡалғаға бикләп ҡуйылған принцесса» һәм «Сыңғыҙҙың ҡәбиләләргә тамға, ағас, оран, ... биреүе» тураһындағы өлөштәрҙе иҫәпкә алмаһаҡ, үҙенең ҡалған эстәлеге буйынса ул «Юань-Чао-Би-ши», «Алтан Топчи» һәм «Сананг Сәчән»дәрҙән айырылмай тиерлек. Рәшит-әт-дин əҫəрендə әйтелмәгән, ләкин «Сыңғыҙнамә» һәм өҫтә телгә алынған монгол əҫəрҙəре өсөн уртаҡ булған тема — «Дова Сохур» (төркисә «Сыңғыҙнамә»ләрҙә «Шыба Соҡур») хикәйәһе. «Сыңғыҙнамә» лә хикәйәнең эстәлеге шулай:

«Торомбай (Торомтай. — *Ә. С.*) сәсәндең улы Томаул Мәргән ауға сыҡҡайны. Янында Шыба Соҡур исемле төркмән һаҡсыһы бар ине. Маңлайында бер генә күҙе бар ине. Бер көн Шыба Соҡур Томаул Мәргәнгә: «Алыҫта бер ҡара нәмә күрәм. Был бер алтын кәмә булырға тейеш. Унда тағы бер ҡара тау бар. Мин был кәмәне шул ҡара тауҙың артында күрәм. Һиңә үтенесем шул: һин ул кәмәгә төбәп уҡ ат! Эсендә нимә бар — һинеке, тышында нимә бар — минеке булһын!» — тине. Иртәгеһен кәмә яҡын килде. Томаул Мәргән сәп алып уҡ атты. Кәмәнең эсенән бер гүзәл ҡыҙ сыҡты. Был ҡыҙ Өләмалик Көрүклү ине...»

Монгол риүәйәте былай:

«Туру Хол Чыждың ике улы бар ине: Дубун Мәргән һәм Дова Сохур. Дова Сохурҙың маңлайында бер генә күҙе бар ине. Был бер күҙе менән ул өс мәнзилдән (мәнзил — бер көнлөк юл) күрә ине. Бер көн ике туған, ауға сығып, бер тауға юл тоттолар. Дова Сохур Тингәлик[13] (ҡайһы бер нөсхәләрҙә Тингәле) йылғаһының яр буйында бер каруан күрҙе. Был каруанда, бер ҡара сатыр эсендә ғәйәт һылыу бер ҡыҙ бар ине. Был ҡыҙ Аланҡуа[14] ине. Ҡыҙҙы бик

---

[11] Радлов тарафынан яҙып алынған Сыңғыҙ хикәйәһенә (Proben III, 63—68) ҡағылып Потанин был риүәйәттең ислам əҫəрҙəре араһында осрамауы хаҡында һөйләй, бәлки беҙҙең «Сыңғыҙнамә»нән хәбәрҙар булмағандыр. (Восточные мотивы в средневековом европ.эпосе, 33.)

[12] Иакинф (Гиацинт), «Собрание свед. о народах»; Deguines (H. Cahit B.), III. 7—8.

[13] Тингәлик йәки Тикәлик йылғаһының исеме «Сыңғыҙнамә»ләрҙә лә иҫкә алына. (Җиһаншин әшере — 12; Париж китапханаһы нөсхәһе — 100, русса тәржемә — 131 бит.)

[14] Алан Хоа.

оҡшатҡан Дова Сохур, уны туғаны Дубун Мәргәнгә кәләш итеп алып бирҙе[15]...»

Беҙҙең «Сыңғыҙнамә»ләрҙәге Сыңғыҙға арналған хикәйәләр урынына, монгол риүәйәттәрендә Будунжарға арналған хикәйәләр күрербеҙ. «Сыңғыҙнамә» һәм монгол риүәйәттәрен сағыштырған саҡта, шәхси исемдәрҙәге айырмаға иғтибар итмәһәк, уларҙың мотивтарының тап килеүенә шаһит булырбыҙ.

«Сыңғыҙнамә»лә, Дубун Байан вафат булғас, Аланҡуа Күк бүренән ауырға ҡала. Был бүре (буҙ ҡорт) күктән нур ҡиәфәтендә төшмәй. Дубун Байандан булған улдары Аланҡуаны уйнаш итеүҙә гәйепләйҙәр.

«Ирһеҙ ауырға ҡалған бисә булырмы?! «Сакалун» тигән хайуанмы әллә һин, һыу эсеп ауырға ҡалырға? «Мина» (ҡайһы бер нөсхәләрҙә «мани») тигән ҡошмо әллә һин, ҡояш эҫеһенән йөклө ҡалырға? Ҡауын-ҡарбузмы әллә һин, ирһеҙ орлоҡ етештерергә? Тауыҡмы әллә һин, күлгә аунап күкәй һалырға? Ҡыр инәһеме (ҡайһы бер нөсхәләрҙә Ҡур инә) әллә һин, күбек ашап, ауырға ҡалырға?!» — тинеләр.

Был мотив Рәшит-әт-дин әҫәрендә лә, монгол риүәйәттәрендә лә бар. Сыңғыҙхандың (монгол риүәйәттәрендә Будунжарҙың) туғандары менән ауға китеүе, тауҙа ҡош аулап тамаҡ аҫырауы, уны эҙләп килгән ҡәбилә бейҙәренең йылға буйында бик күп ҡош мамығы табыуы «Сыңғыҙнамә»лә генә түгел, монгол риүәйәттәрендә лә бар[16], ләкин Рәшит-әт-дин әҫәрендә генә осрамай.

Аланҡуаның уландарына биргән нәсихәте монгол риүәйәттәрендә лә тап «Сыңғыҙнамә»ләге кеүек яңғырай.

«Сыңғыҙнамә»нең башында «Аҡ диңгеҙ»ҙең иҫкә алыныуы был риүәйәттәр өсөн яңылыҡ булһа кәрәк. «Юань-Чао-Би-ши» иһә «Күк бүре менән марал Тингиш йылғаһына килделәр», — тип башлана. «Сыңғыҙнамә»ләге «Өләмалик» һүҙенең говаса исемле маралдың өңө булыуына шик юҡ.

«Сыңғыҙнамә»нең бер нөсхәһендә нур һәм бүренән тыуған балаға (Сыңғыҙға) әсәһенең «Мани» тип исем ҡушыуы[17] айырыуса иғтибарға лайыҡ. Был факт риүәйәткә «Оғузнамә»нең йәки манихеист төркиҙәр тарафынан һөйләнгән башҡа бер риүәйәттең тәьҫире булыуын күрһәтә.

[2] *Майҡы бей һ.б.* — бында, асылда, башҡорт ырыуҙарының бейҙәре һаналған:

Майҡы бей — Табын ырыуының, Урдаж (йәғни Урадач) бей — Мең ырыуының, Тимер Ҡотлығ (Ҡотло) — Түңгәүерҙең, Мүйтән (Мөйтән) бей — Үҫәргән ырыуының башлыҡтары булған; Ҡалдар, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Кирәйет — шул исемде этноним итеп алған ырыуҙарҙың бейҙәре («Бабсаҡ менән Күсәк» эпосының Ҡыпсаҡ версияһының ҡайһы бер варианттарында Күсәк бей Ҡыпсаҡ бей тип исемләнә). Ошо күҙлектән ҡарағанда, «Юрыҡта» тигәндә — Юрматы, «Теленгут» тигәндә — Тиләү күҙ уңында тотолған булыуы ихтимал, сөнки уларҙы ла шул исемдәрҙе этноним итеп алған ырыуҙарҙың бейҙәре тип белгәндәр.

[3] *Ҡуңғрат бей, Ҡатай бей, Салжут (Һалйот, Һалйыуыт) бей, Ҡыят бей* — улар ҙа шул исемде этноним иткән ҡәүемдәрҙең башлыҡтары.

[4] *Ау, туған (дөрөҫөндә, Аҡтуған), Тутыяҡ (Тутыя), Аҡ тилаҡ* — Бөрйән, Тамъян, Юрматы ырыуҙарының орандары. Тимәк, 2-се иҫкәрмәлә Юрматы хаҡында әйтелгәндәр дөрөҫ булып сыға. Быны текста Сыңғыҙ хандың ырыу атрибуттары өләшеүе хаҡында әйтелгәндәр ҙә хуплай.

---

[15] Юань-Чао-Би-ши (Палладий), 23, Алтан Топчи, 120, Córанг Сәчән, 51—61.

[16] Юань-Чао-Би-ши, 27—28, Алтан Топчи, 122.

[5] *Тамға, ҡош, ағас, оран* — ырыуҙарҙы бер-береһенән айырыу билдәләре, уларҙың үҙаллылығын (суверенитетын) билдәләүсе атрибуттар.

## 10. АҠҺАҠ ТИМЕР

### (Фасыл фи бәйән дастан Аҡсаҡ Тимер)

Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Ике томда. 1-се том. — 274—285-се б.

[1] Борон заманда Буяғым тигән хан (бер аймаҡтың олоһо) булған, — тип башлана ул әҫәр. — Буяғым бер көн ат еткән, хат еткән ерҙән һынсыларҙы йыйып: «Миңә үлем кемдән була?» — тип һораған. Һынсылар ҡурайҙарын уйнап, ырымлап, ом-шом ҡылып «Быйылғы ғоманлы бисәләрҙән бер ул тыуыр, һиңә үлем шул баланан булыр», — тигәндәр. Буяғым шул йылғы ғоманлы йөҙ ҡырҡ бисәнең башын киҫтереп, бер бисәнең эсен бүҫтергән. Бисәнең эсендәге баланың янбашы зәғифләнеп, аҡһаҡ булып, ир бала донъяға килгән. Ул балаға Аҡһаҡ Тимер тип исем биргәндәр.

Аҡһаҡ Тимер өс йәшенә еткәндә атаһы ла, инәһе лә үлеп, үкһеҙ булып ҡалған. Аҡһаҡ Тимерҙе Буяғымдың оло бисәһе үҙенә ул (бала) итеп ҡуйыныҡа алған. Хан аҙаҡ уны йылҡы көтөргә ҡушҡан. Ул ун һигеҙ йәшенәсә Буяғым хандың малын көткән. Халыҡ был уңған егетте яҡын күргән, ханды яратмаған. Бер мәлде Буяғым хан үлтерелгән, уның урынына Аҡһаҡ Тимер хан итеп ҡуйылған (Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 1-се том. — 306-сы б.).

[2] *Бер Бараж тигән... аждаһа... ҡачтылар* — «Тәтегәс бей» дастанында ла ошо уҡ «аждаһа менән орош ҡылдылар» мотивы ҡабатлана.

## 11. ҒАЙСА УЛЫ ӘМӘТ

### (Фасыл фи бәйән дастан Ғайса уғлы Әмәт)

Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. — 286—290-сы б.

[1] Йәнебәк ханға бәйле башҡорт шәжәрәһендә ... халыҡсан эпик традиция яҙма әҙәби традиция менән тығыҙыраҡ үрелгән. 1771 йылда күсереп, Риза Фәхретдинов яҙмалары аша килеп еткән шәжәрәлә Йәнебәк хандың урынына ултырырға ниәтләнгән Жейәнғол (Ейәнғол), атаһы менән бер туған ағаһы булған Бирдебәктең улын үлтереп, ҡасып китә, ҡаҙаҡтар араһына барып һыйына, һуна кейек кеүек боҫоп йөрөгәне өсөн, үҙенә Һун Ейәнғол, ырыуына Һун Ҡыпсаҡ ҡушаматы тағыла. Хандар тормошона, тәхет өсөн көрәшкә бәйле ситуация эпик әҫәрҙең бер өлөшө кеүек күренһә лә, шәжәрәлә ул ошо жанр стиленә көйләнә (Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 1-се том. — 312-се б.).

## 12. ҺУҢҒЫ ҺАРТАЙ

Шул исемдәге мәғлүм эпос нигеҙендә (ә ул беҙгә сәсмәүер рәүешендә генә килеп еткән) шағир Мәүлит Ямалетдинов яҙған//Мәүлит Ямалетдинов. Һуңғы Һартай// Ватандаш.— 1998. — №1. — 61—67-се б.

Был эпик сюжет 1935 йылда археолог Максим Ильич Касьянов имзаһы менән рус телендә теркәлгән хәлдә Ғилми архивта һаҡлана. (ф.3, оп. 12/259), 1971 йылда «Ағиҙел» журналының 2-се һанында Мөхтәр Сәғитов һәм Әкрәм

Биишев тәржемәһендә тәүгә башҡорт телендә донъя күргән, артабан күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады»ның Фәнүзә Нәҙершина төҙөгән «Риүәйәттәр, легендалар» йыйынтығының «Аңлатмалар» бүлегендә (364—369-сы б.) бирелгән, шул уҡ фольклорсы тарафынан тәүгә русса баҫтырылған (БНТ: Т.2. Предания и легенды, — Уфа: БКИ, 1987. — № 195). 1999 йылда әҫәрҙең тәржемәһенең «Ағиҙел» варианты йәнә «Башҡорт халыҡ ижады»ның яңы баҫмаһында донъя күрҙе// БХИ. 4-се том/ Төҙ. Мөхтәр Сәғитов, Берйән Байымов.— Өфө: Китап, 1999. — 289—293-сө б.

Эпик ҡомартҡының Касьянов имзаһы менән теркәлгән варианты хаҡында өҫтәлмә мәғлүмәттәрҙе әле күрһәтелгән томдың инеш мәҡәләһенән (27—29-сы б.) һәм «Аңлатмалар» өлөшөнән (280—281-се б.) алырға була.

[1] *Мәңгү* — монголдың менгү династияһы вәкиле.

[2] *Сарбаз* — ябай яугир.

[3] *Аҡһаҡ Тимер* — Урта Азия әмире (1336—1405), 1391 йылда Туҡтамыш хан менән һуғыша-һуғыша Башҡортостан аша үтә.

[4] *Хөсәйенбәк* — ислам миссионеры (XIV б.) кәшәнәһе, Шишмә районы ерендә.

[5] *Хыҙыр Ильяс* — бәләгә тарыусыларҙы, сәфәр сыҡҡандарҙы, аҙашҡандарҙы, йәшеллекте, һыуҙы ҡурсалаусы пәйғәмбәр.

[6] *Алай* — полк.

М. И. Касьянов был әҫәрҙе рус теленә үҙе тәржемә иткәнме, әллә уға ошо телдә һөйләгәндәрме, уны кемдән ишеткән — был хаҡта беҙгә бер ни ҙә мәғлүм түгел. Әммә әҫәрҙең русса тексын уҡығанда, мәғлүм ҡобайырҙарыбыҙҙы хәтерләтмәле (бигерәк тә Ялыҡ бейҙең мөрәжәғәттәрендә) урындары (рифмалы һүҙҙәр, шиғыр үлсәмен хәтерләтерлек юлдар осрамауына ҡарамаҫтан) стилендә эске ритм, ҡобайыр фажиғаи-ҡаһарманлыҡ пафосы ныҡ аңҡып тора. Айырым һүҙҙәре төп нөсхәләгесә, йәғни башҡортса, һаҡланған. Быны шундайыраҡ билдәләре — барыһы бергә беҙгә сәсмәүер рәүешендә генә килеп еткән был эпик ҡомартҡының төп нөсхәһе теҙмә телмәргә ҡоролған булырға тейеш, тип ышаныс менән әйтергә нигеҙ бирә. Шуға ла ул шағирҙарҙың иғтибарын йәлеп иткәндер. Беренсе мәртәбә уны рус телендә теҙмәүергә Башҡортостанда йәшәгән рус шағиры Роберт Паль әйләндерҙе (Роберт Паль. Джалык// Истоки,— 1995.— февраль. — № 4(98). Бына ул дастан:

*Роберт Паль*

## ДЖАЛЫК

*Поэма*

*По башкирскому историческому преданию «Последний из Сартаева рода»*

### 1

Ох, как жарко горит моя голова!
Как казан на огне, о котором забыли.
Тяжел мой язык, и вязнут слова
В гортани, как ноги в озерном иле.

Как вспомню, что было, — немеют уста.
Но я вырву из них последние речи!
Слушайте все, я прошу неспроста.
Вот расскажу —
И уйду.
В вечность.

## 2

Мое имя —Джалык. Я сын Бурнака.
Внук Ташкая. Сартаева рода.
Хвост лисицы — был знак мой,
моя тамга[1],
Как пернач[2] мой, любил я свободу.
Горький ветер степей был мне
сладок и люб.
Дух майдана, как пламя,
Играл моей кровью.
Под высоким холмом
Чиялы-Туб
Находилось мое становье.

Хорошо я жил на родной земле!
Был богат я и молод, не ведал печали.
Как орел на скале,
Восседал я в седле.
Аксакалом и бием[3] меня величали.

Косяки табунов веселили мой взор.
Славу их курайсы[4] разносили по свету.
Чтоб не тронули их ни медведи, ни вор,
Я приставил к ним лучших своих егетов[5].

Был в ясыре[6] моем желтоликий калмык.
Я приблизил его и вознес над другими,
Потому что он в сердце мое проник
Тем, что видел и ночью глазами своими.

Но ему не понравилось быть башлыком[7].
Он пытался бежать, но бежал неумело.
Я отсек ему ухо и сделал рабом, —
Бик якши[8], справедливо и правильно
сделал.

Да, я жил хорошо. Три послушных жены
Мою душу и плоть ублажали как надо.
Пил кумыс я под песни родной стороны,
Мне охота была не трудом, а отрадой.

Был я крепок, как дуб.
Был удар мой тяжел.
В двадцать лет я батыром уже назывался.
И когда заявился к нам
Менгу-монгол[9],
Чтоб отнять нашу волю, —
Я лишь рассмеялся.

Его глупый приказ и читать я не стал!
Я назад отослал его с тем же сарбазом[10].
Еще... дохлую мышь я к нему привязал
И стрелу, поломав, отослал ему разом.

Я смеялся над ним! От души, не со зла.
И когда его рать через степи поперла, —
Без труда
        отыскала
                моя стрела
В том горячем бою
Его медное горло.

Так я жил, наслаждаясь, иным не в пример.
Жизнь любила меня и хранила на случай.
Пока злой, кровожадный Аксак-Тимер[11]
Не навис над башкирами
Черной тучей...

## 3

Побелела от жара моя голова.
Закипает слюна в обгоревшей гортани.
Пересох мой язык, и теснятся слова
В моем рту,
Точно камни,
Все небо изранив.

Скоро, скоро сомкнутся мои уста.
Но я вырву из них последние речи!
Слушайте все, я прошу неспроста, —
Вот расскажу —
И уйду.
В вечность.

## 4

Я расскажу о своих сыновьях.
Было два у меня их. Два — было.
Подарил их, наверно, мне сам Аллах,
Наделив красотою и силой.

Восемь раз по четыре и еще один
Было мне, когда первенец мой родился.
Кармасаном стал зваться мой
первый сын,
А второй Сармасаном на свет явился.

Й-е, Худай![12] Как же были они хороши!
Две кровинки мои,
Два крыла моих верных!
В них, в моих соколах, я не чаял души,
Для отцовской любви
Каждый был из них первым.

И хоть матерь одна принесла их на свет,
Были братья ничем меж собою не схожи.
Кармасан был могучий и строгий егет,
Крепкотелый
И смуглокожий.

Были брови его круче сабли моей.
А под ними глаза — две звезды из тумана.
Карагата[13], омытого ливнем, черней
Были звезды — глаза моего Кармасана.

Сармасан!
Как надречный осокорь, он был.
Белотелый, а сердцем доверчив и нежен.
Как он наши прекрасные песни любил!
Как печаль услаждал,
Как мечты мои нежил!

Был певцом Сармасан.
И егетом он был.
Мать-земля через песни дала ему силу.
Я любил его.
Я их обоих любил...
Хорошо, это было.
И правильно было.

Как-то был я в гостях за рекою Ак-Су[14]
И увидел там девушку возраста мака.
За один ее взгляд,
За одну косу
Я, не думая, отдал бы аргамака.

Рядом с нею луна не смела светить.
Ее волосы были темнее кузгуна[15].
Красить щеки и брови свои сурьмить
Было незачем этой красавице юной.

«Хур кызы![16] — я сказал себе. — Удалец
Будет тот, кто возьмет ее!» — и
присвистнул.
Через день я пригнал
Три отары овец
И целый косяк
Кобылиц кумысных.

Я взял ее как драгоценный цветок.
Как главный алмаз из короны султана.
И лучше жены на земле, видит Бог,
Я не нашел бы.
Для Кармасана.

Славный туй[17] закатил я в честь молодых.
Весь мой род веселился,
Довольный невестой.
Я был счастлив не меньше, чем сам
жених...
Но наш праздник испортили
Злые вести.

Их привез мне гонец, что валился с ног.
Он сказал:
— Й-е, худай! Из-за речки Яика
В наши земли идет — ослепи его Бог! —
Хан Тимер Хромоногий, воитель
великий.

Он сказал:
— Й-е, Худай! С ним великая рать:
Атабеки и мурзы, барласы, сарбазы[18]...
Их, как мух среди лета,
Не пересчитать,
Не объять ни рассудком,
Ни слухом, ни глазом.

Он сказал... Я дослушал его до конца.
За испорченный туй
Я ему языка не отрезал.
Я его накормил,
Я приветил его как гонца.
И молчал...
Хотя в сердце кипело железо!

## 5

Хай, дустар![19] Голова моя — что казан,
Из которого выкипело все до капли.
Гаснут мысли и меркнут мои глаза,
А проклятья все горло мое исцарапали.

Черной кровью запекся мой старый рот.
Вяло сникли когда-то могучие плечи.
Но я доскажу,
Как погиб мой род!
Доскажу. И уйду.
В вечность.

### 6

Мой гонец не соврал мне. Дурюс, дурюс[20].
Тамерлан опрокинул покой Урала.
Превратившись в песок,
Степь взошла до небес,
— Поднялась у Яика, —
В Ак-Су упала.

И тогда мой калмык, мой презренный раб —
Да станет вонючим само его имя! —
Врагам указал места переправ,
И те саранчой пронеслись над ними!

Я видел с холма их туменов[21] лет.
Я слышал, как небо об землю билось.
Я понял тогда:
Это смерть идет.
Смерть, которой не ведома милость.

То был день, когда смолк одинокий кэкук[22],
Когда лето гуляло в зеленом уборе.
Не теряя часов, я послал своих слуг,
Чтобы скот и людей отправляли в горы.

Я молился Аллаху и всем святым.
Я на помощь их звал,
Но они — молчали.
И понял тогда я, что нам самим
Придется испить
Свои чаши печали.

Впервые я страх испытал не во сне.
Впервые морозом ожег мне он душу.
Но я растопил его жалящий снег,
Я клятву родимой земле не нарушил!

Решимость и гнев укрепили меня.
Я кликнул своих сыновей и егетов.
О, сколько в них было святого огня!
И я еще больше любил их за это.

Немного нас было. Но разве числом
Берется победа в сраженье кровавом?
Война для меня не была ремеслом,
Кольчугу ее я надел не для славы.

Облечься в доспех меня вынудил враг.
Пусть жизни лишусь я, но трусом
не буду!..
И тут к нам подъехал
Тимера баскак[23],
Спесивый, как целое стадо верблюдов.

«Земли и воды!» — не слезая с коня,
Потребовал этот ублюдок коварный.
Презренье и злость обуяла меня,
Я сбил его наземь единым ударом.

«Земли тебе? Вот она; Сколько сожрешь,
Настолько насытится волчья утроба.
А вот и река. Если сможешь, запьешь.
Ты сам попросил. Разрешаю: испробуй!»

За саблю схватился безумец! Тогда
Я медом обмазал баскака покруче
И голым — так вот вам земля и вода! —
Смеясь, посадил ,
В муравьиную кучу!

О, как завизжал он, паршивый кусюк![24]
Но мы уже мчались навстречу туменам.
Немного нас было, но сечи той звук
Еще и сегодня я слышу отменно.

Я первого всадника взял на копье.
Второго свалил костоломным сукмаром[25].
Я в битве забыл даже имя свое!
Я бился, как лев, не считая ударов.

Со мною сражались мои сыновья.
Лицо Кармасана пылало отвагой.
Он в ярость вошел.
Он рубил, как и я, —
С плеча,
со смертельным
искусным оттягом.

Не стало меча, — он их бил кистенем.
Как коршун, парил он над их головами.
Убили коня, — он сражался ножом.
Не стало ножа, — он душил их руками.

А младший мой сын, мой родной Сармасан!
Он славно рубился, под стать Кармасану.
Вовсю порезвился его ятаган
Над полем голов,
Как над стадом баранов.

Как сладко любил я обоих в тот час!
Не плакал от ран, — от любви своей
плакал.
За каждую каплю, что пала из глаз,
Я взял по сарбазу из рати Аксака!

Мы бились бок о бок. Я был им отец.
Я смерть возвращал
Тем, кто смерть нам приносит. —
Сам великий Тимер,
Сам Железный Хромец
Слышал стрел моей ярости
Яростный посвист!

Только ночь размотала той сечи клубок.
Мы ушли за холмы — я и трое егетов.
В том безумном бою
Весь алай[26] мой полег
И мои сыновья, мои славные дети.

Эй, дустар, как же я их в ту ночь хоронил!..
Две реки безымянных омыли их раны...
Никогда не забыть мне тех скромных
могил:
У одной — Кармасана,
У другой — Сармасана.

Этим рекам своих сыновей имена
Подарил я, чтоб жизнь их не знала предела.
Ну а сам на коне подтянул стремена
И — в седло, и — в леса, и — на бранное
дело.

Кровь детей, боль и пепел родимой
земли!..
Я вобрал их в себя и не ждал утешенья.
Я спросил свою кровь, что она повелит?
И она повелела мне:
Мщенье и мщенье!

## 7

Вот и все. Отболела моя голова.
Замутился мой месяц и солнце погасло.
Облетели года, как с березы листва,
На душе изболевшейся чисто и ясно.

Скоро, скоро уйду я вослед сыновьям.
Лишь на миг задержусь у порога святого,
Чтоб сквозь муки и горести
Выкатить вам
Из хрипящего горла
Последнее слово.

## 8

Тамерлан — да убей его семя Аллах! —
Растоптал мою землю, лишил меня рода.
Я, как раненый пес, укрывался в лесах,
Я лишился всего,
Но свободу не отдал.

Справедливая месть укрепила мой дух.
Днем и ночью врагам не давал я покоя.
Я их резал, как скот,
Я давил их, как мух,
Я глаза вырывал им вот этой рукою.

Я выслеживал их, как охотник зверей.
Я их бил из засад — беспощадно и яро.
Куркаклар![27] Они мною пугали детей!
Трепеща, называли меня юлбасаром![28]

Хорошо!
Я-то знал, что не вор, не злодей,
Как бы подло враги меня ни называли.
Я ни с кем не делился судьбою своей, —
Сам я пил,
Не делясь,
Свою чашу печали.

Лишь теперь, когда выпита чаша до дна,
Понял я, умудренный годами скитаний,
Что она, золотая,
На всех нас — одна,
Всенародная чаша борьбы и страданий.

Пить ее в одиночку — не лучший удел,
Только вместе ее мы наполним свободой!
Вот и все,
Что сказать напоследок хотел
Вам бездомный байгуш[29]
Из Сартаева рода.

Вот и все. Ухожу. Каменеет язык.
Машет крыльями птица-душа, отлетая.
Я исполнил свой долг.
Мое имя — Джалык.
Я последний из гордого рода Сартая.

Ухожу, оставляя вам землю свою,
Быстротечность годов
И веков бесконечность.
Ухожу, ухожу...
Я уже на краю.
Ухожу, ухожу...
В вечность.

## 9

...Дочитана страшная повесть веков,
Суровая исповедь сердца высокого.
А в небе пасутся стада облаков,
А с круч Кармасана глядятся осокори.

Течет Сармасан, озорной, как апрель,
Ласкает холмы и поля хлебородные...
Встречай сыновей своих, Мать-Агидель,
Прими их, великая Память народная!

*1993*

[1] *Тамга* — родовой знак.

[2] *Пернач* — родовая птица.

[3] *Аксакал* — старейшина рода, старший, уважаемый человек. Бий — родоплеменной вождь, военачальник.

[4] *Курайсы* — кураист.

[5] *Егет* — джигит, молодец.

[6] *Ясыр* — плен.

[7] *Башлык* — старший над кем-то.

[8] *Бик якши* — очень хорошо.

[9] *Менгу-монгол* — здесь один из последних представителей монгольской династии Менгу.

[10] *Сарбаз* — воин.

[11] *Аксак-Тимер* — среднеазиатский полководец, эмир Тимер, Тамерлан. Аксак — Хромой.

[12] *Й-е, Худай* — О Боже!

[13] *Карагат* — смородина.
[14] *Ак-Су* — белая, светлая вода; река Белая, Агидель.
[15] *Кузгун* — ворон.
[16] *Хур-кызы* — райская девушка.
[17] *Туй* — праздник, свадьба.
[18] *Атабеки, мурзы, барласы, сарбазы* — вельможи, военачальники, рядовые воины.
[19] *Хай, дустар!* — Эх, друзья!
[20] *Дурюс, дурюс* — правильно, правда.
[21] *Тумен* — воинское подразделение в 10 тысяч воинов.
[22] *Кэкук* — кукушка.
[23] *Баскак* — ханский чиновник.
[24] *Кусюк* — щенок.
[25] *Сукмар* — боевая палица.
[26] *Алай* — отряд, полк.
[27] *Куркаклар* — трусы.
[28] *Юлбасар* — разбойник.
[29] *Байгуш* — бедняк, нищий.

## 13. ЯЛЫҠ БЕЙ, ҠАРМАСАН МЕНӘН СӘРМӘСӘН

«Һуңғы Һартай» сюжетына нигеҙләнеп һәм шунан этәреш алып, Әхмәт Сөләймәнов яҙған дастан. Беренсе тапҡыр «Ялыҡ бей дастаны» тигән исеме менән 1997 йылдың авгусында «Башҡортостан» телерадиокомпанияһының беренсе каналда сыға торған радиотапшырыуҙа эфирға сыҡты. Икенсе йылына шул уҡ исем менән «Йәшлек» гәзитендә донъя күрҙе. Ҡар.://Йәшлек. — 1998. — 16,18,21,28 апрель; 5,12,14,19 май.

[1] «Һуңғы Һартай»ҙың Мәүлит Ямалетдинов яҙған теҙмәүер вариантын уҡыусыларға тәҡдим иткәндә, «Ватандаш» журналы редакция исеменән шундай оҙатма биргән: «Һуңғы Һартай» башҡорт халҡының эпик әҫәрҙәре араһында айырым урын биләп тора. Унда бер ырыуҙың яҙмышы аша Башҡортостан тарихына бәйле конкрет ваҡиға тасуирлана. Был әҫәр беҙҙең көндәргә урыҫ телендә килеп еткән, уны 1935 йылда археолог М. И. Касьянов «Последний из Сартаева рода» тигән исем аҫтында яҙып алып ҡағыҙға теркәгән.

Быға тиклем «Һуңғы Һартай» хикәйәте Роберт Палдең шиғри эшләнешендә «Истоки» гәзитендә донъя күргәйне. Әҫәр үҙ ижадсыларыбыҙҙы ла илһамландыра. Әхмәт Сөләймәновтың уны эпос ҡалыбына һалыуы мәғлүм беҙгә.

Журнал уҡыусыларыбыҙға «Һуңғы Һартай»ҙың бер вариантын тәҡдим итәбеҙ. Уны шиғри ҡалыпҡа һалыусы — билдәле шағир һәм яҙыусы Мәүлит Ямалетдин».

[2] *Мәнгү түрә* — Ҡар.: Тәүге вар. 1-се иҫк.

[3] *Уға ҡушып оҙаттым һыныҡтарын бер уҡтың, үләкһәһен йомрандың* — былдай «хат» ебәреү алымы скифтарға ла хас була. Улар бер мәлде фарсы батшаһы Дарийҙың бирелергә талап итеүенә шулайыраҡ яуап ебәрә:

[4] *Ҡошом менән ораным, тамғам, ағас... бар саҡта* — ырыу атрибуттары уға эйә булған ҡәүемдең суверенитетҡа эйә булыуы хаҡында һөйләй. Был атрибуттар хаҡында мәғлүмәтте «Сыңғыҙнамә»нән һәм Рәил Ғүмәр улы Кузеевтың «Происхождение башкир» тигән монографияһынан (М.: Наука, 1974, — С. 72—75) алырға мөмкин.

[5] *Аҡһаҡ Тимер* — Урта Азия әмире (1336—1405) 1391 йылда Туҡтамыш хан менән һуғыша-һуғыша Башҡортостандан үтә, уны бөлгөнлөккә төшөрә. Ул һуғыштан башҡорт бейҙәре лә ситтә ҡалмай. «Аҡһаҡ Тимер», «Тәтегәс бей», «Ҡазанфари» дастандарын һәм уларҙың 2-се иҫкәрмәләрен ҡарағыҙ.

[6] *Аҡбуҙат* — «Урал батыр», «Аҡбуҙат» һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпостарының мифик персонажы. Һуңғыһында ул Аҡ буҙса тип исемләнгән. Ә «Шүлгән менән Минәй батыр»ҙа Аҡбуҙат Буҙ айғыр тип алынған.

[7] *Аҡ болан* — миф буйынса, бәхет, ырыҫ килтереүсе кейек.

[8] *Шалтыраҡ* — ҡолон бәйләгәндә, бауы сиралмаһын өсөн эшләнгән әйләнеп тормалы тоҡанлы ағас яйлама.

[9] *Чирчик ҡылысы* — Үзбәк илендәге шул ис. ҡала оҫталары эшләгән данлыҡлы булат ҡылыс.

[10] *Бараҡ аймағы* — Бөрйән ырыуының бер тармағы. Фазлаллах Рәшит-этдиндең «Уғызнамә»һен дә (Баку, 1987; 34-се б.) «донъяның ҡараңғы яғында» йәшәгән Ҡылбараҡ ҡәбиләһе телгә алына.

[11] *Ябыҡ-ҡарағай* — риүәйәт буйынса (Архангель районы Аҙау ауылы Шакир Галин әйтеүенсә), хәҙерге Әбйәлил районы, Магнит ҡалаһы тирәһендәге урын.

[12] *Саҡма сағып (хәбәр итеү, оран һалыу)* — борон башҡорттоң сик һаҡсыһы салғыйға ышыҡлап, төнөн былай — саҡма сағып, тауҙан-тауға хәбәр ебәргән.

[13] *Тәңре ҡунағы* — саҡырылмаған ҡунаҡ. Ундай ҡунаҡ — изге ҡунаҡ иҫәпләнгән. Фәлсәфәһе: саҡырылып, кем килмәй, саҡырылмай ҙа кил; саҡырғанды кем ҡунаҡ итмәй, саҡырылмай килгәнгә лә һый-хөрмәт күрһәтә бел.

[14] *Өс атым ер* — атылған уҡ алырлыҡ араның үлсәме.

[15] *Хөсәйенбәк* — ислам миссионеры (XIII б.), кәшәнәһе Шишмә районы ерендә.

[16] *Хызыр-Ильяс* — бәләгә тарыусыларҙы, сәфәр сыҡҡандарҙы, аҙашҡандарҙы, йәшеллекте, һыуҙы ҡурсалаусы пәйғәмбәр.

[17] *Зөлҡәрнәй* — мөгөҙлө батша, Александр Македонский. Ҡар.: «Аҡташ хан».

[18] *Һарт* — үзбәк йә үзбәк сығышлы башҡорт.

[19] *Олоҡай, Туғай* — Аҡһаҡ Тимерҙең бейҙәре.

[20] *Истәк (иштәк)* — Урта Азияла, Ҡаҙағстанда әле лә башҡортто шулай атап йөрөтәләр.

[21] *Аттила* — боронғо төркиҙәрҙең (ҡыпсаҡтарҙың)-һундарҙың башлығы (XV б.). Ул көнбайышҡа ябырылып, көнсығыш Рим империяһын, Галлияны, төньяҡ Италияны баҫып ала. Аттила заговор ҡорбаны була.

## 14. ТӘТЕГӘС БЕЙ

*(Юрматы шәжәрәһе буйынса)*

Башкирские шежере. — С. 27—31; Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. 1-се том.— 233—238-се б. Был шәжәрәнең ике күсереге бары мәғлүм: беренсеһен 1927 йылда Сәғит Мирасов «Башҡорт аймағы»ның 2-се һанында баҫтыра; икенсеһен 1927 йылда Рәил Ғүмәр улы Кузеевҡа Көйөргәҙе р-ны Яҡшембәт ауылы Бирзин Ғәни тапшыра. Р. Ғ. Кузеевтың фекеренсә, шәжәрәне Тәтегәс бей Баҡый мулланан яҙҙыртҡан (бей уға әйтеп торған). Хижра буйынса 972 йылда (христиансa, 1564—1565 йылдарҙа) үлер алдынан Тәтегәс шәжәрәне ил

ағалары Аҙнайға, Илсек/әй/ Тимергә һәм Ҡармышҡа тапшыра /Башкирские шежере. — С. 177/.

[1] *Йорт* — ил, халыҡ.

[2] 1391 йылда Туҡтамыш хан (Алтын урҙаныҡы) менән Аҡһаҡ Тимер (Урта Азия әмире) үҙ-ара һуғыша-һуғыша Башҡортостан аша үтеп китеп, Волгаға барып етеп, уның һул ҡушылдығы Ҡондорсала хәл иткес бәрелешкә инәләр. Туҡтамыш ҡыйратыла.

[3] *Шадлыҡ тигән һыу* — Шады йылғаһы, Ағиҙелдең ҡушылдығы булған Бөрө йылғаһының уң ҡушылдығы. Оло Иҙел аръяғындағы Зәй , Шишмә — юрматылар ере булыуы ихтимал. Риүәйәт буйынса шундағы Ҡалатауҙа бер бей йәшәгән, ти.

[4] *Олоғ бей* — ырыуҙар береге (союзы) башлығы.

[5] *Бейлек* — бей булып хакимлыҡ итеү хоҡуғы.

[6] *Нуғайлар* — Өфөнән алып Башҡортостандың бөтә көньяғы Нуғай урҙаһы ҡулында була (XV б.).

[7] *Игенләр һич үчмәде* — күрәһең, юрматылар XVI быуатта уҡ игенселеккә лә иғтибар биргән.

[8] Нуғайҙарҙың бер өлөшө Исмаил хан етәкселегендә Мәскәү менән яҡшы мөнәсәбәттә торһа ла, уның ҡустыһы Йософ етәкселегендәгеләре Мәскәүҙең эшмәкәрлеген ек күрә, Башҡортостандағы өҫтөнлөктәрен юғалтыуҙан шөрләп, Кубан тарафтарына күсә.

[9] *Туғыз йөз дә илле өчтә ирде* — хижра буйынса 953 йыл христианса 1546—1547 йылға тура килә.

[10] Ҡаҙағстан һәм Урта Азияла әлегәсә «башҡорт» этнонимының синонимы «иштәк».

[11] Ҡазанды алғас, Иван IV башҡа халыҡтарға: «идите к нам без ужаса и боязни. Прошедшее забываем, ибо злодейство наказано. Платите мне, что вы платили казанским ханам», — тип ярлыҡаштар ебәрә// Карамзин Н. М. История государства Российского. Т.VIII. — Спб, 1783.— С. 117. По кн. «Башкирские шежере». — С. 182.

[12] Рәсәйгә ҡушылғансы башҡорт ҡәбиләләре ерҙе уртаҡ файҙалана. XVI быуаттың икенсе яртыһынан ер бүлгеләнә башлай. Шәжәрәлә әйтелеүенсә, юрматы ырыуы үҙ ерен дүрт түбәгә (ырыуҙан бәләкәй этник төркөмдәргә) бүлгеләй. Ахырҙа XVII быуаттарҙа ер хужаһы ырыу түгел, ә ауыл була. См. Кузеев Р. Г. Очерки исторической этнографии башкир. — Уфа, 1957 — гл.Ш; Его же. Башкирские шежере, — С. 183.

## 15. ҠЫПСАҠ ЗАТЛЫ ЯМҒЫРСЫ БЕЙ МЕНӘН ҠУСҠАР БЕЙҘЕҢ ЯҢЫ ИЛ ТАПҠАНЫ

*(Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе буйынса)*

Башкирские шежере.— 93—94; Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. 1-се том,— 240—241-се б.

1927 йылда «Башҡорт аймағы» журналының 4-се һанында Сәғит Мирасов баҫтырған. Ул уны хәҙерге Баймаҡ р-ны Темәс ауылында Хоҙайназар мулланан алған. Ә мулла үҙ сиратында шәжәрәне етмеш йәшлек Йәнгир атлы старшинанан күсереп алған була.

[1] Мосолман мифологияһы буйынса Лоҡман Хәким Йәфәстең ярандарының береһе булған. Ә Йәфәсте төркиҙәр ҡанбабаһы тип атайҙар.

[2] Бында һүҙ XI быуатта Яйыҡ менән Оло Иҙел (Волга) араһында хасил булған Ҡоман (Дәшти Ҡыпсаҡ) дәүләте хаҡында бара.

[3] Нуғайҙар араһында ҡыпсаҡ элементы көслө генә була.

## 16. БАБСАҠ МЕНӘН КҮСӘК

*(Башҡорттоң ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе буйынса)*

Башкирские шежере. — С. 110—112; Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. — 245—246-сы б.

Шәжәрәне 1959 йылда Мөхтәр Сәғитов (1933—1986) Бөрйән р-ны Иҫке Монасип ауылы Үтәбаева Мәрхәбәлә һаҡланған ҡулъяҙманан күсереп алған. Уны Мәрхәбә әбейҙең ире Сәләхетдин мулла һаҡлаған булған.

[1] *Торатау* — Стәрле ҡалаһынан йыраҡ булмаған тау.

[2] Бында, ырыу-ара ыҙғыштар һөҙөмтәһендә, ырыуҙар берегә (союзы) тарҡалыуы күҙ уңында тотола.

[3] Ҡазанды рустар сысҡан йылы 1552 йылдың 2 октябрендә ала.



# БАБСАҠ МЕНӘН КҮСӘК

*(Башҡорттоң ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе)*

[illegible]

## 17. ҠАЗАНФАРИ БЕЙ ЗАМАНЫ — ИКЕ КИЛМӘТ НИЗАҒЫ

*(Миң ырыуы шәжәрәһе буйынса)*

Башкирские шежере. — С. 50—51; Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. 1-се том. — 239—240-сы б.

[1] Аҡһаҡ Тимер — Урта Азия әмире (1336—1405).

[2] Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш хан араһындағы һуғыш хаҡында «Тәтегәс бей» дастанына бирелгән 2-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[3] *Аҡ Килмәт менән Ҡара Килмәт* — нуғай мырҙалары, уларҙың ыҙғышы хаҡында П. Я. Рычков, В. С. Юматов, В. Ф. Филоненко яҙған. Ҡар.: История Башкортостана с древнейших времен до 60-х годов XIX века. (Отв. ред. Х. Ф. Усманов. — Уфа: Китап,1997. — С. 139—140; Очерки по истории Башкирской АССР. Т.I. Ч.I. Гл.II. — Уфа: БКИ, 1956. — С. 52—56; В. С. Юматов. Древние предания у башкирцев Чубиминской волости//Башкирия в русской литературе. Т.I/Сост., автор предисл. и коммент. Мурат Рахимкулов. — Уфа: БКИ, 1989. — С. 402—405.

[4] Нуғайҙарҙың күптәре көньяҡҡа китһә лә, башҡорттар үҙ улусҡа яһаҡ түләүҙе дауам иткән.

[5] Ҡазанды 1552 йылда Иван Грозный алһа ла (уға 22 генә йәш була), башҡорт, татар шәжәрәләрендә йыш ҡына Иван Калита алған, тип яҙылған. Ә ул 1325—1340 йылдарҙа Мәскәү кенәзе сифатында хакимлыҡ иткән.

## 18. БЕЙ ТУҠСАБА УҒЛАНЫ МӨЙТӘН БЕЙ

Төп сығанағы — «Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе» // Башҡорт шәжәрәләре. — 81—87-се б.; Башҡорт шиғриәте антологияһы. — 207—210-сы б. Ярҙамсы сығанаҡтар: «Тарих (Шәжәрәнән алынған) 1967 йылда Йылайыр р-ны Юлдыбай ауылы Рәхмәтуллин Мөҡим Бәҙри улынан (1898) Ниғәмәт Динәхмәт улы Шоңҡаров (1937—1994) яҙып алған//ҒА, ф.3, оп, 65/2. — 278—281-се б.; «Мөйтән»//БХИ. 2-се том РЛ. — 164—165-се б.; Шул уҡ шәжәрәнең ейәнсуралар Ғ. Б. Хөсәйеновҡа тапшырған варианты. Ҡар.: Хөсәйенов Ғайса. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе//Башкирские шежере. — Уфа, 1984. — С. 54—60. Шул сығанаҡтар нигеҙендә йыйылма тексты төҙөү эшен Ә. М. Сөләймәнов атҡарҙы.

**Иҫкәрмәләр.** 3-сө һәм 11-сеһен иҫәпкә алмағанда, тулыһынса Рәсәй фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, Башҡортостан республикаһы фәндәр академияһының академигы, тарих фәндәре докторы, профессор Рәил Ғүмәр улы Кузеев төҙөгән «Башҡорт шәжәрәләре»нән алынды (200—201-се б.).

[1] Үҫәргән ырыуы (дөрөҫөрәге, оло ырыуы — ҡәбиләһе) Башҡортостан республикаһы һәм Ырымбур өлкәһе башҡорттарынан тора. Улар, нигеҙҙә, Хәйбулла, Йылайыр, Ейәнсура, Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ районларында йәшәй.

«Үҫәргән шәжәрәһе» 1900 йылда Йылайыр р-ны хәҙерге Ҡужанаҡ ауылында Шаһиғәлим Тоҡомбәтов тигән башҡорт тарафынан күсереп алынған да 1931 йылда Вилданов Ғәбделәхәт Фазлый улы (1880—1946) тарафынан ғилми тикшеренеү институтына алына. 1935 йылда СССР халыҡтары музейы ойоштороған экспедиция ваҡытында табылған күсермәне 1953 йылда экспедиция ағзаһы В. Н. Белицер Рәил Ғүмәр улы Кузеевҡа тапшыра// Башкирские шежере. — С. 200.

[2] Туҡһаба улы Мөйтән йәки Мәйтән — Үҫәргән ырыуы башлығы була. Үҫәргәндәр этник яҡтан Урта Азиялағы ҡарағалпаҡ мөйтәндәре менән ҡәрҙәш.// Башкирские шежере. — С. 200.

[3] М. Б. Рәхмәтуллин вариантында ошонан һуң: «...түбәндәге ерләргә:» — тип әйтелһә лә, ул ерҙәр күрһәтелмәгән.

[4] Боронға традиция буйынса, бөтә күркәм шәхестәр тағы ла күренеклерәк шәхестәргә, хатта изге заттарға (әүлиә, пәйғәмбәрҙәргә) мөнәсәбәтле итеп күрһәтелер булған. Шул уҡ ваҡытта тарихи шәхесте күренекле итеп күрһәтеү маҡсатында ла, шулай иткәндәр.

[5] Р. Ғ. Кузеев, XVIII быуатта Үҫәргән ҡәбиләһе Сураш, Айыу, Бишәй, Шишәй тигән ырыуҙарҙан торған, тип иҫәпләй. Беҙҙеңсә, һүҙ, әгәр ырыуҙар һаны юҫығында барһа, тағы ла бер нисә ырыу барын асыҡларға булыр ине. Һәр хәлдә «Мәмбәт шәжәрәһе» йәки «Түлле Мәмбәт» тигән яҙма шуны ҡеүәтләй.

[6] Оран — яуҙа, ил сигендә, юлда, башҡа тарафта саҡырыу, өндәү, иҫкәртеү, танышыу (пароль) өсөн әйтелә торған һүҙ. «Сыңғыҙнамә»не ҡарағыҙ.

[7] Р. Ғ. Кузеев әйтеүенсә, тарханлыҡ дәрәжәһе Мәскәү тарафынан элекке бейҙәргә, уларҙың вариҫтарына бирелгән. Сөнки Рәсәйгә ҡушылыу менән, бейлек институты бөтөрөлөп, ырыуҙар менән старшиналар идара итә башлай.

Тархандар һалым түләмәгән, ерҙе күберәк биләгән, хатта ҡораллы отряд тота алған//Башкирские шежере. — С. 201.

[8] Ҡатайҙар көньяҡ Уралдың төньяҡ битләүен биләгән. Улар малды әллә ни үрсетә алмаған, мал көтөргә башҡаларға ялланып булған//Башкирские шежере. — С. 201.

[9] XIX быуатта ла өс-дүрт мең баш йылҡы тотҡан байҙар булған//Башкирские шежере. — С. 201.

[10] Шәжәрәнең һуңғы өлөшөндә үҫәргәндең XVIII—XIX быуаттағы быуындары хаҡында һүҙ бара. Унан күренеүенсә, был ырыуҙан уҡымышлылар, түрәләр, хәрбиҙәр күп сыҡҡан//Башкирские шежере. — С. 201.

[11] 1552-че йыл уктәберенең 2-че көнендә Русиә жәмәғәтләре Ҡазан шәһәрен алмыщдыр һәм йортлар бина ҡылмыштыр. Вә бәғдә 1564-че йыл башҡорт исемланмеш дүрт ыруғдан, йәғни Үсәргәндән — Бикбау кенәз Таҙкачев (дөрөҫөрәге, Таукәев булырға тейеш. Сөнки шәжәрә буйынса, Бикбауҙың атаһы — Таукәй. — *Төҙ.*), Ҡыпсаҡтан — Мәшәүле Ҡара Ҡужаҡ кенәз, Бөржәндән Иске бей кенәз, (Тамъяндан — Шағале Шаҡман кенәз) — мәзкүр дүрт ыруғдан олуғ кенәз Иван Василичҡа Ҡазан шәһәренә саҡырылыб барыб, Русиә шаһы ғәҙел ирмеш дәю... Жөмлә халайыҡларымыз бер иттифаҡдә улуб; будилам бавирнуй* арҡылы шаһ хәзрәтинең мәрхәмәт әмерендан рөхсәт һәмәюн* сурадыҡ, йәғни мөҡәддәмдәге* бабаларымыз Сыңғыҙ Тамучин тәсрифендә* улыб, олуғ Тамучин Сыңғыҙ ханның рөхсәт тәдбире* илә бабаларымыздан мираҫ улмыш жир-ерләремеҙне, һыуларымыҙны, урманларымыҙны дүрт ыруғ тәксим* итеб алмаҡымыз өсөн. Вә бу илтимаг ғәрызәләр хосусында* рәхимле шаһымыҙ Бабил Битров мәрхәмәт идеб, зимләмирләр жибәрде сәлахиәт* илан һәр ҡаюларымызды ерләремеҙне, һыуларымыҙны вә урманларымыҙны ҡисмәт идеб* алмаҡымыҙға һәм шул уҡ зимләмирләрҙән бүлдереб алдыҡ[11].

Үҫәргән һәм Бөрйән, Тамъян, Ҡыпсаҡ ырыуҙарына Сыңғыҙ хан биләргә рөхсәт иткән ерҙәргә уларҙың хоҡуғын Рәсәй батшаһы таныуы хаҡында әйтелгәндән һуң шәжәрәлә шул ерҙәрҙең сиктәре күрһәтелгән:

«Мәзкүр мәшүрәт илан ҡисмәт жиремез мындин мәғлүм улуныр: Әүүәл Яйыҡ сыуы буйлаб түбәнге сиге Сарайчыҡдан, үрге сиге Яйыҡның Буз-

сауылдан, йәнә Сакмар сыуы, дәхи Ик сыуы, йәнә Ыслы Үскәлек ике Сурам, мынларның башындан аягынчә; Сайылмыш башындан, Керәүленең ташкичеүендан, Мынав йылгасындан Ялгыз Өйәңкегәчә, йәнә Нугай кичеүедан үтә Иртүбакдан Үкчез түбагә(ча), йәнә Солок башындан, Мынауышлы, Үткаш карагайдан, һәм Миәрдәкнең камыш(лы) башындан Мынауышлы сыуы тауынәчә. Сакмарның Алты Тура ташындан Лайын-бирде түбакчәсенә, йәнә Яркадакдан, Кара урман аркылы Камышлау башы(ндағы) убадан, Айрыурык тамағындан, Жим сыуындан Үсерган илә Кыбчак, Тамъян һәм Бөржанеңдер. Йәнә андан сәхрә тарафы — түбәнги сиге Сарайчыкдан Үзаннең агыш сыуы илә өченче Зайнунның тараулары илә, үрге ягы Дүрткүлгәчә Бөржан илә Үсерганнең усабәле жирларедер». «Бөрйән, Кыпсак, Үҫәргән, Тамъян ырыуҙары шәжәрәһе»//Башкорт шәжәрәләре. — 77-се б.

Иҫкәрмә: Шәжәрәне күсереүселәрҙең йә уны транскрипциялаусыларҙың ғәйебе менәнмелер, ер-һыу исемдәре китапта дөрөҫ бирелмәгән осрактар бар. Мәҫәлән, «Мәрәүеште», «Тора таш», «Эйек», «Өҫкәлек» тигән гидронимдар «Мынауышлы», «Тура таш», «Ык», «Үскәлек» рәүешендә баҫылған. Шуға күрә лә, хөрмәтле укыусылар, шәжәрә өҙөгөндәге калған атамаларға ла иғтибар итеп, үҙегеҙ белгәненең һеҙҙәгесә әйтелешен дөрөҫләп, ошо томды төҙөүселәрҙең береһенә яҙып ебәрһәгеҙ ине. Был эш киләһе баҫмаларҙа хатаны төҙәтеү өсөн кәрәк. Ихтирам менән алдан ук рәхмәтебеҙҙе күндерәбеҙ. Беҙҙең адрес: 450054. Өфө калаһы, Октябрь проспекты, 71, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты (русса кыҫкартылышы: ИИЯЛ).

[12] Башкорт дәүләт университетының доценты Миҙхәт Мәмбәтов 70-се йылдарҙың аҙағында Ғайса Хөсәйеновка Үҫәргән ырыуы шәжәрәһенең йәнә бер версияһын тапшыра. М. Ә. Мәмбәтовтың атаһы Әхмәтханда һаклаңған был ҙур шәжәрә шулай ук калын бер дөйөм дәфтәрҙә тәшкил итә. Ул ҙур дәфтәрҙе жанры ягынан тәуарих яҙмаһы, төрлө тәуарих, дини легенда, башкорт шәжәрәләренән күсермәләр тип атарға мөмкин. Ул күсермәләр үҙе махсус өйрәнелеүгә лайык.

Әле шул күсермәләр араһынан Үҫәргән ырыуы шәжәрәһенән алдағы шәжәрә менән сағыштырыу өсөн кайһы бер генеалогик теҙмәләрҙе һәм яҙмаларҙы килтереп үтке килә.

Генеалогик теҙмә был яҙмаларҙа күпкә боронғонан башлана: Баба Төкләҫ — Тырма — Казансы — Ишлам кыя — Кары кыя — Котлоғ кыя... — Туксаба — Мөйтән бей — Шакмаклы (Шығали) бей — Бүрка (Бүрәкә) бей — Чөркә (Серкә) бей — Манғут — Урал бей — Арпан бей — Тимер карый буға бей — Карас бей — Сарбаш бей — Сарыш бей — Ябынсы Ясауыл — Үҫәргән.

Бында Мөйтән бейҙән һуң килгән быуындарҙа кайһы бер быуындарҙың урыны алмашыныуы, айырым исемдәрҙең ике төрлө яҙылышы, икенсе төрлөрәк укылышы күҙәтелә.

Үҫәргәндән һуң бик күп быуындар теҙмәһе китә: Үҫәргән — Ялпаксал — Юлъякшы. Үҫәргән — Сөйәлғужа — Шишәй — Бикбау кенәз. Иҫәнбирҙе — Таймаҫ һ.б.

Шәжәрәне күсереүсенең кайһы бер исемдәргә биргән аңлатмалары кыҙыклы. Мөйтән хакында ул, мәҫәлән, шундай һүҙҙәрҙе яҙып куя: «Мөйтән атасы исеменә шәжәрә диләр. Беҙ исә Туксабаны дөрөсөрәк күрәбез. Аның өчөн *«Туксаба оранлы башкорт»* дигән сүзне күргәнебез бар иде».

Бына Мөйтән бей хакында тулырак аңлатма:

«Безнең кулыбыздағы шәжәрәдә Мөйтән бин Туксаба хакында бер аз аның тәржемә хәле сымак язуу бар. Йәғни үзенең ил халкы Мөйтәнгә бер аз

мал, жиһаз йыйып биреп Чынхызханға ебәрәләр. Күп һәдиә берлә барғач, халыкны кырып йөрөп үзенә табиғ итеп йөргән Чыңғыз, һич бер суғышсызнисез малы, бүләге белән бер руг ил сезгә табиғ булып бер ислахлы рәғиәңез* булсак, дигән. Чыңғыз бик хуп күреп, һәдиәсен* алып һәм Мөйтәннең сораған ерен, сыуын Мөйтән сораған иленә мәңгелек итеп биреп һәм Мөйтәннең үзенә би итеп билек мәнсәби* үзгә мирас, йәғни бар тумушкә, йәғни үзеңдән суң бар балаларға бирерсең... Һәм Туксаба оранан биргән. Әлхасил шул замандан кәдерләгән кешесенә биреләчәк дәрәжә ғәмәлгә лайыклы нәрсәләрнең һәммәсен Мөйтәнгә һибә кылған».

Йәғни был аңлатмала Мөйтән хакында шәжәрәләрҙә киң таралған легенда телгә алына.

Үҫәргәндең атаһы Ябынсы хакында шәжәрәне күсереүсе байтак фараз итә.

«Ябынчы ясауыл олуғ урны Казандан илле чакрым жирдә Ябунчы дигән ауыл исемләнгән, шунда ғөмер иткән һәм Казанда алған Кул башы булып жөргән тарих китаплар күренә. Ошондак Урал би Урал тауында мәкәм тоткан. Шул заманда Кыуакан атасы Буяк би (?) шул Трайыш тарафында калған һәм Үсәргән карт Үргендә булған һәм шул ауылда вафат булған. Зыяраты шул ауылда.

Ясауыл Ябунчы баласы.

Атамыз Динмөхәммәт бәғзе бер тарихларда Казан тарихында Ябунчы дигән бер татар командирын күреп, шуны безнең йырак бабамыз булған, Ябунчы ясауыл дип заң* кыладыр* иде. Һәм Шиһабетдин Мәржәни хәзрәтнең туган ауылы Ябунчы булып, шуңа дәхи безнең бабамыз Ябунчы ясауыл имеш. Шул Казан тирәсендә йөргән диеп тәүсил кыладыр* иде. Мин үзем бер ничә мәртәбә ул Ябунчы бу безнең Ябунчымыз түгел дисәм дә... күрә алмадым.

«Ябынчы ясауыллыкны шул вакытдағы сугышларда булып алмады микән? Өйдә ятып алмаган булырға кәрәк. Ихтимал, Казан хөкүмәте бирсә дә йәки Мәскәү хөкүмәте бирсә дә, бар бирелгән исем һаман да атала бирә түгелме?

Ләкин Камай Мәскәү хөкүмәте тарафдарлык булып киткән.

Казан алынған очордағы мосолманлар тарафындағы нуғай мырзаларындан Камай һәм Ябаный исемендә ике командир бар иде. Башкорт түгелләр иде дисәләр дә, бабаңыз Ябунчының тарихына якын булырға окшай. Аның өчен батырырак башкортлар да барып Казанға ярдәм иткәнләр, дигән сүз күренгән иде.

Безнең кулыбыздағы шәжәрәдә Ябынчы Ғәбделрәхмән Нураевтың 10-чы бабасы булып күренә. Казан алыну 1552-нче йыл инде. 10 бабаңызны 373 йылга сыйдырсаңыз, бәлки, шул бабаңыз ябынчы булыр. Ризаитдин кази Япанчы дип яза иде. Йәғни Япанчы сәхрәдә күчеп йөрүче дигән сүздән алынган, дип.

Япанчы бабамыз бик боронғо вакытларда булырға окшай. Казан алынудан борон булырға кәрәк».

Шәжәрәлә тағы шул мәғлүм: Ябынчы яһауылдан ете ул калған: Иркара, Эткара, Һыркара, Ибәй, Күбәй, Ибәнсәй, иң кесеһе Үҫәргән.

Ырыу тармактарын күк кәләм менән яҙып сыккан күсереүсе аҙак шундай мәғлүмәт биргән: «1923-нче йыл 4-че көн авгусында яздым ошбу шәжәрәне мин. Мөхәммәдкәримовның язып калдырған шәжәрәсен күчереп яздым. Ғәбделрахман Нураевның язучы буйынча вак язулары гел бер төрлөлөкдән, бәлки, хата булып укыучы ғәфү кылырсың урыны илән ак ер калдырып

китдем... уҡыусылардан доға үтенеп бән Бүребай ауылының Хәкимжан Мөхәмәдрәхим улы Туғызбаев» (Хөсәйенов Ғайса. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе. — 58—60-сы б.)

## 19. МӨЙТӘН БЕЙ

2002 йылда Ә. М. Сөләймәновҡа академик Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов (1928) тапшырҙы (Тыуған ере: Ҡырмыҫҡалы р-ны Үтәгән ауылы. Шөғөлө — әҙәбиәт ғилеме, фольклор ғилеме, әҙиплек).

Үҙе тапшырған ҡулъяҙмаға ул шундай аңлатма бирҙе:

«Мөйтән бей» һарнау ҡобайырының был йыйылма тексы беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып килгән күсермә һәм баҫма текст өлөштәрен, фрагменттарын бер әҙлекле епкә теҙеү нигеҙендә төҙөлдө. Төп сюжет үҙәген ҡобайыр шиғыры менән яҙылған «Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе» һәм «Мөйтән бей» тигән шиғри легенда тәшкил итте. Ҡобайыр фабулаһын үткән быуаттың егерменсе йылдары аҙағында Өфө сәнғәт училищеһе директоры, музыка белгесе И. В. Салтыков етәкселегендә ойошторолған фәнни экспедиция ваҡытында яҙып алынған Мөйтән бей хаҡындағы һигеҙ текст шаҡтай тулыландыра төштө. Был текстарҙың башҡортса яҙып алынған нөсхәләре әлегәсә табылмағас, уның руссаға юлға-юл тәржемәләнгән мәғәнәүи текстары башҡортсаға кире ҡайтарылды. Ул сығанаҡтар «Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе» — «Башкирские шежере», Уфа, 1960, 81—84-се биттәр, «Мөйтән» шиғри легендаһы — «Башҡорт халыҡ ижады». Риүәйәттәр, легендалар», Өфө, 1980, 160—161-се биттәр; «Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала», Уфа, 1974, 262—265, 269—270, 272—273-се биттәр. Өлөштәрҙе үҙ-ара ялғап ебәргәндә, текстар руссанан башҡортсаға ауыҙ асылғанда, тәбиғи, ҡобайыр шиғыры үлсәмен һаҡлап һәм ҡобайыр поэтикаһын һәр саҡ иҫтә тотоп, йыйылма тексҡа текстология һәм поэтика принциптары йәһәтенән ижади киленде».

## 20. МӨЙТӘН

*(Версия)*

XX быуаттың 30-сы йылдарында М. В. Салтыков туплаған материалдарҙан/ ҒА ф.3, оп.25/26. —28—31-се б. Ошо уҡ фондтың 26—27-се, 28—29-сы биттәре өлөшләтә бынан алдағы текста файҙаланылған.

Салтыков яҙмалары русса вариантта ғына һаҡланған. Эпостың тулы булмаған был версияһын башҡорт теленә ирекле тәржемә итеү эшен Ә. М. Сөләймәнов атҡарҙы.

[1] *Манғыт* (Салтыковта — Мангут) — Зәрәүшәнде биләгән ҡәүем. Улар төрки телле булмаған. Үҙҙәрен нуғай тип атаған халыҡтың юлбашсыһы Нуғай шул ҡәүемдән сыға. Шул ҡәүем, төрки-ҡыпсаҡтар менән аралаша торғас, төрки телле яңы этник төркөм хасил итә /Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. — М.: Наука, 1974. — С. 361—484./ Ихтимал, эпос үҫәргәндәрҙең бер тармағының манғыттар менән бәйле булыуына ишара яһай.

## 21. ТҮЛЛЕ МӘМБӘТ

1966 йылда Хәйбулла р-ны Сәхит ауылы Мәмбәтов Мостафа Ғабдулвәкил улында (1907) һаҡланған ҡулъяҙманан шағир Ҡәҙим Аралбаев күсереп алған. Төп нөсхәлә ул «Мәмбәт шәжәрәһе» тип атала. Ҡар.: Аралбаев К. А. Фольклорные мотивы в шежере Мамбетова рода// Башкирские шежере: Филологические исследования и публикации. — Уфа, 1985, — С. 129—160. Шул йыйынтыҡта шәжәрәнең фрагменттары донъя күргәйне. Уны Ҡәҙим Аралбаев әҙерләгән ине. Шул уҡ тикшеренеүсе был әҫәрҙе айырым китап итеп баҫтырып сығарҙы. Башҡортлаштырылған иҫке төрки телендәге был Ҡомартҡыны хәҙерге башҡорт теленә әйләндереү эшен дә ул атҡарҙы. Түбәндәге аңлатмалар ҙа, һүҙлектең ошо текстҡа ҡараған өлөшө лә уның тарафынан әҙерләнгән. Ҡар.: Мәмбәт шәжәрәһе. — Өфө: Китап. 1994.

[1] *Урта Йөҙ Арғын* — ҡаҙаҡ ырыуҙары өс ҙур йөҙгә (Оло Йөҙ, Урта Йөҙ һәм Кесе Йөҙ) бүлеп йөрөтөлгән. Арғын ырыуы шуларҙың уртансыһына ҡараған.

[2] *Мырҙабәк* — шәжәрә авторы Мостафа мулла был урында Мәмбәттең атаһы Мырҙабәкте, ниндәй сәбәп менәндер, атамай үтеп киткән. Әммә шәжәрәнең аҙағына табан (100-сө аңлатманы ҡарағыҙ) Мәмбәттең атаһы телгә алына.

[3] *Мәмбәт ауылы* — Хәйбулла районы, Таналыҡ һыуы буйында ултырған ауыл. Боронғо исемдәре: Ҡаҙаҡ ауылы, Иҫәнғол, Мәмбәт. Тарихи-документаль сығанаҡтарҙа ла ауылдың был исемдәре күрһәтелә (мәҫ., «Списки населенных мест Российской Империи...» т. XXVIII, Санкт-Петербург, 1871 г. — Оренбургская губерния (по сведениям 1866 г.; — С. 40): («Мамбетева (Казаклар), д. башкирская, р. Таналык, число дворов — 86, мужчин — 243, женщин — 251, мечет 1».)

V—X ревизия (1795—1858 йй.) мәғлүмәттәренә нигеҙләнгән һуңғыраҡ бер хеҙмәттә (Хисаметдинова Ф. Г. «Башкирская ойконимия XVI—XIX вв. — Уфа, 1991; — С. 264.) Мәмбәт ауылының Ҡаҙаҡ, Иҫәнғол атамалары ла килтерелә, ауылдың беренсе тапҡыр телгә алыныу ваҡыты итеп 1775 йыл күрһәтелә. Әммә был хеҙмәттә Мәмбәт ауылы исеменең килеп сығыуын ниндәйҙер Мәмәтәй Нурумбетовҡа бәйләп аңлатыу бәхәсле.

[4] *Мәмбәттең йәше* төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә аңлатыла: 1) генеалогик таблицала Мәмбәттең вафаты 1792 йылда 77 йәшендә тиелә, тимәк, ул 1715 йылда тыуған булып сыға; 2) Шәжәрәнең тәүге вариантында, Ырыҫмөхәмәт мулланың иҫәпләүенсә, 1922 йылда Мәмбәттең донъяға тыуыуына 230 йыл була, тиелә. Унынса, Мәмбәт 1692 йылда тыуған була. 3) Шәжәрәнең Мостафа мулла Мәмбәтов яҙған тексында (шул уҡ Ырыҫмөхәмәт муллаға һылтанып) иһә йәнә яңы иҫәп: 1921 йылда Мәмбәттең тыуыуына 220 йыл тула һәм ул 75 йәшендә вафат. Был мәғлүмәт буйынса Мәмбәт 1701—1776 йылдарҙа йәшәгән булып сыға.

Әлегә билдәле булған был өс датаның беренсеһе генә Мәмбәттең балаларының йәшен күрһәткән 1816 йылғы ревизия переписына яҡын килгәндәй, әммә аныҡ тип булмай. Мәҫәлән, Мәмбәттең Ғәбит (Һыйлыҡайҙан) һәм Мөхәмәтрәхим (Йомаһултандан) исемле уландары тыуған йылда (1786) уға 71 йәш булған килеп сыға. Алда Кубак (Көбәк) тигән улы тыуасаҡ әле. Ҡыҫҡаһы, Мәмбәттең йәшәгән йылдарын асыҡлау — киләсәк эше.

[5] *«Иштәктең унлап уғрылары...»* — борон ҡаҙаҡтар башҡортто «иштәк» тип йөрөткән. Һүҙ бында башҡорт батырҙарының, ҡаҙаҡ яғына барымтаға сығып, йылҡыларын ҡыуалап алып китеүе тураһында бара. 10—12 йәшлек Мәмбәттең йылҡы көтөүе менән ҡуша алып кителеүе хаҡында риүәйәттәр

күп (ҡара: «Башҡорт халыҡ ижады» (риүәйәттәр, легендалар). Өфө, 1980. 73—76 биттәр).

[6] *Һабыр* — Үҫәргән волосы старшинаһы Һабыр Ҡотломбәтов. Урта Һаҡмар буйында ул нигеҙ һалған Һабыр ауылы (хәҙер Йылайыр районына ҡарай) уның исемен йөрөтә. Башҡорттарҙың батшаға ҡаршы 1755 йылғы күтәрелешендә һәм 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында актив ҡатнаша. Риүәйәттәрҙән билдәле булыуынса, халыҡ хәтерендә ул «Һабыр батыр» исеме менән ҡалған.

[7] *Йомаш* — XVII быуат аҙағында тарханлыҡ грамотаһы алған Бөрйән волосы башҡорто Йомаш мулла нигеҙ һалған ауыл, хәҙер Баймаҡ районында.

[8] *«Аҡ батшаға ҡол булып, теләгән урындан ер алайым тип килдем...»* — Мәмбәттең ергә хужа булып йәшәү теләге менән рөхсәт алыу өсөн Ырымбур губернаторына барыуы хаҡында шәжәрәнең тәүге вариантында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар: «...Аҡ бадшаға ҡол булыб жир алуб тыныч ғөмөр итеү фекере төшөб, хөкүмәт тарафынан ғәйебле күренеб бер ҡачыб йөрүче кеше Мәмбәткә иялэб, шуның мәслихәт закуны, ҡәләме илә языб биргән ҡәғазы илә Урнбур барыб кубернатрға кереб, «А, кубернатр, мин үҙем ҡазаҡмын, Аҡ бадшаға ҡол булып хедмәт итеб, жир алайым диб килдем», диб ҡағызларын бирғач, ҡабул итеб, эт тиресенә языб кубернатр мөһөрөн баҫып, теләгән урындан жир ал, дип шаһадәтнамә ҡағыҙын бирә»...

[9] *Туҡ, Соран* — хәҙерге Ырымбур өлкәһе территорияһы аша ағыусы Туҡ һәм Соран йылғалары.

[10] *Эйек (Оло Эйек)* — Йылайыр, Күгәрсен, Ейәнсура райондары аша ағыусы йылға. Һаҡмарҙың уң яҡ ҡушылдығы.

[11] *Яхыя сәсән* — әлегәсә билдәһеҙ сәсән. Был шәжәрәлә уның хаҡында бер хәтирә һәм сәсәндең әйткән тапҡыр һүҙҙәре килтерелә. Яхыя сәсән Верхнеуральск өйәҙенә ҡараған Нуғай (Яйыҡбай) ауылы кешеһе булыуы ихтимал, сөнки артабан шәжәрәлә «Нуғай чисы Яхыя сәсән» тип күрһәтелә.

[12] *Иҫәнғол* — Иҫәнғол Мәмбәт улы Кәипов (1773—1848), ун ете йәшенән — башҡорт хәрби һыбайлыһы (казак), Ырымбур линияһын һаҡлау хеҙмәтенән башлап, уҡымышлылығы һәм тырышлығы арҡаһында 9-сы кантон башлығы ярҙамсыһы, кантондар өҫтөнән попечитель, майор дәрәжәһенә күтәрелә; 1817 йылдан — 13-сө класлы чиновник, башҡорт дворяны... Иҫәнғол — Мәмбәттең һигеҙ улы араһында иң билдәлеһе һәм, шәхес буларак, иң күренеклеһе. Уның хаҡында риүәйәттәр киң таралған. Шуларҙың өсәүһе «Башҡорт халыҡ ижады»на ла индерелгән (Өфө, 1980, №№ 179, 312, 313).

[13] *Самаҙы* — Ейәнсура районындағы йылға (Өҫкәлектең һул яҡ ҡушылдығы) һәм шул исемдәге ауыл.

[14] *Кәҙә башы* — Йылайыр районындағы йылға, Һаҡмарҙың һул яҡ ҡушылдығы.

[15] *Бараҡал* — Йылайыр районындағы йылға, Һаҡмарҙың уң яҡ ҡушылдығы.

[16] *Рәхмәт заманында* — Мәмбәттең икенсе улы Рәхмәтулла тураһында һүҙ: Мәмбәт үлгәндә уның бар ғаиләһе, мал-мөлкәте Айыулы ауылында (хәҙерге Хәйбулла районында) булыуға ҡарамаҫтан, Рәхмәтулла бай булып, атаһы урынына хужа булып ҡалғас та әле Бараҡал йылғаһы буйындағы утарҙарҙы һаҡлаған, унда барғылап торғандар.

[17] *Завод ерҙәрендә* — Преображенск заводы, хәҙерге Йылайыр ауылы.

[18] *Айыулы йылғаһы* — Хәйбулла районындағы Быҙаулыҡ йылғаһының уң яҡ ҡушылдығы.

[19] *Быҙаулыҡ* — Хәйбулла районында Таналыҡ йылғаһының уң яҡ ҡушылдығы.

[20] *Яҡуп* — Йылайыр районындағы ауыл.

[21] *Вараш* — элекке Беренсе Бөрйән волосына ҡараған ауыл. Бөгөн исеме һаҡланмаған. Түбәнге Мәмбәт (Баймаҡ районында) булыуы ихтимал.

[22] *Ҡурғашлы заводы* — был исем менән аталған заводтың булғанлығы билдәһеҙ (ҡара: Г. Ф. Гудков, З. И. Гудкова. «Из истории Южноуральских горных заводов XVIII—XIX вв». Часть I, Уфа, 1985 г.; ч. II, Уфа, 1993 г.). Хәҙерге Йылайыр районы территорияһындағы Ҡурғашлы йылғаһы буйында асылып, һуңынан бөтөрөлгән завод булыуы ихтимал.

[23] *Аҡсура* — Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы территорияһындағы йылға. Һаҡмарға ҡоя.

[24] *Ҡундрау* — Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенә ҡараған ауыл. Һаҡмар йылғаһы буйында.

[25] *Юлыҡ* — хәҙерге Баймаҡ районындағы ауыл.

[26] *Талҡаҫ* — хәҙерге Баймаҡ районындағы күл.

[27] *Ҡыуандыҡ* — Мәмбәттең ейәне, Үҫәргән волосында 20 йыл самаһы старшина булып торған. Ҡыуандыҡ хаҡында ла халыҡ араһында риүәйәттәр күп. Шуларҙың бер нисәһе «Башҡорт халыҡ ижады» томында ла урын алған (Өфө, 1980, 73—76, 165—166 биттәр).

[28] *Ҡыпсаҡ* — хәҙерге Йылайыр районындағы ауыл, икенсе исеме — Йомағужа.

[29] *контроль* («ун ике кантон өҫтөнән ҡарап йөрөй торған бер контроль...») — Иҫәнғол Мәмбәт улы Кәипов 1818 йылдан башҡорт кантондарына попечитель итеп ҡуйыла.

[30] *Алатау* — Хәйбулла районында Мәмбәт, Сәғит ауылдары янындағы тау хаҡында һүҙ бара. Хәҙер ул Мәмбәт тауы тип йөрөтөлә.

[31] *Ғәбит батыр* — Мәмбәттең икенсе ҡатыны Һыйлыҡайҙан тыуған улы. 1816 йылғы перепись мәғлүмәттәре буйынса, ул 1786 йылда тыуған, ҡатыны Мәхүбә 22 йәштә. 1816 йылда Ғәбит үҙ ғаиләһе менән ағаһы Иҫәнғол йортонда (Һабыр ауылында) йәшәгән. «Башҡорт халыҡ ижады»ның легендалар һәм риүәйәттәр томында Ғәбит батыр хаҡында ла уҡырға мөмкин (165—166 биттәр).

[32] *Иләс* — Ильяс исемле ҡыпсаҡ башҡорто, сығышы менән Ҡыҙыл Мәсет (хәҙерге Мораҡ) ауылынан, Туры ат йылғаһы буйында ер алып, ауылға нигеҙ һалған. Хәҙер ауыл халҡы телендә — Турат, рәсми телдә Иләс (Илячево) булып йөрөй.

[33] *Таштуғай* — шәжәрәнән күренеүенсә, Таштуғай тип борон Таналыҡ һыуының Мәмбәт ауылы тирәһендәге ташлы урын (туғай) атап йөрөтөлгән. «Таштуғай» исеме менән бөгөн Таналыҡтың түбән яғында ултырған ауыл да атала.

[34] *Һултас* —Хәйбулла районында түңгәүер ырыуы башҡорттары ауылы, хәҙер бөткән.

[35] *Вәлит* — Хәйбулла районындағы ауыл.

[36] *Ярат* — Баймаҡ районындағы ауыл.

[37] *Исмаҡай* — элекке Бөрйән волосы 7-се йортҡа ҡараған ауыл. Юлыҡ йылғаһы буйында ултырған. Хәҙер юҡ.

[38] *Шуралы* — Бөрйән волосына ҡараған ауыл, Шуралы йылғаһында булған, хәҙер юҡ.

[39] *Баймырҙа* — хәҙерге Баймаҡ районындағы ауыл.

[40] *Сәйфулла* — Мәмбәттең баш балаһы.

[41] *Мансур* — элекке Бөрйән волосындағы, хәҙерге Баймаҡ районындағы Бәхтигәрәй ауылы.

[42] *Бикет* — Хәйбулла районының көньяҡ-көнсығыш сигендә Таналыҡ менән Урал (Яйыҡ) йылғаһы араһындағы элекке сик утары. Яйыҡ казактары башҡорт менән ҡаҙаҡтар араһында барымта-ҡарымта күренештәренә юл ҡуймаҫ өсөн ошо урында пикет ҡороп, һаҡта торғандан ҡалған исем.

[43] *Кинә Һары* — ҡаҙаҡ ханы Кинәһары Ҡасимовтың Рәсәй батшаһына ҡаршылыҡ итеү маҡсатында 1838—1847 йылдарҙа Яйыҡ буйындағы күтәрелештәре хаҡында һүҙ бара.

[44] *Яйыҡ казактары* — Рәсәй менән Ҡаҙағстан сиге булған Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйлап төҙөлгән нығытмаларҙағы ғәскәри хеҙмәт алып барыусылар. Казак — хәрби сословие.

[45] *Ҡомаҡ* — хәҙерге Ырымбур өлкәһенең көнсығыш өлөшөндәге йылға, Яйыҡтың һул яҡ ҡушылдығы. Шул исемдәге ауыл.

[46] *«...ҡыуып тишелгән тау...»* — туннель; бында Динмөхәмәттең туннель ҡаҙыу эштәренә мәжбүр ителеүе тураһында һүҙ бара.

[47] *Фидерски* — Хәйбулла районындағы ауыл.

[48] *Аҡъяр* — Хәйбулла районы үҙәге. 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙә ауыл «Хайбуллино (Акзярь)» тип, ике исемдә яҙылған.

[49] *Иҙел* — Бөрйән волосындағы Иҙелбай ауылы, тәүге исеме — Абдулмөкмин, Таналыҡ йылғаһында. Хәҙер юҡ.

[50] *Самара* — Хәйбулла районындағы хәҙерге Самарск ауылы.

[51] *Һары* — был исемде йөрөткән ауылдар Ырымбур губернаһында бер нисәү булған. 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙән Узала йылғаһы буйында (хәҙерге Йылайыр районы) ултырған Аҡъегет ауылы — Һарылар, Һаҡмар буйындағы хәҙерге Йәнтеш ауылы (Хәйбулла районы) — Һарылар. Былардан тыш әлеге көндә Ырымбур өлкәһендә Һары (Сара) исемен йөрөткән ауылдар бар.

[52] *Ҡолбирҙе* (кәриә — ауыл) — хәҙер Ырымбур өлкәһенә ҡарай.

[53] *Әбделкәрим* — хәҙерге Баймаҡ районындағы ауыл.

[54] *Ҡалбаҡ* (Кульбахтино, Ҡолбаҡты) — хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге ҡасаба.

[55] *Орск* — Ырымбур губернаһына ҡараған өйәҙ үҙәге, Яйыҡ йылғаһында.

[56] *Ғәҙел (Әҙел)* — хәҙерге Хәйбулла районындағы ауыл, Таналыҡ буйында.

[57] *Ғәбделнасир* (Әбделнасир, Әпнасир) — хәҙерге Хәйбулла районындағы ауыл. Түңгәүер ырыуына ҡараған башҡорттар нигеҙ һалған. 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙә ауылдың Елбаш тигән исеме лә телгә алына.

[58] *Таналыҡ* — йылғаның Яйыҡҡа ҡойған ерендә төҙөлгән ҡәлғә. Ырымбур линияһы (сиге) хеҙмәтендәге казактар, күскенсе рустар, хохолдар йәшәгән ҡаласыҡ.

[59] *Шәйех Зәйнулла* — Троицк ҡалаһында мәҙрәсә тотҡан мәғрифәтсе, ғалим Зәйнулла ишан хәҙрәттәре Рәсүлев. Мәмбәт нәҫеленән күп кенә муллалар Зәйнулла ишанда уҡып, уға мөрид булған.

[60] *Һаҡтау* — хәҙерге Йылайыр районындағы ауыл. Рәсми телдә — Ҡәнзәфәр.

[61] *Юлдыбай* — Йылайыр районындағы ауыл. 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙә икенсе исеме — Ҡабарташ та телгә алына. Түңгәүер ырыуы башҡорто Юлдыбай нигеҙләгән ауыл.

[62] *Суртанлы үҙәк* (Суртанүҙәк) — хәҙерге Йылайыр районындағы ауыл.

[63] *Маҡан* — Хәйбулла районындағы йылға, Таналыҡтың һул яҡ ҡушылдығы. Шул исемдәге ауыл.

[64] *Аралбай* — Рәхмәтулланың өлкән улы, Мәмбәттең ейәне (Аралбай — Искәндәр — Ямалетдин — Мырҙағале — Ғәбделғәлим — был юлдарҙың авторы — *Ҡ. А.*).

[65] *Татлыбай* — Беренсе Бөрйән волосына ҡараған ауыл. Хәҙер Баймаҡ районында.

[66] *Бәкәтәр* — Йылайыр районы территорияһында, хәҙер юҡҡа сыҡҡан ауыл.

[67] *Ишан* — Ырымбур губернаһында (Ҡыуандыҡ р-ны) бөткән ауыл.

[68] *Ҡайраҡлы* — хәҙерге Йылайыр районындағы Түбәнге Ғәле ауылы. 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙә уның Һаҡмар йылғаһында булыуы һәм Ҡайраҡлы-тамаҡ, Ласын атамалары менән дә йөрөтөлөүе күрһәтелә.

[69] *Бүребай* — хәҙерге Хәйбулла районындағы эшселәр ҡасабаһы. Бүребай — Һабыр ауылынан бүленеп сыҡҡан ауыл. Таналыҡ йылғаһында 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙә Бүребай, Юша исемдәре менән телгә алына.

[70] *Ҡарағас* — Йылайыр районындағы ауыл, хәҙер юҡҡа сыҡҡан.

[71] *Рафиҡ* — хәҙерге Хәйбулла районындағы ауыл, түңгәүер ырыуы башҡорттары нигеҙләгән. Таналыҡ йылғаһында.

[72] *Утарбай* — хәҙерге Хәйбулла районындағы ауыл.

[73] *Ерәнағас* — Хәйбулла районындағы хәҙерге Юлбарыҫ ауылы. 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙә ауылдың Ерәнағас йылғаһында булыуы әйтелә.

[74] *Питербур* — хәҙерге Санкт-Петербург.

[75] *Йүкә* — Баймаҡ районындағы хәҙерге Ишмырҙа ауылы.

[76] *төрөк һуғышында* — бында 1828—1829 йылдарҙағы Рус-төрөк һуғышы тураһында һүҙ бара.

[77] *Арзрум* — юғарыла телгә алынған Рус-төрөк һуғышында рус ғәскәрҙәре тарафынан баҫып алынған Эрзурум ҡалаһы.

[78] *Дубински* — Ырымбур өлкәһендәге ауыл (әллә Тубинск — Түбәме (Баймаҡ)).

[79] *Темәс* — хәҙерге Баймаҡ районындағы ауыл.

[80] *Һултантимер* — хәҙерге Йылайыр районындағы ауыл.

[81] *Ишмөхәмәт бин Рәхмәтулла* — 1796 йылда тыуған, 17 йәшенән Ырымбур линияһын һаҡлауға һалдат хеҙмәтенә алына. 1815 йылдан зауряд-сотник, 1833 йылдан — старшина ярҙамсыһы.

[82] *Таш мәсет* — Мәмбәт ауылының көньяғында Таналыҡ йылғаһы буйында, ауылдан бер-ике саҡрым алыҫлыҡта.

[83] *Ҡолбаҡты* — хәҙерге Әбйәлил районындағы Әлмөхәмәт ауылы.

[84] *«Ҡыҙыл сәкмән әрмеләрҙә»* — һалдат кейеменең бер формаһы хаҡында һүҙ бара булһа кәрәк.

[85] *«волост булып...»* — волостной старшина.

[86] *Гржанауски губернатор* — Николай Александрович Крыжижановский, артиллерия хеҙмәте генералы, 1865—1882 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булып тора.

[87] *«Сыр-Дарья яғына ғәскәр булып киткәндә...»* — бында Ырымбур губернаһының хәрби губернаторы генерал-майор граф В. А. Перовский етәкселегендә 1839—1840 йылдарҙа Хива экспедицияһы тураһында һүҙ бара.

[88] *Сәғит бай* — Хәйбулла районындағы хәҙерге Сәғит (Ҡалтай) ауылына уның исеме бирелгән.

[89] *«Халыҡ ер һатыуға әйләнгәс...»* — бында батша хөкүмәтенең 1869 йылдың февралендә башҡорт аҫабаларының ерҙәрен һатыу һәм арендаға биреү законы тураһында һүҙ бара. Был закон ҡабул ителгәс, Башҡортостандың

барлыҡ төбәктәрендә лә ерҙәрҙе күпләп һатыу, төрлө юлдар менән тартып алыу киң төҫ ала.

[90] *Тиргәмеш* — хәҙерге Хәйбулла районындағы Байғусҡар ауылының икенсе исеме.

[91] *Ҡустанай* — Ҡаҙағстандың Силәбе һәм Ырымбур өлкәләре менән сиктәш өлкәһе.

[92] *Тубылғы туры юрғалары* — Тоболь йылғаһы яғынан (Кустанай өлк.) алып киленгән тоҡомло юрға ат.

[93] *Разур хахулдары* — хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ҡараған Разоренное ауылында күпселеген украин (хохол) милләтле кешеләр йәшәй.

[94] *«Йомғаға килә»* — мәсеткә йома намаҙын уҡырға килә, тигән һүҙе.

[95] *Сәлим* — Йылайыр районындағы ауыл.

[96] *Атингән* — Хәйбулла районындағы ауыл. Рәсми ҡағыҙҙағы исеме — Әбүбәкер.

[97] *Мырҙа* — Хәйбулла районындағы 1-се Мырҙалар ауылы. Халыҡ телендә — Түшауыл.

[98] *Тимерһуҡҡан* — исеменән күренеүенсә, был утарҙа башҡорттар тимерҙән хужалыҡ кәрәк-ярағтары, ҡоралдар ҙа эшләгән тип һөйләй ырыу ҡарттары. Билдәле булыуынса, батшаның 1736 йылдағы указы менән башҡорттарға тимерлек тотоу тыйыла.

Был утар һуңынан Һултантимер ауылы байы Ғәбделлатиф исеме менән йөрөтөлә.

[99] *«Туғыҙ бәйгене лә үҫәргән аттары алып...»* — бында бәйгелә ҡатнашып, беренсе урындарҙы алған аттарҙың үҫәргән башҡорттарыныҡы булыуына, йәғни Мәмбәт нәҫеле үҙҙәрен Үҫәргән ырыуы башҡорттарына индереүгә ишара (әлбиттә, Үҫәргән волосы ла).

[100] *Мөхәмәтшәриф* — Юлыҡ (Баймаҡ районы) мәҙрәсәһе ишаны Ғәбделлатиф хәҙрәттең икенсе улы Мөхәмәтшәриф мулла.

[101] *Смаҡ Һары күл* — түңгәүер ырыуы башҡорто Исмәғил бай (Исмак, Смаҡ) нигеҙләгән ауыл. Был урын боронғо исеме менән Һарыгүл тип тә йөрөтөлә. Смаҡ ауылы ҙурайып, икегә бүленә — Таналыҡ ағышына ҡарап, Үрге Смаҡ һәм Түбәнге Смаҡ тип атала. 1795 йылдарҙан билдәле булған был ауыл документтарҙа Исмәғилдең улы Әлибай Смаҡов исеменә лә аталып китә. Үрге Смаҡта данлыҡлы башҡорт ҡурайсыһы Йомабай Иҫәнбаев тыуған.

[102] *Байғаҙаҡ* — Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районындағы ауыл.

[103] *Троиск* (Труиски) — хәҙерге Троицк ҡалаһы (Силәбе өлкәһендә).

[104] *Бирмәҫ тамағы* — Һаҡмарҙың уң яҡ ҡушылдығы — Бирмәҫ йылғаһындағы ауыл. Хәҙер юҡ.

[105] *Өсөнсө Үҫәргән Гөбөрлө* — Ырымбур губернаһы Өсөнсө Үҫәргән волосына ҡараған Гөбөрлө ауылы — Яйыҡ йылғаһының уң яҡ ҡушылдығы Гөбөрлөлә. 1866 йылғы мәғлүмәттәрҙә Гөбөрлө йылғаһындағы был ауыл Нурбулат тип тә аталған.

[106] *Киев* — Украинаның баш ҡалаһы.

[107] *Шәжәрә авторы* Мостафа мулла Мәмбәтов русса ла һүҙҙәр, һөйләмдәр ҡыҫтырып ебәргеләй. Бында ла ярым русса, ярым башҡортсалап, шаяртып ала.

[108] *Кустай* — Кустанай ҡалаһы булһа кәрәк.

[109] *Ҡарғалы* — Ырымбур губернаһындағы ауыл. Сәйет биҫтәһе тигән исем менән дә йөрөтөлгән. Ҡарғалы — мәҙрәсәләре менән дан тотҡан төбәк. 1811 йылда унда 11 мәҙрәсә эшләгән. Һаҡмар һыуында.

[110] *«Кыҙыл сәкмән хеҙмәттәрендә»* — 88-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[111] *Аҡ мәсет һуғышы* — Ырымбур генерал-губернаторы В. А. Перовский етәкселегендә Урта Азияға ике тапҡыр ойошторолған Хива походында бик күп башҡорт һәм мишәр һалдаттары ҡатнаша. Походтың икенсеһендә (1853 йылдың йәйе) Аҡ мәсет ҡалаһын штурмлауҙа ғына 4 йөҙ башҡорт яугире ҡатнашҡанлығы мәғлүм.

[112] *«Ҡаҙнанан жалунйә...»* — дәүләт ҡаҙнаһынан махсус бирелгән жалованиe (пособие, пенсия) алыу.

[113] *Кәрим* — Хәйбулла районындағы юҡҡа сыҡҡан ауыл.

[114] *Мәнәүез* — Был ауыл да юҡ. Хәйбулла районында Һаҡмарҙың һул яҡ ҡушылдығы — Мәнәүез (Мәләүез) йылғаһы буйында булған ул.

[115] *япон-ҡытай һуғышы* — 1904—1905 йылдарҙағы Рус-япон һуғышы күҙ уңында тотола. Унда Ҡытай ҙа ситтә тороп ҡалмағанлығы тарихта билдәле.

[116] *герман һуғышы* — 1914—1916 йылдарҙағы Беренсе бөтә донъя һуғышы.

[117] *Һарыҡамыш һуғыштары* — Беренсе бөтә донъя һуғышы ваҡытында Һарыҡамыш (хәҙер Төркиәнеке) районында. Рәсәйҙең Кавказ армияһы 1914 й. 9 декабренән 1915 й. 4 ғинуарына тиклем Төркиәнең генерал Энүәр-паша командалығында һөжүм итеүсе 3-сө армияһын ҡамай һәм ҡыйрата.

[118] *Бохараи Шәреҡ* — 1919—1922 йылдарҙағы граждандар һуғышының Төркөстан, Бохара тирәләрендә барыуына ишара.

[119] *Исул (ысул) йәдид* — ғәрәп телен яңыса уҡытыуға күсеү (йәдидселек).

[120] *Абҙан* — хәҙерге Ейәнсура районындағы ауыл.

[121] *Сурай* — хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ҡараған Ҡыуандыҡ районындағы ауыл. Һаҡмар һыуында.

[122] *Ҡасҡын* — Йылайыр районындағы ауыл.

[123] *Ҡыҙылағас* — Йылайыр районындағы ауыл. Хәҙер юҡ.

[124] *«канауға йөрөгән заман»* — ауыл кешеләре батша әмере менән канау ҡаҙыуға йәлеп ителгән осор.

[125] *Филатов* — Ырымбур губернаһында 6 һәм 9-сы башҡорт кантондарына ҡуйылған попечитель Н. Н. Филатов. Уның 1848 йылда башҡорт ауылдарына йөрөгәндә яҙған көндәлек юлъяҙмалары һаҡланған (ҡара: ЦГА РБ, ф. 2. оп. 1. д.6001).

[126] *Рәхмәткин утары* — Мәмбәттең улы Рәхмәтулла байҙың Таналыҡ буйындағы биләмәһен (хәҙерге яңы Ергән ауылы тирәһен) Украинанан күсеп килгән хохолдар арендаға алып, хутор ҡороп ултырғандар. Утар Рәхмәтулла бай исеменә «Рахметкин» тип йөрөтөлгән.

[127] *күсмәле мужик* — Үҙәк Рәсәйҙән, Украинанан Уралға, Башҡортостанға күсеп килеүселәр.

[128] *Таналыҡ тамағында* — Таналыҡтың Яйыҡҡа ҡойған ерендәге ҡасаба.

[129] *ҡаҙаҡ* — боронғо ауырлыҡ үлсәүе берәмеге; бер ҡаҙаҡта — ярты кило самаһы; миҫал өсөн бер ҡаҙаҡ сәй 4 һум 20 тин торған.

[130] *Ерекле* — хәҙерге Ырымбур өлкәһенең көнсығышында Яйыҡ йылғаһы буйында Орскиҙән өҫтәрәк эшселәр ҡасабаһы (Ерекле һыуһаҡлағысы, Ерекле ГЭС-ы).

[131] *Мәмбәт бин Мырҙабәк* — Мәмбәттең атаһы Мырҙабәк хаҡында әлегә рәсми мәғлүмәттәр юҡ.

[132] *«Айыулынан Мәмбәткә күсеп килгәс...»* — 1816 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Мәмбәттең балалары үҙ ғаиләләре менән Һабыр ауылында (Йылайыр районы) теркәлгән. Әммә йәйге айҙарҙа улар йәйләүгә Таналыҡ, Маҡан буйҙарына күсер булғандар. Был хәл Айыулыла йәшәгәндә лә шулай дауам иткәнлеге шәжәрәлә яҙылған. Мәмбәт ҡарт үлгәс инде, уның балалары Айыулынан хәҙерге Мәмбәт ауылына бөтөнләйгә күсеп килгәндәр.

[133] *Мәмбәт мәсете* — беҙҙең көндәргәсә һаҡланған мәсет бинаһы бер нисә тапҡыр төҙөкләндерелә, әммә урыны шул — Иҫәнғол һалдырғандағыса.

[134] *Ырымбур* генерал-губернаторы, полковник Т. С. Циалковский.

[135] *Ырымбур* хәрби губернаторы генерал-майор В. А. Перовский.

[136] *Припраж мужиктары* — Преображенск (хәҙерге Йылайыр) заводында эшләгән крепостной крәҫтиәндәр. (Ҡара: Г. Ф. Гудков, З. И. Гудкова. Из истории Южноуральских горных заводов XVIII—XIX веков. Часть 1, Уфа, 1985.)

[137] *Туҡ-Соран* — Ырымбур губернаһындағы волость, совет осоронда (1919—1930 йылдарҙа) Туҡ-Соран кантоны.

[138] *сплав* — Бөрйән, Үҫәргән, Түңгәүер башҡорттары Һаҡмар, Эйек, Урал йылғалары буйлап Ырымбурға һал менән ағас ҡыуғандар.

[139] *Ҡаҙаҡ ауылы* — Мәмбәт ауылы «Ҡаҙаҡ ауылы» тип тә йөрөтөлгән. Әммә бында Байғаҙаҡ ауылы хаҡында ла булыуы мөмкин.

[140] *«заводтан ҡайтып...»* — Преображенск (Йылайыр) заводы.

[141] *«батша биргән елән, алтмыш көмөш тәңкә мекән бөрөлгән ҡашмау...»* — Иҫәнғолдоң икенсе ҡатыны Салихаға бирелгән был зиннәтле бүләктәр тураһында халыҡ араһында йөрөгән риүәйәттәр күп. Шуларҙың береһе («Салиха туны») «Башҡорт халыҡ ижады» ҡомартҡыларының «Легендалар» китабында баҫылып сыҡты (Өфө, 1980).

[142] *Бурангол кантон* — Ырымбур губернаһында 9-сы кантон башлығы майор Буранғол Ҡыуатов (1740—1833).

[143] *«Рәхмәтулла хахулы» урыны* — хәҙерге яңы Ергән ауылының көнсығыш осо Рахметкино тип аталған, алда әйтелеүенсә, унда украин күсенселәре арендаға ер алып йәшәгән. Бүребай кешеләре башта ауыл булып унда ултырһа, аҙаҡ Таналыҡ үренә — ҡасабаның бөгөнгө урынына күсеп киткәндәр.

[144] *Ҡолбирҙе, Һарыбай хуторы* — Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районындағы ауылдар.

[145] *Ҡыуатов Әлмөхәмәт кантон* — Ырымбур губернаһының төрлө кантондарында начальник булып эшләй. Ҡазан университетын тамамлап, тел ғилеме кандидаты дәрәжәһен ала.

[146] *Тутай батыр* — ҡаҙаҡтарҙың бик күп легендаларҙа һөйләнелгән батыры. Шәжәрәлә лә Тутай батырға киң урын бирелгән.

[147] *Йәрмөхәмәт сотник* — Иҫәнғолдоң өлкән улы Йәрмөхәмәт 1792 йылда Һабырҙа тыуған. 1809 йылдан 1833 йылға тиклем һалдат хеҙмәтендә Ырымбур линияһын һаҡлай, 1838—1847 йылдарҙа Ҡаҙаҡ ханы Кинйәһары Ҡасимов етәкселегендә башланған фетнәне баҫтырыуҙа Рәсәй батшаһы ғәскәрҙәре яғында тороп ҡатнаша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн хорунжий дәрәжәһенә күтәрелә. Үҫәргән волосында старшиналыҡ итә, есаул (капитан) чины бирелә.

[148] *Әхмәтйәзари* — полный хорунжий Әхмәтйәзари Иҫәнғол улы Кәипов (1807—1878) һалдат хеҙмәтенә 1828 йылда алына. 1837 йылдан — хорунжий. 1835—1836 йылдарҙа — губернатор В. А. Перовский хеҙмәтендә.

[149] *Бирмәҫ башы* — Хәйбулла районында Һаҡмарҙың уң яҡ ҡушылдығы Бирмәҫ йылғаһы башында ултырған ауыл. Хәҙер юҡ.

* *биҫтә ҡатыны* — ҡала ситендәге ауылдан алған ҡатыны (бында: Ырымбур ситенән).

[150] *Ноғай чисе* — Нуғай юлы.

[151] *«Булмаҫ сәсәнлек ҡыҙға киткән икән...»* — Яхъя сәсән үҙен кәмһетеп, йәғни әҙәп һаҡлап, «булыр-булмаҫ сәсәнлегем ҡыҙыма күскән икән» тигән.

[152] *«дөйәнән ҡорбан салманым»* — дөйәнән ҡорбан салыу ислам динендә иң ҙур сауап һанала.

[153] *Камар аçты* — Сәғит ауылынан Таналыҡ яғына киткәндә төшә торған ҡалҡыулыҡ түбәне (аçты).

[154] *ҡаҙаҡ тамыры Ҡарабай* — Мәмбәттең ҡаҙаҡ яғынан туған-тыумаһы.

[155] *«еремде истәккә бирмәй алдым...»* — истәк тигәндә бында Иçәнғол Бүребайҙы, Һабыр балаларын, күҙ уңында тота.

* *дөйә ботлого* — дөйәнең бот тиреһенән яһалған ҡымыҙ һауыты.

* *баҡан ағасы* — ике һыбай араһына арҡыры һалынған ағас (ҡолға).

[156] *Туржы* — Мәмбәт тауынан ағып сығып, Таналыҡҡа ҡойған йылға.

[157] *«Таштуғай» көйө* — халыҡҡа киң билдәле «Таштуғай» көйө һәм йыры хаҡында.

[158] *Кәрим ауылдары* — бында: Кәрим (Әбделкәрим) ауылы кешеләре тигән мәғәнәлә.

[159] *«Сырдарья аръяғына ғәскәр башлығы булып»* — 1839 йылда Ырымбур генерал-губернаторы В. А. Перовский етәкселегендәге поход.

[160] *Аллаяр* — шәжәрә авторы Мостафа мулла Мәмбәтовтың атаһы Аллаяр хорунжий ҙа ошо походта (1839 й.) Йәрмөхәмәт хорунжий менән бергә булған.

[161] *«Эйек буйында лагерҙа ятҡанда Циалковский губернатор»* — Т. С. Циалковский командалығында Ырымбур линияһы ғәскәрҙәренең лагерҙары Яйыҡ, Эйек, Һаҡмар буйҙарында булған (1834 йылдан).

[162] *Хәби кантон* — Хәбибулла Баймырҙа улы Ҡансурин, 1855 йылдан 4-се башҡорт кантоны начальнигы. Хәҙерге 1-се Мырҙа (Хәйбулла районы Матрай совхозы) ауылында тыуған, Баймырҙа (Баймаҡ районы) ауылында торған.

[163] *«Солтанғәли-Мәхийән»* — бер туған ике отставкалағы хорунжий бергәләп сауҙа компанияһы төҙөгәндәр.

[164] *Аҡмалетдин хәҙрәт* — Мәмбәт шәжәрәһен (ырыу тарихын) яҡшы белгән уҡымышлы шәхес.

[165] *«Ырымбурға батша туйына барғанда»* — Батша Николай I 1825 йылда Рәсәй империяһы тәхетенә ултырғас, барлыҡ губерния үҙәктәрендә байрам була. Шул иçәптән Ырымбурҙа ла булған ул «батша туйы».

[166] *Хәсән кантун* — Ырымбур губернаһының 6-сы кантоны башлығы (1838—1846 йылдарҙа) Хәсән Байназар улы Бейешов (Уның тураһында тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе тарихсы-ғалим Ә. Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкирской АССР», т. 1-се китабының 56—57-се биттәренән уҡый алаһығыҙ. Өфө, 1991).

[167] *кунни забуд* — Маҡан йылғаһы буйында йылҡысылыҡ заводы булған. Хәҙер юҡ инде.

[168] *иçке яҡ* — Мәмбәт һәм уның балалары өсөн элек йәшәгән яҡ — Йылайыр яғы, Һабыр ауылы.

[169] *Силәбе яғы убужурға* — баш күтәреүселәрҙе тынысландырыр өсөн ебәрелгән каратель отряд (обжор команда).

[170] *Утарбай* — Хәйбулла районында хәҙер бөткән ауыл.

[171] *Буре* — Һаҡмар буйында хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ҡараған Наҙарғол ауылы.

[172] *«Муллаҡай, Ғабдулла хәҙрәттә уҡып...»* — Баймаҡ районындағы Муллаҡай ауылында Ғабдулла хәҙрәт Сәйетбаттал улы ҙур мәҙрәсә тотҡан.

[173] *Йәнтүрә* — Орск өйәҙендәге башҡорт ауылы. Хәҙер юҡ.

[174] *Киндерле* — Хәйбулла районындағы ауыл. Хәҙер юҡ.

[175] *Бикбау* — Хәйбулла районындағы ауыл. Хәҙер юҡ.

[176] *Дәүләтшин Ғабдулла кантон* — 1-се башҡорт кантоны башлығы, «Абдулла ахун» йырында ҡәһәрләнгән яуыз түрә.

[177] *Ҡыҙыл Мәсет* — хәҙерге Мораҡ ауылы, Күгәрсен районы үҙәге.

[178] *Бикес* — Күгәрсен районындағы ауыл.

[179] *Ҡотлогилде Ишемғолов* — Күгәрсен районы Бикес ауылы, ҡыпсаҡ ырыуы кешеһе, тархан нәҫеленән, 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһарманы. Полк командиры, Парижды алыуҙа ҡатнаша. Уның тураһында тарихсы Ә. Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкирской АССР» (книга вторая) хеҙмәтенән тулы мәғлүмәт алырға мөмкин (Уфа, 1991; — С. 173—174).

[180] *Өҫкәлек һыуы* — бында шәжәрә авторы бәләкәй генә яңылышлыҡ ебәргән: Өҫкәлек Ейәнсура районындағы йылға, Оло Эйектең һул яҡ ҡушылдығы.

[181] *Иҫке яҡ Иҫәнғол* — хәҙерге Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғол ауылы.

[182] *Оло Һаҙ* — Йылайыр районындағы ауыл. Хәҙер юҡ.

[183] *герман һуғышы* — 1914—1916 йылдарҙағы Беренсе бөтә донъя һуғышы.

[184] *Мөхәмәҙи* — Кәипов Мөхәмәҙи Хәмзә улы; Мәмбәт ырыуы шәжәрәһен яҡшы белеүсе, бай тарихи мәғлүмәтле кеше ине Мөхәмәҙи олатай. Унан яҙып алынған легендалар «Башҡорт халыҡ ижады» томдарының береһендә донъя күрҙе (Өфө, 1980, №№ 312, 313).

[185] *Балапан* — Йылайыр районындағы ауыл.

[186] *Ҡыуатов Әлмөхәмәт (Әлми кантон)* — төрлө башҡорт кантондарында начальник, 1855—1863 йылдарҙа Ырымбур өйәҙе Юлдыбай ауылында 4-се кантон башлығы. (Аңлатмаларҙың 185-сеһен ҡарағыҙ.)

[187] *Шәмшәриф Мәтинов* — Шаһишәриф Мидәтғәли улы Мәтинов (1854—1919) Баймаҡ районы Атанғол ауылында тыуған, Муллаҡай мәҙрәсәһендә уҡыған. Орск өйәҙендә ахун булып эшләй. 1906 й. I Дәүләт думаһында депутат. 1918 й. Бөрйән-Түңгәүер кантоны рәйесе, аҙаҡ — Башҡортостан Диниә назараты мөфтөйө.

[188] *Ғәбит батыр бин Мәмбәт* — Мәмбәттең дүртенсе улы Ғәбит ҡаҙаҡ баҫҡынсыларына ҡаршы сығыуы һәм ил-йорт именлеген һаҡлауы менән Батыр исеме алған. Уның хаҡында халыҡ телендә легендалар күп һаҡланған (Аңлатмаларҙың 31-сеһен ҡарағыҙ).

[189] *Этҡол* — Баймаҡ районындағы I Этҡол ауылы.

[190] *Һәмән* — Баймаҡ районындағы ауыл.

[191] *Хива* — хәҙер Үзбәкстандағы ҡала.

[192] *Йомаһултан* — Мәмбәттең өсөнсө ҡатыны Йомаһултан хәҙерге Ейәнсура районы Самаҙы йылғаһындағы Самаҙы ауылы ҡыҙы булған.

[193] *Буранбай* — Буранбай Ҡотдос улы Сөйөндөков, Бөрйән волосы старшинаһы һәм 14-се класс чиновнигы, сәсән, танылған ҡурайсы, башҡорт халыҡ йыры «Буранбай»ҙың прототибы.

[194] *Бейешов Хәсән кантон* — Хәсән Байназар улы Бейешев (аңлатмаларҙың 212-сеһен ҡарағыҙ).

[195] *Һауыр (һауры)* — һыйыр малы тиреһенән ҡыҙылға буяп эшләнгән күн.

[196] Шәжәрәнең беҙгә килеп еткән өлөшө ошонда өҙөлә. Текстан күренеүенсә, шәжәрәне төҙөүсе (автор) Мостафа мулла Мәмбәтов Мәмбәт атаның бөтә нәҫел-нәсәбе хаҡында хикәйәне теүәл һәм бик эҙмә-эҙлекле алып бара һәм ҡулъяҙма, беҙҙең үкенескә, Мәмбәттең өсөнсө ҡатынынан тыуған балалары хаҡында һөйләгәндә өҙөлә. Әлбиттә, Мостафа мулла ырыу ағасындағы Мәмбәттең ҡалған балалары (Мөхәмәтрәхим бай, Күбәк батыр) хаҡында ла яҙғандыр. Әммә уларын, күрәһегеҙ, бөгөнгө быуындарғаса һаҡлап еткерә алмағандар.

[197] *«казачий рустан башҡа...»* — Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйлап һуҙылған Ырымбур линияһын — Рәсәйҙең көнсығыш сиген һаҡлаусы рус казактарынан башҡа рустар, хохолдар был яҡта булмаған.

[198] *абрук ерҙәре (оброк ере)* — крепостнойлыҡ ваҡытында крәҫтиәндәрҙән помещиктар яһаҡ урынына алған ер.

[199] *Макруш заводы* — хәҙерге Хәйбулла районы I Маҡан совхозы ерендә төҙөлгән Мокрушин тигән баярҙың йылҡысылыҡ һәм һыра заводы. Хәҙер юҡ.

[200] *Ногман* — Стәрле өйәҙендә булып, хәҙер юҡҡа сыҡҡан ауыл.

## «МӘМБӘТ ШӘЖӘРӘҺЕ»НЕҢ БАШЫ

*(Ҡулъяҙма)*



ددستی اللی جمعیتده
بر جتاه بالا ایکان دیب بو قدان طوروب قایتماقچی بولغان
جماعت قوواته حقوواته جمعیتنی آشت لوتنه منگاشدروب الو.
جماعتغه بیت جماعت قوواته ... بو بالا بر اولوشلی بالا
[illegible] خاتون بالالرینه کورکانلرن باردن سویلاب بو بالا
نیشی تربیه ابتوکردن سوینش اول قاریلارن تعم ملا سون چاق دیب بر قربان
صالوب مونه بر بالا الوب کیلدم بو بالانک اسمی جان صاری ملا بو بالاغه
ملا اذان قامت اوقوب جان صاری غه منیت
نیشی اسم قوش [illegible]
دیب اسم بیرم ده نشکلک لوب بولسون دیب دعا قیلهلر ملا اندشول
دعا قبول بولغاندر ۱۹۳۱ انچی یلده جمعیت نک بیل بالالرینک بالالری توکال ایلی
یوز اونیلی بولغان ایدی ۱۹۳۸ انچی یل سعید اولنچ ۳۴ دوم جمعیت بالاسی باد
اوداذای اولنچ ۲۳ دوم نامیت بالاسی ! جمعیت اولنچ ۶۵ دوم جمعیت

*

۱۹۳۱ انچی یل اصلقنچ مونه خلقه قالای اولدی

[illegible] عزیز آتالی بولوب کتوچیسی مال جماعت
جمعیت جماعت قاتی تربیه سنک جماعت [illegible] اسیرلکده عمر کیچوم [illegible]
[illegible] آیرلوبه توزلی قاتلقلر لوب
[illegible] جمعیتنی قلوقسر رحم وقتی جمعیتنی الوبر
اوغلاری [illegible] توالی دووامال طبیعتلی خلقسر جماعت بلالری آیده جمعیت
صبر [illegible] آدخون غه قایتماقچی بولغان
قایتمانی یولغه چغاروب جبار ایکب دیب مونه یاطه [illegible]
یاغنه چغاروب جبار ملار بول طال . قایته آلمای کیت جماعت [illegible]
شولای بتوب اوسوب بتاچ جماعت بورچاه یوما شولمای [illegible]
[illegible] تلوینه تلوو [illegible]
[illegible] اسمای حضرت [illegible]
[illegible]
[illegible]



## 22. ЗАМАНАЛАР ҠИССАҺЫ

Ошондай баш аҫтында шағир, фольклорсы һәм тел ғалимы Рәшит Шәкүров тарафынан баҫтырыла// Ағиҙел. — 2000.— № 12. —143—157-се б.

Үҙенең баҫмаһына Р. Ш. ошондай аңлатма биргән:

### «Ейәнбай олатайҙың аманаты»

Уйламаған ерҙән, Өфөгә килеп, ул мине үҙе эҙләп тапты.

— Ейәнбай Тимербай улы Усманов булам. Ил башы Әлшәй Мәргәндең балаҫының балаҫының балаҫының балаҫының балаҫы, — тип таныштырҙы

ул үҙен. — Элекке Әлшәй ауылын беләсең бит. Шул ауылдыҡымын, 1908 йылдың 2 мартында Сурайға ҡунаҡҡа барған ваҡытта тыуғанмын. Шуның өсөн Ейәнбай тип ҡушҡандар иҫемде[1]. Ананың тыуған йортонда мин — ейән. Ғаиләлә дүрт бала үҫтек: Ибраһим, Ғәфүрбай, Ейәнбай, Тимерхан. Инәйем Фатима, Сурайҙың Ғайса ҡарт ҡыҙы.

Шулай итеп, үҙе тураһында ҡыҫҡа ғына, ләкин шаҡтай тулы мәғлүмәт бирҙе Ейәнбай бабай.

Мине килеп табыуының төп маҡсаты — ғүмер буйы күңелендә һаҡланған тарихтарҙы һөйләп яҙҙырыу, баҫтырып сығарыу икән. Шуның өсөн, минең турала һорашып белеп, килеп тапҡан да инде. Фатирыбыҙ тығын булғанлыҡтан, мин уны «Ағиҙел» ҡунаҡханаһына урынлаштырҙым.

Ейәнбай олатай менән 6-шар, 7-шәр сәғәт буйы өс көн буйы ултырып, әлеге тарихтарҙы һүҙмә-һүҙ тиерлек яҙып алдым. Һүҙҙе ул Әлшәй Мәргәндән, уның улдары, нәҫел-нәсәбе, биләгән ерҙәре, тормош сәхифәләре тураһында риүәйәттән башланы. Был риүәйәт артабан хәҙерге Әлшәй районының Ҡармыш, Сурай, Сураҡай, Ҡайып, Иҫке һәм Яңы Аҡколай, Ташлы ауылдары, шулай уҡ Раевка ҡасабаһы составында тороп ҡалған Әлшәй ауылы менән бәйле тарихҡа барып тоташты. «Түбәнге Волга буйында башҡорт ерҙәре», — был инде беҙҙең тарихта билдәһеҙ ҡалған биттәрҙең береһе булыуы менән айырыуса ҡыҙыҡлы бер әңгәмә ине. Белеүебеҙсә, XVIII быуатта урыҫ батшалығы Түбәнге Волганың уң яҡ яр буйҙарына бер төркөм немец колонистарын (күскенселәрен) килтереп ултырта. Әммә уға тиклем кем ере булған ул төбәк? Бөтөнләй хужаһыҙ, буштан-буш ятмағандыр бит инде үҙәк губерналарға терәлеп үк ятҡан ул дала? Урыҫ тарихсылары был хаҡта ауыҙ асып бер һүҙ әйтһәләрсе. Әммә бына тарихи риүәйәт унда әүәл башҡорттар йәшәгәнлеген раҫлай[2]. Ер биреү — йән биреү, бирәү ҙә үҙ ерен еңел генә ташлап китә алмай. Түбәнге Волга башҡорттары, төбәктәренә немецтарҙы килтереп ултыртыу тураһында указ сығыу менән, ҡорал тотоп ҡаршы тормаҡсы булалар. Ярҙам һорап, Оло йортҡа, арҙаҡлы ил-ырыу башлыҡтарына, шул иҫәптән Әлшәй Мәргәнгә сапҡын ебәрәләр. Әммә ләкин кәмендә бер мең саҡрым ерҙә ятҡан, күптән инде төп йорттан бүленеп, ситтә ҡалған төбәкте нисек итеп, етмәһә, батшаның ихтыярына ҡаршы барып, һаҡлап ҡалмаҡ кәрәк? Әлшәй Мәргән алдында нәк шул һорау килеп тыуа. Риүәйәттә уның, төптән уйлап, ундағы башҡорттарҙы көрәләтә утҡа тыҡмайынса, үҙҙәренең араһына алып ҡайтып һыйындырыуы тураһында һүҙ бара. Ошо риүәйәттән сығып фекер йөрөткәндә, Әлшәй районындағы хәҙерге Ҡыпсаҡ-Асҡар, Ибрай, Дүртөйлө, элекке Туҡтар ауылдарына халыҡтың бер өлөшө ошо ваҡиғалар айҡанлы килеп ултырған булып сыға. «Халыҡтың бер өлөшө» тип һаҡлыҡ күрһәтергә тура килә. Сөнки, мәҫәлән, Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылының тарихи риүәйәттәрендә был ауыл халҡының (һәм, ғөмүмән, ҡары-ҡыпсаҡтарҙың) боронораҡ Ҡытайҙан сығып, башта Ирәндек буйына, унан хәҙерге Өфө янына, унан хәҙерге Дурасов ауылы ултырған ергә күсеп ултырыуы тураһында бәйән ителә[3]. Ә Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылының исеме рәсми сығанаҡтарҙа[4] 1664 йылдан билдәле.

---

[1] Паспортта Янбай тип яҙылған, тине Ейәнбай бабай.

[2] Ул төбәктә һуңынан, 1918—1941 йылдарҙа, РСФСР составында Волга буйы немецтарының Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы йәшәп килә. Был республиканың территорияһы 28,2 мең квадрат километр була (БСЭ т.17, М., 1974).

[3] Башҡорт халыҡ ижады, III том. Риүәйәттәр, легендалар. — Өфө, 1997, 148—150-се биттәр.

[4] Хисаметдинова Ф. Г. Башкирская ойконимия XVI—XIX вв. — С. — 171. Уфа, 1991, 171-се бит.

«Йәйләүҙә ятҡанда», «Ғәлекәй батырҙың ҡыҙы Зәйнәп һылыу» тип исемләнгән риүәйәттәрҙә лә Әлшәй башҡорттарының элекке тормошонан ҡыҙыҡлы ваҡиғалар бәйән ителә. Әммә иң мөһиме һәм, бәлки, иң ҡәҙерлеһелер — «Фәкихтәр яҙыуы» тигән хикәйәт. Ошо яҙыу йәки башҡорттарҙың боронғо тарихына арналған шул китап тураһындағы иҫтәлек ғүмер буйына тынғы бирмәгән дә инде Ейәнбай олатайға. Балыҡ тиреһенә (бер аҙы Ҡытайҙан, Сәмәрҡәндтән килгән ҡағыҙға) яҙылған ул тарих китабы, быуындан быуынға тапшырыла килеп, Ейәнбай бабайҙарҙың өйөндә һаҡланған, ә ҡулъяҙманы ул 8—9 йәштәрҙән үк уҡып үҫкән. Үкенескә күрә, илдә мәҙәниәт революцияһы барған осорҙа, 20-се йылдар аҙағында — 30-сы йылдарҙа, иҫкегә ҡаршы көрәш һылтауы менән, башҡорттарҙың боронғо ҡулъяҙма мираҫы юҡҡа сығарыла. «Фәкихтәр яҙыуы» ла шул яҙмышҡа дусар ителә. 1929 йылда булһа кәрәк, НКВД вәкилдәре, килеп тентеп, алып сығып китәләр. Яндырғандарҙыр, моғайын. Нәҡ бына ошо өйҙә тарих китабы булғанлығын кемдер еткергән булырға тейеш.

Һәләк булған китап тураһында мин Ейәнбай олатайҙан айырыуса төпсөп һорашып, яҙып алдым. Уның йөкмәткеһе махсус комментарий, махсус иғтибар талап итә. (Белгестәребеҙ, әлбиттә, артабан уға иғтибар бирерҙәр.) Китаптың ҙур күләмле булыуы, ғәйәт киң планда тарихи дәүерҙәрҙе айҡауы, бигерәк тә боронғо башҡорттарҙың үҙҙәренә дин һайлап донъя гиҙеүе һәм мосолманлыҡты мәғкүл күреүҙәре менән бәйле мажаралы сюжеттың, шулай уҡ сағыштырмаса һуңғараҡ дәүергә ҡараған Ҡасым (йәки Ҡасим) түрә, уның Яйыҡ буйына Һаҡмар ҡойған ергә шәһәр һалыуы тураһындағы хикәйәттең нигеҙендә шулай уҡ билдәле тарихи ваҡиғалар яталыр, тип фараз итергә мөмкин. Ләкин шуны иҫтә тоторға кәрәк: кеше хәтере ташҡа баҫылған йә булмаһа ҡағыҙға яҙып, теркәп ҡуйылған текст түгел. Күп нәмә яйлап онотола, тоноҡлана барыусан. Бындай хәлдә иң элек исемдәр, конкрет факттар, ваҡиғалар эҙмә-эҙлелеге трансформацияға бирелеүсән. Ҡомартҡыла, мәҫәлән, Мырҙабәк хан тураһында телгә алына. Әммә Ҡазан ханлығында Мырҙабәк исемле хан йәки ханға яҡын торған берәй эшмәкәр булғанмы, юҡмы — был әлегә һорау булып ҡала. Ейәнбай бабай «Фәкихтәр яҙыуы»н ҡулға алғандан һуң мин уның менән осрашҡанға тиклем теүәл алты тиҫтә йыл ваҡыт үткән ине. Шул уҡ ваҡытта ошондай афоризм да бар: йәш саҡта уҡыған — ташҡа яҙылған, олоғайғас уҡыған — ҡомға сыймаҡланған. Ейәнбай олатайҙың бала һәм үҫмер сағында уҡып, хәтерендә һаҡлаған ваҡиғалар, дөйөм алғанда, ысынлап та, ана шул сөкөп ташҡа яҙғанды хәтерләтеп тә ҡуя.

Ғәжәп ҡыҙыҡлы тарихи деталдәр ҙә булған икән ул ҡулъяҙма ҡомартҡыла. Мәҫәлән, башҡорттарҙың боронғо заманда ҡордтар менән бәйләнеше аҙ ғына сағылып ҡала. Дөрөҫөрәге, һүҙ унда Бохарала, Сәмәрҡәндтә ҡоллоҡтан сығарылған ҡорд ҡәбиләһе күселәре тураһында бара. Шул ҡорд ҡәбиләһе күселәре юл башлап килгән өсөн башҡорд булып киткән, тип раҫлай ҡомартҡы. Был версия менән танышҡанда хәҙер бына Салауат Ғәлләмовтың башҡорттар һәм ҡордтар проблемаһына арналған хеҙмәттәрен нисек итеп иҫкә төшөрмәйһең! «Ә беҙҙең арала уларҙы Ҡыйғы башҡорттары тиҙәр, ҡыйғылар. Арғаяшта ла бар ҡордтар», — тип тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ асыҡлыҡ индереп ҡуя тарих һөйләүсе. Шул уҡ ваҡытта академик В. В. Радловтың Йәнәсәй яҙма ҡомартҡыларында *ҡорт* тигән этноним булғанлығын билдәләүе башҡорт тарихы өсөн билдәле бер әһәмиәт ҡаҙана.

Башҡорттарҙың Урыҫ батшалығына ҡушылыуы менән бәйле ваҡиғалар айҡанлы, ҡомартҡыла шулай уҡ ғәйәт әһәмиәтле мәғлүмәттәр хәбәр ителә. «Бынаһы урыҫтарҙың беҙгә дүртенсе һөжүме булған», — тиелә унда. Тимәк,

башҡорт-урыҫ мөнәсәбәттәрендә элеккерәк дәүерҙә лә мөһим ваҡиғалар булып уҙған — һәм бер генә мәртәбә лә түгел.

Ейәнбай бабай үҙен «Әлшәй Мәргәндең балаһының балаһының балаһының балаһының балаһы» тип таныштырғайны, тинек. Хәҙер шул мәсьәләгә әйләнеп ҡайтайыҡ. Был нәҫел ебе түбәндәгесә килеп сыға: Әлшәй Мәргән — уның беренсе ҡатынынан оло улы Яубай Мәргән — Яубай Мәргәндең оло улы Ғәлекәй Мәргән— уның оло улы Уҫман палуан — уның икенсе ҡатынынан кесе улы Тимербай — уның улы Ейәнбай. Әлшәй Мәргән уға бишенсе быуын олатай тура килә. Ә арала нисә йыл тип иҫәпләргә? Бында, этнографтар методикаһы менән, быуындар араһын 30 йыл самаһы тип алыу үҙен аҡлап бөтмәй һымаҡ. Сөнки — феноменаль күренеш! — атай-олатайҙар оҙон ғүмерле булған. Яубай Мәргән — 160, Ғәлекәй Мәргән — 141, Уҫман палуан 119 йыл йәшәгән, тип раҫлай риүәйәт.

Әлшәй Мәргәнде Ейәнбай олатай төркмән-ҡыпсаҡтарҙың ырыу башлығы тип билдәләй. Төркмән-ҡыпсаҡ тигән этноним, уның хикәйәтенән күренеүенсә, мең тигәнгә, мең ҡәүеменең исеменә тура килә. Шул уҡ ваҡытта Әлшәй районының төп ерҙәрен биләп торған боронғо башҡорт ауылдарына (Әлшәй, Ҡармыш, Ташлы, Сурай, Сураҡай, Ҡайып хәҙерге ваҡытта Өс Аҡҡолай) Әлшәй Мәргән үҙе һәм уның энеләре, туғандары нигеҙ һалған. Тимәк, уның үҙенең зат-ырыуы меңлеләрҙең Йыҡсыбы тармағы (аймағы) тип иҫәпләргә була. Ә инде Ҡыпсаҡ-Асҡар, Ибрай, Дүртөйлө һ.б ауылдар шул Әлшәй башҡорттарының ерҙәренә килеп ултырған. Һуңғы дәүерҙәрҙә ошо уҡ ерҙәрҙә типтәр, татар, урыҫ, сыуаш һ.б. ауылдар барлыҡҡа килгән, ҡасабалар үҫеп сыҡҡан.

Ейәнбай олатай затлы Әлшәй Мәргән тармағының совет осоронда ниндәй фажиғәгә дусар ителеүе тураһында йән әрнеүе менән һөйләне. Ул үҙе ғаиләлә өсөнсө бала булып, яҡшы белем һәм тәрбиә алып үҫкән. Йөҙйәшәр уҡымышлы өләсәһе (ҡәртнәйе) уны бала сағында, «боронғо ҡәләмгә өйрәтеп», изге ҡомартҡы итеп һаҡланған иҫке китапты уҡыта башлай. Ауылда иһә, Әлшәй мәҙрәсәһендә, Хафиз ҡарыйҙан уҡып белем ала. Әммә 1929 йылдың аҙағында, тентеп эҙләп табып, тарих китабын юҡҡа сығарғандан һуң, ғаиләне лә, төбө-тамыры менән аҡтарып, Себер һөрәләр.

Ейәнбай олатайҙың Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуы, фронтта күргәндәре тураһында айырым бер иҫтәлек яҙырға булыр ине. Уныһына ваҡыт етмәне, үкенес. Шул иҫтә ҡалған: ағай (ул ваҡытта 33—34 йәштәрҙәге ир-егет), үҙенең отҡорлоғо арҡаһында, теләгән бер машинаға ултырып китә алыуы менән дан алған. Шул арҡала хатта ятып ҡалған немец машиналарын да хутҡа ебәреп, командирын тиҙ генә ултыртып алып киткән саҡтары булған.

Һуғыштан алдағы йылдарҙа Ейәнбай Усманов Төркмәнстанға барып төпләнә. Шунда үҙебеҙҙең Дим буйынан барған бер башҡорт ҡыҙына өйләнеп, ғаилә ҡорған. Ауыр яу юлдарын үтеп, туп-тура шунда ҡайтып төшкән. Балалар үҫтергәндәр. Ҡартайып, ҡатыны үлгәс, тыуған яғына ҡайтып, Яңы Ҡыпсаҡ ауылында төйәкләнгән. Һуңғы йылдарҙа бабайҙың хәлен белә алғаным булманы.

Ейәнбай бабайҙың отҡор, һәләтле булыуына тағы бер миҫал — телдәрҙе белеүе. «Ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, үзбәк, төркмән, фарсы, ғәрәп, урыҫ телдәрен беләм», — тине ул. Күпме ғүмере ситтә үтһә лә, башҡортсаһы, дөрөҫөрәге, башҡортсаның Дим һөйләше, саф көйөнсә һаҡланғайны. Ул үҙенең Дим һөйләше менән төркмән теле араһындағы яҡынлыҡты (әйтәйек, ҫ, ҙ өндәренең уртаҡлығын) бик яҡшы тойоп һөйләшеп йөрөр булғандыр, күрәһең.

Төркмәннәр, ҫин ҡайҙан, кем булаҫың, тип ҫораҫалар, мин башҡорттоң төркмән-ҡыпсаҡ ырыуынанмын, тип әйтә инем», — тип хәтеренә ала Ейәнбай олатай. «Шул ҫүҙҙе әйтҫәң, ә, үҙебеҙҙеке икән, тип бер туғандай күрәләр ҙә ҡуялар», — ти бабай. Бына шулай күпте күреп, донъя гиҙеп ҡайтҡан бер аҡһаҡал булып сыҡты Әлшәй башҡорто Ейәнбай Тимербай улы Усманов».

[1] Артабан, уларҙы еңелләштереү өсөн, Ейәнбай бабайҙан яҙып алған текстарҙы, айырым осраҡтарҙан тыш, нигеҙҙә, әҙәби тел нормаһына күсереп бирергә булдыҡ (Р. Ш.).

[2] Ошо урында Ейәнбай бабай миңә: «Ҡашыңдың ни икәнен беләҫеңме? — тип өндәште һәм: — э-эй, бахыр, башҡортмон тип йөрөй бит инде. Быҙау тиреҫенән тегелгән ҡапсыҡ була ул», — тип аңлатты. (Р. Ш.)

[3] Ейәнбай бабайҙан был материал 1989 йылдың 23, сентябрендә яҙып алынды. Тимәк, Миңнеғәле Яхыя улы Туҡаев XIX быуаттың 90-сы йылдар уртаһында тыуған булып сыға. (Р. Ш.)

[4] «Хатта Әлшәй ауылының иҫке зыяратын уратып алған таш ҡойманы Раевкаға күсеп килгән әҙәмдәр нигеҙ таштарына алып бөткәндәр, — тип йәне әрнеп һөйләне Ейәнбай Усманов. — Хәҙер ул ҡәберлекте шәкәр заводы баҫып бара. Былай рельефтан ғына беләм мин ҡартатайҙарҙың ҡайҙа ятҡанын», — тине ул (Р. Ш.).

[5] Был сәфәр, артабан бәйән ителеүенсә, ҡыпсаҡ башҡорттарының Уҫман хәҙрәт (ул Ғәрәп хәлифәтендә 644—656 йылдарҙа хәлиф булып торған) ислам динен ҡабул итеүе менән тамамлана. Шул айҡанлы, ниһайәт, атаҡлы мәғрифәтсе ғалим Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың «Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар» тигән мәҡәләһендә әйтелгән һәм әле һаман да Башҡортостан тарихсыларының иғтибарынан ситтә ҡалып килгән ошондай һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөп үтеү урынлы булыр. «Хисаметдин бине Шәрәфетдин Болғари-Мөслимиҙең тарихына ҡарағанда, башҡорттар ислам динен күп кенә күршеләренән алдараҡ ҡабул иткәндәр, — тип яҙа ул. — Атап әйткәндә, һижри буйынса 195 йылда (яңыса 748 йылда) Төркөстан өлкәһендә йәшәгән һәм ислам диненә иҫкесә 400-сө йылдар, грекса X быуат тирәһендә күскән төрөктәрҙән алдараҡ, ҡабул иткәндәр». (Ҡарағыҙ: Өмөтбаев М. Йәдкәр. Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө, 1984, 198-се бит) (Р. Ш.).

[6] *Бейрут* — хәҙерге Ливияның баш ҡалаһы.

[7] *Рум.* — Рим.

[8] *Хәҙрәте Усман* — мосолман изгеләренең береһе.

[9] *Хәҙрәте Ғүмәр* — мосолман изгеләренең береһе, Мөхәммәттең һаҡсыһы.

[10] *Зәрәфшан* — Бохара вилайәтендәге ҡала.

[11] *Кәттә ҡорған* — Сәмәрҡәнд вилайәтендәге (Зарафшан йылғаһы ярындағы) ҡала.

[12] *Сәмәрҡәнд* — Хәҙерге Үзбәкстандағы (Зарафшан үҙәнендәге) ҡала. б.э.т. 329 йылда Марҡанд исеме менән мәғлүм булған.

[13] *Фирғәнә Оазисы* — хәҙерге Үзбәкстандағы оазис.

[14] *Марғилон* — VIII быуатта уҡ билдәле булған ҡала, Фирғәнә үҙәнендә.

[15] *Ҡашғар* — Ҡытай халыҡ республикаһындағы Циньзян-Уйғыр автономияһының мөһим мәҙәни үҙәге.

[16] *Дүнгән* — Ҡытайҙың төньяғында йәшәгән Хүәй тигән ҡәүемдең бер этник төркөмө.

[17] Башҡорт тарихында ете ырыу-ҡыпсаҡ ырыу-ҡәбиләләр союзының тамырҙары, ошонан сығып ҡарағанда, бик боронғо дәүерҙәргә барып тоташа булһа кәрәк. (Р. Ш.)

[18] *Хужэн* — Урта Азия ҡалаһы.

[19] *Үремсе* — Циньзян — Уйғыр автономияһы үҙәге (КХР).

[20] Хәҙерге үзбәктәрҙең ата-бабалары тип аңларға кәрәктер (Р. Ш.).

[21] *Ҡыҙыл урҙа* — Алтын урҙа емереклектәрендә хасил булған бәләкәй хан-лыҡтарҙың береһе. Урта Азияла ошо исемде (Кызыл Орда) йөрөткән ҡала бар.

[22] *Аҡ мәсет* — 182—183 йылдарҙа Ҡыҙыл урҙа шулай тип атап йөрөтөлә.

[23] *Ҡортд ҡәбиләләре* — курдтар. Р. Ш., Салауат Ғәлләмовҡа эйәреп, «башҡорт» этнонимының килеп сығышын ошо этнос менән бәйләй: Йәнәһе, беҙ — Баш+ҡордт.

[24] *Ҡасим түрә* — төрөкмән ҡыпсаҡтарының (йәғни мең ырыуының) урта быуаттарҙағы бер етәксеһе.

[25] Документаль сығанаҡтар буйынса, Эткол (Отҡол) ауылы халҡы — элекке Верхнеурал өйәҙе Бөрйән улусынан сыҡҡан башҡорттар. Ауылға Ҡыркөйлө мең улусы ерендә 1797 йылда нигеҙ һалынған һәм Этҡол Боҫҡоновтың исеме бирелгән. Был хаҡта ҡарағыҙ: Асфандияров А. Из истории башкирских деревень Давлекановского района (Ватандаш. 1999, 41-се бит) (Р. Ш.).

[26] *Алап* — яу сыҡҡанда уйнала торған оло барабан.

— Алапты күрҙеңме? — тип һораным Ейәнбай бабайҙан. Ул миңә ошолай тип яуап бирҙе:

— Тирәсен күрҙем, бойҙай иләй торған иләк хәтле. Киңлеге шул иләккә ике бәрәбәр. Ағастан эшләнә. Тимерҙән шылтырауыҡтары теҙелгән, көмөш ялатылған, сәскәләр яһалған. Тиреһе — балыҡ (оло йәйен) тиреһе. Унар, ун бишәр бот килә торған йәйен тиреһе инде ул. Шул алап үҙебеҙҙә бар ине. Өҫтө күн менән көпләнгән ағас туҡмағы ла булған уның (Р. Ш.).

## 23. КҮБӘЛӘК-ТИЛӘҮ БАТЫРҘАРЫ

2001 йылда Учалы районы Миндәк ҡасабаһында йәшәүсе Әхмәҙи сәсән Шәрипов Ә. М. Сөләймәновҡа тапшырған// ТТЭИ фольклор һәм сәнғәт бүлегенең ҡулъяҙмалар фонды. «Әхмәҙи сәсән Шәрипов» фонды.

[1] *Ҡыҙылут* — Учалы районындағы Ҡотой ауылы янындағы ҡыраҡа (тау һырты).

[2] *Ара Түбә* — Учалы районындағы Мәҫкәү ауылы янындағы түбә.

[3] *Аҡса* — ҡаҙаҡ батыры. Ҡайһы бер риүәйәттәрҙә ул ҡаҙаҡ ханы тип нарыҡлана. Учалылағы Аҡсатау — шул батыр ерләнгән тау, тиҙәр.

## 24. ӘБРӘЙ БАТЫР МЕНӘН АЛБИРМӘҪ АЛАСАБЫР

Жәлил Кейекбаев. Туғандар һәм таныштар/ Баҫмаға әҙерләүсеһе, инеш мәҡәлә авт. һәм махсус мөхәрр. Әнүәр Вахитов. — Өфө: БКН, 1975. — 67—73-сө б. Яҙыусы күренекле тел ғалимы, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры Жәлил сәсән Кейекбаев (1911—1968) үҙенең романында файҙаланған был сюжетҡа нигеҙ итеп 1945 йылда Ғафури р-ны Тайыш ауылы Мирсаяф ҡарт Сәйфуллиндан үҙе яҙып алған «Әбрәй батыр» риүәйәте (ул беренсе тапҡыр 1959 йылда ташҡа баҫылға. Ҡар.: 2-се том, 1959. — 222—223-сө б.) менән «Аласабыр» легендаһын (Ҡар.: шул уҡ баҫма. — 214—216-сы б. һәм БХИ. 2-се том. РЛ. — 329—331-се б.) ала.

[1] Романда тәүҙә Әбрәй батыр менән Аласабыр хаҡында һөйләү шарты тасуирлана: «Баҙар көн кис, ҡыҙыл эңер төшкәс, Ташбаткан ауылының бер төркөм ҡарттары Әхмәдиҙең урам буйында ятҡан бүрәнәләре өҫтөндә һөйләшеп ултырҙылар. Ҡарттар янына Әхмәди ҙә сығып ултырҙы.

— Ҡола байталың һаман табылманымы шул? — тип һораны Усман ҡарт.

— Юҡ, һыуға батҡан һымаҡ юғалды ла ҡуйҙы, — тине Әхмәди, көрһөнөп.

— Йүгерек булмаҡсы ине хайуан, — тине Ваһап ҡарт.

— Берәйһе муйынына бысаҡ ҡына һалғандыр, моғайын, — тине кемдер.

— Йүгерек булырға бөтә ере килгәйне инде. Шундай хайуан бик һирәк килеп сыға, — тине Әҙһәм ҡарт һәм йүгерек ат хаҡында оҙон бер хәбәргә төшөп китте...» (167-се б.)

Йылҡы малының ҡәҙерен белмәүсе байҙар тураһында Әҙһәм ҡарт әйткәндәрҙе Әхмәҙиҙең нисек ҡабул итеүе романда шулай еткерелә:

«Әҙһәм ҡарттың был һүҙе туп-тура Әхмәдигә һәм уның әнеһе Бәһауға барып тейҙе. Улар, бер һүҙ ҙә өндәшмәй, баштарын баҫып тик ултырҙы.

— Атты тәрбиәләп тотһаң ғына ат ул. Ошонан үҙең аҙна араһы ғына һурпа эсмәй йөрөп ҡара, быуын бөтә лә ҡуя, шуның кеүек инде ул, — тине, Әҙһәм ҡарттың һүҙен ҡеүәтләп.

— Һурпа эсеңкерәп тотонһаң, арыу булып ҡала ул, — тине шаярып Әпхалиҡ. Йәштәр көлөштөләр.

— Ғибат ағайың белмәй әйтмәҫ ул, үҙ елкәһендә татыған кеше.

— Ниңә, ысын, — тине Ғибат.

— Уныһы, уныһы, иллә Аласабырҙы һатып ебәреп әрәм иткәндәр икән, — тине ҡурайсы Әхмәди». (70—71-се б.)

Әҙһәм ҡарт хикәйәтен тыңлаусыларҙың берәүҙәре Әбрәй батырҙы хуплай. Әхмәҙи иһә аты хаҡында уйлана:

— Иллә йәтеш иткән икән тегене, — тине кемдер.

— Майҙанды уратып ултырған халыҡҡа күрһәтеү өсөн юрамал билләшеп йөрөгән икән Әбрәй батыр, — тине Сәмиғулла.

— Әбрәй ҙә таһыллы булған, ә?

— Алай, әй.

Әҙһәм ҡарт хәбәренең аҙағы, Әбрәй батыр хикәйәһе, Әхмәдиҙе бер ҙә ҡыҙыҡтырманы.

Башҡалар Әҙһәм ҡарттың хәбәрен йотолоп тыңлап ултырҙылар, ә Әхмәдиҙе Аласабыр хикәйәһе ҡыҙыҡтырҙы. Ләкин Аласабыр уны бер яҡтан ҡыҙыҡтырһа, икенсе яҡтан иҙҙе. Һынсылдар әйткән: Иҙел буйынан Аласабырҙан да шәп тағы бер йүгерек сығасаҡ, тигәндәр. Ҡола байтал, моғайын, шул булғандыр.

Әхмәди уйы менән юғалған байталының нәҫелен юлларға тотондо: аҡ бәкәл ҡола айғыр уға атаһынан башҡа сыҡҡан саҡта тейгәйне. Хәҙер бик күп йылдар булды инде уға. Ҡола айғыр ҙа йүгерек ине. Ул ҡартайҙы. Әхмәди уны һимертеп һуғым итте. Ул ҡола айғыр ниндәй айғыр балаһы булғандыр, Әхмәди уны хәтерләмәй ине. Әҙәм нәҫелен юллай китһәң, әҙәм тамыры — ағас тамыры һымаҡ. Юллап табып була. Үҙенең олаталарын инде ул ете быуынға тиклем белә. Әхмәдиҙең атаһы Сәлмән, уның атаһы Ғилман, уның атаһы Вилдан, уның атаһы Ноғоман, уның атаһы Байегет, уның атаһы Ишҡол. Ишҡол кем улы булғандыр, Әхмәди артабан белмәй. Ә быларының исемдәрен белеү генә түгел, хатта уларҙың кем булыуҙарын, ҡайҙан, ни эшләп йөрөүҙәрен, ни дәрәжәлә бай булыуҙарын да белә. Ноғоман ҡарт харунья булған, өс бисәһе булған, Ғилман ҡарттың мең башлап ҡортло умартаһы булған. Ишҡол ҡарттың малы бик күп булған, ул ҡыш көнө тауҙа, утарлап, мал ашатып ятҡан. Уның урынын әле булһа Ишҡол утары тип йөрөтәләр.

Ул ғына ла түгел, Әхмәди хатта Ташбатҡан ауылындағы башҡа кешеләрҙең ата-бабаларын да белә. Ә бына юғалған ҡола байталдың нәҫеле ҡайҙа барып сыға икән? Әхмәди ҡайһы саҡта уның нәҫеле Аласабыр нәҫеленә барып сыҡмағаны яҡшы тип уйлай, сөнки ул хәҙер барыбер юғалған инде. Юҡтың аты юҡ, тиҙәр, тип уйлай. Әгәр уның нәҫеле шунда барып сыҡһа, барыбер үкенестә генә ҡалыр ине, тип уйлай ул. Шулай ҙа ҡола айғырҙың нәҫелен юлларға ниәте юҡ түгел Әхмәдиҙең. Бәлки, уның нәҫеле шул Тәлгәшле ауылынан сыҡҡандыр, теге Аласабыр сыҡҡан ауылдандыр, кем белә...» (72—73-сө б.)

[2] *Әбрәй батыр* // БХИ, 2-се том, 1959. — 222—223 б. Бынан алдағы аңлатманы ҡара.

## ӘБРӘЙ БАТЫР

Уның ысын исеме Абдрахман булған. Тыумышы — Ҡолҡан ауылынан.

Әбрәй ара-тирәлә данлыҡлы батырҙарҙың береһе булып, үҙе бик ирекле йәшәгән. Ул заман Ырымбурҙа йыл һайын ҙур һабан туйы үткәрелер булған. Әбрәй йыл һайын шунда барып, беренсе урынды алып ҡайтҡан. Бер йылды шундай һабан туйы Ҡазанда үткәрелгән. Әбрәй Ҡазанға барған. Ат сабышынан да, батырҙарҙан да шул Ҡолҡан, Сәйетбаба яҡтары беренсе урынды алғандар.

Әбрәй батыр көрәшкә бер юлы ғына тотоноп китә алмаған. Башта ул ҡыҙа икән. Шуның өсөн халыҡ, ул көрәшә башлағас та, һеүләп тора икән, халыҡ һай-һаулаған һайын, был ҡыҙа бара икән.

Шулай, бының көрәшен бер зирәк кенә бәндә ҡарап торған да, бөтә ерҙә дан алған батыр янына сығып:

— Мин был батырҙы йығам. Тик мин көрәшкән саҡта, майҙанда бер тауыш та булмаһын, шым ғына ултырығыҙ, — тигән.

Халыҡ уға ҡаршы:

— Үлтерер бит ул һине, — тип, теге бәндәне кире һүргән.

Шулай ҙа был тыңламаған, батыр менән көрәш тотҡан. Былар көрәшә башлағандар. Әбрәй, айыу шикелле, тирә-яғына ҡаранып йөрөй икән, майҙанда һай-һаулаған кеше лә юҡ, бер тауыш та сыҡмай. Әбрәй батыр, йүнләп кәүҙәһен дә тота алмай, киҫкә һымаҡ тик йөрөй икән. Халыҡ һай-һауламағас, тегеңә көс кермәй, ти. Йөрөй торғас, теге бәндә быны һалған да ҡуйған. Шунан Әбрәй батыр һикереп торған да:

— Ниңә һай-һауламайһығыҙ, ниңә ҡысҡырмайһығыҙ?! Шаулағыҙ, яңынан көрәшәм мин ул малай менән! — тип дулаған.

«Йә был үлтереп ҡуйыр», — тип халыҡ уны көрәшкә ҡуймаған.

Шунан ул ерҙе «Әбрәй батыр йығылған ер» тип атағандар.

Шунан һуң инде бәйгеләрҙә, һабантуйҙа батырҙар көрәшкәндә, һай-һаулап, көс биреп ултырыу ғәҙәткә кереп киткән.

## 25. БИКЙӘН МӘРГӘН

Томға Әхмәт Һибәт улы Исламғолов яҙмаһа буйынса индерелеп, беренсе тапҡыр баҫыла. Кемдән, ҡайҙа яҙып алыныуы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Исламғоловтың «Был әкиәт революциянан элек тик ҡарттар араһында ғына

әкиәт итеп ара-тирә генә һөйләнгән, хәҙерге көндә шыпа онотолған. 25-се йылдарҙа ла быны хәтерләгән ҡарттар бик һирәк ине әле», тигән иҫкәрмәһенә ҡарағанда, уны Исламғолов, күрәһең, шул 1920 йылдарҙа ҡарттарҙан ишетеп, һуңынан (1938 йылдың 20 февралендә) үҙенең хәтерендә ҡалғанынса яҙып, 1939 йылдың 11 ноябрендә М. Ғафури исемендәге Тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырған. Ҡулъяҙмаһы СССР ФА БФ фәнни архивында «Башҡорт халыҡ әкиәттәре (А. Исламғолов материалдары/» тигән 87-се папкала һаҡлана: ф.3, оп12, ед.хр.247, 146—163-сө б. (Н. З.).

«Бикйән Мәргән»дең ҡулъяҙмаһы хаҡындағы фекерҙәр (Н. Т. Зариповтың архивынан): 1. Әкиәт бит был. Эпос тип аңлатыу, бигерәк тә уҡыусыны ышандырыу (иң элек, әлбиттә, үҙеңде!) ауыр булыр. Әҙәбиләштерелгән әкиәт. Ҡултамға: Ә. Харисов . 13.IV (Йылын билдәләү ауыр түгел. М. Х. Минһажетдинов үҙенең фекерен 1970 йылда яҙған. Был яҙманыҡы ла шул уҡ йыл булырға тейеш. Был иҫкәрмә 6,5х9,5 киңлегендәге гәзит ҡағыҙына ҡара ҡаралы авторучка менән яҙылған).

2. Былай ҡыҙыҡлы ғына әҫәр. Ләкин әкиәт стиле хикәйә стиле менән аралашып, буталып китә, әҙәбиләштереү көслө. Ваҡ деталдәр, әҙәби хикәйәләү күп. Ҡулдан (?) ҡыҫҡартҡылағанда, бәлки, баҫырҙар. Шулай ҙа яһалма икәне күҙгә ныҡ бәрелеп тора. Эпик элементтар булыуы, эпостың хикәйәгә боролоуы — үҙе ҡыҙыҡлы күренеш. F. X. (Ғайса Хөсәйенов булырға тейеш. Тексттың яҙылышы, стиле — уныҡы. Был иҫкәрмә лә шул уҡ 1970 йылда яҙылған булырға тейеш. Авторы уны ябай ҡәләм менән эпостың күкһел йәшкелт ҡағыҙға баҫтырылып, Н. Т. Зарипов ҡулы менән редакторланған 1-се данаһының һуңғы, 20-се битенең һыртына яҙған булған).

3. Нур Талипович, уҡып сыҡтым «Бикйән Мәргән»де. Иғтибар менән уҡыным. Редакцияғыҙҙы, нигеҙҙә, уңышлы табам. Тик бер-ике урында уңышһыҙ булһа кәрәк. «Ләкин»де алыу кәрәкмәҫ, әҙәби стилгә тарта (был — миҫал өсөн генә).

Минеңсә, был үҙенсәлекле һәм яҡшы әҫәр. Әҙәбиләштереү ныҡ һиҙелә, ләкин иғтибарға ул үҙенең йөкмәткеһе менән лайыҡлы. Көнкүреште эпик һүрәтләү йәһәтенән йөрөгән сюжеттарҙан үҙенең идея-эстетик һәм тематик йөкмәткеһе менән айырылып тора. Йөкмәткене асыу — һеҙҙең эш. Инеш мәҡәләләме, әллә иҫкәрмәләрҙәме. Иҫкәрмәләрҙә сюжеттың эпик йөкмәткеһенә аңлатмалар талап ителгән урындар, минеңсә, байтаҡ ҡына. Һәм улар уңайлы, йәтеш киләләр. Бөтә бер дәүер, ижтимағи формация эсендәге социаль процестарҙың халыҡ аңындағы сағылыуы, ҡаршылыҡтар кисереп үҫеүсе донъяның, халыҡтың эпик идеалына ярашлы дөйөмләштерелеүе, минеңсә, быңдай йөкмәткеле булыуы әҫәрҙең китапҡа инеүен бәхәсһеҙ яһауҙан тыш, уға байтаҡ тулы аңлатма биреүҙе талап итә. «Ҡара юрға», «Ҡола бейә» (бәлки, автор «Аҡһаҡ ҡола»ны күҙ уңында тотҡандыр. — *Ә.С.*) һ.б күҙ күреп өйрәнгән сюжеттарҙан байтаҡ айырылып торған был әҫәр тарихтың быуаса һөйләнелмәгән яҡтары тураһында һөйләргә мөмкинлек тыуҙыра. Тарих тураһында халыҡ әҙәбиәте тулыландырыласаҡ ҡына.

Ҡайһы бер иҫкәрмәләрегеҙ яңылыш күренә. Һеҙ әйткән «Йәйләүгә барып сыҡты» формаһы, әҙәби булыуға ҡарағанда, халыҡтыҡы ул. Тик беҙ уға (бер аҙ) күнекмәгәнбеҙ генә.

22.11.1970. Хөрмәт менән Марат Минһажетдинов.

P.S. Кемдер, тексты (аҙаҡта) әкиәт, тигән. Был иптәш әкиәттең ни икәнен тулыһынса күҙ алдына килтермәй, ахыры.

* * *

[1] Сюжеттың шундай исемдәр менән бүлектәргә бүленеүе әҙәбиәт йоғонтоһонда Исламғолов тарафынан эшләнгән булһа кәрәк. (Н. З.)

[2] *Аҡуаз йылғаһы (Аҡ ауыҙ)* — Мәләүез р-ны Һыртлан ауылынан үрҙә Ағиҙелдең уң ҡушылдығы.

[3] *Ҡулъяҙмала: ... йәйләүгә барып сыҡты.* Күрәһең, художестволы әҙәбиәт йоғонтоһонда, артабан һөйләү-хикәйәләү ана шулай (шаһитлы) үткән заман хәбәр ҡылым (күргәнде һөйләү) формаһында бара. Телдән-телгә күсеп, бик боронғоно сағылдырған эпик әҫәрҙә тәбиғи булмауын иҫәпкә алып, был форма бөтә урында ла үткән заман сифат ҡылым (ишеткәнде һөйләү) формаһында (-ған-гән, -ҡан-кән) күсерелде (Н.З).

[4] Һапҡан — ауыртмаҡ принцибына нигеҙләнгән ҡорал (тышау оҙонлоғо бауҙың бер яҡ осон урап тотаһың, икенсе осон — ҡыҫып. Тоҡанына таш һалаһың да, ауыртмаҡты өйрәлтеп-өйрәлтеп, алға һелтәгәндә, усты асаһың. Таш осоп китә).

## 26. СУРА БАТЫР

Ватандаш. — 1999. — № 9. — 128—133. Эпостың был варианты йыйылма текстан ғибәрәт. Уны төрлө урында йә риүәйәт, йә сюжетһыҙ ҡобайыр, йә тегеһенең дә, быныһының да өҙөмтәләре рәүешендә сәселгән текстарҙан нуғай халҡының «Шура батыр» йыры өлгөһөндә Ғайса Хөсәйенов төҙөгән. Мөйөшлө йәйәләр эсендәге өҫтәмәләр Ә. М. Сөләймәнов тарафынан индерелде.

Эпостың бер ярсығы Нур Талип улы Зарипов (1925—1997) тарафынан ике тапҡыр йыйынтыҡтарға индерелгәйне (Ҡар.: БХИ: Эпос. 3-сө кит. 69—70-се б.; БХИ. 5-се том, — 210-сы б.). Һуңғы китаптың «Аңлатмалар» өлөшөндә эпостың башҡа өҙөмтәләре һәм башҡорттоң Тамъян-ҡатай тигән ырыуының Спб-та һаҡланған шәжәрәһенә ингән вариантының сығанаҡтары күрһәтелгән. Унда шулай уҡ эпостың башҡа төрки ҡәрҙәштәребеҙҙәге версиялары хаҡында ла мәғлүмәт табырға була.

## 27. СУРА БАТЫР

*(Вариант)*

Силәбе өлкәһе Уйск р-ны Әмин ауылында Рәхмәтуллин Тимершаһ Әхмәтшәриф улы төҙөгән шәжәрәнең шул ауыл уҡытыусыһы Дәүләтшин Марс Шайкамал улы яһаған күсерегенән күренекле журналисыбыҙ Рәүеф Насиров күсереп алған (Уның күсереге ТТӘИ-ның фольклор һәм сәнғәт бүлеге архивында һаҡлана) Ҡар.: «Рәүеф Насиров фонды. — 2001».

Шәжәрә ғәрәп графикаһында теркәлгәнлектән, унда ингән эпостың варианты ла шул графикала яҙылған. Һүҙ башҡорттоң ырыуы, Сура батырҙың нәҫел ебен дауам итеүсе тамъян-ҡатай башҡорттары хаҡында барһа ла, шәжәрәне төҙөгәндә, рәсми яҙма милли тел татар теле булғанлыҡтан, бөтә яҙма шул телдә атҡарылған.

«Сура батыр» эпосы, эпостың төп ҡаһарманының зат-ырыуы, нәҫел-нәсәбе хаҡындағы тулыраҡ мәғлүмәтте Р. Насировтың «Сура батыр илендә» тигән мәҡәләһенән алырға мөмкин. Ҡар.: Ватандаш. — 2000. — № 9. — 175—180-се б.

## 28. СУРА БАТЫРҘЫҢ ҠАЗАНҒА ЯУ АСҠАНЫ

*(Версия)*

XX быуаттың 80-се йылдарында Баймаҡ р-ны Ниғәмәт ауылында атаҡлы ҡурайсы, бейеүсе һәм сәсән Дияров Кәрим Мөхәмәҙи улынан (1910—1986) яҙып алынған һәм уның «Сал Уралдың моңдары» тигән китабына (төҙөүселәре Рәшит Шәкүр менән Фәрит Камаев. — Өфө: БКН, 1988. — 36—39-сы б.) «Сура батыр» риүәйәте һәм Сура батыр сығарған көй тарихы рәүешендә икегә бүлеп индерелгән. Көйө борон «Сура батыр сығарған, Ҡазанды яу алған көй» тип аталған, аҙаҡ уны «Ҡазанды алған көй» тип кенә исемләй башлағандар. 1964 йылда Баймаҡ р-ны Абҙаҡ ауылы Разин Ибраһим Әбүбәкер улынан (1903) БДУ студенткаһы Рәйсә Яхина яҙып алған «Һары батыр менән Сура батыр» тигән риүәйәттә ул көйҙөң исеме «Сура батыр» тип тә, «Ҡазан яу алған» тип тә аталып йөрөтөлөүе әйтелгән. (Ҡар.: БӘФК, һаҡл. бер. 60. — 108-се б.). Көйҙөң исеме шундай фекергә килтерә: тимәк, Сура батыр, ысынлап та, Ҡазанға яу сапҡан, тимәк, ул ошо хан ҡалаһына ингән, уны даулашыуҙа ла, яулашыуҙа ла ҡатнашҡан. Шуға күрә К. М. Дияровтың: «Сура батырҙың һыбайлы ғәскәре Ҡазанға еткәнгә тиклем ҡурай маршын уйнап барған. Улар Ҡазанға барып етеүҙән алда Иван Грозный Ҡазанды яулаған була. Сура батыр, ҡурай маршын уйнатып, ҡоралды ғәскәрен кирегә бороп, тыуған иленә ҡайтып китә», — тигәне дөрөҫлөккә тап килмәй.

## 29. КИНЙӘКӘЙ

Ҡулъяҙма СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының ғилми архивында һаҡлана: ф.3, оп. 63/37. 1972 йылда «Ағиҙел» журналының 8-се һанында «Кинйәкәй мөнәжәте» исеме менән баҫылып сыҡҡан (124—126-сы б.). Икенсе тапҡыр бәйет жанры иҫәбендә донъя күрә // БХИ: Бәйеттәр / Төҙ. М. М. Сағитов, Н. Д. Шоңҡаров; яуаплы мөхәр. Ғ. Б. Хөсәйенов. — Өфө: БКН, 1978. — 44—48-се б. Эҫәрҙе тәүләп баҫырға әҙерләүсе Н. Т. Зарипов инеш һүҙендә был әҫәр хаҡында шуларҙы әйтә: «Миңә 1968 йылда Ишембай районында уҙғарылған фольклор экспедицияһында ҡатнашырға тура килгәйне. Шул экспедицияла Әрмет ауылында, яҙыусы Ибраһим Ғиззәтуллин (хәҙер ул Өфөлә йәшәй) беҙгә үҙендә һаҡланған күсермә бер ҡулъяҙма дәфтәр бүләк итте. Уҡып ҡараһаҡ, ғәрәп хәрефтәрендә яҙылған был дәфтәр эсендә башҡорт халыҡ ижадына һәм боронғо ҡулъяҙма әҙәбиәткә ҡараған дүрт әҫәр теркәлгәнлеге беленде. Уларҙы (үҙенә нығырак оҡшаған шул дүртеһен генә) И. Ғиззәтуллин икенсе бер ҡулъяҙма дәфтәрҙән 1945 йылда күсертеп алған. Тәүге дәфтәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юғалған. Уның эйәһе, журналда баҫылған «Кинйәкәй мөнәжәте»нең тәүге строфаһында әйтелгәнсә, шул уҡ район Иҫәкәй ауылы кешеһе Дауытов Мөхәмәдулла Әхмәдулла улы булырға тейеш. М. Ә. Дауытовтың биографияһын, кем булыуын хәҙергә асыҡлап булманы. И. Ғиззәтуллиндың һөйләүенә ҡарағанда, ул — XIX быуат кешеһе, рус-башҡорт Маҡар училищеһын уңышлы тамамлағаны өсөн уға, исемен яҙып, русса баҫылып сыҡҡан Ҡөрьән бүләк ителгән. Теге дәфтәр ҙә шул Ҡөрьән эсендә һаҡланған булған. Ҡөрьән аҙаҡ шул дәфтәр менән бергә Әрмет ауылы муллаһына килеп ингән».

«Кинйәкәй бәйете» композицион яҡтан өс өлөштән ғибәрәт булып, башҡорттарҙың тәлтем-юрматы ырыуҙарының күптән килгән шәжәрә ебен һәм Кинйәкәй ауылының яндырылыу фажиғәһен һөйләгән тарихи хәл-ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала. Был фажиғәле ваҡиғаларҙы тасуирлау поэтик шәжәрә, ҡобайыр стиленә ҡоролған.

[1] *Кинйәкәй (Кинйәкәү)* — Башҡортостандың хәҙерге Ишембай районы Петровское ауылының элекке исеме. XVIII быуат аҙаҡтарында восстание ваҡытында яндырылған, аҙаҡ ул урынға ауыл нигеҙләнгән. — Н. Т. Зарипов иҫкәрмәһе.

[2] Шәжәрәләрҙә ырыуҙар йыш ҡына үҙҙәренең сығышын берәй легендар шәхескә, йә булмаһа реаль булып та, даны киң таралған тарихи шәхескә бәйләү осрағы йыш. Бында ла башҡорт халҡының эпик ижадында киң билдәле Тора хандан тәлтем-юрматы ырыуының башланыуын бәйләргә тырышыу күренә.

[3] *Ишәй, Салих, Ҡарайған, Ишембай, Байғужа, Ташбулат, Кинйәбулат, Көҫәпҡол, Һарғай, Иҫәкәй, Ғүмәр, Маҡар, Һайран* — Башҡортостандың хәҙерге Ишембай районына ҡараған башҡорт ауылдары. Ул ауылдарҙың барлыҡҡа килеүе ошо исемдәге кешеләр менән бәйләп аңлатыла.

[4] *Мыраҡ (Мораҡ)* — Башҡортостандың Күгәрсен районы үҙәге исеме.

[5] *Үтәк* — Башҡортостандың Ғафури районына ҡараған ауыл.

[6] *Ҡармыш* — Башҡортостандың хәҙерге Ғафури районына ҡараған Яңғыҙҡайын ауылының икенсе (боронғо) исеме.

[7] *Темәс баяр* — башҡорт еренә алдаҡ юл менән баҫып килеп ултырған рус баяры Тимашев. Ул тәлтем-юрматы башҡорттары ерендә ауыл ҡорған. Ул ауыл Башҡортостандың Ишембай районына ҡарай, Тимашевка исемендә йөрөй.

[8] *Ҡарун* — ислам дине мифологияһында киң таралған һаран, ҡомһоҙ кеше исеме. Ул ҡомһоҙлоҡ символы булып халыҡ аңына һеңешкән.

[9] *Убыр команда* — карательный отряд. Батша хөкүмәте элек башҡорт ауылдарында бола сыҡһа, карательный отрядтар ебәрер булған. Э был язалаусы команданы ашатып-эсереү ауыл халҡына йөкләтелгән. Был карательный отрядтарҙы ябай халыҡ телендә обжор командаһы тип йөрөткәндәр.

[10] *Еғән* — Көньяҡ-Көнсығыш Башҡортостандағы йылға. Ағиҙелгә ҡоя.

[11] *Йәмәлкә* — 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышы етәксеһе Емельян Пугачев.

[12] *Кинйәкәй* — 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышы етәкселәренең береһе Кинйә Арҫланов.

[13] *Салауат* — 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышы етәкселәренең береһе, Пугачевтың тоғро соратнигы Салауат Юлаев (1752—1800).

[14] *«Ошбу мәктүб мөнәжәт. Аҡмулланан аманат»* — тигән юлдар аҡ, изге күңелле мулланан аманат тигән мәғәнәлә ҡулланылған булырға тейеш.

## АЛАСАБЫР

XXI быуат башында Ғафури районы Сәйетбаба ауылында Аман Юлъяҡшин Вәлиев Хәйрулла бабайҙан яҙып алған//Йәшлек. — 2004. — 22.05. — 5-се б.; Ағиҙел: — 2004. — № 5. — 183 — ... б.

Берҙән-бер көндө Әлтәшле ауылында (Ауылды нигеҙләүсе Әлдәшир була, һуңынан «Әлдәшир»ҙән «Әлтәшле»гә әйләнә, хәҙерге Ҡолҡан ауылы) Зөлҡәрнәй исемле кешенең бейәһе ҡолонлай. Был ҡолондоң үҙенә генә хас

үҙенсәлектәре була: һыртынан бауыр аҫтына тиклем, буй-буй булып, аҡ һәм ҡыҙыл төҫтә ала төшкән, ә һәр бер буйҙа аҡ төҫ өҫтөндә — ҡыҙыл, ҡыҙыл өҫтөндә бармаҡ башы ҙурлығы ғына аҡ төктәр була. Төҫөнә күрә, эйәһе уны Аласабыр тип исемләй. Уны күрергә килгән, атты яҡшы белгән һынсыл ҡарттар, аҡһаҡалдар, Зөлҡәрнәйгә был ҡолондоң киләсәктә ел еткермәҫ йүгерек ҡотло ат булырын юрайҙар ҙа уны нисек тәрбиәләргә, нисек ашатырға кәңәш бирәләр.

Аласабыр ябаҡтан тайға әйләнгәс, Зөлҡәрнәй уны, ҡарттар кәңәшенсә, ашата, тәрбиәләй башлай.

Атҡа һоло биреүҙең дә үҙенә күрә рәте бар. Күпте күргән, күпте белгән ҡарттар кәңәш иткәнсә, һолоно ул ҡаҙанда бөрттереп, икмәк бешереп алынған ҡыҙыу мейестә киптереп, һуңынан ҡыҙҙырып ашата. Ошолай иткәндә, һолоноң майы сығып, ул туҡлыҡлы була. Шуны ашатһаң, эсе тартылып, ат буйһыулана, кәүҙәгә еңел, ә көскә, ҡеүәткә кәрле була.

Тай сағында уҡ атта сос йөрөгән малайҙарҙы мендереп, Зөлҡәрнәй Мырҙаҡай ауылының осонан Әлтәшлегә тиклем Аласабырҙы сабыштыра башлай. Ат башындағы малайға, теҙелеп баҫҡан һыҙыҡтан киткәс тә, атты ныҡ ҡыумаҫҡа, үҙ ыңғайына ҡуйырға; әгәр аттың барышы артһа, алда барған аттың артҡы аяғы тәңгәленән бармаҫҡа, сөнки ул ғәрсел ат, үҙенә етеп килгән Аласабырҙың түшенә тибеп, артабан сабышыу, уҙышыу дәртен һүндереүе бар; ә инде уҙырға кәре булғанда, юлдың йәтешлегенә ҡарап, йә уңдан, йә һулдан, атты һыҙырып: «Эйҙә, малҡай», — тип ҡеүәтләп, уҙырға кәрәк икәнлеген әйтеп, кәңәштәр бирә.

Мырҙаҡай ауылы осондағы йәшел тигеҙлектә аттар теҙелеп бөткәс, берәү шәп итеп һыҙғырып ебәрә — бар бәйге аттары Әлтәшлегә табан сабып сығып китә. Аласабыр, былдай нәмәне тәү тапҡыр күргәнлектән, аҙап ҡала, урынында тыпырсына. Ат башындағы малай, теҙгенен ҡарғып, сыбыҡ менән бер һелтәнгәс кенә, иң аҙаҡтан тегеләрҙе ҡыуа төшә.

Бөтәһе ун ат саба, Аласабыр барған һайын тиҙлекте арттыра барып, уларҙы уҙа бара, Әлтәшленең ауыл осона тиклем бишеһен уҙа. Мәсет тәңгәленә килеп еткәндә, алда ике генә ат ҡала...

Аттың тәүге сабышындағы холҡон ат башындағы малайҙан һорашҡас, Зөлҡәрнәй дәртләнеп китә: Аласабырҙы ауыр йөк менән бик үк йонсотмаҫҡа, унан яҡшы сабыш аты сығырға тейеш — ырамлы саба, сәме бар, ара ни тиклем йыраҡ булһа, шул тиклем уның тыны оҙоная, алдағыларҙы уҙа.

Һабантуйҙар яҡынайыу менән, ауылдағы йүгерек аттарҙы сабыштырып ҡарау ғәҙәти бер эшкә әйләнеп киткән. Аласабыр инде тәүге сабыштағы һымаҡ аҙап ҡалмай, шунда уҡ алға ынтыла, шулай ҙа ике ауыл араһындағы сабышта Басарыйҙың ҡола дүнәнен уҙып китә алмай, артынан килеп еттем тигәндә генә, сабышыу юлы бөтә лә ҡуя.

Хәҙер инде хужаһы, һабантуйҙар алдынан аттың эсен тартылдырыр өсөн, уны үтә яҡшы тәрбиәләй башлай: һолоно бөрттереп, ҡыҙҙырып, шунан килелә төйҙөрөп, ҡабығынан таҙартып, ағас тирмәндә тарттырып, ярмаға әйләндереп тә ашатҡылай, икмәген дә ҡаптырғылай. Атты май бөрмәһен өсөн, Аласабырҙы һәр саҡ хәрәкәттә тота. Ул киң күкрәкле, нәҙек бөйөрлө, урта көрлөктәге еңел кәүҙәле, күҙҙәре баҙлап торған һөкланғыс бер атҡа әйләнә бара.

Бер саҡ Зөлҡәрнәйгә сәйер генә уй килә: «Сабышыу араһын йырағыраҡтан — Ҡарағай һыртынан — алғанда, нисегерәк булыр икән?»

Кешеләр менән һөйләшкәс, малайҙарҙы сабыш аттарына мендереп, Ҡарағай ауылы һыртына ебәрәләр. Ололар ҙа ат менеп, был күренеште ҡарар өсөн, алғараҡ барып тора.

Бына бер ваҡыт йыраҡтан күренеп торған һырт башынан ат тояҡтарынан ҡупҡан туҙан һуҙыла. Ҡылтауҡайындан байтаҡ кире килгәнсе, теге ҡола дүнән алды бирмәне, ти. Әммә артынан Аласабыр уны ҡыҫтай ине, ти. Барған һайын уның тыны оҙайған — тиҙлеге артҡан.

Мырҙаҡай ауылы осона етерҙән алдараҡ һыҙа буйына яҡынлағанда, теге ҡола дүнән йәйләны, Аласабыр тиҙлеген арттырып, алға сыҡты, ти. Сабышыусы аттар Әлтәшлегә яҡынлағанда, Аласабыр тегеләрҙән ярты саҡрым самаһы алда барған.

Ошо һынауҙан һуң Зөлҡәрнәй Аласабырҙы һабан туйҙарында сабыштырып була икәнлегенә тамам төшөнә. Эйәһенә уның дан һәм мал килтерәсәгенә өмөтләнә башлай.

Ваҡыт үтеү менән Зөлҡәрнәйҙең Аласабырға булған ышанысы тулыһы менән аҡлана: ул Кесе һәм Кәлсер Табында ғына түгел, тотош Табын ырыуының данын күтәрә. Йыйын бәйгеләрендә уны уҙыусы бер ат та табылмай.

...Бына 1846 йылдың 30 авгусы тыуа.

Аҙна буйына һуҙылған юл мәшәҡәтенән йонсоған кесе табындар Карауанһарай ҡунаҡханаһында рәхәтләнеп йоҡлай, аттары ла үҙҙәре янында.

— Ай-һай, Василий түрә башлы кеше икән, беҙҙе, элекке һымаҡ, фатир эҙләп йонсоп йөрөмәһендәр тип, бына ниндәй ҙур эш башҡарҙы бит, ә-ә-ә, — тип һуҙып ҡына һүҙ башланы, ти, берәүһе. Бөтәһе лә уянған, ятҡан ерҙән генә һөйләшәләр икән, ти.

— Аттарыбыҙ ҙа ышаныслы ерҙә бит әле... Элек ни, атын юғалтып, йәйәүгә ҡалып та ҡайта торғайнылар бит, — тип ҡуя икенсеһе. Иртәнгене ашап алғас, аттарын тәрбиәләнеләр, ти. Көн болотло, һалҡынса ямғыр һибәләй ине, ти.

— Былай булһа, һабантуйҙың йәме булмай инде, — тип ҡуялар үҙ-ара.

Иртәгә һабантуй башлана тигән көндө Зөлҡәрнәй аты менән яланға сыға. Ат сабыштырырға килгәндәр менән бергәләп йөрөй. Ҡайтышлай, Яйыҡҡа барып атын таҙартып, йөҙҙөрөп алып ҡайта.

Был һабантуйға Хоҙай үҙе фатиха бирә. 20 авгусҡа тиклем болотло булған һалҡын көн 30 августа салт аяҙға әйләнә. Бар халыҡтың рухы күтәрелә.

Һәр кантондан килгән ҡунаҡтар өсөн айырым урындар билдәләнә. Сабыша торған аттар бер тирәлә тәртип менән йыйыла. Һәр кем үҙ атына ышана, беренселекте ҡулдан ысҡындырмаҫҡа ниәтләнә. Ҡаҙаҡ далаларынан да ат сабыштырырға килгәндәр. Ҡайһы ат алдан килгәнен төҫмөрләр өсөн, ат айышын белгән һынсылар йөрөй. Атты яҡшы белгән бер һынсыл әбей артынан ҡаҙаҡтар, бер тотам да ҡалмай, юрғалап йөрөй. Әбей атты ҡырҙаныраҡ ҡарап тора ла, яҡын килеп, аттың башын тотоп, тын ала торған танау тишектәрен ҡарай ҙа, үҙ эсенән генә мөңгөрҙәп ҡуя.

Ҡаҙаҡ әбейе табындар янына килеп етеү менән, Аласабырҙың эйәһенән атты тотоп ҡарарға рөхсәт ала ла уның тәнен ҡапшап ҡарай. Шунан Зөлҡәрнәйҙән аттың йәшен, элек ярыштарҙа ҡатнашыу-ҡатнашмауын һорап тора ла шәп кенә атлап китеп бара. Арыраҡ киткәс, үҙенә эйәреп йөрөгәндәргә ошо аттың сабышта беренсе киләсәген, ҡаҙаҡтарҙа уны уҙа алырлыҡ ат юҡлығын әйтеп бирә.

Ҡаҙаҡтар Аласабырҙы сабышта ҡатнаштырмау сараһын күрә башлай. Төрлө-төрлө хәйлә ҡора улар. Бер аҙҙан Зөлҡәрнәй янынараҡ килеп, уға ишетерлек итеп:

— Бөгөн ат сабышы булмай икән, шунлыҡтан хәҙер үк ҡайтып, атты эсереп-ашатып, иртәгәгә тиклем ял иттерергә кәрәк, — тип һөйләшеп торалар ҙа, аттарына менеп ҡайтып киткән кеше булалар. Юрый тороп ҡалған берәүһе Зөлҡәрнәйгә:

— Кешеләр ҡайтып китте, һин ниңә атыңды йонсотаһың, әйҙә ҡайттыҡ, — тип китеп бара.

Зөлҡәрнәй быларҙың һөйләшеүенә, ысынлап та, ышана, ҡайтып, Аласабырҙы һуғара ла, уға һоло бирә.

Каруанһарай һабантуйын асыу тантанаһы оҙағыраҡ бара: төшкә табан ғына ослана.

Алдан билдәләнгәнсә, тәүҙә ат сабыштарын белгән, башҡорт аттары тураһында ишетеп кенә түгел, күп походтарҙа үҙе күреп белгән генерал Циалковский был эш йөкмәтелгән бер башҡорт түрәһен алданыраҡ ебәреп, әҙерлекте тикшерергә ҡуша.

Ат сабышында 200 ат ҡатнашырға тейешлеген күптәр белһәләр ҙә, һәр кем үҙ атының, үҙ ырыуының даны өҫкә сығыуын теләй. Бүләктәр бик затлы була. Бындай ҙур бүләктәрҙе башҡа һабантуйҙарҙа ишеткәндәре лә, күргәндәре лә булмай: төрлө төҫтәге буҫтауҙан тегелгән өс башҡорт сапаны, икеһе алтынланған, береһе көмөшләнгән Бохара еләне, сик буйы комиссияһы рәйесе генерал-майор Лазыжинскийҙың көмөш кубогы, фирүзә ҡашлы алтын йөҙөгө, көмөштән ҡойолған ғәскәри хәрби борғоһо, көмөш йүгертеп биҙәлгән теүәтәйе, сауҙагәр Деев вәғәҙә иткән дөйә...

Ат сабышын түҙемһеҙлек менән көткәндәр араһында иң тынғыһыҙҙары 1812—1814 йылдарҙа француз яуынан еңеп, миҙал алып ҡайтҡан Табын ырыуы ҡарттары булғандыр, моғайын. Ниндәй ауыр һуғыш шарттарында ла башҡорт аттары кеүек сыҙамлы, батыр аттар булмаған бит. Табындарҙың бар өмөтө Аласабырҙа була. Шул өмөттө аҡлау бурысын йәштәргә йөкмәтеү менән ҡәнәғәтләнмәй, ҡарттар аттар янына үҙҙәре бара.

Зөлҡәрнәйҙең ҡайтып атына һоло биреүенә күп тә үтмәй, артынан бер төркөм табындар килеп етә. Улар шунда уҡ уны өтөп ала:

— Ниңә ҡайтып киттең? Сабышта ҡатнашмаҫҡа ни хаҡың бар?!

Һыу эсеп, һоло ашаған аттың сабыша алмаҫына ныҡ ышанһа ла, килгәндәрҙең ҡыҫтауына түҙә алмай, Зөлҡәрнәй атына менергә мәжбүр була. Һабантуй майҙанына килеп етеүгә, бар сабыш аттары бер ергә тупланған була.

Зөлҡәрнәй хәлде аңлатып:

— Аласабыр сабыша алмай, һәләк буласаҡ, — тип әйтеп ҡараһа ла, күпте күргән яугир-аҡһаҡалдар үҙ һүҙҙәрендә ныҡ тора:

— Аласабырһыҙ ат сабышы булмай!!!

Ярышта ҡатнашырға тейешле барлыҡ аттар Ырымбурҙан 25 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Һаҡмар почта станцияһына табан юл ала. Аттарҙы ныҡ ҡыумайынса, талғын ғына юрттырып баралар. Зөлҡәрнәйҙең башында төрлө уйҙар ҡайнаша. «Бәлки, ҙур араға барып еткәнсе, Аласабырҙың эсе бушар, ул саҡта беренселек беҙҙеке буласаҡ», — тип өмөтләнә ул.

Аттарҙы теҙеп бөткәс, бәйгенең башланыуын белгертеп, мылтыҡ аталар. Тын ятҡан дала ҡапыл мәңгелек йоҡонан уяныл киткәндәй була. Зөлҡәрнәйҙең Аласабыры, уҡ һымаҡ алға ынтыла, ҡалған бәйге аттары уның артынан теҙелә.

— Эй, Хоҙайым, ҡеүәт бир минең Аласабырыма! — тип теләк теләй Зөлҡәрнәй. Тик бер саҡрым самаһы матур ғына алдан барған аты ҡапыл тиҙлеген юғалта башлай, арттағы аттар берәм-берәм алға уҙып китә.

— Ах! Харап ҡына була бит малҡайым, — тип көйәләнә Зөлҡәрнәй.

Бер аҙҙан Аласабыр бөтөнләй туҡтай, үҙен уҙып киткән аттарға ҡарап, моңһоу ғына кешнәп ҡуя.

Зөлҡәрнәй атынан төшөп ни эшләргә белмәй торғанда, Аласабыр ергә ятып аунай башлай, һикереп тороп эсен бушата. Бына ул, йәнләнеп китеп, түҙмәй бер урында тыпырсына башлай, еңел генә итеп кешнәп: «Йә, хужам, мен инде, киттек!» — тигән һымаҡ була. Зөлҡәрнәй менеүе була — аты уҡтай алға ынтыла. Аласабыр әленән-әле тиҙлекте арттыра бара. Бына ул аттар төркөмөн ҡыуып та етә. Зөлҡәрнәй уҙа килгән аттарҙы һанай башлай.

— Йөҙөнсө... йөҙ егерменсе... Эй, малҡайым, тырыш инде, һынатма! — тип атын бер туҡтамай ҡеүәтләп, муйынынан һөйөп бара.

...Был ваҡытта ат сабышы көткән һабантуй гөж килә. Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы Циалковский бейек трибунанан ҡарап бәйгене күҙәтә. Генерал эргәһендә генә, французҙарҙы еңеп, Парижда тирмә ҡороп, ҡурай уйнатып ҡайтҡан Табын ырыуы яугирҙәре алдан ниндәй төҫтәге ат килеүен һораштырғылап тора. Аласабыр төҫөндәге ат бәйгелә берҙән-бер генә. Алдан туры, ҡара төҫтәгеләр килеүен ишетеп, табындар тынғыһыҙлана башлай:

— Ни булды Аласабырға?

Әбрәй батыр тегеләрҙең көйәләнеүенә тыныс ҡына:

— Аласабыр шундай ат: үлһә, сәсрәп үлер юлда, үлмәһә, беренсе килер, — тип ҡуя.

— Эй Алла, иҫән генә булһын инде, — тип үҙҙәрен тынысландыра табындар.

...Зөлҡәрнәй, һанай килеп, һанды 199-сыға еткерә:

— Эй, малҡайым, бар байлығым минең, тағы ла бер ынтыл инде — һуңғыһы бит!!! — тип атының ялын ысҡындырып, ике ҡулы менән муйынын һөйә, әллә шатлыҡтан, әллә шул тиклем ҙур тиҙлектәнме, тамағына төйөр ултырғандай була — Аласабыр, «һә» тигәнсе, үҙенән алда елгән иң һуңғы атты ла уҙып китә.

Ала аттың алға сығыуын ишеткәс, табындар, шатлыҡтан, Аласабырҙы ҡаршыларға йүгерә.

Ҡаҙаҡтар ни эшләргә белмәй сыуалыша башлай, үҙҙәренең аттарына ҡаршы барабыҙ, тигән булып, алдан килгән атҡа ҡамасаулау өсөн, һыбайлы малайҙар ебәреп булашалар. Ләкин ат сабышы өсән яуаплы кешеләр уларҙы кире бора.

Аласабыр барлыҡ аттарҙы ла уҙғас, Зөлҡәрнәйҙең яурынынан ауыр йөк төшкәндәй була, тәнендә ул ниндәйҙер рәхәтлек тоя. Аттарҙы күпме самаһы артта ҡалдырыуын белергә теләп, ул артына әйләнеп ҡарай. Тик башын ҡабат алға борған мәлдә, көслө тиҙлектән барлыҡҡа килгән елгә ҡаршы тора алмайынса, атынан осоп ҡала.

— Алға, Аласабыр, алға! — тип ҡысҡырырға ғына өлгөрә.

Нисек кенә үкенесле булмаһын, Зөлҡәрнәй атының тиҙерәк финиш һыҙығына барып етеүен теләй.

Ә был ваҡытта һабантуй гөж килә башлай.

— Алдан килгән аттың кешеһе ҡайҙа һуң?

Ҡолҡан, Сәйетбаба халҡы тиҙ генә бер нисә кешене, ат мендереп, Зөлҡәрнәйҙе эҙләтергә ебәрә.

Бына тиргә батҡан Аласабыр, башҡа аттарҙы саҡрым самаһы артта ҡалдырып, майҙанға килеп инә. Шунда уҡ һабантуйҙы яңғыратып кешнәп тә ебәрә.

Ҡарттар:

— Эйәһенә тауыш бирә, эйәһен эҙләй... — тиешә.

Әбрәй батыр Аласабырҙың теҙгенен әләктерә һалып, атты йөрөтә башлай. Ә ҡарттар Аласабырға һәм уның эйәһенә тейешле бүләктәрҙе алырға китә.

Табын ырыуы кешеләренең шатлығы сикһеҙ була.

Ат сабышында отолған ҡаҙаҡтар сыр-сыу килешә.

Аттан йығылып ҡалған Зөлҡәрнәйҙе лә килтереп еткерәләр. Бәхеткә күрә, уның бер ере лә имгәнмәй. Тиҙҙән ҡаҙаҡтар Зөлҡәрнәйҙең эргәһендә сыуалыша башлай. Улар, нисек булһа ла, Аласабырҙы ҡулға төшөрөргә хыяллана. Бөрәүҙәр алмашҡа ете йөҙ баштан торған бер көтөү ҡуй, икенселәре бер өйөр йылҡы тәҡдим итеп булаша.

Халыҡ араһында йөрөгән һүҙҙәргә ҡарағанда, Зөлҡәрнәй Аласабырҙы бер өйөр йылҡыға алмашҡан. Ләкин ул, Аласабырҙы алмашып, уңа алмаған — барлыҡ малы ҡырылып бөткән. Ил ҡарттары Зөлҡәрнәйҙең был эшенә риза булмайынса: «Аласабыр аттың ҡото ине, ул башҡорт еренән киткәс, аттың ҡото китте», — тип, үкенес менән иҫкә алыр булғандар.

## ӘБРӘЙ БАТЫР

Ғафури районы Ҡолҡан ауылында йәшәүсе Рәхимов Сөләймән бабай һөйләгәндәргә нигеҙләнеп, Аман Юлъяҡшин аҡ ҡағыҙға теркәгән// Ағиҙел. — 2004. — №5. — 180—183-сө бб.

Табын ырыуы бөтә башҡорт иленә билдәле батырҙары, бил бирмәҫ көрәшселәре менән элек-электән дан тотҡан. Сама менән 1820—1890 йылдарҙа йәшәгән Абдрахман, йәғни Әбрәй батыр ҙа — Кесе Табын ырыуы баһадиры булған.

Ул элекке Әлтәшле (хәҙерге Ҡолҡан) ауылында тыуып үҫкән ярлы, буйы 180—195 сантиметр самаһындағы мыҡты кәүҙәле кеше була.

Кесе Табын ырыуының мәртәбәһен үҙенең бәһлеүән ҡылыҡтары менән арттырғаны өсөн, халыҡ уны ололап, исеме менән үк башҡаларҙан айырылып торһон тип, «Әбрәй батыр» тип йөрөткән.

Батырҙың атаһы — Зәйнәғәбдин ҡарт — ғүмер буйы үҙенең ҡара көсө менән көн иткән, йор һүҙле, изгелекле, итәғәтле, ярҙамсыл һәм иманы камил бер зат булған. Уның был сифаттары улы Абдрахманға — Әбрәйгә лә күскән дә йәшәгән еренә, ырыуына, халҡына ҡарата ихтирам кеүек һыҙаттар менән тулыланған.

Ауыл халҡы Абдрахмандың бәһлеүәнлегенә күп тапҡыр шаһит булған: бүрәнә ташыған ваҡытта, йыуан ағастарҙы ул бер үҙе күтәреп һалған, үткеһеҙ насар ерҙә ат йөгөн тарта алмағанда, уны туғарып, йөктө үҙе тартып сығарған. Ә инде кесе табындарҙың һабантуйҙарында бер кемгә бил бирмәгән көрәшсе икәнлеген дә күреп белгәс, үҫмер сағынан уҡ Әбрәйҙе батыр тип йөрөтә башлайҙар. Уның көрәшсе тигән даны Кәлсер Табын, Йомран Табын, Ҡумрыҡ Табын тарафтарында ла киң тарала.

Сана юлы төшкәс, крепостной крәҫтиәндәр өсөн мәжбүри эш башлана: улар тау араларындағы тимер, баҡыр заводтарынан Ағиҙел буйындағы пристандәргә суйын, баҡыр ташыу эштәре менән шөғөлләнә. Бер заман кесе табындар бер ҙур туп булып ылауға сыға. Заводта алтышар ботло ҡойолған

суйын йәки баҡыр бүкәндәрҙе (болванкаларҙы) санаға тейәү күптәр өсөн бик ауыр эш булған. Ә Әбрәй батыр был бүкәндәрҙең икәүһен бер юлы ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, еңел генә йөрөтә икән. Үҙенең аттарына тейәп бөткәс, бүтәндәргә тейәшә. Тимер бүкәндәрҙе санаға рәтләп, йөк юлда бушап йонсотмаһын өсөн баҫырауҙар менән баҫтырып-быраулап ҡуйғас, 40—50 аттан торған ылау юлға сыға.

Яңы ғына яуған ҡарҙан һуң ҡаты һыуыҡ, һыҡыла ауыр йөклө сана табандарының шығырлауы әллә ҡайҙарға ишетелә. Юл тар, ҡаршы килгән ылауҙарға уҙыу мөмкинлеге юҡ. Көн кисләп килгәндә алдағы аттар ниңәлер туҡтап ҡала. Баҡһаң, кесе табындарға унлап атта Егәҙе урыҫтары йөктәрен бушатып ҡайтып килә икән. Алдағы ике урыҫ, сыбыртҡылары менән табындарҙың алғы аттарын туҡмап, юлдан бороп, үҙҙәренә юл асырға маташа. Ат хужалары ауыр йөклө, арыған аттарын ҡарға батырмаҫҡа тырыша:

— Һеҙҙең аттар йөкһөҙ, шунлыҡтан юлды һеҙ бирергә тейеш! — тип еңешә. Ылауҙың урта тирәһендә килгән Әбрәй батыр шау-шыу ҡупҡан ергә бара.

Алдағы йонсоған йөклө атты етәкләп юлдан ситкә, көрткә төшөрөргә булашҡан ике урыҫты күргәс, Әбрәй, был ғәҙелһеҙлеккә түҙмәйенсә:

— Зашим бьеш лошатка? — тип һорай, шунан атты бороп булашҡан кешеләрҙең елкәһенән матҡып тотоп, бер-береһен маңлайға-маңлай килтереп бәрә лә:

— Ырас ты дурак, маяныҡы тоже дурак! — тип әйтеп ҡуя ла, тегеләрҙең алда торған атының бауыры аҫтына инеп, уны күтәрә лә санаһы-ние менән юлдан көрткә бырахтыра. Унан — икенсеһен, өсөнсөһөн. Бер нисә минут эсендә алдағы өс атты көрткә ырғытыуын күреп, урыҫтар шаҡ ҡата. Шунан һуштарына килеп, быларҙың аттарына юл бирмәһендәрме! Иптәштәренең саналарына ултырып бөткәнен күргәс кенә, Әбрәй батыр ҡуҙғалырға ым яһай. Тегеләрҙе уҙып барышлай:

— Если твояныҡы умный будет, маяныҡы тоже умный будет, — тип һөрәнләй Әбрәй.

Юл йөрөгәндә, яһилланып, кешеләргә уҫаллыҡ ҡылып өйрәнгән Егәҙе урыҫтарына был оло һабаҡ була.

Йөктө пристандә бушатҡас, ҡолҡандар бер килке, ҡайҙан ҡайтырға икән, тип кәңәшләшеп тора. Барыһы ла өшөгәндәр, асыҡҡандар. Йәһәтерәк ҡайтып етергә кәрәк. Ә Табын ауылы урамынан үтһәң, әүәлгесә бәйләнеүселәр булыуы ихтимал. Шулай ҙа Әбрәй:

— Табын ауылы аша үтеп, Шауғара тауы эргәһенән тураға ҡайтабыҙ, — тип белдерә тәүәккәллек менән.

Ылауҙың урта тирәһендәрәк Әбрәй батыр үҙе бара. Сөнки, алдан йә арттан ҡурҡыныс янағанда, ул ике яҡҡа ла өлгөрә алырлыҡ булырға тейеш. Хәүефләнеү бушҡа булмай. Ҡыҙмаса булып алған бер төркөм казактар бына бер ауыл уртаһында алдағы ылаусыларға бәйләнә башлай. Егеттәр, ҡайыш сыбыртҡы һелтәп, тегеләрҙе яҡын ебәрмәй торған арала, Әбрәй батыр баҫырау тотоп килеп, бер һелтәүҙә баҫҡынсыларҙың тотош өйөрөн ергә һыпыра һуға. Үҙен тоторға маташҡандарын икенсе һелтәүҙә йыға һуғып, был һуғыштың улар өсөн үлемесле икәнлеген төшөндөрә. Хәлде йыраҡтаныраҡ күҙәтеп торған икенсе төркөм казактар, һыҙғырышып, Әбрәйгә ташлана. Әбрәй аптырап ҡалмай, башҡалары килеп етмәҫ элек, 6—7 кешенән торған төркөмдө йәнә баҫырау менән тәгәрәтә һуға. Ҡамарға маташҡандарҙы яҡын ебәрмәҫ өсөн, баҫырауҙың ырмаулы яғынан тотоп, түңәрәк яһап өйөрөлөп-өйөрөлөп һелтәнә. Килгән береһе ҡарға түшәлә бара. Бөттө, ахыры, тип уйлап, ул

баҫыраууын санаһына һалыуы була, аттарға ышыҡланып килгән 3—4 казак уға артынан барып аҫылына. Әбрәй быларын муйындарынан эләктереп ала ла иҫ киткес етеҙлек, көс менән егеүле торған аттар аша юл аръяғына көрткә ырғыта. Шунан иптәштәренә әйҙәп ҡул һелтәй.

Был ваҡиғанан һуң Кесе Табын халҡы, Әбрәй батырға арҡаланып, ылау менән һәр саҡ Табын ауылы уртаһынан иркен йөрөй башлай. Казактар уларға тағы ла ҡаршы сығып маташа-маташыуын, әммә Әбрәй батыр менән уның егеттәренең тәүәккәллеге шул тиклем көслө була — тәкәббер, ғәрсел казактар был көс менән иҫәпләшергә мәжбүр була. Хәҙер инде улар, урам буйына сығып, юл баҫмай. Ә күптәре, ҡапҡаларын бикләп, йәшенеп ҡалыуҙы мең артыҡ күрә. Әгәр ҙә бикле ҡапҡа эсендәге өйҙән, асыҡ тәҙрәнән берәй мәрйә ҡарап көлөп ултырһа, Әбрәй ҡапҡаны этеп йыға ла шуның янына инеп китә (батырҙың уларға ҡарата тәбиғи дәрте көслө булған). Ошондай хәлдәрҙән һуң казактар, Әбрәй үткәндә, ҡатын-ҡыҙҙарынан тәҙрә астырмау ғына түгел, хатта уларҙы баҙға төшөрөп йәшерә торған булған.

Яҙғы сәсеү эштәре тамамланғас, ғәҙәттә, ауыл халҡы бер осор тирмәнгә иген тарттырырға барып ҡайтыр булған. Табын ауылының тирмәне башҡаларҙан ононоң сифаты менән айырылып торған. Шулай бер көндө халыҡ йыйылышып, ҙур бер туп булып, Әбрәй менән Табын тирмәненә барған. Сират ҙур булғанлыҡтан, бер нисә көн үтә. Шунда тирмәнсе ҡарт Әбрәй эргәһенә килеп:

— Бынау ҡатындың дүрт тоҡ оно бар, шуны ғына өйөнә алып барып бирһәңсе, — тип үтенә.

Сират көтөп эшһеҙлектән ялыҡҡан Әбрәй ризалаша. Арбаларҙа йөк булғанлыҡтан, Әбрәй батыр күтәреп кенә алып барырға була. Ул дүрт тоҡто икешәрләп бәйләп, ике яурынына артмаҡлай ҙа еңел генә атлап сығып китә. Тирмәнсе ҡарт Әбрәй артынан байтаҡ ҡына ҡарап тора, шунан аптырап башын сайҡай: «Да-а, вот это да!»

Әбрәй тоҡтарҙы алып барып ҡайтҡас, тирмәнсе уға маҡтау һүҙҙәре әйтә. Шунан уны тағы ла һынамаҡсы булып, һүҙ башлай:

— Анна ҡунаҡ иттеме, һыйланымы? Арыманыңмы?

— Юҡ, арыманым, — ти Әбрәй тыныс ҡына. Тирмәнсе ҡарт биш-алты саҡрымдағы тауға ҡарап ала ла:

— Беҙҙеңсә — Воскресенка, башҡортса — Шауғара, видишь? — ти.

— Күрәм.

— Шул тауға 18 бот ондо күтәреп алып бара алаһыңмы? Үҙең алып барған он үҙеңә була. Тик бер ерҙә лә туҡтап ял итмәҫкә! — тип, ҡарт һынаулы ҡараш ташлай уға.

Килешеү шарты буйынса, тирмәнсе яғынан — ике, Әбрәй яғынан ике кеше эйәреп юлға сыға. Улар ҡабаланмай ғына атлап Шауғараға табан йүнәлә. Тау эргәһенәнерәк һөҙәк кенә үр китә, етә килә, үр текәрәк күтәрелә. Көн дә бик эҫе — Әбрәй тиргә бата. Бына Шауғараға етеп баралар. «Әллә иптәштәр күтәреп килгән сәйнүктән бер-ике йотом һыу эсәһеме икән?» — тип уйлап ҡуя ул, тик һыр бирмәҫкә була, һорамай. Ниһайәт, килешеүҙең шарты үтәлә — улар Шауғара эргәһендәге ҡорт баҡсаһына килеп етә.

Әбрәйҙәр тирмәндән кире әйләнеп килгәс, тирмәнсе ҡарт, үҙенә һәм тегеләргә араҡы ҡойоп:

— Молодец, башкир — богатырь, — тип маҡтай һәм килешеүҙе йомғаҡлап ҡуя.

...Ырымбур ҡалаһы. Генерал-адъютант Перовский, Ырымбурға тәғәйенләнеп эшкә килгәс, башҡорттарҙың һорауын иҫәпкә алып, ҡунаҡхана —

Каруанһарай төҙөтөргә ҡарар итә. Башҡорт кантондарына ошо эш буйынса халыҡтан аҡса йыйыу эше ойоштоорола.

Каруанһарайҙы төҙөү 1836 йылда башланып, 1844 йылда тамамлана. Төҙөлөшкә бөтәһе 804913 һум аҡса сарыф ителә. Унда 7181 кеше эшләй. Эштә ҡатнашҡан һәр бер атлы кешегә — 25 тин, ә атһыҙға 15 тин көнлөк түләгәндәр.

Перовский 1846 йылдың 30 август көнөнә Каруанһарайҙы асыу тантанаһын билдәләй. Ҙур дәрәжәле ҡунаҡтар саҡырыла. Оло һабантуйға, алдан хәбәр ителеп, һәр кантондан көрәшселәр, сабыш аттары, ҡурайсылар, йырсылар, сәсәндәр — һәр төрлө һөнәр маһирҙары килә.

Һабантуйға килгән һәр тараф халҡы үҙенсә әҙерләнгән, береһенән-береһе арттырырға тырышып, хатта саманан уҙҙырып та ебәргәндәре була. Бына ҡайһы яҡтандыр бер батырҙы тимер сылбыр менән ҡаҙыҡҡа бәйләп үк ҡуйғандар. Кәүҙәгә оҙон, үҙе йыуан, елкәләре ҡалын булып ҡалҡып торған был көрәшсе, айыу һымаҡ үкереп, сылбырлы ҡулдары менән ерҙе сапсып тора. Ошондай ҡиәфәте менән бүтән көрәшселәрҙең ғәйрәтен ҡайтарырға итә ул.

Кесе табындарҙан һабантуйға көрәшкә Әбрәй батыр, ә ат сабышына Зөлҡәрнәй исемле кеше «Аласабыр» ҡушаматлы аты менән килгән була.

Каруанһарайҙы рәсми асыу тантанаһынан һуң һабантуй уйындары башлана. Төшкә тиклем аттар сабыша, унан майҙанға көрәшселәр сыға.

Кесе табындарҙан Кейекбай, Нәҙерғол, Бикҡол, Сәғит, Атанғол, Хәмит, Ишбулды кеүек ҡарттар, бер тирәгә ултырып, үҙ яҡтарын туплай, бөтә Табын ырыуының данын күтәреү өсөн, йәштәрҙе дәртләндерә, өгөт-нәсихәт әйтә.

Әбрәй, бер аҙ аяҡтарҙы ял иттерәйем тип, аттар торған ергә барып, арбаға менеп ултыра. Бәлә көтмәгәндә килә: арбанан һикереп төшкән саҡта, киндер ыштаны яңғырыҡҡа эләгеп, төбөнән үк йыртылып китә. Алмаштырып кейерлек нәмәһе юҡ. Шунлыҡтан ул, көрәш майҙанына сыҡмаҫҡа булып, ике ҡулы менән йыртыҡ урынды ҡаплап, шул ерҙә тора бирә. Ә майҙанда көрәш ҡыҙғандан-ҡыҙа, сылбыр менән бәйләп ҡуйылған теге көрәшсе сыҡҡан береһен ырғыта тора. Табындар үҙ-ара гөж килә:

— Быны беҙҙең Әбрәй батыр ғына ырғыта ала, ҡайҙа йөрөй, нишләп күренмәй әле ул?

Ололар бер нисә егетте Әбрәйҙе эҙләргә ебәрә. Улар килеп Әбрәйҙең көрәшкә сыҡмаясағын әйткәс, ҡарттар түҙмәй, үҙҙәре китә.

Әбрәй майҙанға ниңә сыҡмаясағының сәбәбен әйтеп биргәс, Рәхим ҡарт:

— Байуҡ шулай тип әйтәләр уны, мә, үҙемдекен сисеп бирәм, — ти, ғауғаланып.

Барыһы ла, Әбрәйҙе тапҡанға ҡыуанышып, көрәш майҙанына ашыға. Көрәштең ҡыҙған мәлендә генә губернатор Василий Алексеевич Перовский килә. Ҡурайсылар берҙәм рәүештә «Перовский маршы»н уйнап ебәрә, дәртле моң тарала.

— Молодцы, мои башкиры! — тип ҡеүәтләп ебәрә ул халыҡты.

Губернатор ирекһеҙҙән 1812 йылғы Ватан һуғышындағы бер эпизодты иҫенә төшөрә.

...Бер мәл Бородино һуғышында йәш офицер Перовскийҙың янында урыҫ һалдаттары ҡырылып бөтә, ә француз һалдаты уның башы өҫтөндә ҡылысын күтәрә. Был хәлде күреп ҡалған башҡорттар, шул арала килеп етеп, береһе сабырға торған ҡылысҡа һөңгөһөн арҡыры ҡуя, икенсеһе, теге французды ҡылыс менән сабып, Перовскийҙы үлемдән ҡотҡара. Ошонан һуң Василий Алексеевич башҡорттарға ҡарата күңелендә ҙур ихтирам йөрөтә.

Әбрәй майҙанға килеп еткәндә, теге сылбырлы көрәшсе менән бил һынашырға сығыусы булмай. Ул уның һайын маһайыулы ҡиәфәт менән әҙәм ҡурҡытып йөрөүен белә.

Бына Әбрәй, майҙан уртаһына сығып, көрәшергә таҫтамал ала. Халыҡ ҡапыл ғына геүләп ала ла, тып-тын ҡалып, ни булырын көтә башлай.

Билләшеп майҙан әсенән бер әйләнгәс, сылбырлы көрәшсе Әбрәйҙе күтәреп алырға ынтыла, әммә Әбрәй батыр, аша баҫа һалып, тегенең билен шытырлатҡансы һығып тотоп, үҙен ташларға юл ҡуймай. Батырҙар, билләшеп, майҙанды өсөнсө урағанда Табын ырыуы кешеләренең:

— Һеү-ү, әйҙә, Әбрәй батыр. Һеү, әйҙә! — тип геүләй башлауы була, Әбрәй батыр шунда уҡ теге батырҙы күкрәгенә күтәрә лә аяҡ өҫтө торған көйө баш осонан ырғытып та ебәрә. Сылбырлы батыр халыҡ араһына барып төшә. Табындар, майҙан уртаһына сығып, Әбрәй батырҙы һауаға сөйә.

— Һабантуй беҙҙеке, Әбрәй батыр еңде! Аласабыр беренсе килде! — тип ҡыуаныша кесе табындар.

Каруанһарайҙағы һабантуйҙа Табын ырыуы халҡының абруйын, данын күтәргән Әбрәй батыр һәм Аласабыр тураһында риүәйәт әле булһа ла, телдән телгә, быуындан быуынға күсеп, башҡорттар араһында йәшәп килә.

## АҠТАШ

1982 йылдың 4 сентябрендә Өфөнөң 6-сы дауаханаһында Өфөлә йәшәүсе Ғиндуллин Хәлимдән (1915) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған//ҒА: ф.5, оп.1 ед.хр.10. — 99—101-се б.

Инйәр, Сим, Ағиҙел буйҙарында бөтә ғүмерен һал ағыҙыу, ҡыуғын ҡыуыу, ағас эше менән үткәргән Инйәр буйы башҡорто Әҙһәм ағай күп нәмәләр һөйләргә әүәҫ, оҫта бер ҡарт ине. Шуның Аҡташ хаҡында һуғышҡа саҡлы һөйләгәне һаман күпмелер иҫтә.

Ағиҙелдә Аҡташ тауҙары бар бит. Әллә ҡайҙан ағарып матур булып күренеп яталар. Ә Иҙел шул тирәлә ҡотороноп аға. Һалды гел генә текә ярҙарына ҡайыра.

Борон шул Аҡташ тауҙарында Аҡташ тигән матур бер ҡала булған, ти торғайны ул. Уны ап-аҡ таштарҙан ғына бер хан һалдырған булған, ти. Шуға ҡаланы ла уның ханын да Аҡташ тип атағандар, ти.

Бик ҡеүәтле хан булған ул Аҡташ хан. Әллә ни саҡлы илдәр биләгән. Тирә-яҡтың хандарын да, халыҡтарын да ҡалтыратып тотҡан, ти. Яттар яу ҡылып ҡараған — береһе лә еңә алмаған. Үҙенең ғәскәре лә, байлығы ла бихисап булған, ти, Аҡташ хандың.

Шул Аҡташ тауҙары тишегендә, эстә мәмерйәләрҙә хандың алтын-көмөш хазиналары һаҡланған, ти.

Аҡташ хандың Айһылыу исемле бик сибәр ҡыҙы булған. Уға ҡыҙыҡмаған, өмөтләнмәгән хан, мырҙа улдары ҡалмаған.

Ҡыҙ үҙе бик батыр булған. Бер кемдән еңелмәгән. «Кем дә кем мине көрәштә, алышта, сабышта, сәпкә атышта еңә ала, шуға ғына кейәүгә сығам. Кем дә кем бәйгегә сығып та, шуны булдыра алмай — шуның башы киҫеләсәк», — тигән. Ҡыҙҙың шартын үтәрҙәй батыр табылмаған. Бәйгегә сығырға баҙнат итеп тә, булдыра алмағандарҙың башы киҫелеп торған.

Бер һунарсы башҡорт егете лә бәхетен һынап ҡарарға — батыр ҡыҙ менән алышырға ниәт ҡылған. Көрәштә көстәр бер тиңерәк булған. Ҡыҙ үҙенең еңелеүен түгел, тиңе табылыуын таныған. (Шул һунарсыға) кейәүгә сығырға ризалыҡ биргән. «Ярлы, затһыҙ кеше балаһы», — тип, атаһы Аҡташ хан быға күнмәгән.

Йәштәр бер-береһен яратышып өлгөргән. Әммә хан уларҙың осрашыуын, ғишыҡ тотоуын ҡаты тыйған. Ҡыҙына мең һаҡсы ҡуйған. Ҡыҙ менән егет Ағиҙел буйында бер оло таш ҡырында бер-ике тапҡыр ғына осрашып һөйләшеп ҡалған. Аҙаҡ улар бер-береһенең күҙенә күрһәтелмәгән. Егет яратыуҙан, һағыныуҙан һарғайып кипкән. Һуңыраҡ үлтерелгәнме, үҙ үлеме менән үлгәнме, мәңгегә ғәйеп булған. Хан ҡыҙы бирешмәгән. Ирҙәрсә ат, һунар менән күңелен баҫҡан (Ғорур, тәкәббер хан ҡыҙы бит инде барыбер).

Аҡташ ханға бер заман ҡара яу килгән. Айҙар буйы алышһа ла Аҡташ хан ғәскәре бер саҡ еңелгән. Шул һуғышта ҡыҙы Айһылыу ҙа ҡатнашҡан. Ҡыҙ дошман яуының башы менән алышҡан, ти, үҙе. Шул яу башлығы хан ҡыҙының матурлығын, батырлығын күреп, Аҡташ хан менән туғанлашырға булған. Ҡыҙын кәләшлеккә һоратҡан. «Ҡара йөҙлө ҡара батыр өсөн үҫтергән ҡыҙым юҡ. Дошманға еңел бирелер — илем, хазинам юҡ!» — тип, Аҡташ хан күнмәгән.

Бер ҡаты һуғышта хан ҡыҙы һәләк булған, тип тә, ғәскәре менән тау тишегенә инеп йәшеренгән имеш, тип тә һөйләгәндәр. Һәр хәлдә, шул боронғо ҡара яуҙан, Аҡташ хан менән Аҡташ тигән ҡаланан ҡалған емерек-ватыҡтарынан торған һаман да бейек вә ҡурҡыныс Аҡташ ҡая-ташы ғына ҡалған, ти.

Бик күп заман үткән. Аҙаҡ бында бик ғәйрәтле йәнә бер хан йәшәгән.

Тау тишеге эсенә (шул элекке хандарҙың) алтын-көмөштәре йәшерелгәнен иҫләп, шул хазиналарҙы эҙләп ҡараусылар булған. Тик, ғәйрәт итеп, тау тишегенән төпкә ингәндәрҙең береһе лә яҡты донъяға кире әйләнеп сыҡмаған. (Ни өсөн тигәндә), күп ғүмер үтеүҙән хазинаға ендәр эйәләшкән, имеш. Хазинаға өмөтләнгән әҙәм заттарын шулар юҡ итә торғандар, ти. Аҙаҡ, ҡурҡып, берәү ҙә хазина эҙләргә батырсылыҡ итмәгән.

Тора-бара тау тишектәре ҡапланған, эстәге мәмерйәләр ишелеп бөткән. Урындары тигеҙләнгән. Ҡайһы саҡ Аҡташ тауында эстә ниндәйҙер тауыш, гөрһөлдәүҙәр ишетелеп ҡала икән. Быны, шул хазиналарҙы һаҡлаған ендәрҙең туй яһаған саҡтары, тип һөйләйҙәр. Тау тишегенә инеп бикләнгән ғәскәрҙәр ҡалдығы имеш, тиеүселәр ҙә бар.

Бик матур айлы төндәрҙә хан ҡыҙы Айһылыу Аҡташтың Ағиҙелгә терәлеп кенә торған бер ташына сығып ултыра, имеш. Шуны берәйһе яңылыштан күреп ҡалһа, ул әҙәм, телдән яҙып, һарғайып барып үлеп китер булған, ти.

Шундай ғибрәттәр, хөрәфәттәр булған тиҙәр Аҡташ тауында борон.

## ҺҮҘЛЕК

Ағяһ *(г.)* — белеп тороусы, хәбәрдар.
Ад — исем, ат.
Адын бәклә адыңый — исемеңде исем итеп аҡла.
Аҙамдарҙы — әҙәмдәрҙе.
Аҙыра *(ҡаҙаҡса)* — хужаһыҙ.
Алай *(т.)* — полк.
Алабыңды — «алаптай ауыҙыңды» мәғәнәһендә.
Ала күҙ — ҙур түңәрәк күҙ.
Алдар — монгол телендә «батыр».
Алдырҙай — алдыр (туҫтаҡ) ҙурлыҡ.
Алдырып белән — албырғанып йәни.
Алынсың — һин алаһы ҡыҙ (?).
Алып — алпамышалай, бәһлеүән.
Алып шалсы тигән атын — Шалсы тигән яу атын.
Анса булмай *(һөйл.)* — шул арала.
Анһар — йылға, дарья.
Аңыша — аңлай.
Ап-аҡ айғырына — дөрөҫөрәге: Күгайғырына. Сөнки башҡорт, аҡ ат, тимәй, күк ат, ти.
Арзи Ҡыпчаҡ — Ҡыпсаҡ ере.
Арзыһынан булма — (арзу. *г*) — теләгеңә ирешергә (миңә тейергә) итмә (арзу. *фарсы.* теләк).
Артланып — артына сығып.
Арышын *(т.)* — оҙонлоҡ үлсәме, аршын (Ритм тигеҙлеге өсөн арышын).
Асла (аслам) — бер ни.
Аҫҡарһаҡ *(һөйл.)* — аҡһырғаҡ.
Аҫтыртындарын — йәшерен урындары.
Атабәк *(т.)* — һайлам ғәскәрҙәр.
Ата дадын... эстәр (дад — *г.* — ғәҙеллек, зар) — атаһының үсен ҡыулар.
Аткрлис — открепительное, рөхсәт ҡағыҙы, документ булһа кәрәк. Русса һүҙ үҙгәртеп яҙылғанға оҡшай.
Атрафи шатта — алыҫ тарафтар.
Атымдин үҙгә — атымдан башҡа.
Атына — исеменә.
Ауалы ла *(һөйл.)* — һауалы ла.
Ауан — 1. Хәйләһеҙ. 2. Алабарман.
Аһҡандай *(һөйл.)* — аҡһаҡлай.
Аһәнг *(г.)* — ауаз, тон.
Аһәнг итеү — һүгенеү, ҡысҡырыу.
Аш булған *(һөйл.)* — үҙенә күрә таман.
Аяға төшһәм дә — хәсрәт кисерһәм дә.
Аяҡ — һауыт (туҫтаҡ).
Бағлы — «хас», «тура килгән» мәғәнәһендә.
Баҙар ерҙә — баҙап (ҡаушап) ҡалыр саҡта.
Баж хиражы — бер ерҙән икенсе ергә килтерелгән әйберҙәрҙән (тауарҙарҙан) алынған һалым (пошлина).
Байман — ҡәнәғәтлек, именлек.
Байға һатып *(һөйл.)* — гәп һатып.
Баҡый *(г.)* — мәңгелек.
Баҡың — баҡ, ҡара, күҙ һал.

Баҡырса *(һөйл.)* — еҙ ҡомған.
Балдарын *(һөйл.)* — балаларын.
Баллар *(һөйл.)* — балалар.
Бара бирә *(һөйл.)* — тора-бара.
Барасымын *(т.)* — барласымын.
Барлас *(т.)* — ғәскәр төрө.
Барымта — ҡарымтаһы.
Баструк — һөргөн.
Баҫма *(т.)* — фарман яҙылған хат.
Бата *(ғ.)* — фатиха.
Бау-бау — төркөм-төркөм, үҙ аллы (суверенлы).
Баучка (рус.) — повозка; көймәле (өҫтө көплө) еңел арба.
Бахыҫ (бахис — ғ.) — бәхәс.
Башбикәр *(һөйл.)* — башкөллә, бөтөнләйгә.
Бейлек мансабы — бейлек дәрәжәһе, вазифаһы, урыны.
Бейлеге өсөн — ырыу башы булғаны өсөн.
Беләүенә беләү *(һөйл.)* — ҡайрағына (беләү ташына) ҡайра.
Бер генә осҡа ҡалдырып — ботаҡтарын ботап.
Берғауым *(һөйл.)* — бер ни тиклем, байтаҡ.
Бер далый (талый) — 1. бер нисә; 2. бер ни тиклем ваҡыт.
Беренсегә талашсымын — беренсе урынға дәғүәсемен.
Бер ҡарар әйләйә — гел һаҡлаһын.
Бер ҡәүем (берғауыл) — бер ни тиклем, бер нисә.
Бере лә *(һөйл.)* — береһе лә.
Беренсең — тәүге кәләшең.
Бер әнтә — бер нисә.
Бер яры — төрлө яҡҡа.
Бивафа *(ғ.)* — вафаһыҙ, бер һүҙле.
Бидағ итеп *(ғ.)* — һаубуллашып.
Биҙәрләнеү — үтә биҙәнеү, үтә ҡупшы.
Биҡәргә — бушҡа.
Би паян — сикһеҙ, иге-сиге булмаған.
«Бирауай инуалит» *(рус.)* — 1-се группа инвалидлыҡ.
Биреп эйеү — биреп ебәреү.
Биреһенә *(һөйл.)* — бирьяғына (был яғына).
Битексе *(т.)* — яҙып барыусы, хандар, бейҙәр сәркәтибе.
Битәр менән — битәрләп, йөҙ йыртып.
Бол — аҡса, мал.
Боролма-бараул — боролош, юл саты; переулок.
Боҫҡағы — өҙөк-йолпоғо.
Бохара намаҙлығы — Бохарала эшләнгән зиннәтле йоҡа келәм — намаҙлыҡ.
Ботомдо салып ултырған — ботто тиң һоноп, береһен икенсеһе өҫтөнә ҡуйып ултырыу.
Будилам бивринуй *(рус.)* — по делам поверенный.
Бу донъя беҙгә баҡый тормаҫ, дәйү — был донъя беҙгә мәңгелек түгел, тигәндәр.
Буҡталһын *(һөйл.)* — яманаты (даны) сыҡһын.
Бурыс-үтәлге — шарт (ҡуйыу, үтәү).
Бәдән *(ғ.)* — кәүҙә.
Бәдәүи — ғәрәптең күсмә тормошло ҡәүеме.
Бәйгелектәр — бәйгелә еңеүселәргә бирелә торған бүләк.
Бәйге тегеп — бәйгелә ҡатнашыусыларға бүләк тегеп.
Бән — мин.
Бәлән *(һөйл.)* — фәлән.
Бәңәһ *(т.)* — миңә.
Бәхер *(ғ.)* — диңгеҙ.
Бәһәләй *(һөйл.)* — баһалай.
Бәһәләндереү *(һөйл.)* — бүленде.
Вазифа алып — эш хаҡы алып.
Вайран *(фарсы)* — емереү, ватыу, һәләк итеү.
Вафа *(ғ.)* — һүҙҙә тороу.
Вафа әйләгәнде яд итмә *(ғ.)* — тоғролоҡҡа.
Ваше высокоблагородие — «һеҙ ғали йәнәптәре».
Виреү — биреү.
Вожуд — барлығыҙға.
Вожүне *(ғ.)* — тәне, кәүҙәһе.
Вәли (вәләкин) *(ғ.)* — ләкин.
Вәсләт *(ғ.)* — ҡауышыу.
Гөл ямалығыҙҙы — гөл матурлығығыҙҙы.

Гөрҙәләрен — гөрзөйҙәрен, йәғни суҡмарҙарын.
Гәҙһир *(ғ.)* — ярҙамсы.
Грифтар *(ғ.)* — тотҡон.
Ғажәм *(ғ.)* — ғәрәптән башҡа халыҡтар; иранлылар, фарсылар.
Ғази *(ғ.)* — батыр, еңеүсе;
Ғаҡыл мөбаш *(ғ.)* — аҡыллы (кеше) булмаҫ.
Ғалип *(ғ.)* кәлеү — еңеү, яулау
Ғапҡа *(ғ.)* — сәмреғош.
Ғар (мәғәрә. ғ.) — мәмерйә.
Ғарат *(ғ.)* — талау.
Ғарыз *(ғ.)* — үтенес.
Ғажиз *(ғ.)* — көсһеҙ, мөсһеҙ.
Ғазбилә *(р.)* — асыу менән.
Ғата *(ғ.)* — бүләк.
Ғафил *(ғ.)* — булып, һиҙмәй ҡалып, ғәмһеҙ.
Ғиззәт-иҡрам *(ғ.)* — ҡәҙер-хөрмәт.
Ғиҡабләин *(ғ.)* — яза оҫтаһы.
Ғиләжә *(ғ.)* — әмәл, дауа.
Ғимәрәт *(һөйл.)* — ғибәрәт.
Ғисмәте *(ғ.)* — өлөшө.
Ғифрәтте *(һөйл.)* — ғифритте.
Ғиш-ғәшрәт ҡылыу *(ғ.)* — кәйеф-сафа, күңел асыу, типтереү, әсеү.
Ғуғыржи — Грузия.
Ғәдәүәт *(ғ.)* — дошманлыҡ.
Ғәзимәт *(ғ.)* — ниәт.
Ғәзәлдәр *(ғ.)* — ике юллыҡ шиғырҙар.
Ғәйре *(ғ.)* — бүтән.
Ғәм *(ғ.)* — масса.
Ғәмбәр — хуш еҫле.
Ғәрез *(ғ.)* — үтенес.
Ғәһет *(ғ.)* — ант.
Ғәүер — динһеҙ (кафыр).
Ғәфләт *(ғ.)* — иғтибарһыҙлыҡ.
Даҡи *(ғ.)* — ырыҫлы.
Далай *(һөйл.)* — талай.
Даима (даими — *ғ.*) — даими, гел.
Дана *(фарсы.)* — бирәү, бер бөртөк.
Дауам күҙәткән — байтаҡ ваҡыт ҡараған (тәрбиәләгән).
Деү *(һөйл.)* — дейеү.
Деүҙәрҙең — дейеүҙәрҙең.
Дикте *(т.)* — урынын алды.
Дирауни начаник (деревенский начальник, *рус.*) — ауыл старостаһы.
Дияр *(ғ.)* — йорт-ер, ил, край.
Дыуамалдығы — «тәүәкәллеге» мәғәнәһендә.
Дәйү — «тиеп».
Дәлат *(ғ.)* — хөкөм, яза.
Дәм *(ғ.)* — бер һулыш алырлыҡ ҡына ваҡыт (күҙ асып күҙ йомғансы).
Дәмләнеп *(ғ.)* — тын, һулыш алып.
Дәрдемәнд — ҡайғы-һағышлы.
Дәрдемәнднең — бисараның.
Дәриғ *(ғ.)* итәм — йәлләйем.
Дәриғ итмәм — йәлләмәм.
Дәрхәл *(ғ.)* — шул уҡ ваҡытта, шул хәлдә, шунда уҡ.
Дәүрән *(ғ.)* — дәүер.
Дәфен итеү — *(ғ.)* ерләү.
Дәхи *(ғ.)* белерсә — йәнә белһен (белеп торһон).
Ебәк таҫма — хат-оҙатма (послание).
Егәр итем *(т.)* — ҡеүәтем (йән киҫәгем).
Егәрле тағлы *(т.)* — егәрле әсир.
Егәре бар *(һөйл.)* — егәрле.
Ейеү *(т.)* — ашау.
Елде *(һөйл.)* — елле, ҡеүәтле.
Ерҙе лә *(һөйл.)* — һис кенә лә.
Есаул (яһауыл, *т*) — хәрби дәрәжә, офицер.
Жилд *(ғ.)* — том, киҫәк, китап.
Жисем *(ғ.)* — нәмә, әйбер.
Житем — Еҙем.
Жөмлә *(ғ.)* — бөтәһе лә.
Жәбәли кәбирә *(ғ.)* — бейек (ҙур) таулы урын.
Жәйше *(ғ.)* — ғәскәре.
Жәм *(ғ.)* — бөтәнеһе.
Жәмғе ҡылыу *(ғ.)* — туплау.
Жәмиғ *(ғ.)* — бөтә, һәммә, күмәкләп.
Жәникә —
Заң *(ғ.)* — үтәлеүе зарур ҡағиҙә.
Зат шәриф — бөйөк зат.
Заһүр *(ғ.)* — күренгән.
Зилзәлә (зилзилә, зәлзәлә — *ғ.*) — тетрәнеү (бәлә-ҡаза).
Зыяфәт — һый-хөрмәт.
Зөлфәкарҙай — дини мифология буйынса, Ғәли хәлифенең, бер сапҡанда, урталайға ярырлыҡ тылсымлы ҡылысы.

Зөләф *(ғ.)* — һөйгән ҡыҙҙың сәс толомо.
Зым-зыя юҡ булған — эҙһеҙ юҡ булған.
Зыя *(ғ.)* — яҡтылыҡ, нур.
Зәйех булған *(ғ.)* — әрәм булған.
Зәкәт *(ғ.)* — ярлы мосолмандарға бирелә торған өлөш.
Зәмзәм *(ғ.)* — Мәккә ҡалаһындағы изге шишмә.
Зәнгистан *(ғ.)* — ҡара тәнлеләр иле.
Зәнжар (зинжир — ғ.) — сынйыр.
Зәуал *(ғ.)* — бөтөү, юҡҡа сығыу.
Зәхем *(ғ.)* — түбән.
Иғтимал *(ғ.)* — таяныу, ышаныу.
Иғыл — үтеп.
Изем итте — юл ҡуйҙы, рөхсәт итте, белгертте.
Ижтиһад итеү — тырышыу.
Ики ... кисди — «бесте» (ике к... кәйен дә киҫеп алып атты) мәғәнәһендә.
Иклим *(ғ.)* — климат бүлемдәре.
Ихәүәт *(ғ.)* — туғанлыҡ.
Иҡрар ҡылыу *(ғ.)* — таныу, дөрөҫләү.
Иҡтивас иткән *(ғ.)* — алған.
Илде *(һөйл.)* — илле.
Илтифат *(ғ.)* — иғтибар, диҡҡәт.
Ил ялпыһы — ил фәҡире.
Имдәт *(ғ.)* — ярҙам.
Инен — мал бескәндә алып ташлана торған ике йомортҡа.
Инәйҙәрем-үкелдәрем — ҡиәмәтлек инәйҙәрем.
Инсан *(ғ.)* — кеше.
Инсеһенә *(т.)* — тәғәйенләнгән мал рәүешендә.
Ирҙаһы *(ғ.)* — ризалығы.
Иркәк *(т.)* — ата затлы йән эйәһе.
Иркәке тәки тышы — ир-ат йәнә инә (ҡатын) заты.
Исемле — ҡушаматлы.
Истифада *(ғ.)* — файҙа.
Истиҡбал итеү *(ғ.)* — ҡаршы алыу.
Ихсан *(ғ.)* — саф, ихлас.
Ихтидар *(ғ.)* — ялбарыу.
Йоморо йоҙороҡ ҡоҙалар — «Ҡоҙа-ҡоҙа-ҡоҙороҡ, ҡаҡ башыңа йоҙороҡ» тигән таҡмаҡҡа ишара.
Йондоҙ атҡыһы — йондоҙ атылған.
Йортта — «илдә» мәғәнәһендә.
Йыйын бәйләүсе — аяҡ-ҡулды бәйләшеп уйнау.
Йылға баштауҙарынан *(һөйл.)* — йылғалар сыҡҡан ерҙән.
Йылыу — йылғаның туңмай ятҡан ере.
Йәдкәр *(ғ.)* — иҫтәлек.
Йәлдәнмә *(һөйл.)* — йәлләмә.
Йәндәренә миннәт *(ғ.)* — йәндәренә рәхмәт (афарин!).
Йәк торор *(ғ.)* — бер булыр, берҙер.
Йәнәбе шаһи әғлә *(ғ.)* — Аллаһы тәғәлә.
Хауз *(ғ.)* — бассейн.
Йәнем бахаҡҡа тәслим итеү *(ғ.)* — йәнен Аллаға тапшырыу, вафат булыу.
Йәнәнеш — йәнәшем (һөйгәнем).
Калакул (колокол, *рус*) — малдарҙың муйынына таҡҡандай ҡыңғырау.
Катиб *(ғ.)* — яҙыусы.
Кейәүсәгә — кейәү йортона.
Кесертеп *(һөйл.)* — кесерәйтеп.
Киҙәк *(т.)* — йәрәбә.
Кирегүт *(һөйл.)* — кире кеше.
Көйән китеп — көйәләнеү.
Көмбай — көмбә, ҡырлыҡ.
Көнөгә ялланып *(һөйл.)* — көнләксө булып, йәғни ашау хаҡына ялланып.
Көскүрә *(һөйл.)* — үсләшмә (әсе яна, әсе көтөрләй).
Көтөк *(һөйл.)* — көсөк.
Күжә өйрәһе — үлән ашы.
Күк — күк.
Күк айғыры — күктән төшкән ат. Аҡ ат хаҡында һүҙ барғанда, уны күк ат тиҙәр.
Күк күбә (көбә, көпә, көп) — тимер кейем.
Күрһәтке — мәрәй.
Күсәк — күсеүсән, күсеп йөрөүсе, илгиҙәр мәғәнәһендә бирелгән исем буғай (һәр хәлдә Күҫәк түгел).
Күткәре *(һөйл.)* — кире.
Кәбап (кәбаб *ғ.*) — ҡыуырдаҡ.
Кәбаир *(ғ.)* — оло гонаһ.

Кәдам *(ғ.)* — аяҡ баҫымы.
Кәрен алам — хәлен алам.
Кәрсел күңел — тар күңел.
Ҡадир *(ғ.)* — көсө етеүсе, булдыра алыусы.
Ҡаҙаҡ үләне — шиғри һүҙ, сәсәнлек ижадынан тыуған шиғри һүҙ.
Ҡайтауылһыҙ — биргән һүҙҙән кире ҡайтмайса.
Ҡайын йорто — ҡайны йорто.
Ҡалалы — ҡала һүҙенең иҫкесә бер шәкеле.
Ҡаланлары — ҡалғандары.
Ҡалмағыл — ҡалмағыҙ.
Ҡалтағай — табанына тире йәбештерелгән яу, һунар саңғыһы.
Ҡалъян — уҡ һауыты.
Ҡара ҡоҙғон — кешеләрҙе төнөн ҡулға алып, тейәп алып киткән машинаны халыҡ шулай тип атаған (русса: черный ворон).
Ҡарҙауыҡ — ямғыр ҡатыш ҡар.
Ҡараған — далала селектең бер төрө (Мәҫ.: Ҡараған туғай).
Ҡартай — ҡарт атай.
Ҡасд *(ғ.)* — хас.
Ҡасҡыр *(т.)* — бүре.
Ҡасҡырдан калган сыныкны арыслан жеймас — бүре ҡалдығын арыҫлан ашамаҫ.
Ҡасыд *(ғ.)* — ниәт, уҡталыу.
Ҡасыйд *(ғ.)* — хат-хәбәр килтереүсе, илсе, берәй нәмә эшләргә ниәт ҡылыусы.
Ҡасыйдттарға хайкырып какя, йылтырым кеүек шаҡя — илселәргә ҡаты ҡысҡырып, йәшен кеүек солғап алырға.
Ҡатилға йөрьәт — үлтереүгә ҡыйыулыҡ итеү.
Ҡатилғам — бөтә халыҡты ҡырыу.
Ҡатил ҡылыу *(ғ.)* — үлтереү.
Ҡашҡа, тимен — ҡашҡа ат икәнен белегеҙ.
Ҡауғаға төшөрөп — ҡауға: хәүеф, борсолоу, ғауға.
Ҡисмәт *(ғ.)* — өлөш.
Ҡолон таҡырын — ҡолон саңдауын.
Ҡотоб *(ғ.)* — атаҡлы кеше, ғилем эйәһе.
Ҡулдаш булыр — бергәләшеп (бер ҡулдан) эш итерҙәй.
Ҡуна сабыу — юлдың теге осонда төн үткәргәндән һуң тағы сабышыу.
Ҡулыҡның *(һөйл.)*, ҡулҡа — 1. Үпкәнән йөрәккә барған ҡан тамыры. 2. Йөрәк ауыҙының шул тамыр урынлашҡан ере.
Күһстан — Кавказ.
Ҡушаҡ — билбау.
Ҡуштабаҡтай (йәки ҡоштабаҡтай) — ҡайын ороһон өңөп яһалған ҙур аш табағы.
Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы (*рус.* — к сожалению) — үкенесемә күрә.
Ҡыҙыр — ҡыҙырыу, сәйәхәт итеп йөрөү мәғәнәһендә.
Ҡылысбай — ҡылыс менән алышыуға бик оҫта.
Ҡысманнар — ҡыҫыусан, һаран.
Ҡыҫымығыҙҙы— өлөшөгөҙҙө.
Ҡыяс — сағыштырыу, тиңләштереү.
Ҡәбәп *(ғ.)* — ҡауырҙаҡ, ҡауырма.
Ҡәдими — элекке, боронғо.
Ҡәдәм — ҡотлау һүҙе, аяҡ баҫымы, табан.
Ҡәлбемә *(ғ.)* — күңелемә.
Ҡәлғә — нығытма, крепость.
Ҡәмәр — ай.
Ҡәрам *(ғ.)* — хөрмәт, йомартлыҡ.
Лазым — кәрәк, тейеш.
Лаҡамынан — торған еренән.
Лотф (лотыф. *ғ.*) — мәрхәмәт.
Ләғил (ләғыль. *ғ.*) — ал, ҡыҙыл төҫтәге аҫылташ.
Ләжә *(фарсы)* — упҡын (пучина), кешеләр төркөмө (толпа).
Ләүәземен — тейешлеһен.
Маҙы ҡапҡан мәл — эңер.
Мазар *(ғ.)* — ҡәбер.
Майорлыҡ син — батша армияһында хәрби дәрәжә (чин).
Маҡамынан — торған еренән.
Маҡсуд — маҡсат.
Мал булыр — кеше булыр, эшкинер.
Мал күтендә *(һөйл.)* — мал артынан.
Манара туйлап — манараны өмә яһап күтәргәндәр.
Манап — дәрәжәһе, биләгән урын, ҡөҙрәт мәғәнәһендә.

Маскар буйлау — катмарлы хәрәкәттәр яһау.
Матәм (*г.*) — кайғы (траур).
Миҫле (*г.*) — төҫлө.
Миһри (*г.*) — нык яратыу, дуҫлык.
Маҙ (*һөйл.*) — боҙ.
Монасип (Мөнасиб) — яраклы, бербереһенә тура килгән.
Мораттабан (*г.*) — тәртип буйынса.
Мохараба (*г.*) — һуғыш, алыш.
Моштак — интизар — икенсе бер нәмә (ниҙер) сәбәп булған зар (зарығыу).
Мөбтәлә (*г.*) — баштан уҡ.
Мөбәрәк (*г.*) — котло, уңышлы, бәхетле.
Мөгәзәй — ауылда дөйөм мәнфәғәт өсөн йыйып, иген һалыу өсөн яһалған келәт.
Мөҙҙәт (*г.*) — срок, вакыты.
Мөккәдәмдәге (*г.*) — әүәлге.
Мөнһәҙим хәдденә ирешеү (*г.*) — еңелеү сигенә етеү.
Мөнәжәт — бында, ғөмүмән, *шиғыр, шиғри әҫәр* мәғәнәһендә кулланылған.
Мөс (*һөйл.*) — көс.
Мөсә — өлөш.
Мөстән төртә — төрткө ауырыуы.
Мөсәхәбәт (*г.*) — кара-каршы.
Мөхтәсәр (*г.*) — 1. Исеме билдәле. Мәдехе булды мөхтәсәр — данлы исеме билдәле. 2. Бойһондоролған, яулап алынған.
Мөхтәсәр булыу (*г.*) — кыҫка, бәләкәй булыу.
Мөхтәсара кылдылар (мөхәтара *г.*) — куркыштылар.
Мөшкөлдөр — мөмкин түгелдер.
Мыртый (*һөйл.*) — бер туған кусты.
Мәбне (*г.*) — королған.
Мәбһүт (*г.*) — хайран.
Мәғбүл (*г.*) — кабул ителеү.
Мәғишәт (*г.*) — тормош.
Мәғкүл (*г.*) — урынлы.
Мәғлүп улыу (*г.*) — еңелеү.
Мәғрип һәм мәшрик (*г.*) — көнбайыш һәм көнсығыш.
Мәғшуға (*г.*) — һөйөлөүсе катынкыҙ заты.
Мәғәрә (*г.*) — мәмерйә.
Мәзәт бирмәһә (*г.*) — өн (һүҙ) бирмәһә.
Мәҙех (*г.*) — мактау, данлау.
Мәҙкүр (*г.*) — билдәле, атап әйтелгәнсә.
Мәҙрәс — мактау һүҙе.
Мәжнүн (*г.*) — тиле, йүләр.
Мәйех итте (*г.*) — күңеле ятты.
Мәкамәт (*г.*) — йәшәгән урын.
Мәкбүл (*г.*) — кабул.
Мәксүт (*г.*) — максат.
Мәлкүр (*г.*) — мәҙкүр.
Мәләк (*г.*) — фәрештә.
Мәмнуғ (*г.*) — тыйылған.
Мәмнун (*г.*) — кәнәғәт.
Мәмәт (*г.*) — үлем.
Мән (*һөйл.*) — менән.
Мәнсабы (*г.*) — чины, вазифаһы.
Мәрғас (*г.*) — көтөүлек, урын.
Мәрхам (*г.*) — мәрхәмәт.
Мәс (Мас, *фарсы*) — кинәнеү.
Мәсғүт — бәхетле.
Мәслихәт белән — ихтимал.
Мәсләк (*төрөк.*) — тоткан юл.
Мәмтағы — теләге.
Мәхрам (*г.*) — лайык кеше.
Мәшһүр итәлем — данлайым.
Мәхшәр (*г.*) — ғәрәсәт, бәлә-каза.
Наибы — илсеһе.
Нам (*г.*) — исем, дан, шөһрәт.
Нан (*т.*) — икмәк (бында аш мәғәнәһендә).
Нирмәт йыйҙырыу (*т.*) — тәмле (затлы) аҙык ашатыу, һыйлау.
Нияз (*г.*) кылып — ялбарып, үтенеп.
Нойон (*монголса*) — монголдарҙа юғары дәрәжәләге кеше, ырыу башлығы.
Носрат (*г.*) — яҙам.
Нөгәр — 1. Хандың тән һаксыһы. 2. Кейәү егете, кейәү үңере.
Нәғрә ороу (*г.*) — әсе тауыш менән кыскырыу.
Нәғрә (*г.*) — яман әсе тауыш.
Нәүғ (*г.*) — енес, төр.
Нәҫели эш — нәҫел (зат) эше.
Нәфсәниәт — нәфсе.
Нәүкәр — нөгәр.
Нәһи кылыу (*г.*) — тыйыу.

Оҙомандарҙың *(һөйл.)* — урмандарҙың.
Ойоҡҡан *(һөйл.)* — ҡатыҡ.
Оло Иҙелде — Волганы.
Олуғ — күренекле, дәрәжәле.
Орғат — ырыуҙар.
Өңгәйенең *(һөйл.)* — өңөнөң, мәмерйәнең.
Өшкөрҙө — «кырып һалды» мәғәнәһендә.
Парә-парә *(г.)* — киҫәк-киҫәк.
Пәдәр *(г.)* — ата.
Правитель (рус.) — хаким, идара итеүсе, ғәскәр йә дәүләт башлығы.
Прапорщик — түбәнге офицер дәрәжәһе.
Приговор *(рус.)* — бында халыҡ йыйынында (сходта) сығарылған ҡарар тураһында һүҙ бара.
«Призывҡа барып...» *(рус.)* — ғәскәри хеҙмәткә саҡырылыу.
Пәришан *(г.)* — боҙоҡ, бәхетһеҙлеккә тарыған.
Рабби *(г.)* — Алла, Хоҙай, ҡәҙерле, изге (божество).
Ристауит итеп *(рус.)* — арестовать итеү, ҡулға алыу.
Рөтбә *(г.)* — дәрәжә.
Рухын тәслим итте *(г.)* — йән бирҙе.
Рәжа *(г.)* — үтенес.
Рәғиәт *(г.)* — гражданлыҡ хоҡуғы, бер дәүләттең халыҡтары (подданныйҙары).
Рәкип *(г.)* — көнсө, көндәш.
Рәхеш *(г.)* — йүгерек ат, саптар.
Рәуан *(фарсы)* — китеп барған, хәрәкәтсән.
Рәүке үҙәге — тын юлы.
Саба — иртәнге ел (саба — иртә, таң).
Садиғым *(г.)* — эскерһеҙ.
Саҙаҡаи жария *(г.)* — сауап өсөн ирекле, үҙ теләге менән, матди-материаль ярҙам күрһәтеү.
Саилсылай — теләнсе кеүек.
Саҡ булһын — тиң булһын.
Сапсан ғына — етеҙ генә.
Сарбаз — ҡаҙимге яугир.
Сардар *(фарсы)* — ғәскәр башлығы.
Саруа — ваҡ халыҡ.
Сасырап *(һөйл.)* — сәсерәп.
Сафа *(г.)* — хозур.
Сафа итер — тыныслыҡ бирер, ҡайғыһыҙ итер.
Сил — көслө ташҡын.
Сират мөстәким — тура юлда.
Сиреү *(т.)* — ғәскәр.
Сиуар булыу — һыбайлы булыу, атҡа менеү.
Сөал *(г.)* — һорау.
Соға *(г.)* — сифатлы йоҡа буҫтау.
Солҡоп — ҡупшы.
Солтанат *(г.)* — текста мөһабәт, олпат, өҫтөн мәғәнәһендә.
Сотник *(рус.)* — хәрби дәрәжә: йөҙ башы.
Сотский *(рус.)* — хәрби дәрәжә: йөҙ башы.
Сөмбөл *(г.)* — ләлә ише ваҡ ҡыңғырау сәскәһе, ҡыяҡ япраҡлы гөл.
Сөхбәт итеү — осрашып һөйләшеү.
Сураһы — ырыу ораны.
Сусайтма ташта *(һөйл.)* — сосайып торған ташта.
Сырлауығы — ҡош.
Сәйет *(г.)* — башлыҡ, түрә.
Сәйф *(г.)* — ҡылыҡ.
Сәдран, сәркәбирән *(г.)* — урта ҡул башлыҡтар, ҙур етәкселәр.
Сәлахиәт илән *(г.)* — белеп, асылына инеп.
Сәнжаҡ *(г.)* — байраҡ.
Сәрби (сәрви ғ.) — төҙ, зифа буйлы.
Сәргәр *(г.)* — ғәскәр башлығы.
Сәри ғәскәр *(г.)* — ғәскәр башлығы.
Сәр ләшкәре *(г.)* — ғәскәр башлығы.
Сәрмая *(г.)* — байлыҡ, хазина, сәбәпсе.
Сәстарашҡа — парикмахерға.
Сәруи *(г.)* — мәңге йәшел ағас.
Сәруар *(г.)* — халыҡ башлығы, етәксе, күренекле кеше.
Табиғ *(г.)* — эйәреүсе.
Табиғ (тәбиғ) булған — баш һалған.
Тағлы ҡапу — тамғалы ҡапҡа.
Тағыдан *(г.)* — тәхетенән.
Тайфа *(г.)* — этник төркөм, ырыу.
Талҡы — киндер, етен талҡый (тупаҫ эшкәртә) торған ҡулайма.
Талай — байтаҡ.
Тартып — тотоп алып.

Татыр *(т.)* — таралыр мәғәнәһендә.
Тегендә — теге донъяла.
Терке юк — тереклек итер хәле юк.
Тезләп үлтерең — һығып, телгеләп үлтерең.
Теләгең уң булһын — юлың уңһын, теләгеңә ирешң.
Тибенди — һөжүм итте.
Тиғ *(ғ.)* — ҡылыс.
Тимер торҡа — тимерҙән эшләнгән баш кейеме (шлем).
Тиңкәйһең — тиң итәһең.
Типкер — һунар ҡошо.
Тинкеһе — тояғындағы типкесе.
Тируҡ яҙылған сыулар — торға ҡарай аҡҡан һыуҙар.
Тозорорға *(һөйл.)* — тызырырға (туҡмарға, һуғырға).
Торомтай, яғалбай, ҡыйғыр, тойғон, типкер ҡоштар — һунар ҡоштары.
Торошток ныҡ итегеҙ — ныҡ тороғоҙ.
Тотарлыҡ, быуырлыҡ, утарлыҡ, һуғарлыҡ — экспрессия маҡсатында йәнле һөйләштә бирелде.
Төҙәктәлешеп *(һөйл.)* — теҙелешеп.
Төкәнмәҫ *(т.)* — бөтмәҫ.
Төрбә *(т.)* — ҡәбер өҫтөндәге ҡоролма.
Төртәнгән *(әр һүҙе)* — ни ҡылырға белмәүсе.
Төкөнөү — бөтөү, үлеү мәғәнәһендә.
Төттөрмәй — тиҙ арала.
Трах *(һөйл.)* — трактор.
Тардәре — тарлауыҡ (ике тау араһындағы аралыҡ).
Тубылғы (тубылғылыҡ) — ялан яғында үҫә торған ваҡ ағас (өс ҡат).
Тулылы — туп-тулы, үтә һимеҙ мәғәнәһендә.
Тутыялай — тутыйғоштай.
Түлде *(һөйл.)* — түлле.
Түңкәүҙәр (түңкәү) — ваҡ-ваҡ убалар, түңдәр, түмәләстәр.
Түгәрәген *(һөйл.)* — түңәрәген.
Тышҡыр *(т.)* — тыш, тышҡы донъя.
Тәблиғ — хәбәр.
Тәғәм — ризыҡ.
Тәдбир *(ғ.)* илә — хәйерле хәл итмеш.
Тәҡдир әйләне — эшләгән эште баһаланы.
Тәҡдис — ололау.
Тәкеүә (тәкүә, *ғ.*) — дингә ныҡ инанған кеше.
Тәҡсим *(ғ.)* — бүлгеләү.
Тәкәбиле — тиклем.
Тәл булһын *(һөйл.)* — осраһын.
Тәләкә *(һөйл.)* — мәрәкә, көләмәс.
Тәм итеп — тәмләп.
Тәмәғкәр *(ғ.)* — күп ашаусан.
Тәммәллөк *(ғ.)* — хужа, эйә булыу, байлыҡ билдәһе.
Тәсдиҡләне *(ғ.)* — раҫланы.
Тәсҡин *(ғ.)* — тынысландырыу, баҫыу, һүндереү.
Тәсриф *(ғ.)* — идара.
Тәслим итте *(ғ.)* — ҡулдан-ҡулға тапшырҙы.
Тәслим ҡылыу — тапшырыу.
Тәсхир *(ғ.)* — яуланған, биләнгән.
Тәфтиш *(ғ.)* — тикшереү, эҙләү, ревизия.
Тәхетгяһ *(ғ.)* — баш ҡала, батша (хан) йәшәгән урын.
Тәхти пай *(ғ.)* — баш ҡала.
Тығыю *(ғ.)* — танышыу.
Тур *(т.)* — Дон.
Тыу *(т.)* — байраҡ (ҡылдан).
Тыума (тума) — атаһыҙ тыуған.
Тәшәәм *(ғ.)* — шомланыу.
Уға күктән тошмон — уға күктән юлыҡтым.
Улыс — өлкә, урын (волость).
Улъя *(т.)* — ҡулға төшкән малмөлкәт, трофей.
Улъянан һауға — табыштан өлөш.
Унау ҡылығынан — ҡыулашыуынан.
Уны буйҙан — уға баш бирмәй.
Урал ҡапыртының — Урал тауы ҡырласынан.
Урармын *(һөйл.)* — урырмын.
Уртас *(һөйл.)* — урта.
Ут — үлән.
Ута башы — ҡалҡыулыҡ.
Утаһында (утауында, атауында) — утрау (утар).
Уттыҡсала — костерҙа.

Уш — ҡасан.
Үҙҙе-үҙенең *(һөйл.)* — һәр береһенең.
Үҙ мөҙәтендә — үҙ мәлендә.
Үҙенсә хәләлләгән — ауырыу йә үлгән мал — хәрәм, ә бай уны хәләл тип иҫәпләгән.
Үкен — үткән тарих.
Үнсе-тәнсе *(һөйл.)* — саҡ-саҡ.
Үҫәрмән *(т.)* — үрсемле, ишле.
Үтәгә — бурыс.
Үтәлге — үтәлә торған эш.
Фазыл ихсан — оло ярҙам.
Фарасатлы — һыбай оҫта йөрөүсе.
Фарьяд — ҡайғы кисереү.
Фираҡынан *(ғ.)* — айырылышмаҫтан.
Фәйзене әсрар *(ғ.)* — шәфҡәт, йомартлыҡ.
Фәғал *(ғ.)* — эшсән (фәғал).
Фәған шам вә сәхәд *(ғ.)* — моң-зар.
Фәхип буларҫың *(ғ.)* — ҡайғырырһың, тултырырһың.
Фәләк — күк көмбәҙ.
Фәрзәнлек *(ғ.)* — иркенлек.
Фәрсах *(ғ.)* — саҡрым.
Фәсад *(ғ.)* — боҙоҡлоҡ.
Фәсад әһле *(ғ.)* — боҙоҡлоҡ эйәһе.
Фәсех *(ғ.)* — боҙоу, ҡырыу.
Хадим — хеҙмәтсе.
Хаҡ — Алла.
Хаҡтан рижам — Алланан һорамаҡ.
Халә — әсәйҙең оло апаһы (инәй).
Ханзәзә (ханзада) — хан (батша) улы.
Хан күтәреү *(т.)* — хан итеп һайлау.
Хасияты *(ғ.)* шунда — үҙенсәлеге (хикмәте, сере) шунда.
Хибестән — төрмәнән (тотҡондан).
Хитап итеү *(ғ.)* — өндәү һүҙе.
Хитап итеп *(ғ.)* — өндәшеп.
Хиш *(ғ.)* — туған.
Хорунжий — хәрби дәрәжә, кесе офицер званиеһы.
Хосусындә *(ғ.)* — тураһында.
Хохол — украин милләтенән булған кеше.
Хөллә *(ғ.)* — ожмах кейеме, затлы кейем.
Хөрмәт иткән — ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән.
Хуш дәүрә — яҡшы (гүзәл) ғүмер (дәүрә — әйләнеш. Бында кешенең ғүмер юлы мәғәнәһендә килә).
Хуш шәриф *(ғ.)* — иғтибар.
Хәшер хаһ — теләктәш.
Хәләс — ҡотҡарыу, азат итеү.
Хәлкаяр салдырған — хәбәр таратҡан.
Хәлкәт *(ғ.)* — тәбиғәтендә.
Хәриф *(ғ.)* — ҡәҙерһеҙ кеше, түбән кеше.
Хәрәме-шәриф *(ғ.)* — ҡәғбәнең таш бинаһы.
Хәсән *(ғ.)* — гүзәл, яҡшы.
Хәтөм ҡылыу *(ғ.)* — ҡөрьәнде баштан аҙағына тиклем уҡыу, ғөмүмән, намаҙ уҡыу.
Һаҙар *(ғ.)* — уртаҡ (тыныс, күнеккән) тормош.
Һаҙаҡ — уҡ.
Һаҡ барҙы — халыҡ этимологияһы буйынса «Һаҡмар» гидронимы, бөтәһе ошо һүҙҙән яһалған.
Һарҡыт — эсемлек.
Һерҙәндәтмә *(һөйл.)* — һерәндәтмә.
Һибә — бүләккә-бүләк.
Һижран *(ғ.)* — һөйгәненән айырыу.
Һижрәт *(ғ.)* — күсеп китеү.
Һиммәттәр *(ғ.)* — 1. Дәрт, көслө ынтылыш, 2. Намыҫ, дан.
Һомай ҡоштоң — бәхет ҡошоноң.
Һонай *(һөйл.)* — ҡор күбәләк тиләүҙә шулай исемләнә.
Һорҡон — һелтәп һуға торған ҡорал төрө.
Һушлашып. *(һөйл.)* — хушлашып.
Һебә — бәйгелә еңеүсегә бирелә торған бүләк.
Һыҙырма уҡ — яра ата торған уҡ.
Һыуһын — сарсауҙы баҫыр эсемлектәр.
Һулау — һулыш.
Һыртына — артына.
Һәлһеҙ *(һөйл.)* — хәлһеҙ.
Һәмишә — һәр саҡ, гелән, һаман, әлеләә.
Һәп сөкүт — тып-тын ҡалыу.
Һәр дайым — һәр саҡ.
Чаби (чабек *ғ.*) — өлгөр, етеҙ сапҡын.

Чирей *(г.)* — ғәскәр.
Чырмалып (чубырланып, чымғанып, жыуашып) — шомланып.
Шаиғына мәғкүл — 1. Шаиғ — таралыу, таратыу. 2. Мәғкүл — бик урынлы, лайыҡлы.
Шаид *(т.)* — шәт, моғайын.
Шайы — һымаҡ.
Шаң — ағастан эшләнгән ҙур тәпән һауыт.
Шилә ҡаҡыны ки — шундай ярһыны (ҡыҙҙы, ҡалтыранды).
Шилә нәғрә — үтә йәмһеҙ (ҡаты) тауыш.
Шиҡаҡ әйләү — киҫәккә бүлеү, айырыу.
Шиҡым төрлө һүрәткә инеп — кешене әләкләп, ҡыланып.
Шипкерт булыр, ҡарпайың — шикле нәмә булмай тормаҫ, һәр саҡ һаҡ булығыҙ (ҡолағығыҙ ҡарпайып торһон).
Шипкерт — һәпкерт — шикле нәмә.
Шөкәри икмәге — сухари.
Шөкәр нуры — йәйғор кеүек кәртәләнгән нуры.
Шуға латиф *(г.)* итеп — шуға күрә яғымлылыҡ күрһәтеп.
Шыйҙа — һуйыл.
Шәкияд итһен — буйһонһон.
Шәрех ҡамус — аңлатма һүҙлек.
Ыҙғыны — шаулашты (тауышын күтәрҙе).
Эңерләтеп йөрөгән — кискелеккә утлауға алып барған.
Эскәре — эскә (өйгә).
Эстәү *(т.)* — эҙләү, теләк белдереү.
Эшкә үмгәнең юҡ — быуының ҡатмаған.
Эбедән уйын ҡыҙҡындан — уйындың ныҡ ҡыҙыуынан.
Эбелхәйәт — тормош, тереклек һыуы.
Эғлә *(г.)* — юғары, бөйөк, оло.
Эдәсет *(г.)* — таҙарыныу, тәһәрәт.
Эйелен (айылын) — ҡатыным.
Эйтеш *(т.)* — шиғри бәйге, сәсәндәр ярышы.
Эҡраба *(г.)* — туған, ҡәрҙәш.
Элһәсум (әлхәсем) — ҡыҫҡаһы.
Эмер һәмәюн *(фарсы)* — батша (хаким) әмере.
Энуға — төрлөһө.
Эрткап иткән — төшән.
Эхбар — хәбәр.
Эһле басыйрат — аң-белем (ғилем, фекер) эйәләре.
Эһәре лә — береһе лә.
Эүдән *(г.)* — балалар, тоҡом.
Эүләд (балалар) — потомство, дети (араб).
Эүәрә итмештер — биҙгәнмен мәғәнәһендә.
Эфзәләт — өҫтөнлөк.
Эфләх — «әфләҡ», молдаван.

## ҺЫҒЫМТА

«Башҡорт халыҡ ижады» туплamaһының сираттағы был томы тулыһынса яҙма ҡисса һәм дастандарҙан төҙөлдө. Ҡасан ғына донъяға килмәһендәр, тематикаһы, жанр формалары нисек кенә сыбар булмаһын, уларҙың береһе лә буш урында тыумаған: йә исламда, йә башҡорттоң милли мифологияһында, фольклорында мәғлүм сюжет, мотивтарға, образдарға нигеҙләнә һәм традицион поэтик алымдарҙы файҙалана. Әгәр «Әҙәм менән Иблис» тигән ҡисса «Ҡөрьән Кәрим» сюжетына нигеҙләнеп ижад ителһә, «Аҡташ хан», «Ҡорҡот ата», «Ләйлә менән Мәжнүн», «Уғыҙ хикәйәте», «Заманалар ҡиссаһы» кеүектәре ҡасандыр айырым баҫма йә ҡулъяҙма китап рәүешендә йөрөгән дә шунан отоп алып һөйләнгәндән ҡағыҙға теркәлгән ҡыҫҡа варианттарынан ғибәрәт; «Тәтегәс бей», «Бабсаҡ менән Күсәк», «Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей», «Мөйтән», «Түлле Мәмбәт»», Сура батыр» ишеләре шәжәрә тексы йә шәжәрә компоненты рәүешендә яҙма хәлдә һаҡланған. Томға шулай уҡ күпселек төрки ҡәүемдәре өсөн уртаҡ яҙма ҡомартҡы иҫәпләнгән «Сыңғыҙнамә», «Аҡһаҡ Тимер», «Ғайса улы Әмәт» һымаҡ дастандар менән бер рәттән мәшһүр «Орхон-Йәнәсәй» руник яҙмаларының Күлтәгингә бағышланған «Кесе яҙма» тигән өлөшөнөң башҡорт теленә поэтик ауҙарылмышы ла индерелде. Том инеш мәҡәлә, аңлатмалар һәм һүҙлек менән тәьмин ителгән.

## РЕЗЮМЕ

Очередной том свода «Башкирское народное творчество» полностью составлен из числа произведений, которые условно названы «Письменные киссы и дастаны». Вне всякой зависимости от места создания, бытования, пестроты тематики и жанровых форм, эти произведения сходны в главном: все они возникли не на пустом месте — основой и арсеналом для них служили сюжеты, мотивы и образы либо исламской мифологии, либо национального, либо общетюркского про-

исхождения. Если кисса «Адам и Дьявол» была написана на основе коранического сюжета, то дастаны типа «Акташ-хан», «Деде Коркуд», «Лейля и Меджнун», «Хикаяти-Угуз», «Киссаи-заман» представляют собой краткий пересказ фабулы старинной (видимо, рукописной) книги. Дастаны же «Тетегес-би», «Бабсак и Кусяк», «Сын Туксабы-бия Муйтэн-би», «Муйтэн», «Родовитый Муйтэн», «Сура-батыр» и т. п. изначально бытовали как фольклорно-литературный, поэтический компонент родословий отдельных башкирских племен. Помимо «Чингизнаме», « Хромой Тимур», « Сын Гайсы Амед», которые представляют собой башкирские версии одноименных общетюркских дастанов, в данный том включен также поэтический перевод «Малой Надписи» из Орхоно-Енисейского памятника, посвященной Культегину. Том снабжен вступительной статьей, комментариями и глоссарием.

## SUMMARY

The current volume of the «Bashkir Folk Creations» collection is entirely composed out of the works that have been provisionally termed 'The Written Qyssahs and Dastan Sagas». Totally irrespective of the creation place, topical variety and genre forms these works are similar in the main feature, to wit: they have not been created for no reason, their foundation being plots and motifs be it of Islamic mythology, or national or well of the common Turkic provenance. If, say, the «Devil and Adam» qyssah was written on the Quran plot base, then the dastan sagas of the «Aqtash Khan», «Dede Qorqud», «Leila and Mejnun», «Khiqajaty Ughuz», «Qyssajzaman» type present a concise rendering of an olden book plot likely to have been an MS. The Dastan sagas of the sort 'Teteghes-bi», «Babsac and Kusek», «Mujten-bi, Son of Tuqsaba-bi», «Mujten», «Surah batyr», etc. had originally been functioning as a folklore and literary component of separate Bashkir tribes' geneologies. Beside the «Chynghiznamah», «Tumur the Lame», «Ahmed, Son of Gaisa» which represent Bashkir versions of the common Turkic dastan sagas the present volume also includes a versified translation of «The Lesser Inscription» from the Orkhon Yenisseic Kulteghin monument. The volume in question also incorporates an introduction article, commentaries and a glossary.



## ÖZET

Başkurt Folkloru kulliyatinin bu cildi tamamıyla yazılı kıssa ve destanlardan derlenmiştir. Çeşitli zamanlarda ve üsluplarda yazılmış eserlerin temelini islam dininin âye ve hadislerinin, Başkurt Milli mitolojisi ve folklorunun belli süje, motif, şahsiyetleri teşkil etmektedir. Onlarda tradisyon sür üsluplari kullanılmıştır. Eğer «Adam ve iblis» kisasi Kur'an Kerim âyetine dayanıyorsa, «Aktaş Han», «Korkut Ata» «Leyla ve Mecnun», «Oğuz Hikayeti», «Zamanlar Kissaasi» gibileri önce yayınlanmış ve eluasma kitap şeklinde yaşamışlardır ve sonra sözlü olarak aktarılmaya başlayan eserlerin kısaltulmış yeni türlirinden Kaydedilenlerdendir. «Tetiges Bey», «Babsak ile Küsek», «Bey Toksabaoglanı Möyten Bey», «Möyten», «Tülle Mambet», «Sura Batur» gibileri şecerenin bir parçası seklinde yaz olarak korunmuştur.

Bu cilde yine Türk Halklarının çoğu üçün ortak yazma yadigarları hesaplanan «Singizname», «Akhak Temir», «Gaysa oğlu Amet» gibi destanlarla beraber, Orkun-Yenisey runik yazitlarin Kültegırim Küçük yarısının parçasi da Baçkurtçaya şiir şeklinde çevrilerek girtilmiçtir. Ciltte giriş yazı, açıklamalar ve Sözlük verilmiştir.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Яҙма ҡисса һәм дастандарыбыҙ (Әхмәт Сөләймәнов)** . . . . . . . . . . . . . . . . 6

1. Әҙәм вә Иблис . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 16
2. Минәй батыр менән Шүлгән батша . . . . . . . . . . . . . . . . . . 26
3. Аҡташ хан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
4. Хан ҡыҙы Алтынсәс . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 77
5. Ҡорҡот ата . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 78
6. Күлтәгин . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 82
7. Уғыҙ хикәйәте . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 105
8. Ләйлә менән Мәжнүн . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 113
9. Сыңғыҙнамә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 143
10. Аҡһаҡ Тимер *(Фасыл фи бәйән дастани Аҡсаҡ Тимер)* . . . . . . . . . . . 164
11. Ғайса улы Әмәт *(Фасыл фи бәйән дастани Ғайса уғлы Әмәт)* . . . . . . 174
12. Һуңғы Һартай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 178
13. Ялыҡ бей, Ҡармасан менән Сәрмәсән . . . . . . . . . . . . . . . 192
14. Тәтегәс бей *(Юрматы шәжәрәһе буйынса)* . . . . . . . . . . . . 242
15. Ҡыпсаҡ затлы Ямғырсы бей менән Ҡусҡар бейҙең яңы ил тапҡаны *(Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 245
16. Бабсаҡ менән Күсәк *(Башҡорттоң Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 247
17. Ҡазанфари бей заманы — ике Килмәт низағы *(Мең ырыуы шәжәрәһе буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 248
18. Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей . . . . . . . . . . . . . . . . . . 250
19. Мөйтән бей *(Һарнау ҡобайыр)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 258
20. Мөйтән *(Версия)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 270
21. Түлле Мәмбәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 275
22. Заманалар ҡиссаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 355
23. Күбәләк-Тиләү батырҙары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 371
24. Эберәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр . . . . . . . . . . . . . 385
25. Бикйән Мәргән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 389
26. Сура батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 401
27. Сура батыр *(версия)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 412
28. Сура батырҙың яу сапҡаны . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 416
29. Кинйәкәй . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 418

**Һүҙ ахыры. Кешелектең ата-инәһе Әҙәм менән Һауа йәшәгән мифик замандан XX быуатҡа тиклемге дәүерҙе иңләгән ҡисса һәм дастандар** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 423

1. «Ҡөрьән Кәрим» сюжетынан яралған ҡисса *(Флүр Сибәғәтов)* . . . . . 423
2. «Минәй батыр менән Шүлгән батша» — «Урал батыр» һәм «Аҡбуҙат»ҡа ауаздаш иртәк *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . 426
3. Мәкерлекте фашлаусы эпос *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . 430

4. «Хан ҡыҙы Алтынсәс» хаҡында *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . 431
5. Башҡорттарҙа «Ҡорҡот ата» сюжеты һәм мотивтары *(Ғайса Хөсәйенов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 433
6. Ҡаһарманлыҡ пафослы нәсихәти дастан *(Әхмәт Сөләймәнов, Миңлеғәле Нәҙерғолов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 436
7. «Уғыҙнамә» дастанының башҡорт версияһы *(Ғайса Хөсәйенов)* . . . . . 441
8. Шағирҙы мәжнүн иткән мөхәббәт хаҡындағы дастан *(Ғайса Хөсәйенов, Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 444
9. Хандар хаҡындағы дастандарҙың башҡорт версиялары *(Ғайса Хөсәйенов, Миңлеғәле Нәҙерғолов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 453
10. Ялыҡ бей хаҡындағы дастандың теҙмә варианттары *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 462
11. Шәжәрәләргә теркәлгән дастандар *(Ғайса Хөсәйенов, Миңлеғәле Нәҙерғолов, Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 463
12. Халыҡ романы тип нарыҡланмалы дастан *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . 477
13. Заманға заман ялғанған *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 489
14. Намыҫ тойғоло ир-ат һәм ил намыҫын һаҡлаған ир менән ат *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 497
15. Бейҙең ғәҙел хөкөмөнә ирешкән фәҡир һунарсы хаҡындағы дастан *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 505
16. Нуғай сығышлы эпостың башҡортлашҡаны *(Ғайса Хөсәйенов, Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 507
17. Башҡа эпостарға оҡшамаған «Күбәләк-тиләү батырҙары» ҡобайырының улар менән уртаҡлығы *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . . 515
**АҢЛАТМАЛАР.** Шартлы ҡыҫҡартмалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 521
Һүҙлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 609

*«Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығы*
*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге «Почет билдәһе» орденлы*
*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында*
*әҙерләнде һәм институттың*
*ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды*

Литературно-художественное издание

**БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО**

**Том 7**

**Письменные киссы и дастаны**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Фирҙәүес Ноғоманова*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Әлфиә Илекәева, Гөлсәсәк Раянова, Әлфиә Теләмова*

Нәшр. лиц. № 04380, 26.03.01. Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.12.04.
Ҡағыҙ форматы 60 × $90^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 39,0+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 39,5.
Иҫәп-баҫма таб. 39,61+0,45 форз. Тиражы 3000 дана. Заказ № И 742.
Башҡортостан Республикаһының «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001. Өфө, Левченко урамы, 4а.

ЯСИ «Яшель». 450077, Өфө, Ленин урамы, 70.